БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
СОЦИАЛЬ-ГУМАНИТАР ФӘНДӘР ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР БҮЛЕГЕ

Ә. Х. Хәбиров

БЫУАТТАР ҠАУЫШҠАНДА

1 ТОМ

Өфө
Ғилем
2017

УДК 82
ББК 83.3(2Рәс.Баш)
Х11

Баҫма БР ФА ғилми тикшеренеүҙәрҙе яҡлау Фонды булышлығы менән тормошҡа ашырыла

Рецензенттар:
М. Х. Нәҙерғолов, филология фәндәре докторы
Г. Н. Ҡасҡынова, филология фәндәре кандидаты

Хәбиров, Ә. Х.

Х11 Быуаттар ҡауышҡанда. 2 томда. 1-се том : әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, йыллыҡ күҙәтеүҙәр, ижади портреттар. – Өфө : Башҡ. энцикл., 2017. – 568 бит.

ISBN 978-5-88185-402-7
ISBN 978-5-88185-403-4 (т. 1)

Әҙәбиәт белгесе һәм тәнҡитсе Әнғәм Хәбировтың «Быуаттар ҡауышҡанда» тип аталған хеҙмәтенең 1-се томына уның уҙған быуаттың һуңғы сирегендә, яңы быуаттың тәүге йылдарында яҙылған һәм төрлө баҫмаларҙа донъя күргән әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, шиғриәтебеҙҙең торошон һәм үҫешен яҡтыртҡан йыллыҡ күҙәтеүҙәре, айырым яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың ижадын күҙаллауға бағышланған әҙәби портреттары тупланды. Әнғәм Хәбиров Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең тормош һәм ижад юлын тикшереүгә һәм пропагандалауға күп көс һалды, шағирҙың ижадын мәктәптәрҙә һәм юғары уҡыу йорттарында тулыраҡ өйрәнеү өсөн әҙәбиәтебеҙ ғилемендә тәүгеләрҙән булып махсус «Семинарий» әҙерләп баҫтырҙы (Өфө: Ғилем, 2006). Бөтә ғүмерен республикабыҙ мәктәптәре өсөн юғары белемле уҡытыусылар әҙерләүгә сарыф иткән ғалим үҙенең был ике томлығын башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына адреслай.

УДК 82
ББК 83.3(2Рәс.Баш)

ISBN 978-5-88185-402-7
ISBN 978-5-88185-403-4 (т. 1)

© Хәбиров Ә. Х., 2017
© «Башҡорт энциклопедияһы», 2017

КҮҢЕЛ ДАРЪЯҺЫНА СӘЙӘХӘТ

(Баш һүҙ урынына)

Әҙәби тәнҡит менән уҙған быуаттың алтмышынсы-етмешенсе йылдарынан бирле шөғөлләнһәм дә, «Йәнле шишмәләр» тип аталған тәүге китабым донъя күргәндә миңә алты тиҫтә тулып килә ине.

Буласаҡ китаптың машинкала баҫылған төп нөсхәһен уҡып сыҡҡас, уға арҙаҡлы ғалим Ғайса Хөсәйенов биргән баһа һәм фатиха бөгөнгөләй хәтеремдә. Улай ғына ла түгел, телефон аша һөйләшкәндә, бер аҙ шелтәләп, ул: «Һин, шул Бөрөңдән айырылып, Өфөгә ҡарай юл алғансы тағы әллә күпме ваҡыт үтеп китер әле!» тине һәм ҡулъяҙманы нәшриәткә үҙе илтеп тапшырырға булды. Ысын мәғәнәһендә оло шәхестәргә генә хас ябайлыҡтың, ярҙамсыллыҡтың, шәфҡәтлелектең, изгелектең, ҡайғыртыусанлыҡтың иҫ киткес матур бер өлгөһө ине был. Ошо яҡшы сифаттары өсөн мин Ғайса ағайға әле лә рәхмәтлемен.

Тәүге китабымдың шул тиклем дә һуңлап сығыуының үҙ сәбәптәре бар, әлбиттә. Минең төп һөнәрем – уҡытыусылыҡ. Юғары мәктәп уҡытыусыһымын. Тәнҡит иһә – ана шул төп һөнәргә бәйле хеҙмәтеңде атҡарғандан һуң ҡалған шәхси ваҡыт иҫәбенә башҡарылған эш. Өҫтәүенә, миңә егерме йыл самаһы бик яуаплы, бик мәшәҡәтле вазифалар (кафедра мөдире, уҡытыу һәм ғилми эштәр буйынса проректор) башҡарырға тура килде. Бөтә ғүмерем республикабыҙ мәктәптәре өсөн белемле, инсафлы уҡытыусылар әҙерләүгә сарыф ителде тиһәм, һис тә арттырыу булмаҫтыр. Ләкин төрлө сәбәптәр эҙләп, шул сәбәптәр артына йәшеренеп, үҙемде аҡларға йыйынмайым. Тәүге китабым ифрат һуңлап сыҡҡан икән, уға үҙем ғәйепле. Тимәк, шәхси мәнфәғәтемде тейешенсә ҡайғыртмағанмын, был өлкәлә һүлпәнлек күрһәткәнмен. Дәүләт ышанып тапшырған эште еренә еткереп, сифатлы башҡарыу – минең өсөн һәр ваҡыт өҫтөн торҙо, һәр ваҡыт изге бурыс итеп һаналды.

Һуңлап донъя күргән китап һуңлап тыуған балаға оҡшап торһа ла, минең өсөн ул бик ҡулай булып сыҡты. Яҡынлашып килгән юбилейымды нисегерәк итеп үткәреп ебәрермен икән тип аптырап

йөрөгән мәлем ине. Көтмәгәндә башҡа шәп уй төштө: юбилей мәшәҡәттәрен китабымдың исем туйы менән бергә атҡарырға мөмкин дә баһа!

Жанры буйынса «Йәнле шишмәләр» – ижади портреттар тупланмаһы. Унда һүҙ ете шағир, дүрт прозаиктың яңы китаптары һәм яңы әҫәрҙәре хаҡында бара. Форсаттан файҙаланып, «исем туйы» һылтауы менән юбилей кисәһенә китабымдың ҡайһы бер геройҙарын да саҡырырға булдым. Бер юлы ике кәмәнең ҡойороғон тотоуға оҡшап китте: юбилей тантанаһы ла, китап сығыу йәһәтенән кисерелгән шатлыҡ та бергә үрелде. Һис уйламаған ерҙән байрамдың бынамын тигән яңы төрө тыуҙы ул көндө. Күңелде борсоп торған теге уйҙар ҙа, ямғырҙан һуң таралған болот шикелле, юҡҡа сыҡты.

Алтмышым менән етмешем араһы емешлерәк булды һымаҡ. Әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгөһөн сағылдырған байтаҡ ҡына мәҡәләләр яҙылды. Улар республикабыҙҙа нәшер ителгән төрлө журналдарҙа, ғилми йыйынтыҡтарҙа баҫыла килде. Ҡайһы бер мәҡәләләр «Шифриәт иленде» тигән яңы китабыма инеп китте. Ике юбилей араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми ижадын тикшереүгә күп кенә көс һалынды. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ атаҡлы шағир хаҡында рус телендә яҙылған ике китап баҫтырып сығарыу бәхетенә ирештем.

Бәләкәй сағымдан уҡ мине нишләптер кешеләрҙең холоҡ-фиғеле, улар араһындағы бигүк аңлашылып бөтмәгән мөнәсәбәт ҡыҙыҡһындыра торғайны Хатта күрше-күләндең дә үҙҙәренең ҡылыҡтары менән бер-береһенән һиҙелерлек айырылыуын тойҙом. Ҡайһы беренә барып инһәң, тупһаны атлап үтеү менән: «Әйҙә, улым, түргә уҙ!» – тиерҙәр ҙә, ололар менән һөйләшкәндәй, хәл-әхүәл һорашa башларҙар. Бәғзеләре иһә, хәл-әхүәл һорашыу түгел, сәләмеңде лә теләр-теләмәҫ кенә ҡабул итерҙәр, теш араһынан һөҙөп сығарған һүҙҙәр менән яуап ҡайтарырҙар. Үҫә төшкәс, кешеләр араһындағы ошо төрлөлөктө түрәләр менән(!) аралашҡанда һиҙҙем. Ҡай береһе үҙен ябай ғына тота. Һинең менән ихлас һөйләшә, йомошоңдо иғтибар менән тыңлап, уны үтәү юлдарын эҙләй башлай. Икенселәр иһә, булыр-булмаҫ түшен киреп, арҡаһын ултырғысҡа терәр ҙә, һауалы ҡарашын ташлап, һинең моң-зарыңды тыңлаған кешегә һалышыр. Ләкин һорауыңды ҡәнәғәтләндерер өсөн ҡыл да ҡыймылдатмаҫ.

Ни өсөн шулай? Ни өсөн ҡайһы берәүҙәр һинең өҫтөңә менеп бара? Ни өсөн бәғзеләр, ҡулынан килерен-килмәҫен уйлап тормаҫтан,

юғары дәрәжәгә ынтыла? Ни өсөн кешеләр араһында алдаш-йолдаш, ғәҙелһеҙлек хөкөм һөрә? Ни өсөн кеше үҙенә рәхәт тормошто башҡалар иҫәбенә ҡороуҙан да сирҡанмай? Ни өсөн кеше әйбер ҡолона әүерелә? Ни өсөн?.. Ни өсөн?..

Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ «ни өсөн»дәргә яуап эҙләгәндә тыуған уй-фекерҙәремде фәлсәфәүи-психологик яҙмалар рәүешенә килтереп, етмешемде шул яҙмалар менән ҡаршылармын тигәйнем. Ул уйланыуҙар ғүмерем буйына алып барылған күҙәтеүҙәр, тормоштоң үҙенән алынған аныҡ миҫалдар менән үрелергә тейеш ине. Ләкин ниәтем тормошҡа ашманы. Донъя мәшәҡәттәре көслөрәк булып сыҡты. Олоғайған һайын, ваҡыт та тиҙерәк үтә кеүек. Юбилейым айҡанлы, үҙемдең нисек итеп әҙәбиәт донъяһына тартылыуым хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеү менән генә сикләнергә булдым. Минең уйымса, ергә килгән һәр заттың яҙмышы – асылып бөтмәгән сер һәм яҙылмаған китап. Күп осраҡта әҙәм балаһы шул серҙе лә, ҡағыҙ битенә төшмәй ҡалған сюжетты ла үҙе менән мәңгелеккә алып китә.

Был донъяға мин бик һуңлап килгәнмен – атайым менән әсәйемдең һигеҙенсе балаһы булып. Мин тыуғанда улар инде, иҫке тормош ҡалдыҡтарынан арынып, яңыса йәшәй башлағандар. Күмәк хужалыҡ итеүгә күскәс, хеҙмәт көнөнә тейгән игенде өй беренсә ылау менән таратып йөрөйҙәр ине тип һөйләгәндәре хәтеремдә. Тик минең балалыҡ осором ҡәһәр төшкөрө һуғыш мәленә тура килде. Ул йылдарҙа инде икмәкте арбалап түгел, грамлап ҡына бирәләр ине. Бәлки, шул һуғыш касафаты арҡаһындалыр, үҫә-үҫә үҙемде бик көтөп һәм теләп алынмаған бала итеп тойған саҡтарым да булманы түгел. Ярай әле, минән һигеҙ йәшкә ҙурыраҡ Хәлизә исемле апайым булған: төпсөктө ҡарау күберәк уның елкәһенә төшкән; ул әле лә мине сит итмәй – Фәрит еҙнәм менән бергәләп улар мине лә, минең балаларҙы ла һәр ваҡыт яҡты йөҙ менән ҡаршы алалар.

Мәктәптә уҡый башлауым һуғыш йылдарына тура килде. Хәреф танырға, яҙырға-һыҙырға өйрәткән тәүге уҡытыусым – Мөхәүилә апай Мофаззалова – әле булһа күңелем түрендә. Класыбыҙ бик ишле ине. Аслы-туҡлы көн иткәнлектәндер инде, парта араһында ултырған килеш йоҡлап киткән саҡтарыбыҙ ҙа булғыланы. Шул мәлдә уҡытыусыбыҙ беҙҙе баштарыбыҙҙан йомшаҡ ҡына һыйпап уятыр ҙа дәресен дауам итер ине. Уҡыу әсбаптарыбыҙ ҙа таманса булды: иҫке сепрәктән әтмәләгән тоҡсай, ҡырҡтан ашыу балаға биш-алты «Әлифба», сүбектәре сығып торған һарғылт ҡағыҙҙан тегеп эшләнгән бер ҡалын дәфтәр.

Ошондай ҡытлыҡтар кисереп уҡыһаҡ та, бер ҡыш уҙыуға беҙ инде шул бөтә фәндәргә лә иҫәпләнгән ҡалын дәфтәрҙе ат башылай эре хәрефтәр, шундай уҡ ҙурлыҡтағы һандар, үҙебеҙ төшөргән һүрәттәр менән тултырып өлгөргәйнек. Ҡоромдо иҙеп яһаған ҡара менән яҙылған дәфтәр биттәре бер-береһенә сат йәбешһәләр ҙә, тәүге уңыштарыбыҙға сабыйҙарса ҡыуаныуыбыҙҙың сиге юҡ ине.

Һуғыш осоронда ла, һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла минең тыуған ауылымда мәктәп ете йыллыҡ ҡына булды. Өлгөргәнлек аттестаты алайым тиһәң, ун-ун биш саҡрым алыҫлыҡтағы Рәжәп, Иҫке Дөмәй йәиһә Яңы Ҡото тигән ауылдарҙың береһенә йөрөп уҡырға тейешһең. Миҙхәт исемле офицер ағайым (ул минән ун бер йәшкә оло) мәсьәләгә хәрбиҙәрсәрәк ҡараны: үҙе хеҙмәт иткән Октябрьский ҡалаһына саҡырып алды ла беренсе һанлы рус мәктәбенең һигеҙенсе класына уҡырға бирҙе. Был – йөҙә белмәгән баланы тәрән йылғаға ташлауға тиң ине: йәшәгең килә икән – батма, йөҙөргә өйрән.

Ағайымдың бындай ҡыйыу һәм киҫкен аҙым яһауы минең өсөн көтөлмәгән хәл түгел ине. Һуғышҡа тиклем үк әле уға йә Ленинградта, йә Өфөлә урыҫтар менән яҡындан аралашып йәшәргә тура килгән. Шуға күрә уларҙың телен дә, ғөрөф-ғәҙәттәрен дә яҡшы үҙләштергән. Уның саф урыҫ телендә һөйләшеүен урыҫтар хатта үҙҙәре лә хайран ҡалып тыңлаған тигәндәрен ишеткәнем булғыланы. Ағайым, күрәһең, мине лә үҙе артынан эйәртергә теләгәндер. Ләкин уны ҡыуып етә алманым. (Йәйәләр эсендә әйтәйем: тәбиғәт ағайымдан башҡа һәләттәрҙе лә йәлләмәгән. Ауыл мәктәбендә уҡыған сағында үҙ ҡулдары менән мандолина һәм скрипка яһап уйнаған. Бер ниндәй ҙә музыкаль белеме булмаһа ла, өҙҙөрөп пианинола уйнай. Һуғышты Берлинда ослап ҡайтҡас, байтаҡ ғүмерен армияға бағышланы, партия-совет органдарында эшләне, хәҙер хаҡлы ялда.)

Ете йыллыҡ ауыл мәктәбен тамамлап, ҡала урта мәктәбенә барып инеүемде мин юҡҡа ғына һыуға ташланған бала яҙмышы менән сағыштырманым. Уҡыу йылының тәүге көндәрендә кисергән ауырлыҡты үҙем генә беләм. Урыҫ теле һәм әҙәбиәте укытыусыһының ҡыҙыл ҡәләме менән сыбарланған бит ярымлыҡ диктант әлегеләй күҙ алдымда.

Илленсе йылдар башында Октябрьский яңы төҙөлөп килгән ҡала ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ағайым һайлаған мәктәп элиталы уҡыу йорто иҫәбендә йөрөгән. Педагогтар эшкә һайлап ҡына алынғанлыҡтан, коллектив көслө һәм талапсан булған. Мәктәптең үҙ

традициялары ла тыуып өлгөргән. Әйтәйек, ситтән килгән балаларҙы бында бер айлыҡ һынау шарты менән генә алғандар. Шундай һынауҙы мин дә үттем. Башта беҙ унау инек. Башҡаларыбыҙ ете йыллыҡты минең шикелле татар мәктәбендә түгел, ә урыҫ мәктәбендә бөтөрөп килгәйнеләр. Берәүһе хатта Монголиянан күсеп ҡайтҡан нефтсе-инженер малайы булып сыҡты. Тик октябрь башына ундан өсәү генә ҡалдыҡ. Етебеҙ урыҫ теленән генә түгел, башҡа фәндәрҙән дә алдыра алманы. Уларға бер класҡа түбән төшөп яңынан етенселә уҡырға тәҡдим иттеләр. Ләкин икеһе генә ризалашты һымаҡ, ҡалғандары мәктәпте бөтөнләйгә ташлап китте.

Әлбиттә, ҡыҙыл ҡәләм менән сыбарланған теге бит ярымлыҡ диктантты күҙ уңында тотһаҡ, етенсе класҡа төшөрөлөүселәр йәиһә мәктәпте ташлап китергә мәжбүр ителеүселәр араһында мин дә булырға тейеш инем. Бәхеткә күрә, улай булманы – һигеҙенсе класта ҡалдырҙылар. Бында мәктәп директоры Фаина Абрамовна Розенбаум апайҙың өлөшө ҙур булды кеүек. Берме, икеме ай ул беҙҙең класта тарихты уҡытты. Ә был фән минең өсөн иң ауырҙарҙан ине. Тарихты белмәгәнлектән түгел – тарих тураһында күп һөйләргә кәрәк булғанлыҡтан. Фаина Абрамовна мине таҡта янына йыш саҡырып сығарҙы. Интегә-интегә эҙләгән һүҙҙәрҙе табырға ярҙамлаша ине. Таныш булмаған урыҫ һүҙҙәрен әйткәндә киткән хатанан ауыҙҙарын йырырға әҙер торған ҡыҙҙарҙы ла (улар, башлыса, ҡала түрәләренең һөйөклө балалары ине) бик тиҙ урындарына ултыртыр булды директор апай. Ул – ысын мәғәнәһендә педагог булған тип уйлайым күп йылдар үткәндән һуң. Минең тырышлығымды һиҙгәндер һәм шуға күрә уҡыуымды дауам итергә теләк уятҡандыр. Урыҫ мәктәбендә уҡый башлағас яҙған тәүге диктантым ҡып-ҡыҙыл булһа ла, директорҙың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәнем: һигеҙенсе класты тик бер генә «өслө» (әлеге лә баяғы – шул урыҫ теленән инде!) менән тамамланым, ҡалғандары «дүртле» лә «бишле» ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡала мәктәбендә бер генә йыл уҡырға насип булды. Хәрби хеҙмәт кешеһе булараҡ ағайымды башҡа ергә күсерҙеләр, ә мин үҙебеҙҙең районға юлландым. Уҡыуымды Саҡмағоштоң беренсе һанлы урта мәктәбендә дауам иттем һәм унынсы класты шунда бөтөрҙөм.

Әйткәндәй, урыҫ телендә һөйләшергә өйрәнеү теләге миндә бәләкәйҙән үк яралды. Уның үҙ сәбәптәре бар. Һуғыш башланғас, бөтә ил кеүек, беҙҙең ауыл халҡы ла фашистар баҫып алған ерҙәрҙән ҡасып китергә мәжбүр булған ватандаштарыбыҙҙы үҙ ҡосағына

һыйындырҙы. Ауылыбыҙ ҙур булғанға күрә микән, беҙгә эвакуацияланғандар байтаҡ ине. Башта улар нардомда (клубты элек ауыл халҡы шулай атап йөрөтә ине) йәшәне. Күрәһең, күсенеүселәргә юлда күп ғазаптар сигергә тура килгәндер. Ҡайһы берҙәре, нардомда дөйөм туҡланыуҙы юлға һалып ебәргәнсе, ил-йорттарын ашыҡ-бошоҡ ташлап киткәндә ҡулдарына эләккән сепрәк-сапраҡты берәй ашамлыҡҡа алыштырырға теләп, өй беренсә йөрөнө. Берәүһе беҙгә лә килеп инде. Ул әсәйем йәштәрендәге апай ине. Ниндәйҙер тышҡы оҡшашлыҡ та булғандай тойолдо миңә. Әсәйем шикелле тулы, түңәрәк йөҙлө, асыҡ сырайлы, зәңгәр күҙле, буйға ла бер сама. Мәрйә апай ҡулындағы селтәрҙе әсәйемә һона. Әсәйем, ымлап булһа ла, селтәрҙән баш тартты ла, апайҙы түргә саҡырып, өҫтәл артына ултыртты һәм сәй эсереп, барынса тамағын туйҙырып сығарҙы.

Көҙ яҡынлашҡанда клуб бушаны. Ауыл етәкселәре ишлерәк балалы ғаиләләр өсөн айырым торлаҡ йүнәтергә тырышты. Ҡалғандары өйҙәш йәшәне. Район үҙәгенә киткәндәр ҙә булған тинеләр. Эвакуацияланыусыларҙың йәшерәктәре төрлө эшкә йәлеп ителде, ә ҡарт-ҡоролар йорт-ҡура тирәһендә уралды. Беҙҙең күршелә генә Ленинградтан килгән уҡытыусы апай торҙо. Уның минең йәштәрҙәге ҡыҙы ла бар ине. (Хәтерем яңылышмаһа, Юля исемле ине, шикелле.) Беҙ уның менән ярайһы ғына дуҫлашып киттек. Бер-беребеҙҙе аңламаһаҡ та, ололар эштә саҡта (уныҡы – мәктәптә, минекеләр – колхозда) ваҡытты йыш ҡына бергә уҙғарҙыҡ, үҙебеҙсә төрлө уйын ҡороп, икебеҙ ике телдә нимәлер хаҡында ләпелдәшкән булдыҡ.

Ленинградтан эвакуацияланған тағы бер ғаиләгә туҡталып китмәксемен. Улар оло йәштә ине. Таисия исемле ҡыҙҙары ауыл медицина пунктында фельдшер булып эшләне. Армия йәшенә етеп килгән Ваня исемле улдарын оҙаҡламай һуғышҡа алып киттеләр. Ҡарт менән ҡарсыҡ үҙ көндәрен үҙҙәре күрергә тырышты: картуф сәстеләр, сусҡа аҫыранылар. Ғаилә башлығы (ул Путилов заводында эшләгән икән тигән хәбәр ҙә йөрөнө) бик ипле, мөләйем ҡарт ине. Картуф сығарған мәлдә булған бер хәл хәтеремдә ҡалған. Ҡарт оҙон, шыма һаплы көрәге менән яйлап ер ҡазый, ә ҡарсығы, тупраҡты ҡулдары менән аҡтарып, картуф сүпләй. Мәрйә әбейгә беҙ ҙә, күрше-күлән малайҙары, ярҙам итәбеҙ, ара-тирә улар менән һөйләшергә маташҡан булабыҙ. Бер аҙ кипшенгән картуфты тоҡтарға тултыра башлағас, ҡарт үҙ теленең ҡайһы бер серҙәренә төшөндөрмәксе булды, ахырыһы. Беҙ тоҡтарҙы үҙебеҙсә һанағанда ул да ҡушылып китте:

«Один мешок, но два мешка. Три, четыре мешка, но пять мешков». Был үҙенә күрә ябай ғына, әммә күңелгә һеңерлек бер дәрес ине.

Әсәләре менән беҙҙең ауылда йәшәй башлаған төрлө йәштәге урыҫ малайҙары ҡылыҡтары буйынса ла төрлө ине. Минән дүрт-биш йәшкә ҙурыраҡтары, мәҫәлән, кәрт, бәке уйнаны. Ошо ят уйындарға әкренләп ауыл малайҙары ла тартылды. Ситтән килгән бәғзе малайҙар кеҫәләрендә бер йәки ике йәпле бәке йөрөтөр ине. Һирәк-мирәк шул бәкеләрен сығарып, маҡтанған саҡтары ла булғыланы. Әле бына уйлайым: уларға ниңә бәке йөрөтөргә кәрәк булды икән? Көс күрһәтер өсөнмө? Әллә ҡандарына һеңгән милли йоламы ул?

Урыҫ телен белергә тырышыуым тағы бер сәбәп арҡаһында көсәйҙе. Минең үтә баҫалҡы, үтә тәрбиәле бер дуҫым бар ине. Ауыл мәктәбендә ете йыл бергә уҡыныҡ. Уның атаһы һәр йылды тиерлек беҙҙән ун биш саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы Николаевка ауылы халҡына ялланып, уларҙың мал-тыуарын көтөр ине. Мәктәптә уҡыуҙар тамамланып, каникул осоро еткәс, атаһына булышыр өсөн минең тиҫтерем дә шул ауылға китер булды. Бер нисә йәйҙе Николаевкала үткәргәс, һабаҡташым апаруҡ урыҫса һупалай башламаһынмы! Был миңә етә ҡалды. Дүртенсе класҡа күскәс, бер-ике йылға түбән төшөп булһа ла, күршебеҙҙәге Васильевка ауылының башланғыс мәктәбендә уҡырға йыйынып та бөткәйнем һымаҡ. Үҙебеҙҙең телдә Кеүәш башы тип аталған ауыл беҙҙән дүрт-биш саҡрымда ғына. Базы йылғаһы аша сығып, Салпы тауына күтәреләһең дә Салауат Юлаев ял итеп киткән яңғыҙ ҡайын эргәһенән Саҡмағошҡа ҡарай юл алаһың һәм күҙ асып-күҙ йомған арала Иван дуҫтар янына барып та етәһең. Ләкин һуғыштан һуңғы ауыр йылдар был хыялды тормошҡа ашырырға форсат бирмәне. Сөнки дүрт-биш саҡрым араны үтер өсөн дә ҡышҡы халҡындарҙа өҫкә йылыраҡ кейем, тамаҡҡа туҡлыҡлыраҡ аҙыҡ кәрәк ине.

Күңелем даръяһында ҡыбырлап ҡуйған ошо күренештәр – бынан илле-алтмыш йылдар элек булған хәл-ваҡиғаларҙың кескәй генә бер сағылышы. Хәҙерге йәштәргә урыҫ теле тиҙерәк тә, еңелерәк тә бирелгән һымаҡ. Сөнки, заман башҡа – заң башҡа тигәндәй, уларға ярҙамға радио, телевидение, башҡа төрлө техник саралар килде. Мөхит тә үҙгәрҙе. Бер ниндәй телде лә китап уҡып, ҡағиҙәләр ятлап ҡына бөтә камиллығында үҙләштереп булмай. Ә урыҫ телен әсәң теле кимәлендә белергә тырышырға кәрәк. Ни тиһәң дә, беҙ урыҫ илендә йәшәйбеҙ. Әҙәбиәтебеҙҙең тәүге классигы Мәжит Ғафури ҙа үҙенең бер геройынан юҡҡа ғына: «Урыҫса белергә кәрәк, юҡһа һин

ауырлыҡ күрергә...», – тип әйттермәгәндер. Ғөмүмән, башҡа халыҡтарҙың телен дә, мәҙәниәтен дә белеү һис тә яҙыҡ түгел. Элеккеләр: «Уҡыған кеше – суҡынған кеше», – тигән. Уҙған быуаттың алтмышынсы-етмешенсе йылдарында Мәскәү һәм Ленинградтың элиталы мәктәптәрендә һәм вуздарында инглиз телен урыҫ теле кеүек үҙләштергән «Чикаго малайҙары» туҡһанынсы йылдар башында илебеҙ тарихында ана ниндәй боролоштар яһап ҡуйҙы.

Ауыл мәктәбендә уҡып йөрөгән саҡта шиғырҙар яҙып маташтым, ләкин шағир булырға насип итмәне: яҙғандарымдың береһе лә донъя күрмәне, сөнки кимәлдәре түбән булған – рифмаға һалынған яңғырауыҡлы юлдарҙан ары китмәгәндәр (быны мин һуңыраҡ аңланым). Ҡайһылыр класта уҡығанда тәржемә эше менән дә шөғөлләнеп ҡараным. Уларҙы ла баҫырға атлығып тороусы табылманы. Ә шулай ҙа мәктәп һәм ауыл тормошон яҡтыртҡан мәҡәләләремдән баш тартманылар – улар әкренләп район, өлкә гәзиттәрендә баҫылып, ара-тирә хатта радио аша ла ишетелеп торҙо. Ташҡа баҫылған исемеңде күреү йәиһә уны радио аша ишетеп ҡалыу тамам «сиргә» һабыштырҙы – нефть институтын ташлатып (хәйер, ул институтҡа бик теләп түгел, бәлки, стипендияһы ҙур һәм бушлай кейендерәләр тигәндәре өсөн генә барғайным), иртәме-һуңмы барыбер журналистика юлына баҫтырҙы, һәм мин, урта мәктәпте тамамлап, бер нисә йылымды әрәмгә уҙғарғас, үҙебеҙҙең район гәзитендә эшләп алып киттем.

Район гәзите редакцияһында эшләү минең өсөн оло мәктәп булды. Тормош мәктәбе. Балалыҡ бер ҡатлылығынан арынып, аҡты – ҡаранан, ҡараны аҡтан айыра белергә өйрәнә башлауым да шул йылдарға тура килә. (Хәйер, тормоштоң был дәресен мин әле лә ахырына тиклем үҙләштереп бөтә алманым, шикелле.) Вазифам буйынса кабинет хеҙмәткәре булһам да, командировкаға йөрөргә ярата инем. Дүрт йыл эшләү дәүерендә райондың мин булмаған бер генә колхозы ла, хатта бер генә бригадаһы ла ҡалмағандыр, моғайын. Ауылдар буйлап йөрөгәндә төрлө кешеләр менән осрашаһың, хикмәтле хәлдәргә лә юлығып ҡуяһың.

Гәзиттә эшләүемдең минең өсөн тағы бер мөһим яғы булды. Ул мине йәшлек хыялымдан – әҙәбиәттән айырылмаҫҡа мөмкинлек бирҙе. Улай ғына түгел, бәлки, был хыялымды йылдан-йыл көсәйтә генә барҙы, уға тағы ла яҡынайтты. Ҡазанда журналистар курсында уҡып ҡайтыуым да файҙаға ғына булды. Сөнки унда журналистика серҙәренә төшөндөрөп, уны ижтимағи-сәйәси һәм фәлсәфәүи яҡтан нығытып ҡуйыу менән генә

сикләнмәйенсә, конкрет иҡтисад нигеҙҙәрен дә өйрәттеләр, күп милләтле әҙәбиәтебеҙҙең көнүҙәк мәсьәләләре менән дә таныштырҙылар. Әҙәбиәт буйынса лекцияларҙы Ҡазан университетынан саҡырып килтерелгән атаҡлы профессорҙар уҡыны. (Был курстарҙың программаһы шул тиклем бай йөкмәткеле, тәртип шул тиклем ҡаты ине, көҙ үтеп ҡыш етеүгә, ҡыш үтеп яҙға аяҡ баҫыуға, Рәсәй Федерацияһының ун туғыҙ өлкәһенән һәм республикаһынан йыйылған йөҙ журналистың унға яҡыны, нагрузкаға түҙә алмайынса, ауырып, кире өйҙәренә ҡайтып китте.)

Ҡазанда уҡығанда, лекцияларҙан тыш, йәнле әҙәби тормош эсендә ҡайнау ҙа ыңғай йоғонто яһаны. Матбуғат йортоноң Туҡай исемен йөрөткән клубында яҙыусылар, шағирҙар менән осрашыу кисәләре йыш була торғайны. Ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт үтеп китһә лә, сал сәсле, сандыр йөҙлө, тыштан ҡарағанда баҫалҡы холоҡло Хәсән Туфан сығыштары әле лә күҙ алдында. Йәштәр гәзите редакцияһында башлап яҙыусылар менән Мәхмүт Хөсәйен алып барған семинарҙар ҙа бик ҡыҙыҡ үтә ине. Ғөмүмән, был ҡыш мине рухи яҡтан артабан да байыҡтырҙы. Курстарҙы тамамлап, тағы бер йыл эшләгәс, күптәнге хыялымды тормошҡа ашырырға ниәтләнем һәм Бөрө дәүләт педагогия институтының урыҫ теле һәм әҙәбиәте факультетына уҡырға индем. Был мәлдә мин инде ярайһы ғына тәжрибә туплап өлгөргәйнем. Уҡып сыҡҡанға тиклем етерлек итеп кейем-һалым да әҙерләгәйнем. Әйткәндәй, мин Бөрө педагогия институтында ла яҡшы уҡытыусыларға тап булдым. Һәйбәт уҡығаным, ҙур йәмәғәт эштәре алып барғаным өсөн улар мине һәр ваҡыт алға алдылар, үҙ иттеләр, студент сағымда уҡ аспирантураға әҙерләй башланылар. Һуңғы курстарҙа хатта исемле стипендия алып уҡыным.

Әҙәбиәт «сире»нә һабышыуҙың сере исемеңдең ташҡа баҫылыуын күреү теләгендә генә түгел, әлбиттә. Ул төпкөлдәрәк ята. Иң тәүҙә – ғаилә тәрбиәһендәлер. Мин мәктәпкә төшөп, уҡырға-яҙырға өйрәнгәнсе үк әле беҙҙең өйҙә ҡысҡырып китап уҡыу ғәҙәте бар ине. Ҡартатайымдан ҡалған йорт бик ҙур булғанға күрәлер инде, китап тыңларға күрше-күлән дә керә торғайны. Тәҙрәләре күплектән һәм уларҙың саманан тыш ҙур булыуҙары арҡаһында ҡышҡы һалҡындарҙа өйҙә ел-буран уйнап торһа ла, күңелдәрҙә йылылыҡ хөкөм һөрҙө. Өҫтәүенә, әсәйем яттан бик күп бәйеттәр, әкиәттәр, табышмаҡтар, мәҡәлдәр белә ине. Уның шыңғырҙатып, ниндәйҙер бер көйгә һалып ҡорьән уҡыуы әле лә ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора. Тик ни өсөндөр уны өйҙә бер үҙе ҡалған саҡта ғына уҡыр булды. Мин ҡайтып инһәм,

уҡыуҙан туҡтар ине. Үҙе иҫке заманда тыуып үҫкәс, баланың башын ҡатырмайым тигәндер, күрәһең. Дин тураһында һүҙ сыҡҡанда ла бик тәрәнгә төшмәҫкә тырышты. «Алла ҡайҙа йәшәй?» – тип һораһаң, мәҫәлән, ул, иҫе китмәйенсә генә: «Уны бер кем дә белмәй», – тип яуап ҡайтарыр ине. Ҡөрьәндән башҡа дини китаптарҙы ла байтаҡ белә ине ул. Колхоз пенсияһына сыҡҡас, бер генә ураҙаны ла ҡалдырманы, ә бына көндәлек намаҙҙың ҡайһы берҙәрен ҡалдырғыланы – бөтәһенә лә өлгөрә алманы. Ҡызғанысҡа ҡаршы, әсәйемдең ғүмере фажиғәле өҙөлдө: аҙна-ун көн самаһы Өфөлә йәшәгән өлкән улында ҡунаҡта булғандан һуң, һағыныуҙан ашҡынып-елкенеп тыуған төйәгенә ҡайтып килгәндә, Бүздәк тимер юл станцияһында маневр яһаусы йөк поезына тапалып үлде.

Мәктәптә уҡый башлағас, әҙәбиәткә мөхәббәтте һөйөклө уҡытыусыларым өҫтәп ебәрҙе һәм уны атлаған һайын үҫтереп торҙо. Бында бигерәк тә Мөбәрәк Мәхийән улы Батыев ағайҙың исемен телгә алып киткем килә. Бөтә фәндәрҙән дә бер тигеҙ барһам да, урыҫ әҙәбиәте буйынса ул үткәргән дәрестәр һәр ваҡыт көтөп алынғандарҙан ине. Бәлки, тәбиғәттән дә берәй нәмә бирелгән булғандыр. Өйҙә һауыт-һаба шылтырап, үпкәләп ҡуйған саҡтарымда әҙәби фантазиям айырыуса үҫешеп китә ине: төрлө сюжеттар ҡороп (ул ваҡытта сюжет һүҙенең мәғәнәһен белеү түгел, үҙен дә ишеткән юҡ ине, әлбиттә), шулар буйынса күңелемдә әҫәрҙәр яҙа инем дә, үҙем шул әҫәрҙәремдәге ата-әсәһенән ҡасып тигәндәй төп йортто ташлап сығып киткән, күп илдәр һәм һыуҙар кисеп, байтаҡ йылдар үткәндән һуң байып-сереп яңынан атай йортона әйләнеп ҡайтҡан ыңғай геройына әйләнә инем.

Кешене әҙәбиәткә ылыҡтырыуҙа уның тыуған төйәге, тирә-йүн, мөхит, айырым шәхестәр ҙә мөһим роль уйнай торғандыр. Шиғыр яҙып ҡарау теләгенә бәйле бер ваҡиға хәтерҙә. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа беҙҙең ауылға уҡытыусы итеп йәш кенә бер ағайҙы килтергәйнеләр. Йәш тиһәң дә, һуғышта булып ҡайтҡан кеше ине. Офицер булған тинеләр. Бик ыҫпай кейенеп йөрөр ине. Өҫтәүенә, талант эйәһе лә булып сыҡты: йырға ла, бейеүгә лә, һүрәт төшөрөүгә лә оҫта ине. Шиғыр ҙа яҙҙы. Шиғырҙары өлкә һәм район гәзиттәрендә генә түгел, ул саҡтағы «Әҙәби Башҡортостан» журналында ла баҫылғыланы. Бына ошондай кеше нисек инде һиңә йоғонто яһамаһын! Шағир булырға теләүселәр бөтәбеҙ ҙә уға тартылдыҡ. Яҙғандарыбыҙҙан баш тартманы, уҡыны, кәңәштәрен бирҙе, теләктәрен әйтте. Ләкин беҙҙән шағир сыҡманы.

Шулай ҙа берәүебеҙҙең шиғыры өлкә гәзитендә баҫылды. Тик һуңынан ул турала ауылда төрлө күңелһеҙ хәбәрҙәр йөрөнө. Ташҡа баҫылған шиғырҙың авторы хәлле ғаиләнән ине, һуғыш ваҡытында ла икмәктән өҙөлмәнеләр. Уҡытыусы ағайыбыҙ, бер бот онға тегенең булыр-булмаҫ шиғырын баштан-аяҡ эшкәртеп, ысын мәғәнәһендә әҙәби әҫәр кимәленә еткереп биргән тигән һүҙ таралды. Булһа ла булғандыр, сөнки заманалар бик ауыр ине. Етмәһә, ағайыбыҙ үҙе менән, бергә-бергә йәшәргә тип, әсәһен һәм ҡустыһын да беҙҙең ауылға алып килгәйне. Уларҙың да тамағын туйҙырырға кәрәк бит. Ә теге егетебеҙҙең шиғырҙары башҡаса күренмәне. Уның шулай булыры көн кеүек асыҡ ине. Бер ҙә хистәргә бирелә торған кешегә оҡшамағайны ул. Уҡыуының да әллә ни фәтүәһе булманы – ете класты көс-хәл менән генә тамамланы. Ә талантты һатып алып булмай. Үтескә лә бирелмәй. Шуныһы ҡыҙғаныс: талантлы уҡытыусыбыҙ беҙҙең ауылда оҙаҡ йәшәмәне. Шәхси тормошонда ниндәйҙер күңелһеҙ хәлгә тарыған да, райондан ғына түгел, хатта республиканан башын алып сығып киткән тинеләр. Бәлки, берәй өлкәлә урыҫ яҙыусыһы йәки шағиры булып киткәндер – улар телен дә яҡшы белә ине.

Беҙҙең район элек-электән бәрәкәтле, мәҙәниәтле төйәктәрҙән иҫәпләнә. Уның уңдырышлы тупрағында бик күп билдәле шәхестәр: яҙыусылар, шағирҙар, ғалимдар, дәүләт эшмәкәрҙәре, юғары дәрәжәле офицерҙар үҫеп сыҡҡан. Уларҙың донъяла барлығын белеү, улар менән ғорурланыу, уларға оҡшарға йәиһә улар шикелле булырға теләп тырыша-тырыша уҡыу – үҙе бер мәктәп. Тәрбиә мәктәбе. Хәҙерге заман уҡытыусылары быны онотмаһындар ине. Ошо тәрбиә мәктәбенең әҙәбиәткә ҡағылышлы яҡтарына ғына бер ни ҡәҙәр туҡталып китмәксемен.

Мин ауыл мәктәбендә уҡып йөрөгәндә Әкрәм Вәлиҙең исеме киң таралғандарҙан ине. Уның «Беҙҙең яҡ егеттәре», «Сәрмәсән яландарында» тигән повестарын йотлоғоп уҡыуыбыҙ әле лә хәтерҙә. Улар башта «Әҙәби Башҡортостан» журналында баҫылды. Ә был журнал бөтә ауылға бер генә данала – избачта. Шуға күрә уны күберәк кистәрен, бергә йыйылып уҡый торғайныҡ. Повестарҙы бөтә нескәлектәренә тиклем, бәлки, аңлап та бөтмәгәнбеҙҙер. Ләкин беҙҙең малайҙарса эскерһеҙ маһайыуыбыҙҙың сиге юҡ ине: был әҫәрҙәрҙе яҡташыбыҙ – Аблай ауылында тыуып үҫкән ағайыбыҙ яҙып, ташҡа баҫтырған бит! Һуңыраҡ, бер аҙ үҫә төшкәс, алыҫтан ғына булһа ла Әкрәм Вәлиҙең үҙен дә күрергә насип булды.

...1958 йылдың октябрь айы, булһа кәрәк. Көҙгө осорҙа һирәк-мирәк кенә күренеп ҡала торған салт аяҙ көн. Урып-йыйыу эштәрен уңышлы тамамлап, дәүләт келәттәренә лә, үҙебеҙгекенә лә игенде мул ғына һалып ҡуйғас, район етәкселәре халыҡты рухи аҙыҡ менән дә туҡландырып алырға уйланы һәм беҙҙең төйәктә тыуып, хәҙер төрлө тарафтарға таралған әҙәбиәт, мәҙәниәт, фән эшмәкәрҙәре менән осрашыу үткәрергә ҡарар итте. Район үҙәгендә башланған был осрашыу ҙур һәм күңелле байрамға әйләнеп китте. Шул осрашыуға Өфөнән Әкрәм Вәли ҙә ҡайтҡайны. Мәҙәниәт йортонда ойоштороlған кисәлә уның, үҙе тураһында артыҡ оҙаҡ һөйләп тормайынса, бер нисә шиғырын уҡып ишеттергәне хәтерҙә ҡалған.

Әғләм исемле өлкән ағайымдың, үҙе хәрби кеше булһа ла (ул революцияға тиклем тыуған, бөтә ғүмерен армияға бағышланы, 1941–1945 йылдарҙа Башҡорт атлы дивизияһы составында һуғышты, Сәғит Әлибаев үҙенең «Онотолмаҫ йылдар шаңдауы» тигән иҫтәлектәрендә уны бер нисә тапҡыр телгә ала), мине әҙәбиәткә яҡынайтырға тырышҡанлығын шәйләйем. Ҡырҡынсы йылдар аҙағында тәү тапҡыр Өфөгә килгәнемдә Әхнәф Харисовтың «Әҙәбиәт теорияһы» тигән китабын алып биргәне, беҙҙең яҡта ла шағирҙар бар ул тип ғорурланып, үҙенең замандаштары Ғәлимйән Латип менән Нур Ғайсинды йыш ҡына телгә алғаны иҫтә. Танауға әҙәбиәт еҫе керә башлағас, ундай шағирҙарҙың барлығына ағайым һүҙҙәре аша ғына түгел, әҫәрҙәрен уҡып та ышандым. Улар икеһе лә беҙҙән алыҫ булмаған күрше ауылдарҙа тыуып үҫкәндәр, егет булып еткәс, Ҡазанға китеп, ғүмерҙәрен туғандаш татар әҙәбиәтенә хеҙмәт итеп үткәргәндәр. Журналистар курсында уҡыған саҡта яҡташ шағирҙарҙың береһен – Ғәлимйән Латипты – осратып, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырырға ла тура килде.

Беҙҙең төйәктән сыҡҡан яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың, алыҫҡа китмәйенсә, Өфөлә төпләнгәндәре лә етерлек. Шуларҙың иң ҡеүәтлеһе һәм абруйлыһы – Ғилемдар Рамазанов. Уның хаҡында тәү тапҡыр һуғыш тамамланған йылда ишеттем. Беҙҙең ауылдар бер-береһенә яҡын булғанлыҡтан, ундағы яңылыҡтар, хәбәр-хәтерҙәр бик тиҙ тарала һәм уртаҡ хазинаға әйләнә торғайны. 1945 йылдың эҫе йәйендә Ғилемдар ағайға бәйле хәбәр менән дә шулайыраҡ булды. Ололарҙың: «Йыһандарҙың теге гәзиткә яҙыша торған улы ҡайтҡан. Бер ҡулы яраланған икән», – тип һөйләнгәндәре ҡолаҡҡа кереп ҡалған. 1958 йылдың матур көҙөндә районда үткәрелгән теге осрашыу кисәһендә ул да ҡатнашҡайны. «Совет Башҡортостаны»

гәзитендә редакторлыҡ вазифаһын ҡалдырып, яңы ғына СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында өлкән ғилми хеҙмәткәр булып эшләй башлаған сағы ине. Ҡыйыуһыҙлығым арҡаһында яҡындан таныша алманым. Артабан иһә мин уның шиғырҙарын, ғилми хеҙмәттәрен даими уҡып барҙым. Ә бына 1962 йылдың башында Башҡортостан журналистарының республика конференцияһында яҡташым менән күрешеп танышырға насип булды. Тәнәфес ваҡытында беҙҙең арала үҙенең ҡыйыулығы менән айырылып торған Хаҡҡый Фәттәхов (ул бик матур шиғырҙар яҙа ине; ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның таланты асылмай ҡалды – был донъяны бик иртә ташлап китте) атлы делегаттың хәстәрлеге һөҙөмтәһендә Ғилемдар ағай менән бергә хатта фотоға төштөк. Ул һүрәт миндә әле лә һаҡлана. Ләкин беҙҙең танышлыҡ ҙур яҡынлыҡҡа әйләнеп китмәне – рәсми юҫыҡтараҡ ҡалды. Быға, бәлки, мин үҙем ғәйеплелер. Әммә яҙғандарым уға оҡшай ине һымаҡ. Бәлки, миңә шулай тойолғандыр ғына.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ғилемдар Рамазанов хаҡында үткән заманда ғына һөйләргә ҡалды. Сөнки тәбиғәттең яҙылмаған законы уны ла үҙ яйына буйһондорҙо – әле генә бынамын тип йөрөп ятҡан кеше гүр эйәһенә әйләнде. Күңеле һиҙгәндер инде – вафатына бер-ике ай ғына ҡалғас, «Хәтер төпкөлөнән» тигән иҫтәлектәрен баҫтырып сығарҙы. Хәҙер был иҫтәлектәрҙе шағирҙың ҡәләмдәштәре дауам итә һәм яңы һыҙаттар менән тулыландыра, егәрле, кешелекле ир-егеттең күркәм һүрәтенә яңы буяуҙар өҫтәлә.

Яҡташымдың ысынлап та егәрле кеше булғанына уның алтмыш йәшен билдәләгән осорҙа төшөндөм. Ниндәйҙер бер эске ауаз ошо юбилей айҡанлы мәҡәлә яҙырға өндәне. Кемдең дә булһа тормошо һәм ижады тураһында һүҙ әйтергә уйлаһаң, иң тәүҙә уның матбуғатта баҫылған әйберҙәрен барлай башлайһың бит. Ғилемдар Рамазановҡа арналған «Шағир һәм ғалим» тигән бәләкәй генә күҙәтеүҙе яҙыр өсөн дә миңә бик күп ултырырға тура килде. Сөнки уның айырым китап булып сыҡҡан хеҙмәттәренән тыш төрлө гәзиттәрҙә, журналдарҙа баҫылған мәҡәләләрен бер урынға туплаһаң, үҙе генә лә әллә күпме ҙурлыҡтағы том барлыҡҡа килер ине. Тәңкитсе һәм ғалим Ғ. Рамазанов ҡәләмдәштәренә, айырыуса – йәштәргә, бик иғтибарлы булды. Хәҙер уның үҙе тураһында китап яҙырға ваҡыт етмәнеме икән?

Беҙҙең төйәктә тыуып үҫкән яҙыусылар исемлеген Әхнәф Байрамов дауам итә. Уны ла мәктәптә уҡып йөрөгәндә үк ишетеп белә

инем. Яңы Ҡаръяуҙы ете йыллыҡ мәктәбендә эшләгәндә (ә был ауыл Сейәлеҡулға терәлеп үк тора тиерлек) уның хаҡында күберәк тә белдем, йәйге ялға ҡайтҡан мәлендә хатта үҙен дә күргә насип булды. Ул осорҙа Әхнәф Байрамов очерк жанрында бик әүҙем эшләй ине. Яҙғандарын бөтәһен дә тип әйтерлек уҡып барҙым, уға оҡшатырға тырышып, үҙем дә ҡәләм тибрәтеп ҡараған саҡтар булғыланы.

Мин район гәзитендә эшләп йөрөгән дәүерҙә әҙәбиәт майҙанында яңы исемдәр ҡалҡып сыҡты: Вәзих Исхаҡов, Хәләф Гарданов, Фәнил Мансуров... Һуңыраҡ уларға Мансаф Ғиләжев өҫтәлде. Шулар араһында иң яҡыны Вәзих Исхаҡов булғандыр. Сөнки ул райондаш ҡына түгел, ауылдаш та ине. Тыуған төйәгенә йыш ҡайтып йөрөнө, шуға күрә осрашыуҙар ҙа йышыраҡ була торғайны.

Вәзих Исхаҡовты үҙемдең малай сағымдан уҡ беләм тиергә мөмкин. Уның хаҡында оҙаҡ һөйләргә булыр ине. Бында ҡайһы бер эпизодтарға ғына туҡталмаҡсымын. Тәйнәш – элек-электән ҙур ауыл. Ҡасандыр хатта баҙары ла булған. Заманында ул әллә нисә бригаданы берләштергән эре генә бер колхозды тәшкил иткән. Тәбиғи, ҙур ауылдың урамдары ла күп була, уларҙың атамалары ла төрлөсә яңғырай: Оло урам, Базы урамы, Тамъян урамы, Типтәр урамы, Арҡылы урам, Аръяҡ, Юғары ос, Түбән ос... Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Вәзих ағай күрше ауылда ғына урынлашҡан МТС-та шофер булып эшләне. «Пикап» тип исемләнгән бәләкәй кузовлы автомобилдә ниндәйҙер түрәне йөрөттө, ахырыһы. Әсәһе менән ҡустыларының хәлен белер өсөн йыш ҡына ауылға ла һуғылып китер ине. Оло урамда торһам да, Типтәр урамы малайҙары менән уның пикабына ултырып, Бәләкәй Күпер соҡорона тиклем елдергән саҡтар ҙа булды. Күпергә барып еткәс, ағайыбыҙ, машинаһын туҡтатып, беҙҙе төшөрөр ҙә юлын артабан дауам итер, ә беҙ, шатлыҡтан ауыҙҙарыбыҙ ҡолаҡҡа етеп, кире ауылға ҡарай сабыр инек.

Тағы бер хәтерҙә ҡалған күренеш. Ҡышҡы сатнама һыуыҡ көндө, йәйәүләп, ауылға бер ир-егет килеп инде. Буйға ҡалҡыу ғына. Өҫтөндә, әгәр хәтерем яңылышмаһа, ҡара шинель, аяҡтарында – кирза ботинкалар, арҡаһында кескәй генә биштәр. Егет, ашыҡмайса ғына Базы урамы буйлап үтте лә атаһы нигеҙенә ҡарай атланы. Был – буласаҡ яҙыусының Бәләбәйҙә уҡып йөрөгән мәле ине. Ыҫпай кейенгән, мөһабәт кәүҙәле йәш офицер. Өлкә гәзиттәрендә күренгеләп ҡалған тәүге очерктар, ҡыҫҡа хикәйәләр... Билдәле шәхестәрҙең революцион эшмәкәрлеген сағылдырған тәүге китаптар... Артабан –

повестар, романдар. Вәзих Исхаҡов бик алсаҡ, илгәҙәк кеше ине. Мәскәүҙә аспирантурала уҡып ятҡанда уның мине эҙләп тапҡаны хәтерҙә. 1969 йылдың декабрь баштары ине. Яҙыусылар берлеге идараһының яуаплы сәркәтибе булып эшләүсе яҡташым ниндәйҙер йомош менән баш ҡалаға килгән икән һәм Революция майҙанындағы «Мәскәү» ҡунаҡханаһына урынлашҡан. Бер кисте шунда мине лә саҡырып алды. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, донъя хәлдәре, әҙәбиәт мәсьәләләре хаҡында һөйләшеп ултырҙыҡ, таныш-белештәрҙе иҫкә төшөрҙөк. Оҙаҡламай бер-бер артлы тиерлек Әхиәр Хәкимов менән Фәнүн Рамазановтар килеп инде. Һүҙ артынан һүҙ сығып ҡына торҙо, ваҡыттың үткәне һиҙелмәне лә. Байтаҡ ултырғас, Әхиәр ағай өйөнә ҡайтып китте, ә беҙ, өс ауылдаш, таңды «Мәскәү» ҡунаҡханаһында ҡаршыланыҡ. Айырылышыр алдынан Вәзих ағай миңә үҙенең яңы ғына сыҡҡан «Атайым ултыртҡан өйәңке» тигән китабын бүләк итте. Әйткәндәй, уның үҙ ҡулы менән яҙып бүләк иткән китаптары миндә байтаҡ ҡына. Минең өсөн яҙыусының ижад лабораторияһы бер ҡасан да бикле булманы. Әҫәрҙәренең прототиптары, уларҙың нисегерәк итеп китап биттәренә килеп инеүҙәре хаҡында мауығып һөйләр ине. Ижади пландарын да ете ҡат ер аҫтында тотманы. Уның ҡайһы бер хикәйәләренең сюжетын, мәҫәлән, улар ҡағыҙға төшөп, ташҡа баҫылғанға тиклем белергә насип булды миңә.

1978 йылдың сентябрь аҙаҡтарында, булһа кәрәк, Вәзих Исхаҡов тауышһыҙ-тынһыҙ ғына Бөрө яҡтарына килеп сыҡты. Был ваҡытта ул яңынан «Ағиҙел»дә эшләй башлағайны. Беҙҙең яҡтарға юл тотоуының да сәбәбе – журналды пропагандалау һәм уны уҡыусылар араһында мөмкин тиклем күберәк таратыу сараһын күреү. Ҡала хужалары менән осрашып, уларҙың кабинетында ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеп сыҡҡас, ул тура минең янға – институтҡа йүнәлгән. Икенсе көндө уның ошо уҡ бурыс менән Борайға юл аласағын белгәс, яҡташымды үҙемә ҡуна саҡырҙым. Ул әллә ни ҡарышып торманы. Кисен өҫтәл артында барынса һыйланып, үткәндәрҙе иҫләп ултырҙыҡ. Һүҙ күберәк әҙәбиәт хаҡында барҙы, әлбиттә. Тик ул бынан ун йылдар самаһы элек «Мәскәү» ҡунаҡханаһындағы кеүек йәнле һәм шаулы була алманы. Тормош иптәшенең ваҡытынан алда вафат булыуы айҡанлы, ағайымдың ҡайғыһы һурығып өлгөрмәгәйне әле, һәм ул бик бойоҡ күренде. Шулай ҙа был осрашыуҙың бер мәле хәтерҙә сағыу һаҡланған. Минең эш өҫтәлемдә «Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр» тигән китап (уны билдәле ғалимә М. Хәмиҙуллина төҙөгән һәм аңлатмалар

биргән) хаҡында «Советская Башкирия» гәзите өсөн яҙа башлаған мәҡәләмдең ҡаралама биттәре ята ине. Ҡунағым шуларҙы күреп ҡалды ла ҡыҙыҡһынып ҡуйҙы. Буласаҡ мәҡәләнең (яҙылып бөткәс, ул «Советская Башкирия» гәзитенең шул уҡ йылдағы 3 декабрь һанында донъя күрҙе) асылын һөйләп биргәс, шөғөлөмдө хупланы. Башҡорт мемуаристикаһы хаҡында беҙҙең арала бер аҙ һүҙ ҙә сығып алды.

Был эпизодты хәтергә төшөрөүем үҙемдең бәләкәй генә мәҡәләм тураһында ҙур итеп һөйләү ниәтенән түгел, әлбиттә. Вафатына һанаулы ғына айҙар ҡалғас, Вәзих Исхаҡов нәшриәткә «Сәғит Агиш тураһында иҫтәлектәр» тигән китап әҙерләп тапшырҙы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был китапты уға үҙ ҡулдарында тотоп, биттәрен асырға насип булманы, өлгөрмәне. Әжәл тигәндәре һинең бөтә эштәреңдең аҙағынаса эшләнеп бөткәнен көтөп тормай шул. Әлеге китапты төҙөп, уға баш һүҙ яҙған һәм аңлатмалар биргән автор менән дә шулайыраҡ килеп сыҡты. Ләкин шуныһы мөһим: яҡташым атаҡлы башҡорт прозаигының онотолмаҫ образын мәңгеләштереүгә үҙенең баһалап бөткөһөҙ өлөшөн индереп китте был донъянан. Теге ваҡытта мемуар жанры хаҡында һөйләшеп ултырыуҙың һөҙөмтәһе булманымы икән, тип уйлап ҡуям ҡайһы саҡта, «Сәғит Агиш тураһында иҫтәлектәр»ҙе ҡат-ҡат ҡулға алып. Бәлки, шулай ҙа булғандыр. Сөнки ул үҙенең башынан үткән тормош хикәйәләрен, ҡәләмдәштәре хаҡында бер нисә иҫтәлекте берләштергән «Йәшлек моңдары» тигән китабын да ҡалдырҙы бит. Тик был һорауға хәҙер яуап юҡ инде. Йомғаҡлап, әлегә шуны әйтергә мөмкин: Вәзих Исхаҡов бик тырыш һәм ижтиһадлы кеше ине. Әҙәбиәткә һуңлабыраҡ килеп, алтмышын да тултыра алмауына ҡарамаҫтан, ул егерменән ашыу китап сығарып өлгөрҙө.

Әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа, уға мөхәббәт тәрбиәләүҙә райондаштарым ғына түгел, яҡын-тирәлә тыуып үҫкән башҡа әҙиптәр ҙә сәбәпсе булды, тип әйтә алам. Шундайҙарҙан Тимер Арсланды, Назар Нәжмиҙе, Ибраһим Абдуллинды, Нәжиб Асанбайҙы, Хәким Ғиләжевты күрһәтергә мөмкин. Улар бөтәһе лә – беҙгә күрше райондарҙан. Шуға күрә уларҙың матбуғатта күренгән яңы әҫәрҙәре һәр саҡ көтөп, эске бер тулҡынланыу һәм ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршы алына ине. Назар Нәжми менән Хәким Ғиләжев исемдәре күңелгә айырыуса иртә кереп ояланы. Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған Әғзәм исемле уртансы ағайым менән бер осорҙа Дәүләкән педагогия училищеһында уҡығанлығын белгәс, Хәким Ғиләжевҡа ҡарата ихтирамым һәм уның ижады менән ҡыҙыҡһыныуым уғата ла артты. Иҫән

булһа, минең ағайым да әҙәбиәт юлынан китмәҫ ине микән, тигән уй ҙа килгеләне башҡа. Сөнки, ололарҙың һөйләүенә ҡарағанда, ул тыумыштан бик һәләтле булған, ауылда яңы тормош ҡора башлағас, шул дәүерҙе сағылдырған сәхнә әҫәрҙәре яҙып, уны йәштәр менән үҙе үк ауыл клубында уйнаған. Кесе ағайым шикелле, музыка ҡоралдары яһау менән мауыҡҡан, оҫта итеп рәсем төшөргән. Овал формаһындағы фанерҙа майлы буяу менән Базы буйы пейзажын һынландырған һүрәте оҙаҡ йылдар беҙҙең өйҙөң ике тәҙрә араһын биҙәп торҙо. Хәким Ғиләжевҡа әйләнеп ҡайтҡанда, ул әле лә минең рухташым, илһамыма йүнәлеш биреүсе булып ҡала килә. Һикһәненсе йылдар башында ул «Ҡәләмдәштәр» тигән баш аҫтында жанры буйынса элеккеләренән башкөллө айырылып торған китап сығарҙы. Унда шағирҙың әҙәби тәнҡит мәҡәләләре һәм айырым яҙыусыларҙың ижадын сағылдырған әҙәби портреттар тупланған. Мәҡәләләр бик йәнле яҙылған, уҡымлы, ҡыҙыҡлы факттар ҙа, анализ да етерлек, фекерҙәр ҡыйыу. Әгәр ғилем юлын һайлаған булһа, күренекле шағир һәм прозаик исемен яулау менән бер ҡатарҙан, Хәким Ғиләжев бынамын тигән ғалим дәрәжәһен дә алған булыр ине, тип уйлап ҡуям үҙемсә.

Әҙәбиәт серҙәренә ныҡлап төшөнөү институтта уҡыған йылдарға тура килә, әлбиттә. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк: Бөрө педагогия институтында теория практика менән тығыҙ бәйләп уҡытылды. Доцент Иван Александрович Зотовтың эстетика нигеҙҙәре менән әҙәбиәт теорияһынан уҡыған төплө һәм мауыҡтырғыс лекцияларын әле лә хәтерҙә. Уның был фәндәр буйынса уҙғарған семинарҙары ла үҙенсәлекле булды: беҙгә «Новый мир», «Дружба народов», «Октябрь», «Знамя» журналдарында донъя күргән өр-яңы, тәнҡитселәр теленә эләгергә өлгөрмәгән хикәйәләрҙе бүлеп бирер ҙә, шуларға үҙебеҙҙең ҡулдан килгәнсә анализ яһатып, бәхәс ойоштороp ине. Иван Александровичтың, сығышым буйынса мин Шаляпин тыуып үҫкән яҡтарҙан тип эске бер ғорурлыҡ менән һөйләгәне лә хәтерҙә. Мәшһүр яҡташына оҡшатырға тырышып, кисәләрҙә ариялар башҡарғаны ла күҙ алдында. Тауышы көр ине. Ғүмеренең һуңғы сәғәттәренә тиклем спорт менән шөғөлләнде. Алтмыштан уҙған уҡытыусым, саманы онотоп, иртәнге гимнастика яһағанда йән биргән. Бөрө пединститутына инһә ул Мәскәүҙә аспирантура бөтөргәс ебәрелгән. Үҙе уҡыған аспирантураға беҙгә лә юл асты.

Ленинградтан күсеп килгән доцент Иван Прокофьевич Дмитраков та иҫтә ҡалырлыҡ шәхес ине. Уның фән өлкәһендәге төп

йүнәлеше – А. М. Горький ижады ине. Ошо ижадты бөтә нескәлегендә өйрәнеүгә ғүмерен бағышлаған. Беҙҙә лә бөйөк яҙыусыға мөхәббәт тәрбиәләргә тырышты, уның тормош юлын һәм ижадын тикшереүгә бағышланған махсус семинар менән етәкселек итте. Бөрөлә йәшәй башлағас, Иван Прокофьевич башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте менән дә яҡындан ҡыҙыҡһынды. Урыҫ һәм башҡорт әҙәбиәттәре араһында оҡшашлыҡтар, элемтәләр, бәйләнештәр эҙләү теләгән миндә ул уятты тип әйтә алам. Тышҡы ҡиәфәте менән дә, үҙен тотошо йәһәтенән дә, характеры буйынса ла ифрат үҙенсәлекле кеше булды Иван Прокофьевич. Уның метафораларға, һәр төрлө сағыштырыуҙарға, эпитеттарға бай теле тураһында һөйләп тораһы ла юҡ.

Институттың мин уҡыған осорҙағы ректоры К. Әхиәров, беҙ йәшәгән ҡаланың мәҙәниәт үҙәктәренән алыҫта ятҡанлығын иҫтә тотоп, Бөрө студенттарының дөйөм әҙерлеген баш ҡаланыҡылар кимәленән түбән төшөрмәҫ өсөн күп көс һалды һәм даими хәстәрлек күрҙе. Институтта ҡунаҡта Өфөнән, Ҡазандан, Мәскәүҙән, хатта ҡайһы бер сит илдәрҙән дә саҡырып килтерелгән атаҡлы ғалимдар, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре йыш була ине. Ошо йәһәттән беҙҙең акттар залын Бөрө ҡалаһындағы иң иҫтәлекле, иң изге урын, тиер инем. Олораҡ быуын вәкилдәренең һөйләүенә ҡарағанда, заманында унда Афзал Таһиров сығыш яһаған. Был залдың өнһөҙ стеналары Илья Эренбург, Марк Бернес, Зәйнәб Биишева, Баязит Бикбай, Ғәйнан Әмири, Әнүәр Бикчәнтәев, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Ғилемдар Рамазанов, Муса Ғәлиҙәрҙең тауыштарын үҙенә мәңгегә һеңдергән.

Юғары уҡыу йортон бөтөргәнлеккә диплом алғанда, минең киләсәгемдең ысынлап та әҙәбиәткә бәйле булыры көн кеүек асыҡ ине. Аспирантурала уҡығанда ла, уға ҡәҙәр һәм унан һуң да иғтибарым үҙәгендә башҡорт әҙәбиәте торҙо. Дөрөҫөрәге, ул урыҫ әҙәбиәте менән бергә үрелеп барҙы. Күңел даръяһында йөҙгәндә шул күҙгә ташланды: бөтә шатлыҡтары, ҡайғы-хәсрәттәре менән байтаҡ ғүмер үтеп киткән икән дә баһа. Төнгө йоҡо иҫәбенә булһа ла, байтаҡ ҡына мәҡәләләр ҙә яҙылған. Уларға күпме көс сарыф ителгәнлеген, ниндәй хистәр кисереше аҫтында яҙылғанлыҡтарын үҙем генә беләм. Әммә, нисек кенә булмаһын, ошо ауыр ҙа, бер үк ваҡытта мауыҡтырғыс та юлды һайлап, яңылышманым һымаҡ.

2006, июнь.

ПОЭТИК БЕЙЕКЛЕКТӘРҘЕ ЯУЛАП

(Н. Нәжмиҙең ижади портретына ҡайһы бер һыҙаттар)

Күренекле шағир Н. Нәжмиҙең беренсе шиғри китабы «Тамсылар» (1950) тип аталғайны. Күләме яғынан ҙур булмаған был йыйынтыҡты уҡыған һайын мин ниңәлер беренсе шиғырҙа оҙағыраҡ туҡталам. Һәр саҡ үҙемә ниндәйҙер яңылыҡ асам, яңы тәм табам, буяуҙар төрлөлөгөнә ғәжәпләнәм, уларҙың сағыулығына һәм һутлылығына һоҡланам. Был буяуҙар шундай сағыу һәм саф, әйтерһең дә шиғыр утыҙ өс йыл элек түгел, ә бөгөн, ошо минутта яҙылған: «Ҡарт Урал һыртынан һарҡып ваҡ-ваҡ тамсылар, көн-төн туҡтамай, тып та тып ташҡа тамдылар. Тамдылар ҙа… Таштың өҫтө төштө уйылып. Һәм сыҡты шунан бер ваҡыт шишмә урғылып…». Был һүҙҙәрҙә быуаттар буйына ҡуңалтаҡ тормошҡа дусар ителгән, тик Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына йәшәүгә һәм сәскә атыуға хоҡуҡ алған башҡорт халҡының яҙмышы ла, уның тормошта барыһы ла бәләкәйҙән, күҙгә күренмәгән ваҡ әйберҙән башлана тигән аҡыллы фекере лә, тамсынан күл була тигән тапҡыр әйтеме лә һәм башҡа нәмәләр сағыла төҫлө. Был фекер шағирҙың үҙенең ижади яҙмышына ла ҡағыла, шикелле.

Н. Нәжмиҙең тәүге китабы сыҡҡан мәлдән күп ваҡыт үтте. «Тамсылар» артынан бер-бер артлы төрлө телдәрҙә яңы шиғри йыйынтыҡтары донъя күрҙе. Башҡорт һәм татар телдәрендә «Тулҡындар» (1955), «Көтөлмәгән ямғыр» (1960), «Ер һәм йыр» (1962), «Көҙгө һуҡмаҡтар» (1967), «Ҡарҙар яуа» (1971), «Ут күрше» (1972), «Көтмәгәндә» (1973), «Тарафтар» (1980); рус телендә «Осенние тропы» (1969), «Вслушиваясь в тишину» (1973), «Спасибо этому дому» (1974), «Всегда под звездами» (1975), «Дыхание» (1976) һ.б. йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты. Мин был исемлеккә авторҙың ижади йөҙөн төҫмөрләргә аҙмы-күпме ярҙам итеүсе баҙыҡ исемле китаптарын ғына индерҙем. Һис һүҙһеҙ уны авторҙың төрлө йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Һайланма әҫәрҙәре», пьесалар йыйынтығы иҫәбенә дауам итергә булыр ине. Бында юлъяҙмалар, прозаик әҫәрҙәр,

әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре, әҙәби оҫталыҡ тураһында уйланыуҙар йыйынтыҡтарын да теркәргә мөмкин…

Ләкин эш баҫылып сыҡҡан китаптар һанында ла, уларҙың исемдәрен һанауҙа ла түгел. Иң мөһиме, минеңсә, шунда: улар авторға дан, шөһрәт килтерҙе, уны республикала ғына түгел, бөтә ил күләмендә яратып уҡылған, популяр шағирға әйләндерҙе. Ҙур ижади юл үткән Н. Нәжми, заманыбыҙҙың танылған шағиры В. Федоровтың хаҡ әйтеүенсә, күп хеҙмәт күрһәткән, хөрмәт ҡазанған шағирға әүерелде.

Шағирҙың әҙәбиәткә килеү юлы үҙенсәлекле булды. Был осраҡта Ленинград тәнҡитсеһе Дм. Хренковтың бик образлы һәм тапҡыр сағыштырыуын ҡулланмай булдыра алмайым. «Назар Нәжми, – тип яҙғайны ул бер ун йылдар самаһы элек, – Мостай Кәримдең йәштәше. Уларҙың биографияһы бер-береһенә оҡшаш, ә ижади яҙмыштары икеһенең ике төрлөрәк булды. Мостай Кәримдең таланты бик тиҙ асылды. Бырау нефтле ҡатламға үтеп инеү менән, нефть фонтаны ер тәрәнлектәренән шулай ҡапыл урғылып сыға башлай. Назар Нәжми оҙайлы яҙға оҡшаны. Яҙғы һыуҙар оҙаҡ йыйылып, ҡалын боҙ ҡатламы аҫтында йәшеренеп торҙолар, сәғәте килеп еткәс кенә, улар барлыҡ көс-ҡеүәте менән тирә-яҡҡа ташып сыҡтылар».

Әйткәндәй, ижади яҙмышының башҡаларҙыҡына ҡарағанда бүтәнсәрәк булыуын Н. Нәжми үҙе лә инҡар итмәй. Күренекле башҡорт шағирәһе Ф. Рәхимғоловаға эссе-мөрәжәғәтендә ул былай ти: «Беҙ бит әҙәбиәткә оҙаҡ, бик оҙаҡ һәрмәнеп-һәрмәнеп килдек. Беҙгә ялт итеп ҡабынырға һәм ялт итеп янып торорға мөмкин булманы. Белмәйем, тәбиғәттең биргәнеме, әллә заманмы шулай итте. Барҙыр инде, икеһе лә барҙыр».

Шағирҙың лирик биографияһын тәшкил итерҙәй шиғри әҫәрҙәрендә лә әҙәби аренаға сығыуҙың оҙайлы характерҙа булыуы тураһында фекер сағылып ҡала. «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә…» тигән шиғырында, мәҫәлән, шағир уға хас эскерһеҙлек менән былай ти:

Ирештем дә кеүек моратыма,
Хәҙер миңә башҡа ни кәрәк?
Тик бөтәһе һуңлап килде миңә,
Мин тыуғанмын, ахыры, иртәрәк.

Ләкин был һис тә Н. Нәжмиҙең лирикаһы тик интим, эске уй-тойғолар менән генә сикләнгән тигән һүҙ түгел. Күңел йылыһы менән йылытылған лирика шағирҙың шәхси уй-кисерештәренән йыш ҡына алда тора:

Үҙ юлымдан, үҙ йырымдан
Айырыуы мине ситең.
Ерем, һыуым, йырым менән
Мин – бер бөтөн! Мин – бер бөтөн!

«Ике һыбай», «Ағастар менән һөйләшеү», «Ҡоя ямғыр», «Тау һәм йылға», «Ғүмер», «Ҡарҙар яуа» шиғырҙары ла әле килтергән «Мин бер бөтөн» шиғыры рухында яҙылғандар. Стиль һәм тематика төрлөлөгөнә ҡарамаҫтан, улар автор фекерләүенең юғары интеллектуаль кимәлдә булыуы, һалынған фекерҙең тәрән мәғәнәлелеге, лирик геройҙың хәҙерге ысынбарлыҡ фактттарына актив мөнәсәбәте, тормош позицияһының аныҡлығы менән айырылып торалар.

Н. Нәжмиҙең лирикаһы ғәҙел, ул өгөт-нәсихәттәрҙән азат. Шағир тормошто уның бөтә ҡатмарлығында һәм төрлөлөгөндә күрә. Ул йәне-тәне менән беҙҙе солғаған тормошто аңларға, уның үҫеш законлылыҡтарын поэтик төҫмөрләргә, кешенең йәшәү мәғәнәһенең серҙәренә төшөнөргә ынтыла.

Ниндәй тыныс! Ығы-зығы,
Әйтерһең, юҡ был заманда.
Ниндәй тәртип ер өҫтөндә
Юғарынан ҡарағанда, –

тип уйлана шағир үҙенең бер шиғырында.

Көндәлек тормош философияһының поэтик интерпретацияһы «Шапырынма!» шиғырында асыҡ сағыла. Был шиғыр тура телмәр формаһында төҙөлгән. Атаның улына биргән теләктәрен шағир үҙгәрешһеҙ шиғыр юлдарына һала. Был һүҙҙәрҙә күпме аҡыл һәм халыҡ зиһененең зирәклеге тупланған! Авторҙың уҡыусыға әйтергә теләгән, уны таныштырырға уйлаған тормош философияһы юл һайын, строфа һайын тәрәнәйә бара. Шиғыр аҙағында шағир ҡыҫҡаса һығымта яһай:

Беләм, ауыр көйләүҙәре
Был донъяның көйһөҙ көйөн.
Улым, быны һиңә әйтәм,
Һин дә мине тыңла, килен.
Йә хушығыҙ!..

Н. Нәжмиҙең һуңғы йылдар поэзияһында философик йүнәлеш көслөрәк юл ала, лирикаһы философик лирикаға әйләнә бара. Ғәҙәттә Н. Нәжми шиғырҙары күләме, строфалар һаны буйынса ҙур түгелдәр, ләкин фекерләү характеры, поэтик образдың масштаблылығы буйынса улар йыш ҡына киң дөйөмләштереүҙәргә хәтлем үҫәләр:

Бәхеткә лә, рәхәткә лә микән
Әллә кеше бик тиҙ күнегә –
Тауҙай шатлыҡ беленмәй ҙә кеүек,
Бер түңгәктәй ҡайғым күренә.

Тау янында бер ни түгел түңгәк,
Ул күҙгә лә һирәк сағыла.
Ләкин кеше бейек тауға түгел,
Түңгәккә шул килеп абына.

Н. Нәжмиҙең «Яҙ көнөндә һөйләшеү» тигән шиғыры образлы, поэтик кәүҙәләндерелгән быуындар эстафетаһы, быуаттың художестволы биографияһы итеп ҡабул ителә. Был – шағирҙың үҙ-үҙе менән һөйләшкән эске диалогы, үҙ көсөнә ышаныу тойғоһо менән һуғарылған диалогы. Ә был көс – үҙеңде бөйөк Коммунистар партияһының бер киҫәге, өлөшө итеп тойоуҙа.

«Йоҡлаған бала янында һүҙ» исемле поэма-монолог «Яҙ көнөндә һөйләшеү»ҙең органик дауамы булып тора. Был – Н. Нәжми әҫәрҙәренең күренеклеләренән береһе. Ул күләме яғынан ҙур түгел, ләкин тәрән йөкмәткеле, оло фекерҙәр менән рухландырылған. Унда заман динамикаһы масштаблыраҡ, тосораҡ сағылған. Оло тарихи ваҡиғалар ағышын үҙ йөрәге аша үткәреп, әйтерһең, шағир кешелек донъяһы яҙмышы өсөн тревога һуға.

Н. Нәжми поэзияһы шағирҙы тәрбиәләп үҫтергән тыуған ерә, халҡына төбәлгән. Н. Нәжми әҫәрҙәре үҙенең ошо яғы менән башҡорт уҡыусыларына ғына түгел, ә бөтә совет кешеләренә яҡын. Шағир

кешеләр өсөн, уларҙың мәнфәғәттәре менән йәшәй. Уның ижады үҙенең тамырҙары менән халыҡҡа береккән, йөкмәткеһе беҙҙең күп яҡлы һәм күп төрлө тормошобоҙ менән бәйләнгән. Был йәһәттән «Әпәй, ҡояш» шиғыры әһәмиәтле:

Ләғнәт төшһөн миңә, әгәр, ерем,
Әпәйеңә
Тир түкмәгән ҡоро ҡул һуҙһам.
Шиғырҙарым ҡарғап, ташлап китһен,
Мин үҙемде
Шул әпәйҙән әгәр ҙур ҡуйһам.

Халыҡҡа, реаль ысынбарлыҡҡа йәне-тәне менән тығыҙ бәйләнгәнлек идеяһы «Ут күрше» шиғырында сағыу һәм образлы кәүҙәләндерелгән:

Ут алырға… Йөрәгемдә минең
Утым бөткән, һүнгән саҡтарҙа,
Мин ут алдым, алдым кешеләрҙән,
Алған кеүек саҡматаштарҙан.

О, миндә лә аҙ-маҙ ут табылып,
Кинәнһәләр икән кешеләр.
Әйтһә ине улар, уның менән тиеп,
Беҙ ут күрше, беҙ ут күршеләр.

Һәр аҙымын халыҡҡа тиңләп, уның бай рухи тәжрибәһенә таянып, шағир халыҡ аҡылын йотлоғоп үҙенә йыя, уның һуттары менән туҡлана. Ул халыҡ әйтемдәрен, йырҙарын, мәҡәлдәрен һәм хикмәтле һүҙҙәрен «төҙөү материалдары» сифатында ғына файҙаланмай, ә уларға таянып эш итә. Нигеҙендә идея яғынан байытылып, заманса үҙгәртелгән халыҡ юрауҙары һәм хөрәфәттәре ятҡан «Рәхмәт, тимен», «Ут күрше», «Әгәр улар юлда икән…» шиғырҙары ла шулай тыуғандар:

Ишеттем мин: кемдәргәлер
Ҡулым еңел булғанлығын,
Миңә осрап кешеләрҙең
Юлдары ла уңғанлығын.

Дуҫым да бар, дошманым да –
Донъя шул бер төҫлө түгел.
Аяҡтарым да булалар
Кемгә ауыр, кемгә еңел.
Яуыздар яуыз күрһә лә,
Күңелемдең төбө бүтән,
Кешеләргә юл булһын, тим,
Әгәр улар юлда икән.

Н. Нәжмиҙең утыҙ йылдан ашыу элегерәк яҙылған «Ленин яҡҡан усаҡ» тигән шиғыры хәҙер хрестоматия әҫәре булып бара инде. Шағирҙың өс томдан торған әҫәрҙәр йыйынтығында ла ул лайыҡлы урынын алған. Әҫәрҙең ғәҙәттән тыш тәьҫир итеү көсө, минең уйымса, авторҙың уңышлы поэтик форма табыуында. Шиғыр конкрет тормош материалын һүрәтләүҙән башлана:

Аҡ ҡайындар күләгәһе төшкән
Аҡланында киң рус еренең,
Янып торған усаҡ эргәһендә
Уйға сумған донъя генийы.

Ләкин авторҙы күренекле тарихи факттарҙы ябай һөйләп сығыу мөрхәтһендермәй. Конкрет хәлдән әкренләп образлы абстракцияға күсә. Һөҙөмтәлә «уйға сумған донъя генийы» эргәһендәге ғәҙәти усаҡ бөтә донъяға йылылыҡ һәм яҡтылыҡ биреүсе тәрән дөйөмләштерелгән, поэтик күләмле образға әүерелеп китә. Н. Нәжмиҙең был шиғырында эҙмә-эҙлекле, ғәжәп теүәл фекер градацияһын күҙәтеп була. Ул юлдан юлға тәрәнәйә, тослана һәм күп яҡлы була бара. Икенсе строфала, мәҫәлән, Ленин яҡҡан усаҡ йылыһының тәьҫирен автор үҙе менән генә сикләй:

Ул уйҙарҙың тәрәнлеген беләм,
Күрмәһәм дә дауылын шул саҡтың;
Ғүмер буйы мин йылыһын тоям
Шул аҡланда янған усаҡтың.

Өсөнсө строфала усаҡтың поэтик образы тағы ла күләмлерәк төҫ ала:

Усаҡ яна! Аҡ ҡайынға үрелеп
Уралалар күкһел төтөндәр.
Бер ниндәй ел уны һүндерә алмай,
Яна усаҡ көнөн-төнөн дә.

Һуңғы строфала был образ тамам үткерләнеп, бар мөһабәтлегендә беҙҙең күҙ алдына килеп баҫа:

Шуға ерем яҡты, йылы минең –
Мәңгелек яҙ тыуҙы нурланып.
Ленин яҡҡан ошо усаҡ бөгөн
Йылыта бара бөтә донъяны.

Күреүебеҙсә, образлы фекерләү һәм поэтик формаларҙы оҫта ҡулланыу арҡаһында Н. Нәжми был шиғырында киң таралған Ленин темаһына үҙенсә, оригиналь килгән һәм даһиҙың үлемһеҙ образын матур художество биҙәктәр менән күрһәтә алған.

Н. Нәжми һуғыш тураһында күп һәм тулҡынландырғыс итеп яҙа. Уның «Әсә», «Ҡайындар», «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Йоҡлаған бала янында һүҙ», «Күлдәк» кеүек ҙур әҫәрҙәре һуғыш тематикаһы менән бәйләнгән. Уларҙы дөйөм бер һыҙат берләштерә – ул автобиографиклыҡ. Әгәр ҙә «Ҡайындар» балладаһының йөкмәткеһе һуғыш яланынан ҡайтмаған балалыҡ дуҫы менән бәйләнгән булһа, «Ҡапҡалар» исемле лирик поэмала «тормош ҡапҡалары» аша үткән тиҫтерҙәре һәм үҙе тураһында хикәйәләй; «Йыр тураһында баллада» Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған күренекле башҡорт шағиры М. Харисҡа бағышланған. Ләкин бындай автобиографиклыҡ һис кенә лә был әҫәрҙәрҙең дөйөм идея-художество һәм эстетик әһәмиәтен кәметмәй, бының менән улар тар, локаль булып китмәйҙәр. Тәрән лиризм менән һуғарылған был әҫәрҙәр үҙҙәренең тормош-санлығы һәм образлылыҡтары менән ышандыралар; киң дөйөмләштереүҙәргә һәм уйланыуҙарға аҙыҡ биргән кешеләрҙең яҙмышы беҙҙә һоҡланыу тойғоһо уята.

Үҙенең метафорик стиле, фекер киңлеге һәм күренештәрҙең асылына тәрән инеүе менән «Ҡапҡалар» лирик поэмаһы отошло. Әҫәрҙең үҙәгендә – тыуған «баҫыу ҡапҡаларын» аша атлап, оло поэзияға сыҡҡан һәм «донъя ҡапҡаларын» асырға баҫҡан ауыл малайы образы. Был образ индивидуаль дә, типик тә. Типик, сөнки һәр

кем тормош баҫҡыстарынан үтә, ләкин һәр кем үҙенсә, башҡаса үтә. Был йәһәттән Н. Нәжми поэмаһы быуат биографияһы итеп ҡабул ителә. Поэмала шағирҙың күҙаллауҙары һәм һиҙемләүҙәре аша илебеҙҙең тарихы сағыла, ә уның фонында – Октябрь тиҫтерҙәренең биографияһы тасуирлана. Поэма патриотик пафос менән һуғарылған:

Тыуған яғым, ниндәй булһам да мин,
Мин барыбер һиңә бурыслы,
Ҡулдан килгән тиклем һинең йырсы,
Кәрәк саҡта – һалдат, һуғышсы...

Дәһшәтле йылдар ауазы шағир-фронтовиктың борсоулы йөрәгенә тынғы бирмәй, ул үҙенең ижадында әленән-әле был темаға әйләнеп ҡайта. «Атайымды алып ҡайт», «Һуғыштан да яман нәмә юҡтыр…», «Һалдат өсөн», «Эҙләмәйем», «Ниндәй көн был?..», «Миләш», «Һыйыр тураһында йыр», «Һалдаттар, һалдаттар…» шиғырҙары һәр совет кешеһенең күңеленә һеңгән, һәр беребеҙҙә төҙәлмәҫлек яра ҡалдырған йәшенле-дауыллы көндәр хәтирәһен ирекһеҙҙән беҙҙең күңелебеҙҙә яңырта:

Самолеттар һинең һүҙгә
Иғтибар итмәнеләр.
Һуғышҡа бит бөтәһе лә
Ҡайтырға китмәнеләр.

Хәҙер үҙең бейектәргә
Осоп китәһең менеп.
Миңә ҡалһа, атайыңды
Эҙләп китәһең кеүек.

Н. Нәжмиҙең «Күлдәк» поэмаһы ла хәл-ваҡиғаларҙың көсөргәнешлеге һәм сюжет йылдамлығы менән айырылып тора. Бында быуындар күсәгилешлеге проблемаһы ҡуйыла һәм хәл ителә. Тәү ҡарашҡа шағир ауыр һуғыш йылдары, уның ҡайғы-хәсрәттәре кеүек күптән таныш тормош материалына мөрәжәғәт итә кеүек. Ләкин уңышлы табылған һәм ҙур оҫталыҡ менән художестволы дөйөмләштереү кимәленә еткерелгән деталь – күлдәк байрамы Н. Нәжми поэмаһына өр-яңы, ҙтә оригиналь яңғыраш бирә:

... «Балаларым,
Бер йола бар беҙҙең затта.
Малайға биш йәш тулғанда,
Ата-баба бала саҡта
Кейгән күлдәкте кейҙереп,
Атаһы улын мендереп
Ултыртырға тейеш атҡа,
Эйәрләнгән, ярһыу атҡа –
Шул йола бар беҙҙең затта»...

Биш йәшлек етем ейәнсәр Ансафҡа бағышланған традицион ғаилә тантанаһын Әсмә өләсәй ошондай һүҙҙәр менән аса. Был осраҡта беҙ йәнә Н. Нәжмиҙең милли тормош йолаһын ҡулланыу факты менән осрашабыҙ. Хәйер, шағир үзе лә халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәренә тарафдар булыуын йәшермәй:

Күлдәк туйы!.. Ҡай берәүгә
Бындай туйҙар ғәжәптер ҙә.
Бер ҡарауға, ил белмәгән
Нәмә кеүек, мәҙәктер ҙә.
Ә бит халыҡ байрамдары
Килә ерҙән, ерҙән килә.

Әммә ырыу традицияларының Н. Нәжми өсөн үҙмаҡсат та, «уйын» да, «сәйер ирмәк» тә түгел. Улар «Күлдәк» авторына оло һәм тәрән идеяны асырға ярҙам итеүсе сара итеп ҡулланыла. «Күлдәк туйы» – ул бөтә поэманың төҙөлөшөндә һәм үсешендә төп үҙәк.

Республиканың С. Юлаев исемендәге премияһы лауреаты Н. Нәжми әле ижади көстәренең сәскә атҡан мәлендә. Шағирҙың бар ижады аша ҡыҙыл еп булып үтерҙәй ниндәй ҙә булһа берҙән-бер теманы әйтеүе ҡыйын. Тематика төрлөлөгө булған хәлдә лә, уның әҫәрҙәре бер әйберҙә берҙәм: уларға бөйөк гражданлыҡ хас. Нимә тураһында ғына яҙмаһын, шағир үҙенә, халыҡ һәм ил алдындағы бурысына тоғро булып ҡала. Н. Нәжмиҙең күп милләтле совет әҙәбиәтенең поэтик күген сағыу һәм шиңмәҫ биҙәктәр менән матурлаусы яңы әҫәрҙәре менән ҡыуандырасағына шикләнмәйбеҙ.

1982

КӨСЛӨ ҺӘМ НЫҠ ШӘХЕС ЙЫРСЫҺЫ

(Д. Юлтыйҙың тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата)

Ошо йәмле яҙғы көндәрҙә республикабыҙ йәмәғәтселеге башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе яҙыусы Д. Юлтыйҙың тыуыуына 90 йыл тулыуҙы киң һәм тантаналы итеп билдәләй. М. Аҡмулла, Ғ. Туҡай, М. Ғафури кеүек мәшһүр шағирҙарҙың поэзияһы йоғонтоһонда яҙа башлаусы, А. Таһиров, И. Насыри, Б. Ишемғолдарҙың замандашы Д. Юлтый туған халҡының рухи культураһы тарихына үҙенең әҫәрҙәрендә дәүерҙең иң мөһим мәсьәләләрен сағылдырыусы һүҙ оҫтаһы булып инде.

Д. Юлтыйҙы революция яҙыусыһы тип атарға тулы хоҡуҡ бар. Ун етенсе йыл ваҡиғаларының грандиоз ҡолас алыуын һәм бөйөк тарихи әһәмиәтен маҡтағаны өсөн генә түгел. Һәм уның үлемһеҙ әҫәрҙәрендә яңы тормош өсөн көрәш дәүеренең бөтә күркәмлегендә йәнләндерелеүе өсөн дә түгел. Бөтәһенән элек ул үҙе ошо ваҡиғаларҙың көслө өйөрмәһендә ҡайнағаны һәм бөтә йәне-тәне менән уларҙың ҡайнар һулышын тойғаны өсөн. Д. Юлтый әҙәбиәткә революция аша килә, буласаҡ китаптарының геройҙары менән ул беренсе империалистик һуғыштың туң оҡоптарында таныша һәм дуҫлаша, улар менән бергә батшаны бәреп төшөрөүҙә ҡатнаша, граждандар һуғышы фронттарында үҫә һәм нығына, социализм төҙөү йылдарында азат хеҙмәт шатлығын уртаҡлаша.

Д. Юлтыйҙың таланты һәм әҙәби мәнфәғәттәре диапазоны ғәйәт киң һәм күп яҡлы. Капиталистик эксплуатация кәмселектәрен тәрән нәфрәт менән фашлаусы һәм яңы дәүерҙең килеүен ысын күңелдән шатланып ҡабул итеүсе шағир һәм драматург, журналист һәм прозаик Д. Юлтый үҙенең бөтә көсөн партияға хеҙмәт итеүгә биреүсе актив йәмәғәт эшмәкәре, үҙенең сығыштарында әҙәбиәт һәм сәнғәттең марксистик-ленинсы идея-эстетик принциптарын яҡлаусы ялҡынлы публицист булараҡ та билдәле.

Д. Юлтыйҙың ижади биографияһы әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт теорияһы менән дә органик бәйләнгән. Ул шәхси мәнфәғәттәренә бикләнеп йәшәүсе кеше булмай. Үҙ әҫәрҙәре өҫтөндә ентекле эшләү, күп көс һәм энергия талап итеүсе ҙур йәмәғәт эшмәкәрлеге менән

бергә, ул замандаштарының ижадын, милли театр формалашыуын иғтибар менән, ҡыҙыҡһынып күҙәтергә, әҙәбиәт һәм сәнғәт үҫешенең актуаль проблемаларына ҡағылған теге йәки был мәсьәлә буйынса оригиналь фекерҙәр әйтергә ваҡыт таба. Әгәр бер аҙ киңерәк итеп алһаҡ, Д. Юлтый йәнле әҙәби процестың актив ҡатнашыусыһы булды, йәш башҡорт әҙәбиәтендә социалистик реализм методын раҫлау өсөн һүҙе менән дә, эше менән дә арымай-талмай көрәшеүселәр сафында бергә атланы тип әйтергә мөмкин. Ошо көрәштә уның ижади таланты нығыны һәм үҫте.

Д. Юлтый бик иртә яҙа башлай. Уның «Башҡорт хәле» тигән тәүге шиғыры 1908 йылда баҫыла. 1910, 1913 һәм 1915 йылдар уның өсөн айырыуса емешле була. Шуныһы характерлы: Д. Юлтыйҙың бөтә шиғырҙары ла тиерлек даталанған, ҡайһы саҡта хатта яҙылыу урыны ла күрһәтелгән. Был яғы менән ул А. Блокты хәтерләтә. Даталары ҡуйылған шиғырҙар шағирҙың тормош юлын, ижади йәшлек осорондағы күңелен билдәле кимәлдә асыҡлай. Улай ғына ла түгел, улар шағирҙың ижад эволюцияһы процесын, уның мәғрифәтселек идеяларынан – демократик ҡарашҡа, ә унан асыҡтан-асыҡ революцион саҡырыуға нисек әкренләп күсеүен аңларға мөмкинлек бирә.

Кешеләрҙең дөйөм бәхете, шәхес азатлығы хаҡында уйланыуҙар Д. Юлтыйҙың бөтә ижады аша ҡыҙыл еп булып үтә. Ул шағирҙың революцияға тиклемге ижадында уҡ беленә һәм Октябрҙән һуңғы осорҙа айырыуса асыҡ күренә. Мәҫәлән, 1916 йыл менән билдәләнгән шиғырҙарының береһендә ул, халыҡ яҙмышы хаҡында тәрән йөрәк һыҙлауы менән уйланып һәм уға бәхетле киләсәк тураһында алдан белгертеп, былай ти:

Халҡым ғәмен тотҡан ғәмле күңел
Меңдәр ғәме менән яна ул;
Меңдәр ғәме менән яна ла ул,
Ғәмдәр уты менән ҡана ул.
Көндө болот мәңге ҡапламаҫ,
Көслө елгә тауҙар ҡаҡшамаҫ,
Сәсрәп аҡҡан шишмә һалҡынына
Таштар ҡаршы хөкөм һаҡламаҫ.

Шағир бик хаҡлы булып сыға. 1917 йылғы революция меңдәрсә һәм меңдәрсә кешеләр яҙмышын яҡтыртып ебәрҙе, уларға бәхеткә

һәм сәскә атыуға юл асты. Кешеләрҙең ғүмер-ғүмергә азатлыҡҡа ынтылыуын өнгә, йәшәүгә хоҡуҡ тураһындағы хыялын реаль ысынбарлыҡҡа әйләндерҙе.

Шағирҙың ҙәнең тауышы ла яңы тарихи шарттарҙа яңыса яңғырай башлай – ул тағы ла көслөрәк булып китә, тормошто раҫлаусы пафос менән тула. Өмөтһөҙләнеү минуттарында, айырыуса империалистик һуғыш йылдарында уны оҙата барыусы һағыш, ҡайғы мотивтары хәҙер күңелле, оптимистик ноталар менән, тәртипкә һалынмаған йәшәү факттарын күрһәтеү яҡты тормошҡа ышаныу менән алмашына; иҫке ысынбарлыҡтың кире яҡтарын тәнҡитләү революциянан һуңғы ысынбарлыҡтың яңы билдәләрен интенсив эҙләү һәм уларҙы мотлаҡ арттырыу, тормошто сағыу, сағыштырғыһыҙ матур итеү теләге менән бергә ҡушыла.

Ләкин иң мөһиме шул: Д. Юлтыйҙың совет осорондағы әҫәрҙәрендә, ниндәй жанрҙа яҙылыуына һәм уларҙа ниндәй тарихи дәүер сағылдырылыуына ҡарамаҫтан, төпсөнөүсән аҡыллы, солғап алған социаль мөхиткә актив мөнәсәбәтле, һәр ваҡыт эҙләнеүсе, бөтә нәмәне белергә тырышыусы, яҡшылыҡтың яманлыҡты еңеүенә ышаныусы яңы геройҙар, яңы характер-кешеләр барлыҡҡа килә. «Бәләкәй Ҡотош» (1919), «Тимеркәй фәлсәфәһе» (1924), «Хәлкәй артист» (1926), «Өмөт» (1926) хикәйәләренең, «Ҡараҫол» (1920) трагедияһының, «Шәрәф» (1922), «Мәйсәрә» (1932), «Нефть тураһында әкиәт» (1932), «Айһылыу» (1933) поэмаларының ыңғай персонаждары быға миҫал була ала.

Һис һүҙһеҙ, был әҫәрҙәрҙең геройҙары – аҡыл үҫешенең кимәле, күңел төҙөлөшө, йәмғиәттә тотҡан урыны буйынса төрлө кешеләр. Өлкән Ҡотош менән Бәләкәй Ҡотош, мәҫәлән, азатлыҡ өсөн ысын көрәшселәр, революцион хәрәкәттә аңлы ҡатнашалар. Яҙмыш ихтыяры менән тормош төпкөлөндә ҡалған Тимеркәй хәҙерге социаль ысынбарлыҡтың ҡаршылыҡтарын, уның серҙәрен төшөнөү стадияһын кисерә. Тимеркәйҙең ғүмере фажиғәле өҙөлә, ләкин уның йәшәү мәғәнәһе, ҡан ҡойғос һуғыштың ни өсөн һәм кем өсөн барыуы хаҡында эске уйланыуҙары бик үҙенсәлекле, улар кеше аңының ауыр ысынбарлыҡ менән йөҙгә-йөҙ осрашыу һөҙөмтәһендә яйлап, хатта ваҡыты менән йәшерен уяна башлауын күрһәтә.

«Артист Хәлкәй» хикәйәһенең сюжетын башҡасараҡ тормош хәлдәре тәшкил итә. Уның геройы йәшләй етем ҡалған, ҡағыла-

һуғыла үҫә. Ләкин ул яҙмышҡа бирешергә теләмәй, иҫке тормошҡа яйлашырға тырыша. Йәмғиәттә билдәле бер хәлгә ирешкәс, Хәлкәй үҙенең сығышын онота һәм тәүҙә революцияға шикләнеп ҡарай. Тәү ҡарауға Хәлкәй менән Тимеркәй һәм Ҡотошто ҡатар ҡуйыу, сағыштырыу ауыр кеүек күренә. Шул уҡ ваҡытта уларҙы берләштергән, бер-береһенә яҡынайтҡан ниндәйҙер уртаҡлыҡ бар. Улар бөтәһе лә – социаль ғәҙелһеҙлек ҡорбандары, ләкин ғорур, эстән йыйнаҡ кешеләр, яҙмышҡа буйһоноп йәшәргә теләмәйҙәр, рухланып эш итәләр. Дөрөҫ, уларҙың активлыҡ дәрәжәһе төрлөсә күренә. Тәбиғәте менән тынғыһыҙ, йүнсел Хәлкәй ирекле күсер ҡошто хәтерләтһә, Тимеркәй хәүефле хәрәкәткә һәм эшкә әҙерәк бирелеүсән, унда хәҙергә пассивлыҡ һәм килешеүсәнлек өҫтөнлөк итә, ләкин уның да күңеле төбөндә үҙенең социаль хәле менән ҡәнәғәтләнмәү тойғоһо өлгөрөүен күрмәү мөмкин түгел. «Бәләкәй Ҡотош» хикәйәһенең геройҙары яҡшы тормош өсөн көрәштең юғарыраҡ баҫҡысында торалар.

Шәрәф, Өмәт, Айһылыуҙың тормош юлдарында, эске теләктәрендә, тирә-яҡта булып торған ваҡиғаларға ҡараштарында уртаҡлыҡтар күп. Ҡотош, Тимеркәй, Хәлкәй кеүек улар ҙа хәҙергене үткәндән, яңыны иҫкенән айырыусы ике дәүер араһында ҡалалар. Яҙыусы, бәлки, геройҙарының характер һыҙаттарын индивидуаллаштереп бөтөрә, уларҙы хәрәкәттә күрһәтә лә алмағандыр. Ләкин улар хәтерҙә ҡала. Был геройҙар беҙҙең күҙ алдыбыҙға бөтә донъяны хайран ҡалдырған бөйөк тарихи үҙгәрештәрҙең тере шаһиттары һәм замандаштары ғына түгел, бөтәһенән элек актив шәхестәр, үткәндән бөгөнгөгә аша атлап сыға һәм яңы тормош төҙөүселәргә әйләнә алыусы кешеләр булып баҫалар.

Д. Юлтыйҙың ижадын иғтибарлыраҡ өйрәнгәндә, уның айырым әҫәрҙәренең М. Горькийҙың революцияға тиклемге әҫәрҙәре менән оҡшашлығын күрмәү мөмкин түгел. Билдәле, М. Горький үҙенең бөтә ижады буйынса кешенең рухи яҡтан үҫеүен, уның аң даирәһенең киңәйеүен, был кешенең оҙаҡ, ләкин ныҡышмалы рәүештә үҙ-үҙенә бикләнгәнлеген еңеүен, йәмғиәт менән, тирә-яҡтағы донъя менән бәйләнешен яйлап арттырыуын һәм нығытыуын иғтибар менән күҙәтә.

Д. Юлтый әҫәрҙәрендә лә кеше яҙмышы ошо ҡараштан сығып яҡтыртыла. Быға миҫалдар күп: юғарыла телгә алынған хикәйә һәм поэмаларҙың, «Ҡарағол» трагедияһының геройҙары Тимеркәй,

Хәлкәй, Ҡарағол һәм башҡалар – шулай уҡ ифрат көслө һәм ныҡ шәхестәр. Был әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе беҙҙе тарих төпкөлөнә алып китһә лә, унда кеше проблемаһы бик ҡәтғи ҡуйыла һәм заманса хәл ителә. Тағы ла бер иғтибар итерлек факт. Ҡайһы ваҡыт Д. Юлтый менән М. Горький әҫәрҙәренең идея яғынан ғына түгел, тематик оҡшашлығы ла күренә. Әйтәйек, хеҙмәтсән массаларҙың революцион көрәшкә ҡушылыуы «Әсә» һәм «Бәләкәй Ҡотош» әҫәрҙәрендә күҙәтелә. Хәлкәй билдәле бер кимәлдә М. Горькийҙың «Дачала йәшәүселәр»е геройҙарын хәтерләтә. «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе менән «Тормош төбөндә» пьесаһы һәм «Өсәү» повесы араһында ла тематика яғыннан ҡайһы бер бәйләнеш бар.

Көслө һәм актив шәхестең тарихи ваҡиғалар йоғонтоһонда формалашыуы «Ҡан» романында тулыраҡ күҙәтелә. Был роман ҡатмарлы тарихи осорҙо – Тәүге донъя һуғышының башынан алып Февраль буржуаз-демократик революцияһына тиклемге йылдарҙы эсенә ала. Әҫәрҙең төп конфликты – иҫке донъя менән яңы тыуып килгән донъя араһындағы бәрелеш. Иҫке донъя – татар-башҡорт буржуалары һәм байҙары, армия офицерҙары һәм муллалары образдары, ә яңы донъя эшселәр, крәҫтиәндәр һәм һалдаттар образдары аша сағылдырыла.

Билдәле булыуынса, романдың башында беҙҙең алда – хеҙмәткә яңы алынған һалдаттар. Уларҙың һуғыш тураһында уйҙары үтә бер ҡатлы: «… бер яҡта беҙҙең ғәскәр тора, икенсе яҡта дошман ғәскәре тора. Команда буйынса атыша башлайҙар. Шунда үләләр, яраланалар. Ҡайһы яҡ күп ҡырылһа, шул яҡ еңелә…».

Һуғыштың әлифбаһын төшөнә башлаусы һалдаттарҙың тойғоларын яҙыусы дөрөҫ һәм аныҡ һүрәтләй. Большевиктар йоғонтоһонда һәм илдә революцион шарттар өлгөрөү һөҙөмтәһендә улар һуғыш ҡуйған мәсьәләләр өҫтөндә уйлана башлайҙар. Пассивлыҡ, яҙмышҡа буйһоноу тойғоһо ҡәнәғәтһеҙлек, протест менән алмашына. Быны һалдаттарҙың эшселәр менән туғанлашыу эпизодтары, уларҙың офицерҙарға ҡаршы сығышы һәм политик митингыларҙа ҡатнашыуы иҫбатлай. Кульминацион моментты һуғышҡа һәм хөкүмәткә ҡаршы демонстрация тәшкил итә. Һөҙөмтәлә тәжрибәһеҙ һалдаттар, кисәге эшсе һәм крәҫтиәндәр самодержавиеға ҡаршы актив көрәшеүселәргә әүереләләр.

Геройҙар аңындағы үҙгәрештәрҙең мөһимлеге әҫәрҙе рамкаға алыусы күренештәр ярҙамында сағыуыраҡ күрһәтелә. Романдың башында һуғыштың маҡсаты һәм характеры хаҡында бер нәмә

белмәүсе хәрби хеҙмәткә яңы ғына алынған кешеләр фронтҡа бара. Китаптың аҙағында фронтҡа күпселек һалдаттары революция яҡлы марш батальоны оҙатыла.

Шәхестең һәр яҡлап үҫеү һәм яңырыу процесы Булат образында айырыуса ышандырырлыҡ итеп күрһәтелә. Тәүҙә ул да, хеҙмәткә яңы алынған башҡа һалдаттар кеүек, яҙмышҡа буйһоноусы, бер ҡатлы һәм эскерһеҙ егет. Тәбиғәте менән аралашыусан Булат һалдат тормошона тиҙ күнегә, «беҙ», «беҙҙеке», «беҙгә» тигән һүҙҙәрҙе йышыраҡ әйтә башлай.

Тәүге походта уҡ ул Сергей Новиков менән таныша. Һуғыш тураһында асыулы һүҙҙәрҙе Булат иң беренсе унан ишетә. Һуңыраҡ рус һалдаты башҡорт егетен байҙарға ышанмаҫҡа, нәфрәт менән ҡарарға, уларҙы күрә алмаҫҡа өйрәтә. Сюжет үҫеше барышында Булат ғәйрәтле, тәүәккәл кешегә әйләнә, пассивлыҡтан актив хәрәкәткә, аңлы протесҡа күсә. Романдың икенсе китабында ул революцион идеяларҙы ҡыйыу пропагандалаусы булып китә һәм актив көрәш юлына баҫа.

Шулай итеп, Д. Юлтыйҙың ниндәй генә әҫәрен алһаҡ та, уның ыңғай геройҙары – томаналыҡтан – аңлауға, инстинктан – аҡылға, пассивлыҡтан аңлы йәмғиәт маҡсаттары хаҡына хәрәкәткә күтәрелгән кешеләр. Шуның өсөн улар ваҡытҡа буйһонмай һәм ошоға тиклем беҙҙең әҙәбиәтебеҙ ҡаҙанышы булып һанала. Көслө һәм ныҡ шәхестең дәртле йырсыһы Д. Юлтый геройҙары менән бергә үҙе лә халыҡ хәтерендә йәшәй.

1983

ШАҒИР ҺӘМ ҒАЛИМ

Республиканың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре, популяр шағир һәм актив әҙәбиәт тәнҡитсеһе, ялҡынлы публицист, ғалим һәм журналист Ғ. Рамазановҡа 60 йәш тулды.

Ғ. Рамазановты башҡорт әҙәбиәт ғилеменең уң флангыһында барыусы тип тә иҫәпләргә мөмкин. Билдәле булыуынса, һуғышҡа тиклем башҡорт әҙәбиәт ғилеме формалашыу һәм үҫеү осорон кисерә ине. 50-се йылдар башында уға етди һәм төплө теоретик әҙерлек алған бер төркөм йәш ғалимдар килде. Улар араһында Ғ. Рамазанов та бар ине. Шул ваҡыттан алып бына сирек быуаттан ашыу инде ул ошо фәндең алғы сафында атлай.

Был дәүер эсендә ул башҡорт художестволы ижадының төрлө аспекттары буйынса күп әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре яҙҙы: «Башҡорт совет поэзияһында тыныслыҡ өсөн көрәш темаһы», «Павло Тычина һәм Сәйфи Ҡудаш»», «Поэзияла форма камиллығы һәм төрлөләгө өсөн», «Башҡорт сатираһы тураһында мәҡәләләр», «Маяковский һәм башҡорт поэзияһы», «Типиклыҡ проблемалары һәм башҡорт әҙәбиәте мәсьәләләре», «Поэзиябыҙ тураһында уйланыуҙар», «Һуғышсан әҙәби тәнҡит өсөн», «Тормошҡа, хәҙерге заманға яҡыныраҡ», «Башҡорт поэмаларында типиклаштырыуҙың ҡайһы бер мәсьәләләре тураһында», «Башҡорт әҙәбиәтендә ыңғай герой тураһында»…

Былар тәнҡитсе һәм публицист яҙғандарҙың бер өлөшө генә әле. Ә әҙәбиәт белгесенең күпме китабы бар? «Башҡорт поэзияһында совет кешеһе образы» (1956) тигән әҙәби-тәнҡит күҙәтеү, «Мәжит Ғафури ижады» (1965) тигән монография; биш йылдан һуң тағы ла М. Ғафури тураһында рус телендә монография; башҡорт совет әҙәбиәтенең хәҙерге этаптағы үҫеш тенденциялары хаҡында күҙәтеүҙәрҙән һәм төрлө быуын башҡорт яҙыусыларының әҙәби портреттарынан торған «Әҙәбиәт офоҡтары. Тикшеренеүҙәр һәм әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре» (1978) тигән китап; 1980 йылда «Современник» нәшриәтендә баҫылған «Многоцветье» («Төҫтәр балҡышы») һәм «Мажит Ғафури. Очерк жизни и творчества» («Советская Россия»

нәшриәте, 1980) тигән хеҙмәттәре. Ошо һуңғы ике китабы өсөн Ғ. Рамазанов республиканың Салауат Юлаев исемендәге премияһына лайыҡ булды.

Шулай ҙа М. Ғафури тураһындағы башҡорт телендә сыҡҡан монографияһын ғалимдың фән өлкәһендәге иң мөһим, хатта фундаменталь хеҙмәте булды һәм булып ҡала. М. Ғафури хаҡында мәҡәләләр, китаптар, диссертациялар күп яҙылған. Ләкин ошоға тиклем шағирҙың тормошон һәм ижадын бер бөтөн, тотош бер процесс итеп сағылдырыусы монографик тикшеренеү юҡ ине әле. Ошо бушлыҡты Ғ. Рамазанов тулыландырҙы ла инде.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Ғ. Рамазанов башҡаларҙы ҡабатламай. М. Ғафури тураһында уның үҙ фекере, ҡарашы бар, шул уҡ ваҡытта шағир хаҡында уға тиклем әйтелгәндәрҙе ихтирам итә, улар менән бик һаҡ эш итә. Яҙыусының ҙур һәм ҡатмарлы ижад мираҫын ул XX быуаттың тәүге өстән бер өлөшөндә Башҡортостан менән Татарстанда М. Ғафури һәм уның замандаштары Ғ. Туҡай, Ф. Әмирхан, Ғ. Камал, Ш. Камал, Ш. Бабич, Д. Юлтый, А. Таһиров торған әҙәби хәрәкәт менән тығыҙ бәйләнештә ҡарай. М. Ғафуриҙың әҙип булып формалашыуына рус әҙәбиәте, конкрет алғанда, А. Пушкин, М. Горький, И. Крылов, Д. Бедный кеүек титандарҙың ижады һәм Көнсығыш халыҡтарының классик поэзияһы һиҙелерлек йоғонто яһаны тип шулай уҡ бик дөрөҫ әйтелә.

Монографияның яҡшы яғы тағы шунда: яҙыусының ижад эволюцияһы унда XX быуат башында Урта–Волга буйында һәм Көньяҡ Уралда ижтимағи-политик һәм әҙәби-художестволы фекерҙең барлыҡҡа килеү һәм үҫеү барышы менән тығыҙ берлектә өйрәнелә. Ғалим М. Ғафури шәхесен ул йәшәгән заманда ситтә тороусы итеп ҡарамай, ә берҙәм тарихи-әҙәби процестың айырылғыһыҙ бер өлөшө тип иҫәпләй. Ул М. Ғафуриҙың мәғрифәтселектән тәнҡитле реализмға, ә унан социалистик реализмға нисек яйлап, ләкин ышаныслы килеүен иғтибар менән, ентекләп күҙәтә. Беҙҙең күҙ алдыбыҙға Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың утыҙ йылдан ашыуға һуҙылған ижад юлы бөтә күркәмлегендә килеп баҫа.

Шуныһы мөһим: М. Ғафури тураһындағы монография ғилми хеҙмәттәр өсөн хас ҡәтғи академик телдә түгел, ә образлы тел менән яҙылған. Шуның өсөн ул еңел уҡыла.

«Әҙәбиәт офоҡтары»нда ғалимдың иғтибар үҙәгендә хәҙерге башҡорт поэзияһы, драматургияһы һәм шулай уҡ башҡорт

әҙәбиәтендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһын яҡтыртыуға бәйле мәсьәләләр тора, С. Агиш, Б. Бикбай, Б. Ишемғол, З. Биишева, К. Мәргән, Ә. Харисов, Т. Арслан, Х. Ғиләжев, Ш. Бикҡол, Х. Кәрим, Ә. Атнабаев, А. Игебаевтарҙың ижади портреттары һүрәтләнә, «Төҫтәр балҡышы»нда иһә автор бер әҙәбиәт сигенән алыҫ китә һәм өс туғандаш әҙәбиәттең (башҡорт, татар, сыуаш әҙәбиәттәренең) үткәне һәм хәҙергеһе тураһында мауығып һөйләй. Был китапта ғалим үҙ күҙәтеүҙәренең ваҡыт һәм географик рамкаларын байтаҡ киңәйтә. Бында С. Юлаевтың һәм поэзияла уның данлы традицияларын дауам иттереүсе М. Кәримдең батыр тауыштары ишетелә; М. Ғафури һәм уның замандашы Ғ. Туҡай менән яңынан осрашабыҙ; беҙҙең күҙ алдыбыҙҙан К. Иванов һәм Я. Ухсай, Д. Юлтый һәм Ш. Бабич, Һ. Таҡташ һәм Х. Туфан, М. Йәлил һәм Ф. Кәрим, Ғ. Сәләм һәм Р. Ниғмәти, С. Ҡудаш һәм С. Хәким, Ғ. Хузеев һәм Ш. Мөдәррис, Ш. Ғәлиев һәм И. Юзеев, М. Сеспель һәм Н. Полороссов, И. Туҡташ һәм В. Митта, А. Алга һәм П. Хузангай… бер-бер артлы үтәләр. Бына ысын мәғәнәһендә тауыштар ярашыуы! Ғ. Рамазанов был шағирҙарҙың һәр береһе тураһында ентекләп һөйләүҙе маҡсат итеп ҡуймай. Уларҙың ҡайһы берҙәре авторҙың иғтибарын нығыраҡ йәлеп итә, икенселәре хаҡында ашыҡ-бошоҡ ҡына һөйләй. Ләкин дөйөм алғанда өс халыҡ поэзияһының сығанағы һәм хәҙерге торошо тураһында тулы һәм асыҡ картина барлыҡҡа килә. «Хәҙерге быуын сыуаш шағирҙары, – ти Ғ. Рамазанов “Төҫтәр балҡышы” китабында, – фольклор традициялары һәм үҙҙәренең элгәрҙәге ижады менән һаҡ эш итеү яғынан айырылып торалар. Миңә улар сыуаш халҡының “Кем халыҡ менән дуҫ, шул бай” тигән хикмәтле һүҙен яҡшы хәтерләйҙәр һәм тормошҡа ашыралар кеүек».

Ауыҙ-тел ижады традициялары һәм оло быуын яҙыусыларының ижад мираҫы менән һаҡ эш итергә кәрәклеге тураһындағы фекер «Төҫтәр балҡышы» аша ҡыҙыл еп булып үтә. Был китап өс туғандаш халыҡтың өс бөйөк шағирына: М. Ғафури, Ғ. Туҡай һәм К. Иванов-тарға бағышланған «Тере сығанаҡ» тигән мәҡәлә менән асыла.

Китаптың артабанғы «Күңел йомартлығы поэзияһы» һәм «Ваҡыттар бәйләнеше» тигән бүлектәрендә лә Ғ. Рамазанов беҙҙе быуаттар төпкөлөнә алып китә. Уларҙың беренсеһендә автор башҡорт поэзияһының «Урал батыр» тигән эпик ҡомартҡыһынан алып беҙҙең көндәргә тиклемге тарихын күҙәтһә, икенсеһендә татар поэзияһының атаҡлы «Йософ һәм Зөләйха» поэмаһынан башлап хәҙерге быуын

татар шағирҙарына тиклемге тарихы ҡарала. «Сыуаш сағаһы» тигән бүлектә Ғ. Рамазанов сыуаш поэзияһы сығанағын да халыҡ араһынан эҙләй.

Ғалимдың үткән замандың культура һәм әҙәби традицияларына хөрмәт менән ҡарауы һәм улар менән ипләп эш итеүе хаҡында һөйләүсе башҡа фактҙар ҙа бар. Мәҫәлән, 1961 йылда ул «Мәжит Ғафури тураһында замандаштары» тигән бик файҙалы китап баҫтырып сығарҙы. Әйтергә кәрәк, башҡорт әҙәбиәт ғилемендә был беренсе тәжрибә булды. 1978 йылда уның тағы ла «Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр» тигән ошо жанрҙа китабы сыҡты. Милли культура тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырған күренекле әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре хаҡында материал туплау, уны системаға һалыу һәм иҫтәлектәр китабы итеп баҫып сығарыу – үтә яҡшы башланғыс, ул һис шикһеҙ маҡтауға лайыҡлы һәм бөтә яҡлап яҡлау табырға тейеш. М. Ғафури тураһындағы мәҡәләләре, монографик тикшеренеүе, популяр китаптары ғалимдың үткән замандың прогрессив культура традицияларын менән ихлас, ленинса һаҡ эш итеүе тураһында һөйләй.

Ғ. Рамазановтың халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың ижад мираҫын өйрәнеү һәм дөйөмләштереү менән бәйле фәнни тикшеренеүҙәренең үҙ тарихы бар. Йәш ғалимдың башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы тураһындағы тәүге мөһим сығышы, моғайын, М. Ғафуриҙың 1952 йылда Мәскәүҙә баҫылған повестарына инеш һүҙҙәр. Артабан халыҡ шағирының төрлө баҫмаларына инеш һүҙҙәре, газета һәм журналдарҙа проблемалы һәм юбилей уңайы менән мәҡәләләре баҫыла. Әйткәндәй, Ғ. Рамазанов М. Ғафуриҙың тыуыуына 100 йыл тулыу көнөн әҙерләү һәм үткәреүҙә актив ҡатнашты. Ул – башҡорт әҙәбиәте классигының юбилей уңайы менән сығарылған дүрт томлыҡ әҫәрҙәр йыйынтығының баш редакторы һәм 1-се, 3-сө томдарының инеш һүҙҙәре авторы. Юбилей тантанаһы көндәрендә М. Ғафуриҙың тормошо һәм ижады тураһындағы уның юғарыла телгә алынған китабы рус телендә баҫылып сыҡты.

Шағир һәм ғалим Ғ. Рамазанов үҙенең юбилейын ижадының сәскә атҡан осоронда ҡаршылай. Бынан утыҙ йыл элек нисек булһа, ул әле лә шулай, яңы бейеклектәр яулап һәм әҙәбиәтебеҙҙе төрлө яҡлап байытып, поэзияға ла, фәнгә лә бер тигеҙ тоғро хеҙмәт итә. Был өлкәлә уға киләсәктә лә уңыштар юлдаш булһын.

1983

ЯҘЫУСЫҒА ТЕРЕ ҺӘЙКӘЛ

Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош юлын өйрәнеү һәм ижад үҙенсәлектәрен тикшереү буйынса республикала күп эштәр башҡарыла. Был йәһәттән М. Минһажетдиновтың диссертация хеҙмәтен һәм шуның нигеҙендә яҙылған китабын, башҡорт һәм рус тәнҡитселәренең айырым мәҡәләләрен күрһәтеп үтергә мөмкин.

Әле бына күптән түгел тағы бер ҡыуаныслы хәл булды – яҙыусыға арналған яңы китап донъя күрҙе: «Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр». (Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. 160 бит). Уны филология фәндәре кандидаты М. Хәмиҙуллина төҙөгән һәм баҫырға әҙерләгән. Китап филология фәндәре кандидаты С. Сафуанов редакцияһында сыҡҡан һәм шул уҡ ғалимдың «Ил ҡыҙының яҡты һыны» тигән баш һүҙе менән асып ебәрелгән.

Йыйынтыҡҡа утыҙға яҡын автор йәлеп ителгән. Улар араһында Һ. Дәүләтшинаның ҡәрҙәштәре лә, замандаштары ла, ҡәләмдәштәре лә бар. Китапта төп урынды Ғ. Әмириҙең Һәҙиә Дәүләтшина менән төрлө йылдарҙа, төрлө шарттарҙа осрашыуҙар һәм уларҙан алған тәьҫораттар нигеҙендә яҙылған «Башҡорт гүзәле» исемле иҫтәлекмәҡәләһе алып тора тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Был мәҡәлә үҙенең күләме яғынан ғына түгел, эстәлеге менән дә, унда килтерелгән фактлар менән дә ошо баһаға хаҡлылыр. «Башҡорт гүзәле»ндә автор Һ. Дәүләтшинаның биографияһын һөйләү менән генә сикләнмәй, әҙибәнең бөтә ижад юлын күҙ уңынан үткәрә, «Ырғыҙ» романының яҙылыу, уның өҫтөндә ҡат-ҡат эшләү, уны баҫтырып сығарыу тарихына ҡағылған бик күп ҡыҙыҡлы һәм фәһемле фактлар килтерә. Был мәҡәләне уҡып сыҡҡас, «Ырғыҙ» романының талантлы яҙыусының гүзәл ижад емеше генә түгел, уның иҫ киткес һәм һоҡланғыс батырлығы ла булыуына тағы бер тапҡыр инанаһың. Автор шулай уҡ Һ. Дәүләтшинаның сиктән тыш баҫалҡы, ләкин ҙур, бай һәм ҡайнар йөрәкле гүзәл кеше, совет патриоткаһы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала, ниндәй генә ауырлыҡтар кисереүенә лә ҡарамаҫтан, уның ифрат көслө рухлы шәхес, идеалдарына һәр ваҡыт тоғро булып ҡалыуына һәм дөрөҫлөктөң тантана итәсәгенә ышанысын бер ваҡытта ла юғалтмауына баҫым яһай. Һ. Дәүләтшинаны яҡындан тороп

белгәнлектән, уның менән һуғышҡа тиклем дә, һуғыштан һуңғы осорҙа ла күрешкеләп торғанлыҡтан, Ғ. Әмири ҡәләмдәшенең онотолмаҫ образын тыуҙырыуға ирешкән һәм уны, тере кеше һымаҡ итеп, уҡыусы күҙе алдына баҫтыра алған. Автор «Ырғыҙ» романына ла ентекле туҡтала, уның донъяға килеү фактын һирәк осрай торған ҙур подвигҡа тиңләй. Ғөмүмән, Ғ. Әмириҙең «Башҡорт гүзәле» тигән мәҡәләһе – Һәҙиә Дәүләтшина тураһындағы ҡоро бер хәтирә генә түгел, ә ысын мәғәнәһендә ижад портреты ул.

Йыйынтыҡта Һ. Дәүләтшинаны күреп белеү, уның менән аралашыуҙар, осрашыуҙар нигеҙендә яҙылған башҡа иҫтәлектәр ҙә бар. Был иҫтәлектәрҙең байтағы ошо китап өсөн махсус яҙылған, уларҙың һәр ҡайһыһы яҙыусының шәхесен күпмелер кимәлдә тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә.

Бына, әйтәйек, Һ. Дәүләтшинаның ҡәрҙәше, партия работнигы, журналист С. Байтурин үҙенең «Һәҙиә апай тураһында ҡайһы бер хәтирәләрем» тигән яҙмаһында беҙҙе 20-се йылдар төпкөлөнә алып китә лә буласаҡ яҙыусының Һамар губернаһындағы Диңгеҙбай ауылында мәктәптә эшләү дәүере менән таныштыра. Аҡ банда отрядтары баш-баштаҡлыҡ итеп, халыҡты талап, Совет яҡлы кешеләрҙе яфалап үлтереп йөрөгән ошо ҡатмарлы осорҙа йәп-йәш ҡыҙҙың, ауыл йәштәренә аң-белем биреү менән бер рәттән, ҡурҡыу белмәй культура-ағартыу эштәрен дә киң йәйелдереп ебәреүе тураһында хайран ҡалып һөйләй был мәҡәләнең авторы. Яҙыусының кешелек сифаттарын ул бына нисек һүрәтләгән: «Һәҙиә апай асыҡ йөҙлө, йылмайып ҡына һөйләшер, яғымлылығы һәм һөйкөмлөлөгө менән һәр кемде арбай торған кеше ине. Ул берәүгә лә асыу тота белмәне, үпкәләү йәки хәтере ҡалыу кеүек нәмәләр ҙә ят ине уға. Һәҙиә апай үҙен ысын мәғәнәһендәге ил ҡыҙы итеп хис итте, башҡаларҙан айырылыу, ситләшеү, үҙ ҡабығына бикләнеү кеүек нәмәләрҙе белмәне ул».

Әҙибәнең икенсе бер ҡәрҙәше – С. Дәүләтшин «Оло рухлы кеше» тигән иҫтәлегендә, Һ. Дәүләтшинаның тормош юлын тағы ла асығыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырырҙай деталдәр менән бер рәттән яҙыусының ижад эше өлкәһендә яһаған тәүге аҙымдарына ла иғтибар итә. Был иҫтәлектә шулай уҡ Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Ниғмәтиҙең йәшлек йылдарына бәйле ҡыҙыҡлы ғына юлдар табырға мөмкин. С. Дәүләтшин дә «Ырғыҙ» авторының көслө рухлы шәхес булыуын раҫлай. «Ғүмеренең иң ауыр йылдарында ла, – тип яҙа ул, – Һәҙиә Дәүләтшина үҙен совет халҡы менән бергә тойҙо, рух

төшөнкөлөгөнә бирелмәне, киләсәккә яҡты өмөт менән ҡараны. Оптимизмды ул кемдәндер үтескә алманы, бәлки бөтә ғүмере буйы оптимист булды, йөрәге менән һәр ваҡыт ленинсы идеяларға тоғро булып ҡалды».

Һ. Дәүләтшинаның яҡташы, халыҡ мәғарифы ветераны, философия фәндәре кандидаты, оҙаҡ йылдар республиканың мәғариф министры булып эшләгән Ф. Мостафинаның «Һәҙиә апай» тип бик ябай ғына исемләнгән хәтирәләре лә ошондайыраҡ планда яҙылған. Бында ла, үрҙә телгә алынған иҫтәлектәге кеүек, Һ. Дәүләтшинаның ғаилә тормошона бәйле ҡайһы бер факттар килтерелгән. Иң мөһиме, Фатима Мостафина хәтирәләрендә Һ. Дәүләтшина күпте белгән, юғары кимәлдәге эске культуралы, ябайҙарҙан да ябай кеше булып күҙ алдына баҫа. Автор шулай уҡ Дәүләтшиндарҙың шәхси китапханаларының иҫ киткес бай булыуын таңға ҡалып иҫкә ала.

Иҫтәлектәр араһында күренекле башҡорт шағиры С. Кулибайҙың «Замандаштарым тураһында һүҙ» тигән яҙмаһы билдәле урын алып тора. Был яҙманың үҙенсәлеге шунда: унда һүҙ бер Һ. Дәүләтшина тураһында ғына бармай, бәлки 30-сы йылдар башында башҡорт әҙәби процесына бәйле ҡайһы бер күренештәр ҙә сағылып китә.

Һ. Дәүләтшинаны күреп белгән һәм уның яҡты образын үҙҙәренең күңелендә һаҡлаған күренекле башҡорт әҙибәһе Зәйнәб Биишеваның «Онотолмаҫ көндәр», башҡорт яҙыусыһы Д. Юлтыйҙың ҡатыны Фатима апай Юлтыеваның «Яҙыусы әхирәтем хаҡында һүҙем», Һ. Дәүләтшинаның әхирәте, Башҡортостанда пионер, комсомол, ҡатын-ҡыҙ хәрәкәттәрен ойоштороусыларҙың береһе Ғ. Мырҙагилдина-Баязитованың «Онотолмаҫ хәтирәләр», республика газеталары редакцияларында эшләгән сағында Һ. Дәүләтшина менән яҡындан аралашҡан Ш. Ишкининаның «Рәхмәт һүҙем», Донда ғы Ростов дәүләт университеты профессоры Ғ. Мөхәмәтовтың «Онотолмаҫ Һәҙиә апай», Р. Сафина-Мөхәмәтова менән Ә. Мөхәмәтовтарҙың «Әсәм дә, әхирәтем дә ул минең» һәм «Һәҙиә апай тураһында хәтирәм», журналист, РСФСР-ҙың атҡаҙанған культура работнигы Ғ. Ишбулатовтың «Баҫалҡы тәбиғәтле әҙибә», Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Йәмилә Әбитаеваның «Хәтеремдә ҡалған яҡты эҙҙәр», әҙәбиәт белгесе С. Кирьяновтың «Һәҙиә хаҡында уйҙарым» тигән иҫтәлектәре «Ырғыҙ» романы авторының ижади портретын тағы ла байыҡтыра, уның биографияһына яңынан-яңы штрихтар өҫтәй. Был иҫтәлектәрҙе бер епкә теҙеүсе дөйөм һыҙат –

Һ. Дәүләтшинаның шәхси тормошо менән ижад юлы араһында булған ниндәйҙер уртаҡлыҡты билгеләргә, уның кешелек сифаттарын тулыраҡ асырға тырышыу.

Йыйынтыҡҡа тупланған икенсе бер төркөм материалдар – яҙыусының ижады тураһында тәрән уйланыуҙар һәм эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһе булараҡ барлыҡҡа килгән мәҡәләләр. Уларҙың авторҙары – әҙәбиәт белгестәре, күренекле яҙыусылар, артистар һәм художниктар. Бындай характерҙа яҙылған материалдар араһында М. Йәлилдең «Һәҙиә Дәүләтшинаның әҫәрҙәре тураһында», Б. Бикбайҙың «Тере тауыш», М. Минһажетдиновтың «Ижад батырлығы», Ә. Хәкимовтың «Романда ваҡиға һәм характер үҫеше тураһында», Ә. Вахитовтың «Ҡаһарманлыҡ» тигән мәҡәләләрен күрһәтеп үтергә мөмкин. Әйтергә кәрәк, был мәҡәләләрҙең төрлөһө төрлө осорҙа яҙылған, төрлө баҫмаларҙа донъя күргән.

Йыйынтыҡта тағы бер төркөм материалдар бар – улар Һ. Дәүләтшина һәм уның әҫәрҙәре тураһында беҙҙең күп милләтле совет әҙәбиәтенең күренекле вәкилдәре әйткән ҡанатлы һүҙҙәр. Бындай һүҙҙәр китапта маҡтаулы урынды алып тора һәм уның ҡиммәтен бермә-бер арттыра. Ул һүҙҙәрҙе бына кемдәр әйткән: атаҡлы ҡаҙаҡ яҙыусыһы, Ҡаҙаҡ ССР-ның Фәндәр академияһы академигы Сабит Моҡанов; шәреҡ халыҡтары әҙәбиәте һәм фольклор белгесе Иосиф Брагинский һәм татар совет әҙәбиәте белгесе, Ҡазан университеты профессоры Хатип Ғосман.

Йыйынтыҡта байтаҡ ҡына архив материалдарын да осратырға мөмкин. Уларҙың ҡайһы берҙәре тәү башлап донъя күрә. Был факт үҙе генә лә китаптың абруйын һиҙелерлек күтәрә. Уның тағы ла бер ыңғай яғы бар: йыйынтыҡты төҙөүсе һәм баҫырға әҙерләүсе китапҡа индерелгән һәр мәҡәләгә тулы һәм төрлө аңлатмалар бирә барған. Бына ошо фактҡарҙың бөтәһен дә бергә туплап фекер йөрөтһәң, башҡорт халҡының үлемһеҙ ҡыҙы Һ. Дәүләтшина тураһындағы яңы китап киң ҡатлам уҡыусылар араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыр тигән өмөт бағларға мөмкинлек бирә.

1984

ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ РОМАНЫНДА АУЫЛ ТОРМОШО

Ауыл тормошон һүрәтләүгә бағышланған әҫәрҙәр хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә күренекле урындарҙың береһен алып тора. Колхоз тормошонан алынған әҙәби материалдың тәрән социаль йөкмәткеле булыуы, мөһим ижтимағи идеяларҙың һәр саҡ баҙыҡлығы менән башҡорт «ауыл прозаһы» уҡыусыларҙа танылыу яуланы.

Башҡорт әҙәбиәтендә «ауыл прозаһы»ның үҙенең традицияларының бар. Улар 30-сы йылдар башына барып тоташа. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Б. Бикбайҙың «Аҡселән ташҡанда» (1956), Д. Исламовтың «Йомарт ер» (1959), Х. Ғиләжевтың «Погонһыҙ һалдаттар» (1965) кеүек романдары менән байығып, ул алға мөһим аҙым яһаны. Хәҙерге романдарҙа ла колхоз ауылы тормошон һүрәтләүгә күп иғтибар бирелә. Н. Мусиндың «Өҙәрем юл кешеләре» (1969), Я. Вәлиевтең «Бөркөттәр оя ташламай» (1970), Т. Сәғитовтың «Һабантуй» (1977) романдары уҡыусы хәтерендә ныҡлы урын алды. Беҙҙең реаль совет ысынбарлығы тураһында тәрән уйланыу, хәҙрге ауылдың актуаль проблемаларын көн тәртибенә күтәреү һәм ҡыйыу сисеү – бөгөнгө башҡорт «ауыл» романының төп үҙенсәлектәре тиергә мөмкин.

Хәҙерге башҡорт романында колхоз ауылы туҡтауһыҙ үҫешендә, ҡатмарлы эске үҙгәрештәре менән төрлө яҡлап һүрәтләнә. Әйткәндәй, яҙыусыларға ауыл яҡын: күбеһе унда тыуып үҫкән. Улар ер менән ныҡ бәйләләр, шуға ла ер ҡаҙере тураһында уйланыу яҙыусылар ижадының үҙәгендә тора. Күп кенә романдарҙа ер тураһындағы фекер кешенең тәбиғәт алдында яуаплылығы менән тығыҙ ҡушыла. Беҙҙең яҙыусыларыбыҙ кешеләрҙә ергә, уның байлыҡтарына һаҡсыллыҡ, гуманлы мөнәсәбәт тойғоһо тәрбиәләргә тырышалар.

Я. Вәлиевтең «Бөркөттәр оя ташламай» әҫәрендә кешенең ер менән ныҡлы бәйләнеше өҫтөнлөк ала. Автор кешене тәбиғәттең айырылмаҫ бер өлөшө тип ҡарай. Был йәһәттән Заминдар ҡарт образы бик тә характерлы, уның портретындағы һыҙаттар осраҡлы түгел.

Исеме лә уның – Заминдар – «ер хужаһы» тигәнде аңлата. Оло урманда бер үҙе йәшәһә лә, ҡарт үҙен яңғыҙ тип иҫәпләмәй. Бында һәр ағас, һәр ҡош, һәр таш – уның дуҫтары.

Я. Вәлиевтың әҫәрендә тәбиғәт – йәнле образ. Юҡҡа ғынамы ни уның романында йылғаның кешенеке кеүек яҙмышы бар, тауҙар, кешеләрҙәй, үҙенең башланғысын, тыуған илен онота алмайҙар. Бер яҡтан, тәбиғәтте йәнләндереү алымдары ҡулланып, икенсенән, кешене тәбиғәттең айырылмаҫ бер өлөшө тип иҫәпләп, автор шаҡтай тос философик дөйөмләштереүҙәргә күтәрелә, кешенең ергә ереккәнлеген күрһәтә. Тыуған ергә мөхәббәт тойғоһо үҙ сиратында уға яуаплылыҡ тойғоһо менән үрелеп үҫә.

Ер өсөн яуаплылыҡ пафосын раҫлау Заминдар образында ғына күрһәтелмәй – был маҡсатҡа бөтә образдар ҡоролошо буйһондоролған. Мәҫәлән, үҙәк геройҙарҙың береһе – Кәбир Юламанов. Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа Юламановтар ғаиләһе ауылдан сығып китә. Ләкин Кәбир тыуған яҡтарын онота алмай. Ул тиктәҫкә генә игенселек һөнәрен һайламай – ауыл хужалығы институтының агрономия факультетына уҡырға инә. Уны тамамлағас, институттың тәжрибә хужалығында эш тәҡдим итһәләр ҙә, унда ҡалмай, ауылға, үҙенең Ҡариҙеленә китә.

Күп һүҙ оҫталары ергә булған һөйөү хисен кешене нәфисләндереүсе, тәьҫирле тойғо тип күрһәтәләр. Д. Исламов та («Йомарт ер») кешене тәбиғәттең бер өлөшө тип ҡарай һәм унан айырылыу кеше өсөн берҙәй һәләкәтле булһа, уға яҡынлыҡ һәм бәйләнгәнлек кешегә тәьҫирле дауа тип һанай. Игенселек хеҙмәте юлдан яҙлыҡҡан Бибекәйгә аяҡҡа баҫырға, йән тыныслығы табырға ярҙам итһә, ер көсөнөң һауыҡтырыусы тәьҫире аҫтында Билаловтың ҡатыны Зөһрә лә танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Әҫәрҙең тәүге биттәрендә ул беҙгә елбәҙәк холоҡло кеше булып күренә. Зөһрәлә хеҙмәткә мөхәббәттең остоғо ла тәрбиәләнмәгән. Шуға ла ул бер урындан икенсеһенә ташлана. Романдың аҙағында, хатынан күренеүенсә, «йәмғиәткә файҙалы кеше» булыу теләгенән, үткән буш тормошо менән хушлашып, Зөһрә Ҡаҙағстан далаларына эшкә олаға. Нескә психолог Д. Исламов ер беҙҙе туйҙырып ҡына ҡалмай, кешене әхлаҡи яҡтан һауыҡтыра ла тигән берҙән-бер дөрөҫ фекергә килтерә.

Хәҙерге башҡорт романында беҙҙең замандың мөһим проблемаһы – йәштәрҙең күпләп ҡалаға китеүе ер-әсәнең киләсәге өсөн яуаплылыҡ темаһы менән бермә-бер бәйле. Был тема өҫтөндә эшләгәндә,

башҡорт яҙыусылары бөтәһенән элек социаль-экономик мотивтарҙы һыҙыҡ өҫтөнә алалар. Ә күп кенә әҫәрҙәрҙә был проблеманы материаль мотивтар менән дә, әхлаҡ менән дә бәйләп ҡарарға була. Я. Вәлиевтың «Бөркөттәр оя ташламай» романының геройы Кәбир Юламанов ҡалала эш хаҡы ла күберәк, тормош та ҡыҙыҡлыраҡ тип һанай. Ул һис һүҙһеҙ хаҡлы. Әммә автор бында төп нәмәне тотоп ала белгән. Заминдар ҡарт уйынса, йәштәр ҡалаға аҡса, күңелле тормош өсөн генә китмәй, унда һәр ерҙә эшсе ҡулдар кәрәк. Совет йәмғиәтендә тәрбиәләнеп үҫкән йәштәр Тыуған илдең теләһә ниндәй мөйөшөнә барырға ла ҡурҡмай.

Совет әҙәбиәтсеһе М. Минокиндың, ваҡыт етер, йәштәр ҡаланан ауылға күсә башлаясаҡ тип раҫлауы һис тә шик тыуҙырмай. Уның уйынса, быға тормош кимәленең күтәрелеүе, ауылды культура байлыҡтарына ылыҡтырыу, башҡа һүҙ менән әйткәндә, ҡала менән ауыл араһындағы айырманың бөтөрөлөүе сәбәп буласаҡ. Ҡалала уҡып белем алған һәм тәжрибә туплаған йәштәрҙең ауылға ҡайтыуын байтаҡ ҡына яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә сағылдырҙылар ҙа инде. Ҡалала тыуып үҫкән Кәбир Юламанов колхозға агроном булып эшкә килә («Бөркөттәр оя ташламай»); өлкә газетаһы корреспонденты Рәшит Билалов тыуған ауылына колхоз председателе булып ҡайта («Йомарт ер»); Айрат Байрасов, ҡалала ҡалып, аспирантурала уҡый алыр ине, ләкин партияның саҡырыуы буйынса ул утыҙ меңселәр иҫәбендә ауылға китә («Һабантуй»).

Күпселек яҙыусылар бөгөн йәштәрҙә тыуған ергә, игенсе һөнәренә мөхәббәт тәрбиәләү мәсьәләһе менән мәшғүлдәр. Улар иғтибарҙы мәктәпкә, колхоз-мәктәп, мәктәп-колхоз проблемаһына йүнәлтәләр. Был бик тәбиғи, сөнки мәктәп – илебеҙҙең киләсәге. Я. Вәлиевтең «Бөркөттәр оя ташламай» романының отошло яғы ла мәктәп һәм киләсәктең үҙ-ара бәйлелеген күрһәтеүҙә. Романдан күренеүенсә, Нурлы ауылы мәктәбе механизаторҙар, электриктар әҙерләй, агроном эшенә лә йүнәлеш бирә, малсылар эшенә лә өйрәтә. Өлкән класс егеттәре комбайн һәм трактор двигателдәрен өйрәнә, ә ҡыҙҙар фермала быҙау тәрбиәләй.

Колхоз етәкселәре – мәктәптең саҡырылмаған ҡунаҡтары. К. Юламанов («Бөркөттәр оя ташламай»), А. Байрасов («Һабантуй») кеүек алдынғы ҡарашлы етәкселәр, мәктәптең колхоз менән бергә тығыҙ бәйләнештә эш итеүе генә ауыл балаларында ергә, игенсе хеҙмәтенә һөйөү тәрбиәләргә, уларҙы игенсе хеҙмәтенә күндерергә мөмкин тип иҫәпләйҙәр.

Ауыл уҡытыусылары иңендә лә мөһим бурыстар ята. Ергә ҡарата һөйөү хисе йөрөтмәгән, балалар күңелендә тәбиғәткә, бөтә булған тереклек эйәләренә мөхәббәт, үҙең тәрбиәләп үҫтергән хеҙмәт емеше менән ғорурланыу тойғоһо уята алмаған уҡытыусының ауыл мәктәбе өсөн кәрәге бер тин.

Әйткәндәй, ауыл уҡытыусыһы проблемаһы хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә һүлпән яҡтыртыла. Әлегә хәтлем тулы ҡанлы ауыл уҡытыусыһының бер генә лә тос образы юҡ. Уҡытыусы Барый Бикташев (Я. Вәлиев, «Бөркөттәр оя ташламай») күберәк партия работнигы итеп күрһәтелгән. Ул «Алға» колхозының парторгы, ә уның уҡытыусылыҡ эшенә автор бөтөнләй иғтибар бирмәгән.

«Ауыл прозаһы» өҫтөндә эшләүсе әҙиптәрҙең ер тураһында, ер-әсә алдында кешенең яуаплылығы өсөн борсолоуҙар ҙы беҙгә аңлашыла һәм яҡын. Урбанизация процесы нисек кенә көсәймәһен, ер ер булып ҡала. Ул кешене туйындырҙы һәм кейендерҙе, туйындырасаҡ һәм кейендерәсәк.

Бығаса беҙ, әҙәби факттарға таянып, күбеһенсә кешенең ер-әсә алдында яуаплылығы проблемаһы тураһында һөйләнек. Яуаплылыҡ проблемаһы – күп яҡлы проблема. Йәмғиәт, кешеләр алдында яуаплылыҡ проблемаһы совет кешеләрендә һәр нәмәгә хужаларса мөнәсәбәт тойғоһо тәрбиәләү, социаль активлыҡ һәм үҙ бурысыңды аңлы башҡарыу проблемалары менән берҙәй бәйле. Был проблемалар өҫтөндә эшләгәндә, яҙыусылар иң тәүҙә ауыл тормошо менән етәкселек итеү проблемаһына ҡағылалар.

Х. Ғиләжевтың «Погонһыҙ һалдаттар» романында халыҡ менән етәкселек итеү, уның менән эшләй белеү мәсьәләһенә ҡағылышлы ике төрлө ҡарашҡа юлығабыҙ. «Оло юл» колхозы парторгы Әмир Ҡотлобаев, ошо колхоздың председателе Маһира Ҡаһарманова, өлкә комитет вәкиле Яубаҫаров дөрөҫлөктө халыҡтан эҙләйҙәр. Эштәрендә халыҡҡа таяналар. Улар халыҡ менән фекерҙәштәр. Бындай фекерҙәш һәм уйҙаш етәксене халыҡ ярата ла, хөрмәт тә итә. Ленинсы партиялылыҡ, эшлеклелек, намыҫлылыҡ, демократизм кеүек етәксегә хас сифаттар халыҡта тиҙ төшөнөлә, эш тә алға бара.

Ауыл тормошо, эше менән етәкселек итеү проблемаһы Д. Исламовтың «Йомарт ер» романында ла сағыла. Романдың геройҙары «Ҡуштирәк» колхозы председателе Рәшит Билалов менән парторг Әхмәҙуллин йәмәғәт эштәрен үҙ мәнфәғәттәренән юғары ҡуялар.

Улар халыҡ, ил алдында яуаплылыҡ тойоп эш итәләр. Был – уларҙың йәшәү асылы, йәшәү мәғәнәһе.

Парторг Әхмәҙуллин – халыҡ алдында яуаплы кеше. Үҙенең посынан мәжбүри китеүен ул ауыр кисерә. Кисереү урын өсөн түгел. (Ундай кешеләр һәр ерҙә кәрәк.) Ә «көрәш майҙанын» ҡалдырыу өсөн, сөнки батырҙар уны еңмәйенсә ҡалдырмайҙар.

«Йомарт ер»ҙәге Әхмәҙуллин менән Билаловтың антиподы – Хәлил Арыҫланов. Ул үҙ-үҙен артыҡ һөйөүсе, шуға ҡарамаҫтан, үҙ алдына эш итә алмаусы кеше. Ул үлсәп ҡарамай, планлаштырмай, тоҫмаллап, самалап эш итә. Геройҙың шөһрәткә ынтылыуы эште, кешеләрҙе белеү, колхоздың мөмкинлектәре менән бәйләнмәгән. Һәр төрлө шаулы кампания уның үҙен рекламалауға әйләнә. Директиваларҙың магик көсөнә өмөтләнә.

Ошондай уҡ күренеш менән, тик киңерәк планда, Я. Вәлиевтың «Бөркөттәр оя ташламай» романында ла осрашабыҙ. Х. Ғиләжев, Д. Исламов романдарындағы кеүек үк, бында ла яуаплы ҡараш тигән фекер өҫтөнлөк итә. Әле әйтелгән авторҙарҙың әҫәрҙәренән айырмалыраҡ, Я. Вәлиевтың тәнҡит пафосы күҙ буяусыларға, юҡты шыттырыусыларға төбәлгән.

Романда Янов менән Ғәбделхәкимов – Юламановҡа ҡапма-ҡаршы образдар. Янов ишеләй етәксе 60-сы йылдар әҙәбиәтендә булғайны. Ә инде Ғәбделхәкимов образы менән эш ҡатмарлыраҡ тора. Был образда ҡапма-ҡаршылыҡтар бергә үрелеп бара – кире сифаттары менән бергә характерында ыңғай һыҙаттар ҙа юҡ түгел. Ауылға ул партия саҡырыуы буйынса килә, дөйөм эш өсөн бошона белә. Романда төп ыңғай геройҙарҙың береһе булараҡ Юламанов Ғәбделхәкимовта халыҡтан ситләшеү, унан айырымыраҡ йәшәү, кәртәләнергә ынтылыу һиҙемләй.

Т. Сәғитов «Һабантуй» романында ауыл тормошо менән етәкселек итеү проблемаһына бүтәнсәрәк юл таба. Яуаплылыҡ проблемаһы бында бөтөнләй башҡаса хәл ителә. Был әҫәрҙә һәр кем үҙ эш участогы өсөн яуаплы. Т. Сәғитов етәксенең бер урында, бер хужалыҡта оҙаҡ эшләүе мөһим тигән фекер яғында.

Т. Сәғитов романының геройы – совхоз директоры Айрат Байрасов совхозды ташлап китә алмай, сөнки уны ныҡытыуға, юлға һалыуға үҙенең ун йыл ғүмерен биргән. Уның етәкселегендә совхоз аяҡҡа баҫҡан, уның усадьбаларын таш йорттар биҙәй, үҙ стадионы, футбол командаһы, һәйбәт культура йорто бар, юлдары асфальтланған.

Уңышҡа өлгәшеү, әлбиттә, председателгә генә түгел, ә бригадирҙарҙың, механизаторҙарҙың, бөтә ауыл эшсәндәренең тырышлығына бәйле. Ауыл бөгөн хеҙмәтте йөрәк эше итеп ҡараған кешеләргә мохтаж.

М. Шолоховтың Кондрат Майданниковын бер аҙ хәтерләткән бригадир Якуб Мырҙабаев, халыҡ аҡылын үҙендә туплаған Ғәриф Иртөбәков, тик күмәк хужалыҡ шарттарында үҙенең бөйөк сифатын тапҡан элекке батрак Ғәмир, оҙаҡ икеләнеүҙәрҙән һуң колхозға инеп, уны нығытыуға көсөн йәлләмәгән элекке ярлы Булат Өмөтбаев – быларҙың бөтәһен дә Б. Бикбай бөйөк һынылыш эпохаһы тормошонан алған.

Х. Ғиләжев нескә хисле үткер ҡыҙ Сәхибьямал, уңған ҡыҙ Әҡлимә, ҡыйыу һәм тәүәккәл егет Зөфәр, фронттан ҡайтҡан Фәтих менән Йәмғә кеүек илебеҙҙең иң ҡатмарлы бер осоронда – һуғыш ваҡытында һәм унан һуңғы йылдарҙа батырҙарса эш иткән кешеләрҙең ышандырырлыҡ образдарын тыуҙырҙы.

Т. Сәғитов менән Н. Мусиндың геройҙары – беҙҙең замандаштар. Әнғәм Етембаев (Т. Сәғитов, «Һабантуй») образы айырыуса хәтерҙә ҡала. Етембаев образында Совет власы осоронда башҡорт крәҫтиәненең тормошонда булған һынылыштар сағылдырылған. Әнғәм – коммунист, алдынғы механизатор, талантлы уйлап табыусы.

Әлеге көндә ауыл кешеләрендә яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләү проблемаһы бигерәк тә киҫкенләште. Тормош үҙе мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Был проблеманы көнүҙәк проблемалар рәтенә сығарыу бөгөнгө ауылда барған процестар менән бәйләнгән. Беҙҙең совет ауылы хәҙерге көндә айырым бер үҫеш стадияһын кисерә. Ул, ҡала һымаҡ, фәнни-техник революция полосаһына инде.

Һүҙ ҙә юҡ, был күренеш бөтәһенән элек социаль һәм экономик, мораль һәм философик проблемалар тыуҙыра. Ошолар иҫәбенә ҡала менән ауыл араһындағы мөнәсәбәт, үткән тормоштағы прогрессив традицияларҙы, тирә-йүнде һаҡлау, бәләкәй ауылдар яҙмышы тураһында хәстәрлек күреүҙе индерергә булыр ине.

Күп яҙыусылар хәҙерге ауылды уның алдағы перспектив үҫешендә күрергә тырышалар. Ауылдың киләсәге тураһында күп уйланалар. Шуға күрә уның үткәне, хәҙергеһе һәм киләсәге әҙиптәрҙең әҫәрҙәрендә һәр саҡ үҙ-ара бәйләнештә анализлана.

Әйтергә кәрәк, күп яҙыусылар юғалған ауылдар өсөн көйөнөстәрен йәшермәйҙәр. Был Я. Вәлиевтың «Бөркөттәр оя ташламай»

әҫәрендә аныҡ ишетелә. Элекке ауыл тормошоноң ауырлыҡтарын, хәҙергеһенең алға бер аҙым икәнен ул таный, булһа кәрәк. Техника игенсе хеҙмәтен еңеләйтте, ләкин ауыл донъяһының поэзияһын юғалтманы. Быға күпселек башҡорт прозаиктары ышаналар. Шуға ла уларҙың әҫәрҙәрендә хәҙерге ауыл тураһында әленән-әле яҡты, шатлыҡлы интонациялар яңғырай. Ваҡ ауылдарҙың бөтөүен, ҙурҙарының ишәйеүен, беҙҙеңсә, Т. Сәғитов объектив һәм тулы ышандырырлыҡ итеп күрһәтә. Бөгөнгө ауыл кешеһе халыҡҡа яҡыныраҡ булырға, күңеллерәк, «культуралыраҡ» булған ерҙә йәшәргә теләй. Был – тормош талабы.

Ләкин кешеләргә тыуып үҫкән ерҙән, ата-бабалар төйәгенән айырылып китеү бер ни ҙә тормаҫлыҡ ябай эш тип уйларға ярамай. Быны Т. Сәғитов Әнғәм Етембаевтың әсәһе образында күрһәтә. Тәүҙә ҡарсыҡ яңы шарттарға күнегә алмай. Таш йорттоң бүлмәләре уға тар булып күренә, һыуҙан тимер тәме килә. Ул ауыл өйөн, шишмә һыуын һағына. Ваҡыт үтеү менән данлыҡлы ауыл мейесе газ плитаһы менән, артмаҡлы ағас ҡойо һыу үткәргес менән бер ниндәй конкуренцияға ла инә алмағанлығы асыҡлана. Кешелек цивилизацияһының был нәмәләренән башҡа артабанғы тормошто ҡарсыҡ күҙ алдына ла килтерә алмай.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ауылда барған бөйөк үҙгәрештәр процесы сығымһыҙ ғына булмай. Шуға күрә лә «Өҙәрем юл кешеләре» романында Н. Мусин фәнни-техник прогресҡа юғары тиҙлектәр генә түгел, ышаныслы тормоз да кәрәк тигән фекер әйтә. Прогресс кешеләргә файҙалы хеҙмәт итһен өсөн, үҫештә күсәгилешлелекте аңларға, әлеге осорҙа һәм киләсәктә уның эҙемтәләрен иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Шул саҡта, әлбиттә, Н. Мусин әйткәнсә, урамдары йәшел үләндән мәхрүм, ҡайҙа ҡарама туҙан болото сорнаған ауылдар булмаҫ ине. Н. Мусин менән был мәсьәләлә Т. Сәғитов та килешә. Ул урбанизацияның прогрессив һәм ҡотолғоһоҙ процесс икәнен аңлай. Кешеләр мулыраҡ тормошта йәшәргә ынтылалар, цивилизацияның емештәрен файҙаланырға тырышалар, ауылды ғына түгел, бөтә донъяны күрергә, фән һәм техниканың бөгөнгө ҡаҙаныштары менән йәнәш атларға теләйҙәр.

Былар барыһы ла хаҡ. Яҙыусы аңлашылмаҫ аҙым яһарға уйламай. Конфликт башҡа нәмә тураһында хәстәрлек менән киҫкенләшә. Был хәстәрлек ҙур тиҙлек менән барған үҙгәртеп ҡороуҙарҙа халыҡ этикаһы һәм эстетикаһы хазиналарын һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелә. Беҙгә хәҙер

ҙә, һуңынан да ул шиңмәҫ хазинаһыҙ йәшәү юҡ. Т. Сәғитов үҙенең романында ҡала менән ауыл араһындағы ҡаршылыҡты бөтөрөү һис кенә лә ауылдың рухи матурлығын, тәбиғәт гүзәллеген бөтөрөү, хеҙмәттә тыуған, йылдар һынауы үткән күркәм традицияларҙы бөтөрөү түгел тигән хаҡ фекер үткәрә. Яңы культура, яңы көнкүреш күп быуаттар буйы тупланған прогрессив халыҡ традицияларына нигеҙләнергә тейеш. «Һабантуй» романының пафосы әхлаҡи юғалтыуҙар менән һис кенә лә ризалашмай. Кешеләрҙе тарҡатыусы потребитель психологияһынан килеп тыуған ҡурҡынысты яҙыусы нескә һиҙемләй. Уны беҙ романда Элжебет образында айырыуса асыҡ күрәбеҙ.

Башҡорт романы ауыл тормошондағы булған яңылыҡтарҙы хуплай тип әйтеү, әлбиттә, үткәндәге ыңғай күренештәрҙе бөтөнләй онота тип әйтеүгә юл ҡуймай. Яҙыусылар үткәнгә иғтибарлылар.

Х. Ғиләжевтың «Погонһыҙ һалдаттар», Я. Вәлиевтың «Бөркөттәр оя ташламай» һәм башҡа романдарҙың биттәре крәҫтиән хеҙмәтенең матур поэзияһы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, йолаларҙың яҙмышы тураһында уйланыуҙар менән тулы. Был әҫәрҙәр авторҙарының фекеренсә, элекке һәйбәт традициялар яңылар менән бер ҡатарҙан атларға тейеш. Ләкин улар яңы нигеҙҙә, йөкмәткеһе һәм сифаты байыҡтырылып дауам иттерелергә тейеш. Өмәне алайыҡ. Өмә хәҙер күмәк эш кенә түгел, ә колхозда күмәк хеҙмәт (Я. Вәлиев, «Бөркөттәр оя ташламай»; Х. Ғиләжев, «Погонһыҙ һалдаттар»). Йәки башҡорт һәм татар халҡының һабан байрамы – һабантуй – (Т. Сәғитов, «Һабантуй») – хәҙерге көндә ауыл эшсәндәре хеҙмәтенең уңыштары смотры ул. Тракторсылар, комбайнсылар һәм көтөүселәр ярышы, милли көрәш, ат сабыштырыу кеүек милли ярыштарға торорлоҡ ғәҙәти күренештәр ул. Яңы традициялар тыуа. Йәйләү – шуларҙың береһе (Н. Мусин, «Өҙәрем юл кешеләре»). Был байрам колхоз малдарын йәйләүҙә көтөүгә сығарыу менән бәйләнгән.

Ҡыҫҡаһы, алда грандиоз эштәр көтә. (Т. Сәғитовтың «Һабантуй» романын уҡып, быға тағы ла бер тапҡыр ышанаһың.) Тормош беҙҙең алға бик күп хәл итәһе мәсьәләләр ҡуйҙы. Был мәсьәләләрҙе комплекслы хәл итергә кәрәклеген раҫлап, Н. Мусин дөрөҫ эшләйҙер. Авторҙың әйтеүенсә, алда бик ҙур, көсөргәнешле тәрбиә эше тора. «Башҡорт ауыл романы» был эштең төп ориентирҙарын ярайһы уҡ аныҡ билдәләй.

1984

ХАЛҠЫБЫҘЫҢ ҒОРУРЛЫҒЫ

(Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуыуына 80 йыл тулыуға ҡарата)

Һәҙиә Дәүләтшинаның ижады – һирәк була торған оригиналь күренеш. Ул һоҡландырғыс прозаик булараҡ билдәле, уның әҫәрҙәрендә башҡорт халҡы тормошоноң иң мөһим яҡтары художестволы сағылыш тапты. Үҙенең хикәйәләре, повестары һәм «Ырғыҙ» роман-эпопеяһы менән Һ. Дәүләтшина башҡорт прозаһын үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе.

Яҙыусының ғәжәп көслө талантына тулыһынса асылыу насип булманы. Ләкин ҡыҫҡа ғына ғүмерендә ижад итеп өлгөргән әҫәрҙәре башҡорт совет әҙәбиәте фондында ныҡлы урын алды һәм уның сағыу биттәренең береһен тәшкил итте. Һ. Дәүләтшинаның идея йүнәлеше буйынса асыҡ һәм социалистик реализм принциптарына тоғро әҫәрҙәре кешенең үҙ-үҙен художестволы танып белеү сараһы булып хеҙмәт итә.

Һ. Дәүләтшина әҙәбиәткә, йәштәр газетаһында үҙенең «Һылыуҡай пионерка» тигән тәүге хикәйәһен баҫтырып, 1926 йылда килде. Һуңынан уның башҡа хикәйәләре, шиғырҙары һәм нәҫерҙәре бер-бер артлы донъя күрҙеләр. 30-сы йылдар башында йәш яҙыусы ҙурыраҡ жанрҙарға мөрәжәғәт итә һәм уҡыусыларҙың киң ҡатламына билдәле «Айбикә» һәм «Башаҡтар тулҡыны» тигән повестарын яҙа. Ләкин Һ. Дәүләтшинаға хаҡлы дан һәм үлемһеҙлек килтереүсе иң күренекле әҫәре булып уның «Ырғыҙ» романы тора. Был әҫәрҙең башҡорт әҙәбиәте тарихында беренселәрҙән булып республиканың Салауат Юлаев исемендәге премияһы менән билдәләнеүе күп нәмә тураһында һөйләй.

«Ырғыҙ» үҙенең масштаблылығы, эпик ҡоласы менән айырылып тора. Романдың был үҙенсәлеге автор фекеренең киңлеге һәм масштаблылығына бәйләнгән. Яҙыусы үҙенең алдына сиктән тыш ҡатмарлы бурыс – дөрөҫ һәм сағыу картиналар һәм ышандырырлыҡ художестволы образдар аша башҡорт халҡының революцияға тиклемге тормошон күҙ алдына килтереү, уның тарихи яҙмышы тураһында һөйләү һәм был халыҡтың революцияға нимә менән килеүен, хәҡиҡәт юлына баҫҡансы уға ниндәй яфалар сигергә тура килеүен күрһәтеү бурысын ҡуйҙы.

Романда һүрәтләнгән ваҡиғалар беҙҙең быуат баштарында йәйелеп китә һәм яҡынса ике тиҫтә йыл ваҡытты үҙ эсенә ала. Белеүебеҙсә, был осор бөтә донъя күләмендәге әһәмиәткә эйә булған ҙур тарихи ваҡиғалар менән билдәле. В.И. Лениндың большевиктар партияһын төҙөүе, рус-япон һуғышы, 1905–1907 йылдар революцияһы, 1917 йылғы февраль буржуаз-демократик революцияһы, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы һәм Граждандар һуғышы – был дәүерҙә булып үткән һәм Россия халыҡтарының политик һәм милли үҙаңы формалашыуында, уларға йәмғиәт үҫешендә үҙенең урынын белеүҙә айырыуса мөһим роль уйнаған ваҡиғалар теҙмәһенең төп быуындары бына шулар.

Был ваҡиғаларҙың береһе лә Һ. Дәүләтшинаның иғтибарынан киттә ҡалмай. Уларҙың яңғырауығы бөтә әҫәр барышында ишетелеп тора. Һәм был ваҡиғалар теҙмәһе, «Ырғыҙ» тураһындағы ҡайһы бер мәҡәләләрҙә раҫланғанса, романда бөтә хикәйә ителгәндәрҙең фоны ғына түгел, ә айырылғыһыҙ бер өлөшө булып сығыш яһай. Башҡорттарҙың урындағы мәғәнәгә генә эйә кеүек булып күренгән патриархаль тормош һәм көнкүреш картиналары ил күләмендәге ваҡиғаларҙың дөйөм ағышына яҙыусы тарафынан бик оҫта ҡушып үрелә һәм, улар менән органик ҡушылып, ғәжәп сағыу художестволы полотно булып үҫә. Бында Һ. Дәүләтшинаның халыҡ тормошоноң тәрән ҡатламдарына үтеп инә белеү һәм ысынбарлыҡты реалистик киң кәүҙәләндереү оҫталығы, ваҡиғаларҙы сәбәп бәйләнешендә аңлау һәләтлеге күренде. Яҙыусы талантының был яғын Л. Соболев беренселәрҙән булып билдәләне. «Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романын белмәй тороп, – тине ул РСФСР яҙыусыларының I съезында һөйләгән докладында, – башҡорт халҡының үткәнен аңлау мөмкин түгел».

Һ. Дәүләтшинаның романы – үҙенең эске асылы: социаль дөйөмләштереү тәрәнлеге, характерҙарҙы художестволы типик формаларҙа кәүҙәләндереү һәм индивидуалләштереү көсө буйынса ысын мәғәнәһендә новаторлыҡ күренеше. Башҡорт әҙәбиәтендә «Ырғыҙ» романына тиклем кешенең рухи донъяһы үҙен уратып алған мөхит менән ҡатмарлы үҙ-ара бәйләнештә шулай эҙмә-эҙлекле һәм һәр яҡлап тикшерелгән әҫәр булдымы икән? Һ. Дәүләтшина үҙенең романында ифрат бай тормош материалын төшөнөп алыуға һәм шәхси сюжетты һиҙҙермәй генә ҙур эпик темаға бороп ебәрергә һәләтле художник ҡына түгел, бик шәп психологик анализ оҫтаһы, кеше күңелен бөтә нескәлектәренә тиклем яҡшы белеүсе булып та сығыш яһай.

«Ырғыҙ» романы Һ. Дәүләтшинаның үҙенең ижад биографияһында ғына түгел, бәлки бөтә башҡорт әҙәбиәте тарихында ла айырым урын биләй.

«Ырғыҙ» яҙыусының подвигы тип хаҡлы иҫәпләнә. Ысынлап та, бөтә ижад юлы буйына, бигерәк тә «Ырғыҙ» романы өҫтөндә эшләгән осорҙа, Һ. Дәүләтшина үҙенә башҡа бер сыҙамлылыҡ һәм таң ҡалырлыҡ рух тотороҡлолоғо күрһәтте. Ныҡ ауырыған һәм хәҙер инде элекке ҙур һәм ысын мәғәнәле тулы тормошҡа әйләнеп ҡайтыуына бер ниндәй ҙә өмөтө ҡалмаған, бәхетһеҙ яҙмыш уның күренекһеҙ өлөшөн алдан билдәләп ҡуйған кеүек булған саҡта ла ул үҙенең ниәтен бойомға ашырыу өҫтөндә эшләүен дауам итә.

Роман өҫтөндә эш ике тиҫтә йылдан ашыу бара. 30-сы йылдар башында граждандар һуғышының дәһшәтле ваҡиғалары тураһында бәләкәйерәк повесть яҙырға тип уйланған был әҫәр ваҡыт уҙыу менән ҙур эпик полотно булып үҫә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Һ. Дәүләтшина, романын яҙып бөтөрөү өсөн күпме көсөн һәм энергияһын биреп, уның донъяға сыҡҡанын күргәнсе йәшәй алманы: «Ырғыҙ», автор үлеп, өс йыл үткәс кенә, баҫыла башланы. Шулай итеп, был әҫәр яҙыусының ижад яҙмышында кульминацион нөктә генә түгел, бәлки уның аҡҡош йыры ла булды.

Әҙәби тәнҡит Һ. Дәүләтшина тураһында 30-сы йылдарҙа уҡ һөйләй башланы. Яҙыусының ижады, «Ырғыҙ» романы баҫылып сыҡҡас, төплөрәк өйрәнелә башланы. Һ. Дәүләтшинаның тормош һәм ижад юлы М. Минһажетдиновтың «Һәҙиә Дәүләтшина» (Өфө, 1966) тигән монографияһында шаҡтай тулы һәм фәнни яҡтан нигеҙле яҡтыртылды. Китапта яҙыусының донъяға ҡарашының формалашыу һәм үҫеү юлдары, уның әҙәбиәт өлкәһендәге тәүге тәжрибәләре, 30-сы йылдарҙың беренсе яртыһында ижадының нисек киң үҫеш алыуы тураһында ентекле һөйләп бирелә. Тикшеренеүсе Һ. Дәүләтшинаның социалистик реализм ерлегендә барған ижад эволюцияһын шул йылдарҙың дөйөм әҙәби процесы менән тығыҙ бәйләнештә ҡарарға, социалистик реализмдың бөтә нәмәне солғап алыусы бик киң характерын күрһәтергә тырыша. Могографияла «Ырғыҙ» романының идея-художество үҙенсәлектәрен тикшереүгә, был әҫәрҙең ижад ителеү тарихын яҡтыртыуға һәм уның композицион үҙенсәлектәрен асыуға күп иғтибар бүленгән. М. Минһажетдиновтың китабы башҡорт яҙыусыһының ижади мираҫын дөйөмләштереүҙә беренсе тәжрибә булыуы менән ҡиммәт.

«Ырғыҙ» романы тураһында егерменән артыҡ мәҡәлә яҙылған. Шуныһы шатлыҡлы, яҙыусының ижады менән ҡыҙыҡһыныу кәмемәй. Һуңғы 10–15 йыл эсендә уның иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса күп нәмә эшләнде. Республикабыҙҙың ҡалаларында Һ. Дәүләтшина исемен йөрөтөүсе урамдар, бульварҙар барлыҡҡа килде. Айырыуса Бөрөлә был йүнәлештә күп эштәр эшләнә. Ҡалала яҙыусы үҙ ғүмеренең һуңғы көндәрен йәшәгән, «Ырғыҙ» романын яҙыуҙы тамамлаған. Бөрө кешеләре үҙ ҡалаһының «Ырғыҙ» романы тыуған ер булыуы менән ғорурланалар һәм үҙен тулыһынса Тыуған иленә хеҙмәт итеүгә арнаған кешенең яҡты образын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлайҙар. Бында педагогия институтының төп корпусы алдында Һ. Дәүләтшина һәйкәле барлыҡҡа килде. Яҙыусы йәшәгән өйгә мемориаль таҡта ҡуйылды. Институттың картиналар галереяһында Һ. Дәүләтшина музейы төҙөлдө. Унда яҙыусының шәхси әйберҙәре һәм «Ырғыҙ» романының машинкала баҫылған тексы һаҡлана. Бөрө дәүләт педагогия институты базаһында Һ. Дәүләтшина ижадына арналған вуз-ара фәнни-теоретик конференциялар үткәреү яҡшы традицияға әйләнде. Студенттарҙың әҙәби түңәрәге лә яҙыусының ижад мираҫын өйрәнеү буйынса ҙур ғына эш башҡара.

Республикала тағы ла бер яҡшы эш башҡарылды – «Һ. Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр» китабы баҫылып сыҡты. Әйтергә кәрәк, башҡорт әҙәбиәтендә һәм әҙәбиәт ғилемендә хәҙергә бының кеүек баҫмалар күп түгел. М. Ғафури, Д. Юлтый һәм Б. Бикбай тураһындағы иҫтәлектәр китаптарын ғына күрһәтергә мөмкин. Шуның өсөн йыйынтыҡты төҙөүсе филология фәндәре кандидаты М. Хәмиҙуллинаның эшенә тейешле баһа бирергә кәрәк. Ул материалдар туплау, уларҙы системаға килтереү һәм баҫырға әҙерләүҙә айырыуса активлыҡ күрһәтте. С. Сафуанов тарафынан яҙылған инеш һүҙҙән тыш йыйынтыҡҡа 28 мәҡәлә индерелгән, уларҙың авторҙары – яҙыусының туғандары һәм Һ. Дәүләтшинаның ижадына ниндәйҙер мөнәсәбәте булған замандаштары. Бында фәнгә яңы индерелгән архив материалдарын да күп осратырға мөмкин. «Һ. Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр»ҙе «Ырғыҙ»ҙың авторын үҙен ололаусыларға тағы ла яҡынайтыусы тере иҫтәлек тип әйтеп була.

Йылдар беҙҙе алыҫыраҡ алып киткән һайын, Һ. Дәүләтшинаның ижад мираҫы һаман ҡәҙерлерәк була бара, беҙ уның үҙе тураһында ла күберәк беләбеҙ.

1985

ЯУГИР ШАҒИР АУАЗЫ

Совет халҡына гитлерсы фашизм көсләп таҡҡан ҡәһәрле һуғыш беҙҙең материаль ресурстарыбыҙға ғына түгел, рухи байлығыбыҙға ла ифрат ҙур зыян килтерҙе. Ватаныбыҙҙың азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап ҡалыу өсөн бөтә халыҡ яуға сыҡҡанда, үҙ теләктәре менән ҡулдарына ҡорал алған төрлө һөнәр кешеләре араһында байтаҡ инженерҙар һәм белгестәр, фән һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре, әҙиптәр, врачтар, уҡытыусылар һәм интеллигенцияның башҡа бик күп төр вәкилдәре бар ине. Улар киң Тыуған илебеҙҙең Балтик диңгеҙенән алып көньяҡ сиктәренә хәтлем дөрләп ятҡан яу яланында ғәзиз баштарын һалды.

Күп милләтле совет әҙәбиәтенең фронттан әйләнеп ҡайта алмаған вәкилдәре араһында исемдәре инде киң ҡатлам уҡыусыларға барып еткәндәре лә, шулай уҡ ижадтары әле бөрөләнеп кенә килгәндәре лә булды. Ниндәй аяныс хәл! Әгәр улар иҫән ҡалһалар, әҙәбиәтебеҙгә күпме көс өҫтәлер ине лә үҙҙәре менән күпме яңы идеялар, темалар алып килерҙәр ине! Бөгөн етмештән ашыу телдә ижад иткән туғандаш халыҡтар әҙәбиәтенең тауышы тағы ла көрөрәк, һулышы тәрәнерәк, табыны мулыраҡ булыр ине.

Ҡот осҡос һуғыш арҡаһында быуындары әле яңы нығынып килгән беҙҙең башҡорт әҙәбиәте лә күп юғалтыуҙар кисерҙе. Беренсенән, һуғыш афәте проза менән драматургиябыҙҙың артабанғы ҡеүәтле үҫешен тотҡарлаһа, икенсенән, байтаҡ ҡына яҙыусыларыбыҙ һәм шағирҙарыбыҙ яу ҡырынан әйләнеп ҡайта алманы. Шулар араһында поэтик тауышы ярты юлда өҙөлөп ҡалған, әйтер һүҙҙәрен уҡыусыға еткереп тә өлгөрмәгән, ләкин һуғыштан һуңғы осорға ҙур ижад пландары менән янып йөрөгән утыҙ дүрт йәшлек Бәҙрүш Моҡамай ҙа бар ине.

Бәҙрүш Моҡамай республикабыҙҙың Дүртөйлө районында тыуып үҫкән. Өфө педагогия техникумын тамамлағас, башта уҡытыусы, унан һуң журналист булып эшләгән. Уның тәүге шиғырҙары 1929–1931 йылдарҙа «Яңы ауыл», «Йәш юҡһыл», «Әҙәби удар» газеталарында донъя күргән. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, фронтҡа киткән һәм 1944 йылдың 20 сентябрендә батырҙарса

һәләк булған. Һалдат күңелен биләп алған данлыҡлы еңеү көнөнә һанаулы ғына айҙар ҡалғас, «хыялға бай, нескә күңелле» шағирҙың ижад шишмәһе көтмәгәндә өҙөлөп ҡуйған.

Хәҙерге заман уҡыусыһы Бәҙрүш Моҡамайҙы ныҡлап белмәҫкә лә мөмкин. Сөнки ул иҫән саҡта ни бары ике генә китап сығарырға өлгөргән. Күп йылдар үткәнлектән, инде улар ҙа библиографик хазинаға әүерелгәндәр. Шуға ла әле күптән түгел Бәҙрүш Моҡамайҙың Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан «Линарияға хаттар» тигән йыйынтығы шатлыҡлы хәл булды. Теүәл ҡырҡ йылдан һуң патриот шағир һәм ҡаһарман һуғышсы беҙҙең араға яңынан ҡайтып төшкән кеүек тойолдо.

Йыйынтыҡҡа Бәҙрүш Моҡамайҙың «һуғыш араһындағы тынлыҡтарҙа окоптарҙа, блиндаждарҙа, траншеяларҙа» ижад ителгән ҡыҫҡа хикәйәләре, шиғырҙары, «Ҡан өсөн ҡан!» исемле пьесаһы һәм хаттары тупланған. Уны шағирҙың йәшлек дуҫы Самат Шакир төҙөгән һәм баш һүҙ яҙған.

Йыйынтыҡ һалдат-шағирҙың ҡыҙы Линарияға яу ҡырынан яҙған хаттары менән асыла. Унда бөтәһе ун ике хат. Беренсе хаттың ҡасан яҙылыуы күрһәтелмәгән. Һуңғыһы 1943 йыл менән билдәләнгән. Был хаттарҙы автор фронт хикәйәләре тип атаған. Жанр ҡанундарынан ҡәтғи сығып эш иткәндә, улар, бәлки, хикәйә талаптарына бик үк яуап та бирер бөтмәй торғандарҙыр. «Линарияға хаттар» – тыуған йортонан алыҫ ерҙәрҙә ил азатлығын һаҡлап йөрөгән һуғышсының һөйөклө ҡыҙына адресланған ябай хаттар түгел, ә өлкән быуын кешеһенең үҫеп килеүсе йәштәргә васыяты, художестволы дөйөмләштереү кимәленә күтәрелгән йәнле документтар. Хикәйәләрҙең төбөндә документаль фактлар ятыуына автор үҙе лә ишара яһай. Мәҫәлән, туғызынсы хатҡа инеш һүҙендә ул: «Был хикәйәм дә үҙемдең тарафымдан уйлап яҙылған уйҙырма түгел, һәммәһе лә булған ваҡиғалар», – тип киҫәтеп ҡуя.

Линарияға адресланған хаттар күләме яғынан әллә ни ҙур булмаһалар ҙа, эстәлеге менән йән өҙҙөргөстәр. Уларҙы уҡып сыҡҡас, гитлерсы илбаҫарҙар тарафынан яндырылған ауылдар, үлтерелгән балаларҙың, дарға аҫып ҡуйылған ирҙәрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың имгәтелгән кәүҙәләре йөрәк тетрәткес күренеш булып күҙ алдына килеп баҫа. Бишектә ятҡан сабыйҙы дөрләп янған мейескә ташлау тиһеңме, немецтарҙың бер нисә кәнфитен алған биш йәшлек малайҙы автоматтан атып үлтереү тиһеңме, әсәһен атҡанда ҡурҡыуҙан теленән

һәм аяғынан яҙған дүрт йәшлек бала тиһеңме – былар бөтәһе лә фашист-вәхшиҙәрҙең мораль йөҙөн фашлаусы ҡысҡырып торған факттар итеп ҡабул ителә.

Хаттарҙы бер епкә теҙеп, бер бөтөн итеп ҡарағанда, уларҙың композицияһы контрасҡа, ҡапма-ҡаршылыҡҡа ҡоролоуын төҫмөрләргә мөмкин. Бер яҡтан, фашист илбаҫарҙарының йыртҡыслыҡтары күңелде өшөткөс дәлилдәр ярҙамында тасуирланһа, икенсе яҡтан, уларға ҡаршы дәррәү күтәрелгән совет халҡының иҫ киткес батырлығы ышандырырлыҡ картиналарҙа һүрәтләнә. Дөрөҫ, жанр рамкалары авторҙың мөмкинлектәрен һиҙелерлек сикләй – фронт тормошон ул бөтә киңлегендә һәм тәрәнлегендә түгел, ә айырым эпизодтарын ғына күрһәтә. Был эпизодтар араһында яҙыусы үҙ күҙҙәре менән күргәндәре лә, шулай уҡ башҡа персонаждар ауыҙынан ишетеп һөйләгәндәре лә бар. Әммә нисек кенә булмаһын, улар ил азатлығы өсөн яуға күтәрелгән беҙҙең һуғышсыларыбыҙҙың мораль яҡтан да, физик яҡтан да дошман ғәскәрҙәренән күпкә өҫтөн тороуын художестволы саралар менән раҫлай.

Бына бишенсе хатты алайыҡ. Был хатта автор коммунист Әхәт Камаловтың батырлығы һәм тапҡырлығы тураһында һөйләй. Ул өҙөлгән кабелдең остарын ауыҙына ҡабып, ҡаты итеп тешләгән дә бер-бер артлы төшөп ярылыусы дошман миналары уты аҫтында ике сәғәт буйына элемтә линияһының өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин иткән.

Коммунист Иван Щукин (өсөнсө хат), сержант Әнүәр Баянов, ҡыҙылармеецтар Сорокин менән Сәлимгәрәев (дүртенсе хат), телефонист Ғата Кәримов (алтынсы хат), сапер Таймасов (етенсе хат), ҡыҙылармеец Насировтарҙың (унынсы хат) батырлыҡтары ла шаҡ ҡатырғыс. Уларҙың үҙ Ватанын йәне-тәне менән һөйөүҙәрен, уның өсөн ҡәҙерле ғүмерҙәрен дә бирергә әҙер тороуҙарын һүрәтләүгә бағышланған был ҡыҫҡа хикәйәләр ябай ҡарауға Линарияға ғына адресланған булһалар ҙа, төптә иһә беҙҙең батыр һуғышсыларыбыҙҙың юйылмаҫ образдарын кәүҙәләндерәләр. Тағы ла шуныһы характерлы: дошманға нәфрәт, Тыуған илгә мөхәббәт хисе хаттан-хатҡа күсеп, үҫтерелеп киленә.

Өсөнсө хатты лирик сигенеү формаһындараҡ автор былай тип яҙа: «Мин йәшәргә теләйем. Ләкин ҡол булып түгел, ирекле булып йәшәгем килә минең. Тап бына шуның өсөн беҙгә ҡоллоҡ алып килеүсе яуыз дошманға ҡаршы ярһыулы асыу һәм ҡайнар нәфрәт менән атакаға күтәреләм. Йәки еңеү, йәки үлем. Башҡа юл юҡ

беҙҙең». Был һүҙҙәрҙе уның геройҙары ла тулы хоҡуҡ менән ҡабатлай алырҙар ине. Һәм улар һүҙ менән генә түгел, ә үҙҙәренең яу ҡырындағы ҡаһарманлыҡтары менән дә шулай эшләйҙәр ҙә.

«Линарияға хаттар»ҙа үткәрелгән идея-тематик йүнәлеш Бәҙрүш Моҡамайҙың әле һүҙ барған йыйынтыҡҡа индерелгән шиғырҙарына, «Таня» исемле поэмаһына һәм «Ҡан өсөн ҡан!» тигән пьесаһына ла хас. Дөрөҫ, поэзия менән драматургиябыҙ ирешкән бөгөнгө көн юғарылығынан сығып ҡарағанда, был әҫәрҙәр үҙҙәренең художестволы эшләнеше яғынан, бәлки, күпкә йомшағыраҡтыр ҙа. Әйтәйек, шиғырҙарға поэтик образлылыҡ етешеп бөтмәй, улар күп осраҡта рифмаға һалынған яңғырауыҡлы саҡырыуға йәиһә хәбәр һөйләүгә ҡайтып ҡала, урыны-урыны менән ритмдар аҡһай, ҡабатлауҙар ҙа осрай, күләмдәре менән дә бик ҙурҙар. Пьесаға килгәндә иһә, уның ерлеген һиҙемләү ҡыйын, сөнки ваҡиғаларҙың ҡайҙа һәм ҡайһы ваҡытта барыуы асыҡланмаған. Әммә үҙҙәренең пафостары буйынса улар беҙгә бик таныш һәм яҡын.

Ант итәм: үлһәм-үлермен!
Намыҫҡа тап төшөрмәм!
Тыуған-үҫкән илкәйемде
Дошман ҡулына бирмәм! –

тип оран һала 1941 йылдың сентябрендә яҙылған «Ант» исемле шиғырҙың лирик геройы. Был ант Б. Моҡамайҙың фронт юлдарында ижад иткән бөтә әҫәрҙәре аша ҡыҙыл еп булып үтә, уҡыусыны дәртләндерә, фашизмдың еңелеүе ҡотолғоһоҙ булыуына ныҡлы ышаныс тыуҙыра, ул көндө яҡынайтыу өсөн героик көрәшкә саҡыра.

«Линарияға хаттар» йыйынтығы шағирҙың ҡатынына һәм Сәйфи Ҡудашҡа адресланған хаттар менән тамамлана. Был хаттар күберәк шәхси планда яҙылған булһалар ҙа, уларҙың һәр ҡайһыһынан яугир шағирҙың ҡайнар һулышы, Ватанға бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөхәббәт хисе бөркөлөп тора, авторҙың эске кисерештәре Тыуған ил яҙмышы, халыҡтар яҙмышы тураһында тәрән уйланыуҙар менән бергә үрелеп бирелә. 1942 йылдың 13 мартында тормош иптәше Клаваға ул былай тип яҙа:

«Мин… Ватан тураһында, һинең һәм һөйөклө балаларымдың киләсәк бәхеттәре тураһында уйланам. Ватан өсөн һәм һеҙҙең бәхетегеҙ өсөн аҡтыҡ тамсы ҡаным ҡалғансы көрәшергә ант иттем,

мин был антымды намыҫ менән үтәрмен. Фашизм дөмөгөр, ә мин еңеү менән һеҙҙең янға ҡайтырмын. Мин – ябай. Минең һөйөүем дә – ябай. Ләкин ул һөйөү – ҡайнар һәм саф!

Һин, бәғерем, йомшаҡ характерлы булма…

Әлбиттә, бик аңлайым. Еңел түгелдер һиңә минһеҙ. Ләкин беҙ большевиктар – особый материянан эшләнгән кешеләр. Ауырлыҡты еңә белергә кәрәк!»

Ауырлыҡты еңә белергә кәрәк! Был һүҙҙәр Бәҙрүш Моҡамайҙың үтә иртә өҙөлгән тормош һәм ижад юлына эпиграф булып тороролоҡ. Фашизмды дөмөктөрөп, тыуған яҡтарына еңеү менән әйләнеп ҡайтырға бик ныҡ өмөтләнһә лә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул яу ҡырында ятып ҡалды һәм үҙенең исемен әҙәбиәтебеҙ күгенә алтын хәрефтәр менән яҙып ҡуйҙы.

«Линарияға хаттар» йыйынтығына Б. Моҡамайҙың һуғыш йылдарында яҙылған бөтә әҫәрҙәре, бәлки, кереп тә бөтмәгәндер. Әммә ошо тиклеме лә шағирҙың уй-хистәрен, эске кисерештәрен, уның ижад лабораторияһын, киләсәккә пландарын күпмелер кимәлдә төҫмөрләргә мөмкинлек бирә. Бынан ҡырҡ йыл элек совет халҡының фашизмға ҡаршы көрәштә күрһәткән батырлығын тағы ла бер тапҡыр хәтергә төшөргән был китап үрҙә телгә алынған ҡайһы бер етешһеҙлектәренә ҡарамаҫтан, әҙәбиәтебеҙҙең Бөйөк Ватан һуғышы осоро тарихына йәм өҫтәр, хәҙерге заман йәш быуынды хәрби-патриотик һәм интернациональ рухта тәрбиәләүҙә лә уның роле ҙур булыр.

1985

НОҒМАН МУСИН ИЖАДЫНДА КЕШЕ ҺӘМ ТӘБИҒӘТ ПРОБЛЕМАҺЫ

Кеше һәм тәбиғәт проблемаһы – яҙыусыларҙа һәр ваҡыт ҡыҙыҡһыныу тыуҙырып килгән мәсьәләләрҙең береһе. Тәбиғәт менән аралашыу кешелә уның матурлығы һәм серҙәре, ғаләмдең бөйөклөгө һәм гармонияһы, йәшәү мәғәнәһе һәм кешенең бурысы тураһында уйҙар, ижади активлыҡ тыуҙыра, уның күңелен сафландыра. Тәбиғәт-әсәнең файҙалы тәьҫирендә барлыҡҡа килгән был рухи процестар күп совет яҙыусыларының әҫәрҙәрендә үҙенең сағылышын таба. Леонов, Паустовский, Залыгин тыуған яҡтың матурлығын күрһәтеп кенә сикләнмәнеләр, тәбиғәттең кешегә эстетик-әхлаҡи йоғонтоһон да астылар.

Күп милләтле совет әҙәбиәтенең иң яҡшы традицияларын үҫтереүҙе дауам итеп, башҡорт әҙәбиәте мәңгелек мәсьәләне – кеше һәм тәбиғәт проблемаһын үҙенсә яҡтырта. Һәм был күренекле башҡорт яҙыусыһы, зур романдар, үткер проблемалы повестар, күп һанлы хикәйәләр һәм очерктар авторы Н. Мусин ижадында тулыраҡ яҡтыртылған.

«Мәңгелек урман» романы – яҙыусының урман һәм халыҡ яҙмыштары хаҡында оҙаҡ йылдар уйланыуҙары емеше. Был теманы ул үҙенең тәүге әҫәрҙәрендә: «Зөһрә», «Ер биҙәге», «Кеше йылмая» тигән повестарында, «Ир намыҫы», «Ҡарағайҙар», «Ереккәнде ер ярата» тигән хикәйәләрендә үк ентекләп тикшерә башлағайны.

«Зөһрә» повесы 50-се йылдар башҡорт прозаһына йәнләндергес сығанаҡ булып килеп инде һәм авторҙың үҙенә лә танылыу килтерҙе. Ул шул ваҡыттағы тәнҡит тарафынан да яҡшы ҡаршыланды.

Ул саҡта үҙенең тыуған ауылы Ҡолсорала уҡытыусы булып эшләгән яҙыусы уҡытыусылар хаҡында повесть яҙырға уйлай, ләкин ул мәктәп, уның ихтыяждары һәм мохтажлыҡтары тураһында һөйләү менән генә сикләнмәй, промартелдең экономик һәм культура проблемаларына ла ҡағыла.

Н. Мусиндың ижади үҙенсәлеге уның реаль ысынбарлыҡты бер яҡтан ғына ҡарамайынса, алдан билдәләнгән темаға яраҡлаштырып йолҡоп алынған «киҫәктәр» рәүешендә түгел, ә үҙ-ара бәйләнгән

күренештәр комплексында, мөнәсәбәттәр һәм характерҙар үрелешендә ҡабул итә һәм художестволы әҫәргә күсерә белеүенән ғибәрәт.

Яҙыусы үҙенең тәүге ҙур әҫәре «Зөһрә» повесында уҡ мөхәббәтте, йәшлекте һәм йәшәү принциптарының маҡсаты хаҡында уйланыуҙарҙы һүрәтләүҙең тар сиктәренән сыға. Тормош үҙ яйы менән барған ауылға егәрле йәш уҡытыусы Зөһрә килә. Зөһрә һәм күптән түгел хеҙмәттән ҡайтҡан, тормошто яҡшы белгән Ғәлимдең ҙур эшмәкәрлектәре һөҙөмтәһендә бөтә ауыл хәрәкәткә килә. Был ике образды автор бер сюжет линияһының ике тармағы итеп һүрәтләй. Зөһрә ауыл кешеләрен рухи яҡтан байытырға тырыша, Ғәлим ауылдаштарының өйҙәрендә электр лампалары тоҡандыра. Яңы тормошҡа ынтылыусы һәм үҙҙәре артынан повестың башҡа персонаждарын эйәртеүсе был кешеләрҙең шәхси мөнәсәбәттәре лә уҡыусыларҙа йылы тойғолар уята. Шулай итеп, тема идиллик төҙөлгән сюжет аша хәл ителә.

Ошо әҫәрендә үк авторҙың тәбиғәткә һәм ерҙәге бөтә тереклек эйәләренә мөхәббәте, уның күңел йылылығы асыҡ сағыла. Урман темаһы беренсе тапҡыр бында барлыҡҡа килә. Идиллик төҙөлгән сюжет реаль көнкүреш ваҡиғалары менән ҡушыла.

Н. Мусиндың «Ир намыҫы» тигән икенсе хикәйәһенең геройы лесничий Әбүзәр Борһанов Зөһрә менән Ғәлим башлаған эште дауам итә, ләкин бында замандың актуаль һәм үҙәк мәсьәләләре киңерәк ҡарала. Герой образында замандаштарыбыҙҙың иң яҡшы һыҙаттары үҙенең сағылышын тапты. Иң мөһим мораль-этик проблемалар Борһановтың эшмәкәрлеге һәм көрәше менән органик бәйләнештә ҡуйыла. Автор урман хужалығы менән яңы шарттарҙа етәкселек итеү мәсьәләләренә айырым иғтибар бүлә. Әбүзәр Борһанов конкрет шарттарҙы иҫәпкә алып эш итә, етәкселек итеүҙең иҫке методтарына ҡаршы сығыш яһай, ижади инициативаны яҡлай. Был геройҙың эштәре тураһында һөйләү әҫәрҙең сюжет һыҙығын тәшкил итә.

Хикәйәлә ер биҙәге – урманды яҡлаусы кеше менән ғорурланыу һәм һоҡланыу асыҡ күренә. Н. Мусин 50-се йылдар өсөн хас яңы тормош пафосын сағылдыра алған. Әбүзәр Борһановтың урманды ялҡынлы һәм дәртле яҡлауында, уның үҙ эше менән мауығыуында һәм тәбиғәтте лиризм менән тулы тасуирлауҙарында яҙыусының тауышы асыҡ һиҙелә. Һәм был хикәйәгә айырым бер тәьҫирлелек бирә.

Кешегә ышаныу, халыҡҡа киң инициатива биреү мәсьәләләре геройҙың урман хужалығына етәкселек итеүҙең яңы методтары өсөн көрәше менән органик бәйләнештә яҡтыртыла. Шулай итеп, гума-

низм проблемаһы производство мәсьәләләре менән айырылғыһыҙ бәйләнешле булып сыға һәм әҫәрҙә ҙур ижтимағи-эстетик яңғыраҡ ала. Кешенең интим донъяһы, уның шәхси бәхете «етештереүсе тормош»тан айырылған донъя түгел. Хикәйәлә төп иғтибар замандашыбыҙҙың үҙенсәлекле һыҙаттарын асыуға бүленгән, яҙыусы уны тормошоноң һәм эшмәкәрлегенең бөтә аспекттарында күрһәткән.

«Ир намыҫы» тигән хикәйә заман геройын – ябай хеҙмәт кешеһен, үҙ эшенең новаторын күрһәтә. «Ир намыҫы», беҙҙең фекеребеҙсә, Н. Мусин ижадында ғына түгел, ләкин 50-се йылдар башҡорт әҙәбиәтендә лә иң уңышлы хикәйә булып тора. Хикәйәлә йәмғиәт тормошондағы мөһим проблемаларҙың береһе ҡуйыла. Теманың актуаллеге менән юғары художестволы кимәлдең ҡушылыуы әҫәрҙе тағы ла юғарыраҡ күтәрә.

Н. Мусин әҫәрҙәрендә тәбиғәт саф күңелле, ысынбарлыҡтан айырылмаҫ кешеләр менән гармонияла һүрәтләнә. «Ғорурлыҡ» тигән повесында яҙыусы, беренсе ҡарашҡа, тәбиғәттән алыҫ тема – һалдат тормошо тураһында яҙа. Ләкин был әҫәрҙә лә яҙыусының үҙенсәлекле стиле – тәбиғәт менән кеше күңеленең берҙәмлеге һиҙелә. Кешеләр тәбиғәттә матурлай, байыта, тәбиғәт кешенең кисерештәре, кәйеф призмаһы аша үтә, кеше тәбиғәт закондарына ынтыла. Ыңғай геройҙар – ер биҙәге, ә киреләр – ер биҙәген, уның бөтә йөҙөн боҙоусы әрәмтамаҡтар.

Н. Мусиндың «Ер биҙәге» тигән повесының күп геройҙарына рухи бөйөклөк һәм намыҫлылыҡ, яҡшылыҡ, күркәмлек хас. Заман геройы тибын ентекләп эшләүен дауам итеп, яҙыусы кешенең тәбиғәткә, ергә һәм уның биҙәге – урманға мөнәсәбәте тураһында полемик ялҡын менән һөйләй. Кешеләр араһындағы бөтә бәрелешеүҙәр, уларҙың әхлаҡ сифаттары повеста туранан-тура ошо проблема менән бәйләнгән. Үҙен тыуған еренең хужаһы һәм шуға күрә уның яҙмышы өсөн яуаплы итеп иҫәпләүсе урман ҡарауылсыһы Йомағол Заманов өсөн урман – кешеләрҙең мул тормошта йәшәү сығанағы ғына түгел, ләкин ер биҙәге лә, шуның өсөн урманға ҡараш та – әхлаҡлылыҡ, бөтә әйләнә-тирәгә, донъяға гуманлы ҡараш күрһәткесе. Повестағы бар яҡшылыҡ Йомағол менән бәйләнгән, уның характеры беҙҙең алға ҙур, күләмле булып килеп баҫа, сөнки ул замандың реаль ҡаршылыҡтары алдына ҡуйылған, беҙҙең тормоштоң мөһим проблемаларын хәл итеү өсөн көрәшкә инә. Н. Мусин повесынан асыҡ күренеүенсә, ер биҙәген урман һәм башҡа тәбиғәт байлыҡтары ғына

түгел, ләкин Йомағол, Ямниха, Гөлнәзирә һәм башҡалар тибындағы кешеләр ҙә, тормошобоҙҙағы матурлыҡ тураһындағы уй менән йәшәүсе һәм эшләүселәр ҙә тәшкил итә. «Хеҙмәттең матурлығын, тормоштоң рәхәтлеген тоя беләм мин», – ти Ямниха.

Урман байлыҡтарын аҡыллы файҙаланыу һәм һаҡлау кеүек зур дөйөм халыҡ проблемаһын күтәреп, автор урмансылыҡтың практик мәсьәләләрен ҡуя, кешенең «йәшел дуҫын» яҡлап сығыш яһай. Кеше тормошон сәскә атыусы баҡса менән, бәхетле киләсәк өсөн көрәште урман хаҡында хәстәрлек менән, кешеләр араһындағы аҡыллы, яҡты, яҡшы ҡараштың еңеүен тәбиғәт матурлығы менән сағыштырып, Н. Мусин яҡшы тормош хаҡына илһамланыуға көслө теләккә генә түгел, бәлки үҙенең хыялдарын ысынбарлыҡҡа әйләндереү өсөн эшлекле көрәшкә һәләтле кеше идеалын сағылдыра.

1962 йылда Н. Мусин «Ҡарағайҙар», «Ереккәнде ер ярата» тигән ике яңы хикәйәһен уҡыусы хөкөмөнә тапшырҙы. Был әҫәрҙәрҙә ерҙе аңһыҙ һәм мәғәнәһеҙ һөйөү тураһында ғына һүҙ бармай, уларҙа тормошта үҙ урынын эҙләүсе тынғыһыҙ рух йәшәй. «Ер биҙәге» повесында ҡуйылған мәсьәләләр бында йәштәрҙең тормошо һәм эшмәкәрлегенән алынған конкрет миҫалдарҙа хәл ителә.

«Кеше йылмая» (1964) повесында Н. Мусин үҙенең геройҙарын йәштәр араһынан һайлаған. Авторҙы замандаш образы, уның әхлаҡ принциптары, уйҙары һәм эштәре ҡыҙыҡһындыра.

Әҫәрҙең төп геройҙары Гөлсөм һәм Байморат менән осрашыуҙан һуң беҙҙең алда романтика менән тулы яңы донъя асыла. Әҫәрҙәге бөтә ваҡиғалар тәбиғәт ҡосағында бара, кешеләрҙең характеры төрлө яҡлап асыла. Повестың геройҙары тәбиғәттә үҙҙәрен өйрәнеп киткән өйҙәге кеүек тоялар, ләкин бер үк ваҡытта яңы күсеп килгән кеше һымаҡ шатланалар. Ҡаяларҙың, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡоштары һәм йәнлектәре булған аҡландарҙың матурлығын күрә, ябай күҙгә ташланып бармаған меңәрләгән нәмәләргә иркәләп ҡарай белеүҙәрендә геройҙарҙың башҡаларҙан айырылып торған, саф халыҡ характеры, рухи сәләмәтлеге сағыла.

Юғарыла телгә алынған әҫәрҙәрҙә әле публицистик тура һүҙлелек өҫтөнлөк итте, ауыр, хәл ителмәгән мәсьәләләр артҡы планға күсерелде. Шуға ҡарамаҫтан, был повестарҙа һәм хикәйәләрҙә яҙыусының башҡорт урмандарының, ер-һыуҙарының үткәне, хәҙергеһе һәм киләсәге хаҡындағы уйланыуҙары үҙенсәлекле мотивҡа әйләнә. Ул әҫәрҙән әҫәргә үҫә, тәрәнәйә, киңәйә, ә «Мәңгелек урман» рома-

нында киң эпик йөкмәткеле дилогияға әүерелеп үҫә. «Ноғман Мусиндың “Мәңгелек урман” дилогияһы… рус әҙәбиәтендә 50-се йылдар башында асылған һәм композицияһы “заманалар бәйләнеше”нә нигеҙләнгән романдарға яҡын. Ю. Бондаревтың “Яр”, О. Гончарҙың “Циклон”, А. Ивановтың “Мәңгелек саҡырыу”, П. Проскуриндың “Яҙмыш” романдарында ҡулланылған был композицион алым Л. Леоновтың “Рус урманы” романы менән асылды». (Ә. Вахитов. Дәүерҙәр һәм яҙмыштар // «Ағиҙел». 1978. № 12).

«Мәңгелек урман» – милли тормоштоң философик тәрәнлектәрен аңлауҙың, художниктың кеше һәм тәбиғәт араһындағы ҡатмарлаша барған бәйләнештәрҙе алдан күреүенең, танып белеү һәм үҙ-үҙеңде танып белеү процестарын төшөнөүенең миҫалы.

Дилогияла документаллек менән шартлылыҡ, очерклыҡ менән киң эпик хикәйәләү, легендаға хас образдар менән тарихи шәхестәрҙең яҙмыштары бергә ҡушыла. Ләкин был стилистик сыбарлыҡ, образдарҙың тамамланмағанлығы хаҡында һөйләмәй.

«Мәңгелек урман»дың проблемалары ҡатмарлы һәм күп төрлө. Мәҫәлән: кеше һәм тәбиғәт, кеше һәм тарих, дин һәм танып белеү. Был проблемаларҙың һәр береһе ентекле өйрәнеүҙе талап итә. Әммә улар араһында иң мөһиме берәү – кеше һәм тәбиғәт проблемаһы. Уның тирәһендә башҡа проблемалар туплана.

Романда урман башҡорт халҡының яҙмышы асылған фон ғына түгел. Урман – ул иң йәнле, поэтик, бөтә ергә үтеп инеүсе, бөтә нәмәне яҡтыртыусы, хәрәкәт итеүсе көс тә. «Мәңгелек урман»да беҙҙең алдыбыҙҙа – бөйөк ваҡиғаларҙан тетрәнгән Башҡортостан. Үҙенең романын Норош ярына Лапшиндар менән Каргиндар тулы хужа булған ваҡыттан башлап, яҙыусы 1895, 1905 йылғы ваҡиғалар хаҡында һөйләй ҙә уҡыусыларҙы хәҙерге заманға алып килә.

Дилогияның ике романы ла инеш һүҙҙән, заман кешеһенә мөрәжәғәт итеүҙән башлана, һәм уның менән тығыҙ бәйләнгән Норош буйҙарындағы урман тарихын һөйләү үҙенсәлекле сюжет ағымын тыуҙыра. Әҫәрҙең шаулылығы геройҙарҙың бик күп булыуына, ваҡиғаларҙың тулылығына ғына ҡайтып ҡалмай, ә уның жанр һәм стиль үҙенсәлектәре менән аңлатыла.

Тәүге китап бынан йөҙ йыл элек булып үткән ваҡиғаларҙы хикәйәләү менән асыла. Норош ярҙары ҙур юлдарҙан алыҫ, бында капитализм закондары хакимлыҡ итмәй. Быуаттар буйына килгән тынлыҡ һунарсыларҙың атыу тауышынан ғына боҙола. Бына ошо

ерҙәргә промышленник Лапшиндың күҙе ҡыҙа. Тар һунарсы һуҡмаҡтары киңәйә, уларҙа яңы кешеләр күренә. Урман тауышы үҙгәрә, сөнки Норош ярҙарындағы тормош ритмы үҙгәрә. Романдағы ваҡиғаларҙы хикәйәләүҙәге яңы интонациялар тормоштоң үҙгәреүе менән бәйләнгән. Яҙыусының үҙ замандашына мөрәжәғәт итеүе һәм күптән булып узған ваҡиғалар тураһында озон итеп һөйләүе әҫәрҙең тулы бер дәүерҙе эсенә алыуын белдерә: «Тарих мең дә һигеҙ йөҙ ҙә етмеш бишенсе йылында…». Бындай башлам халыҡ ижады әҫәрҙәренә, атап әйткәндә, бәйеттәргә хас.

«Н. Мусиндың “Мәңгелек урман” романының төп персонажы Төлкөсура – асылда легенда кешеһе, фольклорҙан профессиональ әҙәбиәткә килеп ингән шәхес. Образдың ошо үҙенсәлеген белдереүсе ике эпизодты иҫкә төшөрәйек. Тәүгеһендә Төлкөсура үҙенең ҡан дошманы капиталист Лапшинды үҙе етәкселек иткән бола ҡорбаны булыуҙан ҡотҡара, уға ҡасырға ярҙам итә. Бындай киң күңеллелек – эпос батыры өсөн хас күренеш. Икенсе эпизод, киреһенсә, Лапшиндың Төлкөсураны һәләк итеүе кеүек ҡанһыҙлыҡты тасуирлай. Әммә автор фольклорса романтик алымға бында ла тоғро ҡала. Төлкөсура Лапшинға бирелмәй, ә алдында ажғырып ятҡан йылғаға бейек ҡаянан ташлана. Геройҙың легенда йәки эпос өсөн генә хас булған ҡылыҡтары әҫәрҙең реалистик структураһында һис тә сурайып тормай. Төлкөсура ҡаяһы, йөҙйәшәр ҡарағай кеүек предмет образдарының үткәндәрҙе, айырым кешеләрҙең яҙмышын легендаға әйләндереп һөйләүе кеүек алымдар ҙа әҫәрҙең легендар-романтик рухын күтәрә төшә» (Н. Мусин. Мәңгелек урман. Икенсе китап. Өфө, 1978. 391–392-се биттәр).

Төлкөсура тормош ҡаршылыҡтарын аңламай әле. Шуға күрә Уйылдандың «дуҫлығын» икеләнмәйенсә ҡабул итә һәм уға үҙенең һеңлеһе Миңлегөлдө бирергә әҙер тора. Ләкин озон һәм ауыр тормош юлы үткән Торомтай ҡарт уны былай тип иҫкәртә: «Йыртҡыс балаһы тәү тапҡыр тере малды тотоп ашағас ҡына ысын йыртҡысҡа әйләнә…». Ошо уҡ һүҙҙәр егерме йылдан һуң ҡабатлана. Үҙенең ярты ғүмерен һөргөндә үткәреп, Төлкөсура бөтөнләй икенсе кешегә әүерелә. Атаһының һүҙҙәрен ҡабатлап, ул Бикморатты кешеләрҙе баһалауҙа хаталаныуҙан киҫәтеп ҡуя.

Дилогияның икенсе китабында иғтибар үҙәгендә – беренсе китапта һөйләнгән ваҡиғаларҙан һуң алтмыш алты йыл үткәс, яңы тормош, яңы йәмғиәт төҙөү. Октябрь революцияһына тиклем тау-урман

райондарында йәшәүселәр өсөн урман берҙән-бер йәшәү сығанағы була. Шунлыҡтан уны һатыу һәм теләһә нисек ҡырҡыу тормоштоң үҙен ҡурҡыныс аҫтында ҡалдырыу кеүек итеп ҡабул ителә. Быны яҡшы аңлаусы кешеләр – Григорий менән Төлкөсура халыҡты көрәшкә күтәрә. Ошо ваҡиғаларҙы художестволы әҫәр теленә күсереү беренсе китаптың йөкмәткеһен тәшкил итә.

Икенсе китапта социализм төҙөү йылдарында урман хужалығын аяҡҡа баҫтырыу нигеҙҙә тормошто үҙгәртеп ҡороу, яңыртыу рәүешендә күрһәтелгән. Тимәк, беҙ дилогия киң социаль ҡапма-ҡаршылыҡҡа ҡоролған тип раҫлай алабыҙ. Дөрөҫ, беренсе романда конфликттың нигеҙен традицион синфи ҡапма-ҡаршылыҡ тәшкил итә, ә икенсеһендә ғүмер буйына урманда эшләгән, ләкин барыбер уның киҫкен проблемаларын аңламаған Козиндың һәм ерҙең матурлығын арттырырға ынтылыусы Ғилман Төлкөсуриндың ҡапма-ҡаршы фекерҙәре бәрелешә. Үҙенең хеҙмәтенә ижади ҡараған Ғилман ҡасандыр боҙолған, көсһөҙләндерелгән урмандың көсөн һәм байлығын аяҡҡа баҫтырырға хыяллана, һәм был – алдынғы ҡарашлы халыҡ ҡатламының, Төлкөсуриндарҙың тотош бер быуынының күптәнге хыялы.

Роман Кешегә мөрәжәғәт итеү менән башлана: «… Эй әҙәмем! Ергә хужа булған Кешем минең! Бына һин, әллә ни саҡлы уйҙарға сумып, төбөмдә баҫып тораһың. Ер яҙмышы – беҙҙең яҙмыш тураһында хәстәр күреп, шулай болоҡһоуың ҡайһылай шәп! Уйлан һин, ҡартлас Ер тормошон йәшәртеү өсөн ҡулыңдан килгәндең барыһын да эшлә. Ә һуң һинең ҡулыңдан ниҙәр генә килмәй, Кеше?! Ер-әсәбеҙҙең өҫтөндәге генә түгел, уның тәрән ҡуйынындағы һәммә хазина, бөтә тереклек һинең рәхимеңә тапшырылған. Беҙ, ерҙең барлыҡ йән эйәләре, һиңә күҙ төбәгәнбеҙ… Бөгөнгөң – үҙ ҡулыңда, киләсәгең иһә – аҡылыңда…».

Китаптың аҙағында, тыуған тәбиғәтте һәм уның байлыҡтарын һаҡларға саҡырып, Ер-әсә тағы Кешегә мөрәжәғәт итә.

Романдың төп геройы Ғилман Төлкөсурин йөҙөндә урман үҙ эшенә мөкиббән бирелгән, шул ҙур хеҙмәте өсөн бүләкләнеү тураһында башына ла килтермәгән бөйөк көрәштәшен таба.

Ғилман Төлкөсурин урман байлыҡтарын халыҡ өсөн һаҡлау идеяһына ныҡ бирелгән кеше. «Һай урманым, урманым, күпте күргән урмандарым минең. Һинән башҡа – ерҙе, һинән айырып һыуҙы, үҙем һулаған һауаны күҙ алдына килтереп буламы? Һин юҡ икән – ерҙең

йәм-күрке юҡ; һин туплаған дым бөттөмө – йылғалар ҡорой; һин шифалы һутыңды сәсмәнеңме – тыны ҡурылыуҙан ерҙә әҙәм заты ҡалмаҫ ине. Эйе, һин әҙәм балаларын утлы, һыулы, ризыҡлы, йорт-ерле иткәнһең. Ер йөҙөндә тереклек башланғандан бирле кешеләр һинән ни саҡлы изгелек күрҙе икән? Иҫәпләп бөткөһөҙҙөр. Ләкин бына улар бөгөн ошо хаҡта ныҡлап уйлап ҡарайҙармы? Үткәндәрҙе иҫкә алып ҡына ҡалмайынса, алдағы ғүмерең тураһында ла хәстәрлек күрәләрме?» – тип уйлай Төлкөсурин һәм ошо хәҡиҡәтте башҡалар күңеленә һалырға тырыша.

Н. Мусиндың «Мәңгелек урман» романы проблеманың ҡуйылышы буйынса Л. Леоновтың «Рус урманы»на яҡын. Ике романда ла урман герой ғына түгел, әҫәрҙең тере нервыһы ла булып сығыш яһай. Ул яҡтылығы романдарҙың бөтә персонаждары йөҙөндә сағылған үҙ аллы поэтик образ да. Урман – кешенең яҡшы юлдашы, һаҡлаусыһы һәм яҡлаусыһы. Урман – ул быуындарҙың өҙөлмәҫ бәйләнеше һәм уның тере һыуынан башҡа икмәк тә, йыр ҙа, балалар ҙа тыуа алмаған бәләкәй шишмә.

Н. Мусин – тәбиғәт һәм урман өсөн ялҡынлы көрәшеүсе. Уның бөтә әҫәрҙәре лә тиерлек Башҡортостандың үҙе тыуып үҫкән тау-урман районы кешеләренең тормошо материалы нигеҙендә яҙылған. Уның әҫәрҙәрен бер уртаҡ проблема – кеше һәм тәбиғәт проблемаһы берләштереүе осраҡлы түгел.

Ләкин Н. Мусиндың романдарында, повестарында һәм хикәйәләрендә тәбиғәт – ябай пейзаж ғына түгел, ул тәбиғи мөхит, уның менән геройҙарҙың бөтә йәшәү эшмәкәрлеге һәм шулай уҡ уларҙың көнкүреш һәм рухи культураһы үҙенсәлектәре бәйләнгән. Н. Мусин кеше менән тәбиғәт гармонияһын, уның кеше психологияһына йоғонтоһон нескә аңлай. Яҙыусы фекеренсә, тәбиғәткә ҡараш – кешенең кешелек дәрәжәһен, рухи культура кимәлен билдәләй торған социаль фактор.

1986

ӘҘИП ОБРАЗЫ

Башҡорт мемуаристикаһында тағы бер шатлыҡлы хәл – «Сәғит Агиш тураһында иҫтәлектәр» китабы баҫылып сыҡты. Уны хәҙер инде мәрхүм яҙыусы Вәзих Исхаков төҙөгән һәм аңлатмалар биргән. Китап төрлө кимәлдәрәк эшләнгән утыҙлап мәҡәләне берләштерә. Уларҙың авторҙары – күренекле башҡорт һәм татар яҙыусылары, әҙәбиәт белгестәре, журналистар, педагогтар, әҙиптең йәшлек дуҫтары, яҡташтары һәм һабаҡташтары, яҡындары. Иҫтәлектәр башлыса ошо йыйынтыҡ өсөн махсус яҙылғандар һәм, баш һүҙҙә әйтелгәнсә, С. Агиштың тормош юлын, уның ижад үҫешен мөмкин тиклем күҙ алдына баҫтырыуҙы маҡсат итеп ҡуйғандар.

Әйтергә кәрәк, С. Агиштың исеме киң ҡатлам уҡыусыларға яҡшы таныш. Сөнки уның ижады мәктәп йылдарында уҡ ярайһы ғына күп өйрәнелә. Шуға күрә хәҙер «Нигеҙ» романын йәиһә «Мәхмүтов» повесын белмәгән кешене табыуы еңел түгел. Ә бына яҙыусының үҙе тураһында, уның холҡо-ғәҙәттәре, шәхси сифаттары, ижад принциптары тураһында белеүселәр әллә ни күп булмаҫ. Ни өсөн тигәндә, дәреслектәрҙә теге йәки был уңай менән яҙылған тәнҡит мәҡәләләрендә, белешмәләрҙә, яңы сығып килгән китаптарға баш һәм һуңғы һүҙҙәрҙә яҙыусының үҙе тураһында һөйләү бик үк ғәҙәткә инмәгән бит. Бындай яҙмаларҙа һүҙ күберәк конкрет әҫәр, уның геройҙары, авторҙың художестволы алымдары тураһында барыусан. Һәм ул, бәлки, шулай дөрөҫтөр ҙә. Бына шуға ла теге йәки был яҙыусы тураһында иҫтәлектәр китабы сығыу, ҡабатлап булһа ла әйтәйек инде, үтә шатлыҡлы күренеш, улай ғына ла түгел, бик изге эш. Сөнки күренекле кеше хаҡында иҫтәлек яҙыу – мәрәкә һөйләү түгел ул (һәр хәлдә, улай булырға тейеш түгел), ә уның шәхесен йәштәргә өлгө итеп күрһәтеү. Был йәһәттән мемуар әҫәрҙәренең тәрбиәүи әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур.

Яҙылыу формалары менән дә, йөкмәткеләре менән дә йыйынтыҡҡа ингән иҫтәлектәрҙе ниндәй ҙә булһа төркөмдәргә, әйтәйек, тематик төркөмдәргә бүлеп ҡарау мөмкин түгел. Уларҙың бөтәһендә лә тип әйтерлек Сәғит Агиштың кешелек сифаттары яҡтыртыла. Айырма тик шунда: урта һәм йәшерәк быуын кешеләре яҙыусының инде

шәхес булып өлгөрөп еткән осорона ҡағылышлы хәтирәләр менән уртаҡлашһа, олораҡ быуын вәкилдәре уҡыусыны әҙиптең балалыҡ һәм йәшлек йылдарына, ул ут уйнатып комсомолда эшләп йөрөгән һәм әҙәбиәткә тәүге аҙымдар яһаған осорға алып китә. Әгәр Сәғит Агиштың китап биттәре буйлап ынйы бөртөктәре һымаҡ ялтырап ятҡан сифат үҙенсәлектәрен ашыҡмайынса ғына йыйып, бер епкә теҙһәк, беҙҙең алға, татар совет яҙыусыһы Әмирхан Еники һүҙҙәре менән әйткәндә, «һис кемгә оҡшамаҫ үҙенә айырым бер кеше»нең тере һыны килеп баҫыр ине. Йыйынтыҡтың композицион үҙенсәлеге лә асыҡлана һымаҡ: ул әҙиптең донъяға аяҡ баҫҡан йылдарына ҡағылышлы иҫтәлектәрҙән башланып китә лә, уны эҙмә-эҙ үҫтереп, илле йылдан ашыу осорҙо эсенә алған әҙәби тормошто күпмелер кимәлдә сағылдырып, мәрхүмдең һуңғы сәғәттәренә тиклем килтереп еткерә.

Буласаҡ әҙиптең Каруанһарайҙа уҡып йөрөгән студент саҡтарын хәтерләп, уның һабаҡташы һәм йәшлек дуҫы Ҡасим Аҙнабаев бына нисек яҙа: «Сәғит буйы-һыны – бәләкәй кәүҙәһе, сөм ҡара сәсе, ҡап-ҡара күҙе менән дә, холҡо-характеры менән дә башҡаларҙан айырым, үҙенә бер төрлө кеше ине. Уның ҡайһы бер ҡылыҡтары, һәр саҡ шат йөрөүе, көтмәгәндә ҡапыл ҡысҡырып көлөп ебәреү ғәҙәте, кешеләр менән һәр ваҡыт яҡшы мөнәсәбәттә булыуы, һәр саҡ яҡшылыҡ эшләргә тырышыуы, кешеләрҙең шатлығы менән дә, ҡайғы-хәсрәте менән дә уртаҡлаша белеүе һымаҡ сифаттары күңелдәргә шул тиклем тәрән инеп ҡалған, хатта хәҙер ҙә, ярты быуаттан һуң да, күҙ алдында торған кеүек».

Сәғит Агиштың характерына хас булған бына ошондай сифаттарҙы китап биттәренән бик күп табырға мөмкин. Бөтә авторҙар ҙа тип әйтерлек әҙиптең «һәр саҡ көр күңелле, бик оптимист», ауырлыҡтар килгәндә лә бошоноуҙы белмәүсе, «һәр ваҡыт шат, һәр ваҡыт йор һүҙле, дәртле, шаян», «ҡайһы берәүҙәр кеүек ерле юҡҡа зарланып бармай, ә үҙ баһаһын белеп, ғорурлыҡ һаҡлай торған кеше» булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Шул уҡ Ҡасим Аҙнабаев, мәҫәлән, С. Агиштың һәйбәт сифаттары, кешегә яғымлылығы, мөләйемлеге, ябайлығы, кешеләр менән йылмайып, көлөп кенә һөйләшеүе һәм башҡа күп яҡшы яҡтары үҙенә ҡарата мөхәббәт тыуҙыра ине тип билдәләй.

Әҙиптең икенсе бер һабаҡташы һәм йәштәше Фәйзи Баҡаев иһә был фекерҙе тағы ла ҡеүәтләп ебәрә: «Сәғит Агиш менән бергә

булғанда күңел күтәрелә, йәшәүгә, хеҙмәткә дәрт өҫтәлә торғайны», – ти ул. Күп кенә авторҙар Сәғит Агиштың «кешеләр менән еңел таныша, тиҙ генә яҡына, үҙләшә» белеүен һоҡланып иҫкә ала. Бына ошо сифаттар татар совет яҙыусыһы Ғабдрахман Минскийға: «Сәғит кеше булараҡ та талантлы кеше», – тип әйтергә хоҡуҡ биргәндер, күрәһең.

Ләкин Сәғит Агиштың үрҙә һанап үтелгән яҡшы сифаттары уны хуш күңелле, бөтә нәмәгә лә килешеп ҡараусан, битараф кеше итеп күҙ алдына баҫтырырға һис бер нигеҙ бирмәй. Әҙәбиәт мәсьәләләренә, уның сафлығына ҡағылышлы бәхәстәрҙә ул үтә принципиаль, бер һүҙле булған, дуҫлыҡта хыянат барлығын һиҙһә, уны ғәфү итә алмаған.

Китаптың күп кенә биттәрендә әҙиптең шәхси сифаттары уның ижад принциптары менән бергә үрелеп бирелә. Был йәһәттән Мостай Кәрим иҫтәлектәре иғтибарға лайыҡ. Ҡыҙыҡлы айырым эпизодтары менән генә түгел, ә шағирға һәр ваҡыттағыса хас уйсанлыҡ, төплөлөҡ, фекер тәрәнлеге менән иғтибарҙы йәлеп итә был иҫтәлек: «Китаптарынан тыш,– тип яҙа Мостай Кәрим яҡын дуҫы һәм өлкән ҡәләмдәше С. Агишты юҡһынып, – ул беҙгә йәнә яҙыусының шәхес өлгөһөн, ижадты иман эше итеп таныу өлгөһөн ҡалдырып китте. Ул уйлағанын, теләгәнен яҙҙы. Шуға күрә яҙғаны теләп ҡабул ителде. Уның өсөн тормошта иптәшлек – теләктәшлекте, дуҫлыҡ – тоғролоҡто, намыҫ – көрәште, милли ғорурлыҡ – милли киң күңеллелекте аңлата ине. Үҙ-ара мәнәсәбәттә ул асыҡлыҡты алға һөрҙө, ярымартылыҡ уға ят ине. Рухи яҡынлыҡтан, фекерҙәшлектән, идея уртаҡлығынан тыш яҡташ та, әшнә лә эҙләмәне».

Сәғит Ағиш – беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең үҫешенә ҙур өлөш индергән, ошо үҫеш дәүерендә күп нәмәләрҙе башынан кисергән оло быуын яҙыусыһы. Ҡайһы берәүҙәр уны юҡҡа ғына «тере тарих, әҙәбиәт һәм сәнғәт тарихы» тип атамай. Сөнки ул егерменсе йылдарҙың башында уҡ әҙәбиәт донъяһына килеп ингән дә ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем шул донъяла ҡайнаған. Иҫтәлектәрҙән күренеүенсә, С. Агиш башҡорт совет әҙәбиәтенең нигеҙ таштарын һалыусы Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Афзал Таһиров, Ғабдулла Амантайҙар менән йәштән үк осрашып, күрешеп йөрөгән. Мәшһүр йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов, күренекле музыкант Солтан Ғәбәшиҙәр менән яҡындан аралашҡан, татар совет әҙиптәре Шәриф Камал, Муса Йәлил, Һаҙый Таҡташ, Хәсән Туфан, Ғәҙел Ҡотойҙарҙы күреп белгән. Ә инде урта быуын

башҡорт һәм татар яҙыусылары һәм шағирҙары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ – С. Агиш улар менән һәр ваҡыт аралашып йәшәгән.

Иҫтәлектәрҙең бер нисәһендә С. Агиштың М. Ғафури кәңәше буйынса шиғыр яҙа башлауына ишара яһала. Әҙәбиәт ғилеме өсөн был, әлбиттә, әллә ни яңы фекер түгел. Ләкин бында ул үҙенең икенсе яғы менән отошло: Сәғит Агиш уҡыусы булып ҡына ҡалмаған – ғүмер йомғағын һүтә барған һайын, уның үҙенең дә уҡыусылары күбәйгәндән күбәйгән. Сәйфи Моратов, Әмир Чаныш, Ғәзим Аллаяров, Әсғәт Мирзаһитов, Ғабдулла Байбурин, Ғайса Хөсәйенов, Миҙхәт Ғәйнуллин, Ибраһим Ғиззәтуллин, Суфиян Сафуанов, Самат Шакир, Фәрит Иҫәнғолов мәҡәләләре – быға асыҡ дәлил. «Тормош юлында, – тип хәтерләй С. Агиш уҡыусыларының береһе, Ленинградта йәшәүсе ғилми хеҙмәткәр С. Моратов, – кеше кемдәр менән генә осрашмай. Әммә уларҙың бик һирәктәре генә һинең яҙмышыңда яҡты эҙ ҡалдыра. Минең яҙмышымда үҙенең аҡыллы кәңәше, шәхси өлгөһө, ихлас ҡарашы, йор һүҙе, күңел киңлеге менән тәрән эҙ ҡалдырған кешеләрҙең береһе Сәғит Агиш булды». Күренекле ғалим, профессор Ғ. Хөсәйенов иһә был фекерҙе тағы ла асыҡлай төшә: «… үҙе редакторлаған “Әҙәби Башҡортостан” журналы аша Сәғит Агиш мине, етәкләп һәм хуплап тигәндәй, әҙәбиәт донъяһына алып инде».

Иҫтәлектәр китабында Сәғит Агиштың ижад лабораторияһына ла бер аҙ күҙ ташлана, яҙыусының ижад психологияһын аңларға тырышыу һиҙелеп ҡала. Шул уҡ С. Сафуанов, мәҫәлән, С. Агиштың үҙ әҫәрҙәрен уйлап сығарып түгел, ә тормоштоң үҙендә осрап, күңелгә һеңеп ҡалған нәмә тураһында яҙыуына ҡағылышлы һүҙҙәрен килтерә, әҫәрҙәрен бер тында яҙыусан булыуы, әгәр ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында туҡталып ҡалһа, уны тамамлап бөтөрә алмайынса интегеүе тураһында белдерә. С. Моратов, Ғ. Хөсәйенов, М. Ғәйнуллин мәҡәләләрендә «Нигеҙ» романының яҙылыу һәм уны руссаға тәржемә итеү тарихына бәйле ҡыҙыҡлы факттар табырға мөмкин. Әмир Чаныш иһә Сәғит Агиш менән күп тапҡырҙар осрашыуы һәм уның әҫәрҙәрен ентекләп өйрәнеү нигеҙендә яҙылған мәҡәләһендә новаторлыҡ ролен билдәләргә тырыша, С. Агишты «әҙәбиәт атаһы» тигән ҙур һәм хаҡлы исем менән хөрмәтләй. С. Агиш ижадының дөйөм идея-эстетик принцибына ҡағылышлы фекерҙәр Ғ. Хөсәйенов иҫтәлектәрендә лә яңғырап китә.

Шулай ҙа, яҙыусының ижад лабораторияһы, яҙыу манераһы тураһында һүҙ сыҡҡас, уның ҡыҙы Лена Агишеваның һүҙҙәрен килтермәй булмаҫ. «Атайым хикәйә йә мәҡәлә яҙғанда,– тип хәтерләй ул, – гел бер юлы таҙа итеп яҙа ине (йәғни ҡараламаһыҙ ғына эшләй ине). Ул бөтә хикәйәләрен башынан аҙағына тиклем башында йөрөтөп сыға ла һуңынан ҡағыҙға төшөрә. Ситтән ҡарағанда уға яҙышыу бик еңел бирелә кеүек. Мәҫәлән, ҡайһы саҡ ятып тора ла: «Ярай, тағы бер хикәйә бөтөрҙөм», – тип һикереп тора һәм бер ултырыуҙа яҙа ла ҡуя ине».

Бөтә иҫтәлектәрҙең дә авторҙары бер тауыштан тип әйтерлек Сәғит Агиштың иҫ китмәле талантлы кеше булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Студент йылдарында уҡ инде уға танылған декламатор, нәфис һүҙ оҫтаһы, һәүәҫкәр артист тигән матур атамалар тағылған. Бөтә кешегә лә бер юлы тәтемәй торған был сифаттар әҙиптең ғүмерлек юлдаштары булып ҡалған. Татар яҙыусыһы Ғ. Минский, мәҫәлән, шиғыр уҡыуҙа С. Агишты Маяковскийҙан һуң икенсе урынға ҡуйған. Сәғит Агиштың был оҫталығы Мәскәү яҙыусыларына ла мәғлүм булған һәм, яйы сыҡҡанда унан, ҡат-ҡат һорап, Маяковскийҙы уҡытҡандар. С. Агиш бик күп шағирҙарҙы һәм уларҙың әҫәрҙәрен яттан белгән. «Ул сағыштырғыһыҙ оратор-импровизатор һәм уны тыңлауы ҡыҙыҡ та, мауыҡтырғыс та ине», – тип хәтерләй Назар Нәжми. Шуғалыр, бәлки, ҡайһы бер авторҙар С. Агишты башҡорт әҙәбиәтенең Андронниковы тиҙәр.

Һүҙҙе ослағанда, күҙгә бәрелеп ятҡан бер етешһеҙлекте әйтеп үтмәй булмаҫ. Ҡайһы бер иҫтәлектәрҙең авторҙары күберәк үҙҙәре тураһында һөйләү менән мауығып китә. Ауыр булһа ла, был турала ярып һалмау мөмкин түгел. Сөнки мемуар жанры әҙәбиәтебеҙҙә торған һайын үҙенең лайыҡлы урынын ала бара. Шуға күрә был жанрға мөрәжәғәт иткәндә ҙур һаҡсыллыҡ та, такт та, элементар әҙәплелек тә күрһәтеп эш итергә кәрәк. Юғиһә уны ваҡ-төйәктәр менән сүпләп ҡуйыуыбыҙ бар.

«Сәғит Агиш тураһында иҫтәлектәр» китабы – уҡыусы ҡарамағында. Уны иғтибар менән уҡып сыҡҡас, ул «Нигеҙ» романы авторының башҡорт әҙәбиәте үҫешенә лайыҡлы өлөш индергән өлкән быуын яҙыусылары араһында иң хөрмәтле урындарҙың береһендә тороуына тағы ла бер тапҡыр ышаныр тигән өмөт бағлағы килә.

1986

НАЗАР ҢӘЖМИҘЕҢ БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ЙЫЛДАРЫНДАҒЫ ЛИРИКАҺЫ

Был мәҡәләлә әйтергә теләгән һүҙ – күренекле шағир Н. Нәжмиҙеҥ һуғыш йылдары осорондағы ижади эҙләнеүҙәре, юғалтыуҙары һәм табыштары.

Н. Нәжми 30-сы йылдарҙың икенсе яртыһында, башта «Восток-сталь» металлургия рабфағында, унан һуң Башҡорт дәүләт педагогия институтының әҙәбиәт факультетында уҡып йөрөгән саҡта уҡ башҡорт яҙыусылары менән осрашып, шиғриәт кисәләрендә сығыштар яһап, газета-журналдарға актив яҙышып, шиғырҙарын баҫтырып йөрөһә лә, һуғыш башланғансы әҙәбиәттә уның быуындары ныҡлап ҡатмағайны әле. Быны ул үҙе лә инҡар итмәй. 1940 йылда уҡытыусыһы Хәмит Бикмәтовҡа арнап яҙған шиғырында, мәҫәлән, уның «әҙәбиәткә тәпәй баҫырға ла мин бит яңы өйрәнеп киләмен» тигән юлдарын уҡырға мөмкин. Улай ғына ла түгел: һуғыштың өсөнсөмө, дүртенсеме көнөндә «Фашизм ул осор көл булып» тигән шиғыр менән Башҡортостан радиоһы аша сығыш яһай ҙа Н. Нәжми бөтөнләй тынып ҡала.

Новосибирскиҙа сағында күңелен биләп алған эске кисерештәре менән уртаҡлашып, ул былай ти: «… бында эш әҙәбиәттән, шиғриәттән бик алыҫ тора ине, етмәһә, тәүлегенә дүрт-биш сәғәт кенә йоҡларға форсат тейгән хеҙмәт ине. Һуңынан ял сәғәттәре күберәк булған саҡтарым да күренгеләй башлаһа ла, ни өсөндөр шиғыр үҙенә саҡырманы. Мин был хәлде быуын ҡатмай тороп, тормошта шундай ҡырҡа үҙгәреш булыуы менән аңлатырға тырыштым. “Елдәр иҫә Урал яғынан… Тыуған Өфөм, һине һағынам” тигән юлдар ҙа яҙылды, ләкин ул ваҡыт рухына тиң түгел ине».

Шағир күңеленең бына ошондай мәле дүрт йыл самаһы дауам итә. Ниһайәт, һуғыш бөтөргә һанаулы айҙар ҡалғас, шиғыр уны яңынан үҙенә саҡыра. Ул осорҙо хәтерләп, утыҙ йыл ғүмер үткәс, Н. Нәжми былай тип билдәләй: «… дүрт йыл самаһы тынып торғандан һуң, “Окоптар төбөндә” тигән шиғырҙар циклы яҙҙым, “Россия тураһында йыр” тигән поэма башланым».

Еңеү юлдары буйлап Бранденбург ҡапҡаларына табан атлағанда яугир шағир күпме һәм нәмәләр яҙып өлгөргәндер – быныһы инде уның ижад лабораторияһына һәм шәхси архивына ҡағыла. Бөгөн иһә

беҙ Н. Нәжмиҙең өс томлыҡ «Әҫәрҙәр» йыйынтығының 1-се томына (1977) индерелгән ун ете шиғырын күҙ уңында тотабыҙ. Уларҙың ун алтыһы 1944 йылда яҙылған, ун етенсеһе 1945 йыл менән билдәләнгән.

Шуны әйтергә кәрәк, был шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәре тәнҡитселәрҙең ҡәләмдәренә эләкмәнеләр. Әммә уларға айырым туҡталып, бер епкә теҙеп ҡараусы булманы, шикелле. Ғәҙәттә, Н. Нәжми ижадында һуғыш темаһына ҡағылышлыраҡ һүҙ барғанда күберәк уның инде тыныс йылдарҙа был ваҡиғаларға бағышлап ижад иткән шиғырҙарын һәм поэмаларын телгә алалар, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яҙылғандары иһә бер ситтәрәк тороп ҡала килә. Ә бит, нығлабыраҡ уйлап ҡараһаң, улар поэзия тормошонда, бигерәк тә шағирҙың ижади биографияһында, үҙе бер күренеш.

Был шәлкемгә ингән шиғырҙарҙың беренсеһе ике генә строфанан тора.

Күҙҙәреңә бағып туя алманым,
Әйтә алманым әйтер һүҙемде.
Минуттарым йылдар кеүек оҙон,
Ярай әле йөрәк түҙемле…

Нурлы гөлдәр сәскә атыр өсөн
Йылы яҙҙы өҙөлөп һағына.
Гөлдәр булһаң, йылы яҙҙар булып,
Мин ҡайтырмын һинең яныңа.

Ниндәй тәрән һағыш, шул уҡ ваҡытта күпме дәрт һәм рухи нығлыҡ ошо һигеҙ юллыҡта! Үҙенең ритмикаһы, эске төҙөлөшө, моңо менән ул бер ни тиклем халыҡ йырына ла тартым. Шиғырҙа «һуғыш» тигән йәки уға ҡағылышлы бер генә һүҙ ҙә юҡ. Ләкин уның ҡасан яҙылғанлығына ҡарап, лирик геройҙың һөйгәненән алыҫта йөрөүен, уны бик һағыныуын, шунлыҡтан уға ғүмерҙең дә оҙаҡ үткән кеүек тойолоуын, тик нисек кенә булмаһын, уның янына әйләнеп ҡайтырға ышанысын юғалтмауын шәйләргә мөмкин.

Икенсе шиғыр «Ғүмер һәм өмөт» тип атала. Тәү ҡарауға ул «Күҙҙәреңә бағып туя алманым…» шиғырына ҡапма-ҡаршы яңғыраған кеүек:

Күпме йәшә – һин ҡыҫҡаһың кеүек.
Ниңә, ғүмер, ашығып үтәһең?..
Кемдәр генә һинән туя икән,
Йөҙ йыл йәшәп килә үләһе!

Минуттары йылдар кеүек оҙон тойолған лирик геройға был юлы ғүмер ифрат ашығып үткән һымаҡ. Әммә икенсе һәм өсөнсө строфаларҙы иғтибар менән уҡып сыҡҡас, был шиғырҙың да яҡты тойғолар менән һуғарылғанлығына шик ҡалмай: лирик геройҙың йәшәүгә, оҙон ғүмерле булыуға өмөтө генә түгел, бәлки ышанысы һәм ихтыяр көсө әйтеп бөткөһөҙ ҙур.

Өсөнсө шиғыр «Күлдәк». Әйткәндәй, бында бөгөнгө Н. Нәжмиҙең поэтик һыҙаттары сағылып китә түгелме һуң? Тормошта йыш осрай торған бер-береһенә оҡшаш күренештәрҙе йәнәш ҡуйып, тәрән мәғәнәле һөҙөмтәгә килеү манераһы күҙгә ташлана ла баһа был шиғырҙа: бала сағында, кибер-кипмәҫ көйө кейелгән күлдәк һәм өс көн буйы ҡойоп яуған ямғыр аҫтында манма һыуға әйләнгән һалдат гимнастеркаһы… Исеме менән генә түгел, бәлки интонацияһы, идея йүнәлеше менән дә ул 1970 йылда яҙыласаҡ «Күлдәк» поэмаһының ойотҡоһо булып тормаймы икән? Поэма кеүек, шиғыр ҙа бик оптимистик рухта тамамлана:

Беҙ барабыҙ. Һалдат юлы сикһеҙ.
Ямғыр нимә һуғыш мәлендә!
Яуһын әйҙә! Йөрәк кенә тирһен,
Ә күлдәгем кибер тәнемдә.

«Ҡуш нарат» тураһында инде күп яҙҙылар, күп һөйләнеләр. Был шиғыр хрестоматик булып китте тиһәк тә, хата булмаҫтыр. Һәм ул хрестоматик булырға бик хаҡлы. Сөнки унда һуғыш һәм тәбиғәт күренеше аша шағир дуҫлыҡ тураһында бик нескә һәм образлы итеп әйтеп бирә алған.

«Ҡанатлы ҡыҙ», «Фронтта төн», «Хат», «Окопта уйҙар», «Совет һалдатына», «Землянкала», «Танкист» тигән шиғырҙарҙың даны, бәлки, бик шаулы ла түгелдер. Шуға күрә уҡыусыға бик үк ныҡ таныш булмаҫҡа ла мөмкин. Әммә уларҙың һәр ҡайһыһы – ысын поэзия, шиғри табыш.

«Ҡанатлы ҡыҙ»ға иғтибар итәйек. Башына пилотка, өҫтөнә гимнастерка кейеп, билен ҡайыш менән ҡыҫып бәйләгән ыҫпай ҡыҙҙың матур һыны күҙ алдына килеп баҫа был шиғырҙы уҡығанда. Уны беҙ хәрби фильмдарҙа ла йыш ҡына осратҡаныбыҙ бар. Аяҡтарына һалдат итектәре кейеп алған был һылыу ҙур юл сатына баҫҡан да, ҡулындағы ал, һары флагтарҙы болғап, колонналар хәрәкәтен

тәртипкә һалып тора. Шағир хыялында ул һәр кемдең барыр юлын күреп торған ҡанатлы ҡошҡа әйләнгән.

«Фронтта төн» шиғыры, Н. Нәжмиҙең был осорҙа яҙылған башҡа әҫәрҙәренән айырмалы булараҡ, һуғыш атрибуттары менән нығыраҡ туйындырылған һымаҡ. Бында миналар ҙа гөрһөлдәп ярыла, яҡында ғына дошман да тырылдай, пулялар ҙа выжлап оса, ракеталар ҙа емелдәй, котелок та сеңләп китә… Ләкин кемдеңдер «Үҙ туйыңа тиклем йәшәп, иркәңде үпһәң ине…» тигән моңһоу-яманһыу көйө ишетелеү була, был атрибуттар онотола ла ҡуя. Хәйер, әлеге йыр киҫәген бик үк яманһыу тип тә булмай торғандыр. Уның һүҙҙәре, моғайын, ғәҙәти кешенең ғәҙәти кисерештәрен сағылдырған бер күренештер.

«Хат» шиғырына туҡталайыҡ. Кем генә хат яҙмай ҙа, кем генә хат алмай! Әлбиттә, донъяла төрлө тәбиғәтле кеше була. Ҡайһы берәүҙәр күп яҙышалар һәм үҙҙәре лә йыш хат алалар. Ә икенселәр, яҙышырға бик яратмаһалар ҙа, дуҫтарынан йәки таныш-белештәренән хаттар һирәгәйә башлаһа, хәҙер үк үпкәләргә генә торалар. Н. Нәжми быларға туҡталмай. Ул иһә хаттың есеменә, кеше тормошонда тотҡан урынына күберәк иғтибар итә. Баҡһаң, хат әҙәми заттың айырылмаҫ ғүмер юлдашы: үҙе йәм биреүсе лә, ят һәм сит ерҙәрҙә йөрөгән саҡта яҡындарыңды хәтерләтеүсе лә, шатлыҡ алып килеүсе лә икән дә баһа.

«Окопта уйҙар» шиғыры бөтөнләй башҡа планда яҙылған. Унда фронт тормошоноң реаль картиналары күҙ алдына баҫтырыла. Атакаға күтәрелеү мәле лә, разведкаға барыу ғәләмәте лә иҫкә алына. Һуғыш булғас, окоптарҙа үткән һалдат ғүмере өсөн үлемдәрҙең дә ғәжәп түгеллеге хәтергә төшөрөлә. Был юлдарҙан бер аҙ моңһоулыҡ елдәре лә иҫкән һымаҡ тойолоп ҡала. Әммә һуңғы дүрт юл бөтөнләй башҡаса яңғырай. Әҫәрҙе ослар ваҡыт еткәс, шағир фекерҙәр ағышын кинәт кенә бора ла ебәрә:

Тыуған ергә еңеп ҡайтырмын мин,
Үтеп ошо һуғыш йылдарын.
Мин ышанам, барыбер осрашырбыҙ,
Үлем юҡ ул беҙгә, дуҫтарым!

«Совет һалдатына» шиғыры риторикаға ҡоролобораҡ яҙылған һымаҡ. Уның тәүге дүрт строфаһында беҙҙең һуғышсыларыбыҙҙың

яу ҡырында күрһәткән батырлыҡтары һанап сығыла һәм һуңғы бишенсе строфаһында йомғаҡлау рәүешендәрәк уға дан һүҙе әйтелә:

Төнгө йоҡолар күрмәнең,
Ләкин һин барҙың алға.
Ниндәй уттарҙа булһаң да,
Үлем юҡ һиңә, һалдат!

Хәүефле йылдарҙа яҙылған ун ете шиғыр! Шуларҙың әле туғыҙына ғына туҡталдыҡ. Ниндәй уртаҡ сифат берләштерә һуң был шиғырҙарҙы? Ниндәй берҙәмлек хас уларға? Күҙгә иң ныҡ ташланғаны – шағирҙың да, уның лирик геройының да дошманды тар-мар итеп, Тыуған илгә еңеүсе булып ҡайтыуҙарына ныҡ ышаныуҙары һәм өмөт бағлауҙары. «Күҙҙәреңә бағып туя алманым…» шиғырында, мәҫәлән, лирик герой үҙенең һөйгәне янына йылы яҙҙар булып ҡайтырға вәғәҙә итһә, «Ғүмер һәм өмөт»тә ул «кеше өсөн ерҙә өмөт менән йәшәү күңелле» тип раҫлай. «Күлдәк»тә шулай уҡ: герой ҡойоп яуған ямғыр аҫтында ла йөрөргә риза, тик уның йөрәге генә тибеүҙән туҡтамаһын; «Ҡанатлы ҡыҙ»ҙа ул еңеүҙән һуң «туҙанлы фронт юлдарын» һәм шул «ҡанатлы ҡыҙҙы» иҫкә алырына өмөтөн өҙмәй; «Фронтта төн» шиғырында лирик герой «иртәгә был тирәлә дошмандың эҙе» лә булмаҫына ныҡ ышанған, хатта бөйөк байрам хөрмәтенә әйтелгән тоста ла («Землянкала») иң мөһиме – еңеү, «ҡалғаны бары ла табылыр» тигән өмөт белдерелә.

«Үткән көндәр гүзәллеген уйлап…» шиғыры ике генә строфанан тора. Ләкин ниндәй көсөргәнеш, эске бер рух күтәренкелеге менән яҙылған строфалар улар! Шағирҙың әйтергә теләгән төп уйы беренсе строфаның һуңғы, ике һәм өсөнсө строфаның тәүге ике юлдарына төрөлгән тип әйтһәк тә була торғандыр:

Күпме әле башланмаған көндәр,
Башланмаған йылдар – алдыңда!
Улар бары ла йәшәйәсәк йылдар,
Улар бары ла гүзәл киләсәк.

«Иҫән ҡалһам» шиғыры ла үҙенең интонацияһы һәм эшләнеше менән үтә асыҡ һәм ябай. Унда бер ниндәй ҙә серле фекерҙәр ҙә, йомаҡ рәүешендә бирелгән поэтик деталдәр ҙә күҙгә ташланмай. Ли-

рик Уралын, Иҙел буйҙарын, Өфөһөн, тыуған ауылын, бала саҡта йөрөгән һуҡмаҡтарын, әсәһен, һөйгән ҡызын һағынған. Шиғырҙың исеме шартлы ҡылым формаһында алынған булһа ла, аҙаҡҡы строфа юғары пафос менән һуғарылған, һәм геройҙың, гитлерсы фашизмды еңеп, тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтырына һис бер шиге юҡ:

Тыуған ил һәм хеҙмәт көткән өсөн,
Оҙаҡ көткән өсөн матурым,
Иҫән ҡалмау миңә мөмкин түгел,
Мөмкин түгел – мин һау ҡайтырмын!

Н. Нәжмиҙең һуғыш йылдарында яҙылған шиғырҙар шәлкеме араһында «Роза сәскәһе» тигән бер поэтик әҫәр бар. Ул заманында тәнҡитселәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп иткәйне, булһа кәрәк. Итмәҫлек тә түгел шул. Беҙгә ҡалһа, был шиғыр – формаһы менән дә, шулай уҡ эстәлеге менән дә ысын мәғәнәһендә юғары кимәлдә эшләнгән әҙәби әҫәр. Автор беҙҙең күҙ алдына бына ниндәй картинаны килтереп баҫтыра. Фашистарҙан азат ителгән ауыл. Уның аҫты өҫкә килтерелгән, баҡса ҡоймалары утлы күмергә әйләнгән, бомба өҙгән ағастар утта янған. Һәм, һис көтмәгәндә, ут һәм төтөндән башҡа бер ни булмаған ошо ауылда хайран ҡалырлыҡ хәлгә тап булабыҙ: ялҡын эсендә, бомба шартлауҙарына һис тә иҫе китмәгән кеүек, роза сәскәһе үҫеп ултыра. Күпме көс, урғылып торған эске энергия, йәшәүгә ынтылыу был шиғырҙа!

Барып сәскәне еҫкәнем,
Ул бер ал роза ине;
Һәм шунда һин күҙ алдыма,
Һин күҙ алдыма килдең.

Кинәт М. Кәримдең «Таш өҫтөндәге гөлдәр»е иҫкә килеп төшә. Унда ла Н. Нәжмиҙекенә оҡшашыраҡ юлдар бар бит.

Билдәле рус яҙыусыһы Иван Буниндың ошондайыраҡ фекере бар. Һеҙҙе солғап алған һәр предмет, һеҙҙең һәр тойғоғоҙ шиғыр өсөн тема була ала. Үҙегеҙҙең тойғоларығыҙға иғтибарлыраҡ булығыҙ, һеҙҙе солғап алған тирә-йүнде күҙәтегеҙ һәм һеҙгә ҡәҙәр башҡа шағирҙар, хатта бөйөк шағирҙар тойғанса һәм күргәнсә түгел, ә үҙегеҙ тойғанса һәм үҙегеҙ күргәнсә яҙығыҙ. Сәнғәттә үҙ аллы булығыҙ.

Быға өйрәнергә мөмкин. Һәм шул ваҡытта һеҙҙең алдығыҙҙа ысын поэзияның бөтмәҫ-төкәнмәҫ донъяһы асылыр. Һеҙгә тын алыуы еңеләйер.

Бына ошолай тирә-йүнде үҙенсә күрә, үҙенсә тоя белеүҙәре өсөн фронт юлдарын байҡап йөрөүсе ике шағир бер үк нәмә тураһында аллы-артлы ике шиғыр яҙа алғандарҙыр инде.

Н. Нәжмиҙең күренекле башҡорт шағиры Т. Арсланға бағышлап яҙған «Дуҫлыҡ сәхифәләренән» тигән мәҡәләһендә ошондай һүҙҙәр бар: «Һуғыш мәлендә Ватан тойғоһо үтә киҫкен, үтә нескә, үтә физәҡәр ине һәм был нескәлек һәм физәҡәрлек, күпме дөйөм булмаһын, һәр кемдә ул тойғо үҙенсәлекле ине». Шағирҙың һуғыш осоронда яҙылған әҫәрҙәре быға асыҡ дәлил була ала. «Партияға инеү» шиғырының лирик геройы, мәҫәлән, үҙенең коммунистар сафына баҫыу сәғәтен үтә тыныс, ләкин зур яуаплылыҡ тойғоһо менән кисерә: «Беҙ һөжүмгә киттек. Ватан өсөн ҡаршы киттек утҡа, үлемгә, Сөнки белдем, партияға инеү ул тик барыу ине һөжүмгә».

Ватан тойғоһо «Казбек» шиғырында ла үҙенсәлекле бирелгән. Сит ерҙәрҙә йөрөгән совет һуғышсыһы юлда барған сағында беҙҙең илдә эшләнгән папирос һауытын күреп ҡала һәм, тапалып ятмаһын тип, уны күтәреп ала – уға Тыуған илдең ташландыҡ бер сүбе лә ҡәҙерле булып күренә.

Хәүефле йылдарҙа яҙылған ун ете шиғыр! Идея-тематик яҡтан сығып ҡарағанда, был шиғырҙарҙа «еңеүгә ихтыяр көсөн юғалтмаған батыр тәбиғәтле совет халҡының уй-тойғолары, рухи донъяһы» күпмелер кимәлдә сағылдырылһа, художестволы үҙенсәлектәренә килгәндә иһә, уларҙа фекер тәрәнлегенә ынтылышты шәйләргә мөмкин.

Йомғаҡлап шуны әйтке килә: һуғыш осоронда яҙылған шиғырҙары Н. Нәжмиҙең ижад биографияһында билдәле урынды алып торалар һәм шағирҙың үҙ йөҙө, үҙ стиле формалаша башлауы тураһында һөйләйҙәр. Авторҙың үҙ һүҙҙәре менәнерәк әйткәндә, һуғыш осоро – уның күңеленең тәьҫирләнеү һәләтенә тамам эйә булып, шул тәьҫирҙәр менән киләсәк өсөн әкренләп тулыша башлау мәле булғандыр. Шағирҙың һуғыштан һуң ижад ителгән әҫәрҙәре (күп һанлы шиғырҙары һәм поэмалары) шулай уйларға нигеҙ бирә.

1988

ҺУҠМАҠТАР ОЛО ЮЛҒА ИЛТҺЕН

Ноғман Мусиндың «Кеше һуҡмағы» тигән китабына (Өфө, 1987) ошо исемле повестан тыш тағы ике әҫәр ингән. Уларҙың береһе «Шайтан ҡуласаһы», икенсеһе – «Йәшлек ваҡыт…» тип атала. Иң һуңғыһын иҫәпләмәгәндә, повестар өр-яңылар – 1985 йылда яҙылғандар. «Йәшлек ваҡыт…» тигәне генә авторҙан күп ваҡыт талап иткән – уның өҫтөндә эшләү егерме йылға һуҙылған.

Был повестар билдәле тәнҡитсе Ғ. Хөсәйеновтың «Һөйөнөсөнә ҡарағанда көйөнөстәре» тигән мәҡәләһендә («Ағизел» журналы, 1986 йыл, 12-се һан) телгә алынғайны инде. Әле иһә, айырым китап булып сыҡҡас, уларға яңынан бер ҡараш ташлаһаҡ зыян итмәҫ. Сөнки үрҙә телгә алынған мәҡәләлә һүҙ барған ҡайһы бер повестарҙан айырып ҡарағанда, былары – бөгөнгө көн талаптарынан сығып яҙылған әҫәрҙәр тип әйтергә мөмкин. Редакция аннотацияһында ла «Ноғман Мусиндың был китапҡа ингән яңы повестарында бөгөнгө көндөң производство һәм әхлаҡ проблемалары күтәрелә» тип юҡҡа ғына һыҙыҡ өҫтөнә алынмағандыр, күрәһең. Ысынлап та, шул уҡ аннотацияла әйтелгәнсә, яҙыусы «үҙ геройҙарының эшен, тормошон ҡыҙыҡлы деталдәр аша һүрәтләп», беҙҙең йәмғиәттә «намыҫлылыҡ, эскерһеҙ дуҫлыҡ, үҙ тыуған төйәгеңә, иленә, халҡыңа тоғролоҡ» төшөнсәләренең «кешеләр характерында сағылышын төрлө яҡлап күрһәтергә тырыша».

Повестарҙың өсөһөн дә бер епкә теркәүсе төп мотив – Кеше тураһында, уның асылы, ер йөҙөндә билдәләнгән урыны һәм йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланыуҙар. Был мотив төрлө художество алымдары ярҙамында кәүҙәләнеш таба. «Шайтан ҡуласаһы»нда, мәҫәлән, ул башлыса Мохтасар, Рәсүл һәм Минзәлә образдары аша һүрәтләнә, уларҙың поступкалары менән аңлатыла. Ләкин яҙыусы был геройҙар менән генә сикләнмәй, әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһен уҡыусыға тулыраҡ һәм асығыраҡ төшөндөрөү маҡсатында, булһа кәрәк, Риза образын да тыуҙыра, уның уйланыуҙары, эске кисерештәре, Мохтасар менән ике арала булған һөйләшеүҙәр ярҙамында кешене Кеше итә торған сифаттар тураһында фекер йөрөтә. Әлбиттә, уның был ҡатлаулы һәм мәңгелек проблемаға ҡағылған уй-фекерҙәре менән килешергә лә, ә ҡайһы берҙәре менән килешмәҫкә лә мөмкин.

Әйтәйек, Мохтасар менән Рәсүл араһындағы мөнәсәбәттәр уҡыусыны халыҡ телендә күптән йәшәп килгән «Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа» тигән мәҡәлде хәтерләүҙән ары алып китә алмай. Сөнки ни сәбәптәр арҡаһында Мохтасарҙың «… ғәжәп ҡатмарлы, шул уҡ ваҡытта ҡабатланмаҫ яҙмышлы, иҫ киткес саф намыҫлы кеше…», ә уның ҡустыһы Рәсүлдең яуыз кеше булып сығыуы асыҡланмаған. Автор рупоры һымағыраҡ ҡабул ителгән Риза ла «… ике бер туған араһында бындай фажиғәле ваҡиға булыуына, һөйләһәләр ҙә ышанмаҫ инем биллəһи!» тип шаҡ ҡатыуҙан ары китә алмай.

Китаптың яртыһынан күберәк өлөшөн «Кеше һуҡмағы» повесы биләгән. Ысынлап та, был күләмле әҫәр кескәй романға торорлоҡ. Унда персонаждар ҙа байтаҡ, сюжет һыҙыҡтары ла етерлек. Ләкин иғтибарҙы йәлеп иткәне персонаждар һаны түгел, ә әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Был йәһәттән иһә ул отторғоһоҙ. Повестың ижад ителеү тарихы беҙгә мәғлүм булмаһа ла, уның заман елен ҡуҙғатып ебәргән апрель пленумынан һуң яҙылыуына һис тә шик ҡалмай.

«Шайтан ҡуласаһы»нан айырмалы булараҡ, Н. Мусиндың был әҫәрендә Кеше тигән бөйөк исемде аҡлаусы төп категориялар башҡасараҡ сағылыш таба. Әгәр тәүге повеста сюжетты ойоштороусы фигура булып ығы-зығынан бер аҙ арыныу һәм урман һауаһы һулау ниәте менән алыҫ бер районға килеп төшкән яҙыусы Риза Ханбәков торһа, «Кеше һуҡмағы»нда хикәйәләү теҙгенен үҙ ҡулында журналист Айнур Хәкимов тота, шунлыҡтан сюжеттың бөтә һыҙыҡтары ла уға килеп тоташа.

Хәйер, айырмалыҡҡа ҡарағанда был ике әҫәр араһында әҙәби алымдар оҡшашлығы, күтәрелгән проблемалар берҙәмлеге күберәктер ҙә әле, моғайын. Әйтәйек, уларҙың икеһендә лә күпмелер кимәлдә авторҙың уй-фекерҙәрен белдергән лирик геройҙар хәрәкәт итә. (Алғараҡ китһәк, бындай геройҙың «Йәшлек ваҡыт…» повесында ла барлығын күрербеҙ.) «Шайтан ҡуласаһы»нда ла, «Кеше һуҡмағы»нда ла яҙыусы тыуған төйәккә мөхәббәт, тәбиғәткә, иң беренсе сиратта – урманға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү мәсьәләләрен күтәрә. Айнурҙың: «Урман – ерҙең күрке, матурлығы, биҙәге. Күркәмлек, матурлыҡ – эстетик категорияның төп элементтары, тимәк, урман байлыҡ һәм әхлаҡи категория ғына түгел, эстетик категория ла» тигән һүҙҙәрендә ҙур мәғәнә ята.

Ниһайәт, ике повеста ла кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең бик ҡатмарлы булыуына, ҡайһы бер саҡта тормоштоң, хатта бөтә

донъяның да шайтан ҡуласаһына оҡшап китеүенә, унда төрлө яҙмышлы, төрлө тәбиғәтле, төрлө ҡарашлы бәндәләр йәшәүенә ишара яһала. Был төрлөлөк айырыуса «Кеше һуҡмағы»нда ныҡ күҙгә ташлана. Әҫәрҙең үҙәгендә журналист Айнур Хәкимов тора, тигәйнек инде. Автор уны төрлө ситуацияларға ҡуя, төрлө кешеләр менән мөғәмәләгә индерә, күп осраҡта эске кисерештәрен дә йәшермәй, йәшәү принциптары ла уртаға һалып тикшерелә. Әҙәби әҫәрҙәргә ҡарата ҡулланыла торған традицион үлсәү менән килгәндә, был – тулыһынса ыңғай герой. «Юҡ инде, Гөлнара, намыҫым менән һатыу итә алмайым мин. Был донъяла үҙ-үҙеңә хыянат итеүҙән дә ауырыраҡ ғәйеп юҡ», – ти ул ҡатыһына. Һәм шунда уҡ үҙен-үҙе киҫәтеп ҡуя: «Икеләнмәҫкә, икегә бүленмәҫкә, йөрәк ҡушҡанса эшләргә һәм йәшәргә. Шунан башҡа юл юҡ!»

Геройҙың хәтирәләре аша ла, шулай уҡ күҙмә-күҙ ҙә яҙыусы беҙҙе байтаҡ кешеләр менән осраштыра. Уларҙың ҡайһы берҙәре эпизодик образдар кимәлендә генә, ә бәғзеләре әҫәрҙең башынан алып аҙағына тиклем хәрәкәт итәләр. Һуңғылар иҫәбенә һис шикһеҙ Гүзәлиә ханым менән Вафил Аталмасовты индерергә мөмкин. Тағы ла шул традицион ҡалыптан сығып ҡарағанда, былары инде – тиҫкәре геройҙар. Уларҙың икеһенең дә йәшәү принцибы көн кеүек асыҡ: «Һин – миңә, мин – һиңә». Ҡыҙҙары Гөлнара менән Светлана ла әсәһе менән атаһы юлынан киткәндәр. Силәгенә күрә ҡапҡасы тигәндәй, хатта кейәүҙәре Эдгар ҙа уларҙан әллә ни айырылмай. Был – һөрһөп торған мещандар ояһы тиһәк тә, хата булмаҫ. Ундағы «тәртип, ғәҙәттәр – бик мәҙәниәтле булып ҡыланыу, кемдәрҙелер әҙәмгә һанамай, икенсе берәүҙәрҙе аллаға тиңләп һөйләшеүҙәре, тегенән-бынан өҙөп-йолҡоп өйгә донъя малы ташыу, хатта үҙ-ара мөнәсәбәттәге яһалмалылыҡ» күҙгә ярылып ята.

Шулай ҙа әҫәрҙә беҙҙең иғтибарҙы күпмелер кимәлдә үҙендә туҡтатҡан бер образ бар. Был – Аталмасовтарҙың улы Марс. Ул, бына ошо һөрһөгән мещанлыҡты үҙ исеме менән атамаһа ла, интуитив рәүештә уға ҡаршы сыға, бунт күтәрә. Китаптың был биттәре Горький әҫәрҙәрен хәтергә төшөрөп ҡуя. Тик хикмәт шунда: Горькийҙың ыңғай геройҙары капитализм тыуҙырған социаль мещанлыҡтан арынырға тырышһалар, Ноғман Мусиндың Марсы иһә социализм ерлегендә тамыр йәйгән көнкүреш мещанлығына протесын белдерә. Шуныһы йәл, был образ әлегә етлегеп бөтмәгән, себеше моронлап килгән йомортҡаға оҡшап ҡалған, сөнки ҡыҙмаса баш һәм көрлөккән

тел менән яуҙырылған тәңкит һүҙҙәре (улар бик дөрөҫ һәм хаҡ булһалар ҙа) уҡыусыла барыбер ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо уята.

Әйтергә кәрәк, көнкүреш мещанлығын фашлау алтмышынсы йылдар прозаһында ла күпмелер сағылыш тапҡан ине. Был йәһәттән З. Биишеваның «Уйҙар, уйҙар…» һәм «Сәйер кеше» повестары ныҡ хәтерҙә ҡалған. Мусиндың Гүзәлиәһе Биишеваның Сара Сабитовнаһына һуйып ҡаплаған, тиерһең. Баҡһаң, бөгөнгө әҙәбиәттә күтәрелгән ҡайһы бер проблемалар беҙҙең яҙыусыларыбыҙға элекке йылдарҙа ла тынғылыҡ бирмәгән икән дә баһа. Ләкин бөтә нәмәгә лә «ал да гөл» күҙлегенән ҡарап, һәр бер сөскөргәнгә «йәрхәмбикалла!» тип сәләм бирергә өйрәнелгән торғонлоҡ осоронда был проблемаларға иғтибар бермә-бер кәмей төштө. Юғары трибуналарҙан мещанлыҡ рецидивтарының үҙен һиҙҙереүе тураһында киҫәтеүҙәр ҙә яһалғайны яһалыуын, тик ул һүҙҙә генә ҡалды, ә «һин – миңә, мин – һиңә» принцибы һаман да сәскә генә ата барҙы. Бына ошо яҡтан килгәндә, «Кеше һуҡмағы» – әйтеп бөтөргөһөҙ актуаль әҫәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршылырмы-түгелдерме, Гөлнара ғына Зәйнәб Биишеваның Суфияһы кимәленә күтәрелә алмаған. Кем белһен, бәлки ул тормошсанираҡ та килеп сыҡҡандыр әле. Бынһы инде яҙыусы намыҫында һәм ваҡыт ҡарамағында.

Төҙөлөш идаралығы начальнигы Вафил Аталмасов та, беҙҙеңсә, әҫәрҙе актуаль яңғырата торған образдарҙың береһе. Ул да торғонлоҡ осороноң бер емеше бит. Күп йылдар етәксе эштә йөрөп, күҙ буяу тәжрибәһен шаҡтай нескә үҙләштергән һәм «кәрәк саҡта төлкө, кәрәккәндә бүре ҡиәфәтенә инеп йәшәүҙе үҙ иткән» был әҙәми заттың прототиптары ғәйәт күп булды бит беҙҙең тормошта һәм улар әле лә фаш ителеп торалар. Әгәр китап биттәрендә эпизодик рәүештә генә булһа ла күренгеләп ҡалған төҙөүсе ҡыҙ Фәнилә ауылдашы Айнур менән осрашыуының береһендә: «Квартал аҙағында төҙөлөп бөттө тип тапшырылған бер йортто рәткә килтерәбеҙ», – тип әйтә икән, уның был һүҙҙәре беҙҙә һис тә аптырау ҡатыш сәйерһенеү тойғоһо уятмай, сөнки бындай факттар тураһында үҙәк матбуғат биттәрендә лә байтаҡ һөйләнелде бит инде. Уҡыусының хәтерендәлер әле, етмешенсе йылдар аҙағында ҡағыҙҙа төҙөлөп, ҡағыҙҙа ғына файҙаланыуға тапшырылған бер завод һикһәненсе йылдар башында статистик отчеттарҙа хатта «продукция биреп» ятты бит. Тимәк, әле һүҙ барған повеста сағылыш тапҡан «күҙ буяусылыҡ» темаһы ла бик тормошсан, бик урынлы һәм бик ваҡытлы күтәрелгән булып сыға. Хикәйәләү

йөгөн тартыусының үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, «күпме өндәшмәй йөрөргә мөмкин? Әйтер һүҙеңде әйтмәй, намыҫыңа ҡара яғып йәшәүҙән дә яманыраҡ эш юҡтыр был донъяла».

Намыҫ тураһында һүҙ сыҡҡас, иғтибарҙы йәлеп иткән тағы ла бер мәсьәләгә туҡталып китмәксебеҙ. «Кеше һуҡмағы»нда ситләтеп кенә әйтелгән булһа ла журналист әхлағына, бөгөнгө көн матбуғатының бурыстарына ҡағылышлы фекерҙәр яңғырап китә. Әлбиттә, башҡорт әҙәбиәте өсөн был тема яңыларҙан түгел – һәр хәлдә корреспондент, журналист образдары осраштырғылағайны инде. Ноғман Мусиндың үҙе өсөн дә ул яңылыҡ түгел. Ошо китапҡа ингән «Йәшлек ваҡыт…» повесын ғына алайыҡ. Унда ла бит өлкә гәзитенең махсус хәбәрсеһе Рамазан Рафиҡов тураһында һүҙ бара, повестың нигеҙенә һалынған хәл-ваҡиғалар башлыса уның күҙлеге аша сағылдырыла. Әйтергә теләгән һүҙ шул: Айнур Хәкимов та, редактор Сәғәҙиев та, Рамазан Рафиҡов та матбуғаттың роле бермә-бер күтәрелгән үҙгәртеп ҡороу осоронда бик урынлы һәм заманса яңғыраған образдар. Дөрөҫ, улар бөтәһе лә бер тиңдәр, художество яғынан аҙаҡҡа тиклем эшләнеп бөткәндәр һәм тулы камиллыҡҡа еткерелгәндәр тип раҫлап булмай (Сәғәҙиев, мәҫәлән, бер фрагмент ҡына), әммә үҙҙәренең тормош позицияларының, ғәҙеллеккә ынтылыштарының, һайлап алған профессияларына тоғролоҡ һаҡлауҙарының һәм рухи донъяларының сафлығы менән уҡыусы күңелендә тәрән ышаныс уятырлыҡтар.

Кеше тураһында, уның булмышы һәм яҙмышы тураһында уйланыуҙарын автор төрлө хәл-ваҡиғалар, әҙәби алымдар һәм буяуҙар ярҙамында бирергә тырыша тигәйнек инде. Бына ошо үҙәк проблеманы – кеше проблемаһын хәл иткәндә яҙыусы ҡайһы бер осраҡта үҙен-үҙе ҡабатлап та ҡуя. Әйтәйек, «Шайтан ҡуласаһы» повесында Мохтасар менән Рәсүл араһындағы мөнәсәбәттәр тәбиғәткә, уның байлыҡтарына һаҡсыл ҡараш планында күрһәтелә. Ошо уҡ тема «Кеше һуҡмағы»нда ла сағылып китә (Айнур Хәкимовтың урман министры менән әңгәмәһен хәтергә төшөрөү ҙә етә). Әгәр был ике әҫәр янына Н. Мусиндың тәбиғәт проблемаларына бәйле элегерәк яҙылған повестарын һәм романдарын да килтереп өҫтәһәк, – күберәк булып китмәҫме?

Йә булмаһа һүнеп, таралып барған ваҡ ауылдар, шул ауылдарға үҙенсә бер йәм һәм тереклек биреп торған мал фермалары, замана техникаһы уҙғандан һуң аҡтарылып ташланған юлдар яҙмышын

алайыҡ. Һүҙ юҡ, былар бөтәһе лә бик актуаль, бөтәбеҙгә лә тынғы бирмәй торған проблемалар. Ләкин улар әҫәрҙән-әҫәргә күсеп йөрөй башлаһалар, үтемлектәре бермә-бер кәмей бармаймы икән? Әгәр хәтеребеҙ яңылышмаһа, был проблемалар үҙ ваҡытында «Өҙәрем юл кешеләре» романында ла күпмелер кимәлдә сағылыш тапҡайны.

Аҙаҡ килеп, әле һүҙ барған повестарҙың архитектоникаһына ҡағылышлы бер фекер. Сюжетты үткерерәк итеп ҡороу маҡсатынан сығып микән, Н. Мусин мажаралы ситуациялар менән мауығып киткән. Был етешһеҙлеккә тәнҡитсе Ғ. Хөсәйенов та иғтибар иткәйне. Ысынлап та, «Шайтан ҡуласаһы»нда Риза Ханбәковты Байым Шәйәхмәтов менән һис көтмәгәндә урам сатында осраштырыуҙан ниндәй фәтеүә инде? Өҫтәүенә, уларға Минзәлә лә килеп ҡушыла. Алдан һөйләшеп ҡуйғандар тиерһең! Ә инде Мохтасар менән Рәсүлдең урманда ҡыуышып йөрөүҙәре, Ғ. Хөсәйенов әйткәнсә, детективҡа оҡшап китә. «Кеше һуҡмағы»ндағы Айнурҙың уйламағаннитмәгән ерҙән Фәнилә менән, «Йәшлек ваҡыт…»та Рамазандың Сания менән осрашыуҙары ла сәйерерәк тойола, яһалмалылыҡҡа ҡоролған ситуацияларҙы хәтерләтә.

Н. Мусиндың башҡа әҫәрҙәренә хас булғанса, был повестарында ла автор сигенеүҙәре билдәле бер урын алып тора. Яңғыраштары менән улар төрлөсә: публицистик формалағылары ла, лирик йылылыҡ менән һуғарылғандары ла бар. Ҡайһы саҡта улар теге йәки был геройҙың (әлбиттә, ыңғай геройҙың!) эске монологтары менән үрелеп китә. Тик шуныһы йәл, арала буталсыҡ фекерле сигенеүҙәр ҙә осрап ҡуя. Миҫалға Айнурҙың бына был уйланыуҙарын хәтергә төшөрөргә мөмкин: «Әгәр кеше үҙенең һуңғы көнө тураһында ғына уйлап йәшәһә, ер йөҙөндәге тормош бер урында ҡатып ҡалыр ине. Кешенең ғүмер юлы – уның үлемгә ҡаршы көрәшеп үткәргән күҙ асып йомған аралағы мәл генә түгелме? Һәм ошо көрәш донъяны үҙгәртеүсе, тормошто алға алып барыусы төп көстөр, моғайын».

Беҙҙеңсә, бында икеле-микеле уйлап, әллә ни фәлсәфә һатып тораһы юҡтыр. Сөнки кешенең асылы, уның йәшәү мәғәнәһе тураһында байтаҡ дөрөҫ һәм матур фекерҙәр әйтелгән инде. Үҙ заманында, мәҫәлән, Горький әҙәми затты ике төркөмгә бүлеп ҡараған. Беренсе төркөмгә ул донъяла үҙе өсөн, үҙ мәнфәғәттәренән генә сығып йәшәүселәрҙе индергән һәм уларҙы «үткенселәр» («прохожий») тип атаған. Икенсе төркөмгә иһә үҙенән һуң ер йөҙөндә бәләкәй генә булһа ла эҙ ҡалдырырға тырышып йәшәүселәрҙе («про-

ходящий») индергән. Шуға күрә «кешенең ғүмер юлын – уның үлемгә ҡаршы көрәшеп үткәргән күҙ асып йомған аралағы мәл генә» тип иҫәпләһәк, был проблемаға бик тар ҡараш булыр ине.

«Йәшлек ваҡыт…» повесындағы журналист Рамазан Рафиҡов, совхоз директоры Ринат Сәхиевич менән осрашҡандан һуң, хистәргә бирелеп, былай ти: «Маҡтап яҙған кешең, етәксеме ул, ябай хеҙмәтсеме, саф күңелле, ҙур маҡсатлы заман кешеһе, улай ғына ла түгел, киләсәк менән йәшәүсе кеше булһын». Был – бик дөрөҫ әйтелгән, тәрән мәғәнәле фекер. Н. Мусиндың геройҙары ла һүҙҙә генә түгел, эштә лә ана шулай ҙур маҡсатлы, киләсәк менән йәшәүселәр булһын, һуҡмаҡтар уларҙы оло юлға алып сыҡһын. Быға яҙыусының егәрлелеге лә, һәләте лә, таланты ла етерлек. Юлдар һикәлтәле булһа булһын, тик уларҙың сиге генә булмаһын.

1989

ҺАРЫ ҺАҒЫШТАР ҺӘМ ЯРАЛЫ ЯҘМЫШТАР

Шакир Янбаевтың «Беүә буйҡайҙары һары тал» тигән романы үҙенең сюжеты һәм композицияһы менән шаҡтай үҙенсәлекле әҫәр, минеңсә. Был үҙенсәлек романдың тәүге биттәренән үк күҙгә ташлана. Хикәйәләү Рәхмәтулла Зайлаловтан башлана. Оҙон-оҙағайға һуҙып тормайынса, яҙыусы хәтерҙә ҡалырҙай штрихтар ярҙамында үҙ геройы тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе бирә лә, «… һуғыштан алда Исмәғил ҡартты тирәк баҫып үлтерҙе» тигән кескәй генә фраза менән уҡыусы күңеленә ниндәйҙер шом һалып ҡуя. Ошо уҡ минутта автор орбитаһына Үрге Тагил килеп инә. Күп тә үтмәй, беҙ уй-фекерҙәребеҙ менән алыҫ Ҡаҙағстан далаларына барып сығабыҙ. Яҙыусы бына шулай репортажға тартымыраҡ алым менән бер юлы бер нисә сюжет йомғағын төйнәп ҡуя, унан һуң уларҙы әкренләп һүтә башлай. Хикәйәләү барышында үҙәк сюжет һыҙыҡтарына яңылары килеп ҡушыла, һәм ахыр сиктә улар, бер бөтөн булып уҡмашып, романдың асылын тәшкил итәләр.

Әҫәрҙәге ваҡиғалар рамкаһы әллә ни киң түгел. Унда һүҙ башлыса Беүә йылғаһы буйындағы Мәргән ауылы эргәһендә төҙөлә башлаған йылылыҡ электр станцияһы тураһында бара. Әммә теге йәки был геройҙың образын тулыраҡ асыу ниәтендә яҙыусыға йыш ҡына үткәндәргә лә күҙ ташларға тура килә. Йәшен тиҙлегендә генә булһа ла Граждандар һуғышы ла сағылып китә, колхозлашыу йылдары ла иғтибарһыҙ ҡалмай, дәһшәтле һуғыш һәм унан һуңғы ауырлыҡтар ҙа килеп ҡушыла. «Беүә буйҡайҙары һары тал»ды яҙмыштар романы тип атар инем мин. Сөнки ҡайһы ғына персонажды алып ҡараһаҡ та, уның биографияһы ил биографияһы менән бәйләнгән. Традицион үлсәү менән килгәндә, бында хатта геройҙарҙы ыңғай һәм тиҫкәре типтарға бүлеп ҡарау ҙа еңел түгел. Ни өсөн тигәндә, уларҙың күбеһендә ыңғай сифаттар айырым етешһеҙлектәр менән йәнәш йәшәп яталар.

Романдағы конфликт та үҙенсәлекле. Ул күҙгә бәрелеп торған ҡапма-ҡаршы көстәрҙең көрәшенә түгел, ә төрлө ижтимағи-сәйәси, социаль-политик, мораль-этик, экологик һәм әхлаҡ принциптарынан сығып эш иткән кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәренә ҡоролған. Бында ҡан ҡойоштар ҙа, үлтерештәр ҙә, киҫкен бәрелештәр ҙә юҡ. Ә бына

йәнде өшөткөс, тән яраһына ҡарағанда бик күпкә оҙаҡ йәшәй торған күңел яралары байтаҡ ҡына. Романдың хатта исеме лә метафора рәүешендә яңғыраған һымаҡ. Халыҡ аңында һары төҫ, ғәҙәттә, һағыш төшөнсәһе менән йәнәш ҡуйыла бит. Ысынлап та, геройҙарҙың күбеһе күңел ғазабы кисерә, тышҡы яҡтан тормоштары бик етеш һәм ал да гөл күренһә лә, эстәрендә һары һағыш. Айырма тик шунда ғына: ҡайһы берәүҙәренең күңел йәрәхәте йылдар үтеү менән бер аҙ һарҡый төшкән, ә бәғзеләрендә ул мәңгелеккә ҡалған.

Үрҙә телгә алынған Зайлалов ҡарт образына кире ҡайтайыҡ әле. Бынамын тигән колхоз председателе. Тәжрибәле. Хужалығы ныҡ. Ерҙең ҡәҙерен белә. Игенде лә яҡшы үҫтерә. Пландар һәм йөкләмәләр ваҡытында үтәлә. Колхозсыны эшләтә лә белә, тамағын да туйҙыра. Ялҡауҙарҙы ене һөймәй. Унан ҡурҡалар ҙа, ихтирам да итәләр. Даны районға ғына түгел, бөтә республикаға таралған, етәкселәр алдында абруйы ҙур. Ысын мәғәнәһендә – ер хужаһы. Мәргән ГРЭС-ына төҙөлөш начальнигы булып килгән Фәрит Бәхтийәров менән беренсе тапҡыр осрашыу эпизодын ғына хәтергә төшөрәйек: «Нефтяниктар ҡан биҙрәткәйнеләр, ер-һыуҙы ҡаҡшатырға, крәҫтиәнде ерҙән биҙҙерергә инде һеҙ килеп еттегеҙме?» – ти ул асыу менән. Һәм үҙ һорауына үҙе асыҡлыҡ индергәндәй, әйтә: «… беҙгә еребеҙҙәге һәр һуҡмаҡ, һәр ағас, хатта болондағы үләндең һәр бөртөгө ҡәҙерле. Бына был йөрәккә ҡушылып тамырланған улар!..»

Еңелсәрәк, өҫтән-мөҫтән генә фекер йөрөткәндә, Зайлалов яңылыҡҡа ҡаршы сыҡҡан, иҫкелеккә йәбешеп ятҡан шәхес һымағыраҡ күҙ алдына килеп баҫа. Беүә йылғаһы буйындағы Мәргән ауылы эргәһендә бик ҙур йылылыҡ электр станцияһы төҙөләсәге тураһындағы хәбәрҙе ул үҙенсә ҡабул итә. Шуға ла төҙөлөш начальнигын үтә һалҡын ҡаршылай. Ә тирә-яҡтан йыйыла башлаған эшселәрҙе ваҡытлыса фатирға урынлаштырыу мәсьәләһе көн үҙәгенә килеп баҫҡас, хатта аяҡ салып та ҡарай. Председателдең «тиҫкәрелеге» ҡарабойҙай баҫыуына бәйле ваҡиғаларҙа айырыуса ныҡ күҙгә ташлана. Ә инде уның «Правда» газетаһына яҙған хаты Фәрит Бәхтийәров менән ике арала булған конфликттың иң юғары нөктәһелер, моғайын.

Әммә колхоз председателенең был ҡылыҡтары, уға бары тик тиҫкәре кеше тип кенә ҡарарға нигеҙ бирәме икән һуң? Хатта уның антиподы ролендә һүрәтләнгән төҙөлөш начальнигы ла ер хужаһының хәлен аңларға мәжбүр бит. «Һәр кемдең үҙ мәшәҡәте... – тип уйлай

Фәрит Бәхтийәров. – Зайлалов ит, һөт, икмәк тип баш вата, ә минең башымда икенсе ғәм. Мин ошо кеше ғүмер иткән, донъя көткән ерҙә электр станцияһы ҡоторға тейешмен… Әлбиттә, колхозға бер аҙ ҡыҫылыңҡырарға, мал йөрөткән көтөүлектәренән, бесән сапҡан болондарынан мәхрүм ҡалырға тура килер…»

Бына шулай, был донъяла һәр кемдең – үҙ ғәме, үҙ мәшәҡәте. Роман авторының да үҙ маҡсаты, әйтергә теләгән үҙ һүҙе барҙыр. Сөнки һәр яҙыусы художестволы әҫәрҙе ижад иткәндә әҙәби образдарҙы китап битен тултырыу өсөн түгел, ә улар ярҙамында, уларҙы бер-береһе менән төрлө мөғәмәләләргә индереп, уҡыусыла ниндәйҙер фекер уятыу өсөн тыуҙырыла. Икенсе төрлө әйткәндә, ысын мәғәнәһендә өлгөрөп еткән, юғары кимәлле һүҙ сәнғәте әҫәрҙәрендә төп идея күҙгә бәрелеп, ярылып ятмай, ә образдар системаһына төрөлөп бирелеүсән була. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, Шакир Янбаевтың үҙ романы, бигерәк тә Зайлалов һәм Бәхтийәров образдары менән әйтергә теләгән уйы айырыуса ғибрәтле һымаҡ, минеңсә.

Әнүәр Бикчәнтәевтең «Ҡарасәй юлы» тигән романын хәтергә төшөрәйек әле. Унда ла бит ер хужаһы булып өлгөргән колхозсы крәҫтиәндәр менән Ағиҙел буйында нефть эҙләп йөрөүсе геологтар араһында киҫкен конфликт килеп тыуа. Тик был ике романдағы ике конфликт үҙҙәренең масштабы һәм тәрәнлеге менән дә, шулай уҡ селеш формалары менән дә бер-береһенән бик ныҡ айырылып торалар. Беренсенән, нефть разведкаһы өсөн әллә ни күп ер кәрәкмәй, шулай булыуға ҡарамаҫтан Ҡарасәй ауылы халҡы араһында ғауға ҡуба. Ә Мәргән ГРЭС-ын төҙөргә килгән Бәхтийәровҡа ер күп кәрәк, бик күп кәрәк. («Әлбиттә, колхозға бер аҙ ҡыҫылыңҡырарға, мал йөрөткән көтөүлектәренән, бесән сапҡан болондарынан мәхрүм ҡалырға тура килер…»). Икенсенән, «Ҡарасәй юлы»нда нефть разведкаһы өсөн ер бүлеү мәсьәләһе колхозсыларҙың дөйөм йыйылышына ҡуйып ҡарала, ә «Беүә буйҡайҙары һары тал»да иһә ошонда ғүмер иткән, донъя көткән кешеләр менән кәңәшләшеп тороу ҙа юҡ – уңдырышлы ерҙәрҙе һыу аҫтында ҡалдырып, бер нәмәгә ҡарамайынса электр станцияһы төҙөү юғарыла әллә ҡасан хәл ителгән мәсьәлә булып сыға. Әгәр «Ҡарасәй юлы»ндағы хәл-ваҡиғаларҙың утыҙынсы йылдар башында булыуын, ә «Беүә буйҡайҙары һары тал»да һүрәтләнгән тормоштоң алтмышынсы йылдар осорона тура килеүен иҫкә алһаҡ, утыҙ-ҡырҡ йыл эсендә ижтимағи тормошта халыҡтың роле байтаҡҡа кәмегәнен күрербеҙ.

Был айырма Йәсәүи Хәкимов менән Рәхмәтулла Зайлалов образдарын сағыштырып ҡарағанда бигерәк тә ныҡ күҙгә ташлана. Революция һәм Граждандар һуғышы йылдарында Совет власы өсөн йәнен бирергә әҙер торған, унан һуң Ҡарасәйҙә колхоз ойоштороуҙа актив ҡатнашҡан Йәсәүи, крәҫтиән эшен ташлап, нефть экспедицияһына киткән кешеләргә ризаһыҙлығын белдереп, былай ти: «Ер крәҫтиән өсөн бөтә нәмә ул. Кеше һауанан башҡа йәшәй алмаған кеүек, крәҫтиән ерһеҙ көн итә алмай. Ер – әсә ул». Зайлалов ҡарт та ошо уҡ фекерҙе ҡабатлай ҙа баһа! Айырма нимәлә һуң? Ә айырма шунда: колхоздар әле яңы ғына төҙөлгән мәлдә крәҫтиән үҙен күпмелер кимәлдә ер хужаһы итеп тойған, уның менән иҫәпләшкәндәр, кәңәшләшкәндәр. Ә йылдар үткәс, шул уҡ крәҫтиән ер хужаһынан бәләкәй бер шөрөпкә әйләнгән. Ныҡлабыраҡ уйлап ҡараһаң, Зайлалов үҙе лә шөрөп кенә бит, тик, колхозсылар менән сағыштырғанда, бәлки, бер аҙ ҙурыраҡ шөрөптөр. Сөнки тыуған төйәкте, ер-һыуҙы тәбиғәт закондарын тупаҫ боҙоусыларҙан һаҡлап алып ҡалырға тырышып күпме генә сәбәләнеп ҡарамаһын, уның һүҙенә ҡолаҡ һалыусы бер генә етәксе лә табылмай.

Романдағы Зайлалов образына бәйле ҡатмарлы ла, тәү ҡарауға ҡаршылыҡлы ла булып күренгән фекерҙәргә балалыҡ йылдары ошо тирәлә үткән Тихон Дмитриевич Данилко бер ни ҡәҙәр асыҡлыҡ индергәндәй. Тихон Дмитриевич та Беүә буйында башланған төҙөлөшкә битараф булып ҡала алмай. Әлбиттә, ҡала комитетының беренсе секретары булараҡ ул яҡшы аңлай: ГРЭС – кәрәк, ГРЭС – прогресс. Ләкин ҡеүәтле машиналар «үҙенең һуңғы минуттарын кисергән, бынан һуң халыҡ телендә, кеше хәтерендә исеме генә ҡаласаҡ Нараҭһаҙ яланы»н дер һелкетеп, аҫтын-өҫкә килтерә башлағас, экскаватор сүмесе ер ҡыртышын түгел, ә Тихон Дмитриевичтың күкрәгендә ятҡан иҫтәлектәрҙе аҡтарған кеүек тойола яҙыусыға. Төҙөлөш эштәрен башлап ебәреү айҡанлы үткәрелгән митингыла ҡатнашыусыларҙың йөҙҙәрендә, күҙ ҡараштарында ерҙе аяу тойғоһо булмағанға йәне әсей ҡала комитеты секретарының. Сөнки ҡалын ҡара тупраҡ, «яҙмышына өнһөҙ-тауышһыҙ буйһоноп, ҡеүәтле машиналарҙың тәгәрмәсе аҫтына» түшәлә башлағас, «мең араһынан ни бары берәү генә “ah!” тигән өн сығара. Күпме ут-һыуҙар кисеп, ochoҙ-ҡырыйһыҙ фронт юлдарында ярты сәләмәтлеген юғалтып ҡайтҡан партия работнигы, әҙәм балаларын, барлыҡ тереклекте туйындырыусы ер менән бер ҡатарҙан һыҙланып, ошондай ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы уй-хистәргә бирелеп

китә икән, ни өсөн әле Беүә буйында бөтә ғүмерен ергә, уның илаһи көсөнә һәм иҫ киткес матурлығына табынып үткәргән Зайлалов ҡарабойҙай баҫыуындағы мәхшәргә битараф ҡалып, ситтән тыныс ҡына күҙәтеп, бер ни булмағандай ҡарап торорға тейеш?

Һүҙ бында «тиҫкәре» колхоз председателен абруйлы партия работнигы шәүләһе менән ҡаплап, уны ярлыҡау тураһында түгел, ә мәсьәләнең шаҡтай ҡатмарлыраҡ булыуы тураһында, күрер күҙгә бик үк сағылмайынса, төпкөлдәрәк ятҡан сәбәптәр һәм күренештәр тураһында – әҙәм балаһының әкренләп ер-әсәнән ситләшә башлауы тураһында бара. Тихон Дмитриевичтың эске кисерештәрен сағылдырып, яҙыусы уның тураһында бына бит нимә ти: «… ҡара тупраҡтың ҡалынлығына хайран ҡалып, ана шул хәтәр ҡиссаларҙы иҫенә төшөрөп, уйсанланды, ер өсөн талашҡан-тартышҡан крәҫтиән балаларының бөгөнгөһө көндә йөҙҙәрендә, күҙ ҡараштарында ерҙе аяу тойғоһо булмағанға йәне әсене».

Ә хәҙер Тихон Дмитриевичтың Өлкә Комитеты бюроһынан сыҡҡас башына килгән уй-фекерҙәрен хәтергә төшөрәйек: «Эйе… Ер мәсьәләһе йылдан-йыл ҡатмарлана… Бар ине бит заманда, бирәһеңме, юҡмы тип колхозсынан һорап тороу ҡайҙа! Тулҡынланып ятҡан бойҙай баҫыуының ҡап уртаһына килтерәбеҙ ҙә буровой ултыртабыҙ! Бер кем ләм-мим һүҙ әйтмәй… Ерҙе генәме? Күпме күлдәрҙе, йылғаларҙы нефть ағыҙып бысраттыҡ». Был нимә: уфтаныумы, әллә үткәндәргә ҡарап, ғәмһеҙлек һәм баш-баштаҡлыҡ хөкөм һөргән осорҙарҙы хәтерләп, үҙенә күрә бер ғорурланыумы? Яҙыусы бында әйтер һүҙен аҙаҡҡа тиклем әйтеп бөтөрмәгән, ахырыһы, һәм шунлыҡтан ҡапма-ҡаршылыҡлыраҡ һорау килеп тыуа. Өлкә Комитеты бюроһында колхозсылар фекере түгел, ә Зайлаловтың «Правда» газетаһына яҙған хаты тикшерелеүен дә иҫкә алһаҡ (хәйер, ул махсус тикшерелмәй ҙә, ә төҙөлөш эштәренең барышы ҡаралыу уңайы менән телгә генә алынып китә!), был ҡаршылыҡ уғата ла арта. Бәлки, уны автор аңлы рәүештә килтереп тыуҙырғандыр? Ә ни өсөн бынан алдараҡ, электр станцияһына нигеҙ һалыуға арналған әлеге лә баяғы шул Нарат һаҙ баҫыуындағы митинг башланыр алдынан Бәхтийәров менән ике арала булып алған ҡыҫҡа һөйләшеүҙә Тихон Дмитриевич Данилконың Зайлаловҡа һүҙ тейҙерәһе килмәгәйне? Пландарҙы ваҡытында һәм арттырып үтәгәне өсөн генәме? «… Зайлалов яҡшы хужа! Ерҙең ҡәҙерен белә…» тигән һүҙҙәрҙең төп мәғәнәһе тағы ла шул проценттарға ғына ҡайтып ҡаламы?

Әгәр Тихон Дмитриевич образына ныҡлабыраҡ иғтибар итһәк, уның айырым эпизодтар аша тасуирланған тормош юлын күҙ уңынан үҙғарһаҡ, беҙҙең алға бик сабыр, мөләйем йөҙлө, юғары культуралы, сәләмәтлеге барлы-юҡлы булыуға ҡарамаҫтан, үҙ эшенә ихлас бирелгән партия работнигы килеп баҫыр. Был ыңғай сифаттарҙы үрҙә телгә алынған ҡаршылыҡлыраҡ фекерҙәр менән бергә үрһәк, ҡала комитеты секретары Данилко ла, минеңсә, яҙмышына буйһонған, үҙаллылыҡтан мәхрүм ителгән кеше булып сыға. Юғиһә, Әнүәр Бикчәнтәевтың шул уҡ «Ҡарасәй юлы» романында һүрәтләнгән утыҙынсы йылдар башындағы өлкә комитеты секретары Таһир Алтынбаев икенсе төрлөрәк хәтерҙә ҡалған.

Әйтелгәндәрҙән бер ни тиклем дөйөмләштереү яһаһаҡ, ҡала комитеты секретары Тихон Дмитриевич Данилко ла, колхоз председателе Зайлалов та – үҙ заманының балалары тип раҫларға булыр ине. Әлбиттә, уларҙы бер ҡалыптан һуғылғандар тип әйтергә уйламайым. Сөнки әҙәби образ булараҡ типик күренеш бейеклегенә күтәрелһәләр ҙә, шул уҡ ваҡытта был ике герой бик индивидуаль дә. Бер үк заман һыуын эсеп, бер үк заман һауаһын һулап йәшәһәләр ҙә, Данилко үҙенең кешелек сифаттары менән Зайлаловтан бик күпкә өҫтөн тора. Данилко һүҙҙәре менән әйткәндә, ерҙең ҡәҙерен белеүсе яҡшы хужа булһа ла, Зайлалов ни өсөндөр беҙҙең хәтерҙә башлыса һөйкөмһөҙ йән эйәһе булып ҡала. Уның рухи донъяһы, мораль йөҙө, әхлаҡ принциптары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде (был осраҡта яҙыусы буяуҙарҙы ни өсөн шул тиклем ҡуйыртып ебәргәндер!). Йәнде иң ныҡ өшөткәне – Зайлаловтың кешеләр яҙмышы менән уйнауы. Уның мәкерлелеге, бәғерһеҙлеге арҡаһында күпме кешеләрҙең шәхси тормошо селпәрәмә килә! Һүҙ юҡ, бында ҡәһәрле һуғыш та ғәйепле. Әммә Зайлаловтың этлектәрен һуғыш ғәләмәтенә генә япһарып ҡалһаҡ, дөрөҫлөккә хыянат итер инек. Был фекерҙе дәлилләү өсөн романдан бик күп фактттар килтерергә мөмкин. Шуларҙың ҡайһы берәүҙәренә генә булһа ла туҡталайыҡ әле.

… Тагилдағы бына тигән өс бүлмәле фатирын ташлап, ҡатыны менән улын эйәртеп, Мәргәнгә Миңнеғәле Мурзин ҡайтып төшә. Тыуған өйө янында үҫкән ҡарт өйәңке һаман иҫән. Өй генә юҡ. «Атай нигеҙенә тамыр ебәрә алманым… Ә ҡайҙа минең үҙ нигеҙем?» – тип уйлай Миңнеғәле. Ә бит уны бынан күп йылдар элек, 1945 йылдың яҙғы сәсеүе ваҡытында, Зайлалов ауылдан ҡыуған.

… Йомағолоноң ҡуйын йылыһын йүнле-башлы татып та өлгөрмәгән Гөлбаныуҙы Зайлалов, уның ихтыяры менән иҫәпләшеп-нитеп тормайынса, Магнитогорскиға ебәреп олаҡтыра.

… Миңнеғәленең бер көнлөк кәләше Нәфисәне лә шул уҡ Зайналов, үҙенең күптәнге өмөтөн тормошҡа ашырыу ниәтендә, ФЗО-ға оҙата. «Әҫәһең, Аҫылғужа мырҙаһын һуңғы күреүемдер тигән уй Нәфисәнең башына ла килмәгәйне. Бер генә төндө йәнәш үткәргән никахлы ире Миңнеғәле менән дә ғүмергә айырылырмын, күңелем тартмаған, йәнем һөймәгән Фәһимгә насип булырмын тип тә уйламаны».

… Инде нисәмә йылдар үтеп китһә лә, Миңнеғәленең уйҙары тағы Нәфисәгә барып тоташа, тынғы бирмәй йәшлек мөхәббәте: «Ниңә иҫемдән сыҡмай ул? Йәшлек мөхәббәтем әллә һүрелмәгәнме? Минең бит инде ҡатыным, үҫеп еткән улым бар. Арала күпме йылдар ята. Нәфисәнең дә хәҙер үҙ тормошо, Фәһим менән балалар үҫтерә. Уның хаҡында уйлау хилаф түгелме?..»

… «Ҡайтырға ине тыуған яҡтарға!» – тигән теләк елкендерә Нәфисәне, Мәргән ауылы янында электр станцияһы төҙөлөү тураһындағы хәбәрҙе радионан ишеткәс. Һәм ул ҡайта. Алыҫ Ҡаҙағстан далаларында бынан күп йылдар элек йәйелгән һәм шаҡтай тәрәнгә китеп өлгөргән тамырын өҙөп ҡайта. Сөнки тыуған яҡтың үҙенә тартыу көсө ҡеүәтлерәк булып сыға. Ҡайтыу менән зыяратҡа, әҫәһе ҡәберенә юл тота. «Тауыш сығарып үкһемәне Нәфисә, күҙенән тамсы йәш сыҡманы. Йөрәге генә иланы».

Ошо урында миҫалдарҙы туҡтатып, Бәхтийәровтың һүҙҙәренә иғтибар итәйек: «Мине бер нәмә ғәжәпләндерә, Тихон Дмитриевич: ошоғаса бер кем дә Зайлаловтың ысынбарлыҡта кем икәнен белмәй, хатта һеҙ ҙә уның ялтырауыҡ битлеген генә күрәһегеҙ. Ә бит шул битлек артында ниндәй зәһәрле әҙәм йәшәй!».

Ни өсөн әле был һүҙҙәр иғтибарҙы йәлеп итте? Автор рупоры төҫлөрәк яңғырағаны өсөн. Беренсенән, яңы ғына Беүә буйҙарына килеп сыҡҡан төҙөлөш начальнигы ҡайһылай әле бик тиҙ арала Зайлаловтың эске донъяһын бөтә нескәлектәре менән белеп өлгөргән? Икенсенән, Зайлаловтың зәһәрлеге был яңғырауыҡлы һүҙҙәр ярҙамында ғына түгел, ә романдың башынан аҙағына тиклем йәйрәп ятҡан күренештәр, геройҙарҙың эске кисерештәре аша ғәжәп ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнә. Үрҙә файҙаланылған ҡайһы бер миҫалдар – быға асыҡ дәлил. Һәм бына ошо нескә хистәргә, эске кисерештәргә ҡоролған картиналарҙы мин романдың иң уңышлы биттәре тиер инем.

Ҡызғанысҡа ҡаршы, әҫәрҙең бөтә биттәре лә ундай картиналарҙан ғына тормай, ГРЭС төҙөлөшөн һүрәтләүгә күскәс, персонаждар һаны ла саманан тыш күбәйеп китә, лозунгыға оҡшаш яһалма фразалар ҙа яңғыраштыра, төҙөлөштә инженер менән бригадирҙың тотҡан урынына ҡағылышлы ләститтәр ҙә һатыла, техницизмдар ҙа башты ҡатыра, ғөмүмән, урыны-урыны менән очеркка тартым стиль өҫтөнлөк ала. Бәхтийәровты, тормош закондары менән иҫәпләшеп тормайынса, бик тиҙ генә заман геройы итергә тырышыу күҙгә бәрелеп ҡуя. Былар бөтәһе лә – ашығыслыҡ һөҙөмтәһелер тип уйлайым мин.

Мәҡәләлә һүҙ күберәк Зайлалов тураһында барҙы. Был осраҡлы түгел. Тәү ҡарауҙа роман Мәргән ГРЭС-ын төҙөүгә бағышланған һымаҡ тойолһа ла, унда Зайлалов образына ғәҙәттән тыш ҙур урын бирелгән. Был үҙенсәлек әҫәрҙең композицияһында ла сағылыш тапҡан – ул ҡулса формаһында төҙөлгән: хикәйәләү Зайлаловтан башлана һәм уның менән тамамлана. Романдың һуңғы биттәрендә Исмәғил ҡартты баҫып үлтергән тирәккә бәйле шомло фразаның да сере асыла: ғүмер баҡый кеше ҡатынына ымһынып йәшәгән Зайлаловты ҡартлыҡ көнөндә шул уҡ ҡатындың ҡәбере өҫтөндә үҫеп ултырған ҡайын – Зөлфиә ҡайыны баҫып үлтерә. Шулай итеп, Зайлаловтың үҙ яҙмышы ла яралы яҙмыш булып сыға.

Әлбиттә, был Шакир Янбаевтың яңы романы гел һары һағыштар һәм яралы яҙмыштарҙан ғына тора икән тигән һүҙ түгел. Әҫәрҙә оптимистик рух менән һуғарылған образдар ҙа етерлек. Әйтәйек, әле ныҡлап ойошоп та бөтмәгән эшселәр коллективында хөкөм һөргән хеҙмәт энтузиазмы – үҙе генә лә ни тора! Йә булмаһа романдағы иң һуңғы эпизодты алайыҡ. Унда Урал менән Раузаның туйы тасуирлана – әсе яҙмыш ҡорбаны Ҡолсәғизәнең етем ҡалған улы балалар йортонда тәрбиәләнеп үҫеп, үҙ донъяһын ҡорорға әҙерләнә. Тимәк, тормош дауам итә. Дөрөҫ, ул асфальт түшәп ҡуйылған шып-шыма һәм туп-тура юл түгел. Унда һикәлтәләр ҙә күп, боролмалар ҙа байтаҡ, упҡындар ҙа осрай. Яҡшы күңелле кешеләр менән бер ҡатарҙан әшәкеләре лә йәшәп ята. Әммә тормош барыбер үҙенекен итә – ваҡыты еткәс, һәр кемгә ҡарата үҙенең ғәҙел хөкөмөн сығара. Бына ошо күҙлектән ҡарағанда, «Беүә буйҡайҙары һары тал», минеңсә, бик актуаль, бик заманса яңғырай торған роман.

1989

ОЛО ӘҘИП ТУРАҺЫНДА ЕТДИ ТИКШЕРЕНЕҮ

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә туған әҙәбиәтебеҙгә ҡағылышлы байтаҡ ҡына ғилми хеҙмәттәр баҫылып сыҡты. Шулар араһында әҙәбиәтебеҙҙе һәм сәнғәтебеҙҙе үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индергән шағир, драматург, прозаик, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Баязит Бикбай ижадына арналған монография ла бар. Уның авторы – филология фәндәре кандидаты Мәҙинә Хәмиҙуллина. Тикшеренеүсе күренекле әҙиптең юйылмаҫ образын мәңгеләштереү буйынса беренсе ҡыйыу аҙымды бынан ун йылдар самаһы элек яһағайны. 1978 йылда ул, «Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр» йыйынтығын төҙөп, уға аңлатмалар биреп, айырым китап итеп баҫтырып сығарҙы. Һүҙ барған монография – ғалимдың изге юлындағы икенсе мөһим аҙым. Ул инеш һүҙҙән, өс бүлектән һәм нығымтанан тора.

«Ер даны» тип аталған беренсе бүлек Б. Бикбайҙың шағир булараҡ индивидуаль үҙенсәлеген аныҡлауға, уның башҡорт поэзияһында тотҡан урынын билдәләүгә бағышланған. Был бүлек, бәлки, автор өсөн иң сетерекле, иң ҡатмарлы бүлек тә булғандыр. Ни тиһәң дә, поэзия тураһында ауыҙ тултырып һөйләү өсөн фекер тәрәнлеге генә түгел, ҡәләм шымалығы ла кәрәк бит. Был ҡаршылыҡты М. Хәмиҙуллина, минеңсә, уңышлы еңеп сыҡҡан. Ғалим шағирҙың әҙәбиәттә яһаған беренсе аҙымдарынан алып һуңғы йылдарына тиклемге эволюцияһын бик объектив, бөтә нескәлектәре, юғалтыу-табыштары, ҡапма-ҡаршылыҡтары менән күҙ алдына баҫтырырға тырышҡан.

Әйтәйек, «Тынғыһыҙ тоҡом» тигән бүлексәлә буласаҡ шағирҙың ижади сығанаҡтары тикшерелеп, уларҙың тамыры фольклор, Туҡай һәм Бабич традицияларына барып тоташыуы күрһәтелһә, икенсе бүлексәлә шағирҙың 20-се йылдар аҙағында һәм 30-сы йылдар башында яһаған тәүге аҙымдары күҙ уңынан уҙғарыла. Был осор хаҡлы рәүештә шағир ижадында өйрәнеү миҙгеле, тәүге тәжрибәләр туплау дәүере тип билдәләнә, уның шиғырҙарының «Д. Юлтый, М. Ғафури, С. Ҡудаш, Т. Йәнәби кеүек өлкән шағирҙарҙың, быуындаштарынан Р. Ниғмәти, Ғ. Сәләм һ.б. бик күптәрҙең тарихи көрәш нигеҙендә тыуған һәм социаль үҙгәрештәрҙе тәбрикләгән һәм яҡлаған, иҫкене

фашлау пафосы менән һуғарылған әҫәрҙәренә ауаздаш» булыуына ишара яһала.

«Ваҡиғалар эсенә…» бүлексәһендә тикшеренеүсенең иғтибар үҙәгендә Б. Бикбайҙың 30-сы йылдар уртаһында ижад иткән «Урман артында», «Гармунсы», «Ҡайын», «Йәшә, тормош», «Ер» кеүек киң билдәле әҫәрҙәре тора, «Совет патриоты» тигән бүлексәлә шағирҙың Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан яҙылған һәм Тыуған ил образын һүрәтләгән шиғырҙарына күҙәтеү яһала. Ә инде «Һалдат тырышлығы менән» тигән бүлексә үҙе бер айырым осорҙо эсенә ала – Б. Бикбайҙың һуғыш йылдарындағы поэтик ижадын да, шулай уҡ әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге ойоштороу эшмәкәрлеген дә. Бында ғалим «Баязит Бикбай тураһында иҫтәлектәр» китабына мөрәжәғәт итеп бик дөрөҫ эшләй. Яҙыусы, ысынлап та, фронтовик шағирҙарҙы республика менән тоташтырып тороусы «тере коммутатор» образында күҙ алдына килеп баҫа.

«Тормоштоң яңырыуы менән яңырып», «Киләсәк заманға ҡарап» тигән һуңғы ике бүлексәлә тикшеренеүсе, шағирҙың 50-се һәм 60-сы йылдарҙа тыуҙырған иң яҡшы поэтик өлгөләрен анализлап, «Лирик геройҙарҙы, әҙәби характерҙарҙы конкретлаштырыу, бигерәк тә шиғриәттең нигеҙен тыуған ер яҙмышына ҡороу, халыҡ менән бер юлда булыу Б. Бикбай ижадын оло поэтик күренеш итте» тигән хаҡлы һөҙөмтәгә килә.

Монографияның «Тарих тауышы» тип аталған икенсе бүлеге – иң етди, иң эстәлекле бүлектер, моғайын. Бында һүҙ Б. Бикбайҙың сәхнә әҫәрҙәре тураһында бара. Ғалим уны беҙҙең алдыбыҙға ысын мәғәнәһендә талантлы, үҙенә бик талапсан, башҡорт театр сәнғәте үҫешенә ифрат ҙур өлөш индергән оло драматург итеп килтереп баҫтыра.

Поэзияны тикшергәндәге шикелле үк, был бүлектә лә әҫәрҙәр хронологик тәртиптә ҡарала. «Дауыл алды атмосфераһы» тигән беренсе бүлексәлә, мәҫәлән, М. Хәмиҙуллина Б. Бикбайҙың «Ҡарлуғас» драмаһын ентекләп анализлай, ундағы төп геройҙарҙың фольклорға, конкрет алғанда, тарихи йырҙарҙағы ҡасҡындар, йәғни социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы көрәшеүсе батырҙар образына барып тоташыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Традиция һәм новаторлыҡ мәсьәләләренә ҡағылып, ғалим «Ҡарлуғас»тың тарихи тикшеренеүҙәргә, прототип йәки прообраздары булған геройҙарға таянып, реаль ваҡиға һәм документтар нигеҙендә яҙылыуы тураһында төплө фекергә килә.

«Дауыл мәле. Халыҡ һәм шәхес проблемаһы» һәм «Дауылдан һуң шәхес трагедияһы» тигән икенсе һәм өсөнсө бүлексәләр «Салауат» һәм «Шәүрә» әҫәрҙәрен тикшереүгә бағышланғандар. Бында яҙыусының ижад лабораторияһына ҡағылышлы ҡыҙыҡлы ғына күҙәтеүҙәр бар. «Ҡарлуғас»тың ҡаҙаныштары «Салауат» менән «Шәүрә»лә артабан үҫтерелде тигән тезис иҫбат ителә. «Ҡарлуғас» менән сағыштырғанда, «Салауат»тағы реализмдың эволюцияһы социаль йөкмәткенең артабан тәрәнәйеүендә, конфликттың киҫкенлегендә, психологик анализдың көсәйеүендә» тигән һығымтаға килә автор.

Монографияның был бүлегендә «Ҡаһым түрә» драмаһының идея-художество үҙенсәлектәрен тикшереүгә ҙур урын бирелгән. 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһындағы документтарға, иҫтәлектәргә һәм тарихи әҙәбиәткә, бигерәк тә башҡорттарҙың был һуғышта тотҡан урынын һәм ролен күрһәтеүсе бик күп архив материалдарына таянып, Б. Бикбай Ҡаһымдың объектив образын тыуҙырыуға ирешкән. «Халыҡтың патриотик күтәрелеше тыуҙырған шәхес» тигән бүлексәнең төп тезисын бына шулай аңларға мөмкин. Ғалимдың «“Ҡаһым түрә”лә Б. Бикбайҙың унан алдағы тарихи драмаһына ҡарағанда тормош менән максималь яҡынлыҡҡа, тарих фәне менән тығыҙ бәйләнешкә ынтылыуы күпкә көслөрәк» тигән һығымтаға килеүе һис тә осраҡлы түгел, әлбиттә.

Б. Бикбайҙың тарихи темаға яҙылған сәхнә әҫәрҙәре серияһын «Аҡҡош йыры» драмаһы ослап ҡуя. Был драманың нигеҙендә Беренсе бөтә донъя һәм Граждандар һуғыштары ваҡиғалары ята. Әҫәрҙең идея-художество концепцияһы «Заман менән бергә халыҡ һәм шәхес проблемаһының яңырыуы» тигән бүлексәлә киң һәм тәрән яҡтыртылған. «Әҙәм хуры яһай күптәрҙе иҫке йола» тигән бүлексә лә үтемле яҙылған. Бында тикшереүҙең төп объекты булып «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы тора. Ул төрлө яҡлап анализлана, уның яҙылыу тарихына ла бер аҙ күҙ ташлана, А.П. Чехов традициялары ла иҫкә алына.

Ә бына «Замана идеяһын күтәреп» тигән һуңғы бүлексә башҡасараҡ яҙылған. Бында һүҙ Б. Бикбайҙың һуғыш йылдарында ижад иткән «Ватан саҡыра» һәм «Бер ата балалары» тигән пьесалары тураһында бара. Тематик яҡтан был әҫәрҙәр Б. Бикбайҙың элегерәк яҙылған поэтик әҫәрҙәре менән сағыштырып тикшерелә. Тик шуныһы ҡыҙғаныс, инерция буйынсамы, әллә саманы онотоп ташлапмы, «Ва-

тан саҡыра» һәм «Бер ата балалары» башҡорт сәхнәһенең классикаһына әүерелгән «Ҡарлуғас», «Салауат», «Шәүрә», «Ҡаһым түрә», «Аҡҡош йыры», «Ҡоҙаса»лар менән бер ҡалыпҡараҡ һалынған. Күҙгә күренеп торған йомшаҡ әҫәрҙәрҙе көслө әҫәрҙәр менән бер ҡатарҙан ҡарау дөрөҫлөккә хилафлыҡ итеү була торғандыр ул. Бында тағы шуны әйтеү урынлы булыр, Б. Бикбай үҙенең тарихи темаға яҙылған сәхнә әҫәрҙәре менән беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, ә күп милләтле бөтә совет әҙәбиәтендә билдәле урынды алып тора. Шуға күрә уның уңышһыҙыраҡ килеп сыҡҡан әҫәрҙәрен тартҡылап-һуҙғылап күтәреүҙең бер ниндәй ҙә хәжәте юҡ, минеңсә.

Монографияның «Тере шишмәләр» тип аталған өсөнсө бүлеге яҙыусының прозаһына арналған. Күләме яғынан әллә ни ҙур булмаһа ла, был бүлектә Б. Бикбайҙың прозаһы ярайһы ғына тулы итеп күҙ алдына килтереп баҫтырыла. «Халыҡ энергияһы ярҙарынан сыҡҡанда» тигән бүлекселә, әйтәйек, «Ҡояшлы көн» повесынан үҫеп сыҡҡан «Аҡселән ташҡанда» романы һәр яҡлап анализлана һәм был романда 30-сы йылдар башындағы башҡорт ауылында күҙәтелгән ҡатмарлы ижтимағи-политик, социаль һәм идеологик атмосфераның милли ерлектә, ҡабатланмаҫ образдар аша бирелеүе һыҙыҡ өҫтөнә алына. «Физәҡәрлек сатҡылары» бүлексәһе иһә «Самолет алған Хәбирйән» һәм «Арыҫлан» очерктарын ентекләп тикшереүгә арналған һәм был очерктарҙың төп геройҙары ҡаһарманлығының социаль-психологик сығанаҡтарын асыуҙа, уларҙың рухи портреттарын тыуҙырыуҙа Бикбайҙың художество оҫталығы ышандырырлыҡ итеп күрһәтелгән.

Һуңғы ике бүлексәлә («Быуындар яуаплылығы» һәм «Шәхестең рухи биографияһы») М. Хәмиҙуллинаның иғтибар үҙәгендә – Б. Бикбайҙың 60-сы йылдарҙа яҙылған «Аҡсәскә» һәм «Тере шишмәләр» исемле повестары. «Аҡсәскә» повесын тикшергәндә Б. Бикбай беҙҙең алға нескә психолог булып килеп баҫһа, «Тере шишмәләр»ҙе анализлағанда иһә был үҙенсәлеккә яҙыусының тарихилыҡ принцибы килеп өҫтәлә.

Шулай итеп, әле һүҙ барған монографияла Б. Бикбайҙың тормош һәм ижад юлы бөтә тулылығы менән күҙ алдынан уҙғарыла. Һүҙен тамамлап, китаптың авторы шундай һығымта яһай: «Б. Бикбай башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәтендә беренселәрҙән булып реаль тормоштоң ҡатмарлы факторҙарын – дәүләт ҡоролошо, социаль-тарихи шарттар, мөхит һәм тәбиғәт, халыҡтың йәшәү рәүеше,

идеологияһы, психологияһы, этнографияһы, музыкаль байлығы һәм хореографияһына бәйле әҙәби-тарихи концепция тыуҙырҙы. Яҙыусы ана шул рәүешле әҙәбиәткә киң ҡараш алып килде, һүрәтләнгән тормошто үҫеш-перспективала күрһәтте, тарихилыҡ принцибын күҙҙә тотто, тәрән социаль анализды геройҙарҙы индивидуалләштереү менән бергә алып барҙы. Уның әҫәрҙәре шуға ла художестволы бер бөтөнлөк, конкретлыҡ сифаттарына эйә» (189-сы бит).

Был Б. Бикбайҙың әҙәби мираҫына ҙур баһа. Ләкин ул һуңғы баһа түгел әле. Яҙыусының тормош һәм ижад юлы тикшерелә генә башланы. Уның тураһында киләсәктә яңынан-яңы мәҡәләләр, иҫтәлектәр һәм ғилми китаптар яҙылыр. Әҙиптең мираҫын рус телендә пропагандалау буйынса ла тейешле саралар күрелер һәм уның иң яҡшы әҫәрҙәре беҙҙең күп милләтле совет уҡыусыһының уртаҡ хазинаһына әйләнер тип ышанғы килә.

Әле беҙ һүҙ алып барған монография ла юғалып ҡалмаҫ. Уның икенсе баҫмаһын тағы ла киңәйтеберәк сығарырға мөмкин булыр ине. Мәҫәлән, поэзия тураһында һүҙ барғанда тикшеренеүсе Б. Бикбайҙың фольклорға, өлкән быуын башҡорт һәм татар шағирҙарының, шулай уҡ рус классиктарының традицияларына таяныуына ҡат-ҡат баҫым яһай. Шул уҡ ваҡытта уның яҙыусы булып ҡына ҡалмауы, бәлки новатор кимәленә күтәрелеүе һыҙыҡ өҫтөнә алына. Тик бына, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо ҡиммәтле фекер ҡайһы осраҡта ҡоро раҫлау булып ҡына яңғырай. Әгәр ҙә конкрет миҫалдар килтереп, уларҙы бер-береһе менән сағыштырып, традиция һәм новаторлыҡ тураһында ауыҙ тултырып һөйләгәндә, ниндәй яҡшы һәм ышандырырлыҡ булыр ине!

Традиция һәм новаторлыҡ проблемаһын М. Хәмиҙуллина Б. Бикбайҙың драматургияһын һәм прозаһын тикшергәндә лә бик йыш телгә ала. Авторҙың күҙәтеүҙәре бөтәһе лә ҡыҙыҡлы һәм уҡыусыла шик тыуҙырырлыҡ түгел. Тик уға, әлеге лә баяғы, шул ашығыслыҡ ҡамасаулай һәм шуның арҡаһында ҡыҙыҡлы ғына булып күренгән күҙәтеүҙәр ҙә бәғзе урындарҙа өҫтән-мөҫтән генә яһалған һымаҡ тойола.

Киләһе баҫмаһын әҙерләгәндә ғалим ошо теләктәрҙе иҫкә алып, Б. Бикбайҙы әҙәби процесҡа тағы ла тығыҙыраҡ бәйләп күрһәтһә, яҙыусы беҙҙең алға ысын мәғәнәһендә оло бер әҙәби күренеш булып килеп баҫасаҡ.

1990

ҮТКӘНДӘРҘЕ ВАҡЫТ ХӨКӨМӨНӘ ТАРТТЫРЫП

Таңсулпан Ғарипованың яңы китабы «Ай менән ҡояш бер генә» тип атала. Уға ошо исемдәге повесть һәм алты хикәйә ингән. Бөтә был әҫәрҙәрҙе бер епкә бәйләп тороусы уртаҡ сифат – уларҙың идея-тематик берҙәмлеге тип әйтһәк, һис тә хата булмаҫтыр. Сөнки йыйынтыҡҡа индерелгән ҡайһы ғына әҫәрҙе алып ҡараһаҡ та, унда һүҙ башлыса әхлаҡ принциптарына ҡағылышлы мәсьәләләр тураһында бара. Художество кимәленә килгәндә иһә улар, әлбиттә, шаҡтай төрлө.

Китап әлеге шул «Ай менән ҡояш бер генә» повесы менән асыла. Повесты уҡығанда тәүге минуттарҙан уҡ иғтибарҙы үҙенә иң ныҡ йәлеп иткәне – уның формаһы. Әҫәр, больницала бер палатаға тура килеп, операция көтөп ятҡан урта йәштәрҙәге ике ҡатындың – Айһылыу менән Аняның – үтеп барыусы ғүмер, шул мәлдә үҙҙәре кисергән шатлыҡтар һәм хәсрәттәр, тормош юлында осраған төрлө кешеләр тураһында уйланыуҙары рәүешендә яҙылған.

Хикәйәләү Айһылыу исеменән алып барыла. Был образды урыны-урыны менән авторҙан айырып ҡарауы ла ситен булып китә. Бәлки, ул автобиографик һыҙаттар менән дә һуғарылғандыр. Һәр хәлдә повестан ниндәйҙер эске йылылыҡ бөркөп тора. Мин уны хатта повесть-эссе тип атар инем.

Һүҙ әҫәрҙең формаһын асыҡлауҙан башланғас, уға ҡағылышлы тағы бер фекерҙе әйтеп үтәһе килә. Зирәк аҡыллы, һиҙгер йөрәкле Айһылыу, үҙ алдына уйланғандай итеп, йәнәш койкала ятҡан ҡатынға бындайыраҡ характеристика бирә: «Аня, ҡатын-ҡыҙға хас булғанса, һүҙҙе һә тигәнсе икенсегә бороп ебәрә, көтөлмәгән ерҙә өҙә лә, унан да бигерәк, аңғармаҫтан ялғап ҡуя. Был һикерештәр араһында ҡарамаҡҡа бәйләнеш юҡ кеүек тойолһа ла, улар әллә ни рәүешле ер аҫты кабелдәре менән тоташҡан була. Уның менән һөйләшкәндә әллә ниндәйҙер алтынсы тойғо менән шул кабелдәрҙең йүнәлешен тойомлайһың».

Авторҙың үҙ стиле лә тап бына ошо алымға тартым: әҫәрҙең сюжеты «һикерештәр» яһай-яһай, «ер аҫты кабелдәре» ярҙамында үрелә. Әгәр ҙә мәгәр сюжет айышына төшөнөү һәм яҙыусының «тел

төбөн» аңлау ниәте менән повесты фабула ҡалыбына һалып, ваҡиғалар ағымында йөҙһәк (икенсе төрлө әйткәндә, ана шул «ер аҫты кабелдәре»н бер-бер артлы, эҙмә-эҙлекле тоташтыра башлаһаҡ), героиня менән беҙ тәү тапҡыр больница палатаһында түгел, ә шаҡтай иртәрәк осрашҡан булыр инек.

… Айһылыуға биш-алты йәштәр самаһы. Атаһы уға, ҡаланан алып ҡайтып, алты төҫлө буяу ҡәләме бүләк итә. Әле мәктәпкә лә төшмәгән сабыйҙың шатлығы эсенә һыймай. Тик был шатлыҡ үтә лә ҡыҫҡа ғүмерле булып сыға. Атай бүләге, шатлыҡ менән бергә, күңел ғазабы ла алып килә. Алдын-артын шәйләп тормаҫтан, балаларға ғына хас бер ҡатлылыҡ менән, Айһылыу, атаһы-әсәһе эштән ҡайтыуға, Сталиндың газетала баҫылған ярайһы ғына ҙур һүрәтен төрлө төҫкә буяй ҙа ҡуя. Ләкин, иң изге теләк менән – газета битенән уға ҡарап торған йөҙҙә сәләмәт кешеләрҙекенә оҡшатыу ниәте менән шул хәтлем тырышып башҡарылған был эштән һуң ғаиләлә шатлыҡ ауазы түгел, ә шомло тынлыҡ хөкөм һөрә. Атаһы ла, әсәһе лә сирҡанып ҡарағандай тойола Айһылыуға. «Ҡыҙыҡ ҡына был донъя: бер үк ваҡытта ҡурҡып та, яратып та буламы икән? Әллә атайым уны (Сталинды. – *Ә.Х.*) тыштан ғына яратамы икән?» тигән һорауҙар тынғы бирмәй үҫмер ҡыҙға.

Үҙ героиняһының тормош юлын Таңсулпан Ғарипова бына ошо мәлдән башлап ебәрә. Тик ул Айһылыуҙың биографияһын бәйнә-бәйнә һөйләп биреүҙе маҡсат итеп ҡуймай, бәлки уның характеры формалашҡан осорҙағы ҡайһы бер киҫкен моменттарҙы, әле бөрөләнеп кенә килгән күңел түрендә үтә лә ныҡ эҙ ҡалдырған ваҡиғаларҙы барлау менән генә сикләнә. Әйтергә кәрәк, бала психологияһын асыуҙа яҙыусы ярайһы ғына уңышҡа ирешкән. Һәм бына ошонда беҙ повестың тағы ла бер үҙенсәлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә тейешбеҙ – унда Айһылыуҙарҙың образы икәү: уларҙың береһе – бала Айһылыу, икенсеһе инә – әсә Айһылыу. Әҫәрҙең композицияһы ла ошо ике образды бергә үреп биреүгә ҡоролған: бала Айһылыу образы әсә Айһылыу хәтирәләрендә тыуа һәм йәшәй; үҫмер сағынан уҡ теремек, хистәргә бирелеүсән ҡыҙ, йылдар үткәс, нескә күңелле, аҡыллы, эске кисерештәргә бай тәбиғәтле, донъя хәлдәре тураһында үҙ аллы тәрән фекер йөрөтөргә һәләтле ҡатынға әүерелә. Юҡҡа ғына бит ул, әсә Айһылыуға әйләнгәс: «Бәлки, беҙ, һуғыштан һуң тәүге яҙҙарҙа тыуғандар, һағыш ҡатыш мөхәббәттән яралғанға күрә лә һағышлыбыҙҙыр», – тип әйтмәй.

Яҙыусының иғтибары күберәк бала Айһылыуҙың образын тыуҙырыуға йүнәлтелгән. Ысынлап та, беҙҙең күҙ алдына ул бик уйсан, күпте белергә ынтылыусан, күргән һәм ишеткән һәр нәмәнән ниндәйҙер мәғәнә табырға тырышыусан һәм уларға хатта үҙенсә баһа ла бирергә яратыусан ҡыҙ булып килеп баҫа. Сабыйҙы иң ныҡ борсоғаны – ололар донъяһында ваҡыты-ваҡыты менән килеп сығып торған әллә ниндәй ҡаршылыҡтар, үҙ-ара бәхәстәр, аңлашылмаусанлыҡтар, улар араһындағы ҡасандыр һәм кемдәрҙер тарафынан урынлаштырылған мөнәсәбәттәрҙең йыш ҡына боҙолоп китеүе, ахырына тиклем ап-асыҡ итеп әйтеп бөтөрөлмәгән ярым-йорто һүҙҙәр, кешеләрҙең бер-береһен рәнйетеүҙәре… Ғөмүмән, тирә-йүнде әйләндереп алған тормош бала Айһылыуға үҙе бер серле йомғаҡ булып тойола. Һәм шул йомғаҡты нығыраҡ һүткән һайын, уның былай ҙа буталсыҡ уйҙары уғата ла ҡатмарлана төшә, теге буяу ҡәләме арҡаһында килеп сыҡҡан күңелһеҙ хәлдән һуң тыуған һорауҙар әленән-әле яңырып ҡына тора.

Әйтәйек, нимә ул ябыҡ йыйылыш? Ниңә ул һимеҙ түгел? Ниңә шул ябыҡ йыйылыштарҙың береһендә Айһылыуҙың атаһына малсылыҡты күтәреү бурысын йөкмәтәләр? «Тимәк, атайыма фермалағы һәр һыйырҙы күтәреп торғоҙоп йөрөргә тура киләсәк. Был эште уға ҡушмай, кемгә ҡушһындар: яҡын-тирәлә унан да көслөрәк кеше юҡ. Йылдың-йылы, һабантуйҙарҙа еңеп, тәкә алып ҡайта ла ул» тигән һығымта яһап ҡуя үҙенсә бала кеше.

Ферма йортона күсеп килеп йәшәй башлағас, Айһылыуҙың донъяға ҡарашы киңәйгәндән-киңәйә бара. Беренсенән, әкренләп Үгеҙ Айытҡол менән Айыу Айытҡолға бәйле мәрәкәнең серенә төшөнә башлаһа, икенсенән, әсәһендәге үҙгәреш тә уның күҙ уңынан ситтә ҡалмай – ферма бына тигән йәп-йәш ҡатындар эшләп йөрөгәнлектән, әсәһе Саимә лә үҙенең өҫтө-башына иғтибарын көсәйтә, йәштәрсәрәк кейенеп йөрөй башлай. Райондан килеп төшкән уполномоченныйға бәйле ваҡиға айырыуса тос тасуирланған. Баш мейеһен байтаҡ ҡайнатҡандан һуң, Айһылыу уйынса был ят һүҙҙең мәғәнәһе «ыҙалатыу өсөн килеп төшкән кеше» булып сыға. Эпизодик рәүештә генә күҙгә салынып киткән «Чапай» ҡушаматлы Иҫәнбай ҡарт образы ла хәтерҙә ҡалырлыҡ.

Повеста Айһылыуҙың мәктәп йылдары ла күпмелер кимәлдә сағылыш таба. Тик башта уҡ киҫәтеп ҡуяйыҡ: яҙыусыны героиняның нисек уҡыуы, мәктәптән ниндәй билдәләр алып ҡайтыуы түгел,

ә барыһынан да элек ул үзләштергән тормош һабаҡтары һәм шул һабаҡтар арҡаһында уның характерында барлыҡҡа килгән үзгәрештәр ҡыҙыҡһындыра. Мәктәп йылдарын хатта Айһылыу биографияһындағы икенсе баҫҡыс тип тә һанарға мөмкин. Был баҫҡыс уғата ла текәрәк, мәшәҡәттәргә уғата ла байыраҡ булып сыға. Сөнки, беренсенән, ферма ихатаһынан ауылға йөрөп уҡырға тура килһә, икенсенән иһә, уға ололар донъяһында әленән-әле тыуып торған ҡытыршылыҡтарҙың яңы шаһиты булырға тура килә.

Мәктәп йылдарынан Айһылыуҙың күңел түрендә һаҡланып килгән иң ғибрәтле ваҡиғаларҙың береһе – «Ҡарға бутҡаһы» байрамылыр, моғайын. Был ваҡиға ниндәйҙер дәрәжәлә повестың композицион нигеҙен тәшкил итә тип әйтһәк тә, дөрөҫ булыр. Эш бында яҙыусының «Ҡарға бутҡаһы» байрамына бәйле хәтирәләргә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтыуында ғына ла түгел. Иң мөһиме – илаһи тормоштоң бәләкәй генә булһа ла бер өлөшөн тотоп алып, уны ошо байрам яҡтылығында сағыу күрһәтә белеүҙә.

Тәүҙә үк шуны һыҙыҡ өҫтөнә алыу урынлы булыр – «Ҡарға бутҡаһы» байрамы повесть биттәрен бер-бер артлы яңы персонаждар менән байыҡтыра; Ғәлиә, уның әсәһе Гөлбикә апай һәм өләсәһе Мәрзиә инәй, гармунсы Бибисәлимә апай һәм уның әхирәте Тутыя… Дөрөҫ, улар әллә ни күп урын биләмәй, әммә һәр ҡайһыһы – үҙе бер донъя. «Устап Хәлфетдин» тураһындағы мәрәкә генә лә ни тора! «– Ултырып түгел, гүрендә ятып сыҙамаһын Уға шул кәрәк! – Бынығы һуғыш ваҡытында ҡыҙ көйө ғәйептән бала тапҡан һауынсы Мәрхәбә апай тауышы ине…» – тип йөпләп ҡуя яҙыусы ишетелер-ишетелмәҫ кенә. Йә булмаһа, Гөлбикәнең Аҫылғужа атлы ир ҡаршыһында бер аҙ йомшарып китеп, донъяһын онота биреберәк ҡуйған мәлде иҫкә төшөрәйек. Әсәһенең һәр хәрәкәтен иғтибар менән күҙәтеп тороусы Ғәлиәнең күңел ғазабы ҡайһылай зур оҫталыҡ һәм психологик нескәлек менән күрһәтелгән! «– Әсәй, мин һине гелән яратырмын, врачлыҡҡа уҡып сыҡһам, һиңә шундай дарыу уйлап табырмын: ҡартаймаҫһың да, әжәл дә яҡын юламаҫ… тик һин бер ҡайҙа ла китмә, йәме? – Был Ғәлиә тауышы». «Кешене белмәҫһең: әле илайҙар, әле, мәңгелек йәдкәрҙәй, тау түбәһенә менеп баҫалар…» тигән һығымта яһап ҡуя Айһылыу, әсә менән ҡыҙҙың һәйкәлдәй ғорур һәм матур һындарын күреп. Ә Сәйҙәгә өйләнергә йөрөгән избач Кәбирҙең характерын нисек сос тотоп алған үҫмер ҡыҙ: «Бар булмышынан, боҙлауыҡ яуған ҡарашынан һалҡын бәреп

торған кеүек». Һәм ул шулай булып сыға ла: ҡағылып-һуғылып йәшәүҙең сигенә еткән Сәйҙә, ирен ташлап, ферма йортона күсеп китә.

«Ҡарға бутҡаһы» байрамы үҙенең художество бирелеше менән дә иғтибарҙы йәлеп итерлек. Ул торғаны бер халыҡ ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларына ҡоролған. Моңло йыр тиһеңме, дәртле бейеү тиһеңме, уйын-көлкө тиһеңме, ҡапма-ҡаршы таҡмаҡтар әйтешеү тиһеңме – бөтәһе лә бар бында. Ғөмүмән, «Ҡарға бутҡаһы» байрамы ғына түгел, бөтә повесть бай һәм матур шиғри тел менән яҙылған. Әгәр маҡсат итеп ҡуйһаң, әҫәр биттәренән бик күп тапҡыр һүҙҙәр, әйтемдәр, мәҡәлдәр табып булыр ине. Бына шуларҙың ҡайһы берҙәре: «Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡаса»; «Эт эсенә һары май килешәме»; «Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала»; «Еңгәм сәнсә, мин тартам»; «Уңғандың ҡулы унау, егәрленеке етәү»; «Әсәйең үгәй булһа, атай еҙнәй була»; «Ҡатын бәхете ирҙән»; «Өмөтһөҙ – шайтан»; «Усаҡта ут янғанға күрә лә ерҙә тормош бара»; «Илдә сыпсыҡ үлмәй»; «Йылыға йылан да эйәләй»; «Күрәсәген күрмәй, әҙәм балаһы гүргә инмәй»; «Бишектәге бала бишкә төрләнә»; «Таяуға – терәү, йыртыҡҡа – ямау»; «Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй»; «Халыҡ төкөрһә, күл була». Был әйтемдәрҙең бәғзеләре повесть туҡымаһына халыҡ ауыҙ-тел ижады арсеналынан бер ниндәй үҙгәрешһеҙ килеп инһә, икенселәре иһә шул уҡ әйтемдәрҙең еңелсә вариацияларын тәшкил итә. Шуға ла уларҙы ҡәтғи группаларға бүлеп ҡарауы ла еңел түгел. Ә был иһә яҙыусының халыҡ ауыҙ-тел ижады байлыҡтарынан формаль рәүештә, үҙмаҡсат өсөн түгел, ә ижади файҙаланыуы тураһында һөйләй торғандыр.

Тағы ла шуны һыҙыҡ өҫтөнә алыу урынлы булыр: ауыҙ-тел традицияларына таяныу был әйтемдәргә генә ҡайтып ҡалмай. Әҫәрҙе халыҡ ижады стихияһына илтеп тоташтырыусы башҡа деталдәр ҙә бар бында. Әйтәйек, шул уҡ «Ҡарға бутҡаһы» байрамы. Йә булмаһа, Ирәндек атлы ырыу башлығына бәйле хикәйәт. Ә «Һөйөү ағасы», «Көмөш хәситә» тураһындағы риүәйәттәр ҡайһылай тәрән йөкмәткеле! Был эпизодтар әҫәрҙе тышҡы яҡтан биҙәп, уҡымлы итеү өсөн генә ҡулланылмаған, әлбиттә. Уларҙың һәр ҡайһыһы айырым идея нагрузкаһы менән һуғарылған һәм шуға ла сатнап күҙгә бәрелеп ятмай, бәлки, повестың органик өлөшө формаһында ҡабул ителә.

Әҫәрҙә Т. Ғарипованың поэтик табыштары ла етерлек. Шиғырса яңғыраған сағыштырыуҙар, афоризмға тороршай әйтемдәр, һутлы

эпитеттар, метафораға тартым алымдар, ынйы бөртөктәре һымаҡ йымылдап, китап биттәре буйлап сәселгән. Улар төрлө урында төрлө функция башҡара. Мәҫәлән, кешенең тышҡы ҡиәфәтен, уның эске кисерештәрен һәм психологик хәлен аңлатырҙай сағыштырыуҙар йыш осрай бында: «Аня йөҙөндәге йылмайыу байыған ҡояштан ҡалған шәфәҡ кеүек оҙаҡ һүрелмәй ятты»; «Күңел һыуынған бетон иҙмәһеләй шыҡырлап ҡатты»; «Йөрәк уҫаҡ япрағылай дерелдәй». Бер Ғәлиәнең генә лә портретын тыуҙырыу өсөн күпме эпитет һәм сағыштырыу ҡулланылған: «Балауыҙҙай йөҙөндә ике бөртөк ҡара күмерҙе хәтерләткән күҙҙәр»; «Бешкән муйылдай күҙҙәренең серле ҡарашы»; «Муйыл күҙҙәренең ялҡын ҡатыш һөрмәле һағышы» һ.б. Тәбиғәт күренештәре лә бик нескә тотоп алынған: «Ҡояштың тәүге нур уғы төн шаршауын йыртып та ебәрә»; «Сирень сәскәһе төҫлө көрәнһыу, шулар кеүек үк бөҙрә болоттар»; «Ҡыр-урмандарҙың япраҡ ялҡынында мейестәге тере ҡуҙҙай көйрәп-баҙрап ятҡан сағы». Метафораға ҡоролған сағыштырыуҙар ҙа етерлек: «Тупаҫ балта менән орҙом-бәрҙем генә сабып яһалғандай таш һынды хәтерләткән… апай»; «Ерҙең дә итәгенә ут төшкән»; «Нейлон йөрәктәрҙе тыштан ҡаплап ҡуйыр ҡорған»; «Йылмайыуы ташты иретерлек»; «Балталай ауыр һүҙҙәр»; «Күкрәген һалҡын тупраҡ баҫҡан дуҫымдың йәне һыҡтай…»; «Кеше ғүмере көмөш болотҡа әүерелде лә ергә ямғыр булып яуҙы». Ярым-шаярыу, ярым-ихлас формала яңғыраған тормош һабаҡтарын да байтаҡ алырға мөмкин: «Ҡыҙ күргәндә лә йыҙылдамаған күҙ – күҙ булмай инде ул, күҙ урынындағы биҙ генә була»; «Йырлай белеү генә түгел, йырҙы тыңлай белеү ҙә бер һөнәр». Ә былары инде йәшәү мәғәнәһе тураһында етди уйланыуҙар емеше: «Ҡояш – Ерҙәге тормоштоң йөрәге булһа, кеше – уның аңы»; «Май шәмеләй һыҙылып ҡына һүнгән был ғүмер»; «Кеше ғүмере лә Ҡояш кеүек: үҙ йылыһын, үҙ яҡтыһын Айға, Ергә, әҙәм-атҡа, урман-һыуға, кейек-януарға, сәскә-үләнгә өләшә-өләшә байый».

Бына шулай, яҙыусы, үткәндәрҙе ваҡыт хөкөмөнә тарттырып, уларға берсә героиняһы, берсә үҙ күҙлегенән ҡараш ташлап, фәлсәфәүи тәрәнлектәге һығымталар яһап ҡуя. Күләме яғынан әллә ни ҙур булмаһа ла, «Ай менән ҡояш бер генә»лә автор бик күп проблемаларға ҡағылып үтә. Әйтәйек, ни өсөн беҙҙең көндәлек тормошобоҙҙа әхләҡ нормалары ҡаҡшағандан-ҡаҡшай бара? Ҡомһоҙлоҡ, ғәмһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, намыҫһыҙлыҡ һәм башҡа шундай тиҫкәре сифат-тарҙың тәбиғәтен ҡайһылай аңларға? Ни өсөн тарҡалған ғаиләләрҙең

һаны артҡандан-арта бара? Эскесе ирҙәр ҡайҙан килеп сыға? Балаларын тәрбиәләүҙә әсәләр ниндәй урын тоторға тейеш? Ни өсөн әҙәм балаһы үҙен әйләндереп алған мөхиткә йыртҡыстарса ҡарай? Һәм ул ни өсөн ер йөҙөндә үҙ-ара тыныс һыйышып йәшәргә өйрәнмәгән?

Күреүебеҙсә, был проблемаларҙың барыһы ла бик актуаль, нәҡ бөгөнгөсә яңғырай. Әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһы ла повесть биттәрендә тәрән сағылыш тапҡан тип әйтеп булмай. Автор үҙ алдына ундай маҡсат та ҡуймаған. Әммә ләкин яуызлыҡтың төбө-тамырын юллауға бағышланған биттәр бер генә уҡыусыны ла битараф ҡалдырмаҫтар. Башлыҡтарының үҙ нәфсеһенә хужа булалмауы арҡаһында үлемгә дусар ителгән ырыу яҙмышы тураһында Айһылыуҙың атаһы һөйләгән хикәйәт, минеңсә, күп нәмәгә ишара яһай.

Айһылыуҙың атаһы тигәндән, повестың тағы бер үҙенсәлегенә күҙ ташлайыҡ әле. Персонаждар бында туранан-тура хәрәкәт итмәйҙәр, бәлки күберәк осраҡта Айһылыу аңы аша үткәрелеп биреләләр. Шуға ла уларҙың образы ҙур күләмле ғәҙәти сәсмә әҫәрҙәрҙәге һымаҡ бик иркенләп, йәйелеп китеп түгел, ә айырым деталдәр, сағыу штрихтар ярҙамында асыла. Мәҫәлән, Айһылыуҙың атаһы Хәтмулла беҙҙең күҙ алдына донъяның әсеһен дә, сөсөһөн дә татыған, йырға ла, һүҙгә ярайһы ғына оҫта, баш-аяғы менән колхоз эшенә бирелгән һәм шул эш тип ваҡытынан алда аяҡ һуҙған ир булып килеп баҫа. Әсәһе Саимә апай иһә баҫалҡы, һүҙгә йор булһа ла кеше күҙенә кереп бармаусан, ғүмер баҡый башын күтәрмәй эшләгән ауыл уҡытыусыһы булып хәтерҙә ҡала. Нәҫелдән килгән эскелек сире арҡаһында яҡты көндө ҡараңғы төнгә әйләндереп йәшәүсе избач Кәбирҙе һәм тормош мәшәҡәттәренә һис тә иҫе китмәгән, еңелелпе генә эш итергә күнеккән мелиоратор Тимурҙы ла бер-береһе менән бутарлыҡ түгел. Ә Айытҡолдоң әсе яҙмышын тасуирлаусы юлдар тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде. Шулай ҙа Т. Ғарипованың уңышы – ҡатын-ҡыҙ психологияһын сағыу асып биреүҙәлер. Дөрөҫ, ҡайһы бер саҡта тупаҫыраҡ яңғыраған урындар ҙа осрай. Ләкин, тура һүҙгә – яуап юҡ тигәндәй, хоҙай уларҙы үҙе шулай яратҡас, ни әйтмәк кәрәк.

«Ай менән ҡояш бер генә» үҙенең формаһы менән Т. Ғарипованың элегерәк яҙылған «Күгәрсен йыры» тигән хикәйәһен бик ныҡ хәтерләтә. Бәлки, әле һүҙ барған повесть тулыһы менән ошо хикәйәнән үҫеп сыҡҡандыр ҙа. Сөнки был ике әҫәр араһында стиль берҙәмлеге лә, образдар оҡшашлығы ла күҙгә бәрелеп ята. Хатта төп

героиняларҙың (Айһылыу менән Зәлифәнең) әсәләре лә бер үк исем менән аталғандар. Ә хикәйәнең художество кимәленә килгәндә иһә, ул «Ай менән ҡояш бер генә»нән һис тә ҡайтыш түгел: шундай уҡ бай һәм матур шиғри тел менән яҙылған; халыҡ һөйләменә хас тапҡыр һүҙҙәр ҙә етерлек; Зәлифәнең психологияһына ла, бала Айһылыуҙыҡына шикелле, ярайһы ғына тәрән үтеп инелгән.

Йыйынтыҡҡа тупланған хикәйәләрҙең иң отошлоһо – «Гамлет – принц Датский»ҙыр. Тәү ҡарашҡа ул исеме менән дә, сюжет ҡоролошо менән дә өҫтән-мөҫтән генә, еңел ҡулдан ғына яҙылған көләмәскә тартым. Юмор ҙа, ирония ла етерлек бында. Ләкин, ныҡлабыраҡ уйлап ҡараһаң, был әҫәрҙә лә тормош мәшәҡәттәре үҙенең бөтә ҡатлаулыҡтары һәм ҡапма-ҡаршылыҡтары менән нәҡ тормошса тотоп алынған бит. Эш бында илдә барған үҙгәртеп ҡороуға ҡағылышлы мәсьәләләрҙе күтәреүҙә генә лә түгел. Әгәр хикәйәнең бөтә асылы шуға ғына ҡайтып ҡалһа, ул конъюнктурщинанан ары китә алмаҫ ине. Иң мөһиме – бер ғаилә, уның көндәлек мәшәҡәттәре миҫалында йәшәү мәлендәге ҡатмарлы процестарҙың кескәй генә булһа ла бер өлөшөн үҙенә күрә психологик нескәлек менән күрһәтергә тырышыуҙалыр. Был йәһәттән хикәйәнең һуңғы юлдары айырыуса ҙур тәьҫир ҡалдыра. Ғаилә башлығы Ғәндәлип-Гамлет, бик күп уйланыуҙарҙан, тәрән эске кисерештәрҙән һуң алдашыу, күҙ буяу, урлашыу кеүек тиҫкәре күренештәргә ҡаршы дәррәү күтәрелеп сығырға йыйынып бөткәс кенә, уның алдына дилемма килеп баҫа: дөрөҫлөктө ярып һалып, ҡыҙының бәхетенә аяҡ салырғамы, әллә бөтәһенә лә ҡул һелтәргәме?

«Ярҙағы усаҡтар» хикәйәһе лә фәһемле генә. Унда ла һүҙ күберәк кеше яҙмышы тураһында бара. Ҡотлобикә образын тыуҙырып, яҙыусы тормошто бөтөнләй көтмәгән яғынан тотоп алған. Тик әҫәр, материалға бик бай булғанлыҡтанмы, бер нисә хикәйәнән торған һымаҡ тойола. Ә был инде композиция йомшаҡлығынан килә торғандыр.

Йыйынтыҡты «Аҡ ҡалас», «Осона сыға алмайым бер уйҙың…», «Бал тип үрелгәнем…» тигән хикәйәләр теүәлләп ҡуя. Күләмдәре яғынан улар әллә ни ҙур түгелдәр, формалары менән иһә ниндәйҙер ғибрәтле хәл тураһында һөйләүгә ҡоролғандар. Ләкин, авторҙың әйтергә теләгән фекерҙәре уҡыусыла бер ниндәй ҙә икеләнеү уятмаһа ла, был хикәйәләр ашыҡ-бошоғораҡ эшләнгәнгә оҡшап торалар. Сөнки ана шул фекерҙәр хикәйәләү барышында тәбиғи рәүештә

тыуаһы урынға, автор уларҙы әҫәр аҙағында үҙе әйтеп бирә. Һәм шунлыҡтан аҡыл бүлешеүгә тартып ҡуя. «Осона сыға алмайым бер уйҙың…» хикәйәһендә был хәл бигерәк тә ныҡ күҙгә ташлана. Ул публицистик стилгә яҡын риторик һорау менән тамамлана.

Әммә йыйынтыҡтың йөҙөн был хикәйәләр түгел, ә «Ай менән ҡояш бер генә» повесы билдәләй. Ул повесть тураһындағы ҡайһы бер фекерҙәребеҙҙе юғарыла әйттек инде. Хәҙер иһә Т. Ғарипованы ҙур күләмле тәүге әҫәре менән ҡотлап, уға ижадында яңы уңыштар теләйһе генә ҡала.

1992

ТОРМОШ һАБАҡТАРЫ һӘМ ӘҘӘБИӘТ

Күренекле ғалим, әҙәбиәт белгесе Ғайса Хөсәйеновтың ижад алымы күп яҡлы. Илленсе йылдар уртаһында, ғилем донъяһының мәшһүр ҡапҡаларын шар асып, уның мәрмәр баҫҡыстары буйлап киң аҙымдар менән үргә атлай башлағас, ул рустың бөйөк тәнҡитсеһе В.Г. Белинский өлгөһөндә башҡорт әҙәби процесына йыллыҡ күҙәтеүҙәр яһап, замандаштарын шаҡ ҡатырғайны. Унан һуң айырым яҙыусыларҙың тормош һәм ижад юлдарын байҡаған монографиялар бер-бер артлы теҙелеп китте. Уларға башҡорт әҙәбиәтенең тарихын һәм бөгөнгөһөн тикшереүгә арналған күләмле мәҡәләләр ялғанды. Ваҡыты еткәс, ул мәҡәләләр ҡалын-ҡалын китаптарға уҡмашты. Эш араһында ғына булһа ла әҙәби портреттар ҙа тыуа торҙо. Әҙәбиәтебеҙ тарихы буйынса яҙылған фундаменталь хеҙмәттәрҙе әҙерләүҙә лә активҡатнашты ул, дөрөҫөрәге – уларҙы ойоштороусы һәм редакторлаусы булды. Әгәр һанай китһәң, тағы ла байтаҡ нәмәләр иҫкә төшөр ине. Ләкин маҡсат ул түгел.

Етмешенсе йылдар башында, булһа кәрәк, «Ағиҙел» журналы биттәрендә Ғ. Хөсәйеновтың әҙәбиәт мәсьәләләреһенә ҡағылышлы, тик әҙәби тәнҡиттең традицион формаларынан айырылыбыраҡ торған мәҡәләләре күренгеләп ҡалды. Ғалим был өлкәләге эҙләнеүҙәрен артабан да дауам итте. Һәм, шуның һөҙөмтәһе булараҡ, беҙҙең милли ерлегебеҙҙә өр-яңыса яңғыраған әҙәби әңгәмә, әҙәби парса, ижад психологияһы, псевдонимдар тибындағы уйланыуҙар һәм күҙәтеүҙәр үҫеп сыҡты. Уларҙың ҡайһы берҙәре авторҙың «Заман. Әҙәбиәт. Әҙип» (1978), бәғзеләре иһә «Замана» (1988) китаптарына инеп китте. Ә бөгөн беҙҙең алдыбыҙҙа Ғ. Хөсәйеновтың тағы ла бер яңы китабы – ул «Тормош» тип атала. Уның «Парсалар» тигән өҫтәмә атамаһы ла бар. Китап «Тамсылар», «Тарих», «Тыуған яҡ», «Кеше», «Туған тел», «Ғүмер», «Мөхәббәт», «Ижад», «Аҡыл. Ғилем» тигән бүлектәрҙән тора. Тәү ҡарамаҡҡа былардың әҙәбиәт ғилеменә әллә ни ҡатнашы ла юҡ һымаҡ. Әммә уларҙы иғтибар менәнерәк уҡый башлаһаң, һүҙ әлеге лә баяғы шул әҙәбиәт тирәһендә бара ла баһа. Хәйер, быны автор үҙе лә инҡар итмәй һымаҡ. «Күп йылдар буйы, – тип яҙа ул уҡыусыға арналған мөрәжәғәтендә, – мин ҡуйын дәфтәрҙәре алып барам. Унда күргән, ишеткән белгән, уҡыған саҡтарҙа

тыуған уйҙарҙы, күҙәтеүҙәремде, төрлө ҡараштарымды теркәштерәм. Шулар хәҙер үҙенә бер тормош яҙмаһы рәүешле ойошмаҡсы. Ул асылы менән донъя, тормош. Тәбиғәт, кешеләр, әҙәбиәт, сәнғәт, фән хаҡындағы уйланыуҙарҙан ғибәрәт». Тик өҫтәп шуны әйтергә мөмкин булыр ине: донъя, тормош, тәбиғәт, кеше тураһында уйланғанда ла автор барыбер әҙәбиәт белгесе булып ҡала бирә, был глобаль категорияларға әҙәбиәт күҙлегенән ҡарап эш итә. «Тормош» китабын мин хатта «ғәҙәти булмаған әҙәбиәт тарихы һәм теорияһы фәне» тип атар инем. Сөнки унда әҙәбиәт ғилеменә хас ҡатмарлы, уратып-солғатып әйтелә торған фекерҙәр ҙә ябай, ҙә лә мауыҡтырғыс итеп бирелгән. Шуға ла был китапты уҡыусылар даирәһе ғәйәт киң булыр, уны әҙәбиәт белгестәре лә, ябай китап уҡыусылар ҙа берҙәй яратып, берҙәй бирелеп уҡырҙар тип уйлайым мин. Юл уңайында тағы шуны ла әйтеү урынлы булыр: Ғ. Хөсәйеновтың әҙәбиәт тарихы һәм теорияһы мәсьәләләренә арналған махсус ғилми хеҙмәттәре лә яһалма төйөндәр, уйҙырма фекерҙәр менән башты ҡатырмай, юғиһә.

Ғалимдың яңы китабы тураһында төп һүҙҙе «Ижад» бүлексәһенән башлайыҡ. Ул күләме яғынан да айырылып тора, шулай уҡ үрҙә ҡулланылған «ғәҙәти булмаған фән» төшөнсәһен раҫлаусы миҫал да булырлыҡ.

Билдәле, күп милләтле совет халҡының борон-боронан килгән ауыҙ-тел ижады тураһында хәҙер байтаҡ монографиялар, дәреслектәр, уҡыу әсбаптары, хатта том-том тикшеренеүҙәр яҙылған. Шул иҫәптән, башҡорт халҡыныҡы тураһында ла. Һүҙ юҡ, былар бөтәһе лә кәрәк нәмә, бөтәһе лә изге эш. Сөнки ҡайһы ғына халыҡтың бөгөнгө яҙма әҙәбиәтен алып ҡараһаҡ та, ул үҙенең тыуыуы, формалашыуы һәм эстетик берәмек булып китеүе менән тәү башлап шул ауыҙ-тел ижадына бурыслы бит. Әммә шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: эштән арып ҡайтҡан ябай уҡыусының был ҡалын-ҡалын китаптарҙы аҡтарып ултырырға ваҡыты ла, хәжәте лә юҡ. Өҫтәүенә, ул етди ғилми хеҙмәттәр һәр ваҡыт ҡул аҫтында ла ятмай. Бына ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, Ғ. Хөсәйеновтың «Тормош»о ғәйәт үтемле китап та инде. Әлеге иң күләмлеһе тип әйтелгән бүлексә нәҡ ана шул ауыҙ-тел ижадына ҡағылышлы тема – йыр хаҡындағы әңгәмә менән башланып китә. Әгәр махсус ғилми хеҙмәттәрҙә соҡсона башлаһаҡ, ауыҙ-тел ижадының иң киң таралған был жанры тураһында бик күп мәғлүмәттәр йыйырға, бер-береһенән әллә ни йыраҡ китмәгән төрлө-төрлө ҡәтғи атамалар менән осрашырға мөмкин булыр ине. Ә бына

Ғ. Хөсәйенов ошо яраһы ғына ҡатмарлы фәнни категория хаҡындағы үҙ фекерен ябай, бөтә кешегә лә аңлайышлы, популяр формала һөйләп бирә. Жанрҙың асылын билгеләп, мәҫәлән, ул былай ти: «Йыр – ул күңел моңо». Унан һуң жанрҙың төрҙәренә, уларҙың яралыу һәм таралыу тарихына күҙ ташлай; һырға туйы тыуҙырған йырҙарға туҡталып, был йоланың ысын мәғәнәһен асып бирә. «Таштуғай», «Ашҡаҙар», «Зөлхизә», «Буранбай» ише атаҡлы йырҙар тураһында һүҙ барғанда ғалим-яҙыусы уларҙың тормоштоң үҙенән үҫеп сығыуына, тормош ғәҙәлһеҙлектәренең тәбиғи бер сағылышы булыуына баҫым яһап әйтә, һәм ошо йырҙарға бәйле легендаларҙы ул хаҡлы рәүештә «яҙылмаған тарих» тип атай. Ә Бейеш батыр, Ғәҙебәк Насыр батыр, Әлмөхәмәт, Абдулла, Ҡаһарман кантондар эшмәкәрлеген сағылдырған йырҙарҙың социаль тамырҙарын юллап, уларҙа тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙы ентекләп барлап сыҡҡандан һуң автор бындай һөҙөмтәгә килә: «Халыҡ үҙенең уҫал түрәләренән, кантондарынан үсен алырға ҡулы менән баҙнат итә алмағанда… теле менән үсен ҡайтарған. Тел яраһы ҡылыс яраһынан хәтәрерәк булған. Шуға бер кемдән ҡурҡмаҫ уҫал кантондар ҙа йырҙарҙан ҡурҡыр булған». Башҡорт моңоноң бүтән халыҡтар күңеленә үтеп инеүен күрһәткән («Цицернак»), йыр жанрының иҫ киткес киң мөмкинлектәргә эйә булыуын дәлилләгән («Романдарға торошло»), уның бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанаҡтарын асыҡлаған («Милли уйындар», «Төртмә таҡмаҡтар», «Ҡыуғынсылар янында», «Йәдкәр дәфтәре», «Тәбиғәттән», «Тормоштан») хикәйәттәр менән дә танышыр уҡыусы был бүлексәлә, поэзияның ер йөҙөндә тотҡан урынын һәм әҙәми заттың көндәлек тормошонда уйнаған ролен билгеләүсе ғәжәп ябай һәм шул уҡ ваҡытта тәрән мәғәнәле тапҡыр фразалар ҙа иғтибарһыҙ ҡалмаҫ.

Йыр-шиғриәт стихияһынан Ғ. Хөсәйенов китап донъяһына инеп китә һәм, «ғилем башы китапта икән, китап башы – яҙылмыштарында» тигән тезисты үҫтереп, «яҙылмыш китап – яҙма тарихыбыҙҙың, әҙәбиәтебеҙҙең башы» тигән ныҡлы ҡарарға килә. Артабан ғалим «Йософ китабы»ның яҙылыу тарихына бәйле легенданы һөйләп таныштыра, башҡорт баҫма китабының тәүге аҙымдарына күҙ ташлай, объектив һәм субъектив сәбәптәр (тел һәм шрифт барьеры) арҡаһында күп кенә иҫке баҫмаларҙың фән офоҡтарынан һаман да ситтә ҡала килеүенә йәне әсенеүен белдерә. Ошонда уҡ китап, баҫма һүҙ тураһында байтаҡ ҡына тапҡыр һәм аҡыллы фекерҙәр тупланған, Башҡортостандың тарихын, культураһын, этнографияһын өйрәнеүгә

тос өлөш индергән прогрессив рус ғалимдары һәм уларҙың хеҙмәттәре тураһында ҡиммәтле белешмәләр килтерелә.

Был бүлексәлә шулай уҡ әҙәбиәттең йәшәү формаларына ҡағылышлы күҙәтеүҙәргә, китап уҡыусының зауығы һәм рухи донъяһы тураһында уйланыуҙарға, фән һәм әҙәбиәт араһындағы үҙ-ара бәйләнештәрҙе һәм мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауға ла урын бирелгән. Был күренештәрҙе кәүҙәләндереү өсөн автор төрлө алымдар ҡулланған: ҡуйын дәфтәренән килтерелгән ҡыҫҡа-ҡыҫҡа өҙөктәр; китап уҡыусылар бәхәсе; техник ғалим, яҙыусы, автор диспуты һ.б. Ижад серҙәренә, уның эске пружиналарына бәйле әңгәмәләр иғтибарҙы айырыуса йәлеп итерлек. Улар, үрҙә әйтелгәнсә, мауыҡтырғыс итеп, нәҡ «ғәҙәти булмаған фән»сә яҙылғандар. Әйтәйек, факт һәм хыял, эске моң, сюжет, ҡаймалы композиция, әҙәби саралар, әҙәби деталь, әҙәби тәнҡит тураһындағы төшөнсәләрҙе әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә махсус әҙерлектәре булмаған кешеләр ҙә еңел аңларҙар һәм матур әҙәбиәт донъяһына тағы ла нығыраҡ һәм активыраҡ тартылырҙар тип уйлайым мин.

Әйткәндәй, Ғ. Хөсәйенов фән һәм әҙәбиәт араһындағы үҙ-ара бәйләнештәрҙе һәм мөнәсәбәттәрҙе асыҡлау менән генә сикләнмәй – күпмелер кимәлдә ул үҙе лә тарихсы һәм археограф ролендә сығыш яһай. Китаптың «Тарих» тигән бүлексәһендә, мәҫәлән, ул башҡорт халҡының «йәше»нә, уның «биографияһы»на, әҙәбиәте һәм мәҙәниәте сығанаҡтарына бәйле шаҡтай ҡыҙыҡлы фактлар һәм мәғлүмәттәр килтерә. Дөрөҫ, автор, һәр ваҡыттағыса, баҫалҡылыҡ күрһәтеп, үҙенең бурыстарын һиҙелерлек сикләй. «Мин, – ти ул, – үҙемдең был кескәй яҙмаларымда айырым күренештәр хаҡында ғына һөйләйем, ҡайһы бер ҡараштарым менән уртаҡлашам, үҙемсә фараз ҡылам. Парса жанрында. Парса ул – бары тамсы. Тамсыларҙан киләсәктә, бәлки, яйлап күл йыйылыр. Уларҙы әлегә алдағы хыял». Ысынында иһә Ваҡыт һәм Хәтер, халыҡ тарихы, башҡорт этнонимы һымаҡ фәнни төшөнсәләр тураһында тапҡыр һүҙ менән әйтелгән үҙенсәлекле һәм афористик фекерҙәр яңғырай был бүлексәлә. Таштағы яҙыуҙар, биләрҙәр, илсе Ибн Фаҙлан, Шишмә районында һаҡланған кәшәнә-мавзолейҙар, тамға аҡсалар һәм башҡа шуның кеүек хикмәтле сәхифәләрҙе аҡтарып сыҡҡандан һуң, автор үҙенең ҡуйын дәфтәренә бындай һүҙҙәрҙе төртөп ҡуя: «Тарих – ул үҙе ҡан-йән менән яҙылған ысын роман, быуаттар хәкиәте. Тарихлы халыҡ – ул бәхетле халыҡ. Ул шул тарихи үткәнен һаҡлауы, ирек,

бәхет өсөн көрәшеүсе улдарын ололауы, онотмауы менән бәхетле». Һәм, ошо тезисты ҡеүәтләгәндәй, башҡорт халҡы араһынан үҫеп сыҡҡан ҡайһы бер шәхестәрҙең яҙмышына туҡталып уҙа («Батыр шағир Мөжәй», «Панфиловсы комиссар», «Ун разведчик – ун герой», «Меңдәрҙән берәү», «Ғүмер йәл булмаҫ» хикәйәттәре).

«Тарих» бүлексәһен уҡығанда ирекһеҙҙән боронғо рус әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен тикшереүгә һәм өйрәнеүгә бағышланған фәнни хеҙмәттәр һәм уларҙың авторҙары иҫкә килеп төштө. Иң беренсе сиратта – бөгөнгө уҡыусыға киң билдәле академик Д.С. Лихачев, әлбиттә. Уның, әйтәйек, «X–XVII быуаттарҙа рус әҙәбиәтенең үҫеше. Эпохалар һәм стилдәр», «Боронғо рус әҙәбиәтенең поэтикаһы», «Бөйөк мираҫ. Боронғо рус әҙәбиәтенең классик әҫәрҙәре», «Боронғо руста көлөү», «Боронғо рус әҙәбиәтендә кеше» тигән хеҙмәттәре. Тағы ла боронғо рус яҙмаһының «Повесть временных лет» тип аталған иң бөйөк ҡомартҡыһы һәм уны өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән А. Шахматов, В. Истрин, В. Адрианова-Перетц, Б. Рыбаков исемдәре. Баҡһаң, беҙҙең яҡташыбыҙ Ғ. Хөсәйеновтың да ошо ғалимдарҙың традицияларын башҡорт ерлегендә үҫтереп ебәрергә тырышып ятҡан көнө икән дә баһа, һәм ул үҙенең ҡәләмдәштәрен шуға өндәй ҙә һымаҡ. «Башҡортостандың тулы тарихын яҙа алыр үҙ Карамзиндары тиҙерәк тыуһа икән» тигән уфтаныу ҡатыш ышаныс та белдереп ҡуя. Быға өҫтәп, башҡорттоң үҙ Соловьевтары һәм үҙ Ключевскийҙары ла булһын ине тип әйтке килә.

«Кеше» бүлексәһе лә уҡыусыны битараф ҡалдырмаҫ тип уйлайым. Бында Ғ. Хөсәйенов үҙен һис көтмәгән яҡтан – философ, педагог һәм психолог итеп күрһәтә. Сөнки бында ул ошо төр белгестәрҙең һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә торған төп объектты – Кешене күҙәтеүгә алған һәм уның асылы, булмышы, яҙмышы, тереклек донъяһында тотҡан урыны тураһында баш вата. «Кем ул кеше? Нисек яралған, ҡайһылай камиллашҡан? Нимәгә ул шунса ҡатмарлы һәм аңлап бөтмәҫлек?» Ошондай һәм шуға оҡшашлы башҡа һорауҙар тынғылыҡ бирмәй әҙиптең былай ҙа тынғы белмәгән һиҙгер йөрәгенә.

Һис көтмәгән яҡтан тип әйтеү, бәлки, бик үк дөрөҫ тә булып бөтмәҫ. Ни өсөн тигәндә, әҙәбиәт һәм сәнғәт ифрат бай, күп яҡлы тормошто бөтөнләйе менән үҙ эсенә алып, уны сағыу картиналарҙа һәм тулы ҡанлы образдарҙа яҡтыртҡан һымаҡ, шул өлкәлә эшләүсе ғалимдар ҙа бер үк ваҡытта художник та, философ та, политолог та, экономист та, тарихсы ла, педагог та, психолог та булырға мәжбүр.

Ғ. Хөсәйеновтың әле һүҙ барған бүлексәгә ингән «Ҡуйын дәфтәренән», «Бөйөк зат», «Сер йомғағы», «Кем хужа?», «Прометей», «Кеше үҙ-үҙенә лә сер», «Беләбеҙме?», «Төшөнөр төшөнсәләр», «Хәтер», «Төрлөлөк берлеге» ише парсалары нәҡ ана шул турала һөйләйҙәр ҙә инде.

Әммә был бүлексәлә уҡыусыны иң ныҡ тәьҫирләндергәне, шул уҡ ваҡытта уны иң ныҡ борсоғаны ла әҙәп-әхлаҡ принциптарына, кешеләр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр һәм мөғәмәләләргә, хәҡиҡәт, изгелек һәм гүзәллек, ышаныс, өмөт һәм мөхәббәт, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, хаҡлыҡ һәм хаҡһыҙлыҡ, намыҫ һәм намыҫһыҙлыҡ, ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек, кешелеклелек һәм миһырбанһыҙлыҡ төшөнсәләренә бәйле яҙмаларҙыр, моғайын. «Әҙәбиәттә һәм сәнғәттә, – тип билдәләй ғалим ошо төшөнсәләр тураһында уйланып, – кире геройҙар ыңғай геройҙарға ҡарағанда йыш ҡына теремегерәк, шәберәк килеп сыға. Ниңә ул шулай? Әллә һәйбәт кешеләр аламаларға ҡарағанда донъяла аҙыраҡмы? Әллә һәйбәттәрҙе үҙебеҙ тейешенсә күреп етмәйбеҙме? Әллә һүрәтләү оҫталығы самалыраҡмы? Һуңғыһы дөрөҫөрәктер, моғайын. Унан, һәйбәт кешеләр, тиҫкәре-аламалары менән сағыштырғанда, күҙгә әллә ни салынып та бармайҙар. Барыһы тәбиғи, тыныс башҡарыла. Яҡшылыҡ бик һөрәнләп бармай». Ә бына быныһы инде торғаны бер тормош философияһы, кешемен тигән йән эйәһенә аҡыллы киҫәтеү ҙә, шифалы дарыу ҙа: «Әҙәмгә, әлбиттә, ҡайсаҡ йән тыныслығы кәрәк. Тик ул, үҙен тыныслайым тип, донъяның тейешле шау-шыуынан, ҡайғы-шатлыҡтарынан, төрлө кисерештәренән бөтөнләй мәхрүм ҡала күрмәһен. Ул саҡта ҡолағы һау булһа ла – һаңғырау, күҙе күрһә лә – һуҡыр, йөрәге типһә лә – кисерешһеҙ, моңһоҙ бер мәхлүккә әйләнмәгәйе».

Был киҫәтеү-ярлығауға әҙәм балаһына хас була торған әшәкелек, булдыҡһыҙлыҡ, көнсөллөк, хөсөтлөк, ҡуштанлыҡ, рухи ҡоллоҡ, яһалмалылыҡ, ҡылансыҡлыҡ, мещанлыҡ, боҙоҡ нәфселек, енси азғынлыҡ, ике йөҙлөлөк һәм башҡа шундай тиҫкәре сифаттар тураһында уйланыуҙар килеп ялғана. Тапҡыр һүҙ менән әйтелгән был афористик фекерҙәрҙә күпме фәһем, аң-белем, тәрән мәғәнә йәшеренеп ята! Уға ышаныу өсөн бер нисә миҫал килтереү ҙә етә: «Актерлыҡ һәләте сәхнә өсөн һәйбәт. Тормош сәхнә түгел»; «Көнсөлдәрҙең аҡылы ҡыҫҡа булһа ла, ҡулы һәм теле оҙон»; «Көнсөлдәрҙең һәләте булмаһа ла, һәләтлеләрҙе һәләк итергә һәләттәре табыла»; «Һүҙ һәләте юҡ, әммә ҡайһылай лығырҙай»;

«Моңо, тауышы юҡ, әммә ауыҙын ҡайһылай ҙур аса»; «Һәнәк тоторға һәләте юҡ, әммә һәнәк хаҡында һүҙ ҡуйырта»; «Туғыҙ башлы йыландан ҡурҡма, ике йөҙлө юханан ҡурҡ»; «Ике йөҙлө алдында ашыңды ашар, артыңда башыңды ашар»; «Ике йөҙлөнөң бер бите яна, бер бите туңа. Уның теле майҙай, күҙе тоҙҙай, күңеле боҙҙай»; «Иң яман кеше лә үҙенең алама ҡылығына һылтау эҙләй»; «Нимә һирәк осрай? Кешелеклелеген һаҡлаған ҙур түрә».

Ошо пландағы күҙәтеүҙәрҙе, уйланыуҙарҙы һәм бәхәстәрҙе Ғ. Хөсәйенов «Туған тел», «Ғүмер» бүлексәләрендә лә дауам итә. Хатта тел тураһында, уның эске законлылыҡтары хаҡында һүҙ барғанда ла, ул үҙенең филологлығын бер аҙға онота тороп (аңлы рәүештә, әлбиттә!), иғтибарын күберәк мәсьәләнең философик аспекттарын асыҡлауға йүнәлтә. Башҡорт әҙәби теленең бөгөнгө торошона, уның ҡулланылышына күҙ ташлап, автор, ҡайһы бер саҡта рухи хазинаға һаҡһыҙ ҡарағандары өсөн, яҙыусылар һәм ошо телдә аралашып көн күргән кешеләр адресына үҙенең үпкәһен дә белдереп ҡуя. Лингвистар ҡолаҡ һалырлыҡ күҙәтеүҙәр ҙә бар был бүлексәлә. Китаптың башҡа бүлексәләрендәге кеүек, бында ла телгә арналған бик күп тапҡыр һүҙҙәр табырға мөмкин булыр ине («Теле барҙың иле бар, иле барҙың даны бар»; «Тел – ул халыҡтың мәңге тере тарихы»; «Теленә хужа – үҙенә хужа»; «Остазың маҡтаһа, түбәң күктәргә тейә»; «Һүҙе яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур»; «Кешене үҙенә ҡарап ҡаршылайҙар, һүҙенә ҡарап оҙаталар» һ.б.). Әммә әйтергә теләгән фекер башҡа: Ғ. Хөсәйенов лингвистика өлкәһендә лә киң ҡарашлы, үткер күҙле ғалим булып ҡала. Күп йылдар йәшәп, ижад теле юғарылығынаса күтәрелгән башҡорт әҙәби телен тар ҡалыпҡа бикләмәҫкә, киреһенсә, айырым диалекталь һүҙҙәр иҫәбенә уның лексик йөкмәткеһен өҙлөкһөҙ байытып торорға саҡыра ул. Һәм ошо өлкәлә ҡыйыу аҙымдар яһаусы кеше – Ғ. Хөсәйенов үҙе тип әйтер инем мин. Яҙыусыларға мөрәжәғәт итеп, юҡҡа ғына бит ул бына былай тип әйтмәй: «Һүҙ сәнғәте темалар, геройҙар ҡабатланыуын ғына түгел, һүҙ-стиль ҡалыплашыуын, шымарып бөтөүен һис хуп күрмәй. Йыш елләтәһегеҙме ижад биналарығыҙҙы, һүҙ оҫталары?» Эйе шул: шишмә һыуы кеүек саф, ҡурай моңо кеүек йырлап торған телебеҙҙең бөтә кешелек донъяһы өсөн уртаҡ хазиналар иҫәбенә тағы ла байып, ҡеүәтле симфонияға әйләнеүенә ни етә !

«Ғүмер» бүлексәһендә иһә ғалим-яҙыусы ғаләм киңлектәренә, йыһан серҙәренә, донъяның өҙлөкһөҙ үҙгәреп тороуына, быуындар

бәйләнешенә, йәшәү хикмәтенә, тормош ығы-зығыһына, йәшлек һәм ҡартлыҡ, йәшәү һәм үлем, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ төшөнсәләренә бәйле уйланыуҙарын дауам итә. «Нимә һуң ул тормош? Донъя үҙе ҡасан, нисек яралған? Кешелектең үткән юлы нисегерәк? Кеше үҙе кем? Кешене, донъяның үҙен аҙағына саҡлы төшөнөп етергә мөмкинме?» Был һорауҙарға яуап эҙләп, автор төрлө әҙәби сараларға мөрәжәғәт итә. Әйтәйек, Хызыр Ильяс хикәйәте, геронтолог менән әңгәмә, елғыуар менән көнғыуар араһындағы диалог, сәсәндәр әйтеше, әжәл менән әҙәм хаҡында философтар фекере һәм әҙиптәр диспуты, социолог менән дин әһеле бәхәсе, әжәл тураһында риүәйәт һ.б.

Әҙәби саралар тигәндән, шуларҙың береһенә аҙ ғына булһа ла туҡталайыҡ әле. Әле һүҙ барған китаптың бөтә бүлексәләрендә лә «Ҡуйын дәфтәренән» алынған парсалар килтерелә. Ҡайһы берҙәрендә ул хатта икешәр-өсәр тапҡыр ҡабатлана. Минеңсә, был һис тә юҡтан түгел. Күңел дәфтәрҙәре «Тормош»то бер епкә бәйләп тороусы үҙәк көс ролен уйнай. Өҫтәүенә, улар авторҙың «тел төбөн» аңларға, уның теге йәки был мәсьәләгә ҡарашын, позицияһын асыҡларға ярҙам итеүсе бер сара ла булып тора.

«Аҡыл. Ғилем» бүлексәһендәге ҡуйын дәфтәрендә, мәҫәлән, Ғ. Хөсәйенов Боронғо Көнсығыш философтарынан башлап, урта быуат аҡыл эйәләре аша хәҙерге осорғаса күҙ ташлай һәм айырым тезистар формаһында үҙенең ҡыҙыҡлы ғына фекерҙәре менән уртаҡлаша. Әйтәйек, үҙеңәмге ҡаҙаныштарға, ғилем нигеҙҙәренә мөнәсәбәт ниндәй булырға тейеш? Яңы концепциялар нисек тыуа һәм фән өлкәһендәге асыштар нисек яһала? Фәнни хеҙмәттең асылы нимәнән ғибәрәт? Ни өсөн ҡоро сүлдә орлоҡ шытым бирмәүсән? Уйлаған кешегә былар бөтәһе лә – аҙыҡ, әлбиттә.

Йә бына «Тыуған яҡ» бүлексәһенә иғтибар итәйек. Унда авторҙың ҡуйын дәфтәре ни бары ярты биттән тора. Ләкин йөкмәткеһе, фекер тослоғо менән ул башҡа бүлексәләгеләрҙән һис тә ҡайтыш түгел. «Тыуған илде һөйөү, – тип йомғаҡлай ғалим-яҙыусы был дәфтәрен, – һәр кемдең мөҡәддәс тойғоһо. Әммә шул уҡ ваҡытта Тыуған илең дә һине һөйһөн. Шунда ғына был тойғо ғәмәлгә ашҡан изге тойғо буласаҡ. Тимәк, кеше илен һөйөүен эше менән аҡлап, Тыуған иленең һөйөүенә лайыҡ булһын тигән һүҙ».

Тыуған илеңдең һөйөүенә лайыҡ булыу! Бындай һүҙ бәйләнешен ишеткән юҡ ине әле. Бәлки шуғалыр ҙа тәүҙә ул сәйерерәк яңғырағандай тойола. Сөнки, ни тиһәң дә, беҙ «һөйөргә, яратырға»

ғына күнеккәнбеҙ бит. Күп осраҡта ул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шалтырап торған ҡоро һүҙ генә булып та ҡала килде. Ә бына шул һөйөүҙе, яратыуҙы эш менән аҡлау тураһында әҙерәк уйланылды һымаҡ. Ысынлап та, илеңдең һөйөүенә ирешеү – ниндәй ҙур байлыҡ һәм бәхет! Әгәр шуға ирешелгән булһа, йәшеү юлында ныҡышмалыҡ күрһәтелгән булһа, бөгөн беҙҙең арабыҙҙа елғыуарҙар ҙа, баштарын иҫереклеккә һалғандар ҙа, мафиозиҙар ҙа артҡандан-арта бармаҫ ине, бәлки. Тыуып үҫкән ерен, йорт-илен ташлап, морондарын сит яҡтарға бороусылар йәки шуға ынтылыусылар һаны ла бермә-бер кәмемәҫ инеме икән?

Автор позицияһын тулыраҡ итеп яҡтыртырҙай тағы ла бер алым уңышлы файҙаланылған «Тормош»та – уҡыусы менән аңғәмә, бәхәс. Дөрөҫ, был форма тегеһе һымаҡ йыш осрамай, әммә булған ҡаҙәреһе лә хушландырырлыҡ. Миҫал өсөн баш һүҙ урынына тороpлоҡ «Тамсылар» бүлексәһендәге шундай аңғәмәгә туҡталайыҡ әле. Тәүҙә үк шуны һыҙыҡ өҫтөнә алыу урынлы булыр: автор бында уҡыусыны аңғәмәгә үҙе йәлеп итә һәм улар араһында китаптың инеш өлөшө тураһында ла, алдағы өлөштәре хаҡында ла үҙенсәлекле генә һөйләшеү булып ала. Әйтәйек, уҡыусыға китап үҙенең йөкмәткеһе менән дә, формаһы менән дә нисектер сыбар һымаҡ тойола икән, автор уның алдында һис тә аҡланыу юлын эҙләмәй. «Йөкмәткеһе тормоштоң үҙе кеүек, төрлө-төрлө, формаһы ла шулай», – тип яуап бирә ул. Фекерен дауам итеп һәм уны артабан үҫтереп, автор бындай һөҙөмтәгә килә: «Тормош үҙе лә бит роман, повесть, пьеса түгел. Минең аңлауымса, тормош – ул кешенең йәшәүе, донъя көтөүе, шуны аңларға, белергә тырышыуы ла, төрлө мөнәсәбәттәр, бар булмыш та.

Уйланыуҙар, кисерештәр, һөйләшеүҙәр, аңғәмәләр, белеү-белмәүҙәр – барыһы бергә. Әҙәбиәтсәләп әйтһәк, тормош – ул, гүйә, жанрҙар берләшмәһе». Парсалар, хикәйәттәр, ҡыҫҡа яҙмалар формаһын һайлауының сәбәбен иһә ул аҙ һүҙгә тоҫораҡ мәғәнә һалырға, уй-фекерҙе айырыбыраҡ әйтергә ынтылыу менән аңлата һәм «яҙыусы тасуирлаусы ғына түгел, фекер эйәһе лә» тип баҫым яһап әйтә. Шулай итеп, был аңғәмә ғалим-яҙыусының уҡыусы иғтибарына тәҡдим итергә йыйынған яңы китабының асылын һәм айышын аңларға ярҙам итерҙәй үҙенсәлекле бер асҡыс ролен үтәй.

Ғ. Хөсәйеновтың «Тормош» китабы тураһындағы күҙәтеүҙәрҙе һәм уй-фекерҙәрҙе әллә ни тиклем дауам итергә булыр ине. Сөнки уның һәр бите, һәр бүлексәһе, һәр парсаһы яңы ассоциациялар уята,

ҡайһы саҡта шатландыра, ә ҡайһы саҡта иһә көйөнөргә лә мәжбүр итә. «Тамсылар» бүлексәһендә, мәҫәлән, автор күпте күргән, күпте белгән, күп нәмәне үҙ йөрәге аша үткәргән ил ҡарты һымағыраҡ күҙ алдына килеп баҫа. Ошо уҡ бүлексәләге ҡайһы бер парсалар («Матурлыҡ», «Ҡар бөртөгө» һ.б.) мәктәп хрестоматияларында урын алырлыҡ. Сөнки улар уҡыусы балаларҙа күҙәтеүсәнлек тәрбиәләрҙәй, тәбиғәт һәм тормош күренештәрен тотоп алып, шуларҙы матур шиғри тел менән һөйләп бирергә өйрәтерҙәй өлгөләр бейеклегендә. Хәйер, ундай парсаларҙы эҙләй китһәң, бер «Тамсылар»ҙа ғына түгел, китаптың башҡа бүлексәләрендә лә табырға мөмкин.

Ниһайәт, Ғ. Хөсәйенов «Тормош»оноң тағы ла бер күңелгә ятышлы үҙенсәлеге. Китаптың ҡайһы ғына бүлексәһенә күҙ ташлаһағыҙ ҙа, һеҙ унда әҙәп-әхлаҡ нормаларының кешеләр тормошонда, уларҙың көндәлек мөнәсәбәттәрендә тотҡан урыны тураһында уйланыуҙарға тап булырһығыҙ. Кешене кеше итә, уның бөтә булмышын бермә-бер күтәрә торған принциптарҙың, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыш ҡына осраҡта аяҡ аҫтына һалып тапалыуына эсе бошҡан ғалим-яҙыусының көрһөнөү өндәре лә ҡолағығыҙға салынмай ҡалмаҫ, моғайын. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, әле һүҙ барған китапты мин күпмелер кимәлдә үҙ-үҙеңде тотоу, әҙәп һаҡлау ҡағиҙәләре йыйылмаһы, йәиһә аҡыл өләшеүсе ҡуйын дәфтәре тип тә атар инем.

Әйтергә теләгән һуңғы һүҙ – был күҙәтеүҙәрҙең исеме хаҡында. Ни өсөн «Тормош һабаҡтары»? Уларҙың әҙәбиәткә ниндәй ҡағылышы бар? Ғөмүмән, Ғ. Хөсәйеновтың был китабын күнегелгән әҙәбиәт рамкаларына һыйҙырып буламы?

Ошо һәм ошоға оҡшашлы башҡа һорауҙарҙың тыуасағын алдан һиҙенгәндәй, автор китап уҡыусы менән тәүге әңгәмәһендә бына нимә ти: «Беҙ, ғәҙәттә, матур әҙәбиәтте әҙер көйө ҡабул итергә күнеккәнбеҙ. Әҫәрҙе уҡыйбыҙ, ундағы хәл-ваҡиғалар, геройҙар хаҡында уйланабыҙ, әҫәрләнәбеҙ. Ә тормош, әҙәбиәт материалының үҙе, хикмәттәре тураһында аҙыраҡ фекер йөрөтәбеҙ».

Тормош, әҙәбиәт материалының үҙе тураһында аҙыраҡ фекер йөрөтәбеҙ... Бик урынлы әйтелгән. Ғ. Хөсәйеновтың китабы ошо бушлыҡты бер аҙ тулыландырыр тип ышанғы килә.

1992

«СӘФӘР СЫҒАМ, ЭЙӘРЕГЕҘ МИҢӘ…»

Бынан тиҫтәнән ашыу йыл элек үҙенең «Шағирҙар» тигән китабында Ғайса Хөсәйенов, «Йәйғор» (1978), «Бөрөләр» (1980), «Ләйсән» (1981) исемле поэтик төргәктәрҙе һәм шул төргәктәргә ингән шиғри йыйынтыҡтарҙың авторҙарын күҙ уңында тотоп, былай тип яҙғайны: «Улар… үҙ быуындаштарының, замандаштарының уй-хыялдарын, бай рухи донъяларын поэтиклаштыралар. Һөйөү хистәрен, ғаилә мөғәмәләләрен, әсәлек тойғоларын шиғырға күсерәләр. Шуныһы ҡыуаныслы, был йәш шағирҙар бындай уртаҡ уй-хистәрҙе, уртаҡ мотивтарҙы һәр береһе үҙенсә йырларға, үҙ поэтик буяуҙарын табырға тырыша. Йәйғор нисек төрлө төҫлө булған шикелле, һәр авторҙың үҙ шиғри төҫөн күпмелер тоҫмалларға мөмкин».

Ун-ун биш йыл элек поэтик буяуҙарын табырға тырышыусылар араһында Тамара Ғәниеваның да исеме телгә алынғайны. Бөгөн иһә ул үҙ шиғри төҫөн билгеләү генә түгел, биш китап авторы булырға ла өлгөрҙө инде. Шуларҙың иң һуңғыһы – «Уйлы сағым». Тимәк, байтаҡ йылдар элек тәнҡитсе һәм оло әҙип бағлаған яҡты өмөттәр бушҡа булмаған.

Т. Ғәниеваның яңы йыйынтығында түр башын «Ҡанундар» тигән поэма биләп тора. Әйтергә кәрәк, был поэма – ҡат-ҡат уҡыуҙы талап итә торған әҫәрҙәрҙән. Өҫтән-мөҫтән, эш араһында ғына ҡараштырып сығып, уның елегенә төшөп етермен тимә. Тәү ҡарауға ул һис ниндәй эске бөтөнлөгө булмаған, тик айырым эпизодтарҙан ғына торған сюжетһыҙ әҫәр кеүек тойола. Сөнки был эпизодтар логик рәүештә береһе артынан береһе ағылып торған тормош ваҡиғаларына түгел, ә зиһенде көсөргәнешле эшләтеү нәтижәһендә килеп тыуған ҡатмарлы уйҙар бәйләнешенә ҡоролған («Замандаш тауышы», «Палдискиҙағы уйҙар», «Диңгеҙ ярында һөйләшеү», «Әсәймдең хаты», «Һөйгәнемә өндәшкәнем», «Өн аралаш төшөм»). Шуға ла ул уҡыусыла бик күп ассоциатив фекерҙәр уята. Формаһы менән «Ҡанундар» поэмаһы ниндәйҙер дәрәжәлә М. Кәримдең «Европа – Азия»һын да хәтерләтеп ҡуя. Ул да бит бер-береһенә бик үк йәбешеп бармаған айырым шиғырҙарҙан – фәлсәфәүи уйланыуҙарҙан тора ине. Тик бында һүҙ формалар оҡшашлығы тураһында ғына барырға мөмкин, әлбиттә.

Әммә Т. Ғәниеваның яңы әҫәрен сираттағы аҡыл һатыу бәйгеһе, йә иһә рациональ фекерҙәр теҙмәһе тип кенә ҡарау төптө хата булыр ине. Халҡыбыҙҙың тарихи үткәненә күҙ ташланһынмы, бөгөнгө үтә лә ҡатмарлы һәм аңлайышһыҙ тормошобоҙ хаҡында һүҙ барһынмы, киләсәгебеҙ өсөн етди борсолоу белдерелһенме – был күренештәрҙең һәм хәл-ваҡиғаларҙың шағирә йөрәге аша үтеүенә, уйҙар һәм хистәр йомғағының бер-береһе менән аралашып, бер-береһен тулыландырып хәрәкәт итеүенә шик юҡ. Поэмала аҡыл менән йөрәктең айырылғыһыҙ бергә үрелеп барасағын автор инеш һүҙ рәүешендәрәк яңғыраған тәүге юлдарҙа хатта баҫым яһап әйтә. Әгәр ул башта:

Уйҙарымдың бер осонан тарттым,
Уйҙарымды һүтеп ебәрҙем, –

ти икән, күп тә үтмәй, бер генә һүҙен үҙгәртеп, ошо фразаны яңынан ҡабатлай:

Уйҙарымдың бер осонан тарттым,
Хис йомғағын һүтеп ебәрҙем.

Әҫәр башынан аҙағына тиклем киҫкен көсөргәнешлек, үткер, хатта өткөс һүҙҙәр менән яҙылған.

Көн менән төн, ер менән күк йәнәш,
Керпек асып йомған аралыҡ.
Мин донъяны байтаҡ барланым да,
Хаҡ-баһалар ҡуйып ҡараным.
Ҡанундарға мин хөкөмдар түгел,
Ҡанундар ҡан менән һыналған.
Йәшәйештең ғәме, гөнаһтары
Йәндәремә килеп уралған, –

ти автор шул уҡ инеш һүҙҙә. Әйтерһең дә, ул хистәргә бай, тойғоларға йомарт, йомшаҡ ҡуллы һәм нескә күңелле, эскерһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар затынан түгел, ә «формация йәки системалар» айышын аңларға тырышып, ғәләм яҙмышын ҡайғыртып йөрөүсе, «Ҡуласа Ер, Миҙгел һәм Мәңгелек» төшөнсәләре хаҡында баш ватыусы уҙаман. Заманалар алышынып та, камиллыҡтарҙың ҡыялап үтеүенә, ҡанундарҙың үҙгәрмәүенә һәм әҙәмдәрҙең ошо ҡанундарҙа әсир булып йәшәүенә

эсе боша уның. «Ерҙәштәрҙең ғазаптары ниҙән, гөнаһтары өсөн кем ғәйепле?» «Ике төрлө ҡапма-ҡаршылыҡтан кеше яҙмышы бит ысҡынмаған». «Шағиры юҡ икән, халыҡ та юҡ, һәр властың да бар үҙ йырсыһы». «Нисә тапҡыр донъя түңкәрелде? ‹…› Кешелектең хәтереме ҡыҫҡа, һуңлап килә әсе тәүбәләргә».

Туҡланайым тигән кешегә рухи аҙыҡ етерлек бында – һәр һөйләмгә тәрән мәғәнә төрөп бирелгән һәм уның һәр ҡайһыһынан фекер тослоғо аңҡып тора. Закон һәм Власть, золом һәм изгелек, шағир һәм дәүләт башлыҡтары тураһында уйланғанда, Пушкиндың «Иреклелек» одаһын хәтерләткән юлдар ҙа ҡолаҡҡа салынып китә. Һәм был һис тә ғәжәп түгел. Сөнки «Ҡанундар»ҙың авторы Пушкин һәм Туҡай, Лермонтов һәм Бабич, Л. Толстой һәм Ғафури әҫәрҙәрен уҡып үҫкән кеше бит, шуға ла уларҙың традицияларына таяныуы бик тә тәбиғи хәл.

Поэмала төп урынды лирик герой алып тора. Ул – авторҙың быуындашы ғына түгел, бәлки уның фекерҙәше лә тип раҫларға мөмкин. Был турала туранан-тура әйтелмәһә лә, уны шәйләүе ҡыйын түгел. Өҫтәп шуны әйтеү урынлы булыр: тәү ҡарауға бер-береһенә бик үк ылыҡып бармаған бүлектәрҙе лә ошо лирик герой берләштерә һәм әҫәргә ниндәйҙер кимәлдә сюжет бөтөнлөгө бирә. Үҙенең уйҙарында һәм хыялдарында ул төрлө кешеләр менән мөғәмәләгә инә, төрлө күренештәрҙе күҙ алдына килтерә. Улай ғына ла түгел – күп осраҡта уларға ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен дә белдерә. Уйҙарҙа һәм хыялдарҙа тыуҙырылған һәм күҙ алдына баҫтырылған был осрашыуҙар һәм аралашыуҙар диалогик һөйләм формаһында бирелгән. Беренсе бүлектә, мәҫәлән («бүлек» төшөнсәһе бында шартлы рәүештә генә ҡулланыла, әлбиттә, сөнки автор үҙенең әҫәрен бер ниндәй ҙә бүлектәр йәиһә киҫәктәр менән билгеләмәгән), лирик геройҙың партнеры сифатында уның замандашы сығыш яһай – дөрөҫөрәге, замандаш тауышы яңғырай. Лирик геройҙың да, замандаштың да исемдәре аталмаған. Улар икеһе лә – дөйөмләштерелгән образдар. Был ике персонаж араһында ҡыҙыу бәхәстәр ҡупмай ҡубыуын. Ирендәрҙән төкөрөктәр, күҙҙәрҙән осҡондар сәсрәп торорҙай һүҙ көрәштереүҙәр ҙә юҡ. Әммә уйландырырлыҡ нәмәләр ярайһы ғына бында.

Эй, бахырҡай, ҡалай алданаһың,
Был донъяла мөғжизә ул һирәк.
Һин данлаған күңел бөтөнлөгө
Кемгә кәрәк?

Телдәреңдән һинең балдар тама,
Хыялда һин минән бейегерәк.
Йәнәһе лә йәшәү – тотош аһәң!
Малың булһа – шуның кеүегерәк.
Тамағың туҡ саҡта һин дә йырлы,
Шиғыр яҙып ҡара ас ҡарынлай.
Дәрүиш йырсыны мин күргәнем юҡ,
Ҡулы кәкре йырсы табылғылай.

Күренеүенсә, һүҙ бында күңел бөтөнлөгө, аһаң, яҡты хыялдар, рух байлығы тураһында бара. Тиҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең көндәлек тормошобоҙға ысын мәғәнәһендә йүнәлеш биреп тороусы һәм уның асылын билдәләүсе, кешене шәхес бейеклегенә күтәреүсе, уға мотлаҡ рәүештә хас булырға тейешле был гүзәл сифаттар шиҡ аҫтына алына, уларға ниндәйҙер мыҫҡыллы, хатта өмөтһөҙлөк тойғолары менән һуғарылған ҡараш ташлана. «Һин күктәрҙән йондоҙ сүпләгәндә, ерҙәгеләр йыя матди байлыҡ», – тип иҫкәртә шағирҙы уның замандашы. Бөтә нәмә лә: йыр ҙа, шиғыр ҙа, бөйөк хыялдар ҙа, йәшәү йәме лә – бөтәһе лә бары тик аҡсаға ҡайтарып ҡалдырыла, бөтәһе лә матди байлыҡ ҡалыбына һалына. Әҙәм балаһы бахырға тиңләнә, аҡса ҡолона әйләндерелә. Әлбиттә, лирик герой, минең аңлауымса, тормошҡа бындай тар ҡараш менән килешә алмай һәм килешергә лә тейеш түгел. Бөтә асылы һәм тәбиғәте менән ул ғәҙеллек яҡлы, уның уй-фекерҙәре рух күтәренкелеге менән һуғарылған һәм яҡты идеалға ышанысын ул бер нәмәгә лә алмаштырмаған.

Ҡырау һуҡҡан һуҡмаҡ буйлап үтәм,
Хәйер һонам ғибәҙәт ҡылғанға.
Сауап яуһын кеше ғөнаһтарын
Күкрәгенә алып, аҡ донъянан
Мәңгелеккә атылып уҙғанға.
– Исем-шәрифтәрең кем тиәйем,
Төбәп уҡыған доға сауаплы?
Шәйехзада тиең… Рәми тип әйт…
Онота күрмә, инәй, берүк кенә
Салауатты…

Лирик геройҙың донъяға ҡарашы, заман елдәре тыуҙырған ҡанундарға мөнәсәбәте «Палдискиҙағы уйҙар» менән «Диңгеҙ ярында һөйләшеү»ҙә тағы ла асыҡлана, тәрәнәйә төшә. Художество алымдары ла башҡа төрлөрәк бында. Замандаш урынын диңгеҙ биләгән, лирик герой менән ике аралағы диалогты ышыҡ эҙләүсе елдәр һәм ҡурғаш һымаҡ ҡайнаған тулҡындар дауам итә. «Тулҡындарҙа сайҡала ла ҡояш болоттарға инеп юғала», «мин диңгеҙҙәй ярһыу тоҡомдан» кеүегерәк поэтик табыштар ҙа юҡ түгел. Тик лирик геройҙың кәйефе генә төшөнкө: «Бәйге ҡайғылары китте, илдәрҙә тынысһыҙлыҡ. Инә – ҡыҙҙы, ата улды аңламаҫ ҡылыҡһыҙлыҡ. Буш боғаҙ әйҙәүҙәр мәле, замана – осһоҙ ҡыуыҡ. Майҙанға елғыуар хужа, уйсандар йәне бойоҡ». Һәм, замандаштарын алдаҡсы телмәрҙән иҫкәртеп: «Йыр ҡайғылары киткән мәл, йәнгенәм минең – кереш, донъяны авантюранан кем ҡотҡарырға тейеш?!» – тигән ҡәтғи һорау менән мөрәжәғәт итә ул йөрәгенә.

Поэманың сираттағы ике бүлегендә лирик герой тәү ҡарауға үҙенең интим хистәре менән уртаҡлашыр һымаҡ. Ысынында иһә ул бында ла шәхси мәнфәғәттәрҙән алыҫ тора. Әгәр донъя мәшәҡәттәрен барлауға ҡоролған «Әсәйемдең хаты» беҙҙең дәүерҙә модаға инеп киткән асыҡлыҡтың бер сағылышы булып яңғыраһа, «Һөйгәнемә өндәшкәнем»дә иһә бейеклектәргә бирҙәгән лирик герой бер нәмәгә лә аптырамай торған, йәнен албыратырҙай көс эҙләй, дауыл уртаһында йөҙөргә ашҡына, ҡаяларға, күктәргә ынтыла. Тик реаль тормош ҡанундары уны, романтика стихияһынан айырып, яңынан гөнаһлы ергә алып төшә:

Ҡыйыҡтарға ятып үкһей елдәр.
Һуҙып-һуҙып уҡый йыназа.
Минең инде йәнем тере мәйет.
Минең инде тәнем ураҙа…

Ниһайәт, поэманың һуңғы өлөшө – «Өн аралаш төшөм». Ул да ассоциатив фекерләүгә ҡоролған. Йомғаҡлау ролен уйнаусы был бүлек халҡыбыҙҙың тарихи яҙмышы, үткәне һәм бөгөнгөһө, уның күренекле улдары һәм ҡыҙҙары хаҡында уйланыуҙар формаһында яҙылған. Талант менән талант алышҡан майҙанға ашҡыныусы һылыу образында, мәҫәлән, күренекле яҙыусыбыҙ Һәзиә Дәүләтшинаның трагик яҙмышын шәйләргә мөмкин.

Тертләп торған боҙҙан атлап барам,
Зымырлап та китә табаным.
Үҙемде, тим, мин дә күрһәтәйем,
Арҙаҡлылар һынап ҡараһын.
Йөрәгемде мин усыма алам,
Илтеп һалам хәҙер һандалға.
Сәхнәләрҙе былай өнәмәйем,
Сәмләнеүем – намыҫланғанға.

Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дәртләнеп-талпынып ярыш майҙанына барған еренән һылыу көтөлмәгән хәүефкә тарый. Һәм беҙҙең күҙ алдыбыҙға уның ҡанаты ҡайырылған ҡошто хәтерләтеүсе һыны килеп баҫа:

Һау бул, хыял! Бәхилләгеҙ мине!
Күҙ йәшемдән ирей күк боҙҙар.
Их, мәхрүмдәр генә була бәйге,
Майҙандарға сыҡһа моңһоҙҙар.

Артабан лирик геройҙың өн аралаш төшөнә Бабсаҡ, Айҙар, Күсем кеүек тарихи шәхестәр килеп инә. Уларға дандары киң таралған ил улдары – Салауат, Шәйехзада, Әхмәтзәки ялғана. Был исемдәрҙе автор эске бер ғорурлыҡ һәм шул уҡ ваҡытта һағыш ҡатыш юҡһыныу менән иҫкә ала:

Ҡайҙа, ерем, Бабсаҡ кеүек улың.
Бармы һиндә Айҙар сәсәндәр?
Йырҙарыңда һинең, моңдарыңда
Сағылмайҙар Айҙар, Күсемдәр.
Салауатың ҡайтты. Зәкиеңә,
Бабичыңа әле һәйкәл юҡ.
Илбаҫарҙы ҡыуған Донской улын
Онотмай бит күрше бер халыҡ.

Әйтергә кәрәк, тыуған төйәгенә, ғәзиз еренә мөрәжәғәт итеү аша шағирә тарихҡа байҡау яһап ҡына сикләнмәй, бәлки хәтерҙә ҡалырҙай штрихтар, поэтик деталдәр («Тартыша ла кеүек нәҫел-тамыр ырыуының түле бөткәндән», «Әсәһенең күкрәгенән түгел, баш ҡоронан ирҙәр баш тарта», «Беркетәләр ҡанун-ҡағиҙәләр яҡшы

менән яман бизмәнен», «Биле һынған Урал, йәнең кеүек йәнселгән бит һинең күкрәгең», «Мөхәммәткә минең рәнйешем бар мәхрүм иткән өсөн тиңлектән» һ.б.) ярҙамында «изгелек тә менән яуызлыҡтың алышылыр йәшәү тигәнең», «кемдәр килеп, ергә кем китмәгән, йәшәй бирә шул уҡ ҡанундар» тигән тәрән, фәлсәфәүи мәғәнәле һығымта ла яһап ҡуя.

Бына шулай, ҡарамаҡҡа ярым-йорто, өҙөк-мөҙөк фекерҙәрҙән сылбыр һымаҡ үрелгән поэма үҙенең йөкмәткеһе менән ахыр сиктә уҡыусынан ярайһы ғына интеллектуаль әҙерлек талап итеүсе әҫәргә әүерелә. Формаһы менән иһә ул, үрҙә билдәләнгәнсә, был жанрға хас традицион алымдарҙан байтаҡҡа айырыла. Әйткәндәй, Т. Ғәниеваның «Ҡанундар»ы әҙәбиәт ҡанундарына бик үк буйһоноп бармай. Һәм бына ошонда үҙенән-үҙе һорау килеп тыуа: яҡшымы был, әллә насармы? Өҙөп кенә яуап биреүе ҡыйын, әлбиттә. Ихтимал, был новаторлыҡ күренешелер? Ни өсөн тигәндә, ҡанун һүҙе күпмелер кимәлдә традиция төшөнсәһенә лә яҡын килә бит. Ә новаторлыҡтың традициялар ерлегендә тыуыуы һәр кемгә билдәле.

Әммә, нисек кенә булмаһын, шуны хәтерҙән сығармайыҡ: емеш ағастарының һәм еләк өлкөмдәренең төрө ни хәтлем күберәк булһа, баҡса шул тиклем күркәмерәк, байыраҡ күренә һәм уның хужаһына тейгән файҙаһы ла бермә-бер арта. Әҙәбиәт баҡсаһы ла шулайыраҡтыр, моғайын: әҫәрҙәр һаны күбәйеп, жанрҙар төрө артҡан һайын, уҡыусыныҡ да мөмкинлектәре күҙгә күренеп киңәйә – йәне теләгәнде һайлап ала, теләмәгәнен инҡар итә. Т. Ғәниеваның «Ҡанундар» поэмаһына ла уҡыусы битараф ҡалмаҫ, минеңсә. Сөнки халҡыбыҙҙың милли үҙаңы оторо ла көсәйгән, уның сәйәси эшмәкәрлеге тағы ла активлашҡан бер мәлдә донъяға килгән был әҫәр үҙенең идея йөкмәткеһе менән бик актуаль яңғырай. Поэманың ғүмере күпме булыр һәм әҙәбиәтебеҙ майҙанында ул ниндәй эҙ ҡалдырыр – быныһы инде ваҡыт ҡарамағында, тарих хөкөмөндә. Ә бөгөн иһә ул беҙҙең замандашыбыҙға хеҙмәт итеү – уны уйландырыу, тулҡынландырыу, ҡатмарлы тормош ағымында уға дөрөҫ йүнәлеш биреү маҡсатына хезмәт итә.

Ҡанундар мотивы Т. Ғәниеваның ошо исемдәге поэмаһына ғына түгел, бәлки әле һүҙ барған йыйынтыҡҡа ингән ҡайһы бер шиғырҙарына ла хас. Эш бында «ҡанун» һүҙенең шиғырҙан шиғырға («Аҙаштыңмы, байғош, төркөмөңдән…», «Мөхәббәткә һәйкәл», «Егерменсе быуат») күсеп йөрөүендә генә лә түгел, ә барыһынан да

элек был әҫәрҙәрҙең фекер уртаҡлығында, автор поэзияһының юғары гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған булыуында, хатта, мин әйтер инем, уларҙың үрҙә телгә алынған «Иреклелек» одаһы һымаҡ, «уҫал» яңғырашында.

«Хужалар» бар – донъя тотҡалары,
Тай-тулаҡҡа йүгән кейҙерер.
Үрәпсеп тә йә сығынлап ҡара,
Нужа-ҡамсы башың эйҙерер.

Кемгә аҡса,
Кемгә баҡса кәрәк,
Төшөмлө эш кәрәк кемдәргә,
Йәннәттәрҙең ишектәре асыла,
Тубыҡланған мәхлүк күндәмгә.

Был ике строфа – «Дауам итә революция»нан. Ошондай уҡ зәһәрле, мейеңә үтеп инерлек һүҙҙәр менән яҙылған юлдарҙы байтаҡ табырға мөмкин был йыйынтыҡта. Әйтәйек, «Эйелә башым», «Яңы йыл», «Алла менән иблес…», «Асмайһығыҙ мәллә хәҡиҡәтте…», «Ҡарурман», «Үҙем өсөн…», «Хайран ғына донъя мурт һыныр ҙа…», «Уйһыуҙарға бағып уйға ҡалам…», «Ҡасаҡтар», «Ҡыпсаҡтар», «Әсирлектә телем», «Донъя буйлап мин сер эҙләп киләм…», «Төҫө һеңгән ирҙәр ҡарашына…», «Ах, хәлебеҙ, ағай, аяныслы…» һ.б. шуның кеүек шиғырҙарҙа. Әгәр «Эйелә башым»да шағирә:

Эйгән башты һалам күкрәгемә,
Ауырта бит йәнем самаһыҙ.
Оятһыҙҙар талай заманамды,
Ришүәтселәр йәшәй язаһыҙ.

Намыҫ менән әҙәп киткән ерҙең
Гөнаһтары ята иңемдә.
Эйелә башым,
Зәғиф заманымдың
Ғәйептәрен тоям үҙемдә, –

тип һыҙланһа, «Яңы йыл»да иһә ул тирә-йүндә ҡылынып ятҡан әшәкелектәрҙе асыҡтан-асыҡ фашлай:

Декабрҙән ғинуар яҡтарына
Хәсрәттәрем яйлап үтеп бара.
Үҙгәрергә донъя уйламай ҙа,
Мәкер генә яңы төҫтәр ала.

Тәбиғәттең хозур мәле лә бит,
Матурлыҡтар һатыла аҡсаға:
Фатир һатыла,
Матур ҡыҙҙар һатыла,
Дан һатыла,
Әхлаҡ тарҡала.

Юлдан юлға үҫтерелеп, строфанан строфаға тәрәнәйтелгән фекер ахыр сиктә борсолоу ҡатыш икеләнеү менән ослап ҡуйыла:

Яңырмайса тороп кешелек рухы,
Камиллыҡ был ергә ҡайтмаҫ кеүек.

«Уйлы сағым» йыйынтығының бик һәйбәт бер үҙенсәлеге (бәлки, ул шағирәнең бөтә ижад манераһына ла хастыр) – унда ингән әҫәрҙәрҙең яҙылыу ваҡыты күрһәтелеүе. Был алым рустың күренекле әҙибе А. Блок ижадын хәтерләтә. Билдәле булыуынса, Блоктың шиғырҙары аша уның бөтә тормош юлын, ижад процесындағы эҙләнеүҙәрен, табыштарын һәм юғалтыуҙарын күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Т. Ғәниеваның да яңы лирик китабы лирик геройҙың көндәлек яҙмалары, икенсе төрлө әйткәндә – авторҙың ҡуйын дәфтәре һымағыраҡ ҡабул ителә.

«Уйлы сағым»ға тупланған әҫәрҙәрҙең күбеһе 1986–1990 йылдарҙа ижад ителгән. Ара-тирә һикһәненсе йылдар башында яҙылғандары ла күҙгә салынып китә. Яҙылыу ваҡытына иғтибар итмәгән хәлдә лә, дөйөм стиль уртаҡлығы, поэтик саралар берҙәмлеге менән бер ҡатарҙан, улар араһында ятҡан байтаҡ айырмалыҡтарҙы ла шәйләмәй мөмкин түгел. Әйтәйек, үҙгәртеп ҡороу, асыҡлыҡ, митингылар шау-шыуы заманына тура килгән романтик пафослы шиғырҙарҙа уйлағанды күҙгә бәреп әйтеү һымағыраҡ алым үҙен нығыраҡ һиҙҙерһә, унан элегерәк яҙылғандарында («Шағир йөрәге», «Һин әйтәһең…», «Гармунсым», «Өшөттөрмә әле…», «Бармаҡтарың», «Шығырлатып баҫырға ла ҡурҡам…», «Зиһендәрҙе бутар

ылыҫ еҫе…», «Ауыр һүҙҙәр әйтмә», «Тәҙрәләрең һылап, екләп ҡуйҙың…») лирик башланғыс өҫтөнлөк итә кеүек.

Был сағыштырыуҙарҙы китапҡа ингән әҫәрҙәрҙә ниндәйҙер ҡаршылыҡ, тупаҫыраҡ итеп әйткәндә, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләү тип нарыҡларға ярамай. Һүҙ шағирә ижадындағы эволюцияны аңларға тырышыу, уға күпмелер кимәлдә баһа биреү тураһында бара. Шул өҙлөкһөҙ эске үҫештең күҙгә нығыраҡ салынғаны, күңел ҡылдарын тәрәнерәк сирткәне – Т. Ғәниеваға тәбиғәт биргән поэтик тауыштың йылдан-йыл көрәйеп, әҫәрҙән әҫәргә дәлиллерәк, талапсыраҡ яңғырауында тиер инем мин. Был фекерҙә әллә ни яңылыҡ та юҡтыр, бәлки. Сөнки шағирмын тигән бер генә шағир ҙа баҫҡан урынында тапанырға һәм шунда ҡатып ҡалырға тейеш түгел дә инде. Шулай ҙа, әйтелгән һүҙ бушҡа китмәһен өсөн, бер нисә миҫал килтереү артыҡ булмаҫ.

Үҙенең әҫәрҙәрендә Т. Ғәниева йыш ҡына тарихи шәхестәр, күренекле әҙиптәр исемен телгә алыусан. Шундай әҫәрҙәрҙең береһе – «Шағир йөрәге» тигән шиғыр. 1984 йылда яҙылған. Күләме яғынан бик ҙур ҙа түгел – ни бары ун алты юлдан тора. Бында бер ниндәй һөрән һалыу ҙа, буҙа күтәреү ҙә, тамаҡ төбө менән һөйләшеү ҙә юҡ. Киреһенсә, әҫәр үтә лә нескә тойғоларға ҡоролған. Яҡында ғына һайраған ҡошсоҡ Салауат Юлаев йөрәге менән Шәйехзада Бабич моңон символлаштырһа, сулпыларын көйгә сайҡалдырған һандуғастай ҡыҙ Һәҙиә Дәүләтшина һынын кәүҙәләндерә; ә атылып күккә менгән һабантурғай Рәми Ғарипов образын күҙ алдына баҫтыра. Бөтәһе лә ябай, бөтәһе лә күркәм, шул уҡ ваҡытта бөтәһе лә юғары сәнғәтсә бында.

Ошо уҡ исемдәр «Шағир йөрәге»нән бер нисә йылға һуңыраҡ ижад ителгән «Ҡанундар» поэмаһында, ә ҡайһы берәүҙәре «Ҡарурман», «Һин ҡайҙанһың?», «Йүрүҙәндән тауға үрләгәндә…», «Үҙен шағир тиеп йөрөгән берәү…», «Ҡай таштарҙа икән эҙең ҡалған…», «Ах, хәлебеҙ, ағай, аяныслы…» тигән шиғырҙарҙа ҡат-ҡат телгә алына. Ләкин был ҡоро ҡабатлау, юҡҡа-барға һүҙ ҡуйыртыу түгел. Һәр әҫәрҙең үҙ моңо, үҙ төҫө, кәрәк икән – хатта үҙ асҡысы бар. Әгәр «Шағир йөрәге»ндә үрҙә аталған шәхестәр лирик пландараҡ, ниндәйҙер бер эске йылылыҡ, поэтик нескәлек менән күҙ алдына баҫтырылһалар, «Ҡанундар» поэмаһында улар әлеге лә баяғы шул кемдәрҙер тарафынан уйлап сығарылған ҡағиҙәләр, сикләүҙәр, ғәҙелһеҙлектәр, интригалар ҡорбаны кеүегерәк кәүҙәләндереләләр, һәм шуға яраҡлы рәүештә әҫәрҙең стиле лә үҙгәреш кисерә – лирик

башланғыс публицистик пафосҡа төрөлә, автор тауышының көсө бермә-бер арта, ҡошсоҡтар, һандуғастар, һабантурғайҙар моңо тормоштоң яҙылған һәм яҙылмаған закондары тураһында фәлсәфәүи тәрәнлектәге уйланыуҙар менән алмашына, тойғолар донъяһына заман елдәре бәреп инә.

Ошоға тартым эволюцияны Т. Ғәниеваның мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарында ла тоҫмалларға мөмкин. Быға ышаныу өсөн һикһәненсе йылдарҙың беренсе яртыһында ижад ителгән «Өшөттөрмә әле…», «Һин әйтәһең…», «Гармунсым», «Бармаҡтарың» һ.б. шуның кеүек шиғырҙарҙы 1988 йылда яҙылған «Ҡайҙа китте мөхәббәттә сафлыҡ…» менән сағыштырып ҡарарға мөмкин.

Һикһәненсе йылдарҙың икенсе яртыһына ҡараған байтаҡ шиғырҙар донъяға асыҡ ҡараш белдереп, тура һүҙ, үткер тел менән яҙылғандар. Уларҙың күбеһендә авторҙың үҙ кисерештәре лә ниндәйҙер кимәлдә сағылыш табалыр, бәлки. Һәр хәлдә Т. Ғәниеваның лирик геройы зирәк аҡыллы, беҙҙең көндәлек тормошобоҙҙағы хәл-ваҡиғаларға актив мөнәсәбәтле, принципиаль, кешеләр араһындағы үҙ-ара мөғәмәләләә тоғролоҡто яҡлаусы, ғәҙеллеккә дан йырлаусы саф йөрәкле шәхес булып күҙ алдына килеп баҫа. Уҡыусынан ғәфү үтенеп, тағы бер миҫал килтермәй булмаҫтыр. «Донъя буйлап мин сер эҙләп киләм…» тигән шиғыр. Эпиграф итеп алынған О. Бальзак һүҙҙәре үк әйтеп тороуынса, был әҫәр ҙә мөхәббәт темаһына. Ләкин уның героиняһы, мөхәббәт утында янаһы урынға, донъя мәшәҡәттәре менән мәшғүл:

Паспорт тотоп баҫтым сираттарға,
Ит, май өсөн… Текә һатыусының
Яндарынан ғорур үтеп ҡара.
Ҡоллоҡ төҫө минең күҙҙәремдә,
Ризыҡ өсөн торам теҙҙәремдә.

Мөғжизәнән башын тартҡан заман
Йәшәйешкә икән ни дәғүәлә?
Ҡатын-ҡыҙмын, ләкин мин сер түгел…
Тупһаларҙа йәнем үрһәләнә.

«Уйлы сағым» йыйынтығына арналған был мәҡәлә Т. Ғәниеваның бөтә ижадын байҡауға дәғүә итмәй. Әгәр ундай бурыс күҙ

уңында тотолһа, ул маҡсатҡа ярашһыҙ булыр ине. Сөнки китапҡа шағирәнең бөтә әҫәрҙәре лә түгел, ә бары тик өр-яңылары ғына, башлыса, һуңғы биш-алты йыл эсендә яҙылғандары ғына тупланған. Әйтергә теләгән уй-фекер башҡасараҡ. Әле һүҙ барған йыйынтыҡтан күренеүенсә, уның авторы тураһында, дөрөҫөрәге – уның әҙәби эшмәкәрлеге, ижади эҙләнеүҙәре, шиғриәт өлкәһендәге юғалтыуҙары һәм табыштары тураһында бөгөн ара-тирә генә, ярым-йорто ғына, һүҙ эйәрә һүҙ сыҡканда ғына түгел, бәлки ауыҙ тултырып һөйләргә, проблемалар ҡуйырға, улар тирәһендә бәхәстәр ойоштороpға тулы нигеҙ бар. Шағирә туҡтауһыҙ үҫеш юлында. Иҫерткес, дыуамалыраҡ йәшлек осорон артта ҡалдырып, әҙәби ижад өлкәһендә ул хәҙер өлгөрөү мәленә аяҡ баҫты тип әйтһәк тә хата булмаҫтыр. Лирик герой менән автор араһында күпмелер дәрәжәлә оҡшашлыҡ, ҡараштар уртаҡлығы йәшәү мөмкинлеген иҫкә алғанда, был фекергә Т. Ғәниеваның әҫәрҙәрендә лә раҫлау табырға була:

Еңел-елпе йәшәр мәлем үтте,
Эйелә башым хәстәр йөгөнән, –

ти ул шиғырҙарының береһендә. Ошоға тартым фекер «Ҡанундар» поэмаһында ла ярылып ята:

Текәлеп тә бағам күк йөҙөнә,
Ай тирәләп баҫты йондоҙҙар.
Сәфәр сығам, эйәрегеҙ миңә,
Йәнендә ғәм булған ҡыйыуҙар.

Был – ҡоро һүҙ, ҡоро саҡырыу түгел, минеңсә. Лирик герой (ә уның артынса – автор ҙа!) яңы бейеклектәргә үрләү өсөн үҙендә көс тә, дәрт тә, дарман да һиҙә һәм ҡыйыу йән эйәләрен үҙе менән сәфәргә әйҙәй.

Сәфәр – оло юл ул. Тимәк, Тамара Ғәниева һуҡмаҡтан оло юлға сығып, ышаныслы, ныҡлы аҙымдар менән милли поэзиябыҙҙың ҙур майҙаны буйлап атлай. Әҙәбиәттең ауыр йөгөн өлкән быуын әҙиптәре менән бер ҡатарҙан тартырына һәм киләсәктә тағы ла аҡыллыраҡ, төплөрәк, форма йәһәтенән дә камилыраҡ әҫәрҙәр ижад итеренә ышанысым ҙур.

1992

ШАҒИРҘЫҢ ПОЭТИК ДОНЪЯҺЫ

Сафуан Әлибаевтың «Йырлап ҡалайым әле» тигән китабын ҡулға алып, йырҙар тупланған беренсе бүлеге менән таныша башлағас, келт итеп бынан ун йылдар самаһы элек булған бер хәл иҫкә килеп төштө. Төштө лә, күңелде биләп алды һәм бөтә асыҡлығы менән күҙ алдына килеп баҫты.

«Торғонлоҡ» тип аталған йылдар ине әле ул саҡта. Башҡортостан хөкүмәте, өс йөҙләп туристы берләштергән ҙур ғына делегация туплап, Германия Демократик Республикаһының Галле округына дуҫлыҡ визиты ойоштороғайны. Делегация составында, промышленность һәм ауыл хужалығы алдынғылары менән бер ҡатарҙан, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, мәғариф һәм фән өлкәһенән дә вәкилдәр бар ине. Һанаулы көндәр тиҙ үтеүсән. Немец иленең арҡырыһын-буйын бер итеп, ҡаланан-ҡалаға йөрөй торғас, ҡайтыр ваҡыт та килеп етте. Һәм бына беҙ, поезға ултырып тыуған-үҫкән яҡтарыбыҙға юл тотор өсөн, тиҙ йөрөшлө автобустарҙа Берлинға табан елдерәбеҙ. Ләкин хужаларҙың «һыйы» бөтмәгән икән әле. Галле округынан сығып китер алдынан беҙҙе туҡтаттылар ҙа, йәм-йәшел хәтфә кеүек йәйрәп ятҡан тип-тигеҙ аҡланда байрам ҡороп ебәрҙеләр. Фронтовик башҡорт әҙиптәренең шиғырҙарында, йәиһә публицистик әҫәрҙәрендә йыш ҡына телгә алынған Көнбайыш Европа майының ямғырға тартым бер көнө ине был. Һауа һалҡынса. Баш өҫтөндә ҡурғаштай ауыр болоттар бына-бына лапылдап ергә килеп төшөр һымаҡ. Ара-тирә ҡояш күренгеләп китә, ләкин уның һис бер йылыһы юҡ. Нимәһе менәндер беҙҙең һабантуйҙы хәтерләткән был байрам әллә ни оҙаҡҡа һуҙылманы. Программа буйынса әҙерләнгән рәсми өлөш тамамланғандан һуң халыҡ айырым төркөмдәргә таралышты. Дуҫтар ерендәге һуңғы минуттарҙы һәр кем үҙенсә үткәреүҙе ҡулайыраҡ тапты, күрәһең. Берәүҙәр сәйәхәт дауамында алынған тәьҫораттары менән уртаҡлашты. Икенселәр уйын-көлкө менән мауыҡты. Бәғзеләр иһә ҡайтыр юл тураһында уйланды. Бына ошонда булды ла инде теге башта әйткән хәл. Бер мәлде, киң яланды иңләп-буйлап, башҡорт йыры яңғырап китмәһенме! Ҡырмыҫҡа ояһы кеүек геүләгән халыҡ шым ҡалды. Бөтә кешенең дә күҙҙәре оҙатыу «табыны»ның рәсми өлөшөн ойоштороу өсөн эшләнгән «ваҡытлы» трибунаға йүнәлде. Ул инде буп-буш ине. Микрофон алдында тик бер генә кеше баҫып тора һәм ул, һис нәмәгә иҫе

китмәйенсә, йырлауын дауам итә. Өҫтөнә аҡһыл-һарғылт плащ кейгән тәбәнәгерәк буйлы был йырсы – Сафуан Әлибаев ине. Ул ниндәй йыр башҡарғандыр – байтаҡ ваҡыт үткәнлектән хәҙер инде өҙөп кенә әйтеүе лә ҡыйын. Әммә мин үҙем өсөн шундай асыш яһаным: Сафуан Әлибаев халыҡ араһында киң популярлыҡ яулаған йырҙар авторы ғына түгел, уларҙы ярайһы ғына оҫта итеп башҡарыусы ла икән.

Бер уйлаһаң, бында аптырарлыҡ нәмә лә юҡ инде. Йыр поэзияһы өлкәһендә эшләүсе шағир моңһоҙ була алмай торғандыр ул. Улайға китһә, музыкаль сәнғәттең берәй төрө менән мауығыусы әҙиптәр араһында бер Сафуан ғына ла түгелдер әле. Мәҫәлән, Назар ағай Нәжмиҙең, Рафаэль Сафиндың һыҙҙырып гармунда уйнауҙары билдәле; ә Кәтибә апай Кинйәбулатованың матур итеп мандолинала уйнағанын телевизор экрандары аша хатта үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар. Тик беҙҙә ни эшләптер шағирҙарҙың, яҙыусыларҙың, артистарҙың, ғөмүмән, ижад кешеләренең шәхес булараҡ үҙенсәлекле сифаттары икенсе пландараҡ ҡала килә әле, улар менән яҡынданыраҡ тороп ҡыҙыҡһыныу һаман да ғәҙәткә инеп китмәгән. Милли характерыбыҙҙың тағы ла бер һыҙатылыр инде был.

Эйе, көн артынан көн, йыл артынан йыл үтеп кенә тора. Әле үрҙә иҫкә алынған ваҡиғаларҙан һуң да инде Сафуан Әлибаев байтаҡ йырҙар һәм шиғырҙар яҙҙы. Улай ғына ла түгел: ошо уҡ дәүерҙә ул береһенән-береһе ҡалыныраҡ ике йыйынтыҡ әҙерләп сығарҙы. Уларҙың береһе «Ҡойон» тип атала, ә икенсеһе – бына беҙҙең ҡулдағыһы, күңелдә яҡты хәтирәләр уятып, бер аҙ хистәргә бирелеп алырға мәжбүр иткәне.

Ғәжәп хәл: ваҡыт тигәнең шағир кешенең ижад алымдарына ғына түгел, бәлки уның шәхесенә лә шаҡтай йоғонто яһай икән. Һикһәненсе йылдар башында сығарған бер китабын Сафуан Әлибаев «Йырлар сағым» тип атағайны. Был китаптың үҙәгендә торған лирик геройҙы ваҡыт менән күкрәк ҡағып һөйләшеүсе кеше һымағыраҡ төҫмөрләргә мөмкин ине. Әле килеп иһә, туҡһанынсы йылдар башында, шул уҡ герой, үткән ғүмерҙәрен байҡап, йәндәрен моң тулҡынында сайҡап, мөмкин тиклем күберәк һәм көрөрәк йырлап ҡалырға ашҡына башланы.

Әҙәм балаһын хурламай,
Ҙурлап ҡалайыҡ әле,
Һығылып илар саҡта ла
Йырлап ҡалайыҡ әле…

Бында бер ниндәй ҙә метаморфоза юҡ, әлбиттә. Шағир артынан һуҙылып ҡалған йылдар бураҙнаһы ишәйгән һайын уның лирик геройы ла, тышҡы яҡтан һаман шаталаҡ күренһә лә, ысынында иһә барыбер олпатлана, етдиләнә һәм уйсанлана төшә, күрәһең. Шуға ла хәҙер ул йырлар сағым тип оран һалыу менән мауыҡмай, бәлки яҙмыш йөгөн күтәргәндә йырҙы – юлдашҡа, иңдәшкә, ә йырлай-йырлай ғүмер итеүҙе батырлыҡҡа тиңләп, үҙ хеҙмәтенән бәләкәй генә булһа ла ләззәт табырға, йән аҙығы алырға тырыша, уның асылын билгеләргә ынтыла.

Хәйер, быға тартым уйҙар Сафуан Әлибаевтың элегерәк яҙылған «Юл уртаһы» тигән шиғырында ла үҙенсә сағылыш тапҡайны:

Йөктә килә ете төйөнсөгөм,
Төйөнсөктәр – ете китабым,
Заманыма улар әйтер һүҙем,
Йылдар алдындағы хисабым.

Ошо уҡ шиғырҙа «Яҙмыш менән бәхәсләшә киләм, тик булмаһын ғына йыр – алдау» тигән өмөт ҡатыш ышаныс белдергән юлдар ҙа бар ине. Ниһайәт, «Юлдар уртаһы»ның лирик геройы, үҙенең ғүмер арҡанындағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ ялғауҙарға ла ҡарамаҫтан, үрҙәрҙең яңыһына артылыуы тураһында хәбәр иткәйне.

Бөгөн инде «төйөнсөктәр» һаны етенән дә ашыу. Ләкин эш уларҙың һанында ғына түгелдер. Иң мөһиме – нимә төйнәлгән был төйөнсөктәргә? Шағир үҙе әйтмешләй, кем өсөн төйнәлгән улар? Әлбиттә, был һорауҙарға бер ултырыуҙа ғына тулы яуап бирергә иҫәп тотоу – тыйнаҡһыҙлыҡ та, шул уҡ ваҡытта өҫтөңә ҡулдан килмәҫлек эш алыу ҙа булыр ине. Әммә шуны ла хәтерҙән сығармайыҡ: теләһә ниндәй төйөнсөктөң дә төбөнә төшөү өсөн иң тәүҙә уны, бер осонан ғына булһа ла тартып, асып ебәрергә кәрәктер. Шунда, бәлки, Әлибаев шиғриәтенең ҡайһы бер үҙенсәлектәре лә күҙгә салынып китер, уның поэтик донъяһы ла күпмелер төҫмөрләнер.

Ҙур ижад майҙанына Сафуан Әлибаев балалар әҙәбиәте аша килеп инде. Уның алтмышынсы йылдар аҙағы – етмешенсе йылдар башында донъя күргән тәүге китаптары – быға асыҡ дәлил. Шағирҙың әҙәбиәт өлкәһендә балаларса ихласлыҡ, ысын күңелдән, бөтә йөрәге менән бирелеп эшләүе лә ошонан киләлер әле, моғайын.

Һүҙҙе С. Әлибаевтың шиғыр техникаһынан башларға иҫәп. Кеше менән кеше осрашҡанда ла улар иң элек бер-береһенең өҫ-баштарына еңелсә ҡараш ташлап алалар. Унан һуң күҙҙәр менән күҙҙәр осраша. Күҙҙәр аша һәр кем икенсе кешенең уй-фекерҙәрен, кәйеф-сафаһын аңларға тырыша. Әҙәбиәт донъяһында ла бына шундайыраҡ хәл – уҡыусы иң тәүҙә ҡулына алған әҫәрҙең формаһына иғтибар итә.

С. Әлибаев шиғырҙарына ошо күҙлектән ҡараһаҡ, уларҙың башта уҡ үҙҙәренең тышҡы ябайлыҡтары менән күңелде арбап алыуҙарын шәйләрбеҙ. Тик бында фекер йөрөтөү форманан башланған икән, был әле йөкмәткене һәм идея асылын иғтибарҙан ситтә ҡалдырыу тигән һүҙ түгел. Йөкмәтке йәһәтенән дә, идея яғынан да С. Әлибаев әҫәрҙәре уҡыусыла ниндәй ҙә булһа шик-шөбһә тыуҙырмаҫ. Ә бына формаға килгәндә инде, уның шиғри юлдары һандуғас һымаҡ һайрап, күгәрсен кеүек гөрләп торалар тиер инем мин. «Ҡойон» йыйынтығына бирелгән аннотациялағыса әйтһәк, С. Әлибаев әҫәрҙәренә «ритмик теүәллек, музыкаллек һәм йөрәк йылыһы хас».

Эйе, ритмик теүәллек, музыкаллек! Өҫтәп, рифма бөтөнләгө, тип тә әйтергә мөмкин. Быларҙың бөтәһе лә поэзияға ихлас ҡарауҙан, шиғыр техникаһына талапсан булыуҙан килә торғандыр ул. С. Әлибаевтың бик күп шиғырҙарына көй яҙылыуы ла юҡтан ғына түгелдер. Һуңғы йыйынтыҡҡа ҡарағанда, уларҙың һаны алты тиҫтәнән дә ашыу. Йыйынтыҡҡа инмәгәндәре лә байтаҡтыр әле. Хәйер, С. Әлибаевтың көйгә һалынмаған шиғырҙары ла йыр кеүек яңғырай. Ни өсөн? Беренсенән, әлеге лә баяғы, шул ритм теүәллегенән, рифма бөтөнләгөнәндер. Икенсенән, С. Әлибаев поэзияһының бөтә формаһы, бөтә тәбиғәте, бөтә нервылары менән халыҡтың ауыҙ-тел ижадына барып тоташыуынандыр тип уйлайым. Шиғыр юлындағы ижектәр һаны тиһеңме, һүҙҙәрҙең талғын ғына ағышы, параллеллеккә ҡоролған ритмлы һөйләмдәр, фекер тослоғо тиһеңме – былар бөтәһе лә халыҡса, ауыҙ-тел ижадынса. Быны һүҙ менән генә аңлатып биреүе лә ҡыйын – уны йөрәгең менән, йәнең-тәнең менән тойорға кәрәктер. Тағы шуны ла әйтәйек: ҡайһы ғына халыҡтың балалар әҙәбиәтен алып ҡарама, уларҙың юлы шул халыҡтың ауыҙ-тел ижадынан башланғанлығына ышанаһың. Тимәк, бында айырып алғыһыҙ үҙ-ара тығыҙ бәйләнеш ята: ижад юлын балалар өсөн яҙыуҙан башлау, бер яҡтан, шағирҙы халыҡ ижады традицияларына һаҡлыҡ менән ҡарарға, уларҙы ихтирам итергә өйрәтһә, икенсе яҡтан, уның

киләсәк поэтик булмышына ла ниндәйҙер йүнәлеш, әгәр әйтергә мөмкин булһа, форма йәтешлеге биргәндер.

Үрҙә С. Әлибаевтың шиғырҙары һандуғас һымаҡ һайрап, күгәрсен кеүек гөрләп торалар тиелгәйне. Бындай раҫлау ҡайһы берәүҙәрҙә, бәлки, йылмайыу ҙа тыуҙырғандыр. Ләкин, уйлабыраҡ ҡараһаң, аҡһаҡ-туҡһаҡ рифмалы, ҡарға кеүек ҡарҡылдап торған шиғырҙар ҙа етерлек бит беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ни формаһы, ни йөкмәткеһе. Хәйер, ундай шиғырҙарҙың авторҙары шул ҡарҡылдап торған, күңелгә ятмаҫ юлдар менән тәрән, фәлсәфәүи фекер әйтергә дәғүәләйҙер әле, моғайын.

Ошо уңай менән профессор Ғ. Хөсәйенов һүҙҙәрен хәтергә төшөрөп китеү урынлы булыр. Етмешенсе йылдарҙа әҙәбиәткә килгән бер төркөм йәштәр ижадына байҡау яһап, ул былай тигәйне: «Хәҙерге поэзияла, бигерәк тә йәштәр ижадында, замандың актуаль проблемаларының йылдамыраҡ күтәрелеүен, гражданлыҡ активлығын, жанр һәм формалар өлкәһендә ҡыйыу эҙләнеү һәм табыштарҙы күберәк күрге килә. Айырыуса яңы быуынға төрлө тематика һәм поэтика өлкәһендә үҙ көсөңдө һынау мөһим бурыс. Йәшлектә шағирға, әйтәйек, шиғыр техникаһында, ҡолондай ҡойроҡ сәнсеп сабыу ҙа, рифма тышауҙарын, строфа ҡоршауҙарын өҙөп ташлау ҙа килешә торғандыр. Хәҙерге поэзиябыҙға, әйҙә, аҡ шиғыр ҙа, ирекле шиғыр ҙа иркен инһен».

Әлбиттә, күренекле ғалим менән ризалашмау мөмкин түгел. Аҡ шиғыр ҙа, ирекле шиғыр ҙа инһен поэзиябыҙға. Юҡһа, бер урында тапанып, ҡатып ҡалыуың да бар. Традицион методтар новаторлыҡ һыҙаттары менән әленән-әле байыҡтырылып тормаһа, уның үҙ асылын юғалтып ҡуйыуы ла ихтимал. Әммә, тормоштағы һәр нәмәгә хас булғанса, бында ла саманы онотоп ташламау хәйерлерәктер. Яңы замандың яңы талаптарын заманса поэтиклаштырам тип тамаҡ ярып ҡысҡырыуҙан ғына аҡ шиғыр тыумай торғандыр әле ул. Күп осраҡта ундай шиғыр юлдары башватҡысты хәтерләткән өҙөк-мөҙөк һүҙҙәр бәйләменән ары китә алмаусан. Мәгәр, А. Грибоедовтың «Аҡыллылыҡ бәләһе» тигән әҫәре лә ирекле шиғыр менән яҙылған. Тик уның күп юлдары бөгөн булһа (ике йөҙ йылға яҡын ваҡыт үткәндән һуң да!) халыҡ теленән төшмәй – афоризмға әйләнеп киткәндәр. Шулай шул, тәрән мәғәнәле ҡыҫҡа әйтемдәрҙән торған шиғыр яҙырға ой-ой ҙур талант кәрәк, ә традицион шиғыр ҡалыбында үткер фекер әйтеү өсөн, бәлки, унан да ҙурырағы кәрәктер. Ритмик

теүәллекте лә боҙмай, рифма тышауҙарын да өҙмәй, строфа ҡоршауҙарын да ватмай поэзияла яңы ынйылар табыу шағир өсөн еңел эш түгелдер, моғайын.

Әллә ҡайҙан күрәм ауылымды:
Уттар балҡый, нурҙар һибелгән,
Туҡтап ҡалған яҡты вагондарҙай,
Бер-бер артлы өйҙәр тезелгән.

Ҡайһы өйҙән ҡуйы төтөн сыға,
Бөҙрәләнеп үрелә офоҡҡа,
Әйтерһең дә, ауыл – ҙур бер вокзал,
Паровоздар төтөн боркота.

Был – «Ҡышҡы ауыл» тигән шиғыр. Ни әйтәһең – бөтәһе лә үҙ урынында. Һигеҙ юллыҡ был шиғыр шундай йүгерек, шундай ябай тел менән яҙылған, уны аңламаҫ, үҙ итмәҫ бер генә кеше лә табылмаҫ. Әлбиттә, ауыл тураһында шиғырҙар етерлек ул беҙҙә. Ҡышҡыһы тураһында ла, йәйгеһе тураһында ла. Эҙләй китһәң, көҙгөһө-яҙғыһы тураһында ла табып булыр. Был әллә ни ғәжәп тә түгел, сөнки беҙҙең шағирҙарыбыҙҙың туҡһан туғыҙ проценты кисәге ауыл малайҙары һәм ҡыҙҙары. Ләкин С. Әлибаевтың әле телгә алған шиғыры бер кемдекенә лә оҡшамаған. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡышҡы ауыл, уның үҙенә генә хас биҙәктәре булған хәлдә лә, – йәйге ауыл түгел инде. Ә бына шағир, кескәй генә бер деталь ярҙамында ҡышҡы осорҙа ғәҙәттә тынып ҡалыусан ауылға йән өргән дә ебәргән.

Әле һүҙ барған шиғыр – С. Әлибаевтың ауылға арналған берҙәнбер әҫәре түгел. Ауыл тематикаһы уның ижадында ярайһы ғына урын алып тора. Ғөмүмән, ауыл – шағирға даими рәүештә илһам биреп, уға дәрт өҫтәп тороусы ғәжәйеп бер көс, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ижад сығанағы тип әйтергә мөмкин. Был фекерҙе раҫларҙай байтаҡ миҫалдар килтерергә булыр ине. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә генә булһа ла туҡталайыҡ.

Ауылым яны – киң сәскәле ялан,
Уйнай инек унда сабышып
Һәм ярыша инек, сыр-сыу килеп,
Иң-иң аҫыл сәскә табышып.

Тормош – миңә сәскәле киң ялан,
Уйҙарымда хәҙер ошо ҡыр.
Иң гүзәл сәскәм итеп унда
Таңһам ине бөгөн аҫыл йыр!

Һеҙҙең алда – тағы бер һигеҙ юллыҡ. Әйткәндәй, С. Әлибаевтың күпселек шиғырҙары шулай ҡыҫҡалар. Һирәк-мирәк осрай торған иң оҙон тигәндәре лә утыҙ-ҡырҡ юлдан артмаҫ. Ысынлап та, кемгә кәрәк ул дилбегә буйы шиғырҙар? Поэтик фекереңде әҙ генә һүҙҙәр менән уҡыусыға еткерә белеү – үҙе ҙур әҙәби оҫталыҡ түгелме ни!

Ә бына «Уттар» тип аталған шиғыр. Ул да үҙенең тамырҙары менән ауыл темаһына барып тоташа. Тегеләренә ҡарағанда оҙонораҡ – биш строфанан тора. Шуларҙың беренсеһен һәм дүртенсеһен килтерәйек:

Йыш ҡына була, дуҫтарым,
Һағынған минуттарым:
Күктә йондоҙҙарҙы түгел,
Ауылымдың уттарын.

Оҙон урам – буйҙан-буйға
Уттар киткән һыҙылып.
Ҡош Юлымы еребеҙгә
Төшөп ятҡан һуҙылып!

Күреүебеҙсә, әле телгә алған өс шиғыр ауылды өс төрлө картинала күҙ алдына килтереп баҫтыра. Береһендә ул – вагон уттары һымаҡ балҡып торған ҙур вокзал. Икенсеһендә – ауыл янындағы сәскәле киң ялан йылдар үткәндән һуң тормош майҙанына әйләнеп киткән һәм шағир шул майҙанда иң гүзәл сәскәгә тиң булырҙай аҫыл йыр эҙләй. Ниһайәт, өсөнсөһөндә – уттары буйҙан-буйға һуҙылып киткән ауыл урамы ергә төшөп ятҡан Ҡош Юлын хәтерләтеүе менән күңелде арбай. С. Әлибаевтың байтаҡ әҫәрҙәре бына шундай сағыштырыуҙарға, параллеллеккә ҡоролған. Ғәҙәттә, шиғырҙың башында тормошта йыш ҡына осрап, күҙгә бәрелеберәк торған берәй күренеш тасуирлана ла, һуңынан көтөлмәгән һығымта яһап ҡуйыла. «Ер», «Бал ҡорто», «Миләш тәме», «Башҡаса», «Умартасы», «Даға» һ.б. шиғырҙар тап ана шундай. Әйткәнемсә, күләмдәре яғынан улар ҙур

түгелдәр, әммә фекер тослоғона килгәндә – милли поэзиябыҙҙың гәүһәренә торорлоҡтар. «Ер» шиғырында, мәҫәлән, автор башта ер-әсәнең әҙәм балаһына күрһәткән шәфҡәттәрен, уға ҡарата булған мәрхәмәтлектәрен һанап сыға. Аҙаҡта иһә, һис көтмәгәндә:

Ә һин уға, тирең тамыҙмайса,
«Яратам» ти күрмә – ышанмаҫ, –

тигән киҫәтеү яһай. «Бал ҡорто»нда шағир, ғәмәлдә тәбиғәт тарафынан яратылған был ғәжәйеп бөжәктең иҫ киткес эшсәнлегенә һоҡланып бөтә алмайынса хайран ҡалһа ла, һуңғы юлдарҙа барыбер үҙенсәрәк һығымтаға килә:

Һинең һымаҡ ләкин бер ҡасан да
Көтөп ятмай аяҙ сәғәтте, –

ти ул.

«Хикмәтле» фекерҙәр С. Әлибаевтың ауыл темаһына туранан-тура ҡағылышы булмаған әҫәрҙәрендә лә тулып ята. Бына «Кәңәш» шиғырын тыңлап ҡарағыҙ әле:

«Түбәһе лә хатта күренмәй!» – тип,
Һәр бер тауҙы, дуҫым, маҡтама, –
Тәпәш кенә түбәләс тә ҡайсаҡ
Аҡһыл болот менән ҡаплана.

Сал сәсенә ҡарап, һәр кешене
Күпте күргән тиеп аңлама –
Бер елғыуар, ҡыуыҡ баштың да бит
Ваҡыты менән сәсе саллана.

Бында, минеңсә, бер ниндәй ҙә аңлатма кәрәкмәй торғандыр – бөтәһе лә көн кеүек асыҡ: кешенең кешелек асылын уның тышҡы ҡиәфәтенә күҙ ташлап ҡына аҙағына тиклем күреп тә, белеп тә булмай икән шул. Бер уйлаһаң, был – әллә ни яңылыҡ та түгел һымаҡ. Бер-береңде яҡшыраҡ аңлайым тиһәң, бергә-бергә бер бот тоҙ ашап бөтөрөргә кәрәк тигән һүҙ ҙә бар бит. Ләкин тәү ҡарамаҡҡа тапалған, иҫке булып күренгән фекерҙе яңыса, үҙеңсә поэтиклаштырыу, шул фекергә таянып яңы образдар тыуҙырыу – поэзияға үҙ өлөшөңдө

индереү түгелме ни? Шағирҙың «Кәңәш»тә әйтергә теләгән уйы «Икәү» тигән шиғырҙа уғата ла үҫтерелә, көсәйтелә, тәрәнәйтелә, хатта, әйтер инем, күпмелер кимәлдә аяныс төҫ ала:

Берәүҙең юҡ һыңар аяғы,
Туҡ-туҡ килә терәү-таяғы;
Атлап бара, ҡалмай аранан,
Аҡһаҡ тимәм, уға ҡараһам.

Ә берәүҙең иҫән аяҡтар,
Ләкин нисек баҫа, һынап бар;
Гел үҙенә йөрөй юл һаҡлап, –
Ғүмер юлын уҙа ул аҡһап.

Бында инде фекер хикмәтлеге генә түгел – тормош фәлсәфәһе, йәшәү принцибы. Төрлө кешенең төрлөсә көн итергә яраҡлашыуын, төрлөсә ғүмер уҙғарыуын шағир бик оҫта тотоп алған, юғиһә. Тормоштоң йәмен, тәмен бөтә йөрәге, бөтә булмышы менән тойоп, намыҫлы хеҙмәттән ләззәт табып, тырышып-тырмашып йәшәүселәр менән бер ҡатарҙан ғүмер баҫҡыстары буйлап еңел-елпе, артыҡ көс сарыф итмәйенсә, сәскәнән-сәскәгә һикереп кенә үтеүсе әҙәми заттар ҙа етерлек шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ундайҙарҙың маңлай күҙҙәре күрһә лә, күңел күҙҙәре һуҡыр, шағир үҙе әйтмешләй, аяҡтары иҫән булһа ла, ғүмер юлдары аҡһай.

«Икәү»ҙе йөкмәткеһе менән дә, формаһы менән дә «Аҡыл етмәҫ…», «Гел тынлыҡты эҙләгәнгә…», «Башҡаса» шиғырҙары дауам итә. Уларға тағы «Ҡурай»ҙы, «Берәү килә», «Сәхнә» һәм башҡа бик күп шиғырҙарҙы өҫтәп булыр ине. Әгәр бер әҫәрендә шағир гел тымыҡты, гел ышыҡты өҫтөн күргән йән эйәһен тынлыҡтан ҡасырға, елгә ҡаршы елергә саҡырһа, икенсеһендә иһә «кемле-гемде тарих күрһәтер ул, аҡыл етмәҫ эштәр башҡарҙым!» тип һөрән һалған бер әрһеҙҙе тереләй ҡәбергә күмә. Бер әҫәрендә шағир бөйөк ҡарағай эргәһендә үҫеп ултырған ҡамсы буйлыҡ ҡына ҡурайҙы күрмәүселәргә үпкәһен белдерһә, икенсеһендә иһә ул уҡыусыны «тормош ләкин сәхнә түгел – ҡабат сығып уйнап булмай» тип иҫкәртә. Был шиғырҙарҙың бөтәһе лә ҡапма-ҡаршы мәғәнәне аңлатҡан сағыштырыуҙарға ҡоролған. Уларҙың формалары теүәл, телдәре үткер. Ҡайһы бер һөйләмдәр хатта афоризмға тартым.

«Ҡабат сығып уйнап булмай» тигәс, С. Әлибаевтың тағы бер шиғыры иҫкә килеп төштө. «Ҡыуғын» тип атала ул. Тәү ҡарамаҡҡа шиғыр үтә ябай тойола. Башта һүҙ урам буйлап, йәиһә ауыл тирәләй мал ҡыуыу йолаһы тураһында бара. Ҡыуғынға ауыл малы ла ҡушылып китеүсән булған. Ошо йоланы иҫкә алғандан һуң шағирҙың иғтибары яҙғы Иҙелгә йүнәлә. Һәм кинәт кенә уның күңелендә ассоциатив фекер тыуа: йылға ярҙарына һыя алмайынса аҡҡан көтөү-көтөү боҙҙар ауыл урамы аша уҙып барыусы ҡыуғынды хәтерләтеп ҡуя. Ләкин шиғыр бының менән генә тамамланмай әле. Уның асылы һуңғы ике строфала:

Ашыҡтырып, тулҡын ҡамсы һелтәй,
Боҙҙар бара геүләп йә тынып.
Ала-сола бер йыл ғүмер ошо
Ҡыуғын менән китте ҡушылып.

Белдем микән уның ҡәҙеркәйен,
Моңһоу уйға хәҙер сумһам да?
Бора алмам,
уға етә алмам,
Короҡ тотоп, һыбай сыҡһам да…

Эйе, уйҙар моңһоу. Тик ни эшләмәк кәрәк һуң? Ҡыуғынға ҡушылып киткән малды һыбай сығып, кире бороп алып ҡайтып була ла, ә бына Иҙел боҙҙары кеүек аҡҡан ғүмерҙе кире ҡайтарып ҡара әле!

Йәшәү ысулдары, йәшәү принциптарына кире ҡайтып, С. Әлибаевтың «Башҡаса» тигән шиғырына ла туҡталайыҡ әле. Күләме менән әллә ни ҙур булмаһа ла, уҡыусынан ғәфү үтенеп, уны тулыһынса килтермәй булдыра алмамдыр, ахыры. Бына ул:

Тертләп киттем:
шыршы ауып ята,
Йәп-йәш көйө, –
был ни ғәләмәт?!
Бергә үҫкән талдар, еректәр ҙә,
Миләштәр ҙә иҫән, сәләмәт.
Шыршы,
ысын шыршы булып тыуғас,
Ғүмер итә алмай башҡаса:

Күтәрелә өҫкә,
борғоланмай
Түбәләре күккә ашҡанса.

Күтәрелә,
һуңын ҡарап тормай,
Ә бында шул ерҙәр һаҙамыҡ.
Уртасалап ҡына көн иткәндәр
Йәшәй бирә, ятмай ҡаҙалып,
Тик шыршылар ауа…

Был шиғырға һоҡланмай мөмкин түгел, минеңсә. Уның килмәгән ере юҡ: формаһы күркәм, йөкмәткеһе тәрән, уҡырға еңел. Әгәр әҙәби әҫәрҙе сәнғәттең бүтән төрҙәре менән сағыштырыу ғәҙәте булһа, С. Әлибаевтың «Башҡаса» шиғырын сағыу буяуҙар менән яҙылған мәшһүр полотноға йәиһә ҡупшылығы менән күҙҙең яуын алып торған архитектура ҡоролмаһына тиңләп булыр ине. Ысынлап та, бында ниндәй ҙә булһа артыҡ деталь дә, шыҡһыҙ образ да, һүҙ бутҡаһы ла юҡ. Бер генә һөйләмде лә, хатта бер генә һүҙҙе лә алып ташлармын йәиһә уны икенсе һүҙ менән алыштырырмын тимә – уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ урынында, бер-береһенә ылыҫып торалар. Әҫәр өҫтөндә автор күпме эшләгәндер – бынығы инде уның үҙенә генә билдәле. Әммә тәбиғәттең бәләкәй генә бер күренешенә иғтибарын йүнәлтеп, уны оҫта итеп символлаштырыу аша иҫ китмәле аҡыллы фекер әйтеүгә ирешеүе – бәхәсһеҙ: уртасалап ҡына көн иткәндәр йәшәй бирә, ятмай ҡаҙалып…

Тәбиғәт күренеше тигәндән, әлеге шиғырҙа миләш образы ла күҙгә салынып китә. Башҡорт поэзияһы өсөн был образ яңыларҙан түгел түгеллеген. Назар Нәжмиҙә лә бар ул «миләш», Рәми Ғариповта ла. Зәйнәб Биишеваның «Миләш»е киң таралған йырға ла әйләнеп бара инде. С. Әлибаевтың үҙендә генә лә был образ, әгәр яңылышмаһам, өс тапҡыр ҡабатлана. Ләкин быға ҡарап ҡына уны тапалған, трафаретҡа әйләнгән образ тип әйтеп булмай, сөнки үрҙә телгә алынған шағирҙарҙың һәр ҡайһыһы был образды үҙенсә тыуҙыра, үҙенсә аса, үҙенсә поэтиклаштыра. Дөрөҫ, С. Әлибаев шиғырҙарында миләш образы нисектер түбәнһетелеберәк, кәмһетелеберәк бирелгәндәй тойола. «Башҡаса»ла, мәҫәлән, был ағас, үҙенсә күркәм, үҙенсә гүзәл булһа ла, шыршының күләгәһенә генә торорлоҡ үҫемлек

һымағыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырыла. Ә «Миләш тәме»ндә иһә ул бер аҙ сарсауҙы баҫыусы, ләкин ирендәрҙе өтөп алыусы емеш шикеллерәк һүрәтләнә. Әлбиттә, шиғырҙың асылы, төп мәғәнәһе быға ғына ҡайтып ҡалмай: уның йөкмәткеһе күпкә байыраҡ, авторҙың әйтергә теләгән уйы ла тәрәндәрәк ята. Һүҙ бында күпте өмөт итеп, йыш ҡына әҙгә лә ҡәнәғәт булып ҡалырға тура килеү хаҡында бара:

Кай сағында шулай:
Һуңғы сиктә
Ни булһа ла сарсап табаһың.
Татлылары инде ҡалмағастын,
Асыһын да эҙләп ҡабаһың.

Тимәк, беҙҙең алда тағы килеп – хикмәтле фекергә ҡоролған, «улым – һиңә әйтәм, киленем – һин тыңла» тибындараҡ яҙылған шиғырҙың бер өлгөһө.

Ләкин С. Әлибаевтың бөтә поэтик арсеналы тик ошо типтағы әҫәрҙәрҙән генә тора икән тип уйлау төптө хата булыр ине. Әлбиттә, улай түгел. Тәбиғәттең иҫ киткес бай күренештәренән, күҙҙең яуын алырлыҡ буяуҙарынан ниндәй ҙә булһа берәй ғиллә табыу ниәтенән генә түгел, бәлки уларҙың хозурлығына, сафлығына, гүзәллегенә һоҡланыу арҡаһында тыуған тәьҫораттарын рифмаларға һалыу нәтижәһендә ижад ителгән шиғырҙары ла етерлек уның. Ғилми тел менән әйткәндә, шағир пейзаж лирикаһы өлкәһендә лә берҙәй активлыҡ, берҙәй егәрлелек күрһәтеп эшләй һәм уның тәбиғәткә арналған әҫәрҙәренең палитраһы шаҡтай бай һәм күп төрлө. Был өлкәлә лә ул тәбиғәт донъяһында хөкөм һөргән үҙ аллы тормоштоң объектив законлылығын юғары баһалаусы, ундағы бәләкәй генә хәрәкәтте лә күҙ уңынан ысҡындырмай бөтә йөрәге менән тоя белеүсе, шул хәрәкәтте һәм бер-береһен алмаштыра-алмаштыра өҙлөкһөҙ дауам иткән үҙгәрештәрҙе сағыу биҙәктәр ярҙамында мауыҡтырғыс бер күренеш рәүешендә уҡыусы күҙ алдына баҫтыра алыусы шиғыр оҫтаһы булып ҡала.

С. Әлибаев йылдың бер генә мәленә лә битараф түгел. Яҙ менән көҙ, ҡыш менән йәй – уларҙың һәр ҡайһыһы уның лирикаһында үҙенсәлекле сағылыш таба. Был миҙгелдәрҙең бәғзеләренә ул хатта ҡат-ҡат әйләнеп ҡайта, әйләнеп ҡайта ла, уларҙы йәнле итеп һүрәтләү өсөн яңы буяуҙар эҙләй. Ә бына «Урман йыры» шиғырында бөтә

миҙгелдәр ҙә бер ҡыуыш аҫтына йыйылғандар төҫлө. Был шиғырҙың дүрт строфаһында урмандың дүрт ваҡытҡа хас дүрт сифаты асыла: йәйен ул «шишмә булып гөрләй»; көҙөн, «аҡ яулыҡтар болғап», йылы яҡтарға осоп китеүсе ҡоштарҙы оҙатып ҡала; ҡышын «бүре булып олой, түҙә алмайса ҡаты һыуыҡҡа»; яҙын «ағастарҙа шат бөрөләр шыбырлаша» башлай. Беренсе һәм бишенсе строфаларҙа иһә шағир уҡыусыһын урманды ҡолаҡ һалып тыңларға саҡыра, уның йырына иғтибарлы булырға өндәй.

Пейзаж лирикаһында С. Әлибаев йыш ҡына метафора алымына мөрәжәғәт итә. Йөкмәткеһе менән шул уҡ йыл миҙгелдәренә бәйле «Япраҡ» шиғырында, мәҫәлән, ғәҙәттәге япраҡ башта Ҡояшҡа ҡарап күҙен аса; унан һуң, ағастың күрке булып, күккә олғаша; хатта «көҙ ҙә, боҙло ямғыр ҡойғанда ла», ул күккә баға, тик «алтын төҫкә – Ҡояш төҫөнә» ингәс кенә өҙөлөп төшә. Ошо рәүешсә, япраҡ образы тере кеше шикелле күҙ алдына килеп баҫа. «Ҡышҡы япраҡтар», «Март», «Яҙ», «Ҡояш ҡошо», «Тәүге ҡар», «Йырғанаҡ йыры», «Яҙғы ямғыр», «Әбейҙәр сыуағы», «Ҡышҡы урман» тигән шиғырҙарында ла шағир тәбиғәтте балаларса ихлас яратыусы, уны нескә аңлаусы, һәр һулышын йәне-тәне менән тойоусы ер улы булып ҡала.

Шағирҙың маңлай күҙе лә, күңел күҙе лә бик осло, ул бөтәһен дә күрә һәм шул күргәндәрҙе йөрәге аша үткәрә: ғинуар еле көрттәр һалғанда ла ағас башында зелтерәшеп өшөп ултырған япраҡтар уға ваҡытында йылы яҡҡа китә алмай дуҫтарынан айырылып ҡалған ҡошсоҡтар кеүек тойола; март еткәс иһә шағир боҙға ҡуша туңған күбәләктең көнгә бағыуын, ҡанаттарын яҙыуын шәйләй, ә йылғалағы һыуҙың, морон төртөп сыҡҡан бәпкә шикелле, боҙ-ҡабығын сиртә башлауын һиҙемләй; яҙғы ҡояш уға, һары шәлъяулығын һалып, алһыу яулыҡ ябынған һымаҡ, ә шишмәләрҙе ул әкиәт һылыуының сулпы таҡҡан көмөш толомона оҡшата һ.б. Ни ҡәҙәр бай фантазия, поэтик зирәклек һәм һиҙгерлек бында! Әйтерһең дә, шағир тәбиғәт менән бер бөтөн! Әйтерһең дә, ул тәбиғәт ҡосағында иңләп-буйлап йөҙә лә, уның эске серҙәренә төшөнөп, йәшәү өсөн, ижад итеү өсөн үҙенә яңынан-яңы көс, яңынан-яңы дәрт ала.

Пейзаж лирикаһын диңгеҙгә арналған шиғырҙар теҙмәһе тулыландыра. Шағир ижадында был – үҙенә бер күренеш тип уйлайым мин. Ни әйтһәң дә, ата-бабаларыбыҙ диңгеҙ буйына ултырмаған, ә тау битен һайлағандар бит. Ләкин шулай булыуға ла ҡарамаҫтан, был тема беҙҙең поэзиябыҙҙа һирәк-мирәк булһа ла яңғыраш тапмай

ҡалмай. Шағирҙарыбыҙ диңгеҙ буйында булып ҡайттылармы, унда тыуған тәьҫораттарын тиҙерәк шиғыр юлдарына һалырға, уҡыусылар менән уртаҡлашырға ашҡыналар. Һәм был һис тә ғәжәп түгел. С. Әлибаевҡа килгәндә иһә, диңгеҙ уның өсөн даими темаларҙың береһенә әйләнеп бара, шикелле. Белмәйем, был нимә менән аңлатылалыр: башҡаларға ҡарағанда ул диңгеҙ янында йышыраҡ була торғандырмы, әллә иһә бер барғанда берәгәйле тәьҫораттар алып ҡайталырмы – һәр хәлдә уның хәҙер ике тиҫтәнән ашыу шиғырҙы берләштергән «диңгеҙ шәлкеме» бар. Шуныһы ла мөһим: улар бер юлы ғына яҙылмағандар, күрәһең. Сөнки йыйынтыҡтан-йыйынтыҡҡа яңылары өҫтәлә килә. Йөкмәткеһе менән дә, формаһы менән дә был шиғырҙар, әлбиттә, шаҡтай төрлөләр. Күберәге әлеге шул метафоралар ярҙамында, символдар аша ниндәй ҙә булһа берәй хикмәтле фекер «ҡаҙып сығарыуға» ҡоролған. Әйтәйек, бына бындайыраҡ:

Берәүҙәре киткән Аҡ диңгеҙгә,
Каспийына киткән, Аралға.
Хәйерлегә булһын!
Аҡ уй менән
Юлым төштө минең Ҡараға.

Яҙмыш минән байтаҡ һынау алды,
Бутаған юҡ аҡты ҡараға.
Ҡара диңгеҙ!
Зәңгәр күҙҙәреңә
Хаҡлымындыр тура ҡарарға?..
(«Йәйрәп ятҡан һыуҙарҙың да…»)

«Әллә ниндәй сағы күңелемдең…», «Әйтсе, тулҡын?», «Аҫыл таштар эҙләй бер ҡыҙ…», «Кешеләрҙе диңгеҙ тарта», «Шауҙырлатып диңгеҙ…», «Диңгеҙ тыны…» тигән шиғырҙар ҙа бер кемде лә битараф ҡалдырмаҫ. Уларҙы уҡығанда диңгеҙҙе үҙ күҙҙәре менән күрмәгән кеше лә уйланыр, тулҡынланыр, хистәргә бирелер, хатта ысын күңелдән йылмайып та ҡуйыр:

Яр буйынан килә бер ҡыҙ,
Күпме ерҙәр уҙғандыр?

Белһәң ине, кемгә генә
Бүләк эҙләр булғандыр?

Уның менән аҫыл таштар
Эҙләшеп үтер инем,
Иң аҫылы үҙең тиеп
Алыр ҙа китер инем.
(«Аҫыл таштар эҙләй бер ҡыҙ…»)

Әле һүҙ барған шәлкемде С. Әлибаев «Үҙ диңгеҙем» тип атаған. Һәм был һис тә юҡҡа түгел. Ошо атаманың төбөндә тәрән мәғәнә ята, минеңсә. «Йәйрәп ятҡан һыуҙарҙың да икән бер тиң түгел холҡо, ҡылығы… Һәр кемдең дә була үҙ диңгеҙе, ярһыуҙары була, тымығы». Эш бында һәр шағирҙың диңгеҙҙе үҙенсә аңлауында, үҙенсә ҡабул итеүендә, үҙенсә йырлауында ғына түгел. Билдәле булыуынса, диңгеҙ элек-электән кешеләрҙе үҙенә йәлеп итеүсе илаһи бер көскә әүерелгән. Батшалар ҙа бик яратҡан уны. Төрлө заманда власть башында тороусы башҡа әһелдәр ҙә үҙ иткән. Беҙҙең көндәрҙә иһә ун бармағына ун алтын балдаҡ кейеп йөрөүсе ҡайһы бер мещандарҙың ҡеүәһен билгеләрҙәй күрһәткескә әйләнеп киткән. Ә бына С. Әлибаевтың лирик геройы өсөн ошо мөғжизәнән дә мөғжизәлерәк диңгеҙгә ҡарағанда тыуған-үҫкән төйәге ҡәҙерлерәк, уның тыуған төйәге үҙе диңгеҙгә тороплоҡ: сөнки «зәңгәр күкте зәңгәр диңгеҙ күреп, тәү ҡат шунда ҡанат ҡағылған» бит. «Көн битендә, ҡырсындарҙа аунап, күпме генә көндәр» уҙғармаһын, геройҙың үрһәләнгән йәне йәмен дә, тәмен дә тапмай эскән сит һыуҙарҙың. Хатта буй-һындарын һығылдырып, яр буйында аҫыл таштар эҙләп йөрөгән сибәр ҡыҙыҡай ҙа уның тыуған яҡтарына осорға әҙер торған йәнен тынысландыра алмай. Бына ошонда беҙ был мәҡәләләә әйтергә теләгән уйҙың һуңғыһына килеп еттек тә инде, булһа кәрәк: кем ул С. Әлибаевтың лирик геройы? Әлбиттә, был үҙе айырым бер тема. Һәм уның тураһында бик оҙаҡ һөйләргә мөмкин булыр ине. Ләкин алда төҫмөрләнгән ҡайһы бер һыҙаттарға тағы бер нисәне өҫтәп, туҡталыу хәйерлерәк булыр, моғайын.

С. Әлибаевтың лирик геройы тышҡы яҡтан бик сабыр күренһә лә, ысынында ул янып-көйөп, ашҡынып йәшәүсе кеше. «Йырлап ҡалайыҡ әле…»лә был сифат нисектер декларативыраҡ, яңғырауыҡлыраҡ һүҙҙәр аша сағылдырылһа, «Йәйғор»ҙа ул ҡойоп ҡуйған образ кимәленә күтәрелгән:

Мин һаман да юлда.
Был тормошта
Күптер, ахыры, үтер тау, ҡырым,
Сөнки алда мең-мең төҫтә балҡый
Бына-бына етер йәйғором.
Юл саңдарын баҫып, ямғыр үтте,
Йәйғор ҡалҡты, тағы уйнай нур.
Күңелемде һәр саҡ арбап торған
Шиғриәт тә, ахыры, шул йәйғор.

С. Әлибаевтың лирик геройы – тәрән хистәргә, яҡты хыялдарға бирелеүсән кеше. Уйҙары йүгерек, аҡылы зирәк, күңеле саф, теләге изге уның. Яңғыҙ ҡалған мәлдәрендә, мәҫәлән, һалҡын ай ҙа геройҙың йәненә йылы өргән шикелле. Тормош утҡа һалһа – уны шунда уҡ һүндерергә, әгәр инде һөйөү утҡа һалһа – күпме кәрәк, шул ҡәҙәр түҙергә әҙер ул. Мөхәббәтте лә үҙенсә аңлай ул: сәскәгә наҙлы ҡояшы ла, яҙғы ямғыры ла кәрәк икән, тимәк, ысын мөхәббәттең дә күҙ йәшһеҙ генә булыуы мөмкин түгел. Күк йөҙөндәге ике Етегән шағир хыялында иркәһе менән икеһенә семәрләнгән ике ултырғыҫҡа әйләнеп китеүе лә ихтимал. Аҡиҙел буйына шаулап-гөрләп яңы яҙ килгәс, лирик геройға уның йәшлеге кире ҡайтҡан һымаҡ тойолған икән – быға ла ышанмай ярамаҫтыр. Көҙөн аҡҡоштар осоп киткәс, геройға серҙәш булып уларҙың ҡауырһындары – аҡ ҡайындар – ҡала икән, был да ғәжәп түгелдер. Ғөмүмән, ошондай поэтик биҙәктәр йыш күҙгә салына С. Әлибаев шиғырҙарында. Уларға тик иғтибар ғына етһен. Теләгән кеше йән аҙығы ла, күңел тыныслығы ла табыр бында.

Тағы килеп, С. Әлибаевтың лирик геройы – ер-әсәгә табынған, намыҫына тоғролоҡ, эшһөйәр кеше. Уның был һыҙаттары күҙгә салынып ҡына китмәй, бәлки ярылып ята. Ләкин был саң ҡағып, оран һалыу тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Шағир барыбер шағир булып ҡала, әйтер уйын уҡыусыға еткереү өсөн матур һөйләмен дә, поэтик детален дә таба. «Ҡоштарҙың мин күп ғәҙәтен алдым», «Тамсы», «Беҙ үҫкәндә» әҫәрҙәре был йәһәттән айырыуса иғтибарҙы йәлеп итерлек. «Мин ҡоштарҙың күп ғәҙәтен алам, яҙһын, тимен, алыҫ осорға, яҙмаһын тик, илем, һиндә тыуғас, сит ерҙәргә китеп ҡышларға, был ғәҙәте ҡалһын ҡоштарға», «Ерем, һинең бөтә изгелеккә мин хыянат итһәм бер тамсы, аямайса уйнат баш осомда тамсылы ҡамсы, үсең ҡанғансы», «Беҙҙең әле ҡырыҫ күңелдәрҙән өлгөрмәгән һағыш

таралып, – үҫкән саҡта беҙ ҡояшҡа түгел, ҡара ергә күберәк ҡараныҡ». Ә бына бынылы «Артылыш»тан:

Енем һөймәй шуға,
берәү һыҡтап,
Үҙ тынына үҙе сәсәһә,
Йәки берәү,
өркөп бейеклектән,
Тигеҙ ерҙә шыуышып йәшәһә.

Бәлки, юлдың осона сыға алмам,
Ауһам, ҡалыр алда артылыш.
Әйтһә әйтһендәр шул саҡ:
үҙ өлөшөн
Йәшәне, тип, бары яртылаш.
Әйтмәһендәр берүк:
үҙенең эшен
Эшләне, тип кенә, яртылаш…

Минеңсә, был юлдарҙа фекер тослоғо ла, һүҙ ҡеүәһе лә етерлек. Уларҙың дауамын «Мин – кеше», «Ни етә!», «Ғүмер», «Хыялдарым», «Йәшәй-йәшәй», «Элеккесә…», «Намыҫ», «Хаталар», «Һауаларға ҡарап һауаланма…» һәм шуның кеүек башҡа бик күп шиғырҙарҙа табырға мөмкин. Һәм, әйтергә кәрәк, лирик геройҙың образы әҫәрҙәнәҫәргә тағы ла асыҡлана, тәрәнәйә һәм тулылана ғына бара, уның характерына яңынан-яңы һыҙаттар өҫтәлә һәм ул бөтә күркәмлеге менән беҙҙең алға килеп баҫа. Килеп баҫа ла, һауаларға ҡарап һауаланырға түгел, бәлки йырға ҡушылырға саҡыра, сөнки:

Шишмә тынһа, ҡаялар ҙа өнһөҙ,
Ҡылһыҙ ҡалған скрипка ишелер…
Был донъяның ниндәй йәме ҡалыр,
Йырһыҙ булһа әгәр кешеләр?!

Әйтергә теләгән һуңғы һүҙ: С. Әлибаевтың поэзияһы – ваҡытлы поэзия түгел. Ул китергә килмәгән. Үҙенең әҫәрҙәрендә шағир теләһә ҡайһы осорҙа ла кешеләрҙе берҙәй уйландырырлыҡ һәм берҙәй һоҡландырырлыҡ нәмәләр хаҡында һөйләй.

1993

«ӨЛГӨРҘӨ МИҡӘН ҺҮҘҘӘРЕМ…»

Гүзәл Ғәлиеваның «Ут һүрелмәй усағымда» тигән шиғырҙар йыйынтығының бер аҙ һуңлабыраҡ булһа ла иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеүе һис тә юҡтан түгел. Уның тышлығына эре хәрефтәр менән ябай ғына итеп яҙып ҡуйылған шиғри юлдар нимәһе менәндер Назар Нәжми тауышын хәтерләтеп ҡуйғандай булды. Һәм мин ашыҡмайынса ғына, китаптың биттәрен асып, күҙ йүгертә башланым…

Һүҙемде бер ни тиклем һуңға ҡалыбыраҡ әйтеүемдең дә үҙ сәбәптәре бар. Хәҙер бит магазин кәштәләренә нисек итеп кеше үлтерергә, нисек итеп дуҫыңды алдарға, нисек итеп юлдан яҙған ҡатын-ҡыҙҙарҙың күңелен күрергә өйрәтә торған китаптар хужа булды. Уларҙың тышлыҡтары күҙеңдең яуын алырлыҡ – буяу йәлләмәйҙәр. Ниндәй ҡағыҙға баҫалар тиһегеҙме? Йылҡылдап торған шыпшымаһына. (Шуларҙы инглизсәнән урыҫ теленә тәржемә итеп ултырған аҡса ҡолдарын әйтер инем!) Ни эшләмәк кәрәк, донъяһы шулайға әйләнеп китте – классик әҙәбиәтебеҙҙе сит илдәр көсләп таҡҡан еңел-елпе әҫәрҙәр ҡыҫырыҡлап сығара башланы. Гүзәл Ғәлиеваныҡы шикелле йыйынтыҡтарҙың хәле иһә бөтөнләй мөшкөлләнде – улар, көс-хәл менән баҫылып сыҡһалар ҙа, күҙгә бәрелеп бармаҫ булып киттеләр.

Ҡулға бер килеп эләккәс, китапты күҙ уңынан үткәрә башларға тағы бер сәбәп булды – авторҙың тышлыҡ менән титул бите араһында урын алған портреты. Мөләйем йөҙлө, уйсан ҡарашлы был шағирәнең әҫәрҙәре ниндәйерәк икән? Дөрөҫ, уның айырым шиғырҙарын ваҡытлы матбуғат биттәрендә элегерәк тә уҡыған һымаҡмын. Ул саҡта күңелемде ниндәй уйҙар биләгәндер, өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын инде. Ә хәҙер бына, ҡасандыр төрлө баҫмаларҙа күренеп киткеләгән шиғырҙар бер йыйынтыҡҡа тупланғас, уларҙы икенсерәк күҙлектән сығып, иғтибар менәнерәк уҡыу форсаты тыуҙы. Шул уҡ ваҡытта үҙемде лә һынап ҡарамаҡ булдым… Һәм йыйынтыҡты асып ебәреүсе «Кескәй генә Ер шарындай йөрәгемдә» тигән тәүге шиғырҙан уҡ хайран ҡалдым: быға тиклем башҡорт поэзияһында беҙҙең тыған республикабыҙ йөрәккә тиңләнә ине, ә Гүзәл иһә бөтә Ер шарын йөрәгенә һыйҙырған. Йөрәк Ер шарына әйләнгән дә, йәшел урмандар менән ҡапланған. Унда тауҙар ҙа

ҡалҡып сыҡҡан, ҡаялар ҙа барлыҡҡа килгән, даръялар ҙа шаулап ағып ята. Кескәй генә Ер шарын хәтерләткән йөрәктә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яралар ҙа бар, шунда атлығыусы саялар ҙа юҡ түгел икән. Бына был – поэтик табыш, исмаһам. Күпме образлылыҡ, ниндәй бай хыял бында! Ошолор инде ул шағирлыҡ билгеһе – ябай ғына нәмәләрҙе лә поэзия теленә күсереп, уларҙан хикмәт таба белеү маһирлығы, донъяны үҙеңсә күреү һәм аңлатыу һәләтлеге. Был шиғырҙа авторҙың эске донъяһы, уның характерының ҡайһы бер һыҙаттары ла сағылыш тапмай ҡалмағандыр әле. Ул, моғайын, асыҡ йөҙлө, киң күңелле, сабыр холоҡло, баҫалҡы, ләкин үҙ баһаһын белеп йәшәүсе ханымдыр. Тормош мәшәкәттәре лә, урынһыҙға ҡыйырһытылыуҙар ҙа ситләтеп үтмәй торғандыр уны. Ярҙамсыллыҡ һәм шәфҡәтлелек сифаттарынан да мәхрүм түгелдер ул, сөнки уның кескәй генә Ер шарына тороролоҡ йөрәгендә «изгелекле йәшел-йәшел урмандар» яҡлауға мохтаж бәндәләрҙе дауылдарҙан ышыҡларлыҡ, ә даръяларҙың еләҫ тулҡыны иһә күңелдәрҙәге яраларҙы йыуырлыҡ. Ҡыҫҡаһы, ун алты ғына юлдан торған ошо шиғыр бына күпме фекер бәйләнештәре тыуҙырҙы миндә, ниндәй бай күренештәрҙе күҙ алдына килтереп баҫтырҙы!

Йыйынтыҡҡа исем биргән юлдарҙы эҙләп табыу ниәте менән уның биттәрен аҡтарыуымды дауам итәм. Ниһайәт, барып еттем... Бына ул шиғыр! «Күңелем өшөгәндә» тип атала. Әсәһенә мөрәжәғәт итеп, лирик герой былай ти:

Һинән йыйған аҡыл менән
Ҡатты минең дә быуын.
Усағымда ут һүрелмәй,
Тәрбиәле аш-һыуым.

Тимәк, шиғырҙың бер юлы әҙ генә үҙгәртелгән дә, китаптың тышлығына сығарылған. Тик нимәһе менән һуң әле ул Назар Нәжмиҙе хәтерләтеп ҡуйҙы? Уның лексиконында йыш осрай торған ут, усаҡ, әсә, тыуған йорт һүҙҙәре менән генә түгелдер ҙә баһа? Бәлки, поэтик ауаздашлыҡ төптәрәк ята торғандыр, һәм ул тауыштар, өндәр ярашлығына ҡайтып ҡалалыр? Ниңә һуң әле Г. Ғәлиеваның «Күңелем өшөгәндә»һе минең хәтер һандығымдан Н. Нәжмиҙең «Ут күрше»һен аҡтарып сығарҙы? Бына ғәжәп! Әлбиттә, был ике әҫәрҙе бер ҡалыпҡа һалырға йыйынмайым. Ләкин шул уҡ ваҡытта улар араһындағы

ниндәйҙер уртаҡлыҡты тойоуымды ла йәшерә алмайым. Бер генә миҫал. Н. Нәжмиҙең лирик геройы, йөрәгендә ут бөтөп торған саҡтарҙа, кешеләргә мөрәжәғәт итә. Г. Ғәлиеваныҡы ла шуға тартым: көҙөн-ҡышын күңеле өшөмәһен өсөн, ул гел йәй булып ҡалыу серенә төшөнөргә хыяллана.

Тағы килеп, ике шағирҙың да ижад эшенә ҙур талапсанлыҡ менән ҡарауҙарын, уҡыусы алдында тәрән яуаплылыҡ тойоуҙарын, ирешелгәндәр менән маһайып китмәүҙәрен, ә, киреһенсә, үҙҙәрен бик ябай, баҫалҡы тотоуҙарын шәйләмәй мөмкин түгел. Әйтәйек, шул уҡ «Ут күрше»лә Н. Нәжми, бик ҙурға өмөт итмәйенсә, үҙе лә кешеләргә аҙ-маҙ ут бирһә, ҡәнәғәт булырға әҙерлеген белдерә. Ошоға оҡшашыраҡ фекер Г. Ғәлиевала ла ишетелеп киткеләй. «Өфөнөң урамдарында…» тигән шиғырында, мәҫәлән, ул былай ти:

Тик үҫә бара бер һорау,
Күңелгә хафа тулып:
Өлгөрҙө микән һүҙҙәрем
Кешеләрҙең күңеленә
Уйылып ҡалырлыҡ булып?

Кеше күңеленә уйылып ҡалыу… Шәп әйтелгән бит! Ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта тәрән мәғәнәле лә. «Ташҡа баҫылған һүҙ», «ташҡа уйылған һүҙ» төшөнсәләре таныш, күнегелгән, өйрәнелгән, ә бына һүҙҙең күңелгә уйылып ҡалыуы – яңысараҡ яңғырай, минеңсә. «Өлгөрҙө микән һүҙҙәрем» дә бик үҙенсәлекле әйтелеш. Ятыуы етте микән, йөҙө килде микән, тоҙо таман микән, бешеп өлгөрҙө микән… Күпме ассоциация! Әйтелгән теләһә ниндәй һүҙ ҙә йөрәккә барып етеүсән булмай шул. Һүҙҙең бәҫен ундай кимәлгә күтәреү өсөн, бик күп тырышырға, күп көс һәм хеҙмәт һалырға кәрәк. (Өҫтәүенә, талант тигән нәмә лә булғанда, әлбиттә.) Был – хәҡиҡәт, һәм ул дәлилләүгә мохтаж түгел. Әле һүҙ барған шиғырҙың асылы иһә – ошо хәҡиҡәтте тәрән аңлауҙа, авторҙың, үҙ ижады тураһында уйланып, бер аҙ хафаланыуында. Һәйбәт сифат. Ҡыҙғаныс белдереп, тураһын әйтергә кәрәк: ул сифат ижад кешеләренең бөтәһенә лә тәтемәй. Сафуан Әлибаевтың шиғырында берәү маҡтанғанса, «кемлегемде тарих күрһәтер ул, аҡыл етмәҫ эштәр башҡарҙым!..» һымағыраҡ һөрән һалыу өҫтөнлөк итеп ҡуйғылай, мин-минлек хөрәфәте йәнде көйҙөрә.

Китапты битләй торғас, «Изел ярында ултырам» тигән шиғырға тап булдым. Баҡһаң, минең күңел белмәй һиҙенмәгән икән дә баһа – «Ут һүрелмәй усағымда»ның авторы үҙенең Н. Нәжмигә ҡарата булған мөнәсәбәтен хатта асыҡтан-асыҡ ярып һалған был шиғырында:

Айырыла был тарафтар
Минең тыуған яғымдан.
Беҙҙә тауҙар. Юҡ зур һыуҙар,
Ҡомлоҡтар юҡ ярында…
Ә шулай ҙа тик үҙенсә
Ҡуҙғатып тора хисте.
Бында Назар рухы йәшәй –
Яп-яҡында Минеште.

Шағирәнең өлкән ҡәләмдәшенә ҡарата булған мөнәсәбәте Назар исемен, уның тыуған ауылы Минеште атамаһын ҡулланыуға ғына ҡайтып ҡалмай, әлбиттә. Нәжмиҙәгесә «тарафтар» һүҙен файҙаланыу менән генә лә сикләнмәй. Иң мөһиме – әҫәрҙең интонацияһында, уның эске һулышында. Миндә, мәҫәлән, «Изел ярында ултырам» Н. Нәжмиҙең «Тыуған ауылыма»һын хәтерләтте. Бигерәк тә ундағы «Ә бит, ерем, һиндә бөтәһе бар: ҡырҙарың бар, ләкин киң түгел; тауҙарың бар – улар тәпәш кенә, күккә ашҡандарға тиң түгел. Йылғаларың да бар, ләкин улар тик сылтырап аҡҡан шишмәләр, күҙ күреме ерҙәр үтәләр ҙә туғайҙарға барып бөтәләр» кеүек юлдарҙа. Был шиғырҙарҙы бер-береһенә яҡынайтҡан дөйөм сифат, уртаҡлыҡ – ике авторҙың да тыуған төйәктәренә тәрән, сикһеҙ мөхәббәте, эскерһеҙ һөйөү тойғоһо, күҙгә бик бәрелеп тормаһалар ҙа, ошо төйәктәрҙән йәм һәм тәм табыуҙары, тыуған-үҫкән яҡтары менән маһайыуһыҙ ғына ғорурланып, унан илһам алып йәшәй һәм ижад итә белеүҙәре. Әгәр йәш шағирә үҙен сорнап алған тирә-йүндә (бәлки, ижадында ла) Назар рухын тойомлай икән – бында ла урынһыҙға шапырыныу күрмәйем. XIX быуаттың бер бөйөк шағиры «Там русский дух… там Русью пахнет!» тигәндән рус халҡына ла, уның арҙаҡлы шәхестәренә лә бер ниндәй ҙә зыян килмәгән, юғиһә.

Назар Нәжми менән ауаздашлыҡты Г. Ғәлиеваның «Мине һин бит уйлап сығарғанһың…», «Өс тин баҡыр», «Ауыр һүҙҙән йәнем йәнселгәндә…», «Йомаҡ», «Кисермәнем ниндәй төңөлөүҙәр!..», «Шиғырым!..», «Һәр осрашыу миңә һуңғыһылай…» тигән шиғыр-

ҙарында ла һиҙемләргә мөмкин. Уларҙы уҡығанда, ҡолаҡ төбөндә Н. Нәжмиҙең «Дуҫтар», «Маҡталаһың, тиргәләһең дә ул…», «Усаҡ», «Иҫке йылды оҙатҡанда», «Үҙгәрә тора тирәмдә…», «Йөрөгән таш ул шымара, тиҙәр…», «Аңламаҫһың был донъяны», «Донъя сәйер…», «Һуңғыһылыр кеүек»тәре сыңлап киткәндәй була.

Әйтелгән фекер буш һүҙ булып ҡалмаһын өсөн, Г. Ғәлиеваның «Өс тин баҡыр» һәм Н. Нәжмиҙең «Йөрөгән таш ул шымара, тиҙәр…» исемле шиғырҙарына туҡталырға мөмкин. Күләмдәре яғынан улар әллә ни ҙур түгел: беренсеһе – ун ике, икенсеһе – ни бары туғыҙ юлдан тора. Әммә фекер тослоғона килгәндә – икеһе лә һоҡландырғыс, икеһе лә поэтик өлгө булырлыҡ. Ҡарамаҡҡа, «Өс тин баҡыр»ҙың нигеҙендә беҙҙең көндәлек тормошобоҙҙа йыш осрай торған ябай ғына бер күренеш ята. Үткер күҙле, һиҙгер йөрәкле шағирә иһә ошо ябай ғына тойолған хәл-ваҡиғанан да оло мәғәнә тапҡан – береһе йәнселгән, икенсеһе шымарған ике баҡыр образы аша күп яҡлы ысынбарлыҡтың аяуһыҙ бер сағылышын кәүҙәләндергән:

Һыу эсәм тип, автоматҡа
Төшөрмәксе булдым баҡыр,
Төшмәй ҡуйҙы. Усҡа һалып,
Ҡарап торҙом уны ахыр.

Күпте күргән әйбер икән.
Шуныһы ғәжәп – шымармаған,
Йәнселгән дә бер ситенән,
Ҡытыршыраҡ булып ҡалған.

Алдым эҙләп икенсеһен.
Ҡиммәттәр бер, төҫтәр һары.
Икенсеһе төшөп китте
Шыма булған өсөн бары.

Ошондай уҡ фекерҙе Н. Нәжми күпкә элегерәк әйткән. Ләкин башҡасараҡ итеп. Образлау сараһы итеп ул баҡыр тинде түгел, ә ташты һайлаған. Дөрөҫөрәге, әҫәрҙең нигеҙенә киң билдәле «Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер» тигән халыҡ мәҡәлен һалған. Һәм, лирик геройҙың яҙмышын күп йөрөгән таш яҙмышы менән сағыштырып, шағир ғәжәп тәрән һығымтаға килгән. Баҡһаң,

ҡатмарлы тормош юлын төрлөсә үтергә мөмкин икән дә баһа: ҡайһы берәүҙәр уға яйлаша, яраҡлаша; ә бәғзеләр иһә, бер ниндәй ҙә ауырлыҡтарға бирешмәйенсә, гел үҙенсә булып ҡала:

Йөрөгән таш ул шымара, тиҙәр…
Йөрөгән таш… Минме йөрөмәгән!..
Был донъяны минме өйрәнмәгән,
Ир күргәнде минме күрмәгән?!

Өйрәтте лә тормош, күрһәтте лә –
Аҙаҡ килеп итте шиғырсы.
Баҡтым иһә, күптәр шып-шымалар,
Тик мин һаман шаҙра, ҡытыршы.
Йөрөгән таш их… шымара, тиҙәр…

Сағыштырыуҙарҙы дауам итеп, береһенән-береһе сағыуыраҡ миҫалдар килтерергә, әҫәр менән әҫәрҙе яҡынайтыусы идея-эстетик уртаҡлыҡтар табырға мөмкин булыр ине. Тик был уртаҡлыҡтар, Г. Ғәлиева, үҙ аллы шағирә кимәленә күтәрелә алмайынса, гел кешене генә ҡабатлай икән тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Танылған шағир Н. Нәжмиҙе түбәнһетеү ҙә иҫәптә тотолмай. Әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалын йәшерәк быуын вәкиле менән сағыштырыу (ә был сағыштырыу үҙенән-үҙе, һис көтмәгәндә килеп сыҡты) ижад майҙанында һәйбәт традицияларға таяныу, уларҙы үҙеңсә ҡабул итеп, артабан үҫтереү мөмкинлеге барлығын тағы бер тапҡыр раҫлау ниәтенән генә эшләнде. Минең һиҙемләүҙәрем йоп килеп, шулар нигеҙендә яһалған бәләкәй генә күҙәтеүҙәрем дөрөҫкә ашһа – быға бары тик шатланырға ғына кәрәктер. Ниндәй остаз үҙ алымын дауам итеүселәрҙән (әгәр ундайҙар булһа!) баш тартыр ҙа, ниндәй уҡыусы үҙен мәшһүрҙәр ҡанаты аҫтында тойоуҙан кәмһетелеү хистәре кисерер?!

Мәсьәләнең икенсе мөһим яғы ла бар. Быға тиклем беҙ яҙма әҙәбиәтебеҙҙәге традицияларҙы күберәк халыҡтың ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларынан эҙләй торғайныҡ. Бөгөн иһә, ошо иҫ киткес бай сығанаҡты инҡар итмәҫтән, М. Ғафури, Д. Юлтый, Ш. Бабич, Р. Ниғмәти, М. Кәрим, Н. Нәжми традициялары тураһында ла һүҙ алып барырға ваҡыт еткәндер. Был – ҡоро һүҙ генә түгел: хәҙерге поэзиябыҙҙы иғтибар менән күҙәткәндә, әйтелгән фекерҙе раҫларҙай байтаҡ дәлилдәр килтерергә булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы,

башҡорт әҙәбиәте ғилемендә лә, көндәлек тәнҡиттә лә традициялар һәм новаторлыҡ көнүҙәк мәсьәләләр булып китә алмай әле.

Лирик сигенештәрҙе ҡалдырып, Г. Ғәлиева ижадына кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Хәтерегеҙҙәлер, әҫәрҙәренең береһендә ул «өлгөрҙө микән һүҙҙәрем кешеләрҙең күңеленә уйылып ҡалырлыҡ булып?» тигән һорау ҡуйғайны. Риторик формала яңғыраһа ла, уға яуап көтәлер автор. Әлбиттә, шағирәне борсоған һорауға төрлө уҡыусы төрлөсә яуап бирер. («Даһилыҡ» шиғырында һымағыраҡ.) Бик ҡәтғиҙәре лә булыр. Майлап-яйлап ҡуйғандары ла табылыр. Минең уйымса иһә, йыйынтыҡҡа ингән бөтә шиғырҙарҙы ла күңелгә уйылып ҡалырлыҡтар тип раҫлаһаҡ, дөрөҫлөккә хилафлыҡ булыр ине. Ни әйтһәң дә, асылына төшөп етеү өсөн ҡат-ҡат уҡыуҙы талап итә торған һүҙ бәйләнештәре лә осраштыра. (Бөйөклөктөң ябайлыҡта икәнлеген онотмаҫҡа кәрәк ине лә бит!) Вәғәз уҡып, нотоҡ һөйләүгә ҡоролған әҫәрҙәр ҙә юҡ түгел («Ҡалмыҡ бейеү көйөн тыңлағас», «Фажиғәле гений»). Ара-тирә мәғрифәтселек стиленә тартым тел менән яҙылған шиғырҙар ҙа күҙгә салынып китә («Ирәмәл ҡайындары», «Даһиҙарға ғәйеп ташламағыҙ», «Егәрленең идеалы – егәрлелер…»). Тик быны үткәнебеҙҙән баш тартыу тип аңларға ярамай. Заманында мәғрифәтселек этабы үтелмәгән булһа, милли поэзиябыҙ бөгөнгө бейеклегенә күтәрелә алмаған да булыр ине, бәлки.

Ә шулай ҙа Г. Ғәлиеваның «Ут һүрелмәй усағымда» тигән йыйынтығын һуңлабыраҡ булһа ла ҡулыма алып уҡыуыма үкенмәйем. Шиғриәт һөйөүселәр ҙә уға битараф ҡалмағандарҙыр тип уйлайым. Үҙемде һынап ҡарауым да бушҡа китмәне – китаптың исеме есеменә тура килде: фәһем алырлыҡ, күңелгә йылы өҫтәрлек байтаҡ шиғырға тап булдым мин унда. Шундайҙарҙан «Күңел йылғам ырғый ярҙарынан…», «Мине һин бит уйлап сығарғанһың…», «Күңелемдә зыярат тапҡан…», «Миләш йылы», «Ауыр һүҙҙән йәнем йәнселгәндә…», «Йомаҡ», «Кисермәнем ниндәй төңөлөүҙәр!..», «Һәр осрашыу миңә һуңғыһылай…», «Ҡара яғылған ҡәбер ташы янындағы уйҙар» тигәндәрен билгеләп үтер инем. Уларҙың һәр ҡайһыһы – Гүзәл Ғәлиева эҙләп тапҡан ижад шишмәһенең матур өлгөләре. Сығышы мул, һыуы саф, ағышы көслө булһын был шишмәнең.

1993

ӨҘГӨЛӘНӘ ШАҒИР ЙӨРӘГЕ

Һуңғы йылдарҙа республикабыҙ күгендә Рауил Бикбаевтың тауышы йыш яңғыраусан булып китте. Хәйер, шағир быға тиклем дә артҡы планда йөрөмәне йөрөүен. Һәр хәлдә, ике тиҫтәгә яҡын китаптың авторын «һүлпәндәр» иҫәбенә индереп булмай торғандыр ул. Күптән түгел уға «Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры» тигән маҡтаулы исем бирелеүе лә юҡтан түгелдер.

Өҫтәп шуны ла әйтәйек: Рауил Бикбаев поэтик ижадты әҙәбиәт фәне өлкәһендәге ғилми тикшеренеүҙәр менән бергә алып бара. Уның яңы әҫәрҙәре, публицистик сығыштары ғына түгел, бәлки, башҡорт поэзияһы мәсьәләләренә ҡағылышлы күләмле мәҡәләләре лә әленән-әле матбуғат биттәрендә баҫылып тора.

Ләкин һуңғы ваҡытта шағирҙың исемен шаулатҡаны – уның «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы менән «Халҡыма хат» тигән шиғри мөрәжәғәте булды, минеңсә. Артабан ул беҙҙең күңелдәрҙе «Баҙар балтаһы» исемле яңы поэмаһы менән арбап алды. Был әҫәрҙәрҙең бөтәһе лә һикһәненсе йылдарҙың аҙағында һәм туҡһанынсы йылдарҙың башында яҙылған. Уларҙың тәүге икеһе авторҙың 1991 йылда аллы-артлы донъя күргән яңы китаптарына («Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!», «Барыһы ла беҙҙең намыҫта») индерелде лә инде, ә бына өсөнсөһөн мин журнал вариантында уҡып сыҡтым («Ағиҙел» журналы, 1991 йыл, 12-се һан.).

«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»гә тупланған йөҙҙән артыҡ өрйяңы шиғырҙарға һәм «Барыһы ла беҙҙең намыҫта»лағы «Халҡыма хат»тың русса вариантына (Дим Даминов тәржемәһендә) туҡталып тормаҫтан, шағирҙың, башта әйткәнемсә, исемен шаулатҡан өс әҫәренә генә күҙ ташларға иҫәп. Уларҙың идея-эстетик концепцияһында ла, күтәрелгән проблемаларҙың художестволы сисселешендә лә ниндәйҙер уртаҡлыҡ, эске бер бөтөнлөк, рухи яҡынлыҡ бар. Хатта поэтик алымдар оҡшашлығын да һиҙемләргә мөмкин. Был – беренсенән.

Ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр иткән икенсе сәбәп иһә – билдәле шағирәбеҙ Тамара Ғәниеваның матбуғат битендә яңғырап киткән: «Һуңғы ваҡытта Рауил Бикбаев конъюнктура менән алдана бирep ҡуя», – тигәнерәк раҫлауы. Был, минеңсә, ябай уҡыусыла ла, шулай

уҡ әҙәбиәтселәр араһында ла берҙәй ҡыҙыҡһыныу, күпмелер кимәлдә хатта бәхәс уятырҙай фекер.

Әлбиттә, Р. Бикбаевтың поэзияһы – бөтә яҡлап та камил, һәр төрлө етешһеҙлектәрҙән азат тип раҫларға һәм уны тәнҡит утынан ҡурсаларға йыйынмайым. Шағир үҙе лә быға мохтаж түгелдер тип уйлайым. Был донъяла бер кемгә лә тип-тигеҙ һәм туп-тура юл әҙерләп ҡуйылмаған. Сәнғәт әһелдәрен дә һәр саҡ уңыштар һәм шатлыҡтар ғына оҙата бармай. Әгәр улай була ҡалһа, тормош диалектикаһы башкөллө үзенең мәғәнәһен юғалтыр ине. Ҙур аҡыллылыҡ – юғалтыуҙар һәм табыштар, тайпылыуҙар һәм сайҡалыуҙар, дөрөҫлөктәр һәм ялғанлыҡтар аша атлап, төрлө хәлваҡиғаларҙа ла үҙеңдең асылыңды һаҡлап, тик үҙеңсә генә булып ҡала белеүҙәлер ул.

Маҡсат итеп ҡуйһаң, ҡытыршылыҡтарҙы, кәмселектәрҙе Р. Бикбаевтың үрҙә телгә алынған әҫәрҙәрендә лә табырға булыр ине. Шуларҙың күҙгә нығыраҡ бәрелеп торғаны – күп һүҙлелек тиер инем мин. «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы, мәҫәлән, мең ярымға яҡын юлдан тора. «Халҡыма хат» шиғыры менән «Баҙар балтаһы» поэмаһы ла бик ҡыҫҡаларҙан түгел. «Күп һүҙ – китапҡа яҡшы» тигән әйтем бар барлығын халыҡ телендә. Тик уның да бит әле тормоштоң бөтә осраҡтарына ла тап килмәүе мөмкин. Телдән һөйләгәндә лә, уның яҙма төрөн ҡулланғанда ла һүҙҙәрҙең тығыҙыраҡ, ә фекерҙәрҙең тоҫораҡ булыуы хәйерлерәк тигән талапты ла онотоп ташламаһаҡ икән. Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа өҫтәлебеҙгә бер-бер артлы кирбестәй ҡалын романдар килеп ята башлағас, тәнҡитселәр генә түгел, хатта яҙыусылар үҙҙәре лә борсолоу тойғоһо белдереп ҡуйғайнылар. Был да һис тә юҡҡа ғына булмағандыр, күрәһең.

Хәҙер иһә мәсьәләнең икенсе яғына иғтибар итәйек. Нимә һуң ул конъюнктура? Әҙәбиәткә уның ниндәй ҡыҫылышы бар? Дөрөҫөн генә әйткәндә, был һорауҙарға баҙыҡ ҡына яуап биреүе лә ауыр. Һәр хәлдә, бөгөнгө көндә беҙҙең ҡул аҫтыбыҙҙа күпме, нисәмә төрлө һүҙлек бар, был төшөнсәгә лә уларҙан шул тиклем аңлатма табырға мөмкин. Ә инде әҙәби ижад өлкәһендә осраштырып ҡуйғылай торған конъюнктураға килгәндә иһә, уны фәкәт бер генә мәғәнәлә – ҡайһы тарафтан йылыраҡ ел иҫһә, моронда шул яҡҡа бороп тотоу мәғәнәһендә генә аңларға булалыр. Асыҡлабыраҡ әйткәндә, ҡәләмеңде заман еле уңайына тирбәтеү, ҡанундарға яраҡлашыу, улай ғына ла түгел, шул ҡанундарға хатта мәҙхиә йырлау кеүегерәк була торғандыр

инде ул. Рауил Бикбаевтың һуңғы ваҡытта яҙылған әҫәрҙәренә күҙ ташлағанда, уны был «гөнаһтар»ҙа ғәйепләү урынлы микән һуң? Шағирҙың ижадын баһалауҙа бер аҙ ашығыслыҡ күрһәтелмәгән микән?

Жанр талаптарынан сығып ҡарағанда, «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» – лиро-эпик поэма. Уның композицион-тематик нигеҙен фәнни-техник прогресс тип аталған бер осорҙа кеше менән тәбиғәт араһында көтөлмәгәндә килеп тыуған ҡаршылыҡтар тәшкил итә. Бер яҡтан автор илде индустриялаштырыуҙың заманында бик ҙур әһәмиәткә эйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала («Күрҙе донъя: юғарыға илем наҙлыҡтарҙан һурылып ашҡанды. Эй, был заман!»; «“Завод насар!” тиеп яу һалырға башымамы минең тай типкән?.. Илгә ғәйрәт өҫтәр нигеҙҙәрҙе һалаһы ла әле һалаһы»), икенсе яҡтан иһә ул, бөйөк төҙөлөштәр һәм үҙгәртеп ҡороуҙар менән мауығып, ер-һыуыбыҙға, тирә-йүн мөхиткә наҡһыҙлыҡ күрһәтеүҙе, уның байлыҡтарын йыртҡыстарса файҙаланыуҙы фашлай («Тормош матурыраҡ булһын тиеп, күпме матурлыҡтар ҡырылған. Ҡот-дәүләте илдең артһын тиеп, урман ауған, һыуҙар ҡороған»). Шуғалыр, бәлки, поэма башынан алып аҙағына тиклем публицистик пафос менән һуғарылған: публицистик әҫәрҙәргә хас булғанса, унда бөгөнгө көн өсөн мөһим, үтә әһәмиәтле мәсьәләләр күтәрелә, уҡыусы күңелен борсоған киҫкен һорауҙар ҡуйыла. Улар араһында Башҡортостан ерлегендә генә түгел, ә тотош планета, хатта бөтә ғәләм киңлегендә яңғыраҙайҙары ла бар. Әйтәйек, бына бындайыраҡтар: «Ер ҡарая, ер тарая бара, кесерәйә һымаҡ Ер шары. Ер генәме шулай? Текләберәк йөҙөбөҙгә әйҙә бер ҡара: һайрап һандуғасты күңелдәрҙән компьютерҙар ҡыуып сығара»; «Бомбаларға төйөп тултырылған донъяны юҡ итер ҡара елдәр. Шартлап һыныр хәлдә меридиандар, сырмалырға тора параллелдәр. Ҡайҙа бара, ҡайҙа бара илдәр?» Проблемаларҙың күберәге иһә, риторик һорауҙар ҡалыбына һалынып, үҙебеҙ йәшәгән мөхиткә ҡайтып ҡала: «Кемдәр генә һине ҡырманы, башҡорт урманы?!»; «Ағиҙелкәй! ‹…› Һыуҡайҙарың ҡасан аҡ ине лә ҡасан хайран ҡалыр яҡ инең?»; «Ер-һыуҙарың бөгөн күргәндәрен һөйләрлекме шиғри тел менән?» һ.б. Һорауҙарҙың күплегенә автор үҙе лә хайран ҡала.

«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»зең үҙәгендә – лирик герой. Ул – ил ҡәҙерен белеүсе, йәшәү йәмен тәрән һәм нескә аңлаусы, халыҡ яҙмышын тарих яҙмышына тиңләүсе ир-егет («Барыһын байҡап, ғәйептәрем барҙай әллә ниңә ғәфү үтенәм. Уйыла миңә олатайҙар

уйы ҡобайырҙай ҡая битенән»; «Мин үҙем дә илгә тәрәнерәк тамырлана барам ил гиҙеп»; «Таптырмайым күпте. Еркәйемдең улы булып ғүмер һөрәйем. Янып ҡына барған был башымды эҫе таштарына терәйем»; «Ҡан тамырым ил тамыры менән – Ағиҙелем менән үрелгән»). Әҫәрҙә тасуирланған хәл-ваҡиғаларға автор лирик герой күҙлегенән сығып ҡарай, тыуған ерҙе, ундағы байлыҡ-хазинаны әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуйылыу сәбәптәрен дә уның ҡарашы аша аңлатырға тырыша («Сувенир тип, ватып алынып бөткән меңәр йылдар үҫкән таш һындар. Ирек ҡуйһаң, улар Шүлгәнташтың һәр бер ташын өйгә ташырҙар»). Формаһы менән был поэма Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Ниғмәтиҙең киң билдәле «Йәмле Ағиҙел буйҙары» исемле әҫәренә тартым («Һандуғастың ярһыу моңо менән ярышҡанда ярһыу шаршылар, һәр ҡаяһы менән Ағиҙелкәй тарих һөйләп баҫты ҡаршыма»). Ошо әҫәрҙән хатта бәләкәй генә өҙөк тә килтерелгән. Әгәр өлкән быуын шағирыбыҙ Ағиҙел йылғаһын быуатты быуатҡа ялғаусы тере шаһит рәүешендә метафорик образ кимәленә күтәрһә, Р. Бикбаев уны тупаҫ ҡулдар тотоноуҙан ыҙалanған йән эйәһе һымағыраҡ итеп күҙ алдына баҫтыра:

Ағиҙелем!
Ерҙең тәнендә һин
Леп-леп типкән тере бер тамыр.
Ағыуланһа кескәй тамырҙары,
Оло йөрәк тә бит туҡталыр.

Ҡайһы бер композицион алымдары менән «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» А. Твардовскийҙың «Алыҫтан – алыҫҡа»һын да хәтерләтеп ҡуя. Күренекле рус шағирының лиро-эпик поэмаһы шикелле, Р. Бикбаевтың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»е төп геройҙың оҙайлы сәйәхәтен һүрәтләүгә ҡоролған. Был урында тағы шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтеп китеү яҙыҡ булмаҫ: әле сағыштырып ҡараған әҫәрҙәрҙең икеһендә лә геройҙар Пушкиндың эшһеҙлектән интеккән Евгений Онегин һымаҡ юҡты бушҡа ауҙарып йөрөүселәрҙән түгел («Барлыҡ йәйем быйыл юлда үтте, ил гиҙмәнем ирмәк ҡыҙыҡтан», – тип баҫым яһап әйтә, мәҫәлән, Р. Бикбаев геройы). Киреһенсә, улар бик актив шәхестәр – сәйәхәт дауамында күҙҙәре менән күргән, ҡолаҡтары менән ишеткән бер генә нәмәгә лә битараф ҡалмайҙар, уларға хатта үҙҙәренсә баһа биреп баралар, ара-тирә ярайһы ғына ҡаты, ләкин ғәҙел

хөкөмдәрен дә сығаралар. Дөрөҫ, авторҙарҙың иғтибар үҙәгендә торған ваҡиғалар ҡоласын иҫәпкә алғанда, был ике әҫәр бер-береһенән ныҡ айырыла. Твардовский геройы, әйтәйек, элек Советтар Союзы тип йөрөтөлгән бөйөк держава буйлап сәфәр ҡылһа, Р. Бикбаевтың геройы, хыялдары, уй-хистәре менән ғәләм киңлектәренә ҡаҙәр күтәрелһә лә, асылда иһә үҙебеҙҙең Башҡортостан ере буйлап атлай.

Уралҡайым! Үҙәнеңә төшәм,
Яңы һырттарыңа ашығам.
Иртәгәгә бағам Ирәмәлдән,
Ил байҡайым Изел башынан…

Белорет, Бөрйән, Шүлгән, Иштуған, Стәрле, Өфө аша үткәндән һуң, ул тағы бер тапҡыр киҫәтеп ҡуя:

Башҡортостан!
Һине иңләп-буйлап,
Аяҡтарым барыбер талмаған.
Изел кистем. Илдең моңон эстем.
Ирәмәлдән еттем Камаға, –

ти ул. Был географик атамалар автор лексиконына тиктомалға ғына килеп инмәгәндәр, әлбиттә. Уларҙың һәр ҡайһыһы – үҙе бер тема, ауыҙ тултырып һөйләрлек үҙе бер тарих. Әгәр Ағиҙел йылғаһын «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» сюжетының арҡа һөйәгенә тиңләргә мөмкин булһа, сәйәхәт дауамында лирик герой туҡталыш яһаған төйәктәр әҫәрҙең бар булмышын тәшкил итә тиергә кәрәктер. Һүҙ араһында ғына булһа ла Нөгөш, Ҡариҙел, Кама быуалары ла телгә алына һәм уларҙың файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк булыуына ишара яһала. Хәйер, ишара яһау ғына түгел, был фекерҙе автор Иштуған һыуһаҡлағысын төҙөргә килгән «ҡартлас» образы аша, бигерәк тә уның йәштәргә төбәлгән телмәре ярҙамында үтә лә киҫкен, хатта йөрәк тетрәткес һүҙҙәр менән раҫлай. «Кем уйлаған үкенестәр килер тиеп шулай һуңлап», – тиеп уфтана күпте күргән, күпте белгән ҡарт эшсе. Һәм, һүҙен дауам итеп, әйтә: «Ил нигеҙен нығытҡанда һөрҙөм нигеҙен тыуған йорттоң. ‹…› Күпме кәртә-ҡураларҙы емереп үттем ҡыҙмаса баш. Нисә айҙар, нисә йылдар йәшәлгәндәй гел ҡыҙмаса».

Шулай итеп, поэманың авторы республикабыҙ картаһын күҙ алдына баҫтырып ҡына ҡалмай, бәлки, Ағиҙел буйында урынлашҡан мөһим нөктәләргә туҡталып, тыуған еребеҙгә егерменсе быуат алып килгән ҙур үҙгәрештәргә объектив баһа бирергә, беҙҙең реаль тормошобоҙға бәреп ингән уңай күренештәрҙе лә, тиҫкәреләрен дә дөрөҫ аңларға һәм аңлатырға тырыша. «Намыҫ таҙа булһа, уяу булһаҡ, көй һаҡланыр, моң һаҡланыр, ер-һыуыбыҙ имен, таҙа булыр», – ти ул әҫәрен тамамлар алдынан.

Моң һаҡланыр, тигәндән, поэмала һүҙ гигант төҙөлөштәр, шул төҙөлөштәр арҡаһында кеше менән тәбиғәт араһында килеп тыуған ҡаршылыҡтар тураһында ғына бармай, әлбиттә. Әҫәрҙең эстәлеге, сюжет сиктәре шаҡтай киңерәк. Беҙҙе солғап алған мөхитте, бигерәк тә яҡлауға мохтаж булған ер-һыуҙы аҙағына тиклем уйлап бөтөрөлмәгән, бөгөнгө көн талаптарынан ғына сығып яҙылған һәм ҡабул ителгән ҡараҙарҙан («Түрәләр бит үтә күрәләр!» тигән рефренды иҫкә алыу ҙа етә), ҙурыраҡ аҡса сәлдерер өсөн шул ҡараҙарҙы үтәргә әҙер торған ғәмһеҙ бәндәләрҙән ҡурсалау мәсьәләһе халҡыбыҙҙың рухи донъяһын һаҡлап алып ҡалыу проблемаһы менән бергә тығыҙ бәйләп үҫтерелә. Был проблема башлыса һәр туҡталышта яһалған автор сигенештәрендә сағылыш таба. Шундайҙарҙан Шүлгәнташ мәмерйәһенә ҡағылышлыһы иғтибарҙы айырыуса йәлеп итерлек. Шүлгәнташты шағир быуаттар төпкөлөнән килгән сәнғәт өлгөһөнә тиңләй («Шүлгән! Иң боронғо храм булып, нурың менән индең йөрәккә. Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған һинең ташыңдағы һүрәттән»). Ләкин мәсьәләнең асылы бының менән генә сикләнмәй. Баҡһаң, заман еле беҙҙең ер-һыуыбыҙға ғына түгел, рухи донъябыҙға ла мәрхәмәтһеҙлек күрһәткән икән дә баһа:

Аҡмулланың аҡ йөҙөнә
Ҡара яғылды,
Бер сабылған башы Бабичтың
Яңынан сабылды,
Таңға юл ярыусы Юлтыйҙар
Төрмәгә ябылды.

«Иштуған эпопеяһы»на бәйле лирик сигенеш тә көслө яңғырай. Фәһем алырлыҡ нәмәләр байтаҡ унда. Стиле лә үҙенсәлекле. Бер ҡараһаң ул, үткәндәрҙә ҡылынған хилафлыҡтар, баш-баштаҡлыҡтар,

төҙәтә алмаҫлыҡ хаталар өсөн үкенеү хистәре менән һуғарылған кеүек тойола; икенсе яҡтан иһә унан битеңде-күҙеңде ялмап алырҙай ялҡын бөркөп торған һымаҡ:

Элек ҡайҙа булдыҡ?
Иҫкә килдек
Терәлгәндә ҡомға кәмәбеҙ.

Элек ҡайҙа инек?
Хаҡты ярып,
Һүҙ әйтергә ҡыйҙы кемебеҙ?

Берәүҙәр байыҡты,
Берәүҙәр – бойокто.
Берәүҙәр – иҙҙе,
Берәүҙәр – түҙҙе.
Берәүҙәр – майҙа йөҙҙө.
Берәүҙәр – ғәмһеҙлекте һиҙҙе,
Әйтә алманы тик
ғәҙел һүҙҙе.

Аҡланыу юҡ, ярып һалыр һүҙҙе
Әйтә алмай күпме тыйылдым.
Хыялдарҙы ылымыҡ бығауланы,
Уй быуылды, ижад быуылды.

Былар шағирҙы конъюнктурала ғәйепләрлек бер ниндәй ҙә сәбәп юҡлығын раҫларҙай юлдар, минеңсә. Сөнки лирик герой бик кәрәк саҡта ла һүҙ ҡатмайынса ҡалыуын асыҡтан-асыҡ әйтеп һалған һәм үҙенең был ҡылығын һис кенә лә аҡламай, аҡланырға ла йыйынмай. Киреһенсә, поэмала «барыбыҙ – заман улы, тик һәр кеше үҙ ғәйебен үҙе күтәрһен!» тигән фекер һыҙыҡ өҫтөнә алына һәм ул ҡат-ҡат ҡабатлана.

Ә бына Стәрле һәм ундағы мөхит кисергән имәнестәр йоғонтоһо аҫтында тыуған лирик сигенеш башҡасараҡ. Форма йәһәтенән дә, йөкмәткеһе менән дә. Тәүҙә шағир бынан ярты быуат элек Рәшит Ниғмәти йырлаған Ағиҙелде бөгөнгө Ағиҙел менән сағыштыра. Артабан ул, ауыҙ-тел ижадына хас таҡмаҡ стилен файҙаланып, тирә-

йүнебеҙҙә нәфсенең шашыуына, намыҫтың юғалыуына, йорттоң да, рухтың да ҡото китеүенә бошона, «ҡот осоп йәшәү сиренән ҡотола алмайбыҙ һаман» тигәнерәк хәүефен дә белдереп ҡуя. Лирик уйланыуҙарҙың һуңғы өлөшө иһә беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙа ла тиерлек оялап алған ғәмһеҙлекте фашлауға арналған. Әйтергә кәрәк, ул баш мейеһен зыңлатырлыҡ тос, йөрәгеңә үтеп инерлек уҡлы һүҙҙәр менән яҙылған. Һәр фраза оран һымаҡ яңғырай бында, уның һәр ҡайһыһы киҫкен, көсөргәнешле тойғо менән һуғарылған. («Ғәмһеҙлектәр өсөн, ғәҙел хөкөм, иңебеҙгә, әйҙә, емерел! Ташлан миңә, таш! Аяма, ҡая! Өҫтөмә ау, тау! Тала мине, дала! Көлгә әйләндер, сүл! Туңдыр мине, тундра! Яндыр ҡыр, ялан-ҡыр! Һүк, ҡәһәрлә, күк!» һ.б.) Әйткәндәй, кисә арзанлы дан артынан ҡыуған, тирә-йүнебеҙҙең, рухи донъябыҙҙың киләсәге хаҡында төптән уйлап тормаҫтан, өҫтән-мөҫтән генә эш иткән «аҡыл эйәләре»нең «битенә сәпәр саҡта» ҡул сәпәкәйләп ултырғаны өсөн бөгөн килеп лирик герой үҙенә ләғнәт уҡый, бөтә мутлыҡтарҙың щаһиты булып та өнһөҙ йәшәгәненә үкенә, үкенеү генә түгел – уфтана, уфтаныу ғына түгел – хатта өҙгөләнә. Был да Рауил Бикбаевты конъюнктурала ғәйепләүҙең урынһыҙ икәнлеген иҫбатларҙай миҫал түгелме ни? Тик шуныһы ҡызғаныс, артыҡ тәьҫирләнеү һөҙөмтәһендә микән, әллә онотолоп китепме, автор үҙен-үҙе ҡабатлау сиренә юлығып ҡуя. Мәҫәлән, поэманың Шүлгәнташ мәмерйәһенә арналған бүлегендә ул:

Сәләм якташтары үҙ телендә
Уҡый белмәй үҫә Сәләмде.
Ошо хәлдәр күҙ алдына килһә,
Һындыр ҙа бәр ситкә ҡәләмде, –

тип бер тапҡыр әйткәйне инде. Ләкин шул уҡ фекерҙе әле һүҙ барған лирик сигенештә яңынан ҡабатлай:

Яҙған булам…
Ә бит яҙғанымды
Уҡый алмаҫ күпме ырыуҙаш.
Уҡый алмаҫ күпме йәш ҡәрҙәшем,
Әсә теле уның ҡороуҙан.

Достоевскийҙы хәтерләтеп ҡуйған матурлыҡ тураһындағы уй-фекер ҙә, бер аҙ үҙгәртеберәк булһа ла, ҡат-ҡат яңғырай: «Мин

ышанам, кеше матурлыкты һәләкәттән барыбер ҡотҡарыр»; «Ҡотҡарырға ерҙә матурлыкты һуң түгелдер әле, һуң түгел…». Ғәмһеҙлекте фашлау ҙа байтаҡҡа һуҙылған – әҫәрҙең башынан алып аҙағына тиклем тиерлек ҡолаҡ төбөндә гөүләй. Бына ошо һәм ошоға тартым башҡа ҡабатлауҙар поэманы саманан тыш оҙон иткән сәбәптәрҙең береһе түгелме икән? Әлбиттә, беҙ бында ҡабатлау алымын инҡар итергә йыйынмайбыҙ. Билгеле булыуынса, был алым һүҙ сәнғәтендә ярайһы уҡ йыш ҡулланыла торған сараларҙың береһе. Бигерәк тә шиғриәттә, шиғри тел менән яҙылған күләмле әҫәрҙәрҙә. Ләкин ҡабатлау әҙәби әҫәрҙе тарҡатыуға килтерергә тейеш түгел, бәлки, киреһенсә, уны бер бөтөн итеү, тағы ла ыҡсымландырыу, фекер ҡеүәһен үҫтереру, ғөмүмән, идея-эстетик ҡиммәтен бермә-бер күтәреү маҡсатына йүнәлтелә.

Лирик сигенештәрҙең иң отошлоһо, хәтерҙә иң ныҡ уйылып ҡалырлығы – Һыуһылыуҙар һөйләшеүенә ҡағылышлыһылыр, моғайын. Промышленность ташландыҡтары, ағас серектәре, баҫыуҙарҙан ағып төшкән ашлама ҡалдыҡтары менән бысранып ағыуланған өс йылға – Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Дим бергә ҡушылғас, тере кешеләр һымаҡ телгә киләләр ҙә, шыбырлаша-шыбырлаша үҙҙәренең эс серҙәрен бер-береһенә асалар. Сәфәрен дауам итеп, Өфө тарафтарына еткән герой ошо шыбырлашыуҙың һис көтмәгән шаһиты була. Һәм ул, Ағиҙелдең күҙ йәштәре аша әйтелгән: «Яңынан таҙарынып ағыр өсөн ниндәй даръяларға сумайыҡ, һылыуҙарым?..» – тигән йөрәк өҙгөс һүҙҙәрен ишеткәс, аяныс, ләкин кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәтте ярып һала:

Йылғаларҙы бороп, быуып була,
Тыйып ҡына булмай йылғаны.
Башҡа даръяларға манып алып,
Йыуып ҡына булмай йылғаны.

Геройҙың Кама буйҙарына сәйәхәтен һүрәтләүгә лә поэмала байтаҡ урын бирелгән. Баҡһаң, мөхитебеҙ менән йыртҡыстарса мөғәмәлә итеү («Ете уйлап, бер ҡат киҫер саҡта, бер ҡат уйлап, ете киҫеүҙәр…»), ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу сире был тирәне лә ситләтеп үтмәгән икән: «Көтөүселәр малды ҡайҙа ашата? Был яҡтарҙың ерҙәрендә әллә һауынсынан күберәк качалка?»; «Бер йорт ҡына иҫен юйған кеүек тороп ҡалған иҫке ауылдан»; «Йырғысланып бөткән туғайҙарҙы

киҫкеләгән бетон дамбалар»; «Һыуға күмелә, буровойҙар ҡалҡа, ер бысратып, ҡырҙы ҡутарып» һ.б. Бында автор тауышына әсә моңо ла килеп ҡушыла һәм ул әйтергә теләгән фекерҙе тағы ла ҡеүәтләп ебәрә. Әсәнең әсе моңо хатта Ер-әсә һағышына ялғанып китә һәм республикабыҙҙың бөтә тарафтарына ҡанатын йәйә.

Поэманың һуңғы өлөшө лирик уйланыуҙарҙан тора тип әйтергә мөмкин. Был уйланыуҙарға сәбәпсе – Аҡиҙел ярына һәрмәүестәрен батырып маташҡан атом электр станцияһы. Һүҙ станцияның үҙе тураһында түгел, әлбиттә, ә күберәк ул килтерәсәк һәләкәттәр, хәүеф- хафалар хаҡында. Йырының былай ҙа моңһоу килеп сығыуына үкенес белдергән шағир, Изел тамағынан алыҫ түгел ерҙә аҡтарылған тупраҡты, үкереп үтеүсе машиналарҙы, улар артынан күтәрелеп ҡалыусы туҙан болотон күргәс, уғата ла хафаға төшә. Йәшен тиҙлегендә уның мейеһен Чернобыль трагедияһы быраулап уҙа, күҙ алдына һауытынан сыҡҡан ғифрит образы килеп баҫа. Һәм, ошо рәүешсә фекерләү даирәһен тағы ла киңәйтә, тағы ла тәрәнәйтә барып, ахыр сиктә, «аҡылды бер мәлгә юғалтһаҡ, уты, дауылы, боҙо, төнө бар Ер шарын бер юлы ялмар, бер юлы шартлар, бер юлы яныр, бер юлы ҡаплар» тигән киҫәтеү менән тамамлап ҡуя үҙенең уйланыуҙарын автор. Глобустарҙа тамғаһы ла булмаған Башҡортостан еренән ғәләм киңлектәренәсә күтәрелгән лирик геройҙың киҫәтеүе лә, иҫкәртеүе лә тип ҡабул итергә мөмкиндер юғары пафос менән әйтелгән был һүҙҙәрҙе. Поэманың стиль үҙенсәлеге лә сағылыш табалыр бында: тыныс йылғаға оҡшап аҡҡан уй-фекер һис көтмәгәндә оран һымаҡ яңғырай ҙа китә. Ғөмүмән, Р. Бикбаев һүҙ менән бик оҫта, ярайһы уҡ иркен эш итә тиер инем мин. Уның ҡәләме аҫтында һүҙ нисектер уйнап тора, тиҙ арала төрлө төҫкә инеп ала. Тик быны юҡ-бар менән мауығыу, уҡыусы күҙен ҡамаштырып, еңел генә уның күңелен арбарға тырышыу тип аңларға кәрәкмәйҙер, минеңсә. Сөнки шағир, һүҙҙәрҙе уйнатып, тел йүгереклегенә генә ирешеп ҡалмай, бәлки, уның һәр ҡайһыһына бай һәм тәрән йөкмәтке лә һала бит. Быға ышаныу өсөн бер нисә миҫал килтереү ҙә етәлер: «Ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар, әйтерһең дә ҡырағайҙар!»; «Әйтерһең дә ҡырағайҙар – ҡыра ағайҙар. Ҡырағай ҙа түгел ағайҙар – өҫтәгеләр план давайлай»; «Айыу тиреһе нимә? Кәрәк икән, Ерҙең тиреһен, тереләй һыҙырып алып, алдығыҙға килтереп һалырбыҙ…»; «Ер ҡоротор ҡара ҡор булып, ҡор аулайҙар, салюттарҙан ҡырыла ҡоралайҙар»; «Ғәйеплеме бульдозерҙар, түгелдер ҙә бульдог ирҙәр?»; «Ҡара шом. Ҡара моң.

Мәңгелек дөм-ҡараңғылыҡҡа күҙҙәрем тулғансы ҡараным»; «Иҙел иҙелә, Кама ҡамала»; «Нур ауырыуы тишеп һарғайтһынмы йылы нурға мохтаж ер йөҙөн?»; «Миндә йөрәгем менән бергә тыныр Чернобыль… Черная быль… Черная боль…» һ.б. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙең авторы туған телебеҙҙең быуаттар буйына йыйылып килгән хазиналарынан киң файҙалана һәм уның иҫ киткес бай мөмкинлектәрен уҡыусы алдына бөтә күрке менән асып һала. Поэмаға йәм биреүсе, уны уҡымышлы итеүсе телстиль саралары тап ана шул хаҡта һөйләй. Халыҡ мәҡәлдәрен хәтерләткән тәрән мәғәнәле ҡыҫҡа әйтемдәр («Олатайҙарҙың ҡәбер таштарынан кем һуң ейәндәргә йорт һалыр?»; «Беҙҙең генә китеү китеүме ни – Ер йөҙөнән тауҙар китәләр!»; «Тыуған усаҡтарҙы беҙ һүндерһәк, киләсәккә күсһен ут ҡайҙан?») тиһеңме, йөкмәткене менән үткер, эске төҙөлөшө менән таҡмаҡҡа ла, афоризмға ла тартым ике юллыҡтар («Яман йола, яман йола – йолҡоп ҡалыу унан-бынан»; «Яман йола хас та йылан – йылы ҡуйынға һыйына»; «Атылыр йондоҙҙо атылдырмай булмай, атылыр кешене аттырмай була») тиһеңме, шиғырҙы көй һымаҡ яңғыратыусы, уға үҙенә бер моң өҫтәүсе аллитерация («Әйтерһең дә, һүҙен һайлап һөйләр, көйөн һайлап һуҙыр ир-аға»; «Сырмалдылар сәсемә Белореттың сәстән нәҙек ҡорос сымдары»; «Ҡыуғын килгән, ҡыуғын килер. Ҡыуғын килмәҫ, ҡырғын килер») һәм анафора күренештәре («Һағайҙылар ҡоштар, кейектәр, һағайҙылар муйыл, еректәр…»; «Меңдәр аҫылды, меңдәр атылды… Меңдәр онталды…»; «Айырым даръя яҙмышы юҡ, айырым ил яҙмышы юҡ, айырым моң яҙмышы юҡ, айырым тел яҙмышы юҡ…») тиһеңме, метафораға ҡоролған сағыштырыуҙар («Юл күрһәтеп, юлға тәгәрләне Ағиҙелем – көмөш йомғағым…»; «Сал Уралдың сабыр йөҙкәйенә ағыу яуа, һөрөм яғыла»; «Заводтарҙың тынынан төнгө һауаң янып тора ҡыҙған тимерҙәй») тиһеңме, – быларҙы һәм шуға оҡшаған башҡа поэтик сараларҙы байтаҡ табырға мөмкин «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙә. Әҫәрҙең хатта композицияһы ла тотошо менән градация алымын хәтерләтә – лирик геройҙың Иҙел үренән башланған сәйәхәте уның тамағында ослана, ә ошо сәйәхәт дауамында автор әйтергә теләгән фекер үҫкәндән-үҫә, ҡуйырғандан-ҡуйыра бара һәм һуңғы сиктә иң юғары нөктәһенә етә. Ағиҙел образы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ – ул йәнле кеше һымаҡ күҙ алдына килеп баҫа: сыҡҡан еренән алыҫлаша барған һайын уның мәшәҡәттәре лә, ҡайғы-хәсрәттәре лә бермә-бер арта,

күбәйә һәм ишәйә. Йырҙарҙа, шиғырҙарҙа, хатта күләмлерәк әҫәрҙәрҙә лә инде нисәмә тапҡыр телгә алынып, төрлө юғарылыҡта, төрлө оҫталыҡ менән йырланған гүзәл йылға Рауил Бикбаев кәүҙәләндерелеүендә өр-яңы сағылыш тапҡан: баҡһаң, Рәшит Ниғмәти поэмаһындағы һыуы тәмле, үҙәндәре йәмле, иҫең-аҡылың китерлек ҡатмарлы һәм буталсыҡ тарихи ваҡиғаларҙың тере шаһиты булып, уларҙың һәр ҡайһыһын үҙ күҙҙәре аша үткәргән һылыу Ағиҙел беҙҙең дыуамал заманда иһә һыуһынды ла ҡандыра алмаҫлыҡ хәлгә төшкән һәм, Ер йөҙөнән бөтөнләй юғалып ҡуймаҫ өсөн, әҙәм балаһының ярҙамын, мәрхәмәтен көтөп ята. Бына ниндәй ҙур күләмле, тамырҙары тәрәнгә киткән идея-эстетик бурыс ҡуйған шағир үҙенең алдына. Һәм уны, минең ҡарамаҡҡа, ярайһы уҡ уңышлы башҡарып сыҡҡан.

Ижад практикаһында йыш ҡына шундай хәлдәр булғылай: яҙыусы йәиһә шағир, күпмелер ваҡыт үткәс, үҙенең элегерәк ижад иткән әҫәренә кире әйләнеп ҡайта ла, унда күтәрелгән темаларҙың берәйһен айырып алып, уны уғата ла тәрәнерәк итеп, иркенләберәк яҡтырта башлай. Һөҙөмтәлә һис көтмәгән ерҙән башҡоллө үҙ аллы, бынамын тигән яңы әҫәр тыуып ҡуя. Р. Бикбаевтың ижад лабораторияһына был тап киләлерме, юҡмы, әммә «Халҡыма хат»тың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» менән ауаздаш булыуы бер кемдә лә шик уятмаҫтыр. Әгәр «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙә милләттең рухи байлығын, бигерәк тә уның телен һаҡлап алып ҡалырға саҡырыусы юлдар һүҙ араһында ғына, башлыса лирик сигенештәрҙә генә яңғырап киткән булһа, «Халҡыма хат»та иһә был фекер әҫәрҙең төп темаһына әйләнгән һәм уның нигеҙ ташын тәшкил итә. Хәйер, инеш һүҙгә оҡшабыраҡ торған «Барыбыҙ өсөн дә уртаҡ һыҙланыу» тигән иҫкәрмәһендә был шиғырҙың яҙылыу тарихына автор үҙе лә күпмелер асыҡлыҡ индерә. Унан аңлашылыуынса, байтаҡ ҡына ҡәрҙәштәребеҙҙең, айырыуса йәштәрҙең, туған телдән яҙыуы, ҡайһы берәүҙәрҙең уға хатта кәмһетеп ҡарауы шағирҙы күптән борсоп килгән. Ә бына йәйҙең матур бер көнөндә (Өфөнөң Салауат һәйкәле янында барған шиғриәт байрамы ваҡытында) «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» авторының ҡулына көтмәгәндә килтереп тотторолған хат уны тетрәтеп ебәрә. Рауил Бикбаевҡа атап рус телендә яҙылған был хаттың авторы – туған телендә һөйләшә лә, яҙыша ла белмәүсе башҡорт ҡыҙы – үҙенә тынғылыҡ бирмәгән һорауҙар менән уртаҡлаша, туған телдән мәхрүм ителеүҙең сәбәптәренә

төшөнөргә тырыша. Фажиғәгә тиң ошо ҡот осҡос хәл шағирҙың күңелендә электән үк тулышып йөрөгән уй-фекерҙәрен шиғыр юлдарына һалырға мәжбүр иткән дә инде.

Тәү ҡарамаҡҡа «Халҡыма хат» шиғыры публицистик рух менән һуғарылған ҡоро саҡырыуҙарҙан, яңғырауыҡлы һүҙҙәрҙән генә тора һымаҡ. Иғтибар менәнерәк уҡый башлаһаң иһә унда күҙгә бик үк бәрелеп бармаған ниндәйҙер эске бер бөтөнлөк, сюжетҡа оҡшап торған эҙмә-эҙлелек барлығын тоя башлайһың. Башта, мәҫәлән, автор туған теленең тамырҙары тураһында уйлана, уның быуаттар төпкөлөнә китеүе менән ғорурлана һәм быуындарҙы быуындарға ялғауына ҡыуана.

Унан һуң, бер-береһен тиҙ генә алмаштырыусы кинокадрҙар һымағыраҡ булһа ла, башҡорт иленең тарихы күҙ уңынан уҙғарыла. Ә ул тарих, билдәле булыуынса, гел яҡты биттәрҙән генә тормаған: осоро-осоро менән халыҡ «аҫыл ерҙәренән яҙған», «аҫыл ирҙәренән яҙған», «аҫыл йырҙарынан яҙған», «тик моңонан, теленән яҙмаған». Әҫәрҙең төп мәғәнәһе лә бына ошонда, минеңсә: ниндәй генә ауырлыҡтар кисергәндә лә, хатта «батшалар телен киҫкәндә лә башҡортом бит телһеҙ булмаған!» – ти шағир. Ә ни эшләп һуң әле шундай һынауҙарҙы үткән һәм үҙ-үҙен һаҡлап алып ҡалған тел бөгөн килеп иһә меҫкенгә әйләнгән һәм үлем хәленә төшкән? Әҫәр бына ошондай һорауҙарға яуап эҙләүгә ҡоролған, сөнки «теле бөткәндең бит көнө бөтә, иле бөтә теле бөткәндең». Ләкин яуап табыуы еңел түгел был һорауҙарға. Туған моңдан, туған телдән биҙеүҙең сәбәптәрен бер һүҙ менән генә аңлатып булһа икән. Автор уйынса, ғәйептең иң ҙурыһы «ҡуйынында үҫкән сабыйҙарын тырышып-тырышып» үҙ теленән яҙҙырған ата-әсәләргә төшә. «Илдең генә түгел, барлыҡ телдәрҙең дә баштарына» һуҡҡан, бәлә килтергән «башһыҙ башлыҡтар»ға ла үпкә ташлана бында. «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙәге кеүек, үҙебеҙҙең ғәмһеҙлек тә ситләтеп үтелмәй «Халҡыма хат»та. Әйткәндәй, йөкмәткеләре йәһәтенән дә, яңғыраштары менән дә бер-береһенә яҡын торған байтаҡ юлдар табырға мөмкин был ике әҫәрҙә. Уларҙың һуңғы, йомғаҡлау өлөштәрендә лә уртаҡлыҡ һиҙелә: публицистик көсөргәнешлек кәмей төшә, автор яй ғына өгөт-нәсихәт стиленә күсә. «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙә, мәҫәлән, ул, «намыҫ таҙа булһа, уяу булһаҡ, көн һаҡланыр, моң һаҡланыр, ер-һыуыбыҙ имен, таҙа булыр» тигәнерәк өмөт бағлаһа, «Халҡыма хат»та, моңобоҙҙо, телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн уҡыусыны тиҙерәк эшкә егелергә,

маҡсаттарҙы бергә ҡушырға, моңһоҙлоҡтан, аңҡаулыҡтан, ялҡаулыҡтан арынырға саҡыра. Ауыҙ-тел ижады стихияһында яҙылған иң һуңғы строфа ысын мәғәнәһендә халыҡҡа адресланған ялҡынлы мөрәжәғәт булып яңғырай:

Туғанынан яҙған – ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» менән «Халҡыма хат»та күтәрелгән ҡайһы бер мәсьәләләр Рауил Бикбаевтың «Баҙар балтаһы» исемле һуңғы поэмаһында ла сағылыш таба. Был, әлбиттә, элекке әҫәрҙәрҙәге темалар яңыһына үҙенән-үҙе генә килеп ингәндәр ҙә бер ниндәй үҙгәрешһеҙ ҡабаттан урын биләгәндәр икән тигән һүҙ түгел. Сөнки тәү ҡарамаҡҡа таныш тойолған хәл-ваҡиғалар яңы әҫәрҙә бөтөнләй икенсе яҫылыҡта яҡтыртыла. «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙә, мәҫәлән, мөхитебеҙгә, ер-һыуыбыҙға ҡарата күрһәтелгән һаҡһыҙлыҡ, тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙы әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуйыу фактттары тәнҡит уты аҫтына алынған булһа, яңы поэмала иһә ошо уҡ проблемаларға баҙар иҡтисады күҙлегенән сығып ҡараш ташлана. «Күпме малды, балды, алтындарҙы һаттыҡмы беҙ?» – тигән һорау ҡуя автор, һәм шунда уҡ яуап та бирә: «Бушлай оҙаттыҡ; Ер ҡуйынынан күпме хазинаны таланылар, белмәй оятты». Ошо фекерҙе уғата ла ҡеүәтләп, шағир былай ти:

Эсер һыуға ағыуҙарын ағыҙа,
Мәсхәрәләй ерҙе ҡанһыҙлыҡ.
Ҡырылып бөттө башҡорт урмандары,
Башҡорт китабына ҡағыҙ юҡ.

Ә бына был юлдар «Халҡыма хат»тың нәҡ һуңғы строфаһы кеүек яңғырай:

Ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә саҡта
Ҡул ҡаушырып ғәмһеҙ ятмайыҡ.
Һаҡлайыҡ беҙ ғәзиз ер-әсәне,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һатмайыҡ.

Айырма тик шунда: әгәр «Халҡыма хат»та автор, туған тел, уның бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында борсолоуын белдереп, милләтте уянырға, ҡуҙғалырға саҡырған булһа, бында ул өҫтөнә лапылдап баҙар балтаһы төшөргә торған тыуған еребеҙҙе бүлгеләүҙәрҙән-телгеләүҙәрҙән һаҡлап алып ҡалырға өндәй. Өндәп кенә ҡалмай, бәлки «халҡым үҙе тураҡланып бөтөр, тураҡланһа ошо еркәйем» тигән киҫәтеү ҙә яһап ҡуя, улай ғына ла түгел, «ерен һатҡан йәнде ере йотһон, ерен һатҡан йәнде ер баҫһын» тип ҡәһәрләй һәм «тыуған ерен һатҡан бәндәләр тиң үҙ әсәһен һатҡан мөртәткә» тип раҫлай, «ерен һатҡан әсәһен дә һатыр» тип тә өҫтәй. Ошо иҫкәртеүҙәр-киҫәтеүҙәрҙең ни тиклем ваҡытлы яңғырауы, көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһенә әйләнеүе хаҡында һөйләп тороуҙың кәрәге лә юҡтыр бөгөн. Сөнки баҙар балтаһы үҙенең тупаҫ йөҙөн беҙҙең иҡтисадыбыҙға ла, мәҙәниәтебеҙгә лә, сәйәсәтебеҙгә лә көндән-көн нығыраҡ батыра бара. Был хәҙер һәр кемгә асыҡ. Рауил Бикбаевтың яңы поэмаһы тап ана шул турала. «Аҡса, байлыҡ тиеп бәндәләрҙең йәне аҙған, күҙе аларған» бер мәлдә шағир һис тә тыныс ҡына ситтән ҡарап тороусы битараф, илтифатһыҙ кеше ролендә ҡалырға теләмәй. Тирә-йүндә, хатта бөтә илдә барған мәхшәрҙе күреп, уның йөрәге әрней, күңеле үрһәләнә, тәне һыҙлай; «тотош бөйөк дәүләт инеп бара итәк аҫтына» тип өҙгөләнә ул.

«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» кеүек, «Баҙар балтаһы» ла публицистик характерҙағы әҫәр. Публицистик рух унда, бәлки, күберәктер ҙә әле. Ләкин был Р. Бикбаевтың яңы поэмаһы – торғаны бер бәхәсләшеү, нимәгәлер саҡырыу, оран һалыу тигән һүҙ түгел, әлбиттә. «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ҙәге һымаҡ, бында ла сюжет теҙгенен үҙ ҡулында лирик герой тота. Тик ул, тегеһенән айырмалы булараҡ, тарафтар киңлегендә генә хәрәкәт итмәй, ә ваҡыт ҡосағында ла оса. Әҫәрҙең башында, мәҫәлән, беҙҙең алда – ғәҙәти ауыл малайы. Дөрөҫ, был ғәҙәти малай менән уҡыусы бер ни тиклем ғәҙәти булмаған шарттарҙа – ҡала баҙарында осраша. Быға ҡәҙәр бер ергә лә сығып йөрөмәгән малайға бында бөтәһе лә ҡыҙыҡ та, ғәжәп тә: һабантуйҙа шикелле ҡайнашҡан иҫ китмәле күп халыҡ тиһеңме; баш өҫтөндә әллә нисә телдә яңғыраған шау-шыу тиһеңме; күҙҙең яуын алып балҡыған өйөм-өйөм ят ризыҡтар тиһеңме – бөтәһе лә бар ҡала баҙарында; әммә ауыл малайын иң ныҡ ғәжәпләндергәне лә, бер аҙ аптыратҡаны ла ҡысҡыра-ҡысҡыра һалҡын һыу һатып йөрөүсе көр тауышлы апай булғандыр, моғайын. Һүҙ айышында ғына телгә алынған булһа ла, күңелгә уйылып ҡала был образ. Әҫәрҙең идея-ху-

дожество структураһында ла ул ярайһы ғына ҙур әһәмиәткә эйә, минеңсә: йылдар үтеп, лирик герой ауыл малайынан ҡала кешеһенә әйләнгәс, уның сабый саҡтан бирле күҙ алдында һаҡланып килгән баҙар күренеше көтөлмәгәндә бөтөнләй икенсе төҫ ала – әҙәм балаһы эсер һыу ғына түгел, аҡса өсөн хатта үҙен дә, илен дә һатыу хәленә килеп етә.

Кем уйлаған, Ырымбурға килеп,
Баҙар күргән саҡта иң тәүҙә,
Беҙҙең генә түгел, ил яҙмышы
Үлсәнер тип ошо үлсәүҙә.
Кем уйлаған баҙар барлар тиеп
Бар дәүләттең кеҫә ҡалтаһын,
Өлөштәрҙе бер көн бүлер тиеп
Ай дәүмәле баҙар балтаһы.

Поэманың «йөҙөк ҡашы» ла бына ошондалыр әле. Һүҙҙәрҙе теләгәнсә иркен (ләкин шул уҡ ваҡытта айырым бер һаҡлыҡ күрһәтеп) уйнатыу, поэтик буяуҙарҙы мул һәм оҫта файҙаланыу арҡаһында автор ғәжәп үҙенсәлекле дөйөмләштереүгә өлгәшкән – ҡасандыр «бер һелтәүҙә күпме итте умыра» сапҡан «ай дәүмәле баҙар балтаһы» бөгөн килеп иһә беҙҙең башыбыҙ өҫтөндә аҫылынып тороусы образ-символға әүерелгән. Әҫәрҙең атамаһы, шулай итеп, үҙ эсенә ҙур йөкмәткене алған: ул тура мәғәнәһендә генә түгел, күберәк метафора рәүешендә ҡулланылған. Шомло ла, тылсымлы ла тойолған «баҙар» һүҙе сабый сағында лирик геройҙың хыялын арбаған булһа, әле иһә, күп йылдар үткәндән һуң, бар уйын арбаған, сөнки ваҡыт тулҡыны уны ҡала баҙарынан бөтөнләй икенсе, быға тиклем хатта тарих белмәгән баҙар упҡынына килтереп ташлаған.

Сюжет һәм композиция үҙенсәлектәренән сығып ҡарағанда, Р. Бикбаевтың «Баҙар балтаһы» Н. Нәжмиҙең «Ҡапҡалар»ын хәтерләтеп ҡуя. Унда ла бит ябай ауыл малайы, ваҡыт ҡосағында осоп, күп юлдар үтә һәм күп нәмәләргә ирешә. Тик Н. Нәжми геройы «тоталитар режим», «торғонлоҡ» тип аталған йылдарҙа башта баҫыу ҡапҡаһын, унан һуң белем, мәҙәниәт һәм шиғриәт ҡапҡаларын асып йөрөһә, Р. Бикбаев геройы ғәҙәттәге ҡала баҙарынан һуң беҙҙең «үҙгәртеп ҡороу»ҙар дәүерендә моронлаған иҡтисади баҙар ҡапҡаһына килеп һуғыла:

Эш кешеһе таңдан кискә тиклем
Күкрәк көсө менән тапҡанын,
Ҡан илатып, йолҡоп ала баҙар,
Өҙә ҡаба баҙар ҡапҡаһы,
Өҙә саба баҙар балтаһы.

«Баҙар» төшөнсәһенең асылын, уның тышҡы күренешен һәм эске пружинаһын шағир бик оҫта, сағыу буяуҙар менән тасуирлаған. «Бында барыһы ла бар!» – ти ул, тик «Намыҫ ҡына артыҡ самалы». «Тотош отош-алдаш донъяһында» ҡайҙан булһын ти намыҫ! Сөнки «типһә тимер өҙөр ирҙәрең дә әйләнә бит уның ҡолона». Әҫәрҙең темаһы, унда күтәрелгән мәсьәләләр авторҙан бик күп яңы һүҙҙәр ҡулланыуҙы талап иткән. Тәү ишетеүҙә улар бер аҙ сәйерерәк яңғыраһалар ҙа, ысынында иһә әйтергә теләгән фекерҙең тап өҫтөнә баҫҡандар: Алыпһатар, Урлапһатар, Илталар, Малтабар, Малталар һ.б. Уртаҡлыҡ исемдәр һиҙмәҫтән яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп киткән дә поэманың идея-эстетик йөкмәткеһенә өр-яңы ағым өҫтәп ебәргән.

Шулай ҙа уҡыусы күңелен нығыраҡ арбағаны – балта образылыр тип уйлайым мин. Был образ әҫәрҙең беренсе юлдарынан уҡ бөрөләнә башлай. Тәүҙә ул яҙмыш ҡушыуы буйынса ҡала баҙарына килеп эләккән ауыл малайын шаҡ ҡатырыусы бер ҡорал булып күҙ алдына баҫа. Балтаның ҙурлығына хайран ҡалған сабый: «Ярылмайса нисек түҙә түмәр, балта гөрҫләп килеп төшкәндә?» – тип аптырай. Һәм: «Уның эргәһендә беҙҙең балта бер уйынсыҡ ҡына икән дә…» – тип уйлай. Шунда уҡ сабыйҙарға ғына хас бер ҡатлылыҡ менән (бында, бәлки, шуҡлыҡ билгеһе лә барҙыр) уға атама ла тағып ҡуя: «ай дәүмәле баҙар балтаһы». Артабан иһә ошо образ-төшөнсә символ юғарылығына күтәрелә һәм әҫәрҙең лейтмотивына әүерелеп китә, ә «гөрҫләп төшә балта…» тигән юлдар үҙенсәлекле бер рефрен булып яңғырай башлай, баҙар иҡтисадының «һоҡландырғыс күркәмлектәрен», уның «һутлы емештәренең тәмен» уҡыусы хәтеренә әленән-әле төшөрөп кенә тора: ысынды ялғандан айырыуы ҡыйынлаша, иман юғала бара, хәйерселек арта, «бер тин өсөн барған алышта… юғалтыуҙар күберәк табыштан» һ.б. Поэманың иң юғары нөктәһе – тотош илде баҙарға әйләндереүсе түрә-ҡараҡтар исеменә автор ташлаған һыҙланыу ҡатыш әрнеүле һүҙҙәрҙер:

Екерәләр изге ораныма,
Төкөрәләр тамғам-билдәмә.
Улар өсөн һинең ил нәмә? –
Балта турап ташлар билдәмә!
Улар өсөн һинең ер нәмә? –
Балта турап ташлар билдәмә?
Уғырылар ярһып умырырға
Яңы табыш, яңы биләмә.

«Баҙар балтаһы»нда, «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» һәм «Халҡыма хат»тағы шикелле, рухи аҙыҡ, рухи донъя, мәҙәниәт, туған тел яҙмышы тураһында уйланыуҙарға ла урын бирелгән. Һәм был аңлашыла ла – «баҙар» сире халыҡтың рухи байлыҡтарын да ситләтеп үтмәне бит; әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт бәкәленә ул, бәлки, ныҡыраҡ та һуҡҡандыр әле. Сөнки, шағир әйтмешләй, «башҡасараҡ хәҙер йырҙар, көйҙәр», «ҡара таңдан ҡара кискә тиклем йыр-моң менән сауҙа итәләр»; «афишанан ҡарай фәхишәләр, кәрәкмәй ҙә ым йә ишара, фәхишәнең теләгәнен һайла – ҡатын-ҡыҙҙар һатыла шәп-шәрә». Лирик герой сәнғәткә һәм мәҙәниәткә бындай мөнәсәбәт менән һис кенә лә килешә алмай, әлбиттә. Был мәсьәләләргә ҡарата уның позицияһы аныҡ һәм аңлайышлы:

Ил зиһене яҙған китаптарҙы
Күпме уттан һаҡлар юл таптыҡ;
Табыш тиеп бөгөн ярһығандар
Йотмаҡ була ошо китапты.

Ҡурсып алған уны аҫыл ирҙәр,
Йәнен фиҙа ҡылып, ҡан түгеп,

Халҡым һүҙе, халҡым ынйылары
Баҙарҙарҙа һатылыр мал түгел.

Шулай итеп, Рауил Бикбаевтың әле һүҙ барған өс әҫәрендә лә уҡыусыны борсоған көнүҙәк мәсьәләләр күтәрелгән. Ул мәсьәләләр иһә, үҙ сиратында, һуңғы ун йыл эсендә беҙҙең сәйәси, ижтимағи, иҡтисади тормошобоҙҙа барған ҡатмарлы һәм әлегә осо-ҡырыйы күренмәгән хәл-ваҡиғаларҙың үҙенсәлекле бер сағылышы булып

тора. Әҫәрҙәрҙең публицистик пафос менән һуғарылған булыуҙарын да күпмелер кимәлдә ошоноң менән аңлатырға кәрәктер. Сөнки халыҡтың ер-һыуы, матди һәм рухи байлыҡтары, туған теле, тарихи үткәне һәм киләсәге тураһында һүҙ барғанда, тыныс ҡына күңел менән яҙып булмай торғандыр ул. Күп ғәҙәлһеҙлектәрҙе, алдау-йолдауҙарҙы үҙе аша үткәргән шағир йөрәгенең һыҙланыуы-өҙгөләнеүе лә шуға бәйлелер. Һәм уның халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлаусы, халыҡтың уй-хыялдары менән йәшәүсе, халыҡ өсөн йәнен дә бирергә әҙер тороусы трибун-агитатор ролендә сығыш яһауы ла һис тә ғәжәп түгел. Ысын шағир халҡы менән бергә янып-көйөргә тейеш. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, Р. Бикбаевтың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»е, «Халҡыма хат»ы, «Баҙар балтаһы» Д. Юлтый, М. Ғафури, Ш. Бабичтарҙың быуат башында ижад ителгән ҡайһы бер әҫәрҙәрен хәтерләтеп ҡуйыуы тураһында әйтмәй үтә алмайым. Бигерәк тә уларҙың «Башҡорт хәле», «Юҡтырһың да, алла», «Әйҙә, милләт!» тигән шиғырҙарын. Был шиғырҙар ҙа донъяның бик болғауыр мәлендә, ата – улды, әсә – ҡыҙҙы танымай башлау хәленә еткән дәүерҙә яҙылғандар бит. Һәм улар илдә барған ваҡиғаларға күптәрҙең күҙен асҡан, аҡты – ҡаранан, ҡараны – аҡтан айырырға өйрәткән, донъяның аҫты-өҫкә килгән сағында дөрөҫ юл һайларға ярҙам иткән. Рауил Бикбаев әҫәрҙәренең дә ролен мин бына шулайыраҡ тойомлайым.

1994

«Ә ҮҘЕМ УЛ ҮҘЕ ӘЛЛӘ НИСӘҮ…»

Дүрт кенә строфалы шиғырҙан алынған был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә күптәр, бәлки, тиҙ генә төшөнөп тә бөталмаҫ. Тексты тулы көйөнсә килтергәндә, ул бына былайыраҡ яңғырай:

Бер ҡасан да яңғыҙ ҡалғаным юҡ,
Ҡалғаным бар үҙем менән үҙем.
Ә үҙем ул үҙе әллә нисәү…
Күрә уны бары күңел күҙе…

Гөлнур Яҡупованың «Яңғыҙ ҡалғаным юҡ…» исемле шиғырынан был юлдар. Артабан шағирә, «үҙем ул үҙе әллә нисәү» тигән фразаға айырым туҡталып, уның бары тик күңел күҙе генә күргән «үҙем»дәренең асылын асып һала. Баҡһаң, ул «үҙем»дәр байтаҡ икән дә баһа. Һәм береһе икенсеһенә һис кенә лә оҡшамаған. Бер ҡараһаң, ул – матур, икенсеһендә иһә – насар. Бер ҡараһаң, ул – йыуаш, ә икенсеһендә – уҫал. «Үҙем»дәр араһында салпаһы ла, түҙемлеһе лә бар; үҙ һүҙлеһе менән юхаһы ла юҡ түгел. Әммә «үҙем»дәр күңел күҙенә ни ҡәҙәр генә күп салынмаһын, лирик геройҙың булмышы – берәү генә. Ул хатта дирижерға оҡшап китә – ошо күп һанлы «үҙем»дәр менән дирижер һымаҡ етәкселек итә, уларҙы үҙенең тылсымлы таяғына буйһондороп, һәр ҡайһыһына берәм-берәм нотоҡ уҡып сыға, күндерә, береһенә шәм тотторып ҡуйһа, икенсеһен һүндерә.

Белмәйем, башҡаларҙа ниндәйерәк тойғо уятҡандыр был шиғыр, мине иһә ул әҫәрләндерҙе, иғтибарымды биләп алды ла, бер аҙ уйға һалды. Тәү ҡарамаҡҡа унда һуш китерлек әллә ни яңылыҡ та юҡ кеүек. Ғәҙәттәге лирик шиғыр. Уның геройы эске донъяһын уҡыусыға шар асҡан да, үҙенең холҡо-фиғеле менән таныштыра, кәйеф-сафаһы менән уртаҡлаша, күңел ҡылын тибрәтә. Ләкин, зиһенде эшкә ҡушып, авторҙың һүҙ артына, шиғри юл араһына йәшергән «тел төбөн» ҡапшай башлаһаң, әҫәрҙең бик үк тапалғандарҙан түгеллегенә төшөнәһең. Еңел-елпе уйланыуҙарға, ҡоро һоҡланыуҙарға, буш тәьҫирләнеүҙәргә урын юҡ унда. Бәләкәй генә шиғырҙың төбөндә оло фекер, тәрән психологик кисерештәр ята. Ә ул кисерештәр иһә

уҡыусыны, үҙ сиратында, кеше тураһында, уның булмышы, ер йөҙөндә генә түгел, хатта йыһан киңлегендә лә билдәләнгән урыны тураһында баш ватырға мәжбүр итә. Бер үк ваҡытта кешенең ни тиклем дә ҡатлаулы, тиҙ генә аңлап та бөтмәҫлек, аңлатып та бирә алмаҫлыҡ зат икәнлегенә ишара яһала. Ысынлап та, кешенең эске донъяһы иҫ киткес бай, күп төрлө, күп яҡлы һәм тирә-йүндә булғылап торған хәл-ваҡиғалар йоғонтоһо аҫтында тиҙ үҙгәреүсән. Бына ошо берсә бай, берсә тиҙ үҙгәреүсән эске донъя менән аяуһыҙ ысынбарлыҡ араһында гармония урынлаштыра белеү – үҙе ҙур оҫталыҡтыр. Шул оҫталыҡ шәхес характерын, уның конкрет һыҙаттарын билгеләй торған шарттарҙың берәйһелер әле ул, моғайын.

«Яңғыҙ ҡалғаным юҡ…»тан һуң «Төрлө-төрлө икән ул күңелдәр…»гә тап булдым. Күләмдәре яғынан улар икеһе лә бер. Яңғыраштары менән дә оҡшаштар. Бында ла һүҙ, нигеҙҙә, «үҙем»дәрҙең дә, күңелдәрҙең дә (ә быны иһә – кешеләрҙең дә тип аңларға кәрәк) төрлө-төрлө булыуы тураһында бара:

Төрлө-төрлө икән ул күңелдәр…
Бәғзеһенә ишек шар асыҡ.
Ихласлығы гел артылып тора,
Ин дә, әйҙә, уртаҡлашып сыҡ.

Был юлдар Шәриф Бикҡолдоң «Күңелдәрем минең» тигән шиғырын хәтергә төшөрөп ҡуйҙы. Унда ла бит лирик герой үҙенең күңелен ҡунаҡ йортона, йыһанға тиңләй ҙә, кешеләрҙе шатлыҡтары һәм серҙәре менән уртаҡлашырға шунда саҡыра. Таңғы ысыҡ кеүек саф, ҡояш һымаҡ ҡайнар был күңелдә йәне өшөгәндәр өсөн дә урын етерлек – рәхим итеп килһендәр генә.

Гөлнур иһә ошо фекерҙе дауам итеп, уны артабан да үҫтерә, уға яңы һыҙат өҫтәп, «күңел» төшөнсәһенең йөкмәткеһен бермә-бер киңәйтеп ебәрә. Күңелдәрҙең бөтәһе лә гел генә киң дә, саф та, йылы ла булып сыҡмай шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ҡайһылары уның боҙ кеүек һалҡын; бәғзеләре иһә һандыҡ кеүек сат бикле. Арала буштары ла юҡ түгел. Әммә һынауҙарҙың иң ауыры күндәм күңелдәр өлөшөнә төшә. Әлеге лә баяғы, ана шул «үҙем»дәрен йүгәнләргә, кәрәк саҡта тиҙ генә улар менән тейешле мөғәмәлә урынлаштырырға күнекмәгән кешеләр, күндәм күңелгә инеп, тәүбә итеү һәм гөнаһтарын йыуыу менән генә сикләнмәйенсә, йыш ҡына уға аяҡтарын да һөртөп китәләр.

Бер үк авторҙың иғтибарҙы арбаған әлеге ике әҫәре – бик ғибрәтле күренеш, минеңсә. Лирик жанрҙың иҫ киткес бай мөмкинлектәре хаҡында һөйләй торған асыҡ миҫал ул. Ысынлап та, әгәр талантың булһа, унан дөрөҫ файҙалана белһәң, көсөң етһә, лирик геройҙың уйланыуҙары, уның эске кисерештәре аша тәрән мәғәнәне аңлатҡан ни тиклем күп фекер әйтергә мөмкин! Донъя үҙе ҡат-ҡат булған шикелле, кеше тәбиғәтенең дә ҡатлаулығы, төрлөлөгө тураһында быға ҡәҙәр ҙә шиғырҙар яҙылып торҙо. Төрлө телдә, төрлө осорҙа. Ләкин «Яңғыҙ ҡалғаным юҡ…» та, «Төрлө-төрлө икән ул күңелдәр…» ҙә уларҙы һис кенә лә ҡабатламай. Гөлнур Яҡупова был мәңгелек теманы үҙенсә ҡабул итә, үҙенсә аңлай, үҙенсә аса, үҙенсә яҡтырта. Шиғриәттең бөтә ҡыҙығы ла, мәғәнәһе лә, әһәмиәте лә ана шундалыр.

Әйткәндәй, уҡыусы алдында ғәфү үтенеп, уны һүҙҙең айышына төшөрөргә лә ваҡыттыр. Шиғриәт тураһында был уйланыуҙар нисектер мәҙәгерәк башланып киткәндәй булды. Әле һүҙ барған әҫәрҙәрҙең икеһенә лә мин Гөлнур Яҡупованың «Автограф» тигән китабында тап булдым. Нәшриәт аннотацияһына ҡарағанда, был – шағирәнең икенсе китабы. Уға йөҙҙән ашыу шиғыр тупланған. Шиғырҙарҙың башта уҡ күҙгә ташланған иң ҙур өҫтөнлөгө – уларҙың ҡыҫҡалығы. Иң оҙон тигәне лә утыҙ юлдан артмаҫтыр. Тимәк, шағирә әйтергә теләгән фекерен әҙ генә һүҙҙәр менән дә уҡыусыға еткерә белеү оҫталығына ирешкән. Был, һис шикһеҙ, һәйбәт күренеш, әлбиттә.

Һүҙемдең юл уртаһынаныраҡ башланып китеүенең дә үҙенә күрә сәбәбе бар. «Яңғыҙ ҡалғаным юҡ…» менән «Төрлө-төрлө икән ул күңелдәр…»гә йыйынтыҡтың һуңғы битен ябыр алдынан ғына килеп юлыҡтым. Уларға ҡәҙәр алған тәьҫораттарым ҡапыл ғына таралып киткәндәй булды. Ә ул тәьҫораттарҙы яңынан йыйып алыу һәм бер нөктәгә туплау – еңел эш түгел. Бигерәк тә «Автограф» кеүек китаптарҙы уҡығандан һуң. Сөнки унда шиғырҙар тыңҡыслап тултырылған. Әҫәр өҫтөндә – әҫәр, тиергә мөмкин. Шунан һуң уҡыусыға үпкәләйбеҙ, хатта уға ғәйеп һүҙе ташларға ла баҙнат итәбеҙ: йәнәһе, ул шиғриәтте бик үк яратып бөтөрмәй, шуға ла шиғыр китаптары магазин кәштәләрендә үтмәҫ тауар булып ята һ.б.

Яратмауы ла мөмкин шул. Ҡырмыҫҡа иләүенә оҡшатып, бер өйөмгә өйөлгән шиғырҙарҙы кемдең, күҙен секерәйтеп, уҡып ултырғыһы килһен? Был бер Г. Яҡупова йыйынтығына ғына хас күренеш түгел. Түҙер әмәл ҡалмағас, уның тураһында һүҙ барғанда белдерергә тура килә инде күңелде күптән борсоп йөрөгән ризаһыҙлыҡ

тойғоларын. Ҡасан шиғыр китаптарын матур, уҡыған һайын уҡығы килеп торорлоҡ, уҡыусыла эстетик зауыҡ тәрбиәләрлек итеп сығара башларбыҙ икән? Әлегә тиклем донъя күргән күпселек йыйынтыҡтарҙың төҫһөҙлөгө, уҡыған саҡта уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыуы, түбән полиграфик кимәлдә башҡарылыуы нимә менән аңлатыла? Ҡағыҙға ҡытлыҡ менәнме? Әллә бүленгән күләмгә мөмкин тиклем күберәк шиғыр һыйҙырырға тырышыу менәнме? Әгәр был һорауҙарҙың һуңғыһы төп сәбәпсе булһа, уның менән килешеүе ауыр. Шиғыр китабын баҫырға әҙерләгәндә, уның кемгә тәғәйенләнгәнлеген хәтерҙән сығармаһаҡ икән. Теләһә ниндәй китап та уҡыусы өсөн яҙыла, уҡыусы өсөн сығарыла. Шиғыр уҡыған кеше кинәнергә, хозурланырға, донъя мәшәҡәттәренән арынып, бер аҙ ял да итеп алырға тейеш. Бөтә был маҡсаттарға әҙ генә һанлы шиғырҙар менән дә ирешергә мөмкин (әгәр китаптың күләмен арттырырға башҡа сара булмаһа). Шуға ла шиғыр йыйынтыҡтарының тышлыҡтары менән дә, эске төҙөлөштәре менән дә (йөкмәткеһе тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде!) уҡыусыны әллә ҡайҙан үҙенә тартып тороуы, ә уларҙы уҡый башлағас иһә кешене арытыу түгел, бәлки ыңғай хистәр уятыуы хәйерлерәк тә, әйтеп бөтөргөһөҙ мөһимерәк тә.

Хәҙер «Автограф»ҡа яңынан әйләнеп ҡайтайыҡ. Әйткәнемсә, табаҡтар менән иҫәпләгәндә күләме әллә ни ҙур булмаһа ла, шиғырҙар етерлек унда. Рим цифрҙары ярҙамында биш бүлеккә бүлеп бирелгәндәр улар. Тик был бүлектәр нигеҙендә ниндәй принцип ята торғандыр, уныһы билдәһеҙ. Шиғырҙар һанына ҡарап та улар араһында ниндәй ҙә булһа бәйләнеш урынлаштырыуы ҡыйын. Әйтәйек, беренсе һәм бишенсе бүлектәр 38, 39-ар шиғырҙы эсенә алһалар, ҡалғандарында иһә ни бары 11, 13-әр генә. Өсөнсө бүлек бөтәһе 8 шиғырҙан ғына тора. Бындай бүленештең, бәлки, ул саҡлы кәрәге лә булмағандыр.

Хәйер, дүртенсе бүлеккә индерелгән әҫәрҙәр араһында тематик яҡтан күпмелер оҡшашлыҡ, берҙәмлек тойомларға мөмкин. Улар, башлыса, ваҡыт талаптарынан сығып яҙылғандар («Буратино, һине алдағандар…», «Эт күҙҙәре», «Ул үлде…», «“Афған”дар ҡайтҡанда»). Аллегорияға ҡоролғандары ла бар. Беҙҙең бөгөнгө ысынбарлығыбыҙға хас ҡайһы бер күренештәр ярайһы ғына оҫта тотоп алынған был шиғырҙарҙа. Уларҙың һәр ҡайһыһында ла тос фекерҙәр, яңыса яңғыраған юлдар, ғөмүмән, ысын шиғри ынйылар табырға мөмкин. «Коррида»ла, мәҫәлән, лирик герой ҡурҡаҡлыҡтың тиреһен тунаған

да, Заман кәртәһенә элеп ҡуйған. «Үле Иҙел…»дә ул иле менән бергә «ашҡыныулы заман тулҡынына» ташланырға әҙерлеген белдерә. «Эсперанто»ла Яҡшы менән Яман тәржемәһеҙ аңлашыла торған ике телгә тиңләнгәндәр. «Эт күҙҙәре»ндә мәҫәл алымы сағылып киткәндәй була («Эттең эте аңлаймы икән әллә – уйһыҙ кеше илде бөлдөрә…»). Уйланыусан, хистәргә бирелеүсән, шиғыр юлдарынан аҡыл эҙләргә күнеккән уҡыусы «Сихәтлеме ҡулың, заманым?!»а ла иғтибарһыҙ ҡалмаҫ һәм үҙенә кәрәкле фәһемде алыр («Яралымын!.. Ярҙам ҡулын һуҙған кем ул? Һинме, үҙгәрешле заман?! Сихәтлеме ҡулың? Ауыр сирҙән йолоп алырһыңмы имен-аман?»). «Күргәҙмә» менән «Ринг» оторо ла уҫал яңғырайҙар. Беренсеһендә беҙҙең йәшәйешебеҙ сәйер бер күргәҙмәгә оҡшатылһа, икенсеһендә ул рингты хәтерләтә. Ә бына «Уңған ҡатын өйөн йыйыштыра…» – йомшаҡ ҡына һөйләп, ҡатыға ултырта торғандарҙан. Ул тағы ла кешенең шул ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы эске донъяһын тасуирлауға бағышланған. Тәү ҡарамаҡҡа унда һүҙ әҙәм балаһының кәйеф-сафаһы, ҡылыҡ-холҡо көндәлек мәшәкәттәргә, тормош ваҡ-төйәктәренә бәйләнгәнлеге тураһында ғына барған һымаҡ тойолһа ла, авторҙың әйтергә теләгән фекере күпкә төптәрәк ята, минеңсә: донъялар имен булған саҡта ғына күңел тыныслығына иҫәп тоторға мөмкин.

Гөлнур Яҡупованың әле телгә алынған шиғырҙары көнүҙәк проблемалар яҡтылығында ижад ителгән булһалар ҙа, жанр үҙенсәлектәре йәһәтенән улар публицистик характерҙағы әҫәрҙәрҙән алыҫ торалар. Дөрөҫ, шиғырҙарҙың бөтәһе лә тиерлек, публицистик әҫәрҙәрҙәгесә, юғары мотивтар менән һуғарылған. Тик шул юғары мотивтар уҡыусы зиһененә ябай һүҙҙәр менән тыныс ҡына, яйлап ҡына илтеп еткерелә. Икенсе төрлөрәк әйткәндә, замандың ҡатмарлы мәсьәләләре хаҡында шағирә һалҡын аҡыл, ҡайнар йөрәк менән фекер йөрөтә. Һирәк-мирәк осраштырып ҡуйғылаған рифма ҡытыршылыҡтарын иҫәпкә алмағанда, шиғырҙар матур, йыйнаҡ, күңелгә ятышлы.

Шулай ҙа «Автограф»та күберәк урынды заман ығы-зығыларын ғына сағылдырған шиғырҙар түгел, ә ваҡыт һынауын үтеп, һәр саҡта ла уҡыусы менән бергә атлағандары, уға һәр саҡта ла йән аҙығы һәм күңел тыныслығы бирә торғандары биләгән. Йән аҙығы менән күңел тыныслығын иһә әҙәм балаһы ғүмер баҡый мөхәббәт баҡсаһында эҙләргә күнеккән. Китаптың авторы ҡатын-ҡыҙ затынан булғанғалыр, бәлки, был темаға бында айырыуса ҙур урын бирелгән һәм ул, әйтергә кәрәк, һәр яҡлап яҡтыртылған, бөтә нескәлектәре менән

тасуирланған. Йыйынтыҡты асып ебәреүсе «Һыҙыла сазым…» шиғыры уҡ быға асыҡ миҫал булырлыҡ. Мөхәббәт тойғоһо был шиғырҙа атаҡлы музыкант-маэстро образына ла индерелә, бешкән алма менән дә сағыштырыла. Көйсө ҡылдары тыуҙырған моңға тиң бер генә нәмә лә булмаған шикелле, бешкән алманың һутын ҡайтарырлыҡ көс тә юҡ фани донъяла – мөхәббәт уты бер ҡабынһа, һүндерермен тимә. Ғүмер буйы һыҙландырыуы ла мөмкин уның.

«Мөхәббәт» тигән икенсе шиғырында автор был наҙлы ла, тылсымлы ла хистең йөкмәткеһен асып һалғандай итә. Баҡһаң, ул – иҫерткес шарап та, сикһеҙ дарья ла, алыҫ йондоҙ ҙа, утлы дауыл да, ҡырағай тау ҙа, әкиәттәге Һомай ҡош та икән. Шуға ла мөхәббәт тәмен татырға теләүселәрҙе һаҡ та булырға, һуңламаҫҡа ла саҡыра шағирә. Был шиғырҙа иғлан ителгән «мөхәббәт принциптары» «Текә баҫып әгәр әйтә ҡалһам…»да тере кәүҙәләнеш таба тип әйтергә мөмкин. Уның героиняһы мәңге сиселмәҫ сер йомғағы һымағыраҡ күҙ алдына килеп баҫа. Ләкин үҙ бахаһын белеп йәшәгән был ханымдың алданған саҡтары ла булғылай икән. Сөнки донъяла, сәңгелдәк яһайһы урынға, ағастан күҫәк юныусылар булған шикелле, мөхәббәткә хыянат итеүселәр ҙә юҡ түгел шул. Бына ни өсөн ул «Һандуғасым» шиғырында моң сафлығын һәм күңел төҙөкләгән данлап йырлаусы ҡошсоҡтан ҡасандыр «ялған сутылдауға әүрәгәнде» кисереүен үтенә. «Ул көндө һис онотаһым юҡтыр…»ҙа был мотив артабан үҫтерелә һәм ысын мөхәббәтте ялғандан, тиҙ үтеп китеүсән мауығыуҙан айыра белергә ишара яһала. «Үҙ-үҙемә ғәжәп иткәнем бар…» иһә әлеге шул «үҙем»дәрҙең күплеген яңынан хәтергә төшөрә һәм уларҙың мөхәббәт баҡсаһын да ситләтеп үтмәүҙәре хаҡында һөйләй. («Бер ҡараһаң, аяҙ күгемдә ҡояш балҡый. Бер ҡараһаң, болот баҫып ала, ямғыр түгелә…»)

Мөхәббәттең күп осраҡта һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ иҫ киткес ҡатлаулы хистәр һәм кисерештәр төйөнө икәнлегенә баҫым яһап әйтелгән шиғырҙар ҙа байтаҡ йыйынтыҡта. Уны ваҡытында күрә һәм тоя белеү – үҙе бер йомаҡ. «Ландыш» шиғырында, мәҫәлән, был күренеш ифрат образлы итеп тасуирланған. Ысынлап та, ҡуш усында ап-аҡ ҡыңғырау тотоп ултырған күпме ландыштар, «ҡыҙыл ләләләргә» алданып, күңеле һаңғырауланғандарҙың иғтибарынан ситтә ҡала! Үҙ мөхәббәттәрен табалмай интеккәндәр өсөн был бик һәйбәт һабаҡ, юғиһә. Шиғырҙан һуң килтерелгән автор иҫкәрмәһендә лә ҙур мәғәнә ята. «Ландыш»ты «Ярлыҡа, яҙмышым, мине…» дауам

итә, тик унда образлылыҡ етеңкерәмәй – ул ҡоро табыныуға, яҙмыштан мәрхәмәтлек һорауға ғына ҡайтып ҡала. Ә бына «Моғайын бер сәбәбе…» башҡасараҡ яңғырай – теләгән кешегә уйланырлыҡ та, ғибрәт алырлыҡ та нәмә бар унда.

Ғишыҡ утында яныусыларҙың хәл-әхүәлен, эске кисерештәрен, йөрәк тибешен «Асыу алдан, аҡыл арттан… », «“Һайрар ҡошом”,– тинең дә һин…», «Ҡуш ҡанат», «Скрипка», «Юрый ғына…», «Минең төрмәм», «Наҙлы һүҙҙәреңде тыймасы…», «Һөйөүемдең утлы уғын…», «Бүләк иттең миңә ҡуш беләҙек…» һәм башҡа бик күп шиғырҙарҙан аңларға һәм һиҙемләргә мөмкин. Уҡыусы хыялында ошо шиғырҙар тыуҙырған героиня һөйә лә, һөйөлә лә белә. Хистәргә бай ул, йөрәге һиҙгер уның, аҡылы зирәк. Формаһы менән Назар Нәжмиҙең «Төйөн»өн хәтерләткән бер әҫәрҙә Гөлнурҙың лирик героиняһы бына нисегерәк фекер йөрөтә:

Асыу алдан, аҡыл арттан…
Йөрәкте яраланың.
Телгеләп үҙ йөрәгеңде,
Ярама ямау һалдың.

Уңалды ла. Тик ниңәлер
Күңелде көйөк алды:
Икебеҙҙең дә йөрәктә
Йөй ҡалды бит! Йөй ҡалды…

Күңеле тыныс саҡта иһә был героиня йондоҙ илен мөхәббәт тәхетенә тиңләп, ҡуш ҡанаттары менән шунда осорға ла һәләтле; скрипканан һибелгән моң тетрәтеп ебәргәндә уға татлы ғазаптары менән тәүге һөйөүе әйләнеп ҡайтҡандай була; етеҙ тәгәрмәс кеүек тәгәрләгән ғүмер юлының үтелгәне һәм үтеләсәге хаҡында ла уйланып ала Гөлнурҙың героиняһы; һөйгәненең күҙҙәре һипкән ипкенгә наҙланыр өсөн ҡайсаҡ юрый ғына илап алыуҙан да тартынмай ул; хистәре көл аҫтында ҡалған үле күмергә әйләнеүҙән дә шөрләп ҡуя ул һәм шуға ла йөрәген яныр-янмаҫ итеп көйрәтеү менән һис кенә лә килешмәй, киреһенсә, уны тулатыуҙы, саҡма таштай сағып ут сығарыуҙы үтенә һөйгәненән.

«Ун алты йәштә…», «Үрмә гөлдәр кеүек», «Көҙгө юлда», «Зәңгәр, зәңгәр…», «Ике тау мөхәббәте», «Маскарад», «Ни ғәйебем,

ни гөнаһым өсөн…», «Мөхәббәт ул – күлдәк түгел, беләм…», «Беләһеңме, әйтәйемме?..», «Мөхәббәтең шулай иркә микән…», «Һағыш», «Гел һинеңсә йәшәнем мин, аҡыл…» шиғырҙарында ла автор үҙ героиняһының эске донъяһына бик иғтибарлы – ундағы кескәй генә үҙгәреш тә күҙгә салынмай ҡалмай, күңел ҡылының һәр тибрәлеше үҙ моңон тыуҙыра һәм үҙ сағылышын таба. Мөхәббәт тойғоһоноң иҫ киткес бай сығанаҡтары һәм ошо тойғоноң ифрат күп төрлө булыуы тасуирланған был шиғырҙарҙа. Әлбиттә, бәләкәй генә мәҡәләлә уларҙың бөтәһенә лә иркенләп туҡтау, ауыҙ тултырып һөйләү мөмкин түгел – юғиһә «Автограф» хәтлем тағы бер китап хасил булыр ине. Әммә шуларҙың икеһе тураһында бер нисә һүҙ әйтмәй ярамаҫтыр. «Зәңгәр күҙҙәрендә – зәңгәр осҡон…» һәм «Гел һинеңсә йәшәнем мин, аҡыл…» тип аталалар улар. Ике әҫәрҙә лә башҡорт шиғриәтендә йыш ҡабатлана торған миләш образы бар. Тик, лирик героиняның кәйефенә, күңел күгенең торошона ҡарап, ике шиғырҙа ул ике төрлө яҫылыҡта ҡулланылған. Беренсеһендә һүҙ һуңлабыраҡ тыуған мөхәббәт хистәре хаҡында бара. Мәле уҙыбыраҡ килһә лә, ул барыбер дөрләп янған усаҡ кеүек – йөрәкте өттөрә, уның утын да, ялҡынын да йәшереү мөмкин түгел:

Баҙрап тора миләш, баҙрап тора,
Көҙ – көҙмө ни уға, еңмешкә…
Устарыңды асмай сыҙап ҡара
Өҙөлөп кенә төшөр емешкә!

«Гел һинеңсә йәшәнем мин, аҡыл…»да иһә миләш образы башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра. Уның шулай булыуы шиғырҙың ҡатмарлы ла, ҡаршылыҡлы ла уйҙар бәйләнешенә ҡоролоуынан килә торғандыр. Быға тиклем гел аҡылға таянып йәшәгән һәм шул арҡала моратына ирешкән шәхес, яҙмыш рәхимһеҙлегенә дусар булғандан һуң, уға ышанысын юғалта һәм йөрәген үҙ иркенә ҡуя. Ләкин бындай хәл оҙаҡҡа бармай, сөнки аҡылға буйһонмайынса еңел-елпе генә йәшәүҙең ҡыҙығы ла, мәғәнәһе лә юҡ:

Мин – бәхетең тиеп әйткәндәрҙе
Эйәләре килеп таптырҙы,
Еләк кенә көҫәп торғанымда
Көнөм миңә миләш ҡаптырҙы…

Юҡ, кәрәкмәй миңә ят өлөшө,
Көмөш булғанда ла, кәрәкмәй.
Өмөт тигән орлоҡ бирсе, аҡыл,
Шыттырайым уны йөрәктә.

«Автограф»тың икенсе бүлеге лә мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарҙан тора. Тик был шиғырҙарҙа уҡыусыла яҡты хыялдар, ыңғай хистәр уята торған буяуҙарға урын әҙерәк бирелгән. Киреһенсә, юҡһыныу, бойоғоу, яманһылау, моңайыу тойғолары өҫтөнлөк итә унда. «Һиннеҙ», «Ҡалай йонсоу килде быйылғы яҙ…», «Күреп туймаҫ инең йәреңде…», «Ғәжәп ине һинең күҙҙәрең, тим…», «Инде миңә төштәр генә ҡалды…», «Боҙ аҫтында йылға…», «Йәшәүҙәре һиннеҙ мөмкин түгел…», «Бәхетемдән яҙҙым таңғы нурҙа…» шиғырҙарында был мотив үҙен айырыуса ныҡ һиҙҙерә. Ләкин шиғырҙарҙың шулай моңһоуыраҡ килеп сыҡҡандары өсөн уларҙың авторын һис кенә лә битәрләргә йыйынмайым. Бойоғоу, юҡһыныу мотивтары өҫтөнлөк иткән хәлдә лә, өмөтһөҙлөккә урын юҡ унда. Был – беренсенән. Икенсенән иһә, ни өсөн әле поэзияла, бигерәк тә уның лирик төрөндә, гел генә күңел күтәренкелеген йырлағаң, ерҙән айырылып, бына-бына күккә осоп китергә әҙер «ҡанатлы фәрештәләр»ҙе һүрәтләгән әҫәрҙәр хакимлыҡ итергә тейеш? Тормош бит үҙе лә ғүмер баҡый көҙгө һымаҡ ялтырап ҡына тормай. Ә шиғриәт, билгеле булыуынса, тормоштоң ҡатмарлы күренештәрен образлы фекерләү ярҙамында сағылдыра торған үҙенсәлекле бер формаһы. Көндө – төн, йәйҙе – ҡыш алмаштыра икән, тимәк, шағир күңеле лә һәр ваҡытта ла бер төрлө генә булып ҡала алмай. Шуға ла болоҡһоу хистәр менән һуғарылған әҫәрҙәрҙең дә тыуып ҡуйыуы һис тә ғәжәп түгел. (Тик объектив дөрөҫлөккә тап килмәгән ҡара буяуҙар ғына яғылмаһын.) Һәм әҙәбиәт донъяһында ундай әҫәрҙәрҙең дә үҙ билдәләмәһе бар – улар уҡыусыла теләктәшлек хисе уятырға, кеше һағышын үҙеңдеке шикелле ҡабул итә һәм уны уртаҡлаша, кисерешә белеү һәләте тәрбиәләү маҡсатына йүнәлтелгәндәр. Әгәр ундай әҫәрҙәргә юл ябылһа, әҙәбиәт бик ярлы булыр ине һәм ул үҙенең төп бурысын – тормошто тормошса һүрәтләү бурысын үтәүҙән алыҫ торор ине.

Гөлнур Яҡупованың «Автограф»ында әсә һәм әсәлек тойғоһон сағылдырған шиғырҙарға ла байтаҡ урын бирелгән. Дөрөҫ, башҡорт поэзияһы өсөн был яңы тема түгел. Уның шулай булыуының да үҙ сәбәбе бар – ҡатын-ҡыҙҙар араһынан үҫеп сыҡҡан яҙыусылары, шағирәләре, тәнҡитселәре шул тиклем дә күп булған әҙәбиәт донъяла

башҡаса юҡтыр ул бөгөнгө көндә. Әсәләр яҙмышы, өләсәйҙәр изгелеге хаҡында ҡатын-ҡыҙҙарҙан да оҫтараҡ, ҙтемлерәк итеп кем яҙһын! Гөлнурҙың был темаға ижад иткән шиғырҙары ла үҙенсәлекле, минеңсә. Был шиғырҙарында ла («Шәмгә ут ал, әсәй!», «Ҡарлуғас», «Аҡ өйәңке», «Әсәй менән киләм», «Изгелек», «Күңелемде болоҡһотоп…») ул нескә күңелле, һиҙгер йөрәкле, ҙткер күҙле, хистәргә бай шағирә булып ҡала. Таңһылыу Ҡарамышеваның, ни ҡәҙәр генә теләһә лә, ир бала табыу бәхетенә ирешә алмаған бер героиняһы мейегә һеңеп ҡалған шикелле, Гөлнурҙың да хәтер түрендә һаҡланырлыҡ үҙ поэтик табыштары юҡ түгел бында. («Һин бит, әсәй! Ике шәм тигәнем – ике ҡулың. Яҡты тарала, ҡаса ҡараңғылыҡ, күңелемдә күбәләктәй өмөт ярала…»; «…Һин йәшәүҙең бөйөк серҙәренең береһенә, кеше, эйәһең, яңғыҙлыҡтың йәшле мендәренең белмәһәң дә кемгә тейәһен…»; «Өләсәйҙәр! Йомарт йөрәккәйҙәр… Донъялыҡта хәҙер юҡ инде. Булмышыма улар ипләп кенә кейҙереп киткән холоҡ-йүгәнде».) Был шиғырҙарҙы бер цикл тип тә иҫәпләргә мөмкин булыр ине. Уларҙы циклға туплаусы төп мотив – быуындар бәйләнеше, кеше ғүмеренең өҙлөкһөҙ һәм туҡтауһыҙ ағышы тураһында тынғыһыҙ уйланыуҙар. Беҙҙе әйләндереп алған ысынбарлыҡ, унда тереклек иткән кешеләр, ғөмүмән, ер йөҙөндә йәшәүҙең мәғәнәһе хаҡында тынғыһыҙ уйланыуҙар иһә, үҙ сиратында, шағирәне әкренләп фәлсәфәүи яҫылыҡта фекер йөрөтөүгә алып килә. Китаптың һуңғы, бишенсе, бүлегенә ингән шиғырҙар тап ана шул турала һөйләй.

Дөрөҫ, ундай яҫылыҡта яҙылған шиғырҙар әлегә бик күп түгел. Әммә булған ҡәҙәрһе лә иғтибарҙы йәлеп итерлек. Миҫалға «Мөғжизә» шиғырын алырға мөмкин. Гөлнур Яҡупованың ижад манераһына хас булғанса, күләме яғынан ул ҙур түгел. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, унда шағирәнең профессиональ сифаттары – һиҙгерлеге лә, күҙәтеүсәнлеге лә ярылып ята. Улай ғына ла түгел, бында уның оҫталыҡ һыҙаттары ла (талантының айырым үҙенсәлектәре лә) – үҙе күҙәткән күренештәрҙән тәрән мәғәнәле һығымта яһай белеү һәләте лә асыҡ сағылған. Тәбиғәттә барған мәңгелек хәрәкәт менән кеше характеры араһындағы йәнәшәлек, минең уйымса, бик сос тотоп алынған был әҫәрҙә:

Күҙ алдымда булды был мөғжизә:
Көмөш кенә боҙон шишмәнең
Эй суҡыны бер ҡош, эй суҡыны –
Тишелмәйсә боҙ һуң нишләһен?!

Урғып сыҡты ағым, ел таратты
Сылтыр-сылтыр ғына тауышты,
Талға баҫып ҡош та сутылданы,
Йыр менән йыр, гүйә, ҡауышты.

Был ҡуш йырға донъя хайран ҡалды,
Шып-шым ғына торҙо бер тына.
Эй, һин, Кеше, бик-бик ашыҡһаң да,
Бер булмаһа, туҡтап, бер тыңла!

Һин табырһың шул саҡ үҙең менән
Тәбиғәттә күпме уртаҡлыҡ!
Боҙ ҡоршауҙа икән бәгзе күңел –
Изгелеккә етмәй юртаҡлыҡ…

Йә булмаһа, йыйынтыҡҡа исем биреп, уға йән өрөп ебәргән шиғырға туҡталайыҡ. Кешенең ерҙә йәшәү мәғәнәһе хаҡында бынан да ябайыраҡ, шул уҡ ваҡытта бынан да образлыраҡ итеп әйтеп биреү мөмкинме икән? Ваҡыт – ғүмер төшөнсәһе тере кеше ҡиәфәтенә индерелгән бында. Ул маһир ҙа, аяуһыҙ ҙа – аға ла аға. Уның ҡулдары өлгөр, ҡотолормон тимә – үҙенең автографын яҙа ла яҙа, һиҙҙермәйсә генә гримын һала ла һала: «көмөш баҫа сәсте, маңлайҙарҙы селтәр-селтәр генә һыр ала», йөрәкте әсе һағыш телә. Ләкин ғүмер тигәнең кешегә автограф һалып ҡына ҡалмай икән дә баһа – үҙенең көҙгө мәленә еткәс, ул кешенән дә автограф талап итә: ер йөҙөндә ниндәй эҙ ҡалдыраһың – яҡшынымы, әллә ямандымы? Бына ошондай уйҙарға һала Гөлнурҙың был шиғыры. Баҡһаң, автограф һүҙе лә күп төрлө мәғәнәне аңлатырға мөмкин икән.

Әле тикшергән йыйынтыҡ Г. Яҡупованың үҙ ғүмерендә икенсе генә китабы булһа ла (хәйер, китаптар һаны ғына уларҙың авторы тураһында тулы мәғлүмәт бирмәй ҙә инде – уны нисек сығарһаң булмай), шағирәнең өлгөрөп еткәнлеген, уның поэтик фекерләү ҡеүәһенең етерлек нығынғанлығын иҫбатларҙай тағы байтаҡ әҫәрҙәргә туҡталып үтер инем. Ләкин мәҡәлә ҡалыбы уға ирек бирмәй. Шуға ла, уҡыусы булараҡ мине тәьҫирләндергән, күңелемдә ниндәйҙер тойғолар уятып ебәргән шиғырҙарҙың исемдәрен генә һанап китергә мәжбүрмен. Бына улар: «Минең яҡтым», «Көҙгө», «Уйнама, улым, улай», «Ҡыңғырау», «Ah, миҙгелдәр…», «Сәстәремә

яуа тәүге ҡар…», «Сәғәт һуға», «Дая һин, тинем берәүгә…», «Төштә түгел, өндә…», «Йоҙаҡ тағып ҡуйҙы йөрәгенә…», «Бәхетем», «Кәкүктәр», «Сабырлыҡтың төбө һары алтын», «Таш хәтере», «Ҡалҡан», «Ике тамсы», «Тотҡон», «Йәнем…», «Тыумай ҡалһам…». Башҡалар ҙа уҡыһын уларҙы, фәһем алһындар, эстетик зауыҡтарын байыҡтырһындар, йән аҙығы тапһындар.

Шулай ҙа һуңғы ике шиғыр хаҡында бер-ике ауыҙ һүҙ әйтмәй килешмәҫтер. Сөнки тәү ҡарамаҡҡа уларҙың икеһе лә пессимистик рух менән һуғарылған кеүектәр... Әммә шиғырҙарҙың елеген һура башлаһаң, төшөнкөлөк хистәренең яһалма бер ҡорған ғына икәнлегенә тиҙ төшөнәһең. «Йәнем…»дә, мәҫәлән, әлеге шул ерҙә йәшәү мәғәнәһе фәлсәфәүи яҫылыҡта яҡтыртыла. Иртәнге мөлдөрәп торған ысыҡҡа йәиһә талпынып осор ҡошсоҡҡа, йәиһә бишкә бүленергә әҙер тороусы алмаға оҡшаған йәндәргә йәшәү еңел түгел, әлбиттә, был донъяла. Ә бына эскәйендә йәне булмағандарға еңелерәктер, моғайын.

«Тыумай ҡалһам…» да шундайыраҡ формала яҙылған. Башта шиғырҙың лирик геройы тыуғанына үкенгән һымаҡ. Әгәр ергә килмәгән булһа, йәшәү ғазабынан, донъя мәшәҡәттәренән, әрнеүле кисерештәрҙән, иңгә төшкән аҙаптарҙан, хыянаттан, йөрәкте ярған яранан һәм шуға оҡшаған башҡа бик күп ҡыйынлыҡтарҙан ҡотолор ине кеүек тойола уға. Шиғыр осланыр алдынан был күңелһеҙ уйҙар йөҙ ҙә һикһән градусҡа борола ла ҡуя:

Тыумай ҡалһам… Ҡайҙан килеп был уй
Инде әле башҡа кинәттән?
Кешеләр тик әйтә күрмәһендәр
Беҙ ҡотолор инек һинән тип…

Һүҙемде тамамларҙан алда «Ҡарап торор инем, өләсәйем…» тигән шиғырға туҡталмаҡсымын. Шунда «Үҙекәйем ҡунаҡ, һүҙем бүләк…» тигән юл бар. Шиғырҙа ул лирик героиняның өләсәһе йырлаған йырҙан алынған өҙөк итеп килтерелгән. Ләкин йырҙың тамыры йыраҡтараҡ ятҡанлығына бер кем дә шикләнмәҫ. Һүҙ бында Гөлнур Яҡупованың ижадын халыҡтың ауыҙ-тел ҡомартҡылары менән бәйләргә маташыу тураһында бармай – халыҡ ижады традицияларынан башҡа ысын шиғриәт юҡ ул. Мәҡәләнең исеменә сығарылған «үҙем»дәр, «үҙекәйем»дәр ҙә күҙ уңында тотолмай.

Әйтергә теләгән фекер башҡасараҡ. Уйлап ҡараһаң, йырҙан алынған юлдың йөкмәткеһе ифрат тәрән бит. Һүҙҙең алтын бәрәбәренә торорлоҡ байлыҡ икәнлеге, шуға ла уның ҡәҙерен белергә кәрәклеге тураһында әйтелгән унда. «Һүҙем бүләк…» Тимәк, ул һайлап ҡына, ҙур һаҡлыҡ менән генә сығарылырға тейеш. Борсаҡ урынына һибелгән һүҙҙән ни фәтеүә?! «Автограф» йыйынтығының авторы һүҙҙең бай мөмкинлектәренән файҙаланыу, уның бәҫен һаҡлау юлында һиҙелерлек уңышҡа ирешкән, минең ҡарамаҡҡа. Әгәр үҙеңә, һүҙеңә талапсан булһаң, бәләкәй генә шиғырҙар менән дә төплө фекер әйтергә була тигәнде ҡеүәтләй һымаҡ. Ошо йүнәлештә уға киләсәктә лә яңы ҡаҙаныштар юлдаш булһын.

1994

ИКЕ ПОЭМА ТУРАҺЫНДА БЕР ҺҮҘ

Риф Тойғон үҙенең «Ҡәнифә юлы» тигән яңы поэмаһын уҡыусы хөкөмөнә сығарҙы («Ағиҙел» журналы, 1994 йыл, 6-сы һан). Теүәл өс йыл элек беҙ уның «Баҡсала» исемле әҫәре менән танышҡайныҡ. (Шул уҡ журналдың 1991 йылғы 7-се һанында.) «Ҡәнифә юлы»ның әле типография буяуы еҫенән дә арынмағанлығын, ә «Баҡсала»ның тәнҡитселәр теленә эләгеп, таушалып бөтмәгәнлеген (тиҡ, бәхет-кәмелер был, әллә ҡыҙғанысҡа ҡаршымылыр) күҙ уңында тотоп, ошо ике поэма хаҡында бер-ике ауыҙ һүҙ әйтергә иҫәп. Улар икеһе лә быға лайыҡтыр тип уйлайым.

Иғтибар үҙәгендә бер үк авторҙың ике әҫәре торғанлыҡтан, уларҙы йәнәш ҡуйып, бер-береһе менән сағыштырып ҡарау ҡулайыраҡ булыр. Ни әйтһәң дә, улар бер үк тупраҡта моронлап, бер үк илһам шишмәһе менән һуғарылыу нәтижәһендә донъяға килгән ижад емеше бит. Һүҙ барышында бер аҙ ситкә тайпылып китеүҙәрҙең дә булыуы ихтимал. Сөнки әҫәрҙәрҙең икеһе лә тормоштоң үҙенән үҫеп сыҡҡан, ә тормош, билдәле булыуынса, алдан һыҙып ҡуйған туп-тура һәм тип-тигеҙ юл буйлап ҡына тәгәрәмәй, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

Күләмдәре яғынан «Баҡсала» менән «Ҡәнифә юлы» бер-береһенән күпкә, хатта бик күпкә айырыла: һуңғыһы тәүгеһенән ике тапҡырҙан да ҙурыраҡ. «Баҡсала» лирик геройҙың ғәҙәттә бер тыналa уҡып сығыла торған монологын хәтерләтһә, «Ҡәнифә юлы»ның сюжеты шул уҡ геройҙың бала сағынан алып хәҙерге көнгә тиклем осорҙа йөрәк түрендә һаҡланып килгән һәм әле булһа күңеленә тынғылыҡ бирмәгән ҡайһы бер күренештәрҙе барлауға, уларҙы үҙенең аңы аша үткәреп, ниндәйҙер һөҙөмтә яһарға тырышыуын һүрәтләүгә ҡоролған. Ләкин, «Ҡәнифә юлы» «Баҡсала»нан ике тапҡырҙан да артыҡҡа ҙурыраҡ булһа ла, ул һис кенә лә елəткес әҫәр түгел – уны уҡыған һайын уҡығы килеп тора, уҡыған һайын поэма үҙенең эске сифаттарын, поэтик үҙенсәлектәрен тағы ла киңерәк һәм тулыраҡ аса барған һымаҡ тойола.

«Баҡсала» менән «Ҡәнифә юлы»ның нигеҙендә ятҡан, уларҙың туҡымаһын тәшкил иткән тел-стиль сараларына күҙ ташлағанда, был ике әҫәр араһында айырмаға ҡарағанда уртаҡлыҡ күберәк, минеңсә. Уларҙың икеһендә лә башҡорт классик шиғриәте традициялары яры-

лып ята. Строфалар төрлөлөгөн (бигерәк тә «Баҡсала» поэмаһында) иҫкә алмағанда, бында бөтәһе лә ябай, бөтәһе лә халыҡсан. Уның башҡаса булыуы ла мөмкин түгел. «Ҡәнифә юлы», мәҫәлән, ауыҙ-тел ижады рухында яҙылған, тип әйтергә мөмкин. Ауыл тормошон үҙ күҙе менән күреп белгән һәм уны йөрәге аша үткәргән, милли традицияларға, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәренә битараф булмаған уҡыусыла был һис кенә лә шик тыуҙырмаҫ.

Тел-стиль сараларының уртаҡлығын рифмалар теүәллегендә лә шәйләргә мөмкин – яңғыраштары менән шиғырҙар бер-береһенә ылығып, бер-береһен тулыландырып тора. Өҙөк-мөҙөк, ярым-йорто юлдар ҙа күҙгә бик бәрелеп бармай. Һирәк-мирәк осраған хәлдә лә, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ урынында – авторҙың ниндәйҙер фекерҙе һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә теләүен күрһәтеп тора. Башватҡысты хәтерләткән яһалма һүҙ бәйләнештәренә лә урын юҡ был әҫәрҙәрҙә. Ҡыҫҡаһы, авторҙың үҙенә талапсанлығы һәм, бәлки, шуның һөҙөмтәһендәлер шиғриәттә ярайһы уҡ юғары мәҙәниәткә эйә булғанлығы әллә ҡайҙан күҙгә бәрелеп тора. Ә бына идея-тематик яҡтан килгәндә, «Баҡсала» менән «Ҡәнифә юлы» араһында уртаҡлыҡҡа ҡарағанда айырмалыҡ күберәктер, моғайын. Хәйер, был йәһәттән дә уртаҡлыҡ юҡ түгел: әҫәрҙәргә киңерәк ҡараш ташлағанда, уларҙың икеһендә лә мораль-этик мәсьәләләр күтәрелгән һәм авторҙың шул мәсьәләләргә ҡарата мөнәсәбәтен, уларҙы нисектер хәл итергә тырышыуын тойомларға мөмкин.

Юл ыңғайында тағы ла бер мөһим үҙенсәлекте һыҙыҡ өҫтөнә алып китеү урынлы булыр. Тел-стиль, һүрәтләү сараларының ябайлығы, халыҡсанлығы йәһәтенән әле һүҙ барған әҫәрҙәр башҡорт поэмаһының күптән формалашҡан һәм инде шаҡтай нығынып өлгөргән традицион алымдарын дауам итһәләр ҙә, эске төҙөлөштәре менән уларҙың башҡасараҡ булыуын да күрмәү мөмкин түгел. Атап әйткәндә, Тойғон поэмаларында әҫәрҙең нигеҙенә һалынған тормош материалы бөртөкләп, тәфсилләп тикшерелмәй. Авторҙың иғтибары башлыса төп идеяны тәрәнерәк һәм тулыраҡ аңларға ярҙам итерҙәй айырым эпизодтарға ғына йүнәлтелгән. Ә ул эпизодтар араһында бәйләнеш урынлаштырыу, теге йәки был күренештең сәбәптәрен асыҡлау, сюжет ағышына килеп ингән ҡайһы бер хәл-ваҡиғаларҙың тамырҙарын юллау бурысы иһә уҡыусының үҙенә ҡайтып ҡала. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, әле беҙ сағыштырып ҡараған ике поэма ла аҡыл менән тойғоно бергә төйнәп, зиһен ҡылдарын киреберәк тартып эшкә ҡушыуҙы талап итә торған әҫәрҙәр тиер инем мин.

«Баҡсала»ның сюжетын, мәҫәлән, сәсмә тел мөмкинлектәренән файҙаланып, былайыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға булыр ине. Ҡала халҡы бил-быуын яҙҙырырға тип килә торған ғәҙәттәге ял паркы. Эргәнән генә трамвай юлы уҙа. Көҙгө мәл. Теҙелешеп, йылы яҡҡа ҡоштар оса. Уларҙы оҙатып ҡалған кеүек, ағас ботаҡтарынан һары япраҡтар өҙөлөп төшә. Лирик герой баҡсала ултырған бер ҡартты күҙәтә. Үҙенә бик килешеп торған ҡул таяғы менән был ҡарт япраҡтарҙан ниҙер эҙләй һымаҡ тойола уға. Шул саҡ япраҡтар ҡыштырҙауына, үтеп-һүтеп торған трамвайҙар тыҡылдауына үҙҙәренсә уйын ҡороп, сыр-сыу килгән бала-саға тауышы өҫтәлә. Улар нимәнелер арҡан менән һөйрәп йөрөтәләр. Баҡһаң, ул – бюст икән. Ябай бюст түгел, ә «даһи» бюсы. Автор уйынса, был күренеш ағас араһынан балаларҙы күҙәтеп ултырған таяҡлы ҡартты ҡурҡыуға һала, ул тертләп киткәндәй тойола һәм көтмәгәндә юҡ була. Тәбиғәттең ошо тыныс мөйөштәренең береһендә хозурланып, «хыялдарға ихлас бирелеп» ултырған лирик герой ҙа нисектер юғалып, аптырап ҡалғандай була. Бер аҙҙан теге ҡарт яңынан күренә, тик был юлы инде – таяҡһыҙ; «даһи» бюсын һөйрәп йөрөтөүсе балалар янына килә, уларға бер нисә һүҙ ҡата ла, бюҫка төкөрөп һәм уға ләғнәт уҡып, уҡыусы күҙенән дә, әҫәрҙән дә бөтөнләй юғала.

Бер уйлағанда, поэманың йөкмәткеһе – ябай ҙа, ҡыҫҡа ла. Уның сюжет төйөнөн бала-саға уйынсығына әйләнгән бюст тәшкил итә. Хатта күҙгә бәрелеп ятҡан сюжет та юҡ һымаҡ бында. Хәтерҙә ҡалырҙай берҙән-бер күренеш – әлеге лә баяғы шул сыр-сыу килеп, уйнап йөрөгән бала-саға. Әгәр «Баҡсала» лирик геройҙың уйланыуҙары, автор сигенештәре менән байыҡтырылған булмаһа, бәлки ул әҙәби әҫәр кимәленә күтәрелә алмайынса ла ҡалыр ине, уны уҡыусы ла табылмаҫ ине. Бөтә ғиллә лә ана шунда – шағир ниндәй ҙә булһа ваҡиға хаҡында бәйнә-бәйнә һөйләүҙе маҡсат итеп ҡуймай. Уның өсөн иң мөһиме – шул ваҡиға тыуҙырған ҡатмарлы уйҙар теҙмәһе.

Бала-саға тауыштары миңә
Яҡынайғас,
Күҙем ни күрҙе?
Юҡ, әйтергә телем бармай…

Һүҙем
Һөйләй торған түгел уйнатып.
Хөкөм! Хөкөм! – тиеп ҡысҡырыуҙар
Ебәргәндәй мине айнытып.

Бына ошондай берсә киҫкен, берсә шомло яңғыраған ярым-йорто уйҙар теҙмәһенән ҡоролған поэманың сюжеты. Тәү ҡарауға уның исеме уҡыусыны матурлыҡ, күркәмлек донъяһына саҡырған кеүек. Асылда иһә, әҫәрҙең эсенә кергән һайын, бөтөнләй көтөлмәгән, уйланмаған-нитмәгән мөхиткә юлығаһың. Башта еңелсә генә, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә утыҙ етенсе йыл телгә алынып китә. Унан һуң әле көҙгө күлдәгенә төрөнөп, ҡала пейзажына үҙенсә бер йәм өҫтәп ултырған баҡсаның ҡасандыр зыярат булғанлығына ишара яһала. («Заманында ошо зыяратта ла яңғыраған атҡан тауыштар.) Артабан «даһи»ҙың исеме лә туранан-тура атала, уның тарих буйынса киң билгеле булған «атай өсөн улы яуап бирмәй» тигән һүҙҙәре хәтергә төшөрөлә. Шунда уҡ, ҡайһы бер конкрет фактҡа таянып, был һүҙҙәрҙең күҙ буяу өсөн генә әйтелгәнлеге лә фашлана.

Ләкин поэманың төп мәғәнәһе, автор әйтергә теләгән фекерҙең асылы, шәхес культын тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп, уға бәйле ҡазаларҙы, шул осорҙа ҡылынған яуызлыҡтарҙы һанап сығыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Авторҙы борсоған да, бер үк ваҡытта ҡыҙыҡһындырған да, уның мейеһен ҡайнатҡан, күңеленә тынғылыҡ бирмәгән иң мөһим нәмә – шәхескә табыныу заманында ил күләмендә хакимлыҡ иткән дөйөм атмосфера, ошо яман сир тыуҙырған микробтарҙың йәшәү ысулдары, кешеләр араһында хөкөм һөргән тәртиптәр, әхлаҡ нормалары. Рефрен кеүегерәк яңғыраған «ватандашын атҡан, һатҡан» тигән фраза был фекерҙе уғата ла көсәйтә.

Әҫәрҙән күренеүенсә, лирик герой шәхес культына бәйле ваҡиғаларҙың (атыуҙарҙың, һатыуҙарҙың) шаһиты булмаған. Шуға күрә таяҡлы ҡарт образын тыуҙырыу ҙа, бәлки, осраҡлы түгелдер. Сөнки автор байтаҡ фекерен шул ҡарт образы аша белдерә. Тик уның был ҡартҡа мөнәсәбәте бер төрлө генә түгел. Дөйөм алғанда, ҡарт образын шағирҙың уңышы, әҙәби табышы тип иҫәпләргә мөмкиндер. Шәхес культын фашлауҙа ул ярайһы ғына оҫта файҙаланылған. Икенсе яҡтан иһә, ҡарттың үҙенә лә ниндәйҙер шикле ҡараш ташлана һәм ул ҡараш, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик үк асыҡланып та бөтмәгән, шикелле:

Күргәнгә лә «даһи» бюсын һөйрәп
Килтереүен бала-сағаның,
Ҡурҡышынан ҡасып киткәндер ул
Берәй ышығына баҡсаның…

Әллә ул да элек ҡылғанына
Бөгөн килеп терһәк тешләгән.
Ул саҡта һуң утыҙ етенсе йыл
Кем булған ул?
Ҡайҙа эшләгән?

«Теге ваҡытта» кем булғанын, ҡайҙа эшләгәнен белмәгәс, ниңә күрәҙәлек ҡылырға? Әгәр ҡала паркында ергә ҡойолған һары япраҡты ҡул таяғы менән аҡтарып ултырыусы һәр бер ҡартты доноссы-ошаҡсыға тиңләп, уға шикләнеп ҡарай башлаһаҡ, яңынан утыҙ етенсе йылға әйләнеп ҡайтмаубыҙмы? «Кемлеге бит уның аңлашыла – ҡул таяғын ташлап ҡасыуҙан» тип ышандырырға тырыша ла беҙҙе автор, тик бына уҡыусы нисегерәк ҡабул итә икән был үтә ҡәтғи яңғыраған раҫлауҙы? Эзоп теле менәнерәк яҙылған һымаҡ поэманың был өлөшө. Һәр хәлдә, әҫәрҙең йөкмәткеһе шундайыраҡ тәьҫир ҡалдыра. Авторҙың үҙе тыуҙырған ҡарт образына мөнәсәбәте шул тиклем ҡаршылыҡлы һәм ҡатлаулы, минеңсә, ҡайһы бер мәлдә ул, саманы онотоп, дорфалыҡҡа ла юлығып ҡуя. «Олоғайған һайын, күктән бигерәк ергә кеше нығыраҡ тартыла…»; «Гүр эйәһе бер саҡ булыр ерҙе эҙләп йөрөй мәллә ашығып!» тигән шифри юлдар, мәҫәлән, һис кенә лә ҡолаҡҡа йәтеш түгел. Уларҙан йән өшөткөс гүр һалҡыны бәреп тора кеүек.

Әҫәрҙә ваҡыт берәмеге итеп йылдың көҙгө миҙгеле алынған. Был да осраҡлы хәл түгелдер. Сөнки авторҙың күҙәтеү орбитаһына эләгеп, поэманың башынан алып аҙағына хәтлем иғтибар үҙәгендә ҡалған ҡарттың да бит «ғүмеренең әле еткән сағы алтын көҙөнә». (Ҡаршылыҡлы фекер уятырға тағы бер сәбәп: ғүмеренең алтын көҙөнә еткәс, ул бик шәп ҡарт булырға тейештер ҙә baha! Әллә был метонимия поэманың фасадын биҙәү өсөн генә ҡулланылғанмы?) Һүҙгә һаран булһа ла, көҙгө баҡса пейзажын тасуирлау өсөн шағир ҡуйы сағыу буяуҙар тапҡан. Тәбиғәтте ул ҡоро һүрәтләү фоны ғына итеп түгел, бәлки үҙ аллы образ һынында күҙ алдына килтереп баҫтыра. Тойғондоҡ тәбиғәте кеше менән бергә йәшәй, бергә тын ала, бергә хәрәкәт итә.

Ошо урында рефрен кеүегерәк яңғыраған «күктә осҡан ҡоштар төркөмөнән һағышлы моң алыҫ һибелә» тигән шифри юлдарға айырым туҡталып китке килә. Сөнки ул юлдарҙың төбөндә ниндәйҙер мәғәнә ятырға тейештер, минең ҡарамаҡҡа. «Һағышлы моң» башта,

әҫәрҙең беренсе яртыһында (хәйер, поэма бер ниндәй ҙә өлөштәргә лә, киҫәктәргә лә бүленмәгән) «алыҫ һибелә»; унан һуң, шәхес культы һәм уның ҡайһы бер һөҙөмтәләре хаҡында туранан-тура һүҙ сыҡҡас, ул «ергә ағыла»; аҙаҡ килеп иһә, конфликт сиселгәс, был моң «алыҫ тарала…». Шулай итеп, һағышлы моң үҙенең ағышхәрәкәтендә төрлө формаға инә һәм ул, бәлки, лирик геройҙың эске кисерештәренә лә тап килә торғандыр.

Рефренды хәтерләткән тағы бер фраза бар поэмала: «Кем һуң әйтер исемен киткәндәрҙең, был донъяның татып йәберен». Әлеге осраҡта инде тәбиғәттең ер йөҙөндә барған күп нәмәләргә тере, ләкин телһеҙ шаһит булыуына ишара яһалалыр. Кеше донъяға килә, китә, ә тәбиғәт ҡала, йәшәүен дауам итә.

Ниһайәт, тәбиғәт «Баҡсала» поэмаһында үҙенең төп мәғәнәһендә – кешелә эстетик зауыҡ тәрбиәләүсе сараларҙың береһе булараҡ та ҡулланыла. «Күрә белһәң, күпме матурлыҡ бар көҙгө һүрән ҡояш нурында», – тип әйтә икән шағир, уның менән килешмәү мөмкин түгел.

Ә бына «Ҡәнифә юлы»нда тәбиғәт күренештәре күҙгә бик бәрелеп бармай. Дөрөҫ, был поэмаһында ла шағир тәбиғәткә мөрәжәғәт итмәй булдыра алмай. Ләкин, теге әҫәренән айырмалы булараҡ, быныһында, тәбиғәтте һүрәтләүгә ҡарағанда, уның тураһында һөйләү өҫтөнлөк итә һымаҡ. Әйтерһең дә, тәбиғәт әҙәм балаһы тереклек итә торған ябай бер мөхит кенә. Әйтерһең дә, тәбиғәт һәм кеше һәр ҡайһыһы үҙенә башҡа йәшәй. Әйтерһең дә, поэмала кәүҙәләндерелгән тормош мәшәкәттәре авторға ла, шулай уҡ уның лирик геройына ла тәбиғәт матурлығы менән һоҡланырға ваҡыт ҡалдырмай. Уларҙың иғтибары башлыса ошо матурлыҡты тоймаған, унан үҙенә күңел тыныслығы табырға күнекмәгән, ерҙә йәшәү бәхетенең ҡәҙерен белергә өйрәнмәгән йәиһә белергә теләмәгән китек күңелле, яралы яҙмышлы йән эйәләренә, намыҫы рәнйетелгән кешеләргә йүнәлтелгән. Шуға ла «Ҡәнифә юлы»н мин яҙмыштар поэмаһы тиер инем. Сөнки лирик геройҙың хәтирәләре аша байтаҡ кешеләрҙең яҙмышы сағылыш таба унда. Әҫәрҙә һүҙ бер ырыу кешеләре, ундағы боронғо йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр тураһында ғына барған һымаҡ тойолһа ла, ысынында уның бөтә башҡорт халҡына ҡағылғанлығын аңлау ҡыйын түгел.

«Баҡсала»лағы кеүек, «Ҡәнифә юлы»нда ла аныҡ ҡына билгеләнгән, үҙ эсенә ниндәйҙер тотош бер хәл-ваҡиғаны алып, уны

теүәл һәм бөтөн килеш асып һалған сюжет юҡ. Сюжетты ойоштороусы образ ролендә лирик герой үҙе сығыш яһай. Әҫәрҙең йөкмәткеһе уның биографияһындағы төрлө осорҙо сағылдырған айырым хәтирәләрҙән туҡылған. Балалыҡ эскерһеҙлеге лә («Бала саҡтың хыялында беләм ялғанлыҡҡа урын тарлығын…»), үҫмер саҡ шуҡлығы ла («Быйылдан мин, ҡыҙҙар сәсен тартып, аҡылһыҙлыҡ инде ҡылмайым»), өлгөрөп етеп, күпте күргән, күпте белгән ир-егеттең фекерләү ҡеүәһе лә («…Башҡа милләт халҡын ҡыуып ҡына үҙ телеңде булмай күтәреп. Ҡан ҡойошло тағы нисә быуат кәрәк беҙгә шуны аңларға?») төҫмөрләнә унда. Былар бөтәһе лә бергә йыйылғас, сюжет һыҙығы ла ҡалҡып сыға һәм әҫәр үҙенсә бер формаға инә.

«Ҡәнифә юлы» – беҙҙең бөгөнгө ысынбарлығыбыҙға үткәндәр бейеклегенән, халҡыбыҙҙың быуаттар буйына тупланған тәжрибәһе юғарылығынан ташланған үҙенсәлекле бер ҡараш, улай ғына ла түгел, ошо ысынбарлыҡтың ус төбөндәге кеүек бәләкәй генә бер сағылышы тип әйтергә мөмкин. Йәшәү һәм үлем, дуҫлыҡ һәм мөхәббәт, әхлаҡ һәм ғаилә төшөнсәләренә ҡағылышлы күренештәр ҙә, тыуған төйәгеңә, ғәзиз ереңә, һөйөклө илеңә тоғролоҡ мәсьәләләре лә, заманыбыҙҙың ҡәһәрле сиренә әйләнеп киткән эскелек, милләтара ығы-зығы, шәхесте кәмһетеү, кешенең үҙ аллы эске сифаттары менән иҫәпләшмәү, уның кешелек дәрәжәһен һанға һуҡмау ғәләмәттәре лә ситләтеп үтелмәгән бында. Шуныһы мөһим, күптәрҙе борсоған был ҡатмарлы проблемалар ялтырауыҡлы һүҙҙәр ҡулланып, оран һалыу юлы менән түгел, бәлки көндәлек тормоштоң ябай ғына мәшәҡәттәрен һүрәтләү аша яҡтыртыла. Хатта сепаратҡа йыйылған ҡатын-ҡыҙҙарҙың тел сарлап алыу ғәҙәте лә, шағир үҙе әйтмешләй, «ҡаймаҡ кеүек тора яғылып».

Поэмаға исем биргән риүәйәт тә шундайыраҡ. Әҫәрҙә уның бер нисә варианты килтерелгән. Улар һүҙ юҡтан һүҙ булһын өсөн генә ҡабатланмай, әлбиттә. Һәр вариантты үҙенә генә хас айырымлылығы, күркәмлеге, үҙенә күрә хикмәте бар: иғтибарҙы көсөргәндереберәк ҡараһаң, унда ниндәйҙер эске бер градацияны – автор әйтергә теләгән фекерҙең эҙмә-эҙлекле рәүештә үҫә, тослана, дөйөмләшә барыуын шәйләйһең.

Тәү тапҡыр Ҡәнифә тураһында хикәйәтте лирик геройға уның еңгәһе һөйләй. Был хикәйәтте тыңлағандан һуң беҙҙең күҙ алдына Ҡәнифә атлы бер матур ҡыҙ образы килеп баҫа. Ул ҡыҙ шул тиклем һылыу булған, уны күргән егеттәр хатта телһеҙ ҡалған, ә ергә

бөгөлгән ҡарттарҙың биле турайып киткән. Үҫеп еткәс, Ҡәнифәне йәйләүҙән ҡаҙаҡтар урлап алып киткән һәм көсләп кейәүгә биргәндәр. Ләкин, нисек кенә рәхәт йәшәмәһен, башҡорт ҡыҙы ҡаҙаҡ далаһын ерһенмәгән һәм, яйы сыҡҡас, тыуған иленә ҡасып ҡайтҡан. Ҡәнифәлә тыуған иленә, тыуған еренә тиҙерәк әйләнеп ҡайтыу теләге шул тиклем көслө булған, ул хатта «юлһыҙ ерҙән барған юл ярып…». Шуға күрә лә был юл уның исеме менән аталып йөрөтөлә башлаған.

Риүәйәттең икенсе вариантын лирик герой уҡытыусы апаһы ауыҙынан ишетә. Бында ла һүҙ Ҡәнифә атлы ҡыҙ тураһында бара. Ул ялан башҡорттарынан була. Уны тау башҡорто егетенә кейәүгә бирәләр. Тик был Ҡәнифә, тегеһенән айырмалы булараҡ, үҙе түгел, ә туй ваҡытында уға әсәһе бүләк иткән һауым һыйыры бер ҡыштан һуң йәш быҙауын эйәртеп ата йортона ҡасып ҡайта. Юғалған һыйырҙы эҙләп хәлдән тайған Ҡәнифә, йәнәһе, «Ҡуңыр буға» йырын уйлап сығарған.

Ҡәнифә тураһындағы өсөнсө риүәйәт тә фәһемле генә. Ул да борон-боронда һаҡланып килгән. Ләкин, тегеләре менән сағыштырғанда, был риүәйәттең йөкмәткеһе шаҡтай киңерәк: унда һүҙ ырыу йолалары менән генә сикләнмәй, бәлки оло тарихҡа барып тоташа. Сура атлы батырҙың Ҡәнифә исемле ҡыҙы булған, ти. Ниндәйҙер бер бола ваҡытында атаһы уны, иҫән-аман һаҡлап алып ҡалыу ниәте менән, ҡаҙаҡтарға илтеп йәшергән. Үҫеп еткәс иһә Ҡәнифә, сит ерҙә кейәүгә сыҡмаҫ өсөн, тыуған төйәгенә – Уралына ҡасып ҡайтҡан. Һәм уның был ҡылығы батырлыҡҡа тиңләнгән, шуға ла быуындан быуынға күсә барған.

Ниһайәт, һуңғы вариант. Ул лирик геройҙың ҡолағына өләсәһе һүҙҙәре менән инеп ҡалған. Бынығында инде Ҡәнифә юл ярыусы йәиһә йыр сығарыусы ғына түгел, бәлки үҫәргән ырыуының ғәскәр башында тороусы ил ҡыҙы итеп һүрәтләнгән:

Ҡулдарында уйнар ҡоралының
Тамғалары булған ҡойошҡан.

Дошмандарҙы ҡыуғас, Ҡәнифә, ти,
Үҙ һөйгәне менән ҡауышҡан.

Поэмала тағы бер Ҡәнифә бар. Уныһы риүәйәт героиняһы түгел, ә беҙҙең тере замандаш – Сазрый ҡыҙы Ҡәнифә. Автор был образды

ла ентекләп тикшереүзе маҡсат итеп ҡуймай – айырым һыҙаттарға ғына туҡталыу менән сикләнә. Башта, мәҫәлән, күрше ауылдың ҡылый Әхсәне Саҙрый ҡыҙын киске уйындан урлап ҡасҡан икән тигән хәбәр тарала. Унан һуң Ҡәнифәнең, ғәйбәттән ҡурҡып, ауылын ташлап сығып киткәнлеге билгеле була. Әҫәрҙең аҙағында иһә уның биш балаһы менән ҡыуылып ҡайтыуы хаҡында әйтелә. Һәм беҙ, быуындан быуынға күсеп, нисәмә йылдар халыҡ хәтерендә һаҡланып килгән яҡты иҫтәлектәр, шәхес иркенә дан йырлаусы хикәйәттәр донъяһынан һис көтмәгәндә заман алҡымына сумабыҙ, уның башҡа һыймаҫлыҡ, кеше әйтеп кеше ышанмаҫлыҡ мәрхәмәтһеҙлектәре менән күҙгә-күҙ осрашабыҙ: элек тыныс, һыйышып йәшәгән төрлө милләт вәкилдәре бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған, улар үҙ-ара асыуланышыу, талашыу, дошманлашыу, күнегелгән, төпләнгән ерҙән хатта бер-береһен ҡыҫырыҡлап сығарыу дәрәжәһенә килеп еткәндәр. Риүәйәттәге Ҡәнифә ҡаҙаҡ далаһынан тыуған илен һағынып ҡасып киткән булһа, Ҡәнифәләрҙең бөгөнгөһө иһә кисә бынамын тигән көн күреп ятҡан ерҙә сит кешегә әйләнгән, артыҡ йән һымаҡ, унан ҡыуып ебәрелгән. Был инде ысынлап та XX быуат аҙағының бер феномены, ҡайһы бер сәйәсмәндәрҙең башбаштаҡлығы, ә бәлки башһыҙлығы арҡаһындалыр йорт-илебеҙгә килеп ингән ҡазаның асыҡ сағылышы.

Тойғондоң яңы поэмаһында һүҙ Ҡәнифәләр тураһында ғына бармай, әлбиттә. Сюжетты байыҡтырыусы, йәнләндереүсе, уға күпмелер йәм һәм фәһем өҫтәүсе башҡа персонаждар ҙа байтаҡ унда. Уларҙың ҡайһы берҙәре теге йәки был хәл-ваҡиға айҡанлы атап ҡына, телгә алынып ҡына кителә (Хәйрүш-йолҡош, Йәмилә, Хөмәй, Саҙрый ҡарт, ҡылый Әхсән, Йәүҙәт, Фәйрүзә). Бәғзеләре иһә әҫәрҙең буйынан буйына тиерлек хәрәкәт итәләр һәм уның идея-эстетик йөкмәткеһен тәрәнәйтеүгә тос өлөш индерәләр (мәҫәлән, лирик геройҙың ағаһы һәм еңгәһе, Фәйрүзәнең телсәр әсәһе). Шуныһы характерлы, һуңғыларының хатта конкрет исемдәре лә юҡ. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар күңелгә нығыраҡ уйылып ҡала: исемһеҙ көйөнә лә дөйөмләштерелгән образдар кимәленә күтәрелгәндәр.

Лирик геройҙың холоҡ-фиғеленә иң яҡын, хәтер төпкөлөндә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған яҙмыштарҙың береһе – уның еңгәһелер, моғайын. Риүәйәттәрҙә һүрәтләнгән Ҡәнифәләрҙән ҡала поэмала ул төп урынды алып тор кеүек. Халыҡ күңелендә һаҡланған легенда геройы менән еңгә образы араһында күҙгә бик үк бәрелеп тормаған

ниндәйҙер эске бәйләнеш, рухи яҡынлыҡ барлығын да һиҙемләргә мөмкин. Лирик геройҙың еңгәһе Ҡәнифәләргә хас булған иң яҡшы кешелек сифаттарын – ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, намыҫҡа тоғролоҡ, әхлаҡи сафлыҡ – үҙендә дауам итә һымаҡ.

Был образға автор үҙе лә битараф түгел. Әгәр поэманың беренсе киҫәгендә ул: «Ире бар көйөнсә ирһеҙ йәшәй, йыуатыр һүҙ ҡайҙан табырға?» – тигән риторик һорау ҡуйһа, өсөнсө киҫәктә ул, шул уҡ һорауға кире әйләнеп ҡайтып, яуап урынына изге теләген белдерә: «Ирле көйө ирһеҙ йәшәгәнгә түҙем бирһен хоҙай үҙенә». Героиняһының эске донъяһын, уның рухи байлығын һәм күңел теүәллеген тулы ҡанлы итеп күрһәтеү өсөн шағир сағыу буяуҙар тапҡан. Хәйер, буяу тип әйтеү, бәлки, урынһыҙҙыр ҙа. Еңгә образы үҙенән-үҙе тәбиғи рәүештә үҫеп сыға. Автор уны ниндәйҙер айырым шарттарға ҡуймай – донъя нисек, ул да шулай. Ҡәйнеше ғишыҡ тотоп йөрөгән ҡыҙҙың исемен яйы сыҡҡан һайын юрый телгә алып, уны еңелсә шаяртыуы; бесән йыйғанда ауыр хистәргә бирелеп китеп, илап алыуы; ауылдың телсәр ҡатыны таратҡан сираттағы ғәйбәткә артыҡ иҫе китмәйенсә, хоҙайҙан сабырлыҡ һорап, уны, ҡан йотоп булһа ла, тыныс ҡына үткәреп ебәреүе, ир-ат затынан булған тиҫтерҙәре араһында шуҡ ҡыланһа ла, дәрәжәһен төшөрмәйенсә үҙенең баһаһын һаҡлап ҡала белеүе – былар бөтәһе лә лирик геройҙың еңгәһен хәтерҙә ҡалырлыҡ тере образ итеп күҙ алдына килтереп баҫтырырға мөмкинлек бирә. Ғөмүмән, ваҡыт һәм форсат табып, «Ҡәнифә юлы»ның арҡырыһын-буйын бер итеп тикшереү бурысын ҡуйғанда, лирик геройҙың еңгәһе тураһында бик оҙаҡ һәм бик күп һөйләргә, уның хатта портретын яҙырға мөмкин булыр ине: шағир был образды тыуҙырғанда, поэтик стиль ҡалыптарынан һәм талаптарынан сығып, айырым һыҙаттарға ғына туҡталыу менән сикләнһә лә, ғәмәлдә ул сәсмә әҫәрҙәрҙәге мөмкинлектәр юғарылығына күтәрелгән. Тик уның финалы ғына нисектер сәйерерәк яңғырай һәм бер аҙ эсте бошороп ҡуя:

Үҙ намыҫын өҫтөн ҡуйған еңгәм
Ултыра бит, ана, төрмәлә.

Беҙҙе сорнап алған мөхит бер генә төрлө буяуҙан тормаған шикелле, унда тереклек иткән кешеләр ҙә күп төрлө: тышҡы ҡиәфәттәре, эске булмыштары, донъяға ҡараштары һәм башҡа бик

күп сифаттары менән дә. Лирик геройҙың еңгәһе, әсәһе һәм атаһы кеүектәр менән бер ҡатарҙан, уның ағаһы һымаҡ мәңге иҫеректәр ҙә, Фәйрүзәгә оҡшаған елғыуарҙар ҙа, Әхсән һымаҡ еңел-елпе холоҡло тинтәктәр ҙә, тормошта үҙ урынын таба алмайынса интеккән һәм шул арҡала йыш ҡына юлдан да яҙып ҡуйған Йәүҙәттәр ҙә етерлек шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Шуға ла поэманың нигеҙенә Ҡәнифәләргә бәйле риүәйәттәрҙең төрлө варианты һалыныуы, уларҙың береһе хатта әҫәрҙең исеменә үк сығарылыуы – һис тә осраҡлы хәл түгелдер: шағир үҙенең уҡыусыһын тамырҙарыбыҙҙы барларға, халҡыбыҙҙа быуаттар буйына тәрбиәләнгән әхлаҡ ҡағиҙәләрен онотмаҫҡа, уларҙы һаҡларға, дауам итергә, ишәйтергә саҡыра. Лирик геройҙың атаһы улын ҡалаға оҙатырҙан алда әйткән бына был һүҙҙәрҙә ҙур мәғәнә ята, минеңсә:

«... Алыҫ юлда
Өмөт итмә, улым, еңелгә...
Ҡәнифә лә юлы буйлап китеп,
Шул уҡ юлдан беҙгә ҡайт кире.
Соҡор-саҡырҙарҙа абынмаҫһың,
Асфальтында уның һаҡ йөрө!..»

Шулай итеп, Тойғондоң ике әҫәрендә лә һүҙ күберәк кешенең кешелек сифаттары тирәһендә бара. Айырма тик шунда: әгәр «Баҡсала» поэмаһында был мәсьәлә башлыса шәхес культы яҡтылығында ғына хәл ителһә, «Ҡәнифә юлы»нда уға шаҡтай киңерәк ҡараш ташланған. Ике поэма тураһында әйтергә теләгән һүҙ ҙә, нигеҙҙә, шуға ҡайтып ҡала.

Шәхес культы темаһы әҙәбиәт өсөн яңыларҙан түгел. Алтмышынсы йылдарҙан алып бөгөнгө көнгә тиклем был темаға төрлө телдә бик күп әҫәрҙәр ижад ителде. Шулар араһында һуңғы ваҡытта донъя күргәндәрҙән А. Твардовскийҙың «Хәтер хаҡы ҡушҡанса» менән Р. Ғариповтың «Табыныу»ын айырым күрһәтеп үтергә мөмкин. Әлбиттә, тема һайлау һәр авторҙың үҙ эше. Тик бына шуныһы ҡыҙғаныс: шәхес культына арналған әҫәрҙәр яңы сағында бер ҡатар шаулап алалар ҙа, ҙәме-күпме ваҡыт үткәс, тынып ҡалалар. Миҫал эҙләп йыраҡҡа китәһе юҡ. Әле ҡасан ғына М. Дудинцев, В. Гроссман, А. Рыбаков, В. Ажаев әҫәрҙәре ҡулдан-ҡулға күсеп йөрөй ине. Ә бөгөн кем уҡый уларҙы, кемде ҡыҙыҡһындыра?

Сәбәп нимәлә һуң? Минеңсә, был һорауға яуап табыу өсөн тарих төпкөлөнә төшөп китәһе юҡ. Ысын әҙәбиәт – тормош үҙе ул, бөтә гүзәллектәре һәм ғәҙелһеҙлектәре менән бергә. Ә шәхес культы – ошо ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы тормоштоң бәләкәй генә бер өлөшө, әҙәбиәт һәм сәнғәт өсөн хатта, әйтер инем, өрөп ҡабартылған тема. Тойғондоң әле һүҙ барған әҫәрҙәренән сығып та быға ышанырға мөмкин. «Баҡсала» поэмаһында, мәҫәлән, ул бик күп риторик һорауҙар ҡуя. Тәбиғи, улар яуапһыҙ ҡала. Бының өсөн шағирҙы ғәйепләп тә булмай. Сөнки шәхес культы тыуҙырған һорауҙарға беҙҙең бөгөнгө ысынбарлығыбыҙ ҙа төплө генә яуап бирә алмай әле. «Ҡәнифә юлы»ның авторы ла быны яҡшы аңлай, булһа кәрәк. Юғиһә, «ниңә кеше кеше менән һаман шаяра?» тип борсолмаҫ ине ул.

1994

ШИҒРИӘТТӘ ЗАМАН ҺУЛЫШЫ

(1994 йылғы «АҒиҙел» журналы биттәре буйлап)

Был уйланыуҙарға «АҒиҙел» журналы ғына түгел, бәлки, Башҡортостан яҙыусыларының XI съезында Динис Бүләков ташлаған үпкә һүҙҙәре лә күпмелер кимәлдә сәбәпсе булды. Һуңғы йылдарҙа әҙәбиәт ғилеме өлгәшкән уңыштарға хаҡлы баһаһын биргәс, Яҙыусылар союзы идараһының ул саҡтағы рәйесе былайыраҡ тип белдергәйне: «… әҙәбиәт ғалимдарының һәр береһе үҙенең юлын әҙәби тәнҡиттең әсе икмәгенән башланы. Фән икмәге ул хәтлем үк әсе түгелдер, күрәһең, юғиһә әҙәбиәт ғалимдары ошолай күбәйгән бер мәлдә әҙәби тәнҡитселәр ошолай бөтөүгә табан бармаҫ ине. Ә бит шундай замандар бар ине, әҙәби ағымға тәнҡитселәр туранантура йоғонто яһай, йүнәлеш бирә торғайны».

Юмор ҡалыбына төрөп, берсә йылмайыу, берсә әрнеү ҡатыш әйтелгән был һүҙҙәрҙең асылында хәҡиҡәт сатҡылары юҡ түгел, әлбиттә. Уйлап ҡараһаң, Ғайса Хөсәйеновтың «Илле алтынсы йылдың поэтик йомғаҡтарына ҡарата»һынан һәм «Илле етенсе йылғы башҡорт поэмаларына бер ҡараш»ынан һуң да ҡырҡ йылға яҡын ваҡыт үтеп киткән дә баһа. Урыҫтың бөйөк тәнҡитсеһе Виссарион Белинский өлгөһөндәрәк яһалған был күҙәтеүҙәр, һис шикһеҙ, шатлыҡлы күренеш ине. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул беҙҙең ерлектә традицион күренешкә әйләнеп китә алманы.

Дөрөҫ, ҡырҡ йылға яҡын ваҡыт эсендә әҙәби процестың айырым мәсьәләләрен яҡтыртҡан мәҡәләләр әҙ яҙылманы – яҙылып та, баҫылып та торҙо. Шул уҡ Ғайса Хөсәйеновтың «Хәҙерге әҙәбиәт донъяһында» (1973) һәм «Замана» (1988) тип аталған йыйынтыҡтарына тупланған төплө һәм күләмле мәҡәләләрен күрһәтеү ҙә етә. Уларҙы Башҡортостан тәнҡитселәренең, әҙәбиәт белгестәренең «Заман һәм әҙәбиәт» (1982), «Яңырыу юлында» (1994) тигән йыйынтыҡтарға тупланған әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре ҡеүәтләп ебәрә. Иң һуңғыларҙан иһә Ғилемдар Рамазановтың «Бөгөнгө повесть» һәм «Тарихи проза-ла – быуындар бәйләнеше» тигән күҙәтеүҙәрен атап китмәй мөмкин түгел. Был мәҡәләләрҙең – йыйынтыҡтарға тупланғандарының да, тупланмағандарының да – әҙәбиәтебеҙ үҫешендәге төп йүнәлештәрҙе

билдәләүҙәге әһәмиәте әйтеп бөтөргөһөҙ зур. Сөнки уларҙың бөтәһе лә йәнле әҙәби тормоштоң үҙенән үҫеп сыҡҡан, уларҙың бөтәһендә лә тере ижад процесы – шатлыҡтары һәм ғазаптары, табыштары һәм юғалтыуҙары, ҡаҙаныштары һәм етешһеҙлектәре менән бергә – ярылып ята. Ләкин, мәҡәләләр ни ҡәҙәр генә күп яҙылмаһын, әҙәбиәт күгендә бер йыл дауамында хасил булған күренештәргә йомғаҡ яһау алымы – заманында Ғайса Хөсәйенов индерергә тырышып ҡараған яҡшы башланғыс – барыбер «терелмәне».

Был башланғыстың үҙ ваҡытында тейешенсә тамыр йәйеп китә алмауы беҙҙең әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит өсөн шул хәтлем үк ҡыҙғаныс хәлме икән? Әҙәби күренештәргә йыл һайын йомғаҡ яһап барыуҙың хәжәте шул тиклем дә зурмы икән? Гәзит-журнал биттәрендә ара-тирә күренгеләп торған, унан һуң бер аҙ эшкәртелеп, киңәйтелеп, китап биттәренә күскән әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре етмәгәнме ни?

Бына шундайыраҡ һәм шуға оҡшашыраҡ һорауҙар тыуыуы мөмкин уҡыусыла. Шуға күрә, төп һүҙгә күсерҙән алда, уларға асыҡлыҡ индереп китеү урынлы ла, маҡсатҡа ярашлы ла булыр.

Әйтергә кәрәк, беҙҙең «әҙәби хужалығыбыҙ» йылдан-йыл үҫә, киңәйә һәм шул уҡ ваҡытта һиҙелерлек ҡатмарлана бара. Яҙыусылар һаны артҡандан-арта, уларҙың ижади эшсәнлеге күҙгә күренеп активлаша. Көн һайын тип әйтерлек (көн һайын булмаһа – аҙна һайын, ай һайын!) республикабыҙҙың күп һанлы матбуғат баҫмалары әҙәбиәт һөйөүселәргә өр-яңы әҫәрҙәр тәҡдим итеп тора. Өҫтәүенә, яҙыусыларҙың Стәрлетамаҡ, Учалы, Сибай, Яңауыл ҡалаларындағы ойошмалары ла йәнләнгәндән-йәнләнә, нығынғандан-нығына. Уларҙың ҡайһы берҙәре хәҙер әҙәби альманахтар ҙа сығара башлаған, шикелле. Ҡыҫҡаһы, өлгөлө һәм өлгөр хужа үҙенең йорт-илен әйләнгән һайын йыйыштырып, ҡурсалап тотҡан һымаҡ, әҙәбиәтебеҙҙе лә әленән-әле барлап тороу, ундағы күренештәргә баһаны ваҡытында бирep барыу мохтажлығы көн кеүек асыҡ. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, йыллыҡ әҙәби күҙәтеүҙәрҙе (шартлы рәүештә генә булһа ла) хатта үҙ аллы жанрға тиңләр инем. Очерк жанры оло прозаны үҫтереүҙә ниндәй роль уйнаһа, йыллыҡ күҙәтеүҙәр жанры ла әҙәбиәт ғилемен һәм әҙәби тәнҡитте үҫтереүҙә шундай уҡ роль уйнай алыр ине тип уйлайым.

Йәнле әҙәби процестың үксәһенә үк баҫып атларға тейеш булған был жанрҙың үҙ ҡыйынлыҡтары, үҙ ауырлыҡтары бар, әлбиттә.

Ашығыбыраҡ, әле ваҡыт һынауын үтеп өлгөрмәгән материалға таянып яҙылыу һөҙөмтәһендә унда ара-тирә субъектив ҡараштарҙың да өҫтөнлөк алып ҡуйыуы ихтимал. Әммә, нисек кенә булмаһын, диалектика законына ярашлы рәүештә, һан, ваҡыты еткәс, бырыбер сифатҡа күсергә тейеш. Сөнки бәхәстән бәхәс тыуа, ә күп бәхәстән хәҡиҡәт тыуа. Бына ошо изге теләктән сығып ҡараш ташларға ине уҙған йылғы «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән күп һанлы шиғри әҫәрҙәргә. Әгәр уларҙың бөтәһен бергә туплап, юғары зауыҡ талаптарына яуап бирерҙәй айырым йыйынтыҡ итеп сығарһаң, бынамын тигән ҡалын ғына бер китап барлыҡҡа килер ине. Уға йыл дауамында республикабыҙҙың башҡа журналдарында һәм гәзиттәрендә донъя күргән шиғри әҫәрҙәрҙең иң уңышлы тип иҫәпләнгәндәрен дә өҫтәп ебәрһәң, башҡорт поэзияһының йыллыҡ панорамаһын күр ҙә тор инде! Хыялдар, хыялдар…

Юғары зауыҡ талаптарына яуап бирерҙәй, тинем дә, уйға ҡалдым. Юғары зауыҡ бит ул әлеге йыйынтыҡты нәшер иткәндә полиграфияның бөгөнгө ҡаҙаныштарын мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Иң мөһиме – уның эстетик йөҙө һәм художество кимәле. «Ағиҙел»дә баҫылған шиғри әҫәрҙәр нисегерәк икән һуң? Юғары зауыҡ талаптарына яуап бирерлекме? Бөгөнгө арттырыпһатарҙарҙың муҡсаһына бөгәрләп тултырылған сепрәк-сапраҡ һымаҡ, журналдың сираттағы һанын ваҡытында сығарып өлгөрөү ниәтенән генә донъяға килмәгәндәрме?

Белмәйем, редакцияның «портфеле» ниндәйерәк хәлдәләр – ҡалындырмы, йоҡалырмы. Әҫәрҙәрҙе һайлап ҡына, иләктән иләп кенә сығара торғандарҙырмы, әллә иһә килеп кергән берен биреп барырға мәжбүрҙәрме. Ләкин, нисек кенә булмаһын, уҙған йылғы шиғырҙар ҙа, поэмалар ҙа, минең уйымса, журналдың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтерерлек түгел. Был хәл шағирҙарыбыҙ араһында талапсанлыҡтың артабан үҫә барыуы тураһында һөйләй торғандыр, бәлки. Әгәр шулай була ҡалһа, иншалла, – быға шатланырға ғына кәрәк. Һәр хәлдә, теләһә ниндәй әҫәргә лә тәүге «хөкөмдар» – автор үҙе булырға тейеш, унан һуң ғына – уҡыусы һәм тәнҡитсе. Ижад емешең өлгөрөп етмәгән икән, уны ниңә кеше күҙенә күрһәтергә?

Әйткәнебеҙсә, 1994 йыл «Ағиҙел»дең «шиғриәт баҫыуы» өсөн ярайһы ғына уң да, уңдырышлы ла булды. Ул баҫыуҙы ҡырҡтан ашыу әҙип, хәләл тирен түгә-түгә, ең һыҙғанып эшкәртте. Ижад манералары менән төрлө-төрлөләр улар. Арала ҙур тәжрибә

туплағандары ла етерлек. Алға табан яңы аҙым яһағансы, артҡа боролоп, еңелсә бер ҡараш ташлап алырға ғәҙәтләнгәндәре лә бар. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ был баҫыуҙа үҙ бураҙнаһын һәм үҙ толпарын эҙләүселәр ҙә юҡ түгел. Уның шулай булыуы тәбиғи лә, хәйерле лә. Әҙәбиәтебеҙҙең оло быуын вәкилдәренән Мостай Кәрим, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Муса Ғәли, Шәриф Бикҡолдарҙың өр-яңы әҫәрҙәр менән сығыш яһауы үҙе генә лә ни тора! Шиғырҙарының береһендә Кәтибә Кинйәбулатова: «Һыр бирәһем һис тә килмәһә лә, һыната шул талған аяғым… Айға-көнгә һиҙҙермәйсә, ғүмер уҙып киткән һалып таяғын», – тип яманһыулаһа ла, был быуын вәкилдәренең йәнле әҙәби процестан айырылмайынса, ижад майҙаны буйлап ал бирмәй атлап килеүҙәре бер ҡыуаныс булһа, ҡәләмдәренең осҡорлоғо, зиһендәренең, күңел күҙҙәренең үткерлеге иһә икеләтә шатлыҡ.

Өлкән быуын шағирҙарына Рауилдарҙың күмәк һәм көр тауышы көс һәм ҡеүәт өҫтәп ебәргәндәй булды – Рауил Шаммас, Рауил Бикбаев, Рауил Ниғмәтуллиндар уҙған йылда уҡыусыға өсөһө бергә ҡырҡҡа яҡын яңы шиғыр бүләк итте. Рауилдар менән бергә Риф Мифтахов, Ҡаҙим Аралбай, Хәсән Назарҙар ныҡ баҫып атланы һәм шиғриәтебеҙ йылъяҙмаһына яңы юлдар өҫтәне. Уларҙы иһә төрлө йылдарҙа тыуып, төрлө һүкмаҡтар аша уҙып, әҙәбиәткә төрлө ваҡытта килгән Фәйзи Ғүмәров, Сулпан Иманғолов, Мәхмүт Һибәт, Самат Ғәбиҙуллин, Ҡадир Әлибаевтар ҡеүәтләп торғандай булды. Ниһайәт, Аралбайҙар «династияһы»на Таңһылыу Ҡарамышева, Гөлнур Яҡупова, Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева, Динә Талхина, Гүзәл Ғәлиевалар быуыны килеп тоташты – улар ҙа йөрәктәре түренән сыҡҡан ҡайнар хистәрен түкмәй-сәсмәй үҙ уҡыусыһына илтеп еткерҙе.

Йәнә тағы бер ҡыуаныслы хәл тураһында әйтмәй үтеү мөмкин түгел. Уҙған йылда «Ағиҙел»дең шифалы тулҡындарында йәштәргә тәғәйенләнгән яңы журнал үҙенең әле ҡауырһындары ла ҡатып өлгөрмәгән ҡанаттарын һирпелдерә башланы. Уның исеме лә бик матур, нәҡ шиғриәтсә яңғырай – «Елкән» тип атала. Моронлап килгән йәш баҫманың дүрт һаны сыҡты ла инде. Был – «Ағиҙел» күкрәгендә яралып ятыусы өсөнсө журнал булмаҡсы. «Аҡбуҙат» менән «Шоңҡар» шикелле, уны ла яҡты яҙмыш, оҙон ғүмер көтһөн. Әгәр бер аҙ етлегеп, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫып китә алһа, «Елкән» дә, әсәһе «Ағиҙел» шикелле, шиғриәткә ҙур урын бирмәксе. Әле донъя

күргән дүрт һанда ғына ла ун авторҙың илленән ашыу шиғыры һәм бер поэманың баҫылыуы быға ҡеүәт.

Шулай итеп, һанай китһәң, поэтик емештәр әҙ түгел. Бер «Ағиҙел» биттәрен генә аҡтара башлаһаң да, ул байтаҡ йыйыла. Тик был – һан яғынан, башта әйтелгәнсә, «әҙәби хужалығыбыҙ»ҙы барлап ҡарау йәһәтенән. Ә талапсан уҡыусы түҙемһеҙлек менән анализ көтә, уҙған йылда баҫылып сыҡҡан шиғри әҫәрҙәр тураһында фекер ишеткеһе килә.

Ошондай ҙа болғауыр осорҙа, билдәһеҙлек заманында шиғриәт йәшәй микән ни, әгәр йәшәһә, ул ниндәйерәк икән һәм уның хаҡында ниндәй һүҙ йөрөтөргә мөмкин тип уйлаусыларҙың да табылыуы ихтимал. Үҙҙәренсә, бәлки, улар ҙа хаҡлылыр. Сөнки заманыбыҙ, ысынлап та, көйһөҙ. Шығыр-шағыр килеп, таралырға торған арбаны хәтерләтеп ҡуя ул. Илде үҙгәртеп ҡора башлағанға ла ун йыл ваҡыт үтеп китте. Ләкин донъялар һис кенә лә йүнәлеүгә табан барғанға оҡшамай – хәлдәр һаман да мөшкөлләнә генә. Ҡасандыр даны йыһанға таралған бөйөк державанан яҡты иҫтәлектәр генә тороп ҡалды. Хатта бөгөн ниндәй ижтимағи-сәйәси ҡоролошта йәшәүебеҙҙе лә күҙаллауы ҡыйын. Күптән түгел абруйлы бер дәүләт эшмәкәре юғары трибунанан: «Социализм төҙөмәйбеҙ, коммунизмға бармайбыҙ», – тип һөрән һалғайны ла һалыуын, тик үҙ фекеренә асыҡлыҡ индереп бөтөрмәне – ярты юлда туҡталды. Яҙғы ташҡын ваҡытында ағым һыу өҫтөндә бөтөрөлгән бысраҡ күбек һымаҡ, уғрылар ҡалҡып сыҡты, алдаҡсылар күбәйҙе, хәйерселек сәскә ата. Социализм шул тиклем дә насар ҡоролош булды микән ни? Уны ҡолатыу – беткә асыу итеп, тунды мейескә яғыуға оҡшап китмәне микән?

Һәр замандың – үҙ зары, үҙ моңо тигәндәй, был һорауҙар әҙәбиәтте, шул иҫәптән шиғриәтте лә ситләтеп үтмәй, әлбиттә. Үҙ мәнфәғәттәренән генә сығып уй йөрөткән еңелерәк холоҡло ҡайһы бер аҡыл эйәләре идеологияны ни ҡәҙәр генә инҡар итеп маташмаһын, ул барыбер йәшәй. Идеологияны инҡар итеү – үҙе үк идеология түгелме ни? Кем әйтмешләй, йәмғиәттә йәшәп, йәмғиәттән ситтә тороу мөмкин түгел дә инде. Теләйме, теләмәйме, әҙип үҙен сорнап алған ысынбарлыҡҡа ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәтен белдермәйенсә ҡала алмай. Сөнки әҙәбиәт – тормош көҙгөһө, ә йыш ҡына уны тормош дәреслегенә лә тиңләйҙәр. Бына шуға ла башҡорт шағирҙарының үҙгәртеп ҡороу тип аталған бер мәлдә илдә барған ығы-зығыларҙы йөрәктәре аша үткәреп, уларҙы үҙҙәренсә аңларға тырышыуҙары һис тә ғәжәп түгел.

Һүҙҙе әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдән башларға иҫәп. 1994 йылды мәҙәниәтебеҙ тормошонда Мостай Кәримдең йылы тип атаһаҡ та хата булмаҫ. Сөнки шағирҙың тыуыуына 75 йыл тулыу айҡанлы республикабыҙ матбуғатында уға ифрат күп урын бирелде. «Ағиҙел» журналы биттәрендә генә лә ул ике тапҡыр сығыш яһаны. Йәйге һандарҙың береһендә «Юлда туҡтап, әле усаҡ яғам…» тигән шәлкемен тәҡдим иткән булһа, юбилей айында инһә «Боронғоларға эйәреп…» тигән баш аҫтында ҡойоп ҡуйған дүрт юллыҡтарын баҫтырҙы.

Һуңғы ваҡытта Мостай Кәрим исеме ил ағаһы тигән ғәжәйеп матур ҡушамат менән бергә ҡуйып телгә алына башланы. Һәм был бик тә урынлы. Сөнки теге йәки был уңай менән яһаған сығыштарында шағир, ысынлап та, аҙ һүҙле, ләкин иҫ киткес тәрән фекерле аҡыл эйәһен хәтерләтә. Үрҙә телгә алған шиғырҙарында ла ул шундай. «Юлда туҡтап, әле усаҡ яғам…» шәлкемен асып ебәргән әҫәрендә, мәҫәлән, шағир бөгөнгө рәхимһеҙ тормоштоң ҡайһы бер күренештәрен ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта хәтерҙә лә ҡалырлыҡ деталдәр ярҙамында һүрәтләгән. Автор аңлауынса, донъя сирле лә, серле лә. Берәүҙәр унан биҙеп, бар өмөтөн тапай-тапай изеп китә. Икенселәре инһә, уны фашлап, ләғнәт уҡып хушлаша. Ләкин арала яйлашыусылар ҙа, иманын һатып, шөһрәт ҡаҙаныусылар ҙа етерлек, хәмер эсеп, зина ҡылыусылар ҙа байтаҡ. Ошондай ҙа мәхшәрҙән һуң донъяға хатта йыназа уҡырлыҡ та кеше табылмаҫ һымаҡ тойола икән, һис тә ғәжәп түгел.

Донъя сирле. Белеп булмай
Ни яҙаһын;
Кем һуң уҡыр был донъяның
Йыназаһын? –

тип борсола шағир. Күпме аҡыл, ниндәй тәрән фәлсәфә төрөлгән был һүҙҙәргә! Һәм күпме аһаң уларҙа!

«Ай саҡырҙы»ны ла поэтик оҫталыҡ өлгөһө тиер инем. Уның формаһы уҡ иғтибарҙы йәлеп итә – көтмәгәндә төнгө юлдаштар булып киткән Ай менән шағир араһындағы диалогҡа ҡоролған ул. Баҡһаң, планетаның планетаһы ла замананың бәндә йөҙөндәге һәм күҙендәге маҙаһын шәйләмәй ҡалмаған. Шағир-юлдашына мөрәжәғәт итеп, Ай бына нимә ти: «Дәртле инең элек, хәҙер бойоҡ йырҙар яҙаһың». Йырҙарҙың бойоҡлоғона инһә, шағирҙың йәше олоғайыуҙан

да бигерәк, донъяларҙың ҡотһоҙланып китеүе, Ерҙәге талаш-тартыштар сәбәпсе икәнлеге бер кемдә лә шик тыуҙырмайҙыр, минеңсә.

«Боронғоларға эйәреп…» тигән парсалар ҙа зиннәтле һәм зауыҡланырлыҡ. Улар фекергә лә, хискә лә бай. Тәү ҡарамаҡҡа был ҡыҫҡа шиғырҙар авторҙың уҡыусы алдында тотҡан хисабы һымаҡ тойола – әйтерһең дә, ул ғүмере буйына алған тәьҫораттары, күҙәтеүҙәре, уй-кисерештәре, тормош тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Ләкин хикмәт был тәьҫораттарҙа ғына түгел – иң мөһиме шул тәьҫораттар, күҙәтеүҙәр тыуҙырған тәрән мәғәнәле фекерҙәр. Уларҙың һәр ҡайһыһы тормош һабағы булырлыҡ. Заман ҡаҙағына һуҡҡандары ла бар унда:

Ни хәлдәргә төшөрҙөләр хәятты –
Ҡуласаһына тыҡтылар таяҡты;
Пыран-заран килде бөтә тирә-яҡ,
Зыян күрмәй бөтөн ҡалды тик таяҡ.

«Донъя туҙҙы, һис ҡалманы торорлоғо», «туп-тура тиһәң, сыбалып китеп, юлдар аҙаша; ҡай тарафҡа барырға ла белмәй, йылдар аҙаша; үҙ ерендә, ай-ҡояшһыҙ ҡалып, илдәр аҙаша» тип эсе бошонһа ла, Мостай Кәрим барыбер үҙенсә булып ҡала – киләсәккә ышанысын юғалтмай:

Ямғыр ҡатыш ҡар –
Ерҙә, Һауала.
Поезда барам,
Ҡаршымда бала.

Ул сабый миңә
Шундай саф ҡарай.
... Донъяла әле
Йәшәргә ярай.

Әйтергә кәрәк, парсалар башҡорт шиғриәтендә торған һайын киңерәк урын ала бара. Заманында лириканың был төрөн үҫтереүгә Сәйфи Ҡудаш, Мәҡсүд Сөндөклө, Ҡадир Даян, Абдулхаҡ Игебаев-тар тос өлөш индергәйне. Бөгөн иһә парса жанрында Фәйзи Ғүмәров ең һыҙғанып эшләй. Ҡасандыр ул тотошлай ҡыҫҡа шиғырҙарҙан ғына торған айырым китап та сығарғайны. Уҙған йыл иһә шағир «Ағиҙел» уҡыусыларына дүрт юллыҡтарҙың өр-яңыларын бүләк

итте. Элеккеләре кеүек, былары ла бик уҡымлы, тәрән йөкмәткеле, юморға бай. Фәйзи Ғүмәровтың яңы парсаларын беҙҙең алға үтә күп һорауҙар ҡуйған ҡаршылыҡлы һәм ҡатмарлы дәүеребеҙҙең үҙенсәлекле бер сағылышы тип атарға мөмкин:

Нимә булды был донъяға? Буталабыҙ.
Шулай итеп йәшәүҙәнме йәм табабыҙ?
Аҡты күптән ҡара төҫкә буяныҡ та,
Шуға хәҙер бер туҡтауһыҙ шатланабыҙ!

Дүрт юллыҡтар араһында ҡыйыш атып, тура тейҙерә торғандары ла, ҡыйыҡ-мыйыҡлап тормайынса, күҙеңә бәреп әйткәндәре лә бар. Әгәр парсаларының береһендә автор «бер туҡтауһыҙ ләстит һатып көн үткәргәс, күр, йортобоҙ нигеҙенән ауып бара!» ти икән, икенсеһендә был фекерҙе, «етте шундай заманалар: эштәр харап – ҡомға килеп терәлде бит беҙҙең карап» тип, уғата ла ҡуйыртып ебәрә. «Яфа өҫтәп тора ил башына ҡунаҡлаған ғәмһеҙ төркөм», «бер туҡтауһыҙ сүбәк сәйнәй бай түрәләр, … халыҡ малын ашап, туйып һикерәләр!» тип әйтеүҙән дә сирҡанып тормай шағир.

Ә бына Шәриф Әхмәмәт менән Ҡәҙим Аралбайҙарҙың дүрт юллыҡтары башҡасараҡ яңғырай. Шәриф Әхмәмәттең «Көндәр менән төндәр араһында» тигән ҡыҫҡа шиғырҙарында һүҙ күберәк саф фәлсәфәүи юҫыҡта барһа, Ҡәҙим Аралбайҙың «Робағиҙар»ында башҡорт иленә, халҡыбыҙ тарихына, уның йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә фәлсәфәүи күҙлектән ҡараш ташлана. Авторҙарҙың икеһе лә Йыһан һәм Ваҡыт, Йәшәү һәм Үлем, Мөхәббәт һәм Нәфрәт, Бәхет һәм Бәхетһеҙлек, Шатлыҡ һәм Ҡайғы, Ләззәт һәм Һағыш, Тыйнаҡлыҡ һәм Тыйнаҡһыҙлыҡ, Хәҡиҡәт һәм Ялған, Тоғролоҡ һәм Хыянат һәм башҡа шуның кеүек мәңгелек төшөнсәләрҙең фәлсәфәүи асылын аңларға тырыша. Бер нигә ҡарамайынса, кәрәк икән – хатта башҡалар иҫәбенә булһа ла, үҙеңде һаҡлап алып ҡалыу өсөн тәбиғәттә һәм кешелек йәмғиәтендә ғүмер баҡый барған көрәште Шәрәф Әхмәмәт бына ниндәй ғибрәтле шиғыр юлдарына һалған:

Ҡуян илай бүре тырнағында:
Балаларым үлә, ебәр, – тип.
Бүре әйткән: Балаларым көтә,
Улар астан үлә, йүләр, – тип.

«Көндәр менән төндәр араһында»ға фекер тәрәнлеге һәм һүҙ тапҡырлығы хас. Ундағы ҡайһы бер шиғыр юлдары хатта халыҡ мәҡәлен хәтерләтеп ҡуя: «Бушап ҡалған ҡарға ояһына ояламай бөркөттәр»; «Тыйнаҡһыҙҙар араһында юлбарыҫтай һаҡ бул»; «Шишмәне туҡтатып булмай таш ырғытып, сүп ташлап»; «Бәхет ҡошо йәшәй “Ҡыйын” тигән тауҙар артында» һ.б. Ҡәҙим Аралбай робағиҙарын да шағирҙың һуңғы йылдарҙа ирешкән ижад уңышы тип иҫәпләргә мөмкин. Тик робағи рифмаһына тап килеп бөтмәгән шиғырҙарҙың да күҙгә салынып китеүе бер аҙ эште бошора.

Беҙҙең заман – парадокстар заманы. Гректарҙан килеп ингән был һүҙҙе мин үҙебеҙсәгә «туҙға яҙмаған һүҙ һөйләү, йәиһә әҙәм әйтеп, әҙәм ышанмаҫлыҡ эш эшләү» тип тәржемә итер инем. Ысынлап та, егерменсе быуаттың буйынан-буйына тиерлек, күпме ауырлыҡтар һәм михнәттәр кисереп, илебеҙҙе бөтәйттек-бөтәйттек тә, тир, хатта ҡан түгеп йыйған байлығыбыҙҙы бер нисә йыл эсендә юҡҡа сығарҙыҡ та ташланыҡ. Ябай халыҡ тиҙ генә аңлап бөтмәҫлек әллә ниндәй йәшерен уйҙарҙы бер нәмәгә ҡарамайынса тормошҡа ашырыу ниәтенән баш ҡала уртаһында йәйрәп ултырған гүзәл Аҡ йортто утҡа тотоу, улай ғына ла түгел – гөрләп йәшәп ятҡан тулайым бер ҡаланы аҙна-ун көн эсендә нигеҙенә тиклем емереп ташлау беҙҙең өсөн хәҙер бер ни тормай. Был мәхшәрҙе йөрәк аша үткәреү бигерәк тә өлкән быуын шағирҙарына ауыр. Бынан ҡырҡ-илле йыл элек улар күккә ашҡан бөйөк төҙөлөштәребеҙгә ҡыуанып, һоҡланып бөтә алмаған булһалар, бөгөн килеп шуларҙың емеректәре янында баҫып торалар. Был парадокс түгелме ни? Әгәр ҙә Кәтибә Кинйәбулатоваға йәшәп ятҡан донъяһын сүп-сар баҫҡан шикелле тойола икән һәм уны таҙартыу, ер-һыуын асылына ҡайтарыу өсөн күңелендә генә булһа ла үҙ теләге менән буран сығарып ала икән, шағирәне аңларға мөмкин:

Һай был донъя,
Иҫерек түгелһең дә,
Аҡылдарың юйҙың түгелме?! –
Ниндәй афәттәрҙе күтәрә бит
Тыуған еркәйемдең түҙеме…

Кәтибә Кинйәбулатова уратып-солғатыбыраҡ әйткән фекерҙе Фәүзиә Рәхимғолова күҙеңдә сатнатып, туп-тураға ярып һала. (Был һис кенә лә шағирә еңелерәк юлдан киткән тип уйларға нигеҙ

бирмәй.) Уҙған йыл ул «Ағиҙел» журналы биттәрендә ун ике шиғырҙы берләштергән «Донъя күрә кемдең кем икәнен» тигән бик матур шәлкем менән сығыш яһаны. Быға тиклем дә күберәк балалар өсөн яҙған әҙибә был юлы ла үҙенең төп темаһына хыянат итмәгән. Шәлкемде биҙәгән әҫәрҙәрҙең байтағында балаларын бәлә-ҡазанан ҡурсырға, уларҙы ҡош-ҡорттан һаҡлап, үҙ ҡанаты аҫтына алырға әҙер торған ил әсәһе образына инә; кеше үлтереп байыусыларға, сабыйҙарҙың күҙ йәшенә ҡарап теш ыржайтыусы аяуһыҙҙарға ләғнәт уҡый, шул сабыйҙарға ярҙам итә алмауына үкенә, йөрәге әрней. Әгәр Кәтибә Кинйәбулатова «Бар тирә-яҡ сер йомғағы бөгөн…» тип көрһөнһә, Фәүзиә Рәхимғолова «Килде ҡолаҡ ишетмәгән заман, зәһәр заман, тормош, эй, әсе! Ниңә төшмәй әҙәм үлтереүсе яһилдарға сабый күҙ йәше» тип һөрән һала һәм «Мүкәйләп тә бара тротуарҙан, ah, меҫкенем, тажик балаһы! Ни ҡылайым, ниңә көсһөҙмөн мин?! Әрней генә йөрәк яраһы…» тип үрһәләнә. Мостай Кәрим шикелле, Фәүзиә Рәхимғолова ла тыумыштан эскерһеҙ сабыйға өмөтөн бағлай, уның саф ҡарашынан йәшәү дәрте ала. «Кәрәгем тейһә бер сабыйға, мин йәшәргә хаҡлы ул сағында» ти ул. Был шәлкемгә ингән ҡайһы бер шиғырҙарҙан (мәҫәлән, «Мәскәү», «Ваҡыт етте!») заман талаптарына бик тә тап килгән публицистик аһаң бөркөп тора:

Ығы-зығы килә бәндә меҫкен,
Эй бутала ерҙә ҡара-аҡ…
Мөмкин түгел хәҙер һуҡыр булыу,
Бер ҡатлы ла уйға ҡалған саҡ.
Ауыҙы бешкән кеше өрөп ҡаба,
Һыуынғанын көтөп ҡалаҡтың…
Ваҡыт етте күптән ҡыҫҡартырға
Ҡойроҡтарын хәйлә, алдаҡтың!

Заман һулышын һәр шағир үҙенсә ҡабул итә, уға мөнәсәбәтен дә үҙенсә белдерә. Тәбиғәте, холҡо-фиғеле, ижады менән романтик рухлы Муса Ғәлигә, әйтәйек, бөгөнгө заман төҫһөҙ тойола, ер-һыуҙың тәме киткән һымаҡ уға, аң боларған кеүек. Ай-йондоҙҙоң нурын тапмай йонсоғас, уның лирик геройы, ошо төҫһөҙлөктө балҡыштарға күмерҙәй сәм табыу өсөн, аҡ ҡайын ҡуйынына инергә лә риза. Һәм был аңлашыла: үҙ ғүмерендә юлдарҙың ҡатмарлыһын да, дәһшәтлеһен дә, һикәлтәлеһен дә үткән шағир «яһил йәндәр тоҙағына» ла эләгергә теләмәй, «ҡара

йөҙгә ҡарап аҡланырға» ла йыйынмай. Киреһенсә, үҙенең лираһы менән мөртәттәрҙе, уғрыларҙы телдән яҙҙырырға, ә «имгәтелгән, емертелгән рухты» балҡытырға иҫәп тота. Риторик һорауҙарға ҡорол-ған бер шиғырҙа иһә парадокстарға бай ысынбарлығыбыҙҙың асылы етерлек дәрәжәлә ышандырырлыҡ итеп асып бирелгән:

Офоҡтарға баҡһам, аҙашамын,
Йондоҙҙарға баҡһам, баш әйләнә.
Ҡайһы быуат еле ҡағыла миңә,
Сит-ят көстәр йәнгә ник бәйләнә.
Өйөрмәләр булып туҙына аҡыл,
Хаҡлыҡ ҡайҙа ҡасты, үҫте ялған.
Вәғәз уҡый яңы боҙоҡ баштар,
Затлыларҙың йөрәктәре талған.
Баш әйләнә… Өҙгөләнә выждан.
Ник тартмайбыҙ әле тартыр йөктө,
Беҙ бер яңы заман башланыҡмы,
Иҫкеһеме беҙҙе сығарып түкте?

Дәүеребеҙҙең иң зур парадоксы, ҡалған бөтә парадокстарҙың да сығанағы – ҡаш ҡуябыҙ тип күҙ сығарыуға оҡшап киткән үҙгәртеп ҡороу ғәләмәте булды, әлбиттә. Илдә демократия урынлаштырабыҙ, билдәлелек булдырабыҙ, цивилизация шарттарына күсәбеҙ тип, хаҡлыҡты юғалттыҡ, ялғанлыҡҡа юл астыҡ, аҡты ҡара менән бутап ташланыҡ. Ошо фекер Шәриф Бикҡол шиғырҙары аша ла ҡыҙыл еп булып үтә. Әйткәндәй, үҙған йыл уның өсөн дә юбилей йылы булды, һәм ул үҙенең етмешенсе яҙын билдәләгән көндәрҙә уҡыусыға «Шат йыр йырлап килә йәшәгем…» тигән шәлкем бүләк итте.

Ун ике шиғырҙан торған был шәлкемендә шағир үҙе булып ҡалған – әҫәрҙәренең йөкмәткеһе менән дә, форма йәһәтенән дә: гражданлыҡ пафосы ла етерлек унда, шиғри наҙ ҙа, йөрәк йылыһы ла, хистәр нескәлеге лә, күңел байлығы ла. М. Кәрим, М. Ғәли ши-келле, Ш. Бикҡол да Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тыуған ерен фашист илбаҫарҙарынан азат итеүҙә ҡатнашҡан һәм ҡан ҡойған яу-гир. Шуға күрә лә беҙҙең көндәрҙә әкренләп йәшәү рәүешенә әйләнеп барған шәфҡәтһеҙлектең, мәрхәмәтһеҙлектең тере шаһиты булған яугир-шағир: «И Тыуған Ер – ғәзиз төйәгебеҙ, башыбыҙға һыймай гөнаһың: һине ҡурсып, ут-һыу кискәндәргә тат бирерҙә тоҙ

һонаһың?!» тип үпкәһен белдерә икән, ул хаҡлы. («Рәнйешле һүҙ».) Шәлкемде асып ебәреүсе был шиғырҙа, яҡты идеалдарҙың селпәрәмә килеүен, билдәһеҙлеккә дусар ителеүҙе белдергән юлдар ҙа бар: «Өмөтөбөҙ – суйыр ташҡа орған борсаҡ ише – кире ҡаҡлыҡты: көндөҙҙәрен сыра яндырып та эҙләп табыр хәл юҡ хаҡлыҡты…». «Һоҡланыу һәм әрнеү ораны», «Ауыҙлыҡ» тигән шиғырҙар ҙа ошондайыраҡ тойғолар менән һуғарылған. Әгәр уларҙың береһендә автор, шомланып: «Был донъяла аҡты ҡара баҫҡан, – ah, аяныс бына шуныһы…» тиһә, икенсеһендә инде: «…Атты ғына түгел, бәндәне лә ауыҙлыҡлап алды яуызлыҡ…» тип, асыҡтан-асыҡ ярып һала.

Шулай ҙа заман рухы Ш. Бикҡолдоң «Уйлай китһәң…» менән «Йыр яҙамын…» тигән шиғырҙарында көслөрәк тә, тулыраҡ та сағылғандыр. «Уйлай китһәң…»дә, мәҫәлән, шағир башта, һүҙҙе артыҡ ҡуйыртмайынса, ләкин уның һәр ҡайһыһына тос фекер төрөп, метафораға ҡоролған образдар ярҙамында замандың ҡайһы бер күренештәрен һүрәтләй: «Өйөр-өйөр бүре ил ҡыҙыра, һарыҡ тиреләре ябынып; натлыҡ йәндәр яңы битлек кейә, иблис доғаһына табынып». Аҙаҡтан иһә уның асылына төшөнгәндәй итә, ата-бабалар төйәген ҡаплаған харабаларҙың сәбәбен аңлатырға тырыша:

… Уйлай китһәң,
кеше,
кеше үҙе
тыуҙыра ла баһа заманды!

Закондарҙы яҙа кеше ҡулы,
бығауҙы ла шул уҡ ҡул яһай:

шәфҡәтһеҙҙе батша итеп ҡуя,
теләй икән –
һине ҡол яһай…

… «Заман» тибеҙ,
уға яңһарабыҙ:
«Тик ул ҡуя, – тибеҙ, – талапты…»

Юҡ, ерҙәштәр,
Ил Яҙмышы өсөн
кеше Үҙе,
Үҙе яуаплы!

«Күк хыялды, яҡты өмөттәрҙе» (Ш. Бикҡол) ҡыйратҡан яуыз ҡулдарға рәнйештәрен өлкән быуын әҙиптәре генә түгел, уларҙан йәшерәктәре лә – ир уртаһы ил улдары ла белдерә. Заман тыуҙырған ығы-зығылар, алдаш-йолдаштар, талаш-тартыштар уларҙа ла ризаһыҙлыҡ тойғоһо уятмай ҡалмай. Ундай мотивтар Самат Ғәбиҙуллин, Риф Мифтахов, Сулпан Иманғолов, Рауил Ниғмәтуллинда ла, Рауил Бикбаевта ла яңғырап китә. Хатта йәш шағирәләребеҙҙең береһе Тәнзилә Дәүләтбирҙина ла «үҙгәртеп ҡороу» алып килгән бәлә-ҡазаларға битараф ҡалмаған. «Беҙҙең тормош – хәҙер шайтан ҡуласаһы», «Сиктәр аша, ситән аша хәйер бирә күршеләр, был ахмаҡтар илен маҡтап, йылмайып күрешәләр», ти ул. Һәм ошо ҡыҫҡа ғына шиғри юлдарҙа ла беҙҙең бөгөнгө иҡтисади хәлебеҙҙе ифрат үтемле, образлы итеп күрһәтә алған.

Әлбиттә, һәр шағирҙың үҙ үлсәүе, үҙ фекерләүе, үҙ билдәләүе, үҙ күремләүе һәм башҡа бик күп «үҙ»ҙәре. Рауил Ниғмәтуллиндың да «Ҡайырыла ҡанат ҡаршы елгә» исемле поэтик шәлкемендә үҙ һағыштары һәм үҙ табыштары. Уның «Нишләйһең һуң?..» тигән шиғырына ғына туҡталайыҡ. Тәү ҡарамаҡҡа ул – торғаны бер лирик әҫәр. Унда һүҙ, талаптар артҡан һайын, дуҫ-иштәрҙең дә һирәгәйгәндән-һирәгәйеүе тураһында ғына барған һымаҡ. Ә ысынында иһә шиғырҙың йөкмәткеһе күпкә киңерәк һәм ул, минеңсә, ҙур дөйөмләштереүгә эйә. Дуҫ-иштәр араһында «йәнде таларҙар», «талаҡ әйтеүселәр», «йәнде ҡыярҙар», «йәмде ҡоярҙар», «үҙен шәп тоярҙар», «тик үҙҙәрен өҫтөн ҡуйырҙар», «выжданһыҙҙар, бушбоғаҙҙар, йүнһеҙгәмһеҙҙәр» күбәйә икән, тимәк, М. Кәрим әйткәнсә – «донъя сирле».

Р. Ниғмәтуллиндың «Монар», «Фажиғә» тигән шиғырҙарында ла ошондайыраҡ мотивты һиҙемләргә мөмкин. Улар үҙҙәренең төҙөлөштәре-яҙылыштары менән дә үҙенсәлекле – шиғырҙың һуңында мәҫәл жанрындағыса һөҙөмтә яһап ҡуйыла: «… Халҡыбыҙ, ил тотош тәләфләнә бөгөн бына шундай монарҙа»; «Бүре булып талай үҙ әсәһен, үҙ атаһын эттең балаһы». Ә бына «Миңлеҡәмәр инәй китә» башҡасараҡ яңғырай. Әлбиттә, был шиғырҙа ла образлылыҡ етерлек, ләкин ул ҡыйыҡ-мыйыҡлап түгел, бәлки, үҙенең тура мәғәнәһендә ҡулланылған:

Оҙатабыҙ һуңғы юлға
Миңлеҡәмәр инәйҙе.
Ул ғынамы –
Был донъяла

Барыбыҙ ҙа һемәйҙе:
Тыныс йоҡоға киткәндән
Ҡалғандар хәле яман,
Ялған көслəп таҡҡан иман,
Хакимдар үҙе ялған.

Заман елдәрен Самат Ғәбиҙуллин да үҙенсә тоя һәм шуға ярашлы рәүештә мөнәсәбәтен дә үҙенсә белдерә. Тирә-йүндә булып ятҡан хәл-ваҡиғаларға баһаһын бирергә ул бик үк ҡабаланып бармаған шикелле. Башта илгә сығып әйләнмәксе, һәм ҡайҙа ниндәй хәлдәр барлығын, халҡы, теле өсөн дау барғанда дуҫ-иштәре, һабаҡташтары һәм табаҡташтары, хеҙмәттәштәре, серҙәш-моңдаштары, хыялдаштары, юлдаштары араһында моңһоҙҙар юҡмы икәнлеген асыҡламаҡсы. («Илгә сығып әйләнәйем әле…») Илгә сығып әйләнеп ҡайтҡас иһә шағир иҫке һәм яңы юлдарҙы сағыштырып ҡарай: иҫке юл уға тайғаҡ булып тойола, яңыһының да ҡайҙа илткәне билдәһеҙ һымаҡ, һәм ул, «Һәрмәләнеп килә торғас аяҡ талды, әллә инде таң алды был, әллә эңер?» тиергә мәжбүр («Көнөбөҙ»). «Күрербеҙме беҙ ҙә берәй заман юл тоҫмалын белгән һыбайлыны?» тип бошоноп та ала («Күрербеҙме?»). «Үҙ ауына үҙе ҡапһын хәйлә ауын ҡорғандар, тороп баҫһын йығылғандар, йығылмаһын торғандар» тигәнерәк саҡырыу ҙа ташлай («Йығылғандар тороп баҫһын…»). Тау-таштарҙы ярып, үҙенә юл тапҡан Нөгөш-һыу һымаҡ, тормош та, уны мең афәттәр аңдып тора ла, берәр әмәлен табып, дауам итер әле тигән өмөтөн дә белдерә һәм, хәрәкәттә генә бәрәкәт тип, үрҙәр артылғанда тындар ҡыҫыла ла, бирешмәҫкә өндәй («Ымһындырып, әйҙәп юлдар ята»).

Йәшермәйем, был әҫәрҙәр нимәһе менәндер Мәжит Ғафуриҙың быуат башында мәғрифәтселек осорон кисереп, беренсе рус буржуаз-демократик революцияһы йылдарында яҙылған ҡайһы бер шиғырҙарын хәтерләтеп ҡуйҙы. Һәм үҙенән-үҙе мейемде бөгөн беҙ шул дәүерҙе әллә яңынан кисерәбеҙме икән тигәнерәк уй телеп уҙҙы. Ярай әле автор үҙенең шәлкемен «Тәҙрәләрҙе асып ҡуям әле…» тигән шиғыр менән тамамлаған. Аллегорияға ҡоролған был әҫәрҙе уҡығас, тәнгә әҙерәк йылы ингәндәй булды һәм тегеләре лә, бәлки, шул аллегорияның бер шауҡымылыр тигәнерәк өмөт уятты:

Сафландырып әҙерәк сыҡмаҫмы ел –
Тәҙрәләрҙе асып ҡуям әле.

... Бер бүлмәлә генә булһасы эш…
Бүлмә түгел, тотош ил бит шулай.
Был мәхшәрҙә мейем ҡайнап бөттө,
Саф һауаға һыуһап йәнем дулай –
Тәҙрәләрҙе асып ҡуям әле…

«Ағиҙел»дең йәйге һандарын уҡып ултырғанда С. Ғәбиҙуллиндың «Күрербеҙме?» тигән шиғыры яңынан иҫкә килеп төштө лә, өҫтәмә ҡыҙыҡһыныу уятып ебәрҙе. Был шиғырҙың нигеҙен тәшкил иткән мотив Ш. Бикҡолдоң «Ауыҙлыҡ», «Уйлай китһәң…», Р. Мифтаховтың «Үҙебеҙҙә!» тигән шиғырҙарына ла хас та баһа. Уларҙың бөтәһендә лә һүҙ заман тураһында бара, уның асылын һәр автор үҙенсә аңларға, үҙенсә баһаларға тырыша. Әгәр С. Ғәбиҙуллиндың «Күрербеҙме?»һендә аҡыл эйәләренең һәр кеше үҙ яҙмышын үҙе яҙа тигән раҫлауына шикле ҡараш ташланһа һәм демократия хакимлыҡ иткән беҙҙең заманда ла ауыҙлыҡһыҙ йәшәмәүебеҙгә ишара яһалһа, Ш. Бикҡол шиғырҙарында был фекер уғата ла көсәйтеп ебәрелә һәм илдә-ерҙә барған хилаф-холафлыҡтарҙа бөтәбеҙҙең дә ғәйепле булыуыбыҙ һыҙыҡ өҫтөнә алына. Р. Мифтахов иһә өс кенә строфанан торған «Үҙебеҙҙә!» исемле шиғырында беҙҙең көндәрҙәге хәл-ваҡиғаларға тарих күҙлегенән сығыбыраҡ ҡараш ташламаҡсы, Ш. Бикҡол һыҙыҡ өҫтөнә алған ғәйептең тамырҙарын, сәбәптәрен һәм эске мәғәнәһен асып бирә һымаҡ:

«Даһиларҙа, – тинек, – аң һәм аҡыл,
Беҙҙең намыҫ, выждан, күркәмлек…»
Бөйөктәргә бөгөлә-һығыла торғас,
Ошо көнгә килеп терәлдек.

Өр-яңынан даһи тыуҙырырбыҙ,
Өр-яңынан Алла табырбыҙ;
Ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә ҡалғас,
Бар бәләне уға яғырбыҙ.

Аңлар ваҡыт хәкикәтте,
Һабаҡ бирер күпме өйрәтте:
Даһилыҡ бит беҙҙең үҙебеҙҙә!
Үҙебеҙҙә – Алла көҙрәте!

Әйткәндәй, уҙған йыл Риф Мифтахов «Ағиҙел» журналы уҡыусыларын ундан артыҡ яңы шиғыры менән ҡыуандырҙы. Уларҙың күбеһе – мөхәббәт тураһында. Әҙәм балаһына ғүмер баҡый тынғылыҡ бирмәгән был тойғо Р. Мифтаховтың лирик геройына ла мәңге асылмаҫ сер булып ҡала («Сер», «Мөхәббәт гөлдәре», «Ай һәм йөрәк», «Йондоҙло төн», «Мин бит әле…»). Хистәргә бай, аҙ, ләкин йор һүҙле ул. «Ҡартлыҡ көткәндә» лә, «мин бит һөйөү карабында йондоҙҙарға осмаҫ ир түгел» тип тә ебәрергә мөмкин хатта. Һөйөү һәм һөймәү, һөйөлөү һәм һөйөлмәү ғазаптарын йөрәге аша үткәргән был лирик герой нескәләрҙән дә нескә ошо эске тойғоларҙы тышҡа сығарғанда ялғанлыҡтан һәм яһалмалыҡтан ҡурҡа: «Күрһәтмәсе, Хоҙай, тормошта бергә булып яңғыҙ ҡалырға…».

Р. Мифтаховтың яңы шәлкемендә кешенең ерҙә йәшәү мәғәнәһе һәм уның асылы тураһында уйланыуҙарҙан торған шиғырҙар ҙа бар («Эҙләйем», «Йомаҡ», «Әсе», «Минорлы минуттар»). Күләмдәре яғынан әллә ни ҙур түгел улар, әммә һәр ҡайһыһында тәрән фекер ярылып ята. Әйтәйек, бәхеттең яңыларын эҙләгәндә, иҫкеләрен юғалтып ҡуйыуың да ихтимал. Йыраҡтан эҙләгәнеңде яҡындан табырға һәм оҙаҡ эҙләп тапҡаныңды ҡапыл ғына юғалтып та ҡуйырға мөмкин. Арзан алғандың ҡиммәткә төшөүе, һалҡын тип ҡапҡандың ауыҙҙы бешереүе мөмкин. Юғары тигәндең түбән булып сығыуы ла ихтимал. Ә ни өсөн шулай? Сөнки тормош үҙе торғаны бер йомаҡ. Ә бына кеше ғүмерен музыкаға оҡшатыу, шул ғүмер буйлап дәрәжәңде юғалтмайса һәм абруйыңды төшөрмәйенсә атлауҙы музыканың нотаһын яҙыуға тиңләү – ысын мәғәнәһендә шағирҙың поэтик табышы тиер инем.

Поэтик ынйылар Рауил Шаммастың «Наҙҙар итеп, ергә тараттым…», Мәхмүт Һибәттең «Күренгәйнең тауҙар офоғонан…», Ҡадир Әлибаевтың «Көн нурынан, ҡош йырынан…», Хәсән Назарҙың «Уртаҡ фатирҙа мин йәшәп ятам…» тигән шәлкемдәрендә лә етерлек. Ҡ. Әлибаевтың «Иртә» тигән шиғыры үҙе генә лә пейзаж лирикаһының матур бер өлгөһөнә торорлоҡ. Таң атыуын гөл балҡыуына оҡшата автор. «Йым-йым иткән таң нурҙарын йылғалар алыҫ илтә». Был мәлде йырсы ҡоштар ҙа көтөп ала, уның елдәре лә бик иркә һәм әсә ҡулдарын хәтерләтеп ҡуя. Таң нурҙары үләндәрҙә, гөлдәрҙә емелдәшә, хатта телгә килгән тәүге һүҙҙәр ҙә «ысыҡ кеүек балҡып китә». Был инде – күрә лә, тоя ла белеү һәләтеле. Ҡ. Әлибаевтың ҡарашы, күңел күҙе башлыса атай йортона, тыуған төйәгенә, тәбиғәт киңлектәренә төбәлгән, шул тарафтарҙан ул йәшәү дәрте ала, шул уҡ тарафтар шағирҙы ижадҡа

илһамландыра, тыуған-үҫкән дала яҡтарын хатта шиғыр шишмәһенә тиңләй ул.

Пейзаж лирикаһының матур өлгөләрен Х. Назарҙа ла табырға мөмкин. Миҫал итеп «Йәйге йәшен» тигән шиғырын күрһәтер инем. Биш кенә строфанан торған был әҫәрҙә тәбиғәттең ғәҙәти бер күренеше бик оҫта һүрәтләнгән. Шағирҙың күҙәтеүсәнлеге лә, үҙе күргәнде башҡаларға матур ҙа, ышандырырлыҡ та итеп һөйләп бирә белеү маһирлығы ла сағыла унда. Образлылыҡ та, шиғри табыштар ҙа етерлек «Йәйге йәшен»дә. Ошо бәләкәй генә әҫәрҙә тәбиғәттең күҙ асып, күҙ йомған арала бер-бер артлы булып уҙған өс мәле сағылып киткән: ямғырға хәтлем, ямғыр ваҡыты, ямғырҙан һуң. Ямғырға хәтлем «салт көндән» изрәгән ер «алмалай бешеп» ятҡан һымаҡ тойола шағирға. Йәшен яҡынлашыуын һиҙгән ҡоштар сырҡылдашыуҙан туҡтай, ҡараңғылыҡ ҡуйыра. «Шомло ғәскәр шәүләһеләй ағыла ҡара болот». Ниһайәт, алыҫ-алыҫта шаңғыртмай ғына лыбырлаған йәшен бында ла килеп етә: «салыш-солош ут ялтлай; күктең ҡурғаштай күҙ йәше үләнде ергә ҡаплай». Елләп-ғәрәсәтләп килгән ҡойон, дауыл ҡуптарып, үтеп тә китә һәм «ҡояштан тартыла ҡыл…». Бына шулай, шифаһына ҡарағанда афәте күберәк булған селлә ямғырын автор сағыу буяуҙар, метафорик образдар, уңышлы файҙаланылған сағыштырыуҙар ярҙамында хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп һүрәтләп биргән.

Хәсән Назарҙың был шәлкемгә ингән башҡа шиғырҙары тураһында ла оҙон-оҙағай, ентекләп һөйләргә булыр ине. Ләкин күҙәтеү жанры талаптарына буйһоноп, уларҙың дөйөм йүнәлешен билдәләп үтеү менән генә сикләнергә тура килер. Х. Назар шиғырҙары фәһемле лә, хикмәтле лә. Эске рухы, стиль үҙенсәлектәре менән уларҙың ҡайһы берҙәре әҙәбиәтебеҙҙең оло Назарын – шиғыр оҫтаһы Нәжмиҙе хәтерләтеп ҡуя. Шундайҙар иҫәбенә иң тәүҙә «Аға һыуҙар…», «Йырлаһа, башлап йырлай ул…», «Алмасыуар», «Ниңә?..», «Тыуҙы сабый…», «Йәшәп ятам…»даҙы индерер инем. Ике әҙипте бер-береһенә яҡынайтыусы байтаҡ оҡшашлыҡтар, уртаҡлыҡтар табырға була.

«Аҡыллым, тимә йәреңә» исемле шиғырында Х. Назар, йөрәкте – һөйөү солтанына, ә аҡылды – уның һаҡсыһына тиңләп, «аҡыл – һалҡын ҡанлы, бигерәк хәтәр – булһа әгәр хистәре лә аңлы» тигәнерәк бик үҙенсәлекле бер фекер әйтеп ташлай. Ошо юлдар Мәхмүт Һибәт шиғырҙарына туҡталып, уларҙың асылын аңларға тырышыу теләгеп уятып ебәрҙе. Минең менән килешеүселәр табылмай булмаҫ тип уйлайым: Һибәттең ҡайһы бер шиғырҙары, ысынлап та, тәү тапҡыр уҡыу

менән үк күңелгә һылашып бара торғандарҙан түгел бит. Был күренеш XIX быуаттың ахырында – XX быуаттың башында рус поэзияһында сәскә атҡан символизмдың башҡорт ерлегендәге бөгөнгө бер шәүләһенә оҡшап китә хатта. Рус символистары ла бит үҙ заманында, йәнәһе, шифриәтте бөтә кешенең дә аңлауы мотлаҡ түгел, бер шифырҙы ғына ла төрлө уҡыусы төрлөсә ҡабул итергә мөмкин, ысын шифриәт ул сәнғәт һөйөүселәрҙе беҙҙең «тупаҫ ысынбарлығыбыҙҙан» гүргә, йәиһә күктәр донъяһына алып китергә тейеш тигәнерәк фекерҙе алға һөргән. М. Һибәттең дә «Ныҡ ғашиҡтар һәр ваҡытта…», «Ер – көн утын яғып та…», «Мин урмандың хәлен белә килдем…», «Йырым ҡанатына ҡушылып мин…», «Янып талпынһаҡ та хыял кеүек…» тигән шифырҙары, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шундайраҡ рухта яҙылған тиер инем. Уларҙың төбөнә төшөп етер өсөн, минеңсә, әҙме-күпме шағирҙың ижад лабораторияһын, теге йәки был әҫәрҙең яҙылыу тарихын белеү кәрәктер. Әммә М. Һибәттең лирик геройы тышҡы яҡтан күпме генә ҡырыҫ тойолмаһын, ни ҡәҙәр генә саманан тыш аҡыллы булып күренергә тырышмаһын, мөхәббәт арбаһына ултырып алғас, барыбер хистәргә буйһонмай ҡалмай. Һөйөүҙән уның есеме күмергә, көлгә әйләнеүе лә ихтимал; ике ғашиҡтың йәне ҡояштан да сағыуыраҡ янғандай тойолоуы мөмкин; һөйөүҙе нурлы өмөткә, яҡты изгелеккә лә тиңләргә мөмкин; «эй, йөрәгем, иңрә, һыҡта, иңрәмәгән үлектер ул» тип, үҙ-үҙенә бойороҡ биреүе лә ихтимал.

Ә бына Рауил Шаммастың лирик геройы, тормош ығы-зығыларына артыҡ иҫе китмәйенсә, унан үҙенә күрә бер йәм табып, яҡты донъяға килгәненә шатланып, бер-береңә изгелек эшләү ниәтенән бер алманы бишкә бүлергә әҙер торған асыҡ йөҙлө, алсаҡ күңелле кеше һымағыраҡ күҙ алдына баҫа. «Бер яҡтың да ҡалмағанда» хатта ҡар яҡтыһы ла көс-дәрт биргән һәм алға әйҙәгән кеүек тойола уға. Йәшәүҙең асылын да, уның ҡайһы бер серҙәрен дә үҙенсә аңларға тырыша («Тыуған көнөмдә уйланыу», «Йоҡлап ҡалма…», «Дауамым», «Йәшәү ҡәҙере»), мөхәббәттең ҡәҙерен белә һәм ысын һөйөүҙе ҙур ҡыуанысҡа, хазинаға тиңләй («Яңғыҙ башта бергә саҡты…», «Яратмаһа…», «Ышаныс», «Татлы шарап»). Иң мөһиме, тормоштоң ниндәй генә мәлдәрен кисермәһен, лирик герой был фани донъяла тик үҙе булып ҡалырға теләй.

Рауилдарҙың тағы береһе, Бикбаевы, – күп һәм уңышлы эшләй торғандарҙан. Һуңғы ваҡытта уның «Ағиҙел» биттәрендә бер генә тапҡыр булһа ла сығыш яһамай ҡалған йылы юҡтыр, моғайын. Уҙған

йыл иһә Р. Бикбаевтың исеме һәр һанда тиерлек күренеп торҙо – Шәйехзада Бабичтың 100 йыллығын әҙерләү һәм үткәреү мәшәкәте күберәк уның елкәһенә төштө, булһа кәрәк. Өҫтәүенә, «Ырыуҙарым – күҙ нурҙарым» тигән ҙур ғына шәлкем дә баҫтырып сығарҙы. Был шәлкемендә лә шағир ваҡиғалар үҙәгендә ҡайнаусы шәхес булып ҡала. Әҫәрҙәр заман һулышы, заман рухы менән һуғарылған, уларҙың байтағында авторҙың илдә барған хәлдәргә ҡарашын, мөнәсәбәтен тойомларға мөмкин. Ҡайһы берендә был мөнәсәбәт өгөт-нәсихәт һымағыраҡ яңғыраһа, бәғзеләрендә иһә аллегория төҫөн ала. Шәлкемгә исем биргән шиғырҙа автор, ҡобайырға тартым алымға таянып, халыҡты берҙәмлеккә, уңғанлыҡҡа, татыулыҡҡа, уяулыҡҡа саҡыра. «Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа», «Мортазиндың һуңғы һүрәте», «Йылына алмай ҡалтырана ҡуян…», «Гәзит-эфирҙарҙан ябырылып…» тигәндәре лә шундайыраҡ стилдә яҙылған. Ә бына «Ағиҙелгә сумып суҡыналар…», «Һөрлөкмәҫ тә ерҙә һөрлөгөүҙәр…», «Сабый саҡтан ҡалған ғәҙәт һаҡлап…»ты заман ҡаршылыҡтарын сағылдырған шиғри этюдтар тиер инем. Лирик геройҙың донъя хәлдәре, йәшәү серҙәре тураһында уйланыуҙарынан торған шиғырҙар ҙа бар бында («Әллә ниҙәр булды донъяларға…», «Салт сасҡау таң. Донъяны бәҫ баҫҡан…», «Эй, тәбиғәт! Офоҡтарың ҡай саҡ…», «Үткәндәй заяға, ғүмер йә яй аға…»). Мөхәббәт лирикаһына ла күпмелер урын бирелгән («Ике бәхетте бергә татыным…», «Ҡатын-ҡыҙҙар, эс-бауырыңа инеп…», «Ҡасан ғына, муйыныма һарылып…», «Мин буш йәшәмәнем…»).

Ҡатын-ҡыҙҙар, Р. Бикбаев һүҙҙәренсә, эс-бауырыңа инеп барһалар ҙа, уларһыҙ донъя – һанһыҙ. Күберәк ваҡыттарын төп вазифаларын атҡарырға сарыф итһә лә, узған йыл беҙҙең шағирәләребеҙ ҙә башҡорт шиғриәтен артабан үҫтереүгә тос өлөшөн индерҙе. «Ағиҙел» биттәрендә генә лә ун бишләп авторҙың сығыш яһауы быға асыҡ дәлил. Әйтергә кәрәк, уларҙың ижад манералары ғына түгел, ижад яҙмыштары ла төрлө. Үрҙә билдәләп үтелгәнсә, бай тормош тәжрибәһе туплап, ил әсәһенә әүерелгәндәре лә бар. Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында бер аҙ һыуынып тороп, яңынан сәмләнеп тотонғандары ла осрай. Шиғриәттең тылсымлы ҡаҙылмаһынан көн дә тип әйтерлек гәүһәр эҙләүҙе йәшәү мәғәнәһенә тиңләгәндәре лә етерлек. Йән рәхәтлеге генә түгел, күңел ғазаптары ла мул өләшелә торған был баҡсаға һуңлабыраҡ килеп ингәндәре лә юҡ түгелдер, бәлки. Ләкин яҙмыштарҙың да, манераларҙың да төрлөлөгө дөйөм әҙәби процеҫҡа тотҡарлыҡ йәиһә кире йоғонто яһаусы ниндәйҙер кәртә түгел – ул, киреһенсә, йәм өҫтөнә йәм, нур өҫтөнә нур ғына өҫтәй.

Ҡатын-ҡыҙҙар поэзияһының (был төшөнсә шартлы рәүештә генә ҡулланыла, әлбиттә) характерлы үҙенсәлектәренең береһе – әсәлек тойғоһоноң ил мәшәҡәттәренә барып тоташыуында, ошо ике стихияның бергә тығыҙ үрелеп һүрәтләнеүендә. Был үҙенсәлек Кәтибә Кинйәбулатова менән Фәүзиә Рәхимғолованың үрҙә телгә алынған шиғырҙарына ла хас; уны шулай уҡ Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Йөрәк түрҙәренән моң түгелә» һәм Фәүзиә Юлдашбаеваның «Ҡыҙ балалар – яҙмыш ҡаҙҙары» тигән шәлкемдәрендә лә күрергә мөмкин. Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Еләк-бүләк» шиғырында, әйтәйек, лирик героинянының, мөхәббәт наҙынан һушын юғалтып, иреп китеүе лә ихтимал; «Ейәнем» тигән икенсе шиғырҙа иһә ҡулдарын алға һонған бала уға «йүгән тотҡан ир-уҙаман»ды хәтерләтә һәм, ваҡыты еткәс, уның ат «аяғынан даға сыңы» яңғыратырына шикләнмәй. «Ҡубыр инде хәмәл бураны»нда хисе-аҡылы бергә: ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас нәзәкәтлек тә, баҫалҡылыҡ та, шул уҡ ваҡытта тәрән мәғәнә лә бар унда – яҙҙы көтөүҙән үрһәләнеп, күңеле иләҫ-миләҫ килгән героиня һис көтмәгән һығымта яһай ҙа ҡуя: «Буталанған донъя яйланһасы хан башына бейҙәр етеүҙән». Формаһы яғынан да, йөкмәткеһе менән дә был шиғыр – шәлкемдә иң уңышлыларҙандыр. Хәйер, «Көмөш тояҡ» та, «Еркәйемә» лә, «Еңгәләремә» лә унан һис тә ҡайтыш түгел, минеңсә.

Хистәр менән аҡыл берлеге Фәүзиә Юлдашбаева өсөн дә төп сифаттарҙың береһе. Уның шиғырҙары быға асыҡ миҫал. Әгәр «Йондоҙ күрҙем», «Килен алдың, әсәй!», «Улыма», «Шишмәләрем» ысын мәғәнәһендә тормош ағышына, донъя мәшәҡәттәренә ҡатын-ҡыҙҙар күҙлегенән сығып ҡарауҙың һәм фекер йөрөтөүҙең бынамын тигән өлгөһө булһа, «Ҡара баҙар» инде уларҙың киреһе – ул матур тойғоларҙы, ерҙә йәшәү шатлығын, әсә күңелендә быуындар бәйләнеше тыуырған ғорурлыҡты селпәрәмә вата ла ташлай. «Шишмәләрем»дә шағирә үҙенең лирик героиняһын «асылмаған сиҙәм – ҡыҙ саҡтарым кире ҡайтмаҫ, күпме көтһәм дә» тип наҙландырһа, «Ҡара баҙар»ҙа ул:

Сауҙагәрҙәр ҡыҙыл малдай күреп
Капшамаҫтар, тимә, тәнеңде,
Талант, һәләт менән һатыу итеп,
Тураҡламай алыр йәнеңде, –

тип оран һалырға мәжбүр.

Таңһылыу Ҡарамышева менән Гөлнур Яҡупова – тиҫтерҙәр. Уларҙың ижад яҙмыштарында ла ниндәйҙер уртаҡлыҡ барҙыр, бәлки. Береһе әҙәбиәт өйрәһен бик йәшләй тәмләп ҡараны ла, өрөп ҡапҡан кешегә оҡшап, барыр юлынан яй ғына атлауын дауам итте. (Исеме етмешенсе йылдарҙа уҡ яҙылған әҙәби-тәнҡит мәҡәләләрендә күренгеләп китһә лә, ысын мәғәнәһендә шағирә статусы уға һуңлабыраҡ килде, ахырыһы.) Икенсеһе эсендәгеһен тышына сығарырға бик ашығып бармаған һымаҡ – әйтерһең дә, үҙ ваҡытын көтөп, түл йыйып ултырҙы. Бөгөн иһә улар икеһе лә, ишле ҡунаҡ төшөрөргә әҙерләнгәндә ең һыҙғанып ҡамыр баҫырға тотонған ҡатындар шикелле, бөтә сәмдәрен әҙәбиәт донъяһына йүнәлтте: шиғри шәлкемдәр ҙә баҫтырып торалар, айырым йыйынтыҡтар ҙа сығаралар.

Уҙған йыл Таңһылыу Ҡарамышева уҡыусыға «Ергә-һыуға башын эйеп…» тигән шәлкемен тәҡдим итте. Уға башлыса гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған шиғырҙар тупланған. Илдәге хәл-ваҡиғаларға авторҙың үҙ ҡарашы бар. «Уяныу», «Шәжәрә һағышы» исемле шиғырҙарҙа, мәҫәлән, үҙгәртеп ҡороуға тиклемге осор, әгәр мин авторҙы дөрөҫ аңлаған булһам, «иманһыҙ замана» тип атала, ә үҙгәртеп ҡороу дәүере «ирек ташҡындары»ның, «ҡоллоҡ быуалары»ның йырылыуына тиңләнә, илебеҙ иһә «һыуы ағып бөткән» бысраҡ төплө быуаға оҡшатыла. Әйтергә кәрәк, шиғыр техникаһы яғынан килгәндә әҫәрҙәрҙең икеһенә лә һүҙ тейҙерерлек түгел: сағыштырыуҙар ҙа, метафораға ҡоролған образлылыҡ та етерлек бында. Тик үткәндәргә тотош ҡара күҙлек аша ғына ҡарау дөрөҫлөккә тап киләме икән? «Ирек ташҡындары»ның йырылыуына шағирә иртәрәк шатланмаймы икән? Юғиһә, икенсе бер шиғырында ул ниңә бына бындай һорау ҡуя:

Йоморткала килеш үлде себеш,
Ҡабырсаҡта үлде ҡыҫала…
Әсә ҡарынында тонсоғормо
Азатлыҡҡай тигән хөр бала?

Ә «йәшел ағыуҙарҙан, сүп-сарҙарҙан тиҙерәк йыу илде, ағым һыу…» тигән саҡырыуҙы нисегерәк аңларға? Кешелек донъяһы үҙ дәүерендә ағым һыуҙарҙы байтаҡ күргән дә бит, ләкин йәшел ағыуҙарҙан да, сүп-сарҙарҙан да әле булһа арынып бөтә алмаған, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. «Йәшер ташың – бәрә күрмә», «Ҡаҙан»,

«Нәркәс», «Иң ныҡ ҡәлғә – әҙәм күңеле лә…» шиғырҙары ла ҡапма-ҡаршылыҡлыраҡ фекерҙәр уятмай ҡалмаҫ уҡыусыла. Шәлкемде ослап ҡуйыусы «Ибн Фаҙлан хаҡты яҙған» әҫәре иһә башҡаларҙан күпкә айырыла, минеңсә: башҡорт халҡының үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә тарих юғарылығынан ташланған поэтик ҡараш тиер инем мин уны.

Гөлнур Яҡупованың «Бәғеремде һағыш-уй киҫә…» тигән шәлкеме күләме йәһәтенән генә түгел, уға ингән шиғырҙарҙың шаҡтай үҙенсәлекле яңғырауы менән дә айырылып тора. Шәлкемдең исеменән үк күренеүенсә, Гөлнурҙың лирик героиняһы хистәргә бирелеүсән, үҙенең бай эске тормошон, күңел кисерештәрен йыш ҡына тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып, сағыштырып ҡарарға һәм шунан ниндәй ҙә булһа берәй хикмәт килтереп сығарырға ратыусан шәхес. Шул уҡ ваҡытта ул үҙ-үҙенә ифрат талапсан, бәғерен һағыш-уй телеп уҙғанда ла төп кешелек сифаттарын юғалтмай; ара-тирә күңеле иләҫ-миләҫләнеп китһә лә, ҡасандыр мейеһенә һеңеп ҡалған йәшәү принциптарына хыянат итмәй. Шағирә ишара яһай алымын ярата, һәм быны ул үҙе лә йәшермәй, сөнки әҫәрҙәренең береһе хатта туранан-тура шулай атала. Әйткән фекерҙе ҡеүәтләү өсөн «Тирмән», «Сүреләге еп», «Әй мин, һармаҡ…», «Ҡышлау гөлөм», «Бер минут…» тигән шиғырҙарҙы күрһәтеп үтергә мөмкин. Уларҙың берәнсеһендә бөтә донъя туҡтауһыҙ әйләнеп торған тирмән ташына оҡшатылһа («Әйләнә таш. Әйләнә баш. Таш… баш… Тыңлап торһаң – ҡалай моңһоҙ. ‹…› Әйләнә таш. Әйләнә бар донъя. Бер уйлаһаң, һис бер толҡаһыҙ»), икенсеһендә кеше ғүмере сүреләге епкә тиңләнә һәм мәғәнәһеҙ үткән ғүмер һүтелмәгән сүре шикеллерәк күҙ алдына килтерелә («Ҡайтанан уралмаҫ сүре – һүтелмәйем, туҡтайыммы? Һүтелмәгән сүреләрҙең бер кәрәге юҡ та инде»). Ләкин эш ҡоро оҡшатыуҙа, ҡоро тиңләүҙә генә түгел, ә әҫәрҙәрҙең төбөндә ятҡан тәрән фәлсәфәүи фекерҙә. «Бер минут…»та был фекер оторо ла көсәйтеп ебәрелгән – «йәп-йәш кенә йәшкелтем бал» тамсыһы ғәжәп үҙенсәлекле образдар бәйләнеше тыуҙыра: ығы-зығылары менән бер-бер артлы үтеп торған йылдарыбыҙ кәрәҙҙе хәтерләтә, үҙебеҙ иһә тыҙ-быҙ килеп шул кәрәҙҙе тултырырға маташыусы бал ҡорттары булып сығабыҙ. Һәм тағы бер һағыш: янып-көйөп, тырышып-тырмашып көткән донъябыҙ – ҡабып йотолған бер ҡалаҡ бал шикелле, «бер минутлыҡ кәрпек ҡағыш…». Ә шулай ҙа, әгәр шәлкемгә ингән ун алты шиғыр араһынан береһен һайлап

алырға ҡушһалар, һис икеләнмәйсә, «Бәпкә»не күрһәтер инем. Был шиғырҙа шағирәнең бар булмышы кәүҙәләнеш тапҡан. Һүҙҙең һуңында шуны әйтәһе килә: автор был шәлкемендә лә үҙенең ижад алымына – әҙ генә һүҙ менән тос фекер әйтергә тырышыу теләгенә тоғро ҡалған.

Һуңғы ваҡытта Факиһа Туғыҙбаева менән Тамара Ғәниеваларҙың поэтик тауышы көсәйгәндән-көсәйә. Әҙәбиәт юлына етмешенсе йылдарҙың ахырында – һиҡһәненсе йылдарҙың башында ғына ныҡлап аяҡ баҫып китеүҙәренә ҡарамаҫтан, хәҙер инде улар байтаҡ китаптар сығарып өлгөрҙө һәм һүҙ сәнғәте майҙанында һәр ҡайһыһы үҙ урынын яуланы. Ф. Туғыҙбаева, Т. Ғәниева һәм башҡа шағирәләребеҙ тураһында уйланғанда, беҙҙең бит үҙебеҙҙең Анна Ахматоваларыбыҙ, Зөлфиәләребеҙ, Сильва Капутикяндарыбыҙ, Фазу Алиеваларыбыҙ бар ҙаһа тип ғорурланып ҡуям. Шаштырып ебәрә тиеүселәр ҙә табылыр. Ихтимал. Ләкин әлеге осраҡта мине мәсьәләнең икенсе яғы ныҡыраҡ борсой: бына беҙ юғарыла телгә алынған һәм алынмаған һүҙ оҫталарының исемдәрен әҙме-күпме беләбеҙ ҙә бит, ә улар илендә минең яҡташтарымдың ижады менән ауаздаштармы икән һуң? Ыңғай яуапҡа иҫәп тотоуы ҡыйын. Сөнки нисәмә йылдар буйы ҡәҙерләп үҫтерелгән һәм нығытылған дуҫлыҡ бәйләнештәре юҡҡа сыҡты. Улай ғына ла түгел, ошо бәйләнештәрҙең нигеҙен тәшкил иткән милләт-ара аралашыу теленең дә роле кәмегәндән-кәмей.

Уҙған йыл Факиһа Туғыҙбаева уҡыусыларын «Тәүбә» тигән поэма һәм «Минең йәнем – көҙгө үкһеҙ елдәй» исемле шиғырҙар шәлкеме менән ҡыуандырҙы. «Тәүбә» – романтик рух менән һуғарылған лирик поэма. Уның композицион-тематик нигеҙен халҡыбыҙҙың бөйөк улы Шәйехзада Бабичтың трагик яҙмышы, ошо яҙмышҡа бәйле тәрән уйланыуҙар тәшкил итә. Ләкин әҫәр шағирҙың тормош юлын һөйләп сығыуға йәиһә уның ижады хаҡында ләстит һатыуға ҡайтып ҡалмай. Әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ күгендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған шәхестең онотолмаҫ образын кәүҙәләндереү өсөн автор бик үҙенсәлекле һәм, әйтер инем, ярайһы ғына уңышлы форма тапҡан – поэманың сюжеты лирик героиняны төрлө ситуацияларҙа Ш. Бабич менән осраштырыуға ҡоролған. Тәүге осрашыу – китап биттәрендә, әлбиттә. Артабан иһә героиня күптәрҙең идеалына әйләнгән шағирҙы, Ш. Бабичтың үҙ ижади алымдарынан оҫта файҙаланып, йондоҙҙар араһында, йәшен эсендә, ташҡан даръяларҙа, гөлдәр араһында, ҡойондарҙа, бурандарҙа эҙләй. Ниһайәт, эҙләгән

кешеһен, уның мәңге тере йәнен һәм заман елдәренән арынған яҡты һынын Урал тауҙарының үрҙәрендә, Шүлгән мәмерйәһе янындағы ҡаяларҙан барып таба. Аллегорияға ла, символикаға ла берҙәй бай был әҫәр Ш. Бабичтың ҡыйырһытылған иҫтәлеге алдында тәүбәгә килеү күренешен һүрәтләү менән тамамлана. Күләме яғынан поэма ыҡсым – символикаға ҡоролған ошо осрашыуҙар береһенән-береһе ҡыҫҡа дүрт бүлеккә һыйҙырылған. Теле ябай. Шиғри әҫәрҙәр алдына ҡуйыла торған башҡа талаптарҙан сығып ҡарағанда ла, «Тәүбә»гә һис бер һүҙ тейҙерерлек түгел, минеңсә, – бында бөтәһе лә үҙ урынында. Ҡыҫҡаһы, Ш. Бабичҡа арналған шиғырҙар, ғилми-тикшеренеү хеҙмәттәре, сәсмә әҫәрҙәр, иҫтәлектәр янына бынамын тигән өр-яңы поэма килеп өҫтәлде һәм шағирҙың үлмәҫ образы уғата ла балҡып киткәндәй булды.

Ф. Туғыҙбаева «Минең йәнем – көҙгө үкһеҙ елдәй» тигән шәлкемгә ингән шиғырҙарында үткәнебеҙгә лә, бөгөнгөбөҙгә лә айыҡ ҡарашлы шағирә булып ҡала. Халҡыбыҙҙың милли традицияларының, шул традицияларҙы һаҡлаусы һәм дауам иттереүсе арҙаҡлы шәхестәре менән ул ихлас ғорурлана («Тағы ла йыр тураһында», «Мәңгелек моң»), ә бына беҙҙең заман уға «бәғерһеҙ заман» булып тойола һәм уны «аҡылынан яҙған донъя» тип атай («Мин булғанмын, тиҙәр, тыуғансы уҡ…», «Әсәйем менән һөйләшеү»). Шағирә менән килешмәү ҙә мөмкин түгел, сөнки «фәхишә ҡыҙ аулай бай абзыйҙы», «иҫерек йыр йырлай иҫеректәр, иҫкә төшөргөләп инәләрен…» («Күргәҙмә»). Ф. Туғыҙбаеваның лирик героиняһы ярайһы ғына ҡатмарлы ла, ҡапма-ҡаршылыҡлы ла шәхес. Әлбиттә, ул ебеп төшкәндәрҙән түгел. Тәү ҡарамаҡҡа хатта ут һәм ялҡын сәсеп торған һымаҡ. («Ләкин бер көн һин онтамаҫ тимә быяланы. Онтаҡ быяланың өҫтәрендә был бейемәҫ тимә ялан аяҡ…»). Шул уҡ ваҡытта күҙле көйө һуҡыр хөкөмөндә ҡалған сағы ла була уның, сөнки үҙе бер ҡатлы ғына булмаған шикелле, лирик героиняны сорнап алған кешеләрҙең дә фиғелдәре ҡатлы-ҡатлы («Күҙем түгел – ботаҡ тишектәре, аҡ тигәнем була бик тә йыш ҡараларҙан-ҡара, төҙ тигәнем, әҙәм көлә, – әйтһәм, – ҡып-ҡыйыш»). Бер ҡараһаң, лирик героинянының йәне, үҙенә урын таба алмай, көҙгө үкһеҙ елдәй, күккә аша; икенсе ҡарағанда иһә, ул «ҡаяларға барып ҡаҡлыға ла», «ҡанһырап ята бер талай». «Үҙендәге бәп-бәләкәй генә яраға» көсө етмәйенсә, ҡойон сығарырға ла ярата. Ваҡыты менән дыуамал да, бер ҡатлы ла. «Көҙгө елдәй, ут менән ҡауышып, юлындағын көлгә» ҡалдырырға ла

мөмкин ул. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, Ф. Туғыҙбаеваның лирик героиняһы заман һулышы менән һулап, тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә берҙәй татып (әсеһе күбәйеп киткәндә ул хатта пәрәнжә кейеп тороу хәленә килеп етә), уға үҙенең мөнәсәбәтен асыҡтан-асыҡ белдереүсе шәхес булып иҫтә ҡала.

Тамара Ғәниеваның лирик героиняһы ла үҙенең характеры менән Ф. Туғыҙбаеванығынан алыҫ тормай һымаҡ. (Һәр хәлдә, «Илгә һүҙем» тигән шәлкемгә ингән шиғырҙарҙы уҡығанда шулай тойола.) «Бәп-бәләкәй генә буйлы» булһа ла, ул, кәрәк икән – яугир ҡатын, кәрәк икән – йөк аты булырға, кәрәк икән – тойғо-хискә тулырға әҙер; күк ҡөҙрәтен дә, халыҡ ихтыярын да, тәбиғәттән килгән күндәмлеген дә, ил алдындағы бурысын да яҡшы аңлай. «Илгә һүҙем»дә генә түгел, «Тауҙар», «Ҡола ат», «Минең ҡиблам» шиғырҙарында ла Т. Ғәниеваның лирик героиняһы ир-егеттәргә биргеһеҙ. Атҡа эйәр ҙә һала белмәгән ҡайһы берәүҙәрҙе еңелсә генә битәрләп тә ала. Дыуамалланып китеп, йәшәүҙең ҡалып-тәртәләрен дә тибеп һындырмаҫ тимә. Был кеше өсөн хатта тарафтар ҙа ғәҙәттәгесә дүртәү генә түгел – бишәү. Ләкин героиня ни ҡәҙәр генә ҡаты ҡуллы, йор һүҙле, ир-аттарса ҡырыҫ холоҡло булып күренергә тырышмаһын, асылда иһә ул барыбер йомшаҡ күңелле, хистәргә бай, хыялдарға бирелеүсән ҡатын-ҡыҙ. «Төн ҡуйыны», «Йәзит егет», «Сәхнәләрҙән төшкәс», «Бесәй», «Ышандыңмы инде?», «Ҡоштар туптарына ҡул болғаным…», «Атыңды һин туғар», «Дауыл мәллә ул һин?», «Һыйыналар һалам эҫкертенә…», «Доға» шиғырҙары нәҡ ана шул турала һөйләй. Әйтәйек, ул «Бөгөн төндә көт тип шыбырлаған берәүҙең мин ҡурҡам килеренән, килмәҫенән ҡурҡам бигерәк» тип, бер аҙ ҡылансыҡланып та алырға мөмкин; эсендә бисәлеге тулағанын да йәшермәй һәм ат туғарған иргә икмәк һалған саҡтарын һағынып хәтерләй; яңғыҙ башына күңелһеҙ булып киткәндә, Ваучер исемле бесәйе менән һөйләшеп, йән тыныслығы таба; юғалтҡандарҙың кире ҡайтмауына төшөнгәс, яйлап ҡына зиңкеүҙәрҙән айныға. Ысынлап та, Т. Ғәниеваның лирик героиняһы бик алсаҡ кеше. Халыҡ әйтмешләй, эсендәге – тышында. Уҡыусынан йәшергән бер генә сере лә юҡ уның. Был иһә шәлкемгә тупланған әҫәрҙәрҙең тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттыра: шатландырырға ла, борсолдорорға ла, бәхәсләштерергә лә мөмкин улар. Тимәк, шағирә теләгенә ирешкән.

Үҙған йыл Динә Талхина менән Гүзәл Ғәлиевалар ҙа «Ағиҙел»де иғтибарһыҙ ҡалдырманы – «Һөйөүемә ҡабат юл алам…» һәм «Хал-

ҡыма мәҙхиә» тигән шәлкемдәр менән сығыш яһаны. Дөрөҫ, көнүҙәк мәсьәләләр әллә ни ҙур сағылыш тапмаған был шәлкемдәрҙә. Динә Талхинаның лирик героиняһы, мәҫәлән, «ҡоттар китеп торған», «йәмдәр китеп торған», «йәндең йәмен юйған заманала» һөйөү хистәренә сумып, мөхәббәт диңгеҙендә йөҙөүҙе хәйерлерәк күрә, шикелле. Халыҡ йырына тартым «Ҡар биҙәге»нең героиняһы ла, «тормош усында» балҡыған «ҡар биҙәге» генә кеүек ғүмерҙе «ваҡыттарҙан, дауылдарҙан» ҡурсыу әмәлдәрен юллап ҡараһа ла, «Ирем миңә йәр булмаһа…», «Ҡара күҙҙәр», «Икебеҙгә бер зәңгәр күк» шиғырҙарында үҙенең булмышын барыбер һөйөү стихияһында эҙләүен дауам итә. Әгәр шәлкемгә ингән әҫәрҙәр араһында конкурс үткәрелһә, беренсе урынды һис бер тартынмайынса «Саған япрағы»на бирер инем. Әлеге лә баяғы шул йыр ҡалыбынараҡ һалып яҙылған һәм Назар Нәжмиҙең «Өфө йүкәләре» тибындағыраҡ был шиғыр – иң уңышлыларҙан, минеңсә. Формаһы менән дә, йөкмәткеһе менән дә. Ваҡыты еткәс, ул йыр булып та, хрестоматияларға ла инеп китмәҫ тимә.

Гүзәл Ғәлиеваны ла заман мәшәҡәттәре менән берҙән-бер шиғыры – бөтә шәлкемгә исем биргән «Халҡыма мәҙхиә»һе генә бәйләй тип әйтергә мөмкин. Әҫәрҙең үҙәгендә үҙ яҙмышын дөрөҫ хәл иткән халыҡ образы торһа ла, нимәһе менәндер ул XVIII быуаттың ахырында – XIX быуаттың баштарында батша тәхетенә яҡын торған ҡайһы бер рус шағирҙарының таныш юлдарын иҫкә төшөрөп ҡуя. «Халҡыма мәҙхиә»ләге фекерҙәрҙе берәй публицистик мәҡәләлә әйтеп биреү, бәлки, отошлораҡ та булыр ине. Ә бына «Ҡайтып инер кеүек», «Инәйем Зөмәрә рухына», «Зәңгел һыуыҡтарҙан, әсе елдән…» кеүектәргә һүҙ тейҙерерлек түгел – шағирәнең йөрәген ярып сыҡҡан әҫәрҙәрҙер улар. Был шәлкемдә тағы бер төркөм шиғырҙар бар – мөхәббәт темаһына арналғаны. Шулар араһынан «Минме икән хөкөм ителгәнмен…» менән «Эй Хоҙайым! Һөйөү бирә күрмә…»ләрҙе мөхәббәт лирикаһының аҫыл ташына тороpлоҡ тиер инем, әгәр шундай сағыштырыу урынлы булһа.

«Ағиҙел»дең шифриәтен даими күҙәтеп һәм уҡып барыусылар иғтибарынан тағы ла бер үҙенсәлекле хәл ситтә ҡалмағандыр, моғайын. Һүҙ – Әбүс (Сабит Суфиянов), Нур Хәбиров һәм Әхмәҙиә Шәриповтар хаҡында. Өс исем, өс төрлө ижади яҙмыш. Әбүс менән беҙҙең күптәребеҙ тәү тапҡыр осрашалыр, сөнки ул «тыйылған»дар иҫәбендә йөрөтөлгән. (Уның тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәр

бирең, бер шәлкем шиғырҙарын тәҡдим иткән Тамара Ғәниеваға рәхмәт әйтәһе генә ҡала.) «Килен оҙатҡандай» ҡарап ҡалған ағастар! «Ҡуйы болот булып рельстәргә» ятҡан уй ташҡыны! «Тормош һыуы»нда ашалған «ғүмер ташы»! Ошондай юлдарҙы уҡыйһың да, уларҙың шағир үҙе иҫән сағында донъя күрмәүенә үкенеп ҡуяһың. Нур Хәбировтың ижади яҙмышы, бәхеткә күрә, Әбүстекенә оҡшаш түгел. Тик ни эшләптер ул да илленсе йылдарҙың икенсе яртыһында матбуғат биттәрендә күренгеләне лә, артабан юғалып ҡуйҙы. Әле бына уның «Йөрәгем», «Тотҡон зары», «Яңғыҙ күгәрсен», «Ҡайын төптәренә барып ятам…» («Һарыларға һабышҡан кеүек мин дә, көҙҙәр етһә, шундай моңаям; яҙҙар етһә, шатлығымдан иреп, хистәремдән илереп, йәш ҡояm!») тигән шиғырҙарын уҡып сыҡтым да, тетрәп киттем: әгәр ошо оҙайлы ғүмер дауамында шағир ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ижад өлкәһендә һүлпәнлек күрһәтеп, илке-һалҡы ғына эшләгән булһа, тәбиғәт биргән һәләткә ғәфү ителмәҫлек битарафлыҡ күрһәтелгән. Ниһайәт, Ә. Шәрипов. Колхозсы, мейессе, балта оҫтаһы, ташсы, склад мөдире. Махсус әҙәби әҙерлеге булмаһа ла, халыҡ ижады менән рухланып, унан һут алып йәшәүе һөҙөмтәһендә ҡайһылай матур ҙа, аҡыллы ла шиғырҙар яҙған! («Өндәмәйем һис дауға, тик һаҡ булайыҡ, тимен, эләкмәҫ борон ауға».)

Факиһа Туғыҙбаеваның «Тәүбә»һенән башҡа уҙған йыл «Ағизел» тағы өс поэма баҫтырып сығарҙы: Риф Тойғондоҡ «Ҡәнифә юлы»н, Сулпан Иманғоловтың «Күңел ҡәғбәһе»н, Рәдиф Тимершиндың «Ғаләм һәм Әҙәм»ен. Поэмаларҙың өсөһө лә заман рухы менән һуғарылған. Тәү ҡарамаҡҡа улар йөкмәткеләре менән бер-береһенән бик алыҫ торған һымаҡ күренһә лә, бөтәһен дә бер тынала уҡып сыҡһаң, алыҫлыҡҡа ҡарағанда яҡынлыҡты, уртаҡлыҡты күберәк тояһың. Дөйөмләштереберәк әйткәндә, әҫәрҙәрҙең өсөһөндә лә һүҙ әҙәм балаһының, яҡты донъяға килгәнлегенә шатланып, шул донъяны үҙе теләгәнсә матур итеп ҡороп, уның бөтә гүзәллектәренән наҙ алып, күркәмлектәренән йәм табып йәшәйһе урынға, әле һаман булһа бер-береһен ҡыйырһытыуы, Ергә һыйыша алмауы хаҡында бара. Әлбиттә, донъя күләмендәге әһәмиәткә эйә булған был мәсьәләгә һәр автор үҙ юғарылығынан ҡараш ташлай, уны үҙенсә яҡтырта. Риф Тойғон, әйтәйек, ырыу йолаларынан, халыҡ риүәйәттәренән оҫта файҙаланып, элек кешене сит ерҙәрҙән тыуған төйәгенә магнит һымаҡ тартып ҡайтара торған юлдың бөгөн килеп инһә сит

тарафтарҙан тыуған яҡтарына ҡыуылып ҡайтыусылар юлына әүерелеүен сағыу буяуҙар, хәтерҙә ҡалырлыҡ деталдәр ярҙамында күрһәтеп биреүгә ирешкән. Сулпан Иманғоловтың да әйтер төп һүҙе ошо тирәлә сыуала. Дөрөҫ, уның геройы бик күп өҫтәмә һорауҙар ҙа тыуҙыра. Әгәр донъялар буталып китмәгән булһа, ул үҙен нисегерәк тотор ине икән? «Әсе яҙмыштарын ҡарғай-ҡарғай», күҙ йәштәрен түгер ине микән? «Донъя биргән әсе һабаҡты» иҫләп, гөнаһтары өсөн ғәфү үтенер инеме икән? Бына шуға ла авторҙың үҙ геройын, байлыҡҡа ҡыҙығып, ата-баба илен сит ергә алыштырғаны һәм ғүмерен кеше ҡояшына ҡыҙынып үткәргәне өсөн ҡаты шелтәләүе һис тә осраҡлы түгел һымаҡ. Башыбыҙға бәлә-ҡаза килеп төшкәс кенә, ер-һыуыбыҙҙың, тыуған төйәгебеҙҙең ҡәҙерен белә башлайбыҙ түгелме? Ошондайыраҡ уй-фекерҙәр ҙә уятып ҡуя С. Иманғолов поэмаһы. Тик һорауҙар ни ҡәҙәр генә күп тә, төрлө лә булмаһын, «Ҡәнифә юлы»нда яңғыраған ҡайһы бер мотивтарҙың «Күңел ҡәғбәһе»нә күсеүен шәйләмәй мөмкин түгел.

Шуныһы ҡыҙыҡлы: ошо ике поэманы уҡығанда тыуған һорауҙар Рәдиф Тимершиндың лирик геройына ла тынғы бирмәй, шикелле. Айырма тик шунда:«Ҡәнифә юлы» менән «Күңел ҡәғбәһе» тормош материалына таянып яҙылған булһа, «Ғаләм һәм Әҙәм»дең авторы иһә фантастика жанрына хас алымдарға мөрәжәғәт иткән һәм, йыһанға күтәрелеп, Ерҙәгеләрҙе борсоған мәсьәләләргә шаҡтай киңерәк ҡараш ташлаған, ундағыларҙы аңдарына килергә, ваҡ-төйәк ығы-зығыларҙан арынырға, донъя мәшәҡәттәренән юғарыраҡ торорға, киңерәк күңелле булырға саҡырған. Еңелсә йылмайыу, юмор сатҡылары менән һуғарылған был әҫәрҙең лирик геройы, Ғаләм менән Әҙәм араһында үҙенсә бер элемтә урынлаштырырға, унда ниндәйҙер йәнәшәлек табырға тырышып, Йыһан киңлектәрендә осоп йөрөһә лә, уй-фекерҙәре, ҡылыҡ-холҡо менән ул барыбер Ер кешеһе булып ҡала, Ерҙә Именлек, Ғәҙеллек хөкөм итеүен теләй һәм аҙаҡ реаль тормошҡа кире әйләнеп ҡайта. Шулай итеп, поэмаларҙың өсөһө лә бик ваҡытлы яңғырай, һәм улар хәҙерге заман уҡыусыһының донъяға ҡарашын киңәйтеүҙә, уның рухи байлығын арттырыуҙа үҙҙәренең тейешле ролен уйнар тип ышаныс менән әйтергә мөмкин.

Нигәйәт, һуңғы һүҙ – тағы ла «Елкән» хаҡында. Тыуып килеүсе йәш журнал, әсәһе «Ағиҙел» шикелле, шиғриәткә ҙур урын бирмәксе тип әйткәйнек инде. Тәүге аҙымдарын яһаусы журнал эсендәге журналдың поэтик йөҙөн билдәләргә, унда баҫылған әҫәрҙәр

тураһында ауыҙ тултырып һөйләргә иртәрәктер әле. Быға күпмелер ваҡыт кәрәк. Һәм ул, иртәме, һуңмы, килер. Бөгөн иһә шуны фараз итергә мөмкин: әгәр «Елкән» үҙ аллы баҫма булып китә алһа, киләсәктә уның йәш көстәр сығанағына әүерелеренә һәм «Ағиҙел»де даими рәүештә талантлы шағирҙар менән тәьмин итеп, тулыландырып торорона шик юҡ. Һәр хәлдә, журнал эсендәге журналдың узған йылғы дүрт һанында донъя күргән шиғырҙар шулай уйларға нигеҙ бирә. Бында мин иң беренсе сиратта Флүзә Мырҙабаеваның «Мәшәкәттәр һис бөтәһе түгел…», «Һуңлама», Камил Фазлыйҙың «Хәтер», Зәйтүнә Насибуллинаның «Баҫылайыҡ, ямғыр», «Әгәр…», Фәнил Күзбәковтың «Өмөт», Йәҙгәр Вилдановтың «Еңгәләр», «Даға», «Малайҙар», Салауат Әбүзәрҙең «Үҙемә һүҙ», «Уйын», Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның «Эсемдәге – тышымда…», Әхмәзин Әфтәхтең «Гөнаһ», «Йүгермәнем», Земфира Муллағәлиеваның «Ат көтөүсе малайға», «Әгәр беҙ бергә булһаҡ…», «Үтеп китмә», «Һандуғастарға ялынма» кеүегерәк шиғырҙарын күҙ уңында тотам. Уларҙың авторҙары, минеңсә, өйрәнсеклек осорон үтеп, инде тулы мәғәнәһе менән үҙ аллы ижад юлына баҫҡан шәхестәр. Хәҙер иһә йәнеңде лә, тәнеңде лә йәлләмәйенсә, бар көсөңә эшләйһе генә ҡала. Уларға ошо мауыҡтырғыс та, һикәлтәле лә юлда уңыштар теләйек.

Бына «Ағиҙел» журналының 1994 йылғы шифриәтен барлап та сыҡтыҡ. Ҡыҫҡаса был күҙәтеүҙәр башҡорт поэзияһының иҫ киткес ҡатмарлы заманда ла юғалып ҡалмауын, бөгөнгө ҡаршылыҡлы ысынбарлыҡты эстетик үҙләштереүҙә шағирҙарыбыҙҙың актив ҡатнашыуын раҫлай торғандыр тип уйлайым. Ысынлап та, бер йыл эсендә генә лә күпме әҫәр тыуған һәм бер журнал биттәрендә генә лә уларҙың күпмеһе донъя күргән! Ваҡыт, әлбиттә, үзенекен итер: иләр, елпер, һайлар, еңелерәктәре елгә осор, тосораҡтары йолпос төбөндә, иләк өҫтөндә ҡалыр. Әммә был әҫәрҙәрҙе ниндәй генә киләсәк көтмәһен, уларҙың бөтәһе лә – беҙҙең бөгөнгө булмышыбыҙ, бөгөнгө йөҙөбөҙ, бөгөнгө тын алышыбыҙ. Шуға ла көндәлек, йыллыҡ шиғриәткә генә түгел – бөтә әҙәби процесҡа иғтибарлыраҡ булһаҡ икән.

1995

ЛИРИК ПОЭЗИЯ ҠЫЛДАРЫ

(Туҡһан бишенсе йылдың поэтик йомғаҡтарына ҡарата)

Был мәҡәлә – «Шиғриәттә заман һулышы»ның дауамы. Жанры буйынса ул – был юлы ла күҙәтеү, йәғни күпмелер кимәлдә «әҙәби хужалығыбыҙ»ҙы барларға ынтылыу. Йөкмәткеһе яғынан да ҡәҙимгесә – асылда «Ағиҙел» журналының туҡһан бишенсе йылғы һандарын уҡығанда тыуған тәьҫораттарҙан тора.

Бер «Ағиҙел» журналына ғына таянып, башҡорт шиғриәтенең йыллыҡ ҡаҙаныштары, йәиһә уның кәмселектәре тураһында һүҙ йөрөтөргә мөмкин микән, тигәнерәк һорауҙың да тыуыуы ихтимал. Минеңсә, һүҙ йөрөтөргә мөмкин генә түгел, хатта ул шулай булырға тейеш. Сөнки «Ағиҙел» журналы беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең, мәҙәниәтебеҙҙең эталоны, республикабыҙҙағы иң абруйлы һәм иң өлкән баҫмаларҙың береһе. Шиғри әҫәрҙәрҙең дә, сәсмә әҫәрҙәрҙең дә, сәхнә әҫәрҙәренең дә иң яҡшылары, тамам өлгөрөп еткәндәре, юғары пробалылары ғына баҫылырға хаҡлылыр уның биттәрендә.

Ошо йәһәттән Таңһылыу Ҡарамышеваның Башҡортостан яҙыусыларының уҙған йыл апрель айында булып үткән дөйөм йыйылышындағы сығышы бик урынлы яңғыраны, шикелле. Бөгөнгө әҙәби процесс хаҡында барған фекер алышыуҙа ҡатнашып, ул үҙе етәкләгән «Шоңҡар» журналының төп бурысы – йәш таланттарҙы табып, уларҙы үҫтереү, донъяға күрһәтеү һәм, фатиха биреп, зур юлға – «Ағиҙел» кеүек олпат баҫмаларға оҙатып тороу тип билдәләгәйне. Был фекер бер кемдә лә ризаһыҙлыҡ тойғоһо уятмаҫтыр. Уны артабан дауам итеп, шундайыраҡ һорау ҙа ҡуйырға мөмкин булыр ине: йәштәргә тәғәйенләнгән журналдарға, әҙәбиәт менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән башҡа төр баҫмаларға «Ағиҙел» биттәрендә әленән-әле күҙәтеүҙәр яһап торор ваҡыт та етмәне микән? Ҡоҙаҡоҙағыйлыҡ нигеҙендә түгел, ә объектив талаптарҙан сығып урынлаштырылған бындай бәйләнеш XXI быуатҡа лайыҡ булырҙай әҙәби алмаш тәрбиәләүҙә лә, әҙәбиәтебеҙҙең, мәҙәниәтебеҙҙең бөгөнгө һәм киләсәктәге дөйөм кимәлен артабан күтәреүҙә лә ыңғай роль ғына уйнар ине.

«Ағиҙел» журналының туҡһан бишенсе йылғы шиғриәт баҫыуы, уҙғандағыһы һымаҡ, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерерлек булманы тип ышаныс менән әйтер инем. Һан яғынан да, сифат йәһәтенән дә. Ләкин был беҙҙең «әҙәби хужалығыбыҙ»ҙа, шул иҫәптән шиғриәттә лә, бөтәһе лә ал да гөл икән тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Уның шулай булмауына тәнҡитселәр генә түгел, ҡайһы саҡта шағирҙар үҙҙәре лә бошоноп ҡуя. Уҙған йыл «Ағиҙел»дә баҫылған кескәй генә бер мәҡәләһендә (дөрөҫөрәге – башлап яҙыусыға биргән фатихаһында) Факиһа Туғыҙбаева, мәҫәлән, «беҙҙең шиғриәттә уй-хистәрҙе имитациялаған әҫәрҙәр бик йыш осрай, талапсан булмаған уҡыусы уларҙы ысын шиғриәттән ҡайсаҡ айыра алмай, хатта йыр сүрәтендә лә ҡабул итә» тип борсолһа, Тамара Ғәниева республикабыҙ яҙыусыларының үрҙә телгә алып кителгән йыйылышында яһаған сығышында «бәғзе авторҙарҙың ижадында… асыҡ ишектәрҙе ҡат-ҡат ҡағыуға оҡшап тапаныу, үҙ-үҙҙәрен ҡат-ҡат ҡабатлау» күренештәренең нығына барыуына ишараланы һәм «ялған биҙәктәр ысын гәүһәрҙәрҙән айырып баһаланмай» тигәнерәк үкенесен белдерҙе.

Ике шағирәнең дә теләктәре изге, уйҙары яҡты, әйтер фекерҙәре аныҡ – улар икеһе лә ҡәләмдәштәрен шиғриәттең быуаттар дауамында яуланған һәм тәғәйенләнгән билдәләнешен һаҡларға, уның һүҙ сәнғәте булараҡ та, аҡыл сығанағы булараҡ та дөйөм кимәлен түбән төшөрмәҫкә әйҙәй.

Ысынлап та, әгәр баҙар сире (ә имитация мотлаҡ шунан килә) шиғриәткә лә күсһә, шатланырға һис тә урын юҡ. Сөнки ҡырағай баҙарҙы, аҫыл йәнлек тиреһенән күберәк аҡса сығарыу өсөн һуҙғылап та тартҡылап тегелгән ялған кәпәстәр баҫҡан шикелле, Факиһа Туғыҙбаева әйтмешләй, «уй-хистәрҙе имитациялаған әҫәрҙәр»ҙең дә ишәйеп китеү ҡурҡынысы бар. Бына шуға ла әҙәбиәткә, әҙәби ижадҡа бәйле мәсьәләләрҙе тикшереүҙә һәм хәл итеүҙә шағирҙарҙың, прозаиктарҙың, драматургтарҙың үҙҙәре лә ҡатнашыуы – һәйбәт һәм маҡтауға ла, яҡлауға ла лайыҡ күренеш. Беренсенән, улар тарафынан әйтелгән фекер күпмелер кимәлдә тәнҡиткә булышлыҡ итә, уны уяуыраҡ булырға һәм әүҙемерәк эшләргә өндәй. Икенсенән, үҙе шөғөл иткән өлкәләге етешһеҙлектәр, кәмселектәр тураһында уйланыу – ижадсыларҙың үҙ-үҙҙәренә талапсанлығын арттыра, «уй-хистәрҙе имитациялаған әҫәрҙәр» яҙыуҙан ҡурсалай, «асыҡ ишектәрҙе ҡат-ҡат ҡағыу»ҙан, үҙ-үҙеңде ҡабатлауҙан иҫкәртә, ялған биҙәктәр менән артыҡ мауыҡмайынса, гел ысын гәүһәрҙәр генә эҙләргә һәм табырға саҡыра.

Туҡһан бишенсе йыл – тарҡатылған һәм бөлдөрөлгән илебеҙ тарихында ҙур юбилей йылы булды: Бөйөк Ватан һуғышында еңеүебеҙгә теүәл ярты быуат тулды. Йөкмәткеһе менән был юбилей донъяла тиңе булмаған ваҡиғаға арналһа ла, формаһы йәһәтенән ул йылы һәм көләс байрамға әйләнеп китә алманы – үткәрелгән сараларҙан, мәйет сыҡҡан өйҙәге һымаҡ, ҡайғы һәм хәсрәт һөрөмө болоҡһорап торҙо. Көтөп алған оло юбилей, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шағирҙарыбыҙҙы ла артыҡ тулҡынландырманы, шикелле. Күрәһең, эске тетрәнеү етеңкерәмәгәндер инде. Ялҡын, әгәр ул йөрәк түренән бәреп сыҡмаһа, яһалмаға әйләнә шул – йылылыҡ та бирмәй, әллә ни дәрт тә өҫтәмәй кешегә. Тыуған илебеҙҙең, еребеҙҙең, халҡыбыҙҙың бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап алып ҡалыу өсөн дүрт йыл буйы дауам иткән, ҡоралдар бәрелешен генә түгел, бәлки, сәйәси, әхлаҡи ҡараштар алышын да поэтиклаштырған «Үлтер, улым, фашисты!», «Үлмәҫбай», «Ҡара һыуҙар», «Ҡайындар», «Йыр тураһында баллада», «Атай янында», «Ҡырҡ алтынсы һалдат» кеүек киң билдәле әҫәрҙәргә яңылары өҫтәлмәне. «Ағиҙел» журналы үҙенең май айы һанында яугир шағирҙарҙың һуғыш тураһында башлыса һуғыш йылдарында ижад иткән шиғырҙарын баҫтырыу менән мөрхәтһенергә мәжбүр булды. Яңыларҙан иһә Фәүзиә Рәхимғолованың «Һуғыш һалған эҙҙәр» исемле шәлкемен һәм Әмир Моратовтың «Йәшлек менән һөйләшеү», «Һалдат кейеме», «Һалдат медальондары», «Мысай икмәге» тигән шиғырҙарын атап китеү менән генә сикләнергә тура килә.

Әлбиттә, ошондай ҙа ҙур, хатта донъя күләмендәге әһәмиәткә эйә булған байрамдың сейле-бешле генә үтеү сәбәптәрен бер һүҙ менән генә аңлатып биреү мөмкин түгел. Ул бер яҡлы ғына мәғәнәлә аңлатылырға ла тейеш түгелдер. Данлы 9 майҙың беҙҙән алыҫлаша барыуы ла, бәлки, үҙенең ролен уйнай торғандыр. Сөнки, йылдар үткән һайын, һуғышта ҡатнашҡан кешеләрҙең дә, һуғышта ҡатнашмайынса ла уның бөтә ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә татығандарҙың да һаны кәмегәндән-кәмей бара. Тарихыбыҙҙың ҡайһы бер биттәрен яңынан яҙып маташыу ҙа үҙенең кире йоғонтоһон яһамай ҡалмайҙыр, моғайын. Ә шулай ҙа төп сәбәптәрҙең береһе – Бөйөк Ватан һуғышына бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмаған бер төркөм ҡарасҡыларҙың күҙ асып, күҙ йомған арала халҡыбыҙҙың күк хыялдарын, яҡты өмөттәрен ҡыйратып ташлауындалыр тип уйларға баҙнат итәм. Халыҡ телендәге: «Үҙен ысын мәғәнәһендә туҡ кеше хәлендә хис итеү өсөн, әҙәм балаһына бер икмәк кенә етмәй», – тигән һөйләм

үзенең иҫ киткес асыҡ сағылышын тапты был байрам көндәрендә. Тәм-томдар менән тулған магазин кәштәләре, күҙҙе ҡыҙҙырып һәм ауыҙҙың һыуын ағыҙып, һығылып торһа ла, кеше йөҙөндә шатлыҡ нурҙары балҡып китмәне. Сөнки, һый-хөрмәттән дә бигерәк, уға йән аҙығы һәм күңел тыныслығы кәрәк ине. Тирә-йүндә үлтереш, ҡан ҡойош барған саҡта, иртәгәһе көндә һине ни көткәнен дә белмәгән бер мәлдә, ҡайҙан килһен ти ул күңел тыныслығы менән рух күтәренкелеге, һәм нисек тыуһын ти ул байрам кәйефе.

Кеше күңелендәге һәм зиһенендәге ошо ҡапма-ҡаршылыҡты бигерәк тә шағир халҡы тиҙ һәм сос тотоп алыусан. Улар бит тыумыштан үҙҙәрендә тәбиғәт биргән өҫтәмә тойғо–һиҙемләү тойғоһон йөрөтә. Был тойғо Мостай Кәрим менән Муса Ғәли шиғырҙарында айырым бер нескәлек менән, һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ эске кисерештәр аша сағылып китте. (Әҙәбиәтебеҙҙең «сал сәслеләре» үҙған йылда ла «Ағиҙел»де иғтибарһыҙ ҡалдырманы – уның биттәрендә үҙҙәренең яңы әҫәрҙәре менән сығыш яһанылар, рәхмәт уларға.) Мостай Кәримдең «Бабич өнө» тигән шиғырында, мәҫәлән, ел-дауылдың да, бәлә-ҡазаның да уртаһында булған, иле өсөн ҡанына сәсәп ауған лирик герой, «нур өләшеп, ҡараңғыла ҡалған» бисараға тиңләнә икән, тимәк, ул ҡыйырһытылған – уны өмөтөнән яҙҙырғандар, күҙен быуғандар, йәнен бимазалағандар, рухына төкөргәндәр. «Һорауҙар» исемле икенсе шиғырҙа иһә лирик герой, әйтерһең дә, аптырау арбаһына ултырған: «Алда ла, артта ла, гел һорау, гел һорау; һорауҙар эсендә, тик ҡатып, мин торам», – тип ғазаплана. Ыҙаһына түҙер әмәле ҡалмағас, йөрәк түренән сыҡҡан йән әсеһен бына бындай юлдарға һалырға мәжбүр:

Таралды зиһенем,
Тығылды ауазым.
Һорауҙар бирмәгеҙ,
Юҡ минең яуабым.
Юҡ!..

Шайтанлыҡтан яҙып, әле берәүҙең дә кире фәрештәгә әйләнмәгәнлеген белһә лә, Мостай Кәримдең лирик геройы, «бәлтерәмә, рухым, бөгөлмә, бил», «ялған ауаз ғына бирмә, шартлатырһың йөрәкте» тип, үҙен-үҙе өгөтләргә лә көс таба; «… Өнөмдә лә аҡ боландар көтәм ҡара ҡарҙар яуған көндәремдә» тигән өмөтөн дә өҙмәй;

һағынған минуттарында шағир ҡәләмдәш дуҫтарын шаяртып алырға ла форсат таба һәм үҙен борсоған уй-кисерештәр менән уртаҡлашыу өсөн шифриәттең ошо формаһын да ярайһы ғына уңышлы файҙалана. Шаярыуҙарҙың Муса Ғәлигә арналғаны ифрат та заманса яңғырай кеүек. «Юлдар менән күпме бәхәсләштем, елдәр менән күпме көрәштем… Көсәнеүем булды заяға, – ғаләм үҙ көйөнә аға», – ти унда автор, ҡәләмдәше һәм замандашы образына инеп. Был шаярыуҙың тағы бер хикмәте бар: ул Муса Ғәлиҙең ошо уҡ һанда донъя күргән «Баш осомда әле йондоҙ яна…» исемле шиғырҙар шәлкеменә кереш һүҙ һымағыраҡ яңғыраған төҫлө.

Хәрәкәттә – бәрәкәт тигәндәй, Муса Ғәли ижади эҙләнеүҙәрҙән һис кенә лә туҡталып тормай – шиғриәт баҡсаһында үҙ түтәлдәрен әүәлгесә ҙур тырышлыҡ һәм инанғанлыҡ менән эшкәртеүен дауам итә. Үрҙә аталған яңы шәлкем – быға асыҡ дәлил. Шәлкем ун шиғырҙы берләштергән. Уның һәр ҡайһыһы – айырым бер донъя, уйҙар һәм фекерҙәр ҡуйырығы, кеше күңеленең ниндәй ҙә булһа мәлен сағылдырған тылсымлы көҙгө. Һәр ҡайһыһының төбөндә – тәрән мәғәнә, шиғри юлдарға төрөп бирелгән тормош фәлсәфәһе.

Юлдар оҙон, юлдар ҡалай оҙон…
Йылдар елә, ғүмер һүнә бара;
Төҫһөҙ хыял, буш өмөттәр булып,
Көндәр, айҙар ергә һеңә бара.
Ҡайҙа һуң һеҙ, ҡылған ғәмәлдәрем?
Ҡалай ҡыҫыҡ ҡалған үтер ара,
Мине алдаған сәғәт, минуттарым
Йөрәгемде талап, өтөп ала.

Был өҙөк – шәлкемде асып ебәргән «Йылдар елә» тигән шиғырҙан. Уның тәүге юлы уҡ уҡыусы күңелендә әллә күпме тойғолар уята: һағайта ла, бер аҙ шомландыра ла. Шиғырҙан һуң күп нөктәләр ҡуйылыуы ла юҡтан ғына түгел – тормош юлының, кеше ғүмеренең оҙайлы һәм ҡатмарлы, ваҡыты-ваҡыты менән хатта еләткес уй-кисерештәр бәйләнешенән тороуына бер ишара. Икенсе, дүртенсе һәм алтынсы юлдар тертләтеп, нисектер һиҫкәндереп ебәрә, ҡалғандары – уйға һала. Бындай юлдарҙы тыуҙырыу өсөн сал сәсле булыу ғына етмәй, әлбиттә (сәстәрең салланып та, еңел-елпелектән ҡотола алмайынса интегеүең бар). Бындай юлдарҙы тыуҙырыу өсөн,

олпатлыҡ, тормош тәжрибәһе менән бер ҡатарҙан, айыҡ аҡылға һәм фекерләү ҡеүәһенә эйә булыу мотлаҡтыр. Шағирмын тигән шағирға был сифаттар, бәлки, бөтә нәмәгә ҡарағанда ла мөһимерәктер ҙә әле.

«Йылдар елә»нең икенсе яртыһы ла үҙенсәлекле. Йөкмәткеһе яғынан ул үрҙә килтерелгән өҙөктөң ҡапма-ҡаршыһы һымағыраҡ яңғырай – үткән һәм ҡалған ғүмер тураһындағы һағышлы уйҙар еңелсә юмор менән алмашына: лирик герой, «бер елле ҡамсы табып», төҫһөҙ хыялға, буш өмөттәргә әйләнгән йылдарын һуҡтырып алырға, «бар ғүмерҙең ваҡ-төйәген һыпырып», йәһәннәмдән йотторорға теләй. «Тик шул мәлдә» лә ул барыбер «елдәргә ҡаршы» тормаҡсы һәм, үҙ-үҙенән ҡәнәғәт булып, «байрам ҡороп» алмаҡсы. Шулай итеп, ни бары ун алты юлдан торған ошо шиғыр үҙ ҡалыбына оло бер ғүмерҙе һыйзырған һәм ҙур тормош юлы уҙған кешенең бай эске кисерештәрен хәтерҙә ҡалырлыҡ деталдәр аша кәүҙәләндергән.

Шәлкемгә ингән башҡа шиғырҙарға ла ошондайыраҡ стиль хас. «Сәфәрем»дә, мәҫәлән, Муса Ғәли үҙен йәнә романтик рухлы, киң ҡарашлы, көр тауышлы шағир итеп күрһәтә. Көр тауыш был ораҡта һөрән һалыу тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Һөрән һалыуҙың, күкрәк киреүҙең, боғаҙ йыртыуҙың еҫе-ҡоҫо ла юҡ бында. Әҫәрҙең төп йөкмәткеһе – әлеге шул үтеп барған ғүмер хаҡында уйланыуҙар. Ләкин төшөнкөлөккә, бошоноуға һис кенә лә урын юҡ унда – уҡыусыға әйтер фекерен автор ҡабаланмайынса ғына, ябай формала һәм тыныс тонда еткерә. Һәр дүрт яғын ҡиблаға тиңләүсе «ғашиҡ йән» һымағыраҡ һүрәтләнгән лирик герой башта уҡ: «Уңды сәфәрем. Йонсотһа ла мине донъя йөгө, йыҡмай үтте елдең хәтәре», – тип киҫәтеп ҡуя ла, артабан тын күлдәрҙән, күкһел тауҙарҙан, йәшел утлы ап-аҡ шәмде хәтерләткән аҡ ҡайындарҙан, түгелә-түгелә уйнаған нәжәғәйҙәрҙән, мөғжизәләргә бай яҡты донъянан барыбер туймағанлығын белдерә. Әҫәрҙең һуңында был фекер оторо ла ҡуйыртып ебәрелә: фани донъя ни тиклем генә ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, гөнаһлы булмаһын, ул «ожмахтарҙың хатта үҙендә лә» һағындырыр әле тигәнерәк фараз ҡылына.

«Яҡтылыҡ» тигән шиғыр ҙа фани донъя, уның иланһи ҙа, шул уҡ ваҡытта зиһендәреңе етмәҫ серле лә булыуы хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған. Тик, тегеләренә ҡарағанда, бынығында һүрәтләү даирәһенә килеп ингән күренештәргә шаҡтай киңерәк ҡараш ташланған – авторҙың кисерештәре, хыялдары, беҙҙе сорнап алған мөхит менән генә сикләнмәйенсә, йыһан тарафтарына уҡ юл алған: Ерҙә тереклек

итеүҙең дә, күк ҡөҙрәтенең дә, Кеше менән Ғаләм араһындағы бәйләнештең дә асылына төшөнөргә тырыша ул. Әлбиттә, әгәр шиғырҙа һүҙ гел ошо юҫыҡта ғына барһа, ул, бәлки, берәй ғилми хеҙмәткә лә оҡшап китер ине. Ләкин шағир ундай юлға баҫмаған – образлы фекерләүҙе хуп күргән. Һис көтмәгән ерҙән ғәжәп үҙенсәлекле лә, фәһемле лә һығымта менән ослай ҙа ҡуя: баҡһаң, күк йөҙөндә һәр кемдең тик уға ғына тәғәйенләнгән, тик уны ғына һөйгән һәм уны ғына яҡлаған үҙ йондоҙо була икән дә баһа! Был һығымтаның әхлаҡи яғын да шәйләмәү мөмкин түгел: күк йөҙөндә һәр кемдең үҙ йондоҙо икән, тимәк, һәр кемдең үҙ бәхете – үҙе менән; тимәк, кеше бәхетенә ымһыныу, йәиһә уға тарһыныу, күпһенеү – алйотлоҡ менән бер.

Хатта мөхәббәт темаһына арналған «Кисер, йәнем!» тигән шиғырында ла Муса Ғәли алғы планға аҡылды, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе ҡуя. Хатта, тип, баҫым яһап әйтеүемдең сәбәбе шунда: һәр төрлө иҫәп-хисапҡа ҡоролған мөхәббәтте күҙ уңында тотоп, булһа кәрәк, Хәсән Назар үҙенең күптән түгелге бер әҫәрендә «аҡыл – һалҡын ҡанлы, бигерәк хәтәр – булһа әгәр хистәре лә аңлы» тигәнерәк фекер әйткәйне. Муса Ғәлиҙең әле һүҙ барған шиғыры иҫәп-хисапҡа ҡоролған мөхәббәт хаҡында түгел, әлбиттә. Киреһенсә, кеше тормошонда иҫ киткес ҙур һәм йыш ҡына ыңғай роль уйнай торған ошо изге хис тураһында аҡһаҡалдарға ғына хас аҡыллылыҡ менән фекер йөрөтөлә унда: лирик герой башта, һөйгән йәрен «болот елберҙәгән түбәләргә алып менә алманым», «ҡаршыбыҙға аҡ һарайҙар баҫты, ишектәрен асып керә алманым» тип үкенһә лә, ахыр сиктә ул «үҙ йәнендә ҡойоп һалған мөхәббәт һарайының» шул болоттарҙан да бейегерәк, ишектәрен асып инергә насип булмаған аҡ һарайҙарҙан да пагыраҡ икәнлеге менән хаҡлы ғорурлана. Был ғорурлыҡ рәхмәтле һәм мәрхәмәтле уҡыусыла ла шик уятмай. Байлыҡҡа, алдаҡ-йолдаҡҡа ҡоролған мөхәббәттең (хәйер, уны мөхәббәт тип атауы ла ҡыйын!) «гүзәл емештәрен» үҙ күҙҙәре менән күреп, ҡолаҡтары менән ишетеп тора ла баһа ул.

Муса Ғәлиҙең «Баш осомда әле йондоҙ яна…» исемле шәлкеме тураһында һүҙ барғанда, «Юлда уйланыу» һәм «Төп башына…» тигән шиғырҙарҙы күрмәмешкә һалышып, ситләтеп үтһәк, гөнаһ ҡылыуға тиң булыр. Көслө, үткер һәм үтемле шиғырҙар. Уларҙан заман заңы зыңлап тора. Яңғыраштары менән дә нәҡ Муса Ғәлисә – тос фекер тәрән хистәргә төрөп бирелгән. Әле исемләнгән шиғырҙарҙың береһендә тағы юл темаһы күтәрелгән. «Йылдар елә»ләге

һымаҡ, ул тағы тура мәғәнәһендә генә түгел, бәлки, символ рәүешендә лә ҡулланылған: оло юл – тормош юлын – үткән һәм шул юлда япа-яңғыҙы тороп ҡалған лирик герой уйҙарға бирелә. Шунан был уйҙар Ғаләм күләмендәге көнүҙәк мәсьәләләргә килеп ялғана. «Миллиард йылдар осҡан Ер биленә гел гонаһтармы әллә уралған?» тигән һорау борсой уны. Уға яуап таба алмағас, мәрхәмәтле тәңрегә мөрәжәғәт итеп, былай ти:

Мин һуң нимә?..
Донъя үҙе көйһөҙ,
Ул ҡоролған көскә, хәйләгә.
Ниәттәрем минең төҙөк ине,
Ҡылғандарым булды йөрәктән:
Яуҙар кистем, сараһыҙҙан кистем,
Ил-көнөмдө яҡлап үләттән.
Нимә урҙым кисә сәскәнемдән,
Селпәрәмә килгәс бөгөнөм?

Бында инде бер ниндәй ҙә аңлатма ла, анализ да кәрәкмәй торғандыр: бөтәһе лә көн кеүек асыҡ. Бынан да асығыраҡ, бынан да зәһәрерәк, йөрәгеңде ярып инерлек итеп әйтеп биреү мөмкин дә түгелдер. Юл ыңғайында шуны ла асыҡлап китеүҙең зыяны теймәҫ: зәһәр тигән һүҙ бында уҫаллыҡ, ағыуыңды сәсеп тороу мәғәнәһендә ҡулланылмай – Муса Ғәли шиғриәтенә был сифаттар бөтөнләйе менән ят күренеш; асыуы килгән саҡта ла ул аҡырыныу-баҡырыныуға күсмәй, киреһенсә, әйтер фекерен адресатҡа ла, уҡыусыға ла еткереү өсөн, ҡарап торғанда бик ғәҙәти күренгән, ә ысынында иһә ифрат урынлы, тапҡыр, тос йөкмәткеле һүҙҙәрҙе һайлап ала белә (шәлкемде ослап ҡуйған «Наҙ тоймай ҙа хәҙер йәшәй алам…» исемле шиғыр – быға һәйбәт миҫал).

Әле беҙҙең иғтибар үҙәгендә торған шиғырҙарҙың икенсеһе – «Төп башына…» тигәне – шәлкемдә тотҡан урыны менән генә түгел, ә иң мөһиме – йөкмәткеһе йәһәтенән дә «Юлда уйланыу»ҙың тураннан-тура дауамы һымаҡ ҡабул ителә. Әгәр «Юлда уйланыу»ҙа лирик герой «Нимә урҙым кисә сәскәнемдән, селпәрәмә килгәс бөгөнгөм?» тип һыҙланһа, «Төп башына…»ла ул һыҙланып ҡына ҡалмай, бәлки, үҙен борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып, асыҡтан-асыҡ һөйләшә. Шиғыр үҙенең төҙөлөшө менән дә үҙенсәлекле. Беренсе дүрт

юллыҡта автор, хәтерҙә ҡалырҙай һыҙаттар ярҙамында сығырынан сыҡҡан заманыбыҙға үҙ баһаһын бирә, шиғырҙың ҡалған өлөшөндә иһә шул баһаны образлы фекерләү ҡалыбына һала һәм халыҡ телендә киң таралған мәҡәлдән оҫта файҙаланып, көтмәгән ерҙән тағы ла бер тәрән мәғәнәле һәм үткер яңғырашлы һығымта яһап ҡуя:

О, бер минме?
Әйләнәмә баҡһам,
Кешелек үҙе ултыра төп башында.

«Юлда уйланыу» шиғырындағы «О, төшмәсе, кешем, бөгөлөп!..» тигән бер юл хәтергә һеңеп ҡалған. Ошо юлға һалынған мәғәнә Муса Ғәлиҙең «Айға ҡарап торам» исемле икенсе бер шиғырына күсеп, унда артабан үҫтереп ебәрелгән һәм башкөллө үҙ аллы өр-яңы әҫәр барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе булған тимәксемен. Һәр хәлдә, был ике шиғыр араһында, айырмаға ҡарағанда, оҡшашлыҡ һәм эске яҡынлыҡ күберәк. «Айға ҡарап торам» да уҡыусыны әллә ҡайҙан уҡ «мин дә – Муса Ғәлиҙеке» тип ҡысҡырып ҡаршы ала һымаҡ. Шул уҡ ыҡсымлыҡ, шул уҡ фекер ҡеүәһе, шул уҡ йәнле, үҙенсәлекле поэтик алымдар; иғтибарҙы йәлеп итеп торған деталдәр, уйҙар һәм хистәр берҙәмлеге, тәрән образлылыҡ, лирик герой кисерештәрен тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып, сағыштырып ҡарау һәм шул йәнәшлектән ниндәй ҙә булһа берәй ғиллә килтереп сығарыу маһирлығы – быларҙың бөтәһен дә төҫмөрләргә мөмкин «Айға ҡарап торам»да. Әйткәндәй, буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, түбәндәге миҫалды килтерәйек:

Күрсе, ул да, хас тере зат кеүек,
Бер йылмайып ала, бер уфтана;
Үҙен япҡан болот күсеп китһә,
Элеккенән дә ул яҡшы яна.
Тулған Айым, һинең был хәленде
Үҙ хәлдәрем менән мин ялғаным,
Минән дә бер күсер ул болоттар…
Әй тәбиғәт, һинең юҡ ялғаның.

Шиғырҙы ослап ҡуйған һуңғы юл текста ике ҡабат ҡулланылған. Был да юҡтан түгел – ул әҫәрҙең нигеҙ ташын тәшкил итә, ғилми тел менәнерәк әйткәндә, уның лейтмотивы кеүегерәк яңғырай: тәбиғәттә

ялғанлыҡ юҡ икән, тимәк, ул кешелек йәмғиәтендә лә булырға тейеш түгел; Айҙы япҡан болот күсеп китә икән, тимәк, йәмғиәттә барған алыштар, талаш-тартыштар һәм ығы-зығылар, тарих арбаһының тәгәрмәсенә таяҡ тығып маташҡан айырым шәхестәрҙең башбаштаҡлығы арҡаһында илдә килеп тыуған ауырлыҡтар ҙа ваҡытлы ғына күренеш булырға тейеш. Бына шуға күрә лә шағир, кисәге өмөттәр, ышаныстар, яҡты хыялдар бөгөн селпәрәмә килһә лә, кешене «яңы шартлауҙар» алдында бөгөлөп төшмәҫкә өндәй.

Донъяға ошондай оптимистик ҡараш «Яҡты элегия» тигән шиғырға ла хас. Әҫәрҙең атамаһы һағышлыраҡ яңғыраһа ла, уның лирик геройы яҡынлашып килгән яҙ тынын тоя һәм уға сабыйҙарса ҡыуана, йәне елкенә. Шул уҡ ваҡытта ул, көтөп алынған сираттағы яҙ тик «ҡара йылдың ҡара яҙы» ғына була күрмәһен тигән шөбһәһен дә белдереп ҡуя. Әммә яҙҙың барыбер яҙ булыуына, үҙенең шифаһы менән ер-илдәрҙе яңыртырына һәм йәшәртеренә ышанысы ҙур уның. Шиғыр яҡты уйҙар, ҡанатлы өмөттәр һәм изге теләктәр менән тамамлана, уҡыусыла ла шундай уҡ хистәр уята:

Ҡаршыңа сығырмын инде,
Иламай, йырламай ғына;
Йылыт әле бар донъяны,
Кил дә тик һуңламай ғына!..

Был күҙәтеүҙә Муса Ғәлиҙең яңы шиғырҙарына иғтибар күберәк бирелгән икән, ул һис тә осраҡлы түгел – шағир быға лайыҡ. Уның «Баш осомда әле йондоҙ яна…» тигән шәлкеме тураһында тағы әллә күпме һөйләргә булыр ине. Мәҫәлән, үҙенең эске төҙөлөшө йәһәтенән ул кешенең төрлө мәлдәге уй-кисерештәрен кәүҙәләндергән һәм шуларҙы бер епкә теҙгән поэмаға ла оҡшап китә. Йөкмәткеләре менән шиғырҙар бер-береһенә ылыҡып тора. Бөтә шәлкем буйлап үткән дөйөм лирик герой образы ла уларҙы бер төйөнгә уҡмаштыра һымаҡ – шиғырҙан шиғырға күсеп йөрөүсе олпат, күпте күргән, күпте белгән, күргән-белгәндәренән тәрән мәғәнәле һығымталар яһарға күнеккән ил ағаһы килеп баҫҡандай була беҙҙең күҙ алдыбыҙға. Ул – тормоштоң шаҡтай ғына ҡатмарлы хәл-ваҡиғалары хаҡында ҡайнар йөрәк һәм халҡын аҡыл менән фекер йөрөтә торған уҙаман. Муса Ғәлиҙең лирик геройы үҙенең баҫалҡылығы, тыйнаҡлығы менән дә айырылып тора: ул бер ҡасан да юҡҡа-барға күтәрелеп

бәрелмәҫ – уға эске йыйнаҡлыҡ, тотанаҡлылыҡ һәм тәбиғәттән бирелгән сабырлыҡ хас. Ошо йәһәттән «Баш осомда әле йондоҙ яна…»ның авторы ла, шулай уҡ уның лирик геройы ла, һеркәһе һыу күтәрә алмай торған, йәиһә әҙ генә маҡталғанға ла бик тиҙ үҫеп, һауаланып китеүсән һәм терһәген үҙенән алда йөрөтөргә яратыусан ҡайһы бер әһелдәргә һәйбәт өлгө булырлыҡ тип әйтке килә.

Муса Ғәлиҙе борсоған мәсьәләләргә уның ҡәләмдәштәре һәм рухташтары Тимер Йосопов, Сафуан Әлибай, Тамара Ғәниевалар ҙа битараф түгел. Улар күптән инде уҡыусы күңелен арбаған, байтаҡ китаптар сығарып өлгөргән һәм исемдәре республикабыҙ тарафтарында киң билдәле шағирҙар. Әгәр Мостай Кәрим, Назар Нәжми һәм Муса Ғәли бөгөнгө башҡорт поэзияһының өс тағаны булһа, Тимер Йосопов, Сафуан Әлибай, Тамара Ғәниевалар инһә шул тағандың ышаныслы терәктәре. Уларҙың һәр ҡайһыһы заман һулышы менән һулап, уға үҙенең мөнәсәбәтен асыҡтан-асыҡ белдереп йәшәй. Һәр ҡайһыһының үҙ тауышы, үҙ стиле, үҙ поэтик офоғо бар.

Узған йылғы «Ағиҙел» биттәрендә Тимер Йосопов рекорд ҡуйҙы тиһәк тә була – бер юлы утыҙға яҡын шиғыр баҫтырып сығарҙы ул. Был тиклем күп шиғырҙың бер юлы бер һанда баҫылыуы журнал өсөн дә, авторҙың үҙе өсөн дә, бәлки, бик отошло ла түгелдер (күп ашаһаң, бал да әскелтемләнеп китә бит). Әммә, нисек кенә булмаһын, улар араһында иғтибарҙы йәлеп итерлектәре байтаҡ ҡына.

Һүҙҙе «Күҙегеҙгә нисек ҡарайым?»дан башламаҡсымын. Ул – фашист илбаҫарҙарын тар-мар итеүҙең илле йыллығына арналған берҙән-бер әҫәр. Ҙур байрам уңайы менән яҙылһа ла, байрамса яңғыраған бер генә юл да тапмаҫһың унда – бындай ваҡиғаға бағышлап, элегерәк ижад ителгән шиғырҙарҙағы рух күтәренкелеге лә, дәртлелек тә юҡ, шатлыҡ тойғолары ла ташып бармай. Жанры буйынса ул элегияға тартым – уның авторы илебеҙ бойондороҡһоҙлоғо өсөн кисә яу сапҡан, ә бөгөн «йондоҙҙарға яурындарын терәп, ғүмер тауына артылған» ҡарт һалдаттарҙың ҡыйырһытылған яҙмышы өсөн ихлас күңелдән бошона һәм уларҙы хәүефтәрҙән аралап ҡала алмағаны өсөн үҙен үҙе битәрләй:

Донъя йолҡҡостары өсөнмө ни
Окоптарҙан ҡалҡҡан ағайҙар?..
Ағайҙарым ил тип яуға ингән,
Илгә биргән инде барлығын.

Ә йолҡҡостар йолҡа ил байлығын,
Тауыштары сыға ҡарлығып…
Беҙ ғәйепле һеҙҙең алдығыҙҙа,
Ил аға һы булған ҡыйыуҙар,
Китте инде гелән йән ҡыйыуҙар,
Булғандарын инде ҡырыуҙар.

Заман еле Тимер Йосоповтың «Шау-шыу китте инде…» исемле шиғырына ла ҡағылмай уҙмаған. Әҫәрҙең нигеҙенә халыҡ телендәге «болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоу» тигән әйтем һалынған, һәм ул беҙ йәшәгән осорҙоң асылын асып биреүҙә бик оҫта файҙаланылған. Тарих даръя һы, ти автор, ынйыларҙан ғына тормай, уның ләмдәре лә бар. Болғансыҡ һыуға оҡшаған беҙҙең дәүерҙә иһә, үткәндәрҙең ынйы һына ҡарағанда, күберәк ләме өҫкә ҡалҡа, тип бошона шағир, һәм ошо рәүешле заманыбыҙҙың сағыу образын кәүҙәләндереүгә үҙенең тос өлөшөн индерә.

«Күҙегеҙгә нисек ҡарайым?» менән «Шау-шыу китте инде…»нең авторына илдәге хәл-ваҡиғаларҙы теркәп барыусы итеп кенә ҡарау – төптө хата булыр ине. Сөнки ул ваҡиғаларға иғтибарын йүнәлтеп кенә ҡалмай, бәлки уларға үҙенең баһаһын да бирә. «Беҙгә ҡаршы кемдәр сығып…», «Арабыҙҙа йөрөй», «Миңә ҡағыла», «Шөгөр», «Ил ҡайғы һы – йөрәктә» тигән шиғырҙарҙа был үҙенсәлек күҙгә айырыуса ныҡ ташлана. Дүрт киҫәктән торған «Миңә ҡағыла» исемле шәлкемдең лирик геройы, мәҫәлән, замандарҙың ҡайғы-шатлыҡтарын да, ел-дауылдарын да, ғәйбәт-ялаларын да йөрәге аша үткәреп, «ил ҡайғы һы төшкә тиклем, үҙ ҡайғыбыҙ – төштән һуң…» тигән девиз аҫтында йәшәүсе шәхес булып хәтерҙә ҡала. Был шәхес тирә-йүндә булып торған бер генә нәмәгә лә битараф түгел: түрәләргә яраған ҡуштандарға ла, кисә түрә булып алғас, бөгөн танауын күккә сөйгән яҡын дуҫына ла, ил байлығын йолҡҡолаусыларға ла, байлыҡ тиеп, имандарын һатыусыларға ла нәфрәте беҙәй зур уның. «Бөтәһе лә миңә ҡағыла шул» тигән рефрен үҙе генә лә әҫәргә йәм һәм фекер ҡеүәһе өҫтәп тора. Ваҡыты еткәс, был һүҙҙәр шағирҙың визит карточкаһына әйләнеп китмәҫ, тимә.

Әйткәндәй, айырым юлдарҙы ҡат-ҡат ҡабатлап, уларға ниндәйҙер мәғәнә һалып, баҫым яһап әйтеү Тимер Йосоповтың яратҡан алымына әүерелеп бара. Бындай юлдар шағирҙың әҫәрҙәрендә йыш күҙгә салына. Миҫал өсөн тағы бер шиғырға туҡталырға мөмкин – «Киткәндәрҙең

урыны» тип атала ул. Нимәһе менәндер был шиғыр бөйөк рус шағиры Некрасовтың «Түр яҡ ишек яныңдағы уйланыуҙар»ын хәтерләткәндәй була. Тәү ҡарамаҡҡа, һүҙ башлыса авторҙың ауылдаштары, халыҡ теле менән әйткәндә, йәшен – йәшәгән, ашын – ашаған ауыл ҡарттары хаҡында ғына барған һымаҡ. Ә бына «Түрәләрҙең ишек арттары», «Түрәләрҙең ишек төбөндә», «Ҙур түрәнең ишек төбөндә» тигән рефрендарға ҡолаҡ һалып, уларҙың мәғәнәһен аңларға тырышһаҡ, автор әйтергә теләгән фекерҙең шаҡтай тәрәндәрәк ятҡанлығына төшөнәһең. Тимәк, рефрен был юлы ла юҡтан ғына файҙаланылмаған – ул авторҙың тел төбөн шәйләргә, ғилми телгә күсһәк, әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен аңларға булышлыҡ итә.

Тимер Йосопов шиғриәтенең күҙгә бәрелеп торған тағы бер үҙенсәлегенә туҡталып китмәй ярамаҫтыр. Минеңсә, уның шиғырҙарында лирик ағым үҙен ныҡ һиҙҙерә. Әлбиттә, ысын мәғәнәһендә сәнғәттең юғары кимәленә дәғүә иткән бер генә шиғри әҫәр ҙә лирик башланғысһыҙ була алмайҙыр. Әммә Тимер Йосопов әҫәрҙәрендә ул – лирик башланғыс ҡына түгел, ә ҙур бер ағым тиер инем. Был сифат уның мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарына ла, туранантура уға ҡағылмағандарына ла хас (йыш ҡына лирик башланғысты, лирик ағымды мөхәббәт темаһы менән генә сикләүсәндәр бит).

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ тигәндәй, әлеге фекер буш ҡыуыҡҡа оҡшап ҡалмаһын өсөн, «Йөрәккәйем китә өҙөлөп» исемле шиғырға күҙ һалайыҡ. Ҡарамаҡҡа, был шиғыр – пейзаж лирикаһының ғәҙәти бер өлгөһө. Авторҙың иғтибар үҙәгендә – йыл миҙгелдәренең иң матур, иң күркәм, бөтә тереклеккә йән һәм йәм өҫтәй торған мәле – яҙ. Тәбиғәткә генә түгел, кеше күңеленә лә яңырыу, көс һәм ҡөҙрәт алып килә торған ошо илаһи мәлде (Муса Ғәлиҙең үрҙә телгә алып кителгән «Яҙғы элегия»һын да хәтергә төшөрәйек) шағир ҙур оҫталыҡ менән тасуирлағаң: «йырындарҙан ҡар һыуҙары аға һыҙылып»; «тамсыларҙың билкәйҙәре китә һығылып…»; «тып-тып итеп ергә баҫҡан тамсының ялтлап китә тояғы»; «алатауҙар болоттарҙан ҡала һөҙөлөп»; «күҙҙән йәш тамғандай, ҡыйыҡтарҙан күк тамсылар төшә өҙөлөп»; тыуған ергә «ҡоштар ҡайта, осар ҡоштар ҡайта теҙелеп». Буяуҙар шул тиклем ҡуйы, сағыштырыуҙар, метафоралар шул тиклем йәнле бында, әйтерһең дә, беҙҙең алда әҙәби әҫәр түгел, ә тәбиғәттә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә бер туҡтауһыҙ дауам иткән хәрәкәтте, ундағы иҫ китмәле нәфислекте үтә лә бер нескәлек һәм һиҙгерлек менән кәүҙәләндергән сағыу һүрәт эленеп тора. «Яҙҙар етте инде» тип яй ғына башланған шиғыр,

тора-бара лирик геройҙың «тамсы тама, әй ғүмерҙәр уҙа, йөрәккәйем китә өҙөлөп» тигән тәрән көрһөнөүе менән тамамланып ҡуя.

Йә булмаһа, «Осло энәләре менән…»гә иғтибар итәйек. Ул тотошлай тиерлек метафораларға ҡоролған. Осло энәле ел, мәҫәлән, көмөш ебен йәлләмәйенсә лирик геройҙың яраһын теккән, дауыл иһә уны ямаған. Ләкин осло энәле ел дә, уның көмөш ебе лә, тегелгән-ямалған йән йәрәхәттәре лә шиғырҙың лирик асылын юя алмаған: ғүмер араларын тешен ҡыҫып үтеүсе лирик герой, «тик бер кем асып ҡарамай йөрәгем яраларын» тип, үҙенең эске кисерештәре, хәл-әхүәлдәре менән уртаҡлашырға ла яйын таба.

«Бураҙнаға баҫһам…», «Мең йәшәһен инде», «Хат ебәрҙем» тигән шиғырҙарҙа лирик геройҙың образ-һыны артабан да сағыулана, ҡабарынҡылана төшә кеүек. Иҙеүен елгә ҡаршы асып, юҡ-барға бик иҫе китмәйенсә алға атлауын белгән сабыр холоҡло, түземле бер уҙаман һымағыраҡ күҙ алдына баҫа Тимер Йосоповтың лирик геройы. Донъяның ялғанын да, яманын да үҙ итмәй ул. Белдегенә барып, ҡасандыр хата ҡылып ташлағанына ла үкенеп ала. Һағыштары баштарынан ашһа ла, бер ваҡытта ла кеше бәхетенә аяҡ салмай, кеше шатлығына ымһынмай, киреһенсә, уларға ҡыуана ғына. Дуҫ-иштәре араһында үҙен яңғыҙ тойһа ла, күктәге ай-ҡояшҡа ҡарап йыуана. «Ваҡыт ситлегенән ысҡынып», бөгөнгөнән киләсәккә атлау хыялы ла ят түгел уға. «Әй кешеләр, татыу булығыҙ!» тигән аманатын хат итеп яҙа ла, уны уҡҡа ҡаҙап, күкһел ғаләмдәргә осора:

Хатым елә,
Киңлектәрҙе телә,
Сәләм китә беҙҙең осорҙан.
Йыһан даръяһында аҡ болоттар
Йылтлап китә,
Гүйә, ҡамалар…

Уғы менән бергә киләсәккә елгән хатын күҙәтеп тороусы лирик герой, «Балҡып-балҡып артта ҡала бара ваҡыт менән бергә арауыҡ…» тип, бер аҙ яманһыулап та ҡуя. Шағир был әҫәрендә лә айырым юлдарҙы, хатта строфаларҙы ла ҡат-ҡат ҡабатлау алымын оҫта ҡулланып, фекер тослоғона ирешә.

«Сиған ҡыҙы», «Күләгәләр төшмәһен, тим…», «Күпһенмәгеҙ шатлыҡты», «Әсе йәшем ағып китә», «Өшөйөм инде, туңамын

инде…», «Томанда» тигән шиғырҙар ҙа тәрән лиризм менән һуғарылған әҫәрҙәр. Уларҙың һәр ҡайһыһында лирик геройҙың уй-хистәре донъя хәлдәре менән тығыҙ бәйләнештә сағылдырылған. Хатта «Сиған ҡыҙы»нда ла, ҡарап тороуға ул саф мөхәббәт темаһына арналған һымаҡ тойолһа ла, кинәйәле фекерҙе төҫмөрләмәй мөмкин түгел: ҡыҙҙың һылыулығына таң ҡалып, уның арбауына ҡаршы торорлоҡ көс таба алмаған лирик герой, башта, «алһа – китеп барыр инем, ултырып арбаһына» тип шаяртҡан була ла, һуңынан, әҫәрҙең ахырында, ул миҙгелдәр көҙөндә хыялдары аҙашҡан бер бахыр, фанилыҡ аръяғын күҙ уңында тотоп, «китһәм – киттем, инде үҙем – сиған көнөндә» тигән йән өшөткөс һәм йөрәк әрнеткес хәбәр һала.

Үрҙә һанап кителгән шиғырҙарҙың ҡалғандары тураһында ла оҙон-оҙағай һөйләргә булыр ине. Ләкин, күҙәтеү жанрының мөмкинлектәре сикле икәнен иҫтә тотоп, Тимер Йосопов хаҡындағы һүҙҙе йомғаҡлар алдынан «Күләгәләр төшмәһен, тим…» менән «Өшөйөм инде, туңамын инде…» тигәндәренә генә туҡталып уҙайыҡ. Үҙҙәренең аһаңе менән улар икеһе лә «Сиған ҡыҙы»на яҡын. «Күләгәләр төшмәһен, тим…»дә, мәҫәлән, «аҡыллылар эргәһендә аҡылдары һайыҡҡан», «үтә тупаҫтар янында теле сарланған», «шыр ахмаҡтар араһында бер аҙ еңеләйгән» лирик герой, «хәйләһеҙҙе, бер ҡатлыны, айыҡты эҙләп», эшсе дуҫтары янына китеп бара. «Өшөйөм инде, туңамын инде…»лә иһә, урамдағы һыуыҡ ҡыштың эт кеүек шыңшыған еле менән һалҡын бүлмәлә геүләп ултырған һыуытҡыс араһында йәнәшәлек үткәреп, «был донъя әллә оло һыуытҡыс…»мы тигән риторик һорау ҡуя ул. Был әҫәрҙә лә сағыу буяуҙар менән биҙәлгән метафоралар күп ҡулланылған. Әйтәйек, лирик герой үҙен һалҡын ғаләмгә төрөлгәндәй тоя; һап-һалҡын бүлмәлә уның тыны йүгерә; ел шыңшыған эт кеүек йүткерә; «дөрөлдәп яна буран усағы»; «елдең бысҡыһы боҙ быса». Һәм, ошо рәүешле буяуҙарҙы юлдан юлға ҡуйырта барып, шағир лирик геройының хәлен, уның эске донъяһын, уй-кисерештәрен ышандырырлыҡ итеп асып биреүгә ирешкән.

Сафуан Әлибай – башҡорт шиғриәтенең классик традицияларына тоғро ҡалып, уны артабан үҫтереүгә һәр ваҡыт үҙенең өлөшөн индереп тороусы шағирҙарҙың береһе. Узған йылғы «Ағизел»дең шиғриәт ҡапҡаларын асып ебәреүсе лә ул булды – журналдың беренсе һанында уҡ «Күҙ алдында ваҡыт ағып бара…» тигән баш аҫтында ундан артыҡ өр-яңы шиғыр баҫтырҙы.

Традицияларға тоғролоҡ С. Әлибай шиғырҙарының формаһында ғына сағылып ҡалмай, бәлки, йыш ҡына уларҙың йөкмәткеһенә лә үтеп инә. Миҫал өсөн уның «Ағиҙелкәй», «Сыңрау торна», «Салауат йорто», «Һабантуй», «Аҡ бөркөт – сал яурын» исемле шиғырҙарын атап китергә мөмкин. Эш бында бәғзе шиғырҙарға эпиграф итеп халыҡ йырынан өҙөк килтерелеүҙә, бәғзеләренең иһә тотошлай халыҡ көйөнә яҙылыуында ғына түгел. Иң мөһиме – уларҙың туҡымаһында, һулышында, тын алышында. Ҡайһы берәүҙәргә бындай раҫлау мәҙәгерәк тә тойолор, бәлки. Әммә хәҡиҡәттән ҡасып булмай – һәр шиғыр, ысынлап та, үҙенсә һулай, үҙенсә тын ала. «Ағиҙелкәй» шиғырында, мәҫәлән, ике һулыштың бергә ҡушылыуын һиҙемләргә мөмкин. Бер яҡтан, унда халыҡтың ауыҙ-тел ижады эҙҙәре ярылып ятһа, икенсе яҡтан, ул яҙма әҙәбиәт традицияларына барып тоташа. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, Сафуан Әлибайҙың был шиғыры Рәшит Ниғмәтиҙең киң билдәле «Йәмле Ағиҙел буйҙары» тигән поэмаһын иҫкә төшөрә: үҙ ғүмерендә күп болаларҙың, ғәҙелһеҙлектәрҙең, рәнйештәрҙең шаһиты булған Ағиҙелкәйебеҙгә уғата ла дәһшәтлерәк, уғата ла ҡурҡынысыраҡ ҡан ҡойоштарҙы күргә тура килмәһен тигән киҫәтеү яһала.

Ошо урында кескәй генә лирик сигенеү яһап китеүҙе урынлы һанайым. Мең туғыҙ йөҙ туҡһан беренсе йылдың август ваҡиғаларынан һуң байтаҡ кешеләр эйфорияға бирелеп алды. Киң күләм матбуғат биттәрендә лә сағылмай ҡалманы ул. Гректарҙан килеп ингән был һүҙҙе беҙҙеңсәгә саманы онотоп, йүләр кеше һымаҡ, юҡҡа барға ла гел шатлыҡ кәйефе кисереп йәшәү тип тәржемә итергә мөмкин. Кемдәрҙеңдер йәшерен рәүештә алдан уйлап, төҙөп, һыҙып һәм ҡороп ҡуйған күрһәтмәләре буйынса Советтарҙы, халыҡ һәм дәүләт байлығының нигеҙен тәшкил иткән завод-фабрикаларҙы, колхоз-совхоздарҙы ҡолатып, кибет кәштәләрен алыҫ ерҙәрҙән килтерелгән сникерстар, банандар менән тултырып ташланыҡ та, маймылдар һымаҡ, шуларға ҡарап һоҡланабыҙ. Сникерстар һатылмайынса оҙаҡ ята, кибеп ҡорғаҡһый, ә банандар ҡарағусҡыллана. Уларҙы алдап-йолдап, тегенән-бынан аҡса сәлдергәндәр генә ашай. Намыҫлы хеҙмәтеңә тейгән эш хаҡына алып ҡара һин уларҙы! Унан һуң банан ашап ҡына тамаҡ туямы?

Эйфория сире беҙҙең рухи донъябыҙҙы ла ситләтеп үтмәне. Ошо айҡанлы Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре кандидаты Рауил Бикбаевтың әсенеп әйткән һүҙҙәрен килтермәйсә бул-

дыра алмайым. «Әле ҡасан ғына, – тип яҙҙы ул “Аралашыу бәхете” исемле күптән түгелге бер мәҡәләһендә, – “Революцияға тиклем күпме милләттәр тома наҙан булған, уларҙың күҙе Октябрҙән һуң ғына асылды”,– тип тылҡып килделәр. Хәҙер иһә: “Революциянан һуңғы ете тиҫтә йыл эсендә илдә тик боҙоҡлоҡ, тик ҡыйралыш ҡына булған”, – тип йәштәрҙең мейеһен ағыулайҙар, ошондай вәсүәсә байтаҡ ҡына ололарҙың да күҙен томалай, рухи нигеҙен ҡаҡшата. Был һүҙҙәрҙе берәүҙәр башҡаларға бер ҡатлы эйәреп, шуларҙың ҡотҡоһона бирелеп ҡабатлай. Икенселәр һис бер нигеҙе булмаған ул ялған уйҙырманы махсус рәүештә, мәкерле рәүештә тарата, кешеләрҙе, милләттәрҙе тарҡатыу, шәхестең ышанысын һүндереү, рухын һындырыу, уларҙы өмөтһөҙ шайтанға әйләндереү өсөн ағыулы ҡорал итеп файҙалана». («Ағизел» журналы, 1995 йыл, 12-се һаң, 143-се бит.)

Был фекер менән килешмәү мөмкин түгел. Әлбиттә, Рауил Бикбаевты ла, уның һүҙҙәрен ҡабатлаусыны ла ностальгияла ғәйепләүселәр булыуы ихтимал. Ләкин әлеге осраҡта һүҙ ностальгия тураһында түгел бит – тарихи дөрөҫлөк хаҡында. Совет осоронда ебәрелгән хаталар күпме генә булмаһын, революцияға тиклем колония хөкөмөндә тереклек иткән әҙ һанлы халыҡтарға социализм ҡоролошо алып килгән милли һәм рухи бойондороҡһоҙлоҡ хаҡында онотоп ташларға ярамайҙыр. Әгәр быға ҡәҙәр айырым шәхестең ил һәм халыҡ яҙмышында уйнаған ролен һәм тотҡан урынын тарихи материализм буйынса яҙылған уҡыу әсбабтары аша ғына белһәк, һуңғы ун-ун биш йыл эсендә беҙ уны үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек. Һинд океаны ярында итектәрен йыуырға хыялланған бер йүләр тибындағы, йәиһә Ибраһим Абдуллиндың «Тау артынан тау» тип аталған роман-эссеһындағы Миңлемихаил һымағыраҡ, йәиһә Тимер Йосопов шиғырындағы кишер танаулы берәй зат тағы түр башына менеп ултырһа, барлы-юҡлы азатлығыңдан да ҡолаҡ ҡағып, колонизаторҙар изеүе аҫтына яңынан әйләнеп ҡайтмам тимә.

Сөнки илдә реформа үткәрәбеҙ тип башланған хәрәкәттең реставрацияға әйләнеүе хәҙер көн кеүек асыҡ, ә капитализм – ул социализм түгел. Шәриф Бикҡол һүҙҙәрен бер аҙ үҙгәртеберәк ҡулланһаҡ, «һарыҡ тиреһенә ябынып, ил ҡыҙырған өйөр-өйөр бүре» өсөн, «иблис доғаһына табынып, яңы битлек кейгән һатлыҡ йәндәр» өсөн һинең милли һәм рухи бойондороҡһоҙлоғоңдоң бары ни ҙә, юғы ни. Етмеш бер көн йәшәгән Париж Коммунаһы шикелле, етмеш йылдан

ашыу бөтә Йыһанды таң ҡалдырған, «бүлгелә лә, хакимлыҡ ит!» принцибын алға һөрөүселәрҙе дер һелкетеп ҡотон осорған Совет власының да оҙаҡ ваҡытҡа яҡты төш булып ҡына ҡалыуы ихтимал. Бына шуға ла Сафуан Әлибайҙың «Ағиҙелкәй» тигән шиғыры ифрат та заманса яңғырай. Әҫәрҙең Ичкериялағы ваҡиғалар башланғанға тиклем ижад ителгәнлеген дә хәтергә төшөрһәк, уның әһәмиәте һәм уҡыусыға тәьҫир итеү көсө бермә-бер арта. Шағир кешенең йөрәге һиҙгерерәк була шул. «Ағиҙелкәй»ҙе уҡыҫас, быға тағы бер тапҡыр ышанаһың.

Традицияларға таянып, уларҙы артабан үҫтереү һәм үҙенсә яңы һүҙ әйтеү маһирлығы С. Әлибайҙың «Сыңрау торна» шиғырында уғата ла нығыраҡ күҙгә ташлана. Беренсенән, ул халҡыбыҙҙың иң боронғо көйөнә яҙылған йыр тексы булһа, икенсенән, автор унда үҙенең өлкән ҡәләмдәше һәм атаҡлы яҡташы Рәми Ғариповтың башланғысын дауам иткән. Дауам иткән, ләкин һуҡыр килеш эйәрмәгән. Әгәр Рәми Ғарипов шиғырында сыңрау торна, алыҫ ерҙәрҙә үҙ төйәген һағынған лирик геройға тыуған-үҫкән яҡтарынан, быуаттарҙан-быуаттарға осоп барған Уралҡайынан түкмәй-сәсмәй сәләм алып килеүсе һәм унда бөтәһе лә иҫән-аман тигән хәбәр һөйләүсе йән эйәһе һымағыраҡ кәүҙәләндерелһә, Сафуан Әлибайҙа ул, яҙмыш талаптарына буйһоноп, төрлө тарафтарға таралған башҡорт халҡына уның тарих ихтыяры менән билгеләнгән төп иленән саләм илтеүсе ҡош итеп һүрәтләнә:

Ырғыҙ, Барҙы, Кәмәлеккәй –
Беҙҙең ғәзиз еребеҙ;
Сыңрай-сыңрай Сафакүлгә
Сәләм биреген!

Сыңрау торна зәңгәр күккә
Сыңрап ҡалҡынһын;
Ҡанаттары ҡайырылмаһын
Туған халҡымдың!

Әлмән, Коншаҡ, Арғаяшта
Беҙҙең ғәзиз еребеҙ;
Ил һағынған башҡортома
Сәләм биреген!

«Салауат йорто» һәм «Һабантуй» исемле шиғырҙар ҙа фекерҙәргә ярайһы ғына бай. Уларҙың икеһе лә аныҡ хәл-ваҡиғаларҙан үҫеп сыҡҡан: беренсеһенең нигеҙендә халҡыбыҙҙың легендар шәхесе хөрмәтенә музей асыу факты ятһа, икенсеһенә яҙғы ҡыр эштәре тамамланғандан һуң йыл да үткәрелә торған милли байрам һалынған. Ләкин был фактттар, хәл-ваҡиғалар тураһында тәфсилләп һөйләү маҡсаты ҡуйылмаған. Уларҙы автор, реаль ерлектән талпынып, шиғриәт күгенә, уй-хистәр донъяһына осоп китер өсөн генә ҡулланған. Һәм, образлы фекерләү мөмкинлектәренән оҫта файҙаланып, ҙур дөйөмләштереүгә өлгәшкән. Әҫәрҙәрҙең икеһенән дә, «Ағиҙелкәй» менән «Сыңрау торна»лағы шикелле, заман һулышы бөркөп тора. «Салауатым йорто, ҡасан тыуыр батыр көткән иркен иртәләр?! – Азатлыҡҡа халҡым һыуһағанда Салауатҡа торош ир кәрәк!..» – тиелә уларҙың береһендә. Икенсеһендә иһә беҙҙең бөгөнгө ҡатмарлы, болғансыҡ ысынбарлығыбыҙ һабантуйҙағы алышҡа оҡшатыла: «Бер уйлаһаң, яҙмыш – көн дә һинең көс-сәмеңде һынар һабантуй»; «Күҙ алдында, – арҡан түҙһен генә! – хаҡлыҡ менән ялған тартыша»; «Тик аяныс: хаҡлыҡ яғында беҙ берәм-бөртөк ҡалған кеүекбеҙ».

Әйткәндәй, «тормош-һабантуй» метафораһы, йәғни тормошто һабантуйға тиңләү алымы, Тамара Ғәниева ижадында ла күҙгә салынып китә. Дәлил эҙләп, алыҫ йөрөйһө юҡ – уның уҙған йылғы «Ағиҙел»дә баҫылған «… Өйрәнмәйем бит мин барыбер ҙә тоғролоҡло, ихлас булмаҫҡа…» тигән шәлкеменә иғтибар итеү ҙә етә. Шәлкемгә ингән шиғырҙарының береһендә, мәҫәлән, ул бына нимә ти:

Донъя сәйер…
Уңмаусандың юҡ һис кәрәге.

Еңеүселәр генә мәртәбәле
Был арбағыс һабан туйында.
Ҡағиҙәһен төшөнмәнек микән,
Еңелдек беҙ тормош-уйында.

Арбағыс һабан туйын хәтерләткән сәйер донъя, шулай итеп, көтмәгәндә йәнә бер метафораға – уйынға әйләнә.

Донъяның сәйерлеген дә, хайранлығын да һәр шағир үҙенсә аңлай һәм үҙенсә ҡабул итә. Әгәр Мостай Кәрим йыл элгәре яҙылған бер шиғырында «Донъя сирле. Белеп булмай ни яҙаһын; кем һуң

уҡыр был донъяның йыназаһын?» тип борсолһа, Тамара Ғәниеваның иһә быға артыҡ иҫе китмәгән һымаҡ. Оло әҙиптең бошоноу-борсолоуҙарын таратырға теләгәндәй, ул: «Йыһан Ерҙең үҙен йыназалар, үткән, бөткәнендә», – ти.

Ижади манераһы, холҡо-фиғеле менән Тамара Ғәниеваның йор һүҙле, ҡанундарға бик буйһоноп бармаусан шағирә икәнлеге инде күптәргә билгеле. Уның был сифаттары илде үҙгәртеп ҡороу кампанияһы башланғас бигерәк тә ныҡ асылып киткәндәй булды. Шул дәүерҙә яҙылған түбәндәге юлдар әле лә хәтеремдә:

Паспорт тотоп баҫтым сираттарға
Ит, май өсөн… Текә һатыусының
Яндарынан ғорур үтеп ҡара.
Ҡоллоҡ төҫө минең күҙҙәремдә,
Ризыҡ өсөн торам теҙҙәремдә.
(«Донъя буйлап мин сер эҙләп киләм…»)

Тик шуныһы ҡыҙғаныс, көтөп алған үҙгәртеп ҡороуҙар шағирәгә һәм уның лирик героиняһына тауҙай байлыҡтар ҙа, күңел тыныслығы ла алып килмәгән. Элек, паспорт тотоп, ризыҡ өсөн теҙҙәрендә торһа, хәҙер иһә ул, «хәйерселек мине һынһыҙ итте, алйыным бит бөтмәҫ мәхрүмлектән», «иртәгенән нимә кейәйем тип, бөгөн кискә нимә ейәйем тип ғүмер итеүҙәрем – мәсхәрә» тип ярып һала; «осто-осҡа ҡалай ялғайым» тип бошона һәм «мыҫҡылыңа түҙмәй, теҙҙәр сүкһәм, ни ҡылырһың минһеҙ, замана?» – тигән һорау ҡуя.

Егерменсе быуат ахырында илебеҙ халыҡтары иңенә төшкән һынауҙар, уларға кисерергә тура килгән хурлыҡтар Т. Ғәниева шәлкеменең башҡа шиғырҙарында ла сағылмай ҡалмаған. «Һандалдарға көсләп һалынған мәл…» тигәнендә, мәҫәләң, тарих белгестәре ауыҙынан күп йылдар үткәс кенә ишетеләсәк һүҙҙе ул инде бөгөн үк әйтеп һалған: «Енәйәтсе яуызлығы быуа заман һулышын, илдә бара аҫтыртын тоҡанған граждандар һуғышы». «Беҙҙекеләр яуға күтәрелде…» иһә тикшереп тороуға ла мохтаж түгел – бөтәһе лә көн кеүек асыҡ бында: «Имен-аман сығыр әмәлдәр юҡ – үҙ-үҙебеҙ менән алыштан». Йыйып ҡына әйткәндә, Тамара Ғәниева – бөгөнгө башҡорт шиғриәтенең иң әүҙем эшләүсе, ижад тулҡындарына сумып, арыу-талыуҙы белмәйенсә ҡолас йәйеп йөҙөүсе вәкилдәренең береһе. Уҙған йыл шағирә «Ағизел» журна-

лын уҡыусыларға «Арҡайым» тигән өр-яңы поэмаһын да бүләк итте. Тимәк, уның ижад офоҡтары ла йылдам киңәйә бара. Ошо йүнәлештә яңы уңыштар юлдаш булһын уға.

Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан, Тамара Ғәниеванан ҡала, һуңғы йылдарҙа Зөбәржәт Йәнбирҙинаның да исеме матбуғат биттәрендә йыш күренә башланы. Туҡһан бишенсе йылда ул «Ағиҙел» биттәрендә генә лә «Һандал» исемле поэма һәм «Үтте инде тағы йәйҙәрем» тигән баш аҫтында шиғырҙар шәлкеме баҫтырып сығарҙы. Был мәҡәләлә поэмаларға туҡталыу күҙ уңында тотолмағанлыҡтан (ә уҙған йыл, үрҙә атап кителгән «Арҡайым» һәм «Һандал»дан тыш, Ринат Шакирҙың «Һаумы, олатай!..», Булат Рафиҡовтың «Таш һын» һәм Ҡәҙим Аралбайҙың «Рух яҙыуы» тигән поэмалары донъя күрҙе, һәм улар, һис шикһеҙ, махсус һөйләшеүгә лайыҡ), шағирәнең әле исемләнгән шәлкеме тураһында ғына бер кәлимә һүҙ әйтеп үтергә иҫәп.

З. Йәнбирҙина шиғриәтенә хас сифаттарҙан иғтибарҙы йәлеп иткәне – уның ябайлығы, минеңсә. Рифмалар килешлегенә бәйле (рифмаларҙың теүәл яңғырауы шиғыр техникаһы алдына ҡуйылған мөһим талаптарҙың береһе булһа ла) ябайлыҡ ҡына түгел, ә яһалма ҡатмарлыҡты (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шиғриәтебеҙҙә ундай күренеш менән дә осрашырға тура килгеләй) кире ҡаға торған ябайлыҡ. Шағирә күнегелгән, ижад практикаһына нығлап ингән алымдарҙы яҡыныраҡ күрә, һәм ҡарап тороуға ана шул ябай ғына тойолған саралар ярҙамында (ә ул ябайлыҡтың баһаһын автор үҙе генә белә!) күңелгә ятышлы, фекергә бай әҫәрҙәр яҙыуға ирешә.

Миҫал өсөн «Туп кеүек тыуа бәпес» тигән шиғырға туҡталырға мөмкин. Дауахана тураһында яҙылған, йәиһә шул «хана»ларҙа ижад ителгән шиғырҙарҙы уҡыған бар, ә бына тыуыухана хаҡында ишеткән юҡ ине әле. Баҡһаң, унда ла шиғри моң тулып ята икән дә! Бәпестәр илауын шағирә орган тауышына оҡшата. Һүҙ ошо тирәлә генә барһа, әҫәр, бәлки, хәбәр һөйләүҙән ары китмәйенсә һәм ысын мәғәнәһендә шиғыр кимәленә күтәрелә алмайынса ла ҡалыр ине. Ләкин автор көтөлмәгән боролош яһай: тыуыуханала туп кеүек бәпестәр тыуғанда, донъяларҙа туптар шартлай. Бөгөн тупылдашып тыуған бәпестәрҙең киләсәге билдәһеҙ: ил һаҡлармы улар, әллә ерме? Шуға ла шағирәнең изге теләге менән килешмәү мөмкин түгел: донъяларҙа туптар шартлағансы, «шаңдап торһон бәпес илаған тауыш!..»

Яһалма ҡатмарлыҡты башкөллө инҡар итеүсе ябайлыҡтың тағы бер үрнәген «Һалма йәйәм»дә төҫмөрләргә мөмкин. Исеменән үк

күренеүенсә, дүртәр юллыҡ алты строфанан торған был шиғырҙың нигеҙенә көндәлек тормоштағы ябайҙарҙан да ябай хәл-ваҡиға һалынған. Ләкин ошо ябай ғына күренеште лә шағирә образ кимәленәсә күтәреүгә өлгәшкән. Әҫәр символдарға бай. Шуларҙың йөрәккә иң ятышлыһы – ижадҡа, ижади бәйләнештәргә ҡағылышлыһылыр, моғайын. Әйтәйек, шиғриәттә лә, үҙ-ара мөнәсәбәттә лә аҡлыҡҡа һәм паклыҡҡа ишара яһала икән, был бер кемде лә битараф ҡалдырмаҫтыр. Ә шулай ҙа «Дуҫым булһаң, һалма өлгөргәндә, йөрәгемә килеп ат бәйлә» тигән һуңғы юлдар был шиғырҙың иң юғары нөктәһелер. Авторҙың табышы ла, асышы ла шундалыр.

Зөбәржәт Йәнбирҙинаның лирикаһы темалар йәһәтенән дә байый һәм төрлөләнә бара. «Дебет шәлем»дә, мәҫәлән, гражданлыҡ мотивы өҫтөнлөк итһә, «Суҡындырған Иван татарҙарҙы…» һәм «Ҡоттар осҡос: ғаләм, космос…»та ул сәйәсмән шағирә рәүешендә сығыш яһай. Нескә хистәр менән һуғарылған мөхәббәт лирикаһы ла яҙыҡ түгел уға («Өшөй йәнем»). Беҙҙе уратып алған ысынбарлыҡтың фәлсәфәүи айышына төшөнөү теләге лә тынғылыҡ бирмәй шағирәгә («Ҡыйын», «Кәкүк саҡыра талдарға…», «Һағыш», «Ah, был донъя!..»):

Ah, был донъя! Бөтмәҫ мәшәҡәтең
Ҡай тоҡсайға һалып аҫайым?
Дәфтәр менән ҡәләм генә алып,
Болотҡамы ултырып ҡасайым?
Ah, был донъя! Ҡалай алдаҡсы һин!
Үтте бына тағы йәйҙәрем.
«Һүтелмәһен», – тиеп, тотоп киләм
Был донъяның ебен-бәйҙәрен.

Фәүзиә Юлдашбаеваның исеме шиғыр һөйөүселәргә яҡшы таныш. Баш ҡаланан алыҫ йәшәһә лә, шағирә «Ағиҙел» биттәрендә йыш күренеп тора: һалмаҡ ҡына ижад итеүен һәм иткәнен уҡыусыға ваҡытында еткерә барыуын белә ул. Зөбәржәт Йәнбирҙина шикелле, уға ла шиғриәттә ябайлыҡ хас. Хистәргә бай. Тормош тәжрибәһе лә етерлек уның. Шуға ла әҫәр яҙыу өсөн тема эҙләп интекмәй – ул аҙым һайын, күрә генә бел һәм йөрәгең аша үткәрә генә ал. «Мейес яғып, торбаларҙа йылынмайым, ҡыҙҙыралыр мине һәр саҡ шиғыр уты; шифалы ла йөҙөм-емеш тәмдәреләй, йәндәремә көс бирәлер йырҙың һуты», – тип яҙа ул «Шиғыр уты» исемле бер шиғырында.

Шағир һәм шиғриәт, шиғриәт һәм ижад, ижад һәм уның серҙәре хаҡында башҡорт телендә лә, башҡа телдәрҙә лә шиғри әҫәрҙәр әҙ яҙылмаған. Даһиҙар тарафынан да, улар бейеклегенә күтәрелеп етә алмағандар тарафынан да. Әммә, ҡарамаҡҡа ошо таушалып та, тапалып та бөткән темаға мөрәжәғәт итһә лә, Фәүзиә Юлдашбаева үҙ һуҡмағын һайлаған – шиғыр уты тигән өр-яңы метафора уйлап тапҡан. Шиғыр уты уның ҡан тамырҙары буйлап йөрөй, шуға күрә ул дауа ла – сихәт тә, йылыта ла – яҡтырта ла, көс тә бирә – ҡеүәт тә өҫтәй. Шулай итеп, беҙ бында шиғырҙы донъяға тыуҙырыусы менән уны уҡыусы араһындағы күҙгә бик бәрелеп тормаған эске бәйләнеште тойомлайбыҙ: әгәр уҡыусы өсөн шиғриәт рухи аҙыҡ булһа, шағир өсөн ул – йәшәү мәғәнәһе.

Был фекер Ф. Юлдашбаеваның «Ҡанатһыҙға ҡанат бирәйем!» тигән шәлкеменә ингән «Осам, осам…» исемле шиғырында ла дауам иттерелә һәм артабан үҫтерелә: шиғриәт күгендә осҡан, шиғриәт күлендә йөҙгән, шиғриәт туғайын гиҙгән лирик героиня ҡанатһыҙға ҡанат бирергә йыйына; илдең ҡарайған йөҙөн яҡтыртырға, яраларын имләргә хыяллана; шағирә-героиняның күңелендә көндөҙ йондоҙ яна, ҡышҡы селләлә һандуғас һайрай. Шәлкемдә саф лирик юҫыҡта яҙылған шиғырҙар ҙа («Ҡайын еҫе», «Улыма», «Иртә киттең, атай…»), гражданлыҡ пафосы менән һуғарылғандары ла бар («Юҡмы ни һуң ирҙәр?», «Кемгә нисек…»). Лирик шиғырҙарҙағы ҡайын образының әҫәрҙән әҫәргә күсеп йөрөүе бер аҙ эсте бошорһа ла, һуңғы ике шиғырҙың заманса яңғырауы бәхәсһеҙ. «Илкәйемдең биле һынған бөгөн» тигән метафора ла уҡыусының иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ, моғайын.

Һуңғы ваҡытта Гөлнур Яҡупованың ижади эшсәнлеге күҙгә күренеп йәнләнә һәм көсәйә барыуы хаҡында бер тапҡыр әйткәйнек инде. Уны яңынан ҡабатларға мөмкин. Ысынлап та, шағирә уҡыусыға әленән-әле яңы әҫәрҙәрен тәҡдим итеп тора. Үҙған йыл ул бөтә көсөн мөхәббәткә мәҙхиә йырлауға һалды һәм ошо исем аҫтында шиғырҙар гөлләмәһе баҫтырып сығарҙы. Әйтергә кәрәк, эшләнештәре яғынан был шиғырҙар төрлөсәрәк. «Онотолоп Айҙы күҙләнек беҙ…», «Һинең көйөң», «Ҡалын төштө ҡырау, көтмәгәндә…» кеүектәре, мәҫәлән, тәүге уҡыуҙан уҡ хәтергә инеп ҡалалар һәм үҙ булып китәләр. Ә бына «Йәшен менән Ҡайын пар түгелдәр…», «Раузаларың», «Сыра яна» һымағыраҡтарының айышына төшөп етеү еңел түгел, һәм авторҙың тел төбөн аңлар өсөн бер аҙ уйланырға тура килер.

Мөхәббәт темаһы Гөлнур Яҡупова өсөн яңыларҙан түгел. Уның был темаға ижад ителгән әҫәрҙәрен бер урынға туплаһаң, байтаҡ йыйыла торғандыр. Шуныһы мөһим, элегерәк яҙылған шиғырҙарында ла, әлегеләрендә лә кеше күңеленең тәрән ҡатламдарына үтеп инеүе, ундағы тойғолар һәм уйҙар бәрелешен сос тотоп ала белеүе менән айырылып тора. Гөлнурҙы мөхәббәт лирикаһының оҫтаһына әйләнеп бара тиһәк тә, хата булмаҫ. «Әйт, тураһын!»да, мәҫәлән, лирик героиняның эске кисерештәрен ул бына ниндәй юлдарға һалған:

Баҙаным мин тамам. Телең менән
Баш тартаһың һөйөүемдән үҙең,
Ә күҙҙәрең һөйләй башҡасараҡ:
Саҡыр, һылыу, бөттө инде түҙем.

Саҡырып ым бирһәм, битәрләрһең:
Әүрәттең, тип, мине топ-тойоҡтан,
Телең һөйләй, имеш, донъяң теүәл,
Күңелеңде шулмы ныҡ ойотҡан?

Г. Яҡупованың мөхәббәт лирикаһына, рифмаға һалынған бөҙрә һүҙҙәр теҙмәһе тип кенә ҡараһаҡ, дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине. Тышҡы яҡтан ябай ғына күренгән шиғырҙың да төбөндә ниндәй ҙә булһа хикмәт ята. Миҫал өсөн «Яратам, яратам, тиһең…»де алырға мөмкин. «Яратам тип әйтеүеңә рәхмәт; ышанмаһам да тыңлайым, сөнки ҡолағыма рәхәт һәм йәнем китә иреп». Ҡарамаҡҡа, бында һуш китерлек бер нәмә лә юҡ һымаҡ: күптәр тарафынан әйтелә, күптәр тарафынан ҡабатлана торған һүҙҙәр, сөсөләнеүҙәр хатта. Әгәр шиғыр гел ошолай дауам итһә һәм ошолай тамамланһа, уның, бәлки, ҡыҙығы ла, тартыу көсө лә булмаҫ ине. Тик улай тамамланмай шул, бәхеткә күрә. Лирик героиня көтөлмәгән ҡыйыулыҡ күрһәтә: «Бүрәнә аша һөйләшмәйек, ас ишекте киреп»; «Ҡайҙа үҙең, күрен. Ашаҡлап үт тә тупһаны, билә күңел түрен», – тип өндәшә ул буш һүҙ менән генә күңелен арбарға тырышыусы берәүгә.

Йәиһә «Осондороп минең күңелемде…» тигән шиғырға күҙ һалайыҡ. Күпме хис, ҡалай нескәлек унда! Шул уҡ ваҡытта – тәрән мәғәнә лә. Уҡыусынан ғәфү үтенеп, уны тулы килеш килтермәксемен – ул еләткес түгел, Гөлнурҙың бөтә шиғырҙары һымаҡ, ҡыҫҡа:

Осондороп минең күңелемде
Алып менгәйнең дә зәңгәр күккә, –
Ҡолаттың шул…
Имгәнеүҙән әрнеп
Илағанда – тик үҙемә үпкәм.

Бер ҡатлыға – миңә аҡыл булды,
Белә-күрә ләһә өмөтләндем:
Быға са һис татымағайным шул
Бал тип ҡапҡанымда әрем тәмен.

Тик үҙемә үпкәм. Тик үҙемә.
Ah, саҡырма бүтән ул күктәргә.
Табанымды ерҙән һин айырма,
Көсөң етмәҫ булғас, ҡуй, күтәрмә!

Шәлкемгә ингән «Яза», «Ышан миңә», «Ҡара һөлөк» тигән шиғырҙар лирик героинаның образын тағы ла тулыландыра төшәләр: уға яңы һыҙат өҫтәйҙәр, ғөрөф-ғәҙәттәрен, холоҡ-фиғелен тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итәләр. «Яза» тигәнендә, мәҫәлән, ул уйсан, сабыр тәбиғәтле, саф күңелле, оло йөрәкле кеше булып күҙ алдына баҫа. Яҡын күргәне ни тиклем генә ғәйепле булмаһын, ул уны ғәфү итергә әҙер. Ғәйепле кешеһенә лирик героинаның бөтә язаһы ла – үпкә генә. «Бер асылыр әле күңелем дә, үтәлер бит үпкә, үткәрһәң?» – тип тыныслandыра ул үҙ-үҙен. «Ышан миңә» исемле шиғыр мөхәббәттә үҙ тиңеңде табыуҙың хәйерлерәк икәненә ишара яһаһа, «Ҡара һөлөк»тө иһә яңғыҙлыҡта заяға үткән ғүмерҙең кескәй генә бер күренеше тип ҡабул итергә кәрәктер. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, Гөлнур Яҡупованың уҙған йылғы шиғырҙары, элеккеләре һымаҡ уҡ, мөхәббәт лирикаһының мөмкинлектәре иҫ киткес бай, ә киңлектәре икһеҙ-сикһеҙ икәнлеге тураһында һөйләй торған тағы бер миҫалдыр ул.

Бындай миҫалдарҙы Рәмил Йәнбәктә лә күпләп осратырға була – уның «Аҡиҙел» биттәрендә уҙған йыл донъя күргән шиғырҙары тотошлай мөхәббәт тураһында. Шулар араһында ни эшләптер «Мин тыуғанмын»ы тәү тапҡыр уҡып сыҡҡас уҡ иғтибарҙы йәлеп итә. Әллә, беҙҙең рәхимһеҙ заманда, мөхәббәт төшөнсәһенең бәҫе юғалып, атанан-әсәнән тыуып та, атаһыҙ-әсәһеҙ үҫкән балалар күбәйеп киткәнгә микән? Ә Рәмилдең лирик геройы, мөхәббәттән

тыуғанлығы менән, бәрәкәтле ерҙә тыуғанлығы менән ихлас ғорурлана, «саф хистәрҙән», «йәйге муллыҡтан» яралғанлығына шатлана. Донъяла бына ошондай саф, ысын мөхәббәттән яралып тыуғандар күберәк булһа, ҡалай яҡшы булыр ине лә бит!

Гөлнур Яҡупованан айырмалы булараҡ, Рәмил Йәнбәктең мөхәббәт лирикаһында еңелсә шаярыу сатҡылары, мыйыҡ аҫтынан ғына бер аҙ йылмайыу һыҙаттары һиҙелеп киткәндәй («Киләсәк ҡыҙына», «Семәр һаплы хәнйәр»). Хәйер, һағыштары ла етерлек («Һин саҡырма мине туйыңа», «Аҡ ялан», «Диңгеҙ һәм йөрәк», «Ҡара көҙҙөң ласҡаҡ батҡағында…»). Мөхәббәттә ғорурлыҡ той-ғоһо күберәк ҡатын-ҡыҙҙарға хас сифат булһа ла, уның ир-егеттәрҙе лә ситләтеп үтмәүенә ишара яһала («Ҡайғырғанда – йәш күрмәҫһең…», «Тәҙрәм төбөнән поездар…»). Шулай ҙа Рәмил Йәнбәк өсөн мөхәббәт, шаярырға, йылмайырға, һағышланырға сәбәп булыуҙан да бигерәк, йәшәү мәғәнәһе, көс һәм дәрт сығанағы. Ошо йәһәттән уның «Кәбән ослау» тигән шиғыры отошло. Тормош юлын үтеүҙе шағир кәбән ҡойоуға оҡшата. Әҫәрҙең лирик геройы, кәбәнен күкрәкләгән мәлдә уйҙарға бирелеп китеп, үткәненә күҙ ташлай. Ҡарап торғанда, бөтәһе лә әҙәмсә һымаҡ тойола уға: намыҫына көс килмәгән; шәфҡәтле лә, ғорур ҙа, ихлас та булған; халҡы заңы һис тә күңеленән сыҡмаған, иле ғәме гел алдан йөрөгән; мәкер, ялған менән яғалашҡан һәм сафлыҡҡа, хаҡлыҡҡа табынған. Ләкин уның үргә һелтәр күбәләре лә байтаҡ әле. Геройҙың бөтә теләге, бөтә маҡсаты – яҙа баҫып осмайынса, кәбәнен ослап ҡуйыу. Ул шуға ынтыла, шул уй менән янып йәшәй.

«Ағиҙел» журналының туҡһан бишенсе йылғы шиғриәте үҙенең характеры буйынса ла, билдәләнеше яғынан да төрлө булды. Ҡайһы бер әҙиптәребеҙҙең сығыштары уларҙың юбилейҙарына тап килде (Рәғиҙә Янбулатова, Кәтибә Кинйәбулатова, Сөләймән Муллабаев, Рамазан Шәғәли). Бәғзе шағирҙар яңы йыйынтыҡтарына ингән йәиһә инәсәк әҫәрҙәре менән уртаҡлашты (Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Рауил Шаммас, Ғәлим Дәүләди, Ҡәҙим Аралбай, Хәсән Назар). «Таныш булығыҙ!» тигән рубрика аҫтында бирелгәндәре лә осраны (Мәрйәм Күсмәева, Гөлирә Сөләймәнова). Туҡһан дүртенсе йылда нигеҙ һалынған яҡшы башланғыстың, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер аҙ һүнә төшөүе хаҡында ла әйтмәй үтеү ярамаҫ – уҙған йылда «Елкән» бер генә тапҡыр күренеп ҡалды (бер генә тапҡыр сыҡһа ла, ул ифрат бай йөкмәткеле ине). «Ағиҙел» тупһаһын тәү тапҡыр атлап

уҙыусылар ҙа булманы түгел шикелле туҡһан бишенсе йылда. Әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһына айырым туҡталып, бөгөнгө шиғриәтебеҙ тураһындағы уйланыуҙарҙы артабан дауам итергә булыр ине. Ләкин юбилярҙар хаҡында әйтеләһе йылы һүҙҙәр башҡалар тарафынан инде әйтелгән, ә яңы йыйынтыҡтарға ингән һәм инәсәк шиғырҙарға баһаны махсус мәҡәләләрҙә – рецензияларҙа биреү маҡсатҡа ярашлыраҡтыр тигән уйҙан сығып, был күҙәтеүҙе ошонда тамамларға иҫәп.

Йомғаҡлап, шуны әйтке килә: заманалар ни тиклем генә ҡатмарлы булмаһын, бынан йөҙ, ике йөҙ йыл, унан да элегерәк һымаҡ, шиғриәт барыбер йәшәй, эҙләнә, асыштар яһай, юғалтыуҙар кисерә. Ул – даими хәрәкәттә. Шуныһы ҡыуаныслы, бөгөнгө башҡорт шиғриәте сникерстарға, банандарға алданып түгел, бәлки, кешелек донъяһын тулҡынландырған эрерәк мәсьәләләр менән ҡыҙыҡһынып йәшәй, уларҙы аңларға һәм үҙенсә хәл итергә тырыша. Банандар, сникерстар иһә унда йылмайыу ғына уята. Риф Әхмәҙиевтың «Айҙың һыны ла хәҙер ауаздаш заманыма, – оҡшаттым ауылым айын ят илдең бананына…» – тигән шиғри юлдары быға асыҡ дәлил була ала.

1996

ШИҒРИ ХИСТӘРҘӘН ГӨЛ ҮРЕҮСЕ

(Абдулхаҡ Игебаев ижадына бер байҡау)

Һирәк-мирәк булһа ла беҙҙә «Һайланма әҫәрҙәр» тигән баш аҫтында йыйынтыҡтар сыҡҡылай. Был һәйбәт традиция инде байтаҡтан килә. Ғәҙәттә, ундай йыйынтыҡ әҙип тормошондағы берәй иҫтәлекле ваҡиғаға арналыусан. Һуңғы егерме-утыҙ йылда был яҡшы традицияға йәнә бер үҙенсәлекле яңылыҡ өҫтәлде: «Һайланма әҫәрҙәр»ҙең ҡайһы берҙәренә инеш һүҙҙе шағирҙар, прозаиктар, драматургтар үҙҙәре яҙыусан булып китте. Минеңсә, был насар түгел. Сөнки әҙип тураһында, уның тормош һәм ижад юлындағы айырым күренештәр һәм ваҡиғалар, ваҡыты еткәс әҙәбиәт тарихы өсөн кәрәге булырҙай фактҡар хаҡында уның үҙенән дә ҙтемлерәк итеп, түкмәй-сәсмәй кем һөйләп бирһен.

Был риторик һорау танылған шағирыбыҙ Абдулхаҡ Игебаевтың 1994 йылда донъя күргән шиғырҙар, йырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар йыйынтығын, дөрөҫөрәге – уның ошо китабын асып ебәреүсе «Ғүмер тауҡайҙары киртләс-киртләс» тип аталған баш һүҙен уҡығандан һуң тыуҙы. (Йәйәләр эсендә шуны әйтеп үтеү урынлы булыр: был мәҡәләнең тәүге вариантын автор үҙенең 60 йәшлек юбилейы айҡанлы әҙерләнгән «Әйтелмәгән һүҙҙәрем бар» тигән китабы өсөн яҙғайны; юбилей көндәрендә ул, бер аҙ үҙгәртелеп, «Артылыштарға артылғанда» тигән баш аҫтында «Ағиҙел» биттәрендә лә донъя күрҙе – журналдың 1990 йылғы 7-се һанында.)

«Ғүмер тауҡайҙары киртләс-киртләс» тип аталған баш һүҙ күләме яғынан әллә ни ҙур булмаһа ла, йөкмәткеһе менән ул бер кемде лә битараф ҡалдырмаҫ. Беренсенән, унда әҙиптең биографияһына яңы штрихтар өҫтәлә һәм шул арҡала уның тормош юлын тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырыу мөмкинлеге тыуа. Ошо фекерҙе йөпләгәндәй, автор бына нимә ти: «… ни сәбәптәндер, миңә бер ваҡытта ла үҙем хаҡында хатта ҡош телендәй генә булһа ла мәҡәлә яҙырға тура килмәне. Бына шуның өсөн дә мин тәүәкәлләп хөрмәтле уҡыусыларыма, шиғыр яратыусы дуҫтарыма ҡыҫҡаса ғына хәл-әхүәлемде, йәғни үҙ күңелемде, һөйләп бирәйем тип, ҡулыма ҡәләм алдым да инде».

Икенсенән, ғүмеренең «киртләс-киртләс тауҡайҙарына» күтәрелеп, артта ҡалған артылыштарға ҡараш ташлағанда, әҙиптең ижад лабораторияһы ла бер ни ҡәҙәр асылып киткәндәй була. Был тәңгәлдән дә миҫалдарҙы күпләп килтерергә мөмкин. Әлегә шуларҙың тик береһе менән генә ҡәнәғәтләнеп торайыҡ: «Мин, – ти автор, – әҫәрҙәремде бер ҡасан да көсәнеп яҙмайым, ә йөрәгем ҡушҡанса илһамланып яҙам».

Өсөнсөнән… Хәйер, бик ҡабаланып бармайыҡ әле. Шағирҙың ижад баҡсаһына инеп, емештәренән ауыҙ итә башлағас, инеш һүҙ ролен уйнаусы был мәҡәләгә ҡат-ҡат кире әйләнеп ҡайтырға тура килмәгәйе.

Ләкин шағирҙың ижад баҡсаһына инеп китерҙән алда кескәй генә иҫкәрмә яһау кәрәктер: уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән был уйланыуҙар – Абдулхаҡ Игебаевтың яңы китабына сираттағы рецензия түгел. Дөрөҫ, ара-тирә рецензияға тартым стилдең дә күҙгә салынып китеүе ихтимал. Әммә ҡуйылған маҡсат бөтөнләй башҡаса –аныҡ бер китапҡа баһа биреү менән генә сикләнмәйенсә, ошо китапты донъяға тыуҙырған кешенең бөтә ижадын байҡап ҡарау, күпмелер кимәлдә уның әҙәби һынын һүрәтләргә тырышыу.

Бер китапҡа ғына таянып, шағирҙың бөтә ижады тураһында һүҙ йөрөтөүҙе бик үк хуп күрмәүселәр ҙә табылыр. «Һайланма әҫәрҙәр» тигән баш аҫтында сыға торған йыйынтыҡтарҙың иң ҙур өҫтөнлөгө бына шунда ла инде – ундай йыйынтыҡтарҙы авторҙар айырыуса яуаплылыҡ тойоп әҙерләйҙәр, уларға әҫәрҙәренең ваҡыт һынауын үткәндәрен генә индерергә тырышалар. Абдулхаҡ Игебаевтың «Һайланмалар»ы ана шундайҙар иҫәбендә – унда шағирҙың ҡырҡ йылдан ашыу осорҙағы әҙәби эшмәкәрлеге сағылыш тапҡан: йыйынтыҡҡа тупланған шиғырҙар араһында илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылғандарын да, шулай уҡ туҡһанынсы йылдар башына ҡарағандарын да берҙәй йыш осратырға мөмкин. Был фекер авторҙың үҙе тарафынан да раҫлана. «Яңы китабыма, – ти ул, – оҙайлы йылдар буйына ижад ителгән һәм өр-яңы шиғырҙарым, йырҙарым, дастандарым, ҡобайырҙарым тупланды. Ҡайһы бер шиғырҙарҙы бөгөнгө күҙлектән ҡарап сығырға һәм уларға ҡәләм төртөргә тура килде».

Абдулхаҡ Игебаевтың айырым шиғырҙары ҡырҡынсы йылдарҙың ахырында – илленсе йылдарҙың башында ғәзит һәм журнал биттәрендә йыш ҡына күренгеләп торһалар ҙа, «Йәшлек йыры» тип аталған тәүге китабын ул 1954 йылда ғына сығарыуға ирешә.

Яҙыусылар союзы ағзаһы булып китер өсөн дә уға тәүге йыйынтығы донъя күргәндән һуң яңынан туғыҙ йыл тир түгергә һәм шул дәүерҙә тағы ла биш китап сығарып өлгөрөргә тура килә. (Ошоларҙы күҙаллайһың да, беҙҙең өлкән быуын әҙиптәребеҙ үҙҙәренең алмашсыларына – йәш ҡәләмдәштәренә ҡалай «ҡаты ҡуллы» булғандар тип уйлап ҡуяһың. Егерменсе быуаттың икенсе яртыһында шиғриәтебеҙҙең дөйөм кимәле шаҡтай ғына юғары күтәрелеүе лә ана шул осорҙағы үҙ-ара талапсанлыҡтың үҙенсә бер сағылышылыр әле ул, моғайын. Ирешелгән кимәлдән түбән төшөргә яҙмаһын инде берүк!) Бынан күп йылдар элек, Сәләх Кулибай әйтмешләй, «йәше, төҫ-һыны яғынан шиғри сәңгелдәк тирәләй теремек йүгереп йөрөгән сабыйҙы» хәтерләткән Абдулхаҡ Игебаев бөгөн иһә – өҫ тиҫтәгә яҡын китаптың авторы. Шуларҙың уныһы балаларға тәғәйенләнгән, береһе очерктарҙан тора, ҡалғандары – шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығы. Арала Өфөлә һәм Мәскәүҙә рус телендә баҫылып сыҡҡандары ла бар. Өҫтәүенә ул хәҙер – Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр һәм Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премиялары лауреаты. Уға шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исем дә бирелде.

Өлкән ағалары, быуындаштары, әҙәбиәт белгестәре, тәнҡитселәр Абдулхаҡ Игебаевтың ижадына вайымһыҙлыҡ күрһәтте тиһәк, дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине. Хәйер, бынан бер ун-ун биш йылдар самаһы элек әҙәби тәнҡиткә ҡаты ғына «шелтә» эләгеп ҡуйҙы ҡуйыуын. Йәнәһе, «Абдулхаҡ Игебаевтың ижадына ҡырын күҙ менән ҡаралды», «әҙәби тәнҡиттән шағир беренсе аҙымдарынан уҡ уңманы», «әҙәби тәнҡит ошо көнгәсә уның ижадына һағайып ҡарай, ул ғына ла түгел, ошо һағайыуҙы уҡыусыларға ла тағырға тырыша» һ.б., һ.б. (Был фекер танылған шағир Хәким Ғиләжевтың «Көр күңелле ихлас йырсы» һәм «Атайсал һағышы» тигән мәҡәләләрендә яңғырап китте. Уларҙың беренсеһе А. Игебаевтың илле йәшенә арнап сығарылған «Шиғырҙар, поэмалар» китабына баш һүҙ итеп бирелгәйне. «Атайсал һағышы» иһә – әлеге мәҡәләнең бер аҙ үҙгәртелгән икенсе варианты – Х. Ғиләжевтың 1984 йылда донъя күргән «Ҡәләмдәштәр» исемле китабына индерелгән.)

Әйтеп булмай, әле һүҙ барған мәҡәләләрҙең авторы үҙенең шәхси күҙәтеүҙәре һөҙөмтәһендә яһаған ҡайһы бер раҫлауҙары менән, бәлки, хаҡлылыр ҙа. Ләкин, шулай булған хәлдә лә, билдәле ғалим Ғайса Хөсәйеновтың ошо уҡ осорҙа, һиҡһәнсе йылдар башында,

яҙылған «Йырланған һәм йырланаһы йырҙар» тигән әҙәби портретында дөрөҫлөк күберәк һымаҡ, миңә ҡалһа. «Үҙенә иғтибарлылыҡ йәһәтенән, – ти унда ғалим, – Абдулхаҡ Игебаев баштан уҡ бәхетле булды». «Бәхет» һүҙе бында бер ниндәй ҙә ҡуш тырнаҡтар эсенә алынмаған, тимәк, ул үҙенең төп мәғәнәһендә ҡулланылған. Ысынлап та, беренсе китаптарына уҡ Рәшит Ниғмәти һәм Мостай Кәрим шикелле атаҡлыларҙың фатихаһын алыу, уларҙың йылы һүҙен ишетеү кемгә-берәүгә генә тейә әле ул?

Әйе, Абдулхаҡ Игебаевтың «Йәшлек йыры» исемле тәүге китабы кибет кәштәләренә барып ятырға ла өлгөрмәй – шул уҡ 1954 йылдың июлендә «Совет Башҡортостаны» гәзите биттәрендә Рәшит Ниғмәтиҙең ошо китапҡа яҙған рецензияһы баҫылып сыға. Йәш шағирҙың «Тыуған ер» исемле икенсе китабы менән дә шундайыраҡ хәл була – 1956 йылдың майында уны баҫырға ҡул ҡуйыла, ә сентябрҙә иһә «Советская Башкирия»ла Рәшит Ниғмәтиҙең яңы китапҡа арналған икенсе рецензияһы килеп сыға. Күп тә үтмәй, «Ҡәләмдәш иптәштәргә хаттар» тигән баш аҫтында Мостай Кәримдең «Балтик буйынан – Рига ярҙары тип йөрөтөлгән ерҙән» яҙған «уй-теләктәре» пәйҙә була. Дүрт хаттың береһе – иң тәүгеһе – Абдулхаҡ Игебаевҡа адресланған. Уны яҙырға әйҙәүсе көс, сәбәпсе – шағирҙың әлеге шул «Тыуған ер» китабы. (Был уй-теләктәр адресатҡа хат формаһында еткерелһә лә, йөкмәткеһе менән ул тәнҡит мәҡәләһе, әлбиттә. Унда, һүҙ ыңғайында ғына булһа ла, Абдулхаҡтың беренсе китабы ла телгә алынып китә.) Быларға тағы «Әҙәби Башҡортостан» (хәҙерге «Ағиҙел») журналының төрлө һандарында һәм, ниһайәт, «Ҡызыл таң» гәзитендә донъя күргән Бөрө педагогия институты студенты Р. Сибәғәтов, Зәһит Шәрҡый һәм Ғәйнан Әмири мәҡәләләре ялғана. Бына шулай, Абдулхаҡ Игебаев әҙәбиәт майҙанына төклө аяғы менән инә һәм өлкән ағалары уны ҡолас йәйеп ҡаршылай.

Әлбиттә, ҡолас йәйеп ҡаршылауҙы йәш шағирҙың етешһеҙлектәренә күҙ йомоп, йомшаҡ яҡтарын күрмәмешкә һалышыу, уның гел башынан ғына һыйпап тороу тип аңларға ярамай. Үрҙә һанап үтелгән авторҙарҙың береһе лә ундай маҡсат ҡуймаған, минеңсә. Киреһенсә, ярайһы ғына ҡаты яңғыраған һүҙҙәр ҙә етерлек унда. Әммә дөйөм йүнәлештәре, төп пафостары менән ҡәҙерле был мәҡәләләр – уларҙың һәр ҡайһыһында Абдулхаҡ Игебаевтың артабанғы поэтик яҙмышы хаҡында, ахыр сиктә бөтә әҙәбиәтебеҙҙең сафлығы хаҡында хәстәрлек тойғолары ярылып ята.

Рәшит Ниғмәти, әйтәйек, «Абдулхаҡ Игебаевтың тәүге шиғырҙар китабы – ныҡышмалы хеҙмәттең емеше», «йәш шағир үҙен үҫә торған, һәләтле автор итеп таныта», «әҫәрҙәренең тематикаһы төрлө», темаларҙы «үҙенсә хәл итергә, уғаса яҙғандарҙы ҡабатламаҫҡа тырыша», «лирик геройҙары тура һүҙлерәктәр һәм шуға тормошсаныраҡтар ҙа» кеүегерәк ифрат йомшаҡ, ҡолаҡҡа йәтешле әйтемдәр менән генә сикләнмәй, бәлки «шағирҙың ике китабында ла етешһеҙлектәр һәм тайпылыштар ҙа аҙ түгел»леген билдәләп үтә, «ашығыс яҙылған төҫһөҙ, өлгөрмәгән нәмәләр бар»лығын да йәшермәй, хатта ҡайһы бер шиғырҙарҙан «проза аңҡып» тороуын, ә бәғзеләрендә иһә «ритмды тултырыр өсөн генә ҡуйылған йөкмәткеһеҙ һүҙҙәр» осрауын әйтә һәм фекерен йөпләү өсөн аныҡ миҫалдар ҙа килтерә.

Абдулхаҡ Игебаевтың тәүге китаптары тураһында һүҙ асылда бер тирәлә барһа ла, ул төрлө төҫтәге, төрлө ҙурлыҡтағы «күлдәккә төрөп» бирелде. Әгәр Ғәйнан Әмири үҙенең «Талапһыҙлыҡ – ижадтың дошманы» тигән мәҡәләһендә ҡәтғи яңғыраған һөйләмдәр ҡулланып, турағараҡ һуҡтырһа, Мостай Кәрим Балтик буйынан яҙған хатында Абдулхаҡ Игебаевҡа еткерәһе уй-теләктәрен яйлап ҡына, хәтерҙә ҡалырлыҡ хикмәтле сағыштырыуҙар, образлы һөйләмдәр ярҙамында белдерә. (Был хатты формаһы йәһәтенән дә, йөкмәткеһе яғынан да әҙәби-тәнҡит мәҡәләһенең матур бер өлгөһө тиергә мөмкин.) Үткер күҙле, һиҙгер йөрәкле оло шағир йәш ҡәләмдәшенең яңы китабында, «ымһындырған, алдатҡан нәмәләр» менән бер ҡатарҙан, «хәҙергә күп һәм эре булмаһа ла», «ысын гәрәбә бөртөктәре» барлығын да шәйләмәй ҡалмай. Хаттың авторы Абдулхаҡ Игебаевтың һәләтһеҙ кеше түгеллегенә, күңеле менән шағир кеше икәнлегенә шикләнмәй. Ләкин шул уҡ ваҡытта үҙен борсоған ҡайһы бер уй-фекерҙәрен дә әйтмәй үтә алмай. Мәҫәлән, ул «Йәшлек йыры» һәм «Тыуған ер» китаптары авторының әле һаман «донъяға билдәле бер ҡарашы» булмауы, «матурлыҡты ла бер яҡлы ғына аңлауы», тәрәндәрәк ятҡанын түгел, ә бары тик «күҙгә бәрелеп торған матурлыҡты ғына» күреүе өсөн үкенесен белдерә. Талапсан, шул уҡ ваҡытта ифрат хәстәрлекле өлкән шағир йәш дуҫының «һүҙ менән һаҡһыҙ эш итеү»ен, таушалып бөткән сағыштырыуҙар, метафоралар йәки ялған поэтик (лжепоэтические) саралар ҡулланыуын да хупламай.

Был хаттағы күп кенә фекерҙәрҙең бик тә урынлы һәм ваҡытлы әйтелгәненә йылдар үткән һайын нығыраҡ ышанаһың. Шуларҙың

береһенә генә иғтибар йүнәлтәйек. Абдулхаҡ Игебаевтың «Тыуған ер» исемле йыйынтығын күҙ уңында тотоп, «Китап, – тип язғайны Мостай Кәрим бынан ҡырҡ йылдар самаһы элек, – ысын гәрәбәләрҙән мәхрүм түгел, уларҙы икенсе кеше, бәлки, күберәк табыр, ә заман иләге уларҙы эреһен эрегә, вағын ваҡҡа айырып иләй торор». Әйтергә кәрәк, шиғри гәрәбәләрҙе заман иләге генә түгел, Абдулхаҡ Игебаев үҙе лә иләп кенә тора: әле бына беҙҙең күңелде арбаған «Һайланма әҫәрҙәр»гә ул «Йәшлек йыры»ндағы алтмыш шиғырҙың береһен дә индермәгән, ә «Тыуған ер»ҙәге ҡырҡ һигеҙ шиғырҙың ни бары дүртеһен генә айырып алған. Әлбиттә, был – йөҙҙән ашыу шиғыр юҡҡа сыҡҡан, мәғәнәһен юғалтҡан тигән һүҙ түгел. Уларҙан бөтөнләйгә баш тартыу йәиһә уларҙы һанға һуҡмау – үҙеңде ихтирам итеүҙән туҡтауға оҡшап китер ине. Был шиғырҙарҙың бөтәһен дә шағирҙың йәшлек осорон кисергәндәге йөрәк тибешен мәңгеләштереп ҡалдырған үҙенсәлекле бер кардиограмма һүрәтенә тиңләһәк тә хата булмаҫтыр. Шул шиғырҙарҙы уҡып, уларҙың авторын ысынлап та «донъяға һоҡланып ҡараусы, һәр нәмәнән шатлыҡ эҙләүсе, кешеләргә тик яҡшылыҡ ҡына теләүсе, Ватанын бөтә йөрәктән һөйөүсе егет» итеп күҙ алдына баҫтыраһың.

Ошо урында туҡталыш яһап китергә кәрәк булыр. Хәтерегеҙҙәме, инеш һүҙ урынына файҙаланылған «Ғүмер тауҡайҙары киртләс-киртләс» исемле мәҡәләгә яңынан әйләнеп ҡайтҡыларға тура килмәгәйе тигәйнек. Хәҙер инде ошо мәҡәләләге: «Ҡайһы бер шиғырҙарҙы бөгөнгө күҙлектән ҡарап сығырға һәм уларға ҡәләм төртөргә тура килде» тигән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәйек. Эйе, элегерәк яҙылған шиғырҙарын «бөгөнгө күҙлектән» ҡарап сығыу, кәрәк тип табылһа, уларға ҡәләм дә төртөп алыу А. Игебаевтың ижад практикаһында ярайһы ғына йыш осрай торған күренеш. «Тыуған ер» (1956) исемле китаптан «Һайланма әҫәрҙәр»гә (1994) күскән «Китмәҫ күңелдән», «Таш бәғер», «Күрше ҡыҙы» тигән шиғырҙар, мәҫәлән, нәҡ ана шул «ҡәләм төртөү»гә дусар ителгәндәр иҫәбендә. «Китмәҫ күңелдән» тигәненә ҡәләм күберәк тә төртөлгән: биш строфалы шиғыр ике строфаға ҡалдырылып, бөтөнләй яңы исем менән – «Һөйөү йыры» тип бирелгән. Бындай яҙмыш, үкенескә ҡаршы, А. Игебаевтың күләмлерәк әҫәрҙәрен дә ситләтеп үтмәй.

Әлбиттә, һәр автор – шағирмы ул, прозаикмы йәки драматургмы, рәссаммы йәки архитектормы – үҙ әҫәренең, үҙ һүрәтенең, үҙ һыҙмаһының хужаһы. Ләкин – ваҡыты еткәнсә генә, ижад процесы

тамамланғансы ғына. Күп көс һәм ваҡыт талап иткән был процесс тамамланып, ижад емешең бүлмәңдән сығып киттеме, ул инде уҡыусы, тамашасы, ғөмүмән, халыҡ ҡарамағына күсә. Шуға ла һәр төрлө үҙгәртеүҙәр, шымартыуҙар, өҫтәүҙәр һәм ҡыҫҡартыуҙар тик ижад процесында ғына маҡсатҡа ярашлы. Әгәр мәшһүр архитектура ҡоролмаһы төҙөлөп бөткәс, уның авторы ҡоролманың берәй элементын алмаштырырға уйлаһа, быныңаҙағы нисегерәк булыр ине икән? Әҙәбиәткә, сәнғәткә килгәндә иһә, теләһә ниндәй әҫәрҙең дә үҙ осорон, үҙ заманын, шул осорға, шул заманға хас үҙ һулышын сағылдырған кардиограмма һүрәтенә оҡшап ҡалыуы хәйерлерәк түгел микән?

Илленсе йылдар уртаһында донъя күргән мәҡәләләрҙә Абдулхаҡ Игебаев йыйынтыҡтарының бер сифатына – уларҙың тышҡы күренешенә һәм эске төҙөлөшөнә иғтибар етеңкерәмәгән. (Йыйынтыҡтар иһә формат яғынан да, биҙәлеш йәһәтенән дә айырым бер зауыҡ менән – матур ҙа, уҡыр өсөн уңайлы ла итеп эшләнгәндәр.)

Абдулхаҡ Игебаевтың «Яңы һыҙаттар» исемле өсөнсө китабы ла тәнҡит күҙлегенән ситтә ҡалманы. Замандаштары – төрлө профессия кешеләре – хаҡындағы ун бер очеркты берләштергән был китап «йәш шағирҙың проза киңлегенә тәүәккәл аҙымы» тип баһаланды. Байтаҡ ҡына етешһеҙлектәре лә күрһәтелде. Әйтәйек, яҙыусының, тормошҡа актив ҡатнашаһы урынға, күберәк ваҡиғаларҙы күҙәтеп йөрөүсе ролендә сығыш яһауы, үтә яңғырауыҡлы һүҙҙәр менән эш итеүе, яһалмалылыҡ күренештәре осрауы, геройҙарҙың, көрәш һәм ҡаршылыҡтар эсендә йөҙәһе урынға, еңел генә юлдан барыуҙары һ.б. һыҙыҡ өҫтөнә алынды. «Проза киңлегенә тәүәккәл аҙым» тип баһаланһа ла, китап был өлкәлә әлегә хәтлем тәүгеһе лә, һуңғыһы ла булып ҡала.

Алтмышынсы йылдар уртаһына тиклем Абдулхаҡ Игебаев тауышһыҙ-тынһыҙ ғына йәшәп ятыуын һәм яҙыуын дауам итте. Тауышһыҙ-тынһыҙ тип әйтеүҙең мәғәнәһе шул: быға ҡәҙәр уның ижады тирәһендә шау-гөр килгән тәнҡит ни өсөндөр биш-алты йыл самаһы тынып торҙо. Бәлки, шағирҙың 1957 йылда яҙылған «Үҙ шәүләһенән ҡурҡыусы» тигән әҫәрендәге: «Иптәшкәйем, зинһар өсөн, әйтһәнә, әгәр яҙһам берәй тәнҡит мәҡәлә, үҙемә ел-ямғыр фәләнҡағылып, берәй хәүеф-хәтәр сыҡмаҫ микән, ә?» тигән сәнскеле шаян юлдар ҙа тәьҫир иткәндер. Һәр хәлдә, бер-бер артлы донъя күргән «Минең һеңлем», «Ирәндек бөркөтө», «Аҡбуҙат» исемле китаптар уҡыусы күҙенә сағылып ҡына ҡалды. Ә был китаптар

шағирҙың ижад даирәһенең артабан киңәйә, тематикаһының байый барыуы тураһында һөйләйҙәр ине. Мәҫәлән, «Минең һеңлем» менән «Аҡбуҙат» Абдулхаҡ Игебаевтың балалар әҙәбиәте өлкәһендә лә әйтер һүҙе барлығын һәм уның был өлкәлә ныҡлап эшләй башларға иҫәп тотоуын дәлилләнеләр. (Ошо китаптарға ингән әҫәрҙәр күп йылдар үтеп, күп һыуҙар аҡҡас ҡына билдәле ғалим Суфиян Сафуановтың «Башҡорт балалар әҙәбиәтенең үҫеш проблемалары» тигән монографияһында телгә алындылар. Өҫтәп, шуны ла әйтеү урынлы булыр: балалар өсөн яҙылған шиғырҙарҙың ҡайһы бер өлгөләре Абдулхаҡ Игебаевтың тәүге йыйынтыҡтарында ла күренгеләп киткәйне.) «Ирәндек бөркөтө» исемле китабы менән иһә шағир үҙен йыр һәм поэма жанрҙарында һынап ҡараны – был йыйынтыҡ шиғырҙар, йырҙар, поэмалар тигән бүлектәрҙән тора. Шуныһы ла бик мөһим: китапҡа исем биргән поэма (унан башҡа бында «Семья шатлығы» тигән тағы бер поэма бар), ҡыҫҡартылып булһа ла, «һайланмалар» иҫәбендә йөрөй, ә ошо уҡ йыйынтыҡтағы ун ете йырҙың күбеһе сәнғәт оҫталары башҡарыуында эфир киңлектәрендә, сәхнә түрҙәрендә әле лә йыш яңғырай.

Поэма тураһында һүҙ сыҡҡас, уға бәйле бер мәсьәләгә туҡталып китеүҙең зыяны теймәҫ. Ҙурыраҡ жанрҙа Абдулхаҡ Игебаев үҙенең мөмкинлектәрен элегерәк тә һынап ҡарағайны: «Тыуған ер» йыйынтығындағы «Корея ҡыҙы» исемле күләмле генә шиғри әҫәр – быға аныҡ миҫал. Әҙәби тәнҡиттә был әҫәр хаҡында әллә ни ҙур һүҙ ҡупманы ҡубыуын. Уның жанры ғына төрлөсә билдәләнде: Мостай Кәрим ҡарашынса, ул – кескәй поэма, Ғайса Хөсәйенов мәҡәләләрендә – поэма. Әҫәрҙең жанр атамаһына автор үҙе лә асыҡлыҡ индермәне. Һәр хәлдә, «Корея ҡыҙы»н поэма тип атағанын ишетергә лә, уҡырға ла тура килмәне. Әйткәндәй, формаһы һәм йөкмәткеһе яғынан был әҫәр балладаға яҡыныраҡ тора һымаҡ. Ул драматик сюжетҡа ҡоролған һәм батырлыҡ романтикаһы менән һуғарылған. Темаһының заманында ифрат актуаль яңғырауы йәһәтенән дә әҫәр күберәк балладаға тартым.

«Ирәндек бөркөтө» китабының тағы бер үҙенсәлеге тураһында әйтмәй үтеү мөмкин түгел – был йыйынтыҡта Абдулхаҡ Игебаевтың сатира һәм юмор өлкәһендәге һәләте сағылып китте. Тыштан ялтырап, эстән ҡалтыраныусыларҙы, эш һөймәҫ иркә йәндәрҙе, үҙ шәүләһенән ҡурҡыусыларҙы, тәкәбберҙәрҙе, иген араһында үҫкән билсәнде хәтерләтеүсе алыпһатарҙарҙы, тар күңеллеләрҙе, аумаҡайҙарҙы, ҡара

йөҙлө, ерәнгес һүҙле хәйләкәр ҡараҡтарҙы, ғаилә тыныслығын боҙоусы иҫерек баштарҙы, ғәйбәтселәрҙе өтөп ала торған шығырҙар бар бында. Ундай әҫәрҙәр шағирҙың «Ирәндек бөркөтө»нән һуң сыҡҡан башҡа йыйынтыҡтарында ла мул ғына. Тимәк, Абдулхаҡ Игебаевтың «лирик геройҙары тура һүҙлерәктәр һәм шуға тормош-саныраҡтар ҙа» тип, Рәшит Ниғмәти үҙ ваҡытында бик дөрөҫ әйткән булып сыға. Сөнки юмор һәм сатираны тура һүҙлелектән башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын бит.

Тәнҡит тулҡыны Абдулхаҡ Игебаев ултырған ижад кәмәһен алтмышынсы йылдар уртаһында һәм шул ун йыллыҡтың икенсе яртыһында яңынан бер ни ҡәҙәр сайҡалдырып алды. Быға уның «Йылмайығыҙ, йондоҙҙар!» исемле шығырҙар йыйынтығы һәм ошо йылдарҙа яҙылған «Оран һала Ер-әсә» тигән патетик поэмаһы сәбәпсе булды. Көсө-ҡеүәте йәһәтенән беренсеһе бейеклегенә күтәрелмәһә лә, әлеге тулҡын Абдулхаҡ Игебаевтың донъяла барлығын тағы бер тапҡыр хәтергә төшөрөп ҡуйҙы. Улай ғына ла түгел: Ким Әхмәтйәнов менән Рәшит Шәкүровтың матбуғат биттәрендә аллы-артлы күренеп ҡалған мәҡәләләре һәм шағирҙың яңы поэмаһы айҡанлы «Ағиҙел» журналы ойошторған «түңәрәк өҫтәл» материалдары Абдулхаҡ Игебаевтың поэтик йөҙөн тулыраҡ асып ебәрҙеләр. Ләкин ошо осорҙа донъя күргән «Алтын тулҡындар», «Еҙ ҡыңғырау», «Урал тауышы» исемле китаптарға һәм рус телендә баҫылып сыҡҡан йыйынтыҡтарға барыбер иғтибар етеңкерәмәне. Был китаптар ҙа Абдулхаҡ Игебаевтың шиғриәттә яһаған ырамлы яңы аҙымдары ине, юғиһә – ололар өсөн дә, балалар өсөн дә, сатира һәм юмор өлкәһендә лә ул берҙәй күндәм, егеттәрсә етеҙ эшләүен дауам итте. Өҫтәүенә, бер үк ваҡытта тип әйтерлек, шағирға ысын мәғәнәһендә дан алып килгән, башҡорт әҙәбиәтендә уның законлы урынын тамам билдәләгән ике ҙур поэма ла – «Урал тауышы» менән «Оран һала Ер-әсә» поэмалары үҫеп сыҡты. «Семья шатлығы» һәм «Ирәндек бөркөтө» менән сағыштырғанда, былары, һис шикһеҙ, авторҙың поэма жанрын үҙләштереүҙәге ҙур ҡаҙанышы булды. «Урал тауышы»ның да, «Оран һала Ер-әсә»нең дә шағирҙың һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә сыҡҡан күләмлерәк йыйынтыҡтарына мотлаҡ индерелеүе – осраҡлы түгелдер, күрәһең.

Етмешенсе йылдарҙың тәүге яртыһында әҙәби тәнҡит Абдулхаҡ Игебаевҡа табан тағы бер тапҡыр мәрхәмәтле ҡарашын ташланы. (Бында Сәләх Кулибайҙың «Замандаштарға дан йыры» һәм Ғилемдар Рамазановтың «Юл егәрлене ярата» тигән мәҡәләләре күҙ уңында то-

тола.) Сәләх Кулибай үҙенең мәҡәләһен, нигеҙҙә, Абдулхаҡ Игебаевтың «Һағына белә икән таштар ҙа» (1972) исемле китабы айҡанлы яҙһа ла, һүҙен йыраҡтан – шағирҙың әҙәбиәткә яһаған тәүге аҙымдарынан уҡ башлай. Ҡасандыр «Йәшлек йыры» һәм «Тыуған ер» йыйынтыҡтарының редакторы булған Сәләх Кулибай, ошо йыйынтыҡтарға ҡарата үҙ ваҡытында яңғыраған тәнҡит һүҙҙәренең урынлы икәнлеге менән ризалаша. «Абдулхаҡ Игебаев,– тип яҙа тәжрибәле өлкән әҙип, яҡташына объектив баһа бирергә тырышып,– үҙенең шиғри ижадына ҡарата ҡатыраҡ та, йылыраҡ та әйтелгән иҫкәртеүҙәрҙе, тәнҡиттәрҙе сабыр ҡабул итә килде һәм дөрөҫ аңланы». Артабан мәҡәлә авторы шағирҙың һуңғы йылдарҙа ирешкән уңыштарына, уның характерындағы ҡайһы бер һыҙаттарға туҡтала һәм «Абдулхаҡ Игебаев иң актив ижад итеүсе шағирҙарҙың береһе» тигән һөҙөмтәгә килә. «Йыл һайын уның шиғри баҡсаһы киңәйә һәм мул уңыштар килтерә тора» тип тә өҫтәй Сәләх Кулибай. Был мәҡәләлә, һуңлабыраҡ булһа ла, Абдулхаҡ Игебаевтың 1969 йылда сыҡҡан «Урал тауышы» исемле китабы ла телгә алынып китә, һәм ул «шағирҙың үҙ тауышын көр яңғыратҡан китаптарҙың береһе» тип баһалана.

Ғилемдар Рамазанов та һүҙен алыҫтан – шағирҙың студент саҡтарынан башлай, уның характерындағы төп һыҙаттарҙы («үтә уңған, теремек, эшсән, өлгөр, кешелекле, кеселекле») билдәләп үтә. Ул Абдулхаҡ Игебаевтың ижадына киңерәк ҡараш ташлай – уны «әҙәбиәтебеҙҙең шаҡтай һәлмәк йөгөн тартып килеүсе төп көстәрҙең береһе» тип баһалау менән генә ҡәнәғәтләнмәй, бәлки шиғриәтенең үҙенсәлектәрен асыҡларға тырыша. Абдулхаҡ Игебаевтың һәр төрлө шау-шыуҙарға, шауҡымдарға бирелмәүе һыҙыҡ өҫтөнә алып кителә, уның ижадындағы эволюция ла шәйләнмәй ҡалынмай. «Хәҙер инде шағир, – тиелә, мәҫәлән, мәҡәләлә, – тормоштоң тышҡы күренештәрен йырлау менән генә сикләнмәйенсә, тәрәнгәрәк инергә, хәл-ваҡиғаларҙың философик айышын асырға ынтыла, шиғриәтенең образдары тоҫораҡ, һәлмәгерәк була килә». Абдулхаҡ Игебаевтың ижад манераһына туҡталып, уның традицион шиғыр алымдарына тоғро ҡалыуын баҫым яһап әйтә мәҡәләнең авторы. «Игебаев,– ти Ғилемдар Рамазанов, – халыҡ ижады өлгөләренә, халыҡсан шиғыр һәм йыр стиленә таянып эш итеүсе шағир. Шуға ла уның байтаҡ шиғырҙары йырға һалынып, халыҡ араһында киң таралып өлгөрҙө». Маҡтау һүҙҙәре менән бер рәттән, шағирҙың кәмселектәре лә уҡыусынан йәшерелмәй. Әйтәйек, уның үҙ-үҙен ҡабатлауы, риторикаға тартым аҡыл һатыу

менән мауығыуы билдәләнеп үтелә. Ғөмүмән алғанда иһә, «Юл егәрлене ярата» тигән мәҡәләне Абдулхаҡ Игебаевтың ижадын фәнни нигеҙҙә өйрәнеүгә табан яһалған беренсе аҙым тип әйтергә мөмкин.

Ниһайәт, һикһәненсе йылдар башы – Хәким Ғиләжев менән Ғайса Хөсәйеновтың үрҙә телгә алып кителгән мәҡәләләре. «Көр күңелле ихлас йырсы»ла һәм «Атайсал һағышы»нда башҡалар тарафынан элегерәк әйтелгән ҡайһы бер фекерҙәр ҡабатлана ла, оригиналь яңғырағандары ла юҡ түгел. Абдулхаҡ Игебаев ижадында Көнсығыш шиғриәте үҙенсәлектәренә хас күренештәрҙең барлығын, ә айырым әҫәрҙәрендә Аҡмулла поэтик алымдарының сағылып китеүен һиҙемләүҙе, мәҫәлән, шундайҙар иҫәбенә индерергә мөмкин. «Урал тауышы», «Оран һала Ер-әсә» менән Баязит Бикбайҙың «Ер» һәм Рәшит Ниғмәтиҙең «Үлтер, улым, фашисты!» тигән поэмалары араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ барлығын тойомлау ҙа ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ. «А. Игебаев – етди фекер йөрөтөргә лайыҡ шағир. Башҡорт әҙәбиәтендә уның үҙ урыны, үҙ тауышы бар», – тигән нәтижәгә килә Х. Ғиләжев үҙенең мәҡәләләрендә һәм «шағир тураһында уның айырым шиғырҙары буйынса түгел, дөйөм ижадынан сығып, уны өйрәнеп фекер йөрөтөргә» саҡыра ҡәләмдәштәрен.

Ғ. Хөсәйеновтың «Йырланған һәм йырланаһы йырҙар»ына әйләнеп ҡайтһаҡ иһә, уны әлегәсә Абдулхаҡ ижады хаҡында әйтелгән һүҙҙәрҙең иң тулыраҡы булып ҡала тиергә мөмкин. Был мәҡәләлә шағирҙың «Йәшлек йыры» (1954) китабынан алып «Шиғырҙар, поэмалар» (1980) китабына саҡлы ижадына ярайһы ғына тәрән һәм эҙмә-эҙлекле күҙәтеү яһалған. Ә бит, уйлап ҡараһаң, Х. Ғиләжев менән Ғ. Хөсәйенов мәҡәләләренән һуң да ун-ун биш йыл ваҡыт үтеп китте. Был дәүер эсендә А. Игебаев ижады ла бер урында торманы, әлбиттә, – артабан үҫеүен, киңәйеүен, ишәйеүен дауам итте. Дөрөҫ, уҙған йәй, шағирға алтмыш биш йәш тулған көндәрҙә, матбуғат биттәрендә, радио һәм телевидение аша байтаҡ йылы һүҙҙәр әйтелде әйтелеүен, тик барыбер Ғайса Хөсәйеновты дауам иттереүсе күренмәне, шикелле.

Һуңғы ун-ун биш йыл Абдулхаҡ Игебаев өсөн ысынлап та яңы артылыштар осоро булды. Күҙгә бәрелеп торған тышҡы күренештәргә генә ҡараш ташлайыҡ: ошо йылдарҙа ул өр-яңы һигеҙ китап әҙерләне һәм баҫтырып сығарҙы, шуларҙың дүртеһе (улар ике телдә – башҡорт һәм рус телдәрендә) балаларға адресланған. Шағирҙың балаларға тәғәйенләнгән күп һанлы китаптары араһында 1989 йылда

сыҡҡан «Һеҙҙең өсөн, балалар!» тигәне – иң уңышлыһылыр, моғайын. Уның йөкмәткеһе бай – автор уға элегерәк яҙылған әҫәрҙәрен дә индергән. Өҫтәүенә, «Бик тә кәрәк Тыныслыҡ!», «Тәбиғәт ҡосағында», «Көлөрһөң дә, иларһың да», «Әкиәт иленә сәйәхәт» тигән дүрт бүлекте берләштергән был китап күҙеңдең яуын алырлыҡ төҫлө һүрәттәр менән биҙәлгән. Ошо уҡ осорҙа донъя күргән «Гөлдәр һиберҙәй булам» (1984), «Әйтелмәгән һүҙҙәрем бар» (1990) исемле китаптар, ниһайәт, был мәҡәләне яҙыр өсөн ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр иткән «Һайланма әҫәрҙәр» (1994) Абдулхаҡ Игебаевтың шиғриәт баҡсаһына яңынан-яңы күркәмлек һәм гүзәллек алып килделәр, йәм өҫтөнә йәм өҫтәнеләр. Улай ғына ла түгел, «Әйтелмәгән һүҙҙәрем бар» тигән күләмле йыйынтығы өсөн шағир Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ булды.

Һуңғы ун-ун биш йылда баҫылып сыҡҡан китаптары Абдулхаҡ Игебаевтың шиғриәт баҡсаһына яңынан-яңы күркәмлек, гүзәллек алып килделәр, йәм өҫтөнә йәм өҫтәнеләр тип әйтеү – һис тә шапыртыу түгел. Уның ысынлап та шулай икәнлегенә ышаныу өсөн «Гөлдәр һиберҙәй булам» йыйынтығына туҡталып китеү ҙә етә. Был йыйынтыҡ һикһән биш шиғырҙан тора. Шуларҙың ике-өсө генә (шул иҫәптән йыйынтыҡҡа исем биргәне лә!) – «иҫке»ләрҙән, ҡалғандары – өр-яңылар. Шиғырҙарҙан тыш, бында өр-яңы парсалар һәм поэма ла бар. (Белмәйем, шағирҙың тыйнаҡлығы менән аңлатыла микән был, китаптың «Йәнгүзәлем» тигән бүлеген тәшкил итеүсе «Мөхәббәт йыры» исемле күләмле әҫәрҙең жанры күрһәтелмәгән. Һуңыраҡ сыҡҡан «Әйтелмәгән һүҙҙәрем бар» тигән китапҡа иһә ул «лирик поэма» булып ингән.) «Әйтелмәгән һүҙҙәрем бар» менән «Һайланма әҫәрҙәр»ҙә лә яңы шиғырҙар бик күп. Был йыйынтыҡтарҙа хатта ҡобайырҙар ҙа хасил булған – улар инде һикһәненсе йылдарҙың аҙағына һәм туҡһанынсы йылдарҙың башына ҡарай. Ошо китаптарға, уларға ингән яңы әҫәрҙәргә хайран ҡалып тораһың да, парсаларының береһендә шағир бик хаҡлы әйткәндер тип уйлап ҡуяһың:

Кеше бәхетенә көнләшмәнем,
Ашаманым кеше өлөшөн,
Үҙ ҡулдарым менән үҫтерҙем мин
Хеҙмәтемдең татлы емешен.

«Мөхәббәт йыры» телгә алынғас, уның тураһында бер-ике генә ауыҙ булһа ла һүҙ әйтмәй үтеү килешмәҫ. Абдулхаҡ Игебаевтың «Урал тауышы» исемле лиро-эпик, «Оран һала Ер-әсә» исемле патетик поэмалары уҡыусыға яҡшы таныш. Был әҫәрҙәр тәнҡитселәр иғтибарынан да ситтә ҡалманы. Ә бына һуңғы поэма, донъяға килгәненә инде ун йылдан ашыу ваҡыт үтеп китһә лә, үҙе тирәһендә әллә ни бәхәс уятманы, шикелле. Бының, бәлки, үҙ сәбәптәре лә барҙыр. Шул сәбәптәрҙең береһе «Мөхәббәт йыры»нда аныҡ хәл-ваҡиғаларға ҡоролған сюжеттың юҡлығында түгел микән? Поэманы тәү тапҡыр уҡығанда Абдулхаҡ Игебаев ижады хаҡында элегерәк яҙылған мәҡәләләр хәтергә төшөп ҡуя. Уларҙың ҡайһы берендә йәш шағирҙың фекер, мәғәнә тәрәнлеге урынына матур һүҙҙәр менән мауығыуы һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтелгән юлдар ҙа осраштырғылай ине. Тәү ҡарамаҡҡа, «Мөхәббәт йыры» ла матур һүҙҙәрҙән генә ҡамалған һымаҡ. Ысынлап та, шиғыр юлдары иҫ киткес матур яңғырай, улар тышҡы биҙәктәргә лә, эске моңға ла ифрат бай – әҫәрҙе уҡыған саҡта үҙеңде, донъя мәшәҡәттәренән арынып, һандуғастар сутылдаған гөлдәр баҡсаһында йөрөгәндәй тояһың. Тик был тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай. Поэманы иғтибар менәнерәк күҙләй башлаһаң, унда матур һүҙҙәргә төрөлгән фекерҙең дә, мәғәнә тәрәнлегенең дә етерлек икәненә тиҙ ышанаһың, ышанып ҡына ҡалмайһың – ҡыуанаһың да.

«Мөхәббәт йыры» һигеҙәр юллыҡ алтмыш алты строфанан тора. Ул бер ниндәй ҙә киҫәктәргә лә, өлөштәргә лә бүленмәгән – тотош текст менән яҙылған. Әҫәрҙең үҙәгендә – лирик герой. Ул – дөйөмләштерелгән образ. Хәйер, бер лирик герой ғына түгел – бында бөтәһе лә дөйөмләштерелеп бирелгән. Хатта төрлө хәл-ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алған конкрет сюжет та юҡ – поэма башынан алып аҙағына тиклем фәҡәт лирик геройҙың уй-кисерештәренән генә туҡылған. Кисерештәр иһә тәрән һәм йөкмәткеле – улар лирик геройҙы бөтә булмышы менән күҙ алдына килтереп баҫтыра. Поэмала йәнә бер дөйөмләштерелгән образ бар – ул лирик геройҙың яратҡан йәре, Йәнгүзәл. Лирик геройҙың Йәнгүзәленә ҡарата мөнәсәбәте, уға арнап әйтелгән һөйөү һүҙҙәре әҫәрҙең эстәлеген тәшкил итә лә инде. Был мөнәсәбәттең асылы поэманың тәүге юлдарынан уҡ төҫмөрләнә башлай. Әйтәйек, Йәнгүзәлен күргән һайын, лирик геройҙың күңел көмбәҙендә ҡапыл ғына ай балҡып китә; киреһенсә, яратҡан йәренең наҙлы ҡарашын күрмәй торһа, йыры етем ҡала; зарығып көткән

минуттарҙа оҙаҡ килмәй торһа, иң ҡәҙерле хыялдары менән хушлашыр һымаҡ; яҙмыш юлы йәне яратҡанын йыраҡ алып китһә, сарсап һағыныуҙан йөрәгенә ҡандар һауыр һымаҡ; ғөмүмән, Йәнгүзәле менән бергә булһа ғына, лирик геройҙың донъяһы бөтөн! Поэма бына шулай башланып китә лә, шағирҙың әйтер фекере артабан үҫтерелә лә үҫтерелә. Унда лирик геройҙың тынғы белмәҫ бай эске донъяһы, күңел ҡылының һәм йөрәк тибешенең төрлө мәлдәре арыу ғына сағылыш тапҡан. Хәл-ваҡиғалар ағышын был поэмала хистәр ағышы биләгән, шунлыҡтан әҫәрҙең нигеҙендә «хистәр сюжеты» ята тип әйтһәк тә урынлы булыр шикелле.

Тормош
икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ булһа,
Ғүмер – аҡҡан һыуҙыр…
Ә мөхәббәт –
әҙәм йәнендәге
Баҙрап торған ҡуҙҙыр…
Һөйөү ҡуҙы яна,
Йәнгүзәлем,
Беҙҙең ҡанда гөлтләп,
Ләкин ҡайсаҡ ҡапыл ҡуҙ һүнер тип
Йөрәк ҡуя тертләп!

Ыҙабаҡмы көнөм,
йә сыуаҡмы,
Йә дулаймы ҡойон…
Ете диңгеҙ,
ете тау артылып,
Һиңә бара уйым.
Йәнгүзәлем,
Һин тип йәшәйем мин,
Һин тип ғүмер уҙа…
Кәрәк икән мөхәббәтем өсөн
Йәнем булыр фиҙа!

Поэманың исеме есеменә бик тап килгән – мөхәббәт тойғоһон шағир илаһи бер көс дәрәжәһенә күтәргән, шуға ла уның йыры ысын мәғәнәһендә ода һымаҡ яңғырай. Ошо йәһәттән Абдулхаҡ

Игебаевтың был әҫәре күренекле рус шағиры А. Блоктың «Һылыу ханым тураһында шиғырҙар» тигән киң билдәле шәлкемен хәтерләтеп ҡуя.

«Мөхәббәт йыры»н уҡыған саҡта ни өсөндөр А. Игебаевтың бер ни тиклем элегерәк яҙылған «Йылы наҙҙарыңа тилмерәм…» (1978) исемле шиғыры ҡолаҡ төбөндә сыңлап торғандай тойола. Дөрөҫ, был әҫәрҙә һүҙ икенсерәк яҫылыҡта бара – лирик герой әсәһенең «йылы наҙҙарына», «ихлас һүҙҙәренә», «тере ҡарашына» тилмереүен белдерә. Шул уҡ ваҡытта ул «Шиғри хистәремдән гөл үрәм…» тигән бер генә фраза менән үҙенең бөтә булмышын да – донъяла йәшәү мәғәнәһен дә асып һала. «Мөхәббәт йыры»ның да асҡысы ошо кескәй генә фразала түгел микән? Ә бәлки, шағирҙың бөтә ижадына ла асҡыс шундалыр? Ысынлап та, әгәр А. Игебаевтың ярты быуатҡа яҡын осорҙа яҙған әҫәрҙәрен диҡҡәт менән, ҡайһы берҙәрен хатта ҡат-ҡат уҡый башлаһаң, уларҙың авторы ла беҙҙең алға шиғри хистәрҙән гөл үреүсе ҡиәфәтендә килеп баҫмаймы икән? Баҫалыр, моғайын.

Әлбиттә, хисһеҙ шағирҙың булыуы мөмкин түгел. Хисһеҙ кеше ысын мәғәнәһендә шағир ҙа була алмай торғандыр. Ә бына Абдулхаҡ Игебаевта ул урғылып, шашып тора һымаҡ. Шуға күрә уны хистәр шағиры тип атарға ла тулы хоҡуҡ бар, минеңсә. Тик бында «хистәр» төшөнсәһенең йөкмәткеһе генә тарайтылып ҡуйылмаһын. Ғәҙәттә уны мөхәббәт тойғоһо менән бәйләп ҡараусандар бит. Һүҙ юҡ, мөхәббәт донъяһы – хистәр даръяһы, бәлки, даръяның да иң көслөһөлөр әле. Ләкин хистәрҙе мотлаҡ мөхәббәт баҫсаһында ғына эҙләү һәм һөйөү йәки һөйөлөү тойғолары менән генә аңлатыу – уны яһалма рәүештә сикләүгә килтерер ине. Асылда хистәрҙең сығанағы – ғәйәт киңерәк тә, тәрәндәрәк тә. Шиғри хистәрҙең бер төрө булған мөхәббәт лирикаһына килгәндә иһә, Абдулхаҡ Игебаев ижадында ул иҫ китмәле ҙур урын биләп тора – уның ҡайһы ғына китабын алып ҡараһаң да, мөхәббәт темаһына арналған шиғырға юлыҡмай ҡалмайһың. Дөйөмләштерелгән Йәнгүзәл образы, мәҫәлән, тәү башлап «Һағына белә икән таштар ҙа» (1972) тигән йыйынтыҡта күҙгә салынып китә. Ошо исем аҫтындағы шәлкемгә ингән шиғырҙарҙың байтағы («Һулыу белмәгән гөлөм», «Ҡар өҫтөндә усаҡ ҡабыҙҙым», «Күкрәп-йәшнәп йәшәр саҡ икән», «Донъяла иң бәхетлеләр», «Һин ҡайҙарҙа ҡалдың?», «Төштәремдә күреп булһа ла», «Күк ҡабағы асыла» һ.б.) «Мөхәббәт йыры»на юл ярыусылар, иртәме-һуңмы уның

донъяға килерен белгерткән ҡарлуғастар булғандыр тип фараз итергә мөмкин – уларҙың темаларында ғына түгел, яңғыраштарында ла уртаҡлыҡ һиҙелеп тора. Алтмышынсы йылдар башында яңғыраған «мөхәббәт ул ҡыйғыр ҡоштай азат, бикләп булмай уны ситлеккә», «мөхәббәт ул яҙғы ташҡын һымаҡ, ҡаршы торорлоҡ көс юҡ уға» тигән юлдар ҙа шағирҙың был тема өҫтөндә күптән һәм ихлас эшләүен раҫлап тороусы кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр тиер инем мин. Тимәк, әле беҙ туҡталған лирик поэма юҡтан ғына бар булмаған – шиғри хистәрҙән үҙ гөлөн үрә-үрә, автор уға оҙайлы йылдар, йоҡоһоҙ төндәр аша килгән.

Абдулхаҡ Игебаевтың ижадын өйрәнгәндә бер үҙенсәлек күҙгә ташлана: уның бөтә китаптарында ла тип әйтерлек (хатта балаларға тәғәйенләнгәндәренең дә ҡайһы берендә) шиғырҙар айырым теманы эсенә алған шәлкемдәргә йыйып бирелгәндәр. Шағирҙың тәүгеләрҙән иҫәпләнгән «Тыуған ер» (1956) исемле китабында уҡ, мәҫәлән, «Йәшә, илем», «Тыныслыҡ өсөн», «Бәхетле йәшлек», «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» тигән бүлектәргә тап булаһың. Артабанғы йыйынтыҡтарҙа «Заман тауышы», «Йөрәк менән йөрәк һөйләшә», «Тыуған яҡ моңдары», «Ер һағышы – моңдарымда», «Башҡортостан – илгенәм», «Беләм ерем-һыуым ҡәҙерен», «Йәшлегемә ҡайтам…», «Һөйгәндәр, һөйөлгәндәр», «Ғашиҡтар баҡсаһында» һәм башҡа шуның кеүек шәлкемдәрҙе осратырға мөмкин. «Һайланма әҫәрҙәр»ендә лә шағир үҙенең ошо ғәҙәтенә тоғро ҡалған – унда шиғырҙар «Тик бәхеттән генә тормай донъя», «Беҙ ҡабыҙған зәңгәр усаҡтар», «Кемгә ышанырға?», «Йылдарым – моңдарым», «Донъябыҙҙан ни ҡала?» тигән төркөмдәргә берләштереп бирелгән. Хикмәт бында шәлкем исемдәренең шиғриәтсә матур, айырым бер ритм менән яңғырауында ғына түгел, әлбиттә. (Хәйер, уныһын да инҡар итергә кәрәкмәҫ.) Иң мөһиме – уларҙың йөкмәткеһендә, һәр фразаға һалынған мәғәнә тәрәнлегендә. Ошо атамаларға ҡарап ҡына ла Абдулхаҡ Игебаевтың поэтик офоҡтарын һәм ижад сығанаҡтарын төҫмөрләргә мөмкин. Профессор Ғ. Хөсәйенов әйткәнсә, шағир ижадының нигеҙ ташын тыуған ер, тыуған тупраҡ, тыуған яҡ моңдары тәшкил итһә, уларҙың тамыры иһә тыуған Башҡортостанына барып тоташа, артабан – киң илебеҙ, бөтә донъя хаҡында уйланыуҙарға ялғана һәм шағирҙы ил улы, заман улы итеп таныта.

Ил хәстәрҙәренә, донъя мәшәҡәттәренә, халыҡ яҙмышына, заман талаптарына Абдулхаҡ Игебаев бер ҡасан да битараф булманы.

Әҙәбиәт һуҡмаҡтары буйлап тәүге аҙымдарын яһаған саҡта уҡ әле, илленсе йылдар башында, «Илемә» тигән бер әҫәрендә йәш шағир: «Һиңә булһын минең һәр бер эшем, күкрәгемдә ташҡан бар көсөм, һуңғы һулышымды алғанғаса йәшәрмен мин Тыуған ил өсөн!» тип, ярып һалғайны. Артабан был фекер шағир ижадында үҙенсәлекле бер эволюция кисерҙе тиһәк тә була – ул йылдан-йыл көсәйә, әҫәрҙән-әҫәргә тәрәнәйә барҙы. Етмешенсе йылдар башында яҙылған «Бары һинең өсөн йәшәйем» исемле ике генә строфанан торған кескәй шиғырҙа, мәҫәлән, ҡайғы һурпаһын да күп һемергән, һуғыш һөрөмөндә лә етерлек сәсәгән шағир, ғүмер-ғүмергә бары иле өсөн йәшәгәнлеген ҡоро раҫлау менән сикләнеп ҡалмай, бәлки «тәүге йырым һинең хаҡта булды, һиңә булыр һуңғы йырым да!» тип асыҡтан-асыҡ, бар көсөнә яңғырата. Ошо уҡ йылдарҙа ижад ителгән «Ғүмер юлы» исемле икенсе шиғырында автор, донъя көткәндә, йәшәү дәүерендә ниҙәр генә кисерһә лә, йөрәге хисенә кер төшөрмәйәсәгенә ышандыра һәм кеше тигән бөйөк исемде һәр ваҡытта ла ғорур аҡларға һүҙен бирә. Йәнә шул да мәғлүм булһын: элек Абдулхаҡ Игебаев лирикаһында ант итеү, вәғәҙә биреү һымаҡ яңғыраған юлдар йышыраҡ осраһа, хәҙер, йылдар үтеү менән, ҡылған эштәр хаҡында уҡыусы алдында хисап тотоуға оҡшағандары күҙгә нығыраҡ салына. «Тик бәхеттән генә тормай донъя» тигән шиғыр быға асыҡ миҫал була ала:

Үкенмәйем, ғәмһеҙ йәшәмәнем,
Эштә дарман алдым илһамыма,
Яҙмыш саңдарында керләнһәм дә,
Тоғро ҡалдым һәр саҡ иманыма!

Шуныһы характерлы, шиғри юлдарға төрөп бирелгән фекерҙәрҙең ҡайһы берҙәре шағирҙың тамашасылар, китап уҡыусылар, радио тыңлаусылар, телевизор ҡараусылар алдында яһаған сығыштарында ла ишетелеп ҡала, әҙәбиәт һөйөүселәргә тәғәйенләнгән яҙмаларында ла сағылып китә. Әлеге «Ғүмер тауҡайҙары киртләскиртләс» исемле мәҡәләһендә, мәҫәлән, ул, бауырҙаштарына, моңдаштарына мөрәжәғәт итеп, үҙе тураһында, ижадының асылы тураһында былай ти: «Һеҙҙең өсөн яңы китап әҙерләнем, хөрмәтле уҡыусылар. Унда күңелем донъяһының һәр төрлө миҙгелдәре, һәр төрлө күренештәре, һәр төрлө биҙәктәре төҫмөрләнер. Йөрәгем

кисергәнде, намыҫым ҡушҡанды яҙҙым мин. Үҙебеҙ йәшәгән ер хаҡында, үҙебеҙ йәшәгән донъя хаҡында йырлап, йырҙарым менән замандаштар күңелен нурлап ғүмер итергә ынтылдым мин».

Абдулхаҡ Игебаев бөгөн дә йөрәге кисергәнде, намыҫы ҡушҡанды яҙыуын дауам итә. «Әллә ниҙәр башҡарырҙай булам, ләкин ваҡыт етмәй һаман да, ә бит минең әле, тирҙәр түгеп, ижад кәбәндәре ҡояһым бар тормош тигән серле яланда!» ти ул һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарының береһендә. Ысынлап та, шағир әүәлгесә актив һәм һөҙөмтәле эшләй. Быға ышаныу өсөн шундай факт килтереү ҙә етә: «Һайланма әҫәрҙәр»гә ингән шиғырҙарҙың өстән бере тип әйтерлек үҙҙәренең яҙылыу йылдары менән илде үҙгәртеп ҡора башлаған осорға тура килә. Тик бына замандаштары күңелен нурҙарҙай һүҙҙәр табыуы ғына бер аҙ ауырлаша төштө һымаҡ шағирға. Бошоноу, юҡһыныу, яманһыулау, болоҡһоу тойғолары менән һуғарылған әҫәрҙәрҙең күренгеләп китеүе шулай уйларға мәжбүр итә.

Әйтерһең дә,
илһам толпарымды
Ниндәйҙер көс ҡуйҙы тышаулап,
Хистәремдең
гәлсәр шишмәһен дә
Боҙ ҡапланы, гүйә, ҡоршаулап.
Бер нигә лә күңелем төшмәй минең,
Йәнде өйкәй шомло тынлыҡтар,
Аһ… ауыр ҙа,
ғазаплы ла икән
Шиғыр яҙылмаған минуттар.

Абдулхаҡ Игебаевтың һуңғы ете-һигеҙ йыл эсендә ижад иткән әҫәрҙәре араһында ҡапма-ҡаршыраҡ уй-фекер уятып ҡуйғандары ла юҡ түгел. «Быҫҡып йәшәү етте!» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, автор башта, «беҙҙең нисә йылдар ауыҙ йомоп», «шапырынып», «ытырғанып», «буръяҡланып», «айный алмай», «йән өшөтөп», «гел табынып», «заяға» һәм «вайымһыҙ үтте» тип үрһәләнә-үрһәләнә лә, аҙаҡ уҡыусыға бындай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә: «Данлы эшкә, шанлы үҙгәрешкә бағышлайыҡ көстө, йәнде дөрләтерлек ялҡын барҙа, быҫҡып йәшәү етте!» Бер йылдан һуң ижад ителгән «Донъя балҡып китһен…» исемле әҫәрендә шағир был фекерҙе артабан дауам иттерә

һәм «күп нәмәгә йәшәгәнбеҙ төптө алданып» тип уфтана. Шиғыр бындай юлдар менән тамамлана:

Оло йортобоҙҙоң
саң-туҙанын
Бер ҡағайыҡ әле сәмләнеп,
Сәмле эштән,
бөйөк үҙгәрештән
Донъя балҡып китһен,
йәмләнеп!

Бер ҡараһаң, авторҙың теләге изге, уй-ниәте саф, эскерһеҙ һымаҡ: йорт-илде елләтеп, уның туҙанын ҡаҡҡылап, һауаһын алмаштырып тороу бер ҡасан да һәм бер кемгә лә яҙыҡ булмаған бит. Ләкин «Һаҡлай алыр микән кешелек» исемле икенсе шиғырҙа һүҙ, һис көтмәгән яҡҡа боролоп, бөтөнләй башҡа йүнәлеш ала – донъяның балҡып, йәмләнеп китеүенә өмөт бағлаған лирик геройҙың тамағына заманның әсе хәсрәттәре килеп төйөлгән. «Әллә нимә булды был заманға, күҙ алдында бик йыш үҙгәрә…» – тип аптырай ул. «Ахыры, донъябыҙ ҙа ҡырыҫлана, күңелдәрҙә кәмей изгелек… Киләсәктә йөрәк шәфҡәтлеген һаҡлай алыр микән Кешелек!» тигән һорау ҙа тынғы бирмәй уға. Һорау яуапһыҙ ҡала, әлбиттә.

Һикһәненсе йылдарҙың ахырында – туҡһанынсы йылдарҙың башында ижад ителгән «Ҡайҙа шәфҡәт, ҡайҙа наҙ?», «Үҙебеҙҙе үҙебеҙ фашлайыҡ», «Ҡалманы ҡәҙер», «Оноттоңмо?», «Бәйғәмбәре ҡайҙа донъяның?», «Нисек түҙә икән заман?», «Ах, донъялар ниңә бола-ра?», «Был донъялар ҡайҙа бара ул?», «Шағир, тиҙәр…» исемле әҫәрҙәрҙә лә «Быҫҡып йәшәү етте!» менән «Донъя балҡып китһен»дә күҙгә бәрелеп торған рух күтәренкелеге һәм йөрәк түренән урғылып сыҡҡан дәрт, яңы һулыш алып, артабан да үҫеп, ҡоласын йәйеп ебәрәһе урынға, ни эшләптер күҙгә күренеп һүрелә төшкән, һүрелеү генә түгел, хатта үҙенең киреһенә әйләнеп ҡуйған – юғары пафос менән һуғарылған ялҡынлы саҡырыуҙарҙан һуң лирик герой бөтөнләй көтөлмәгән мөхиткә килеп юлыҡҡан. Унда әҙәп тарҡала, ышаныстар кәмей бара, хаҡлыҡ һәм сафлыҡ, шәфҡәт һәм наҙ юғала. Ғүмер баҡый ысын, таҙа мөхәббәткә табынып, уға ода йырлаған шағир, бөгөн килеп: «Мөхәббәттең ҡәҙере ҡалманы! Бына-бына сат-нап һыныр кеүек рухи донъябыҙҙың тағаны…» – тип иҡрар итергә

мәжбүр. Оло йорттоң «саң-туҙанын» ҡағырға сәмләнгән лирик герой ҙа, аҡланмаған өмөттәренән һыҙланып: «Ниндәй хурлыҡ, һәр тарафта бурлыҡ… илде иман менән тотоп торған бәйгәмбәре ҡайҙа донъяның?!» – тип танырға мәжбүр булған.

Абдулхаҡ Игебаевтың һуңғы йылдарҙағы ижадында күҙгә салынған бындай төрлөлөк – уның донъяға ҡарашы ниндәйҙер үҙгәрештәр кисерә тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Ижадтағы бындай төрлөлөктө, бөтәһенән дә элек, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡтың, унда барған ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙың үҙенсә бер сағылышы тип ҡабул итергә кәрәктер. Шағир аңлауынса, дәүер ҡаты ла, таш йөрәкле лә, уҫал ниәтле лә, сөнки ул «үрсеткән яһилдар донъяны бутай хәҙер, илдең ябай халҡына бөтөнләй бөттө ҡәҙер!» «Бөйөк үҙгәреш» башланғанда хасил булған яҡты өмөттәр, уй-хыялдар, шулай итеп, селпәрәмә килә, һорау артынан һорау тыуа: «… Мәкер баштар… илде бөлдөрҙөләр инде тамам, яманаттары сыҡҡан яһилдарҙың ҡот осорлоҡ бысраҡ эштәренә нисек түҙә икән беҙҙең заман?!»; «… Ер һаташа, донъя болара, милләт менән милләт сәкәләшә, илдәр ыҙғышалар үҙ-ара… Ах, донъялар ниңә болара?!»

Илде, ябай халыҡты бөлгөнлөккә төшөргән боларыуҙар, ыҙғыштар шағирҙың ижадына ғына түгел, уның шәхси яҙмышына ла ҡағылмай үтмәгән:

Һин халыҡсан,
моңсол шағир тиҙәр,
Әммә ләкин бармы ҡәҙерем?
Шағирҙарҙың ҡәҙерен белмәй торған
Миһырбанһыҙ, ҡанһыҙ
бәндәләрҙән
Һаҡлай күрсе мине, Тәңрем!

Шуныһы мөһим, заманалар ниндәй генә ауыр, болғансыҡ һәм буталсыҡ булмаһын, Абдулхаҡ Игебаев барыбер әүәлгесә көр күңелле, юғары рухлы, ғәҙеллектең, дөрөҫлөктөң, аҡылдың ҡара уйҙар, ҡара көстәр, алдаҡтар өҫтөнән ҡасан да булһа бер еңәсәгенә ышанысын юғалтмаған яҡты ҡарашлы шағир булып ҡала. Әгәр шиғырҙарының береһендә ул «дәүер ауыр, һыҙлай бауыр», «ҡәләмемдән ҡан тама!» тиһә, икенсеһендә иһә, донъя кендеген үҙ ҡулдарында тотҡан тел сарлаусыларға бындай саҡырыу ташлай:

«ала шайтан һымаҡ шашмайыҡ, дөп-дөп кенә типкән йөрәктәрҙә кешелеклек хисен һаҡлайыҡ!» Һуңғы йылдарҙа ижад ителгәндәр араһында «Белмәй ҡалдым, һиҙмәй ҡалдым» исемле әҫәр ирекһеҙҙән иғтибарҙы үҙенә тарта. Дөрөҫ, төп һүҙ бында кеше ғүмеренең һиҙелмәй ҙә үтеп китеүе хаҡында бара. Ләкин шиғырҙың «уйлаһам, уйылып китәм, их, минең йәшлек йылдарым мөғжизә булған даһа!» тигән һуңғы юлдарын уҡыған саҡта һис көтмәгән ерҙән, «Быҫҡып йәшәү етте!» күңелде өйкәп ҡуя: «быҫҡып» йәшәлһә лә (бәлки, бик быҫҡып та йәшәлмәгәндер әле), ул барыбер үҙебеҙҙең тарих шул – унан ҡасып та, баш та тартып булмай. Уны яңынан да яҙмайҙар.

Аныҡ бер шағиҙың бөтә ижадына байҡау яһау бурысын алға ҡуйғас, тағы бер мәсьәләгә ҡағылып китмәй булмаҫ, ахырыһы. Абдулхаҡ Игебаевтың тәүге китаптарына арналған мәҡәләләрҙә уны башҡаларға эйәреүҙә, ҡәләмдәштәрен ҡабатлауҙа ғәйепләгән һүҙҙәр ҙә ишетелеп киткеләгәйне.

Өйрәнеү, эйәреү, ҡабатлау төшөнсәләре әҙәбиәт ғилеме өсөн ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе ул. Ахыр сиктә традиция һәм новаторлыҡ күренештәренә барып тоташа торған был төшөнсәләрҙең теоретик нигеҙен асыҡлау һәр саҡ белгестәрҙең иғтибар үҙәгендә булды. Ләкин өйрәнеүҙең ҡайҙа тамамланып, эйәреүҙең һәм ҡабатлауҙың ҡайҙа башланып китеүен билдәләү йыш ҡына ауырҙарҙан-ауыр бурыс булып ҡала килә.

Миҫал өсөн Абдулхаҡ Игебаевтың «Имән» тигән шиғырына туҡталырға мөмкин. Ул – тәүгеләрҙән, 1953 йылда яҙылған. Һуңға табан йырға ла әйләнеп киткән – уның һүҙҙәренә Шамил Ҡолбарисов көй яҙған. Өс кенә строфанан торған был шиғырҙа автор фашист илбаҫарҙары көсләп таҡҡан һуғышты сағыу образдар аша биреүгә ирешкән. Ошоға оҡшаш художество алымын Назар Нәжмиҙең шул уҡ йылда яҙылған «Миләш» тигән шиғырында һәм 1959 йылда ижад ителгән «Ҡайындар» балладаһында ла тойомларға мөмкин. Быны нисек аңларға һәм аңлатырға? Кем кемгә эйәргән дә кем кемде ҡабатлаған? Улайға китһә, 1973 йылда Назар Нәжмиҙең дә «Имән» исемле шиғыры донъяға килә. Алты йылдан һуң уның «Имән төбөндә» тигән шиғыры ла тыуа. Әлбиттә, бында һүҙ исемдәр уртаҡлығы тураһында ғына барырға мөмкин. Сөнки Н. Нәжмиҙең әле атап үтелгән шиғырҙары – бөтөнләй башҡа юҫыҡта яҙылған әҫәрҙәр: береһендә һалҡын ҡанлылыҡ аша рухи һәм физик ныҡлыҡ кәүҙәләндерелһә, икенсеһе кеше күңелендә, кешелек донъяһында ғына түгел, бөтә Ер

йөҙөндә барған мәңгелек хәрәкәтте символлаштыра. Ә бына А. Игебаевтың 1982 йылда ижад ителгән «Таш та шымара, ти…» шиғыры менән Н. Нәжмиҙең 1969 йылда яҙылған «Йөрөгән таш ул шымара, тиҙәр…» исемле әҫәре араһында уртаҡлыҡ һәм яҡынлыҡ күберәк, минеңсә. Хәйер, ике шиғырҙың да нигеҙендә бер үк халыҡ мәҡәле ятһа ла, улар башкөллө мөстәҡил әҫәрҙәр.

Эҙләй китһәң, ошоға тартым оҡшашлыҡтарҙы шиғриәт донъяһында йыш ҡына осратырға мөмкин. Тыштан ҡарағанда, был бер-береңде ҡабатлау һымаҡ та тойолоп китә. Ундай әҫәрҙәрҙең авторҙары ҡайһы саҡта тәңгит утына алынырға ла лайыҡтыр, бәлки. Ләкин төптәнерәк уйлай башлаһаң, һөҙөмтә яһарға бик ашҡынып бармаҫҡа кәрәклегенә төшөнәһең. Юғиһә, кешене нахаҡҡа рәнйетеп ҡуйыуың да бар. Сөнки ижад практикаһында һис көтөлмәгән оҡшашлыҡтар ҙа булғылай бит. Миҫал өсөн йәнә Назар Нәжмигә мөрәжәғәт итәйек. 1962 йылда ул «Йылан арбаусы» тигән шиғыр яҙғайны. Уның йәйәләр эсенә алынған «Һиндостан урамында» тигән өҫтәмә атамаһы ла бар. Ошо уҡ осорҙа күренекле литва шағиры Эдуардас Межелайтис та «Заклинатель змей» исемле шиғырын яҙа. Бер үк күренеш, бер үк хәл-ваҡиға тураһында – ике әҫәр. Уларҙың авторҙары, тереклек иткән мөхиттәре, тыуып үҫкән тарафтары йәһәтенән генә түгел, донъяға ҡараштары, уны тойомлауҙары, ғөмүмән, мәҙәниәттәре, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән бер-береһенән бик алыҫ торалар. Телдәре, стилдәре, яҙыу манералары яғынан бер-береһенән ныҡ айырылған ике шағир, иғтибарҙарын бер үк күренешкә, бер үк фактҡа йүнәлтһәләр ҙә, һәр ҡайһыһы уны үҙенсә күрә, үҙенсә аңлай, үҙенсә ҡабул итә. Литва шағиры Эдуардас Межелайтисты Һиндостанға хас был күренеш барынан да элек үҙенең экзотикаһы – сәйерлеге, хикмәтлелеге менән арбаһа, башҡорт шағиры Назар Нәжми үҙенә хас ғәҙәт, манера буйынса, күргән нәмәһенән тәрән фәлсәфәүи һөҙөмтә яһай һәм шиғырын: «О һинд халҡы! Йыландарҙы арбай торған бөйөк халыҡ, көслө халыҡ!» – тигән юлдар менән тамамлай. Бына ошондай факттарҙан – көтөлмәгән ерҙән килеп тыуған оҡшашлыҡтарҙан һуң өйрәнеү, эйәреү, ҡабатлау, традицияларҙы дауам иттереү, үҫтереү кеүек төшөнсәләрҙең конкрет сиктәрен билдәләп ҡара инде! Абдулхаҡ Игебаев менән Назар Нәжмиҙең үрҙә телгә алынып, сағыштырып ҡаралған әҫәрҙәре араһындағы ҡайһы бер оҡшашлыҡтар ҙа һәр шағирҙың донъяны үҙенсә һиҙемләүенә, тойомлауына ҡайтып ҡала торған хикмәттер ул.

Традициялар хаҡында һүҙ сыҡҡас, Абдулхаҡ Игебаев ижадына хас тағы бер күренешкә туҡталып китеү урынлы булыр. Сөнки «Урал тауышы» менән «Оран һала Ер-әсә»нең авторы – традицияларға бик һаҡ һәм иғтибарлы кеше. «Беләм ерем-һыуым ҡәҙерен» (1976) тигән йыйынтыҡтың «Арнауҙар» исемле бүлегенә тупланған шиғырҙар уның тураһында шулай уйларға хоҡуҡ бирә. Бында һүҙ Атайсал хаҡында, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфө хаҡында ғына түгел, үҙҙәренән һуң ерҙә яҡты эҙ ҡалдырыусы ҡаһармандар хаҡында ла. «Гөлдәр һиберҙәй булам» (1984) исемле китапта был традиция артабан дауам иттерелде һәм «Арнауҙарым – ихлас моңдарым» тигән баш аҫтында айырым шәхестәргә бағышланған яңы шиғырҙар бирелде.

Дөрөҫ, шағирҙың элегерәк сыҡҡан йыйынтыҡтарында ла арнауҙар күренгеләп торҙо. Әйтәйек, патриот шағир Муса Йәлилгә, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә, атаҡлы әҙип Баязит Бикбайға бағышланған «Батырҙарҙың батыры», «Йырың гиҙә илдәр араһын», «Шағир йырын йырлай аҡҡоштар!..» тигән шиғырҙар алтмышынсы йылдарҙа уҡ яҙылғайны. Үрҙә аталған китаптарҙа бындай бағышлауҙар айырым шәлкемдәргә туплап бирелгәс, уларҙың әһәмиәте һәм тәьҫир көсө бермә-бер артып киткәндәй булды. Унан һуң сыҡҡан китаптарҙа арнауҙарҙың яңылары күренә торҙо. «Һайланма әҫәрҙәр»ҙә лә улар йыш осрай. Шулар араһынан татар халҡының атаҡлы улдары Ғабдулла Туҡай менән Хәсән Туфанға, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Рәшит Ниғмәти менән Назар Нәжмигә, күренекле прозаиктарыбыҙ Сәғит Агиш менән Зәйнәб Биишеваға бағышланғандарын айырыуса күрһәтеп үтергә мөмкин. «Шағир һәм әжәл», «Шағир иңендә», «Халыҡ шағиры», «Үҙең бөйөк, үҙең ябай», «Мин ишетәм Агиш тауышын», «Һин илаһи талант эйәһе» тигән шиғырҙарында Абдулхаҡ Игебаев үҙен өлкән быуын ҡәләмдәштәренең художество алымдарын, ижад манераларын, донъяға ҡараштарын яҡшы белгән һәм тәрән үҙләштергән уҡыусы итеп кенә түгел, бәлки уларҙың традицияларын артабан үҫтереүсе итеп тә таныта. Үҙенән өлкәндәргә лә, быуындаштарына ла, фани донъянан киткәндәргә лә, тереләргә лә ул берҙәй зур ихтирам күрһәтә, улар тыуҙырған рухи байлыҡҡа шатланып та, һоҡланып та ҡарай.

Шағирҙың арнау жанрында яҙылған утыҙға яҡын әҫәрендә әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, ғөмүмән, рухи донъябыҙ күгендә үҙ урындарын яулаған шәхестәрҙең образдар галереяһы

тыуҙырылған. Шуныһы мөһим, автор уларға мәҙхиә йырлауҙы төп бурыс итеп ҡуймаған (хәйер, уныһы ла етерлек!), бәлки һәр ҡайһыһының тик уға ғына хас сифатын асырға, мәҙәниәт донъяһында тотҡан урынын билдәләргә тырышҡан. Хөсәйен Әхмәтовҡа, Нариман Сабитовҡа, Заһир Исмәғилевкә, Хәким Ғиләжевкә, Ғилемдар Рамазановҡа бағышланған шиғырҙар – нәҡ ана шундайҙар иҫәбендә тиер инем. Абдулхаҡ Игебаевтың арнауҙар галереяһында, яҙыусылар, шағирҙар, композиторҙар менән бер ҡатарҙан, уның уҡытыусыларына, арҙаҡлы яҡташтарына, күңелен арбап, йөрәк түренә менеп ултырған айырым артистарға ла урын табылған. Былар бөтәһе лә шағирҙың һынсыл да, шул уҡ ваҡытта бай тәбиғәтле һәм киң күңелле кеше лә икәнен раҫлай торған кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәрҙер.

Әйткәндәй, Абдулхаҡ Игебаевтың был сифаты әлеге шул инеш һүҙ ролен уйнаған «Ғүмер тауҡайҙары киртләс-киртләс» тигән мәҡәләһендә лә күпмелер дәрәжәлә сағылып китә. Үткәндәрҙе барлап, ғүмер юлына һәм ижадына бер ҡараш ташлап, тирә-йүнгә, ғүмер юлы буйлап уның менән бергә атлаған кешеләргә үҙенең мөнәсәбәтен шағир бына былай аңлата: «Йөрәк хистәреңде йырға һал, тип, ҡулыма тәүге ҡабат ҡәләм биргән изгелекле балалар йортона (Абдулхаҡ Игебаев бик йәшләй етем ҡалып, балалар йортонда тәрбиәләнеп үҫкән. – *Ә.Х.*), ҡыңғыраулы мәктәбемә, ғәзиз әсә кеүек шәфҡәтле тәрбиәселәремә, һөйөклө уҡытыусыларыма, мәрхәмәтле яҡташтарыма мин ҡат-ҡат рәхмәт әйтәм! Шулай уҡ минең ижади яҙмышыма ыңғай йоғонто яһаған барлыҡ ҡәләмдәштәремә, нәшриәт мөхәррирҙәренә, гүзәл йырҙар бүләк иткән композиторҙарға, сая рухлы, кешелекле остаздарыма йөрәгем түрҙәрендә иң-иң ҡайнар ихтирам тойғолары йөрөтөлә». Абдулхаҡ Игебаевтың был һүҙҙәрендә халҡыбыҙ аңында күп быуаттар дауамында тәрбиәләнгән әхлаҡ ҡағиҙәләренең береһе һәм иң берәгәйлеһе кәүҙәләнеш тапҡан. Шуға ла мин уларҙы берсә тулҡынланыу тойғоһо кисереп, берсә эске ҡәнәғәтләнеү белдереп, ләкин шул уҡ ваҡытта бер ни ҡәҙәр әрнеү һәм әсенеү хистәре менән дә килтерәм. Сөнки ер йөҙөндә (шулай уҡ көндәлек тормошта ла) олоно – оло, кесене кесе итә белмәгән, үткәндәрҙе бик тиҙ онотоп, иманын һатҡан, уҡытыусыларына, остаздарына ҡарата йөрәгендә ихтирам тойғоһо йөрөтөү генә түгел, хатта этлек эшләргә әҙер торған мәғәнәһеҙҙәр ҙә етерлек бит, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

Шағирмын тигән шағирҙың үҙ поэтик йөҙө, үҙ поэтик тауышы, үҙ аһәңе булырға тейеш. Шәп әйтелгән бер генә фраза ла да шағирҙың

исемен мәңгеләштергән, уның бөтә ижадына хикмәтле бер асҡыс булып хеҙмәт иткән осраҡтар ҙа билдәле әҙәбиәт донъяһында. Әгәр «И вечный бой! Покой нам только снится…» тигән фраза яңғырап китә икән, беҙ шунда уҡ егерменсе быуат рус шиғриәтенең классигы Александр Блокты хәтеребеҙгә төшөрәбеҙ. Рустың икенсе бер мәшһүр шағиры – Бөйөк Ватан һуғышы яугиры Сергей Орлов үҙенең «Его зарыли в шар земной…» тигән йөрәк тетрәткес юлдары менән уҡыусы күңеленә мәңгелеккә кереп урынлашты. Бындай миҫалдарҙы үҙебеҙҙең әҙәбиәттә лә күпләп табырға мөмкин. Әйтәйек, «Рус түгелмен, ләкин россиян мин…» тигән юлдар инде күптән Мостай Кәримдең эфирҙағы саҡырыу сигналдары һымаҡ яңғырай. «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә…» иһә әллә ҡайҙан уҡ мин – «Назар Нәжмиҙеке» тип ҡысҡырып тора.

Ошоға тартым һөйләмдәр Абдулхаҡ Игебаев шиғриәтендә лә байтаҡ ҡына. Улар «ҡанатлы фразалар» шикелле хәтерҙә ҡалалар һәм телебеҙҙе ҡыҫҡа, ләкин баҙыҡ, үткер яңғыраған һүҙбәйләнештәр менән байыҡтыралар. Алтмышынсы йылдар башында уҡ әле шағир «Ҡулдан килһә» исемле әҫәрендә уҡыусыны бына бындай юлдар менән шаҡ ҡатырғайны: «… ҡулымдан килһә, иң тәү үҙен дөмөктөрөр инем әжәлдең»; «… ҡулымдан килһә, күҙ йәштәрен һөртөп алыр инем донъяның». Йылдар үткән һайын, уларға яңылары өҫтәлде: «Ете юл сатында ҡалғанда, өмөтөм утында йылындым»; «Йөрәктән сыҡмаған йырҙы отоп булмай»; «Ыҙғыш хөкөм һөргән йортта ҡот булмаҫ!»; «Буш күңелең менән килгәнсе, буш ҡул менән килеү яҡшыраҡ!»; «Ҡәҙерҙәрен һуңлап төшөндөм шул тик бер генә килгән ғүмерҙең»; «Донъя йәмдәренә зауыҡланып, шиғри хистәремдән гөл үрәм…»; «Йыртыҡ сәкмән кейһә кейгән, һыр бирмәгән яттарға…»; «Күтәралмаҫ михнәттәрҙән Ерҙең биле һыныр һымаҡ» һ.б. Ҡабатлап әйтәм, ынйы бөртөктәре һымаҡ йымылдаған бындай һөйләмдәрҙе Абдулхаҡ Игебаев әҫәрҙәрендә байтаҡ табырға мөмкин. Ә шулай ҙа уның визит карточкаһы булып «Һағына белә икән таштар ҙа» тигән ғәжәйеп матур ҙа, тылсымлы ла фраза хеҙмәт итә торғандыр. Был фраза Абдулхаҡ Игебаевты башҡа берәр шағир менән бутарға ирек бирмәҫ. Уға тағы «Таштарҙың да беләм телен» менән «Йылмайығыҙ, йондоҙҙар!» ҙа килеп ҡушылһа, ул сағында инде Абдулхаҡ Игебаев шиғриәтенең арбаусы көсөнән тиҙ генә ысҡынырмын тимә.

Абдулхаҡ Игебаевтың шиғри хистәрҙән гөл үреүсе шағир икәнлеген иҫбатларҙай тағы ла бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин

булыр ине. Ләкин уның ҡырҡ йылдан ашыу ҡәҙерләп үҫтергән баҡсаһындағы емештәрҙең бөтәһен дә бер юлы ауыҙ итеү – тормошҡа ашмаҫ эш. Был мәҡәләлә шағирҙың оҙайлы ижад юлын тағы бер тапҡыр күҙ уңынан уҙғарып, һуңғы йылдарҙағыһын күпмелер кимәлдә тәртипкә һалыу бурысы ғына күҙәтелде. Һүҙҙе тамамларҙан алда йәнә «Ғүмер тауҡайҙары киртләс-киртләс»кә әйләнеп ҡайтмаҡсымын. Унда әҙиптең ижад лабораторияһы ла бер ни ҡәҙәр асылып киткәндәй була, тигәйнек, һәм шағирҙың үҙ әҫәрҙәрен бер ҡасан да көсәнеп яҙмауы, ә бәлки йөрәге ҡушҡанса илһамланып яҙыуы тураһындағы таныуын килтергәйнек. Йөрәге ҡушҡанса илһамланып яҙыуына ышанмау мөмкин түгел – Абдулхаҡ Игебаевтың күпселек әҫәрҙәренән ысынлап та илһам нуры бөркөлөп тора. Был фекерҙе шағирҙың һуңғы йылдарҙа ижад иткән ҡобайырҙары ла ҡеүәтләй. Йомғаҡлап әйткәндә, Абдулхаҡ Игебаев ижады – башҡорт әҙәбиәтендәге сағыу бер күренеш ул. Уның йырланған йырҙары күп булһа ла, йырланаһылары ла байтаҡтыр әле. «Йәнгүзәлем» авторына шиғри хистәрҙән хуш еҫле, күҙ яуын алырлыҡ гөлдәрҙе үрәһе лә әле үрәһе.

1996

«КҮКРӘК ҺӨТӨ АҡТЫ ҠАН БУЛЫП»

Назар Нәжмиҙең һуңғы поэмаларынан береһенә арналған был мәҡәләне шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән атау маҡсатҡа ярашлыраҡ төҫлө тойолдо. Хикмәтле фраза менән уҡыусы күңелен арбау ниәтенән генә түгел. Бигерәк тә ошо фразаға төрөлгән фекерҙең тәрән дә, тетрәткес тә булғаны өсөн. Һиҙеп торам: шифриәтебеҙҙе иғтибар менән күҙәтеп барыусы зирәк аҡыллы һәм сос хәтерле уҡыусы был һүҙҙәрҙең ҡайһы әҫәрҙән алынғанлығын шәйләп тә өлгөрҙө. Эйе, эйе, улар ысынлап та «Тере ҡан» тигән поэманан. Әҫәрҙәге дүрт геройҙың береһенә – һуғыштың тәүге сәғәттәрендә үк бер көнө лә тулмаған балаһын юғалтҡан Гөлзифаға ҡағылған һүҙҙәр был:

Беркөнлөктәр, өскөнлөктәргә лә
Һуғыш – һуғыш ине… Ҡанһыҙлыҡ…
Зифа – әсә, үҙе әсә түгел,
Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып.

Йөрәген ярып тыуған бәпесен тупылдатып бер һөйөргә лә өлгөрмәгән йәш ҡатын – «әсә, үҙе әсә түгел…» Мостай Кәримдең «Ҡара һыуҙар»ындағы «ҡатын булмай етем ҡалған тол кәләш» шикеллерәк. Ике осраҡта ла һүҙ кеше яҙмышындағы ҙур фажиғә тураһында бара. Фажиғәләрҙең икеһенә лә һуғыш ғәйепле. Ләкин «Тере ҡан» һуғыш хаҡында ғына түгел – уның идея-тематик йөкмәткеһе күпкә киңерәк.

«Тере ҡан» – Назар Нәжмиҙең матбуғатта күренгән ун бишенсе поэмаһы. Матбуғатта күренгән тип әйтеүемдең үҙенә күрә сәбәбе бар: халыҡ араһында, шағирҙың әлегә донъя күрмәгән әҫәрҙәре лә байтаҡ икән тигән хәбәр йөрөй. Имеш-мимештәрҙең дөрөҫ булып ҡуйыуы ла ихтимал: бынан теүәл ун йыл элек яҙылған «Тере ҡан», әгәр яңылышмаһам, һигеҙ йылдан һуң ғына баҫылып сыҡты (1988 йылда Ҡазанда икенсе исем аҫтында нәшер ителгән вариантын иҫәпкә алмағанда). «Иблис» (1973–1976) һәм «Урал» (1976) поэмалары менән дә шундайыраҡ хәл булды – етмешенсе йылдарҙың башында һәм шул уҡ йылдарҙың уртаһында яҙылһалар ҙа, уҡыусыға шаҡтай һуңлабыраҡ барып еттеләр.

Ошо йәһәттән Наҙар Нәжмиҙең 1988 йылда сыҡҡан «Атай йорто» исемле йыйынтығын иң тулыларҙан тип иҫәпләргә мөмкин, сөнки унда шағирҙың һуңғы осорҙа ижад иткән поэмаларының бөтәһе булмаһа ла, байтағы бергә туплап бирелгән. 1994 йылда сыҡҡан «Яҡынайыу» тигән китапта иһә уларға яңылары – «Ике Зөләйха» (1984– 1985) һәм «Тере ҡан» (1986) – өҫтәлде. Шулай итеп, яҙылыуына байтаҡ ваҡыт үтеп китһә лә, «Тере ҡан» шағирҙың күләмле әҫәрҙәре араһында әлегә тиклем һуңғыларҙан һәм яңыларҙан булып ҡала килә.

Назар Нәжми ижадына бәйле бындай күренештәргә шағирҙың замандашы һәм ҡәләмдәшн Хәким Ғиләжев күпмелер асыҡлыҡ индергәндәй итте-итеүен. Уның «Атай йорто» һәм «Яҡынайыу» исемле китаптарға баш һүҙ рәүешендә яҙған «Был донъяла һин йәшәйһең икән…» һәм «Үҙ иманы менән» тигән төплө мәҡәләләрен уҡып сыҡҡас, имеш-мимештәрҙе тыуҙырған сығанаҡтарҙың һәм сәбәптәрҙең хәҙер инде кеше аңламаҫлыҡ тәрән сер түгеллегенә ышанаһың. Шуныһы ла мөһим, был мәҡәләләрендә Хәким Ғиләжев ҡәләмдәшенең ижадына байҡау яһап, уға үҙенең тейешле баһаһын биреп кенә ҡалмай, тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре алдына ярайһы ғына ҡыйыу һәм көнүҙәк бурыстар ҙа ҡуя.

«Ҡапҡалар», «Урал» поэмаларының авторына ошондай уҡ ихтирамлы һәм илтифатлы ҡараш Хәсән Назарҙың «Шиғриәтебеҙ тураһында уйҙар» тигән сығышында ла («Ағиҙел» журналы, 1996 йыл, 4-се һан) сағылып китте: «үҙе ябай, үҙе мөғжизә ул Назар Нәжми шиғриәте»,– тип яҙған автор, өлкән ҡәләмдәшенең талант үҙенсәлеген билдәләп. Тимәк, Назар Нәжмиҙең ижадына, уның «күңел төпкөлдәрен айҡап, әллә ниндәй бер тылсым көсөн һалып яҙған» әҫәрҙәренә уҡыусылар ҙа, шағирҙың ҡәләмдәштәре лә битараф түгел.

Һүҙ сәнғәтенең теорияһы өлкәһендә эшләүсе бәғзе ғалимдар, әҙәби әҫәрҙең темаһы йыш ҡына уның атамаһында сағыла тиеберәк фекер йөрөтөүсән. Быныҡ менән килешергә кәрәктер, сөнки әҙәбиәт практикаһында уны дәлилләрҙәй байтаҡ миҫалдар табырға мөмкин. Шул иҫәптән Назар Нәжми ижадында ла… Әйтәйек, «Тере ҡан» поэмаһының исеме күптәрҙең хәтерендә Дауыт Юлтыйҙың киң билдәле «Ҡан» романын яңыртмай ҡалмайҙыр. Назар Нәжми әҫәренең дә төп темаһы – ҡан, тик Икенсе донъя һуғышында түгелгән ҡан. Әгәр ҡан ҡойҙорған Беренсе империалистик һуғыш Дауыт Юлтыйҙың окоптарҙа сыныҡҡан геройҙарын революция юлына баҫтырһа,

Назар Нәжмиҙең Бөйөк Ватан һуғышы яландарында ҡан ҡойған геройҙары Юлтый геройҙарының рухташтары булып хәтерҙә ҡала. Ләкин Назар Нәжми поэмаһында ҡан темаһы киңерәк һәм ҡалҡыуыраҡ юҫыҡта яҡтыртылған – үҙенең тура мәғәнәһендә лә, метафоралар рәүешендә лә. Әҫәрҙең был үҙенсәлеген уның лирик пландa яҙылған инеш өлөшөндә үк төҫмөрләргә мөмкин:

Ҡан… Ҡан… Ул – йән, йөрәк, һулыш, тормош –
Мөҡәддәстәрҙән ул иң мөҡәддәс!
«Ҡан – йән» – рифма ниндәй! Ә рустарҙа
Тура килә уға «мөхәббәт».

Күреүебеҙсә, «ҡан» һүҙе бында дүрт төрлө мәғәнәлә ҡулланылған. Артабанғы юлдарҙа шағир был һүҙҙең даирәһен уғата ла киңәйтә: ҡан – изгелек һыны; ҡан – яҡын туғанлыҡ; ләкин ҡан ҡаты дошманлыҡ та булырға мөмкин. Шулай итеп, «ҡан» һүҙе Назар Нәжми поэмаһында үҙенең полифоник яңғырашын тапҡан. Өҫтәүенә, һүҙҙе омонимлаштырыу юлы менән шағир «ҡан-ҡәрҙәшлек» һәм «ҡан-дошманлыҡ» тигән ике төшөнсәнән «ҡан-дуҫлыҡ» тигән өр-яңы өсөнсө төшөнсә килтереп сығарған. («Ҡан-дошманлыҡ түгел, ә ҡан-дуҫлыҡ йәшәй хәҙер кеше ҡанында».) Яңы төшөнсә иһә, үҙ сиратында, «ҡан» һүҙенең тағы бер яңы мәғәнәһен тыуҙырған: «Ул дуҫлыҡтың һүҙһеҙ һөйләшерлек ҡан теле бар, йөрәк теле бар» икән дә баһа. Бына ошонда поэманы асып ебәргән «Йөрәк ҡаным менән яҙа-яҙа, теркәп килдем йылға йылдарҙы. Ни менән һуң мин яҙырға тейеш ҡанға бәйле ошо юлдарҙы?» тигән риторик һорауҙың да асылы бер ни тиклем асыҡлана төшә: ҡан тураһындағы әҫәр, тимәк, ҡан теле менән яҙылырға хаҡлы. Ниһайәт, «ҡан» һүҙенең был мәҡәләгә эпиграф булып тороҙай тағы бер варианты: әҫәлек вазифаһын атҡарыуҙан мәхрүм ителгән йәш ҡатындың күкрәк һөтө ҡанға оҡшап китә икән – һис тә ғәжәп түгел.

Назар Нәжмиҙең быға тиклем ижад ителгән поэмалары һымаҡ, «Тере ҡан» да еләткес әҫәр түгел. Һәр хәлдә уны, ахырына ҡасан барып етермен икән тип уҡымайһың. Композицион яҡтан теүәл, сюжеты ыҡсым. Инеш һүҙгә тартым лирик башланғыстан тыш, ул дүрт бүлектe эсенә алған. Һәр бүлектең – үҙ тәғәйенләнеше, үҙ билдәләнеше. Күләмдәре менән уларҙың бер-береһенән бик ныҡ айырылып тороуҙарын шуның менән аңлатырға мөмкин. Әйтәйек, беренсе

һәм өсөнсө бүлектәр һәр ҡайһыһы ике йөҙләп һәм унан да ашыу юлға һуҙылһа, икенсе бүлек ни бары егерме һигеҙ юлға һыйған. Һуңғы, йомғаҡлаусы бүлек тә артыҡ ҙур түгел – етмеш-ниҡһән юлдар тирәһе. Әҫәрҙе башынан алып аҙағына тиклем диҡҡәт менән уҡыһаң, унда нагрузкаһыҙ бер генә юл да, хатта бер генә һүҙ ҙә осратмаҫһың – бөтәһе лә үҙ урынында.

Атамаһы уҡ күп төрлө ассоциациялар уятҡан поэманың идея йөкмәткеһе лә ифрат бай. Идея йөкмәткеһенең асылын иһә инеш һүҙҙә яңғыраған риторик һорауҙар тирәһендәге уйланыуҙар тәшкил итә. Ләкин әҫәр абстракт уйланыуҙарҙан туҡылмаған. Күңелен борсоған, зиһененә тынғылыҡ бирмәгән, йөрәген өткән һорауҙарға яуапты автор тормоштоң үҙенән эҙләй. Бындай һорауҙарҙы иһә ысынбарлыҡ атлаған һайын тыуҙырып ҡына тора.Ҡайһы берҙәренең тамырҙарын юллап, шағир ара-тирә тарих төпкөлөнә лә төшөп киткеләй. Тик ул тарих һөйләүҙе маҡсат итеп ҡуймай. Авторҙың ҡарашы киләсәккә төбәлгән: «Беҙҙең йәшәү түгел өмөтһөҙ», – тигән оптимистик раҫлау менән тамамлана поэма.

Әйткәнебеҙсә, әҫәрҙең сюжетын төйнәп ебәреүсе төп ваҡиға – Бөйөк Ватан һуғышы. Тик ул сюжетты төйнәп, ойошторо ебәреүсе генә. Прозаик Дауыт Юлтыйҙан айырмалы булараҡ, шағир Назар Нәжми һуғыш тураһында тәфсилләп һөйләүҙе бурыс итеп ҡуймай. Быны ул уҡыусынан да йәшермәй.

Ентекләүгә роман бик дуҫ булһа,
Поэмаға түгел бик дуҫтан.
Күпме билдәһеҙлек, күпме серҙәр
Асылмайса ҡала һуғыштан…

Үҙенең ҡайһы бер поэтик алымдары менән «Тере ҡан» шағирҙың элегерәк, алтмышынсы йылдарҙа, яҙылған «Йыр тураһында баллада»һын хәтерләтеп ҡуя. «Йыр тураһында баллада»ла, мәҫәлән, һуғыш башланыу фажиғәһен тасуирлау өсөн автор иҫ китмәле сағыу образ-символ тапҡайны: майҙанға ҡарай ат өҫтөндә елдереүсе егет ҡулындағы ҡамсы һис көтмәгән ерҙән ҡылысҡа әйләнеп китә.

(Заманында был әҫәрҙең поэтик үҙенсәлектәрен һәм художество камиллыҡтарын билдәле ғалим һәм тәнҡитсе Ким Әхмәтйәнов бик тәрән һәм ҙур оҫталыҡ менән тикшергәйне.) «Тере ҡан»да ла ошоға тартым күренеш һәм әҙәби алым: тыныс тормоштан һуғыш осорона

күсеү мәле йәшен йәшнәүгә оҡшап китә. Кинәт кенә, көтмәгәндәнитмәгәндә килеп тыуған хәлдең драматик асылын шағир дүрт юлға һыйҙырған:

... Ҡапыл шартлау... Һәм ер тетрәп ҡуйҙы,
Геүләү тауышы килде һауанан.
Бар донъяның аҫты өҫкә килде –
Ут эсенә инде тыуыр көн.

Өҫтән-мөҫтән генә уҡып, еңелсәрәк ҡараш ташлағанда, бында һуш китерлек бер нәмә лә юҡ төҫлө. Шиғырҙың тәүге өс юлы хатта прозаға хас ғәҙәти һөйләмдәргә оҡшап китә. Ләкин һуңғы юл икеләнеүҙәргә һис ниндәй ҙә урын ҡалдырмай: баҡһаң, баштағы юлдарҙан тәрән һәм ҙур йөкмәткеле образ-һын үҫеп сыға икән дә баһа. Тимәк, автор ул юлдарҙы аңлы рәүештә файҙаланған. Асығыраҡ итеп әйткәндә, шиғырҙың тәүге өс юлынан башҡа дүртенсеһе лә тыумаҫ ине һәм уларҙан тыш образ-һынды ла күҙ алдына килтереүе ҡыйын булыр ине. «Ут эсенә инде тыуыр көн». Бер юл, әммә ҡалай берәгәйле юл!

Поэма артабан да шулай дауам итә: ваҡиғалар калейдоскоптағы шикелле бер-бер артлы алмашынып ҡына тора. Сәхнә әҫәрҙәренә хас ремарка стилен ҡулланып, уларҙы былайыраҡ итеп төҫмөрләргә мөмкин булыр ине. Иҫкәрмәҫтән илгә баҫып ингән дошман сик буйында урынлашҡан ҡаланы бомбаға тота башлай. Яҙмыш ҡушыуы буйынса һуғыштың тәүге сәғәтенә үк шаһит булған һәм уның үлемесле ҡарашы менән дә тәүгеләрҙән булып күҙгә-күҙ осрашҡан йәш командир Яхин, бала табыу йортонда ятҡан ҡатыны Зифаны тылға оҙатыуҙы үтенеп, үҙенең ординарецы Иванды ҡалаға ебәрә. Ординарец Иван, сәсәрҙәй булып, йүгерә-атлай ҡалаға килеп еткәндә, ул инде янғын менән ҡамап алынған була: бала табыу йорто емерелгән, уны ут-төтөн ҡаплаған, «аҡ халатта йә булмаһа эске күлдәктә көйө ҡатындар сабыйҙарҙы өс-дүртен бергә өй эсенән тышҡа ташыйҙар». Зифаны Иван көс-хәл менән эҙләп таба: ул, һушын юғалтып, ҡанға батҡан килеш носилкала ята. Иван уны бер аҙ оҙата бара ла, күргәндәрен тиҙерәк командирына еткерергә тип, кире сик буйына саба. Ләкин Иван сик буйына әйләнеп ҡайтыуға уның командиры, йәп-йәш лейтенант Яхин, инде үлек була. Һушына килгәс, Зифаның йөрәген өтөп алған тәүге кисереш – сабыйының яҙмышы тураһындағы уй, уны мәңгегә юғалтыуын тойомлау.

Балаһының табылырына өмөт бағламаһа ла, ирен иҫәндер тип уйлай ул. Күпмелер ваҡыт үткәндән һуң Зифа һауыға һәм аяғына баҫа. Ирен эҙләп табыу ниәте менән ул яу ҡырына китә һәм ялан госпиталендә доктор булып хеҙмәт итә башлай. Көндәрҙең береһендә госпиталдә көтөлмәгән хәл була: бөтә йөҙө бинт менән уралған, ҡаны хатта бинт өҫтөнә һарҡып сыҡҡан ҡаты бер яралы һалдат Зифаны танып ҡала һәм бышылдап ҡына уға исеме менән өндәшә; Зифа уны танырға тырыша, ләкин булдыра алмай – һалдат һушын юғалта; ҡаты яралыны нисек кенә булһа ла үлем тырнағынан тартып алыр өсөн Зифа уға үҙенең ҡанын бирә. Иртәгәһен, ҡарсыға кеүек ябырылған дошман самолеттары яралылар тейәлгән эшелонды утҡа тотҡанда, Зифа ла һәләк була («Кисә үҙе ғүмер биргәйне ул, бөгөн үҙе яҙҙы ғүмерҙән»).

Поэманың тәүге бүлеге бына ошолай тамамлана. Икенсе бүлек, үрҙә әйткәнебеҙсә, – иң ҡыҫҡаларҙан. Унда теге ҡаты яраланған һалдаттың Иван икәнлеге асыҡлана. Госпиталдә ятҡанда дуҫтары уға фотоһүрәт килтереп тапшыра. Был фотоһүрәттә Иванға ҡанын биреп, уны үлемдән ҡотҡарған һәм оҙаҡ та үтмәй үҙе һәләк булған доктор бүләк итеп ҡалдырғанлығын да әйтәләр.

Алды Иван, Ҡарап ҡатты Иван…
Күҙҙәренән мөлдөрәп йәш аға.
Ҡараштылар дуҫтар. Бына һиңә
Көлкө тиештеләр үҙ-ара.

Ивандың күҙҙәренән мөлдөрәп йәш ағыуы, артабан иһә үкһеп-үкһеп илай башлауы госпиталдә ятыусыларға тәүҙә ғәжәп тойолһа ла, тора-бара бының да сере асыла: ҡанын биреп, уның ғүмерен һаҡлап алып ҡалған доктор командир ҡатыны Зифа булып сыға. Шулай итеп, Назар Нәжмиҙең «Тере ҡан»ы үҙенең йөкмәткеһе менән романға тороролоҡ әҫәр тиһәк тә, хата булмаҫ: ул, ысынлап та, ҙур күләмле сәсмә әҫәрҙәргә хас ҡатмарлы һәм аймылышлы яҙмыштарҙы һүрәтләүгә ҡоролған. Поэманың һуңғы ике бүлегендә тасуирланған хәл-ваҡиғалар ҙа шуны раҫлай. Унда Ивандың артабанғы яҙмышы күрһәтелә. Дөрөҫ, автор уны сәсмә әҫәрҙәрҙәге һымаҡ ентекләп, энәһенән-ебенә ҡәҙәр тикшереүҙе бурыс итеп ҡуймаған. Әгәр ундай бурыс ҡуйылһа, жанр ҡанундарына, бәлки, хыянат та ителер ине. Ивандың ҡайһы тарафтарҙа тыуып үҫкәнлеге, ҡайһылай итеп сик буйына барып эләгеүе, яу ҡырында ҡаты яраланғас, тыуған ауылына ҡултыҡ таяғында ҡайтыуы,

Еңеү тантанаһынан һуң илдә тыныс тормош урынлашҡас, институт тамамлауы, ҡала ҡыҙы Марфушаны тыуған ауылына килен итеп алып ҡайтыуы – быларҙың бөтәһе хаҡында ла бәйнә-бәйнә түгел, ә өҙөп-йолҡоп ҡына хәбәр ителә. Әммә ишетер ҡолаҡҡа ярым-йорто ғына яңғыраған фактҡарҙан да геройҙың тормош юлы тотош бер кеше ғүмере булып күҙ алдына килеп баҫа.

Поэмала һүрәтләнгән яҙмыштар йәшен тиҙлегендә тоҡанып киткән һуғыш өйөрмәһендә аймылышһалар ҙа, шағирҙың аймылышлы яҙмыштар мәсьәләһенә ҡарашы шаҡтай киңерәк, күпмелер кимәлдә ул хатта фәлсәфәүи яңғыраш ала. Был үҙенсәлек әле һүҙ барған өсөнсө һәм дүртенсе бүлектәрҙә күҙгә айырыуса ныҡ салына. Ул Ивандың өй түрендә, ике тәҙрә араһында эленеп торған Зифа һүрәтен йәнәшә мөйөштәге тәре – Мәрйәм-әсә менән сағыштырыуҙан башлана:

Ике Әсә – береһе легенданан,
Алланың бит үҙен тыуҙырған.
Икенсеһе – ике ғүмер биреп,
Һәләк булған һуғыш ҡырында.

Алланың үҙен тыуҙырған легендар Әсә менән йәнәш ҡуйып ҡарала икән, тимәк, Иван өсөн Зифа – бөйөктәрҙән дә бөйөгөрәк зат, ҡәҙерлеләрҙән дә ҡәҙерлерәк йән эйәһе. Был сағыштырыу, бәлки, әҙәм балаһының бер тамырҙан яралыуына, тик һуңынан ғына, бик күп йылдар үткәс кенә, уның расаларға һәм милләттәргә бүленеүенә ишаралыр? Әҫәрҙең сюжетына һиҙелер-һиҙелмәҫтән генә килеп ингән Иван менән Марфа араһындағы диалог та шуны ҡеүәтләй түгелме? Бынһы инде – уйланырға, тарих төпкөлөндә һәм ғилем киңлектәрендә иңләп-буйлап йөҙөргә яратыусылар өсөн. Әлегә иһә авторҙың: «Беҙҙең заман – ҡанға ҡан ҡушылып, буталып та бөткән замана»,– тигән раҫлауы менән килешергә генә ҡала.

Иван менән Марфа араһындағы диалог Зифаны Мәрйәм-Әсә менән сағыштырған юлдарға һиҙелер-һиҙелмәҫтән генә ялғанып китһә лә, уның поэмала тоҡан урыны баһалап бөткөһөҙ. Был диалогты Назар Нәжмиҙең тағы бер табышы тиер инем. Ир менән ҡатын араһында барған ҡара-ҡаршы һөйләшеү (ара-тирә ул бәхәскә лә әйләнеп киткеләй), күләме яғынан әллә ни ҙур булмаһа ла, йөкмәткеһе менән ифрат бай. Әхлаҡ мәсьәләләре лә ҡуҙғатыла унда. Ижтимағи-сәйәси мәсьәләләр ҙә ситләтеп үтелмәй. Халыҡ һәм милләт төшөн-

сәләренә лә ҡараш ташлана. Хәҙерге замандың ҡатмарлы һорауҙарына яуап эҙләп, тарихҡа ла күҙ һалына. Ҡыҫҡаһы, Марфа менән Иван диалогы әҫәрҙең идея-художество бәҫен бермә-бер арттыра, уның исемендә үк яңғыраған темаһын тәрәнерәк һәм төплөрәк аңларға булышлыҡ итә.

Әлбиттә, был диалогта күтәрелгән шул тиклем күп мәсьәләләрҙе бер ултырыуҙа ғына хәл итеп бөтөрөү мөмкин түгел. Автор уға ынтылмай ҙа, шикелле. Шағир ижтимағи-сәйәси мәсьәләләргә күҙ йомоп йәшәй алмаһа ла, ул барыбер тулы мәғәнәһендә, йәғни саф сәйәсмән түгел бит, иң тәүҙә һәм барынан да элек – сәнғәт әһеле. Уның фекерләү ысулы ла бөтөнләй башҡаса. Шуға күрә әҙәби әҫәрҙә уҡыусыны ҡыҙыҡһындырған бөтә һорауҙарға тулы яуап биреү ҙә мотлаҡ түгел. Ләкин Назар Нәжмиҙең «Тере ҡан»ында тағы ла шул һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә тойомланып киткән эске борсолоуҙар бер кемде лә битараф ҡалдырмаҫ. Поэманың «үҙгәртеп ҡороу эпопеяһы» башланғансы яҙылғанлығын иҫәпкә алғанда, авторҙың, ысынлап та, ҙур шағир һәм аҡыл эйәһе икәнлегенә тағы бер тапҡыр ышанаһың. Әҙәбиәт ғилемендәге, ҡайһы бер осраҡта әҙәбиәт сәнғәттең айырым вәкилдәре сәйәсмәндәрҙән, философтарҙан, иҡтисадсыларҙан алдараҡ атларға, ижтимағи-сәйәси тормоштоң үҫеш йүнәлештәрен күрәҙәселәр һымаҡ башҡаларға ҡарағанда иртәрәк һиҙемләргә мөмкин тигәнерәк раҫлауҙың бойомға ашыуын самалайһың был поэма миҫалында.

«Тере ҡан»дың идея-художество үҙенсәлектәрен тикшереүҙе артабан дауам итер өсөн уҡыусы иғтибарын әҫәрҙең тәүге биттәрендә үк тип әйтерлек яһалған автор сигенешенә йүнәлтеү хәйерлерәк булыр:

Яҙмыш мине шаһит итмәһә лә
Тәүге сәғәтенә һуғыштың,
Ә Берлинда йәнем, тәнем менән
Кисерҙем мин һуңғы минутын.
Тәүге менән һуңғы араһында
Миллионлаған ғүмер, яҙмыштар.
Ҡайтманылар күпме туғандарым,
Күпме дуҫтар, күпме таныштар.
Миллионлаған яҙмыш араһында
Минең геройҙар ҙа исемле.
Ләкин улар болондағы һанһыҙ
Үләндәрҙең дүрте шикелле.

Был өҙөктө энә күҙенән үткәргә иҫәп тотолмай бында. Маҡсат итеп ҡуйһаң, уның хаҡында бик оҙаҡ һөйләргә һәм байтаҡ йылы һүҙ әйтергә мөмкин булыр ине. Мәҫәлән, романдарға хас фекерләү алымы яңынан үҙен һиҙҙереп ҡуя бында: килтерелгән өҙөктөң һәр юлы тәрән идея-эстетик йөкмәтке менән һуғарылған. Ләкин әлеге осраҡта иғтибарҙы үҙенә тартҡаны – һуңғы юл. Әҫәрҙә дүрт герой хәрәкәт итәсәгенә ишаралай шағир был юлда. Тик поэмала геройҙар һаны дүртәү генә түгел, минеңсә, бишенсеһе лә бар. Ул – автор үҙе. Шуға ла лирик сигенештәрҙә яңғыраған уй-фекерҙәргә автор тауышы тип ҡарау урынлыраҡ булыр төҫлө. Сөнки әҫәрҙең башынан алып ахырына тиклем автор үҙ хыялында тыуҙырған әҙәби геройҙар менән бергә атлай, кәрәк сағында теге йәки был ҡылыҡтарына баһаһын бирә.

Ысынлап та, ишетелер-ишетелмәҫ кенә тибрәлеп торған автор тауышының поэмала тотҡан урыны ифрат ҙур. Уның ыңғай роле иң элек әҫәрҙең композицияһында сағыла. Әгәр автор хәл-ваҡиғалар ағышына туранан-тура ҡатнашып, әленән-әле уларға үҙенең мөнәсәбәтен белдереп бармаһа, геройҙар тормошонан килтерелгән ярым-йорто факттар бер төйөнгә төйнәлеп, бер бөтөн булып ойошоп китә алырҙар ине микән? Был – беренсенән.

Икенсенән, автор тауышы әҫәрҙең уҡыусыға психологик тәьҫирен көсәйтә – көсәйтә генә түгел, хатта бермә-бер арттыра. Был фекерҙе миҫалдар менән нығытырға мөмкин. Әйтәйек, Иван, янғын эсендә ҡалған ҡаланан сик буйына әйләнеп ҡайтып, командирын үле килеш күргәс, баҫҡан ерендә ҡатып ҡала. Һәм автор был хәлдең психологик асылын һәм сәбәбен шунда уҡ асып һала: «Һуғыштың был тәүге сәғәттәре – күнегелмәгән һис үлемгә». Әҙәби геройҙың рухи һәм физик хәлен психологик яҡтан ышандырырлыҡ итеп асып һалыу иһә шағирҙың образлы һүрәтләү оҫталығын һәм художестволы фекерләү кимәлен билдәләй торған күренештәрҙән һанала.

Йә булмаһа, һушына килгәс, Зифаның тәүге минуттарҙа кисергән хистәрен иҫкә төшөрәйек. «Ҡайҙа бала? Мөмкинме һуң тере ҡалыуҙары бындай донъяла?..» – тип уйлай ул. Автор яңынан уҡыусыға ярҙамға килә һәм был аймылышлыҡҡа асыҡлыҡ индерә:

Үлгән тине тере балаһын ул,
Тере тине үлгән иренә.
О ышаныу! Ярай әле ул бар!
Ә һуң унһыҙ йәшәү мөмкинме?

Зифам! Зифам! Һинең тойғоларға
Ҡыҫылаһым килмәй, килмәй шул!
Үлгән һаман һиндә тере көйө,
Тере балаң һаман үлгән шул.

Үлем алдынан һуңғы һулышын алып, ҡан эсендә ерҙә ятыусы Зифаға адресланған автор һүҙендә аймылышлыҡ уғата ла асыҡлана төшә:

Үлмә, Зифа, һинең ҡыҙың тере,
Былай ҙа бит бала атаһыҙ.
Нигә тағы ул ҡалырға тейеш,
Ул ҡалырға тейеш әсәһеҙ?

Ивандың ҡайғыһын уртаҡлашып, бөтә палата уның менән бергә илай башлағас, тағы автор һүҙҙәре яңғырай:

Ниндәй халыҡ һуң был? Аңлап ҡара,
Ауыр кеүек фекер йөрөтөргә.
Нисек итеп Гитлер баҙнат иткән
Ошо халыҡты ҡол итергә?

Поэманың өсөнсө (үрҙә әйткәнебеҙсә, ул башлыса Иван менән Марфа араһындағы диалогтан тора) һәм дүртенсе (унда иһә һүҙ Ивандың Зифа ҡыҙын эҙләүен дауам итеүе һәм уны табырына ҙур өмөттәр бағлауы хаҡында бара) бүлектәрендә лә автор тауышы йыш яңғырай. Әҫәрҙең ахырында ул үҙ геройҙарының ышаныслы һәм айырылғыһыҙ юлдашына әүерелә тиһәк тә ярайҙыр: автор уларҙың яҡты хыялдарына һоҡлана, шул хыялдарҙы тормошҡа ашырыр өсөн ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша, уртаҡ шатлыҡтар кисерә, кәрәк сағында бәхәсләшеп тә ала, уларҙы дөрөҫлөккә, хаҡлыҡҡа саҡыра, дәртләндерә, сәмләндерә. Йыйып ҡына әйткәндә, тора-бара автор образы үҙ аллы герой юғарылығына күтәрелә, һәм ул бик актив хәрәкәт итә, шуның менән дә поэманың сюжетында һәм композицияһында мөһим роль уйнай.

Нихайәт, «Тере ҡан»дың тағы бер үҙенсәлеге. Ул да автор образына бәйле, уға автор тауышы үтәгән функцияларҙың өсөнсөһө тип тә ҡарарға мөмкин: Назар Нәжмиҙең күп кенә башҡа әҫәрҙәрендәге һымаҡ, «Тере ҡан»да ла уның ижтимағи-сәйәси, фәлсәфәүи һәм әҙәби-эстетик ҡараштары ярылып ята. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә

генә булһа ла күҙ һирпеп алыу зыян итмәҫ. Поэманың кереш өлөшөндә үк, мәҫәлән, автор уҡыусыны былай тип киҫәтеп ҡуя:

Шағир, тиҙәр икән, ҡанундарҙан
Азат минең ябай мәртәбәм.
Мин азатмын алтын йүгәндәрҙән,
Мин азатмын алтын тәртәнән.

Метафораға һәм аллегорияға ҡоролған был строфаның мәғәнәһен аңлатып тороуҙың хәжәте юҡтыр: бөтәһе лә ябай, бөтәһе лә көн кеүек асыҡ бында.

Шағирҙың эстетик ҡараштарын сағылдырыусы бындай юлдарҙы артабан да осратырға мөмкин. Марфа менән Иван араһында барған ҡара-ҡаршы һөйләшеүҙе тыңлап торғандан һуң, мәҫәлән, автор, геройының ҡайһы бер ҡылыҡтарын үҙ итмәүен белдереп, бындай реплика ташлай:

Иван! Иван! Ниңә «шәйләп!» тиһең,
Марфаға һин, зинһар, шик һалма.
Шунан да ҙур бәхетһеҙлек юҡтыр,
Эшең, уйың булһа яһалма.

Ваня! Ваня! Шағир, тиҙәр миңә,
Күкрәп була бары йәшнәһәң.
Ни мәғәнә барҙыр шағирлыҡта,
Әгәр ҙә гел шәйләп йәшәһәң.
. . . . . .
(О ялғанлыҡ! Ярамһаҡланыуҙар!
Шағир өсөн ниндәй түбәнлек!
Шулар аша төрлө бейеклеккә
Беҙ менергә хатта өйрәндек.)

Йәиһә бына был юлдарға иғтибар итәйек:

Эй уҡыусым, һин дә мине кисер,
Яҙғандарым таныш тойолһа.
Китте күреү тормош, һуғышты ла
Әҙер сценарий буйынса.

Назар Нәжми ижадында ҡатын-ҡыҙ образы ҙур урын алып тора. Был теманы ул шиғырҙарында ла, поэмаларында ла берҙәй әүҙем яҡтырта, драма әҫәрҙәрендә лә ситләтеп үтмәй. Ләкин ҡатын-ҡыҙ темаһы Назар Нәжми ижадында күңел асыу, ғишыҡ тотоу, мөхәббәт утында яныу, шаярып алыу, иркәләнеү, сөсөләнеү кеүек арзан, еңелелпе тойғоларҙы сағылдырыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Шағирҙың был темаға етди һәм төплө ҡарашы уның «Әсә» тигән балладаһында уҡ әле үҙен ярайһы ғына ныҡ һиҙҙергәйне. «Тере ҡан» поэмаһында иһә ул уғата ла көслөрәк яңғырай – ҡатын-ҡыҙҙың һөйөү һәм һөйөлөү объекты булыуҙан да бигерәк, кешелек ырыуын дауам иттереүсе илаһи зат икәнлегенә баҫым яһала. Бында яңынан әҫәрҙең төп темаһына, ҡан темаһына, әйләнеп ҡайтабыҙ: ҡаныңды биреп, кешене терелтеү – яралыға, ауырыуға йән индереү, ғүмер биреү була икән, әсәлек вазифаңды үтәп, бала табыу ҙа – ғүмер биреү тигән һүҙ. Ерҙә бала табыу, тәү ҡарамаҡҡа, ғүмер биреү кеүек ғәҙәти генә бер хәл булып күренһә лә, шағир уға иҫ киткес тәрән мәғәнә һала һәм кеше тыуыу фактына гимн йырлай. Ләкин шул уҡ ваҡытта, кеше аҡылының үҙен үҙе юҡ итеүгә йүнәлдерелгәнлеген тойоп, тәрән көрһөнә, ауыр һыҙлана, ихлас бошона:

Ә һуң унда күпме бөйөклөк бар –
Кеше тыуыу – ниндәй бөйөклөк!
Ошо бөйөклөктө ҡыйратырға
Тыуған һуғыш – ниндәй кейеклек!
Кыйралышта күпме ҡорал һәм ут,
Ә ут һүнә кеше тәнендә,
Үҙ аҡылы алдында бит әҙәм
Кала үҙе бөжәк хәлендә.

Хәсән Назар әйтмешләй, Назар Нәжми шиғриәте – ысынлап та, үҙе ябай, үҙе мөғжизә. Күрер күҙгә ғәҙәти генә тойолған күренештәрҙән, хәл-ваҡиғаларҙан да тормош фәлсәфәһен, йәшәү айышын таба ул һәм уны ҡойоп ҡуйған шиғри юлдарға һала:

Бәхетте лә, бәхетһеҙлекте лә
Ялғай-ялғай йылдар үттеләр.
Ә ул йылдар киләсәктәрҙе лә
Аға-аға үткән иттеләр.

Шағирҙың фәлсәфәүи һәм эстетик ҡараштары уның сәйәси аңынан айырылғыһыҙ. Халыҡ, тыуған ил, милләт төшөнсәләренә ҡағылышлы мәсьәләләр тураһында һүҙ барғанда был берҙәмлек айырыуса яҡшы тойомлана. «Милләтем һәм халҡым менән генә мин шағирмын, тыуған иллемен», – ти автор. Күберәк эстетика өлкәһенә ҡарағаң был фекер, артабан үҫтерелеп, сәйәси мәсьәләләргә килеп ялғана һәм ахыр сиктә фәлсәфәүи төҫ ала: «Һәр халыҡтың, һәр милләттең ерҙә үҙ тамыры һәм үҙ олоно», шуға күрә, аҙмы, күп һанлымы ул, һәр халыҡ һәм һәр милләт үҙенсә бөйөк.

Әйтергә кәрәк, был фекер бик заманса яңғырай. Илде үҙгәртеп ҡора башлағас, халыҡ һәм милләт төшөнсәләренә лә ҡараш күпмелер үҙгәрҙе бит: элек «бәләкәй» тип йөрөтөлгән халыҡтар хәҙер «әҙ һанлы халыҡтар» тип атала башланы. Поэмалағы «Халҡың менән ғорурланыу – ул дан! Тик кәрәкмәй уны (ниңә ул һан!) ҙурға, бәләкәйгә бүлергә!» тигән юлдарҙы хәтергә төшөрһәк, шағирҙың сәйәсмәндәрҙән алданыраҡ атлағанлығына тағы бер тапҡыр ышанаһың.

Әлбиттә, авторҙың ҡайһы бер ҡараштары менән килешеп тә бөтмәҫкә мөмкин. Мәҫәлән, «бөйөк дуҫлыҡ»тың шик аҫтына алыныуы менән. Уны үҙ аҡылдары үҙҙәренә лә етмәгән, ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында халыҡ менән идара итеү дәрәжәһенә күтәрелгән айырым етәкселәр ялғанға әйләндермәй микән? Ябай халыҡ, бигерәк тә хеҙмәт халҡы, араһындағы дуҫлыҡ та ысын түгел микән ни?

Был риторик һорауҙарым менән «Тере ҡан» поэмаһының авторын нимәләлер ғәйепләргә йыйынмайым. Шағир кеүек, уҡыусы ла уйланырға, килешергә йәки шикләнергә, ризалашырға йәки икеләнергә, ҡабул итергә йәки бәхәсләшергә хоҡуҡлы бит. Әгәр әҙәби әҫәр төрлө фекерҙәр уята икән, тимәк, автор маҡсатына ирешкән. Назар Нәжмиҙең «Тере ҡан» поэмаһы тап ана шундай әҫәрҙәрҙән һаналалыр, минеңсә.

1996

«ЙЫРЫМ МЕНӘН ДОНЪЯ ЯҠТЫ»

(Әнисә Таһирова шиғриәте тураһында уйланыуҙар)

Ғүмер тигәнең бигерәк аяуһыҙ, уға һинең ғәмең бар ни ҙә, юҡ ни – һыу һымаҡ аға ла аға, ут кеүек яна ла яна. Әле ҡасан ғына Әнисә Таһирова тәүҙә – башлап яҙыусылар, бер аҙҙан йәш яҙыусылар исемлегенә индерелеп йөрөтөлә ине. Бөгөн иһә ул – тиҫтәнән ашыу шиғыр китабы авторы. Шулар араһында иғтибарҙы иң ныҡ йәлеп иткәне – «Йөрәк йәдкәре» тип аталғаны булыр. Сөнки әлегә ул шағирәнең иң яңы китабы. Күләме яғынан да элеккеләренән күпкә айырыла. Өҫтәүенә, рәссам Владислав Меос менән биҙәлеш мөхәррире Фазлетдин Ислаховтар ҙа йөрәк йылыһын йәлләмәгән – китаптың тышынан уҡ сафлыҡ һәм паклыҡ бөркөп тора.

Уйламаған-нитмәгән ерҙән ҡулыма килеп эләккән «Йөрәк йәдкәре»н ашыҡмайынса ғына битләп, мейегә һеңдерә-һеңдерә уҡып ултырғанда күңелде биләгән хистәрҙе башҡаларға ла еткереү теләге тыуғас, үҙем өсөн ғәжәйеп тә, ғибрәтле лә бер асыш яһағандай иттем: шаҡтай ғына ижад тәжрибәһе туплап өлгөргән шағирәбеҙ хаҡында әлегә тиклем йүнле-башлы мәҡәлә лә юҡ икән дәһә! Һәр хәлдә, Әнисә Таһирова «үҙен һәләтле лирик шағирә итеп танытты», «уның “Ҡоралай”», «Аҡсарлағым минең» китаптарына (улар иһә йәш шағирәнең тәүге йыйынтыҡтары ине. – *Ә.Х.*) ингән күпселек шиғырҙарына тыйнаҡ хис һәм мөләйемлелек, наҙлылыҡ һәм күркәмлек хас» тип, бынан байтаҡ йылдар элек проф. Ғ. Хөсәйенов биргән баһанан башҡаны хәтеремә төшөрә алманым. Әгәр яңылышһам, бик шат булыр инем.

«Йөрәк йәдкәре» – Әнисә Таһированың һайланма әҫәрҙәр йыйынтығы түгел. Ара-тирә етмешенсе һәм һикһәненсе йылдар арауығында ижад ителгән шиғырҙар осраштырып ҡуйғылаһа ла, китап башлыса шағирәнең һуңғы осорҙа яҙылған әҫәрҙәренән тора. Әммә, һайланма әҫәрҙәр йыйынтығы булмаһа ла, «Йөрәк йәдкәре» – авторҙың поэтик йөҙөн билдәләргә, уның ижадының ҡайһы бер үҙенсәлектәрен асыҡларға мөмкинлек бирерҙәй китап. Был китап тураһында ла, уның авторы хаҡында ла иркенләберәк һөйләргә ваҡыттыр. Тик, әҫәрҙәрҙе анализлауға күсерҙән алда, йыйынтыҡтың

эске төҙөлөшөнә ҡағылышлы бер иҫкәрмә яһап китмәй булмаҫ. Ул, әлеге лә баяғы, шиғырҙарҙы үҙенә башҡа бер зауыҡ менән урынлаштырыу мәсьәләһенә ҡайтып ҡала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, поэтик әҫәрҙәрҙе китап биттәренә тыңҡыслап тултырыу ғәҙәтенән әле һаман арына алмайбыҙ. Шунлыҡтан уларҙың бәҫе китә, уҡыусыға тәьҫир итеү көсө кәмей, ҡайһы саҡта хатта ижад емешен түгел, ә ашыҡ-бошоҡ йомарлап һандыҡҡа тултырылған сепрәк-сапраҡты хәтерләтеп ҡуя.

Әйтергә кәрәк, «Йөрәк йәдкәре»ндәге һәр бүлектең үҙ атамаһы булһа ла, уларға тупланған шиғырҙар араһында, уртаҡлыҡҡа ҡарағанда, тема төрлөләгө күҙгә нығыраҡ ташлана. Китапты асып ебәреүсе «Һинең рухың беҙҙең менән бергә…» тигән бүлек кенә башҡаларҙан айырылып тора – унда авторҙың төп иғтибары әҫә һынын кәүҙәләндереүгә йүнәлтелгән. Һәм был һис тә юҡтан түгел – үҙенең яңы китабын шағирә әҫәһенең яҡты иҫтәлегенә бағышлаған. Бүлеккә ингән шиғырҙар әҫә һынын мәңгеләштереүсе гөлләмәне хәтерләтә. Был гөлләмә сирек быуат дауамында ҡәҙерләп үрелгән. Шуға ла унда күпмелер кимәлдә шағирәнең ижад эволюцияһы ла сағылыш тапмай ҡалмай. Әгәр йәшерәк саҡта яҙылған ҡайһы бер шиғырҙарҙа матур яңғырашлы һүҙҙәрҙе килешле итеп уйнатыу («Ниндәй генә һүҙҙәр һайлаһам да, тиң булалмаҫ кеүек үҙеңә. Йөрәктәге оло мөхәббәтем яҙ ҡояшы булһын көҙөңә») күҙгә салынһа, артабан инһә уларҙа фекер тослоғо, тормош фәлсәфәһе өҫтөнлөк итә башлай («Маллы түрә булһам, һалыр инем һинең рухҡа арнап ҙур бер мәсет, байлыҡ ҡыуып, эҙләмәнем бәхет, йыр донъяһы – йәнем тартҡан тәхет»).

Әсәләргә, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ затына арнап яҙылған шиғырҙарҙы беҙ йыш ҡына гимнға, үҙебеҙсә әйткәндә – тантаналы йырға тиңләп баһаларға күнеккәнбеҙ. «Һинең рухың беҙҙең менән бергә…» тигән бүлеккә ингән шиғырҙар ундай эпитеттарға мохтаж түгел. Уларҙың күпселеге әсәләрҙең көндәлек тормошта тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ҡылған изгелектәре, күргән хәстәрлектәре хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған. Әнисә Таһирова һүрәтләүенсә, әсә – үҙ балаларына йөрәк йылыһын өләшеүсе лә, уларға әленән-әле көс-ҡеүәт өҫтәп тороусы ла, ышаныслы һәм эскерһеҙ серҙәш тә, уйҙарына һағыш һарҡылғанда – берҙән-бер йыуатыусы ла, тормоштоң ел-дауылдарынан ҡурсалаусы ла. Йыйып ҡына әйткәндә, әсә – ғүмергә әсә булып ҡала. Шуға ла ул – Ер йөҙөндәге иң яҡын, иң ғәзиз, иң һөйөклө кешеләрҙән һанала.Тик тәбиғәт тигәнең, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ифрат бәгерһеҙ

шул. Әсә тиклем әсәләрҙе лә аямай ул – аяҡтан йыға. Сөнки уның үҙ ғәме һәм үҙ айышы, үҙ бойомо һәм үҙ хәстәре. «Әсәкәйем ауыр хәлдә ята…», «Бары таныш…», «Шиңгәндәрҙер инде ҡәбереңдә…», «Осоп керҙе матур бер күбәләк…», «Бөгөн, әсәй, төштәремә керҙең…» тигән шиғырҙарҙа тормоштоң тап ана шул яҡылмаған, ләкин бик аяуһыҙ ҡануны – кире лә ҡаҡҡыһыҙ, ҡот та осҡос, ҡотолғоһоҙ ҙа ҡануны – сағылыш тапҡан да инде. Тәбиғи, был шиғырҙар ауыр кисерештәр, болоҡһоу уйҙар, һағышлы тойғолар менән һуғарылған. Әммә шағирә, үҙен биләп алған кисерештәрҙең ни ҡәҙәр ауыр, юғалтыу һәм юҡһыныу хистәренең ни тиклем тәрән булыуына ҡарамаҫтан, әҫәрҙәрендә барыбер ҡара буяуҙарға өҫтөнлөк итергә ирек бирмәгән. Сөнки ул белә: әсәләр фани донъяны ташлап, тегеһенә күсһәләр ҙә, улар барыбер эҙһеҙ юғалмайҙар – Ер йөҙөнә изгелек орлоғо сәсеп китәләр. Шуға ла әсәләрҙең яҡты рухы, быуындан быуынға күсеп, һәр ваҡыт тереләр күңелендә йәшәй.

Китаптың «Күтәрелһәм бейек ҡаяларға…», «Елә аҡ ҡанатлы карабым», «Яуап тапсы, заман!», «Һөйөү – бәхет, һөйөү – күҙ йәше» тигән бүлектәренә тупланған шиғырҙар ҙа яһалмалыҡтан, тышҡы ялтырауыҡлыҡтан, күҙҙе ҡамаштырырға иҫәпләнгән ялған бизәктәрҙән азат. Үҙҙәренең яңғырашы, дөйөм характеры, ниһайәт, эске һулышы буйынса улар ифрат ябай һәм ғәҙәти. Ғайса Хөсәйеновтың үрҙә телгә алынған баһаһына ла бик тап килә: Әнисә Таһированың шиғырҙары, ысынлап та, тәрән лиризм менән һуғарылған, уларҙа наҙлылыҡ та, мөләйемлек тә, тыйнаҡлыҡ та етерлек. Бына шундайҙарҙан бер өлгө:

Яҙғы япраҡ һиңә ҡағылғанда
Йәме булып яҡты бер көндөң,
Хәтерләрһең йәшлегемдең төҫөн,
Баллы татын минең ирендең.

Мөлдөр-мөлдөр зәңгәр сәскә баҡһа,
Тойһаң унда яҙҙар һулышын,
Хәтерләрһең минең тартыныулы
Иркә ҡосағымдың йылыһын.

Күрһәң әгәр тере ысыҡтарҙы
Һары умырзая күҙендә,
Һин белерһең,

Һаман күҙ йәштәре
Кипмәгәнен минең күңелдә.

Йылмайһа яҙ,
Йәшел туғайҙарҙа
Ҡуҙҙай сәскәләрҙе терелтеп,
Һин һиҙерһең –
Моңһоу йөрәгемдә
Һаман йәшәй әле өмөтөм!

Был шиғырҙың идея-художество үҙенсәлектәрен ентекләп тикшереп тороуҙың кәрәге юҡтыр, сөнки бында авторҙың үҙ героиняһынан әйттерергә теләгән уй-фекере былай ҙа ап-асыҡ – лирик героиняның эске кисерештәре, кәйеф-сафаһы, хис-тойғолары, ҡыҫҡаһы, уның бөтә булмышы ус төбөндәге быяла кеүек итеп, үтәнән-үтә күрһәтелгән.

«Йырым менән донъя яҡты»,«Йән өшөгәндә»,«Ялта кипарисы», «Даулы булғанғамы ошо донъя…», «Тоғролоҡ», «Ғүмерҙәрҙең алтын күҙҙәре бар…», «Баҡма миңә…», «Бейеү» тигән шиғырҙар ҙа уй-кисерештәргә, йөрәк түренән сыҡҡан ихлас хистәргә бай. Әгәр бер әҫәрендә шағирә, «Ҡайҙа баҡма, ҡотоп һалҡынлығы: йәнһеҙ һүҙҙәр, боҙҙай ҡараштар… Хыял баҡсаһында гөлдәр шиңгән, һүнмәй ҡалған бары өмөтөм» тип һыҙланһа, икенсеһендә иһә, йөрәген ярып тыуған һәм күңел яраларын йыуған яңы йырына ҡыуана һәм, «Йырым менән ишле булдыҡ: мин бәхетле. Донъя яҡты» тип, шатлығын уртаҡлашырға ашыға. Әгәр бер әҫәрендә шағирә, «Айым һүнгән. Диңгеҙҙәрем алыҫ. Тауҙар ҡымшанмай ҙа сафта тора. Һөйөүемдең биләмәһен һаҡлап тоғролоғом һаман һаҡта тора» тип иҡрар итһә, икенсеһендә «Баҡма миңә. Болоҡһотма мине. Мин осраҡлы ғына юлыҡтым… Һине көтә ялтырауыҡ утлы, кәйеф-сафа тулы карабың» тип, эсендәгеһен тураға ярып һала. Әгәр бер әҫәрендә автор, шағирҙарҙың төрлөһөн (бик шәбен дә, күркәмен дә) күргән Ялта кипарисына мөрәжәғәт итеп, «Уларҙан һис көнләшмәйем – үҙ йыры бар һәр ҡоштоң. Мин – Урал ҡыҙы, йыш ҡына ҡырыҫмын да йомоҡмон» тип, үҙен үҙе йыуатһа, икенсеһендә иһә «Ғүмерҙәрҙең алтын көҙҙәре бар, тымыҡ көҙҙә тәрән аҡыл бар. Ҡабынғанда түгел, ҡуҙҙар төшкәс, йәнгә йылы бирә ялҡындар» тигән ғәжәп фәһемле, тормош һабағына тороплоҡ фекер әйтеп ҡуя.

Әнисә Таһированың лирик героиняһы ҡарап тороуға йомоҡ холоҡло, кәрәгенән артыҡ баҫалҡы, ҡырыҫ тәбиғәтле күренһә лә, асылда иһә ул бай рухлы, саф йөрәкле, моң-зар менән тулы нескә күңелле, итәғәтле һәм нәзәкәтле шәхес. Уның был сифаттарын «Йөрәк музыкаһы», «Ҡарағайҙар менән хушлашыу», «Телһеҙ сәғәт», «Утлы гөлдәр», «Тартылды ғүмер йәйәһе», «Ҡоралай монологы» һәм шулар кеүек башҡа бик күп шиғырҙарҙа («Һыҙлағанда йөрәк, ниңә кәрәк?..», «Был ерҙәрҙән һис үкенмәй китәм…», «Һеҙ бар саҡта…», «Йыһан киңлегендә – алтын һарай…», «Юлдарымдан китмә», «Йәш саҡта йондоҙҙар менән…», «Мин күнектем, ахыры, һинһеҙ генә…», «Һиңә бағышланған йырҙарымдың…», «Быйылғы көҙ – ҡомас күлдәкле ҡыҙ…») тойомларға мөмкин.

Әлбиттә, поэтик әҫәрҙәргә хас булғанса, лирик героиняның характер үҙенсәлектәре, уның кешелек сифаттары үҙенең тура мәғәнәһендә түгел, күберәк метафоралар ярҙамында, сағыштырыуҙар һәм параллелдәр аша тасуирлана. Әйтәйек, уның йөрәгенән урғылып сыҡҡан йыр диңгеҙ тулҡынының шауына һәм моңона тиңләнә, шуға ла ул, йәшерен ҡаяларға осрап, йөрәгенең селпәрәмә килеренә лә әҙер; тормош ҡанунына буйһоноп, ҡырҡып ташланған ҡарағайҙарҙың ыҫмалалы күҙ йәшендә лирик героиняның үткән ғүмере сағылып китә; уның әрнеүле йөрәге телһеҙ, ватыҡ сәғәтте хәтерләтеп ҡуя; яҙмыш ҡаяһына бәрелеп сатнаған йөрәктә гөлдәр элеккесә балҡып янһа ла, хәҙер инде уларҙан баллы ысыҡ урынына утлы йәштәр тама; лирик героиняның ғүмер йәйәһе тартылғанда ла, йыр уны барыбер шиғыр баҡсаһына саҡыра; мөхәббәтен кипкән диңгеҙгә, йәнселгән тауға һәм ҡырҡылған урманға оҡшатһа ла, уның бер наҙ булып хәтерҙә һаҡланырына шикләнмәй ул.

Лирик героиняның рухи донъяһын бөтә тәрәнлегендә һәм киңлегендә асып биреүсе иң уңышлы әҫәрҙәрҙең береһе булып «Елә аҡ ҡанатлы карабым» тора. Ул – өр-яңыларҙан, туҡһан дүртенсе йылда ғына яҙылған. «Карап» һүҙе бында кеше ғүмере, шәхес яҙмышы, тормош һәм ижад юлы мәғәнәһендә ҡулланылған. Һәм, әйтергә кәрәк, был образ-символ авторҙың яратҡан алымына әйләнеп бара һымаҡ, сөнки ул башҡа шиғырҙарҙа ла осрай. «Елә аҡ ҡанатлы карабым» – оҫта, бөтә яҡтан да килешле итеп яҙылған матур яңғырашлы әҫәр. Әгәр иғтибарҙы уның айырым юлдарына ғына йүнәлтеп, уларҙы дөйөм текстан һурып сығара башлаһаҡ, шиғырҙың бәҫе китер ине. Шуға күрә унан бер нисә строфа килтереү ҡулайыраҡ булыр.

Ялҡынлана ғүмерем шәфәктәре,
Елә аҡ ҡанатлы карабым.
Иңдәремә һала тормошомдоң
Шатлыҡтарын, моңон, ғазабын.

Аҡ ҡанатлы, уйсан карабыма
Йөрөмәнем дан һәм мал тейәп.
Һаҡланым тик күңел байлығымды –
Шиғыр ынйыларын бөртөклəп.
. . . . . .
Был байлыҡтың хаҡын бары күктәр,
Оло рухлы йәндәр белəлер.
Был байлыҡтың тиңһеҙ донъяһына
Саф күңелдəр генə инəлер.
. . . . . .
Йөҙə карап.
Юлым диңгеҙҙəргə,
Мəрйен утрауына төбəлгəн…
Кешеләрем,
Етеҙ карабыма
Һеҙгə тигəн байлыҡ тейəлгəн!

«Йөрәк йәдкәре»ндә әҙәп һәм намыҫ, дан һәм мал, әхлаҡ һәм нәфсе, изгелек һәм яуызлыҡ, хаҡлыҡ һәм ялғанлыҡ мәсьәләләрен күтәргән шиғырҙар ҙа етерлек. «Эш, хеҙмәткә дан йырлаған йылдар…», «Китап баҙары», «Осраштылар Хәйлә, Аҡыл, Әҙәп…», «Туҙҙырылды, емерелде әҙәплелек ояһы…», «Һатылған яҙмыштар хаҡында уйланыу», «Үҙемә, дуҫтарыма һәм дошмандарыма теләктәр», «Үткәндәге һәм хәҙерге йырҙар», «Маймыл» тигәндәре тап ана шундайҙарҙан. Был шиғырҙарҙа лирик героиняның күңел көҙгөһө уғата ла сағыу балҡып киткәндәй.

Тәбиғи, лирик героиня ла, шағирә үҙе лә әхлаҡ нигеҙҙәребеҙҙең ҡаҡшауы, өмөт-хыялдарыбыҙҙың юҡҡа сығыуы, байлыҡ һәм муллыҡ артынан ҡыуып, кешелек сифаттарыбыҙҙың күҙгә күренеп кәмей барыуы, көндәлек тормошобоҙҙа ғәмһеҙлек һәм тупаҫлыҡтың, тыйнаҡһыҙлыҡ һәм шәфҡәтһеҙлектең, көнсөллөк һәм ҡанһыҙлыҡтың әкренләп йәшәү ҡағиҙәһенә әүерелә барыуы менән һис кенә лә килешә алмай. Иңенә ҙур йылан һалып, асыҡ ауыҙҙарҙы үҙенә

әүрәткән һәм, хеҙмәт менән түгел, хикмәт менән тамаҡ туйҙырыусы йәш егет тә; күҙҙәрен дә йоммайынса, китап хаҡын теләгәнсә арттырған алыпһатарҙар ҙа; Аҡылды ситкә оҙатып, Әҙәпте таш һарайға тотоп япҡан Хәйлә лә; әсә күҙ йәшенең ҡара ҡарғышы төшөрөнән ҡурҡмайынса, үҙҙәрен һатҡан ынйы тешле йәш һылыуҙар ҙа; аҡса йолҡа белгән һәм шунлыҡтан ер кендегенә, донъя үҙәгенә әйләнгән шыр наҙандар ҙа; хәмергә сумып, маймыл ҡиәфәтенә кергән бәндәләр ҙә уларҙы берҙәй уйландыра, берҙәй һиҫкәндерә, аптыраш-та ҡалдыра, хафаға һала. Барлы-юҡлы намыҫтарын да юғалтҡан алйоттарҙы, нәфселәренә баш була алмаған ғәрип йәндәрҙе фашлап, шиғырҙарының береһендә автор бындай теләктәрен белдерә: «Яҙмыш, дуҫтарыма бир тыныслыҡ, дошмандарға – байлыҡ, муллыҡ, ҡалъяларҙың майлыларын! Мине йыйнаҡ тормошомдан, йырҙарымдан айырма һин!» Һуңғы юлдарҙы шағирәнең ижад принцибы тип тә ҡабул итергә булалыр. Икенсе бер шиғырҙа әлеге фекер артабан да көсәйтелә: «Түбән йәндәр тиңһеҙ был донъяға күпме генә нәжес яҡмаһын, үткәндәрҙең ихлас, саф моңдары йөрәктәрҙә мәңге наҡланыр…» Бар донъяны «байлыҡ» тигән үрмәксе ауы сырмап алған беҙҙең заманда заң да башҡа, йырҙар ҙа башҡа – башҡа ҡиммәттәр килде хәҙер алмашҡа. Ә ул ҡиммәттәр иһә (әгәр уларҙы «ҡиммәттәр» тип атарға яраһа әле) «Йөрәк йәдкәре»нең авторына төбө-тамыры менән ят нәмә.

Әҙәп һәм әхлаҡ мәсьәләләре Әнисә Таһированың ижадҡа бәйле әҫәрҙәрендә лә сағылып китә. Шағирә һәр төрлө ғәҙәлһеҙлектәрҙе, намыҫһыҙлыҡтарҙы, ялағайланыуҙарҙы, сикләүҙәрҙе, ҡыҫыуҙарҙы, рәнйетеүҙәрҙе, кәмһетеүҙәрҙе үҙ итмәй, ошоға тартым кире күренештәрҙе яйы сыҡҡан һайын фашлап ҡына тора. Ундай шиғырҙарҙа йыш ҡына сатира һәм юмор сатҡылары ла үҙен һиҙҙереп ҡуя. Ошо йәһәттән яңылар, һуңғылар иҫәбендәге “Бермуд өсмөйөшө”ндә ҡалыусы ҡәләмдәштәремә асыҡ хат» тигәне үткерлеге һәм зәһәрлеге менән башҡаларҙан айырылып тора. Ул – шағирәнең замандаштарына, фекерҙәштәренә мөрәжәғәте формаһында яҙылған. Матурлыҡ һәм гүзәллек категориялары менән эш итергә саҡырылған юғары сәнғәт талаптарынан сығып фекер йөрөткәндә, был шиғыр, бәлки, өлгөлө әҫәрҙәр иҫәбенә инеп ҡалырға дәғүә лә итмәҫ. (Хәйер, түбәнлек хаҡында юғары нотала һөйләп була микән ул?) Әммә йөрәген айҡаған уйҙарын, бәғерен телгеләгән һыҙланыуҙарын уҡыусыға еткереү өсөн автор ярайһы ғына ҡулай әмәлен тапҡан.

Шуныһы мөһим, «ҡәләм тибрәтмәгән әллә кемдәр “күренекле әҙип” булып бөттө», «йылтыр күҙле йылтыр әпкәләйҙәр», «төрлө төлкөбайҙар, әфәнделәр» йылы урын тапты, «булған шатлыҡтар ҙа һүнде инде, китте хаҡлыҡ, бөттө ижад ҡото» тип бошонһа ла, шағирә киләсәккә өмөтөн өҙмәй: «Китер афәт, иҫер бер мәл саф ел, ер әрселер шул саҡ ҡайғы-ҡарҙан», – тип тамамлай ул үҙенең асыҡ хатын.

«Һиңә ҡайтыр йырҙарым», «Ынйы ҡабырсағы», «Йондоҙ юлы», «Ҡәләм тотҡан ҡатил хәтәрерәк…», «Эттәр шағиры», «Кемгә кем кәрәк?», «Рәхмәт! Төндөң ҡайһы сәғәтендә?..», «Әйләнәләр, әйләнәләр бүреләр…» тигән шиғырҙарҙа ла ижадта ғәҙеллек, әҙәплелек, бер-береңә иғтибарлылыҡ, тәнһүкит күҙлегенән сығып ҡарағанда ла, үҙеңде лә, башҡаларҙы ла ихтирам итә белеү кәрәклегенә ишара яһала. Уларҙа күберәк шағирәнең үҙ хәле, үҙ донъяһы, эске кисерештәре, холоҡ-фиғеле, хатта шәхси тормоштан алынған ҡайһы бер күренештәр һәм фактлар ҙа сағылып киткәнгә оҡшай. Тик бына ошо шиғырҙарҙы уҡығанда күңелдең әллә ҡайһы мөйөшөндә яралып өлгөргән бер төйөр маҙаға тейеп йөҙәтә: автор һәм уның лирик героиняһы үҙ шәхестәренә, үҙ хәл-әхүәлдәренә, ысынбарлыҡ көн дә тип әйтерлек тыуҙырып торған һәр төрлө ҡаршылыҡтарға һәм ығы-зығыға артығыраҡ иғтибарлы булып китмәйҙәр микән? «Ҡәләм тотҡан ҡатил хәтәрерәк…» исемле шиғыр әлеге һорауҙы уғата ла ҡуйыртып ебәргәндәй итә. Уға Анна Ахматованың «Йәшәмәгән шағир ерҙә палачһыҙ һәм язаһыҙ» тигән һүҙҙәре эпиграф итеп алынған. Тимәк, Әнисә Таһирова шиғырҙарындағы лирик героинаның һыҙланыуҙары ла әллә ни яңылыҡ түгел: ул элек тә булған, әле лә бар, киләсәктә лә буласаҡ. Әгәр шулай булмаһа, тормош диалектикаһына ҡаршы килер ине.

Йыйынтыҡҡа ингән әҫәрҙәрҙән күренеүенсә, «Йөрәк йәдкәре»нең авторы рус шиғриәте менән яҡшы таныш. Таныш ҡына түгел, уның иң һәйбәт өлгөләре алдында баш эйә, шул өлгөләрҙе үҙенең ижадында ла файҙаланырға тырыша. Ун туғызынсы быуат башында киң билдәле Константин Батюшковтан алынған шиғри юлдарҙың әле һүҙ барған китапҡа атама бирелеп ҡуйыуында ла ниндәйҙер мәғәнә барҙыр, моғайын. Александр Блок, Ольга Берггольц, Юлия Друнина ижадтары ла башҡорт шағирәһе өсөн ят күренеш түгел. Ә бына Анна Ахматова менән Марина Цветаеваларға «Йөрәк йәдкәре»ндә «Һомай-ҡош уттан яралған» тип аталған айырым бүлек бирелгән хатта. Ул бүлек ошо шағирәләрҙең башҡортсаға тәржемә ителгән утыҙҙан ашыу

әҫәрен берләштергән. Шуларҙы уҡығанда Әнисә Таһированың үрҙә телгә алынған бәғзе шиғырҙары Анна Ахматова һәм Марина Цветаева ижадтары менән ҡыҙыҡһыныуҙың, ҡыҙыҡһыныу ғына түгел, бәлки саманан тыш мауығыуҙың бер шауҡымы йәиһә үҙенә күрә бер йоғонтоһо түгелме икән тигән уй ҙа башҡа килеп ҡуя. Уҫал телле тәнһитселәрҙең Әнисә Таһированы башҡорт Анна Ахметоваһы тип атауҙары ла бик ихтимал.

Тәржемәсе булараҡ Ә. Таһированың тәү ҡарауҙа уҡ күҙгә бәрелеп торған оҫталығына оҙон-оҙағай туҡталып тормаҫтан (сөнки был үҙенә башҡа ҙур тема һәм ул иркенләп өйрәнеүҙе, ентекләп тикшереүҙе талап итә), уның ошо изге эш менән берҙәй әүҙем, берҙәй ихлас шөғөлләнеүен генә билдәләп үтер инем. Изге эш тиеүемдең сәбәбе шунда: бер телдән икенсе телгә әйләндереү – халыҡтың рухи хазинаһын байыҡтырыуға өлөшөңдө индереү тигән һүҙ. Үкенескә ҡаршы, һуңғы йылдарҙа был өлкәлә лә ғәфү итмәҫлек һүлпәнлек һиҙелә башланы. Һәр хәлдә, башҡорт шағирҙарының Мәскәүҙә йә Өфөлә рус телендә баҫылып сыҡҡан китаптарын күптән күргән юҡ инде.

Әҙип, шағирмы ул йәиһә прозаикмы, драматургмы йәиһә тәнһитсеме, – үҙ дәүеренең, үҙ осороноң балаһы. Балаһы ғына түгел – көҙгөһө лә. «Йөрәк йәдкәре»ндә Әнисә Таһирова был хәҡиҡәткә лә тоғро ҡалған – ундағы байтаҡ шиғырҙар беҙҙең ҡатмарлы һәм шәфҡәтһеҙ замандың йән өҙгөс сағылышы булып тора.

Үрһәләнә ерем әрнеүҙәрҙән,
Рәнйеүҙәрҙән, ҡан-йәш ағыуҙан.
Барҙыр әле хаҡлыҡ утрауҙары, –
Шуны эҙләп шәмдәр ҡабыҙам.

Аһ, буталды донъя!
Ожмахҡа тиң
Ерҙән беҙ тамуҡ яһаныҡ.
Бейек күңелдәрҙән йондоҙҙарҙы
Йолҡоп алып ерҙә тапаныҡ.

Был – «Шәмдәр ҡабыҙҙым» тигән шиғырҙан. Ул 1991 йылда яҙылған. Шул уҡ йылдың көҙөндә яңғыраған «Аҡтарылды даръя. Ҡайнай донъя, кемдәр иҫән ҡалыр был афәттә? Ошо афәттә лә ҡай

берәүҙәр ынтылалар һаман кәрәмәткә. Тамуҡ уртаһында ожмах эҙләп, һуғышалар улар дан, мал өсөн, илдең батып барған карабында өс көн иблис туйын туйлар өсөн!» тигән юлдарҙа ла йөрәк әрнеткес мәкерлектәр, алдау-йолдауға ҡоролған оятһыҙлыҡтар фашлана.

Шағирәнең донъяға ҡарашы киң. Тирә-йүндә, шул иҫәптән бөтә ил күләмендә барған, һәр ҡайһыбыҙҙың теңкәһенә тейеп бөткән хәлваҡиғалар унда тәрән ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Һуңғы ваҡытта донъябыҙҙы, бөтә булмышыбыҙҙы баҫып алған тиҫкәре күренештәргә ул һис кенә лә битараф түгел. Ошо йәһәттән «Мәскәү, Мәскәү…», «Таланған һәм ҡыйратылған Рәсәй…», «Рәсәй томаланған башын сайҡай…» тигән шиғырҙар айырыуса иғтибарға лайыҡ. Уларҙың тәүгеһендә автор, элек һәр бер урамы ғәзиз тойолған баш ҡаланың бөгөн килеп ҡалын кеҫәләләр хөкөмөндә ҡалыуын күреп борсолһа, А. Блокка эйәреп яҙылған һуңғы икеһендә ул һатылған һәм ҡыйратылған Рәсәйҙе көсләнгән ҡатынға тиңләй һәм «батыр халҡын бахыр яһап, Рәсәй шаҡ ҡатыра бөгөн донъяны» тип ярып һала. Шиғырҙарының береһендә: «Ҡасан бөтөр мәхшәр? Өмөттәрҙе һүндермәҫлек яуап тапсы, заман!» тигән оран да яңғырап китә. Әммә донъя ни тиклем генә болармаһын, «ҡайнап торған тормош диңгеҙендә» күпме генә яҙмыш-караптар сайҡалып емерелмәһен, кешеләрҙе ниндәй генә ҡайғы-хәсрәт баҫмаһын, ергә саф моң ҡайтырына, матурлыҡтың ерҙе дауаларына шағирәнең иманы камил, һәм ул шуға инана:

Халҡым,
Һаҡла алтын аҡылдарҙы,
Һүндер яуызлыҡтың уттарын,
Бары аҡыл матурлыҡты һаҡлар,
Аҡыл ғына ерҙе ҡотҡарыр.

«Йөрәк йәдкәре»ндә «Һинең рухың беҙҙең менән бергә…»гә оҡшаған тағы бер бүлек бар. Тик ул шиғырҙар араһындағы темалар уртаҡлығынан сығып түгел, ә жанрҙар берҙәмлеген күҙ уңында тотоп төҙөлгән. Был бүлек «Сонеттар» тип атала. Дөрөҫ, сонеттар китаптың башҡа бүлектәрендә лә күҙгә салынып китә. Хәҙер иһә, бер урынға тупланғас, уларҙың ҡиммәте бермә-бер арта һәм был жанр хаҡында айырым һүҙ алып барырға ла мөмкинселек тыуа.

Әйтергә кәрәк, сонет беҙҙең әҙәбиәт һәм шиғриәт өсөн ят күренеш түгел. Ләкин бик киң таралғандарҙан тип тә маҡтанып бул-

май. Әгәр хаталанмаһам, уның тәүге ҡарлуғастарын һуғышҡа тиклем үк әле М. Хәй осорған. Артабан уға Я. Ҡолмой килеп ҡушылған. Ә хәҙер бына – Әнисә Таһирова. Ҡобайыр, робағи, сонет кеүек жанрҙарҙың әҙәбиәтебеҙ майҙанында күренгеләп тороуы, һис шикһеҙ, ҡыуаныслы хәл. Һәр хәлдә, улар әлегә ялт итеп балҡып китмәһәләр ҙә, һүнмәйҙәр һәм һүрелмәйҙәр – шуға шөкөр итергә кәрәктер. Боронғо жанрҙарҙы тергеҙеү һәм шиғриәтебеҙгә индереү йүнәлешендә эшләүсе А. Игебаев, Ҡ. Аралбай, М. Ямалетдиновтың тырышлығы ла маҡтауға лайыҡ.

Әлбиттә, бында жанрҙар һәм әҙәби төрҙәр күргәҙмәһе ойоштороп, улар араһында ниндәйҙер ярыш үткәреү иҫәптә тотолмай. Сөнки ижад процесында еңел генә бирелә торған бер генә өлкә лә юҡтыр. Сәсмә әҫәр яҙаһыңмы, шиғриәттә тир түгәһеңме, драматургияла мәж киләһеңме, тәнҡит баҫыуында янаһың-көйәһеңме – быларҙың бөтәһе лә энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыуға тиң. Ә бына ысын мәғәнәһендә робағи йәиһә сонет яҙыу – ҡоҙоҡтарҙың да тәрәнерәген ҡаҙыу, минеңсә. Сөнки был жанрҙарҙың үҙҙәренә генә хас нескәлектәре, үҙҙәренә генә тәғәйен талаптары бар. Ә ул талаптарға яуап биреү, уларҙы һәр ваҡытта ла теүәл, еренә еткереп үтәү еңелдән түгел. Әнисә Таһирова ла сонетты юҡҡа ғына «шиғырҙарҙың да шиғыры, моңдарҙың да моңо» тип атамай торғандыр. Шиғырҙы моңдоң аҫыл ташына тиңләп, сонетты аҫыл таштар шаһы тип баһалауы ла шунан киләлер, моғайын.

Китапта сонеттар күп – ҡырҡҡа яҡын. Уларҙың байтағы һуңғы ваҡытта – туҡһанынсы йылдарҙа яҙылған. Яңылар иҫәбендә күләмле ике таж да бар. Береһе – «Өҫтәгеҙсе тере ялҡындарҙы!» тигәне – әсәһенә, икенсеһе – «Бер раҫлар быҙ ерҙә үҙебеҙҙе» тип аталғаны Рәми Ғариповтың яҡты иҫтәлегенә арналған.

Тормош үҙе ғәжәйеп төрлө, күп ҡатлы һәм күп яҡлы, хәл-ваҡиғаларға һәм һәр төрлө күренештәргә ифрат мул булған шикелле, Әнисә сонеттары ла бай йөкмәткеле һәм күп биҙәкле. Өҙөп кенә әйткәндә, үрҙә аталған һәм тикшерелгән шиғырҙарҙағы темаларҙың күбеһе уның сонеттарында ла сағылыш таба. Ләкин был – үҙ-үҙеңде ябай ҡабатлау түгел (хәйер, шағирә был сирҙән башкөллө азат тип әйтә алмайым). Йыйынтыҡҡа тупланған әҫәрҙәр араһында темалар оҡшашлығы һәм әҙәби алымдар ҡабатланышы күҙгә салынып киткеләһә лә, сонеттар – барыбер сонеттар булып ҡала. Улар үҙҙәренең эске төҙөлөшө, яҙылышы менән нәфис, зифа; яңғыраштары менән моңло, сыңлы. Һуңғыларҙан, туҡһанынсы йылғыларҙан, бер миҫал:

Сағыу ҡыҙыллығын миләштәрҙең,
Кайындарҙың һары алтынын
Мин үҙ итеп күңелемә йыйҙым,
Өҫтәп алдым саған ялҡынын.

Карағайҙың тыйнаҡ йәшеллеге
Кыйһын, әйҙә, сағыу биҙәкте.
Көҙгө урмандарҙың көмөш моңо
Өҙһөн, әйҙә, өҙһөн үҙәкте.

Тәбиғәттә барыһы ла күркәм,
Барыһы ла бында ярашлы.
Саф матурлыҡ белмәй ҡара төҫтө,
Көнсөллөктө, нәфсе, талашты.

Тәбиғәт ул кеймәй ҡаранан,
Сөнки камиллыҡтан яралған.

Минең уйымса, был сонетты аңламаған, яратмаған һәм үҙ итмәгән бер генә уҡыусы ла табылмаҫ. Әҙәби әҫәр булараҡ һүҙҙәрҙең күркәм, матур, ниндәйҙер бер көй сығарып, моң тыуҙырып яңғырауы бер хәл, ә шул һүҙҙәр ярҙамында һүрәтләнгән күренеш һәм шул күренеш аша һыҙатланған образ, шул күренешкә төрөлгән мәғәнә ҡайһылайыраҡ! Тышҡы матурлығы менән ул күренеш И. Буниндың «Япраҡтар ҡойолғанда» тигән поэмаһын иҫкә төшөрә. Тик тышҡы матурлығы менән генә. Сөнки атаҡлы рус шағирының һәм прозаигының иғтибарын көҙгө урмандың тәү сиратта күҙгә ташланған тышҡы күренеше генә йәлеп иткән һәм шул күренеште ҡағыҙға төшөрөү өсөн иҫ китмәле матур һүҙҙәр тапҡан. Башҡорт шағирәһе Әнисә Таһирова иһә тәбиғәттең тышҡы күркәмлеге менән генә сикләнмәгән – сонеттың һуңғы юлдарында, тәбиғәт күренештәре менән кешелек сифаттары араһында йәнәшәлек үткәреп, ғәйәт аҡыллы һәм ғибрәтле һығымтаға килгән.

Хәҙер иғтибарҙы әҫәрҙең формаһына йүнәлтәйек. Жанр талаптарынан сығып ҡарағанда һәм ул талаптарға һуҡыр килеш табынғанда, бында ризаһыҙлыҡ белдерергә сәбәп һәм ерлек бар, әлбиттә. Мәҫәлән, үҙенең тыуған илендә сонеттар ике – дүртәр юллы һәм ике – өсәр юллы строфанан тороусан. Беҙҙең алда иһә – дүртәр юллы өс строфа һәм ике юллы бер строфа. Тимәк, «Сағыу ҡыҙыллығын миләш-

тәрҙең…» авторы жанр ҡанундарынан тайпылған. Ләкин донъя әҙәбиәтенә күҙ ташлаһаң, сонеттың Әнисә Таһирова ҡулланған төрө лә йәшәргә хоҡуҡлы икәнлегенә ышанаһың. Был фекерҙе аҡлау һәм яҡлау өсөн ҙурыраҡ исемдәргә лә таянырға мөмкин. Әйтәйек, сонеттың ошо төрөн мәшһүр В. Шекспир киң файҙаланған. Өҫтәп, был төрҙөң Онегин строфаһына яҡынайыуын да билдәләп үтеү урынлы булыр. Ләкин сонет барыбер Онегин строфаһы түгел – тышҡы яҡтан уға яҡынлашһа ла, үҙенең эске үҙенсәлектәрен юғалтмай һәм жанр тәбиғәтенә тоғро ҡала.

Һуңғы йылдарҙа Әнисә Таһирова сонеттың әле беҙ һүҙ алып барған төрөн ҡулайыраҡ күрә, шикелле. «Йәшәй ине һөйкөмлө бер алиһә…», «Ҡайһы саҡта минең ҡулдарым…», «Әгәр миндә тиңһеҙ ҡөҙрәт булһа…», «Яманлыҡҡа хеҙмәт итеүселәр…», «Һыуһылыуҙар менән уйнай инем…», «Сихырлы йәм урман, сихырлы йәм…», «Башым эйәм», «Шиғырҙарҙың да шиғыры…», «Һыҙланыуҙың ҡара ҡамсылары…» тигән әҫәрҙәр шулай уйларға форсат бирә. Әлбиттә, мәҡәләлә был сонеттарҙы бөтәһен дә ентекләп тикшереү бурысы ҡуйылмай. Ҡайһы бер сонеттарҙың йомғаҡлау юлдарына ғына иғтибар итәйек. Сөнки жанр булараҡ теләһә ниндәй сонеттың да иң көслө, иң сағыу өлөшө – уның һуңғы юлдары. Юҡҡа ғына бит уны «сонеттың бите» тимәйҙәр. Фекер ҡеүәһе лә, образлылыҡ йөгө лә – шунда, йомғаҡлау юлдарында.

Бына башҡорт әҙәбиәтенең сонеттар оҫтаһы Яҡуп Ҡолмойға арналған әҫәр. «Башым эйәм» тип атала ул. Әҫәрҙең төп темаһы – әҙип һәм уның яҙмышы. Әҙип, әгәр ул ысын мәғәнәһендә әҙип икән, ҡуштандарға, әпкәләйҙәргә баш бирмәһә лә, хакимдарға, ҡуҡыр «батшаларға» сәждә ҡылмаһа ла, барыбер халҡы күңеленә кереп ҡала. Был тема, дүртәр юлдан торған тәүге өс строфала яҡтыртыла ла, ике юллы йомғаҡлау строфаһында үҙенең образлы сиселешен таба: «Батшаларҙың тажы өс көнлөк, ысын шағир тажы ғүмерлек». «Әгәр миндә тиңһеҙ ҡөҙрәт булһа…» сонетында «Етемдәр ҙә күҙ-йәш түкмәҫ ине, һәр көн кеше кәфен текмәҫ ине»; «Йәшәй ине һөйкөмлө бер алиһә…»лә – «Ләкин йөрәк хәҡиҡәткә ышана: гел тантана итмәҫ ерҙә Нишана»; «Яманлыҡҡа хеҙмәт итеүселәр…»ҙә – «Һүрелмәһә йәндә саф ҡуҙҙар, баш осонда һүнмәҫ йондоҙҙар!»; «Ҡайһы саҡта минең ҡулдарым…»да – «Һаҡлай алманым тик һөйөү-ҡошто, ҡулдарыма ҡунмаҫ элек осто» тигән һәм башҡа шуның кеүек тос йөкмәткеле һығымталар яһала.

Әнисә Таһирова сонеттың башҡа төрҙәренән дә баш тартмай – эҙләнә, тапҡанын ижадында файҙаланырға тырыша. «Һин киләһең урман һуҡмағынан…» тигән психологик сонет, мәҫәлән, әҙәбиәт теорияһындағы ҡушымталы, тағылмалы, ҡойроҡло сонетҡа тап килгәндәй. Ул традицион ун дүрт юл урынына ун алты шиғри юлдан тора: ике – дүртәр юллы, ике – өсәр юллы строфаны ике юллы бер строфа йомғаҡлап һәм бикләп ҡуя.

Ә бына «Һыуға төшкән йәш еңгәне…» сонеты бөтөнләй башҡаса: тәүҙә – дүртәр юллы ике строфа, унан һуң – икешәр юллы өс строфа. Был әҫәр шундай күркәм, шундай сағыу, уны бында тулы килеш килтерһәк тә гөнаһ булмаҫ:

Һыуға төшкән йәш еңгәне
Күреп ҡалған бер ҡарлуғас,
Эй шатлана, ҡаштары тип,
Минең ҡанатымдай ҡыйғас.

Шыбыр-шыбыр килә ҡайын:
«Буй-торошо – минең һыным!»
Шишмә көйләй: «Тауышында –
Минең моңом, минең моңом!»

«Атлауҙары!» – тип һоҡлана
Йәш егеттәр ипләп кенә.

«Һыуын сайпылдырмай», – тиҙәр,
Ҡарт инәйҙәр йөпләп кенә.

Ҡыҙҙар һүҙһеҙ көлөп тора,
Барыһын шәйләп, күреп тора.

Ниһайәт, Әнисә Таһирова ижадындағы сонеттың тағы бер төрө – сонеттар тажы. Ул – сонеттың бик үҙенсәлекле һәм бик ҡатмарлы формаһы. Был форма авторҙан ҙур оҫталыҡ, тапҡырлыҡ, мәйеллек һәм камиллыҡ талап итә. Тышҡы яҡтан ул цикл кеүек. Үрҙә әйткәнебеҙсә, «Йөрәк йәдкәре»ндә улар – икәү. Береһендә – әсә образы, икенсеһендә Рәми Ғарипов образы һынландырылған. Уларҙың һәр ҡайһыһы ун бишәр сонетты берләштергән. Таждар

эсендәге сонеттар уғата ла төрләнгән. «Өҫтәгеҙсе тере ялҡындарҙы!» тажындағы һигеҙенсе сонет, мәҫәлән, дүртәр юллы ике һәм алты юллы бер строфанан тора. Унынсы, ун беренсе, ун бишенсе сонеттар ҙа шулай төҙөлгән. Ә туғызынсы сонет ике генә строфанан тора – һигеҙ юллы һәм алты юллы строфалар.

Ошондай уҡ төрлөлөк «Бер раҫларбыҙ ерҙә үҙебеҙҙе» тажында ла осрай. Тажды йомғаҡлаусы ун бишенсе сонет хатта бер генә строфанан тора – юлдарҙың ун дүрте лә тотош текст итеп бирелгән. Әлегә ике таждың да идея-тематик йөкмәткеһенә һәм художество үҙенсәлектәренә туҡталып тормаҫтан (сөнки был махсус тикшереүҙе талап итә), формаһы йәһәтенән уларҙың һуш китмәле тырышлыҡ күрһәтеп һәм жанр талаптары алдында ҙур яуаплылыҡ тойоп эшләнгәнлеген билдәләп үтеү менән генә сикләнергә ниәт. Ысынлап та, таждарҙы уҡығанда шағирәнең сонет жанрына баштан-аяҡ ғашиҡ булғанлығына ышанаһың. Хәйер, быны ул үҙе лә йәшермәй. Элегерәк яҙылған бер сонетында шағирә бына нимә ти: «Нисә йылдар беҙ атлайбыҙ йәнәш, гүйә, тоғро кейәү менән кәләш, булмышыбыҙ ғаләм алдында: ләкин әле булһа хыял кисеп, онотолоп, ҡул суктарын ишеп, беҙ янабыҙ бик йыш ялҡында».

Шулай итеп, Әнисә Таһированың «Йөрәк йәдкәре» бик күп уйҙар тыуҙыра. Уны шағирәнең күңел көҙгөһө тиһәк тә булалыр. Китап уҡыусыны битараф ҡалдырмаҫ. Әгәр ул уҡыусыға барып етһә, әлбиттә. Сөнки, саф матурлыҡ белмәһә лә ҡара төҫтө, китап кәштәләрен йылтыр тышлы, ләкин ҡара эсле баҫмалар торған һайын күберәк биләй бара, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

1997

НАЗАР НӘЖМИҘЕҢ «ИКЕ ЗӨЛӘЙХА» ПОЭМАҺЫНДА ШӘХЕС, ҒАИЛӘ ҺӘМ ӘХЛАҠ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

Назар Нәжми поэма жанрында иң әүҙем эшләгән шағирҙарҙың береһе ине. Уның ижад арсеналында ун биш поэма иҫәпләнә. Әҙәби тәнҡиттә уларҙың яҙмышы төрлөсә булды. Ҡайһы берҙәрен үлтереп маҡтанылар, ә бәгзеләре иһә иғтибарҙан киттә ҡалды. Һуңғылар араһында – «Ике Зөләйха» поэмаһы ла. Әҫәр һикһәненсе йылдар башында яҙылһа ла, әлегә тиклем уның тураһында ҙур һүҙ булғанын бер ҙә хәтерләмәйем. Бының сәбәбе поэмала түгел, әлбиттә, тәнҡитебеҙҙең һүлпәнлегендә. Тәнҡитселәр күҙлегенә эләкмәй ҡалған әҫәрҙәр бер ул ғына түгел.

Назар Нәжмиҙең ҡайһы бер поэмаларына хас уртаҡ сифат – уларҙың башлыса конкрет материалға таянып йәиһә документаль нигеҙгә ҡоролоп яҙылған булыуында. «Ҡайындар», «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Урал», «Ғүмерлек йыр», «Бер туғандар» ҙа шундайҙар иҫәбендә. Ләкин был шағир тормошта булған берәй отошло хәл-ваҡиғаны һайлап алған да шуны рифмалаштырылған юлдарға һалған икән тигән һүҙ түгел. Һүҙ бында фактты юғары шиғриәт кимәленә күтәреү тураһында бара. Ә бының өсөн күп көс, ҙур талант һәм, тәбиғи, әҙәби оҫталыҡ кәрәк.

«Ике Зөләйха»ның нигеҙендә лә конкрет факттар ята. Тегеләре менән сағыштырғанда, бының эпында документаллек, бәлки, күберәктер ҙә әле. Сөнки поэманың сюжеты реаль хәл-ваҡиғаларҙан тора – унда беҙҙең замандарҙа йәшәп көн күргән дүрт шәхестең, йәғни ике ғаиләнең әсенешле яҙмышы һүрәтләнгән. Әҫәрҙең документаль нигеҙгә ҡоролоуын автор үҙе лә инҡар итмәй. «Геройҙарым ерҙә йәшәп ята – минән башҡа, тимәк, тыуғандар; тимәк, ошо поэмаға тиклем, кендек киҫеп, исем ҡушҡандар», – ти ул инеш һүҙендә үк. «Минән башҡа, тимәк, тыуғандар»ҙы поэмала тасуирланған хәл-ваҡиғалар шағир хыялында яралып түгел, ә тормоштоң үҙенән үҫеп сыҡҡан тип аңларға кәрәк. Хәйер, был фразаның асылына автор үҙе лә асыҡлыҡ индермәй ҡалмай: «Бер ҡараһаң, миңә еңел кеүек… Бер ҡараһаң, ул ауыр ҙа миңә… Яҙғандарымда бит хыялым юҡ, булған тормош менән сикләнәм».

Ҡарап тороуға, Назар Нәжмиҙең реаль ысынбарлыҡта йәшәп, шул уҡ ысынбарлыҡта көн иткән геройҙары донъяны шаҡ ҡатырлыҡ йәиһә кешене һуштан яҙҙырырлыҡ бер ниндәй ҙә эш ҡырмайҙар һымаҡ. Дөрөҫ, уларҙың икәүһе – Мөҙәррис менән Ибраһим – яугирҙәр, ләкин улар һуғышта сағында күкрәктәре менән дошман амбразураһын да ҡапламайҙар, батырлыҡ күрһәтеп, дар ағасында ла аҫылынып тормайҙар, һуғыштан һуңғы йылдарҙа йыһан киңлектәрен дә байҡамайҙар.

Зөләйхалар ҙа шундай уҡ: Шәрәҡтең улар исеме менән данланған бөйөк шағирҙары булһа ла, Назар Нәжми эҙләп тапҡан Зөләйхалар – ғүмерҙәре алҡыштарға күмелеп, тере сәскәләргә төрөнөп үткән сәхнә йондоҙҙары ла, арттарынан күҙ эйәрмәҫтәй тиҙлек менән көлтә бәйләүселәр ҙә, һәр һыйырҙан унар мең литр һөт һауып алып, даны тирә-йүнгә таралған һауынсылар ҙа түгел. Улар бары тик «ир йәмәғәте – ҡатын, миллионлаған ҡатын шикелле»; икеһе лә – бары тик «балаларға әсә, миллионлаған әсә шикелле».

Шуға күрә лә авторҙың реаль тормоштан үҙе һайлап алған дүрт шәхес әҙәби әҫәр геройҙары булырға лайыҡмы, түгелме икәнлеге хаҡында уйланыуы һис тә ғәжәп тойолмай. Был һорау әҫәрҙең башынан алып ахырынаса тынғылыҡ бирмәй шағирға. Әгәр инеш һүҙҙә ул, был кешеләр тураһында поэма яҙыу теләге күҙ йәше аша тыуҙы, «дүрт яҙмышты шиғри юлдарымда үҙ яҙмышым итеп кисерҙем» тип ижад серҙәре менән уртаҡлашһа, бер аҙҙан һуң геройҙарының ғазаплы яҙмыштарына ҡарата булған уй-кисерештәрен, хис-тойғоларын «һоро турғайҙарға туптар менән гөп-гөп атҡанға» оҡшап китмәйме икән тигән шиген белдереп ҡуя. Йәнә «әллә микән ағас балта менән, ысынлап та, мин таш юнаммы?» тигән икеләнеүен дә йәшермәй. Уның ижад пландарына, «тормоштағы шәхси бер әйберҙе» шиғри кимәлгә күтәрергә тырышыу тип ҡараусылар менән дә бәхәсләшеп ала. Ошондай бәхәстәр ваҡытында шағирҙың эстетик ҡараштары ла сағылып китә. Донъяла «һәр шәхестең шәхси ағымы бар» тигәнерәк фәлсәфәүи фекер ҙә яңғырап уҙа. Ғөмүмән, авторҙың ҙур аҡыл эйәһе икәнлеге, донъяны уның үҙенә генә хас айырым бер нескәлек менән тойомлау һәләте, шул уҡ ваҡытта ижадтағы шәхсән тыйнаҡлығы атлаған һайын күҙгә бәрелеп кенә тора.

Поэманың сюжеты һәм композицияһы артыҡ ҡатмарлы түгел. Ул ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ун бүлектән тора. Күләмдәре яғынан бүлектәр ҙур булмаһалар ҙа, уларҙың һәр ҡайһыһы әҫәрҙең структураһында мөһим

роль уйнай – һәр бүлектә геройҙар тормошонан ниндәй ҙә булһа берәй киҫкен хәл һүрәтләнә. Беренсе бүлектә, мәҫәлән, автор инеш һүҙҙә исемдәре генә аталған дүрт герой араһынан Мөҙәрриске һайлап ала ла уҡыусыны уның менән яҡынданыраҡ таныштыра башлай. Һәм беҙ ни бары илле юлдан торған ошо бүлек аша бөтәһе түгел мәғлүмәткә эйә булабыҙ: Назар Нәжмиҙең элегерәк яҙылған ҡайһы бер поэмалары («Әсә», «Ҡайындар», «Йыр тураһында баллада», «Күлдәк», «Ғүмерлек йыр») шикелле, быныһы ла һуғыш ғәләмәттәренә бәйле икән («Кырҡ берҙең ә бит июнь таңы утҡа һалды беҙҙең заманды»); һуғышты Литва ерендә ҡаршылаған Мөҙәррис был ғәрәсәттең тәүге мәлендә үк дошман пуляһынан ике күҙһеҙ ҡала, һуштан яҙып йығыла ла, һыуға сумған балта һымаҡ, юҡ була; ләкин тормош үҙенекен итә – ата хәбәрһеҙ юғалһа ла, уның алыҫ Сөн буйҙарында ҡалған Зөләйхаһынан балаһы тыуа («Ғүмер, ғүмер!.. Ҡайҙалыр ул бөтә, ҡайҙалыр ул илап башлана»).

Егерме дүрт кенә юлдан торған икенсе бүлектә оторо ла тетрәткес, йәнде өҙгөс, йөрәктәргә ҡандар һауҙырырлыҡ ваҡиға тасуирланған: «яу ҡырынан госпиталдәр аша» үткәндән һуң тере мәйеткә әйләнгән Ибраһим атлы бер йәш егетте тыуған ауылына – Әрмет яҡтарына ҡайтарып китә. Шулай итеп медсестра, поэманың өсөнсө геройы ла пәйҙә була. Автор уға ҡыҫҡаса ғына характеристика ла бирep уҙа: һуғышҡа ҡәҙәр ул «баҫҡан ерҙән ут сығара алған, һыу һөлөгө кеүек» егет булған.

Ниһайәт, өсөнсө бүлектә геройҙарҙың дүртенсеһе лә хәрәкәт итә башлай. Ҡул-аяҡтары кибеп, ҡабат бала хәленә ингән Ибраһимды ауылдаштары йәлләй, ҡыҙғана. «Ә бары тик берәү йәлләмәне, ә ул “берәү” ине – Зөләйха». Бына ошонда әҫәрҙең төп идеяһы ла йомарлана башлай һымаҡ. «Сая бер ҡыҙ… Асыуланһа – дауыл! Яҡты ҡояш – әгәр йылмайһа» тип, автор Зөләйхаларҙың икенсеһенә бер аҙ үҙ баһаһын бирә лә артабан көтөлмәгән, ҡолаҡ ишетеп, аҡыл ышанмаҫлыҡ хәбәр һала:

Йәллəп түгел, ул йөрәге менән
Ҡаплағандай һуғыш ғазабын,
Ибраһимды үҙ яҙмышы итте,
Уйлап тормай уның аҙағын.

Тимәк, һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ, хатта мөғжизәгә тороpлоҡ аҙым яһала – сая Зөләйха урынынан торорға, йыуынырға,

ашарға, эсергә, кире ятырға хәленән килмәгән, ләкин йәшәргә өмөтөн өҙмәгән, ышанысын юғалтмаған «тере мәйет» менән тормош ҡороп ебәрә. Был инде иҫ киткес тәүәкәллек һәм батырлыҡ үрнәге генә түгел – шәхес, ғаилә һәм әхлаҡ мәсьәләләре бөтәһе бергә килеп ҡушыла торғандыр бында.

Әйткәндәй, шәхес, ғаилә һәм әхлаҡ мәсьәләләренә поэманың дүртенсе, алтынсы, етенсе бүлектәрендә лә шаҡтай ҙур урын бирелгән. Тәүгеһендә һүҙ һаман да Ибраһим менән Зөләйха хаҡында бара. Ибраһимдың йәшәүгә ынтылышы, ә Зөләйханың уның ғүмере өсөн көрәше һыҙыҡ өҫтөнә алына, һәм ул көрәш яу ҡырындағы алышҡа тиңләнә:

Хәҙер уны, мәңге яралыны
Йөрәктәрҙе өткән ут аша
Яу ҡырынан елкәһенә һалып
Алып сыға төҫлө Зөләйха.

Был ғаиләнең нигеҙен автор һөйөүҙә лә, мәрхәмәтлелектә лә күрә. Һәм уның менән килешмәй булмай.

Артабанғы ике бүлектә үҙенең Зөләйхаһы менән йәнә Мөҙәррис алғы планға сыға. Йөкмәткеһе йәһәтенән дә, ҡайһы бер композицион алымдары яғынан да алтынсы бүлек бер ни тиклем икенсе менән өсөнсөнө хәтерләтә: икенсе бүлектә яу ҡырынан Ибраһимдың ҡайтыуы һүрәтләнһә, быныһында – Мөҙәрристеке. Алтынсы бүлектә төп урынды Мөҙәрристең эске монологы алып тора тиһәк тә, хата булмаҫ. «Еңеү көнөн күңелем менән күрҙем, минһеҙ булды ләкин был Еңеү. Был һуғыштан минең өлөшөмә төшкән көмөш – яза, интегеү», – тип уйлана яугир ҡайтыр юлға сыҡҡас, сөнки дүрт йыл буйы барған һуғыштың бөтә ауырлыҡтарын, бөтә михнәттәрен ул әсирлектә кисерә. Мөҙәррис монологында ғаилә һәм әхлаҡ мәсьәләләре, үрҙә әйтҡәнебеҙсә, яңынан ҡалҡып сыға. Ошо хәлдә, тома һуҡыр килеш, Зөләйхаһы ҡабул итерме уны? Хәҙер уға ҡайҙа йүнәлергә, ҡайҙа юл тоторға – әсәһе йортонамы (сөнки «Ундай саҡта кем бар? Әсәй бар. Ни күрһә лә күрә, бала өсөн әсәй булып ҡала әсәйҙәр»), әллә Зөләйха янынамы? Ошо һорауҙар борсой һуғыш инвалидын. Һәм, өсөнсө бүлектәге кеүек, быныһында ла көсөргәнешле, йөкмәткеһе менән дә, тышҡы күренеше менән дә драматик хәл килеп тыуа: һуғышҡа ҡәҙәр бер нисә ай ғына бергә йәшәп ҡалған ике йәш

йөрәк, күп михнәттәр кисерә-кисерә байтаҡ йылдар айырылып торғандан һуң, яңынан күрешеп ҡауыша. Тик был юлы күрешеү, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер яҡлыраҡ килеп сыға: Зөләйха үҙенең һөйөклөһөн күңел күҙе менән дә, маңлай күҙе менән дә күрһә, Мөҙәррис уны күңел күҙе менән генә күрергә мәжбүр. Әммә шуныһы мөһим: көткәндән күпкә көслөрәк тәьҫорат тыуҙырған был осрашыу Мөҙәрристең бөтә борсолоуҙарын, ҡайғы-хәсрәттәрен, икеле-микеле уйҙарын, нисәмә йылдар инде күңелен бимазалап йөрөгән хәүефтәрен юҡҡа сығара, юйып ташлай, елгә осора: Зөләйхаһы уны ҡабул итеү генә түгел, йүгереп килеп ҡосағына ала, ә ул әсирлектә яфа сиккән саҡта тыуып үҫкән бала «атай!» тип ҡысҡырып ебәрә.

Етенсе бүлектә Мөҙәррис образы артабан үҫтерелә, уғата тәрәнәйтелә. Бында ул ысын мәғәнәһендә көслө рухлы шәхес булып күҙ алдына килеп баҫа. Яҙмыш әҙәм балаһына ни тиклем генә мәрхәмәтһеҙлек ҡылмаһын, тормошта ул барыбер үҙ урынын эҙләп, уны мотлаҡ табырына ышана, йәшәргә тырыша. Мөҙәрристә лә ихтыяр көсө шул хәтлем ныҡ, уның, һуҡыр килеш ҡулына салғы алып, бесән сабырға өйрәнеүе генә лә үҙе бер мөғжизә («Таныш үҙән, таныш туғайҙарға ҡыҙы алып барһа етәкләп, бесән саба. Покостары ҡала яһап ҡуйған кеүек һүрәтләп»). Ләкин ҡанлы һуғыштың әрнеүле яраһы йылдар үткәс тә үҙен һиҙдереп кенә тора. Яҡты донъяны күреп йәшәүҙән мәхрүм ителеүе генә етмәгән, тора-бара ул ҡолаҡтан да яҙа. Ә был инде моңдарҙан да, табындарҙа гармун телдәренә ҡушылып йырлауҙан да, кешеләрҙе тауышынан танып белеү һәләтенән дә, улар менән уйнап-көлөшөүҙәрҙән дә, таң атҡанда ҡоштар һайрауын тыңлап кинәнеүҙән дә мәхрүм ителеү, ғөмүмән, үҙ-үҙеңде тереләй ҡәберҙә тойоу тигән һүҙ.

Геройҙың иңенә ошо тиклем күп бәхетһеҙлектәр төшөүен тасуирлап, автор уны йәлләтергә иҫәп тотмай, әлбиттә. Киреһенсә, уның иҫ киткес ныҡ рухлы, үтә түҙемле, йәшәүгә өмөтөн өҙмәгән шәхес икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Был идея Мөҙәрристең ер йөҙөндә тырышып-тырмашып йәшәп ятыуында, кешеләргә артыҡ йөк булмаҫҡа ынтылыуында, ҡулынан килгәнсә уларға ярҙам итеү, ниндәй ҙә булһа файҙа килтереү ниәтенән яһаған аҙымдарында ғына түгел, бәлки аратирә яңғырап торған автор тауышында ла сағыла:

Килә икән килһә бер кешегә,
Баштан ашҡайны бит булғаны,

«Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ» тигәнең
Ошо микән инде торғаны?
Ләкин бар ул яҙмыштарҙан уҙмыш.
Нишләр инең, әгәр уҙмаһаң?
Көндәреңде, айҙар, йылдарыңды
Өмөтһөҙлөк менән ослаһаң?

Туғызынсы һәм унынсы бүлектәрҙә төп урынды поэманың баш геройҙары – уға йән өрөп, исем биргәндәре биләп тора. Шағир уларға һоҡлана, мәҙхиә йырлай тиһәк, бер һүҙ ҙә әйтмәүгә тиң булыр ине. Шағирҙы төпкөлдәрәк ятҡан мәсьәләләр тулҡынландыра. «Кемдәр һуң ул ике Зөләйха?» тигән һорауға яуап эҙләй ул. Ләкин яуап табыуы еңелдән түгел, шуға ла:

Бында һүҙҙәр көсһөҙ –
Тойғоларым көслө һүҙҙәрҙән, –

тип танырға мәжбүр шағир. Ике ирҙе – Ибраһим менән Мөҙәрриспе бәхетһеҙлектән ҡотҡарып, уларға ғүмер буйы рух көсө өҫтәп торған был ҡатындарҙы автор геройҙар тип кенә түгел, ә арҙаҡлы шәхестәр тип атау яғында, сөнки:

Герой булыу мөмкин, мөмкин хатта
Бер күҙ асып йомған арала.
. . . . . .
Ә арҙаҡлы кеше булыу өсөн
Кәрәктер ул, кәрәк бер ғүмер.

Был фекерен «Ғүмер буйы ғүмер һағында тороу өсөн кем булырға кәрәк?» тигән юлдар менән дә нығытып ҡуя шағир. «Яҡшылыҡтар ниндәй тәрәнлектән ярала?» – тип тә уйлана ул Зөләйхаларҙың шәхес булараҡ кем икәнлектәрен асыҡларға тырышҡанда.

Поэманы йомғаҡлаусы бүлектә Зөләйхалар хаҡында уйланыу автор сигенеүҙәре менән бергә тығыҙ бәйләп алып барыла. Ә ул сигенеүҙәрҙә иһә шағирҙың үҙ донъяһы ла: ижад принциптары, тормошҡа ҡараштары, үткәндәр менән бөгөнгөгә мөнәсәбәте лә сағылып китә:

Үткәндәрҙе бөгөнгөгә ялғап,
Юлдар, йылдар аша уҙамын.
. . . . . .
Һеҙҙең ихтыярға, рух көсөнә
Хайран ҡалып, башым эйәмен, –

ти ул, геройҙарына мөрәжәғәт итеп.

Автор тауышы, лирик сигенеүҙәр тигәндән, «Ике Зөләйха» поэмаһы тотошо менән үтә лә нескә, үтә лә тәрән, үтә лә йылы лиризм менән һуғарылған булһа ла, унда тик лирик сигенеүҙәргә генә ҡоролған бүлектәр ҙә юҡ түгел. Бишенсе һәм һигеҙенсе бүлектәр – тап ана шундайҙарҙан. Бишенсе бүлектә, мәҫәлән, һүҙ ҡан ҡойғос ҡәһәрле һуғыш тамамланғандан һуңғы тәүге яҙ – Еңеү яҙы хаҡында бара.

Ошо көндө күрә алмағандар
Йөрәгемде минең өттөләр.
Был көндәрҙә хатта үлгәндәрҙең
Ҡайтыуҙарын күптәр көттөләр, –

тип уйлана лирик герой. Ләкин был бүлеккә лирик сигенеү тип кенә ҡараһаҡ, дөрөҫлөккә хилафлыҡ булыр ине. Ул – киләһе бүлеккә күсеүҙе әҙерләй торған бер әҙәби сара ла. Әгәр бишенсе бүлек «хатта үлгәндәрҙең ҡайтыуҙарын күптәр көттөләр» тип оҫланһа, артабанғы бүлектә иһә автор шул көтөүселәр араһында Сөн буйҙарында көн күреп ятҡан Зөләйха ла барлығын уҡыусы хәтеренә төшөрөп ала. Бишенсе бүлектә шулай уҡ шағирҙың үҙ-үҙенә, һүҙгә, ғөмүмән, шиғриәткә талапсанлығы, поэтик оҫталығы йәнә бер тапҡыр ялтлап китә. Әлеге осраҡта был маһирлыҡты бигерәк тә һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһе менән уларҙың яңғырашы араһында ғәжәйеп бер гармонияға, уртаҡлыҡҡа, эске һәм тышҡы берҙәмлеккә ирешеүҙә тойомларға мөмкин.

Хәтеремдә тәүге Еңеү көнө –
Берлин яны. Урман. Йәшеллек.
Ошо яҙ һәм тәүге йәшеллектә
Бөтәбеҙ ҙә әле йәш инек.

«Йәшеллек» һәм «йәш» тамырҙаш һүҙҙәр булмаһа ла, яңғыраштары һәм эске йөкмәткеләре йәһәтенән бер-береһенә бик яҡындар: яҙ, йәшеллек – улар үҙҙәре үк йәшлекте, сафлыҡты символлаштыралар бит.

Һигеҙенсе бүлек тә тик лирик сигенеүҙәргә генә ҡоролған тип әйткәйнек инде. Ул, ысынлап та, шулай. Был бүлектә шағир һаман да яҙғандарының дөйөмләштерелгән образдар, дөйөмләштерелгән хәлвәҡиғалар кимәленә күтәрелә алырына шик тота. Шул шиктән арыныу өсөн, батырлыҡ тураһында, уның асылы, сығанаҡтары һәм күрһәтелеү ысулдары хаҡында уйланып ала:

Яуҙа күреп йә ишетеп беләм:
Ҡылды кеше күпме батырлыҡ.
Билдәлеһе, билдәһеҙенә лә
Һаман әле хайран ҡалырлыҡ.
Ә кемдәр һуң минең геройҙарым,
Хасмы уларға берәй батырлыҡ?

Һигеҙенсе бүлектәге лирик сигенеүҙәр хистәргә, тойғоларға ғына түгел, фекергә лә бик бай. Мәҫәлән, һуғыштың да, тыныс тормоштоң да, күңелдең дә алғы һыҙығы, алғы сиге булыуы тураһындағы фекер, тыштан ҡарағанда, ябай ғына тойолһа ла, уйлай башлаһаң, шаҡтай ҡатмарлы икән. Баҡһаң, дүрт яҙмыш шағир күңеленең алғы сиген яулағандар ҙа шиғыр юлдарына күскәндәр. Ошонда йәнә Назар Нәжмиҙең эстетик ҡараштары сағылып китә. Күңелдең алғы сиге – «ысын шағир өсөн Хоҙай биргән хәтәр изгелек», «ҡойроҡ болғау, ике йөҙлөлөк» – «уға дошман, уның йән дошманы»; ысын шағир өсөн «алғы һыҙыҡ – хаҡ һүҙ, иман өсөн утҡа инеү, әрнеү, яныу ул», «ябай кешеләрҙең һинең йәндә үҙ йәндәрен килеп табыу ул», «ҡыланыу юҡ унда батыр булып, мәрхәмәтле йән һәм дуҫ булып» тигән юғары талаптар ҡуя шағир шиғриәт, әҙәбиәт, сәнғәт алдында. «Минең геройҙарым алғы һыҙыҡталар бөгөн дә», «Һеҙ ғүмергә алғы сиктәһегеҙ, һеҙҙә һаман һуғыш дауамы» тип, ғорурлыҡ менән өндәшә автор үҙ геройҙарына; улар менән бер быуын, бер заман кешеләре, бер бөтөн булыуы ла һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ошонда ирекһеҙҙән Назар Нәжмиҙең етмешенсе йылдар башында яҙылған «Мин бер бөтөн» шиғыры иҫкә килеп төшә. Тормошта үҙе яулаған сикте билгеләү ниәтенән шағир былай ти: «Миндә иһә бары

һеҙҙең яҙмыш бүләк иткән ижад ғазабы». Ләкин был һүҙҙәрҙең ысын мәғәнәһе төптәрәк ята – поэманың Ибраһим атлы геройына ла ижад ғазабы таныш һәм икеләтә ауырыраҡ икәнлегенә ишара яһала. Шулай итеп, был турала асыҡтан-асыҡ, туранан-тура әйтелмәһә лә, һиҙмәҫтән, уйламаған-нитмәгән ерҙән геройҙың прототибы ла ҡалҡып сыға. Ул – күренекле башҡорт яҙыусыһы Ибраһим Ғиззәтуллин. «Һеҙ һаман да алғы сиктәһегеҙ, һеҙҙең өсөн һуғыш бөтмәгән» тигән юлдар тора-бара рефренға әйләнеп китә. Был рефрен геройҙарҙың дүртеһенә лә ҡағыла һәм әҙәби сара булараҡ поэманың башынан алып ахырына тиклем хәрәкәт итеүсе дүрт яҙмыштың иҫ киткес юғары, таҙа, саф әхлаҡлы кешеләр икәнлеген раҫлай, ошо фекерҙе уғата ла нығыта, уғата ла ҡалҡыулата, уғата ла фәһемләндерә.

Әйтергә кәрәк, әхлаҡ темаһы, шәхес, ғаилә мәсьәләләре әҫәрҙә туранан-тура, асыҡтан-асыҡ күтәрелмәй. Әгәр шулай була ҡалһа, ул инде әҙәби әҫәр түгел, ә ғилми трактатҡа әйләнер ине. Был мәсьәләләр поэманың үҙенән, тәбиғи рәүештә – сюжет ағышында үҫеп сыға. Әлбиттә, бында төп ролде поэмала тасуирланған хәл-ваҡиғалар, тормош-көнкүреш картиналары, образдар системаһы, геройҙарҙың ҡылыҡтары, холоҡ-фиғелдәре, яһаған аҙымдары уйнай. Ләкин был мәсьәләләр лирик сигенеүҙәрҙә лә ситләтеп үтелмәй. Лирик сигенеүҙәрҙә авторҙың тел төбөн аңлауы күпкә еңелерәктер ҙә әле, моғайын.

Ошо йәһәттән йомғаҡлаусы бүлек иғтибарҙы үҙенә тарта. Уға кире әйләнеп ҡайтып, бер аҙ туҡталып китеү яҙыҡ булмаҫтыр. Был бүлек әҫәрҙең композицияһында, тулыраҡ итеп әйткәндә, уның идея-художество концепцияһында мөһим урынды алып тора. Миңә ҡалһа, ул күҙгә күренмәҫ лирик ҡылдар ярҙамында поэманың беренсе бүлеге менән тоташҡан. Әгәр беренсе бүлектә, дошман пуляһынан йығылып, ҡан эсендә ятҡан Мөҙәррис тураһында һөйләгәндә, ҡәһәрле һуғыш Иблискә тиңләнһә («Яҙмыштарҙы пыран-заран итеп, ниңә керә Иблис араға? Йәш атаның ниндәй ғәйебе бар, ни ғәйебе тыуыр баланың?»), унынсы бүлектә автор, һуғыш ғазаптарын тиҙ онотоусыларға, уға «Билдәһеҙ яу» тип кенә ҡарап, үлгәндәрҙең һәм тере ҡалғандарҙың йән-рухын мәсхәрәләүселәргә, Еңеү тантанаһының кәрен төшөрөргә маташыусыларға рәнйешен белдерә, уҙған һуғышҡа мең-мең ләғнәт уҡый, геройҙарының яҙмышы аша бөтә донъяға һөрән һала:

Һуғыш эҙе күпме күңелдәрҙә
Күҙ йәш булып тора эркелеп.

Яу билдәһеҙме ул, түгелме, унан һуң инде «бер кешенең ғүмере тиклем ғүмер» үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, Назар Нәжми геройҙары өсөн һаман дауам итә, сөнки «яраланған ике һалдатты» нисә йылдар буйы алып сыға «яу ҡырынан ике Зөләйха». Тимәк, һуғыш – үҙе үк ҙур әхлаҡһыҙлыҡ, ябай халыҡҡа уның һис кенә лә кәрәге юҡ.

«Ике Зөләйха» поэмаһында әхлаҡ мәсьәләләре күнегелгән, көн дә тип әйтерлек ҡабатланып торған тормош-көнкүреш тәңгәлендә генә түгел, юғарыраҡ кимәлдә лә үҙенең сағылышын таба. Кеше ғүмере, уның бәһаһы, әҙәм балаһының күңел донъяһы хаҡында уйланғанда, мәҫәлән, әхлаҡ темаһы хатта фәлсәфәүи төҫ алып ҡуя тиһәк тә, һис бер арттырыу булмаҫ. Уға йәнә шағирҙың эстетик аңы, эстетик зауығы килеп ялғана:

Беҙ бөтәбеҙ ябай бер тамырҙан,
Әҙәмдәрсә күңел донъяһы.
Эше юҡта ҡоштар осорорға
Шағир түгел ҡоштар ояһы.
Оса икән күңел ҡошо – оҫһон
Туҡайса ул әрнеп, ярһынып,
Былай ҙа киң һәм былай ҙа сикһеҙ
Донъя ситлектәрен тарһынып.

Кешеләр менән кешеләр, илдәр менән илдәр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙең әхлаҡи тамырҙарын да самаларға мөмкин «Ике Зөләйха»ла: кешеләрҙе бер-береһе менән күңел тарлығы ыҙғыштырһа, илдәрҙе һәм халыҡтарҙы иһә «былай ҙа киң һәм былай ҙа сикһеҙ донъя ситлектәрен» тарһыныу һуғыштыра. «Ер өҫтөндә урын етмәйме ни?» тигән борсолоуын автор юҡҡа ғына белдермәй торғандыр.

Әхлаҡ принциптарына ҡағылышлы тағы бер миҫал. Йомғаҡлаусы бүлектәге лирик сигенеүҙә автор үҙе һайлап алған дүрт геройҙың, дүрт яҙмыштың көслө рухтары, шул уҡ ваҡытта уларҙың ифрат ябайлыҡтары алдында баш эйә, улар менән ғорурлана, түҙемлектәренә, сыҙамлыҡтарына һоҡлана. Автор уйынса, был шәхестәрҙең тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ҡылған батырлыҡтары, яулаған абруйҙары алдында «селпәрәмә килә ваҡлыҡтар», «үҙ төҫөнә инә ялған ҡаралыҡ

һәм аҡлыҡтар», ғүмерҙең хатта бер минуты ла донъя ҡәҙәре булып тойола. Ләкин тән язаһын да, күңел ғазабын да баштан ашырған сәбәптәр әле лә юйып ташланмаған, ҡыҙғанысҡа ҡаршы:

Ул һаман да аңдып тора беҙҙе –
Хәтәрерәк үткән хәтәрҙән.
Кеше түгел, хатта бар кешелек
Ғәрипләнәсәк был ҡәһәрҙән.

Поэманың һуңғы юлдарында шағир, Кавказ халыҡтарына хас ғөрөф-ғәҙәттән оҫта файҙаланып, Зөләйхалар образын символ дәрәжәһенә күтәрә һәм иҫ киткес тәрән дөйөмләштереүгә ирешә. Һәм быны Назар Нәжмиҙең сираттағы поэтик табышы тип иҫәпләргә кәрәктер:

Беҙ, кешеләр, ҡан дошмандар түгел,
Булдырмаҫҡа мәғәр һуғышты
Ике араға, баш яулығы һымаҡ,
Ҡуйыр инем һеҙҙең яҙмышты.

Үрҙә поэманың тел-стиль саралары хаҡында ҡайһы бер фекерҙәр әйтелгәйне инде. Был, әлбиттә, үҙе бер ҙур тема. Һәм ул, бәлки, махсус тикшереүҙе лә көтәлер. Әлегә иһә иғтибарҙы шул сараларҙың күҙгә бәрелеп торғандарына ғына йүнәлтеп үтмәксемен. Быға тиклем ижад ителгән күпселек әҫәрҙәре шикелле, «Ике Зөләйха» ла Назар Нәжмиҙең үҙ алдына ҡуйған маҡсаты йәһәтенән дә, әйтергә теләгән уйы менән дә, теле, стиле яғынан да юғары баһаға лайыҡ тиер инем. Һәр ваҡыттағыса, шағир телдең бай мөмкинлектәренән оҫта файҙалана һәм шул арҡала бәхәс уята алмаҫлыҡ уңыштарға өлгәшә. Уға ябай халыҡсанлыҡ һәм халыҡсан ябайлыҡ хас. Ләкин ябайлыҡтың төбөндә тәрән йөкмәткене ята. Бер генә миҫал: «Дүрт яҙмыштың ерҙә дүрт тарихы, яҙмыштар шул булмай тарихһыҙ». Ҡарап тороуға, ошо һөйләм туғыҙ һүҙҙән ойошҡан. Ысынында иһә, унда үҙ аллы алты ғына һүҙ берәмеге. Ҡалғандары – «дүрт», «яҙмыш», «тарих» (уларҙы терәк һүҙҙәр тип тә атарға булалыр) – бер һүҙҙе, уға күпмелер кимәлдә яңы яңғыраш өҫтәп, ике тапҡыр ҡулланыу һөҙөмтәһе. Ошо рәүешле, тыштан ябай ғына күренгән һөйләм үҙ эсенә ғәйәт оло һәм фәһемле йөкмәткене һыйҙырған

булып сыға: ергә килгән һәр бер кеше – ул үҙе бер ҙур донъя, уны аңлап та, аңлатып та бөтөрөрлөк түгел.

Назар Нәжмиҙең һүҙҙәрҙе үҙе теләгәнсә уйнатыу һәм шуның нәтижәһендә образлы фекерләү ҡеүәһен бермә-бер арттырыу маһирлығы заманында күренекле ғалим һәм тәнҡитсе Ким Әхмәтйәнов тарафынан тотоп алынғайны инде. Йылдар үтеү менән был маһирлыҡ торған һайын үҫә, тәрәнәйә генә бара. «Ике Зөләйха» поэмаһынан да ошо фекерҙе раҫларҙай бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Ә рифмаларҙың теүәллеге, эске бер моң сығарып яңғырауҙары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде.

Бөйөктәрҙән берәү әйткән: «Даһилыҡ – ябайлыҡта». Хаҡ һүҙҙер. Халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең халыҡсан, бер үк ваҡытта ябай ҙа һәм ҡатмарлы ла шиғриәте быға асыҡ дәлил була ала.

1997

ШАҒИРҘЫҢ ӨМӨТ ШӘМДӘЛДӘРЕ

Башҡорт һүҙ сәнғәтен башҡа халыҡтар әҙәбиәтенән айырып торған бер үҙенсәлек хаҡындағы фекер күптәнән бирле тел осомда йөрөй ине. Әле бына Фәнил Күзбәковтың «Өмөт шәмдәлдәре» тигән китабын ҡулға алып уҡый башлағас, шул фекерҙе асыҡтан-асыҡ әйтеп һалырға яйы сыҡты һымаҡ. Үҙенсәлек иһә шунан ғибәрәт. Беҙҙең байтаҡ ҡына яҙыусыларыбыҙ һәм шағирҙарыбыҙ әҙәби ижадты ғилми эш менән бергә бәйләп алып бара, уларҙың әҙәбиәт, ғилем донъяһына килеү юлдары ла төрлөсә. Ҡайһы берәүҙәре әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныуҙы ғилем серҙәренә төшөнөүҙән башлай. Икенселәре, саф ижад өлкәһендә күпмелер тәжрибә туплағас, фәнни-тикшеренеү эштәре менән мауығып китә. Бәғзеләре йөктөң икеһен дә бер сама тарта.

Әҙәбиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ тарихына ингән Әмир Чаныш, Жәлил Кейекбаев, Кирәй Мәргән, Әхнәф Харисов, Ғилемдар Рамазанов, Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов, Вафа Әхмәҙиевтар тап ана шундайҙар иҫәбендә булды. (Был шәхестәрҙең исемен һанағанда уларҙың донъялыҡта тотҡан урыны, биләгән вазифаһы, әҙәбиәтебеҙгә, ғилемебеҙгә индергән өлөшө түгел, бөтәһенән элек яҡты иҫтәлектәре һәм йәш айырмалыҡтары күҙ уңында тотолдо.) Был теҙмәне артабан да дауам итергә мөмкин: Ғайса Хөсәйенов, Рауил Бикбаев, Роберт Байымов, Суфиян Поварисов, Әхиәр Хәким, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Зиннур Ураҡсин, Рәшит Шәкүр, Мирас Иҙелбаев. Ниһайәт, бына хәҙер Фәнил Күзбәков – ул да ғилем өлкәһенән: тарих фәндәре кандидаты, журналистика теорияһы буйынса төплө белгес. 1996 йылда «Китап» нәшриәтендә уның етди һәм матур ижад емеше – «Өмөт шәмдәлдәре» исемле шиғри йыйынтығы баҫылды.

«Йәш авторҙың беренсе китабын асып ҡараҙан әүәл, – тип яҙҙы Мостай Кәрим күптән түгелге бер мәҡәләһендә, – миндә гел ошондай һорау тыуа: "Әйтер һүҙе, раҫлар иманы, шикләнер шиктәре бармы икән быныҡ?" – тим. Шулар булһа, тәүге мәлдә, инша-имләнең ҡытыршылыҡтарына, телдәге кәмселектәргә бәйләнмәй ҙә торорға мөмкин. Йәнә: күрә белеү, йәғни маңлай күҙенең дә, күңел күҙенең дә зирәклеге мотлаҡ. Шулар бармы? Булһа, беҙ инде ижадсы менән

эш ҡылабыҙ. (Күңеле һуҡыр әҙәмгә әҙәбиәт тигән ҡара урманда аҙашып йөрөүҙән фәтүә юҡ)».

Фәнил Күзбәковты йәш автор тип әйтеүе ҡыйын, әлбиттә. Өҫтәүенә, редакция аннотацияһынан күренеүенсә, «Өмөт шәмдәлдәре» лә тәүгеләрҙән түгел. Йомшаҡ тышлыҡҡа ғына төрөп сығарылған булһа ла, ҡарап тороуға ул ярайһы ғына тос күренә. Ләкин Фәнилдең исеме әҙәбиәт майҙанында һуңғы йылдарҙа ғына нығыҡлап күҙгә салына башлауын иҫәпкә алғанда, Мостай Кәримдең үрҙә килтерелгән аҡыллы кәңәшен уға ҡарата ла ҡулланырға мөмкиндер тип уйлайым: «Өмөт шәмдәлдәре» авторының әйтер һүҙе, раҫлар иманы, шикләнер шиктәре бармы? Маңлай күҙенең дә, күңел күҙенең дә күреү һәләте ниндәйерәк кимәлдә?

Дөрөҫ, «Һүҙем бар» исемле бер шиғырында ул, «Кешеләрем, әйтер һүҙем бар!.. Мөлдөрәмә тулы күңелем һеҙгә барып етеп түгелһен» тип оран һала, һалыуын. Тик ул оран әйтер һүҙең үҙе түгел бит әле. «Шыбырлайым доғалыҡты» тигән икенсе шиғырында иһә автор, «Өмөт шәмдәлен ҡабыҙҙым, йөрәккә саҡма сағып» тип иҡрар итә. Ләкин был юлдарҙың да алап һуғып ат өркөтөүгә генә оҡшап ҡалыуы бик ихтимал. Ә шулай ҙа «Өмөт шәмдәлдәре» бөтөнләй үк өмөтһөҙ түгел, минеңсә. Ихлас күңел, яҡты уй, изге теләк менән уҡыған кеше уның биттәренән шиғри гәрәбәләр (бынығы ла Мостай Кәримдән алынған сағыштырыу) тапмай булмаҫ.

Бына китапты асып ебәргән «Башҡортостан» тигән шиғыр. Тыуған республикаһына арнап шиғыр яҙмаған берәй шағир бармы икән беҙҙә? Ләкин Фәнил Күзбәков өлкән ҡәләмдәштәрен һуҡыр килеш ҡабатлаған тип әйтә алмаҫ инем. Тәү сиратта, шиғыр үҙенең ыҡсымлығы менән айырылып тора: дүрт строфаға төйәгебеҙҙең данлы-яулы үткәне лә, быуаттарҙан килгән бөгөнгө рухи донъяһы ла һыйған, бәхетле киләсәгенә лә тәрән ышаныс белдерелә. Күнегелгән «байраҡ», «әләм» һүҙҙәре урынына әҙәби телдә һирәгерәк осрай торған «тыу» һүҙен ҡулланыу ла үҙенә күрә бер яңылыҡ – ирек тыуын юғары тоторға өндәй автор.

Әйткәндәй, тыуған төйәк темаһы китапҡа ингән байтаҡ ҡына башҡа шиғырҙарҙа ла сағылыш тапҡан. Уларҙың күпселегендә был тема ике юҫыҡта яҡтыртыла: бер яҡтан, лирик геройҙың тыуған-үҫкән яғы, уның бай һәм күркәм тәбиғәте менән һоҡланыуы һәм ғорурланыуы һиҙелһә, икенсе яҡтан иһә ул, ерҙә йәшәүселәрҙең наҡһыҙлығы арҡаһында ошо байлыҡтың һәм матурлыҡтың әрәм-шәрәм

ителеүенә бошона, тирә-йүнде бәләкәзәрҙән, эт-ҡоштарҙан арсаларға саҡыра. Күтәрелгән мәсьәләгә ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен, уй-кисерештәрен, хис-тойғоларын белдереү өсөн автор уңышлы ғына метафоралар һәм образлы сағыштырыуҙар ҙа тапҡан.

«Быуылған Нөгөш»тә, мәҫәлән, ҡасандыр терегөмөштәй ялтырап ятҡан йылға бөгөн килеп муйынына таштан ишелгән ҡороҡ һалынған йән эйәһе һымағыраҡ күҙ алдына баҫһа, «Килерме әҙәм тәүбәгә?»лә поэтик саралар уғата ла ҡуйыртып ебәрелгән. Тәүге ике строфала бынан күп быуаттар элек ата-бабаларыбыҙ һайлаған төйәктең күҙгә бәрелеп торған ҡайһы бер һыҙаттары тасуирлана. Был төйәк шиғырҙа тау һарайы тип нарыҡланған. Уның тирә-яғын мәрмәр һынлы аҡ ҡайындар уратып алған. Бында шишмә сылтырауы ла үҙенә башҡа – ул яҡты моңдо хәтерләтә. Гөл-сәскәгә күмелгән аҡландар затлы келәмгә тиң. Зәңгәр күк көмбәҙен пар аҡҡоштарға оҡшаған аҡ болоттар иңләй. Ҡыҫҡаһы, бөтәһе лә аҡ, бөтәһе лә пак был төйәктә. Тик, иҫләмәҫтән, көтмәгәндә-нитмәгәндә:

...Бик яҡында ғына көслө шартлау
Телеп үтте урман һауаһын.
Һаҫыҡ дары ҡатыш саң болото
Ҡаплап алды ярты донъяны.
Сәсәй урман, ҡайын ҡара яна,
Төҫө ҡаса сылтыр шишмәнең;
Әллә ҡаҙ мамығы бөтөрөлә,
Әллә туҙҙы аҡлан түшәге.

Артабан автор бәндәнең үҙен Кеше иткән Ер, Һыу, Һауаға битарафлығын фашлай, уның ҡайсағында хатта «әсә түшен тешләр балалай» ҡыланыуына иҫе китә. Шиғыр, «Һуңламайса тәүбә килтерергә табылырмы берәй саралар, табылырмы берәй саралар?» тигән риторик һорау менән тамамлана.

Ер-әсәгә иғтибарлылыҡ, ихтирамлылыҡ, тыуған төйәккә тоғролоҡ, уның тәбиғәтенә һәм хазиналарына хужаларса һаҡсыллыҡ идеяһы «Һыуһындарым ҡанмаҫ, һыуын эсмәй…», «Ер яна», «Олатайҙар минең сәсән булған», «Шыуған тау», «Ҡарағайҙарға элегия», «Йәншишмәләр» исемле шиғырҙарҙа ла ярылып ята. Шулар араһында «Шыуған тау» тигәне айырыуса заманса яңғырай төҫлө. Шиғырҙың төп атамаһы аҫтындағы «Ер һатыуға бәйле леген-

да» тип йәйәләр эсендә бирелгән өҫтәмә асыҡлауҙы «Улым – һиңә әйтәм, киленем – һин тыңла» тигән халыҡ мәҡәле шикеллерәк ҡабул итергә кәрәктер.

Заманса тигәндән, шағир булараҡ Фәнил Күзбәков йәштәр иҫәбендәрәк йөрөһә лә, донъяға ҡарашы буйынса ул инде тамам формалашҡан, өлгөрөп еткән шәхес. «Өмөт шәмдәлдәре»нә ингән шиғырҙарҙың байтағы шулай уйларға хоҡуҡ бирә. Уларҙың авторы тирә-йүндә атлаған һайын һәм көн дә тип әйтерлек булып ятҡан хәл-ваҡиғаларға һис кенә лә битараф түгел. «Күбәләктәй йәнем…»дең лирик геройы, мәҫәлән, «Заман атҡан уҡтар яҙлығыуһыҙ үҙлегемә тейә» тип иҡрар итә лә, «Өҙлөгөп тә, тимен, һыҙланыуҙың булырмы бер сиге?» тигән һорау ҡуя. Ләкин был һорауға берҙән-бер һәм дөрөҫ яуап табыуы еңелдән түгел. Шуға ла: «Боларыңҡы донъя һорауына ябай яуап көтмә! Хоҙай аҙаштырған бәндәләрҙе билдәһеҙлек өтә», – тип киҫәтә автор. Икенсе бер шиғырҙа иһә әлеге һорау уғата ла киҫкенләштерелә: «Иман ҡасҡан… Изгеләр юҡ, мәж килә кәрлә әҙәм. Донъяның ҡото киткәнгә был ғаләм нисек түҙә?!»

«Шөкәтһеҙ ысынбарлыҡ», «Тормош», «Ҡотоп һалҡыны» тигән шиғырҙар ҙа уҡыусы иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ. «Хыялдарға, ҡырау булып, ҡағыла һалҡын тыныҡ» тип мөрәжәғәт итә автор ысынбарлыҡҡа. Һәм, «Ил тиклем ил сәсәй ялғандан, – алҡымынан алдыҡ алғанда…» тип раҫлай. Шуныһы мөһим, автор ҙа, уның лирик геройы ла был тиҫкәре күренештәрҙе раҫлау менән генә сикләнеп ҡалмай, бәлки, уларға үҙҙәренең мөнәсәбәтен дә белдерә. Улай ғына ла түгел – заман елдәренә ҡаршы тура ҡарап атларға әҙер тороуҙарын да йәшермәйҙәр: «Көтөп йәшәү – көйөп йәшәү, – алышҡа сығам, ваҡыт! Төтәй-төтәй быҫҡығандан янып йығылыу артыҡ» («Минуттар уҙа ғына»). «Алҡынып та аҡһын һыуҙар»ҙың геройы ла ошондайыраҡ холоҡло. Башта ул, «Йондоҙһоҙ бер көҙгө төнгә әйләнә инде көнөм…» тип көрһөнөп ала ла, һуңынан: «Юҡ! Әйләнмәҫ. Миндә әле олатайҙар сәме бар» тигән ышанысын һәм ҡәтғи ниәтен белдерә, заманыбыҙҙың Салауат, Кинйәләр рухын талап итеүенә ишаралай.

Шулай ҙа «Өмөт шәмдәлдәре»нең лирик геройын, тормош мәшәҡәттәре артынан ҡыуа-ҡыуа үҙ алдына төрлө һорауҙар ҡуйырға яратыусан, ләкин көнөндә-сәғәтендә генә уларға яуап табылырына өмөтөн өҙгән шәхес йәиһә шул һорауҙарға яуап эҙләү өсөн яуға күтәрелергә әҙер торған сәмле яугир һымағыраҡ күҙ алдына баҫтырһаҡ, бер ҡатлыраҡ булыр ине. Сөнки ваҡыты-ваҡыты менән

уның һыҙланған, күңеле ҡайтып ҡуйған, икеләнгән саҡтары ла булғылай. Әгәр «Күңелемдә хәүеф» шиғырында: «Бар тирә-йүн төпһөҙ ҡараңғылыҡ, йәнде билдәһеҙлек ҡайыҙлай» тигәнерәк шомон белдерһә, «Баҡыр һыбай янында» исемле әҫәрҙә иһә «Ике яҡтың ике дөрөҫлөгө йөрәгемде ҡыҫҡан, – түҙ генә! Ике ярҙан ике олатайым керпек ҡаҡмай ҡарай күҙемә… Ҡайһыһына табан йөҙөргә?..» тип аптырай. Бындай аптырауҙар, икеләнеүҙәр, һыҡрауҙар авторҙың бөгөнгө ҡаршылыҡлы ла, баш ҡатырғыс буталсыҡ та ысынбарлыҡты шағир булараҡ ҡына түгел, ғалим булараҡ та ҡабул итеүенән, уны йөрәге менән дә, аҡылы менән дә мөмкин тиклем тәрәнерәк аңларға тырышыуынан да киләлер, бәлки.

Ысынлап та, Фәнил Күзбәковтың ҡайһы бер шиғырҙарында уның ғалимлығы үҙен һиҙҙермәй ҡалмай. «Аҡ көндәрҙән генә тормай донъя…», «Үҙеңдән», «Донъяның ҡануны ҡаты…», «Халыҡ тигән бер сылбырҙың…», «Булған-булмаған бәләне…», «Зарланмайым», «Тәүге имтихан» кеүектәрҙе тап ана шундайҙар иҫәбенә индерер инем. Сөнки уларҙа, гәрәбәләр табып, шиғри асыштар яһайһы урынға, аҡыл һатып, өгөт-нәсихәт уҡыуға иғтибар күберәк бирелгән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы... Әйткәнемде йөпләү өсөн, бер генә миҫал:

Бейеклектең тәмен белгән
Гел үрҙәргә ынтылыр.
Ғилем еле ҡағылғандар
Йәшәйештең ҡотолор.
(«Тәүге имтихан»).

Талапсан уҡыусының эстетик зауығын ҡәнәғәтләндерергә дәғүә итә алмаҫтай ошоға тартым юлдарҙы үрҙә һанап кителгән башҡа шиғырҙарҙа ла осратырға мөмкин. Ә бына «Ғалим-тарихсыға» тигәне, атамаһы һәм тышҡы ҡиәфәте менән шул уҡ төркөмгә ингән һымаҡ тойолһа ла, йөкмәткеһе йәһәтенән башҡасараҡ яңғырай. Һүҙ унда тарих сүплегендә ҡазыныуҙарҙың йышайып китеүе хаҡында бара. Ҡарап торғанда, шиғриәткә бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмаған тема күтәрелгән шикелле был әҫәрҙә. Ләкин, иғтибар менән уҡыһаң, образлы һүрәтләү, метафорик сағыштырыу ярҙамында авторҙың ҙур дөйөмләштереүгә ирешкәнен шәйләйһең. Үткәндәрҙә соҡсоноуҙы ул ер һөрөүгә тиңләй һәм, ошо ике күренеш араһында йәнәшлек үткәреп, уларҙа ниндәйҙер оҡшашлыҡ, уртаҡлыҡ эҙләй. Һөҙөмтә ҡыуаныслы

түгел: төрәнде саманан тыш тәрән тотоп, сөмөрт ҡара тупраҡты ҡыҙыл мәте менән бутаған кеүек, тарих биттәрен дә кәрәкһә-кәрәкмәһә лә аҡтарыуҙың файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк булып ҡуйыуы ихтимал. Авторҙың «Ҡыҙыл мәте… Ерем күкрәгенән һырҡырап та сыҡҡан ҡан һымаҡ. ‹…› Был ярлы ерҙә ниҙәр үҫер, ниҙәр генә унда сәселер?» – тигән йән өҙгөс һәм тетрәткес риторик һорауын тыныс ҡына ҡабул итеү мөмкин түгел. Өҫтәп шуны әйтке килә: әле беҙ һүҙ алып барған әҫәр – мәле менән ғилем һәм шиғриәттең, аҡыл һәм хистең тап килеп ҡуйыуҙары, хатта бер-береһен тулыландыра, байыҡтыра алыуҙары хаҡында һөйләй торған бер өлгөлөр.

«Өмөт шәмдәлдәре» авторының ғалимлығы уның тел-стиль сараларында ла сағылыш тапмай ҡалмаған. «Сеҫеҙ шиғыр – ҡашһыҙ йөҙөк»тә, мәҫәлән, ул, ярым шаярып, ярым йылмайып: «Шиғырҙарың үтә серле – аңлашылмай, тиһәләр, өндәшә алмай баҙап ҡалам, – сер бит эргә-тирәләр» тип кенә ҡотолорға самалаһа ла, ысынында иһә ҡуйылған һорауҙың төбөндә күпмелер дөрөҫлөк ятҡанын күрмәү мөмкин түгел.

Әлбиттә, Фәнил Күзбәков шиғырҙарының серлелеген тирә-йүндең серлелеге менән аңлатып булалыр. Сөнки: «Нурҙы эсеп, үләнҡалҡа, – үҙе ниндәй мөғжизә! Сер түгелме: ел арымай, ҡитға иңләп, ил гиҙә». Маңлай күҙе генә түгел, күңел күҙе лә күреү һәләтенә эйә булған нескә хисле шағир өсөн сылтырап аҡҡан йылғасыҡтар ҙа, шыбырлап яуған ямғыр ҙа, ҡырҙы япҡан ҡар ҙа, таңды аттырған йондоҙҙар ҙа, ғөмүмән, «йомарлам ғына еребеҙ» һәм унда «мәж килеүсе» кешеләр – үҙе бер сер, «һүтелмәгән бер йомғаҡ», «сиселмәгән сер-йомаҡ». Шуға ла, «Сеҫеҙ шиғыр – ҡашһыҙ йөҙөк, тажһыҙ сәскә һабағы» һымаҡ тойола уға. Ләкин серлелек бының менән генә бөтмәй торғандыр әле. Эргә-тирәләрҙең үҙе сер булыуынан тыш, Фәнил Күзбәков шиғырҙарындағы серлелектең башҡа сәбәптәре лә бар төҫлө. Шуларҙың береһе – шағирҙың көндәлек аралашыу, һөйләшеү телендә һирәгерәк ҡулланыла торған, йәиһә диалектҡа тартым, йәиһә тарих төпкөлөндәрәк ятҡан һүҙҙәргә мөрәжәғәт итергә яратыуындалыр, бәлки. «Башҡортостан» шиғырын тикшергәндә «тыу» һүҙенә туҡталып үҙғайныҡ инде. Миҫалдарҙы артабан да дауам итергә мөмкин: тәкрарлау, ҡороҡ, ҡырталашыу, осмот, мәүлә, киҙәк, сөңгөл, һаҙаҡ, тилбер, яйҙаҡ, уғлан, суғырмаҡлы, ҡарғытыу, маҙрау, улъя, артмаҡлау, алғасҡы, ая, әҙернә, сойорғотоу һ.б. Былары – китаптың «Атайсалдың күкһел ҡан тамыры – ағын һыуҙар

аҡһын алҡынып…» тигән беренсе бүлегенә ингән шиғырҙарҙан алынғаны ғына.

Халыҡтан йыраҡлашып, ҡайһы берҙәре хатта онотолоп барған үтә милли, яңғыраштары буйынса үтә үҙенсәлекле һүҙҙәрҙе әҙәби әйләнешкә индереү, уларға яңы һулыш биреү – һис шикһеҙ изге эш. Сөнки ошондай һүҙҙәр үҙ-ара аралашҡанда ла, әҙәби әҫәрҙәрҙә лә йышыраҡ файҙаланыла икән, тимәк, телебеҙ, бигерәк тә уның йәнле һөйләү формаһы уғата ла йәнләнәсәк һәм образлы һүрәтләү мөмкинлектәре лә күҙгә күренеп киңәйәсәк. Тик был эште зур һаҡлыҡ менән, саманы белеп башҡарыу фарыздыр. Юғиһә, киң ҡатлам уҡыусыға мәғәнәһе тиҙ генә барып етмәҫтәй һүҙҙәрҙе кәрәкһә-кәрәкмәһә лә ҡуллана башлаһаҡ, «Игорь походы тураһында һүҙ» исемле эпосты уҡыҡандағы шикелле, һүҙлектәр аҡтарып ултырырға ҡалыуы ихтимал. Әгәр Фәнил Күзбәковтың ҡайһы бер шиғырҙарынан алынған һәм үрҙә һанап кителгән һүҙҙәрҙең төбөнә төшөп етеүем хаҡ булһа, унда урынһыҙға ҡулланылғандары ла юҡ түгел, буғай. Әйтәйек, әлеге шул «Ғалим-тарихсыға» адресланған шиғырҙа «Сойорғотҡан уғы, тупаҫланып, үткәндәрҙән ҡайта ҡаҡлығып» тигән һөйләм бар. Бер-береһенә бик яҡын «сойорғоу», «сорғоу», «сорғотоу» һүҙҙәре «ырғытыу»ҙы, «сөйөү»ҙе аңлата, булһа кәрәк. Ләкин уҡты аталар түгелме һуң? Һөңгөнө ырғытырға мөмкиндер.

«Баҡыр һыбай янында» тигән икенсе бер шиғырында автор тап ана шулай яҙа ла: «Һыбайлының бер ҡаш йыйырыуы хәл иткән бит бабам яҙмышын. Батыр батша тиеп атаған да уҡҡа һалып атҡан ҡарғышын…» «Әсәйем, берҙән-берем»дә лә «нағыш» һүҙе бик урынлы яңғырамаған һымаҡ. Сөнки был һүҙ ике төрлө мәғәнәне эсенә ала: «биҙәк» һәм «һыр». Тимәк, «күңелемдең биҙәге» генә түгел, «күңелемдең һыры» ла булып сыға.

Фәнил Күзбәковтың айырым әҫәрҙәрендә фекерҙе асыҡтан-асыҡ түгел, ә мөмкин тиклем фәһемлерәк итеп, юл араһына йәшереберәк бирергә тырышыу һиҙелә. (Хәйер, ысын шиғриәт шулай булырға тейеш тә инде!) «Йәйғор балҡыр ергә етәһе бар», «Ҡуҙҙар йыям», «Яңғыҙ ат», «Ҡояш нурҙарына үрелеп», «Әйләнәм дә бағам Уралға», «Тамсы ҡандан ҡабат яралырбыҙ», «Танырмы олатайҙар?», «Ҡараңғылыҡтың ни икәнлеген…» шиғырҙарын шундайҙар иҫәбендә тимәксемен. Тормоштоң үҙенән алынған һабаҡтарҙы фәлсәфәүи планда дөйөмләштерергә, уларҙан хикмәтле һығымталар яһарға ынтылыу ҙа ят күренеш түгел «Өмөт шәм-

дәлдәре»нең авторына. «Ҡоралай», «Уттан киләм», «Хәтер буйһонмай аҡылға…», «Йөйҙәрҙән тора йөрәгем», «Бушҡа янмайыммы…», «Көндәр бирелгәндәр…», «Китаптар китабы», «Яныу», «Тауҙа һәм үҙәндә» кеүек шиғырҙар ошо фекеремде раҫлай һымаҡ. Бер генә миҫал:

Күпме генә йөҙөң борһаң да,
Һона-һона ҡулың туңһа ла,
Асмай ваҡыт япҡан ишеген –
Мөмкинлеге берәү кешенең.
Мөмкинлеге берәү – гел яныу,
Киләсәккә ҡарай юл алыу,
Тормош алда тиеп йыуаныу.

(«Яныу»)

«Өмөт шәмдәлдәре»ндә лирик геройҙың эске донъяһын, йәшлек сәхифәләрен, туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек ептәре менән бәйләнгән яҡындарына, рухташ замандаштарына мөнәсәбәтен сағылдырған шиғырҙар ҙа үҙенсәлекле. Сетерекле тойолған был теманы яҡтыртҡанда ла автор шиғриәттең юғары талаптарынан ситләшмәҫкә тырыша. «Әсәйем, берҙән-берем» телгә алынғайны инде. Уға йәнә «Һин тыуғанһың, әсәй, көҙ айында», «Йөрәген услайҙыр шағир», «Ярыштар дауам итә», «Һин бер ҡайын», «Ағайҙарым», «Ағайҙарҙан мин күп нәмә алдым», «Еңгәләрем», «Төн», «Эйәрҙә минең улым», «Табайымсы саралар», «Аһ, аяныс булды һинең яҙмыш» кеүектәрҙе өҫтәргә мөмкин. Был шиғырҙарҙың һәр ҡайһыһы тураһында ла оҙайлы һөйләргә, уларҙы ентекләп тикшерергә булыр ине. Ләкин уҡыусы иғтибарын, ошо типтағы быға тиклем ижад ителгән ҡайһы бер әҫәрҙәрҙән айырмалы булараҡ, уларҙың нәҡ шиғриәтсә яңғырауҙарына, хистәрҙең нескәлегенә, тойғоларҙың тәрәнлегенә, иң мөһиме – мотлаҡ берәй фәһемле, хикмәтле фекер төрөп бирелеүенә йүнәлтеү менән генә сикләнмәксемен.

Шулай ҙа «Эйәрҙә минең улым» һәм «Табайымсы саралар»ға әҙ генә булһа ла ҡағылып китмәй ярамаҫтыр. Тын алыштары, яңғыраштары, эске тирбәлештәре буйынса был ике шиғыр бер-береһенә бик яҡын торналар ҙа, идея йөкмәткеһе яғынан айырма ла юҡ түгел. Тәүгеһендә һүҙ быуындар бәйләнеше хаҡында бара: улының тәү тапҡыр атҡа менеүен күреп, ата сикһеҙ ғорурлана, уның шатлығы

эсенә һыймай. Икенсе шиғырҙың да үҙәгендә ата образы тора. Тик был юлы ул борсоулы, шатлыҡты хәүеф алмаштырған: бәләкәй сағында ҡолаған баланы тотоп алып ҡалып була ла бит, ә бына ҙурайғас, ҡулдан китә башлағас?.. Шағирҙың йөрәк түренән сыҡҡан хәүефен, ҡалтырауыҡлы тауышын нисек иғтибарһыҙ ҡалдыраһың:

Булайымсы гел яныңда,
Табайымсы сараһын.
Ысынтылап ҡолай ҡалһаң…
Тоталмаһам?..
Я раббым!

Гәрәбәләрҙе мөхәббәт лирикаһында ла осратырға мөмкин. Был темаға арнап, китапта хатта махсус бүлек бирелгән. «Әгәр ғашиҡтары булмаһа, утһыҙ ҡалыр ине был донъя» тип атала ул. Уға етмештән ашыу шиғыр тупланған. Уларҙан күренеүенсә, Фәнилдең лирик геройы тойғоларға ла, хыялдарға ла бай, ул ярата ла, яраттыра ла белә, күҙе осҡор, күңеле һиҙгер. «Хыял йәйғорҙары»нда, мәҫәлән, лирик герой, йөрәген йәйғор дуғаһында эленеп торған һабантурғайына тиңләй ҙә, һөйгәненә былай тип өндәшә:

Ҡыйыр-ҡыймаҫ үреләһең, иркәм –
Үҙем бүләк итеп һонайым.
Йылы устарыңда тере килеш
Леп-леп килеп бәхет тулаһын.

«Мин осраттым һине иртә яҙҙа»ның лирик геройына, күктә март ҡояшы балҡыһа ла, һөйгәненең керпеге боҙланғандай тойола, һәм ул был күренеште, иртә яҙҙың тылсымлы көйҙәрен боҙоп, ҡырҡа ғына төньяҡ еле иҫкәндә бөрөләрҙең һиҙгер төймәһе бөршәйеп, кесерәйеп ҡалыуына оҡшата. «Ҡараның бер һирпелеп»тә һөйгәненең бер һирпелеп ҡарауынан лирик геройға тауҙар һикереп торғандай, һыуҙар елкенеп аҡҡандай, күк ҡабағы асылғандай булып китә. «Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар…»ҙа иһә ҡыҙҙарҙың наҙлы ҡарашынан таш өҫтөндә гөлдәр үҫеренә лә шик тотмай ул.

Мөхәббәт темаһына арналған бер шиғырҙы – «Һөйгәнемдең әйткәне» тип аталғанын – бында тулыһынса күсерһәк, яҙыҡ булмаҫ тип уйлайым. Миңә ҡалһа, ул – үҙенсәлекле лә, тормошсан да әҫәр.

Күңелдәрем иләҫ-миләҫ,
Күңелдәрем тулышҡан:
Сайпылырмын тамсы һүҙҙән, –
Әйтә күрмә ялғыштан.

Йөрәгемде генә тыңла,
Күҙемә генә ҡара:
Йәшлек ҡуҙы һүрелмәгән…
Ә ғүмер үтеп бара…

«Өмөт шәмдәлдәре» тураһындағы һүҙҙе уның биттәренән гәрәбәләр эҙләүҙән, китап авторының уҡыусыға әйтер һүҙе, раҫлар иманы, шикләнер шиктәре бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлауҙан башлағайныҡ. Хәҙер йыйынтыҡта икенсе урынды биләгән (уны титул битенән һуң курсив менән йыйғанда ла ярар ине) «Шифриәт» тигән әҫәргә лә туҡталырға ваҡыттыр. Был шифыр китаптың асҡысы тип аталырлыҡ. Рәми Ғариповтан алынған юлдарҙың эпиграф итеп файҙаланылғаны өсөн генә түгел, әлбиттә. Тәү сиратта, авторҙың тыйнаҡлығы, ҡәләмгә ҙур яуаплылыҡ тойоп тотонғаны өсөн. «Шифриәткә мин инәмен аяҡ сисеп, баш һалып. ‹…› Шифриәткә мин инәмен ғибәҙәтхана күреп», – ти ул. Шәп әйтелгән. Әгәр ул ысын күңелдән икән, төклө аяғың менән тип юрайһы ғына ҡала

1997

ЙӨРӘГЕНДӘ – ИЛ ҡАЙҒЫҺЫ

Тимер Йосопов шиғриәтенә арналасаҡ был мәҡәләнең атамаһын алдымда ятҡан ҡағыҙ битенә теркәп ҡуйҙым да, бер аҙ уйға ҡалдым. Нишләп әле тағы йөрәк? Бынан биш-алты йыл самаһы элек Рауил Бикбаевтың шул осорҙағы ижадына яһаған байҡауым да «Өҙгөләнә шағир йөрәге» тип аталғайны түгелме һуң? Ни өсөн зиһенгә гел шундай атамалар килә? Уйлана торғас, был һорауҙарыма яуап табылды һымаҡ. Хикмәт, моғайын, алтмышынсы йылдар башында аяҡланған бер төркөм әҙиптәребеҙҙең хәҙер инде ир ҡорона инеп ил мәшәкәттәрен үҙ елкәләрендә торған һайын нығыраҡ тойоуҙарындалыр. Уларҙың бәғзеләрен шиғриәтебеҙҙең алғы һыҙығына сығып, ижад дилбегәһен шаҡырлатып тотҡан ышаныслы юлсыға тиңләр инем. Тимер Йосопов – шуларҙың береһе. Әлеге мәҡәләнең атамаһы уның «Ил ҡайғыһы – йөрәктә» тигән шиғырын бер аҙ үҙгәртеп ҡороу һөҙөмтәһендә килеп тыуҙы. 1995 йылда ижад ителгән был шиғыр башта «Ағиҙел» журналының шул уҡ йылғы ун икенсе һанында донъя күргәйне, ә бөгөн иһә ул шағирҙың әле типография буяуынан да арынып бөтмәгән «Беште ер еләккәйҙәре» тигән өр-яңы китабын асып ебәрә:

Ғүмер тигән араларҙы
Үтәбеҙ шул ут йотоп.
Берәй иркен һуланыҡмы,
Ил ҡайғыһын онотоп.
Төшлөгөндә торған ҡояш
Ни арала төшкән һуң?
Ил ҡайғыһы төшкә тиклем,
Үҙ ҡайғыбыҙ – төштән һуң…
Аҙмы дуҫтар ауҙы инде,
Үткән саҡта үрҙәрҙе.
Ил ҡайғыһы бөгә икән
Шәмдәй генә ирҙәрҙе.
Яҙҙар килер был төбәккә,
Бөрө шартлар тирәктә,
Үҙ ҡайғыларым – итәктә,
Ил ҡайғыһы – йөрәктә.

Бына шулай, Тимер Йосоповтың лирик геройы тар ҡабыҡҡа төрөнөп, үҙ мәнфәғәттәренән генә сығып көн итә торған шәхес түгел. Ул шаҡтай ҙурыраҡ үлсәүҙәр һәм юғарыраҡ категориялар менән фекер йөрөтә. Быға беҙ, уҡыусынан ғәфү үтенеп, әле тулыһынса килтерелгән «Ил ҡайғыһы – йөрәктә» тигән шиғыр аша ғына түгел, йыйынтыҡҡа ингән башҡа бик күп әҫәрҙәр миҫалында ла, йыйып әйткәндә иһә – шағирҙың бөтә ижады аша ышана алабыҙ.

«Беште ер еләккәйҙәре» – Тимер Йосоповтың ун икенсе китабы. Уға шағирҙың замандашы, ҡәләмдәше һәм рухташы Р. Бикбаев «Һалмағая аҙымдар, һәлмәгәйә хис-уйҙар» тигән исем аҫтында бик йылы һәм ихлас күңелдән әйтелгән баш һүҙ яҙған. Китапҡа биш йөҙгә яҡын шиғыр тупланған һәм «Улымды эҙләп барам» тигән поэма индерелгән. Күләме егерме табаҡтан ашҡан был китап авторҙың башлыса һуңғы йылдарҙа ижад иткән өр-яңы әҫәрҙәренән тора. Бына шунан һуң нисек инде Тимер Йосоповты бөгөнгө башҡорт поэзияһының алғы һыҙығында атлаусы һәм ифрат әүҙем эшләүсе вәкилдәренең береһе тип әйтмәҫһең. Уға быйыл Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелеүе лә тиктәҫтән генә түгел дә инде.

Тимер Йосопов – балалығы һәм үҫмер осоро ҡәһәрле һуғыш һәм унан һуңғы аслыҡ-яланғаслыҡ йылдарына тап килгән быуын вәкиле. Ата-әсәләрҙең наҙлы ҡарашына ҡойоноп, уларҙың нурлы йылмайыуына изрәп, тәм-томдар ғына ашап үҫәһе урынға, был дәүер балалары ҡар аҫтында ҡышлаған серек картуф кәлйемәһе йәиһә дегет кеүек ҡап-ҡара алабута икмәге ашап, сабый сағынан уҡ ололарҙың ҡул араһына инергә тырышып көн итте. Дөрөҫөрәге, быуындары ла ҡатмаған килеш ололар ҡул араһына инергә уларҙы заман мәжбүр итте. Тимерҙең дә тәүге китабы юҡтан ғына «Икмәк еҫе» тип аталмағандыр, моғайын. Уның: «Оноторлоҡмо һуң, булды бит ул бик тилмергән саҡтар икмәккә», «Тормош күрке булып һәр бер өйҙән гел таралһын икмәк еҫтәре» тигән киҫәтеү-өндәүҙәре лә шунан киләлер. Әле булһа минең кәштәмде биҙәп торған был китаптағы әҫәрҙәр миңә, Тимерҙең ҡорҙашына, шул зәһәрле йылдарҙың йән өшөткөс һәм ҡолаҡ тондорғос шаңдауы булып яңғырай.

Тимер Йосопов әҙәбиәткә терһәкләнеп, йыртышып килеп инмәне, шикелле. Тәүге китабы донъя күргәндә уға инде утыҙ йәш тулып китеүе лә шулай уйларға хоҡуҡ бирә. Егерме өс кенә шиғырҙы бер тышлыҡ эсенә берләштергән был ыҡсым йыйынтыҡ баҫылып сыҡҡанда, уның авторы ярайһы ғына бай тормош тәжрибәһе туплап

өлгөргәйне инде. Буласаҡ шағирҙың тәүге аҙымдары ҡәләм шымартыуҙан башлана – ауыл урта мәктәбен тамамлағандан һуң ул район гәзитендә әҙәби хеҙмәткәр вазифаһын атҡара. Тормошта үҙ урынын эҙләй башлағанда Тимерҙе йөк ташыусы һөнәре лә ситләтеп уҙмай. Артабан – Башҡорт дәүләт университетында уҡыған саҡтағы шаулы һәм дәртле студент йылдары. Унан һуң – мәктәптә балалар уҡытыу, әҙәбиәт дәрестәрендә улар менән бергә хыялдар диңгеҙендә йөҙөү. Ниһайәт, күләме бәләкәй генә булһа ла, тау хәтлем шатлыҡ һәм ҡыуаныс алып килгән тәүге китап.

«Икмәк еҫе»нә ҡарап торам да, халыҡ телендәге «Май сүлмәге тышынан билдәле» тигән әйтемде хәтерләп ҡуям. Ысынлап та, китапҡа ингән шиғырҙарҙың байтағы – тейешле поэтик кимәлдә. Улар һис тә эш юҡтан эш булһын тип йәиһә бер аҙ аҡсаһы сыҡмаҫмы тигән арзан ниәттән генә яҙылған әҫәрҙәргә оҡшамаған. Рифмалар теүәл, ритмдар йәтеш. Образлылыҡ та етерлек. «Бесән өҫтө», «Ерән ҡашҡа», «Күкрәгемде киреп йырлайым мин…», «Батыр эҙе», «Бүләк» тигән шиғырҙар тап ана шундайҙар иҫәбендә тиер инем. Йәш авторҙың тирә-йүндәге бихисап күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы тотоп ала белеү ҡеүәһен һәм уларҙы шиғриәт бейеклегенә күтәрергә тырышҡанлығын шәйләйһең. («Минең ҡулда», «Завод зыңы», «Йөксө», «Йүгерә-йүгерә кирбес ташыйһың һин…», «Эй ҡысҡыра паровозым…»). Йәнле сағыштырыуҙар ҙа, үҙенсәлекле метафоралар ҙа, сағыу эпитеттар ҙа юҡ түгел унда. Әйтәйек, һуғыш ҡасафаты арҡаһында тол ҡалған еңгәһен ул ыласынға тиңләй, ә уның ҡулында уйнаҡлаған салғыны талмаҫ ҡанатҡа оҡшата һәм ошо ҡатындың хәтәр яҙмышын ер битенә салғы менән яҙып ҡалдырырға хыяллана; Ерән ҡашҡаһының эйәренә һалып, тәүге тапҡыр күрше сибәрен үпкәнен дә хәтерләй; цемент күтәргән ҡулында – донъя ҡото, ә иңендә – Ер шары торған кеүек тойола уға; батырҙарҙың эҙен ҡосағында һаҡлаған тыуған ерен наҙлы бишек менән сағыштыра; ҡуйы ағас аша нурын һипкән айҙы еп һаплаған һылыу ҡыҙға оҡшата, офоҡ ситен ялҡын бәреп торған күҙгә тиңләй һ.б., һ б.

Бәхәсләшмәйем, Тимер менән көн дә тип әйтерлек осрашып һәм аралашып йәшәгән, шағирҙы яҡынданыраҡ белгән ҡәләмдәштәре уның тураһында ҡыҙыҡлыраҡ та, йәнлерәк тә, тулыраҡ та, матурыраҡ та итеп яҙырҙар. Шуға күрә үҙ алдыма артыҡ зур, баштан ашҡан бурыстар ҡуймайынса, Тимер Йосопов хаҡында миңә тиклем яҙылған мәҡәләләргә (хәйер, улар әллә ни күп тә түгел, шикелле, һәм бының

сәбәбен гел торғонлоҡ йылдарына ғына япһарып ҡалдырырға ярамаҫтыр, бәлки, тәнҡитебеҙҙең һүлпәнлегендә, иғтибарһыҙлығында ла эҙләргә кәрәктер) таянып түгел, фәҡәт уның шиғырҙарын (бигерәк тә «Ҡая өҫөндә уйланыу», «Килде заманалары», «Ауырая аҙымдар», «Беште ер еләккәйҙәре» тигән китаптарына ингәндәрен) уҡығанда тыуған тәьҫораттар нигеҙендә бер аҙ ғына булһа ла замандашымдың әҙәби портретын төҫмөрләргә, дөрөҫөрәге – шул портреттың ҡайһы бер һыҙаттарын билгеләп ҡарарға иҫәп. Юл ыңғайында шағирҙың шәхесенә бәйле ике эпизодты иҫкә төшөрөп уҙыу ҙа яҙыҡ булмаҫ тип уйлайым.

Уларҙың береһе бынан бик күп йылдар элек булды. Бөрө ҡалаһына килеп төшкән бер төркөм йәшерәк быуын башҡорт шағирҙары араһында Тимер ҙә бар ине. Уның педагогия институты талиптары менән осрашыу кисәһендә яһаған сығышы хәтергә уйылып ҡалған. Беҙҙең күпте күргән, бик күп арҙаҡлы кешеләрҙең табан йылыһын үҙенә һеңдергән сәхнәлә төп-төҙ кәүҙәле, тырпайыбыраҡ торған сөм ҡара ҡуйы сәсле, көр һәм ҡалын тауышлы ир-егет баҫып тора.Шиғырҙарын башҡортса ла, русса ла бик матур итеп, еренә еткереп уҡый. Нимәһе менәндер хатта рустың Маяковскийын һәм үҙебеҙҙең Рәшит Ниғмәтиҙе лә хәтерләтеп ҡуйҙы. Сығышын тамамлағанда: «Минең “Правда” гәзитендә баҫылған шиғырҙарым да бар ул», – тип ысҡындырмаһынмы был. Эргәмдә ултырған түрәрәк бер әҙәм: «Быныһы нимәгә кәрәк булды икән инде? Мәртәбәһен күтәрергә тырышыуымы?» тигәнерәк шиген белдерҙе. Мин иһә, ни өсөндөр, Тимерҙең был һүҙҙәрен башҡасараҡ ҡабул иттем: унда бер ниндәй ҙә маһайыу йәиһә һауаланыу билдәһен тойманым – киреһенсә, шағир, саманан тыш тулҡынланып, хатта балалыҡ бер ҡатлығы менән тәьҫирләнеп, тәрән шатлыҡ хистәре кисерә һымаҡ ине. Һәм ул, моғайын, шулай булғандыр ҙа. Сөнки залда ултырған талиптар бик оҙаҡ алҡышланылар һәм сәхнәнән ебәрмәй торҙолар.

Икенсе эпизодтан һуң да байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Уныһы бынан ун биш йылдар самаһы элек Башҡортостан делегацияһы составында Германияның Галле округына ҡылған сәфәр менән бәйле. Аҙна-ун көнгә һуҙылған был сәфәр дауамында үрҙә телгә алынған ҡылыҡтар Тимер Йосоповтың бөтә булмышына хас сифат икәнлеге ҡайтанан асыҡланды. Тыштан ҡарағанда кәттә генә күренһә лә, асылда ул бик алсаҡ һәм үтә ябай кеше булып сыҡты. Уның тиҙ генә тәьҫирләнеп алыу һәм тиҙ генә болоҡһоп китеү ғәҙәте йәнә үҙен һиҙҙереп ҡуйҙы.

Теремеклеге, кешеләр менән тиҙ арала уртаҡ тел таба белеү һәләте лә күҙгә салынмай ҡалманы. Тимәк, шағирҙың теге саҡта талиптар менән осрашыу кисәһендә «ысҡындырған» һүҙҙәрендә бер ниндәй ҙә көтөлмәгәнлек тә, уның абруйына ҡағылырлыҡ хилафлыҡ та булмаған.

Әҙәбиәтебеҙ тормошонан ошоға тартым тағы бер ҡыҙыҡлы һәм иғтибарға лайыҡлы хәлде иҫкә төшөрөп китергә мөмкин. Хәким Ғиләжев хәтерләүенсә, бөгөнгө шиғриәтебеҙҙең уҙаманы Назар Нәжми ҙә бит йәшерәк сағында (һуғышҡа тиклем үк әле), гәзит-журнал биттәрендә баҫылған шиғырҙары хаҡында һүҙ сыҡҡас: «Улары нимә! Мин “Алмағастар” тигән поэма яҙам әле. Во буласаҡ!» – тип эре генә сирттереп ҡуйған. Ләкин был һүҙҙәрҙе әйткәндән генә Назар Нәжмиҙең бер ере лә ҡыйшаймаған. Ә бына поэмаларҙы күп яҙҙы ул – хәҙер уларҙың һаны ун бишкә етте. Шулай шул: иң мөһиме – әйткән һүҙең бушҡа китмәһен. Өлкән ҡәләмдәше Назар Нәжми шикелле, Тимер Йосопов та һуңғы ун биш-егерме йыл эсендә шиғриәттең яңы баҫҡыстарына күтәрелде һәм иң уҡымлы авторҙарҙың береһенә әйләнде.

Әҙәбиәт ғилемендә әҫәрҙең авторы менән уның лирик геройы араһында берҙәйлек йәиһә тигеҙлек билдәһе ҡуйылырға тейеш түгел тигәнерәк фикер хөкөм һөрә. Теоретик яҡтан ҡарағанда, был, әлбиттә, дөрөҫ. Сөнки теләһә ниндәй әҙәби әҫәр, күпме генә кимәлдә автобиографик һыҙаттар менән һуғарылған булмаһын, тәү сиратта ижадсы хыялының күркәм бер емеше. Ләкин шуны ла онотоп ташларға ярамайҙыр: хыял үҙе лә юҡтан бар булмай – ул тормошҡа, реаль ысынбарлыҡҡа, йәшәйешебеҙгә нигеҙләнә, шунда бөрөләнә, шунан үҫеп сыға һәм ҡанат йәйә. Әгәр шулай булмаһа, сәнғәт әҫәре лә тыумаҫ ине, тыуһа ла зәғиф булыр ине, бәлки, сәнғәт үҙе лә башкөллө юҡҡа сығыр ине. Бөтә ғиллә хыял менән ысынбарлыҡтың нисбәтендә түгел микән? Ҡайһы бер ижадсыларҙың эш практикаһында был ике компоненттың бер-береһенән алыҫыраҡ тороуы ихтималдыр, ә бәғзеләренекендә иһә улар, киреһенсә, магнит валсыҡтары һымаҡ, береһе икенсеһенә тартылып, бер бөтөнгә әүерелергә тырышаларҙыр. Бына ошо икенсе осраҡта автор менән лирик герой араһындағы берҙәйлек тә һиҙелеп арталыр, теорияла улар араһында ҡоролған яһалма кәртә лә торған һайын кесерәйә баралыр, юҡ хәленә килеп етмәһә лә, ул кәртәнең барлығы күҙгә бәрелеп тормайҙыр тимәксемен. Ошоға тартым уй-фекерҙәр элегерәк тә тынғы бирмәй ине. Әле бына Тимер Йосоповтың китаптарын иғтибар менәнерәк,

алға үҙенә күрә бер маҡсат ҡуйып тикшерә башлағас, улар яңынан ҡалҡып сыҡты һәм, төрлө ҡиәфәткә инеп, күңел түрен яуланы.

Тимер Йосоповтың «Икмәк еҫе»нә лә, унан һуңғы йыйынтыҡтарына ла ингән бәғзе шиғырҙарын уҡыған ни эшләптер егерменсе быуат рус әҙәбиәтендә күренекле урын биләгән А.И. Куприн атлы яҙыусының тормош һәм ижад юлы күҙ алдына килеп баҫты. Бик иртә атаһынан ҡалған был сабыйҙы йәштән үк хәрби һөнәргә өйрәтә башлайҙар. Күп төрлө махсус уҡыу йорттарында белем алырға тура килә уға. Тик, уларҙы тамамлап, Ватаны алдындағы хәрби бурысын үтәргә керешкәс, дүрт йыл да үтмәй, батша армияһында хөкөм һөргән тәртипһеҙлектәр менән килешә алмайынса, хеҙмәтен ташлап китергә мәжбүр була. Бер тинһеҙ ҡалған кисәге поручикка тамаҡ ялғарлыҡ ҡына булһа ла ризыҡ табыу өсөн ниндәй генә һөнәр алмаштырырға тура килмәй! Йөк ташыусы ла, балыҡ тотоусы ла, журналист та, ҡорос ҡойоусы ла, хор йырсыһы ла булып хеҙмәт итә ул һәм тағы әллә күпме эштәр башҡара. Төрлө осорҙа йәшәгән (Александр Куприн был донъяны ташлап киткәндә Тимер Йосоповтың әле өс айы ла тулмаған була) рус яҙыусыһы менән (уның тән тамырҙарында мосолман ҡаны аҡһа ла) башҡорт шағирының биографияларында ниндәйҙер уртаҡлыҡ эҙләү, бәлки, мәғәнәһеҙерәк тә тойолор. Ә бына уларҙың ижад принциптарындағы оҡшашлыҡты күрмәү мөмкин түгел: ике әҙип тә (береһе – яҙыусы, икенсеһе шағир булып киткәс) тормош юлына аяҡ баҫҡанда алған бай тәьҫораттарын үҙҙәренең әҫәрҙәрендә киң файҙаланасаҡ. Шуға ла А. Куприн очерктарында, хикәйәләрендә һәм повестарында ябай хеҙмәт кешеләре, ҡыйырһытылған һалдаттар, хәмер һәм боҙоҡ күңелле ҡатындар ҡорбанына әйләнгән тупаҫ офицерҙар образы тулып ята икән, Т. Йосопов шиғырҙарында ла ябай эшсе (йөк ташыусымы ул, крансымы, машинисмы) образы һүрәтләнеүе һис тә ғәжәп түгел. Сөнки буласаҡ шағир үҙ аллы тәүге аҙымдарын шул ябай хеҙмәт кешеләре араһында яһаған, тәүге тормош һабаҡтарын уларҙан алған, тәүге шатлыҡтарын да, ҡайғы-хәсрәттәрен дә улар менән уртаҡлашҡан, улар менән бергә кисергән.

Ләкин Т. Йосоповтың был тәңгәлдәге шиғырҙарына хеҙмәткә һәм хеҙмәт кешеһенә ҡоро дан, мәҙхиә йырлау тип кенә ҡараһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ ине. Сөнки улар хеҙмәт темаһына арнап элегерәк, әйтәйек, егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа, яҙылған әҫәрҙәрҙән күпкә айырыла, ул саҡтағы тимер һалҡыны бөркөп торған

шалтырауыҡ, йәнһеҙ юлдарҙы ниндәйҙер бер эске йылылыҡ менән һуғарылған образлы фекерләү алмаштыра. Һәр хәлдә авторҙың ошоға ынтылышы һәм алдына ҡуйған маҡсатына мотлаҡ ирешеү теләге үҙен һиҙҙереп тора. Завод зыңы уға, мәҫәлән, башта иркәһенең йырлауы һымағыраҡ тойола; бер аҙҙан һуң ул был зыңда гармун тауышын, киске уйында ҡыҙҙар йырлауын шәйләй; артабан иһә ошо көйҙә тулҡын шауын тотоп ала һәм үҙен Иҙел буйында баҫып торған шикелле хис итә; сағылдарҙа саң-саң итеп яңғыраған салғы яныу тауышын да, ауыл тимерлегендә эшләүсе егеттең зың-зың итеп сүкеш һуғыуын да хәтерләтеп ҡуя лирик геройға завод тормошо. Иң һуңынан инде ул төп һығымтаға килә: баҡһаң, завод зыңы – уның йәшлегенең моңо икән дә баһа. Шулай итеп, «Завод зыңы» тип аталған ошо кескәй генә шиғыр әллә күпме хистәр, уй-фекерҙәр уята, тормошта булған хәл-ваҡиғалар менән көтөлмәгән оҡшашлыҡтарҙы һәм йәнәшәлектәрҙе күҙ алдына килтереп баҫтыра. Элек әҙәбиәт һәм сәнғәт алдына ҡуйыла торған ҡайһы бер бурыстар һәм талаптар юғарылығынан сығып ҡарағанда, был әҫәрҙә хеҙмәт романтикаһын да, ҡала менән ауыл араһындағы күҙгә күренмәҫ, ләкин күңелдәрҙә һәр саҡ ғорурлыҡ, иртәгәһе көнөңә ныҡлы ышаныс тыуҙырып торған ептәрҙе лә шәйләргә мөмкин.

Образлы фекерләү ярҙамында шағир ябай йөксө һөнәрендә лә, йүгерә-атлай кирбес ташыусы хеҙмәтендә лә, хатта гудок һәм паровоз тауышында ла тәрән мәғәнә таба: кирбес ташыусының ҡулдарында ул донъя терәген күрһә, «тигеҙ сафҡа аҡ йорттарын теҙеп», далаларҙа ҡалҡып сыҡҡан яңы ҡалала йөксөнөң бармаҡ эҙҙәрен тойомлай. «Өр-яңы йорттар һалғандар мин бушатҡан кирбестән», – тип ҡыуана лирик герой. Уның: «Ситтән килгән турист түгелмен мин, йөксө үҙем һаман илемдә. Ыһ та итмәй, бөгөн Ер шарымды күтәрәмен кеүек иңемдә» тигән һүҙҙәрендә лә хаҡлыҡ бар, әлбиттә. «Эй ҡысҡыра паровозым…»да ул «үтте ләме йәш ғүмерҙәр уҙған составтар кеүек» тип уфтанһа, «Гудок тауышы»нда, шул уҡ фекерҙе ҡабатлағандай итеп, «ялтлап киткән йәшен кеүек, уҙҙы ламы йәш саҡтар?» тигән һағышын белдерә. Ләкин «Гудок тауышы», йөкмәткеһе менән дә, стиле йәһәтенән дә «Эй ҡысҡыра паровозым…»а бик яҡын торһа ла, ул барыбер ҡоро ҡабатлау түгел. Уның: «Гудок тауыштарын эсәм, эсәм йотлоғоп ҡына. Йәшлегемдән килеп сыҡтым туҙып, йолҡоноп ҡына» тигән һуңғы юлдары шулай уйларға нигеҙ бирә.

Йәшлегенән «туҙып, йолҡоноп» килеп сыҡҡан һымаҡ тойолһа ла, лирик герой ябай хеҙмәт кешеләре менән аралашып, улар менән бер табаҡтан ашап-эсеп йөрөгән, дөйөм ятаҡта йәшәгән саҡтарын һағынып иҫкә ала. Һәм был һис тә юҡтан түгел, сөнки унда бөтәһе лә ул тиклем үк насар булмаған. «Сменалар араһы» тип аталған циклға ингән байтаҡ шиғырҙар тап ана шул турала һөйләй. «Эшселәр табынында» тигән бер шиғырҙа, әйтәйек, «Хаҡлыҡ бында түр башында, бер кем барлыҡтан аҙмай. Шиғыр яҙаһы урынға анонимкалар яҙмай» тип нарыҡланһа, «Күрҙем инде» тигән икенсе шиғырҙа иһә ошо фекер уғата ла үҫтереп ебәрелә: «Ярып әйтә телдәре, тим, буш һүҙҙәрҙе талҡымай». Тирә-йүндә алдаҡ, ике йөҙлөлөк, ҡылансыҡланыу кеүек насар ҡылыҡтар күбәйеп китеп, өҫкә ҡалҡа башлаһа, Т. Йосоповтың лирик геройы эшсе дуҫтарына барып морон төртөргә әҙерлеген дә йәшермәй. Сөнки ул белә: арҡа терәрҙәй ирҙәрҙе фәҡәт хеҙмәт кешеләре араһында ғына табырға мөмкин.

Тимер Йосоповтың йәшлек хәтирәләренә таянып яҙылған шиғырҙарынан «Ышанмайҙар…» тигәне айырыуса хикмәтле яңғырай. Нимәһе менәндер ул Н. Нәжмиҙең «Ғәжәпләнделәр» исемле шиғырын да хәтерләтеп ҡуйғандай. Әҫәрҙең лирик геройы – эштән һуң, «кеше күрмәгәндә генә», шиғыр яҙып яҙып маташҡан «болан һымаҡ көслө», «боландай таҙа» йөксө – бер мәлде үҙенең ижад емешен уҡып ишеттергәс, уға ышанмайҙар, «яраһыңдыр һин борсаҡтың эреһен» тип кенә ҡарайҙар. «Берәү көслө йөксө икән – йөксө булып йөрөһөн!» тип бәғеренә лә ҡаҙап ҡуялар, етмәһә. Ә инде ул шағир булып киткәс, уның элек йөксө хеҙмәтен башҡарғанлығына шиктәрен белдерәләр: «Ҡәләм тотҡан ҡаҡса ҡулың, йәнәһе, йөк бушатҡан». Кеше тәбиғәтенә хас бына ошондай аймылыуҙарҙы, ҡаршылыҡлы, хатта ҡапма-ҡаршы хистәргә ҡоролған баһаламаларҙы шағир ифрат оҫта тотоп алған. Ләкин әҫәрҙең асылы уның һуңғы юлдарындалыр: элек йөксө булып эшләгәнлегенә ышанмағас, автор, хәҙер әллә ысынлап та шағирмын инде тигән риторик һорау бирергә мәжбүр. Һәм был һорауҙа шағирҙың мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайыуын да, үҙенсә бер йыуаныуын да, күпмелер кимәлдә ҡыуаныуын да шәйләмәй мөмкин түгел.

Әлбиттә, әле һүҙ барған «Ышанмайҙар…» шиғырында әҙәм балаһының күңел сафлығына, уның кешелек сифаттарына тап төшөрөүсе көнсөллөк, тарлыҡ, башҡаларға кәмһетеп, түбәнһетеп ҡарау һымаҡ тиҫкәре ҡылыҡтарға ла ишара яһала. Ә шулай ҙа был

шиғырҙы ысын мәғәнәһендә сәнғәт әҫәре юғарылығына күтәреүсе төп күрһәткес – «ялҡындарҙан һикерҙем дә атылдым тере ҡуҙға» тигән һөйләмдер. Был һөйләмдә лирик геройҙың йәне тартҡан бер ҡыҙға шиғырын уҡырға баҙнат иткән мәле сағылған. Һәм унда шағирҙың үҙенең дә, уның лирик геройының да бөтә булмышы ялтлап киткәндәй.

Кешенең эске кисерештәрен, уның рухи донъяһын, күңел торошон, хәл-әхүәлен шул тиклем киҫкен һәм шул тиклем көсөргәнешле итеп асып биргән ошондай юлдар Тимер Йосопов шиғриәтендә ярайһы уҡ йыш осрай. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен бында һанап та китергә мөмкин: «Йолҡоп атһам йөрәгемде, ҡайнар ине һыуҙары»; «Күктең йондоҙҙарын сүпләп, ат ялына тағырмын»; «…Буп-буш эскәйемде ҡарамай шул бер кем ярып»; «Дарҫлап тибә, ҡолаҡ һалам йөрәгемдең ҡағышына. Өҙөләм тигәндә ҡалам, әйләнгәс эт ҡайышына»; «Йылдарымдың хәтәр еле йөрәгемде йыртҡан»; «Ялтлап ҡына ҡалдым бары, күкрәй алманым инде» һ. б., һ. б. Дөйөм текстан йолҡоп алынғас, был юлдарҙың уҡыусыға тәьҫир итеү көсө, бәлки, бер аҙ кәмей ҙә төшәлер. Ә бына «Һағындым инде…», «Тайҙарымды мин әйҙәнем…», «Әлифба», «Дарҫлап тибә…», «Ҡан һауҙырҙы», «Юлға сыҡҡайныҡ» тигән шиғырҙарҙа улар бик йәтеш тә, көслө лә яңғырай һәм нур өҫтөнә нур өҫтәй.

Ғилми хеҙмәттәрҙә лә, әҙәбиәттең ағымдағы торошон яҡтыртҡан тәнҡит мәҡәләләрендә лә, теге йәки был шағирҙың ижады хаҡында һүҙ сыҡҡанда, йәнәһе, уның шиғырҙары лириклыҡ менән һуғарылған тигәнерәк фекерҙе ҡабатларға күнеккәнбеҙ. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, лириклыҡһыҙ шиғыр булмай торғандыр ҙа баһа һәм булырға ла тейеш түгелдер. Лириклыҡ – тойғоларға, хистәргә бирелеүсәнлекте аңлатмаймы ни? Ә ниндәй шиғыр һуң был сифаттарҙан азат? Ниндәй шиғри әҫәрҙә авторҙың да, уның лирик геройының да эске кисерештәре, тойғолары һәм хистәре, һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларға мөнәсәбәте сағылыш тапмай ҡала икән? Әгәр шулай булмаһа, әгәр автор ҡан һауҙырып ижад иткән әҫәренә үҙенең йөрәк йылыһын һалмаһа, ул шиғыр ҙа түгелдер, бары тик рифмаларға ҡоролған йәнһеҙ, шылтырап торған һүҙҙәр теҙмәһе генәлер. Төп сәбәп лириклыҡ тип аталған ана шул тылсымлы эликсирҙың ниндәй миҡдарҙа һәм ниндәй формала ҡулланылыуындалыр, бәлки.

Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, Тимер Йосопов лирикаһының бер үҙенсәлеге уның психологик күҙәтеүҙәргә бай булыуында

тимәксемен. Ләкин психологизм алымын шағир тупаҫ рәүештә кешенең күңел төпкөлөндә соҡсоноу маҡсатынан сығып түгел, бәлки шул алым ярҙамында (психологик күҙәтеүҙәр яҡтылығында) тормоштағы берәй хәл-ваҡиғаны үтемлерәк итеп, образлы тел менән һүрәтләп биреү өсөн файҙалана. Бына, әйтәйек, быуат уртаһында бөтә Европа илдәрен тиерлек дер һелкетеп, үҙ артынан ҡыйратылған ҡалалар һәм ауылдар, миллионлаған ҡорбандар һәм яралы яҙмыштар ҡалдырып, көслө ғәрәсәт шикелле шаулап-ажғырып уҙған һуғыш тураһында күпме генә һәм ниндәй генә әҫәр яҙылмаған. Һәм ул тағы ла яҙылыр әле, сөнки был ғәрәсәт алып килгән бәлә-ҡазаларҙың, ҡайғы-хәсрәттәрҙең, ул тыуҙырған ауырлыҡтарҙың шауҡымы бер быуынға ғына түгел, унан һуңғы быуындарға ла етерлек. Балалығы ана шул ғәрәсәтле һуғыш йылдарына тура килгән Тимер ҙә үҙенең ижадында һуғыш темаһына битараф ҡала алмай, әлбиттә. Миҫал итеп уның бик күп шиғырҙарын һанап китергә булыр ине. Шуларҙың тик икеһенә генә – «Ҡабарған саҡ» менән «Ҡояш сумды» тигәндәренә генә туҡталып үтергә иҫәп.

«Ҡабарған саҡ»ты уҡығанда бер генә кеше лә үҙенең балалыҡ осорон хәтерләмәй һәм уны күҙ алдына килтереп баҫтырмай ҡалмаҫ. Апайлы йортта үҫкән малайҙар – айырыуса. Өҫтәүенә, апайың еләк һымаҡ бешкән һәм ҡалын сәс толомо теҙҙәренә тиклем үк төшкән дә булһа – бигерәк тә инде. «Апайыңды миңә бир!» – тип, лирик геройҙы үҫмер сағында ниндәй генә шуҡ егеттәр шаяртмаған да, кемдәр генә уның теңкәһенә теймәгән, иңенән һәм итәгенән тартмаған. Тәү ҡарамаҡҡа әҫәр бына ошондай мәрәкәнән генә торған кеүек. Һәм ул беҙҙә мотлаҡ йылмайыу уята, күңелле лә, ҡыҙыҡ та булып тойола. Ләкин авторҙың әйтер төп һүҙе алдараҡ икән: йылдар аҡҡан, ғүмер үткән һайын, лирик геройҙы шаяртыуҙар ҙа кәмей бара, улай ғына ла түгел, «Апайыңды миңә бир!» – тип, уның еңенән тартыусылар ҙа бөтә, сөнки уларҙың күбеһе яу яланында ятып ҡалған. Һәм шиғыр «Ә апайым бер яңғыҙы – көтә ул егеттәрен, һаман да егеттәрен…» тигән күңелһеҙ ҙә, болоҡһоу ҙа юлдар менән тамамлана. Шулай итеп, ҡәһәрле һуғыштың бер касафатын автор, тормоштоң үҙенән тотоп алынған хәл-ваҡиғаларға таянып, күңелде өтөп алырлыҡ хәбәр һөйләү аша күрһәтеп биреүгә ирешкән.

«Ҡояш сумды»ла тасуирланған күренеш тә күңелдәрҙә ул хәтлем шатлыҡ тойғолары уятмай. Дөрөҫ, шиғырҙа һүрәтләнгән ике геройҙан береһенең донъяһы бөтөн, ел-ямғырҙарҙан азат, ярайһы уҡ етеш, сөнки

ул йәшәгән «йортта ҡоймаҡ бешә», «күктән һәр иртәлә бәхет ҡолап төшә», атаһы «атын еккән икән, аты тора ойоп ҡына». Тик бына күрше йортта эштәр шәптән түгел – һуғыш ялҡыны уға үзенең ҡара ҡоромон яғып киткән. Шуға күрә ул йортта йәшәгән малай ҙа бик бойоҡ – «аҙашҡан бер ҡолонмо ни?». Аталы һәм атлы ихатаға күрше йорттан көн дә тип әйтерлек ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына инеп йөрөгән йәтим малайҙың «Күптән инде яуҙар тынды, ниңә атай ҡайтмай икән?» тигән йөрәк өҙгөс һүҙҙәрендә күпме һағыш һәм юҡһыныу хистәре ятҡанлығын бөтә тәрәнлегендә тойомлау һәм аңлау өсөн әҙгә генә булһа ла шул малай образына инеп ҡарау етәлер тип уйлайым.

«Ҡабарған саҡ» менән «Ҡояш сумды»нан сығып, психологик күҙәтеүҙәр Тимер Йосоповтың гел һуғыш темаһына арналған шиғырҙарына ғына хас икән тигән һығымтаға килергә ярамай, әлбиттә. Лирик геройҙың эске хәлен, ул кисергән уй-хистәрҙе, тойғоларҙы асып биреүгә йүнәлтелгән ынтылышты шағирҙың һуңғы ун-ун биш йыл эсендә ижад иткән байтаҡ әҫәрҙәрендә һиҙемләргә мөмкин. Әйткән һүҙ бушҡа яңғырамаһын өсөн һуғыш касафаттарына һис ниндәй ҙә ҡағылышы булмаған «Асыла ишек» тигән шиғырға туҡталып уҙайыҡ. Ҡарап тороуға был шиғырҙың нигеҙенә беҙҙең заман тормошонан тотоп алынған ябай ғына бер күренеш – дуҫыңдыңмы, туғаныңдыңмы фатирына барғас, звонокка баҫыу һәм ишектең асылырын көтөү мәле һалынған. Күп осраҡта беҙ уға хатта әһәмиәт тә бирмәйбеҙ, биргән хәлдә лә шулай булырға тейештер тиеберәк кенә ҡарарға күнеккәнбеҙ. Ул ғәҙәт кемдер тарафынан әллә ҡасан уҡ уйлап сығарылған да беҙҙең булмышыбыҙға инеп киткән, тиерһең. Ә ысынында иһә, «бесәй күҙендәй быяла күҙлек» алдында, ишекте кем асыр икән, асырҙар микән, юҡ микән, көтәһе микән, китәһе микән тип «ғәйепле һымаҡ» баҫып торған арала кеше күпме түбәнһенеү, ғәрләнеү, кәмһенеү хистәре кисерергә дусар ителә икән дә баһа! Сөнки ишектең теге яғынан быяла күҙлек аша уны кемдер ашыҡмай ғына һөҙөп күҙәтә. Әйтерһең дә, кеше дуҫына йәиһә туғанына түгел, ә хәйер һорарға килгән. Ошондай сетерекле уй-кисерештәр айҡай күңелде «Асыла ишек»тең лирик геройын күҙ алдына килтереп баҫтырғанда. Авторҙың «йортом ишеге шар асыҡ ине» тип бала саҡтарын һағынып иҫкә алыуы менән килешеүҙән башҡа сара ҡалмай.

Ә бына «Йөрөйөм яр буйында» исемле шиғырҙа психологик алым башҡасараҡ юҫыҡта кәүҙәләнгән. «Ҡабарған саҡ» менән

«Ҡояш сумды»лағы шикелле, был әҫәрҙә лә шағирҙың иғтибар үҙәгендә – балалар. Тик, тегеләренән айырмалы булараҡ, былары-ның бала сағы, бәхеткә күрә, һуғыш һөрөмөнә ыҫланмаған. Уларҙың кәйеф-сафалары ла, уйындары ла, автор әйтергә теләгән фекер ҙә бүтәнсәрәк. Шиғырҙың тәүге дүрт юлында сағыштырыуҙар, метафо-ралар ярҙамында тын ғына ағып ятҡан һыу буйы тасуирлана. Арта-бан лирик геройҙың зиһенен яр буйындағы ҡомлоҡта рәхәтләнеп, бөтә донъяһын онотоп, йүгерә-атлай уйнап йөрөгән бер ҡыҙ бала биләп ала. Ул «сүгәләй йә ҡалҡына. Яр буйлап йүгереп китә, ҡошсоҡ кеүек талпына». Бер аҙҙан был баланың ни өсөн шулай оса-ҡалҡа йөрөүенең сәбәбе лә асыҡлана – ул, «аҡ балсыҡты ап-аҡ күстәнәс итеп», ап-аҡ күстәнәс һалынған «күк быяла ярсыҡтарын» «күк тәгәс итеп», ҡунаҡ ҡаршыларға әҙерләнә икән:

«...Алдарында – күстәнәс,
Алдарында – күк тәгәс.
Самауырым яңыртам,
Ҡоҙасаң ҡарсыҡ түгел.
Етеш йүкә балына,
Бауырһаҡ балсыҡ түгел».

Лирик герой ошо күренешкә һоҡланып, иҫе-аҡылы китеп ҡарап торғанда, шәйләмәҫтән өтөк кенә бер малай килеп сыға ла, ололар ҡиәфәтенә инеп һәм улар ауыҙынан ғына ишетелер һүҙҙәрҙе әйтеп, теге ҡыҙ ҡыуана-ҡыуана, оса-елкенә әҙерләп йөрөгән «табынды» күҙ асып йомған арала ҡыйрата ла китә. «Ҡыҙҙың йөҙөн һары һағыш» өтөп алғандай тойола лирик геройға, «һөрт, һылыуым, йәшеңде» тип, уны йыуатырға тырыша, «яр буйынан, ҡойон кеүек» килеп сыҡҡан теге «түмәр һымаҡ остоҡ» малайҙы ваҡытында күреп, уны мәкерле ҡылығынан туҡтатып ҡала алмауына үкенә, ошо өтөк малайҙың күңелдәргә ҡуҙ һалып китеүен дә йәшермәй. Бәләкәй генә бер шиғырҙа әллә күпме психологик төйөн. Шағирҙың үҙ кисерештәре лә, уның кескәй геройҙарының эске донъяһы ла тәрән сағылыш тапҡан бында, һәм улар бөтәһе лә бер епкә килеп тоташҡан. Ә шулай ҙа авторҙың әйтергә теләгән төп уйы, ирҙәр булып ҡыланырға маташҡан теге малай образы аша «атанан күргән – уҡ юнған» тигән халыҡ мәҡәленең бик тормошсан һәм үтә йәшәүсән икәнлеген күрһәтеүгә ҡайтып ҡалалыр. Был инде үҙе бер психологик күренеш.

Тимер Йосоповтың лирик геройҙары, нигеҙҙә теш-тырнаҡтары менән ер-әсәгә йәбешеп ятҡан, шунда тереклек итеп, йәшәү йәмен табырға тырышҡан кешеләр булһа ла, ваҡыты-ваҡыты менән улар хыялдар донъяһында йөҙөүҙән дә баш тартмай. Ҡайһы бер шиғырҙарҙа романтик буяуҙарҙың мул ғына ҡулланылыуы шулай уйларға хоҡуҡ бирә. Ундай саҡта лирик геройҙың ынтылыштарын, холоҡ-фиғелен, йөрәк тибешен тасуирлау өсөн автор сағыу метафоралар, хәтерҙә ҡалырҙай эпитеттар һәм сағыштырыуҙар таба. Әйтәйек, бер осраҡта был герой «нур усмаһын тоттом мин ҡулым менән» тип нарыҡлаһа, икенсе осраҡта ул «елдәрҙе кисеп, дауыл ялдарын ҡул менән ишеп» туғандарына ашҡына. Т. Йосоповтың лирик геройы үҙен ваҡыт күсәрендә зыр әйләнгән кеше итеп тә тойорға мөмкин: баш осондағы йондоҙло күктең теткеләнгән иләккә оҡшап китеүе лә ихтимал уның өсөн: «ҡояш үрелеп менгәндә ғаләмдең ҡыйығына, көлтә-көлтә нурҙарҙы ҡыҫҡанмын ҡуйыныма», «айҙар, йылдарҙы кисәм дә дауыл ялдарын ишәм» кеүегерәк метафорик сағыштырыуҙар ҙа килешеп тора уға: «тумалаҡ ай» «йондоҙ-һырға» тағып алған һымаҡ тойола икән, йәиһә «селтәрле болоттар бала-сабый саҡтың йылымы»н хәтерләтеп ҡуя икән – быларына ла ышанырға мөмкин. Ғөмүмән, Т. Йосопов шиғырҙарында ошоға тартым поэтик алымдар йыш ҡына (бәлки, кәрәгенән дә артыҡ йыштыр) осрай һәм уларҙың төбөнә төшөп етер өсөн аҡыл көсөн сарыф итеү менән бер ҡатарҙан, уҡыусының күңел ҡылдары ла киренкерәк тибрәлергә тейештер.

Метафорик стиль Т. Йосоповтың күләмле әҫәрҙәренә лә ят күренеш түгел. Миҫал итеп уның туҡһанынсы йылдар башында яҙылған «Ҡоштар тубы» тигән поэмаһын күрһәтергә мөмкин. Композицияһы яғынан бер аҙ тарҡауыраҡ тойолһа ла (саманан тыш оҙон, күп һүҙле булыуы арҡаһында уҡыусыны еләтеп ебәреүе лә ихтимал), идея-художество концепцияһы йәһәтенән әҫәр шаҡтай үҙенсәлекле генә. Ул үҙ эсенә һуғыш йылдарынан алып бөгөнгө көнгә тиклемге хәл-ваҡиғаларҙы һыйҙырған. Ләкин автор был хәл-ваҡиғалар хаҡында бәйнә-бәйнә һөйләүҙе бурыс итеп ҡуймаған. Поэма биттәрендә бер кеше ғүмеренә тиң ваҡыт арауығында булып үткән донъя хәлдәренең иң зәһәрҙәре, күңелдәрҙә юйылмаҫ эҙ ҡалдырғандары ғына сағылыш тапҡан. Сюжетты ойоштороусы лирик герой образының конкрет ерлектән үҫеп сыҡҡанлығы һәм автобиографик һыҙаттар менән бергә үреп бирелгәнлеге күҙгә бәрелеп тора. Ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршы-

лыҡлы быуатыбыҙҙың аяныслы күренештәренә ҡараш та ошо герой күҙлеге аша ташлана.

Символиканы поэманың атамаһында уҡ шәйләргә мөмкин. Үҙенең тура мәғәнәһендә, көҙҙәрен йылы яҡтарға осоп китеп, яҙҙар еткәс яңынан тыуған илдәренә әйләнеп ҡайтыусы ҡоштар тубы лирик геройҙы үҫмер бала саҡтарына, йәшлек йылдарына алып ҡайта, уйҙар донъяһында йөҙҙөрә. Тәбиғәт ҡанундарына буйһоноп, был күренеш йыл һайын ҡабатлана ла, уның хистәргә бай лирик геройҙы әҫәрләндерерлек сихри көсө лә бар икән шул. Алыҫ араларҙы яҡын итеп, ҡоштар йәнә беҙҙең яҡтарға ҡайтып төшкәндә ергә йәм һәм йән, күңелдәргә йәшәү дәрте өҫтәлгәндәй була. («Яҙға баҫтыҡ. Түшәк һымаҡ шундай йылы еребеҙ. Ҡышты ярып килеп сыҡтыҡ, ярай әле теребеҙ».) Ә бына йәйҙәр уҙып, тағы көҙҙәр еткәс, ҡоштар тубы, һалҡын ҡыш ишек ҡаҡҡанын хәбәр иткәндәй, озон сәфәргә сыға һәм «күктәге моң сылбыры», «хушлашыу сыңы» булып, ергә ҡойола. («Ҡара болот төҫлө күкте ҡаплай – киң ғаләмдә ҡарға туйымы? Елбер-елбер килеп елберләгән әллә инде ҡайғы тыуымы?») Ғүмеренең көҙҙәренә етеп килеүсе лирик герой өсөн «һары ҡыр өҫтөнән» осҡан ҡоштар тубы «һағыштың күсе булып» тойола икән, һис тә ғәжәп түгел.

Был, ҡабатлап әйтеүем, поэма атамаһының тура мәғәнәһе. Ләкин әҫәрҙе аҙағына ҡәҙәр иғтибар менән уҡып сыҡһаң, уның исеменә кинәйәле фекер төрөп бирелгәнлеген дә һиҙмәү мөмкин түгел: ваҡыты-ваҡыты менән кеше яҙмышы ла ҡоштарҙыҡына оҡшап ҡуя икән дә баһа. Ҡоштар йылы оя эҙләгән һымаҡ, бәндә лә төрлө сәбәптәр арҡаһында йыш ҡына тыуған-үҫкән яҡтарын ташлап, сит тарафтарға сығып китергә дусар ителә. Лирик геройҙың үҙ яҙмышы ла ошо тәңгәлдә:

Юл башланым,
Саҡ осмайса ҡалдым
Әҙәп кенә тигән эйәрҙән.
Минең арттан ҡуҙғалғандар аҙмы,
Ат аҙғыны тайға эйәргән.

Автор фекеренсә, сит тарафтарға китеп олағыуҙың сәбәптәре күп. Кемдәрҙер «һуғыш ҡырҙарында башын һалды». Ҡайһылары иһә, «оброк түләп, барщинала эшләп» йөрөүҙән тамам туйып, «илкәйҙәрен

ташлап ситкә китте… юҡлыҡтан». Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле лә «сит илдәрҙең сиген һаҡлап, ҡолай беҙҙең һалдаттар». Быға тәбиғәттең рәхимһеҙ ҡанундары килеп ялғана: «Ҡош тубының сите дауылдарҙан» кителеп ҡалған шикелле, әҙәм балаһы ла «ғүмер сылбырынан упҡындарға» ҡойолоп ҡына тора. Лирик геройҙың «Ғүмер ҡаяһынан ҡолайбыҙ беҙ, кемдәр тора икән сиратта?» тигән риторик һорауы ла уйға һалырлыҡ. Йыйып ҡына әйткәндә, Т. Йосоповтың «Ҡоштар тубы» поэмаһында ишара алымына мул урын бирелгән. Үткәндәрҙең дә, бөгөнгөбөҙҙөң дә йән әрнеткес һорауҙарына яуапты шағир шул алым ярҙамында эҙләй. Яуап әлегә табылмаһа ла, әҫәрҙең аҙағы оптимистик рухта яңғырай:

Яңы көндәр күҙен аса,
Алыҫ әле эңерҙәр.
Ҡоштар йырын яңы башлай,
Алда әле ғүмерҙәр…

Поэманың бөтә үҙенсәлеге уның метафорик стиленә генә ҡайтып ҡалмай, әлбиттә. Кинәйә, ишара алымдары тейешле тель-стиль саралары менән дә ҡеүәтләнә. Ҡатмарлы, хатта сетерекле уй-фекерҙәрен түкмәй-сәсмәй уҡыусыға илтеп еткереү өсөн автор ябай халыҡ теленең бай мөмкинлектәренән киң файҙалана. Әҫәр тормоштоң күберәк аяуһыҙ яҡтарын (бер урында лирик герой: «Үткәндәрем минең ҡанатлы» тип оран һалһа ла) фашлауға бағышланғанға күрәлер инде, уның теле лә төртмә. Йәнә шуныһы ҡыҙыҡ: автор менән лирик герой араһында айырма ҙур булмағас, уларҙың ҡайһыһы төртмә теллерәк икәнен дә айырып ҡына әйтеүе ҡыйын. Ә бына лирик геройҙың хәтирәләрендә үҫеп сыҡҡан персонаждарҙың телен автор теле менән бутауы мөмкин түгел. (Бының өсөн лирик геройҙың ҡустыһы Миңдехан башҡарған таҡмаҡты ғына хәтергә төшөрөү ҙә етә.) Ябай ҡатмарлыҡтың һәм ҡатмарлы ябайлыҡтың асылына төшөнөргә ярҙам итерҙәй ошондай йыр-таҡмаҡтар, халыҡ әйтемдәре, хикмәтле фекерҙе аңлатҡан ҡанатлы фразалар («Ҡайҙа ла бер ҡояш, бер ҡайтырмын…», «Ел белмәй ул йоҡо-серемде», «Ай күрҙем аман менән, ауыҙым тулы иман менән…», «Ҡоштарҙа – ҡул, беҙҙә ҡанат ниңә булмаған икән?», «Айҡала ла донъя, әй, сайҡала, минең өсөн донъя тубыҡтан», «Күкрәгемде ярып сыҡҡан йырым кейек ҡоштай ҡанат ҡағынды», «Көҙгө ҡояш һис йылытмай, – йылт-йылт килгән

алтын алҡа», «Гел ҡағылдыҡ, гел һуғылдыҡ – ғәйепһеҙҙән ғәйеплебеҙ» һ. б.) әҫәрҙе йәнләндерә, уның туҡымаһына бәҫ өҫтәй. Шуға күрә улар сюжет ағышына ла еңел генә, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ инеп китәләр.

«Ҡояш тубы»ның лирик геройы, тыуған ауылын ҡалдырып, ҡала кешеһе булып киткәс, иғтибарын ғибрәтле бер күренешкә йүнәлтә:

Кайҙа барма – урам тулы башҡорт,
Тик урыҫса ғына һупалай.
Мәхмүҙәһе бында Маша булған,
Ғәли Гришаға әйләнгән.
Кисә Вәли менән Наташаның
Сәскәйҙәре сәскә бәйләнгән.
Киске уйын,
Сит музыка шаша,
Йәшлек бейегәндә уртала…
. . . . . .
Әй замана,
Ниңә йөрөтәһең
Сул бүреһе кеүек олотоп.
Сит көйҙәрҙе генә һыҙҙырабыҙ,
«Күк Ирәндек» йырын онотоп.

Ошо эпизод ирекһеҙҙән Тимер Йосоповтың «Улымды эҙләп барам» тигән яңы поэмаһына ла туҡталырға мәжбүр итте. Сөнки был поэмала, минеңсә, «Ҡоштар тубы»нда күтәрелгән мәсьәләләрҙең ҡайһы берҙәренә тарих юғарылығынан ҡараш ташланған. Үрҙә килтерелгән эпизодтың да тамырҙарын һәм сәбәптәрен шағир тарих биттәренән, тарих төпкөлөнән эҙләй һымаҡ. Әҫәрҙең күренекле ғалим, әҙәбиәт тарихы белгесе, тарихи романдар авторы Ғ. Хөсәйеновҡа арналыуы ла юҡтан ғына түгелдер, моғайын. Шулай итеп, нигеҙҙәрендә төрлө быуаттарға ҡараған тормош материалы ятһа ла, был ике поэма идея-художество концепциялары буйынса бер-береһенә бик яҡын тора, күҙгә күренмәҫ ептәр, эске бер аһаң менән тоташҡан, тимәксемен.

«Улымды эҙләп барам» – ысынлап та өр-яңыларҙан: ул туҡһанынсы йылдарҙың уртаһында ижад ителгән. Был әҫәрҙе шағирҙың ағымдағы ижади уңышы тип шикләнмәйсә әйтергә булалыр. Башҡорт

әҙәбиәтендә тарихи темаға яҙылған тәүге поэма түгел микән әле ул? Әгәр «Ҡоштар тубы»нда автор тарихҡа еңелсә ишара яһау менән генә сикләнһә («Кантондар илеме – бар Ҡолой, Әпкәләй, үлемдән ҡасабыҙ, ҡасабыҙ бәпкәләй»), «Улымды эҙләп барам»да ул башкөллө тарих упҡынына сумған һәм уның ҡанһыҙлыҡтарын, әшәкелектәрен, аяуһыҙлыҡтарын йәнле картиналар аша бөтә киҫкенлегендә күҙ алдына килтереп баҫтырған.

Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, егерменсе быуатта ил өҫтөнә, бөтә халыҡ өҫтөнә төшкән ауырлыҡтарҙың, ҡайғы-хәсрәттәрҙең «Ҡоштар тубы»нда һүрәтләнгәндәре, «Улымды эҙләп барам»да тасуирланған драматик ваҡиғалар менән сағыштырғанда, ер менән күк араһы икәнлеге иҫбатлауҙы талап итмәй торғандыр. Әгәр «Ҡоштар тубы»нда Мәхмүҙәләр, Ғәлиҙәр үҙ теләктәре менән Машаға, Гришаға әйләнһәләр, «Улымды эҙләп барам»да Юламан ирекһеҙҙән Иван Ильич булып киткән. Беренсе осраҡта беҙ күп һанлы халыҡтың әҙ һанлы халыҡҡа яһаған йоғонтоһон күрһәк (ул йоғонто яҡшымы, яманмы – бынығы инде үҙенә башҡа мәсьәлә), икенсе осраҡта иһә колониаль система заманында шул уҡ халыҡтар араһында хөкөм һөргән социаль-иҡтисади һәм милли мөнәсәбәттәрҙең тиҫкәре бер өлгөһөнә шаһитбыҙ.

«Ҡоштар тубы»н һәм «Улымды эҙләп барам»ды бер-береһенә яҡынайта ла, шул уҡ ваҡытта бер-береһенән һиҙелерлек алыҫлаштыра ла торған тағы бер сағыштырыу. Ике әҫәрҙә лә яңғыраштары менән төрлө, лексик мәғәнәләре яғынан бер-береһенә бик яҡын торған ике һүҙ бар. «Ҡоштар тубы»нда ул – «ситтәр», «Улымды эҙләп барам»да – «килмешәктәр». Ләкин йөкмәткеләре йәһәтенән был һүҙҙәр әлеге осраҡта бер-береһенән бик нык айырылалар, минеңсә. Әгәр «Улымды эҙләп барам»дағы «килмешәктәр» төп халыҡтың ерен тартып алһалар, тәбиғи байлыҡтарын талаһалар, ауылдарын утҡа тотоп көлгә осорһалар, «Ҡоштар тубы»ндағы «ситтәр»ҙең маҡсаты һәм тәғәйенләнеше бөтөнләй башҡаса булғанлығы һәр кемгә билдәле һәм был да иҫбат итеүҙе һорамайҙыр тип уйлайым.

Т. Йосоповтың яңы поэмаһы күләме яғынан ҙур күренһә лә, уның сюжеты һәм композицияһы ыҡсым. Әҫәр «Ҡарамырҙаның һөйләгәне» һәм «Ҡарамырҙаның алыҫ заты һөйләй» тигән ике киҫәктән ғибәрәт; киҫәктәр, үҙ сиратында, эреле-ваҡлы бүлектәрҙән тора. Беренсе киҫәктә сюжет дилбегәһе төп геройға тотторолған, икенсеһендә автор уны үҙ ҡулына алған. Шуғалалыр, бәлки, һәр

киҫәк күпмелер кимәлдә мөстәҡиллеккә эйә һымаҡ, хатта һәр киҫәктең үҙ композицияһы бар шикелле. Тик бына улар араһында әҙ генә булһа ла тел-стиль айырмалыҡтары күҙгә ташланырға тейеш түгел ине микән тигәнерәк һорау тыуып ҡуя. Әммә, ни генә әйтһәң дә, идея-тематик йөкмәткеһе, ваҡиғалар берлеге, образдар системаһы, конфликттар асылы, характерҙар бәрелеше буйынса ике киҫәк – барыбер бер бөтөн.

Үрҙә әйткәнебеҙсә, «Улымды эҙләп барам» поэмаһында батша хөкүмәтенең бынан бер нисә быуат элек башҡорт илендә вәхшиҙәрсә алып барған сәйәсәте кәүҙәләнгән. Ул сәйәсәттең асылын «Ни теләйем, шуны ҡылам» тигән һүҙҙәр менән аңлатырға мөмкин. Билдәле, бындай сәйәсәт ерле халыҡтың ризаһыҙлығын тыуҙыра, һәм ул үҙенең бойондороҡһоҙлоғо өсөн яуға күтәрелә, яйы сыҡҡан һайын батша йәлләттәренән үсен алып ҡына тора. Поэманың байтаҡ юлдары тиҫтәләгән йылдар буйы дауам иткән ошо яуҙарҙы, береһенән-береһе дәһшәтлерәк, ҡаты һәм ҡанлы алыштарҙы һынландырыуға арналған да инде.

Килмешәктәргә ҡаршы яуға сыҡҡан аҫыл ирҙәрҙең ҡаһарманлығы хатта ниндәйҙер бер сәм менән, сағыу буяуҙар ярҙамында тасуирланған. Буяуҙарҙың сағылышына иһә автор сағыштырыу, метафора, гипербола кеүек һүрәтләү сараларын («Ереңә ҡайғылар ҡағылған, тау һыҡтай, ырғаҡта – ҡабырғаң»; «Ҡороҡ итеп ҡулдарыма, ураным мин йәшендәрен»; «Бейергә төшә ҡайындар, ел ҡағыла теҙҙәренә»; «Елдәр сәсен тарап бара, оло юлдан карат бара»; «Ялан тулып яттар килә, аяҡланған урманмы ни?..»; «Ялҡын теле күктең иңен бысҡан кеүек, ә караттар сырылдайҙар сыҫҡан кеүек»; «Ай нурында аҡ ҡайындар итә серем. Төштәрендә тертләп ҡуя тыуған ерем»; «…Оло ялан… Әй буйында башын сайҡай яңғыҙ тирәк»; «Әжәл тигән ялтыр ураҡ ғүмерҙәрҙе ура ғына»; «Аттар саба, ҡояш бата, ергә ҡанлы нурын сәсеп») мул ҡулланыу һөҙөмтәһендә ирешкән. Ә шулай ҙа «Улымды эҙләп барам»дың күҙгә бәрелеп торған иң сағыу һыҙаты – төп геройҙарҙың шәхси драмаһын көсөргәнешле, хатта тетрәткес хәл-ваҡиғалар аша бөтә тәрәнлегендә асып биреүҙәлер. Поэманың һуңғы биттәрендә был драма трагедия юғарылығына күтәрелә тиһәк тә, яңылыш булмаҫ.

«Улымды эҙләп барам»да Т. Йосоповтың кеше психологияһына иғтибарлы булыуы, теге йәки был геройҙың эске донъяһына тәрәнерәк үтеп инергә тырышыуы тағы бер тапҡыр кәүҙәләнеш тапҡан.

Ҡарамырҙа атлы ил уҙаманы, мәҫәлән, беҙҙең алға яу сабыусы батыр ҡиәфәтендә генә түгел, бәлки, һыуһыны ҡайтҡансы яратырға ла өлгөрмәгән һөйөклө бисәһен, яуға киткәндә дүрте генә тулып ҡалған сабыйын юғалтыу ҡайғыһын ифрат ауыр кисереүсе, был хәсрәтте ғүмер буйы йөрәге түрендә йөрөтөүсе ир һәм ата булып та килеп баҫа. Сюжет пружинаһы әҫәрҙең тәүге бүлегендә үк йыйып ҡуйылһа ла, ул икенсе киҫәктең башында ғына атылып китә: икеһе ике яҡта һуғышып йөрөүсе ата менән ул байтаҡ йылдарҙан һуң яу ҡырында осраша. Нимәһе менәндер М. Шолоховтың «Миң» тигән киң билдәле хикәйәһен хәтерләтеп ҡуйған был эпизод психологик яҡтан бик көслө яңғырай: «Ниңә аттым уҡҡайымды… Үҙ һөйәгем… Алтын яурын – таныным мин улҡайымды…».

Артабанғы бүлектә психологизм уғата ла көсәйә. Унда, күпмелер ваҡыт үткәс, Ҡарамырҙаның ҡабаттан улы менән осрашыу эпизоды һүрәтләнгән. Ҡара ҡайғынан һаман булһа арынып бөтә алмаған ата, Йыһан һымаҡ иркен яланды йөрәк тетрәткес моңға күмеп, ҡурай тартып тора. Һәм шул мәлде: «Бер һыбайлы килә ята Ҡарамырҙа тарафына… Ҡаҙаҡланғанмы эйәрҙә, дәрәжәһен белеп килә. Белеп килә, һөлөк кеүек, арғымағы бейеп килә. Ат өҫтөндә елеп килә, һелкетмәй генә бауырын. Тирә-йүнде һөҙөп ҡарай, яҡыная… Алтын яурын». Автор, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә, геройҙарының үткәндәге осрашыуына ла, улының атаһы атҡан уҡтан йәрәхәтләнеүенә лә ишара яһап ҡуя: «Һикереп төштө атынан ул, атлай үҙе һаҡ-һаҡ ҡына». Көсөргәнешлек артҡандан-арта: «Туҡтап ҡалды, ҡурайсыға етмәйенсә саҡ-саҡ ҡына. – Ни хәл, ҡартлас? – Күҙе менән ҡурайсыны үтә тиште». Артабанғы юлдарҙа психологик көсөргәнешлек һуңғы сигенә етә: «Ҡарамырҙа баш ҡалҡытты, уға баҡты… ҡойолоп төштө… – Алтын яурын… Юламаным… Таныйым үҙ һөйәгемде, таптыңмы ни төйәгеңде?..» Ниһайәт, яҙмыштар драмаһы үҙенең иң юғары нөктәһенә күтәрелә: Ул танымай үҙ атаһын, ни әйтерһең башҡаларға. Яҙығы юҡ Юламандың, ҡәһәр төшһөн батшаларға…» Шулай итеп, геройҙарының психологик хәлен, күңел торошон, уларҙың тәрән һәм ҡатмарлы кисерештәрен шағир ыҡсым ғына юлдар ярҙамында ла иҫ киткес нескәлек менән, ышандырырлыҡ итеп һынландырған.

Ләкин поэманың төп конфликты былай ғына сиселмәй әле. Ҡурай тартҡан ҡарт менән көтөлмәгән осрашыу «Алтын яурын»ға (был һүҙбәйләнеш тора-бара яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп китә) ғәжәп

ҙур тәьҫир яһай. Ул уйҙар донъяһына сума. «Әллә ниңә был яҡтарҙы төш аралаш күргән һымаҡ…» тойола уға. Һәм хәтер төпкөлөндә һаҡланып ҡалған өҙөк-өҙөк күренештәр бер-бер артлы өҫкә ҡалҡып сыға башлай: «Уйҙар, уйҙар… Алыҫ китә, әйтерһең дә, яу юлдары. Хәтер ҡуҙын терелтәме уҙғандарҙың дауылдары…» Хәтирәләр ағышы геройҙың аңында фекерҙәр алышына килтерә: «Үткәндәре уҙа төҫлө; тоноҡ көнмө, ҡара төнмө? Ялҡынмы, әллә төтөнмө, яман төшмө, хәтәр өнмө?» Күңел төпкөлөндә ҡайнашҡан ошо көсөргәнешле психологик алыш оҙаҡламай тышҡа бәреп сыға: «Алтын яурын» үҙ асылына ҡайта һәм уны Иван Ильичҡа әйләндереп, ошо йәшенә тиклем аңын томалап тороусынан үсен ала. Поэманың тәүге юлдарында уҡ төйнәлгән төйөн дә үҙенең сиселешен ошонда таба.

Ентекләберәк өйрәнһәң, Т. Йосопов ижадының тағы бер үҙенсәлеге күҙгә салына: уның шиғырҙары менән поэмалары араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ, эске бер бәйләнеш бар һымаҡ. Был уртаҡлыҡ әҙәби әҫәрҙең йөҙөн билдәләүсе, уның уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттырыусы тел-стиль сараларына ғына ҡайтып ҡалмай – ул темалар һәм идеялар яҡынлығында ла ярайһы ғына һиҙелә. Мин, хатта, Т. Йосоповтың поэмалары уның шиғырҙарынан яралған, шуларҙан үҫеп сыҡҡан тип әйтергә лә баҙнат итер инем. Сөнки «Ҡоштар тубы»нда ла, «Улымды эҙләп барам»да ла йыш ҡына теге йәки был шиғырҙа яңғыраған фекер менән ҡайтанан осрашырға тура килгеләй. Әлбиттә, ҡайһы саҡта был күренеш, шағир үҙен-үҙе ҡабатлау юлына баҫмай микән тигән шөбһә лә һалып ҡуя күңелгә. Ләкин әҙәбиәт практикаһында бындай хәлдең дә булыуы ихтималдыр, күрәһең.

Шағирҙы берҙәй тулҡынландырған да, берҙәй борсоған да мәсьәләләрҙән күҙгә нығыраҡ бәрелеп торғаны – кеше хаҡында, уның кешелек сифаттары хаҡында уйланыу тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Шиғырҙар менән поэмалар араһындағы тематик һәм идея-эстетик яҡынлыҡты тәьмин итеүсе сәбәптәрҙең дә береһе ошо түгел микән әле? Теләһә ниндәй шарттарҙа ла – ауырында ла, еңелендә лә – намыҫыңа тап төшөрмәй, абруйыңды һаҡлап, ысын ир булып ҡалыу – шағирҙың девизы. Элегерәк яҙылған бер шиғырында ул «Арҡаланыр ерҙәр эҙләмәнем, арҡа терәр ирҙәр эҙләнем» тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Йәнә: «Дуҫтар тайҙы яндан, көтмәгәндә донъя ҡуйғас һиңә ҡабырғаһын» тип бошоноуы ла бик аңлашыла. Әгәр бер әҫәрендә шағир: «Һәр заманға бар шул ярағандар – ярыҡ барабандар»

тип, борсолоу ҡатыш ғәрләнеү тойғоһон белдерһә, икенсеһендә, кешелек сифаттарына тоғро ҡалған ауылдашы менән ғорурланып: «Күҙ атманың осоҙ дандың балҡып торған уҡаһына» ти. «Тик бер аҙға түрә яһа, белгең килһә кешене», «Берәү туңып һикерә, берәү туйып һикерә» тигән юлдарҙа ла ҙур мәғәнә ята.

Ысын кешелек, ысын ирлек мотивтары Т. Йосоповтың айырыуса һуңғы йылдарҙа ижад иткән һәм, ул үҙе әйткәнсә, «берәү алтынға күмелгән, берәү тыума яланғас» ҡалған ҡаршылыҡлы бер замандың йәмһеҙ һәм ғәмһеҙ күренештәрен яҡтыртҡан әҫәрҙәрендә көслө яңғырай. Әлбиттә, ирмен тигән ир булыу – шағир өсөн ҡоро девиз ғына түгел. Ирлек, кешелек сифаттары хаҡында уйланғанда, ул шаҡтай юғарыраҡ критерийҙарҙан сығып эш итә. Әгәр шағир: «Донъялары илке-һалҡы, таянырға ир кәрәк», «Ил хафаһы ҡан һауҙырҙы ирҙәр йөрәгенә», «Кемдәр ҡолаҡ һала икән илемдең ҡайғыһына?», «Ҡайҙа ғына баш төртмәйек, ил-йорт тиеп йөрәк әрней» тип оран һала икән, тимәк, заман шуны талап итә. Тик бына һуңғы оранды Ҡарамырҙа һалған. Ә ул бынан ике быуаттан да ашыу элегерәк йәшәгән. Тимәк, ил-йорт хафаһы бөгөн дә көнүҙәк мәсьәлә булып ҡала килә. Шуға ла шағирҙың ныҡлы таянысты һәм ышаныслы терәкте кеүек күңелле, саф уйлы, заман ығы-зығыларына бирешмәүсән, алдаҡтарға асыҡ күҙ һәм айыҡ аҡыл менән ҡараусы ил улдарында эҙләй икән, һис тә ғәжәп түгел. Уның ошо изге юлында арҡа терәр ирҙәрҙең күберәк осрауын теләйһе генә ҡала. Ил ҡайғыһын йөрәгенә һалып, иңендә йөрөткән шағирға башҡаса мөмкин түгел.

1998

ИМАНЫНА ҠАЛДЫ ТОҒРО

Шәриф Бикҡол шиғриәтенең ҡайһы бер һыҙаттарын төҫмөрләүҙе күҙ уңында тотҡан был мәҡәлә шағирға етмеш йәш тулыу айҡанлы яҙылғайны. Мәҡәлә матбуғатта баҫылып сыҡҡас, көндәрҙән бер көндө, көтмәгәндә-нитмәгәндә, минең исемгә кескәй генә бер бандероль килеп төштө. Бандеролде асып ебәрһәм, ни күҙем менән күрәйем – «Баш эйәм алдарыңда» тигән китап. Уның титул битендә – изге теләктәр менән ихлас күңелдән яҙылған автограф. Бүләк итеп һалынған китап эсендә ҡош телендәй генә хат та бар. Унда Шәриф ағай Бикҡол шиғриәтенә байҡау яһағаным өсөн үҙенең рәхмәтен белдергән һәм ижадымда уңыштар теләгән. «Әле йәшәйбеҙ икән» тигән романы хаҡында элегерәк баҫылып сыҡҡан мәҡәләләремде лә онотмаған. (Ул мәҡәләләр үҙ ваҡытында «Советская Башкирия» гәзите менән Мәскәүҙә сыға торған «Литературное обозрение» журналында донъя күргәйне). Хәҙерге ҡатмарлы заманда юбилей мәшәҡәттәре ярайһы ғына ҡурҡытып торған булһа ла, уның иҫәнаман үтеп китеүе менән шөкөр икәнлеген дә йәшермәгәйне хаттың авторы. Өҫтөнән тау төшөүгә тиңләгәйне хатта юбилейға бәйле ығы-зығыларҙың артта ҡалыуын. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, танылған шағирҙың был хаты – минең өсөн тәүгеһе лә, һуңғыһы ла булды. Ҡәҙерле бүләкте һәм шағирҙың йөрәк йылыһы һалып яҙылған хатты алып ҡыуаныуыма йылдан ашыу ваҡыт үтеүгә, ул кинәт кенә, көтмәгәндә-нитмәгәндә, гүр эйәһенә әйләнеп ҡуйҙы. Шуға күрә был юлы мәҡәләнең исемен дә бер ни тиклем үҙгәртергә тура килде – хәҙер инде Шәриф Бикҡолдоң үҙе тураһында ла, ижады хаҡында ла үткән заманда һөйләргә ҡалды.

Мәҡәләнең тәүге вариантын яҙырға шағирҙың «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан «Минең донъям» тигән өр-яңы шиғырҙар шәлкеме илһамландырғайны мине. Һигеҙ шиғыр менән ун өс парсанан тора был шәлкем. (Һуңынан уларҙың ҡайһы берҙәре «Баш эйәм алдарыңда» тигән йыйынтыҡҡа ла инеп китте.) «Сәждә ҡылам» тип аталған шиғыр асып ебәрә «Минең донъям»ды. Теш араһынан һарҡылып ҡына сыҡҡан, магнит валсыҡтары һымаҡ бер-береһенә тартылып, сат йәбешеп барған мәғәнәле һүҙҙәр… Бер йәки ике-өс кенә һүҙҙән торһа ла, тамамланған уйҙы аңлатыусы ыҡсым шиғри

юлдар… Шул йор һүҙҙәргә, ыҡсым юлдарға төрөлгән тос фекерҙәр… Традицион алымдарға буйһоноп бармаһа ла, автор әйтергә теләгән фекерҙе уҡыусы зиһененә түкмәй-сәсмәй илтеп еткерерҙәй үҙенсәлекле строфалар… Лирик геройҙың асылына төшөнөргә, уның ҡиәфәтен күҙ алдына баҫтырырға бына ошо саралар ярҙам итә был шиғырҙа. Ә шиғырҙың лирик геройы хәтерҙә ҡалырлыҡ шәхес, күпте күргән, ут-һыуҙы кисеп, донъяның әсеһен дә, сөсөһөн дә берҙәй татыған кеше. Дуҫ-ишһеҙ ҙә йәшәмәгән ул, ләкин яуыздар ҙа, ҡуштандар ҙа етерлек осраған. Сәстәрен күрәләтә кире яҡҡа тараусылар ҙа, һәр бер ихлас теләгенә шөбһә менән ҡараусылар ҙа булған. Табынған фәрештәһен тапай-тапай хурлауҙы ла, әшәке бер яуыз йәнде күккә сөйөп ҙурлауҙы ла күргә тура килгән уға үҙ ғүмерендә. Әммә ҡанһыраған сей яраһына тоҙло ыштыр ураған ла, ул бөгөлмәгән, йәнен – иҫән, рухын – имен һаҡлаған, иманына тоғро ҡалған. Бына ошондай көслө рухлы кеше образы килеп баҫты минең күҙ алдыма «Сәждә ҡылам» шиғырын уҡығандан һуң.

Шәлкемгә ингән «Үтеп киттең…», «Бер үк гөлдөң ике һабағы беҙ…», «Мин йөрәгем менән ишетәм…», «Аҡ болот» шиғырҙары башҡасараҡ яңғырай. Уларҙы берләштереүсе уртаҡ сифат – мөхәббәт темаһы. Кешенең милләтенә лә, расаһына ла, йәшенә лә ҡарамайынса, үҙ аллы хөкөм һөрөүсе мәңгелек был тойғоно шағир бик оҫта тасуирлаған. Уның лирик геройы, әйтәйек, берәүҙең күҙ алмаһында «бына-бына дөрләп китмәле» һөйөү сатҡыларын күреп, ымһынып та, алданып та ҡуйырға мөмкин. Ҡайнар хистәр алдында башы әйләнеп китеүе лә ихтимал. Һөйгәненең йөҙө уға алһыу таңдай алсаҡ булып күренә һәм, әгәр ул уның янынан нур балҡытып үтһә, йөрәгендә ҡапҡан ялҡындан «донъя йөҙө дөрләп китер һымаҡ» тойола. Мөхәббәт тойғоһон шиғырға һалғанда автор төрлө саралар ҡуллана һәм шуның һөҙөмтәһендә хәтерҙә ҡалырлыҡ образ тыуҙырыуға өлгәшә. «Аҡ болот» шиғырында, мәҫәлән, ул, тәбиғәттә йыш осрай торған күренеш менән ерҙәге реаль тормош араһындағы бәйләнешкә таянып, ғашиҡтарҙы көтөлмәгән һәләкәттән һаҡланырға саҡыра. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, был шиғырҙарында Ш. Бикҡол мөхәббәт тойғоһон һоҡланғыс та, тылсымлы ла, ҡәҙерле лә, ҡөҙрәтле лә бер көс итеп һүрәтләй, уның йөкмәткеһен формаһына тура килтереү өсөн сағыу буяуҙар таба.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡ һөйөү һәм һөйөлөүҙән генә тормай шул. Уның үҙ закондары, хатта уҫаллыҡтары

ла бар. Шуға ла мөхәббәт лирикаһы менән бергә фәлсәфәүи юҫыҡта яҙылған шиғырҙарҙың йәнәш тороуы һис тә ғәжәп түгел. «Киҫәтеү» тигән кескәй генә шиғырҙа, мәҫәлән, әҙәм балаһының яҡты донъяла йәшәү мәғәнәһе ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле лә итеп асып бирелгән. «Изге ерем» шиғыры ла шуға тартым. Парсаларға килгәндә иһә, улары тотошо менән афоризмдар тиергә мөмкин. «Башым сатнай» шиғыры ла авторҙың уй-фекерҙәрен, эске кисерештәрен аңларға ярҙам итерҙәй әҫәр. Күпмелер кимәлдә ул «Сәждә ҡылам»дағы иманға тоғро ҡалыу мотивының дауамы ла булып яңғырай.

«Минең донъям» шәлкеме Шәриф Бикҡол ижадының дөйөм йүнәлешен һәм күҙгә бик үк бәрелеп бармаған ҡайһы бер һыҙаттарын кәүҙәләндереүсе үҙенсәлекле бер күренеш тип әйтһәк, хата булмаҫтыр, моғайын. Сөнки шағирҙың быға тиклемге ҡайһы ғына йыйынтығын алып ҡараһаң да, унда әле һүҙ барған шиғырҙарҙағы алымдарҙы һиҙемләргә, уларҙың идея-тематик нигеҙендә ниндәйҙер яҡынлыҡты, берҙәмлекте, уртаҡлыҡты тойорға мөмкин. Миҫал өсөн иң тәүгеләрҙән иҫәпләнгән «Замандашыма» тигән китапҡа күҙ һалайыҡ. Ул 1951 йылда сыҡҡан. (Йәйә эсендә генә булһа ла, шуны әйтке килә: һуғыштан һуңғы ауыр, мәшәҡәтле осорҙа баҫылыуына ҡарамаҫтан, ул ниндәй матур, юғары сифатлы һәм бөхтә итеп эшләнгән!) Был йыйынтыҡҡа тупланған әҫәрҙәрҙә риторика өҫтөнлөк итһә лә, йәш шағирҙың донъяға ҡарашы, уй-фекерҙәре, эске кисерештәре ярайһы ғына киң сағылыш тапҡан. Фашизмды үҙ ҡулдары менән боғаҙлап, һуғыш ҡырынан тыуған-үҫкән яҡтарына еңеүсе булып ҡайтҡан лирик герой үлемһеҙлеккә дан йырлай, тыныс хеҙмәт һөҙөмтәһендә көндән-көн йүнәлә барған тормошҡа һоҡлана. «Беҙҙең ҡулда – тарих теҙгене» тип оран һала. Мәлдең ниндәй генә ауырлыҡтарына ҡарамаҫтан, мөхәббәт тойғолары ла ят түгел уға, сөнки «йәшен утһыҙ булмағандай, йөрәк һөйөүһеҙ булмай» һәм «һөйөү булған өсөн дә кеше йәшәүҙән туймай».

Үҙ ғүмерендә Шәриф Бикҡол байтаҡ китап сығарҙы. Уларҙың күбеһе – шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығы. Арала пьесалар тупланғаны ла бар. Утыҙға яҡын китап араһынан иғтибарҙы иң ныҡ йәлеп иткәне, иң тулыһы – 1984 йылда шағирҙың алтмыш йәшенә төбәберәк сығарылған «Шиғырҙар, поэмалар» йыйынтығы менән үҙе иҫән саҡта донъя күреп өлгөргән «Баш эйәм алдарыңда»лыр. Өҫтәлемдә ятҡан «Замандашыма» (1951), «Әгәр белгән булһам…» (1964), «Һөйөүем һулыу белмәҫ» (1965), «Мин табынған күҙҙәр» (1971), «Дерево, посаженное мною…» (1972), «Величиной с моё сердце»

(1974), «Әле йәшәйбеҙ икән» (1977), «Тырышҡан – таба» (1979), «Мы ещё поживём!» (1981), «Һәйкәлдәргә илткән һуҡмаҡтар» (1981) тигән китаптар араһынан бына ошо икеһен – «Шиғырҙар, поэмалар»ҙы һәм «Баш эйәм алдарыңда»ны һайлап алам.

«Шиғырҙар, поэмалар» йыйынтығы айырым шәлкемдәрҙән тора. Әйтәйек, «Ҡырҡынсы йылдар шәлкеме», «Илленсе йылдар шәлкеме»... Иң һуңғыһы – «Һикһәненсе йылдар шәлкеме». Китаптың яртыһын тиерлек поэмалар, «Көндәштәр» исемле шиғри повесть биләгән. Ҡайһы бер шәлкемдәр эсендә, өҫтәүенә, тематик циклдар ҙа бар. Ҡыҫҡаһы, был китап шағирҙың драматургияһы менән прозаһынан тыш бөтә ижад юлын ус төбөндә кеүек итеп күҙ алдына баҫтыра һәм уның поэтик донъяһына тағы ла киңерәк ҡараш ташларға мөмкинлек бирә.

Ш. Бикҡолдоң йыллыҡ шәлкемдәргә тупланған әҫәрҙәре идея-тематик яҡтан да, тасуирлау сараларының төрлөлөгө менән дә, буяуҙарҙың сағылышы йәһәтенән дә һынатырлыҡ түгел. Уның үҙенә генә хас ижад манераһы бар: ваҡиғаларға бай ысынбарлығыбыҙҙың ниндәй генә күренешен тотоп алмаһын, шағир уны күтәренке рух менән һуғарырға һәм уҡыусы күңеленә яҡты өмөт өҫтәргә тырыша. Был сифат, үҙ сиратында, лирик геройға ла күсә. Әйтелгән фекерҙе раҫлау өсөн миҫалдарға иғтибар итәйек.

Күңелдәрем минең –
ҡунаҡ йорто,
тартынма – ин,
уҙ иң түренә:
ул – киң,
йыһанға тиң,
урын иркен
унда
шатлығыңа, сереңә.
. . . . . .
Күңелдәрем минең –
таңғы ысыҡ,
ҡунғаны юҡ уға кер заты.
Шуға сафтыр,
шуға яҡтылыр ҙа
йәшәүемдең маҡсат, мораты.

Күңелдәрем минең –
ҡайнар ҡояш,
йәй томраһы унда гел генә.
Йылытырмын,
йәнең өшөй ҡалһа,
кил генә һин миңә,
ел генә!

Был өҙөк «Күңелдәрем минең» тигән шиғырҙан алынды. Ул етмешенсе йылдар уртаһында яҙылған. Ошондай уҡ алсаҡ фекерле, эстән үҙенә күрә бер дәрт һәм күңел йылылығы бөркөп торған әҫәрҙәрҙе шағирҙың илленсе, һикһәненсе һәм башҡа йылдарҙағы ижадында ла табырға мөмкин. Уларҙы эҙләргә теләгең генә булһын.

Шәриф Бикҡол ижадында һуғыш һәм тыныслыҡ темаһына арналған әҫәрҙәр ҙур урын алып тора. Был аңлашыла ла. Сөнки ул үҙенең бик күп тиҫтерҙәре һымаҡ, Ватан саҡырыуына ҡушылып, ҡәләмде штыкка алмаштырған һәм ут эсендә ҙур һынау үткән ҡаһармандарҙың береһе. Дүрт йыл буйы һуҙылған ҡан ҡойошто шағир кешенән ишетеп йәиһә китаптан уҡып түгел, ә үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙ елкәһендә татып белә ине. Шул йылдарҙы хәтерләп, Ш. Бикҡолдоң замандашы һәм ҡәләмдәше Х. Ғиләжев бына нимә тип яҙғайны: «…беҙ (Шәриф, Ғилемдар, мин) … төрлөбөҙ фронттарҙың төрлө йүнәлештәрендә, төрлө участкаларында булһаҡ та, бер-беребеҙҙе юғалтыша башлаһаҡ, тылда ҡалған таныш-белешкә, ағай-эне, туған-тыумасаға адрестарыбыҙҙы һорашып мөрәжәғәт итә торғайныҡ. Һәм бер-беребеҙҙе мотлаҡ таба инек».

Һуғыш һәм тыныслыҡ темаһы Ш. Бикҡолдоң бөтә ижады аша ҡыҙыл еп булып үтә тип әйтһәк тә дөрөҫкә килер. Был темаға бағышланған шиғырһыҙ бер генә шәлкем дә юҡтыр. Уларҙы һанап сығырға ла байтаҡ ваҡыт кәрәк булыр ине. Иғтибарҙы ике генә шиғырға йүнәлтмәксемен. Шуларҙың береһе – «Тәпәй баҫты тағы бер бала». Илленсе йылдар шәлкеменә ингән. Элегерәк нәшер ителгән йыйынтыҡтарҙа ул «Өйҙә һәр кем…» тип атала торғайны. Әҫәрҙең нигеҙендә ябайҙарҙан да ябай күренеш ята: тәбиғәт тарафынан тәғәйенләнгән ваҡыт еткәс, бала тәпәй баҫа. Әлбиттә, ғаиләлә ҙур шатлыҡ. Ләкин ысынбарлыҡты образдар системаһына буйһондороп, художестволы фекерләү ярҙамында йөрәге аша үткәрергә күнеккән шағир өсөн был хәл ғаилә шатлығынан күпкә юғары. Тәпәй баҫҡан бала уның өсөн –

тыныслыҡты аяғүрә тороп даулар кеше. Һәм автор менән килешмәй мөмкин түгел: кеше ер йөҙөнә һуғыш суҡмары булып үҫер өсөн яралмаһа ла, тыныс тормош үҙенән-үҙе генә килмәй шул.

Иғтибарҙы туҡтатырға иҫәп тотҡан шиғырҙарҙың икенсеһе – «Тол ҡатындар төшө». Бынығы инде етмешенсе йылдар шәлкеменә ҡарай. Тетрәткес әҫәр. Ел-дауылдары менән ер өҫтөнән инде әллә ҡасан үтеп киткән һуғыш ғәрәсәтенең һаман булһа уңып бөтмәгән йәрәхәтен даими хәтерләтеп тороусы әрнеү ул. Шиғырҙың формаһы – үҙе бер табыш. Тол ҡатындарҙы төнгә генә булһа ла йәшлектәренә ҡайтарып, шағир лирик әҫәрҙең сиктәрен үҙенә кәрәгенсә киңәйтеп ебәргән, уның психологик мөмкинлектәрен һиҙелерлек арттырған. Шиғырҙың һуңғы юлдары тойғоларға айырыуса бай. Еңелсә киҫәтеү ҙә, йөрәк түренән сыҡҡан саҡырыу ҙа, хаҡлы арҙаҡлау ҙа бар унда. Шул уҡ ваҡытта ысынбарлыҡтың аянысы дөрөҫлөгө лә ярылып ята:

Тол ҡатындар йоҡоға һаҡ була…
Татлы төштәр күргән сағында,
аяҡ осоғоҙға баҫып ҡына
йөрөгөҙсө улар янында;
бүлдермәгеҙ, зинһар,
йоҡоларын,
тын-һил булһын барса тирәләр…
…Тол ҡатындар
ғәзиз иркәйҙәрен
төштәрендә генә күрәләр…

Психологик алымды шағирҙың башҡа әҫәрҙәрендә лә осратырға мөмкин. Ошо йәһәттән «Йәнә тәҙрә ҡаҡтың»ды айырыуса билдәләп үтер инем мин. Күләме яғынан әллә ни ҙур булмаған был шиғыр йөкмәткеһе менән балладаға тартым – күпмелер кимәлдә сюжет ҡалыбын шәйләргә мөмкин унда: көҙгө төн; тышта һалҡын, ҡараңғы; ҡойоп ямғыр яуа; ваҡыттың һуң булыуына ҡарамаҫтан, кемдер тәҙрә ҡаға һәм, ишекте астырып, тупһа аша үтә. Лирик герой менән уның күптәнге танышы (ҡасандыр ул, бәлки, дуҫы ла булғандыр) араһында һүҙһеҙ генә ҡараштар, уйҙар диалогы булып ала. «Күңелең – көр, донъяң бөтөн саҡта оноттоң һин Ерҙә мин барын…» – тип уйлай йорт хужаһы. Ә көтөлмәгән төнгө ҡунаҡ иһә, ишек асыусының уйҙарын һиҙгән һымаҡ, ҡапыл тертләп ҡуя, һиҫкәнә. «…Йәнә тәҙрә

ҡаҡтың, башҡайыңа күтәргеһеҙ ҡайғы төшкәндер…», – тип ослап ҡуя шағир әҫәрен, һүҙҙе артыҡ озаҡҡа һуҙмайынса. Сөнки былай ҙа бөтәһе лә аңлашыла.

Һуғыш һәм тыныслыҡ темаһын Ш. Бикҡол йыш ҡына сәйәси мәсьәләләр менән үреп ебәрә. Был иһә шағир ижадында үҫеп сыҡҡан үҙ аллы йүнәлеш – гражданлыҡ лирикаһы тураһында һүҙ алып барырға тулы хоҡуҡ бирә. Уны сәйәси лирика тип тә атарға мөмкин. Бындай лирика ла, һис шикһеҙ, йәшәргә хаҡлы. Фекерҙе раҫлау өсөн шағирҙың гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған йөҙләгән әҫәре араһынан берәүһенә генә – «Азат донъя…» тигәненә генә күҙ йүгертеү ҙә етә. Бынан күп йылдар элек яҙылған булыуына ҡарамаҫтан, ул нәҡ бөгөнгөсә яңғырай.

Үрҙә әйткәнебеҙсә, Ш. Бикҡолдоң шиғриәтен тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырырҙай икенсе йыйынтыҡ «Баш эйәм алдарыңда» тип атала. Ул шағирҙың етмеш йәшен билдәләргә әҙерләнгән осорҙа донъя күргәйне. «Йыйынтыҡҡа, – тиелгән редакция аннотацияһында, – Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, республика комсомолының Ғ. Сәләм исемендәге премияһы лауреаты Шәриф Бикҡолдоң төрлө йылдарҙа яҙылған шиғырҙары һәм поэмалары тупланды». Миңә исемләнгән теге хатында иһә автор был китабын «Һайланма» тип нарыҡлаған. Һәм был һис тә юҡтан булмағандыр: «Баш эйәм алдарыңда»ға ингән әҫәрҙәрҙең ҙур һаҡлыҡ һәм айырым бер талапсанлыҡ менән һайлап алынғанлығын шәйләмәй мөмкин түгел.

Ш. Бикҡолдоң быға тиклем сыҡҡан китаптары шикелле, «Баш эйәм алдарыңда» ла үҙенең бөхтәлеге, композиция яғынан йыйнаҡлығы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Ул «Үтһә үтер йылдар», «Миҙгелдәр», «Яна йөрәккәйем, яна…», «Төшөрәм иҫтәремә…», «Уйыны-ысыны бергә» тигән биш бүлектән тора. Быларҙан тыш, уҡыусы иғтибарына «Табанымда – ерем йылыһы», «Оло юлдан берәү килә», «Күҙмә-күҙ», «Ил яҙмышы – ирҙәр иңендә», «Яралы йыр», «Ике ҡояшымдың береһе һүнгәс…» тигән поэмалар ҙа тәҡдим ителгән. Бүлектәр шиғырҙар араһындағы күпмелер идея-тематик яҡынлыҡты күҙ уңында тотоп төҙөлгән. Уларҙы төҙөгәндә әҫәрҙәрҙең яҙылыу хронологияһы ла иғтибарҙан ситтә ҡалмаған. Был инде шағирҙың ижады менән тәрәнерәк ҡыҙыҡһыныусылар өсөн уғата ла ҡулайыраҡ шарттар тыуҙыра. (Әҫәрҙәрҙең яҙылыу йылын, ҡайһы саҡта хатта айын-көнөн һәм урынын күрһәтеү – лирик геройҙың, бигерәк тә шағирҙың рухи биографияһына тулыраҡ ҡараш ташларға

мөмкинлек биреүсе сараларҙың береһе икәнлеге күптән билдәле). Йәнә шул да мәғлүм булһын: «Баш эйәм алдарыңда»ға автор ғүмеренең һуңғы ун йылында ижад иткән йөҙ егермеләгән өр-яңы әҫәрен индергән. Йыйынтыҡҡа атама биргән шиғыр ҙа шулар араһында. Ул 1988 йылдың мартында-апрелендә Кратовола яҙылған. Әгәр ун ике генә юлдан торған әҫәр өҫтөндә лә шағир шул тиклем оҙаҡ эшләгән икән, тимәк, ул ижадҡа ҙур яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡараған. Ә шиғыр, ысынлап та, ҡойоп ҡуйған кеүек. Бына уның тулы тексы:

Сулпаным булып ҡалҡтың һин
ғүмерем таңдарында:
Гүзәллек менән осраштым –
баш эйәм алдарыңда!

Былбылдар булып тибрәндең
күңелем талдарында:
Мөхәббәт менән осраштым –
баш эйәм алдарыңда!

Шат саҡта ла, ҡайғыла ла
Һин булдың яндарымда:
Тоғролоҡ менән осраштым –
баш эйәм алдарыңда!

Әҫәрҙең кемгә арналыуын асыҡтан-асыҡ күрһәтеп торған эпиграф булмаһа ла, шағирҙың ижад лабораторияһына бер аҙ күҙ һалһаҡ, уның кем алдында баш эйгәнен самалауы ҡыйын түгел. 1995 йылда, юбилей шау-шыуҙарынан һуң, Ш. Бикҡолдоҡ тағы бер китабы донъяға килә. «Һандуғастар ҡунды талдарға» тип атала ул. Тик был юлы Өфөлә түгел, Ҡазанда сыға. Шиғырҙар, йырҙар, поэмалар тупланған был китапта «Баш эйәм алдарыңда» тигән бүлек тә бар. Шулай итеп, бер үк шиғыр аллы-артлы донъя күргән ике йыйынтыҡта ике төрлө композицион роль үтәгән. Ләкин әлеге осраҡта беҙҙе ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындырғаны был түгел. Шәриф Бикҡолдоҡ ижадын да, тормошон да яҡшы белгән замандашы һәм ҡәләмдәше, күренекле драматург Нәжиб Асанбаев раҫлауынса, «Һандуғастар ҡунды талдарға» йыйынтығындағы «Баш эйәм алдарыңда» тигән бүлек шағирҙың алиһәһенә – тормош юлдашына бағышланған. Тимәк, ғүмере таң-

дарында Сулпан булып ҡалҡҡан, күңеле талдарында былбылдар булып тибрәнгән, шат саҡта ла, ҡайғыла ла яндарында булған кеше – шағирҙың алиһәһе. Тап ошо кеше арҡаһында шағир ҙа, уның лирик геройы ла башта Гүзәллек менән, унан һуң Мөхәббәт менән, артабан инһә Тоғролоҡ менән осрашҡан.

Әлбиттә, «Баш эйәм алдарыңда»ла мөхәббәт темаһы китапҡа исем биргән шиғыр менән генә сикләнмәй. Хатта һуңғы ун йыл эсендә яҙылғандар араһында ғына ла уларҙы байтаҡ осратырға мөмкин. Һәм әйтергә кәрәк, Ш. Бикҡолдоң мөхәббәт лирикаһы ифрат бай йөкмәткеле, психологик яҡтан көсөргәнешле, фекерләү йәһәтенән етди, һүрәтләү алымдары үткер, тапҡыр. Дөрөҫ, юмор һәм иронияға ҡоролғандары ла юҡ түгел. Ләкин улары ла барыбер ҡыҙыҡ итеп кенә, шаярып-көлөп алыу өсөн генә яҙылмаған – һәр ҡайһыһына ниндәй ҙә булһа берәй хикмәтле, файҙалы фекер төрөлгән. Шундайҙар иҫәбенә «Ауыҙыңа бал да май», «Тейере генә…», «"Бөркөтөм!" – тип йөрөтәм», «Йәнем-бәғерем ине улар», «Рәхмәт яуһын яҙмышыма…», «Белдем инде», «Зыян итмәҫ ине…» тигән шиғырҙарҙы индерергә була. Улар йыйынтыҡтың «Уйыны-ысыны бергә» тип аталған һуңғы бүлегенә тупланған.

Ш. Бикҡолдоң мөхәббәт лирикаһы тәбиғилеге, ихласлығы менән күңелдәрҙе арбай. Уның лирик геройы хистәргә бай, һүҙгә оҫта, ләкин ул юҡ-барҙы һөйләп баш ҡатырмай: бөтәһе лә – урынлы, бөтәһе лә – ысын йөрәктән. Шиғырҙарҙы иғтибар менәнерәк уҡыһаң, лирик геройҙың характерына һәм бөтә булмышына хас бик күп башҡа сифаттарҙы ла төҫмөрләргә мөмкин. Әйтәйек, ҡарап тороуға ул ифрат тыныс ҡылыҡлы тойолһа ла, әгәр һүҙ мөхәббәт юҫығына күсә икән, шашҡан ташҡын шикелле ярһып та китергә мөмкин («Ташһын, ташһын яҙғы ташҡын, ашһын, ярҙарҙан ашһын: йәнебеҙгә ғәйрәт булып, дәрт булып һеңһен ташҡын! Яҡты өмөттәр ҡуҙғытһын, ҡабыҙһын ялҡындарҙы…»). Һөйгәнен яттар менән күреп ҡалһа, һарыларға һабышыуын да йәшермәй («Мин һине һөйәм икән…»). Уны бер күрер өсөн лирик герой даръялар кисергә лә әҙер («Даръялар кисергә әҙер»). Мөхәббәт ене менән йөрәге тулы икәнлеген дә асыҡтан-асыҡ ярып һала ул һәм, теләй икән, иркәһенә наҙ ғына түгел, хатта яҙ бүләк итмәксе («Яҙ бүләк итәм»). Әгәр «Ниҙәр булды миңә?» тигән шиғырҙың лирик геройы, тәүләп ғашиҡ булған көнөн хәтерләп, уны үҙенә ҡанат үҫкән көн тип иҫәпләһә һәм ул көндө бөтә донъя нурҙа ҡойонған шикелле тойһа, «Бәхетемдең инеше» тип аталған

шиғырҙың лирик геройы һөйгәнен табыуҙы бәхетенең инешенә тиңләй. «Һуңғы һөйөүем ине…» тигән шиғыр ҙа ошондайыраҡ рухта яҙылған. «Күңел күктәремдә тәү күкрәү һине һөйөүем ине… Күңел күктәрендә шул күкрәү һуңғы һөйөүем ине…» – ти уның лирик геройы һөйгәненә мөрәжәғәт итеп. Бында лирик герой характерының тағы бер үҙенсәлеге асылып киткәндәй була: ул еңел-елпе холоҡло түгел һәм мөхәббәт тойғоһо уның өсөн иң изгеләрҙән һанала.

«Йыуанысым», «Килерһең – көтәм әле…», «Аҡ буранға төрөп кенә», «Яна йөрәккәйем, яна…», «Хәбәр һал елдәргә», «Мине осратмаған булһаң…», «Бары һинең өсөн», «Әлләрәлли-әлләли…», «Һулыштарым тулы һары һағыш», «Эҙҙәр…», «Кисерә күр», «Ни йәмдәр донъяларҙа?», «“Иҫеңдән сығаммы?” – тип һора…», «Ҡайт инде, ҡайт…», «Һинһеҙ ҙә мин һинең яныңда» тигән шиғырҙар ҙа лирик геройҙың һынына яңы һыҙаттар өҫтәй, уның бай эске донъяһына тәрәнерәк үтеп инергә ярҙам итә. Был шиғырҙарҙың лирик геройы өсөн мөхәббәт – йәшәү сығанағы, йәшәү мәғәнәһе тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ. Сөнки ул мөхәббәте алдында баш эйеп кенә ҡалмай, уға табына, уны юғалтмаҫҡа, һәр саҡ саф килеш, кер төшөрмәйенсә һаҡларға тырыша. Лирик геройҙың характерында тырнаҡ осондай ҙа үҙемселек юҡ. Борсоулы уйҙар, болот тауҙарына тиң ҡатлы-ҡатлы хәсрәттәр кисергән саҡта ла, «һин тип түккән күҙ йәштәрем асы булһа ла, татлы…» тип йыуата ул үҙен үҙе. Йөрәге янып, күмергә әйләнер хәлгә еткәндә лә, сабырлығын юймай: «Килмәм тип анттар итһәң дә, килерһең – көтәм әле…» тип өмөтләнә. Бөтә ғүмерен, бөтә булмышын һөйгәненә арнауын, «йөрәгем елкенә булыр бары һинең өсөн», «йәнем телгеләнә булыр бары һинең өсөн» тип, туранан-тураға ярып һала лирик герой. Шик-шөбһәләр тыуып, күңеле иләҫ-миләҫләнеп киткән саҡтарҙа иһә ул, «ҡағылһаң-һуғылһаң», «ҡабынһаң-һағынһаң», «көйөнһәң-һөйөнһәң, хәбәр һал елдәргә: алыҫ тип тормамын – китермен сүлдәргә», тик «…сит-яттан һөйөлһәң, зинһар, тим, белгертмә: мин ҡалған тарафҡа елдәрҙе йүгертмә…» тип ялбарыуҙан да баш тартмай.

Әйткәндәй, лирик герой яңғыҙлыҡты, мөхәббәтенән айырылып торған мәлдәрен бик ауыр кисерә. «Сыйырсыҡтар ҙа парлашып һайраша ояларҙа; һиңә – минһеҙ, миңә – һинһеҙ ни йәмдәр донъяларҙа?», – тип уртаҡлаша ул был осраҡта күңелен биләп алған һағышлы уйҙары менән. Икенсе осраҡта иһә был һағыш уғата ла көсәйә һәм ярҙарынан шашып сығырға еткән быуаны хәтерләтеп ҡуя: «Ҡайт инде, ҡайт –

көтөп зарыҡтым, көтөк хәлдәренә тарыҡтым; иртәгә лә әгәр ҡайтмаһаң, донъя зыңлатҡансы ҡағам саң!» Яңғыҙы ҡалған саҡтарҙа лирик герой уйҙары менән егет мәлдәренә кире ҡайтып, яҙғы күркәм туғай күркенә, буҙтурғайҙың сихри моңона, сылтыр-сылтыр аҡҡан һалҡын шишмәгә күҙ-ҡолаҡ һала һәм уларҙа иркәһенең йәшлегенә оҡшаған һыҙаттарҙы эҙләй («Һинең йәшлегеңә оҡшатам…»). Ҡылыуынан айырылып торғанда, лирик геройҙың һулыштары һары һағыш менән тула һәм, «…әллә һин дә һағынаһың инде – төштәремә бик йыш керәһең…» тип, үҙен тынысландырып ала бер аҙға ғына булһа ла. «Шиңеү белмәҫ наҙлы гөлдәр, етһә лә һалҡын көҙҙәр; ғүмергә лә айырылмаҫ бүтәнсә беҙҙең эҙҙәр» тигәнерәк ышанысын да белдереп ҡуя ул һылыуы менән икәүһе бергә һалған һуҡмаҡтарҙы барлап һәм йөрәгендәге яраларҙы тик һөйөклөһө уңалта алырына баҫым яһап. Туҡһанынсы йылдар башында яҙылған «Кисерә күр» тигән шиғырҙың лирик геройы үҙенең хистәрен хатта асыҡтан-асыҡ ярып һала: «Мин ғашиҡмын һиңә әүәлгесә – мин яратам һине, һөйөклөм!»; «Ғүмеремдең һуңғы сигенәсә яратырмын һине, һөйөклөм!»

Ш. Биҡколдоң мөхәббәт лирикаһын шартлы рәүештә ике төркөмгә бүлеп тикшерергә булыр ине. Үрҙә телгә алынған шиғырҙар (улар бик күптәр, шуға күрә бер юлы бөтәһенә лә туҡталыу мөмкин түгел) беренсе төркөмдө тәшкил итә тимәксемен. Был төр шиғырҙарҙа төп урынды мөхәббәт утында янған лирик герой биләп тора. Һәм уның холҡон-фиғелен һүрәтләү, уй-хистәрен тасуирлау, ғөмүмән, лирик геройҙың уҡыусы күңелендә уйылып ҡалырҙай һынын тыуҙырыу өсөн автор төрлө сараларға, әҙәби алымдарға мөрәжәғәт итә. Икенсе төр шиғырҙарҙа иһә шағирҙың үҙ һыны өҫтөнлөк ала һәм шул сәбәпле образлы фекерләү бер аҙ артҡы планға күсә.

Эстетик юғарылыҡтан күҙ ташлағанда, беренсе төркөмгә ҡараған шиғырҙар отошлораҡ, әлбиттә. Быға ышаныу өсөн, икенсе төркөмдө тәшкил иткән әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәренә туҡталып китергә мөмкин. Улар күп түгел, әммә барҙар. «Мөхәббәт аҡланы», «Эҙлә һин уны», «Ишәйергә яҙһын», «Мөхәббәт хаҡында баллада», «Был – мәңге тере хәҡиҡәт…», «Таныш йыр», «Мөхәббәт ул – наҙлы заттан…», «Тештәрен ыржайтып көлөр…» һымағыраҡ шиғырҙарҙы шундайҙар иҫәбендә тиер инем. Был шиғырҙарҙа мөхәббәт тойғоһоноң илаһилығын геройҙың эске кисерештәре аша һүрәтләүгә ҡарағанда, уға мәҙхиә йырлауға күберәк урын бирелгән. «Мөхәббәт аҡланы»нда, мәҫәлән, «һәр кемдең булалыр үҙенең тылсымлы

мөхәббәт аҡланы. ‹…› Йөрәкте уятҡан төбәкте ғашиҡтар онота аламы?», «Ишәйергә яҙһын»да «мөхәббәттең ҡөҙрәттәре сикһеҙ – һорап тормай, ҡыла ҡылырын!», «Мөхәббәт хаҡында баллада»ла «күпме күҙ йәше ҡойолған һин яралтҡан хәсрәттән!..» кеүегерәк тирадалар менән осрашырға тура килә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. «Был – мәңге тере хәҡиҡәт…»тә лә бар ул мөхәббәт хаҡындағы бөҙрә һүҙҙәр: «мөхәббәт һорап алынмай, мөхәббәт – хәйер түгел!»; «мөхәббәт – бер үк ваҡытта мең ғазап шарламаһы, йән яраһы, йәшәү дәрте, яҙмыштың серле кәрте…». «Таныш йыр» ҙа мәхрүм түгел бындай риториканан: «Мөхәббәт йыры – һәр кемгә таныш: ул – йәнде ҡурған тетрәткес һағыш; һүнмәҫкә ҡапҡан аяуһыҙ ялҡын…»

Мөхәббәткә мәҙхиә йырлаған шиғырҙар хаҡында фекер йөрөткәндә күпмелер кимәлдә тәнҡит һүҙе лә яңғырап китә икән, быға шағирҙың яҡты иҫтәлегенә ҡара буяу яғырға, уның абруйын төшөрөргә маташыу тип ҡарарға ярамай, әлбиттә. Сөнки бындай шиғырҙарҙы яҙыу өсөн дә ниндәйҙер әҙерлек, айырым оҫталыҡ кәрәк. Беренсенән, ярайһы ғына тел байлығың булырға тейеш. Икенсенән, шул байлыҡты эшкә егер өсөн фекер ҡеүәһе кәрәк. Төплө фекер әйтер өсөн иһә күпмелер тормош тәжрибәң булыуы мотлаҡ. Тимәк, Ш. Бикҡолдоң мөхәббәткә мәҙхиә йырлаған шиғырҙары ла юҡтан ғына бар булмаған: уйланыуҙар, һыҙланыуҙар һөҙөмтәһендә шағирҙың аңында тыуып, йөрәген ярып сыҡҡандар улар. Унан ары, был шиғырҙар – ялтырауыҡлы һәм яңғырауыҡлы һүҙҙәр теҙмәһе генә түгел бит: уларҙың тәрбиәүи әһәмиәтен дә күрә һәм тоя белергә кәрәктер. «Мөхәббәт ул – наҙлы заттан…» исемле шиғырҙағы бына был юлдарҙы кем инҡар итер икән:

Мөхәббәт ул –
наҙлы заттан:
яҡлау кәрәк;
яманаттан,
хыянаттан
һаҡлау кәрәк!

«Эҙлә һин уны», «Эй ахмаҡтар…», «Тештәрен ыржайтып көлөр…» тигән шиғырҙар ҙа – ошо типтағылар. Уларҙы иғтибар менән, елегенә төшөп етергә тырышып уҡыған бер генә кеше лә үҙенә һабаҡ алмай ҡалмаҫ, моғайын.

Шағирҙың мөхәббәт лирикаһы хаҡындағы һүҙҙе тамамларҙан алда, шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтке килә: үрҙә ике төркөмгә бүлеп тикшерелгән шиғырҙарҙың бөтәһе лә уларҙың авторы инде олоғайып барған мәлдә – алтмышы менән етмеше араһында – ижад ителгән. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, был шиғырҙарҙан йәшлек дәрте һәм сафлыҡ нуры бөркөлөп тора. Ошонан сығып, Ш. Бикҡолдо мин Иманына ғына түгел, Мөхәббәтенә лә тоғро ҡалған шағир һәм шәхес тиер инем. Был фекерҙе шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән дә йөпләргә була: «Күңелем бит һаман – яҙғы ташҡын, йөрәгем бит – һаман янартау!» – ти ул «Көн элгәре…» исемле шиғырында.

Әйткәндәй, Иманға тоғролоҡ мотивы Ш. Бикҡолдоң был мәҡәләгә ойотҡо һалған «Минең донъям» шәлкемендә генә түгел, «Баш эйәм алдарыңда» йыйынтығына ингән шиғырҙарында ла яңғырап китә. Улар башлыса, уйлап-нитеп тормаҫтан, ижтимағи фән нигеҙҙәрен дә һанға һуҡмайынса, илдә йәйелдереп ебәрелгән һәм шунлыҡтан беҙҙе бөлгөнлөккә төшөргән үҙгәртеп ҡороуҙар осорона ҡарай. Ошо йәһәттән «Ер аҡ биләүҙә» тигән шиғырҙы айырып күрһәтер инем. Еңелсә генә символикаға ҡоролған был әҫәр – ифрат бай йөкмәткеле һәм тәрән мәғәнәле, минеңсә. Шиғырҙың тәүге юлдарында лирик герой, мамыҡ ҡар яуып үткәндән һуң аҡ биләүгә биләнгән Ергә һоҡланып һәм бер төн эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән тәбиғәт менән хозурланып, илаһи яҡты донъяға бындай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә: «Айырма аҡҡа-ҡараға, бәхетле-бәхетһеҙгә; оронма өлөшө юҡҡа, киҙәнмә тәхетһеҙгә!» Артабан шағир сәйәсмәндәргә лә, фәлсәфәселәргә лә, иҡтисадсыларға ла ғүмер баҡый тынғы бирмәгән мәсьәләләргә иғтибарын йүнәлтә һәм сәнғәт әһеле булараҡ был мәсьәләләрҙе сәнғәт мөмкинлектәренән сығып аңларға, сәнғәт сараларын файҙаланып башҡаларға ла аңлатырға тырыша. Шиғырҙың һуңғы юлдарында лирик герой яҡты донъянан бындай яуап ала: «Бер минән генә һорама – кешеләрҙән дә үтен! Ҡәнәғәт, шат булһын һәр кем бүленгән өлөшөнә, ҡомһоҙланып, ҡул һуҙмаһын бүтәндәр көмөшөнә!» Дөрөҫ, был юлдарҙан мәғрифәтселек елдәре лә иҫеп киткәндәй була. Әммә шиғырҙы тотошлай, бер тына уҡығанда авторҙың кинәйәһен шәйләмәй мөмкин түгел: әгәр тыумыштан бөтә кеше лә тиң хоҡуҡлы икән, тимәк, ысынбарлыҡта ла шулай булырға тейеш; әгәр «берәүҙәр өсөн тормош – туй, икенселәргә – аслыҡ…» икән, тимәк, ерҙә ғәҙелһеҙлек хөкөм һөрә; әгәр «берәүҙәрҙең ғүмер күге гел зәп-зәңгәр, гел асыҡ»,

ә икенселәр мәңге лә көн күрмәçлек хәлгә еткереп йәберһетелгәндәр икән, тимәк, әҙәм балаһы үзе лә ғәйепле.

«Әйтсе, туған!», «Ҡасып ҡалып булмай язанан», «Тетрәндереп ҡуйҙы кинәт…», («Минең донъям» шәлкемендә был шиғыр «Башым сатнай» тип аталғайны), «Беҙҙең заман сире», «"Бизнесмен әфәнде" мин…», «Ил өҫтөндә – ҡанлы тамаша», «Иңрәү» кеүек шиғырҙарҙа ла шағирҙың сәйәси аңы, донъяға ҡараштары, әхлаҡи принциптары ярайһы ғына асыҡ сағылған. Әгәр «Әйтсе, туған!»да ул : «Был ниндәй рәхимһеҙ донъя: мур ҡыуа, ғазап ҡыуа; теләк башаҡтары ҡыҫыр, хыялдар үле тыуа. Ҡәһәр һуҡҡыр залим ҡулы быуа, боғаҙҙан быуа…» тигән юлдар аша илдә ҡупҡан зилзиләгә ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашһа, «Тетрәндереп ҡуйҙы кинәт…»тә «сал тарихҡа йоҙроҡ төйнәп, ҡара яғып», «кеше аңы һыйҙырмаҫлыҡ мәхшәр» ҡылыусыларға ләғнәт уҡый, Салауат һәйкәленә лә ҡул һоноусылар табыла күрмәһен берүк тигән шиген дә йәшермәй шағир һәм ошо ҡот осҡос уйҙарҙан башы сатнай. Мәскәүҙең Переделкино ҡасабаһында яҙылған «Ил өҫтөндә – ҡанлы тамаша» исемле шиғырында был мәхшәрҙе фашлау өсөн автор уғата ла көслө һүҙҙәр тапҡан:

Ҡабыҡ алыштырған йылан-заттар,
Хаин йәндәр донъя ҡыуалар:
изге һынға кереп,
буш ант биреп,
бәндәләрҙең күҙен быуалар…
Болғаәй-болғай тамуҡ киҫәүҙәрен,
һытмаҡ булып бәхет төйәген,
суҡмар менән йәнсеп,
имгәтәләр
Ил-Әсәнең арҡа һөйәген…

«Ил өҫтөндә – ҡанлы тамаша»нан көн элгәре шул уҡ Переделкинола яҙылған «Иңрәү» исемле әҫәр ҙә шағирҙың уйҙар ағышын һәм күңел көҙгөһөн яҡтыртҡан бер миҫал. Эпиграф урынына ҡулланылған «1992 йылдың ноябрь байрамдары алдынан реконструкция һылтауы менән Ҡыҙыл Майҙандың суйыр таштарын аҡтарып ташланылар…» тигән юлдар шиғырҙың ойотҡоһо ғына түгел, уның идея йөкмәткеһенә үтеп инергә ярҙам итерҙәй асҡыстыр ҙа, моғайын. Кем белә, ҡасандыр

илебеҙҙең бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап ҡалыр өсөн ҡанын түккән яугир шағир, форсаттан файҙаланып, иң бөйөк һәм иң изге байрамыбыҙҙы телевизор аша түгел, ә үҙ күҙҙәре менән күрергә теләп, Ҡыҙыл Майҙанға килгәндер, бәлки, һәм, ҡиәмәт көнөн хәтерләткән майҙанды күргәс, уның йөрәген бына был һүҙҙәр ярып сыҡҡандыр:

Яуыз ирке менән
байрам рухы
ебәрелгән ерҙән ҡыуылып…

…Суйыр таштар булып
суйыр таштар
иңрәп ята
йәшкә быуылып.

Шулай итеп, ҡаш төҙәтеү ниәте менән башлап ебәрелгән эштең күҙ сығарыуға килтереп еткереүен (хәйер, уның тәүҙән үк күҙ сығарырға иҫәп тотоп уйланылыуы ла бик ихтимал!) шағир йөрәге тыныс ҡына кисерә алмай – байрам рухы ҡыуылған ерҙә тере йән эйәһе генә түгел, таш тиклем таш та йәшкә быуылып, иңрәп ята һымаҡ уға.

Үҙгәртеп ҡороуҙар осоро башланғас ижад ителһә лә, уның шаушыуҙарына һис ниндәй ҙә ҡағылышы булмаған йәнә бер әҫәргә туҡталып үтке килә. «Йырҙарымдан һәйкәл ҡойор инем…» тип атала ул. Исеме менән генә түгел, есеме менән дә иғтибарҙы йәлеп итерлек шиғыр. Әҙәбиәттә һәм сәнғәттә һирәгерәк яҡтыртыла торған темаға – мәктәп уҡытыусыһының дөйөмләштерелгән тере һынын кәүҙәләндереүгә арналған ул. Яңғырашы менән риторикаға ҡоролған шикелле тойолһа ла, ғәжәп йөкмәткеле әҫәр. Кеше зиһенен «әлепбиҙән атом серенәсә» төшөндөрөүенә ҡарамаҫтан, көндәлек ығы-зығылар күләгәһе менән ҡапланып, ғәҙәттә күҙ уңынан ситтәрәк ҡалыусан был илаһи заттың тормошта биләгән урыны иҫ киткес бай сағыштырыуҙар һәм сағыу эпитеттар ярҙамында бөтә күркәмлегендә асып һалынған. Ҡасандыр үҙе лә уҡытыусының йылы һәм талапсан ҡулдары аша үткән шағир уның абруйлы исеме алдында баш эйеп кенә ҡалмай, йырҙарынан уға һәйкәл ҡойорға ла әҙер.

Шәриф Бикҡолдоң һуңғы йылдарҙағы ижадында бәләкәй күләмле шиғырҙар күҙгә йыш салына. «Баш эйәм алдарыңда»ла автор уларҙы төрлөсә атай: ишаралар тип тә, парсалар тип тә, уймаҡ

мәҫәлдәр тип тә. Тематикаһы яғынан улар шағирҙың бөтә ижад юлын үҙ эсенә алған төҫлө – унда дуҫлыҡ һәм тыныслыҡ тураһында ла ҡыҫҡа һәм тос фекерҙәр осратырға мөмкин. Быны раҫлау өсөн бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Шуларҙың береһе менән генә сикләнәйек:

Мин белгәнде
Һин дә бел, Хоҙайым –
сер ҡалмаһын беҙҙең арала:
асыҡ дошмандарҙан ыжлаған юҡ,
Һатлыҡ әшнәләрҙән арала…

Иман менән Мөхәббәттән тыш, Ш. Биҡҡол инанған һәм уға һәр саҡ тоғролоҡ һаҡлаған тағы бер илаһи көс бар. Ул – Шиғриәт. Әҙәбиәт һарайына ҡарай юл тотоусыларҙың күпселеге тәүге аҙымдарын ғәҙәттә шиғырҙан башлай. Ләкин уларҙың бөтәһе лә шағир булып китмәй. Бүтән жанрҙарҙа ла уңышлы ғына эшләгән Ш. Биҡҡол инһә иң тәүҙә – Шағир. Һәм ул шулай булып ҡалыр ҙа, ахырыһы. Ошо уңайҙан «Баш эйәм алдарыңда» китабының титул битенән һуң урынлаштырылған «Рөхсәт-фәлән һорап тормай…» тигән шиғыр хаҡында берике һүҙ әйтеүҙе фарыз һанайым. Шиғыр илле туғызынсы йылда яҙылған. Формаһы менән ул йомаҡҡа тартым. Башта, әҫәрҙең буйынан-буйына тиерлек, риторик характерҙағы күп төрлө һорауҙар яуа. Һуңынан уларға яуап ҡайтарыла. Автор ҡарашынса, йәшәйештең бөтә осраҡтарында ла (әйтәйек, ҡайғы йә шатлыҡ килгәндә, «мөхәббәттең тәү ғазабын кисергәндә», «һөйгәнеңде ҡауышырға күндергәндә», «рухың төшөп, дәрт ҡанатың һынған саҡта, өмөтөңдөң сатҡылары һүнгән саҡта», һ.б., һ.б.) кешенең иң тоғро дуҫы булып Шиғриәт ҡала. Сөнки «бер шатлыҡты унау итеп арттыра ул, дарман бирep, тау-таштарҙы ваттыра ул: ғашиҡтарҙың ғишыҡтарын ҡайнарлата, ир-егетте ҡыйыулата, айбарлата». Шиғриәтһеҙ, ти автор, донъя – йәмһеҙ, күңелдәр – хыялһыҙ булыр ине, дуҫлыҡтың – йылыһын, ҡояштың – наҙын, һылыуҙарҙың һылыулығын тоймаҫ инек. Шулай итеп, «Рөхсәт-фәлән һорап тормай…»ҙың курсив менән йыйылыуы ла һис тә юҡтан түгел – был әҫәр шағирҙың эстетик программаһына торорлоҡ. Һәм «Баш эйәм алдарыңда»ға тупланған шиғырҙар – ошо программаның аныҡ бер кәүҙәләнеше тип иҫәпләргә мөмкин.

Ш. Биҡҡолдоң шиғриәткә йәне-тәне менән бирелгәнлеге, уға ифрат яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡарауы һәм ҙур өмөттәр бағлауы

шағирҙың башҡа әҫәрҙәрендә лә тоҫмаллана. «Рөхсәт-фәлән һорап тормай…»ҙан һуң утыҙ йыл тиерлек ғүмер үткәс яҙылған «Шелтәләргә ашыҡмағыҙ…» исемле шиғыр ошо йәһәттән ғәжәп үҙенсәлекле, минеңсә. (Юл ыңғайында шуны ла хәтергә төшөрөп уҙайыҡ. Был әҫәр әҙәбиәтебеҙҙең шиғриәткә табынған оло әһеле – Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең дә иғтибарын йәлеп иткәйне. «Шелтәләргә ашыҡмағыҙ…»ҙың авторына етмеш йәш тулған көндәрҙә яҙылған «Шәриф Бикҡол һәм уның ижады хаҡында бер кәлимә һүҙ»ен халыҡ шағиры ошо әҫәрҙән алынған «Ғәрәсәт уртаһынан» тигән юлдар менән атағайны.) Үҙенсәлек иһә шунда: әҫәрҙә автор менән лирик герой араһындағы айырма юҡ хәленә килеп еткән. Нимәһе менәндер был герой В. Маяковскийҙың «Облако в штанах» исемле поэмаһындағы лирик геройҙы хәтерләтеп ҡуя. Ике герой бер-береһенән шаҡтай алыҫ торған ике осорҙа йәшәһәләр ҙә, үҙҙәренең булмыштары менән улар бер-береһенә бик оҡшаш – икеһе лә ғәжәп нескә күңелле һәм икеһе лә яҡлауға мохтаж. Айырма тик шунда: йәш В. Маяковскийҙың күңел ҡылдары быуат башындағы ғәҙәлһеҙлектәрҙе һәм ҡан ҡойоштарҙы күреп йәрәхәтләнгән булһа, Ш. Бикҡолдоҡо быуат ахырындағы рәхимһеҙлектәрҙән һыҙлана. Шуға ла уның: «…Шелтәләргә артыҡ ашыҡмағыҙ ҡырыҫлана барһа йырҙарым…» тигән саҡырыу-үтенесендә һис ниндәй ҙә аңлашылмаусылыҡ юҡ. Сөнки йырҙар бер ваҡытта ла сәбәпһеҙ генә ҡырыҫланмай: «Шәрә минең күңел ҡылдары – нилектәнен һөйләр йырҙарым…» Ш. Бикҡолдоң ижадын уның тормош юлы менән йәнәш ҡуйып күҙ уңынан үҙғарһаҡ, шундай һөҙөмтәгә килергә булыр ине: шағир, Иман менән Мөхәббәткә тоғролоҡ һаҡлаған шикелле. Шиғриәттә лә ихласлыҡҡа һәм асыҡлыҡҡа хыянат итмәгән – һауа шарттары үҙгәргән һайын йылан һымаҡ ҡабыҡ алыштырыр өсөн үтмәгән бит ул теге саҡта ғәрәсәт уртаһынан.

Һүҙемде тамамларҙан элек, Ш. Бикҡолдоң замандашы һәм ҡәләмдәше Ғ. Рамазановтың «Хәтер төпкөлөнән» тигән иҫтәлектәренән ҡыҫҡа ғына бер өҙөк килтермәксемен. «Башҡорт әҙәбиәтенә бергә килгән тиҫтерҙәрем – дуҫтарым Хәким Ғиләжев, Шәриф Бикҡол, Муса Ғәлиҙәрҙән, – тип яҙа иҫтәлектәр авторы, – күп нәмәгә өйрәндем. Беҙҙең шәхси һәм ижади дуҫлыҡ башланыуға ярты быуат тулып уҙҙы инде. Тормошта төрлө хәлдәр булһа ла, яугирҙәр быуынының инанғанлығына тоғро ҡалдыҡ».

Яугирҙәр быуыны… Ҡаһарманлыҡ… Инанғанлыҡ… Тоғролоҡ… Тағы әллә ни ҡәҙәр уртаҡ сифаттар берләштерә был быуын әҙиптәрен.

Ҡырҡынсы йылдарҙа ижад майҙанына аяҡ баҫып, егерменсе быуаттың уртаһында һәм икенсе яртыһында башҡорт әҙәбиәтен, бигерәк тә уның поэзияһын үҫтереүгә тос өлөш индергән уҙамандар улар. Илдә яңы тормош төҙөү идеялары менән янып-көйөп йәшәгән һәм ижад иткән быуын вәкилдәре. Ш. Бикҡолдоң бына был юлдары аҫтына уның ҡәләмдәш дуҫтары ла һис икеләнмәйенсә үҙҙәренең ҡул тамғаларын ҡуя алыр ине:

Тоҡомом –
бәһлеүән ишле,
сыныҡып үҫкән Тоҡом;
Иле өсөн,
йән аямай,
ут аша үткән Тоҡом!

Үлемде
Йөрәк менән
томалап ҡуйған Тоҡом!

...Исемен
Дан һәйкәленә
мәңгегә уйған Тоҡом!

Күренекле шағирыбыҙ Шәриф Бикҡол ижадына ташланған был ҡараш уның «Минең донъям» тигән шәлкеме тураһында фекер йөрөтөүҙән башланғайны. Шул шәлкемгә кире әйләнеп ҡайтып, уҡыусы иғтибарына шағирҙың бер парсаһын тәҡдим итергә иҫәп:

«Шаҡ» та «шоҡ»
ишек ҡаҡһа ла
ғүмерҙең көҙгө мәле,

хыялдарым –
йәш ҡурпылай:
ҡыуарыу белмәй әле!

Йәш ҡурпылай! Ни хәтлем матур, тәрән мәғәнәле, ысын-ысындан поэтик сағыштырыу был! Бындай һүҙҙәрҙе, минеңсә, тормоштоң

күберәк яҡты һәм яҡшы яҡтарын күрә белгән, бай рухлы, дәрте шашып торған ҡайнар йөрәкле, «кеше аңы һыйҙырмаҫлыҡ мәхшәр» ҡылынғанда ла Иманына, Мөхәббәтенә, Шиғриәткә тоғро ҡалған шәхес кенә әйтә алалыр.

Ҡыҙғаныс, йәш ҡурпылай ҡыуарыу белмәҫ хыялдар кинәт кенә һүнеп ҡуйҙы. Ләкин Ш. Бикҡолдоң ижадына иғтибар һүнмәҫ тип уйлайым. Бер уныҡына ғына ла түгел – өсөһөнөкөнә лә: Ғилемдар Рамазанов, Шәриф Бикҡол, Хәким Ғиләжев. Назар Нәжмиҙең үрҙә телгә алынған мәҡәләһендә улар әҙәбиәтебеҙҙәге өс таған тип аталған. Һәм был бик урынлы сағыштырыу. Бындай күренеш әҙәбиәт тарихында йыш ҡабатланмай. Шуға ла ижадтары менән дә, тормош юлдары менән дә бер-береһенә яҡын торған, ләкин шул уҡ ваҡытта һәр ҡайһыһының үҙ йөҙө, үҙ почеркы, үҙ манераһы булған был өсәүҙең әҙәби мираҫы ныҡлап өйрәнелеп, «Яҙылмаған китап» шикелле йыйынтыҡ түгел, ә айырым-айырым китаптар яҙып сығарылмаһа, уларҙың яҡты иҫтәлеге алдында ла, әҙәбиәтебеҙ ғилеме алдында ла ғәфү ителмәҫлек гөнаһ булыр.

1994, 1999

АҡЫЛ ҺӘМ ХИС ГАРМОНИЯҺЫ

Таңһылыу Ҡарамышеваның шиғриәтен байтаҡтан бирле күҙәтеп килһәм дә, уның «Күңелем доғалары» тигән яңы китабы яңы тойғолар уятмай ҡалманы. Ғүмеренең алтын уртаһын шағирә тап ошо йыйынтығы менән ҡаршыланы. Ижад кешеһе өсөн был үр – нәүбәттәге бер артылыш ҡына түгел, бәлки, тамам өлгөрөп етеү мәле лә. «Ғүмер йәйем» исемле шиғырында әлеге мәл хаҡында Таңһылыу үҙе шулай ти:

Ғүмер йәйем минең үтеп бара.
Үтеп бара байрамым.
Һүрәнәйә көнөм эҫелеге –
Көҙҙәремә китеп барамын.

Әҙәбиәт майҙанына бик йәшләй аяҡ баҫҡан Таңһылыу Ҡарамышеваның ижад усағы башта гөлт тоҡанып киткәндәй тойолһа ла, артабан ул саманан тыш ҡабаланып барманы, шикелле. Дөрөҫөрәге, саманан тыш һалмаҡлыҡ күрһәтте һымаҡ. Уның ваҡытлы матбуғат биттәрендә күренгеләп ҡалған тәүге шиғырҙары һәм шиғри шәлкемдәренән һуң тәүге китабы баҫылып сыҡҡанға тиклем ике тиҫтә йылға яҡын ғүмер үтеп китеүе шулай уйларға мәжбүр итә. Бының, әлбиттә, үҙ сәбәптәре булғандыр. Ә шулай ҙа һикһәненсе йылдар башында «Саҡыр мине» тип аталған тәүге йыйынтығы донъя күргәндән һуң шағирәнең китаптары яйлап ҡына бер-бер артлы сыға тора. Бөгөн ул – бер нисә поэма һәм «Урал батыр» эпосына таянып яҙылған дастан авторы ла. Тик бына уның хаҡында әлегә тиклем әҙәби тәнҡиттә һүҙ ҡуҙғатылғанын ғына бер ҙә хәтерләмәйем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, иллеләре генә түгел, алтмыштары, хатта етмештәре тулған әҙиптәребеҙҙең тормош һәм ижад юлы иғтибарҙан киттә ҡала килә. Был ғәҙәлһеҙлектең сәбәбе – тәнҡитебеҙҙең һүлпәнлегендә генә түгел, уның мөмкинлектәрендә лә: беҙҙә саф тәнҡит менән генә шөғөлләнеүселәр юҡ тиерлек.

Т. Ҡарамышеваның «Күңелем доғалары»н хозурланып уҡып ултырғанда уйламаған-нитмәгән ерҙән күренекле ғалим һәм яҙыусы Кирәй Мәргәндең хәтерем төпкөлөндә һаҡланған «Ике тауыш» тигән парсаһы ҡыбырлап ҡуйғандай булды.

«Ике төрлө тауыш ишетәм мин, – тип башлана ул, – берене нәҙегерәк, икенсеһе ҡалын. Ике тауыш килә ҡолағыма, берене ниндәйҙер яңғырауыҡлы сыға, ә икенсеһе тыйнаҡ ҡына, баҫалҡы ғына…

– Мин уға донъя күрһәтәм,– ти яңғырауыҡлы тауыш, – мин уға… мин уға матурлыҡ алып киләм, ләззәт килтерәм! Бөтә мауыҡтырғыс нәмәне мин бирәм уға!

– Һы, – ти баҫалҡы ҡалын тауыш, – донъяла мауыҡтырғыс нәмәләр күп ул. Бына шул һинең йүгәнһеҙлегең арҡаһында уның төрлө бәләгә эләгә яҙғаны бар. Әгәр ҙә мин булмаһам, һәр саҡ уны тыйып килмәһәм, күптән һин уның башына еткән булыр инең. Ярай әле үҙем бар!»

«Был, – тип асыҡлыҡ индерә парсаның авторы үрҙә килтерелгән диалогҡа, – минең Аҡылым менән Хисем һөйләшә. Йыш ҡына улар шулай бәхәсләшеп китәләр, үҙ-ара ныҡ ҡына тартышып алалар. Ә миңә ҡыҙыҡ. Ҡайһы саҡта уларҙың бәхәсен ана шулай ситтән генә тыңлап торорға яратам мин».

« – Мин уны тормоштоң тәмен татырға өйрәттем, – ти. Хис ашыға-ашыға: Мин булмаһам, ул тормоштоң матурлығын тоя алмаған булыр ине. Белдеңме? Тормош тәмен белмәгәс, ул яҙа ла алмаҫ ине.

Аҡыл бер ҙә иҫе китмәй генә яуап бирә:

– Мин уны тормоштоң мәғәнәһен аңларға өйрәттем. Аңлашыламы? Минең арҡала ул тормоштоң тәрән серҙәренә төшөнә, айышына үтеп инә ала. Яҙыусы өсөн тап ана шул кәрәк тә инде!»

Артабан автор Аҡылы менән Хисе араһында торған һайын ҡыҙа барған бәхәскә ҡушылып китә, уларҙы тыныслandырырға тырышып, һәр ҡайһыһына үҙенең баһаһын бирә, ижад процесында тотҡан урынын билдәләй һәм «Аҡылым хисле булһа ине, ә Хисем һәр саҡ аҡыллы булһа ине!» тигән теләк менән парсаһын йомғаҡлап ҡуя. Таңһылыу Ҡарамышева әҫәрҙәрендә лә ошо ике тауыш ихлас күңелдән һөйләшеп, серләшеп, бер-береһен тулыландырып һәм ҡеүәтләп атлаған шикелле тойолдо миңә.

Аҡыл менән Хис араһында камиллыҡҡа ынтылышты китаптың түр башын биләп тороусы «Асылған серҙәр» дастанында уҡ шәйләргә мөмкин. Дөрөҫ, Көнсығыш әҙәбиәтенән килеп ингән был эпик жанр һуңғы ваҡытта телгә ярайһы ғына йыш алынһа ла, беҙҙең әҙәбиәт ғилемендә уның тәбиғәте, эске төҙөлөшө, поэтик үҙенсәлектәре хаҡында мәғлүмәт юҡ тиерлек. Әҙәбиәт ғилеме буйынса рус телендә

нәшер ителгән сыганаҡтарҙан күренеүенсә, дастан – әкиәт сюжеттарының, легендаларҙың һәм риүәйәттәрҙең әҙәби эшкәртелеше. Ләкин Т. Ҡарамышеваның «Асылған серҙәр»енә ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларының әҙәби эшкәртелеше тип кенә ҡараһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ. Сөнки унда ҡобайырҙан алынған айырым сюжеттар, әкиәт мотивтары, мифологик образдар тормоштоң, йәшәйештең тәрән серҙәренә төшөнөү, уның айышына үтеп инеү сараһы итеп кенә түгел, бәлки, ниндәй ҙә булһа берәй төплө фекер әйтеп, ерҙә бөгөн йәшәүселәргә аҡыллы кәңәш биреү өсөн дә файҙаланылған. Дастандың башында уҡ автор «Барыһы киҫәтеп әйтелгән, әйтелгән ҡарыһүҙ телендә» тип белгертеп ҡуя икән, һис тә юҡтан түгелдер.

Рус телендәге сыганаҡтарҙа дастандың прозаик, шиғри һәм ҡатнаш (проза менән шиғырҙың аралашыуы) формала булыуы, дастан шиғырының ике төрлө үлсәүҙән: 11–11 һәм 7–8 ижектән тороуы хаҡында ла әйтелгән. Т. Ҡарамышева дастанына килгәндә иһә, ул – тотошо менән шиғри әҫәр. Унда бөтәһе утыҙға яҡын шиғыр. Уларҙың береһе лә ялҡытҡыс түгел – яратып уҡырлыҡ ҡына. Һәр шиғырға эпиграф итеп ҡобайырҙан алынған юлдар килтерелгән. Улар, һис шикһеҙ, шиғырҙың йөкмәткеһенә күпмелер кимәлдә алдан уҡ аныҡлыҡ индерә һәм авторҙың әйтергә теләгән уйын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә.

Һүҙ ыңғайында бер нисә иҫкәртмә лә яһамай булмаҫ. Уларҙың тәүгеһе төрлө вариантта файҙаланылған бер үк образдарҙың һәм мотивтарҙың күбәйеп китеүенә ҡағыла. Был, үҙ сиратында, икенсе дәғүәне тыуҙыра. Дастан менән ҡобайырҙың композициялары мәсьәләһе. Ҡобайырҙа ваҡиғалар ағышының ниндәйҙер бер логикаһы бар. Дастанда иһә уға артыҡ иғтибар ителмәгән һымаҡ – әйтерһең дә, ул ирекле композицияға һалынған. Был мәсьәлә буйынса бәхәс ҡуйыртырға йыйынмайым. Ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары менән уларҙың яҙма әҙәбиәттәге варианттары араһында бөтә яҡлап та теүәллек булыу, бәлки, мотлаҡ та түгелдер. Ә шулай ҙа дастан жанрында эшләүсе шағирҙарға был турала уйланыу зыян итмәҫ, тим.

«Аҫылған серҙәр»гә ингән шиғырҙарҙың бөтәһен дә ентекләп тикшереү күҙ уңында тотолмай бында. Бер мәҡәлә сиктәрендә ул мөмкин дә түгел. Әммә, үрҙә әйтелгәндәр буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталмай ярамаҫтыр. Бына шуларҙың «Эҙләү» тигәне. Уның эпиграфы: «Үлем эҙләп йөрөһә, күрһәтегеҙ үлемде». Был – Ҡатил батша биргән фармандың бер аҙ ҡыҫҡартылған

варианты. Үлем тигән яуызды үлтерергә йөрөүсе Урал батырҙың үҙен юҡ итергә бирелгән фарман. Фармандың сәбәбе иһә былай. Урал батыр Ҡатил батша биләмәләренә килеп сыҡҡас, уға батша ҡыҙы ғашиҡ була. Ләкин батыр егет алма бирep ымлаған ҡыҙ ҡаршыһында әүрәп ҡалмай. Сөнки уға батша үҙ алдына ҡуйған бурысты үтәргә кәрәк. Шуға ла Урал батыр батша кейәүе булыуҙан баш тарта. Белмәгән-нитмәгән ырыу егетенән ҡыҙының хурға ҡалыуын Ҡатил батша үтә ауыр кисерә, ул сығырынан сыға һәм ярандарына Урал батырҙы үлтерергә ҡуша. Ғәжәп хәл: ҡобайыр биттәрендә биш йөҙләп юлды биләгән ошо эпизод Т. Ҡарамышева шиғырының эпиграфына һәм тәүге ике строфаһына һыйып бөткән. Ләкин әҫәрҙең асылы быға ғына ҡайтып ҡалмай, әлбиттә. Артабан автор, ҡасандыр йондоҙҙарҙан йондоҙҙарға осоп, үлемһеҙлек эҙләп йөрөгән Урал батыр образына бөгөнгө ысынбарлыҡ бейеклегенән ҡараш ташламаҡсы. Уның әйтергә теләгән төп фекере, минеңсә, һуңғы строфала туранан-тура асып һалынған:

Миңә лә кәрәк Аҡбуҙат,
Булат ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ.
Кешелеккә, тереклеккә
Минән дә тейеш сауап.

Был юлдарҙы шағирәнең поэтик декларацияһы һымағыраҡ та ҡабул итергә булалыр, бәлки.

«Балҡыш» тигән шиғырҙы ҡобайыр менән уның эпиграфы ғына бәйләп тора тиһәк, һис тә яңылыш булмаҫ. Шиғыр дастанда тәүгеләрҙән иҫәпләнһә лә, уға эпиграф итеп ҡобайырҙың һуңғы юлдары һайланған: «Урал батыр үлгән һуң гүре балҡып торған, ти». Дөйөм алғанда, был әҫәрҙә һүҙ йәшәү мәғәнәһе хаҡында, кеше һәм кешелек сифаттары тураһында бара. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, донъяла ҡомһоҙҙар ҙа күп, залимдар ҙа етерлек, аждаһалар ҙа юҡ түгел, йыртҡыстар ҙа тулып ята. Ундайҙар – авторға ят күренеш, уның ҡан дошманы. Ул, киреһенсә, ҡәбере юғалһа ла шөһрәте балҡығандарҙы, физалыҡтан үрнәк ҡалдырғандарҙы, яманлыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап биреүселәрҙе, хаҡлыҡ өсөн йәндәрен дә йәлләмәгән ҡаһармандарҙы үҙ итә, алға ала, яҡын күрә. Уның өсөн: «Бер тинлек тормай ерҙә рухи көсһөҙ әҙәмдәр». «Кәләш тигән йәншишмәне…» шиғырында был идея оторо ла көсәйтеп ебәрелә. «Милләтенең тоҡомдарын ҡорота тик бахырҙар», «Ғүмер сығанағын һәр саҡ оҙайта ҡаһармандар», «Ышанмайым

бахырҙарға, ышанам батырҙарға…», «Ышанмайым бисараға – хәйерсе ялсыһына» тигән юлдар шулай уйларға нигеҙ бирә. Был юлдарға «Үрсемәйҙәр асмандарҙа…» тигән шиғырҙан «Үрсетәйек халҡыбыҙҙы – ерҙә башҡорт нәҫелен», «Йәшәтәйек милләтте беҙ, уның өсөн йәшәйек», «Ялғайыҡ беҙ ерҙә саҡта быуындарға быуынды» кеүек саҡырыуҙар килеп өҫтәлә.

Йәиһә «Тылсым таяғы»на күҙ һалайыҡ. Шиғырға эпиграф итеп бындай юлдар алынған: «Ул таяҡтың даны шул: һыуға төшһәң, батмаҫһың, утҡа инһәң, янмаҫһың». Әҫәрҙең лирик героиняһы, бөтәһе менән дә, хатта Аллалар менән дә хакимлыҡ итеүсе серле таяҡты эҙләп, тормош серенә яуап табырына шикләнмәй, сәмләнеп китеп, ғазаплы был юлда хатта көлгә-күмергә әйләнергә лә риза. Тик авторҙың әйтер төп һүҙе алдараҡ: тылсымлы таяҡ – һәр кемдең үҙендә икән дә баһа; ул – ҡөҙрәт, ул – ҡеүәт, «һәр кемдең терәге – үҙенең теләге», сөнки «теләгән – таш яра, тауҙарҙы аҡтара», «хыялға юл таба», «барыбер асыҡлай донъяның ялғанын».

Урал батырҙан ҡала, «Асылған серҙәр»ҙә иң йыш телгә алынған мифик образдарҙың береһе – Аҡбуҙаттыр. «Эҙләү», «Батыр аты», «Һомай шарты», «Етмеш батман таштай илем…», «Ямантау», «Төлкөләрҙе аулай аҡ шоңҡарҙар…», «Үкенес», «Йән ҡошо», дастанды ослап ҡуйыусы «Аҡбуҙат» исемле шиғырҙар быға асыҡ дәлил. Бер уйлаһаң, бында ғәжәпләнергә әллә ни урын да юҡ: Аҡбуҙат образы ҡобайырҙа ла ҙур урын биләп тора бит. Уның «Урал батыр»ҙан үҫеп сыҡҡан мөстәкил ҡобайырҙың баш геройы булып китеүе лә юҡтан ғына түгелдер.

Ҡобайырҙарҙағы шикелле, «Асылған серҙәр»ҙә лә Аҡбуҙат образын күҙаллау өсөн төрлө алымдар ҡулланылған. «Батыр аты» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул башлыса автор күҙлегенән сығып, уның һүҙҙәре менән тасуирлана: Аҡбуҙат – батыр аты, ул үҙенә торошлоно ғына юлдаш итә, шуға ла уны тик саф йөрәкле һәм намыҫлы ир-егет кенә эйәрләй ала, ул ир-егет иһә байраҡсы, орансы, көрәшсе булырға тейеш:

Майҙандарға сығыу өсөн
Үҙ батырын ул көтә.
Үҙен һынатмаҫты ғына
Эйәрендә йөрөтә.

«Батыр аты»нда Аҡбуҙат образы икеләтә символ дәрәжәһенә күтәрелә. Сөнки шағирә уны батыр аты ғына түгел, ваҡыт аты итеп

тә күрһәтә: үҙ һынауын үткәргәндә ул «кемде эйәренән ата, кемде ергә түңкәрә». Ә бына «Һомай шарты» шифырында Аҡбуҙат икенсе төрлөрәк кәүҙәләнә: Урал батыр менән Һомай араһындағы һынашта ул төп ролде уйнаған тере кеше һымаҡ хәрәкәт итә. Дастандың иң һуңғы шифырында иһә автор йәнә публицистик алымға күсә һәм, тағы бер быуаттың тамамланып килеүенә ишаралап, «Аҡбуҙатҡа юлдашлыҡҡа ирҙәр тыумаған әле» тигәнерәк ҡәтғи һығымта сығарып ҡуя. Шифырҙы тамамларҙан алда бик һәйбәт, бик аҡыллы киҫәтеү ҙә яһала: киләсәктә Аҡбуҙатҡа юлдаш буласаҡ кешеләр уны «тәүләп эйәрләүсе Урал батыр икәнен» онотмаҫҡа тейештәр. Быны иһә, үткәндәргә ҡара күҙлек аша түгел, ә ихтирам менән ҡарарға саҡырыу тип аңларға кәрәктер, сөнки, ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, донъя беҙҙән генә башланмай бит.

Әлбиттә, «Асылған серҙәр»ҙә Т. Ҡарамышева ныҡыша-ныҡыша тылҡыған фекерҙәр менән тулыһынса ризалашыу мотлаҡ түгел. Уларҙың ҡайһы берҙәренә икеләнеп ҡарарға, ә бәғзеләре менән хатта бәхәскә инергә мөмкин. Әйтәйек, дастандың башынан алып ахырына тиклем фанилыҡ – күҙ асып йомған ара, баҡыйлыҡ – мәңгелек, кешенең тәне генә үлә, ә йәне ҡайҙалыр осоп йөрөй кеүегерәк ҡараш алға һөрөлә. Быға ышаныу-ышанмау – һәр кемдең шәхсән эше. «Ышаныс» шифырындағы «Ғазаплайһы килгән меҫкен ҡолдарына, йә булмаһа, биргәндер ул оҙон ҡартлыҡ» тигән һүҙҙәр менән дә килешеүе ауыр. Бында әхлаҡ ҡағиҙәләренең ябай талаптары боҙолғанға оҡшап тора. Әммә, нисек кенә булмаһын, «Асылған серҙәр» дастаны – «Урал батыр» ҡобайырының үлемһеҙлеген һәм әҙәбиәтебеҙҙе яңынан-яңы идеялар менән һуғарып тороусы иҫ киткес бай сығанаҡ икәнлеген тағы бер тапҡыр раҫлаған асыҡ миҫал ул.

Т. Ҡарамышева өсөн үткәндәрҙең серенә төшөнөү – үҙмаҡсат түгел. Шағирәне бөтәһенән дә элек бөгөнгө ысынбарлыҡтың тамырҙары ҡыҙыҡһындыра, кеше менән кеше, милләт менән милләт, ил менән ил, ҡитға менән ҡитға араһында барған талаш-тартыштарҙың, ыҙғыш-бәрелештәрҙең, ҡан ҡойоштарҙың сәбәбен эҙләй ул. «Йән сере» исемле шифырында, мәҫәлән, «Таң ҡалдым мин әкиәткә йәшерелгән хаҡлыҡҡа» тип бөтә тауышҡа иҡрар итә, «Төлкөләрҙе аулай аҡ шоңҡарҙар…» һәм «Ышаныс» тигән шифырҙарында иһә «Булған заман: йыртҡыс бурыстарын атҡарған тик ерҙә йыртҡыстар», «Ҡай дәүерҙән, кеше, һин йыртҡысһың? Ҡасан әүерелдең аусыға?», «Ер һөрәнләй таланыуҙан, көсләнеүҙән. Иҫ китерлек

әҙәм-йыртҡыс эштәренә!» тип оран һала. Шағирәнең күңеле төпкөлөнән бәреп сыҡҡан ошоға тартым риторик һорауҙарҙы, уның мейеһен ҡайнатҡан уй-фекерҙәрҙе «Васыят», «Ямантау», «Каннибал», «Кешеләшлек», «Йән ҡошо» исемле шиғырҙарында ла осратырға һәм һиҙемләргә мөмкин. Каннибалға мөрәжәғәт итеп ул: «Әҙәм булырҙан да алда һин дә йәнлек булғанһың бит» тип хатта тураға ярып һалған. Таңһылыуҙың «Асылған серҙәр»ен тәрәнерәк аңлар өсөн, уны ҡат-ҡат уҡыйым да ошо риторик һорауҙарға килеп төртөләм. Һәм, асылған серҙәр күп булһа ла, уларҙың асылып бөтмәгәндәре лә байтаҡтыр әле тигән һығымтаға киләм.

Дастанда мөхәббәт темаһы ла ситләтеп үтелмәгән. Хәйер, ул шулай булырға тейеш тә. «Урал батыр»ҙа ла бит тәүге юлдарҙа уҡ Йәнбикә менән Йәнбирҙе күренеп ҡала ла, артабан уларҙың юлын мөхәббәттәрен эҙләп һөйөү утында янып йөрөүсе башҡа геройҙар дауам итә. «Асылған серҙәр»ҙә был тема айырыуса «Алмағас» һәм «Бүләк» тигән шиғырҙарҙа сағыу яҡтыртылған. «Алмағас»та, мәҫәлән, кеше «Мөхәббәттән тапҡан йәмен донъя тигән баҡсаның» тип раҫланһа, «Бүләк»тә иһә шағирә ошо төшөнсәнең йөкмәткеһе тураһында уйлана, уны үҙе лә аңларға һәм башҡаларға ла аңлатырға тырыша:

Уйлайым мин
Ерҙең-күктең уртаҡ булған балаларын,
Кешелектең вәкилдәрен, ағзаларын,
Һәм үлсәйем
Йән менән тән талаптары араларын.
Аңлайым мин
Ләззәт менән ғазаптарҙың,
Кинәнестең, имәнестең
Ҡушылмаһын...
Һәм уларға
Ҡушылырға ҡушылғанын
Йәнбирҙенән – тәңребеҙҙән.

Шиғырҙың «Тойғом килә ошо берҙәм ярашлыҡты баҡыйлыҡта бүләк кенә мәлебеҙҙән» тигән һуңғы юлдарын, фанилыҡта мөхәббәттең ҡәҙерен белергә саҡырыу ауазы тип тә ҡабул итергә булалыр.

Мөхәббәт темаһы Т. Ҡарамышеваның «Күңелем доғалары»на ингән башҡа әҫәрҙәрендә лә сағыла. Уның хатта ошо темаға арналған «Мөхәббәттән донъя яралған» тигән поэмаһы ла бар. Был поэманы үрҙә телгә алынған шиғырҙарҙың дауамы тип тә иҫәпләргә мөмкин. Поэмала тәғәйен генә билдәләнгән сюжет һыҙығы күренмәй. Янып-көйөп мөхәббәттәрен эҙләгән йәиһә уның өсөн көрәшкә сығып йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙер торған геройҙар ҙа юҡ. Тыштан ҡарағанда ул лирик тәүбәгә оҡшай. Асылда иһә «Мөхәббәттән донъя яралған» – лирик тәүбә генә түгел, ә тормош тәжрибәһенән сығып яҙылған фәлсәфәүи нәсихәт. Лирик героиняның мөхәббәт – тәбиғәт ҡөҙрәте, хистәр – ихтыярһыҙ; мөхәббәттән йән бөтөн; мөхәббәт – ғазап аша таҙарыу; яратыу – маҡсат түгел, яратыу – сара; мөхәббәтһеҙ күңел – буш бер һауыт; аҡылдан өҫтөн мөхәббәт кеүек теҙмәләре шулай уйларға хоҡуҡ бирә. Тик был образ, ҡызғанысҡа ҡаршы, тоноғораҡ һәм ҡаршылыҡлыраҡ килеп сыҡҡан. Поэма нигеҙҙә мөхәббәткә мәҙхиә булып яңғыраһа ла, унда мәрҫиәне хәтерләтеп ҡуйған юлдар ҙа юҡ түгел. Композиция кәүшәклеге лә (әҫәр бер-береһенә бик үк йәбешеп бармаған айырым шиғырҙарҙан тора) быға ыңғай йоғонто яһамай, әлбиттә.

Әммә, һанап үтелгән бөтә дәғүәләргә лә ҡарамаҫтан, лирик героиняның шаҡтай бай тормош тәжрибәһе туплап өлгөргән, ошо илаһи күренештең шатлығын да, хәсрәтен дә берҙәй татыған, берҙәй кисергән шәхес икәнлеге бәхәсһеҙ. Был фекерҙе дәлилләү өсөн уның «Хәсрәтемде эстем шатлыҡ ҡушып. Шатлығымды эстем хәсрәт ҡушып» тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү ҙә етәлер. Тормошҡа, уның көтөлмәгән боролмаларына һәм һикәлтәләренә, атлаған һайын тыуып ҡына торған ҡаршылыҡтарына һәм ҡатмарлыҡтарына лирик героиняның үҙ ҡарашы, үҙ баһаһы:

Баһаларға барын өйрәндем мин.
Китәрмәйем бәхет ҡәҙерен.
Был донъяла бер ни бушҡа түгел,
Ҡайтарам тик күҙ-йәш әжерен.

Мөхәббәт тип аталған абстракт төшөнсәнең йөкмәткеһен һәм мәғәнәһен, кешенең аңына, уның бөтә булмышына тәьҫир итеү көсөн лирик героиня мөмкин тиклем тулыраҡ һәм тәрәнерәк аңларға тырыша. Был иҫерткес тойғоноң мәле-мәле менән аҡылдан өҫтөн булып ҡуйыуы ла инҡар ителмәй:

Мин ғәйепле түгел яратҡанға,
Мөхәббәт бит миңә буйһонмай.
Ул ирекле, азат, осҡан ҡоштай,
Иркен донъяларҙы тарһынмай.

Ризалыҡ һорамай килә,
Бәхилләшмәй китә ул.
Бурандарҙы яра-яра,
Яҙҙай килеп етә ул.

Шуныһы мөһим: лирик героиня тоғролоҡло йәренең хыянатын илай-илай кисерһә лә, ул барыбер мөхәббәткә ҙур өмөттәр бағлай, уның иҫ киткес эске бер көскә эйә булыуына ышанысын юғалтмай, сөнки донъяның мөхәббәттән яралғанын ҡобайырҙар аша ғына түгел, үҙ тәжрибәһенән сығып белә:

Һүнгем килмәй һөйөү ғазабынан,
Янғым килә уның утынан.
Яратырға мин бит өйрәнәмен
Йәшәү асылынан, ҡотонан.

Мөхәббәт тураһында, уның ҡөҙрәте, йәшерен мөмкинлектәре хаҡында һүҙ башлап, поэманың тәүге юлдарында уҡ әле автор: «Был донъяны һәләкәттән ҡотҡарһа ул ҡотҡарыр», – ти. Яңғырашы менән ифрат матур, йөкмәткеһе менән аҡыллы һәм төплө был фекер билдәле рус яҙыусыһы Ф.М. Достоевскийҙың «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тигән һүҙҙәренә ауаздаш. Әгәр уйлай китһәң, мөхәббәт – матурлыҡ сығанағы ла бит. Батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡтың да нигеҙ ташы. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: мөхәббәттең дә, матурлыҡтың да донъяны һәләкәттән ҡотҡарырға көсө етер дәүер алдараҡтыр әле – бөгөнгә иһә кешелек донъяһы үҙ үҫешенең бик түбән баҫҡысында тора һымаҡ. «Күңелем доғалары»ндағы «Еләк йыйған һылыу» поэмаһын уҡыған быға тағы бер тапҡыр ышанып ҡуйырһың.

«Мөхәббәттән донъя яралған» шикелле айырым-айырым шиғырҙарҙан торһа ла, сюжеты һәм композицияһы йәһәтенән «Еләк йыйған һылыу» күпкә уңышлыраҡ күренә. Тәрән лириклыҡ менән һуғарылған был поэма «элек һәм хәҙер» тигәнерәк сағыштырыуға ҡоролған – уйҙары менән лирик героиня үҙенең балалығына әйләнеп

ҡайта ла шул осорҙан алып бөгөнгө көнгә тиклемге арауыҡта уның тыуған төйәгендә булып үткән үҙгәрештәргә ҡараш ташлай. Тик ошо урында бер-береһен асыҡларға ярҙам итерҙәй ике иҫкәртмә лә яһап китергә кәрәктер. Беренсенән, «Еләк йыйған һылыу»ҙа тормош күренештәре киң планда, ҡолас йәйеп һүрәтләнмәй һәм автор үҙ алдына ундай бурыс та ҡуймаған – уны бары тыуған төйәгенең тәбиғәте ҡыҙыҡһындыра. Икенсенән, тәү ҡарамаҡҡа әҫәрҙә һүҙ тыуған төйәк тураһында ғына барған һымаҡ тойолһа ла, асылда иһә ул беҙҙең бөтә булмышыбыҙға ҡағыла һәм унда күтәрелгән мәсьәләләрҙең мөһимлеге бер төйәк мәнфәғәттәре менән генә сикләнмәй. Шуғалалыр, Т. Ҡарамышеваның был поэмаһы нимәһе менәндер Р. Бикбаевтың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!»ен дә хәтерләтеп ҡуя.

«Еләк йыйған һылыу»ҙа лирик героиня ике юҫыҡта хәрәкәт итә, дөрөҫөрәге – бер үк образ ике төҫкә инә. Төҫтәштәрҙең береһе ҡасандыр бай тәбиғәт ҡосағында туйғансы уйнап, көн оҙоно һыу инеп, итәк менән балыҡ һөҙөп, сеүәтә менән еләк йыйып йөрөгән. Өй-ҡураға терәлеп үк тигәндәй йәйрәп ятҡан тау битендә еләклек шундай шәп булған, әсәһе ҡушҡанды һәр саҡта ла һөйөнә-һөйөнә үтәргә күнеккән һылыуҡай хатта самауыр ҡайнап сыҡҡан арала бер сәйлек еләк йыйып килтерергә өлгөргән. Унан һуң, сирәмлеккә түшәлгән ашъяулығы тирәләй теҙелешеп ултырып, «ҡояш йылыһы ла һүрелмәгән» еләк менән сәй эсер булғандар. Был – элек. Ә хәҙер – бөтөнләй башҡаса: «Ағарышып ята, мәйет кеүек, сауҡалыҡтан ҡалған һөлдәләр»; «Тауҙан тәгәрәгән ҡомташ баҫты урман шишмәһенең тамағын»; «Элек бәпкә көткән сирәмдәрҙең ҡара саңы ята әйләнеп»; «Билбуарҙан үҫкән үләнлектән тороп ҡала бары әремлек»; «Саң да туҙан… Тупраҡ үлеп бөткән. Сирәм дә юҡ ултырып әрнерлек»; «Саң да туҙан… Был имгәнгән ерҙә шайтан таяҡтары үҫкәндәр». Бына шуға ла лирик героиня: «Тыңлайһыңмы? Бүтән түҙалмайым, һөйләр һүҙем һиңә күбәйҙе», – тип үҙенең бала сағындағы төҫтәшенә мөрәжәғәт итергә мәжбүр булған да инде. Лирик героиняның төҫтәшенә һөйләгән һүҙе иһә поэманың йөкмәткеһен тәшкил итә.

Был «һүҙ», үрҙә билдәләгәнебеҙсә, айырым шиғырҙарҙан тора. Яңғыраштары, тәғәйенләнештәре, тышҡы һүрәттәре һәм эске һулыштары буйынса улар төрлө. Ерҙә тереклек итеүселәрҙең тәбиғәт ҡанундарын һанға һуҡмауҙары һөҙөмтәһендә килеп тыуған ҡаршылыҡтар тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙар ҙа бар («Ер ҙә – әсә. Әммә был

баҫыуҙар түлһеҙ ҡалдырылған ҡатындай»; «Кешелекте ҡотҡарыу юҡ эскән һыуын бөтөрөп»; «Иң ҙур аҡыллылыҡ – миһырбанлыҡ, үлем түгел, йәшәү ҡоралы»; «Тупраҡ – ҡарыны ул кешелектең, тупраҡһыҙ беҙ, тимәк, япраҡһыҙ»; «Аяҡ табанында тупраҡ илай – таланған ер үҙе аслы-туҡлы»). Ер-һыуыбыҙға, ғөмүмән, бөтә мөхитебеҙгә һағыраҡ, мәрхәмәтлерәк булырға өндәгән өгөт-нәсихәттәр ҙә етерлек («Ни мәғәнә инеш ҡороп бөтһә, юҡҡа сыҡһа сауҡа, еләклек?»; «Бөгөн килеп бына ошо тупраҡ үҙе мохтаж беҙҙең ярҙамға»; «Кешегә һәр ваҡыт бер иман кәрәк… Кешегә һәр ваҡыт тәбиғәт кәрәк»; «Әйтмәйем мин ниғмәт түгел тип тупраҡты, – һәр беребеҙ ҡара ерҙән ризыҡлана»). Публицистик пафос менән һуғарылған саҡырыуҙар ҙа осрай («… Энә алмаштырһын бешәлектәр, ҡурпылаһын ерҙә бесәнлектәр, күкрәп үҫһен бөтә сәсеүлектәр, сауҡалыҡтар еләк яңыртһын…»; «Ағыуланды тупраҡ, ялҡынһынды, эй кешеләр, нимә эшләнек?»; «Еләк тиргән ҡыҙый, өндәш миңә! Бәлки, берәй яуап табылыр: ҡасандан һуң барса кеше заты изге күреп ергә табыныр?»; «Күпме талар тағы ерҙе кеше? Иблислеккә күпме ышаныр?»). Лирик сигенеүҙәргә тартым юлдар ҙа күҙгә салынып китә («Еләкһеҙ тау, бер ҡайтаһы килә һин еләкле булған мәлдәргә. Еләк һалып сәйҙәр эске килә, ашъяулығым түшәп сирәмгә»; «Тупраҡ һымаҡ, мин дә һәр яҙ сәскәләргә әйләнәм. Бер өҙлөкһөҙ үҙ еремде яратырға өйрәнәмен»; «Ҡороғанда илдә тәрән һыуҙар, күңел һайығыуын кисерәм мин»). Хәйер, «Еләк йыйған һылыу» – лирик поэма ла инде. Әҫәрҙә автобиографик һыҙаттар ҙа юҡ түгел, шикелле.

Поэманың күҙгә бәрелеберәк торған тағы бер үҙенсәлеге: шиғырҙар, темаларына ҡарап, хатта үҙҙәренең үлсәүҙәре һәм интонациялары менән дә бер-береһенән айырыла. Әгәр һүҙ тормош фәлсәфәһе, өгөт-нәсихәт юҫығында барһа, ундай шиғырҙар үҙенән-үҙе һуҙып, ҡабаланмайынса, мейегә һеңдереп уҡыуҙы талап итә. Публицистик рухтағылары иһә сатнап тора һәм уларҙы уҡыуы ла күпкә еңелерәк. Ә инде лирик планда яҙылған юлдарҙан йәшлек һағышы ғына түгел, эске бер йылылыҡ та бәреп торған һымаҡ. Йыйып ҡына әйткәндә, Т. Ҡарамышеваның «Еләк йыйған һылыу»ы – мөхитебеҙҙе һаҡларға саҡырып һуғылған набат ул. Һәм был поэма ошо темаға яҙылған башҡа әҫәрҙәр араһында үҙенең тейешле урынын алыр тип ышанғы килә.

Дастан менән поэмаларҙан тыш, «Күңелем доғалары»нда байтаҡ урынды шиғырҙар биләп тора. Улар, темалары буйынса бик үк

уртаҡлыҡ һиҙелмәһә лә, дүрт бүлеккә тупланған. Шиғырҙар нигеҙҙә һуңғы йылдарҙа ижад ителгән – элекке йыйынтыҡтарҙан күскәндәре һирәк осрай. Авторҙың бөтә шиғырҙар аша ла тип әйтерлек ҡыҙыл еп булып үткән төп маҡсаты – Аҡыл менән Хисте бер тәртәгә егеп, донъяны танып белергә ынтылыу, йәшәйештең серҙәренә төшөнөп, уға башҡаларҙы ла төшөндөрөргә тырышыу. Шуға күрә «Күңелем доғалары»на ингән шиғырҙарҙың күбеһен хис-тойғоларға төрөлгән тормош һабаҡтары тип баһалаһаҡ та, хата булмаҫ. Һүҙ бушҡа яңғырамаһын өсөн, уларҙың ҡайһы берҙәрен һанап та китергә мөмкин: «Дегәнәк», «Тәүбәгә килеү», «Шатлыҡ төҫө – алһыу…», «Дошмандарым», «Хыял», «Һынау», «Сәскә булып үҫмәй сәнскәк…», «Ташландым мин тормош даръяһына…», «Бер ҡараһаң, күңел ҡояшлы…», «Шатлыҡ менән һағыш», «Йәндәшлек», «Хәҡиҡәт».

Ялғайым мин ептең өҙөктәрен.
Ямайым мин күңел йыртыҡтарын.
Тормош булғас, булды барыһы ла,
Һурпалары булды, ҡылсыҡтары.
. . . . . .
Ауырлыҡтың күрҙем шаукымлыһын,
Михнәттәрҙең күрҙем зәхмәтлеһен.
Барыһы ла миңә – әсе һабаҡ,
Барлыҡ насибыма рәхмәтлемен.

Был – «Тәүбәгә килеү» шиғырынан. Ә бына бынаһы – «Ташландым мин тормош даръяһына…» тигәненән:

Ташландым мин тормош даръяһына –
Йөҙә белмәһәм дә ташландым.
Ағым алып китте мин ахмаҡты –
Тулҡындарҙа батмай саҡ ҡалдым.
. . . . . .
Йөҙә беләм инде.
Һөйә беләм.
Тик тормошҡа нисек ярайым?
Ташланыр ҙа инем ташҡындарға…
Юҡ бәхетте ҡайҙан алайым?

«Дегәнәк» менән «Шатлыҡ төҫө – алһыу…» тигән шиғырҙар ҙа ошоға тартым. «Шатлыҡ төҫө – алһыу…»ҙа, мәҫәлән, донъяның йәйғор шикелле төрлө төҫтәрҙән тороуына ишара яһала: мөхәббәттең алһыу төҫлө шатлыҡтары булған һымаҡ, һары төҫлө һағыштары ла була; аҡ бәхеттәр менән ҡара ҡайғылар йәнәш йөрөүсән; юғалтыуҙарһыҙ, хаталарҙан әрнеүһеҙ, үкенеүһеҙ йәки төңөлөүһеҙ, үҙ-үҙеңә рәнйеүһеҙ табыштар ҙа булмай; аҡылға ултырыу ҙа ҡайсаҡ дыуамаллыҡ менән елбәҙәклек аша килә. Былар бөтәһе лә – кешенең сығышы, шәхес юғарылығына күтәрелеү әмәлдәре.

Биш кенә строфанан торған «Дегәнәк» исемле шиғыр ҙа фәһемле. Йәшерәк сағында мөхәббәткә, ғорурлыҡҡа, ләззәттәргә сат йәбешкән лирик героиня ерҙәге бөтә ҡиммәттәрҙең дә әкренләп осһоҙлана, арзаная барыуына төшөнә. Хәҙер инде ул аҡылға ултырған: «Йәбешмәйем бер нигә лә – түгел дә мин дегәнәк!»

Йәиһә бына «Дошмандарым» тигән монологты алып ҡарайыҡ. Исеменән сығып фикер йөрөтһәң, шағирәнең күңеленә ятмаған, уға хөсөтлөк эшләгән, яуызлыҡ ҡылған, бысраҡ атҡан кешеләргә ҡарата белгерткән ҡәҙимге үпкә һүҙҙәрелер тип уйларға булыр ине. Ысынында иһә әҫәр бөтөнләй башҡа нәмә тураһында. Лирик героиня алдында торған иң зур һынау – тормош үзе икән. Ул – яу яланы, йәшәү өсөн ҡырталашыу, сөнки һәр бер боролошта, һәр бер артылышта көтөп тора һине хәүеф-ҡаза. Әлбиттә, әгәр шиғырҙа һүҙ гел ошо тәңгәлдә генә барһа, күңелһеҙ ҙә, аяныс та булыр ине. Ләкин героиня ебеп төшкәндәрҙән түгел. Ул үҙендәге байтаҡ дошмандарҙы бер-бер артлы еңеп сыға. Башта – ҡурҡаҡлыҡты, өркәклекте. Артабан – уңыштарҙан һуҡырайыуҙы, еңеүҙәрҙән миңрәүләнеүҙе. Унан һуң үҙендәге ҡуштанлыҡты һеңгәҙәтә ергә ата, тупаҫлыҡтан ваз кисә. Аҙаҡ килеп, энә менән ҡойо ҡаҙыуҙың, килелә һыу төйгөсләүҙең, иләк менән һауа иләп, һәнәк менән һыуға яҙыуҙың да файҙаһыҙ икәнлегенә төшөнә. Ниһайәт, уның алдына йәнә бер дошман килеп баҫа – ҡартлыҡтың яҡынлашыуын хәбәр итеүсе өн тибрәлеп китә күңеленең алыҫ бер мөйөшөндә. «Иң рәхимһеҙ, иң аяуһыҙ был дошманым алдында ла кеше булып ҡалһам икән. Дөмөктөрә алмаһам да, сигендерә алһам икән», – тип тамамлай монологын шағирә. Ҡайһылай матур әйтелгән! Бына шунан һуң нисек инде Т. Ҡарамышева шиғырҙарында Аҡыл менән Хис бергә атлай, тип әйтмәҫһең. Сер түгел, илдә үҙгәртеп ҡороу «эпопея»ны башланған йылдарҙа беҙҙә үпкә тойғолары менән һуғарылған шиғырҙар күбәйеп китте. Кемдер

кемдәрҙеңдер юлын киҫкән, өлөшөнә ингән; кемдер кемдәрҙеңдер башына һуҡҡан, ауыҙын ҡаплаған; кемдер кемдәрҙеңдер ижадын тотҡарлаған, иркен быуған. Үҙҙәренең шәхсән мәнфәғәттәрен генә яҡларға, уңышһыҙлыҡтарын кешегә япһарырға, сәбәпте гел ситтән эҙләргә күнеккән заттарҙан айырмалы булараҡ, Т. Ҡарамышеваның лирик героиняһы етешһеҙлектәрҙе үҙенән эҙләй. «Дошмандарым» монологы шуныһы менән отошло ла, минеңсә.

Әйткәндәй, Т. Ҡарамышеваның лирик героиняһы тыштан ҡарағанда бик сәмле, үҙ һүҙле кешегә оҡшап торһа ла, асылда ул йомшаҡ күңелле, сабыр холоҡло, инсафлы, халыҡтың ауыҙ-тел ижады нигеҙендә тәрбиәләнеп, этнопедагогика ҡағиҙәләрен тәрән үҙләштергән һәм шул ҡағиҙәләргә һәр ваҡыт тоғролоҡ һаҡлаған шәхес һымағыраҡ күҙ алдына баҫа. Был фекерҙе иҫбатлау өсөн бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Шуларҙың «Минең доғам»дан алынғаны:

Кенә, мәкер бысратмаһын
Йәнемде – тән эйәһен.
Ҡабул итәм бер раббының
Иманын, тәрбиәһен.

Күңелдәге сафлыҡ өсөн
Доғама мин бурыслы.
Дошман әгәр туҡмай икән,
Нигәлер мин торошло.

Был юлдарҙы «Тәүбәгә килеү»ҙән алынған «Йөрәгемдән йолҡоп ташлайым мин нәфрәт, асыу, үсәү, үпкәләрем» һәм «Мөхәббәттән донъя яралған»дан алынған «Рәнйемәйем һис тә һөйгәнемә, ғәфү итәм гөнаһ-яҙығын» тигән һүҙҙәр менән дә ҡеүәтләп ебәргәндә, үрҙә әйтелгән фекерҙең дөрөҫлөгөнә икеләнергә һис кенә лә урын ҡалмаҫ.

Таңһылыу Ҡарамышева шиғырҙарындағы Аҡыл менән Хистең үҙенсәлекле берлеге фәлсәфәүи фекерләүгә юл яра. «Бер ҡараһаң, күңел ҡояшлы…»ла, мәҫәлән, автор «үҙгәрештән донъя йәшәрә» тигән һығымтаға килһә, «Йәндәшлек»тә иһә ул «изге менән яуыз – бер туғандар, мәңге айырылмаҫ юлдаштар» тип раҫлай. Хыялды ла, шатлыҡ менән һағышты ла, хәҡиҡәтте лә фәлсәфәүи юҫыҡҡа күтәреүгә ирешкән шағирә. «Сәскә булып үҫмәй сәнскәк. Ағас булып

үçмәй бәшмәк. Бүрәнәһе ҡыçҡа булғас, һалдар булып аҡмай кәшмәк» тигән юлдарҙың да нигеҙенә халыҡ аңы, халыҡ фәлсәфәһе һалынған. Быға оҡшашлы фекерҙәр «Айырылыу», «Яңы заман», «Замана», «Әйткән һүҙҙәр», «Тарих тәгәрмәсе», «Йөклө ҡатын балаһының…», «Оялар», «Сағым», «Үлем йолаһы» кеүек шиғырҙарҙа ла тулып ята. Шуларҙың тәүгеһе менән һуңғыһына ғына күҙ һалайыҡ. Ҡояш, әкрен-әкрен генә эçеһен кәметеп, яйлап-яйлап ҡына байыған шикелле, әҙәм дә ғүмере менән әҙләп бәхилләшергә, ғүмерлеккә тиеп бирелгәнде тәүлек эсендә тотонмаçҡа, был донъя менән көнләп, айлап, йыллап айырылырға тейеш. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ташҡа ла, ҡағыҙға ла яҙылмаған был ҡанун йыш ҡына үҙенең айышын үҙгәртеп ҡуя, төп йүнәлешенән ситкә тайпыла. Сөнки, көтмәгән-нитмәгән ерҙән, шаулап үçкән имәндәр суҡмарға әүерелә, бер гөнаһһыҙ тимер тупҡа әйләнә һәм, шулай итеп, әҙәм үҙенән-үҙе үлем йолаһын емерә. Шағирәнең: «Үҙ үлеме менән үлһен (кеше), көсләк менән үлмәһен» тигән өндәүендә хаҡлыҡ ята, әлбиттә.

«Мөхәббәттән донъя яралған» поэмаһында бындай юлдар бар:

Мөхәббәттән булам илаһи мин,
Онотамын тормош ваҡлығын.
Талпынғанын тоям күкрәгемдә,
Эйе, ул бит – минең шатлығым.

Ошо мотив Т. Ҡарамышеваның шиғырҙарында ла йыш осрай. Дөйөмләштереберәк әйткәндә, уның шиғырҙары менән күләмле әçәрҙәре араһында тығыҙ идея-эстетик һәм идея-тематик бәйләнеш бар. Минең иçәбем буйынса, йыйынтыҡтағы ҡырҡҡа яҡын шиғырҙы «Асылған серҙәр» дастанының һәм «Еләк йыйған һылыу», «Мөхәббәттән донъя яралған» поэмаларының айырылғыһыҙ өлөшө тип һанарға мөмкин. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен бында атап та китергә була: «Айға морон төртөп, һыу төбөндә…», «Балыҡ – ҡоштоң тиçкәһе…», «Ҡотҡар йәнеңде, кеше!», «Ҡабатланыш», «Кеше», «Еңеллек», «Бешкәксе», «Һыу», «Бала сағым», «Сирәм», «Мин яраттым һине», «Һөйөү – ҡояш», «Ҡабырға», «Мөхәббәттә ҡунаҡтар юҡ…», «Зәрҡум».

Т. Ҡарамышеваның лирик героиняһы мөхәббәттә лә һыната торғандарҙан түгел. Уның йөрәге саф, уйы яҡты, күңеле бөтөн. Мөхәббәттән донъя усағы янғанын яҡшы аңлай ул. Мөхәббәттән яралып, мөхәббәттән тыуғанын да белә. Шуға күрә үзен дә ошо

мөһабәт тойғоно дауам иттереүселәр сафында тоя һәм һөйгән йәндәр өсөн тоташмаған алыҫ ара юҡлығына иманы камил. Мөхәббәттең – ҡорбаны, һөйөүҙең әсире булыуҙан да баш тартмай Таңһылыуҙың лирик героиняһы. Ул – тоғро ла («Мин тоғромон һаман үҙ йәремә, бүтән ҡояш миңә кәрәкмәй»), алсаҡ та («Күңелемә минең ин һин – арба мине, рөхсәт һиңә – арба уйламай ҙа!»). Шул уҡ ваҡытта мөхәббәт уның өсөн – саялыҡ та. «Йөрәк – саҡма тормош саҡмаһына. Йолҡоп ташла, әгәр сағылмаһа, күкрәгеңдән йәнһеҙ һалҡын ташты»,– тип әйтеүҙән дә шикләнеп тормай ул.

«Күңелем доғалары»ның һуңғы битенә еткәс, «Нөктәләр» тигән шиғырға тап булдым. Уны уҡырға керешкәнсе үк, бынан утыҙ йылдар самаһы элек Мәскәү гәзиттәре һәм журналдары биттәрендә ҡыҙып алған «лириктар һәм физиктар» тигән бәхәс иҫкә килеп төштө. Был бәхәс шаҡтай оҙаҡ дауам итһә лә, ҡәтғи генә һөҙөмтәгә киленмәне. Лириктар физик була алмаһа ла, физиктарға лириклыҡ ят түгел тигән бер яҡлыраҡ һығымта менән тамамланды, шикелле. Т. Ҡарамышеваның үрҙә аталған шиғырын уҡып сыҡҡас, бының авторы, образлы фекерләү менән бер ҡатарҙан, аныҡ фәндәрҙе лә үҙ итмәйме икән тигән уй килеп ҡуйҙы. Ысынлап та, геометрияла бит «ике нөктәне һыҙыҡ тоташтыра» кеүегерәк төшөнсә йәшәй. Ләкин һыҙыҡтарҙың төрлөсә булыуы мөмкин: тураһы ла, һыныҡы ла, тулҡынлыһы ла. Дөрөҫ, Т. Ҡарамышева быларын төпсөп тормаған. Шағирә өсөн иң мөһиме – кеше ғүмеренең ике нөктәне тоташтырған һыҙыҡҡа оҡшауы: бер нөктәнән ул башлана, икенсеһендә ослана. Тыуыу менән үлеү араһы – бер һыҙыҡ. Ә ул һыҙыҡтың бер кем өсөн дә тура ғына булмауы былай ҙа аңлашыла.

Бына, ниһайәт, Т. Ҡарамышеваның «Күңелем доғалары» тигән яңы китабын уҡып сыҡтыҡ. Һуңғы һүҙ урынына нимә әйтергә? Күләмле китап. Алдыңа ниндәй ҙә булһа берәй маҡсат ҡуйып уҡыһаң, уны иңләүе аңһат түгел. Шиғырҙарҙың китап биттәренә тыңҡыслап тултырылғанлығын иҫкә алғанда – айырыуса. Әммә, нисек кенә булмаһын, «Күңелем доғалары» – авторҙың уңышы, уның ижад юлындағы бер ҡаҙанышы. Т. Ҡарамышеваның нигеҙҙә традицион шиғриәткә тоғро ҡалыуы ҡыуандыра. Һирәк-мирәк осрай торған рифма ҡытыршылыҡтарын иҫәпкә алмағанда, уның шиғырҙары ла, поэмалары ла, дастаны ла еңел уҡыла һәм һәйбәт тәьсорат ҡалдыра.

Юл ыңғайында шағирәнең өлкән ҡәләмдәштәре һәм үҙ тиҫтерҙәре ижадына иғтибарлы булыуын һәм уларға новаторҙарса ҡарауын да

билгеләп үтергә кәрәк. Был фекерҙе ҡайһы бер миҫалдар менән дә нығытырға мөмкин. Әйтәйек, мәҡәләнең башында уҡ телгә алынған «Ғүмер йәйем» шиғыры үҙенең интонацияһы менән Н. Нәжмиҙең «Өфө йүкәләре»н хәтерләтеп ҡуйһа, «Мөхәббәттән донъя яралған»дағы «Яңғыҙ тыуа әҙәм, яңғыҙ үлә» тигән юлдар иһә шул уҡ Н. Нәжмиҙең «Ғүмерҙең бар ике осо…»на ауаздаш. Ауаздаш, ләкин күсермә түгел. «Тупылдай ямғырҙың тояғы…» тигән шиғыр менән Т. Йосоповтың «Йөрәккәйем китә өҙөлөп» шиғырындағы «Тып-тып итеп, тамсы ергә баҫты, ялтлап ҡына китте тояғы» тигән юлдар араһында ла яҡынлыҡты тоймау мөмкин түгел. Т. Ҡарамышеваның «Үлем йолаһы»нда, шаулап үҫкән имән ҡайһы саҡта суҡмарға әүерелһә, Г. Яҡупованың «Һандуғасым» шиғырында «ағастан да берәү күҫәк юна, ә икенсе яһай сәңгелдәк» һ.б.

Был сағыштырыуҙарым менән шағирҙарыбыҙҙы үҙаллылыҡһыҙлыҡта ғәйепләргә йыйынмайым. Бында осраҡлы оҡшашлыҡ та кире ҡағылмай. Осраҡлы булмаһа ла әллә ни зыян юҡ. Сөнки ижад – ҙур майҙан ул. Унда һәр кем үҙ урынын, үҙ юлын эҙләй, үҙенсә хәрәкәт итә. Ләкин хәүефһеҙ хәрәкәт итеү өсөн башҡаларға ла күҙ ташларға тейеш. Юлың уң булһын тиһәң, бер-береңдән өйрәнеүҙең дә ғәрлеге юҡ. Тик күрмәмешкә һалышырға ғына ярамай. Заманыбыҙҙың оло ғалимы һәм ҡәләм оҫтаһы Ғайса Хөсәйеновтың күптән түгелге «Өлкән хеҙмәттәштәрем» («Ағиҙел» журналы, 1999 йыл, 1-се һан) тигән мәҡәләһендә үҙенең уҡытыусыһы Әхнәф Харисов тураһында әйткән йылы һүҙҙәре быға һәйбәт миҫал да, эйәрергә өлгө лә булырлыҡ. Әйҙә, Таңһылыу Ҡарамышеваның да Аҡылы менән Хисе артабан да бергә атлаһын һәм, ғүмер һыҙығын үткәндә, үҙҙәренең хужаһына шиғриәттә яңы ҡыуаныстар килтерһен.

1999

ҮКЕНМӘЙ УЛ ҮТКӘНДӘРГӘ…

Егерменсе быуатты оҙатҡанда үҙҙәренең иллеләренә аяҡ баҫҡан әҙибәләр араһында Гөлфиә Юнысова ла бар. Ошо айҡанлы ул «Аҡ ямғыр» тигән яңы китабын баҫтырып сығарҙы. Был китапты ысын мәғәнәһендә юбилей баҫмаһы тиергә мөмкин. Автор уға төрлө йылдарҙа ижад иткән шиғырҙарының үҙенә иң ныҡ оҡшағандарын ғына туплаған. Йыйынтыҡҡа шулай уҡ үзбәк шағирәһе Зөлфиәнән, төрөкмән шағирҙары Атаморат Атабаев менән Мәхтүм Ҡолойҙан, рус телендә ижад иткән башҡорт шағиры Дим Даминовтан, сыуаш шағирәһе Рәйсә Сәрбиҙән, рус шағирәләре Людмила Новикова менән Елизавета Зореванан, балҡар шағиры Ҡайсын Кулиевтан, украин шағирҙары Григорий Донец менән Наталка Никулинанан ирекле тәржемәләр ҙә индерелгән.

Китапҡа йәм өҫтәүсе икенсе бер әйбер: уға шағирәнең өлкән ҡәләмдәше, Гөлфиәнең ижадын да, тормош юлын да яҡшы белгән шағир Ирек Кинйәбулатов бик матур баш һүҙ яҙған. «Үҙе ҡанатлы, ижады талантлы» тип аталған кескәй генә был мәҡәләлә шағирәнең бөтә булмышы ус төбөндәге шикелле күрһәтелгән. Теләгән кеше унан үҙенә кәрәк байтаҡ мәғлүмәт таба ала. Ә был бик тә мөһим. Сөнки уҡыусыны әҙәби әҫәр генә түгел, әҫәрҙе тыуҙырыусының үҙе лә ҡыҙыҡһындыра.

Ниһайәт, «Аҡ ямғыр»ҙы ысын мәғәнәһендә юбилей баҫмаһы кимәленә күтәреүсе тағы бер яңылыҡ: шиғырҙарҙы уҡып сығып, китаптың һуңғы битен ябырға йыйынғанда ғына шағирәнең ижады хаҡында Мостай Кәрим, Ғилемдар Рамазанов, Суфиян Сафуанов һәм башҡа әҙиптәр әйткән тос фекерҙәргә тап булаһың. Ул ғына ла түгел: иң аҙаҡтан Гөлфиә Юнысованың төрлө йылдарҙа һәм төрлө телдәрҙә баҫылып сыҡҡан китаптарының хатта дөйөм исемлеге лә бирелгән. Был инде – уҡыусыны баштан-аяҡ ҡоралландырыу тигән һүҙ. Һуңғы ваҡытта Башҡортостан яҙыусылары хаҡындағы биобиблиографик белешмәләрҙең һирәгерәк сығыуын иҫәпкә алғанда – бигерәк тә.

Йәшермәйем, элегерәк Гөлфиә Юнысованың ололар өсөн яҙған шиғырҙары (ә ул иң тәүҙә балалар әҙәбиәтенә ҙур өлөш индергән шағирә булараҡ билдәле) ялтырауыҡлы һәм яңғырауыҡлы һымағыраҡ тойола ине миңә. Әле бына «Аҡ ямғыр» менән яҡынданыраҡ

танышҡас, быға тиклем уның авторына ҡарата ғәҙелһеҙерәк булғаным асыҡланды. Баҡтиһәң, Гөлфиәнең шиғриәте гел яңғырауыҡлы һүҙҙәрҙән һәм ялтырауыҡлы биҙәктәрҙән генә тормай икән. Әгәр «Көлөү – көлкө түгел» исемле әҫәрҙә лирик героиня, уның шаталаҡлығына ғәжәпләнеберәк ҡараған берәүгә: «Йәшәүемдән бәхет табып, минең әле көлөр сағым», – тип яуаплаһа, «Әсәкәйем һыйыр һауа»ла уның кәйеф-сафаһы көтмәгәндә йөҙ ҙә һикһән градусҡа борола ла ҡуя: «Донъяларым – ҡара болот, күңелемдә әсе төтөн», – ти ул. «Әсәй әллә сәскә телен белә…»лә: «Һыйпа әле, әсәй, баштарымдан, – наҙҙарға бит мин дә һыуһаным», – тип ялбарыуҙан да тартынып тормай.

Гөлфиә хыялында яралған лирик героиняның күңелдәре ҡатҡан мәлдәр ҙә юҡ түгел («Диңгеҙ еле»). Уның уйҙарын, өмөтөн нахаҡ һүҙҙәр өтөп киткән саҡтар ҙа булғылай («Ҡыуанма!»). «Үҙ яҙымды күрмәй ҡалғанғамы, йәй етһә лә, һаман яҙ һымаҡ» тип көрһөнөп тә ҡуйғылай ул («Ҡыҙҙар йырлап уйындарға бара…»). Күңел күгенең ҡара болотҡа оҡшап китеүе лә ят түгел Гөлфиәнең лирик героиняһына («Көҙгө ямғыр»). Таш атҡанға гел аш менән яуап биргәнгә күрә, байтаҡ туҡмаҡ алыуын да йәшермәй ул («Аш һәм таш»). Өҙөп кенә әйткәндә, әҙәм балаһына хас уй-хистәрҙең, кисерештәрҙең көллөһөн осратырға мөмкин Гөлфиә Юнысова шиғриәтендә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: лирик героиняның кәйефе ниндәй генә булмаһын (хатта кактус һымаҡ энәләрен тырпайтып торғанда ла) ул барыбер үҙенең асылына – шаталаҡлығына хыянат итмәй, үҙе булып ҡала:

Күҙ йәштәрем аҡһын, әйҙә,
Йөрәктәрем яңғансы.
Күрһәгеҙ ҙә йыуатмағыҙ:
Илайымсы ҡаңғансы.

Бынан ҡырҡ йылдан ашыу элегерәк яҙған бер мәҡәләһендә быуатыбыҙҙың мәшһүр шағиры А. Твардовский бындайыраҡ фекер әйткәйне: «Күпселек кешенең аңында Тыуған ил, Ватан төшөнсәһе үҙенең киң мәғәнәһендә бәләкәй ил, атайсал, тыуған тупраҡ төшөнсәләре менән бергә йәшәй. Сөнки һәр кемдең тәү башлап күҙе асылған һәм аяҡ баҫҡан үҙ төйәге – районы, ҡалаһы йәиһә ауылы була. Ошо бәләкәй ил үҙенең айырым йөҙө, матурлығы менән кеше күңеленә балалыҡ осоронда уҡ уйылып ҡала һәм йылдар үткәс ул оло илгә килеп ялғана. Бәләкәй ил, шәхсән ил төшөнсәләре, – тип дауам

итә фекерен “Василий Теркин” һәм “Алыҫтан – алыҫҡа!” поэмаларының авторы, – әҙиптәр өсөн дә зур әһәмиәткә эйә. Бәгзе яҙыусыларҙы уҡығанда уларҙың хатта ҡайһы тарафтарҙа тыуып үҫкәнлеген дә самалай алмайһың. Ҡайҙан улар: көньяҡтанмы әллә төньяҡтанмы, ҡалананмы әллә ауылданмы? Уларҙың үҙ йылғаһы йәки йылғасығы булғанмы? Ғөмүмән, улар берәй ваҡыт балалыҡ осорон кисергәнме? Ә бына ысын әҙиптәрҙең әҫәрҙәрендә уларҙың бәләкәй илдәренә хас һыҙаттар әллә ҡайҙан ярылып ята».

Ошо талаптарҙан сығып ҡарағанда, Гөлфиә Юнысованың ижадына һүҙ тейҙерерлек түгел, минеңсә. «Аҡ ямғыр» йыйынтығына ингән шиғырҙарҙың байтағы: «Беҙҙең авторыбыҙ гүзәл Башҡортостан ерендә, Урал ҡуйынынан урғылып сыҡҡан йәмле Дим буйҙарында тыуып үҫкән» тип ҡысҡырып торған шикелле. Әгәр «Ҡайыным» тигән әҫәрендә шағирә: «Дим ярында шаулай бер ҡайынҡай, тамырҙары – минең йөрәктә», – тип иҡрар итһә, «Һарыш ауылы йыры»нда иһә: «Дим буйҙары, тыуған ауылым китмәй күҙ алдарымдан. ‹…› Иң ҡәҙерле, иң ғәзиз ер – тыуып үҫкән яҡ ҡына», – тип асыҡтан-асыҡ үҙенең уй-хистәре менән уртаҡлаша. «Әлшәй вальсы», «Дим ташҡанда», «Ғүмер», «Буранда», «Осрашыу», «Ҡолай тауы», «Дим буйҙары хәҙер гөрләп тора…», «Тыуған тупраҡ», «Моң шишмәһе», «Тыуған яғым – Дим буйҙары…», «Әйҙә, киттек Дим буйына», «Кем уйлар?», «Ҡашҡатауҙа», «Тыуған ерем» һәм шуның кеүек башҡа бик күп шиғырҙар аша Гөлфиә Юнысованың, ысынлап та, тыуған-үҫкән яҡтарынан айырылғыһыҙ икәнлегенә, унан һут алып йәшәгәнлегенә ышанаһың. «Аҡ ямғыр» йыйынтығының авторы өсөн тыуып үҫкән яҡтарҙың хатта бурандары ла үҙенә башҡа – уларҙан ниндәйҙер йәм таба шағирә. Бала сағынан күңел түренә инеп ҡалған бер үр иһә уға әле булһа бейек тау булып тойола. «Ҡолай тауы – иң бейек тау, бар донъяла бергенәм. Офоғома киңлек биргән тыуып үҫкән ергенәм», – тип ғорурлана ул ауылы осондағы шул үрҙе хәтерләп. Ә икенсе бер әҫәрендә шағирә тыуған яҡтарын моң шишмәһенә тиңләй, уйҙары менән шул шишмәнән йәшәү дәрте һәм ижад сәме алырға ҡайтыуын белдерә:

Тау шишмәһе кеүек сылтырап аҡҡан
Моңшишмәнән моңдар эсәмен.
Тоям, тоям шул моңдарҙың көсө
Нисек итеп миңә күскәнен.
. . . . . .

Күңелемдә моңдар ҡайнай хәҙер,
Ашығайым, ҡайта һалайым,
Һәр юлына шул моңдарҙы һибеп,
Берәй моңло шиғыр яҙайым.

Әйтергә кәрәк, әле өлөшсә файҙаланылған «Моң шишмәһе»н былай өҙөп-йолҡоп түгел, ә бөтөн килеш уҡығанда, шағирә Дим буйҙарын, уның ярында имән шаулауын, шул имәндә былбыл һайрауын, ниһайәт, әсәһе һынын күңеле сарсағанда ғына иҫенә төшөрә икән тигәнерәк уй ҙа тыуып ҡуйыуы ихтимал. Әгәр ундай уй тыуа ҡалһа, ул дөрөҫлөккә тап килмәҫ. Сөнки Г. Юнысова үҙе лә, уның лирик героиняһы ла тыуған төйәгенә, тыуған еренә, тыуған тупрағына тәненең бөтә күҙәнәктәре, йөрәгенең бөтә тамырҙары менән барып тоташҡан. Ҡала кешеһе булып китеүенә инде күпме йылдар уҙыуға ҡарамаҫтан, холҡо-фиғеле, уй-хистәре, ғөмүмән, бөтә асылы менән ул барыбер ауыл йырсыһы булып ҡала. Шуға ла уның тыуған яҡтарын, унда тереклек итеүсе яҡташтарының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йәшәү ҡанундарын, тын алыштарын, йөрәк тибешен бөтә нескәлеге менән тоя белеүе һис тә ғәжәп түгел. «Аҡлар кеүек» тигән шиғыр ҙа ошо фекерҙе раҫлап торғандай:

Аяҡтарым кинәт тайып китһә,
Дуҫ-иштәрем танымайса үтһә,
Яҙмыш торһа минән әсе көлөп,
Тыуған яғым барыбер аҡлар кеүек.

Ә онотһам ҡайҙа тыуғанымды,
Тәпәй атлап киткән юлдарымды,
Дим һыуҙарын, туғай-болондарын…
Юҡ! Аңламаҫ мине тыуған яғым.
Ғәфү итмәҫ…

«Әсәкәйем һыйыр һауа» тигән шиғыр үрҙә бер тапҡыр телгә алынғайны инде. Гөлфиә Юнысованың ижады тыуған тупрағынан айырылғыһыҙ икәнлегенә шик ҡалмаһын өсөн, шул шиғырға йәнә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Ҡарап тороуға әҫәрҙең нигеҙенә һалынған тормош материалы менән юғары мотивтарҙы һәм нескә хистәрҙе үҙ итеүсе шиғриәт араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ һымаҡ. Донъя

мәшәҡәттәренән бер аҙ кәйеф-сафаһы ҡырылып киткән лирик героиня күңелен әсе төтөндән арындырыу ниәте менән тыуған йортона ҡарай юл тота. Ҡайтып етеп, таныш ихатаға килеп инеүе була, киске тынлыҡта гөбөрләтеп һыйыр һауып ултырған әсәһен күрә. Һәм шул саҡ бөтә ҡыҫыр көйөгө, «әсе төтөн, һөмһөҙ һөрөм» ҡул менән һепереп ташлаған шикелле юҡҡа сыға ла ҡуя:

Ҡайҙа осто ҡара болот? –
Яп-яҡты бит бар тирә-яҡ.
Әсәм һауған аҡ тамсылар
Күңелемә тула һымаҡ.

Һөт гөбөрләүен автор, бер ҡараһаң, өй алдында наҙлы моңдар яуыуына тиңләй; икенсе ҡарағанда иһә, «һөт еҫенән аңҡый һауа, йәнгә дауа» тип, ихлас ҡыуана. Шулай итеп, ауылдың күрер күҙгә ябай ғына тойолған бер хәл-ваҡиғаһын Г. Юнысова шиғриәт кимәленә күтәргән дә ебәргән – мотивтар юғарылығы ла, хистәр нескәлеге лә етерлек унда. Был теманың әҙәбиәтебеҙҙә тәү тапҡыр яңғырауы ла бик ихтимал.

Йә булмаһа «Күл буйҙары – бәпкә үлән…» тигән шиғырҙы алып ҡарайыҡ. Тышҡы яҡтан был әҫәр ҙә ябай ғына күренә. Күләме ҙур түгел. (Ғөмүмән, Гөлфиә Юнысова кеше еләткес оҙон шиғырҙар яҙырға яратмай, шикелле.) Теле йүгерек. Рифмалар теүәл: һәр строфалағы икенсе һәм дүртенсе юлдарҙың һуңғы һүҙҙәре, айырыуса шул һүҙҙәрҙең һуңғы ижектәре, бер-береһенә һылашып торған һымаҡ хатта. Шиғриәтебеҙҙә яҡынса ғына ауаздаш, мәғәнәһе самалыраҡ һүҙбәйләнештәргә ҡоролған аҡһаҡ-туҡһаҡ рифмалар ишәйеп барған бер мәлдә был күренеш, һис шикһеҙ, иғтибарға лайыҡ. Ләкин «Күл буйҙары – бәпкә үлән…» кеүек шиғырҙы яҙыр өсөн ҡәләм шымалығы ғына етмәй торғандыр әле ул. Иң мөһиме – көндәлек тормоштоң ығы-зығылары фонында күҙгә бик үк бәрелеп бармаған кескәй генә фактҡа ла иғтибарлы булыу, уны ваҡытында тотоп алып, дөйөмләштерә белеү оҫталығы кәрәктер. Бының өсөн инде күкрәгеңдә шағир йөрәге тибергә тейеш. Әҙәбиәт ғилеменә хас рәсми тел менән әйткәндә, Г. Юнысованың әлеге шиғыры быуындар күсәгилеше мәсьәләһенә арналған. Тик был мәсьәлә, бәғзе шиғырҙарҙан айырмалы булараҡ, түш һуғып, тамаҡ ярып түгел, ә тыныс ҡына, бик ябай һәм бик үҙенсәлекле хәл ителә:

Бәпкә үләнгә ултырып,
Сер бүлешә инәйҙәр,
Ҡулдарында бәйләмдәре,
Бында ла буш килмәйҙәр.

Арыраҡ – бала-сағалар
«Кем һуҡты»ны уйнайҙар,
Үҙҙәре һиҙҙермәй генә
Инәйҙәрҙе тыңлайҙар.

Ә улары иҫкә ала
Тыуып үҫкән яҡтарын,
Бәпкә үләндә тәгәрәп,
Бәпкә көткән саҡтарын.

Сәнғәтсә, художестволы фекерләү аша халыҡ педагогикаһын халыҡсан һәм шуға күрә лә үтемле итеп кәүҙәләндергән өлгөләрҙең береһе тиер инем мин был шиғырҙы. Тәбиғәт матурлығын күрә һәм аңлай белеү ҙә, йолалар һәм уйындар ҙа, бер быуынды икенсе быуын алмаштырып торһа ла, традицияларҙың һаҡланыуына һәм шул сәбәпле ерҙә тереклек итеүҙең өҙлөкһөҙ сылбырҙы хәтерләтеүенә ишара ла бар бында. Тимәк, уйҙар һәм фекерҙәр тәрәнлегенә ирешеү өсөн шиғырҙың күләме мотлаҡ ҙур, ундағы юлдар һәм строфалар һанының мотлаҡ күп булыуы зарури шарт түгел.

Халыҡ педагогикаһы телгә алынғас, «Әсәм һүҙҙәре» тигән ши_ ғырға ла туҡталып китеү урынлы булыр. Формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә Н. Нәжмиҙең «Шапырынма!»һын хәтерләтеп ҡуйған был әҫәр, ғилми китаптар битендә түгел, ә халыҡ аңында яралып, быуаттарҙан быуаттарға күсеп йөрөүсе әхлаҡи ҡағиҙәләрҙе туплаған күрһәтмәләр йыйынтығына оҡшап тора. Иң алғы планда – намыҫ төшөнсәһе, әлбиттә. Намыҫ – бәхет башы, ти әсә. Шуға ла ул үҙ балаһын намыҫынан тайпылмаҫҡа өндәй. Артабан һүҙ хеҙмәт темаһына күсә һәм уның кеше тормошонда тотҡан урыны һыҙыҡ өҫтөнә алына. Унан һуң әсә балаһының мәрхәмәтле булыуын, кешеләргә һәр саҡ асыҡ йөҙ һәм саф күңел менән ҡарауын теләй.

Һүҙҙең (яҡшыһының да, яманының да) әҙәм балаһына бик көслө тәьҫир итеүен иҫтә тотоп, уны тура бәреп әйткәндә йәнгә уҡтай ҡаҙалыуынан һаҡ булырға кәңәш бирә. Иң аҙаҡтан, һүҙен ослап, әсә

тыуған ергә тоғролоҡто һаҡларға, ерҙә йәшәүҙең ҡәҙерен белергә һәм ғүмерҙе заяға уҙғармаҫҡа саҡыра. Ҡыҫҡаһы, әсә ауыҙынан ағылған аҡыллы кәңәштәр бер лирик героиня өсөн генә түгел, бәлки, был шиғырҙы ҡулына алған бөтә уҡыусылар өсөн дә бынамын тигән тормош һабағы булырлыҡ.

Ошо күҙлектән сығып фекер йөрөткәндә, «Ҡәйнә» исемле шиғыр ҙа иғтибарҙы йәлеп итерлек. Асылда был тема әҙәбиәт өсөн яңыларҙан түгел түгеллеген. Ҡәйнә менән килен араһындағы ябай ҙа, бер үк ваҡытта ярайһы ғына ҡатмарлы ла мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған әҫәрҙәр ауыҙ-тел ижадында ла осрай. Г. Юнысова иһә был традицион теманы үҙенсә хәл иткән: әгәр килен кеше ҡәйнәһенең һәйбәт булыуын теләй икән, ул үҙе лә алама булмаҫҡа тейеш. Шуға ла ҡәйнәһенән уңған киленде ҡәҙер-хөрмәт тулы һүҙҙәре бик тәбиғи яңғырай:

Икәүләп һаҡлайбыҙ йорттo
Бурандан, елдәренән.
Тормош йөгөмдөң күбеһен
Ала ул иңдәремдән.

Халыҡ хәтеренә, ата-бабаларҙан килгән йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә тоғролоҡ мотивы Г. Юнысованың «Ауыл ҡарттары», «Бал тәме», «Киленле йорт», «Көмөш туйҙар», «Ауылдаштарыма», «Инәйҙәр», «Үҙем», «Әсәйемдең күңелендә – турғай», «Үкенестәр» тигән шиғырҙарында ла үҙен һиҙҙереп тора. Лирик героиняның изгелек, әҙәплелек, тыйнаҡлыҡ, инсафлыҡ кеүек әхлаҡи ҡағиҙәләргә табынғанлығын да тойомларға мөмкин был шиғырҙарҙа. «Киләм әле…» тигәнендә уны тойомлайһы ла юҡ – ул туранан-тура әйтеп бирелгән:

Күптәрҙеке менән бер иш юлым,
Эҙләмәнем башҡа яңыһын.
Маҡсатым бер – кеше булып йәшәү,
Ә маяғым – таҙа намыҫым.

Йәнә шул да мәғлүм булһын: шағирә иҫке йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә тоғролоҡ һаҡлап ҡына ҡалмай, уларҙың яңыларын да уйлап сығара. Ошо йәһәттән «Көмөш туйҙар» тигән шиғыр бик үҙенсәлекле.

Билдәле булыуынса, ғаилә тормошона, уның айырым осорҙарына бәйле күп төрлө байрамдар йәшәп килә беҙҙә. Ләкин шуларҙың тик тәүгеһе генә – ике йәш йөрәктең ҡауышыуына арналған туй йолаһы ғына – бөтә шартына еткерелеп, ҡыңғырауҙар тағылған пар аттар менән үткәрелә. Ҡалғандары иһә ғәҙәттә өҫтәл артынан ары уҙа алмай. Ә бына Гөлфиәнең «Көмөш туйҙар»ында бөтөнләй башҡаса – көмөш сәсле «кейәү» менән маңлайына һырҙар теҙелгән «килен», сирек быуат бергә ғүмер иткәндән һуң, йәшлектәрен ҡабатлай: пар аттарҙа, ҡыңғырауҙар тағып, буран туҙҙырып, ауыл урамы буйлап елдерәләр. «Ҙур табынға хужа булған бөгөн килендәре, ҡоҙағыйҙары», «Шатлыҡ-ҡыуаныстар өйгә һыймай, сыға ташып тышҡа, урамға» тип, уғата ла бәҫен күтәреп ебәрә автор көмөш туйҙың һәм уны ойоштороусыларҙың. Был, әлбиттә, әлегә – шиғырҙа. Әммә уның реаль тормошҡа күсеп китеүе лә бик ихтимал.

Г. Юнысова ижадында тәбиғәт темаһы ҙур урын биләп тора. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәктер: шағирәнең пейзаж лирикаһы ла башлыса ауыл мөхитен, тыуып үҫкән яҡтарын тасуирлауға ҡоролған, ә ҡала пейзажы бик һирәк осрай. Был да уның ауылды яҡыныраҡ күреүенән, ундағы тәбиғәтте тәрәнерәк тойомлауынан киләлер, моғайын. «Аҡ ямғыр» йыйынтығындағы шиғырҙарҙы уҡығанда шундайыраҡ уй тыуып ҡуя.

Тәбиғәт күренештәренән шағирәне иң нығ һоҡландырғаны һәм дәртләндергәне – гүзәл Дим, әлбиттә. Уға бик күп шиғри юлдар арналыуы һис тә юҡтан түгел. Сөнки бормаланып-бормаланып аҡҡан Дим үҙе лә, һыу өҫтөндә бейегән күк тулҡындар ҙа, яр ситендәге бөҙрә талдар ҙа, ғорур баҫып торған ҡарт имән менән ҡуш ҡайын да, йылға үҙәнендәге әрәмәлек тә йәмле Дим буйҙарында тыуып үҫкән шағирәнең күңеле түрендә мәңгелеккә уйылып ҡалған. Бәғзе шиғырҙарҙа йылға менән кеше араһында ниндәйҙер оҡшашлыҡты ла һиҙемләргә мөмкин – кеше һымаҡ, Димдең дә төрлө мәле була икән: шаулап-гөрләп, ташҡан саҡтары ла, уйға ҡалып, тыныс ҡына аҡҡан ваҡыты ла. Бәғзеләрендә иһә (мәҫәлән, «Кем уйлар?»ҙа) йылға образы метафоралаштырылып та бирелә. Шиғырҙарының береһендә автор Димде тыуған яғының наҙлы, һылыу ҡыҙына тиңләй.

Әлбиттә, пейзаж лирикаһы бер Димгә генә, төрлө вариацияларҙа уның гүзәллеген данлауға һәм йырлауға ғына ҡайтып ҡалмай. Г. Юнысова шиғырҙарында тәбиғәттең бик күп башҡа күркәмлектәре лә (әйтәйек, тауҙар һәм урмандар, күлдәр һәм шишмәләр, илдең

ҡотон билдәләүсе иген баҫыуҙары һәм хуш еҫ бөркөп торған болондар, ошо мөхитте төйәк иткән йәнлектәр һәм ҡош-ҡорттар) үҙенең тәрән сағылышын тапҡан. Тик ошо урында йәнә бер мәсьәләне асыҡлап китеү маҡсатҡа ярашлы булыр. Минең ҡарашымса, тәбиғәт күренештәре сағылыш тапҡан телəһə ниндәй шиғыр ҙа пейзаж лирикаһы ҡалыбына һыйып бөтә алмай торғандыр ул. Сөнки тәбиғәт күренештәрен шағирҙар йыш ҡына тормоштан тотоп алынған берәй хәл-ваҡиғаны һүрәтләгәндә уҡыусы иғтибарын йәлеп итерҙәй фон сифатында ла ҡулланыусан; тәбиғәт күренештәре менән кешенең эске кисерештәре араһында йәнәшәлек үткәреп, уны образлы фекерләү сараһы итеп файҙаланыу осраҡтары ла байтаҡ. Саф пейзаж лирикаһына килгәндә иһə, ул шиғриәтебеҙҙең һағындырыбыраҡ йөрөй торған ҡунағын хәтерләтə.

Хәйер, был бер башҡорт әҙәбиәтенə генə хас күренеш түгел. Хатта ярайһы ғына бай һәм көслө һаналған рус шиғриәтендə лə (А. Пушкин, И. Тургенев, Ф. Тютчев, И. Бунин, С. Есенин кеүек маһирҙарҙы иҫəпкə алмағанда) пейзаж лирикаһы тулып ятмай. Сөнки пейзаж лирикаһы – шиғриәттең күп көс һалыуҙы талап итə торған шаҡтай ҡатмарлы төрҙəренəн берене. Тəбиғəттең иҫ киткес бай күренештəрен поэтиклаштырыу өсөн уны ихлас күҙəтə һəм бөтə нескəлегендə тоя белеү һələте менəн бер ҡатарҙан, күргəндəреңде һəм тойғандарыңды шундай уҡ нескəлек менəн уҡыусы аңына илтеп еткерерҙəй йəнле һəм күңелгə йəтешле буяуҙар һайлай белеү оҫталығы ла мөһим.

Тəбиғəт күренештəре, уның сикһеҙ күркəмлеге Г. Юнысова шиғриəтендə лə төрлө маҡсаттан сығып, төрлө юҫыҡта һүрəтлəнə. Əгəр «Ҡарҙар яуа», «Əбейҙəр сыуағы», «Ҡырау», «Көҙгө япраҡтар осалар…», «Ирəндек», «Умырзая», «Юл япрағы», «Лəйсəн», «Тупраҡ та, мин дə бик зарығып…», «Түңəрəк күл», «Гөрлəүектəр», «Ҡайын елəге», «Ғəфү итсе, урман», «Йəйге юлда», «Күл буйында аҡ ҡайындар», «Яңғыҙ ромашка», «Ташҡын», «Ҡурпы» ише бер төркөм шиғырында автор тəбиғəт күренештəрен метафоралаштырып, образлы фекерләү аша лирик героиняның күңел торошон, хəл-əхүəлен сағылдырыуҙы бурыс итеп ҡуйған булһа, «Аҡ ямғыр», «Болоттар, болотҡайҙар», «Серле күл», «Ҡарсəскə», «Ҡарт тирəк», «Иген төҫө», «Бөрөлəр уянғанда», «Төн», «Көҙгө урман», «Аҡ сəскəлəр», «Йəшə, имəн!», «Балан», «Ужым», «Көҙгө япраҡтар», «Дим һəм шишмə», «Томра», «Өнһөҙ-тынһыҙ ғына ҡанат елпеп…» тигəн əҫəрҙəрендə

шағирә тәбиғәттең күп төрлө һәм бай буяуҙарын күҙәтеп хозурлана, уның матурлығына һоҡлана һәм шул матурлыҡ тураһында уҡыусы менән уртаҡлаша. Был шиғырҙарҙы ысын мәғәнәһендә саф пейзаж лирикаһы тип атарға мөмкин.

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ тигәндәй, үрҙә яңғыраған фекер ҡоро ҡыуыҡҡа оҡшап ҡалмаһын өсөн, ике төркөмгә бүлеп һаналған әлеге шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китеү фарыздыр. Бына «Әбейҙәр сыуағы»н алып ҡарайыҡ. Ул ни бары өс строфанан тора. Шиғырҙың тәүге ике строфаһы тулыһынса көҙгө тәбиғәттең сағыу бер көнөн тасуирлауға бағышланған; һүрән булһа ла, көн йылы; һуңғы тапҡыр наҙланып, аҡ сәскәләр йылмая; ағастарға еп элеп, үрмәкестәр селтәр бәйләй; мәңге йәшәр һымаҡ, бешкән миләштәр көлөп тора. Ләкин был – фон, уҡыусыға төп серҙе асырҙан алда яһалған үҙенсәлекле бер аҙым. Әҫәрҙең елеге – уның һуңғы строфаһында, анығыраҡ итеп әйткәндә, лирик героиняның: «Исмаһам, бер йылынайым әбейҙәр сыуағында» тигән һүҙҙәрендә. Ә был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөр өсөн, шунан алдағы ике юлға – «Һалҡынса килде йәйҙәрем янып бешер сағымда…» тигән һүҙҙәргә иғтибар итергә кәрәк. (Әлеге осраҡта «йәй» төшөнсәһе үҙенең тура мәғәнәһендә түгел, ә ғүмер миҙгеленә ишаралап ҡулланылған, әлбиттә.) Күренеүенсә, лирик героиняның тормош юлында бөтәһе лә ал да гөл булмаған. Ләкин бынан фажиғә яһарға ярамай. Г. Юнысованың әлеге шиғырында үткәрелгән идея – тормош диалектикаһының кескәй генә бер сағылышы ул: әгәр донъя гел ал да гөлдән генә торһа, унда үҫеш тә, хәрәкәт тә булмаҫ ине. Айырма тик шунда: бәғзе кешеләрҙең – йәйе, бәғзеләрҙең иһә – көҙө һалҡынса килергә мөмкин. Иртә яҙҙар булған шикелле, уның һуңлап килеүе лә ихтимал. Ҡыштар ҙа гел ҡарлы-боҙло бурандан ғына тормай. Әммә, нисек кенә булмаһын, улар бер кемде лә урап уҙмай.

Тәү ҡарамаҡҡа, «Ҡырау» тигән шиғыр ҙа пейзаж лирикаһына тартым һымаҡ:

Туйға әҙерләнгән йәш килендәй,
Ап-аҡ сәскә атты ҡарағат.
Бер көн көтмәгәндә ҡырау төшөп,
Ҡарағатты китте яралап.

Ҡара көйҙө нәфис аҡ сәскәләр,
Булмаясаҡ, тимәк, емеше.

Ҡарағатым ҡара ҡайғыларҙа…
Ә ҡырауҙың унда ни эше?!

Һуҡты, китте. Юллап ҡара хәҙер,
Коляш сығыу менән юғалды.
Ләкин эҙһеҙ түгел, баҡсаларҙа
Күпме һағыш, күпме зар ҡалды.

Әгәр шиғыр ошо урында тамамланған булһа, ул, бәлки, саф пейзаж лирикаһына ла дәғүә итер ине. Тик һуңғы, дүртенсе, строфа көтмәгән-нитмәгән ерҙән әҫәргә өҫтәмә йән өрә лә ебәрә: ағас, гөлдәрҙе ҡырау һуғыу – күңелдең сәскә тойғоларын ғәйбәт һуғып китеүгә бәрәбәр икән дә баһа. Шулай итеп, «ҡырау-ғәйбәт» йәнәшәлеген оҫта файҙаланып, шағирә хәтерҙә ҡалырҙай образ-символ тыуҙырыуға ирешкән.

Дүртәр юллыҡ ике генә строфанан торған «Көҙгө япраҡтар осалар…» тигән шиғыр нимәһе менәндер С. Есениндың киң билдәле «Ҡайын»ын хәтерләтеп ҡуя. Рус шағирының тәҙрәһе төбөндә көмөш ҡар тәңкәләренә күмелгән аҡ ҡайын баҫып торһа, башҡорт шағирәһенең тәҙрәһе алдында иһә, күңелгә шом һалып, бер муйыл йыр һуҙа. Ләкин ике шиғыр араһындағы төп айырма ағастар төрлөлөгөнә генә ҡайтып ҡалмай. Әгәр С. Есениндың «Ҡайын»ы тотошлай пейзаж лирикаһы емеше булһа, Г. Юнысованың «Көҙгө япраҡтар осалар…»ына иһә хикмәтле фекер төрөлгән. Көҙ килгәненә ҡайғырып, һағышланып ултырған муйылға мөрәжәғәт итеп, автор уны еңелсә генә шелтәләп ала, иҫәрлектә ғәйепләй. Сөнки муйылға яҙҙар тағы килер, ә бына кеше ғүмеренең яҙы ҡабатланмай.

Хәҙер икенсе төркөмгә – саф пейзаж лирикаһына – ингән шиғырҙарҙың бер нисәһенә генә булһа ла туҡталып уҙайыҡ. Шулар араһында китапҡа атама биргән «Аҡ ямғыр» исемле шиғыр формаһының ыҡсымлығы, йөкмәткеһенең тәрәнлеге менән бөтәһенән дә айырылып тора тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ:

Ер йылыһын тойоп, күк боҙ
Ирене лә һыу булып,
Юғарыға – зәңгәр күккә –
Күтәрелде быу булып.

Һағыныуҙан тыуған ере
Көтә уны йән атып.
Күк йөҙө тулып, ашҡынып,
Аҡ ямғыр килә ҡайтып…

Тәбиғәттә өҙлөкһөҙ дауам иткән мәңгелек хәрәкәтте шиғриәт телендә бынан да ябайыраҡ һәм бынан да аңлайышлыраҡ итеп әйтеп бирергә мөмкинме икән? (Ошо урында, йәйәләр эсендә генә булһа ла, Г. Юнысованың ижади почеркына хас тағы бер үҙенсәлекте һыҙыҡ өҫтөнә алып китмәй ярамаҫтыр: образдар тыуҙырыу өсөн буяуҙар һайлағанда шағирә аҡ төҫтө ярата төшә, шикелле. Сөнки был төҫ уның әҫәрҙәрендә бик йыш осрай. Гөлфиә өсөн болот та, ямғыр ҙа аҡ, тирәк тә аҡ, йорттар ҙа аҡ, хатта бөтә донъя ап-аҡ. Мамыҡ мендәр ҙә аҡ уның өсөн, биләү ҙә, кейем дә аҡ. Әгәр ул тауға ҡарап һоҡлана икән, мотлаҡ уның аҡ түбәһенә иғтибар итә. Аҡ төрткөлө ҡыҙыл күлдәк тә күҙенә салынмай ҡалмаған шағирәнең. Аҡ толоп, аҡ теләк, аҡ тамсылар, аҡ йомортҡа, ап-аҡ бәхет, аҡ балыҡ, аҡ сәсле ҡылған, аҡ ҡайындар иле һәм шуның кеүек әллә күпме «аҡ»тарҙы табырға була Г. Юнысова шиғриәтендә. Был да юҡтан түгелдер, тип уйлайым, – шағирәнең күңел донъяһы яҡты, намыҫы таҙа, ҡарашы саф икәнлегенә бер ишаралыр. Хәйер, тикшеренеүселәр өсөн был инде үҙенә башҡа тема.)

Йәиһә йылдың төрлө миҙгелдәрен сағылдырған «Серле күл», «Ҡарсәскә», «Бөрөләр уянғанда» тигән шиғырҙарҙы алып ҡарайыҡ. Уларҙың береһендә лә кемдәрҙеңдер һарыуын ҡайната торған ялҡынлы саҡырыуҙар ҙа, ҡайнар өндәүҙәр ҙә юҡ – унда бары тик тәбиғәт күренештәре генә бар. Тәбиғәт күренештәре иһә бик оҫта тотоп алынған – шағирәнең һиҙгерлеге лә, күҙәтеүсәнлеге лә, тел байлығы ла әллә ҡайҙан ярылып ята.

Ағастарҙың һуңғы япраҡтарын
Күлгә һибеп уйнай көҙ еле.
Ләкин күлдең моңһоу күҙҙәрендә
Мөлдөрәмә тулы йәш ине.

Кереүҙәре шулай ауыр микән
Ҡайнар йәйҙән һалҡын көҙөңә –
Сирыштырып күлдең аҡһыл йөҙөн
Вак-вак ҡына тулҡын теҙелә.

Был өҙөк – «Серле күл» тигән шиғырҙан. «Ҡарсәскә» менән «Бөрөләр уянғанда» ла унан һис тә ҡайтыш түгел – шундай уҡ нәфистәр, шундай уҡ бай сағыштырыуҙарға һәм эпитеттарға ҡоролғандар. «…Өйөрөлөп осоп йөрөгән була һуңғы ҡарҙың һуңғы бөртөгө. Матур көнгә ул да бер йәм өҫтәй, тирә-яҡҡа ул да нур сәсә», – тип һүрәтләй шағирә яҙҙың бер көнөн «Ҡарсәскә»лә. «Бөрөләр уянғанда»ла иһә тәбиғәттәге илаһи мәл былай тасуирланған: «Бөрөләр шартлап асыла, балҡып яна һәр япраҡ. Ағастар, йәш әсәләрҙәй, ғорур йылмайған һымаҡ».

Саф пейзаж лирикаһына ҡараған тағы бер шиғыр. «Төн» тип атала ул. Бик үҙенсәлекле әҫәр – тотошлай символикаға ҡоролған. Әллә XIX быуаттың аҙағында – XX быуаттың башында сәскә атҡан рус символизмынан күсеп килгәнме тип торам тәү тапҡыр уҡығанда. Яҙылышы матур: рифмалар теүәл, биҙәктәр мул, эпитеттар етерлек. Тик йөкмәткеһе генә томанлыраҡ – төбөнә төшөп етер өсөн ҡат-ҡат уҡыуҙы талап итә. Сөнки күк болоттар – йылғыр толпарҙарға, йыһан киңлеге – иркен болонға әйләнгән унда. Өйкөм-өйкөм булып күк йөҙөндә йөрөгән «болот-аттар» һонолоп-һонолоп йондоҙ нуры эсә. Таңғы елдәр болоттарҙы ҡыуып алып киткәндә, уларҙың «тояҡтарынан» ялтлап уттар сыҡҡандай була һәм донъялар яҡтырып китә, һ.б., һ.б. Һүҙ ҙә юҡ, бындай шиғырҙар ҙа йәшәргә хаҡлылыр, бәлки. Әммә ундайҙарҙың әҙерәк булыуы һәм һирәгерәк осрауы хәйерлерәктер, моғайын. «Иген төҫө», «Көҙгө урман», «Аҡ сәскәләр», «Балан», «Көҙгө япраҡтар», «Өнһөҙ-тынһыҙ ғына ҡанат елпеп…» кеүек шиғырҙарға ни етә! Уларҙы Гөлфиә Юнысованың ысын мәғәнәһендә пейзаж лирикаһы өлкәһендәге уңышы тип, ауыҙ тултырып әйтергә булалыр, минеңсә.

Күптән түгелге бер сығышында Тамара Ғәниева үҙенең ҡәләмдәше һәм замандашы Гөлфиә Юнысованы моңло-йырлы шағирә тип телгә алғайны. Ошо фекерҙе артабан үҫтереп, «Аҡ ямғыр» китабының авторын хисле шағирә тип тә атарға мөмкин, һәм быны раҫлау өсөн бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Иҫәп шуларҙың тик икеһенә генә – «Тәҙрәләрҙә уттар яна» менән «Вена вальсы» тигән шиғырҙарға ғына – туҡталып китергә. Ысынлап та, әҫәрҙәрҙең икеһе лә хистәргә бай. «Тәҙрәләрҙә уттар яна»ны мин, йәшәйештең фәлсәфәүи юҫыҡта тотоп алынған үҙенсәлекле бер сағылышы тиер инем хатта.

… Төн уртаһы күптән үтеүгә ҡарамаҫтан, ҡайһы бер тәҙрәләрҙә һаман булһа уттар яна. Кеше йоҡлар саҡта тәҙрәләрҙә уттар яныу

юҡтан түгел, әлбиттә. Шуға күрә төн уртаһында ла уттары һүнмәгән тәҙрәләргә шағирә йә һағайып, йә борсолоп ҡарай, башында төрлө уйҙар ҡайнай уның, берсә яна, берсә көйә, сөнки белә: донъяла сәбәпһеҙ бер генә нәмә лә булмай. Һәм ул шул сәбәптәрҙе эҙләй, борсоулы уйҙарына яуап табырға тырыша: «Кемдер оло ҡайғыларҙан һыҙланалыр йоҡо алмай…»; «Бәлки, кемдер унда әле алышалыр үлем менән»; «Йә йәш әсә сәңгелдәкте тирбәтәлер керпек ҡаҡмай»; «Йә берәйһе интегәлер тормошонан йәмдәр тапмай»; «Моғайын да, берәй өйҙә көтәләрҙер шатлыҡ-хәбәр»; «Йәки ғашиҡ булған егет йыр яҙалыр таңға ҡәҙәр», һ.б., һ.б. Шулай итеп, ҡарамаҡҡа ғәҙәти генә тойолған күренештән шағирә тәрән мәғәнә тапҡан һәм үҙе менән бергә беҙҙе лә уйға һалған. «Шаһит булып яҙмыштарға тәҙрәләрҙә уттар яна». Бының менән бәхәсләшеүе ауыр, әлбиттә.

«Тәҙрәләрҙә уттар яна» менән сағыштырғанда, «Вена вальсы» башҡасараҡ яңғырай. Хистәр ағышы буйынса ла, авторҙың әйтергә теләгән уйы йәһәтенән дә. Әҫәр сюжетлы шиғырға тартым: әгәр уның тәүге ике киҫәгендә героиняның үҫмер сағынан бер эпизод – йәй көнө кәләшен эйәртеп Өфөнән ауылға ҡайтып төшкән зифа буйлы егеткә ғашиҡ булыу һәм үҙенең кескенәлеге арҡаһында шул егет менән «Вена вальсы»на бейей алмауын ауыр кисереү эпизоды – һүрәтләнһә, һуңғы киҫәктә иһә уның менән күп йылдар үткәс осрашабыҙ:

Күк тулҡындар «Вена вальсы»на
Әйләнә лә һаман әйләнә.
Быуындарға быуын,
Яҙмыштарға яҙмыш,
Ә йылдарға йылдар бәйләнә.
Дим дә аға.
Теге йәйҙән бирле
Күпме ташҡан, күпме ҡышлаған?!
…Яр башында уйсан ҡатын тора, –
Ялбыр сәсле ҡыҙға оҡшаған.

Һүҙ бында быуындар, яҙмыштар һәм йылдар бәйләнеше хаҡында ғына бармай торғандыр. Автор әйтергә теләгән фекер тәрәндәрәк ята һымаҡ. Әгәр үҫмер саҡтағы хистәр байтаҡ йылдар үткәндән һуң да героиняның хәтерендә һаҡланған икән, тимәк, ул балалыҡ бер

ҡатлылығы ғына булмаған. Яр башында баҫып тороусы теге ялбыр сәсле ҡыҙға оҡшаған ҡатындың уйсан булыуы ла шулай фараз ҡылырға мәжбүр итә.

Гөлфиә Юнысованың атамалары менән бер-береһен инҡар иткән ике шиғыры бар. Уларҙың береһе – «Үкенестәр», икенсеһе – «Үкенмәйем үткәндәргә…» тип атала. Ләкин был ҡапма-ҡаршылыҡ – тыштан ҡарағанда ғына. Шиғырҙарҙың йөкмәткеһенә үтеп инә башлаһаң, ул юҡҡа сыға ла ҡуя. «Үкенестәр»ҙә лирик героиня, яҡын һәм йыраҡ өләсәйҙәрен хәтерләп, бала саҡтағы ғәмһеҙлек һөҙөмтәһендә уларҙың ҡәҙерҙәрен һуңлабыраҡ аңлауына уфтанһа, «Үкенмәйем үткәндәргә…»лә шағирә үҙенең тормош һәм ижад юлына ҡыҫҡаса ғына байҡау яһағандай. Ул юлда еңеүҙәр ҙә, хаталар ҙа, һағынып көтөүҙәр ҙә булған. Ҡанатлы көләс яҙҙарҙан һуң болотланған көҙҙәр килеүе лә көтөлмәгән хәл түгел уның өсөн. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, шағирә лә, уның лирик героиняһы ла үткәндәренә үкенмәй, киреһенсә, был көнгә килеп еткәндәренә ҡыуаналар ғына. Сөнки үткәндәр – ул ғүмер эҙҙәре, «бөгөнгөһө булмағандың булмай үткәндәре лә». Был инде – үҙе бер фәлсәфә, йәшәү фәлсәфәһе. Тимәк, Гөлфиә Юнысованың үткәндәре үкенерлек түгел. Китаптың һуңғы битен япҡанда уның авторына шиғриәттә лә, тормошонда ла яңы бейеклектәргә ирешеүен теләйһе генә ҡала.

1999

НАЗАР НӘЖМИҘЕҢ «АҒЫМ» ПОЭМАҺЫ

Һан яғынан килгәндә, «Ағым» – Назар Нәжмиҙең ун икенсе поэмаһы. Унан һуң ул йәнә өс ҙур поэма яҙасаҡ әле: «Бер туғандар», «Ике Зөләйха», «Тере ҡан». Үҙе иҫән саҡта шағир «Ағым» поэмаһын бер-бер артлы тиерлек донъя күргән ике йыйынтығына («Яҡты күҙҙә», 1984; «Атай йорто», 1988) индергәйне. Тик ул тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре тарафынан әле булһа ныҡлап тикшерелмәгән. Асылда иһә элегерәк ижад ителгән поэмалары (әйтәйек, «Ҡайындар», «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Дуҫ тураһында ун бер йыр», «Күлдәк») һымаҡ, шағирҙың был әҫәре лә тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына күренгән хәл-ваҡиғаларҙан да тәрән фәлсәфәүи фекергә эйә булған берәй хикмәтле мәғәнә килтереп сығарыу маһирлығы менән иғтибарҙы үҙенә тартып тора.

Фәлсәфәүи фекер поэманың инеш өлөшөндә үк төйөнләнә башлай. «Ағым һыуҙар сығанаҡһыҙ түгел, шуға улар тере, ағымлы», – тип иҫкәртеп ҡуя шағир тәүге юлдарҙан уҡ. Сюжетты ойоштороусы төп персонаж да экспозицияла уҡ ҡалҡып сыға: ул – лирик геройҙың замандашы һәм ауылдашы Йомағол ҡарт. Артабан әҫәрҙә һүрәтләнәсәк хәл-ваҡиғаларҙың тарихи һәм географик фоны асыҡлана, герой хәрәкәт итәсәк урындың һәм ваҡыттың сиктәре төҫмөрләнә. Был сиктәр иһә, поэманың йөкмәткеһенән күренеүенсә, бер кеше ғүмеренә тиң арауыҡ менән билдәләнгән.

…Халыҡ телендә «Иҙел башы» тип йөрөтөлгән төйәктә тыуып үҫкән Йомағол атлы кеше, егет ҡорона ингәс, Иҙелдең түбәнге яғында ниндәйерәк тәбиғәт («Урман микән, дала йә тау микән Шәйехзада Бабич тыуған яҡ?») һәм ниндәйерәк мөхит («Үҙе кеүек моңло, сәйер микән ҡаңны башҡортоноң ерҙәре») икәнен күрергә һәм белергә теләп, «юллыҡ аҡса өсөн» ике-өс өйлөк бүрәнәнән һал һаллай ҙа, йылға буйлап аҫҡа ағып төшөп китә. Байтаҡ ваҡыт шулай ағып барғас (бүрәнәһенең бер өйлөк кенә ҡалыуы – быға ишара), тирә-йүнгә сихри моң яуҙырып, яр ситендә йырлай-йырлай кер сайҡаған бер ҡыҙға тап була. Ярҙан ишетелгән йырға һалда ағып барыусы Йомағол тартҡан ҡурай моңо ҡушыла. Һал туҡтай һәм – йөрәк менән йөрәк ҡауыша… Поэма геройының әҫәрҙәге ғүмер юлы бына шунан башлана. Бер ни тиклем ул әкиәт сюжетына ла оҡшап ҡуя. Бының ав-

тор үҙе лә кире ҡаҡмай. «Шул минуттан ысын менән әкиәт, һөйөү, яҙмыш бергә үрелде», – тип белдерә ул бөтә тауышҡа.

Йомағолдоң уйламаған-нитмәгән ерҙән үҙенең бәхет ҡошон табып, уның менән ҡауышыуы, ысынлап та, әкиәттәгегә тартым. Әммә был – әкиәт түгел, ә Назар Нәжми поэтикаһына хас романтик стилдең үҙенсә бер кәүҙәләнеше. Уны шағирҙың башҡа поэмаларында ла күҙәтергә мөмкин. «Ағым»да иһә автор был художество алымын мөхәббәт тойғоһоноң (әгәр ул тойғо көтмәгәндә-нитмәгәндә тоҡанып китеп, дөрләп яна башлаһа – бигерәк тә!) ҡайһылай илаһи (хатта ағып үтеп киткән һалды туҡтатып, ағымға ҡаршы кире ағыҙып килтерерҙәй!) көскә эйә икәнлеген сағыуыраҡ итеп күрһәтеү өсөн ҡулланған һәм, шул маҡсаттан сығып, буяуҙарҙы – ҡуйыртыбыраҡ, ваҡиғаларҙы – ҡабартыбыраҡ биргән тиергә була.

Әйткән фекерҙе йөпләү өсөн автор тауышына ла (автор тауышы – Назар Нәжми ижадында йыш ҡына осрай торған тағы бер әҙәби сара) ҡолаҡ һалырға мөмкин. Үҙ хыялына үҙе ышана барыуына ишаралап, мәҫәлән, ул бына нимә ти:

Һөйгәнемдән һөйөлмәгән йәшлек,
Һинән, ахыры, шулай ҫас алам!

Тимәк, геройҙарының әкиәттәге һымаҡ осрашып ҡауышыуҙарында автор ихтыяры ла үҙенең ролен уйнамай ҡалмаған. Был фараз артабанғы юлдарҙа тулыһы менән тиерлек раҫлана: лирик герой (автор менән лирик герой араһында айырма бик аҙ шикелле әле һүҙ барған поэмала), әгәр йәшләй һөйгән йәре үҙ яғына бер генә ымлаһа ла, Йомағол һымаҡ ағымға ҡаршы ағып килеү генә түгел, хатта осоп барған самолеттан да һикереп төшөп ҡалыр ине.

Әҙәби ижад өлкәһендә бай тәжрибә туплаған шағир булараҡ Назар Нәжми фабула ағышына буйһоноп бармай, әлбиттә. Әҫәрен уҡымлыраҡ итеүҙе күҙ уңында тотоп, сюжет өлөштәрен нисек кәрәк – шулай урынлаштыра. Әйтәйек, Йомағол ҡарт менән Шәмси-кәмәр (яр ситендә йырлай-йырлай кер сайҡаған теге ҡыҙҙың исеме шулай булып сыға) ҡарсыҡтың алтын туйы – логик яҡтан ҡарағанда сюжеттың сиселешенә оҡшап тороһа ла, ул әҫәрҙең тәүге яртыһында уҡ тасуирлана башлай һәм уның аҙағынаса тиерлек дауам итә. Туй ваҡиғаһы поэма эсендәге поэмаға оҡшап китә хатта һәм әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен байыҡтырыуҙа ифрат ҙур роль уйнай.

Поэманың атамаһы ла автор ошо ваҡиғаны һүрәтләүгә күскәс кенә тулыраҡ асыҡлана. Баҡһаң, «ағым» һүзен шағир бер нисә мәғәнәлә ҡулланған икән. Тура мәғәнәһе – ағым һыу, йылға, әлбиттә. Ул һәр саҡ хәрәкәттә – аға ла аға. Артабан был һүҙ Ағиҙел буйлап һалда ағып төшкән Йомағолдоң ҡушаматына әйләнеп китә – ауыл халҡы уны бер аҙ мәрәкәләп, башлыса – үҙ итеп, «Ағым Йомағол» тип атай. Шәмсиҡәмәргә өйләнгәс, Йомағолдоң үҙ ҡулдары менән һалып кергән йорто ла халыҡ телендә «Ағым йорт» тип йөрөтөлә.

Күсмә мәғәнәһендә иһә «ағым» һүзе Ағиҙел шикелле бер туҡтауһыҙ көнө-төнө аҡҡан ғүмерҙе аңлата һәм шул рәүешле күпмелер кимәлдә фәлсәфәүи яңғыраш ала:

Эй ғүмерҙең, ағым һыуҙай ағып,
Тиҙ китеүе һәм тиҙ үтеүе –
Ике ерҙә тыуған был икәүҙең
Бергә ҡушылып ғүмер итеүе!

Ниһайәт, «ағым» һүзенең тағы бер ҡулланылышы: яйы сыҡҡанда, шағир уны юмор ҡалыбына ла төрөп бирә. Йомағолдоң өлкән улы Ғабдрахман, атаһы менән әсәһенең артынан һүҙ алып, сығышын бына нисек башлап ебәрә:

Беҙ инде шул – ағым… Ағымдағы
Эштән торҙо кеүек бар ғүмер.
Бөгөн байрам. Әйтәм: ул бер ябай
Ағымдағы байрам түгелдер.

Телмәр тотоусының нимәгә төрттөргәнен шәйләүе ҡыйын түгел. Иҫләмәҫтән штампҡа әйләнеп бөткән «ағымдағы бурыстар», «ағымдағы пландар», «ағымдағы мәсьәләләр» ише һүҙбәйләнештәр хәтергә төшә. Был һүҙбәйләнештәрҙең нәфис әҙәбиәттә, бигерәк тә уның сатира һәм юмор тип атап йөрөтөлгән төрөндә, ниндәйерәк юҫыҡта ҡулланылғанлығы хаҡында тәфсилләп һөйләп тороуҙың хәжәте юҡтыр. Тик шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк: «Ағым» поэмаһы – юморға ифрат бай әҫәр. Поэмала ярайһы ғына етди мәсьәләләр күтәрелһә лә, ул халыҡсан, шаян тел менән яҙылған. Рәхәтләнеп, ысын күңелдән бер көлөп алырлыҡ эпизодтар ҙа юҡ түгел. Ат урынына ҡапҡа бағанаһына «Жигули» машинаһын бәйләп ҡуйыу – үҙе

генә лә ни тора! Йәиһә Йомағол ҡарт менән Шәмсиҡәмәр ҡарсыҡтың илле йыл буйына тигеҙ һәм татыу ғүмер итеүҙәре хөрмәтенә арнап әҙерләнгән байрам табынында мәрйә килендең «Горько!» тип ҡысҡырып ебәреүе…

Ата-әсәһенең алтын туйында Ғабдрахман (ауылдаштары телендә ул күптән инде – башҡорт Рахман!) һөйләгән телмәр поэманың структураһында мөһим әһәмиәткә эйә. Уны монолог тип тә атарға булалыр. Ошо телмәр-монолог (уға йыш ҡына автор тауышы ла килеп ҡушыла) ярҙамында беҙ төп геройҙың тормош юлын бөтә тулылығында тиерлек күҙ алдына килтереп баҫтырабыҙ.

Йомағол – ябайҙарҙан ябай, тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә күп татыған шәхестәрҙең береһе. Сығышы менән Иҙел башынан булһа ла, Шәмсиҡәмәр менән ҡауышҡас, уның бөтә ғүмере Иҙелдең түбәнге осонда үтә. Ҡарсығы менән ике малай һәм өс ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерәләр. Һөнәре буйынса – балта оҫтаһы. Һуғышта ҡатнаша. Унда ул үҙ һөнәренә тоғро ҡала – сапер булып хеҙмәт итә. Һуғыштан иҫән-аман әйләнеп ҡайтҡас, ең һыҙғанып, башҡалар менән бер ҡатарҙан хәлһеҙләнгән ауылын хәлләндерергә тотона. Күҙҙең яуын алып, алыҫтан уҡ ялт итеп торған йорттар һала. Әкренләп балалары ла башлы-күҙле була. Ҡыҙҙары, ояһынан осҡан матур ҡоштар һымаҡ, төрлөһө төрлө яҡҡа тарала. Малайҙары иһә, игенсе һөнәрен һайлап, ауылда ҡала һәм аталары ағып килгән йылды әпен-төпөн генә һалынған өй урынына урамға буй итеп йөҙөп барыусы карапты хәтерләткән ҙур йорт төҙөп ҡуялар. Герой биографияһындағы мөһим ваҡиғалар бына ошонан ғибәрәт. Шәмсиҡәмәре менән бергәләп алтын туйына килеп еткәндә, Йомағол ҡарт тамырҙарын төрлө тарафтарға йәйеп, сатыры аҫтына төрлө милләт вәкилдәрен йыйған мөһабәт бер ағаҫҡа оҡшап тора:

Бөгөн инде Ағым Йомағолға
Ағылғандар бына һәр яҡтан:
Баҡалынан, Шаран, Туймазынан,
Әбйәлилдән, Һаҡмар-Баймаҡтан,
Ямалдан да, Памир итәгенән,
Сахалиндан, Карпат яғынан,
Алатауҙан, сиҙәм Ҡустанайҙан,
Күрше район, күрше ауылдан.

Йомағолдоң тормош баҫҡыстарын күҙҙән үткәргәндә, уның эске донъяһы менән тышҡы һыны ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай, әлбиттә. Шағир үҙ геройының күберәк яҡшы яҡтарын күргә тырыша, хатта мәҙәгерәк тойолған ҡылыҡтарын да ғәфү итә. Мәҫәлән, Иҙел буйлап ағып төшөп киткәне өсөн уны «ярта ҡыл» тип нарыҡларға әҙер тороусыларҙың үҙҙәрен «ярты аҡылдар», «тере мәйеттәр», «өрәктәр» тип атай. (Назар Нәжмиҙең романтик рухлы шағир икәнлеген раҫлаусы тағы бер күренештер был!) Йомағолдо автор «бер юл да шиғыр яҙмайса ла шағир булған оло йөрәктәр» иҫәбенә индерә. «Бер бирелһә, бер үк кешегә бит бөтәһе лә, ахыры, бирелә»: оҙон ғүмер ҙә, аҡыл һәм оҫталыҡ та, матурлыҡ та тип һоҡлана ул һәм өҫтәй: «Йомағолда барыһы үҙ урынында, һәйкәл итеп һынын ҡой ҙа ҡуй».

Геройҙың кешелек сифаттары ла поэманың тәүге юлдарынан уҡ асыла башлай. Әйтәйек, өс өйлөк бүрәнәне Йомағол кәсеп өсөн түгел, ә шуны һатып, донъя күрер өсөн һаллай. Һуғышта инһә ул бөтә көсөн миҙал алыр өсөн түгел, ә ғәзиз Тыуған илен дошмандан һаҡлап ҡалыр өсөн һала: «Ул эшләгән һалда күпме һалдат Днепрҙы кискән, йөҙгән, батмаған». (Ошо урында, йәйәләр эсендә генә булһа ла, поэмалағы бер эпизодҡа айырым туҡталып китеү кәрәктер. Һуғыштан ҡайтҡан атаһына үҫмер Ғабдрахман, кинәйәләп: «Герой булған күп ирҙәр…» – ти. Улының тел төбөн аңлап алған Йомағол уға былай тип яуап ҡайтара: «Был ярҙа мин һал һаллап шул ҡалдым, геройлыҡты теге яҡта, улым, бирҙеләр». Был эпизодҡа туҡталыуының сәбәбе шунда: билдәле һәм билдәһеҙ геройҙар темаһына Назар Нәжми «Бер туғандар» тигән поэмаһында яңынан әйләнеп ҡайтасаҡ һәм, уны артабан үҫтереп, һуғышта күкрәктәренә Алтын йондоҙ таҡҡан геройҙар ғына түгел, исемһеҙ батырҙар ҙа күп булды һәм улар Еңеүҙе яулауға иҫ киткес ҙур өлөш индерҙеләр тигәнерәк һөҙөмтәгә киләсәк.) Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла Йомағол дан һәм шөһрәт ҡаҙаныу өсөн түгел, ә донъяны бөтәйтеү һәм матурлау теләге менән, алды-ялды белмәйсә, төҙөй ҙә төҙөй. Халыҡ телендәге «Тимерсенең ғүмер булмай балтаһы» тигән шикелле, малайҙары үҫеп, кеше булмаҫ борон үҙ өйөн ипләп һалырға ла ваҡыты етмәй уның.

Төп геройҙың образын уғата ла тәрәнерәк, уның рухи донъяһын оторо ла киңерәк асырға хеҙмәт итеүсе әҙәби сараларҙың тағы береһе – Йомағол ҡарттың алтын туйҙа һөйләгән телмәре. Дөрөҫ, был телмәр көтөлмәгәндәрәк, мәрйә киленененең «Горько!»һына яуап һымағыраҡ килеп сыға. Әммә ул, экспромт менән әйтелһә лә, ифрат

бай йөкмәткеле. Телмәр тотоусы, үткән ғүмеренә байҡау яһау, милли йола, әхлаҡ, ғаилә, тәрбиә, быуындар бәйләнеше мәсьәләләренә ҡағылышлы байтаҡ ҡына аҡыллы фекерҙәре менән уртаҡлаша. Шағирҙы бигерәк тә йорт хужаһының: «Беҙ, балалар, ҡулдан килгән тиклем тормош ҡорҙоҡ, тормош төҙөнөк…» тигән һүҙҙәре әҫәрләндерә һәм уның мейеһендә төрлө уйҙар уята. Табын артында ултырыусыларҙы шаҡ ҡатырып, йыр ҙа һуҙып ебәргәс, Йомағол ҡарт беҙҙең алға бөтә асылында килеп баҫа: ул – алтын ҡуллы балта оҫтаһы ла, йор һүҙле аҡыл эйәһе лә, кәрәк саҡта – көр тауышлы һәм моңло йырсы ла. Автор иһә иғтибарын йәнә геройының һынына йүнәлтә, уның тышҡы ҡиәфәте менән эске донъяһы араһындағы уртаҡлыҡҡа һоҡлана:

Әй аҡылдың ижади сәм булып
Күңелгә йәм биреп аҡҡаны!
Йомағолдоң бөртөк ҡойолмаған
Ап-аҡ сәсе, ап-аҡ һаҡалы,
Егеттәрсә гел йылмайып торған,
Ҡыҫыла төшкән ҡара күҙҙәре,
Үҙ халҡының аҡыл хазинаһын
Үҙенеке иткән һүҙҙәре…

Әйткәндәй, Йомағол телмәре генә түгел, поэма тотошлайы менән тиерлек халыҡтың аҡыл хазинаһына нигеҙләнгән. Йырҙарҙан килтерелгән өҙөктәр («Рәхмәт был хужаға, былай итеп беҙҙе йыйғанға», «Дуҫ-иш кәрәк ҡаршы сығып, атың бәйләргә»), шағир үҙе уйлап сығарған тапҡыр әйтемдәр («Эй Ағиҙел!.. Ғүмер буйы ул хеҙмәттә, эштә… Бына әле Йомағолдоң һалын алып килә һалып һыртына», «Кемдер төҙөй, төҙөй… Кемдер – төҙөгәнде вата, емерә», «“Болондарҙы һөрөп сәсергә” тип бойороҡ булғас, Рахман бар йәне менән … баш тартты» һәм әйтте: «Ағиҙелде ҡалды һөрәһе…», «Илама ла, Ҡәмәр, йәшлек бит ул йүгереп кенә ҡайтыр ер түгел», «Тик яҙмаһын үҙ-үҙеңде белмәй атланырға тырышыу толпарға…» һ.б.), көләмәстәр, шаян һүҙҙәр («Һәр кем көлөп, уҡына-уҡына, «Бисмиллә рахман рәхим», – тип керҙе Рахман менән Рәхим йортона») йыш осрай уның биттәрендә.

Быға тиклем ижад иткән әҫәрҙәрендәге шикелле, был поэмала ла Назар Нәжмиҙең эстетик ҡараштары киң сағылыш тапҡан. «Ағым

һыуҙай, сығанаҡһыҙ түгел был йырым да… Сығанағы – минең тыуған яғым» тип иҡрар итә ул поэманың тәүге юлдарында уҡ. (Заманында «Ҡапҡалар» ҙа «Йыр алырға ҡайтам ауылыма» тигән һүҙҙәр менән башланғайны.) «Ижадтың бит һәр аҙымы һәр саҡ тынғыһыҙ һәм ауыр, борсоулы», «Яҙғандарым кеше йөрәгенә ятһын ине», «Шиғыр юлы – ҡоро аҡыл түгел, шиғыр юлы – йөрәк арҡыры» кеүегерәк кисерештәрҙе байтаҡ һиҙемләргә мөмкин әле һүҙ барған поэмала. Улар бөтәһе шағирҙың үҙ ижадына ифрат ҙур яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡарауы тураһында һөйләй. Бер урында автор хатта «шағир» һүҙен «шиғырсы» һүҙе менән алмаштыра, сөнки үҙен ысын шағир тип иҫәпләгән шағир иңдәренә ниндәй ауыр йөк төшкәнлеген яҡшы аңлай. Назар Нәжми фекеренсә, шиғриәт – «кешеләргә күңел һарайы», һәм шуға күрә ижад эшендә кәсепселеккә һис кенә лә урын булырға тейеш түгел.

Назар Нәжмиҙең эстетик ҡараштарына бәйле тағы бер факт. Поэмала исемдәре әҙәбиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ донъяһында билдәле булған Шәйехзада Бабич, Заһир Исмәғилев, Шәриф Бикҡол, Зөлфәр Хисмәтуллин, Ноғман Мусин кеүек шәхестәр телгә алына. Тимәк, шағир уларҙың ижадына битараф булмаған.

Йомғаҡлап, шулай тиергә мөмкин: «Ағым» – тематик яҡтан ифрат ҡуйы, тығыҙ туҡылған әҫәр. Үҙәк геройҙың образын тасуирлағанда, автор байтаҡ мәсьәләләргә ҡағылып үтә. Әммә уларға иркенләп туҡталыу бурыс итеп ҡуйылмаған. Шағирҙың иғтибар үҙәгендә – бөтәһенән дә элек, ябай хеҙмәт кешеһе. Ә ул иһә, автор уйынса, ниндәй генә хәл-ваҡиғалар уртаһында ҡайнамаһын, «тәбиғәте менән төҙөүсе». Әҫәрҙә ябай кешегә мәҙхиә йырлап ҡына ҡалынмай, фәлсәфәүи һығымта ла яһала: «Кеше көслө булмаҫ ине ерҙә, көсһөҙ булһа әгәр ҡаршылыҡ»».

2001

НАЗАР НӘЖМИҘЕҢ «БЕР ТУҒАНДАР» ПОЭМАҺЫ

(Әҫәрҙең сюжет нигеҙе һәм идея-эстетик асылы)

Һикһәненсе йылдарҙың тәүге яртыһын Н. Нәжми ижадында поэма жанрының сәскә атҡан осоро тип атаһаҡ, һис бер арттырыу булмаҫ. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул, бер-бер артлы «Ғүмерлек йыр» (1982–1983), «Ағым» (1983), «Бер туғандар» (1983), «Ике Зөләйха» (1984–1985), «Тере ҡан» (1986) исемле бынамын тигән биш поэма тамамлап, уҡыусы ҡарамағына тапшырҙы. Һуңғы икеһе тураһында күпмелер кимәлдә һүҙ әйтелгәнлектән, был юлы иғтибарҙы «Бер туғандар»ға ғына йүнәлтергә иҫәп.

Поэманың атамаһынан уҡ күренеүенсә, ул конкрет фактҡарға таянып яҙылған. Был фекерҙе әҫәргә эпиграф итеп килтерелгән «Ағайҙарым Ғәҙелкарам һәм Ғиләжетдин Нәжметдиновтарға» тигән бағышлау яҙыуы ла дәлилләп тора. Ләкин «Бер туғандар» – төптө документаль әҫәр түгел. Назар Нәжмиҙең «Кем уйлаған…» тигән автобиографик яҙмалары һәм айырым шиғырҙары (мәҫәлән, «Миләш», «Мәңгелеккә ут», «Эҙләмәйем», «Атайымды алып ҡайт») аша уның «ялҡынлы йөрәкле» бер ағаһының хәбәрһеҙ юғалып, яу ҡырында ятып ҡалғанлығын, икенсеһенең, һуғышта төҙәлмәҫ яралар алып, тыуған төйәгенә кире әйләнеп ҡайтҡас, байтаҡ йылдар ал-ялды белмәйенсә хеҙмәт фронтында йөҙгәндән һуң гүр эйәһе булғанлығын белһәк тә, поэманың сюжеты конкрет шәхестәр образын һынландырыу менән генә сикләнмәй – әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһе күпкә байыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ.

Үҙенең эске тәбиғәте, төҙөлөшө һәм яңғырашы буйынса «Бер туғандар – лирик поэма. Ике бер туған тураһындағы хикәйәләүҙе уларҙың өсөнсө туғаны – лирик герой алып бара. Ләкин поэманың лириклығы быға ғына ҡайтып ҡалмай. Ул – әҫәрҙең бөтә структураһында, уның тел-стиль сараларында («Өҫ таған бит таймаҫ», «Яңғыҙ ағас янмаҫ» кеүегерәк әйтемдәр үҙҙәре генә лә ни тора!), йөрәк тибешендә.

Һәр ваҡыттағыса, Н. Нәжмиҙең был поэмаһында ла һүҙҙәр, ысынлап та, уйнап тора, тел йүгерек, рифмалар теүәл – улар бер-береһенә сат йәбешкән. Бына тел йүгереклегенә, һүҙҙәрҙе уйнатыуға

һәм уларҙың уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттырыуға бәйле бер күренеш:

Ҡалғанһығыҙ миңә атай булып
Атай үлгәс,
Үҙегеҙ етем ҡалған малайҙар.

Ошо өс юллыҡты төрлө ҡалыпҡа һалып, төрлө мәғәнә сығарырға мөмкин дә баһа: «Ҡалғанһығыҙ миңә атай булып, атай үлгәс…» йәиһә: «Атай үлгәс, үҙегеҙ етем ҡалған малайҙар…».

Ҡайһы саҡта Н. Нәжмиҙең тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған һөйләме лә тәрән мәғәнәгә эйә булып ҡуя. Мәҫәлән, лирик геройҙың «Мин бит хәҙер түгел мин генә…» тип әйтеүе була, беҙ шунда уҡ өс туған араһында береһенең шағирлыҡ юлынан киткәнлеген һәм шунлыҡтан уның булмышы халыҡ ҡарамағына күскәнлеген шәйләп алабыҙ.

«Бер туғандар» поэмаһы төрлө әҙәби сараларға һәм алымдарға ифрат бай. Улар, һис шикһеҙ, авторҙың әйтергә теләгән һүҙен тулыраҡ аңларға, уның уй-фекерҙәренең асылына тәрәнерәк төшөнөргә ярҙам итә. Шундай сараларҙан күҙгә иң нығ ташланғаны – «Беҙ өс туған – беҙ өс таған инек» тигән рефрен. Лирик герой ауыҙынан сыҡҡан был фраза поэманың башынан уҡ йәшәү хоҡуғы ала һәм, әҫәрҙең буйынан-буйына дауам итеп, артабан тағы алты тапҡыр ҡабатлана. Шуныһы мөһим: һәр ҡабатланған һайын, рефрен әҫәрҙең сюжетына һәм композицияһына яңы һыҙаттар өҫтәй, уның идея-тематик даирәһен киңәйтә. Әйтәйек, әҫәр туҡымаһына тәү башлап килеп ингәндә, уның ҡеүәһе әллә ни ҙур түгел – бер ғаилә сиктәренә һыйып бөтә:

Бер әсәнең беҙ өс улы инек –
Беҙ өс олон бер үк тамырҙан.
Бер әсәнең йөрәк ҡаны беҙҙә,
Бер үк күкрәк һөтөн ҡапҡанбыҙ.
Әсә тигән бөйөк бер ғүмерҙең
Өс шишмәһе булып аҡҡанбыҙ.

Рефрен икенсе тапҡыр яңғырағас та әле авторҙың иғтибар үҙәгендә тик ошо өс бер туған һәм уларҙың бик иртә тол ҡалған

әсәләре генә торған һымаҡ. Сюжеттың артабанғы үҫешендә иһә был ғаилә тормошона яйлап-яйлап ҡына заман елдәре үтеп инә башлай. Лирик геройҙың өлкән ағаларына – быуат тиҫтерҙәренә – таяҡтың йыуанырағ башы төшкәнлеге лә инҡар ителмәй. Калейдоскоптағы шикелле генә булһа ла, сабаталы, суҡалы илебеҙҙең яңырышҡа табан яһаған аҙымдары ла сағылмай ҡалмаған. Илгә афәт килгәс, өс бер туған һалдат гимнастеркаһы кейә һәм, ҡулдарына ҡорал тотоп, Ватанды, тыуған ерҙе һаҡларға китә. Шулай итеп, поэма геройҙарының яҙмышы талғын ғына ил яҙмышына, халыҡ яҙмышына барып тоташа.

Әлбиттә, автор был хәл-ваҡиғалар тураһында бәйнә-бәйнә һөйләүҙе бурыс итеп ҡуймаған. Әгәр бәйнә-бәйнә һөйләү юлын һайлаһа, ул, поэма жанры ҡанундарына хыянат итеп, проза киңлектәренә төшөп киткән булыр ине. Шуға күрә шағир XX быуатҡа хас ҡайһы бер һыҙаттарҙы еңелсә билдәләп үтеү менән генә сикләнә. Уның өсөн иң мөһиме – ошо хәл-ваҡиғаларҙың кеше яҙмышына йоғонтоһо, ундағы сағылышы. Кем ул кеше? Уның тәбиғәте, эске донъяһы ниҙән ғибәрәт? Был донъялағы тәғәйенләнеше нимәлә? Ни өсөн килә ул донъяға һәм нисек ҡулайлаша уға? Өҙлөкһөҙ, бер генә йүнәлештә хәрәкәт иткән һәм йәшәү тип аталған үтә ҡатмарлы, йыш ҡына хатта сығырынан сығып китә яҙған процеста ниндәй урын биләй ул? Кем донъя тотҡаһы? Тарихты кем тыуҙыра: төрлө дәрәжәләргә эйә булған вазифалы түрәләрме әллә үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты тауышһыҙтынһыҙ ғына үтәүсе ябай кешеләрме? Дөрөҫ, был һорауҙар туранан-тура ҡуйылмаған – әҫәрҙе диҡҡәт менән уҡыған мәлдә улар үҙенән-үҙе тыуа һәм мотлаҡ яуап биреүҙе талап итә.

Ошо йәһәттән лирик геройҙың икенсе менән өсөнсө һәм бишенсе менән алтынсы рефрендар араһындағы уйланыуҙары айырыуса бай йөкмәткеле тиер инем. Тәүгеһендә һүҙ һуғыштарҙың да, һөжүмдәрҙең дә төрлөһө булыуы хаҡында бара:

Һөжүмдәрҙең, һуғыштарҙың да бит
Бар данлыһы һәм бар данһыҙы.
Тик уларҙың юҡтыр бер ҡасан да
Корбанһыҙы йәки ҡанһыҙы.

Был юлдар алтмышынсы йылдарҙа үҙәк матбуғат биттәрендә ҡабынып алған бер бәхәсте хәтергә төшөрөп ҡуйҙы. Шул осорҙа сәнғәтебеҙҙең көллө өлкәһендә тип әйтерлек Бөйөк Ватан һуғышы

темаһы үзенең икенсе һулышын кисергәндәй булды. Бөтә ғаләмде шаулатҡан ошо ғәрәсәтте ҡырҡынсы-илленсе йылдарҙағы шикелле ашыҡ-бошоҡ ҡына түгел, бәлки, ваҡыт форсатынан файҙаланып, иркенләберәк, киңерәк, ваҡиғаларҙың айышына тәрәнерәк төшөп, уларҙы тормошсаныраҡ итеп һынландырған ҡалын-ҡалын романдар, психологик күҙәтеүҙәргә бай повестар, киҫкен конфликтҡа ҡоролған сәхнә әҫәрҙәре, һуғыш ғәләмәттәрен һанап сығыуға ғына түгел, уларҙың асылына үтеп инергә тырышып яҙылған бынамын тигән поэмалар үҫеп сыҡты. Тәнҡиттә был күренеш Ватан һуғышын кәүҙәләндереүҙәге икенсе тулҡын тип нарыҡланғайны. Һәм ул бер рус әҙәбиәтенә генә түгел, илебеҙ киңлектәрендә көн иткән бүтән милләттәрҙең дә әҙәбиәтенә хас күренеш ине.

Тап ошо мәлдә тәнҡит мәҡәләләрендә лә, әҙәбиәт ғилемендә лә һуғыш яланын штаб юғарылығынан бинокль аша күҙәтеү һәм уны окоп төпкөлөнән һалдат күҙлеге аша күреү тигәнерәк яңы төшөнсәләр ҙә яңғырап киткәйне. Уларға «штаб дөрөҫлөгө» һәм «окоп дөрөҫлөгө» тигән ҡушымталар ҙа килеп ялғанды. Н. Нәжмиҙең «Бер туғандар» поэмаһында ла һуғыш йомғаҡтарына шундайыраҡ юҫыҡтан ҡараш ташланған һымаҡ. Уның геройҙары – юғары дәрәжәле, исемдәре илгә таралған шәхестәр түгел, бары тик – ябай һалдаттар. Улар Мәскәү өсөн, Сталинград, «Курск дуғаһы» һәм башҡа шуның кеүек данлы һәм шөһрәтле һуғыштарҙа ла ҡатнашмаған. Әгәр «За отвагу» тигән миҙал геройҙарҙың береһен фани донъя менән хушлашыр алдынан ғына килеп тапҡан икән, ғәжәпләнергә һис тә урын юҡ. Әммә әҫәрҙәге: «Ә шулай ҙа ҡорал тотҡан ҡулдар ил яҙмышын ҡулда тоттолар» тигән юлдарға ҡолаҡ һалмай үтеү мөмкин түгел. Артабанғы юлдар был фекерҙе ҡеүәтләп кенә ҡалмай, уға өҫтәмә асыҡлыҡ та индерә:

О рух көсө!.. Утҡа ҡаршы торҙо
Йөрәк уты менән утлылар.
Меңәрләгән Карам шикеллеләр
Пулеметтан әгәр атмаһа,
Өлөшөнә төшкән йөҙ метрҙы ул
Йәне, тәне менән тотмаһа,
Еңер инеме икән Сталинградтар,
Бер йылдан һуң «Курск дуғаһы»?

Лирик геройҙың бишенсе рефрендан һуң килтерелгән уйланыуҙары ла иғтибарҙы йәлеп итерлек. Дөйөм күҙлектән сығып ҡарағанда, уны шөһрәтле һәм шөһрәтһеҙ нуғыштар, исемле һәм исемһеҙ батырҙар тураһындағы бәхәстең дауамы тиергә була. Тик был юлы уйланыуҙар бер аҙ фәлсәфәүи төҫ алған. Унда һүҙ күберәк кешенең асылы, тәғәйенләнеше, әлеге шул «бөйөктәр» һәм «ябайҙар», «билдәлеләр» һәм «билдәһеҙҙәр» хаҡында бара. «Үлгәндәр»ҙе шағир – «киткәндәр», «тереләр»ҙе «ҡалғандар» тип атай. Өҫтәүенә, «киткәндәр» һәм «ҡалғандар» төшөнсәләрен образлы тел юҫығына күсереп, уларҙы өр-яңыса яңғыратып ебәрә: «киткәндәр» – «һүнгәндәр», «ҡалғандар» – әле һаман янғандар. Рефренды алтынсы тапҡыр файҙаланыр алдынан иһә автор, ошо образлы сағыштырыуҙарға таянып, оторо ла тәрәнерәк мәғәнәгә эйә булған һығымта яһап ҡуя: «Янғандың да, һүнеп ҡалғандың да ниндәйе юҡ – донъя үҙенсә. Тере көйө кемдер үлек бер йән, кемдер тере үлгән көйөнсә».

Ҡыҫҡаһы, Н. Нәжмиҙең был поэмаһындағы рефрен – ваҡиғалар ағышын һәм кешеләр яҙмышын сюжет ҡалыбына һалғанда автор яһаған һикерештәрҙе асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тороусы әҙәби сара ул. Әҫәрҙең сюжеты ысынлап та ваҡиғалар һәм яҙмыштар теҙмәһенән ғибәрәт. Быны автор үҙе лә йәшермәй. Рефрен икенсе тапҡыр яңғырап, сюжет ташҡыны, бер ғаилә сиктәренә һыя алмайынса, ил киңлектәренә юл яра башлағас, ул былай ти: «Ә мин йылдар аша үткәндәрҙе иҫкә төшөрәм». Һәм поэманың аҙағына тиклем ошо алымға тоғро ҡала. Хикәйәләү барышында уға, үҙ сиратында, яңылары килеп ҡушыла.

«Бер туғандар»ҙың идея-эстетик асылын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итерҙәй тағы бер әҙәби сара – лирик герой исеменә яҙылған хаттар тиер инем. Уларҙың тәүгеһе, һуғыш осорона ҡарағаны, күптәрҙең хәтер төпкөлөндә һаҡланған «һалдат өсмөйөшө»н яңыртмай ҡалмаҫ, моғайын. Байтаҡ йылдар үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, шул «өсмөйөштәр»ҙә йыш ҡына ҡабатланған «Иртәгә һуғышҡа инәбеҙ» тигән хәүефле йәиһә «Һуғыштан иҫән-һау сыҡтым» тигән ҡыуаныслы хәбәрҙәр ҙә иҫтәренә төшмәй булмаҫ.

Тыныс дәүерҙә яҙылған икенсе хаттың нигеҙенә, фронт юлдары буйлап атлағанда утты-һыуҙы кискән, ә хәҙер быуат һынауҙарын үҙ елкәһендә татып, байтаҡ тәжрибә туплаған ауыл ҡартының йәшәү серҙәре тураһындағы уйланыуҙары һалынған. Йөкмәткеһе һәм интонацияһы буйынса был уйланыуҙар, халыҡ аңында яралып,

быуындарҙан быуындарға күсә килгән ғәҙәттәге тормош фәлсәфәһенә тартым. Күпте күргән, күпте белгән аҡыл эйәһе эске кисерештәре менән уртаҡлашып ҡына ҡалмай, фәһемле кәңәштәр ҙә бирә:

Төпһөҙ мискә түгел икән ғүмер,
Ауыр икән, төбө күренгәс.
Бөтәһе лә һүнә бара икән,
Әкренләп йөрәк һүрелгәс.
Һүрелдермә, берүк, йөрәгеңде,
Ул бит һиңә һайлап бирелгән.

Хаттарҙың икеһе лә ысын туғанлыҡ, бер-береңә тәрән ихтирам һәм ҡайнар һөйөү хистәре менән һуғарылған. Ләкин уларҙың әһәмиәте өс туған араһындағы шәхсән мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләүгә генә ҡайтып ҡалмай. Бер яҡтан, был хаттар лирик геройҙың да, хат авторҙарының да образдарын тулыландырыу, уларҙың портретын яңы һыҙаттар менән байыҡтырыу сараһы булып хеҙмәт итһә, икенсе яҡтан, хаттарҙың һәр ҡайһыһы үҙ осорона хас мөһим хәл-ваҡиғаларҙы сағылдырған бәләкәй генә документ ролен дә үтәй.

Н. Нәжмиҙең быға тиклем донъя күргән әҫәрҙәрендәге шикелле, әле һүҙ барған поэмала ла ҡатын-ҡыҙҙарҙың мөһабәт образын һынландырыуға шаҡтай урын бирелгән. Улар – абстракт образдар ғына түгел, бәлки, өс бер туған һымаҡ, реаль ерлектән үҫеп сыҡҡан, реаль шәхестәр яҙмышына таянып тыуҙырылған һындар. Анығыраҡ итеп әйткәндә, конкрет шәхестәр яҙмышын шағир ҡатын-ҡыҙҙарҙың дөйөмләштерелгән образы юғарылығынаса күтәреүгә ирешкән.

Шундайҙарҙың береһе – әсә образы. Ул – тәүге юлдарҙан уҡ авторҙың иғтибар үҙәгендә. Шағир раҫлауынса, әсә – донъя тотҡаһы, ғүмер башы, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ шишмәләр сығанағы. Поэма геройҙарына әйләнеп киткән өс бер туған да шул әсәнән яралған. Ваҡыт еткәс, улар әсәләре өсөн генә түгел, әсә кеүек ғәзиз Ватан, тыуған ер өсөн дә Иман, Өмөт, Һөйөү тигән өс таған шәйенә ингәндәр. Ләкин әсә ҡанын үҙ тәнендә йөрөтөп, әсә йәнен һәм әсә ғүмерен дауам иттереүселәрҙең бөтәһенә лә дан-шөһрәт ҡаҙанырға яҙмаған. Ошо хәҡиҡәтте ҡеүәтләгәндәй, автор, ил өсөн, Ватан өсөн яу яланында баштарын һалған исемһеҙ батырҙарҙы күҙ уңында тотоп, уларға түбәндәге риторик һорау менән мөрәжәғәт итә:

Бер әсәнән өсәр, дүртәр, бишәр,
Етешәр бит хатта булдығыҙ.
Ә үҙегеҙ тарих ағасының
Ҡайһы ботағына ҡундығыҙ?

Лирик герой хыялында хасил булған һындарҙың икенсеһе – еңгә образы. Поэмаға ул алтынсы рефрендан һуң килеп инә. Үрҙә әйткәнебеҙсә, бынығы ла – дөйөмләштерелгән образ. Уның хатта тәғәйен генә исеме лә юҡ. Беҙ уны тик лирик геройҙың һуғышта һәләк булған ағаһының йәп-йәш көйө тол ҡалған ҡатыны икәнен генә беләбеҙ. Әммә ул, әсә һыны һымаҡ, бай йөкмәткеле образ. Уның миҫалында шағир «яңғыҙлыҡтың бөтә михнәттәрен күргән» тол ҡатындар яҙмышын күҙ алдына килтереп баҫтырған. Был образды тыуҙырғанда ла автор төрлө әҙәби саралар менән эш итә. Әҫәрҙең сюжетына шыма ғына инеп киткән еңгә йыры – тап шундайҙарҙан. Йырҙың тексы ҙур түгел – ни бары һигеҙ юлдан тора. Ләкин яңғырашы менән – үҙәкте өҙгөс. Ә бына поэманан алынған түбәндәге өҙөк – тол ҡатындар хөрмәтенә йырланған мәҙхиә тиһәк, һис тә ҡупырайтыу булмаҫ:

Ғүмер буйы ирһеҙ, тоғро йәшәү...
Ниндәй көс ул толдар затында?
Ниндәй була бөгөн, ирен ташлап,
Дүрт-биш иргә еткән ҡатындар?
Тап төшөрмәй ағай рухына,
Барҙың, еңгәм, инсаф юлынан.
Рәхмәт һиңә мөхәббәтең өсөн,
Тоғролоғоң, мәрхәмәтең өсөн
Улдарыңдан, минән, ҡыҙыңдан.

«Бер туғандар»ҙа Н. Нәжми йыш ҡына әҙәби факттарға ла таяна. Уларҙы автор башлыса теге йәки был фекерҙе ҡеүәтләү өсөн ҡуллана. Шундай факттарҙың береһе – билдәле рус әҙибе А. Твардовскийҙың «Ржев янында мин һәләк булдым» тигән шиғыры. Шиғыр фронттың алғы һыҙығынан лирик геройға уның ағаһы яҙған хат айҡанлы хәтергә алына. Белеүебеҙсә, был әҫәрен А. Твардовский Ржев ҡалаһы янында барған ҡаты алыштар, ҡанлы бәрелештәр тәьҫораты аҫтында ижад иткән. Шуныһы мөһим: «Ржев янында мин һәләк булдым» хат авторының яҙмышына күпмелер асыҡлыҡ индереп кенә ҡалмай, поэмаға яңы

йүнәлеш тә биреп ебәрә: ошо шиғырҙы иҫләгәндән һуң, автор һуғыштарҙың да, һөжүмдәрҙең дә төрлө булыуы хаҡында уйлана башлай.

Әҙәби факттарҙың икенсеһе Н. Нәжмиҙең үҙ ижадына бәйле. Һуғыш тамамланып байтаҡ йылдар үткәндән һуң өлкән ағаһына «Батырлыҡ өсөн» миҙалы тапшырылғас, лирик герой, үҙ яҙмышы менән ағаһы яҙмышы араһында айырмалыҡ ҡына түгел, ниндәйҙер оҡшашлыҡ та барлығына ишаралап, былай ти:

«Бөтәһе лә һуңлап килде» тигән
Шиғырым да ҡай бер яғынан
Миңә генә түгел, Ғәҙелкарам
Ағайыма ла бит ҡағыла.
Ғәрип ҡуллы көйө өйгә ҡайтҡас,
Артта ҡалғас һуғыш йылдары,
Ғүмер үткәс, яу ҡырынан килеп,
Эҙләп тапты уны миҙалы.
Ул ҡарт ине инде. Сир һәм яҙмыш
Екте уны һуңғы тәртәгә.
Ундай саҡта бер ни тормайҙыр ул
Төрлө дан һәм төрлө мәртәбә.
Уға бер ни кәрәк түгел ине:
Көмөшө лә, хатта алтыны.
Бер ҡәбергә һыйып бөттө уның
Бөтә ғүмере һәм яу ҡыры.

Был монологтың һуңғы юлдары, үҙ сиратында, яу яланында ҡорбан булған исемһеҙ һалдат яҙмышына арнап, рустың Сергей Орлов атлы яугир шағиры яҙған «Его зарыли в шар земной…» тигән йөрәк тетрәткес һүҙҙәрҙе хәтергә төшөрөп ҡуя.

Монолог тигәндән, һөйләмдең был төрө «Бер туғандар» поэмаһында шаҡтай киң ҡулланыш тапҡан. Дөрөҫөрәге, шағир күберәк диалогик һөйләмгә мөрәжәғәт иткән. Лирик герой даими рәүештә тиерлек ағалары менән, әсәһе һәм еңгәһе менән һөйләшә. Тик тегеләре яуап ҡайтармай – һөйләшеү бер яҡлы килеп сыға. Шуға күрә тыштан ҡарағанда диалогҡа оҡшап торған һөйләм йыш ҡына монолог төҫөн ала.

Ошо ярым диалог, ярым монолог һымаҡ яңғыраған һөйләмдәр ярҙамында автор һуғыш йомғаҡтарына ғына түгел, бәлки бөтә

быуатҡа үҙенең ҡарашын белдерә, баһаһын бирә. Ағалары, еңгәһе менән һөйләшкәндә лирик геройҙың эске донъяһы ла асылып киткәндәй була, автор тауышы ла үҙен нығыраҡ һиҙҙерә. Үҙ яҙмышын ағалары яҙмышы менән сағыштырып, лирик герой, мәҫәлән, үҙен уларҙан бәхетлерәк һанай, сөнки ул ағаларына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәгән, донъяны ла күберәк гиҙгән, күберәк күргән һәм күберәк белгән. Ләкин бәхетте шағир былай бер яҡлы ғына, тар итеп кенә күҙалламай. Ағларына ҡарағанда бәхетлерәк булыуының төп сәбәбен ул «тыуыу, үҫеү тура килде башҡа осор, заманға» тип аңлатыу яғында. Йәғни, бәхет һәм заман төшөнсәләрен бергә ҡуйып, шағир уларға шаҡтай киңерәк һәм тәрәнерәк ҡараш ташлай. «Ниндәй һуң ул ошо беҙҙең быуат?» тигән һорау борсой уны:

Канһыҙ булған беҙгә саҡлыһы.
«Канһыҙ» тигән уны бөйөк Пушкин
Әсенгәндә йәне-күңеле.
Ә беҙҙеке ниндәй? Барған һайын
Канһыҙлана бара түгелме?

Беҙҙең алда – поэмала файҙаланылған әҙәби факттарҙың тағы бер өлгөһө: XX быуатта йәшәгән башҡорт шағиры үҙ дәүерен бөйөк Пушкин ижад иткән дәүер менән сағыштырып ҡарай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, сағыштырыу шағирға күңел тыныслығы килтермәй, сөнки заманалар торған һайын ҡанһыҙлана ғына барған төҫлө тойола уға. Әҫәрҙең бынан ике тиҫтә йыл элек яҙылғанлығын иҫкә алғанда, Н. Нәжмиҙең ҙур шағир һәм ҙур аҡыл эйәһе булғанлығына тағы бер тапҡыр ышанаһың. Ағалары менән башланған диалогты дауам итеп, лирик герой былай ти:

Бөтөп килә һеҙ башлаған быуат,
Ул һеҙһеҙ һәм минһеҙ бөтәсәк.
Канлымы ул, ҡанһыҙмы ул булыр
Киләсәге? Бөтә киләсәк?

Киләсәкте ҡайғыртып, уның ҡанлымы, ҡанһыҙмы булыры хаҡында уйланғанда, шағир тағы бер тапҡыр «йылдар аша үткәндәрҙе иҫкә» төшөрөп ала: һуғыш осоронда ағаларының биографияһына һеңеп ҡалған Дон йылғаһы менән Ржев ҡалаһына мөрәжәғәт итә ул,

ләкин йылға ла, ҡала ла өндәшмәй. Лирик герой уларҙың яуап биреренә өмөт тә итмәй. Сөнки ағалары яҙмышын уртаҡлашыусылар аҙ булғанмы ни? «Мин күп күргәнмен шул, күп нәмәләр ҡанлы, томанлы», – тип яуаплар төҫлө уға Дон. «Ул ҡан бутҡаһының ҡайһы ярмаһын һуң белеп бөтәһең?» – тип әйтер кеүек Ржев.

Үрҙә телгә алынған әҙәби факттарҙың роле поэмалағы теге йәки был фекерҙе ҡеүәтләп ебәреүгә генә ҡайтып ҡалмай. Уларҙа ниндәйҙер дәрәжәлә шағирҙың эстетик ҡараштары ла сағылып китә. Хәйер, Н. Нәжмиҙең эстетик ҡараштары сағылыш тапмаған берәй эпик әҫәре бармы икән ул? «Бер туғандар» ҙа шундайҙар иҫәбендә. Поэмала ике тапҡыр шиғриәткә ҡағылышлы мәсьәлә күтәрелә. Ике осраҡта ла автор «поэтик аймылыштырыу» алымын ҡулланған. Үҙ ваҡытында был терминды әҙәбиәт фәне әйләнешенә башҡорт шиғриәтен (шул иҫәптән Н. Нәжмиҙекен дә) бөтә нескәлектәренә тиклем тикшерергә яратыусан талантлы ғалимыбыҙ К. Әхмәтйәнов индергәйне. «Бер туғандар» поэмаһында «поэтик аймылыштырыу» алымының ни рәүешле ғәмәлгә ашҡанын ике миҫал нигеҙендә күҙәтергә мөмкин. Уларҙың тәүгеһе былай яңғырай:

Һеҙҙең ғүмер оҙайырмы-юҡмы,
Күскәс минең шиғри юлдарға.
«Ә һуң шиғыр үҙе ғүмерлеме?»
(Сумам үҙем шомло уйҙарға.)

Күреүебеҙсә, ошо юлдарҙың баштағы икеһендә һүҙ поэма геройҙары тураһында бара. Исемдәрен шиғыр ҡалыбына һалып, шағир уларҙың ғүмерен оҙайтырға иҫәп тота. Йөкмәткеһе менән был юлдар бер ни тиклем әҫәргә эпиграф итеп килтерелгән бағышлауға ла ауаздаш. Ҡалған ике юлда автор фекере киҫкен үҙгәрә һәм уның ағышы көтөлмәгән боролош яһай: иҫләмәҫтән кеше ғүмере шиғыр ғүмеренә әйләнеп китә. Ләкин герой, быуаттарҙан быуаттарға күсеп, туҡтауһыҙ дауам иткән ҡан ҡойоштар кеше ғүмерен генә түгел, шиғриәт ғүмерен дә ҡыҫҡартып ҡуймаҫмы тигән хәүефле уйҙарға бирелә. Матурлыҡ, изгелек һағында тороусы шағирҙы шиғриәттең киләсәге борсой.

Поэтик аймылыштырыуҙың икенсе өлгөһө лә шиғриәткә бәйле. Был юлы лирик герой башта өлкән ағаһының көс-ғәйрәтенә һоҡлана, уның менән ихлас ғорурлана, сөнки ул, оло йәштә булыуына

ҡарамаҫтан, бура бураған бүрәнәнең гел йыуан башынан күтәргән. Артабан реаль тормоштан алынған ошо факт көтмәгән ерҙән бүтән яңғыраш ала ла ҡуя – шағир хеҙмәте бура бурауға тиңләнә:

Шиғыр йортон мин дә бурайым да…
Уҙған көйгә алтмыш бишемдән.
Мин дә, йүнһеҙ, күтәрәмен, буғай,
Бүрәнәнең йыуан башынан.

Бер һүҙ менән генә әйткәндә, Н. Нәжмиҙең «Бер туғандар» поэмаһы, тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолһа ла, ысынында иһә шаҡтай ҡатмарлы әҫәр. Мин уны күп ҡырлы, күп темалы әҫәр тиер инем хатта. Сөнки, күләме яғынан әллә ни ҙур булмаһа ла, унда байтаҡ мөһим мәсьәләләр күтәрелгән. Өҫтәүенә, уларҙың күбеһе – кешелеккә мәңге тынғылыҡ бирмәй, уны мәңге борсой торғандарҙан. Тел-стиль сараларының байлығы йәһәтенән дә, сюжет һәм композицияның ыҡсымлығы менән дә әҫәр ифрат отошло. Хәжәттәре төшкәндә, әҙәбиәт белгестәре уға ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырҙар әле, моғайын.

2001

НАЗАР НӘЖМИ ХАТТАРЫ

(Осрашыуҙар. Тәьҫораттар. Уйланыуҙар)

Назар Нәжми шәхесе менән ҡыҙыҡһына башлауым ҡырҡынсы йылдарҙың ахырына – илленсе йылдарҙың тәүге яртыһына ҡарай. Ауыл ете йыллыҡ мәктәбендә беҙҙе татар телендә уҡытһалар ҙа, ни эшләптер мине башҡорт әҙәбиәте лә үҙенә тартты. Быға, бәлки, Әкрәм Вәли менән Ғилемдар Рамазанов та күпмелер кимәлдә сәбәпсе булғандыр. Яҡташ ағайҙарымдың гәзит-журнал биттәрендә әленән-әле күренгеләп торған әҫәрҙәрен эстән ниндәйҙер бер ғорурлыҡ тойғоһо кисереп уҡый инем.

Ул осорҙа башҡорт шағирҙары һәм яҙыусылары хаҡында библиографик белешмәләр булмаһа ла, ололар ауыҙынан ишетептер инде, Назар Нәжми, Ибраһим Абдуллин, Тимер Арыҫлан һәм Нәжиб Асанбаевтарҙың да тыуған ауылдары беҙҙекенән әллә ни алыҫ түгел икәнлеген шәйләнем. Ҡазанда баҫылып сыҡҡан китаптарҙы уҡып һәм Ҡазанда яҙылған дәреслектәрҙе үҙләштереп үҫкән кеше өсөн был бер аҙ сәйер ҙә, шул уҡ ваҡытта үтә шатлыҡлы ла хәл ине: баҡһаң, шиғыр-хикәйә яҙыусы ағайҙар беҙҙең үҙебеҙҙә лә бар икән дә баһа. Оҙаҡламай ошо алты шәхестең береһен уҡып-ишетеп кенә түгел, күреп белергә лә насип булды миңә.

… Илле икенсе йылдың йәйе ифрат ҡоро килде. Ошо эҫе йәйҙең бер йәкшәмбеһен Әғләм ағайым менән Рауза еңгәм Дим буйында үткәрергә ҡарар иттеләр. Был ҡарарҙы уларҙың күптәнге дуҫы Нур Дияров ағай менән уның ҡатыны Рәхимә еңгә лә хупланы һәм зур теләк менән ағайымдар ғаиләһенә ҡушылды. Ололар мине лә, йәйге каникул ваҡытында Өфөгә ҡунаҡҡа килгән үҫмерҙе, үҙҙәре менән алырға булды. Ағайымдар ул саҡта Гоголь һәм Фрунзе урамдары мөйөшөндәге ике ҡатлы таш йортта тора ине, шуға күрә һуҡмаҡ буйлап Изел ярына төшөп етер өсөн ваҡыт әллә ни күп китмәне. (Йәйәләр эсендә генә әйтеүем: һуғыштан һуңғы йылдарҙа ярайһы ғына бейек күренгән был йорт хәҙер инде, университеттың колонналы төп бинаһы, уның йәнәшендә гигант завод һәм башҡа мөһабәт корпустар ҡалҡып сыҡҡас, тауыҡ кетәгенә оҡшап ҡалған.)

Йылғаның теге яғына кәмәгә ултырып сыҡтыҡ, сөнки ул заманда Ырымбур күпере юҡ ине әле. Һыуҙы кисеп, урман ауыҙына барып

ингәс оҙаҡ йәйәүләмәнек – юлдың һул яғында йәйрәп ятҡан матур ғына бер аҡланға туҡталдыҡ. Ергә йәйгән япмаларыбыҙға ултырып, хәл йыйырға ла өлгөрмәнек, иғтибарҙы әле генә беҙ үткән юлдан атлап килеүсе бер йәйәүле йәлеп итте. Кәүҙәгә таҙа ғына күренә. Елкәһенә үк төшөп торған ҡалын сәстәре атлаған һайын елберҙәп ҡуя. Аҡ күлдәген һорғолт салбарына ҡыҫтырған. Һул ҡулының бармаҡ осона элгән пинжәген арҡаһына аҫҡан. Уң ҡулында берәй нәмәһе булғандырмы, юҡмы – уныһына иғтибар итмәгәнмен. Беҙ хужа булып алған аҡлан менән тигеҙләшкәс, әлеге йәйәүле аҙымдарын һиҙелерлек әкренәйтте лә:

– Был шаҙралар ҡайһы арала килеп өлгөргән бында? – тине һәм шунда уҡ ялан тултырып шарҡылдап көлөп ебәрҙе. (Шаҙра шаҙраны әллә ҡайҙан айыра тигәндәй, аҡланда ҡояшҡа ҡыҙынып ултырыусыларҙың икәүһе ысынлап та шаҙра ине.) Сая холоҡло, телгә бөткән Рәхимә еңгә лә һүҙһеҙ ҡалманы:

– Бәй, Назар, бөгөн нишләп үҙең генә? Ҡыҙҙар ҡайҙа?

– Бына шуларҙы эҙләп китеп барам. Ярай, хушығыҙ, ялығыҙ күңелле үтһен, – тине лә, юлын артабан дауам итеп, аҙымдарын шәбәйтте. Шунда мин әле генә беҙҙең эргәнән үтеп киткән һәм алсаҡлығы менән бер күреүҙә үк күңелде арбап алған кешенең Назар Нәжми икәнлеген белдем. Быға тиклем әҫәрҙәре аша таныш булған тере шағирҙы үҙ күҙҙәрем менән тәү тапҡыр күреүем ине был.

Ололарҙың шаярыу ҡатыш уйнап-көлөп, хатта хәтер ҡалырлыҡ һүҙҙәр ҡыҫтырып һөйләшеүе башта мине бер ни тиклем ғәжәпкә һалғайны. Бер аҙҙан бөтәһе лә асыҡланды. Фән кандидаты, Башпединститут доценты Нур ағай Дияров һәм инглиз теле уҡытыусыһы Рәхимә апай Назар Нәжмиҙе студент сағынан уҡ, ә минең ағайым – Башҡорт атлы дивизияһы һуғышсыһы, Дим буйҙарынан Эльба ярҙарынаса барып еткән һәм яуыз дошманды үҙ ояһында дөмөктөрөп ҡайтҡандан һуң оҙаҡ йылдар республикабыҙҙың хәрби комиссариатында хеҙмәт иткән яугир – шағирҙы запастағы офицер булараҡ беләләр икән.

Әйткәндәй, Нур Дияров – беҙҙең ауылдан сыҡҡан тәүге ғалим-уҡытыусы ине. Үҙенең «Ғүмер миҙгелдәре» тигән хәтирәләрендә («Ағиҙел» журналы, 1999 йыл, 2-се һан) Мостай Кәрим минең ауылдашымдың да исемен мәңгеләштергән. Рәхмәт уға.

Дим буйындағы көтөлмәгән осрашыуҙан һуң Назар Нәжми минең өсөн «таныш» шағирҙар иҫәбендә йөрөй башланы. Илленсе

йылдар уртаһында эшсе һәм ауыл хәбәрселәренең, шулай уҡ мәҙәниәт әһелдәренең Өфөлә бер-бер артлы үткәрелгән съездарында ла күрҙем мин уны. Ул саҡта шағир «Һәнәк» журналының баш мөхәррире булып эшләй ине, буғай. Ләкин уның менән яҡындан танышыуым тәүге осрашыуҙан һуң ун дүрт йыл үткәс кенә булды. Ул да көтмәгәнитмәгән ерҙән килеп сыҡты.

Алтмыш алтынсы йылдың йәйе башланып ҡына тора ине. Бөрө пединститутында дәүләт имтихандары тапшырырға әҙерләнеп йөрөгән көндәрҙә ҡалаға СССР Юғары Советына депутатлыҡҡа кандидат, билдәле яҙыусы Илья Эренбург килә икән тигән хәбәр таралды. Ул йылдарҙа Бөрөлә мәҙәниәт һарайы юҡ ине әле. Шуға күрә ҡалалағы бөтә яуаплы саралар институттың ҙур залында үткәрелә торғайны. Был юлы ла шулай булды. Зал халыҡ менән шығырым тулы. Унда башлыса ҡала предприятиелары һәм учреждениеларынан ебәрелгән вәкилдәр ултыра. Институтҡа ла күпмелер урын бирелгәйне. Ленин исемендәге стипендия алып уҡыған студент булараҡ ул исемлеккә мин дә эләккәнмен. Улай ғына ла түгел, ҙур түрәләр менән бер ҡатарҙан президиум ағзаһы ла иткәндәр. Депутатлыҡҡа кандидатты ул ваҡытта Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе булып эшләүсе Назар Нәжми оҙата килгәйне. Бер яуа башлаһа, яуа бит ул Хоҙайҙың рәхмәте: президиум өҫтәле артында урыным Назар ағай менән йәнәш тиерлек тура килде. Осрашыу йыйылышы башланып, эштәр бер аҙ яйға һалынғас (йыйылыш алдынан ҡала хужалары ла, депутатлыҡҡа кандидатты оҙатып йөрөүсе лә ярайһы ғына тулҡынландылар), күптәнге «таныш» ағайым миңә боролоп, бышылдап ҡына:

– Йәш күренәһең, студенттырһыңдыр, ахырыһы? – тип һораны. Мин дә бышылдап ҡына үҙем менән таныштырҙым.

Ошо йыйылыштан һуң егерме һигеҙ йыл үткәс Назар Нәжми Илья Эренбург менән тәүге һәм һуңғы осрашыуы хаҡында «Йылдар томаны аша» тигән иҫтәлеген яҙып баҫтырҙы («Ағиҙел» журналы, 1994 йыл, 11-се һан). Иҫтәлектең беҙҙең ҡалаға арналған өлөшөндә аҙ ғына хата ебәрелгән. Юл ыңғайында шул яңылышлыҡты төҙәтеп китеүҙе урынлы һанайым. Ул осорҙа партия ҡала комитетының беренсе секретары – Борис Иванович Фокин, ә Бөрө педагогия институтының ректоры Камил Әхиәров ине. Назар Нәжми иҫтәлегендә иһә Фокин – Рябковҡа, Камил – Шамилға әйләнгән.

Ғәжәйеп хәл: теүәл бер йылдан һуң ошо уҡ залда Назар Нәжми менән яңынан осрашырға яҙҙы. Беҙҙең ректор, төп мәғлүмәте буйынса

Башпединститутттың тарих факультетын тамамлаған белгес булһа ла, әҙәбиәт менән сәнғәтте лә үҙ күрә торған етәксе ине. Өфөнән йыш ҡына яҙыусылар, шағирҙар, артистар, рәссамдар саҡырып килтерҙе, уларҙы уҡытыусылар һәм талиптар менән осраштырып торҙо. Шундай осрашыуҙарҙың береһе алтмыш етенсе йылдың 15 майында булды. Ул шаулап-гөрләп үтте. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел ине: беҙгә ҡунаҡҡа ул саҡта уҡ башҡорт әҙәбиәтенең ыласындарына әйләнгән Мостай Кәрим менән Назар Нәжми килде. Уҙған йылдағыса, зал халыҡ менән шығырым тулы. Тик был юлы ҡала халҡы түгел, ә үҙебеҙҙең талиптар. Китап сауҙаһы ла ойошторҙоҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул бик бай булманы. Сөнки Өфөлә сыҡҡан китаптар беҙҙең ҡалаға һирәк килә торғайны. (Йәйәләр эсендә әйтеп уҙайым: хәҙер улар бөтөнләй күренмәй башланы.) Шулай ҙа Назар Нәжмиҙең пьесалар китабын һәм Мостай Кәримдең әҙәбиәт хаҡында мәҡәләләре тупланған «Күтәрелгән ҡояшҡа ҡарап» тигән йыйынтығын таптыҡ. Автографлы был ике йыйынтыҡ әле булһа минең шәхси китапханамды биҙәп тора. Шуларҙың береһенә былай тип яҙылған: «Әнғәм ҡустыма шиғыр кисәһендә осрашыу иҫтәлеге итеп. Назар Нәжми. 15.V.67».

Ошо осрашыуҙан һуң йылға яҡын ваҡыт үткәс Назар Нәжмиҙең тәүге юбилейы булды – уға илле йәш тулды. Юбилей көндәрендә шағирға хөкүмәтебеҙҙең юғары наградаһы – Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены тапшырылды. Республикабыҙҙың ваҡытлы матбуғат биттәрендә мәҡәләләр баҫылды. Шуларҙың береһенә – Ғ. Рамазановтың «Ағиҙел» журналында (1968 йыл, 2-се һан) донъя күргән «Шиғриәт ҡапҡаларын асыусы» тигәненә туҡталып китеүҙе кәрәкле һанайым. Күләме яғынан был мәҡәлә зур түгел, әммә йөкмәткеһе менән шағирҙың тормош һәм ижад юлын өйрәнеүгә бағышланған монографик очерктың миниатюраһына оҡшап тора. Назар Нәжмиҙең ижадын эҙмә-эҙлекле, тотош бер күренеш итеп яҡтыртҡан тәүге өлгө ине ул. Бында бөтәһе лә бар: шағирҙың биографияһынан ҡайһы бер факттар ҙа килтерелгән; уның әҙәбиәт майҙанына табан яһаған тәүге аҙымдары ла күҙалланған; яу юлдары ла сағылыш тапмай ҡалмаған; һуғыштан һуңғы ижады ла күҙәтеүгә алынған. Мәҡәләнең авторы Назар Нәжми лирикаһының мөһим үҙенсәлектәренән береһен уның тормош менән тығыҙ бәйләнгән булыуында, тормошто яһалма матурлап түгел, ә бөтә ҡаршылыҡтары һәм ауырлыҡтары менән һүрәтләүҙә күрә. «Тормоштоң үҙе кеүек, – тиелгән унда, – Назар Нәжми поэзияһы ла күп яҡлы, музыка теле менән әйткәндә, полифоник поэзия».

Егерме туғыҙ йылдан һуң, ошо мәҡәләне күҙ уңында тотоп, «Күңел дәфтәренән» тип аталған иҫтәлектәрҙең «Юбилейҙар һәм бүләктәр» тигән бүлегендә («Ағизел» журналы, 1997 йыл, 6-сы һан) Назар Нәжми былай тип яҙҙы: «… миңә 50 йәш тулғаны кемдеңдер иҫенә төшә. Мәрхүм Ғилемдар Рамазановтан тиҙ генә мәҡәлә яҙҙыралар». Ошо юлдар менән (шағирға ихтирамым әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур булһа ла һәм уның яҡты иҫтәлеге алдында башымды түбән эйһәм дә) һис кенә лә килешкем килмәй. Әҙәби күренештәрҙе тикшереүгә һәм барлауға арналған кесе күләмле яҙмалар жанр йәһәтенән «мәҡәлә» тип аталһалар ҙа, улар теге йәки был хеҙмәт коллективы өлгәшкән сираттағы ҡазаныштарҙы һанап сығыуға ҡоролған гәзит мәҡәләһе түгел. Әҙәби тәнҡит мәҡәләһе, ижадтың башҡа төрҙәре һәм формалары һымаҡ уҡ, бик күп көс һәм ваҡыт талап итә торған жанр ул. Был турала һүҙ ҡуйыртып тормаҫҡа ла булыр ине. Ләкин Ғ. Рамазанов мәҡәләһенә бәйле белдерелгән ҡараш күп йылдар үткәндән һуң йәнә үҙен һиҙдереп ҡуйҙы. Ул былайыраҡ булды.

Туҡһан етенсе йылдың апрель баштарында Яҙыусылар союзы Өфөлә ниндәйҙер йыйылыш үткәрҙе. Шунда мин дә саҡырылғайным. Форсаттан файҙаланып «Ватандаш» журналының баш мөхәррире Ғ. Хөсәйенов менән осраштым һәм Назар Нәжмиҙең яҡынлашып килгән оло юбилейы айҡанлы мәҡәлә яҙырға теләүемде белдерҙем. (Асылда ул яҙыла башлағайны инде.) Мөхәррир минең был ниәтемде хупланы. Республика мәктәптәрендә башҡорт әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен алып барыусы уҡытыусыларҙың рус телендә баҫылып сыҡҡан материалдарға ҡытлыҡ кисереүҙәрен иҫтә тотоп, мәҡәләне шул телдә яҙыу тураһында ла һүҙ ҡуйыштыҡ. Ай – ай ярым эсендә ул яҙылып бөттө. Мин уны «Путь к зрелости и признанию» тип атаным. Яҙа башлағас, мәҡәлә артыҡ ҙур булып китте – ике табаҡҡа барып баҫты. Шаҡтай ҡыҫҡартылып, ул шул уҡ исем аҫтында шағирҙың тап 80 йәше тулған айҙа баҫылып сыҡты («Ватандаш» журналы, 1998 йыл, 2-се һан). Иң ҡыҙығы иһә шунда: туҡһан етенсе йылдың ноябрь баштарында, мәҡәлә баҫылырға әҙерләнеп ятҡан көндәрҙә, миңә Назар Нәжмиҙән хат килеп төшә. Хат 29 октябрҙә яҙылған. Унда шундай һүҙҙәр бар: «Ватандаш» журналына ла һинән яҙҙырып алыуҙары тураһында әйттеләр». Был һүҙҙәргә мин битараф ҡала алманым, әлбиттә. Уға ебәргән яуап хатында үҙемдең ризаһыҙлығымды белдерҙем һәм мәҡәләнең яҙылыу тарихын бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙем. Минең «баш күтәреүемде» Назар ағай нисегерәк ҡабул иткәндер,

уныһын әйтә алмайым. Сөнки артабанғы хатында ул был турала һүҙ ҡузғатмағайны. Әммә юл ыңғайында бер нәмәгә иғтибарҙы йүнәлтмәй китеп булмаҫ: хаттарға шағир бик тиҙ яуап бирә торғайны. Донъя мәшәкәттәре арҡаһында оҙағыраҡ яҙмай торһам, телефон аша һөйләшкәндә лә, хат аша ла шелтә һүҙҙәре ишетергә тура килгеләне. Туҡһан етенсе йылдың 5 мартында яҙылған хат, мәҫәлән, былай тамамланған: «Һин хат яҙырға яратмайһың, булһа кәрәк. Тәүге хатымды ла яуапһыҙ ҡалдырҙың. Мин ундай хәлгә күнекмәгәнмен». Минең тарафтан оло шағирға ҡарата ниндәй дорфалыҡ күрһәтелгән! Үҙемдең иғтибарһыҙлығыма әле булһа үкенеп бөтә алмайым.

Назар Нәжмиҙең 50 йәшлек юбилейына бәйле тағы бер эпизод хәтергә һеңеп ҡалған. Алтмыш һигеҙенсе йылдың көҙгө айҙарында, һуңлабыраҡ булһа ла, шағирҙың бер томлыҡ «Һайланма әҫәрҙәр»е баҫылып сыҡты. Быға тиклем донъя күргән китаптарынан ул бик күпкә айырыла ине: күләме яғынан да, биҙәлеше менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә. Матур итеп эшләнгән тышлыҡ менән титул бите араһында авторҙың рәсеме (инкрустация ысулын ҡулланып яһалғанға оҡшап тора) урынлаштырылған. Рәсем дә ғәҙәти түгел. Ҡулына китап тотоп ултырған шағирҙың йөҙө ҡырыҫ, ирендәре ҡыҫылған, ҡаштары йыйырылған, ҡарашы етди. Нимәгәлер кәйефе ҡырылған әллә ағайҙың?..

Әлбиттә, был һүрәтте һәр кем үҙенсә уҡырға, үҙенсә аңларға, үҙенсә ҡабул итергә мөмкин. Миндә иһә ул тап әле генә һеҙҙең менән уртаҡлашҡан тәьсоратты ҡалдырҙы. Уның дөрөҫкә килеүе лә бик ихтимал. Сөнки Назар Нәжмиҙең бер томлыҡ «Һайланма әҫәрҙәр»ен ел-ямғырҙар ҙа урап уҙманы бит. Китаптың 275 – 276-сы, 279 – 282-се биттәре ҡырҡып алынды һәм улар урынына яңылары йәбештерелде. Был иһә һуңғы биттәргә лә йоғонто яһаны – йөкмәткегә ҡарап, үҙеңә кәрәк әҫәрҙе эҙләй башлаһаң, уны тиҙ генә табып алырмын тимә.Күп уҡыусы быға, бәлки, иғтибар ҙа итмәгәндер. Ә мин, беҙҙең ректорҙың һөйләүе буйынса, уның серен белә инем. Ул башлыса беҙҙең ҡалаға бағышлап яҙылған «Бөрө… Бөрө… » тигән шиғыр арҡаһында шулай килеп сыҡҡан. Һуңыраҡ был әҫәрҙең яҙмышы тураһында шағирҙың үҙенән дә белдем мин.

Туҡһан етенсе йылда «Һәҙиә Дәүләтшина уҡыуҙары» сиктәрендә беҙҙең институтта ике йылға бер тапҡыр үткәрелә торған вуз-ара ғилми конференцияла, «Жизнь и творчество Назара Наджми (К постановке проблемы)» тигән темаға доклад менән сығыш яһағайным.

Докладтың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе конференция материалдарын туплаған йыйынтыҡта ла баҫылып сыҡты. Йыйынтыҡтың бер данаһын, «Назар ағай! Был китаптың 6–8-се биттәрендәге тезистар һеҙгә кескәй генә бүләк булһын» тигән һүҙҙәр яҙып, уға ебәрҙем. Һәр ваҡыттағыса, яуап тиҙ килде. Мәҡәлә әллә ни ҙур булмаһа ла, шағирға оҡшаған һымаҡ тойолдо. Уның иғтибарын айырыуса «Һәҙиә Дәүләтшинаныҡы шикелле, Назар Нәжмиҙең дә ижади яҙмышы күпмелер кимәлдә беҙҙең ҡала менән бәйле» тигән фекер йәлеп иткәйне. Ошо хаҡта ул миңә былай тип яҙҙы: «Минең ғүмерҙе Бөрө менән бәйләүең бер яңылыҡ булып тойолдо. Ысындан да минең малай сағым (ә ниндәй йылдарҙа әле) ул ҡала менән бәйле. Беләһеңме икән, минең «Бөрө… Бөрө… » тигән шиғырым бар һәм ул шиғырға ҡарата, дөрөҫөрәге ул шиғырға бәйле тарих та бар. Ул тарих обком бюроһынан башлана. Бөрө – минең тормош башының бик үҙенсәлекле өлөшө, тик унда һирәк булам». Назар Нәжмиҙең ижад лабораторияһына ҡағылышлы ошо «серле бит» оҙаҡламай уның «Күңел дәфтәренән» тигән иҫтәлектәрендә киң ҡатлам уҡыусыға ла бөтә тулылығы менән асылды («Ағиҙел» журналы, 1998 йыл, 5-се һан).

Әгәр алтмышынсы йылдарҙың уртаһына тиклем Назар Нәжми әҫәрҙәре мине бары тик ябай бер уҡыусы булараҡ ҡына ҡыҙыҡһындыра, ошо уҡ ун йыллыҡтың аҙаҡтарында мин инде шағирҙың ижадына әҙәбиәтсе күҙлегенән дә ҡарай башланым. Бөрө педагогия институтын тамамлағас, мине шунда эшкә ҡалдырҙылар. Талиптарға рус әҙәбиәтен уҡытһам да, башҡорт әҙәбиәтен күҙәтеп барырға ла ваҡыт табырға тырыштым. Назар Нәжми тураһында мәҡәлә яҙып ҡарау теләге тәү тапҡыр алтмыш һигеҙенсе йылдың йәйендә тыуҙы. Уға шағирҙың «Көҙгө һуҡмаҡтар» тигән йыйынтығы сәбәпсе булды. Тупаҫыраҡ ҡағыҙға баҫылһа ла, тышлығы һәм йөкмәткеһе менән ул бик күркәм ине. Йыйынтыҡ әллә ни ҙур түгел, сөнки уға шағирҙың бары яңы әҫәрҙәре – һуңғы өс-дүрт йыл эсендә яҙылғандары ғына тупланған. Шиғырҙар шул тиклем матурҙар, фекергә шул тиклем байҙар, әле булһа – ҡырҡ йыл үткәндән һуң да – уларҙың береһе лә иҫкермәгән, береһенең дә уҡаһы уңмаған һәм уҡыусыға тәьҫир итеү көсө кәмемәгән. Дөрөҫ, йыйынтыҡты асып ебәргән «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә…» тигәне (юл ыңғайында әйтәйем: Назар Нәжмиҙең был шиғыры – иң яратҡан әҫәрем һәм мин уға әле лә битараф түгелмен) беҙҙең әҙәбиәт йәмәғәтселегендә төрлө ҡараш тыуҙырҙы. Бәғзе берәүҙәр, бигерәк тә тормошто тик яҡты быяла аша ғына күрергә күнеккән ағайҙар, авторҙы төшөнкөлөктә ғәйепләүҙән

дә тартынманы. Айырыуса шиғырҙың «Мин тыуғанмын, ахыры, иртәрәк» тигән һуңғы юлында ниндәйҙер хилафлыҡ эҙләнеләр. Асылда иһә шиғыр бик матур, Назар Нәжмисә ыҡсым, тәрән йөкмәткеле ине. Унда шағирҙың бөтә булмышы ялтлап киткәйне.

Быға тиклем бер нисә әҙәби тәнҡит мәҡәләһе яҙып баҫтырғаным булһа ла, Назар Нәжми шиғриәтенә арналғаны бик оҙаҡҡа һуҙылды – Бөрөлә башланып, Мәскәүҙә генә тамамланды (шул йылдың көҙөндә мин аспирантураға уҡырға индем). Оҙаҡҡа һуҙылыуҙың сәбәптәре күп, әлбиттә. Иң мөһиме, шиғриәт хаҡында фекер йөрөтөү һәм уға лайыҡ тел менән мәҡәлә яҙыу өсөн үҙенә башҡа әҙерлек кәрәклеген аңланым. Назар Нәжми тураһында күптән уйланылған мәҡәлә, ҙур ҡыйынлыҡтар менән булһа ла, ниһайәт, яҙылып бөттө, һәм мин уны «Советская Башкирия» гәзитенең әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире Евгений Петрович Бирюковҡа ебәрҙем. (Мәҡәләләремде ул бик теләп ҡабул итә торғайны. Ғүмере иртә өҙөлдө, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.) Ни эшләптер минең «беренсе ҡарлуғасымды» редакцияға барып ингәс тә баҫтырырға ашыҡманылар – «Поэтический голос Наджми» тигән баш аҫтында ул алтмыш туғызынсы йылдың март аҙаҡтарында ғына килеп сыҡты. Назар Нәжми шиғриәтен әҙәбиәтсе күҙлегенән сығып өйрәнеүҙә яһаған минең тәүге азымым ине был. Артабан инде яратҡан шағирым тураһында мәҡәләләр әкренләп яҙыла торҙо һәм төрлө баҫмаларҙа күренә килде. Был иҫтәлектәремдә шуларҙың ҡайһы берҙәренә документ булараҡ туҡталып китеү зыян итмәҫ тип уйлайым.

Аспирантурала уҡып йөрөгән саҡта Назар Нәжмиҙең Мәскәүҙә баҫылып сыҡҡан «Осенние тропы» тигән китабы айҡанлы икенсе мәҡәләмде яҙҙым. Минең иғтибарҙы йәлеп иткән был ике йыйынтыҡтың атамалары ике телдә яңғыраған бер үк фекерҙе аңлатһа ла, йөкмәткеләре менән улар бер-береһенән бик ныҡ айырыла ине. Рус телендәге китапҡа шиғырҙар ғына түгел, «Ҡайындар», «Ҡапҡалар» һәм «Йыр тураһында баллада» тигән эпик әҫәрҙәр ҙә индерелгәйне.

Әлбиттә, эпик әҫәрҙәргә тотонорға миңә иртәрәк ине әле. Шуға күрә уларҙы башлыса һанап уҙыу менән генә сикләнергә тура килде.

«Зеркало души поэта» тип аталған был мәҡәләмде «Наш современник» журналына тәҡдим иттем. Журналдың тәнҡит бүлеге мөдире Владимир Степанович Семенов яҙманы минең алда уҡ уҡып сыҡты ла үҙенең фатихаһын бирҙе. Ләкин мәҡәлә ҡайһы бер ҡаршылыҡтарға ла осрамай ҡалманы: журналдың ул саҡтағы баш мөхәррир урынбаҫары В. Чалмаев атлы әфәнденең тотҡарлауы

арҡаһында йыйылған килеш бер нисә ай сығарылмай ятҡырылды. Владимир Степанович урынбаҫарға инеп һөйләшеп ҡарарға ла кәңәш иткәйне, ләкин мин уның кәңәшен тотманым. Ялынып йөрөйһөм килмәне. Георгий Марков, Григорий Коновалов, Петр Проскурин романдары һәм Василий Шукшин новеллалары хаҡында һәйбәт кенә мәҡәләләр яҙа торған был тәнҡитсе нишләп шиғриәткә тығылырға булды икән тип уйлап ҡуйыуҙан ары китмәнем. Шуныһы шатлыҡлы: хәстәрләп йөрөмәһәм дә, «Зеркало души поэта» барыбер баҫылып сыҡты («Наш современник» журналы, 1970 йыл, 7-се һан). Минең өсөн был ысынлап та шатлыҡ ине: күләме йәһәтенән мәҡәлә әллә ни ҙур булмаһа ла, талантлы шағырыбыҙ тураһындағы фекеремде үҙәк журналдарҙың береһендә әйтергә ирешеүемә ҡыуандым.

Назар Нәжмиҙең ошо ике китабы хаҡында һүҙ барғанда, мәҡәләләремә инмәй ҡалған бер фекер менән хәҙер, утыҙ йылдан ашыу ваҡыт үткәс, уртаҡлашып китеү яҙыҡ булмаҫ төҫлө. Ул саҡта мине күпмелер дәрәжәлә йыйынтыҡтарҙың атамаһы борсой ине. Ике осраҡта ла атамалар күктән алынмаған, әлбиттә: уларҙың йөкмәткеһе алтмыш өсөнсө йылда ижад ителгән «Беҙ үтәбеҙ көҙгө һуҡмаҡтарҙан…» һәм «Тағы килде бер көҙ…» тигән шиғырҙарҙа сағылған. Ҡырҡ менән илле араһындағы шағир ни эшләп әле көҙгө һуҡмаҡтар тураһында уйлана башлаған тигән һорау тынғы бирмәне миңә ул ваҡытта. Һуңыраҡ, Назар Нәжмиҙең «Кем уйлаған…» тигән автобиографик яҙмаларын уҡығас, хәл бер аҙ асыҡлана төштө кеүек: бала сағында кисергән ауырлыҡтар шағирҙы шулай борсолорға мәжбүр иткәндер, бәлки. Шөкөр, һыҙлана-һыҙлана булһа ла, ул һикһәнен дә егеттәрсә ҡаршыланы һәм оло юбилейын бынамын итеп үткәреп ебәрҙе. Уйлай китһәң, шағир ижадының сәскә атҡан осоро ла тап ошо көҙгө һуҡмаҡтарҙан үткән саҡҡа тура килә икән дә баһа: ғүмеренең икенсе яртыһында ул күпме шиғыр, күпме поэма һәм нисәмә пьеса яҙҙы! Ә шулай ҙа үҙәк өҙгөс бына был юлдарҙы оноторлоҡ түгел:

Тағы килде бер көҙ… Тағы бер көҙ
Ергә һирәк алтын тәңкәләр.
Ҡаҙҙар булып оса инде хәҙер
Яҙын сыҡҡан һары бәпкәләр.
Тағы килер көҙҙәр… Ә шуларҙың
Минһеҙ килер береһе бер ваҡыт,
Ә шунан һуң инде һәр ваҡыт.

Етмешенсе йылдарҙың тәүге яртыһы Назар Нәжми ижадында ифрат емешле осор булды. Өфөлә, Ҡазанда, Мәскәүҙә башҡорт, татар һәм рус телдәрендә шағирҙың бер-бер артлы ете китабы донъя күрҙе. Шуларҙың «Ҡарҙар яуа» тигәне авторға айырыуса ҙур ҡыуаныс алып килде – уға республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелде. Ошо дәүерҙә, атап әйткәндә – етмеш дүртенсе йылда, шағир өсөн тағы бер шатлыҡлы хәл булды: әҙәбиәтебеҙ ғилеменең оло таланты Ким Әхмәтйәнов «Назар Нәжми – шиғыр оҫтаһы» тигән монографияһын тамамлап, уҡыусы иғтибарына тәҡдим итте. Дөрөҫ, китаптар күп сыҡһа ла, ваҡытлы матбуғат биттәрендә уларға арнап яҙылған мәҡәләләр әллә ни күренмәне, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ошо бушлыҡты бер аҙ тулыландырырға ниәтләп, мин дә һүҙ ҡушырға булдым һәм «Советская Башкирия» гәзитендә (1976 йыл, 22 июль) «Щедрость таланта» тигән мәҡәләмде баҫтырып сығарҙым. Мәҡәлә башлыса Назар Нәжмиҙең Мәскәүҙә нәшер ителгән «Вслушиваясь в тишину», «Спасибо этому дому», «Всегда под звездами» тигән йыйынтыҡтарына таянып яҙылғайны. Өсөнсө мәҡәләм, ниһайәт, шағир йөрәгенә лә барып етте шикелле – ул миңә тәүге тапҡыр хат яҙҙы. Йәшермәйем, был хатты мин бик оҙаҡ көттөм – ун йылға яҡын. Үҙенә лә, башҡаларға ла саманан тыш талапсан, һүҙ әҙәбиәтебеҙҙең һәм сәнғәтебеҙҙең сафлығы һәм художество кимәле тураһында барғанда хатта ҡәләмдәштәрен дә ҡаты тәнҡитләүҙән тартынып тормаған шағирҙың яҙғандарыма ҡарата фекерен белер өсөн көттөм. Шуға ла минең өсөн был хат – иң ҡәҙерлеләрҙән. Хатта минең турала маҡтау һүҙҙәре әйтелһә лә, тыйнаҡһыҙлығым өсөн уҡыусынан ғәфү үтенеп, уны тулы килеш күсермәй булдыра алмайым. Бына ул:

«Әнғәм ҡусты Хәбиров!

“Литературная газета”ла Инна Ростовцеваның минең хаҡтағы мәҡәләһе сыҡҡас, рәхмәтемде белдереү юлын, – ҡатын-ҡыҙ булғас, бигерәк тә, – таба алманым. Мәскәүҙә, съезда осрашҡас Ростовцева: “Тәнҡитселәр ҙә кеше бит, уларҙың да үҙҙәренең яҙғандары хаҡында фекер ишетәһе килә”, – тип үпкә белдергәйне. Мин дә Һеҙгә июль айынан бирле рәхмәт һүҙемде яҙырға йыйынам, ләкин һаман “Бөтәһе лә һуңлап килде миңә…”

Мәҡәләгеҙгә мин бик һөйөндөм. Маҡталған өсөн һөйөнөү бер хәл, мин мәҡәләнең кимәле өсөн, үтә профессиональ оҫталыҡ менән

теге йәки был әҫәрҙең идея-художество достоинствоһын күреүегеҙ өсөн һөйөндөм. Үҙем хаҡында мәҡәләләр уҡыманым түгел, уҡыным, ләкин күптәргә һеҙҙәге тәрәнлек, әҫәрҙең елегенә етеү (һыҙыҡ өҫтөнә хаттың авторы алған. – *Ә.Х.*) етмәй ҡала. (Русса проницательность тип әйтелә торғандыр.)

Минең хаҡта шундай фекерҙә булыуығыҙ өсөн рәхмәт. Һеҙҙе Яңы 1977 йыл менән ҡотлайым. Ҙур ижади уңыштар теләйем, Яңы йылда һеҙҙе лә шатлыҡтар урап алһын.

Назар Нәжми.

27. X I I. 76».

Хәйер, уҡыусы алдында ғәфү үтенеүем, бәлки, урынһыҙҙыр ҙа. Сөнки «Советская Башкирия» гәзите хәбәрсеһенә биргән интервьюһында (1976 йыл, 11 декабрь һаны) шағир әлеге хатта һүҙ барған мәҡәләләргә үҙенең ҡарашын асыҡтан-асыҡ белдергән. «Минең тормошомда, – тиелгән унда, – ағымдағы йыл айырыуса яуаплы булды. “Советская Башкирия” һәм “Литературная газета”ла минең ижадым хаҡында рус уҡыусыһына тәғәйенләнгән мәҡәләләр баҫылып сыҡты. Үҙемдең адресҡа әйтелгән маҡтау һүҙен мин аванс рәүешендә ҡабул иттем һәм был аванстың миңә күп нәмә йөкмәгәнен яҡшы аңлайым».

Етмеш һигеҙенсе йылдың башында республикабыҙ йәмәғәтселеге Назар Нәжмиҙең 60 йәшен билдәләне. Ошо осорҙо хәтерләп, «Күңел дәфтәренән» тигән иҫтәлектәрендә шағир былай тип яҙҙы: «60 йәш тулғанда юбилей тантанаһы урынына ижади хисап кисәһе үткәрҙем. Кисәне үҙем алып барҙым. Ул, Ғәйнан Әмири әйткәнсә, бер яңылыҡ ине. Һәм минән һуң юбилейҙарҙы, әҙерәк үҙгәртә төшөп, минеңсә уҙғара башланылар» («Ағиҙел» журналы, 1997 йыл, 6-сы һан).

Шулайын шулайҙыр, әммә юбилей көндәрендә киң күләм матбуғат саралары уйнаған ролде лә тейешенсә баһалап китмәй мөмкин түгел. Улар иһә, ғәҙәттәгесә, ҙур әүҙемлек күрһәтте. Шул осорҙа гәзит-журнал биттәре аша Хәсән Туфан, Сибғәт Хәким, Фәүзиә Рәхимғолова, Ғайса Хөсәйенов, Суфиян Поварисов, Ким Әхмәтйәнов ише билдәле шәхестәрҙең шағирға атап әйтелгән һөйөү һәм ихтирам һүҙҙәре яңғыраны.

Назар Нәжмиҙең юбилейына көстән килгәнсә мин дә йәм өҫтәргә тырыштым: үҙебеҙҙең ҡала гәзитендә – «Стучусь в ворота человеческих сердец», «Советская Башкирия»ла – «Тревожить словом чуткие сердца», Мәскәүҙең «Литературная Россия»һында «К новым высо-

там» тигән мәҡәләләремде баҫтырып сығарҙым. Шуларҙың «Советская Башкирия»ла баҫылғаны менән бер мәрәкә лә булып алды. Юбилей айҡанлы редакция, шағирға бағышлап, ике мәҡәләнән һәм бер нисә шиғырҙан торған подборка бирергә булған. Мәҡәләнең икенсеһен – «Восхождение поэта» тип аталғанын – Ғәйнан Әмири яҙған. Ни эшләптер, уның мәҡәләһе минекенән һуң урынлаштырылған. Бер осрашыуыбыҙҙа Ғәйнан ағай, әллә шаярып, әллә инде ысын ҡатыш, үпкәләгән кеше һымағыраҡ ҡыланып, былай тине: «Һине өҫкә күтәреп, мине аҫҡа төшөргәндәр. Әгәр белгең килһә, Назар тураһындағы тәүге мәҡәләне мин яҙҙым. Уныһын "Рождение поэта" тип атағайным».

Ғәйнан Әмириҙең ысынлап та шундай исемле мәҡәләһе барлығын белә инем. Ул Назар Нәжмиҙең «Тамсылар» тигән тәүге китабы баҫылып сығыу айҡанлы яҙылған һәм шул уҡ «Советская Башкирия»ның (ул саҡта «Красная Башкирия» тип йөрөтөлгән) 1950 йылғы 29 октябрь һанында донъя күргән. Үҙемдән күп йәшкә өлкән кеше менән һүҙ көрәштереп торманым, әлбиттә. Өҫтәүенә, гәзит битендә мәҡәләләрҙең ниндәй тәртиптә бирелеүендә минең һис кенә лә ҡатнашым юҡ ине. Ғәйнан ағайҙың был һүҙҙәре үҙенә күрә бер шаярыу ғына булғандыр тип уйлап ҡуйыу менән сикләндем.

Әйткәндәй, етмеш һигеҙенсе йыл Назар Нәжми өсөн ваҡиғаларға ифрат бай булды. Әҙәбиәтебеҙҙе үҫтереүҙә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн һәм 60 йәше тулыу айҡанлы шағир хөкүмәтебеҙҙең тағы бер оло наградаһы – Октябрь Революцияһы ордены менән бүләкләнде. Февраль аҙаҡтарында Башҡорт академия драма театрында уның «Ҡыңғыраулы дуға» трагикомедияһы буйынса ҡуйылған спектаклдең премьераһы булды. Әммә шағир өсөн иң ҙур шатлыҡ – уның өс томлыҡ йыйынтығы булғандыр, моғайын. Был өс томлыҡ, әҙәбиәтебеҙ тарихында тәүгеләрҙән булып, алдан яҙылыу ысулы менән сығарылды. Һәм, әйтергә кәрәк, ул үҙен тулыһынса аҡланы, шикелле. Һәр хәлдә, беҙҙең институтта уға яҙылыу бик әүҙем үтте. Бөхтә итеп эшләнгән ошо өс томлыҡ минең ҡул аша үткән талиптарҙың (хәҙер инде – байтаҡ хеҙмәт стажы туплаған уҡытыусыларҙың) шәхси китапханаларын әле булһа биҙәп торалыр, тип уйлайым.

Ниһайәт, Назар Нәжмиҙең 60 йәшен билдәләгән йылда уның шәхесенә бәйле тағы бер ваҡиға булды: шағирҙың «Современник» нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан «Всегда под звездами» тигән китабы Рәсәй Федерацияһының М. Горький исемендәге премияһына тәҡдим

ителде. Һәр ваҡыттағыса, премияға дәғүә итеүселәр күп ине. Көҙгө айҙарҙа уларҙың әҫәрҙәре һәм китаптары хаҡында матбуғат биттәрендә фекер алышыуҙар башланды. Форсаттан файҙаланып, мин дә үҙ һүҙемде әйтергә булдым һәм Назар Нәжми шиғриәтенә арнап бер юлы ике мәҡәлә яҙҙым. Тура килһә килә бит ул, улар икеһе ике баҫмала («Поэзия глубоких мыслей» тигәне – «Советская Башкирия»ла, «Путь мой ратный…» – «Литературная Россия»ла) бер үк көндө – 24 ноябрҙә – донъя күрҙе. Ләкин мәҡәләләр артыҡ зур ҡыуаныс килтермәне. Ни сәбәптәндер (премия бүлеүселәрҙе, бәлки, «Всегда под звездами»ҙың күләме ҡәнәғәтләндермәгәндер, сөнки ул ысынлап та бик зур түгел ине), Назар ағай лауреаттар исемлегенә эләкмәне. Был – беренсенән. Икенсенән, мәҡәләләремдең шағирға бер төрлө генә тәьҫир яһамағанлығын, унда ҡаршылыҡлы фекерҙәр уятҡанлығын белдем. Был турала ул миңә сираттағы хатында асыҡтан-асыҡ яҙҙы. Шул хатты бында тулы килеш күсерәм:

«Әнғәм!

Үтеп барған йылда һинең менән танышыуға бәхетлемен (күрешеп танышыуҙы күҙ алдында тотам).

“Лит. Россия”лағы мәҡәләңде Мәскәүҙә уҡыным – обтекаемый булыуына аптырап ҡалдым. Бәлки, бында һинең ғәйебең юҡтыр, сөнки 24.XI. Мәскәүҙән ҡайтышлай самолетта “Сов. Баш.” күреп уҡығас, һинең ғәйеп юҡлығына нығыраҡ ышандым. Газета-радио шаулауын шауланы, ләкин бер төрлө хәбәр-хәтер юҡ, уға бик тынысмын, сөнки Өфөнән тороп ундай нәмәләрҙе алыу ситен.

Бөтәһе өсөн һиңә рәхмәт.

Яңы уңыштар, сәләмәтлек теләйем.

Назар Нәжми.

23.XII.78».

(Хаттың йәйәләр эсенә алынған һүҙҙәренә бер ни тиклем асыҡлыҡ индереп китергә кәрәктер. 26–27 октябрҙә Өфөлә Башҡортостан яҙыусыларының VIII съезы булды. Съезға ҡунаҡ итеп мин дә саҡырылғайным. Шул съезд ваҡытында күрешеп һөйләшеүҙе күҙ уңында тотҡандыр шағир, моғайын.)

Етмеш һигеҙенсе йылда ситләп уҙған премия Назар Нәжмиҙе һикһән икенсе йылда килеп тапты. Был юлы, премияның яҙмышы хәл ителгәндә, комиссия ағзаларын бер генә һорау ҙа борсомағандыр тип уйлайым. Сөнки шағирҙың тылы ныҡ ине. Бәлки, үткәндәге ха-

талар ҙа иҫәпкә алынғандыр. Һәр хәлдә, М. Горький исемен йөрөткән Рәсәй күләмендәге премияға Назар Нәжмиҙең Өфө һәм Мәскәү нәшриәттәрендә бер-бер артлы донъя күргән өс йыйынтығы («Дыхание», «Приглашение другу», «Стороны») бергә туплап тәҡдим ителгәйне. Йыйынтыҡтар тос, береһенән береһе күркәм, бай йөкмәткеле. Улар шағирҙың күберәк һуңғы йылдарҙа яҙылған әҫәрҙәренән тора. Уның «Урал» исемле яңы поэмаһы ла тап ошо осорҙа рус телле уҡыусының рухи хазинаһына әүерелде.

М. Горький исемендәге премияға ҡабаттан тәҡдим ителгәс, Назар Нәжмиҙең китаптарын тикшереүҙә махсус ҡатнашырға тура килмәне. Сөнки үҙәк матбуғат биттәрендә фекер алышыуҙар башланғансы, үҙебеҙҙең республика баҫмаларында ике мәҡәлә сығарып өлгөргәйнем инде. Шуларҙың береһе «Поэтик бейеклектәрҙе яулап» («Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы, 1982 йыл, 4-се һаң) тип атала. Ул Назар Нәжмиҙең ижади портретына ҡайһы бер һыҙаттар рәүешендәрәк яҙылғайны. Икенсеһе шағирҙың «Приглашение другу» исемле китабын тикшереүгә арналғайны, «Зов любви и памяти» тигән баш аҫтында «Советская Башкирия»ла (1982 йыл, 6 октябрь һаны) донъя күргәйне. Белмәйем, премия мәсьәләһе ҡаралғанда был мәҡәләләрҙең берәй йоғонтоһо булғандырмы-юҡмы, әммә Назар ағай уларға битараф ҡалманы, шуға һөйөндөм. Ҡош телендәй генә бер хатында ул былай тип яҙғайны: «Әнғәм ҡусты! 1982 йылда миңә булған иғтибарың өсөн рәхмәт әйтеп, Яңы 1983 йылда үҙеңә, ғаиләңә яңы бәхеттәр, сәләмәтлек һәм уңыштар теләп, Назар Нәжми».

Назар Нәжмиҙең ижад лабораторияһына (әлегә бик тәрәнәймәсә) еңелсә генә ҡараш ташлаһаҡ, шуны шәйләргә мөмкин: дәүләт премияһы шағирҙы ысын мәғәнәһендә ижадта яңы бейеклектәргә елкендерҙе – ул үҙенең икенсе һулышын алғандай булды. Был – ҡоро һүҙ түгел. Дүрт йыл эсендә бынамын тигән биш поэма тыуҙы: «Ғүмерлек йыр» «Ағым», «Бер туғандар», «Ике Зөләйха», «Тере ҡан». Уларҙың береһе лә теге йәки был ваҡиға айҡанлы ғына яҙылған еңел-елпе әҫәр түгел – һәр ҡайһыһында Назар Нәжмисә зур, йәшәйештең күп яҡтарына ҡағылышлы мәсьәләләр күтәрелә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был поэмалар тураһында тәнҡиттә лә, әҙәбиәтебеҙ ғилемендә лә һүҙ етерлек әйтелмәгән әле.

Премия алғандан һуң Назар Нәжмиҙең уғата ла дәртләнеп, уғата ла ҡанатланып эшләй башлауы уның төрлө матбуғат сараларына биргән интервьюларында ла сағылмай ҡалманы. «Советская Башкирия»

гәзите хәбәрсеһенә биргән яуабында (1983 йылдың 4 ғинуар һаны), мәҫәлән, ул, үҙенең ижади пландары менән уртаҡлашып, былай тине: «Теләһә ниндәй бүләк – ижади тормошта символик бер артылыш ул. Ирешелгәндәр күпме генә шатлыҡ алып килмәһен, ул яңы бурыстар йөкмәй һәм яңы үрҙәргә саҡыра».

«Литературная газета»ға биргән интервьюһында иһә (1983 йылдың 12 ғинуар һаны) шағир тәрәнерәк, фәлсәфәүи пландараҡ фекер йөрөтә һәм үҙ шиғриәтенең ҡайһы бер һыҙаттарына ла ҡағылып үтә. «Әгәр, – тиелгән унда, – минең ниндәйҙер яңы поэтик формалар һәм төрлө психологик фокустар эҙләү менән мауыҡмауымды иҫәпкә алһаҡ, ошондай ҙа ҡатмарлы осорҙа беҙҙең атлығыулы быуатты кәүҙәләндереүе еңел түгел. Билдәле булыуынса, ысын поэзия – һәр ваҡытта кеше тәбиғәте менән бер бөтөн һәм бүленмәҫ. Һәм ул, поэзия, үҙенең асылы менән кешенең тын алышы һымаҡ ябай һәм тәбиғи, уның йәне шикелле бай һәм серле».

Назар Нәжми менән аралашыуымдың һуңғы биттәре уның артабанғы юбилейҙарына бәйле. Шағирҙың етмеш йәшлеге бик болғауыр, ата – улды, әсә – ҡыҙҙы белмәй башлаған осорға тура килде. Егерменсе быуат дауамында ирешелгән бөтә ҡаҙаныштарыбыҙҙы инҡар итеү ғәҙәткә инеп китте. Хатта ҡырҡ бишенсе йылда халҡыбыҙ яулаған Бөйөк Еңеүгә лә тел тейҙерә башланылар. Йәмәғәтселек аңында ошондай кәйеф хөкөм һөргән мәлдә Назар Нәжмиҙең һуғыш йылдарында яҙылған, ләкин әлегә йүнләп тикшерелмәгән шиғырҙарына күҙ ташларға булдым. Һөҙөмтәлә «Назар Нәжмиҙең Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы лирикаһы» тигән мәҡәлә үҫеп сыҡты һәм ул «Башҡортостан уҡытыусыһы» (1988 йыл, 2-се һан) журналында донъя күрҙе. Йылдарҙың ни тиклем генә буталсыҡ булыуына ҡарамаҫтан, «Советская Башкирия» ла, әүәлгесә, юбилей мәшәҡәттәренән ситтә ҡалманы – шағирға арнап ҙур ғына подборка бирҙе. Шунда минең дә «Очаг поэта» тигән мәҡәләм бар ине.

Шағирҙың етмеш йәшенә бағышланған тантаналарҙы уның йәй урталарында баҫылып сыҡҡан «Атай йорто» тигән китабы ослап ҡуйҙы. Ул китап Назар Нәжмиҙең быға ҡәҙәр телгә алынғандарынан да тоҫораҡ ине. Унда авторҙың һуңғы ун йыл эсендә яҙылған шиғырҙары һәм поэмалары тупланған. Йыйынтыҡ Хәким Ғиләжевтың «Был донъяла һин йәшәйһең икән…» тигән баш һүҙе менән асылған. Хәким Ғиләжев стиленә хас уҫал тел менән шағирҙы яҡлап яҙылған ошо мәҡәлә миңә ифрат көслө тәьҫир итте. Бигерәк тә бына был юлда-

ры: «Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тип әйтәйемме, талантлы ҙур шағырыбыҙҙың илле йылдан артыҡ ижады әле һаман да тейешенсә өйрәнелмәгән, массовый информация селтәрендә лә (йырҙарынан башҡа) уның ижадын халыҡ араһында пропагандалау етмәй. Ә тәбиғәте менән сабыр, тартыныусан шағир, ҡайһы берәүҙәр кеүек, башҡаларҙы терһәктәре менән тәрткөләп, трибуна, микрофондарға ла ынтылып бармай, әгәр саҡырмаһалар. Мәрхүм Ким Әхмәтйәновтың "Назар Нәжми – шиғыр оҫтаһы" китабы бындай фәнни тикшеренеүҙең башланғысы ғына булды. Ундан артыҡ драманың, ун биштән артыҡ поэманың, биниһая шиғырҙарҙың авторы Назар Нәжми ижады тураһында төплө монография яҙыу мохтаҙлығы ла күптән йәшәп килә».

Ошо фекер Хәким Ғиләжевтың "Яҡынайыу" исемле ҡулъяҙма тураһында уйланыуҙар»ында оторо ла ҡеүәтләп ебәрелде. Шул да мәғлүм булһын: туҡһанынсы-туҡһан өсөнсө йылдарҙа ҡағыҙ биттәренә төшөрөлгән был уйланыуҙар Назар Нәжмиҙең туҡһан дүртенсе йылда, Хәким Ғиләжев әйтеүенә ҡарағанда, көс-хәл менән баҫылып сыҡҡан «Яҡынайыу» исемле яңы китабына баш һүҙ булып китте. Ҡабатлап әйтеүем, Хәким Ғиләжевтың ошо ике мәҡәләһе – «Был донъяла һин йәшәйһең икән…» һәм «Үҙ иманы менән» тигән мәҡәләләр – Назар Нәжми ижадына уғата ла иғтибарлыраҡ булырға кәрәклекте иҫкәртте кеүек. Әгәр шағирҙың алтмышын билдәләгән йылдарҙа уның хаҡында талиптарҙан диплом эше яҙҙырыу менән генә ҡәнәғәтләнгән булһам, етмеш бише тулған көндәрҙә иһә был талант эйәһенең ижады буйынса махсус семинар ойоштороу тураһында уйлана башланым. Минеңсә, был мәсьәлә тулыһынса өлгөрөп еткән һымаҡ ине. Уйым, иншалла, тормошҡа ашты: бына бишенсе йыл инде Бөрө дәүләт педагогия институтының филология факультетында талиптарҙың бер төркөмө Назар Нәжмиҙең поэтик ижадын өйрәнеү менән шөғөлләнә.

Әйткәндәй, бер хатымда был семинар хаҡында Назар Нәжмиҙең үҙенә лә һүҙ ҡатҡайным. Улай ғына ла түгел, ошо семинарҙа ҡатнашыусылар өсөн уҡыу ҡулланмаһы өҫтөндә эшләүемде лә белгерткәйнем, хатта ул әсбаптың эске төҙөлөшөн дә һүрәтләгәйнем. Шағир минең был «алдан ҡысҡырыуым»ды бик тыныс ҡабул итте, булһа кәрәк, сөнки туҡһан етенсе йылдың 15 ноябрендә яҙған хатында ул, артыҡ иҫе китмәйенсә: «Буласаҡ китабың тураһында ентекләп яҙыуың өсөн рәхмәт, яҙыла ҡалһа, уҡырға яҙһын», – тип әйтеү менән генә сикләнгәйне. Ошо һүҙҙәрҙән һуң йәйә эсенә тағы нимәлер

яҙылған, ләкин шунда уҡ танымаҫлыҡ итеп һыҙып ташланған. Хаттың аҙағында ике көндән һуң больницаға кереп ятасағы хаҡында ла әйтелгәйне. Үкенес, уйланылған китабымды шағир үҙе иҫән саҡта өлгөртә алманым. Бигерәк ҡапыл булды шул, көтмәгәндә-нитмәгәндә. Әсбап иһә тормош ығы-зығылары арҡаһында, шулай уҡ хәҙерге заманда Өфөгә барып, теләгән китапханаңда иркенләп эшләп ултырыу үҙе бер ҙур мәшәҡәткә әйләнеү һөҙөмтәһендә һаман ярты юлда туҡталып ҡалған килеш ята. Әммә уға һуңғы нөктәне ҡуйырыма иманым камил, өмөтөм ҙур.

Ғүмеренең көҙгө һуҡмаҡтары буйлап атлаған сағында мәшһүр шағирға шатлыҡ минуттары бүләк итеп ҡалыу бәхетенә лә ирешергә насип булды миңә. Шуға үҙем дә һөйөнөп бөтә алмайым. Туҡһан етенсе йылдың февралендә «Ағиҙел» журналы минең «Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып» тигән мәҡәләмде баҫып сығарҙы. Мәҡәлә Назар Нәжмиҙең «Тере ҡан» тигән поэмаһын тикшереүгә арналғайны. Журнал таралып күп тә үтмәне, шағирҙан хат килеп төштө. Әҙәбиәткә һәм шағирҙың үҙ ижадына ҡағылышлы башҡа мәсьәләләр ҙә күтәрелгәнгә күрә, хатты тулы килеш түгел, ә унан кескәй генә бер өҙөк килтереү менән сикләнәм:

«Әнғәм энем! Мәҡәләңде уҡып сыҡтым. Мәҡәләнең исемен уҡыу менән был поэманы мин яҙҙыммы икән ни тип уйлап ҡуйҙым. Әҫәрҙең елегенә төшөп, шулай анализлауҙы беренсе мәртәбә (үҙемдең әҫәрҙәргә ҡарата) тойҙом. Ҙур рәхмәт һиңә!».

Был һүҙҙәр әҙәп һаҡлау йөҙөнән генә әйтелмәгәндер, тип уйлайым. Назар ағай өсөн «Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып» көтөлмәгән бүләккә оҡшап китте һымаҡ, һәм шул көндәрҙә ул ысынлап та ҡанатлы хистәр, ҡыуаныслы минуттар кисергәндер, бәлки. Ярты йылдан ашыу ваҡыт уҙғас, туҡһан етенсе йылдың аҙаҡтарында яҙған хаттарының береһендә, шағир ошо мәҡәләгә яңынан әйләнеп ҡайтты һәм уны ҡабат уҡып сығыуы тураһында хәбәр итте. Мәҡәләләге ҡайһы бер фекерҙәр менән еңелсә бәхәскә лә ингән; ул фекерҙәрҙе ҡәтғи рәүештә кире ҡаҡмаһа ла, үҙенең ҡараштары менән дә уртаҡлашҡан. Был хатта шулай уҡ «Тере ҡан» поэмаһының тарихына, бигерәк тә уның тәү тапҡыр донъя күреүенә бәйле ҡыҙыҡлы ғына хәл-ваҡиғалар ҙа иҫкә алынғайны.

Ғөмүмән, Назар Нәжми менән хатлашыуыбыҙ бер ваҡытта ла татлы телләнеүгә, ярамһаҡланыуға, илгәҙәкләнеүгә, яғымлы һүҙҙәр менән һатыу итеүгә ҡайтып ҡалманы. Беҙҙе әҙме-күпме яҡынайтҡан,

һирәк-мирәк булһа ла хәбәрләшеп торорға мәжбүр иткән берҙән-бер илаһи көс – әҙәбиәт булды. Ә шулай ҙа, шағирҙы әҙгә генә булһа ла төрлө болоҡһоу уйҙарҙан арындырып тороу ниәте менән, уға күңел тыныслығы теләп яҙған бер хатым хәтерҙә. Бошоноу иһә уның алда торған 80 йәшенә бәйле ине. «Ул, – тип яҙҙы шағир, юбилейҙы күҙ уңында тотоп, – һуңғыһы буласаҡ… Шулай ҡарт булыуыма ҡарамаҫтан, үҙем тағы яңы китап сығарҙым, бер пьеса тамамланым. Ул пьеса үҙемә оҡшап та ҡуя, ләкин бер кемгә уҡыған юҡ әле».

Хатта телгә алынған яңы китап «Аҡ шишмә» тип атала ине. «Был китабым, – тип яҙҙы шағир икенсе хатында, – үҙемә оҡшамай, уның баш һүҙе менән генә ҡәнәғәтмен. Элекке китаптарға индерелмәгән ҡалдыҡ-боҫтоҡтарҙы йыйырға ла мәжбүр булдым, һуңғы яҙылғандар ҙа ҡайтыш. Хәҙер яҙмаҫҡа кәрәктер, тимен дә, яҙыла, ҡәһәрең…»

Бына ошондайыраҡ кәйеф менән йәшәне, булһа кәрәк, шағир үҙенең оло юбилейына табан атлаған көндәрҙә. (Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул ысынлап та һуңғыһы булып сыҡты. Күңеле һиҙгәндер, күрәһең.) Әммә «Аҡ шишмә»гә һүҙ тейҙерерлек түгел ине, минеңсә. Әлбиттә, халыҡ шағирының шундай ҙа ҙур юбилейы хөрмәтенә «Һайланма әҫәрҙәр» йыйынтығы сығарғанда ла ярап ҡуйыр ине лә бит, ләкин ни ҡылаһың, һүҙҙең ҡәҙере китә башлаған рәхимһеҙ бер заманда йәшәгәс. Икенсе яҡтан ҡарағанда, Назар Нәжмиҙең бөтә әҫәрҙәре лә һайланма түгелме ни? Уның нимәһен һайлайһың инде тағы? Авторҙың үҙ китабын оҡшатып бөтөрмәүе – уның һәр ваҡыттағыса шифриәткә ифрат ҙур талапсанлыҡ менән ҡарау һөҙөмтәһелер, моғайын. Китапҡа шағир үҙе яҙған баш һүҙ васыятнамә һымаҡ яңғырай хәҙер. Исеме лә ниндәй бит уның – «Әйтер һүҙем». Ни бары ҡырҡ ете юлдан торған был васыятнамәлә ни ҡәҙәр мәғәнә тослоғо, аҡыл зирәклеге һәм тойғо тәрәнлеге! Әйтерһең дә, шағир ошо ҡош телендәй генә һүҙендә үҙенең бөтә ижадына байҡау яһаған да күңелен борсоған уй-фекерҙәре менән уртаҡлашырға булған.

Беҙҙең хатлашыуыбыҙ яғымлы һүҙҙәр менән алыш-биреш итеүгә ҡоролманы, тигәйнем. Бының шулай икәнлеге үрҙә килтерелгән ҡайһы бер миҫалдарҙа сағылғандыр тип уйлайым. Өҫтәп, тағы берҙе хәтергә төшөрөргә мөмкин – уныһы Назар Нәжмиҙең «Йәнле шишмәләр» тигән китабыма белдергән мөнәсәбәтенә бәйле.

Туҡһан өсөнсө йылда академик Ғ.Б. Хөсәйенов кәңәше буйынса үҙемдең әҙәби тәнҡит мәҡәләләремде йыйынтыҡ итеп туплап, китап

нәшриәтенә тапшырҙым. Үҙемсә уға «Йырғанаҡтар йылғаға ҡоя» тигән исем дә ҡуштым. Өс йылдан һуң ул ниһайәт китап булып сыҡты. Нәшриәт хеҙмәткәрҙәре уға тағы ла матурыраҡ, ысын мәғәнәһендә шифриәтсә яңғыраған һәм йыйынтыҡҡа ингән мәҡәләләрҙең дөйөм йүнәлешен сағыуыраҡ асҡан атама биргәндәр. Минең өсөн бик тә ҡәҙерле һәм көтөп алынған ошо китабымды Башҡортостан яҙыусыларының XII съезында (1996 йылдың 30–31 октябре) осраш-ҡаныбыҙҙа Назар Нәжмигә бүләк итергә баҙнатландым. Бүләгемде ул шатланып ҡабул итте һәм ижадымда яңы уңыштар теләне.

Съездан һуң аҙна-ун көн дә үтмәне, Назар ағайҙан хат килеп төштө. Был хатта һүҙ фәҡәт минең китап тураһында ғына бара ине. Хаттың тәүге юлдарында шағир китапҡа хәҙергә күҙ йөрөтөп кенә сыға алыуы тураһында иҫкәртһә лә, ике мәҡәләне иғтибар менән уҡығанлығын да йәшермәгән һәм уларҙың береһендә тикшерелгән шиғырға үҙ ҡарашын белдереп, уҫал ғына һүҙҙәр ҙә әйткән.

Мәҡәләләрем оло шағирҙа төрлө фекер уятты һымаҡ. Теүәл дүрт айҙан һуң ул минең китапҡа яңынан әйләнеп ҡайтты. Туҡһан етенсе йылдың март баштарында яҙылған шул хаттан бер өҙөк килтерәм:

«Йәнле шишмәләр»еңде иғтибар менән уҡып сыҡтым. Бында бәхәсле нәрҫәләр байтаҡ, ул шулай булырға тейештер ҙә – һәр кемдең үҙ ҡарашы булырға тейеш бит. Мәҫәлән, мин, шәхсән, шағир тиеп танымаған кешеләрҙе һин күккә күтәрәһең икән, миндә бәхәс тыуҙырыуы тәбиғи. Китапта шул ярылып ята – һин мине ныҡ күҙәтеп бараһың икән, уның өсөн дә ҙур рәхмәт. Тора-бара шуны аңланым: шулай ҙа шиғриәттә үҙ концепциям бар икән. ‹…› Минең үҙемдең дә, әҙәбиәттә, шиғриәттә ниндәйерәк һында ҡалырмын икән, тип һуңғы ваҡытта уйланғаным бар. Шуның, мин уйлағандың, береһен, һин әйттең, әммә мин шиғриәттә тағы «ҡапҡа асыусы малай» булып ҡалырмын шикелле. Ауыр минуттарҙа шуларҙы уйлаһам, еңел булып китә».

Ошо хатты уҡып ултырғанда Ғ. Рамазановтың «Шиғриәт ҡапҡаларын асыусы» тигән теге мәҡәләһе келт итеп иҫкә килеп төштө. Тимәк, мәҡәләнең авторы шул йылдарҙа уҡ инде Назар Нәжмиҙең әҙәбиәтебеҙҙә биләйәсәк урынын дөрөҫ төҫмөрләгән. Әлбиттә, шағирҙың минең мәҡәләләремә ҡарата әйтелгән ҡайһы бер фекерҙәре менән бәхәслшергә лә мөмкин. Сөнки Назар Нәжмиҙең талантлы шағир ғына түгел, үткер һүҙле тәнҡитсе лә икәнлеген белһәк тә, теге йәки был әҙәби әҫәргә баһа биргәндә шағир – барыбер

шағир, ә тәнһитсе – тәнһитсе булып ҡалалыр, тип уйлайым. Ләкин бында шағирҙар яҙған тәнһит мәҡәләләрен инһар итеү тураһында һүҙ бармай. Улар яҙһындар, яҙыуҙарын дауам итһендәр, күп яҙһындар. Улар ҙа әүҙем яҙышһа, тәнһитебеҙ, бәлки, йәнләнеберәк китер.

Хәбәрләшеүебеҙ гел әҙәбиәткә бәйле мәсьәләләр тирәһендә генә барҙы, тигән фекерҙе ҡеүәтләүсе һуңғы миҫал. Шағирҙың 80 йәше айҡанлы «Советская Башкирия»ла (1998 йыл, 5 февраль) «Для тех, кто не бежит от красоты» тигән мәҡәләм баҫылып сыҡҡайны. Юбилей үткәс, телефон аша һөйләшкәнебеҙҙә шағир ошо мәҡәләгә үҙенең мөнәсәбәтен белдерҙе. Нигеҙҙә мәҡәлә уға оҡшағайны. Әммә эсен тырнаған ике төйөр барлығы ла һиҙелмәй ҡалманы. Беренсенән, мәҡәлә менән бергә бирелгән фотоһүрәт оҡшаманы шағирға, сәхнәлә йырлап торған артист шикелле итеп күрһәткәндәр тип ризаһыҙлығын белдерҙе. Икенсенән, «Иблис» поэмаһының исемен руссаға «Дьявол» тип тәржемә иткәнем менән килешеп бөтмәне. Минең ҡарамаҡҡа, «Дьявол» тигән атама поэманың йөкмәткеһенә тулыраҡ яуап бирә һымаҡ ине. Ә шағир иһә «Демон» тип тәржемә итеү яғындараҡ булды шикелле. Телефон аша икенсе һөйләшкәнебеҙҙә ошо поэманы рус теленә тәржемә итергә кәрәклеге тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайным. «Ул бик милли әҫәр, шуға күрә икенсе телгә ауҙарыуы ауыр»,– тип яуапланы шағир. Ә шулай ҙа, поэма үҙенең тәржемәсеһен көтә, тиер инем. Сөнки ул – рус теле аша башҡа халыҡтарҙың да уртаҡ хазинаһына әйләнергә лайыҡ әҫәр.

Бер осрашҡаныбыҙҙа Назар Нәжми беҙҙең ҡалаға килеп, талиптар менән шиғыр кисәһе үткәрергә ризалашҡайны. Хатлашҡанда ла, телефон аша һөйләшкәндә лә ошо кисәне ойоштороу мәсьәләһенә, уның ҡайһы бер деталдәрен асыҡлауға ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырға тура килде. Беҙгә килеп китергә шағирҙың теләге ҙур ине, булһа кәрәк. Тора-бара ул талиптар менән генә түгел, ҡала халҡы менән дә осрашырға ниәте барлығын белдерҙе. Бер һөйләшкәнебеҙҙә был теләгенең сәбәптәрен дә асып ҡуйҙы: берҙән, малай сағы беҙҙең ҡалаға бәйләнгән; икенсенән, уның әсәһе лә Бөрө районы ҡыҙы булған икән, шуға күрә шағир беҙҙең ҡаланы ла, районды ла берҙәй яҡын күреп, берҙәй үҙ итеп йәшәгән ғүмер баҡый. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, минән тормаған сәбәптәр арҡаһында был кисә, әҙерләнеп бөттө тигәс, үтмәй ҡалды. Үкенес, әлбиттә.

Кисәне хәстәрләп йөрөгәндә ғибрәтле бер хәлгә лә тарыным. Мәҙәниәт өлкәһендә эшләгән түрәрәк кеше: «Ғәйнан Әмири

күренмәй башланы, ниңә уны ла саҡырмайһығыҙ?» – тип мөрәжәғәт итте. Тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ғәйнан Әмиризең инде күптән ер ҡуйынында ятҡанлығын әйтеп аңлатҡас, әңгәмәләшем ҡыҙарынды-бүртенде лә башҡаса һүҙ ҡатманы. Ә Ғәйнан ағайҙы ул китап һөйөүселәр йәмғиәтенең рәйесе булараҡ хәтерендә ҡалдырған, сөнки шул осорҙа шағир беҙҙең ҡалала йыш ҡына күренер ине. Ошо тоҙһоҙ һорауҙан һуң мин үҙем өсөн бындай һығымта яһап ҡуйҙым: республика ҡалаларында һәм райондарында хакимиәт башлыҡтарының урынбаҫарҙары булып башҡорт, татар әҙәбиәтенә һәм мәҙәниәтенә хәбәрҙар кешеләр эшләүе хәйерлерәктер, маҡсатҡа ярашлыраҡтыр.

Туҡһан һигеҙенсе йылдың май урталарында кисәне үткәреү көнөн асыҡлау ниәте менән шағирҙың фатирына шылтыраттым – хәстәханала, тинеләр. Июль баштарында уға кескенә хат менән «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының икенсе һанын (унда Назар Нәжмиҙең «Ике Зөләйха» тигән поэмаһы тураһында минең мәҡәлә урынлаштырылғайны) бандероль итеп ебәрҙем. Ләкин яуап килмәне. Ошонан һуң ни эшләптер хәбәрләшмәнек.

Шағирҙың вафатын мин бик ауыр кисерҙем. Ҡырҡы үтмәгәйне әле – ул минең төшөмә керҙе. Уны һөйләһәң – әҙәм ышанмаҫ. Шәмшәде күле буйындағы ял йортоноң (был йортто Назар ағай бик ярата ине һымаҡ, сөнки уға бағышлап яҙылған бер нисә шиғыры ла бар) ашхана урынлашҡан бер ҡатлы таш бинаһы алдында шағир үҙенең китаптары менән һатыу итә. Минең алда бынан тап ҡырҡ һигеҙ йыл элек Дим буйында тәү тапҡыр күргән Назар Нәжми баҫып тора. Ҡул биреп күрешкәндербеҙме, юҡмы – уныһы тәғәйен генә иҫтә ҡалмаған. Минең ғәжәпләнеберәк ҡарауымды һиҙеп ҡалды, ахырыһы: «Бына ошо көнгә ҡалдыҡ, ҡусты» тигәндәй тойолдо. Төшөмдө ғаиләм ағзаларына һөйләнем. «Урыны ожмахталыр», – тиештеләр. Шуға шатландым.

2001

БЫУАТТАН БЫУАТҠА КҮСКӘНДӘ

(Кисәге һәм бөгөнгө шиғриәтебеҙ хаҡында)

1

Уҙған быуат менән әлегеһе ҡауышыр төндө бөтәбеҙ ҙә (бик үк ашҡынып булмаһа ла) ниндәйҙер бер эске тулҡынланыу менән көттөк. Күренекле шағирыбыҙ Муса Ғәлиҙең «Ҡапҡаңды ас, Быуат!» тигән поэма-монологында һымағыраҡ: «Нисек килер икән, ҡыңғыраулы аттар егеп мәллә? Яҡты күктән Ергә гөлдәр һибеп, йыһан карабында елеп мәллә?»

Күңел тыныслығы ла һиҙҙермәй ҡалманы үҙен Яңы быуатты ҡаршылағанда. Шик-шөбһәләр ҙә йөрөмәне түгел. Быуат менән быуат ҡына түгел, хатта мең йыллыҡтар осрашҡанға күрә лә шулай булғандыр ул, бәлки.

Иҫке быуаттың ҡасан бөтөп, яңыһының ҡасан башланыры хаҡында башты ҡаңғыртыусылар ҙа табылманы түгел Егерме берҙе көткәндә. Был тәңгәлдә киң күләм мәғлүмәт саралары айырыуса «тырышлыҡ» күрһәтте, шикелле. Ул иһә беҙгә лә йоғонто яһамай ҡалманы. Ихсан Әхтәмйәновтың ике меңенсе йылға аяҡ баҫҡанда уҡ егерменсе быуат менән хушлаша башлауын нисек аңлатмаҡ кәрәк, юғиһә? «Рәхмәт һиңә, Егерме!» («Ағиҙел» журналы, 2000 йыл, 1-се һан) тигән шиғырында ул, уҙған быуатта юлында осраған бар ялғанды үҙ ҡулдары менән емереүен һәм шул айҡанлы үтә ҡәнәғәтлек хистәре кисереүен белдереп, былай тип яҙҙы:

Быуатымдың яңыһына
Саф килеп инәмен мин.
Шуға һиңә – Егермегә:
– Мең рәхмәт! – тиәмен мин.

Әлбиттә, һәр шағирҙың үҙ иманы, үҙ ҡиблаһы. Әгәр ҙә «Рәхмәт һиңә, Егерме!»нең авторына «Болот-Ҡояш араһы» – «Хаҡ Тәғәлә сараһы» һымак тойола икән, бер һүҙ ҙә әйтеп булмай. Шулай ҙа, шиғырҙы ҡат-ҡат уҡығанда, тыштан матур яңғыраған рифмалар һүҙ

уйнатыу өсөн генә уйлап сығарылманы микән тигәнерәк шик тыумай ҡалмай барыбер.

Егерме берҙе көттөк көтөүен, ләкин, көнө-сәғәте килеп етеп, бер быуаттан икенсеһенә күскәндә һуш китерлек бер ни ҙә булманы: әйтерһең дә, һаҡта торған бер һалдатты икенсеһе алмаштырып ҡуйҙы ла, шуның менән вәссәләм. Ай ҙа иҫән, ҡояш та үҙ урынында, күк көмбәҙе лә ишелеп төшмәне, Хоҙайға шөкөр.

Тик был – тыштан ҡарағанда ғына шулай. Донъяның асылына төшөнөргә ниәтләберәк күҙ ташлаһаң быуаттар артылышына, иҫең китеп, хайран ҡалырлыҡ. Кеше аҡылының бер өлөшөн тәшкил иткән шиғриәт өлкәһендә генә лә күпме яңылыҡтар, асыштар, юғалтыуҙар һәм табыштар. Быға башҡорт шиғриәтенең дә үткәне һәм бөгөнгөһө бик һәйбәт миҫал булырлык.

Хәтерләйһегеҙ микән, бынан йөҙ ҙә бер йыл элек, 1900 йылдың 31 декабрендә, ун туғызынсы быуат үҙенең һуңғы һулыштарын алған сәғәттәрҙә, рустың буласаҡ бөйөк шағиры, ул саҡта иһә ни бары егермеһен тултырған һәм исеме әле бер кемгә лә билдәле булмаған Александр Блок, өҫтәлендә ятҡан ҡағыҙ битенә түбәндәге юлдарҙы теркәп ҡуйған:

Һуңға ҡалған юлсы һымаҡ
Йөрөйөм матурлыҡ эҙләп.
Ул ялтылдай ҙа, көлә лә,
Ә миңә инде барыбер:
Ҡурҡам, түгелеп китер тип,
Кубогымдағы шарабым.
Ғәжәп, тирә-йүндә – тынлыҡ,
Минең кубогым иһә буш,
Үлемдең китмәй уйымдан
Бик иртәләгән шәүләһе.

Рус телендәге шиғырҙың мәғәнәһен һаҡларға, уның дөйөм йөкмәткеһенә зыян итмәҫкә тырышып, һүҙмә-һүҙ яһалған был тәржемә, ихтимал, ишетер ҡолаҡҡа бик йәтеш тә түгелдер. Әммә килтерелгән өҙөктән шул аңлашыла: лирик геройҙың кәйефе шәптән түгел, уның эсе боша, кемделер юҡһына, яңғыҙлыҡтан хатта ҡәбер тынлығы сорнап алғандай тойола уға; шарап та ярҙам итмәй: күңелде күтәрәһе урынға – үлемде иҫкә төшөрә.

Бына ошондай халәттә ҡаршылай Блоктың лирик геройы Яңы быуатты. Әгәр әҙәбиәт ғилеменә ҡолаҡ һалып, шиғри әҫәрҙең лирик геройы менән уның авторы араһында йыш ҡына тышҡы оҡшашлыҡ та, эске кисерештәр уртаҡлығы ла булырға мөмкин тигән фекерҙе иҫкә төшөрһәк, Блоктың ун туғызынсы быуатты нисегерәк, нисәйерәк хистәр менән оҙатҡанлығын күҙаллауы ҡыйын түгел. Сәбәп нимәлә һуң? Май эсендә йөҙгән бөйөрҙө хәтерләткән егерме йәшлек егеттең күңелен ни эшләп әле ошондай яманһыу ҙа, болоҡһоу ҙа уйҙар биләп алған? Был һорауҙарға ҡайһы бер яуапты шағирҙың биографияһынан табырға мөмкин.

Петербург университеты ректоры йортонда тыуып, әҙәбиәт мөхитендә ҡайнаған әсәһе, өләсәһе, түткәләре ҡанаты аҫтында тәрбиәләнгән, Жуковский, Пушкин, Лермонтов, Фет, Майков, Полонский әҫәрҙәренең йоғонтоһон тойоп, уларға табынып тигәндәй үҫкән йәш шағирҙы әлегә, социаль-көнкүреш мәсьәләләренә ҡарағанда, үҙенең эске донъяһы ныҡыраҡ борсой. Уның сиктән тыш һәүәҫләнеүсәнлеге, нескә тойғоларға бирелеүсәнлеге, бөтә йөрәктән мөхәббәт утында янып-көйөргә һәләтле булыуы менән дә аңлатылалыр был хәл. Үҙеңдән егерме йәшкә олораҡ сибәр ҡатынға ғашиҡ булып, уны үлеп яратып ҡара әле!

Александр Блоктың әле телгә алынған шиғырына йыл һайын тип әйтерлек ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырға тура килә миңә. Яттан һөйләргә һәләтем бәләкәйҙән үк самалы булһа ла, был шиғырҙың айырым юлдары хәтеремә лә һеңгән инде. Күптән түгел, Рәмил Йәнбәктең яңыларҙан иҫәпләнгән бер шиғырын уҡып ултырғанда, Блок юлдары ҡабаттан ҡыбырлап ҡуйҙы хәтерем төпкөлөндә. «Барыбер» тип атала Рәмилдең ул шиғыры. Минең уйымса, был – бик матур шиғыр: эшләнеше менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә. Уны тулы килеш килтергәндә лә яҙыҡ булмаҫ тип уйлайым. Бына ул:

Оҙон коридорҙан атлап киләм,
Бик оҙон ул, оҙон коридор.
Нимә көтә уның аҙағында –
Минең өсөн инде барыбер.

Һөйгөм килде, бик һөйөлгөм килде –
Яҙҙар үтте кеүек аралап.
Аллаға ла күпме ялбарҙым мин –
Табылманы изге дауалар.

Һуңланыммы? Әллә иртә тыуҙым –
Бушҡа уҙа төҫлө ғүмерем.
Мин, ахыры, ерҙән киткәстен дә
Үҙ-үҙемде эҙләп йөрөрмөн.

... Оҙон коридорҙан атлап киләм,
Бик оҙон ул, оҙон коридор.
Аҙағында, бәлки, яҡтылыҡтыр –
Тик ул инде миңә барыбер.

Кемгә нисектер, миңә ҡалһа, рус шағиры А. Блок һәм башҡорт шағиры Р. Йәнбәктең был ике шиғыры араһында (уларҙы бер-береһенән теүәл йөҙ йыл айырып торһа ла) ниндәйҙер ауаздашлыҡ – аһәңдәр яҡынлығы бар һымаҡ. Ике әҫәрҙең дә бер үк мотив – күңел ҡайтыу мотивы менән һуғарылғанлығын тойоу ауыр түгел. Ләкин бер үк мотивтың төбөндә төрлө сәбәптәр ятыуын да шәйләмәй булмай. А. Блок шиғырының асылында ниндәй сәбәп ятҡанлығы хаҡында үрҙә әйттек инде. Ә бына Р. Йәнбәк шиғырындағы лирик геройҙың күңеле бөтөнләй башҡа сәбәптәрҙән ҡайтҡанға оҡшай – ул иртәгәһе көнгә ышанысын юғалтҡан. Ҡыҙыҡ, әгәр бөйөк Блок әҙәбиәткә ун туғызынсы быуаттың түгел, ә егерменсенең ахырында килгән булһа, ниндәйерәк шиғырҙар яҙыр ине икән? Билдәле шағирәбеҙ Әнисә Таһированың Блок һүҙҙәренә таянып яҙылған бер шиғырындағыса, бына бындай юлдар ярып сыҡмаҫ ине микән рус шағирының ташып торған ҡайнар йөрәгенән:

Һатылған һәм ҡыйратылған Рәсәй,
Һин көсләнгән ҡатын хәлендә.
Йәшәйешең – ғазап ҡамауында,
Ҡара ҡарғыш ҡына йәнеңдә.

Ҡайһы берҙә, А. Блоктың әлеге шул ун туғызынсы йөҙ һуңғы сәғәттәрен һуҡҡанда яҙып ҡалдырған шиғри юлдарын нисәнселер тапҡыр уҡығанымда, ике быуат ҡауышҡанда беҙҙең башҡорт шағирҙары ниндәйерәк хистәр кисерҙе лә, ниндәйерәк кәйеф-сафа ҡылды икән тигәнерәк һорау тыуып ҡуйғаны бар миндә. Ошо һорауға яуапты төрлө сығанаҡтарҙан эҙләп ҡарарға ла тура килгеләне. Тик иҫке быуатты оҙатып, яңыһын ҡаршылауға бағышланған бер генә шиғырға

ла тап булманым. Күрәһең, башҡорт шағирҙарында шарап һәм кубок ҡайғыһы булмағандыр ул саҡта. Улар, моғайын, милләттәштәре Аҡмулланың йөрәк түренән һарҡылып сыҡҡан «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» тигән саҡырыуынан алынған тәьҫорат аҫтында йәшәгәндәрҙер. Был саҡырыу хәҙер юҡҡа ғына хрестоматия битенә теркәлгән ҡанатлы әйтемгә әйләнеп киткән тиһеңме ни.

Шуныһы ҡыуаныслы, халыҡ үҙ мәғрифәтсеһенең аҡыллы һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмай ҡалмаған. Егерменсе быуат башында тейешле тарихи шарттар тыуғас, ул уҡыған, яңы тормош ҡорған, юғары мәҙәниәткә үрләгән. Халыҡтың күңел көҙгөһө тип нарыҡланған әҙәбиәт тә яңы быуатта яңы үҫеш дәүеренә ингән һәм үҙенең яңы битен яҙа башлаған. Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Шәйехзада Бабич, Сәйфи Ҡудаштар «Башҡа мәмләкәттәрҙә мосолмандарҙың хәле», «Башҡорт хәле», «Халҡым өсөн», «Ирек таңында» исемле шығырҙары менән асып ебәргәндәр был битте. Артабан яңы дәүер әҙәбиәтенең тәүге битен Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Мостай Кәрим, Назар Нәжмиҙәр юйылмаҫ, төрлө төҫтәге сағыу буяуҙар менән биҙәгәндәр. Яңы дәүер әҙәбиәтенең беренсе битен һүҙ сәнғәте өлкәһенә алтмышынсы һәм унан һуңғы ун йыллыҡтарҙа дәррәү килеп ингән быуын вәкилдәре ябып ҡуйҙы һәм ең һыҙғанып уның икенсе битен – Егерме беренсе быуатҡа ҡарағанын яҙырға тотондо.

Әлбиттә, бында бөтә исемдәр ҙә һаналманы. Һәм ул мөмкин дә түгел. Яңы осор әҙәбиәтенең тәүге битен асыуҙа, мәҫәлән, Сафиулла Рәхмәтуллин, Закир Һаҙый, Сафуан Яҡшығолов, Шафиҡ Әминев-Тамъяни, Ғәлә Хоҙаяров, Ямалетдин Юмаев, Фазыл Туйкин, Ғиззетдин Иҫәнбирҙин, Шәйхулла Тулвинский, Хәбибулла Ғәбитов, Бәхтиәр Мирзанов, Кәшфи Ҡәриповтар ҙа ҡатнашҡан. Был битте артабан тулыландырыу, уға ваҡыт талаптарына яуап бирерҙәй һыҙаттар өҫтәү бурысы Төхфәт Йәнәби, Булат Ишемғол, Маҡсуд Сөндөклө, Йософ Гәрәй, Батыр Вәлид, Мөхөтдин Тажи, Ғабдулла Амантай, Әкрәм Вәли, Мөслим Мараттар иңенә төшкән. Уларҙың йөгөн Сәләх Кулибай, Мөхәмәтйәр Хәй, Ғәлим Сәләм, Ғәйнан Әмири, Ҡадир Даян, Хәниф Кәрим, Мәлих Харистар күтәрешкән. Һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙа өлкәндәр сафына совет осоронда тыуып, совет мәктәбендә тәрбиәләнгән Ғилемдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев, Шәриф Биҡҡол, Муса Ғәли кеүек бер төркөм йәштәр килеп ҡушылды. Улар өлгөрөп етеүгә Әнғәм Атнабаев, Марат Кәримов, Абдулхаҡ Игебаев, Рафаэль Сафин, Рәми Ғариповтар ҡанат йәйә башланы. Алтмышынсы

йылдарҙа Атнабай менән Рәмиҙәрҙе Рауил Бикбаев, Булат Рафиҡов, Ғәлим Дәүләтов, Тимер Йосопов, Йыһат Солтанов, Муса Сиражи, Рауил Шаммас, Сафуан Әлибаев, Вафа Әхмәҙиев, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Барый Ноғомановтар ҡеүәтләп ебәрҙе. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, бында исемләнгәндәрҙең дә, исемләнмәгәндәрҙең дә һәр ҡайһыһы егерменсе быуат дауамында ҡулынан һәм көсөнән килгәнсә башҡорт шиғриәтен үҫтереүгә үҙенең өлөшөн индергән, шуға ла улар иғтибарға һәм ихтирамға лайыҡ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уҙған быуат тыуҙырған тарихи шарттарға, шул шарттар һөҙөмтәһендә мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә ирешелгән уңыштарға бер яҡлыраҡ, тик тәнҡит күҙлеге аша ғына ҡараш ташлау ғәҙәте лә юҡ түгел беҙҙә. Һыу менән бергә бәпесен дә сығарып түккән философҡа оҡшап ҡуйылмаһын ине. Элек Рәсәй мәмләкәтендә иҙелеп, кәмһетелеп йәшәгән тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә миллион ҡараңғы халыҡтың (уның ниндәй милләттән булыуына ла ҡарамаҫтан) фәкәт егерменсе быуатта уҡырға һәм яҙырға йлрәнеүе – бәхәсһеҙ. М. Горькийҙың «Коновалов» тигән хикәйәһендәге төп герой яҙмышын ғына иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Уҡый-яҙа белмәүе арҡаһында ни тиклем хитлана ул! Ундайҙар Рәсәйҙә аҙ булған тиһегеҙме әллә? Был бит – кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил, ысынбарлыҡтан алынған дәлил, яҙыусы уны тик дөйөмләштергән, типиклаштырған ғына. Әҫәр иһә бынан ни бары йөҙ йыл элек кенә – 1896 йылдың көҙөндә яҙылған.

Меҫкен Саша Коновалов хаҡында уйланып ултырғанда, ирекһеҙҙән Чечнялағы хәлдәрҙе яҡтыртҡан телевизион тапшырыуҙар күҙ алдына килеп баҫа. Иғтибар итәһегеҙҙер, моғайын, ошо ҡыйырһытылған илдең өлкән йәштәге ир-аттары ла, ҡатын-ҡыҙҙары ла Мәскәү журналистарының һорауҙарына саф рус телендә матур итеп яуап ҡайтаралар. Ә улар янында баҫып торған мәктәп йәшендәге балалар, ололар араһында һүҙҙең нәмә тураһында барғанлығын аңламайынса, күҙҙәрен тултырып, йә әсәләренә, йә ҡулдарына микрофон тотҡан ят апайҙарына һәм ағайҙарына ялт-йолт ҡарайҙар. Хас бәләкәй Леся Коновалов тиерһең. Хәйер, киң күләм матбуғат саралары хәбәр итеүенә ҡарағанда, бындай Лесялар бөгөн Рәсәй иленда миллионлап иҫәпләнә – мәктәптә белем алаһы, уҡырға-яҙырға өйрәнәһе урынға, улар хәҙер күберәген урамда, һаҫыҡ подвалдарҙа, харабалар араһында көн күрә. Егерменсе быуаттың егерменсе йылдарындағы һымаҡ, үҙҙәренең атамалары ла бар: ҡараусыһыҙ ҡалған ташландыҡ үҫмерҙәр.

Башҡорт шиғриәте хаҡында һүҙ барғанда, ни эшләп әле Блок шиғыры менән Горький хикәйәһе килеп инде бында тип аптырабыраҡ ҡалыусылар йәиһә ризаһыҙлыҡ белдереүселәр ҙә табылыр, бәлки. Ләкин һис тә аптырайһы юҡ: бөгөнгөнө кисәге менән сағыштырыу өсөн шулай эшләнә. Әгәр Блок шиғырын хәтергә төшөрөп, егерменсе быуат дауамында шиғриәтебеҙ яһаған һикереште күҙаллаһаҡ, Горький хикәйәһе иһә беҙҙе: Хоҙай үҙе һаҡлаһын, яңынан шул заманалар әйләнеп ҡайта күрмәһен берүк тип иҫкәртә. Сөнки кемдәрҙеңдер Рәсәйҙе бик тә Герберт Уэллс шикелле йәнә тома ҡараңғылыҡта күргеһе килә, ахырыһы. Осоробоҙҙоң ҙур аҡыл эйәһе Мостай Кәрим күптән түгелге бер сығышында былай тине: «Илгә, оло һәләкәт булып, физик һәм рухи сир ябырыла. Әгәр ҙә беҙ бөгөн ошоно уйламайбыҙ икән, йөҙ, ике йөҙ йылдан илебеҙ аң кимәле түбән, сирле-сырхау кешеләр төйәгенә әйләнәсәк... Әҙәми заттың... рухи тарҡалыуҙан һәләк булыуы ихтимал, әгәр бөгөн аҡылыбыҙға килмәһәк» («Ағизел» журналы, 2001 йыл, 3-сө һан). Бәлки тыйнаҡһыҙыраҡ яңғырар, әммә ошоға тартым фекер минең дә мейемде айҡап үткәне бар. Тик Мостай Кәрим фараз иткән көндәр йөҙ, ике йөҙ йылға ла ҡалмайынса, XXI быуаттың урталарында йәиһә уның икенсе яртыһында уҡ килеп етер төҫлө миңә. Ни тиһәң дә, шағирҙар оптимисыраҡ була шул. Остаздың йәнен тетрәткән борсолоуын һәм хәүефләнеүҙәрен уртаҡлашып, шуны әйтке килә: әгәр донъялар артабан да ошо йүнәлештә барһа, егерменсе быуатта көсәнеп, тир түгеп, йыш ҡына хатта ҡан да ҡойоп йыйған матди байлығыбыҙҙы бер нисә йыл әсендә әрәм-шәрәм итеп бөтөргән шикелле, рухи ҡаҙаныштарҙы юҡҡа сығарырға ла артыҡ күп ваҡыт кәрәкмәҫ. Ҡараңғынан яҡтыға үрмәләүгә ҡарағанда, юғарынан түбәнгә тәгәрләү күпкә еңелерәк тә, тиҙерәк тә бит ул. Һәр хәлдә, емереү – төҙөү түгел.

2

Егерменсе быуаттың һуңғы көндәре тарих битенә инеп барғанда рухи тормошобоҙҙа күҙгә бәрелеп тормаған, ләкин әһәмиәте буйынса бик үҙенсәлекле бер ваҡиға булды: 2000 йылдың 29 декабрендә «Башҡорт шиғриәте антологияһы»н баҫырға ҡул ҡуйылды. Күп тә үтмәҫтән, ул баҫылып та сыҡты. Өҫтәрәк килтерелгән сағыштырыу ҡабаттан ҡыбырлап ҡуйҙы: 1900 йылдың 31 декабре һәм 2000 йылдың 29 декабре! Аралары теүәл йөҙ йыл. Оло форматлы, ҙур күләмле, күҙҙең яуын алырлыҡ итеп эшләнгән ошо китап Аҡмулла

иҫән саҡта сыҡҡан булһа, ул ниндәйерәк хистәр кисерер ине икән? Бөйөк мәғрифәтсенең хыялы һыйҙыра алмаҫлыҡ бүләк әҙерләгәндәр ҙә баһа быуаттар артылышында Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы шиғыр һөйөүселәр өсөн! Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы Рауил Бикбаевтың антологияға яҙған «Быуаттарҙың шиғри йылъяҙмаһы» тигән баш һүҙе – үҙе бер ҡаҙаныш. Боронғонан алып XX быуат аҙағына тиклемге башҡорт шиғриәтен байҡаған был хеҙмәт – шиғриәтебеҙҙең генә түгел, уны өйрәнеүсе фәндең дә үҫеш кимәлен билдәләүсе бер күрһәткес ул. Уҙған быуат файҙаһына һөйләй торған тағы бер сағыштырыу: һигеҙ йөҙҙән ашыу битте эсенә алған антологияның алты йөҙгә яҡынын егерменсе быуат шиғриәте биләп тора.

Әйткәндәй, быуаттан быуатҡа күскәндә Башҡортостаныбыҙҙағы шиғриәт тормошо ваҡиғаларға бай булды, шулар араһында күңелгә нығыраҡ уйылғаны – дүрт халыҡ шағирының бер-бер артлы үткәрелгән оло юбилейҙары тиер инем. Әлбиттә, юбилейҙар күп булды һуңғы йылдарҙа, әммә былары айырым урын алып тора. Халыҡ шағирҙарының юбилейҙары парадын әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалы Назар Нәжми асып ебәрҙе – 1998 йылдың башында ул үҙенең 80 йәшен билдәләне. Унан һуң Әнғәм Атнабаев етмешен тултырҙы. Шул уҡ йылдың аҙағында Рауил Бикбаев алты тиҫтәһен түңәрәкләне. Бер йылдан һуң халыҡ шағирҙары бәйгеһен Мостай Кәрим ябып ҡуйҙы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҙур юғалтыуҙар ҙа кисерергә тура килде быуатты ослағанда: юбилейҙарынан һуң оҙаҡ та үтмәне, Назар Нәжми менән Әнғәм Атнабаев ҡапыл ғына арабыҙҙан китеп барҙылар. Улар икеһе лә ысын мәғәнәһендә халыҡсан шағирҙар булып һеңеп ҡалды уҡыусы хәтеренә. Фани донъянан мәңгелеккә күскән ағаларына мөрәжәғәт итеп, «Бер туғандар» исемле поэмаһында Назар Нәжми былай тип яҙғайны: «Бөтөп килә һеҙ башлаған быуат, ул һеҙһеҙ һәм минһеҙ бөтәсәк». Үкенескә күрә, ошо фараз дөрөҫ булып сыҡты. Ә бит Егерменсе быуатты тамамлап, Егерме беренсеһенә күсер өсөн шағирға ни бары 482 көн етмәне. Шулай инде: тәҡдиргә бойороп булмай.

Назар Нәжми үҙ ғүмерендә юбилейҙарҙы күп үткәрҙе һәм һәр юбилейына ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырышты. Сөнки һәр юбилей шағир өсөн, байрамдан бигерәк, уҡыусы алдында хисап тотоуға тиң ине. 80 йәшендә лә шулай булды: «Ағизел» журналының февраль һанында ул ярты быуатлыҡ ижадының һәр йылынан үҙенә иң

оҡшаған берәр шиғырҙы һайлап алып баҫтырҙы. Бында уларҙың бөтәһен дә һанап сығыу мөмкин түгел, шулай ҙа уҡыусыға киң билдәләләрҙең бер нисәһен атап китеү зыян итмәҫ: «Япраҡ», «Дуҫтар», «Тауҙар йыры», «Көҙгө баҡсала», «Миләш», «“Яҙ! Яҙ!” – тиҙәр», «Аленушка», «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә...», «Ғәжәпләнделәр», «Ҡарҙар яуа», «Ут күрше», «Һинең ниндәй улыңмын мин» һ.б. Назар Нәжми уйлап тапҡан ошо яңылыҡ Рауил Бикбаев менән Ҡәзим Аралбайға ла оҡшап ҡуйзы, ахырыһы: үҙҙәренең алтмыштарын билдәләгәндә улар ҙа «һәр йылға – берәү» иҫәбенән шиғри шәлкемдәрен төҙөп баҫтырҙылар шул уҡ «Аҡиҙел» биттәрендә.

Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Назар Нәжми ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем әҙәбиәттән айырылманы, тынғыһыҙ ижад ҡомары менән янып йәшәне. Вафатына һанаулы ғына айҙар ҡалып барғанда ул «Аҡиҙел»дең 1999 йылғы ғинуар һәм май һандарында «Ғүмер оҙонайған һайын...» тигән шиғырҙар шәлкеме һәм «Күңел дәфтәренән» тигән сәсмә әҫәре менән сығыш яһаны.

«Ғүмер оҙонайған һайын...» шәлкеме асылда тулыһынса яңы шиғыр-ҙарҙан тора. Илленсе йылдарға ҡараған «Һиҙә күңелем» һәм «Һин алданың мине... Был юлы ла...» тигән ике шиғыр бар, барлығын, тик уларға ла туҡһанынсы йылдарҙағы Назар Нәжмиҙең ҡәләме теймәй ҡалмағандыр, барыбер. Хәҙер инде һуңғылар иҫәбендә йөрөтөлгән шиғырҙарында ла автор үҙенең күнегелгән стиленә, поэтик алымдарына хыянат итмәгән: шул уҡ ыҡсымлыҡ, шул уҡ тапҡырлыҡ, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайыу; әйтергә теләгән фекерен уҡыусы аңына тоҫораҡ итеп еткереү өсөн һүҙҙәрҙе бер туҡтауһыҙ уйнатыу; тормошта йыш ҡына осраһа ла, бөтә кешенең дә күҙенә салынып тормаған хәл-ваҡиғаларҙан берәй хикмәт килтереп сығарыу маһирлығы, һ.б., һ.б. Шәлкемгә ингән «Француздар Өфөлә», «Һүндерелгән дан», «Ике төрлө ҡорал», «Ике телле», «Заман бүлмәһенә кергәндә», «Яуап», «Беҙ бишәүе инек бер өйҙөң», «Ҡәйнәм һүҙҙәренә ике яуап», «Тыуған көнөмдә» тигән шиғырҙар идея-тематик үҙенсәлектәре йәһәтенән айырыуса заманса яңғырайҙар.

«Француздар Өфөлә» шиғырына, мәҫәлән, телефон аша бирелгән, ябай күҙлектән сығып ҡарағанда һис нәмәгә лә дәғүә итмәҫлек «Ваҡытым юҡ. Барыбыҙ за француздар менән мәшғүл» тигән яуап ойотҡо һалған. Ошо уҡ яуап әҫәргә эпиграф итеп тә алынған. Күләме буйынса бәләкәй генә шиғыр үҙ эсенә иҫ китмәле бай йөкмәткене һыйҙырған. Ни эшләп әле йәһәннәм тишегендә йәшәгән француздар

килеп сыҡҡан беҙҙең яҡтарға һәм тәү тапҡыр үтеп ингән «ил ҡапҡаһы аша баш йорттоң»? Ҡасан хасил булған ер йөҙөндә башҡорт һәм француз тигән ике зат? Салауат Наполеондан элегерәк балҡыған, башҡорттоң Парижда булыуына ла ике быуат тулып килә, ә бына француздарҙың башҡорт иле барлығы хаҡында быға тиклем ишеткәндәре булғанмы икән? Тора-бара бөтәһе лә асыҡлана: Парижды хушбуй еҫтәре данлаһа, Өфөнө данлай бензин һәм газ еҫе. Тик, ти шағир, «еҫтәр ҡыҫырыҡлай хистәрҙе», сөнки «ғәҙәттә бит алыҫтарҙан... еҫте үткер һиҙә бүреләр».

«Ике төрлө ҡорал» менән «Ҡәйнәм һүҙҙәренә ике яуап»та йәнә шағирҙың эстетик ҡараштары сағылып китә. Тәүгеһендә ул, шағир ижадын Калашников автоматы менән сағыштырыу юлы аша, «Миндә лә бар үҙем ҡойған ҡорал, минең ҡорал – шиғыр, шиғри һүҙ» тип ғорурланһа, икенсеһендә «Ижад бит ул – бала табыу кеүек, бала табылмай бит сәхнәлә» тип нарыҡлай.

Публицистик мәҡәләләренән күренеүенсә, Назар Нәжми һуңғы йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы иғтибар менән күҙәтеп барҙы. Күңеленә ятмағандарына киҫкен рәүештә ризаһыҙлығын белдереүҙән дә тартынып торманы, матбуғат биттәрендә бәхәсләшеп тә алғыланы. Уның ошо халәте әле һүҙ барған шәлкемдә лә үҙен һиҙереп ҡуя. «Һүндерелгән дан»да, мәҫәлән, ул Чечня һуғышына мөнәсәбәтен белдерһә, Пушкин һүҙҙәренән сығып, уларға яуап һымағырак яҙылған «Ике телле»лә иһә, ике теллелекте ике йөҙлөлөккә тиңләп, ике телде белгән һәм ике телдә һөйләшкән өсөн генә кешегә «ике йөҙлө» тигән ярлыҡ йәбештереүгә ҡәтғи ҡаршы сыға.

Әммә, илде үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, шағирҙы ҡаршылыҡлы уй-хистәр ҙә урап үтмәне, шикелле. «Йорттa хужа – атай булған кеүек...» шиғырында, мәҫәлән, «коммунизм төҙөгән» (был һүҙҙәрҙе ҡуш тырнаҡтар эсенә автор алған.– *Ә.Х.*) ваҡыттарҙы иҫенә төшөрөп, «беҙ үҙебеҙ көн-төн хеҙмәт иттек, ялған тәғлимәткә суҡынып», – ти ул. Ләкин тәғлимәттәрҙең ялғанмы, ысынмы икәнлегенә ныҡлап төшөнөү өсөн бик ҙур һынау, бик күп ваҡыт арауығы үтергә кәрәктер ул. Беҙ табынған һәм «бүреләр» ҡамауында булһа ла яйлап тормошҡа ашыра башлаған тәғлимәткә килгәндә иһә, шуны әйтке килә: уның әлегә уңышһыҙлыҡҡа осрауында төп сәбәпсе, бәлки, тәғлимәт үҙе түгел, ә әҙер тәғлимәтте ваҡыт талаптарынан сығып, артабан ижади үҫтерергә һәм уны кеше мәнфәғәтен үтәү өсөн файҙаланырға һәләтһеҙ талмудсылар булғандыр? Улайһа ниңә әле «Француздар Өфөлә» тигән

әҫәрендә шағир алыҫтарҙан еҫте үткер һиҙеүсе бүреләргә нәфрәтен белдерә? Ул бүреләр әлеге шул ҡайһы берәүҙәрҙең бөйөрөнә таш булып ултырған тәғлимәттән баш тартҡас айырыуса йәнләнеп, күбәйеп китте түгелме һуң? Ни тиһәң дә, заманында күккә күтәреп маҡталған, ә хәҙер шул уҡ маҡтаусылар тарафынан аяҡ аҫтына һалып тапалған (ошонан да ғәйриерәк фарисейлыҡтың булыуы мөмкинме икән?) был тәғлимәт – гуманлы тәғлимәт. Әгәр кешелек донъяһы уҙған быуат башындағы шикелле көслөк менән түгел, ә үҙ аңы һәм үҙ ирке менән ошо тәғлимәт юғарылығына күтәрелә алмаһа, әкренләп уның планета күләмендәге ҙур фажиғәгә тарыуы ихтимал.

Фарисей һүҙенең бында Назар Нәжми адресына әйтелмәгәнлеген уҡыусы аңлағандыр, әлбиттә. Ул бит сәйәсмән түгел, ә шағир. Шағир ҙа сәйәси мәсьәләләрҙән алыҫ торорға тейеш түгел, түгеллеген, ләкин ул барыбер образдар менән эш итеүсе сәнғәт әһеле булып ҡала. Назар Нәжми тураһында һүҙ киләсәктә уғата ла күп булыр. Уның исеме хәҙер инде тәнҡит мәҡәләләренән ғилми хеҙмәттәр битенә күсер. Форсаттан файҙаланып, бер уйым-теләгем менән уртаҡлашмаҡсымын: шағир, драматург, прозаик, тәнҡитсе, мемуарист, публицист Назар Нәжмиҙең 90 йыллығы уның әҫәрҙәренең матур-матур томдарҙан торған тулы йыйылмаһы менән ҡаршыланһын һәм билдәләнһен ине. Әгәр ул академик баҫма итеп сығарылһа, бигерәк тә яҡшы булыр. Был Назар Нәжмигә түгел, ә ерҙәгеләр өсөн кәрәк.

Әнғәм Атнабаевтың юбилейына иғтибар етеңкерәп бөтмәгәндәй тойолдо. Тормош һәм ижад юлындағы был ҙур ваҡиғаға шағир, бәлки, үҙе лә битарафлыҡ күрһәткәндер. Хәйер, үҙен ихтирам иткән бер генә әҙип тә үҙе тураһында мәҡәләләр яҙҙырып йөрөмәҫтер. Юбилейҙар ваҡытында бындай мәшәҡәттәр иң тәүҙә дуҫтар һәм дуҫ-иштәр иңенә төшә торғандыр. Бына ошонан сығып, Атнабай юбилейына иғтибар етеңкерәмәне буғай тимәксемен дә инде. Юғиһә, етмеш йәшен билдәләгәндә шағирҙың үҙе тарафынан ике томлыҡ «Һайланма әҫәрҙәренә» баш һүҙ рәүешендә биш былтыр яҙылған «Үҙем тураһында ике һүҙ» тигән мәҡәләһен өҙөп-йыртып баҫтырыуҙы нисек аңлатмаҡ кәрәк («Ағиҙел» журналы, 1998 йыл, 2-се һан)? «Ватандаш» журналы ла – «егермегә яҡын китап авторы. Уның “Ул ҡайтты”, “Әсә хөкөмө”, “Игеҙәктәр” исемле пьесалары сәхнә түренән төшмәй» тип раҫлау менән генә сикләнде. Үткән – үткән инде, уны хәҙер кире ҡайтарып булмай. Ә бына үткәндән һабаҡ алыу һәм тейешле һығымта яһау – зыян итмәҫ. Халыҡ шағирының тормош һәм ижад юлын яҡтыртҡан,

уның шиғриәтен дә, драматургияһын да тотош бер күренеш итеп тикшереүгә арналған фәнни монография яҙыу, замандаштарының һәм дуҫтарының хәтирәләрен туплаған китап сығарыу хаҡында ла уйланырға бик ваҡыттыр әҙәбиәт йәмәғәтселегенә. Атнабай кеүек шәхестәр ергә йыш килмәй, ул ҡалдырған бай һәм үҙенсәлекле мираҫҡа һағыраҡ һәм иғтибарлыраҡ булайыҡ.

Быуаттар артылышында иҫ киткес егәрлелек күрһәтеп, әҙәбиәт тормошоноң үҙәгендә ҡайнаған һәм иң әүҙем эшләгән шағирҙарҙың береһе Рауил Бикбаев булды. Һуңғы ун йылда ул бынамын тигән поэмалар ижад итте, бихисап шиғырҙар яҙҙы, сәйәхәтнамәләр, публицистик һәм тәнҡит мәҡәләләре менән сығыш яһаны, Башҡортостан Яҙыусыларының XII һәм XIII съездарына ҙур күләмле аналитик докладтар әҙерләне, иҫәбе-хисабы булмаған рәсми йыйылыштарҙа, төрлө семинарҙарҙа, әҙәби кисәләрҙә һәм осрашыуҙарҙа ҡатнашты. Быларҙың бөтәһен дә барлау һәм уларға объектив баһа биреү өсөн үҙенә башҡа ҙур бер мәҡәлә кәрәк булыр ине. Алға ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы рәүештә, бында Рауил Бикбаевтың «Таштар ватып, тауҙар аҡтарғанда», «Антымды мин алмаштырманым», «Уралымдың күкһел монарына, моңдарына инеп юғалам» тигән шәлкемдәренә генә туҡталырға иҫәп. Дөрөҫ, 60 йәше уңайы менән уның, үрҙә әйтелгәнсә, «Урғылыш» тигән тағы бер шәлкеме донъя күрҙе «Ағизел» биттәрендә. Тик уны халыҡ шағирының ижадын төптәнерәк һәм эҙмә-эҙлеклерәк өйрәнеүселәр ҡарамағына ҡалдырыу хәйерлерәк булыр: был шәлкем Рауил Бикбаев шиғриәтенең 1958 йылдан алып бөгөнгө көндәргә тиклемге үҫеш юлын күҙалларға ярҙам итерҙәй әҙер материал.

Дөйөм алғанда, Р. Бикбаев традицион шиғриәткә тоғролоҡ һаҡлаһа ла, уны гел иҫкегә генә табынып, күнегелгән ҡалыпҡа ғына төрөнөп йәшәгән шағир тип булмай. Строфалар төрлөлөгөн дә, үлсәүҙәр иреклелеген дә күҙәтергә мөмкин уның шиғриәтендә. Ҡайһы берҙә был иреклелек һәм төрлөлөк рифмалар ҡытыршылығына ла килтереп ҡуйғылай. Ҡарап торғанда бик тыныс кеше һымаҡ тойолһа ла, импульсивлыҡ та ят күренеш түгел уға. «Рәхмәт!» тигән шиғыр быға асыҡ миҫал:

Юлыма мәкер мәке уйған,
Өҫтөн алдап ҡаплап ҡуйған.
Әллә күктән бер уй керҙе –
Күңелем күрҙе шул мәкерҙе.

Арып-талып, сарсап-яныp
Килә инем ер сигенән.
Туйғансы һыу эстем ятып
Мәкер уйған шул мәкенән.

Рәхмәт, ҡәбәхәт!

«Таштар ватып, тауҙар аҡтарғанда», «Антымды мин алмаштырманым», «Уралымдың күкһел монарына, моңдарына инеп юғалам» шәлкемдәренә тупланған шиғырҙарҙың байтағын («Уйҙарымда ул саҡтарға ҡайтһам...», «Тағы ла көндәрем икеле-микеле», «Елкендергес йыр шикелле миңә...», «Һүнгәндә уйың, булғанда ҡыйын...», «Ҡоштар ғына осор бейеклектән..», «Хатта ҡояш өшөп байығанда…», «Ерҙең хәтәр хәтереңдә...», «Тынғы белмәҫ япраҡ», «Тояҡтары дала яңғыратып...», «Эй күңелдең ошо азат мәле...», «Нисә төн болара төштәрем...», «Ялмай тағы әллә ниндәй хафа», «Аҡ күгәрсен», «Яңыртырға иҫке яраларҙы...», «Сәскә алам. Сәскә һатҡан ҡатын...», «Ҡойонда, томанда, буранда...») – шағирҙың кәйеф-сафаһын, хәл-әхүәлен, ҡайғы-хәсрәттәрен сағылдырған күңел көҙгөһө тиергә була. Бойоғоуҙар, һағыштар, юҡһыныуҙар, үрһәләнеүҙәр, яныуҙар-көйөүҙәр етерлек был көҙгөлә: «Сыҙай икән бәндә. Тик әрнеүҙәр үтмәй... Һыҙыла, һыҙлай күңелем...»; «Йылдар баҫа. Һыҙлау баҫылмай»; «Янған йөрәктәрҙе баҫыр һыуҙы ҡайһы шишмәләрҙән алаһы?..». Шөкөр, шағир ҙа, уның лирик геройы ла яҙмыш һынауҙары алдында бөгөлөп төшмәгән, сайҡалған, ләкин аяҡтан йығылмаған: «Үрһәләнмә, күңел! Хәленде бел, асылыңа төшөн!» тип үҙ-үҙен йыуатырға көс тапҡан, янған йөрәген һыу менән түгел, илһамлы ижад емештәре менән баҫырға тырышҡан.

Рауил Бикбаевтың әле һүҙ барған шәлкемдәрендә йәшәйештең фәлсәфәүи асылы хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған шиғырҙар ҙа күп кенә. Күп һорауҙар борсой шағирҙы, күп нәмәләрҙең серенә төшөнөргә тырыша ул. Кешенең ерҙәге бар ғүмере – бер көрһөнөү генә түгелме? Йыһан һәм мәңгелек юғарылығынан ҡарағанда, фани донъялағы ығы-зығыларҙың, янъял-тартыштарҙың, көнсөллөктәр һәм ваҡлыҡтарҙың, дан-шөһрәттәрҙең баһаһы һуҡыр бер тин генә тормаймы? Ерҙә ризыҡ – төрлөсә, йырлау – төрлөсә, гөрләү – төрлөсә, диндәр – төрлөсә, ә тегендә нисек икән? «Ул сер йомғағын һис булмай сисеп». Сөнки, «яңынан терелеп, бер кем аңлатмай, аңлатыр ине, теге донъянан» бер кем дә кире ҡайтмай. Әммә, унда нисек кенә

булмаһын, «Мин – мәңгелек, – тип ғорурлыҡ менән иҡрар итә шағир әҫәрҙәренең береһендә. – Ерем ҡуйынында ҙтермен мин ярып Ваҡыт, Ара. Мине ерҙән тартып алып була, мине ерҙән бираҡтырып була, тик Йыһандан тартып алып ҡара, бираҡтырып ҡара!». Ошоға тартым уй-фекерҙәр «Бөгөнгөгә мәҙхиә», «Тойғолар ҙа иҫкерәләр...», «Ваҡыт – аҡсалыр», «Йәшәү рәүештәре», «Берәү уйлай: – Мин бөйөккә...», «Эш», «Йәшлектә ҡыш та гөл кеүек ине», «Туҡтауһыҙ яуҙырып һорау, ҡойоп йомағын...» тигән шиғырҙарҙа ла яңғырап ҙтә. Һорауҙар, ысынлап та, күп, ләкин уларға яуап табыуы еңел түгел. Әлегә иһә шуныһы ап-асыҡ:

Оло усаҡтар яҡһаң да,
ҡышты йылытып булмай,
Хушбуй һибеп, аҙбарҙарҙы
хуш еҫле итеп булмай.
Мең тоҙаҡ ҡорһаң да, елде
тоҙаҡлап тотоп булмай,
Йәшлегеңде, китмә, тиеп
йоҙаҡлап тотоп булмай.
Ҡайнап ятҡан шишмә башын
тыйып-ойотоп булмай,
Насип түгел ризыҡтарҙы
сәйнәп тә йотоп булмай.
Гөлт тоҡаныр туҙ булһаң да,
янмайса өтөп булмай,
Әллә ниндәй туз булһаң да,
яҙмышты отоп булмай.

Р. Бикбаевтың лирик геройы – баҫалҡы, итәғәтле, намыҫлы заттан. Һәр төрлө ғәҙелһеҙлек, яуызлыҡ, көнсөллөк, һауаланыу, ғауғалашыу – уның өсөн ят нәмә; йәшәүҙең төп принцибы итеп ул юғары әхлаҡи ҡағиҙәләрҙе һайлаған:

Аттарымды алмаштырғанда ла,
Антымды мин алмаштырманым.
Яҙмыш ярыҡ ялғаш булып ҡалһа,
Ялған менән ялғаштырманым,
Яман менән ямаштырманым.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, лирик геройҙың донъяһы «төйөрлө лә, төйөнлө лә», атлар юлы «түгел шып-шыма», «бәхетенә михнәт үрелеп тора». «Башлаһам да тик изге уй менән, яуызлыҡтар аңдый һәр эштә», – ти ул. «Үҙгәртәйем нисек тормошомдо...» шиғырынан күренеүенсә, был донъяның керенән һәм мәкеренән, алдаштан һәм талаштан, ыҙғыштан һәм тартыштан бер ҡышҡа ғына булһа ла арынып торор өсөн, лирик герой, кеше күҙенән, кеше һүҙенән йәшенеп, Иҙел һымаҡ боҙ аҫтынан ағырға ла риза хатта – тик ҡолағына ғәйбәт ҡағылмаһын да йөҙөнә янъял яғылмаһын. Ваҡланыуҙар, ярамһаҡланыуҙар, түрәгә яраусар ҙа хас түгел Р. Бикбаевтың лирик геройына. Ләкин тормош ҡанундары аяуһыҙ – ул үҙенекен итә:

Түшкә еткән үлән.
Һуҡмағым тар.
Кесерткәндәр араһынан үтәм.

Кесерткәндәр мине ҡулға ала:
– Сағылмайым тиһәң,
Ҡулың күтәр!

Р. Бикбаевтың әлеге шәлкемдәрендә интим лирикаға тартым шиғырҙар ҙа осрай. «Йондоҙ туңа тәүге боҙға ҡуша...», «Һин – яҡты бер таңда...», «Мин һинең ҡулыңда...», «Китер булһам...», «Таңдарымдың хуш еҫлеһе, еләҫе һин...»де шундайҙар иҫәбендә тимәксемен. Бер генә миҫал:

Һин – яҡты бер таңда
Иң тәмле мәлеңдә
Өҙөлгән төш һымаҡ.

Һин – һурылып алынмаҫ,
Һыҙлауы һис тынмаҫ
Теш һымаҡ.

Рауил Бикбаевтың һуңғы йылдарҙағы ижадында тыуған-үҫкән яҡтарын йырлауға бағышланған шиғырҙар ишәйгәндәй тойола. Был, бәлки, ваҡыт үткән һайын шағирҙың олпатлана барыуы менән дә аңлатылалыр күпмелер кимәлдә. Улар тураһында ла ауыҙ тултырып

һөйләргә һәм байтаҡ йылы һүҙ әйтергә булыр ине, ләкин күҙәтеү жанры саманы онотмаҫҡа саҡыра. Бында ошо темаға арналған ҡайһы бер шиғырҙарҙың исемдәрен атап китеү менән генә сикләнергә тура килер: «Даламды һағынғанда», «Илкәйемдең яралары...», «Тыуған яҡтан тәү киткән саҡта...», «Үҫмер саҡтан бирле күргәнем юҡ...», «Иркең булһа, илем, күркең булыр...», «Тауҙан төшөп, тауға менгән һымаҡ...», «Киңлегеңдә тағы йәнем иңрәй...», «Аҡбулаҡтан Ағиҙелгәсә», «Һыҙылып ҡына атҡан таңға ҡарап...».

Башҡа халыҡтарҙыҡынан айырмалы булараҡ, уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарында уҡ әле беҙҙең рухи донъябыҙҙа шундай бер күренеш әкренләп кенә үҙенә юл яра башланы: тормошон әҙәбиәткә һәм мәҙәниәткә арнаған айырым шәхестәр саф ижадты ғилми-тикшеренеү эштәре менән бергә бәйләп алып барырға тырышты. Рауил Бикбаев та шундайҙарҙан. Уның фән өлкәһендәге стихияһы – Шәйехзада Бабич ижады. Шиғриәтебеҙҙең ошо йондоҙон артабан балҡытып ебәреүгә ул күп көс һалды. Ләкин әйтергә теләгәнем икенсерәк: Шәйехзада Бабич ижадын ғалим булараҡ өйрәнә торғас, Рауил Бикбаев уның шиғриәттәге тәжрибәһен дә арыу ғына үҙләштерҙе һымаҡ. Минең уйымса, ике дәүерҙә йәшәгән был ике шағирҙың ижад практикаһында байтаҡ ҡына идея-эстетик уртаҡлыҡ һиҙелә. Тимәк, традициялар йәшәй, традициялар дауам итә. Был иңде Р. Бикбаевтың шиғриәтен махсус рәүештә өйрәнергә йыйыныусылар өсөн үҙе бер мөстәҡил тема.

Академик Ғайса Хөсәйенов әйтеүенсә, «Мостай Кәрим 80 йәшендә лә олпат һәм һоҡланғыс, ҡартайыу тигән нәмәгә һис бирешмәҫ йә һыр бирмәҫ, аҡыл һәм хәтер ҡеүәһе бүҫкәрмәҫ олуғ шәхес булып ҡала». Шағирҙың был юбилейы ла, уның үҙенән дә бигерәк, бөтә әҙәбиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ өсөн күркәм, бай йөкмәткеле ваҡиға булды. Уны ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә республикабыҙ йәмғәтселеге ҙур әүҙемлек күрһәтте. Киң күләм мәғлүмәт саралары ла тейешле өлөштө индерҙеләр.

Мостай Кәримдең күп яҡлы, иҫ киткес бай ижады хаҡындағы иң матур һәм иң тос һүҙ «Ағиҙел» биттәрендә әйтелгәндер, моғайын. Редакция хеҙмәткәрҙәре (ә улар бөтәһе лә ижад кешеләре) шағирҙы ҡунаҡҡа саҡырып, уның менән «түңәрәк өҫтәл» артында бик фәһемле һөйләшеү үҙғарҙылар, диктофон таҫмаһына яҙып алынған был әңгәмә «Бер ултырыу – бер ғүмер» тигән баш аҫтында остазға тап 80 йәш тулған айҙа журналда баҫылып сыҡты. Әңгәмә барышында

әҙәбиәтебеҙҙең үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә ҡағылған байтаҡ мәсьәләләр күтәрелде.

Һуғыш йылдарын хәтерләп, мәҫәлән, Мостай Кәрим, фронттан Баязит Бикбайға яҙған бер хатында, туғыҙ йыл буйы башлап яҙыусылар рәтендә йөрөүенә ҡарамаҫтан, әлегә тиклем бер нәмә лә ҡыйрата алмауының сәбәбен ул саҡта «беҙҙең әҙәбиәттең ҡеүәтле традицияларының булмауы» менән дә аңлатыуын иҫенә төшөрөп алды һәм «беҙҙә үҙеңде профессиональ яҙыусы итеп тойоу әле һаман да юҡ тиерлек» тип өҫтәне.

Әлеге осор әҙәбиәте һәм мәҙәниәте хаҡында һүҙ сыҡҡас, остаз, кинәйәләй-кинәйәләй, донъя әҙәбиәтенән дә, рус әҙәбиәтенән дә, башҡа туғандаш әҙәбиәттәрҙән дә миҫалдар килтерә-килтерә, ҡәләмдәштәрен ваҡиғаларҙан, замандың ығы-зығыһынан өҫтөн торорға өндәне һәм элегерәк әйтелгән бер фекерен ҡабаттан хәтерендә яңыртты: «Яҙыусы тормош менән бәхәсләшеп йәшәргә тейеш. Тормош ҡанундары менән генә түгел, хатта рәсми власть менән бәхәсләшергә тейеш. Бәхәсләшеү менән ызғышыу араһында айырма ҙур. Бәхәсләшеп, хаҡлыҡ эҙләйҙәр, ызғышып, донъя бутайҙар».

Әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге тураһында уйланғанда иһә «бөтәбеҙ бер хорға әйләнеп китмәһәк ярар ине» тигәнерәк борсолоуын белдерҙе «Ағизел» ҡунағы. Ләкин шул уҡ ваҡытта «беҙ әле сағыштырмаса йәшбеҙ, асыла торған милләтбеҙ», «милләтебеҙҙең рухи запасы ҙур» тигән тәрән ышанысын да йәшермәне ул.

Яҙыусының тормоштағы урыны, уның көн үҙәгендә торған ҡатмарлы мәсьәләләргә мөнәсәбәте тураһында һүҙ барғанда әхлаҡ төшөнсәләре лә ситләтеп үтелмәне. Аҡһаҡалдың ҡәтғи фекеренсә, «әҙәп, иман, изгелек категорияларының әҙәбиәттең асылында ятырға тейеш». Ошо урында М. Кәрим шәхесенең мәртәбәһен уғата ла күтәргән бер ваҡиға күҙ алдына килеп баҫты. Сыуашстан халыҡ шағиры Яков Ухсайҙың тыуыуына 90 йыл тулыуын билдәләгән көндәрҙә Бәләбәй тарафтарында, булһа кәрәк (үкенескә күрә, тапшырыуҙың аҙағына ғына тап булдым), үткәрелгән бер сараны телевизор аша күрһәттеләр. Туғандаш һәм яҡташ шағирыбыҙҙың оло юбилейы айҡанлы уның тыуған яҡтарында ойоштороло ғ ан был осрашыуҙа М. Кәрим менән С. Әлибай ҙа ҡатнашҡайнылар. Хәтер кисәһен алып барыусы ине буғай, белдекле күренергә теләп микән, Яков Ухсай менән кемдер араһындағы шәхсән мөнәсәбәттәргә кереп

китеп, уны баҙар ҡатындары һатҡан ләстит кимәленә төшөрә яҙғанда, һүҙгә М.Кәрим ҡушылды һәм, ҙур такт һаҡлап, теге «белдеклене» ваҡытында урынына ултыртты. Минеңсә, олуғ остазыбыҙ бик дөрөҫ эшләне, сөнки әҙәбиәт тарихына айырым шәхестәрҙең үҙ-ара бәйләнештәренә, тормош юлдарындағы ҡытыршылыҡтарға ҡарағанда, улар ижад иткән әҫәрҙәр ҡиммәтерәк. Уйлай китһәң, ябай кешеләргә хас низағтар талант эйәләре араһында ла осраһа, һис тә ғәжәп түгел. Айырма тик шунда: таланттар араһындағы ваҡ-төйәк кенә аңлашылмаусанлыҡтарҙы ла ҙур ҡаршылыҡтар юғарылығына күтәреп, уларҙы тиҙерәк «халыҡ байлығы» итергә әҙер торған аҫтыртындар ҙа табылырға мөмкин. Ниәттәренә ирешкән сүрәттә иһә (таланттар бит бер ҡатлыраҡ, тиҙ ышанысан, еңел йәрәхәтләнеүсән һәм рәнйеүсән була), был хәйләкәрҙәргә, иблес шәйенә инеп, тырышлыҡтарының бушҡа китмәгәнлегенә һөйөнә-һөйөнә, йылмайып йөрөйһө генә ҡала. (Хәйер, ваҡыт тигәнең барыбер үҙенең хаҡ хөкөмөн сығарып, һәр кемгә өлөшөнә төшкән көмөшөн билдәләмәй ҡалмай.)

«Ағиҙел» журналы хеҙмәткәрҙәре Мостай Кәрим менән «түңәрәк өҫтәл» артында һөйләшкәндә әҙәбиәттәр дуҫлығы хаҡында ла һүҙ сыҡты. Уға тәржемә мәсьәләләре килеп ялғанды. Ҡараштар – төрлө, әммә һөҙөмтә – бер: һуңғы ун биш йылда ижадтың был тармағы күҙгә күренеп һүлпәнләнде, хатта артҡы планға күсте, ә үҙ ҡаҙанышында ғына ҡайнап йәшәү – һис кенә лә ҡыуаныслы хәл түгел. Һүҙ юҡ, үҙаллылыҡ алғас, әҫә телен артабан да үҫтерергә киң мөмкинлектәр асылды. Ләкин, был мөмкинлектәр менән мауығып, рус теленә иғтибар кәмемәй микән? Бер нисә тиҫтә йылдан һуң яңынан күҙле бүкәндәргә әйләнмәбеҙме? (Ошо йәһәттән «Ағиҙел» журналының 1999 йылғы 2-се һанында халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең ҡыҙы Флорида Ниғмәтуллина-Тибеева яҙып сыҡҡан «Атайым» тигән мәҡәлә ғибрәтнамәгә оҡшап тора, юғиһә.) Рус теле беҙгә батшалар теле булғаны өсөн түгел, ә тәү сиратта күп һанлы бөйөк рус халҡының теле булараҡ, шул телдә Пушкин һәм Толстой, Чехов һәм Горький һөйләшкән өсөн, йәйрәп ятҡан Рәсәй киңлектәрендә йәшәүсе күп милләтле халыҡтар менән аралашыу өсөн кәрәк. Миҙалдың икенсе яғы ла бар: Советтар Союзы тип аталған мөһабәт державаны башта, оҙаҡ йылдар буйы аҫтан кимереп, ҡаҡшатыуҙа һәм көсһөҙләндереүҙә, артабан иһә уны күҙ ҙә йоммай ҡолатыуҙа инглиз телен һыу урынына эскән, шулар ерлегендә тәрбиәләнеп, шулар шауҡымына бирелгән һәм шулар уйнаған көйгә бейеп, тыуған ил, туған халыҡ

төшөнсәләренә хыянат иткән Мәскәү һәм Ленинград «малайҙары» төп ролде уйнаны түгелме һуң? Улар әле лә һыуын уртлаған ҡоҙоҡҡа төкөрөүҙәрен дауам итәләр. Ни генә тиһәң дә, телдәрҙе белеүгә киңерәк ҡараш хөкөм һөрөргә тейештер.

«Бер ултырыу – бер ғүмер»ҙән тыш, «Ағиҙел»дең был һанында Мостай Кәримдең төрлө йылдарҙа ижад иткән шиғырҙары ла баҫылды. Улар «Күтәрелдем бейек түбәләргә, сәләм бирҙе миңә шаңдауҙар...» тигән дөйөм баш аҫтында бирелде. Тағы килеп, халыҡ шағирының ижадына һәм шәхесенә бәйле уйланыуҙары менән Ринат Камал һәм Ғәлим Дәүләдиҙәр сығыш яһанылар журнал биттәрендә. Әгәр танылыу яулаған прозаик Р. Камал ҙур күләмле, күтәрелгән мәсьәләләр буйынса тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәренекенә биргеһеҙ «Тауҙар һәм кешеләр» тигән мәҡәләһендә, Мостай Кәримдең шиғриәтен, сәсмә әҫәрҙәрен, драматургияһын, публицистикаһын, әҙәбиәт теорияһына һәм практикаһына ҡағылған сығыштарын еңелсә күҙ уңынан үткәреп, уларға өр-яңы ҡараш ташлаһа, билдәле шағир Ғ. Дәүләди «Дуҫлыҡ аманаты» һәм «Эй, туған тел!..» тип аталған яҙмаларында төп иғтибарын остазының ҡайһы бер кешелек сифаттарын, уның ижадына хас айырым һыҙаттарҙы барлауға йүнәлткән.

Мостай Кәрим – юбилейым үтте иңде, ҡалғанын бүтәндәр ҡараһын тип тынысланып, хуш күңеллеләнеп, ҡул ҡаушарып ятыусыларҙан түгел. Ул һаман да – хәрәкәттә, һаман да – ижад ҡоронда. Символик әһәмиәткә эйә булырлыҡ хәл: 2001 йылғы тәүге һанын «Ағиҙел» журналы Мостай Кәримдең тап быуаттар ҡауышҡан осорҙа ижад иткән шиғырҙары менән асып ебәрҙе. Улар күп түгел – ни бары һигеҙ, әммә идея-эстетик кимәлдәре буйынса бөгөнгө шиғриәтебеҙҙең йөҙөк ҡашына торорлоҡ. Шиғырҙар, ғәҙәткә инеп барған айырым бер шәлкем һымаҡ түгел, ә һис ниндәй ҙә уртаҡлыҡҡа дәғүә итмәгән, тулыһынса мөстәкил әҫәрҙәр шикелле бирелгән. Ләкин уларҙы, електәренә төшөп етергә ниәтләп, ҡат-ҡат уҡый башлаһаң, барыбер тема уртаҡлығын тоймай ҡалмайһың: шағир, үткәндәргә осҡор ҡарашын ташлап, Егерменсе быуат менән хушлаша. Хуш күңеллеләнеп, ярамһаҡланып, ҡуштанланып түгел, ә уның бөтә ҡаршылыҡтарын да – ыңғай яҡтарын да, тиҫкәреһен дә иҫкә алып – хушлаша. Үрҙә әйтелгәнсә, ызғышып түгел, бәхәсләшеп хушлаша:

Изге лә һин, яуыз да һин –
Бына ни затлы;

Үҙең гөнаһҡа батҡанһың,
Үҙең сауаплы.

Һин – минеке, мин – һинеке,
Ике һыңар – бер.
Икебеҙ ҙә шыр яланғас,
Икебеҙ зә – сер.

Үҙемә үпкәм юҡ минең,
Һиңә юҡ зарым,
... Үҙем менән алам барын,
Ҡалдырам барын.

Мостай Кәримдең әлеге һигеҙ шиғырын берләштереүсе тағы бер уртаҡлыҡ – уларҙың лирик геройы тиһәм, әллә ни яңылыҡ булмаҫ, әлбиттә. Шулай ҙа, кем һуң ул Мостай Кәримдең бөгөнгө лирик геройы? Ниндәйерәк ҡиәфәттә килеп баҫа ул беҙҙең күҙ алдына? Минең тойомлауымса, М. Кәримдең бөгөнгө лирик геройы – күп йәшәгән, күпте күргән, күпте белгән, тик күргәне-белгәне менән һис кенә лә маһаймаған һәм маһайырға ла йыйынмаған аҡыл эйәһе, донъяуи хәлдәргә, тормоштоң яҙылған һәм яҙылмаған ҡанундарына был аҡыл эйәһенең үҙ ҡарашы, үҙ баһаламаһы. Уҙған быуат, әйтәйек, уныңса – ҡанлы ла, данлы ла. Шайтан ҡотортһа, ул шашырға, күкте түңкәрергә лә һәләтле булған, Хоҙай ҡушһа иһә әҙәмде күккә күтәргән. М. Кәримдең бөгөнгө лирик геройы донъялыҡта үҙ урынын, үҙ дәрәжәһен яҡшы белеп һәм аңлап йәшәгән шәхес. Кәрәк икән, ул Тәңреһе менән бәхәскә инеүҙән дә ҡурҡып тормай, уның менән аяҡ терәп һөйләшә:

Үҙең бер ҡат төҙөгәнде,
Күрәм, һин һипләмәйһең.
Үҙең ипһеҙ ҡылған эште,
Күрәм, һин ипләмәйһең.

Был йәһәттән бар мәшәкәт
Төшә минең елкәмә.
Һипләйем дә, ипләйем дә,
Шуны, тим, һин белһәнә.

... Ҡунаҡ булһам, өс тәүлектән
Китер инем ҡураңдан.
Юҡ, Тәңрем, мин донъялыҡтан
Улай тиҙ үк ҡуҙғалмам.

Тәңреһе менән бәхәсләшеп йәшәһә лә, М. Кәримдең лирик геройы асылда сабыр холоҡло, юҡҡа-барға күтәрелеп-бәрелмәй торған кеше, минеңсә. Һүҙҙең ҡәҙерен һәм бәҫен ебәрмәйсә, саманы белеп, кәрәген генә әйтеп һөйләшә ул. Донъялар айышы менән ғүмер ағышы ла сығырынан сығармай уны – бөтәһе лә ҡәҙимгесә, айыҡ аҡыл менән ҡабул ителә. «Эй йүгерә сылтыр ҡар һыуҙары...», «Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел», «Төн», «Бәрәкәтле тағы бер көҙ килде» тигән шиғырҙар шулай уйларға форсат бирә. Был әҫәрҙәрҙең үҙәгендә торған лирик геройҙың хәтере зирәк, күңеле саф, йәне тыныс, кәйефе заманса. Ул, XIII быуатта йәшәгән ғәрәп шағиры Умар Ибн Әл-Фәридтең «Шарап үтә күренмәле, һыуҙан саф» тигән юлдары менән бәхәс ҡорғандай итеп, «Эсеп алһаҡ, күңел тиле, аң ғәрип, бына шундай көнгә төштөк, әл-Фәрид» тип шаяртып алырға ла мөмкин. Хәйер, шаярыу микән был? Сөнки, шиғырҙың артабанғы юлынан күренеүенсә, «Донъя аға. Ҡотолоу юҡ был яҡтан. Заманалар шарапты ла болғатҡан... »

Ҡыҫҡаһы, әгәр рус халҡы, рус әҙәбиәте һәм мәҙәниәте XIX быуаттан XX быуатҡа үҙенең мәшһүр яҙыусыһы һәм фекер эйәһе Л. Толстой менән күскән булһа, беҙ XX быуаттан XXI быуатҡа арҙаҡлы шәхесебеҙ М. Кәрим менән атланыҡ. Шуға шөкөр итәйек.

3

Үткәндәрҙе ҡәһәрләүҙән ләззәт табып йәшәүселәрҙең күңелен болғатырҙай тағы бер факт: батшалар әмере буйынса исеме тарих битенән юйылып ташланған Салауат батыр совет осоронда ғына халҡына әйләнеп ҡайтты. Уның исемен хәҙер ҡала-райондар, ауыл-ҡасабалар, кинотеатрҙар, ҡала һәм ауыл урамдары, стадиондар һәм парктар, музейҙар һәм мәктәптәр, китапханалар, уҡыу йорттары һ.б. йөрөтә. Салауат Юлаев һүҙҙәренә яҙылған йырҙар халыҡ теленән һәм сәхнә түренән төшмәй. XVIII–XIX быуаттарҙа рәсми рәүештә тыйылған был исемде бөгөн бик күп ата-әсәләр үҙҙәренең һөйөклө улдарына ҡушалар. Ниһайәт, әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә ҙур

уңыштар ҡаҙанған ил азаматтарына тапшырыла торған дәүләт күләмендәге премия ла ошо исем менән аталды. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, XX быуатта Салауат Юлаевтың исеме лә, даны ла республикабыҙ күгендә генә түгел, унан ситтә лә ғорур яңғырай башланы.

Һүҙҙең алыҫтан башланыуы юҡтан ғына түгел, әлбиттә. Егерменсе быуатты тамамлағанда шиғриәтебеҙ тормошонда хәтергә һеңеп ҡалған иҫтәлекле ваҡиғаларҙың береһе ошо шәхескә бәйле – Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары сафына яңынан дүрт шағир өҫтәлде: Факиһа Туғыҙбаева, Ҡәҙим Аралбай, Тимер Йосопов һәм Хәсән Назар. Шул да мәғлүм булһын: быуаттар артылышында улар юғары премия яулауҙары менән бер ҡатарҙан, үҙҙәренең түңәрәк юбилейҙарын да билдәләнеләр.

Факиһа Туғыҙбаева – Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ булған әҙибәләр араһында, Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәб Биишеванан ҡала, өсөнсөһө. 1980 йылда баҫылып сыҡҡан «Мәк ялҡыны» тигән йоҡа ғына тәүге китабынан һуң иҫ киткес ҙур һикереш яһап, ул 45 йәшендә лауреат бейеклегенә күтәрелде. (Ҡыҙыҡһыныусылар булһа, йәйәләр эсендә шундай сағыштырыу килтерергә мөмкин: Һәҙиә Дәүләтшинаға был исем 62-һе тулғанда, ә Зәйнәб Биишеваға – 60 йәшендә бирелгәйне). «Мәк ялҡыны»нан һуң бер-бер артлы «Шаҡмаҡлы дәфтәр» (1981), «Яңы күлдәк»(1983), «Күҙ ҡараһы» (1984), «Йондоҙ асам» (1987), «Хлеб да соль» (1989), «Сәғәт моңо» (1991) тигән китаптар донъя күрҙе. Һигеҙенсеһе иһә – «Фатихамды бирәм һиңә» (1994) тигәне – авторға шөһрәт алып килде: ошо китап өсөн 1995 йылда уға Салауат Юлаев премияһы тапшырылды. Шағирәнең артабанғы ижады «Болонда уйнай сәскәләр» (1995), «Камень счастья» (1998) исемле китаптарында сағылыш тапты. Егерменсе быуатты ул «Минең ҡошом Һомай» (2000) тигән йыйынтығы менән ослап ҡуйҙы.

Факиһа Туғыҙбаева – ижадта ғына түгел, тәнҡиттә лә бәхетле шағирә. Атлаған һайын булмаһа ла, башҡорт шиғриәтенә арналған мәҡәләләрҙә уның исеме телгә алынмай ҡалмай. Ҡәләмдәштәре лә иғтибарлы һәм ихтирамлы Факиһаға. Тәрән фекерле ҡәләм эйәһе тигәнерәк баһалама юлдаш уға хәҙер. Ошо баһалама шағирәнең 50 йәше айҡанлы Хәсән Назар тарафынан яҙылған «ҡәрҙәшлек» («Ағизел» журналы, 2000 йыл, 1-се һан) тигән мәҡәләһендә оторо ла үҫтерелеп, кире ҡаҡҡыһыҙ итеп нығытып ҡуйылды. Мәҡәләнең ав-

торы юбилярҙың ижадына башҡорт ерлегендә генә түгел, киңерәк планда ҡарап, бындай һөҙөмтәгә килә: «Барлыҡ ошо бай һәм ҡатмарлы, сағыу һәм аһаңле солғанышта, күсәгилешлектә, шифриәт тигән берлектә халҡыбыҙҙың әрнеүле һәм сәмле, ғорур һәм ғәмле шағирәһе Факиһа Туғыҙбаева – донъяға, кешеләргә ҡәрҙәшлекте йырлаусы, уға көс өҫтәүсе аҫыл зат ул. Ҡайһы саҡта, бәлки, ҡоро асырғаныуҙар ҙа, аҡты аҡ, ҡараны ҡара тип раҫлаусы ябайлыҡтар ҙа булғылайҙыр, әммә, тотошлай алғанда, ул – рухи күтәрелешебеҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылыусы, аҡыллы, инабатлы шәхес, ысын ижадсы». Хәсән Назарҙың: «Факиһа – рухи яҡтан Аҡмулланың ҡыҙы, Бабичтың һеңлеһе» тигән сағыштырыуы ла оригиналь яңғырай һәм уның менән килешмәү мөмкин түгел.

Ысынлап та, тематик яҡтан ҡарағанда ла, идея-эстетик талаптар юғарылығынан күҙ ташлағанда ла, Ф. Туғыҙбаева ижадының бер үҙенсәлеге – милләт яҙмышының һағында торған тарихи шәхестәргә, улар ҡалдырған рухи хазинаға иғтибарлы, илтифатлы булыуҙа. Уның әҫәрҙәре аша беҙ йыш ҡына Салауат Юлаевты ла, Аҡмулланы ла, Әхмәтзәки Вәлидиҙе лә, Шәйехзада Бабичты ла, Һәҙиә Дәүләтшинаны ла, Рәми Ғариповты ла иҫкә алабыҙ, хәтеребеҙгә төшөрәбеҙ. Шәйехзада Бабичҡа арналған «Тәүбә» исемле поэмаһы хаҡында әүәлерәк үҙемдең фекеремде әйткәйнем инде. Был юлы шағирәнең яңыларҙан иҫәпләнгән «Атылған йыр» тигән әҫәренә генә бер аҙ туҡталып китмәксемен.

«Атылған йыр»ын автор реквием тип атаған. Милли әҙәбиәтебеҙ өсөн был – бер яңылыҡ, әлбиттә. Хәйер, тамырҙары алыҫтараҡ ятҡан, ныҡ үҫешкән әҙәбиәттәрҙә лә йыш осрай торғандарҙан түгел ул реквием тигәндәре. Рустарҙа ла Анна Ахматованыҡынан башҡалары күҙгә бик бәрелеп бармай, шикелле. Башлыса музыка өлкәһенә ҡараған жанрға мөрәжәғәт итеүе лә юҡтан түгелдер Факиһаның – әҫәрҙең үҙәгендә композитор һыны тора. Ул – башҡортоың мәшһүр улы Ғәзиз Әлмөхәмәтов. Исемдәре донъя күләмендә танылыу тапҡан композиторҙарҙан Моцарт, Берлиоз, Вердилар за заманында реквиемдар яҙып ҡалдырған. Тик уларҙың реквиемдары – музыкаль әҫәрҙәр. Ф. Туғыҙбаеваның «Атылған йыр»ы – ғүмере трагик рәүештә өҙөлгән атаҡлы башҡорт композиторы һәм йырсыһының әсе яҙмышын сағылдырған әҙәби реквием.

«Атылған йыр»ҙа Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың бөтә тормош юлын һәм ижадын эҙмә-эҙлекле һүрәтләү бурыс итеп ҡуйылмаған.

Авторҙың иғтибар үҙәгендә герой биографияһындағы иң киҫкен, иң аяныслы мәл – уны ҡулға алыу, зинданға ябыу, туҡмай-туҡмай һорау алыу һәм, ниһайәт, бер ғәйепһеҙгә атып үлтереү. Әҫәрҙең сюжеты бына ошонан ғибәрәт. Уның композицияһы ла авторҙың үҙ алдына ҡуйған маҡсатына ярашлы итеп төҙөлгән. Реквием күләмдәре әллә ни ҙур булмаған дүрт киҫәктән тора. Һәр бер киҫәктең үҙ атамаһы бар, өҫтәүенә уларҙың өсәүһе эпиграфтар менән дә көсәйтелгән. Киҫәктәрҙең атамаларына һәм эпиграфтарға ҡарап, сюжет нигеҙендә башлыса документаль материал ятҡанлығын да шәйләргә була.

Беренсе киҫәк, мәҫәлән, композиторҙың ҡыҙы һөйләгән хәтирәләргә таянып яҙылған: күңелендә бөрөләнеп килгән яңы көйҙөң айырым фрагменттарын пианино артында илһамланып, бөтә донъяһын онотоп тиерлек нотаға төшөрөп ултырған ата һыны; тән уртаһында ишектәрҙе шар асып, рөхсәт-маҙар һорап тормаҫтан түргә уҙған өс ҙур ҡарасҡы; хәлдең айышына төшөнә алмайынса һаман моңға сумып ултырған башҡорт композиторының абруйын төшөрөргә теләп, унан мәсхәрәле көлөү. Чайковский, Бетховендар менән мыҫҡыллы сағыштырып, композиторҙы ғына түгел, бөтә милләтте кәмһетеү, уның үткәненә һәм бөгөнгөһөнә төкөрөү; көтөлмәгән төнгө ҡунаҡтарҙың тупаҫ мөғәләмәһе, ҡорбандарына хатта ҡул күтәреүҙән дә тартынмау зары. Йән өшөткөс ошо күренештәрҙе шағирә 14 строфаға һыйҙырған һәм, образлы фекерләүҙең мөмкинлектәренән оҫта файҙаланып, герой тормошонан алынған бер эпизодты хәтерҙә оҙаҡ һаҡланырлыҡ итеп тасуирлауға ирешкән.

«Ул төрмәлә лә йырланы...» тип аталған икенсе киҫәктә композиторҙың артабанғы яҙмышы сағылған. Һорау алыусылар үҙҙәренә кәрәк яуапты бирҙерер өсөн тотҡондо ни тиклем генә йәберләмәһендәр, ни тиклем генә ҡыҫтаҡламаһындар, ул барыбер рухына хыянат итмәй, дәрәжәһен һаҡлап, үҙе булып ҡала, намыҫына тап төшөрмәй. Властар алдында ла, халҡы алдында ла ғәйебе юҡлығына, выжданының сафлығына һис кенә лә шикләнмәй ул. Үҙенең бөтә «ғәйебен» эсе тулы моң булыуҙа ғына күрә. Эпиграфтан төҫмөрләнеүенсә, документаллек был киҫәккә лә хас: геройҙың төрмәлә үткәргән көндәре шағир Мөслим Марат иҫтәлегенән сығып күҙ алдына баҫтырылған. Автор был юлы ла әҙ һүҙ менән мөмкин тиклем тосораҡ фекер әйтергә тырышҡан.

Өсөнсө киҫәкте реквиемдың кульминацияһы тиергә мөмкин. Уның атамаһы итеп тотҡондо атырға килгән ҡатилдың «Йырла,

башҡорт, һуңғы йырыңды!» тигән әмере файҙаланылған. Был әмер символик әһәмиәткә эйә: ул бик күп һорауҙар тыуҙыра, хатта тарих төпкөлөнә лә алып китә. Асылда өсөнсө киҫәктең йөкмәткеһе тулыһынса ҡатил менән тотҡон араһында барған йәшерен диалогҡа ҡоролған. Диалогтың сәбәбе иһә – әлеге шул ҡорбанын үлтерер алдынан яңғыраған әмер. Ләкин герой, бәхеткә күрә, ҡойолоп төшмәй. Бойороҡто үтәргә лә ашҡынмай. Киреһенсә, ул үҙен ифрат тыныс тота. Уның башынан, кино таҫмаһындағы шикелле, бик күп уйҙар йүгереп уҙа: «Башҡортҡа бит был бойороҡ таныш, боронғо...»; «Һуңғы ҡурайсының йән биргәнен көтөп, ти, көл булған батшалыҡ...»; «Һуңғы йыры булмай ул башҡорттоң, йыр минеке түгел – илдеке, йыр минеке түгел – ерҙеке!»; «Һуңғы йырҙы йырлар һуңғы башҡорт, башҡорт әле ерҙә – тотош ил!». Бына шулай ғорур һәм иркен хис итә үҙен композитор һуңғы минуттарына, һуңғы һулышына ҡәҙәр. Уның йәне лә шулай ғорур килеш, «ҡатил тота алмаҫ офоҡтарға – алыҫ серле күккә» олғаша.

Конфликт реквиемдың «Атылған йыр монологы» тип аталған һуңғы, дүртенсе киҫәгендә сиселә. Был киҫәктә автор, метафора алымына таянып, йырҙы кеше һынына индергән һәм уны йәнле итеп кәүҙәләндергән: атылған, ләкин үлмәгән йыр йылдар аша яңынан иленә һәм халҡына әйләнеп ҡайткан. Ҡайткан да, милләттәштәренә мөрәжәғәт иткән:

Ҡайттым осоп мең гөнаһлы ергә
Гөнаһтарҙан һеҙҙе һаҡларға.
Телгеләнмәһен тип бәғерегеҙ
Ҡыҙылдарға, тағы аҡтарға...

Стиле буйынса һуңғы киҫәк баштағыларҙан ныҡ айырыла. Әгәр тегеләрендә кешене мыҫҡыллау, кәмһетеү, унан мәсхәрәле көлөү мотивтары хөкөм һөргән булһа, бында иһә мажорлы тон өҫтөнлөк алған. Был, әлбиттә, автор ҡөҙрәте менән түгел, ә ваҡиғаларҙың логик ағышынан шулай килеп сыҡҡан: ҡеүәтле, халыҡтың моң-зарын сағылдырған һәм уның йөрәгенә ятҡан йыр бер ҡасан да үлмәй. Халыҡ йәшәй икән – йыр ҙа йәшәй. Мәшһүр композиторҙың айырыуса киң таралған һәм Ф. Туғыҙбаева реквиемында ла ҡулланыу тапҡан ҡайһы бер йырҙары, художество сараһы булыуҙан да бигерәк, уларҙың үлемһеҙлегенә ишара һымағырак ҡабул ителә. Йомғаҡлап, шулай тиергә мөмкин: әгәр быға тиклем Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың

яҡты рухы халыҡ күңелендә үҙенең моңло тауышы һәм йәнде тетрәткес көйҙәре менән һаҡланып килгән булһа, Факиһа Туғыҙбаева арҙаҡлы шәхесебеҙҙең данын әҙәби әҫәр биттәрендә мәңгеләштерҙе.

Факиһа Туғыҙбаеваның әҙәбиәткә яһаған аҙымы пионерҙан комсомолға ингәндәге тантанаға оҡшабыраҡ торһа, Ҡәҙим Аралбай үткән юл ураулыраҡ та, оҙағыраҡ та, шикелле. Урта мәктәпте тамамлағас, ул туған колхозында шофер булып эшләй. Шунан уны әрмегә алып китәләр. Юғары белемде лә әрме хеҙмәтенән ҡайтҡас ҡына, унда ла өҙөп-төтөп кенә алырға насип була уға. Университетты тамамлағас, республикабыҙҙың көньяҡ райондарында урынлашҡан мәктәптәрҙә балалар уҡыта. Артабан уға аспирант та, журналист та, төрлө кимәлдәге аппарат хеҙмәткәре лә булырға тура килә. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, 1975 йылда «Утлы кисеүҙәр» тип аталған тәүге йыйынтығы донъя күргәндә ул инде ярайһы ғына бай тормош мәктәбе үтеп, әҙәбиәт теорияһы буйынса ла (бигерәк тә фольклористика өлкәһендә) ҙур тәжрибә туплап өлгөргән була.

Әҙерлек, хоҙайға шөкөр, бушҡа китмәне. Артабанғы осорҙа Ҡ. Аралбайҙың ижады күҙгә күренеп әүҙемләнде – йыл һайын тип әйтерлек китаптары сығып торҙо: «Батыр яраһы» (1980), «Аҡ тирмә» (1982), «Гонец» (1983), «Һөйөүем йондоҙо» (1986). Ул әле лә ең һыҙғанып ижад итеүсе шағирҙар сафында. Бай тормош тәжрибәһе әҙипкә ысын мәғәнәһендә илһам сығанағына әйләнде. 1996 йылда уға «Рух яҙыуы» тип аталған һәм робағиҙар, ҡобайырҙар, шиғырҙар, йырҙар, поэмалар, бәйеттәрҙән торған йыйынтығы өсөн Салауат Юлаев премияһы бирелде. «Рух яҙыуы»нан элегерәк «Әле һуң түгел» (1989), «Мәслихәт» (1991), «Тау эйәһе» (1994) тигән китаптары ла сыҡҡайны. Премия алғас та шағир эйфорияға бирелмәне: һуңғы өс йылда ғына ла ул «Ағиҙел» биттәрендә «Ҡаратау тотҡоно» һәм «Таналыҡ тауышы» тигән яңы поэмаларын, «Себер дәфтәре» тигән баш аҫтында шиғырҙар шәлкемен баҫтырып сығарҙы.

Яңы быуатты Ҡәҙим Аралбай яңы китап менән башлап ебәрҙе – 2001 йылда уның «Таналыҡ тауышы» тип аталған йыйынтығы донъя күрҙе. Егермегә яҡын баҫма табаҡтан торған был йыйынтыҡҡа шағирҙың һуңғы йылдарҙа ижад иткән поэмалары, байтаҡ лирик шиғырҙары һәм робағиҙары индерелгән. Гөлфиә Юнысованың бынан дүрт йыл элек сыҡҡан «Аҡ ямғыр» тигән йыйынтығындағы шикелле, Ҡәҙим дә был китабына үҙе тураһында ҡәләмдәштәре, замандаштары, дәрәжәле таныштары әйткән маҡтау һүҙҙәрен туплаған.

Айырма тик шунда: Гөлфиәнекендә улар китапты ябып ҡуйһа, Ҡәҙимдекен асып ебәрәләр. Баҡһаң, Аралбайҙың ижадын бик күп арҙаҡлы шәхестәр үҙ итеп өлгөргән икән дә баһа: президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтан алып Башҡортостан ерендә тыуып үҫкән татар шағиры Роберт Миңнуллинға тиклем!

Ысынлап та, тәнҡит тә, дуҫ-иштәре лә Ҡәҙим Аралбайҙы һис ҡасан да ситкә типмәне, ҡаҡҡылап һуҡҡыламаны, ел-ямғыр тейҙермәне. Хатта уның тәүге йыйынтығына ла бер нисә мәҡәлә менән һүҙ ҡаттылар. Ҡалғандары ла бөтөнләй мәхрүм булманы: башҡорт телендә лә, башҡа телдәрҙә лә биреләһе баһа бирелеп торҙо. Әле һүҙ барған һуңғы китап 1997 йылда булдырылған «Шиғриәт йәйғоро» серияһында сыҡҡан. Бер үк ваҡытта уны юбилей баҫмаһы тип тә ҡабул итергә кәрәктер, сөнки ул шағир үҙенең 60 йәшен билдәләргә әҙерләнеп йөрөгән осорҙа килеп ятты кибет кәштәһенә. Авторҙың уҡыусы алдында тотҡан хисабына ла тиңләргә мөмкин «Таналыҡ тауышы»н. Күләме йәһәтенән дә, йөкмәткеһе яғынан да, бай иллюстрацияһы өсөн дә. Элеккеләре һымаҡ, шағирҙың был китабы ла тәнҡитселәр күҙенән ситтә ҡалмаҫ һәм ул тәрәнерәк, иркенләберәк тикшерелер тип уйлайым. Бында иһә иғтибарҙы үҙенә ныҡыраҡ тартҡан «Ҡаратау тотҡоно» поэмаһына ғына туҡталып үтергә иҫәп.

Факиһа Туғыҙбаеваның «Атылған йыр»ы һымаҡ, Ҡәҙим Аралбайҙың «Ҡаратау тотҡоно» ла тормоштан алынған реаль хәл-ваҡиғаларҙы һәм шул ваҡиғалар эсендә ҡайнаған аныҡ шәхестең яҙмышын һүрәтләүгә ҡоролған. Тегеһендә мәшһүр композитор һәм йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов һыны үҙәктә торһа, бынаһында – халыҡ шағиры Рәми Ғариповтыҡы. Ике автор ҙа геройҙарының тормош юлын тотошлай яҡтыртыуҙы түгел, ә уларҙың холоҡ-фиғелдәре, ҡылыҡтары сағыуыраҡ асылған берәй хәл иткес мәлгә туҡталыуҙы өҫтөнөрәк күргән. «Атылған йыр»ҙа ул мәлдең ҡайһылайыраҡ булыуы хаҡында үрҙә һүҙ барғайны инде. «Ҡаратау тотҡоно»нда был мәл – Рәми Ғариповтың Өфөнө ташлап, тыуған-үҫкән яҡтарына ҡайтҡан һәм бер ни тиклем шунда йәшәп алған осор. Ике әҫәр араһындағы тышҡы оҡшашлыҡ ошонда бөтә торғандыр, моғайын. Стилдәре, художество алымдары, һүрәтләү саралары буйынса улар бер-береһенән күпкә айырыла, әлбиттә.

Хәйер, маҡсат итеп ҡуйһаң, был өлкәлә лә ҡайһы бер уртаҡлыҡтарҙы табырға була барыбер ҙә. Миҫалға «Атылған йыр»ҙың айырыуса һуңғы, дүртенсе, киҫәгендә ҙур урын биләгән метафора

алымын хәтергә төшөрәйек. «Ҡаратау тотҡоно» тулыһынса ошо алым ярҙамында ойошҡан тиһәк тә, хата булмаҫ. Хатта автор һүҙе һымағыраҡ яңғыраған «Инеш» бүлегендә лә һиҙелә ул. Әйтәйек, риүәйәткә тартым бына был юлдарҙа:

Ышанғандар шуға:
Тауҙан, имеш,
Нур һирпелә, йылы ишелә,
Ҡаратауға менһәң,
йоға, имеш,
Тотҡон булыу хисе кешегә...

Унда, тиҙәр,
һаман йәшәй, имеш,
Ҡаратауҙың сәйер тотҡоно,
Тәүәккәлдәр генә күрә, имеш,
Усағының һүнмәҫ осҡонон.

Килтерелгән өҙөктө ике төрлө аңларға мөмкин. Тәү ҡарамаҡҡа ул халыҡ ижадының быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп еткән бер емеше шикеллерәк ҡабул ителә. Әйтерһең дә автор, ошо ҡомартҡыны файҙаланып, уҡыусы ҡарамағына тапшырасаҡ поэмаһының геройы ниндәй заттан икәнлегенә ишара яһай: ул – йөрәкле, сөнки «Һирәктәргә төшә – тауҙы аңлау, йөрәклеләр эше – тау ашыу»; ул – көслө рухлы («Ә һин йәшәп ҡара тауҙарҙа! Тау менән дау килеп, яғалашып, еңеп ҡара бәйге-яуҙарҙа!..»); ул – тәүәккәл, сөнки «Тәүәккәлдәр генә күрә... усағының һүнмәҫ осҡонон»). Икенсе яҡтан иһә, поэманың йөкмәткеһе менән яҡынданырак танышҡас, «Ҡаратауҙың сәйер тотҡоно» хаҡындағы легенда бынан күп быуаттар элек түгел, ә беҙ йәшәгән дәүерҙә барлыҡҡа килгән, ошо тау итәгендә Рәми йәшәп киткәндән һуң, уның хөрмәтенә уйлап сығарылған кеүек тойола. Ярһыу йөрәкле Рәми менән халыҡ аңына һеңгән легенда геройы араһында эске бәйләнеш тыуа – Рәми һыны легенда геройының символына әүерелә. Был фекерҙе поэманың һуңғы битендәге «даны уның шанлы Ҡаратауға шаңдау булып ҡайтты әйләнеп» тигән юлдар ҙа ҡеүәтләй.

«Инеш»тә генә түгел, «Ҡайтыу», «Рәмиҙең Ҡаратауға асылғаны..», «Ҡаратауҙа ғәрәсәт ҡупҡаны», «Йәндең осҡаны» тигән

бүлектәрҙә лә метафора тулып ята. Ә бына «Ҡаратауҙың Рәмигә яуаплағаны...», «Тәбиғәттең телгә килгәне» тигәндәре тотошлай ошо алымға ҡоролған. Һуңғыһы әҫәрҙә айырыуса ҙур урын биләп тора: күләме менән дә (ул ике йөҙ юлға яҡын!), йөкмәткеһе йәһәтенән дә. Телгә килгән һәр ағас поэманың геройына хас берәй сифатты аса. Әйтәйек, «Саталы яңғыҙ Ҡарағай», уның төбөндә ҡыуыш ҡороп, бер йәйҙе яңғыҙы шунда үткәргән яҡташын батыр йөрәкле, дәрте йөрәгенән генә түгел, күкрәгенән ташып барған кеше итеп күҙаллай. Ташты ҡоршап, ҡаяла үҫеп ултырған Ҡайын Рәмиҙе тынғыһыҙ йән ине тип хәтерләй һәм фекерен «Ҡаратауҙың менде үркәсенә, йонсоуына китмәй иҫе лә» тигән һүҙҙәр менән нығытып ҡуя. Шулай уҡ үҙенә бағышлап уҡылған шиғырҙы ла онотмаған ул. Шағирҙың уға арҡа терәп йоҡлағанлығын иһә айырым бер ғорурлыҡ менән иҫкә ала. Тере кеше һүрәтенә инеп, телгә килгән «Рәми Баланы», Ауҙарылған Муйыл, «Ҡара ерек» шишмәһе (алтынсы бүлектә) монологтарында геройҙың характеры уғата ла тәрәнерәк асыла, уның портретына яңы һыҙаттар өҫтәлә. Әйткәндәр бушҡа яңғырамаһын өсөн, Ауҙарылған Муйыл монологынан алынған бер өҙөк:

Эйе,
Емешемдән Шағир тәмләгәйне.
Унда әле мин дә йәш инем…
«Ah, муйылҡай – ҡара күҙкәй!..» тине,
Ә күҙҙәре тулы йәш ине.

Ни әйтергә теләгәндер инде? –
Һорап булмай әҙәм телендә.
Күргәнем юҡ ине ир-ат йәшен…
Күрәм – йөрәккәйе теленә.
Йөҙө – нурһыҙ,
Ҡараш төпһөҙ ине.
Егет көйө киткән ҡартайып.
Уға ламы, тинем, берәй хәсис
Күтәргәндер ҡанлы балтаһын?..

Телгә килгән тәбиғәт күренештәре, уларҙың монологтары тура–һында фекер йөрөткәндә, «Ҡаратау тоҡоно»ноң стиленә хас тағы бер үҙенсәлек иғтибарҙан ситтә ҡалмаҫҡа тейеш: монолог менән мөрәжәғәт

итеүсенең һәр ҡайһыһына тик уға ғына тәғәйен, тик уға ғына йәтеш баш һүҙ табылған. «Ҡара ерек» шишмәһе, мәҫәлән, үкһей, сөнки уның һыуын тәмләргә килеүселәр Шағир йәне осто тиеп, ҡайғылы хәбәр һалып китәләр. Ҡаялағы Ҡайын өҙгөләнә, сөнки ҡасандыр ошо тирәләге уяларҙы, армыттарҙы ҡыҙырып йөрөгән Шағир, уны ҙурлап, Ҡояш балаһына тиңләгән, күккә күтәргән. «Рәми Баланы» һамаҡлай, сөнки Кендек Атаһы уны урман эсенән күсереп, Йүрүҙән ярына, ҡыуышы янына ултыртҡан һәм шул көндән башлап һутлы тупраҡ, йомарт ҡояш уның тамырын ҡотротҡан. Ауҙарылған Муйыл аҙарына, сөнки Шағир яҙмышы менән үзенеке араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡты тойомлай. Ә бына «Саталы Яңғыҙ Ҡарағай» үкһемәй ҙә, өҙгөләнмәй ҙә, һамаҡламай ҙа, аҙарынмай ҙа – бары тик әйтә, дәрәжәһен һаҡлап әйтә, сөнки белә: ул янғыҙы урман ситендә, иң тәү уға һуға яуындар, юҡ ышығы, күнгән, яңғыҙ тора, сая алыша дауылда. Саталы Ҡарағайҙың ошолай ғорур яңғыҙлығы, төнөн дә маяҡ кеүек тороуы үҙенә тартҡандыр ҙа, бәлки, Рәмиҙе. Был инде үҙе бер әҙәби сара – сағыштырыу сараһы, геройҙы тәбиғәттәге көс-ҡеүәт менән йәнәш ҡуйып, уның һынын оторо ла ҡалҡыуыраҡ итеп күрһәтергә ынтылыу.

Әлбиттә, «Ҡара ерек» шишмәһе лә, «Саталы Яңғыҙ Ҡарағай» ҙа, Ҡаялағы Ҡайын да, «Рәми Баланы» ла, Ауҙарылған Муйыл да, Ҡаратау үҙе лә – былар бөтәһе лә символлаштырылған образдар. Әммә поэманың структураһында улар мөһим әһәмиәткә эйә, сөнки символлаштырылған булһалар ҙа, барыбер реаль тормоштағы хәл-ваҡиғаларҙан яралған, ошо хәл-ваҡиғаларҙы үҙҙәренә һеңдергән образдар һымаҡ ҡабул ителәләр. Ағас, тау, шишмә атамаларының, хатта шағир төшөнсәһенең һиҙмәҫтән генә уртаҡ исемдән яңғыҙлыҡ исемдәргә әйләнеп китеүе лә юҡтан ғына түгел: тора-бара улар әҙәби персонаждар шәйенә инеп, әҫәрҙә үҙ алдына йәшәй һәм төп геройҙың образын тулыландырыуҙа әүҙем ҡатнаша башлайҙар.

Ошо йәһәттән Ҡаратауҙы һәм уның монологтарын айырым билдәләп үтергә кәрәк. Поэмала ул ике тапҡыр телмәр тота: дүртенсе һәм етенсе бүлектәрҙә. Тәүгеһе көтмәгәндә тыуған төйәгенә ҡайтып төшкән Шағирҙың әсенеүле һәм әрнеүле һорауҙарына яуап рәүешендә яңғырай. Күп ғүмер кисергән, серле лә, хыялый ҙа Ҡаратау яҡташын йылы ҡаршылай, уға йомшаҡ тел менән уғлан тип өндәшә хатта. Ләкин иң мөһиме – Ҡаратауҙың ҡырыҫ, әммә мәғәнәле яуабында. Башта ул, Шағирҙы иғтибар менән тыңлағас, уның йырлы йәне «йәннәт гөлө кеүек йәрәхәтләнергә тора гел» тигән һығымта яһай

һәм Шағирҙың ҡалған ғүмере лә еңел булмаҫ, сөнки тәҡдир яҙған юлы – гел тура тип иҫкәртә. Артабан йөҙ йәшәр ҡартты хәтерләткән Ҡаратау Уғланына аҡыллы кәңәштәр бирә, «Ваҡыт – Оло Табип» тип, уны сабырыраҡ булырға саҡыра:

Һәр рәнйешкә,
Гөнаһ шомлоғона
Борсомайбыҙ иллә Тәңрене.
Барыһы ла үтә.
Һин дә, Уғлан,
Йәшә, баҫ та миңә әрнеүең...

«Ҡаратауҙың Рәмигә яуаплағаны...» тип аталған һәм ни бары ҡырҡ биш юлдан торған ошо дүртенсе бүлек әҫәрҙең идея-эстетик концепцияһын асыҡлауҙа мөһим роль уйнай. Поэманың авторы Шағир трагедияһын заман елдәре, илдәге ижтимағи-сәйәси тормош ҡатмарлыҡтары менән генә түгел, бәлки уның характерындағы ҡайһы бер шәхсән үҙенсәлектәр, аҡыл һәм хис араһында йыш ҡына осрай торған ҡаршылыҡтар менән дә аңлатыу һәм шул рәүешле ысынбарлыҡта тере прототибы булған геройҙың объектив образын тыуҙырыу яғында. Был ҡараш, бәлки, Рәми Ғариповтың шиғриәтенән, көндәлектәренән, әҙәби-тәнҡит мәҡәләләренән үҫеп сыҡҡандыр.

Ҡаратауҙың етенсе бүлектә яһаған сығышы башҡасараҡ яңғырай. Йөкмәткеһе менән дә, эске аһәңе йәһәтенән дә. Тегеһендә минор тон өҫтөнлөк иткән булһа, бынығында иһә – мажор. Йәне күккә осҡан шағир хаҡында һүҙ әйткәндә, мажор тон килешеп бөтә микән тигәнерәк һорау тыуыуы ихтимал. Килешәлер, сөнки был юлы Ҡаратау үҙ «тотҡоно»н хәтерләп, күберәк ул ҡалдырған эҙ тураһында һөйләй, уға дан йырлай:

Уның ише рух бөркөтөнә
Минең генә күгем тар ине.
Шул саҡта уҡ инде
Сал Уралды
Ҡоласларлыҡ ҡанат бар ине...

«Ҡаратау тотҡоно»ноң бөтә күркәмлеген символлаштырылған тәбиғәт күренештәренә генә ҡайтарып ҡалдырһаҡ, дөрөҫлөккә тап

килмәҫ ине. Уның умыртҡа һөйәген Шағир монологтары менән автор тауышы тәшкил иткәнлеге бер кемдә лә шик тыуҙырмаҫ, моғайын. Был ике ағым поэманың тәүге юлдарында уҡ морон төртә башлай һәм артабан, алмаш-тилмәш бер-береһен тулыландырып, кәрәк саҡта бер-береһен асыҡлап, әҫәрҙең аҙағына ҡәҙәр тиерлек дауам итә.

«Ҡайтыу» тигән бүлек, мәҫәлән, поезға ултырып, тыуған төйәгенә ҡарай юл тоткан Рәмиҙең эске кисерештәрен, күңел торошон тасуирлау менән асыла. Быға бөтәһе ун шиғри юл еткән. Унан һуң Шағирҙың беренсе монологы урын ала. Был монологында ул ҡылған ҡылығының асылына төшөнөргә, уның сәбәбен аңлатырға, дәлилләргә тырыша. Күләме менән әллә ни ҙур түгел – ни бары ун дүрт юлдан тора. Монолог тамамланғас, автор тауышы килеп ҡушыла. тәүҙә ул көслө түгел, ишетелер-ишетелмәҫ кенә. Күпмелер кимәлдә Шағир монологының дауамы шикеллерәк тә тойолоп ҡуя: бер яҡтан, поэма геройы яһаған аҙымға ниндәйҙер аҡлау эҙләнелһә, икенсе яҡтан, «илһам шишмәләре көтә уны зарығып...» тип, йыуатыу хисе уятыла. Сюжет тәгәрмәсе алға табан тәгәрләгән һайын, автор тауышы көсәйгәндән көсәйә бара һәм бүлек тамамланыр алдынан беҙ инде бына бындай юлдарға тап булабыҙ:

Үҙең теләп тотҡон булып йәшәү
Еңел булғанмы ни Рәмигә?
Үҙ көсөнә артҡан ышанысы,
Ярһыуҙары бер аҙ кәмегән.

Әйткәндәй, поэмала тулыһынса Шағир монологынан йә иһә автор һүҙенән торған бүлектәр ҙә бар. «Рәмиҙең Ҡаратауға асылғаны...» һәм «Тотҡонлоҡ бәхете» тигән бүлектәр нәҡ ана шундайҙарҙан. Ә бына «Ҡаратауҙа ғәрәсәт ҡупҡаны»лағы монолог был бүлектең яртыһынан күберәген биләп тора. ғөмүмән, Шағирҙың ҡайһы ғына монологын йә иһә ҡайһы ғына бүлектәге автор һүҙен алып ҡарама, улар бөтәһе лә бер маҡсатҡа – поэма геройының образын мөмкин тиклем тулыраҡ һәм тәрәнерәк итеп асыуға, уға хас булған ҡаршылыҡтарҙы һәм кәмселектәрҙе йәшермәйенсә, характер тыуҙырыуҙа яһалмалыҡтан ҡотолоуға буйһондоролған.

«Ҡаратау тотҡоно»ноң күҙгә бәрелеберәк торған тағы бер үҙенсәлеге: поэманың сюжеты Рәми Ғарипов әҫәрҙәренән алынған шиғри юлдар менән үрелеп үҫә. Уларҙың ҡайһы берҙәре (мәҫәлән,

«Туған тел» шиғырынан һәм «Салауат батыр» балладаһынан алынғандары) поэма тексынан хатта айырылып, иғтибарҙы үҙенә тартып тора. Бәғзеләрен иһә һиҙемләргә була. Еңелсә генә ҡараш ташлағанда ла, Ҡәҙим Аралбайҙың «Ҡаратау тотҡоно»нда Рәми Ғариповтың «Табыныу» поэмаһына, «Уйҙарым», «Аманат» ҡобайырҙарына, «Урал йөрәге» хикәйәтенә, «Йөрүҙән», «Бына минең тыуған ер был», «Ни хәл генә, яҙғы аҡ ҡайын!..», «Умырзая йыры», «Кәкүк», «Минең йондоҙом», «Һүҙем бар», «Һаҡланыу», «Яуаплылыҡ», «Нигә генә хәҙер ҡағылмайым…», «Дуҫтарыма», «Тәүәккәллек», «Йырҙарыма ҡайтам», «Бәлки, керләнеп тә бөтөрмөн мин...», «– Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!» һәм башҡа шуның кеүек шиғырҙарына ауаздашлыҡты тоймай мөмкин түгел. (Һүҙмә-һүҙ сағыштырыуҙы киләсәктә Ҡ. Аралбай ижадын ентекләберәк тикшереүселәр ҡарамағына ҡалдырайыҡ). Тимәк, «Ҡаратау тотҡоно»ноң туҡымаһына Рәми Ғарипов ерҙә йәшәп киткән ябай бер шәхес шәйендә генә түгел, үҙенең ижады менән дә килеп ингән. Һәм шул рәүешле, шиғриәткә күскән. Шағир образы тулы ҡанлы әҙәби герой кимәленә күтәрелгән.

Рәми Ғариповҡа бағышлап яҙылған шиғырҙар байтаҡ хәҙер. Иҫтәлектәр ҙә күренгеләп ҡала, һирәк-мирәк булһа ла. Ҡәҙим Аралбайҙың әле һүҙ барған поэмаһы шағирҙың исемен мәңгеләштереүгә, уның йәнле образын һынландырыуға индерелгән тос өлөш булыр һәм әҫәр әҙәбиәтебеҙҙә үҙенә тейешле урынды биләр тип өмөт итәйек.

Уйлағанын күҙеңә бәреп әйтергә яратҡан тура һүҙле Хәсән Назар (ошо ҡылығы менән ул ҡайһы берҙә Хәким Ғиләжевты хәтерләтеп ҡуя) өҫтәрәк телгә алынған «Ҡәрҙәшлек» тигән мәҡәләһендә «дан күлдәген әшнәлек менән, сиратта тороп, хатта осраҡлы ғына алыусылар ҙа бар» тип яҙғайны. Дөрөҫлөккә, бәлки, тап та киләлер был һүҙҙәр. Өфөлә йәшәгән, әҙәбиәт донъяһының үҙәгендә ҡайнаған кеше юҡты һөйләмәҫ, тимен. Тимер Йосопов менән шундайыраҡ хәл булды түгелме һуң? Туҡһанынсы йылдар уртаһында уның «Ауырая аҙымдар» тигән китабы, булһа кәрәк, (тәғәйен генә хәтерҙә ҡалмаған) Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителгәйне. Ләкин ул, ни эшләптер, үтмәне. Ә үтерлек ине бит! Етмәһә, «Ауырая аҙымдар»ға Тимерҙең бер нисә йыл элегерәк баҫылып сыҡҡан «Килде заманалары» һәм «Ҡая өҫтөндә уйланыу» тигән ике китабы ике яҡтан ышаныслы ике таяу булып тора ине. Ярай әле, һуңлабыраҡ булһа ла, ғәҙеллек

еңде: «Беште ер еләккәйҙәре» тигән китабы өсөн 1998 йылда уға күптән бирелергә тейешле премия тапшырылды, ниһайәт.

Т. Йосопов – бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә хаҡлы рәүештә төплө һәм ныҡлы урын биләгән шағирҙарҙың береһе. Утыҙ йылдан ашыу ижад дәүерендә ул шиғриәттә күҙгә бәрелеп торған ҙур һикереш яһаны. Хәтерләйһегеҙҙер әле: йәш шағирҙың 1968 йылда сыҡҡан «Икмәк еҫе» исемле тәүге китабын түш кеҫәһенә һалып йөрөтөрлөк ине. Егерме дүрт шиғырҙы үҙ ҡуйынына һыйҙырған был йыйынтыҡты хәҙер «Беште ер еләккәйҙәре» янына һалып ҡуйһаң – ер менән күк араһы, әлбиттә.

Ләкин төп күрһәткес – китаптарҙың күләме менән уларҙың һаны ғына түгел. Иң мөһиме – шағирҙың, аҙымдары ауырая барыуға ла ҡарамаҫтан, ҡая өҫтөндә уйланып баҫып торор өсөн заман елдәренә хатта түшен ҡуйып, үҙе ҡасандыр бер тапҡыр һайлап алған юлдан тайпылмайынса, туҡтауһыҙ алға хәрәкәт итеүендәләр. Уның быуаттар артылышыңдағы әүҙем ижады ла быға асыҡ дәлил: егерменсе быуатты Т. Йосопов «Яңы йылдың тәүге көнөндә» һәм «Мин – юламан. Тағы сәфәр сығам...» тигән шәлкемдәре менән оҙатып ҡуйҙы ла, Егерме беренсене «Түбәм тейҙе күктәргә...» тигәне менән асып ебәрҙе.

Ғөмүмән алғанда, Т. Йосопов шиғриәтенең тематик һәм идея даирәһе киң һәм бай. Күберәген заман һулышы менән һулаған әҫәрҙәр тәшкил итһә лә, халҡыбыҙҙың тарихи үткәндәре лә ят күренеш түгел уға. (Хәйер, тарихҡа ла барыбер бөгөнгө көн талаптарынан сығып ҡараш ташлана ла инде!) Шағир йөрәгенә ауыл мөхите йәтешерәк булһа ла, ҡала шау-шыуҙары ла сағылыш тапмай ҡалмай уның шиғриәтендә. Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙың шауҡымы ла яңғырап киткеләй Тимерҙең шиғырҙарында һәм поэмаларында. Мөхәббәт, дуҫлыҡ темалары менән әхлаҡ мәсьәләләре лә урап уҙмай уны. Гражданлыҡ, патриотлыҡ, үҙ принциптарыңа тоғролоҡ тойғоһо менән һуғарылған шиғырҙар ҙа юҡ түгел. Илде үҙгәртеп ҡора башлағас, сәйәси лирикаға тартым ағым да һиҙҙереп ҡуйҙы үҙен Т. Йосопов ижадында. Йыйып ҡына әйткәндә, йәшәйештең тап үҙе шикелле был ижад – унда бөтә буяуҙарҙы һәм биҙәктәрҙе лә табырға мөмкин.

Т. Йосоповтың шиғриәте олпатланғандан-олпатлана, уйсанланғандан-уйсанлана, хатта, әйтер инем, үҙенсәлекле бер фәлсәфәүи йүнәлеш ала бара. Ошо сифаттар уның әле һанап үтелгән шәлкемдәренә лә хас. «Яңы йылдың тәүге көнө...» тигән шиғырҙы

уҡый башлағас, башта, мәҫәлән, тертләп киткәндәй булаһың: Яңы йыл бында, ғаләм йөгө ауып, өҫкә ишелгән ҡар шикелле күҙ алдына баҫтырыла. Уҡыуҙы артабан дауам итһәң, шул асыҡлана: ҡарап торғанда, Яңы йыл – күңелле байрам да ул, тик бына, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәр байрамдан һуң «йылдар ҡала һанаулы...». Шуныһы ҡыуаныслы, лирик герой ошондай күңелһеҙ асыш яһаһа ла, төшөнкөлөккә бирелмәй, ғүмерҙең ағышына, уның шулай булырға тейешлегенә айыҡ аҡыл һәм тыныс күңел менән ҡарай:

Бер йылға мин үҫмәнем шул,
Арыу ғына сүктем бит.
Ә шулай ҙа
Мин – мин әле,
Һөйөп танһыҡ ҡанмаған.
Ике аяҡ,
Ике ҡулым –
Хәл таяҡҡа ҡалмаған,
Аяҡтарым талмаған.

Өҫтәүенә, Т. Йосоповтың был геройы ла, «Беште ер еләккәйҙәре»ндәге күп кенә шиғырҙарҙағы кеүек, ил ғәмен үҙ индәренә алырға әҙер торған шәхес итеп һүрәтләнгән: «Илдең ҡайғыһын эсәйем, ҡалмаһын бүтәндәргә», – ти ул.

«Яңы йылдың тәүге көнө...»ндәге мотив әле һүҙ барған шәлкемдәргә ингән башҡа шиғырҙарҙа ла яңғырап киткеләй. Бер осраҡта лирик герой: «... Ҡыҫҡа икән ниңә ғүмерҙәр? (...) Был мәңгелек – һаран, әҙәмдәргә ғүмерҙәрҙе бирә бер көндәй», – тип, аптырашта ҡалған кеше һымаҡ риторик һорау менән мөрәжәғәт итһә, икенсе осраҡта ул: «Һауаларым минең тәпәшәйгән, һауаларым миңә ҡыҫыҡ төҫлө. Яҙҙарыма етһәм ярар ине йолҡоноп та сығҡан ҡошсоҡ төҫлө» тигәнерәк шик-шөбһә ҡатыш өмөтөн белдереп ҡуя. «Уҙған ғүмер, баҡһаң, бер минуттай, бер уйлаһаң, гүйә, бер быуат» та булып тойола ҡайһы берҙә Т. Йосоповтың лирик геройына. Моңһоуыраҡ мәлендә ул: «Яурынды йылдар баҫа, яйы юҡ туҡталырға», – тип, уфтанып та алғылай. «Арыу ғына ара үттем, әллә ҡайҙа ашҡынам. Атылдым гел күк ташҡындан, салланды шул башҡынам» тигән борсоулыраҡ уйҙары менән дә уртаҡлаша ул. «Мәле менән йәшәгеләр килмәй, донъянымы өҙөлөп һөйгәнгә» тигән хистәрен дә йәшермәй.

Лирик геройҙың эске донъяһын, күңел торошон, хәл-әхүәлен, уй-кисерештәрен сағылдырған бындай миҫалдарҙы артабан да килтерергә булыр ине. Т. Йосопов шиғриәтенә хас психологизм уның һуңғы шәлкемдәрендә уғата ла көсәйеп киткәндәй, хатта. Лирик герой, ысынлап та, күп уйлана, йыш ҡына кеше менән Йыһан араһындағы бәйләнештәргә лә ҡолаҡ һала («Йәнем тыныс түгел, шомло Йыһан, ҡара болот тора күк иңендә»; «Ябырыла хәүеф болоттары, күңелемдең күге аяҙ түгел»; «Һау ерем юҡ минең, күкрәгемде телгеләне Йыһан хәнйәре»; «Ҡоштар сырлай, был йөрәгем йырлай Ғаләм генә тигән йортомда»; «Йыһан тигән был тирмәбеҙ тик нурҙарҙан тулышҡан»; «Ҡаршы иҫкән елдәр ала һулышыңды, һырып алған нурҙар йыһан ҡыуышыңды»; «Ваҡыт алып оса, килмәҫ минән хәбәр. Йыһан карабының тиҙлектәре хәтәр...»; «Бер уйлаһаң, үткән ғүмерҙәрем – ҡул һонорлоҡ ҡына тау башы. Бер уйлаһаң, шуңдай оломон мин (…) – Йондоҙҙарҙың хатта йәштәшемен – Кешемен... » һ.б., һ.б.) ғүмер төшөнсәһенең асылын һәм йөкмәткеһен бөтә нескәлегендә һәм тәрәнлегендә аңларға тырыша; ара-тирә уға яманһыу ҙа булып китә, бошонҡолоҡҡа ла бирелеп ҡуйғылай, һағышлы хистәр ҙә урап уҙмай уны; әммә, нисек кенә булмаһын, барыбер йәшәйештең күберәк яҡты яҡтарын күрә, йәшәүҙән һис кенә лә туймаған, унан ләззәт эҙләй, тыуған һәр көндө «Моңдар аға, таң нурҙары аға» тип ҡаршылай; «Уянығыҙ, әй, кешеләр (...) донъя матур икән – таң ҡаламын», – тип өндәшә, бармаҡтары менән «елдәр ишкән болот арҡанына сат йәбешкән»дәй хис итеп үҙен; «Тулап туймаҫлыҡ был донъя, һулап туймаҫлыҡ һауа...» – тип хозурлана. «Көндәр оҙая, ҡыҫҡара ғүмер» тип зарланһа ла, Т. Йосоповтың лирик геройына һөйөү ҡайтып, йөрәген йәшен телеп үтеүе лә ихтимал. Ул саҡта инде уға Ер тетрәп, тау сайҡалғандай тойолор.

Тимер Йосоповтың быуаттар артылышындағы лирикаһы, бер яҡтан олпатланып, уйсанланып китһә, икенсе яҡтан ул тулыһынса ошолай күтәренке рух менән генә һуғарылған икән тип уйлаһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ, әлбиттә. Лирик герой, уй-хыялдары менән Йыһан киңлектәрендә осоп йөрөһә лә, барыбер гөнаһлы еребеҙҙән айырылып китә алмай. Ә унда, ерҙә, эштәр бик шәптән түгел:

Үҙ алдынамы тиргәнә
Бер иҫерек эргәлә.
Һүҙҙәрен дә аңламаҫһың,

Тел тигәнең көрмәлә.
Иҫеректәр иректә лә,
Иҫеректәр төрмәлә.
Батшаһын да аңламаҫһың –
Теле гелән көрмәлә.
Баш әйләнә,
Ҡалдыҡмы һуң
Әллә, тим, өйөрмәлә?
Ни хәлдәр генә итәйем,
Илдең теле көрмәлә.

Ҡыҫҡа булыуына ҡарамаҫтан, һүрәтләү сараларының муллығы менән айырылып торған был шиғыр үҙенең жанры буйынса тәмсилгә тартым. «Тәмсил, – тип билдәләгәйне һүҙ сәнғәтенең теорияһын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән күренекле ғалим Ким Әхмәтйәнов, – Көнсығыш халыҡтары әҙәбиәтендә документаль нигеҙе булған үҙенсәлекле мәҫәл ул. Моралдең булыуы тәмсил өсөн мотлаҡ түгел». Өҫтә килтерелгән шиғыр тап ошо талаптарға яуап бирә лә иңде, минеңсә. Сөнки уның документаль нигеҙгә ҡоролғанлығы хаҡында һөйләп тораһы юҡ – киң күләм мәғлүмәт саралары беҙҙе документаль фактттар менән иртә таңдан алып ҡара төнгә тиклем «туҡландырып» торалар. Моралгә килгәндә иһә, уның да кәрәге әллә ни һиҙелмәй – былай ҙа бөтәһе лә аңлашыла: балыҡ башынан серегән шикелле, илдең дә теле шулай көрмәлә.

Т. Йосоповтың яңы шиғырҙары араһында заман сирҙәренә диагнозды, ситләтеп, кинәйәләп тормайынса, туранан-тура, асыҡтан-асыҡ ҡуйғандары ла бар. «Дәүләт ҡаҙнаһына ҡул һонғандар, – магнаттарҙы төрмәгә ябалар, ябалар ҙа тағы сығаралар, яйын табалар...» тигән юлдар, мәҫәлән, бер ниндәй ҙә аңлатмаға мохтаж түгелдер – бөгөнгө ысынбарлыҡтың ҡысҡырып торған ҡаршылыҡтары көҙгөләге кеүек сағылған унда. Йәиһә бына был юлдарға ҡолаҡ һалайыҡ:

Ниңә әле йөҙө ҡасҡан
Бөгөн төндә айҙың?
Хәлдәре, тим, – ер менән күк
Ярлы менән байҙың.

Әйтерһең дә беҙҙең алда 1905–1907 йылдарҙағы рус инҡилабы осоронда М. Ғафури ижад иткән шиғырҙарҙың береһе. Был сағыштырыу Т. Йосоповтың үҙаллылығына, уның шиғриәтенә, ижади ҡаҙаныштарына күләгә төшөрөү ниәтенән килтерелмәй, әлбиттә. Һүҙ тик мотивтар уртаҡлығы хаҡында ғына бара. Мотивтар уртаҡлығын иһә әҫәрҙәр нигеҙендә ятҡан тормош материалының яҡынлығы һәм оҡшашлығы менән генә аңлатырға мөмкин. Әгәр ошо рәүешсә фекер йөрөтөп, бер-береһенән шаҡтай алыҫ ваҡыт арауығында йәшәгән ике шағирҙың ижад практикаһында темалар һәм идеялар берҙәмлеген тоябыҙ икән, беҙ яңынан XX быуат башына әйләнеп ҡайтҡан булабыҙ түгелме һуң? Был һорауҙы рус әҙәбиәтенән алынған миҫалдар менән дә ҡеүәтләргә мөмкин. Күренекле яҙыусы А.И. Куприндың «Поединок» тигән повесын ғына хәтергә төшөрөү лә етә. Беҙҙең бөгөнгө әрме Куприн әҫәрендә һүрәтләнгән батша әрмеһенән нимәһе менән генә айырыла? Иҫ киткес күңелһеҙ хәл!

Үрҙә һүҙ тик мотивтар уртаҡлығы хаҡында ғына бара тигәс, бер аҙ аҡланыу һымағыраҡ яңғыраны төҫлө. Ә ниңә, Тимер Йосопов Мәжит Ғафури традицияларына ла таяна тип ауыҙ тултырып әйтһәк, яҙыҡ булырмы ни? Бер Ғафури генә лә түгел. Мин, мәҫәлән, уның байтаҡ шиғырҙарыңда Рәми Ғарипов һулышын һиҙемләйем. Бигерәк тә образлы фекерләү алымдарының, метафорик һүрәтләү сараларының мул ҡулланылыуында. Ҡайһы бер тышҡы оҡшашлыҡ та юҡ түгел. Рәми Ғариповтың «Аманат» исемле ҡобайыры һәм Тимер Йосоповтың «Аманат» тигән шиғыры атамалары менән генә түгел, формалары йәһәтенән дә бер-береһенә бик яҡындар. Идея-тематик яҡтан да ауаздаштар. Әгәр киләсәктә «Башҡорт поэзияһында Рәми Ғарипов традициялары» тигән тема өҫтөндә ғилми эш менән шөғөлләнеүсе табылһа, халыҡ шағирының традицияларын дауам итеүселәр исемлеген Тимер Йосопов асып ебәрер һымаҡ миңә.

Егерменсе быуатты тарих төпкөлөнә оҙатҡанда Салауат Юлаевтың данын ғына түгел, уның рухы алдындағы яуаплылыҡты ла үҙ иңдәренә һалған шағирҙарҙың дүртенсеһе – Хәсән Назар: ике меңенсе йылда донъя күргән «Асманға ашыу» исемле китабы өсөн уға дәүләт премияһы һәм лауреат дәрәжәһе бирелде.

Ғүмерен ижадҡа арнаған шәхестәрҙең күбеһенә хас булғанса, Хәсәнде лә әҙәбиәт майҙанына сығарған юл роза сәскәләренә күмеп ҡуйылмағайны. Тиҫтерҙәренеке менән сағыштырғанда, уртаҡлыҡтар ҙа, үҙенсәлектәр ҙә күп ул юлда. Атаһы һуғыш яланында ятып ҡалған

йәтим малайға, мәҫәлән, бәләкәйҙән үк көтөүен дә көтөргә, һабанын да һөрөргә тура килә. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас һайлап алған тәүге һөнәре лә әҙәбиәт донъяһынан алыҫыраҡ булып сыға.

Әммә тыумыштан уҡмаша башлаған яралғы («Мин иҫәрҙе беләһең бит инде, һүҙ сихыры миңә ҡағылған»), бәрәкәтле мөхиткә тап килеп («Йәнгә тылсым булды риүәйәттәр, мин үҫмәнем күңел ҡаҡланып»), барыбер ҙә үҙ шытымын бирмәй ҡалмай. Шағирҙың тормош һәм ижад юлын бөтә нескәлектәренә тиклем белмәһәм дә, был шытымдың үҫендегә әйләнеп, йылдар үткән һайын ҡалҡына һәм нығына барыуында уның башта район гәзитендә, унан һуң республикабыҙҙың күп төрлө матбуғат баҫмаларында эшләүе лә үҙенең ыңғай ролен уйнамай ҡалмағандыр тип уйлайым. Әрме хеҙмәтендә тормош сынығыуын үткән булһа, Мәскәүҙең А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында ситтән тороп уҡыу дәүерендә иһә ул һүҙ сәнғәтенең теоретик нигеҙҙәрен төптәнерәк үҙләштерергә тырышҡандыр. Иншалла, тырышлыҡ бушҡа китмәгән. Әҙәбиәт һәм сәнғәт мәсьәләләренә ҡағылышлы мәҡәләләренән, ҡәләмдәштәре ижадына яһаған күҙәтеүҙәрҙән, төрлө милләт шиғриәтенән башҡортсаға ҡайтарылған тәржемәләренән күренеүенсә, Хәсән Назар – ҙур әҙерлекле, киң эрудициялы шағир.

Шағир биографияһындағы тағы бер үҙгәлек: ҡорҙаштары утыҙ йәш тирәһендә Яҙыусылар союзы ағзаһы булып китһәләр, Х. Назарға был бәхет иллеһен уҙғас ҡына йылмая. Китаптарын баҫтырып сығарыу буйынса ла ул үҙенә башҡа: 1971 йылда «Бөркөттәр төйәге» тигән беренсе йыйынтығын уҡыусы ҡарамағына тапшырҙы ла, ике тиҫтә йылға тынып ҡалды – «Шоңҡар сөйәм» тигән икенсе китабы тик 1992 йылда ғына донъя күрҙе.

1995 йылда баҫылып сыҡҡан «Заман заңы» исемле өсөнсө китабын автор «Ғәмәлдә мин бер китапты яҙам...» тигән баш һүҙ менән асып ебәрҙе. Кескәй генә был инеш мәҡәлә, минеңсә, ҙур символик әһәмиәткә эйә: төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ергә килгән һәм ерҙә йәшәп киткән һәр шәхестең ғүмере – үҙе бер китап. Тик, ҡызғанысҡа ҡаршы, ул китап та, ғүмерҙең үҙе лә күп осраҡта иғтибарҙан ситтә ҡала.

«Заман заңы» өсөн махсус яҙылған баш һүҙҙең тағы бер файҙалы яғы бар: ул күпмелер кимәлдә Х. Назарҙың тәбиғәтен һәм шиғриәтен аңларға ярҙам итә. Тау битендә һәм туғайҙа бесән сабыусы ике кешенең хеҙмәт күрһәткестәрен сағыштырған хикәйәт, мәҫәлән, мәғәнәле яңғырай. Кинәйәгә ҡоролған ошо хикәйәт шағирҙың ҙур

әҙәбиәткә яйлабырак, ашыҡмайса ғына аяҡ баҫыуының сәбәбен дә бер ни тиклем асыҡлай һымаҡ.

«Туғай бесәнен сабыусы» Хәсәндең «салғыһы бакуйҙы әллә ни сыжлатмай ғына ҡайырһа» ла, үләне хуш еҫле, витаминдарға бай булғандыр, күрәһең. Сөнки уның һирәк-мирәк кенә күренгеләп торған шиғырҙарына, һағындырып ҡына донъяға сыҡҡан йыйынтыҡтарына ҡәләмдәштәре битараф ҡалмай. Быны шағир үҙе лә ҙур ҡәнәғәтләнеү һәм эске бер ғорурлыҡ менән иҫкә ала. «Һауаланып түгел, әҙәм балаһына хас булғанса, – тип яҙа ул әле һүҙ барған инеш мәҡәләһендә, – ҡыуанып хәтерҙә тотам – яҙғандарыма ҡарата халыҡ шағирҙары Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рауил Бикбаев матбуғатта йылы һүҙ әйтте, был иһә яуаплылыҡты көсәйтте, бурысты ауырайтты. Былай ҙа мин, үҙемдең быуындаштарым, бауырҙаштарым кеүек үк, был ҙур оҫталарҙың тәрән тәьҫирен кисереп йәшәйем».

Хәсәндең әкренләп кенә асыла барған талантына айырыуса Назар Нәжми иғтибарлы булды, шикелле. Уның башта айырым баҫмаларҙа донъя күргән, һуңынан «Асманға ашыу» китабына баш һүҙ булып киткән «Шиғриәт һәм яҙмыш» тигән мәҡәләһе шулай уйларға нигеҙ бирә. Тик ошо урында бер аҙ асыҡлыҡ индереп үтергә кәрәктер. Тәү тапҡыр был мәҡәлә «Шағирлыҡ һәм яҙмыш» тигән баш аҫтында «Ағиҙел» журналының 1998 йылғы 8-се һанында баҫылғайны. Ул «Тыуыу», «Аҡлыҡҡа табынып...», «Кешене шиғырлы итеү» тигән өс мөстәҡил бүлектән тора. Мәҡәләнең «Хәсән Назар ижадына бәйле уйланыуҙар» тигән өҫтәмә исеме лә бар. Ул дөйөм атаманың аҫтында йәйәләр эсендә бирелгән. Артабан был мәҡәлә Назар Нәжмиҙең вафаты алдынан сигнал экземпляры саҡ-саҡ сығып өлгөргән «Күңел сәхифәләре» тигән китабына инде.

Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтәм: ҡайһы бер тыныш билдәләрен иҫәпкә алмағанда, мәҡәләнең журнал һәм китап вариантары араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ. Ә бына Х. Назарҙың «Асманға ашыу» йыйынтығына баш һүҙгә әйләнгәс, ул байтаҡ үҙгәрештәргә тарыған. Беренсенән, уның дөйөм атамаһы башҡасарак яңғырай. Икенсенән, «Тыуыу» һәм «Кешене шиғырлы итеү» тигән бүлектәрҙән ҙур-ҙур киҫәктәр алып ташланған. (Әҙ-мәҙ булһа ла, бындай ҡыҫҡартыуҙарҙан «Аҡлыҡҡа табынып...» тигән бүлек тә азат түгел.) Өсөнсөнән, «Кешене шиғырлы итеү» тигән һуңғы бүлеккә туранан-тура әле һүҙ барған китапҡа ҡағылышлы ике яңы абзац өҫтәлгән. Тимәк, башта «Ағиҙел» журналында, унан һуң «Күңел сәхифәләре»

китабында баҫылып сыҡҡан «Шағирлыҡ һәм яҙмыш» тигән мәҡәлә менән сағыштырғанда, «Асманға ашыу» йыйынтығын асып ебәреүсе «Шиғриәт һәм яҙмыш» тигән баш һүҙҙәге үҙгәрештәр, ҡыҫҡартыуҙар, өҫтәмәләр редактор теләге менән түгел, ә халыҡ шағирының үҙ ҡулдары менән башҡарылған?

Был сағыштырыуҙарҙың, «соҡсоноуҙарҙың», бәлки, кәрәге лә булмаҫ ине, әгәр эсте бер хилафлыҡ бошороп тормаһа. «Асманға ашыу» китабы өсөн Хәсән Назарға Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелгәс, «Ағиҙел» журналы, үҙенең күптән түгел индергән традицияһына тоғролоҡ һаҡлап, «Әйҙәй Салауат исеме!» рубрикаһы аҫтында шағирҙың портреты менән «Тарихтарҙан уҙыр антыбыҙ» тигән шиғри шәлкемен баҫтырҙы (2001 йыл, 11-се һан). Портрет аҫтында шундай юлдарҙы уҡыйбыҙ: «Әҙиптең “Асманға ашыу” исемле шиғырҙар китабы донъя күргәс, Башкортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми ошолай тигәйне: “Был китап – Хәсән Назарҙың яңы үҫеше, бында ла ысын шағирҙарға хас булған ихласлыҡ, үҙенсәлекле уй-фекер ағышы ярылып ята, үҙе булып ҡала, ул уҡыусынан бер нәмәһен дә йәшермәй, үҙенең төрлө яҡтарын, эске донъяһын, холҡоноң алтын түгел икәнен дә асыҡтан-асыҡ әйтеп, уҡыусыһы менән уй-кисерештәрен ҙур шиғриәт оҫталығы кимәлендә бүлешә”».

Бәй-бәй, был ни хәл? Манипуляция яһалған түгелме һуң? Халыҡ шағиры был һүҙҙәрҙе Хәсән Назарҙың «Заман заңы» исемле китабы айҡанлы әйткәйне лә баһа! («Ағиҙел» журналы, 1998 йыл, 8-се һан, 130-сы бит.) «Асманға ашыу» китабы донъя күргәндә Назар Нәжми гүр эйәһе ине бит инде. Кем ғәйебе менән шулай килеп сыҡты икән? Арҙаҡлы шағирыбыҙҙың яҡты иҫтәлеге һәм изге рухы менән һатыу итеүгә оҡшап китә түгелме һуң был?

Дөрөҫ, Назар Нәжмиҙең әле һүҙ барған мәҡәләһендә «Асманға ашыу» атамаһы ла телгә алына: «Ижади яҙмыштың төп асылдарынан береһе шунда бит: шағирҙың үҙенән һүҙе, һүҙенән үҙе айырылғыһыҙ. Был – оҫталыҡ ҡына түгел, был – физаҡәрлек. Быны Хәсән Назарҙың һуңғы йылдарҙағы фәлсәфи лирикаһы, «Яҙмышты яҙам», «Асманға ашыу» тигән һәм башҡа әҫәрҙәре раҫлай» («Ағиҙел» журналы, 1998 йыл, 8-се һан, 125-се бит). Ләкин мәҡәләнең авторы бында «Асманға ашыу» китабын түгел (сөнки ундай китап донъяла юҡ ине әле Өфөнөң кардиология диспансерында «Шағирлыҡ һәм яҙмыш» тигән мәҡәлә яҙылып ятҡанда), ошо исемдәге поэманы (ә ул

«Ағиҙел» журналының 1997 йылғы 10-сы һанында баҫылып сыҡҡайны) күҙ уңында тота ла баһа.

Был төпсөнөүҙәр, асыҡлауҙар шул тиклем дә мөһим микән ни тигәнерәк уйҙың да тыуып ҡуйыуы ихтимал. Мөһим шул! Тәү сиратта әҙәбиәт тарихы өсөн мөһим. Ә ул, әҙәбиәт тарихы, көн дә яҙыла – беҙ уға иғтибар ғына итмәйбеҙ. Унда, әҙәбиәт тарихында, яңылышлыҡтарға, буталсыҡтарға урындың мөмкин тиклем әҙерәк булыуы хәйерле. Әгәр бөтөнләй ҙә булмаһа – бигерәк тә яҡшы. Бөгөнгө менән генә хушланып түгел, иртәгәһе көндө лә ҡайғыртып йәшәү маҡсатҡа ярашлыраҡтыр. Юғиһә киләсәктә Назар Нәжми һәм Хәсән Назар ижадтарын иркенләберәк, айырым-айырым да, бер-береһе менән сағыштырып та фәнни нигеҙҙә өйрәнеүселәр әле һүҙ барған мәҡәләнең ҡайһы варианты ышаныслыраҡ икән, тип аптырап ҡалырҙар.

Назар Нәжмиҙең Хәсән Назар ижадына бәйле уйланыуҙарына кил-гәндә иһә, ул – юғары талаптарҙан сығып, эстетик зауыҡ менән яҙылған мәҡәлә. (Үрҙә әйтелгәнсә, кемдер ҡулы менән индерелгән буталсыҡтарҙы иҫкә алмағанда, әлбиттә.) Халыҡ шағиры үҙенән бик күпкә йәшерәк ҡәләмдәшенең тормош һәм ижад юлын энә күҙенән үткәргән тиһәк тә хата булмаҫ. Хәсән Назар үҙенең әҫәрҙәрендә бөйөк исемдәргә таянып эш итергә яратҡан һымаҡ, уға арналған мәҡәләлә лә әҙәбиәткә, әҙәби процесҡа, шул процесс эсендә ҡайнаған айырым шәхестәргә киң ҡараш ташланған. Унда һүҙ бер Хәсән тураһында ғына ла, бер башҡорт мөхите хаҡында ғына ла түгел. Мәҡәләнең авторы йыш ҡына донъя әҙәбиәте өлгөләренә, рус классикаһына, туғандаш татар шиғриәтенә, уның танылған вәкилдәренә мөрәжәғәт итә. Хәсән Назарҙы күккә күтәреп маҡтаған һүҙҙәр ҙә етерлек бында; тәнҡит күҙлегенән сығып, ситләтеп-ситләтеп кенә булһа ла, «семетеп» алған юлдарҙы ла шәйләмәй мөмкин түгел. «Аралаусы бәхет-неҙлектәрҙән…», «Ир ҡанаты», «Сәңгелдәк», «Бәке», «Атым, затым, заманым», «Ғинуар уртаһы», «Ҡар шығырлай», «Аҡҡа табыныу», «Мин китермен бер саҡ…», «Мин – мин инде» тигән шиғырҙар айырыуса йылы хистәр уятҡан Назар Нәжми күңелендә. «Сәңгелдәк»те хатта үҙе бер роман тип атай ул. «Аҡҡа табыныу»ҙы ла юғары баһалай һәм уны ғалимдарса иҫ киткес нескәлек менән тикшерә. Ә «Мин китермен бер саҡ...»ты тетрәткес шиғыр, ти. «Хакимлыҡта» монологында иһә А. Твардовский тауышын ишетә мәҡәләнең авторы. Әммә бына был һүҙҙәрҙе әйтеп, ул бер аҙ ашығыслыҡ күрһәткән тиергә була хәҙер: «Беҙҙең көндәрҙә ҡайһы берәүҙәрҙе тере сағында уҡ үҙ күҙе

алдында бәйгәмбәр тип атаусы шағирҙар бар. Бының иһә “көслө” алдында ярамһаҡланыу, ялағайланыу икәнлеге күҙгә бәрелеп тора, әммә ысын шағир бындай түбәнселектәрҙән азат. Хәсән Назар ана шундай ялағайлыҡты белмәгән шағир, шуның өсөн дә ул, бынамын тигән шағир була тороп та, төрлө-төрлө исемдәрҙе лә, төрлө лауреатлыҡтарҙы ла алмаясаҡ һәм уларҙың уға кәрәге лә юҡ».

Күреүебеҙсә, тормош ысынбарлығы бының киреһен раҫланы, һәм уға шатланырға ғына кәрәк. Шул да мәғлүм булһын: Салауат Юлаев премияһы лауреаты исемен яулағас, Х. Назар ижад ҡомарын һүрелдермәй. Әгәр «Асманға ашыу» китабы (әйткәндәй, был китапҡа яңынан да әйләнеп ҡайтыусылар табылыр әле, сөнки унда Назар Нәжми иғтибарын йәлеп иткәндәрҙән башҡа ла гәрәбәгә торорлоҡ әҫәрҙәр байтаҡ) һәм «Шиғриәт – ризалыҡ донъяға» тигән шәлкеме («Ағиҙел» журналы, 2000 йыл, 6-сы һан) менән Егерменсе быуатты ослап ҡуйһа, «Тарихтарҙан уҙыр антыбыҙ» тигән шәлкем менән («Ағиҙел» журналы, 2001 йыл, 11-се һан) ул Яңы быуатты асып ебәрҙе.

«Асманға ашыу» йыйынтығына бирелгән аннотацияла Хәсән Назар – «тормошсан, халыҡсан ижады менән башҡорт шиғриәтенең бөгөнгө юғарылығын тотоусыларҙың береһе», уның шиғырҙары «уйтойғолар тәрәнлеге, фәлсәфәүилек менән һуғарылған», шиғриәтенә «тәбиғи образлылыҡ, милли аһаң, сәсән теллелек хас», тиелгән. Ошо сифаттарҙы шағирҙың «Шиғриәт – ризалыҡ донъяға» һәм «Тарихтарҙан уҙыр антыбыҙ» шәлкемдәрендә лә төҫмөрләргә мөмкин. «Башҡортостанға өндәшеү», «Тормоштан бер ҡисса», «Ыуыҙ ҡоймағы», «Икмәк», «Ауыл», «Диңгеҙ һәм тау», «Аҡса», «Үҙгәлек» тигән шиғырҙарҙа ул айырыуса ныҡ һиҙелә.

«Тормоштан бер ҡисса», мәҫәлән, Н. Нәжми телгә алған «Сәңгелдәк»те хәтерләтеп ҡуя – йөкмәткеһе менән ул да романға тартым. Ҡарап тороуға, бында һүҙ башлыса авторҙың күңел һандығында бикләнеп ятҡан малай сағтағы бер шуҡлыҡ хаҡында ғына бара һымаҡ. Ысынлап та, ул йәштә кем генә колхоз баҡсаһына төшмәгән дә, кем генә үткән-һүткәндә күрше-күлән түтәленә күҙ һирпемәгән! Шиғырҙың тәүге юлдарында балалыҡ романтикаһы сатҡылары ла сағылып китә. Ҡыяр урлау – ат урлаумы ни! Баҡсаға төшөү – һунарға сығыумы ни! Күпме әҙерләнеү, күпме серләшеү был аҙымды яһар алдынан! Ләкин төптәнерәк уйлай башлаһаң, әҫәрҙең нигеҙендә малайлыҡ шуҡлығы ғына түгел, ә тормоштоң яҙылмаған әсе ҡанундары ятҡанлығына төшөнәһең.

Беренсенән, әйтәйек, бында һуғыштан һуңғы «иңрәүле һәм өмөтлө» йылдарға ишара яһала: «кәкре ҡыяр» өсөн баҡсаға төшөргә шуҡлыҡтан да бигерәк юҡлыҡ мәжбүр итә; икенсенән, кеше тәбиғәтенә тыумыштан уҡ һалынған йыртҡыслыҡ, башҡалар иҫәбенә нисек тә еңелерәк йәшәргә тырышыу сифаты фашлана: малайшалайҙарға баш булып йөрөүсе еткән егет уларҙың һәр ҡайһыһынан берәр ҡыяр талап итә; өсөнсөнән, бөтә кеше лә йыртҡыс, ҡомһоҙ йәндәргә буйһоноп бармай: бәләкәй генә булыуына ҡарамаҫтан, лирик герой арала бер үҙе «һаранлыҡ» күрһәтә һәм «яһаҡ» түләүҙән баш тарта; өҫтәүенә, еңел кәсеп менән шөғөл итеүсегә ауылда киң таралған ҡушаматын «хәтеренә төшөрөп», уны уғата ла үсектереп ебәрә һәм шуның арҡаһында, ҡыяры таланыуы ғына етмәгән, һыу эскеһеҙ итеп туҡмала ла; дүртенсенән, яуыз йән донъялыҡта барыбер ҙә игелек күрмәгән: ергә ерекмәгән, елғыуар булған, аҡылын эскән, ни ғаилә, ни бала, шуға ла уның «ҡәберендә илаһа тик – ятып ел илар»; бишенсенән, колхоз баҡсаһына төшкән көндө кисен һөйәктәрен саҡ йөкмәп ҡайтҡан теге баш бирмәҫ малай бөгөн ҡыярын да, еләк-емешен дә үҙ баҡсаһында үҫтерә. Тимәк, әҙәм балаһының тормош юлы төрлөсә һалынырға, яҙмышы төрлөсә ойошорға мөмкин һәм күп осраҡта ул кешенең үҙенән тора. Бына ни тиклем фәлсәфә төрөлгән бер шиғыр эсендә генә лә.

Х. Назарҙың «Ауыл» тигән шиғыры ла фәлсәфәүи күҙәтеүҙәргә бай. Беренсе бүлектә автор (әҫәр ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына биш киҫәктән тора, уларҙы үҙ аллы эскиздар тип тә атарға булалыр) ауылдың «йөрәкте һандуғастан былай» һайратҡан хозурлығына һоҡлана. Икенсе бүлектә ауыл – тел һәм күңел шишмәһе тип нарыҡлана, һәм ошо ике шишмәне заманыбыҙҙың ике йәбере – һалым һәм хәмер – ҡоротоп ҡуймағайы тип борсола шағир. Өсөнсө бүлектә бөтә кешелек донъяһының берҙән-бер йәшәү сығанағына – ергә дан йырлана һәм уның да ҡәҙере ауыл егәрендә икәнлегенә баҫым яһап әйтелә. Дүртенсе бүлектә ауыл – сәйәси именлек тотҡаһы, милләт наҡсыһы итеп тасуирлана һәм ошо йәһәттән дә уға зур өмөттәр бағлана:

Алда ниҙәр булғанда ла,
Ҡупмаҡ булһа хатта дауыл,
Ҡуптармайса тамырҙарҙы,
Мәңге йәшә, йәшә, ауыл!

Һуңғы, йомғаҡлау, бүлегендә ауылдың бәҫе артабан да күтәрелә: ул иман һаҡсыһына, рух шәменә тиңләнә. Иманға иһә шағирҙың үҙ ҡарашы, үҙ баһаламаһы: «Иман барҙа, ҡояш – ҡояш, әҙәм – әҙәм, иман – рух ул, ә түгелдер бары әҙәп», – тиелә Х. Назарҙың «Өс һүҙ» исемле шиғырында.

Жанры буйынса «Ауыл» шиғыры мәҙхиәгә тартым. Ләкин уның йөкмәткеһе ҡоро маҡтауға һәм дан йырлауға ғына ҡайтып ҡалмай. Шиғырҙың буйынан-буйына тиерлек яңғыраған мәҙхиә ауылдың бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында тәрән уйланыуҙар менән үрелеп бара. Әйтергә теләгән төп фекерен автор бындай юлдарҙа белдергән: ауыл менән – донъя ырыҫлы, шуға күрә уға – бөтәбеҙ ҙә бурыслы.

Ысынлап та, фәлсәфәүи күҙлектәнме, йәиһә ғәмәли ихтыяждан-мы сығып ҡарағанда, ауыл – донъяның тотҡаһы. Ҡалала икмәк үҫмәгәнлеге һәр кемгә лә билдәле. Өҫтәүенә, ауыл – аҙғынлыҡҡа, әхлаҡи тарҡалыуға, һәр төрлө боҙоҡлоҡтарға, заман фажиғәләренә ҡаршы үтә сыҙамлыҡ (ләкин был иммунитет унда ла бөтмәҫ-төкәнмәҫ түгел) күрһәтеүе менән дә айырылып тора. Тик беҙ, ҡызғанысҡа ҡаршы, ауылдың ошо өҫтөнлөктәренә – ундағы сәйәси һәм иҡтисади һауаның сағыштырмаса сафыраҡ булыуына иғтибар итеп кенә еткермәйбеҙ, шикелле.

Х. Назарҙың «Ыуыҙ ҡоймағы» һәм «Икмәк» тигән шиғырҙары ла ауыл тематикаһына ҡараған. Ләкин идея-художество структураһы йәһәтенән улар үрҙә һүҙ барған шиғырҙан күпкә айырыла. Был шиғырҙарҙың икеһе лә «Тормоштан бер ҡисса»ға яҡыныраҡ, уларҙың икеһендә лә шағирҙың күңел һандығында һаҡланған ауыл күренештәре тасуирланған. Дөрөҫ, икмәккә арналған әҫәрҙәр беҙҙә күптән бирле яҙыла килә. Ғәйнан Әмириҙең бынан байтаҡ йылдар элек радио тулҡындары аша ҡат-ҡат яңғыраған бер публицистик сығышы әле лә ҡолаҡ төбөнән китмәй. Һүҙ унда икмәк һәм ҡөрьән тураһында ине. Ә бына ыуыҙ һөтөнә бәйле әҫәрҙе быға тиклем ишетергә тура килмәгәйне һымаҡ. Х. Назар, бәлки, тәүгеләрҙән булып мөрәжәғәт иткәндер уға. Һәм һуғыштан һуңғы ауыл тормошонан (бәләкәс малайҙың әсәһе һәүкәшкә «тәмләп ашата һаламды, өй ҡыйығынан йолҡоп») йәнле бер картина тыуҙырыуға ирешкән. Исеменә – есеме тигәндәй, шиғырҙың теле лә бик матур: ябай һәм халыҡсан – асманға ашмаған, нәҡ ерҙәгесә яңғырай.

Быуаттар артылышында Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булған дүрт шағирҙың һуңғы йылдарҙағы ижадына

еңелсә генә ҡараш ташлағанда ла, күҙгә шул салына: тормошта ла, шиғриәттә лә улар бай тәжрибә туплағандар, егәрлеләр, тынғыһыҙҙар, эҙләнеүсәндәр, бер һүҙ менән генә әйткәндә – ысын ижадсылар. Ләкин лауреатлыҡты яулап алғас, эш бөттө тигән һүҙ түгел. Факиһа Туғызбаеваны ла, Ҡәҙим Аралбайҙы ла, Тимер Йосоповты ла, Хәсән Назарҙы ла алда ҙур һәм яуаплы бурыстар көтә. Шиғыр-поэмаларҙы байтаҡ яҙып, китаптарҙы ла байтаҡ сығарһалар ҙа, улар барыбер ҙә үҙҙәренең «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!», «Юҡтырһың да, алла!», «Үлтер, улым, фашисты!», «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа», «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә...» кеүек яңғыраған һәм авторҙарының кем икәнлеген әллә ҡайҙан уҡ белгертеп торған ҡанатлы һүҙҙәрен әйтмәгәндәр әле. Улар әйтелер бер саҡ, шуға өмөт итәйек һәм халыҡ батыры Салауаттың рух көсөн йөрәктәрендә йөрөткән шағирҙарыбыҙға ижадтарында артабан да уңыштар теләйек.

4

Бынан йөҙ йылғы менән сағыштырғанда, бөгөнгө башҡорт шиғриәте исемдәргә ифрат бай. Егерменсе быуатты ослап, егерме беренсеһенә аяҡ баҫҡанда бер «Ағиҙел» журналында ғына ла (беҙҙең бит хәҙер унан башҡа баҫмаларыбыҙ ҙа байтаҡ!) иллеләп шағир сығыш яһаны. Уларҙың ҡайһы берҙәре журналды уҡыусыларға яңы поэмаларын тәҡдим итте, бәғзеләре иһә шиғырҙар шәлкеме менән уртаҡлашты. Арала исемдәре икешәр-өсәр тапҡыр күренеп киткелә-гәндәре лә осраны.

Әлбиттә, әҫәре ташҡа баҫылып сыҡҡан һәр автор үҙе тураһында ниндәй ҙә булһа фекер ишетергә өмөтләнә һәм ул быға хаҡлы. Ләкин ике-өс йыл дауамында донъя күргән шиғырҙарҙың һәм поэмаларҙың бөтәһен бер юлы һәм бер мәҡәлә сиктәрендә ентекле тикшереүҙе күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын, хатта. Әммә быуаттар артылышындағы башҡорт шиғриәтенә өҫтән-мөҫтән генә күҙ һалғанда ла бер шатлыҡлы күренешкә тап булаһың, һәм бөгөн уның менән уртаҡлашмайса үтеп китеү гонаһ булыр ине. Ул күренеш – быуындар күсәгилешлеге. Хоҙайға шөкөр, тиәйемме, әҙәбиәттә тәүге аҙымдарын һуғышҡа тиклем үк һәм унан һуң да, илленсе һәм алтмышынсы, етмешенсе һәм һикһәненсе йылдарҙа яһағандар ҙа шиғриәт йөгөн бер мисәүгә егелеп тарталар. Ошо йәһәттән тәү сиратта Кәтибә Кинйәбулатоваға туҡталып китеүҙе урынлы һанайым.

Рауил Бикбаев «Иленең күңел ҡошо» тигән мәҡәләһендә Кәтибә Кинйәбулатованы «ныҡлы рухлы ил инәһе» тип атаны. Ысынлап та, тәүге әҫәрҙәре уҙған быуаттың утыҙынсы йылдары ахырында уҡ әле матбуғат биттәрендә күренгеләп ҡалған шағирә бөгөн дә әҙәбиәтебеҙҙең алғы сафында атлай, йәштәр менән бер ҡатарҙан ең һыҙғанып эшләй һәм үткер ҡәләме, моңло шиғриәте менән туған халҡына тоғро хеҙмәт итә. Уның «Моңдар һибеп ерҙе ҡурсала!», «Сәләм алып, сәләмләйем!», «Алдарымда – сабый шатлыҡтары» тигән шәлкемдәре, «Ынйыҡай-моңлоҡай» тигән шиғри легендаһы, 80 йәшлегенә арнап баҫтырылған шиғырҙары – быға асыҡ миҫал.

Бөтә ижадын байҡауға иҫәп тотмайынса, ошо шәлкемдәр тирәһендә генә һүҙ йөрөткәндә лә, К. Кинйәбулатова шиғриәтенең байтаҡ үҙенсәлектәрен төҫмөрләргә мөмкин, минеңсә. Шуларҙың күҙгә бәрелеп торғаны – ҡыҫҡалыҡ. Күрәһең, ҡыҫҡалыҡта – оҫталыҡ тигән киң билдәле әйтемде шағирә үҙенең кредоһы итеп һайлағандыр. Һанаулы ғына юлдарҙа ла ул ярайһы уҡ төплө, хәтерҙә уйылып ҡалырлыҡ фекер әйтеүгә ирешә.

Ҡыҫҡалыҡ – үҙмаҡсат түгел, әлбиттә. Әммә оҙон шиғырҙы талант күрһәткесе, маһирлыҡ, әҙәби ҡаҙаныш тип тә булмай торғандыр. Ә ундай шиғырҙар, үкенескә күрә, беҙҙә етерлек. Дилбегә буйы шиғыр – бер ҡалаҡ балды бер биҙрә ҡайнамаған һыуға һалып бутауға оҡшап китмәйме икән ул? Бының киреһен (йәғни, ҡыҫҡалыҡтың күңелгә йәтешерәк булыуын) иҫбатлау өсөн, К. Кинйәбулатованың бер нисә шиғырына туҡталып та китергә мөмкин.

«Нисә тапҡыр…» тигән шиғыр, мәҫәлән, строфаларға бүленмәгән ун ике юлдан тора, шиғырҙың йөкмәткеһе – лирик герой менән Әжәл араһында барған диалог. Унда артыҡ йәиһә килешһеҙ тойолған бер генә һүҙ ҙә тапмаҫһың. Автор хыялында тыуған ошо ҡыҫҡа ғына диалог ярҙамында ғәжәп тәрән һәм сағыу фекер әйтелгән. Шиғырҙа һүрәтләнгән күренеште йәнле итеп күҙ алдына баҫтырыу өсөн уны бында тулы килеш күсереү хәйерлерәк булыр:

Нисә тапҡыр Әжәл менән
Осраштым мин.
Кисә тағы көлөп тора яндарымда.
– Ниңә, – тинем, – йәндәремде
Алмайһың һин?
– Һин былай ҙа ғазраилдар араһында –

Тине Әжәл. Аптырағас:
– О, Тәңрем, – тим, – араласы
Был афәттән йәндәремде...
– Булмай, – ти ул. – Көҙрәтемдең көсө
етмәй.
Иблес, шайтан баҫҡан күптән
Илдәреңде!..

Әҫәр, күреүебеҙсә, бер ниндәй ҙә аңлатмаға мохтаж түгел – бөтәһе лә көн кеүек асыҡ бында: беҙ йәшәгән заманның асылы ҙур һаҡлыҡ менән оҫта һайлап алынған һәм ифрат урынлы ҡулланылған бер нисә һүҙ ярҙамында һынландырылған. Көләмәсерәк тел менән яҙылған һымаҡ тойолһа ла, шиғыр ярайһы уҡ уҫал яңғырай.

«Әжәл – әжәл инде...» лә «Нисә тапҡыр...»ҙан ҡайтыш түгел. Күләме яғынан да, фәһемлелеге йәһәтенән дә. Бына ул:

Алҡаһы ла, йөҙөгө лә алтын,
Аҫылташтар ғына ҡаштары.
Донъя уға гел йылмайып торҙо,
Эй ҡәҙерле булды баштары.

Беләҙектәр ялт-йолт ут балҡытты,
Алтын-көмөш ризыҡ һауыты.
Әжәл – әжәл инде: килде, алды,
Алтын булмағайы табуты...

Кем әйтә алыр икән бында тормош фәлсәфәһе юҡ тип? Дөрөҫ, шиғырҙарҙың икеһендә лә төп «төҙөлөш материалы» булып хеҙмәт иткән «әжәл» төшөнсәһе ҡайһы бер әүҙәрҙә шик-шөбһә, ҡәнәғәтһеҙлек билдәһе тыуҙырыуы ихтимал: йәнәһе, шағирә күңел төшөнкөлөгөнә бирелә, шунлыҡтан ул үлем темаһына мөрәжәғәт итә, ә был теманы сәнғәтсә асыу һәм кәүҙәләндереү өсөн, теләйһеңме-теләмәйһеңме, мотлаҡ ҡара буяуҙар менән эш итергә тура килә.

Эйе, К. Кинйәбулатованың әле беҙ тикшергән шәлкемдәрендә һағыш тойғолары менән һуғарылған шиғырҙар байтаҡ. «Тыуған йылғам», «Түргәйәк күл», «Уйҙар – ҡара урман», «Ҡәләм алһам...», «Уҙған ғүмер», «Һиңә тағы ҡайтып киләм мин», «Эй, ғүмеркәйҙәрҙең үтеүҙәре...», «Мин дә – бар йөрәгемдән...», «Көҙҙәр етте», «”Ah!” тинем

мин», «Таңдар ата», «Йәнем физа инде минең» тигәндәр, мәҫәлән, тап ана шундайҙарҙан. Ләкин был шиғырҙарҙың үлем темаһына һис кенә лә мөнәсәбәте юҡ. Уларҙа һүҙ башлыса шағирәнең тыуған-үҫкән яҡтарын, Арғаяшын, көмөш һыулы, йылтыр йөҙлө Мейәсен, ата-әсә төйәгендә ҡалған «сәскә-гөлдәр тулы болондар»ын, «аҡ ҡайынлы яҡты урмандар»ын, ғөмүмән, «йәшлек һуҡмаҡтарын» һағынып иҫкә алыуы хаҡында бара. Хистәргә бирелә белгән кеше өсөн был, һис шикһеҙ, тәбиғи хәл. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең заманда был тәбиғи тойғонан мәхрүм ҡалғандар ҙа етерлек бит. Аҡса артынан ҡыуып, тыуған төйәктәрен онотоу ғына түгел, тыуған илдәрен хатта ташлап китеүселәрҙең күбәйгәндән-күбәйә барыуы шулай уйларға мәжбүр итә. Ундайҙар өсөн (цивилизация хаҡында күпме генә тылҡымаһындар) хисләнеү, тойғоларға бирелеү – ят күренештер, минеңсә.

«Нисә тапҡыр...» менән «Әжәл – әжәл инде...»гә килгәндә иһә, был шиғырҙарҙағы «әжәл» һүҙе үлемдең үҙе түгел, ә поэтик бер сара ғына. Беренсе осраҡта ул илде баҫҡан иблестәрҙе, шайтандарҙы фашларға ярҙам итһә, икенсе осраҡта мещандарҙы иҫкәртә, фанилыҡта саманы онотоп ташлаһаҡ та, баҡыйлыҡта бөтәбеҙ ҙә бер тиңгә әйләнеүебеҙгә ишара яһала. Әйтергә кәрәк, К. Кинйәбулатованың «Бер көләйем әле», «Өләшкәндә матурлыҡты», «Яңы», «Бөйөкләк», «Кәмһетеп кенә күҙәтмә...», «Көттөм...» тигән шиғырҙары ла ошо юҫыҡтағыларҙан. Нисек инде бынау юлдарҙы уҡыусы иғтибарына тәҡдим итмәйсә түҙмәк кәрәк:

Кәмһетеп кенә күҙәтмә,
Өҫ-башыма ҡарап ҡына.
Алтын-көмөш таҡмайым шул,
Башымда бер тараҡ ҡына.

Шулай ҙа, тим, кейемдәрем
Тәндәремә килешле бит.
Май сүлмәген тышынан да
Белергә һин тейешле бит...

Кәтибә Кинйәбулатованың тормош юлы гел аллы-гөллө сәскәләр менән генә биҙәлеп тормаһа ла, ул яҙмышына үпкәләмәй, кешеләргә лә, донъяға ла асыу тотмай. «Өләшкәндә матурлыҡты» тигән шиғырҙан алынған түбәндәге юлдар шуға бер дәлил:

Башты ташҡа орғанда ла,
Донъя бирә барын ғына.
Бирмешенә риза түгел
Туя белмәҫ ҡарун ғына.

«Зая түгел ғүмер...» исемле шиғырҙа әлеге фекер уғата ла ҡеүәтләнә:

Зарланмайым, һыҡранмайым мәғәр:
Ҡыш өшөһәм, яҙын йылындым.
Зая түгел ғүмер – дуҫ ишетһә
Йөрәк ярып сыҡҡан йырымды.

Шағирәнең күңеле – нур һибеп торған ҡояш шикелле; ул күберәк сафлыҡ, паклыҡ, матурлыҡ тураһында йырлай, кешеләрҙе изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәй, бөтә булмышы менән ябайлыҡҡа тартыла. «Дуҫтар серен эсә-эсә йөрәктәрем һаралһа ла, ғәйбәттәрҙән ҡаралһа ла, күңелем аҡ, көлә һаман», – ти ул шиғырҙарының береһендә. «Йөрәккәйем минең – моң даръяһы...», – тип ярып һала икенсеһендә. «Аҡ күңелдәр миңә сәләм бирһә, бөйөктәрҙән бейек артылам», – тип ҡыуана өсөнсөһөндә, һ.б., һ.б. Йәшәйештең сәйерерәк яҡтары хаҡында уйланғанда ла, шағирә төшөнкөлөккә бирелмәй, өмөтө яҡты:

Күрелмәне түгел,
Күрелде бит
Был донъяның ағы, ҡараһы ла.
Бар теләгем – ғүмер юлҡайымдың
Шиғыр ғына булһын аҙағы ла.

Ошоларҙан сығып, К. Кинйәбулатованың шиғриәте – яҡтылыҡ өләшеүсе, йылылыҡ биреүсе, нур сәсеүсе, гүзәллеккә һәм ғәҙеллеккә әйҙәүсе шиғриәт тимәксемен. Был фекерҙе уның әҫәрҙәре раҫлап тора, тик уларҙы уҡығанда һәүәҫлек күрһәтергә генә кәрәк.

К. Кинйәбулатованың шиғриәте теленең йомшаҡлығы, ябайлығы менән дә үҙенә тарта. Ябайлыҡ иһә шағирәнең был өлкәлә һәр төрлө экспериментҡа артыҡ иҫе китмәүенән, һүҙ менән ифрат һаҡ ҡыланыуынан киләлер. Ҡайһы бер йәшерәк быуын ҡәләмдәштәренә оҡшап, сәсән телле булып күренергә тырышмай ул. Уның әҫәрҙәре

халыҡтың бөгөн һөйләшә торған теленә яҡыныраҡ тороуы менән отошло, минеңсә. Улар еңел уҡыла һәм еңел ятлана.

Ошо йәһәттән «Рәссам» тигән шиғыр иғтибарға лайыҡ. Ул атаҡлы башҡорт рәссамы Әхмәт Лотфуллинға арналған. Күләме буйынса ҙур түгел – егерме һигеҙ юлдан тора. Иҫ киткес матур шиғыр. Тәү ҡарамаҡҡа унда рәссамдың ижад процесы ғына һүрәтләнгән һымаҡ. Шиғырҙың һәр юлын, һәр һүҙен ентекләберәк күҙәтә башлаһаң, рәссамдың ижад процесы һүрәтләнгәндә шағирәнең үҙ маһирлығы ла асылғанлығын шәйләйһең. Әлеге осраҡта шағирәнең маһирлығы тәбиғәт күренештәрен матур һүҙҙәр ярҙамында оҫта һәм йәнле итеп һынландырыуында сағыла. Әйтерһең дә уның икенсе бер әҫәрендә яңғыраған «Тәбиғәттә бөтә нәмә ысын, тәбиғәттең булмай ялғаны…» тигән һүҙҙәре бында үҙенең тере кәүҙәләнешен тапҡан. Әйтерһең дә беҙҙең алда ижадтың ике төҫлө емеше: пейзаж лирикаһы һәм майлы буяуҙар менән киндергә төшөрөлгән пейзаж һүрәте. Шуға ла был шиғырҙы сәнғәттең ике төрө – һүҙ менән ҡылҡәләмдең бергә уҡмашҡан, ижад практикаһында һирәк осрай торған уңышлы өлгөһө тиер инем.

К. Кинйәбулатованың яңы шәлкемдәрен битләп ултырғанда тағы бер шиғыр иғтибарҙы йәлеп итте. «Назар ағай!..» тип атала ул. Халыҡ шағирының вафаты айҡанлы яҙылған. Формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә бик үҙенсәлекле. Ошо шиғырҙы уҡығанда нишләптер К. Кинйәбулатованың бынан утыҙ йылдар самаһы элек баҫылып сыҡҡан «Шиғри хистәр» («Совет Башҡортостаны», 1974 йыл, 7 май) исемле мәҡәләһе иҫкә килеп төштө. Ул да Назар Нәжмигә арналғайны. Гәзит биттәрендә «Ижад серҙәре» тигән рубрика аҫтында бирелгәйне. Мәҡәләнең йөкмәткеһен хәтеремдә яңыртыр өсөн, уны ҡабаттан уҡып сыҡтым. Зауыҡланып уҡыным, сөнки ул, бер яҡтан, юғары профессиональ кимәлдә яҙылған ғилми тикшеренеү һымаҡ тойолһа, икенсе яҡтан иһә шағир тураһында шағирә әйткән тәрән мәғәнәле нескә һүҙ кеүек ҡабул ителә. Шиғриәт тураһында, уның тәбиғәте, төп асылы, йәшерен серҙәре, илаһи сығанаҡтары тураһында бындай тәрән уйланыуҙар беҙҙә бик йыш осрамай. Шиғыр – күңел ҡошо. Ошондай һөҙөмтәгә килә мәҡәләнең авторы һәм ҡәләмдәше хаҡындағы һүҙен былай тамамлай: «Омар Хайям, Назар Нәжми һымаҡ шағирҙар тыумаһа, тормаһа, килеп китмәһә, тормош ҡанатһыҙ, йырһыҙ булыр ине».

Үҙенең оло юбилейын билдәләгән саҡта Кәтибә Кинйәбулатова «Килде...» тигән шиғырын яҙғайны. Стиле буйынса ул – ярым шаян,

ярым етди әҫәр. Тәүге ике строфала автор ҡартлыҡ тураһында һүҙ алып бара. Ҡартайғас, таяҡҡа ҡалыуың да бар. Һәм ул һис тә ғәжәп түгел. Халыҡ бит «ҡартлыҡ – түгел шатлыҡ» тип юҡҡа ғына әйтмәгән. Ләкин «Килде...»нең лирик героиняһы ҡартлыҡҡа буйһоноп, төшөнкөлөккә бирелеүселәрҙән түгел. Кескәй ҡыҙҙың ҡарт әбейҙән көлөп тороуына ла ул үпкә белдермәй, уға йола тип кенә ҡарай, көр күңелле, йор һүҙле булып ҡала. Шиғыр бындай юлдар менән тамамлана:

Тик, ҡыҙыҡай, шул әбейҙең
Йәшенә һин етһәң икән,
Әбей һымаҡ һигеҙ унды
Матур атлап үтһәң икән!..

Ошо шиғырҙы ла, Кәтибә апайҙың башҡа шиғырҙарын да, уларҙың елегенә төшөп етергә тырышып, ҡат-ҡат уҡыйым да, үҙ алдыма аптырап ҡуям: нишләп уларҙың авторы әлеге көнгә тиклем Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ була алманы икән? Юҡ, юҡ, оло йәшкә еткәне өсөн түгел (был премияны таратыусы ойошманың тәьминәт бүлеге түгел икәнлеген яҡшы аңлайым), емешле һәм оҙайлы ижады, сандыр иңдәрендә Салауат аманатын, саф йөрәгендә Салауат рухын йөрөткәне, тыуған халҡына алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт иткәне өсөн. Әҙәбиәтебеҙ йәмәғәтселегенә был турала уйланырға ваҡыт етмәне микән? Юғиһә, мәртәбәле исемдәрҙе кеше был донъянан икенсеһенә күскәс бирергә күнегеп барабыҙ түгелме? Бының ҡайһы берҙә үҙен аҡламағанын күрә тороп та.

Һуғышҡа тиклем үк яҙыша башлаған һәм әле лә әҙәбиәт майҙанында әүҙем эшләүсе шағирҙарҙың икенсеһе – Муса Ғәли. Ул – күркәм холоҡло, имен яҙмышлы әҙип. Элек, совет осоронда, уның ижады хаҡында күп яҙҙылар. Рус телендә лә, үҙебеҙсә лә. Ләкин бөгөн Муса Ғәлиҙең ижады уның тураһында элек баҫылып сыҡҡан мәҡәләләр ҡалыбына ғына һыйып бөтмәй, хәҙер ул ҙурыраҡ үлсәмде – шағирҙың әҫәрҙәренә киңерәк ҡараш ташлауҙы, уларҙы айырым бер тәртипкә һалып, эҙмә-эҙлекле тикшереүҙе талап итә. Бында, әлбиттә, ошондай ҙа ҙур һәм яуаплы бурысты хәл итеү күҙ уңында тотолмай, шағирҙың бары тик «Ҡапҡаңды ас, Быуат!» тигән яңы поэмаһына ғына бер аҙ туҡталып китергә иҫәп.

Муса Ғәли – юғары интеллектлы, фәлсәфәүи юҫыҡта фекерләүсе шағир. Ул байтаҡ поэма, бик күп поэтик китаптар авторы. Йөкмәткеһе

менән уның әҫәрҙәре Көнсығыш мөхитенә нигеҙләнһә (был – тәбиғи, әлбиттә), стилдәре, яҙыу манераһы, фекерләү ҡеүәһе йәһәтенән Көнбайыш традицияларына тартым шикелле. (Бәлки, миңә генә шулай тойолалыр.) Ошо үҙенсәлек «Ҡапҡаңды ас, Быуат!» поэмаһына ла хас, минеңсә.

«Ҡапҡаңды ас, Быуат!»тың жанрын автор поэма-монолог тип атаған. Күләме яғынан ул ҙур түгел – өс йөҙ юл самаһы. Композицияһы ла ябай ғына – киҫәктәргә лә, бүлектәргә лә айырымланмаған: ысын мәғәнәһендә бер тынала уҡыла торған тотош монолог. Монологты лирик герой һөйләй. Уны иғтибар менән тыңлаһаң, автор һәм лирик геройҙың тормош юлдары араһында күпмелер уртаҡлыҡ та һиҙелә. Шунан сығып, М. Ғәлиҙең яңы поэмаһы автобиографик һыҙаттар менән байыҡтырылған әҫәр тип тә әйтергә була. Ләкин ул ҡоро автобиография түгел.

Поэма лирик сигенешкә тартым юлдар менән башланып китә. Шунда уҡ монолог авторының характер үҙенсәлектәре лә асыла башлай. Тәүҙә ул донъяға тағы бер яҙ килеүенә ҡыуана, сөнки һәр яңы яҙ үҙе менән яңы моң – йәшәү моңо алып килә: «Тәнем еңел бөгөн, йәнем азат йәшәйештең барлыҡ юҡ-барынан». Ләкин лирик герой – юҡҡа-барға шатланып, хуш күңеллеләнеп ятыусыларҙан түгел. Ул ярайһы уҡ ғорур тәбиғәтле, иреклекте һәм иркенлекте өҫтөн ҡуя торған шәхес. Үҙен, яҙ еткәс өңдән сыҡҡан айыуға тиңләп, ҡояш йылылығына иреп барған шикелле итеп тойһа ла, уның йәне тыныс түгел: «Донъяла яҙ. Ҡабат мин моңаям, башым сатнай йәшәү серҙәренән», – ти ул.

Поэманың сюжеты үткәндәрҙе барлауға һәм киләсәк хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған. Үткәндәрҙе барлау Рәсәй тарихына еңелсә ҡараш ташлауҙан башлана һәм уның бар булмышы бына был юлдарға һыйҙырылған:

Миҙгелдәре илдең шундай икән –
Һуғыш менән һуғыш аралары.
Әле булһа, ана, һулҡ-һулҡ килә
Милләттәрҙең асыҡ яралары.

Монологта һүҙ – башлыса егерменсе быуат хаҡында, әлбиттә. Егерменсе быуат хаҡындағы һүҙҙе лә автор Рәсәйҙең үткәненә еңелсә ҡараш ташлағандағы шикеллерәк алып бара: тарихты тәфсилләп

һөйләү менән мауығмай – уның иң ҡыҙыу мәлдәрен генә хәтергә төшөрөп уҙа һәм уларҙың һәр ҡайһыһына үҙ баһаһын бирә.

Лирик герой өсөн ошондай мәлдәрҙең иң ҡәһәрлеһе, иң аяныслыһы – донья аҡтарға һәм ҡыҙылдарға бүленгән осорҙа атаһының бандит пуляһынан һәләк булған көндөр, моғайын, сөнки тап ошо фажиғәнән һуң ул тыумаҫ борон йәтим ҡала. Йәтим үҫкән малай ҡул араһына инә башлағас, әҫәрҙә ҡапҡа образы ла ҡалҡып сыға: атаһы урынына ҡалған ҡартатаһы ейәненә «Улым!» тип өндәшер һәм йыш ҡына уға: «Ҡапҡа шығырланы. Бар, сығып ас!» – тиер була. Тора-бара был фраза рефренға әйләнеп китә һәм поэманың идея-эстетик концепцияһын асыҡлауҙа мөһим роль уйнай: ҡапҡа шығырлаған һайын ил күләмендә лә, лирик геройҙың үҙ яҙмышында ла мотлаҡ көтөлмәгән берәй хәл була, шуға ишаралап, монологтың авторы былай ти:

Изгелектәр керҙе ул ҡапҡанан,
Шаҡып тормай ғына керҙе хәсрәт.
Өмөттәрҙе емереп керһә ҡайғы,
Утлы йәшен булып янды сәсрәп.

Лирик герой үҙен белә башлағандан бирле уның биографияһы илдә барған хәл-ваҡиғалар менән тығыҙ үрелеп үҫә тиергә мөмкин. Ҡапҡаны шаҡып тормай ғына ингән хәсрәттәрҙең береһе – «Утыҙ ете» булһа, өмөттәрҙе емереп килеп кергән һәм утлы йәшендәй сәсрәп янған ҡайғы – фашист илбаҫарҙарының беҙгә ябырылыуы. Өҫтә әйтелгәнсә, был ваҡиғалар һанап ҡына сығылмай – уларҙың һәр ҡайһыһына автор баһаламаһы ла бирелә. Илде иңләп килгән «Утыҙ ете»не хәтерләп, мәҫәлән, ул былай ти:

Бәндәләрҙе күпме шик-шом баҫты,
Уйлаһам да быны туңам, янам.
Яңы Варфоломей төндәрендә
Кем китмәне, кемдәр был донъянан?!

Бөйөк Ватан һуғышы һөҙөмтәләрен «яңы күҙлек»тән сығып ҡарарға маташыусыларға иһә шағир бындай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә:

Ниндәй көйҙө көйләр инегеҙ һеҙ,
Уҙған булһа фашист Уралғаса...

... Ерләнмәгән һалдат һөйәктәре
Һаман әле күҙ алдыма баҫа.
Ил иҫкерҙе. Тик беҙ иҫкермәнек,
Үҙгәрһә лә йәшәү айыштары.
Әле булһа һандыҡтарҙа ята
Утта көйгән һалдат ҡайыштары.

Һуғыштан һуңғы осорҙо тасуирлауға күскәс, «быуат» төшөнсәһе лә, ниһайәт, үҙ аллы әҙәби образ шәйенә инә: лирик герой уның менән диалог ҡора, Егерменсе быуаттың ҡанлы һәм шанлы яҡтарын һыҙыҡ өҫтөнә ала, уны «атомлы Быуат» тип атай һәм, риторик һорау ҡуйып, «нишләр Ер, ҡапһа кешелек үлем тоҙағына?!» тип иҫкәртә. Ләкин, уҙған быуатты шағир йәнле кеше ҡиәфәтендә һынландырһа ла, ул телһеҙ: лирик геройҙың бошоноулы һорауҙарына яуап бирмәй, битараф ҡала, шуға ла диалог бер яҡлыраҡ килеп сыға:

Егерменсе, ник бар миҙгелдәрең –
Һуғыш менән һуғыш аралары?
Ҡанлы тамға булып һеңде Ергә
Афған, Чечня, Балҡан яралары.
Кемдәр бөгөн уңда, кемдәр һулда?
Аҙаштырҙың, заман, бәндәләрҙе.
О, боларма, аҡыл, ярһыма, йән, -
Емермәйек рухи ҡәғбәләрҙе.

Поэмала сағылыш тапҡан мәсьәләләрҙең тағы береһе – быуындар бәйләнеше. Әйтергә кәрәк, был мәсьәлә бирелә бик үҙенсәлекле хәл ителгән: әгәр Егерменсе быуаттың тәүге яртыһында ихата ҡапҡаһын Япон яуында ҡатнашҡан ҡарттың ейәне асыр булһа, Быуатты ослағанда иһә шул уҡ ҡапҡаны Герман фашизмын ҡолатып ҡайткан лирик геройҙың ейәне аса башлай. Икенсе төрлө әйткәндә, байтаҡ йылдар үткәндән һуң теге шығырлаған ҡапҡаны асыу бурысы ейәндең ейәненә күсә. Шулай итеп, әҫәрҙә йәнә бер образ – ейән һыны үҫеп сыға. Уның Яңы Башҡортостан ҡанат йәйгән мәлдә тыуыуы ла символик әһәмиәткә эйә. Тимәк, уҙған быуат ни тиклем генә ҡырыҫ булмаһын, ни тиклем генә уттарына сәсәп, ышаныҫты емереп, тапап үтмәһен, ни тиклем генә күкрәктәргә тулған шатлыҡтарҙы һағыштар менән бергә бутамаһын, бәндәлә өмөт үлмәй, тормош дауам итә.

Яңғыраштары буйынса М. Ғәли поэмаһындағы ҡапҡа образы Н. Нәжмиҙең әҙәбиәт һөйөүселәргә киң билдәле «Ҡапҡалар»ын хәтергә төшөрөп ҡуя. Ләкин был оҡшашлыҡ – яңғыраштарҙа ғына. Йөкмәткеләре менән улар бер-береһенән шаҡтай айырыла. Шул уҡ ваҡытта бында уртаҡлыҡ та юҡ түгел: шағирҙарҙың икеһе лә ҡапҡа образын уның тура мәғәнәһендә лә, күсмә мәғәнәһендә лә ҡулланалар. Н. Нәжми поэмаһында ҡапҡа образы үҙенең күсмә мәғәнәһендә белем үрҙәрен яулауҙы, шиғриәт серҙәренә төшөнөүҙе, кеше күңеленә үтеп инеүҙе символлаштыра, М. Ғәли монологында ул Быуат ҡапҡаһын һынландыра. Ләкин ике осраҡта ла ҡапҡаларҙың күсмә мәғәнәһе авторҙарҙың ҡушыуы буйынса түгел, ә образлы фекерләү һөҙөмтәһе булараҡ тыуа һәм тулыһы менән ваҡиғаларҙың логик үҫешенә буйһона.

Муса Ғәли әҫәрендә, мәҫәлән, ябай ихата ҡапҡаһының көтмәгәндә-нитмәгәндә Быуат ҡапҡаһына әйләнеп китеүендә ейән образы ифрат актив роль уйнай: лирик геройҙың ошо шоморт ҡара күҙле ҡолонсағы, ҡартатаһының бойороғон үтәп, сираттағы тапҡыр ихата ҡапҡаһын асырға йүгереп сыға; сыға ла, ямғырҙан һуң мөғжизәле күктә алыҫ офоҡтарҙы тоташтырған йәйғорҙо күреп шаҡ ҡата; тәбиғәт хозурлығына ҡарап сикһеҙ һоҡланған малай, шатлыҡ менән уртаҡлашырға тип, ҡартатайын да урамға саҡырып сығара. Шунда шағир күңелендә символик образ тыуа: ҡапҡаға оҡшаған йәйғор – Быуат ҡапҡаһы! Әлегә бер нәмә лә аңламаған сабый, йәйғор-ҡапҡаға күрһәтеп: «Әйҙә, шул ҡапҡанан үтәйек, – ти, – урман арттарына». Ҡолонсағының хәрәкәт-ҡыланыштарын иғтибар менән күҙәткән лирик герой, уның һорауҙарына яуап ҡайтараһы урынға, эске кисерештәргә бирелә:

Бер йәйғорға, бер сабыйға ҡарап,
Өндәшәмен һиңә, Егерме бер.
Мең йыл аҡҡан ҡан-йәштәрен йыуып,
Татыулыҡҡа кеше килерме бер,
Килерме бер, Егерме бер?!
Мең йыллаған хыял, бәхет булып
Беҙҙең йорттарға ла инерме бер?
Азат йән ул – алтын ҡаурыйлы ҡош,
Азатлыҡ рухы ерҙә еңерме бер,
Егерме бер, Егерме бер?!

Милли йәбер бөткән хөр заманды
Әҙәм заты ерҙә күрерме бер?
Яңырыуҙар аҡыл емеше ул –
Аҡылдан яҙма, Егерме бер,
Аҡылдан яҙма, Егерме бер!

Хәйер, был – кисерештәр генә микән? Оран был! Сал быуатты оҙатып, яңыһын көткәндә яңғыраған оран! Шағирҙың тынғыһыҙ, һыҙланыулы йөрәгенән урғылып, бәреп сыҡҡан оран.

Муса Ғәлиҙең ошо яңы поэмаһын (ә ул «Ағиҙел» журналының 1999 йылғы 6-сы һанында баҫылған) уҡып ултырғанда йәнә Аҡмулланың теге ҡанатлы һүҙҙәре иҫкә килеп төшә. Ун туғыҙынсы быуат ахырында бөйөк аҡыл эйәһе бауырҙаштарын уҡырға өндәгән булһа, егерменсене инә беҙ юғары кимәлле шифриәт менән оҙаттыҡ түгелме һуң? Был да үткәндәрҙең бер ҡаҙанышы, күҙгә бәрелеп торған емешелер ул. Туҡтауһыҙ яуған һорауҙарға яуапты поэманың һуңғы юлдарында ла бер аҙ һиҙемләргә булалыр, сөнки унда, дөйөмләштереберәк фекер йөрөткәндә, ялбарыу өнө түгел, ә тарих арбаһында үҙ хоҡуғын һәм үҙ урынын белгән халыҡ ораны яңғырай шикелле:

Ҡапҡаңды ас, Быуат,
бына балаң,
Һаҡла уны, ҡаҡма, Егерме бер.
Ул һәр затҡа һөйөп баға белер,
Бәхет табыр унан түҙемле Ер.
Һине заман көтә, ҡолонсағым.
Урал батыр һымаҡ турайып баҫ,
Егерме бер! Ул һинеке булыр,
Ҡапҡаңды ас, Быуат, ҡапҡаңды ас!

Кәтибә Кинйәбулатова менән Муса Ғәлиҙән тыш, әҙәбиәтебеҙҙә, тәү сиратта – шифриәтебеҙҙә быуындар күсәгилешлеген Марат Кәримов, Абдулхаҡ Игебаев, Рауил Шаммас, Рафаэль Сафиндар миҫалында ла күргә мөмкин, Һаҡал йөрөтмәһәләр ҙә, аҡһаҡалдар ҡорона ингән шағирҙар улар – быуаттар артылышында үҙҙәренең етмешен билдәләнеләр. Шуныһы ҡыуаныслы, оло йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, ижад утында быҫҡып түгел, ә дөрләп яныуҙарын дауам итәләр. Файыҡ Мөхәмәтйәнов, Сөләймән Муллабаев, Фәйзи

Ғүмәр, Фәниә Чанышева, Әлфинур Вахитовалар ҙа уттарын һүндермәйҙәр – республикабыҙҙың төрлө баҫмаларыныда әленән-әле яңы әҫәрҙәр менән сығыш яһап торалар.

Һуңғы бер нисә йыл эсендә генә лә Марат Кәримов «Күңел байрамдарын һағынам», «Ожмах юлы, тамуҡ юлы…», «Усаҡ булып ҡабынам», «Беҙ – бер бөтөн», Рауил Шаммас «Бәүелә сыйырсыҡ ояһы», «Тәҙрә уйҙым, ишек ҡуйҙым…», Рафаэль Сафин «Тәҙрәләрҙә – киске ҡояш нуры», «Йәнем һаман аҡ бурандар эсендә...» тигән шиғри шәлкемдәрен бүләк иттеләр үҙ уҡыусыларына. Әлегә был шағирҙарҙың ижадына байҡау яһау йәиһә һанап ҡителгән шәлкемдәргә туҡталыу күҙ уңында тотолмай. Шуны әйтеү менән генә сикләнергә иҫәп: уларҙың дүртеһе лә әҙәбиәтебеҙҙә киң танылыу тапҡан, байтаҡ китаптар баҫтырып сығарған шағирҙар. Үҙҙәренән өлкәнерәк быуын әҙиптәренең тәжрибәһен өйрәнеп, халыҡ ижадының бай традицияларына таянып үҫһәләр ҙә, хәҙер һәр ҡайһыһының үҙ тауышы, үҙ стиле, үҙ манераһы. Марат Кәримовтың шиғриәте, әйтәйек, үҙенең үткер теле, тапҡырлығы менән айырылып торһа, Абдулхаҡ Игебаевтыҡы романтик һулышы, буяуҙар төрлөлөгө менән иғтибарҙы йәлеп итә; Рауил Шаммастың шиғриәте халыҡ педагогикаһына яҡыныраҡ торһа һәм уҡыусыны матурлыҡҡа, әхлаҡи сафлыҡҡа саҡырһа, Рафаэль Сафиндыҡы аҡыл менән хистең тәрән бер ҡушылмаһы һымағыраҡ ҡабул ителә.

Әлбиттә, был сифаттар – күҙгә бәрелеп торғандары ғына һәм улар һис кенә лә бында исемдәре аталған шағирҙарҙың тулы ижади портретын асыуға дәғүә итмәйҙәр. Әммә юл ыңғайында булһа ла, эсте тырнап торған бер ризаһыҙлыҡ менән уртаҡлашмай китеп булмаҫ, ахырыһы. Ошо дүрт шағирҙың Абдулхаҡ Игебаевтан башҡалары, етмешкә етеп тә, бер генә дәрәжә лә (халыҡ һөйөүенән башҡаһын!) яулай алмағандар. Ғәҙелһеҙлек түгел микән? Ижад кешеләренең хеҙмәтен баһалағанда, уларҙың таланттарына ҡарағанда үҙҙәрен нисегерәк тотоуҙарын алғы планға ҡуйыу сиренән һаман да ҡотола алмауыбыҙҙы күрһәтеп тормай микән?

Халыҡ телендә, мәҫәлән, Марат Кәримов – күптән инде халыҡ шағиры. Заманында Әнғәм Атнабаев күп йылдар буйы шулай йөрөгәйне. Хаҡлы баһа, ҡызғанысҡа ҡаршы, бик һуңлап килде уға – йүнләп игелеген дә күрә алманы, мәрхүм. Марат Кәримов хаҡындағы минең фекеремде шағирҙың юбилейы айҡанлы Рауил Бикбаев яҙып баҫтырған мәҡәлә лә ҡеүәтләгәндәй, юғиһә. «Йөрәктә ҡалған эҙҙәр»

тип атала ул («Ағиҙел» журналы, 2000 йыл, 1-се һан). Бәлки, халыҡ телендә йөрөгәнде рәсми телгә күсерергә лә ваҡыт еткәндер?

Әйткәндәй, шау-шыуһыҙ, артыҡ ҙур дәрәжәләргә өмөтләнмәйсә, тыныс ҡына ижад итеп ятҡан шағирҙар күп ул беҙҙә. (Тыныс тигәнем шартлы рәүештә генә инде: үҙен ысын шағир итеп тойған шағирҙың йөрәге ҡасан һәм нисек тыныс була алһын!) Шуңдайҙар иҫәбенә тәү сиратта Риф Мифтахов, Ғәлим Дәүләди, Муса Сиражи, Ирек Кинйәбулатов, Рәшит Шәкүр, Сафуан Әлибайҙарҙы индерер инем. Уларҙы Ҡадир Әлибай, Рауил Ниғмәтуллин, Риф Тойғон, Рәмил Йәнбәк, Мәүлит Ямалетдин, Аҫылғужа Баһуманов, Салауат Рәхмәтулла, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Радик Хәкимйән, Фәрит Суфияров, Рәдиф Тимершин, Марсель Сәлимов, Марис Нәзиров, Берйән Байым, Әхмәҙин Әфтәх, Камил Фазлый, Мөхәммәт Закиров, Рәйес Түләков, Әхмәр Үтәбайҙар ҡеүәтләп тора. Һуңғы ваҡытта Нур Хәбиров менән Мөхәммәт Илбаевтарҙың әүҙемләнеп китеүе лә – шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ ҡына.

Шул да мәғлүм булһын: әле һанап үтелгән шағирҙар араһында шағирлыҡты ара-тирә тәнҡитсе һөнәре менән аралаштырыусылар ҙа бар. Риф Мифтахов, Ғәлим Дәүләди, Муса Сиражи, Ирек Кинйәбулатов, Рәшит Шәкүр, Мәүлит Ямалетдин, Аҫылғужа Баһумановтар, мәҫәлән, ҡәләмдәштәре хаҡында матур-матур мәҡәләләр яҙып баҫтырғылайҙар. Был, һис шикһеҙ, хуплауға лайыҡ, сөнки шағирҙар күп, ә тәнҡитселәрҙе бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Шул сәбәпле ижадтары инде күптән бер системаға һалынып, ғилми күҙлектән сығып тикшереүҙе көткән шағирҙар хаҡында әле булһа йүнле-башлы тәнҡит һүҙе әйтелмәгән. Теләһә ниндәй ижадты ла ғилми нигеҙҙә өйрәнгәндә тәнҡит мәҡәләләре уйнаған ыңғай ролде кем генә инҡар итә алыр икән? Әҙәбиәт ғилеменең башы тәнҡиттә түгелме ни? Башланып киткән яңы быуатта ошо көнүҙәк мәсьәлә әҙәбиәт йәмәғәтселегенең иғтибар үҙәгендә торор тип фараз ҡылайыҡ.

Быуаттар артылышындағы башҡорт шиғриәтенең күҙгә бәрелеп торған тағы бер үҙенсәлеге – ҡатын-ҡыҙҙар ижадының иҫ киткес көслө бер ағымға әйләнеүе тиер инем. Шиғриәтте ир-аттарҙыҡына һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына бүлеп ҡарау тураһында һүҙ бармай, әлбиттә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың да ҡаты бәғерлеһе булған шикелле, йомшаҡ күңелле ир-аттар ҙа етерлектер ул ер йөҙөндә. Шиғриәттә лә шулай: ҡатын-ҡыҙҙар яҙған шиғыр ирҙәрсә ҡаты, ә ир-аттар ижад иткән әҫәр ҡатын-ҡыҙҙарса наҙлы яңғырарға мөмкин.

Әйтергә кәрәк, ҡатын-ҡыҙҙар затынан булған ижадсылар беҙҙең әҙәбиәттә уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарында уҡ күренә башлағайны. Ә бына быуаттың икенсе яртыһында, бигерәк тә уның һуңғы сирегендә әҙибәләрҙең һаны күҙгә күренеп ишәйҙе. Беләм (уҡып та, ишетеп тә), уларҙың ижадына беҙҙә ҡараш бер төрлө генә түгел. Мәгәр минең уйымса, шик-шөбһә тыуҙырырлыҡ, иләҫ-миләҫ уйҙар уятырлыҡ бер ниндәй сәбәп тә, нигеҙ ҙә юҡ. Был күренешкә шатланырға ғына һәм гүзәл заттарҙың үҙҙәренән дә гүзәлерәк әҫәрҙәр ижад итеүен генә теләргә кәрәк.

Егерменсе быуаттан егерме беренсеһенә атлап сыҡҡанда шағирәләребеҙҙең иң егәрлеһе, тәбиғәттән килгән булмыштарын тулы ҡеүәтендә файҙаланырға тырышҡаны Әнисә Таһирова, Тамара Ғәниева, Гөлфиә Юнысова, Гөлнур Яҡупова, Таңһылыу Ҡарамышеваларҙыр, тиһәм, һис тә дөрөҫлөккә хилафлыҡ килмәҫ. Был бишәүҙең ижадына диҡҡәтлерәк ҡараш ташлау түгел, хатта уларҙың һуңғы йылдарҙа донъя күргән китаптарын, төрлө гәзит-журналдарҙа баҫылып сыҡҡан шиғри шәлкемдәрен (Тамараның – поэмаларын да!) һанап үтер өсөн генә лә байтаҡ ваҡыт кәрәк булыр ине. Шуға күрә был бурысты ла киләсәк көндәргә ҡалдырып торайыҡ.

Зөбәржәт Йәнбирҙина, Миңлегөл Хисамова, Рәсимә Ураҡсина, Флүзә Мырҙабаева, Эльмира Сәсәнбаева, Зөһрә Ҡотлогилдина, Гүзәл Ситдиковаларҙың да тауышы көсәйгәндән-көсәйә бара. Нәжибә Әминева менән Гөлшат Әхмәтҡужиналарҙың матбуғат биттәрендә йышыраҡ күренә башлауы ла ҡыуаныслы хәл.

Шаҡтай оҙонға һуҙылған был уйланыуҙарҙың аҙағына еткәндә, шуны әйтке килә. Һирәк-мирәк булһа ла «Беҙҙә шиғыр яҙыусылар шул тиклем күбәйҙе, уларҙы хатта уҡып та өлгөрөп булмай» тигәнерәк һүҙҙәр ишетелеп ҡалғылай. Ғәжәп, бындай һүҙҙәрҙе ҡайһы саҡта шағирҙар үҙҙәре лә ысҡындырып ебәрә. Өлгөрмәйһең икән – уҡыма. Баҫылып сыҡҡан шиғырҙың береһен дә ҡалдырмай уҡып барыу мәжбүри түгел дә инде. Кем ҡыҙыҡһына, шул уҡый. Ваҡытын да таба. Уҡыған нәмәһенән мотлаҡ зауыҡ алырға, матурлыҡ өлгөләре табырға тырыша, йән аҙығы – фәһем һәм күңел тыныслығы эҙләй. Алданған сағы ла була, үкенескә күрә.

Шиғыр яҙыусылар күбәйгәс, уның сифаты түбәнәйер тип борсолоусылар ҙа юҡ түгел. Был да әллә ни ҡурҡыныс янамай шикелле. Ваҡыт үҙенекен итә ул барыбер ҙә: иләйһен – иләй, елпейһен – елпей. Пушкин заманында шағирҙар бик күп булған, юғиһә. Рус әҙәбиәте

фәнендә «Пушкин осоро шағирҙары» тигән ғилми төшөнсә лә бар хатта. Бөгөн иһә киң ҡатлам уҡыусылары Пушкинды ғына белә.

Ниһайәт, тағы бер нәмәне иҫтән сығармаҫҡа тейешбеҙ. Донъя әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихы һүҙ сәнғәтенең дә, башҡа төр сәнғәттәрҙең дә күперелеп үҫкән мәлен дә, шулай уҡ юҡҡа сығыу хәленә килеп еткән осрағын да хәтерләй. Миҫал эҙләп, алыҫ китәһе түгел: бөйөк рус халҡының бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Маяковскийы ла юҡ, Есенины ла, Исаковский менән Твардовскийы ла, Смеляков менән Ручьевтары ла юҡ. Кем белә, быуаттар артылышындағы башҡорт шиғриәте лә, бәлки, үҙенең сәскә атыу осорон кисерәлер. Һәр хәлдә, яңы тыуған быуаттың беренсе яртыһында шиғриәтебеҙ аҡһамаҫ, үҙ бурысын үтәүҙе дауам итә алыр төҫлө. Унан һуңғыһы инде ваҡыт ҡарамағында.

2002, август

ЕГӘРЛЕ ИЖАДСЫ ИНЕ

1963 йылда яҙылған «Тағы килде бер көҙ…» исемле бәләкәй генә шиғырын Назар Нәжми былай тип тамамлағайны:

Тағы килер көҙҙәр… Ә шуларҙың
Миңһеҙ килер береһе бер ваҡыт,
Ә шунан һуң инде һәр ваҡыт.

Тәү ҡарамаҡҡа йылдың бер миҙгеленә арналған, ябай ғына һүҙҙәрҙән торған ябай ғына юлдар. Ә уйлана башлаһаң, уларҙың һис тә ябай түгеллегенә төшөнәһең. Булмышыбыҙҙың мәңге хәрәкәттә икәнлегенә ишара яһала унда. Тәбиғәт балаһы булараҡ кеше лә мәңге хәрәкәттә. Уның да үҙ яҙы һәм үҙ көҙө, үҙ йәйе һәм үҙ ҡышы. Лирик герой белә: тәбиғәт – мәңгелек, ә кеше ғүмере – ваҡытлы. Ләкин ул быға уфтанмай ҙа, борсолмай ҙа, көйөнмәй ҙә: ошо хәҡиҡәт тураһында эске бер тыныслыҡ менән уҡыусының иҫенә генә төшөрөп ҡуя. Сөнки аңлай: тәбиғәт ҡануны – кире ҡаҡҡыһыҙ, унда бер ниндәй ҙә ташлама юҡ. Һәм ул шулай булып сыҡты ла: «Тағы килде бер көҙ…»ҙөң лирик геройын донъяға тыуҙырған шағир Назар Нәжми 1998 йылдың февралендә егеттәргә генә хас бер етеҙлек менән үҙенең 80 йәшен шаулатып-гөрләтеп үткәреп ебәрҙе лә, йыл ярымдан һуң, 1999 йылдың ҡояшлы сентябрендә, йәрәктәрҙе һыҡратып, меңәрләгән уҡыусыларын тауышһыҙ-тынһыҙ ғына илатып, теге донъяға китеп барҙы. Ерҙә ҡалғандарҙың мәшәҡәте шул тиклем күп, тормош-көнкүреш шул хәтлем болғауыр, ваҡыттың үҙғаны һиҙелмәй ҙә: әйтерһең дә, ул бер туҡтауһыҙ һәм бер мәғәнәһеҙ аға ла аға. Быйылғы көҙ Назар Нәжмиһеҙ килгәндәрҙең бишенсеһе булып киткән икән дә баһа Назар Нәжмиҙең ижад шишмәһе XX быуаттың утыҙынсы йылдары ахырында үҙенә юл яра башланы. Ләкин төрлө сәбәптәр (шул иҫәптән ауыр һуғыш һәм унан һуңғы тормош мәшәҡәттәре) арҡаһында ул тиҙ генә урғылып китә алманы. «Тамсылар» тип аталған тәүге китабы донъя күргәндә шағирҙың утыҙ икеһе тулып үҙғайны инде. Уның «Бөтәһе лә һуңлап килде миңә…» тигән шиғыры ла юҡтан ғына бар булмағандыр. Әммә, бөтәһе лә һуңлап килһә лә, Н. Нәжмиҙең ижад баҫыуы бик уңдырышлы булып сыҡты. Киләсәк

быуындарға мираҫ итеп ул утыҙлап поэма һәм сәхнә әҫәре, әллә нисә меңләп шиғыр юлы, байтаҡ әҙәби-тәнҡит һәм публицистик мәҡәләләр, автобиографик яҙмалар, башҡа телдәрҙән башҡортсаға ауҙарылған тәржемәләр ҡалдырып китте. Шағирҙың иң әүҙем, иң емешле ижад осоро етмешенсе-һикһәненсе йылдарға – бик күп көс һәм ваҡыт сарыфлауҙы талап иткән көндәлек хеҙмәттән бер аҙ арынып, профессиональ ижадҡа күскән дәүергә ҡарай, тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Китаптарының башҡорт, рус һәм татар телдәрендә күпләп баҫылып сығыуы ла тап ошо ун йыллыҡтарға тура килә.

Назар Нәжми бер ваҡытта ла тәнҡиткә һыуһаманы. Башта уның хаҡында ҡәләмдәштәре яҙҙы. Унан һуң профессиональ тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре һүҙ алды. Был, бәлки, егәрле ижадсының йөгө егәрле булыу менән дә аңлатылалыр. Һәр хәлдә, уның күпселек шиғри китаптары һәм сәхнә әҫәрҙәре көндәлек тәнҡит иғтибарынан ситтә ҡалманы. Хәҙер инде төрлө гәзиттәрҙә, журналдарҙа баҫылған был мәҡәләләрҙе барлап, өйрәнеп һәм ниндәйҙер бер тәртипкә һалып, Назар Нәжмиҙең тормош һәм ижад юлы тураһында тотошлай һүҙ йөрөтөргә лә ваҡыт еткәндер. Артабан иһә был бай һәм күп яҡлы ижадтың айырым яҡтары ла тикшерелә башлар ине. Күренекле ғалим К. Әхмәтйәновтың бынан нәҡ утыҙ йыл элек баҫылып сыҡҡан «Назар Нәжми – шиғыр оҫтаһы» китабында шул аспекттарҙың ҡайһы берҙәре төҫмөрләнеп кенә түгел, бәлки, уларҙы фән талаптары юғарылығынан яҡтыртыу юлына һуҡмаҡ та һалып ҡалдырылыуын иҫәпкә алһаҡ, ҡуйылған мәсьәләнең ни тиклем көнүҙәк бурысҡа әйләнә барыуына тағы бер тапҡыр ышанырбыҙ.

Назар Нәжми ғүмеренең һуңғы көндәренә хәтлем тынғыһыҙ ижадсы булып ҡалды. Оло йәшкә етеүенә ҡарамаҫтан, егерменсе быуатты тамамлаған йылдарҙа бер-бер артлы өс китап баҫтырып сығарҙы: «Яҡынайыу» (1994), «Аҡ шишмә» (1997) һәм «Күңел сәхифәләре» (1999). Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «үҙгәртеп ҡороу»ҙар заманына хас вайымһыҙлыҡ, битарафлыҡ сире был китаптарҙы ла урап уҙманы: тәнҡитселәр теленә эләкмәйенсә, тауышһыҙ-тынһыҙ ғына тарих төпкөлөнә табан юлландылар. Шуға күрә халыҡ шағирының беҙҙең арабыҙҙан китеүенә теүәл биш йыл тулғанда улар тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеп үтеү яҙыҡ булмаҫ тип уйлайым.

«Яҡынайыу» – шиғырҙар һәм поэмалар китабы. Унда авторҙың башлыса һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа ижад иткән шиғырҙары тупланған. Һирәк-мирәк элегерәк яҙылғандары ла осрап ҡуя.

Йыйынтыҡҡа шулай уҡ һуңғыларҙан иҫәпләнгән «Ике Зөләйха» менән «Тере ҡан» һәм етмешенсе йылдарға ҡараған «Урал» поэмалары ла индерелгән. Китаптың тағы бер үҙенсәлеге: ул баш һүҙ менән сығарылған. Уны Назар Нәжмиҙең ҡәләмдәше һәм замандашы, билдәле шағир Хәким Ғиләжев яҙған. «Үҙ иманы менән» тип атала ул. «"Яҡынайыу" исемле ҡулъяҙма тураһында уйланыуҙар» тигән өҫтәмә асыҡламаһы ла бар. Тағы бер үҙенсәлек тип баҫым яһап әйтеүемдең сәбәбе шунда: әҙәбиәтебеҙ тарихына Н. Нәжми ҡырҡтан ашыу китап авторы булып инһә лә, баш һүҙ менән сыҡҡандары һанаулы ғына. Төрлө йылдарҙа, төрлө китаптар өсөн уларҙы Мостай Кәрим, Сибғәт Хәким, Ким Әхмәтйәнов, Гәрәй Рәхим кеүек күренекле әҙиптәр яҙҙы. Һуңғы икеһе (Н. Нәжмиҙең 1988 йылда донъя күргән «Атай йорто» исемле йыйынтығын асып ебәреүсе «Был донъяла һин йәшәйһең икән… » тигәнен дә иҫәпкә алғанда) – Хәким Ғиләжевтыҡы.

Әйтергә кәрәк, Х. Ғиләжев яҙған баш һүҙҙәрҙең икеһе лә бик фәһемле. Н. Нәжмиҙең тормошо һәм ижады менән яҡынданыраҡ танышырға теләүселәр унда үҙҙәре өсөн ярайһы ғына ҡыҙыҡлы сығанаҡтар ҙа табыр, бәләкәй генә булһа ла асыштар ҙа яһар. Һәр хәлдә, был ике шағирҙың күпмелер кимәлдә рухташ та, үҙ-ара яҡшы мөғәмәләлә булыуҙары ла, бер-береһенең ижадын иғтибар менән күҙәтеп барыуҙары ла ярылып ята. Дөрөҫ, Хәким Ғиләжев ҡәләмдәшенең шиғриәтен энәһенән алып ебенә тиклем тикшереү менән шөғөлләнмәй һәм быны үҙенә бурыс та итеп ҡуймаған. Уның ике мәҡәләһе лә шағирҙың ижади портретына рәссам ҡулдары менән төшөрөлгән натюрмортҡа оҡшап тора: эре планда бирелгән һыҙаттар бар, ҡалғаны, йәнәһе, – тәнҡитселәр, әҙәбиәт белгестәре эше.

Хәким Ғиләжев менән Назар Нәжми ижад ҡаҙанында ғына түгел, көндәлек тормошта ла, бәлки, фекерҙәш һәм серҙәш булғандарҙыр. Сөнки баш һүҙҙәрҙең икеһендә лә Н. Нәжмиҙең кешелек сифаттарын, холоҡ-фиғелен, эске кисерештәрен сағылдырған юлдар байтаҡ осрай. «Был донъяла һин йәшәйһең икән…» тигәнендә, мәҫәлән, ошондай юлдарҙы уҡырға мөмкин: «Аҡһөйәктәрҙе поэзия бер ваҡытта ла үҙ итмәне. Ә Назар Нәжмигә, тормош тәжрибәһе һорап, күршегә керәһе юҡ. Сөнки уның ҡулдары барыһын да үҙе эшләй белә. Ул һалдат ҡына түгел, бәлки монтер ҙа, слесарь ҙа, шофер ҙа, балта оҫтаһы ла, маляр ҙа, утын ҡырҡып, утын ярыусы ла, умартасы ла, хәстәрлекле баҡсасы ла, тағы әллә кемдәр. Шуға ла, әгәр шағир ҡулы тейһә, хатта таштар ҙа,

тере затҡа әйләнеп, йырлап ебәрерҙәрҙер кеүек». Ә бынылһы «Үҙ имаһы менән»дән: «Хәбиб-Назар гармунда, аккордеонда, скрипкала уйнағаны өсөн генә моңло түгел (бынылһы – техника эше), ә донъябыҙ, кешеләребеҙ, тәбиғәтебеҙ, уларҙың яҙмыштары тураһында борсолоп, шул яҙмыштар өсөн үҙен яуаплы тойоп уйланғаны, йөрәге аша үткәреп, ихлас кисергәне өсөн моңло». Тағы килеп, ошо уҡ мәҡәләлә: «Моң… уның шиғырҙарына ғына түгел, ә бөтә ижады өсөн хас. Бына поэмаларын ғына алығыҙ. Мин композитор булһам, уның, әйтәйек, "Тере ҡан", "Ике Зөләйха", айырыуса "Иблес"» поэмалары нигеҙендә әллә ҡасан музыкаль трагедия, һәр хәлдә опера яҙған булыр инем. Үҙҙәренән үҙҙәре шуны һорап, композитор көтөп торалар бит».

Назар Нәжмиҙең туҡһанынсы йылдарға ҡараған икенсе китабы – «Аҡ шишмә» – шау шиғырҙарҙан ғына тора. Өҫтәүенә, улар – өр-яңылар. Шуға күрә лә шиғырҙарҙың күбеһенән заман еле бөркөп тороуы һис тә ғәжәп түгел. Быға дәлил итеп бер генә миҫал – М. Лермонтовҡа эйәреп 1995 йылда яҙылған «Кемгә ҡул бирергә?» исемле шиғырҙан өҙөк:

Суҡынды әҙәм аҡсаға,
Ҡороп бара рух.
Йән әрней, нишләп ҡалыр тип
Рухһыҙ тормош.
Кемгә ҡул бирергә хәҙер?..
Ҡул ҡулды йыуа.
Минең ҡулды йыуаһы юҡ,
Йыуынмаған донъя!

Әммә иғтибарҙы «Аҡ шишмә»не сылтыратып асып ебәргән баш һүҙгә нығыраҡ йүнәлтәйек. Элгәрегеләрҙән айырмалы булараҡ, был юлы уны шағир үҙе яҙған. «Әйтер һүҙем» тип атала ул. Ҙур түгел – ни бары ҡырҡ ете юлдан тора. Ул – шағирҙың үҙ китабына үҙ ҡулдары менән яҙған тәүге лә һәм һуңғы ла баш һүҙ булды. Бәлки, алдан уйланып, һиҙеп, аңлы рәүештә эшләнгәндер. Сөнки үтә лә үкенесле яңғырай шағирҙың «әйтер һүҙе», йөрәкте семетеп ала. Бигерәк тә бынау юлдар: «Яңы шиғырҙарҙан ғына торған әлеге китабым… минең ише һикһәнгә етеп килгән кешегә аҙаҡҡы шиғри йыйынтыҡ булыуы ла ихтимал…».

«Әйтер һүҙем»дә Назар Нәжми үҙенең бөтә тормош һәм ижад юлын күҙ уңынан үҙғарып, уҡыусы алдында хисап тотҡан, шикелле.

Хисап, әлбиттә, ҡоро һандарға һәм фактҡарға түгел, ә образлы һүрәтләүгә ҡоролған. Образлы һүрәтләү, үҙ сиратында, шағир ижадының асылына тағы ла нығыраҡ төшөнөргә, уның йөкмәткеһен уғата ла тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә. «Китабыма исемде, – ти ул,– "Аҡ шишмә" тип ҡуйҙым. Уны шулай атауым үҙе лә серле булып сыҡты, сөнки тәүге "Тамсылар" (1950) исемле китабымдағы тамсылар, тама-тама ташты тишеп, шишмә урғылтҡандар икән, шиғырҙарымды иһә – шул тамсыларға, ә шишмә ағышын үҙемдең ярты быуаттан ашыу ижадыма оҡшатып ҡуям. Тағы шуныһы ғәжәп: тәүге китабым ун өс йыл буйына яҙылһа, һуңғыһы өс йыл эсендә (шул уҡ күләмдә) ижад ителгән шиғырҙарҙан ғибәрәт».

Ләкин автор уҡыусы алдында «хисап тотоу» менән генә сикләнмәй – заман тыуҙырған уй-хистәре, үҙе кисергән шиктәре, шомло тойғолары менән дә уртаҡлаша. Ул йәшермәй: әгәр совет осоронда ижад иткән «Ҡарҙар яуа» исемле шиғырында «Донъяның тар ситлегендә осто бары күңелем ҡошо…» тип үрһәләнгән булһа, хәҙер иһә, ситлек емерелеп, быуа йырылғас, шағирға яңы хафалар һәм бошоноуҙар тынғылыҡ бирмәй. «Был йырылыуҙың да, – ти ул, – ыңғай һәм кире яҡтары күренә башланы: бер яҡтан, ул һүҙ иркенә килтерһә, икенсе яҡтан, һүҙҙең ҡәҙерен юғалтыуға, яҙылғандарының да һыуы күплегенә алып килде. Бына шул ағымда, ташыуҙа үҙ асылыңды һаҡлап ҡала алмау ҡурҡынысы ла бар». Шулай итеп, «аҙаҡҡы шиғри йыйынтыҡ»тың атамаһы ла, уның өсөн яҙылған баш һүҙ ҙә бик хикмәтле яңғырай. Автор үҙенең уҡыусыларына: «Һаҡ булығыҙ, кислород менән саманан тыш ныҡ байыҡтырылған һауа һулап, башығыҙ әйләнеп китмәһен!» – тип өндәшә, шикелле.

Ошондай уҡ уйланыуҙарҙы, хис-тойғоларҙы Назар Нәжмиҙең «Күңел сәхифәләре» исемле китабында ла осратырға мөмкин. Жанры буйынса «Күңел сәхифәләре» – әҙәби-тәнҡит һәм публицистик мәҡәләләр, ижади портреттар, иҫтәлектәр китабы. Бындайыраҡ китаптарҙы шағир әлегерәк тә сығарғаны булды: «Яҡтылыҡ юғарынан төшә» (1972), «Кем уйлаған» (1983). Ләкин «Күңел сәхифәләре» уларҙы ҡабатламай, ә дауам итә, сөнки унда авторҙың өр-яңы яҙмалары тупланған. Назар Нәжмиҙең әҙәби мираҫын өйрәнеү буйынса комиссия рәйесе Хәсән Назарҙың ҡайһылыр матбуғат битендә (тәғәйен генә хәтерләмәйем) яҙып сығыуына ҡарағанда, шағир, ғүмере өҙөлөргә яҡынлашҡанда, ошо китабын ҡулында тоторға өлгөргән һәм шуға сикһеҙ шатланған.

«Күңел сәхифәләре» уҙған быуаттың һикһәненсе йылдары уртаһында – туҡһанынсы йылдарҙың башында илебеҙ күләмендә булып алған сәйәси ваҡиғаларға ҡараш белдереү рәүешендә яҙылған үҙенсәлекле мәҡәләләр менән асыла. Улар тағы Н. Нәжмигә хас хикмәтле («Моңһоу шатлыҡтар») баш аҫтында бирелгән. Әлбиттә, авторҙың ҡайһы бер баһаламалары менән килешмәҫкә лә мөмкин. Ләкин был мәҡәләләр ихласлығы, унда күтәрелгән мәсьәләләрҙең киҫкенлеге һәм көн үҙәгендә тороуы, фекерләү ҡеүәһенең логик яҡтан эҙмә-эҙлелеге, фактҡарҙың кире ҡаҡҡыһыҙлығы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Жанрҙары буйынса улар төрлө: күбеһе – берәй сәйәсмәнгә йәиһә ғалимға адресланған асыҡ хат.

Шағирҙың илдә барған хәлдәргә төрлө мөнәсәбәттә булыуын мәғәнәләре яғынан береһе икенсеһен инҡар иткән һүҙҙәрҙең (моңһоу һәм шатлыҡтар) йәнәш ҡуйылыуы ла күрһәтеп тора. Хат рәүешендә яҙылған мәҡәләләрҙең авторы йыш ҡына «үҙгәртеп ҡороу проработары»ның күҙгә бәрелеп торған ҡаршылыҡтарын, йәғни бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләү ғәҙәттәрен ярып һала. Өҫтәүенә, шағир үҙенең оппоненттары менән бәхәсләшкәндә бушҡа аҡыл һатмай, ә киң күләм мәғлүмәт сараларына таянып эш итә, уларҙың хатта аныҡ сығанаҡтарын да күрһәтә.

Хат-мәҡәләләрҙең бөтәһендә лә тиерлек Н. Нәжми даими рәүештә үҙенең сәйәсмән түгел, ә шиғырсы икәнлегенә, шуға күрә тирә-йүндә булып ятҡан хәлдәрҙе, аҡыл менән ҡабул итеүгә ҡарағанда, күберәк йөрәге аша үткәргәнлегенә баҫым яһап әйтә. Ләкин мәҡәләләрҙе алдыңа маҡсат ҡуйып, тикләберәк уҡыһаң, уларҙың авторы – киң эрудициялы, халыҡҡа юғарынан көсләп тиерлек тағылған үҙгәртеп ҡороуҙарға үҙ ҡарашы булған, был үҙгәртеп ҡороуҙарҙы иғтибар менән күҙәтеп барған һәм уларҙың эске мәғәнәһен һиҙгер тойомлаған кеше икәнлегенә ышанаһың.

Әгәр «Моңһоу шатлыҡтар»ҙа Н. Нәжми үҙен донъяға, ундағы хәл-ваҡиғаларға ҡарашын көслө дәрт һәм ҙур әүәҫлек менән яҡлаусы публицист итеп күрһәтһә, «Ижади эҙҙәр» һәм «Күршеләр йортонда» тип аталған артабанғы ике бүлектә иһә ул талапсан тәнҡитсе һәм туған шиғриәтенең яҙмышы хаҡында уйланған хәстәрле уҡытыусы булып күҙ алдына баҫа. Был бүлектәрҙә авторҙың иғтибар үҙәгендә – егерменән ашыу башҡорт һәм татар шағирҙарының исеме. Ғ. Туҡай, Ғ. Бәширов, Х. Туфан, С. Хәким, Р. Ниғмәти, Т. Арыҫланға бағышланған бәләкәй очерктар айырым урын алып тора бында. Һанап

үтелгән шәхестәрҙең күбеһе менән Н. Нәжми аралашып йәшәгән, шуға ла улар тураһындағы очерктар ниндәйҙер бер эске йылылыҡ, өлкән ҡәләмдәштәренең тормош һәм ижад тәжрибәһенә киң күңеллелек, ихтирамлы ҡараш менән һуғарылған. Рәшит Ниғмәтиҙе бик тиҙ онота башланыҡ, тип бошона шағир. Үҙ ваҡытында уның замандаштары был мөһабәт кеше тураһында иҫ киткес матур хәтирәләр яҙып ҡалдыра алырҙар ине, тигән үкенесен дә йәшермәй ул.

Ошо йәһәттән башҡалар башына төшкән бәлә-ҡазаларға, ҡайғы-хәсрәттәргә битарафлыҡ күрһәтеүселәр өсөн «Шағир күңеле» тигән очерк бик ғибрәтле. Ул очеркта Хоҙай Тәғәлә биргән таланты аҙағына тиклем асылып бөтмәй ҡалған Әбүстең (Сабит Суфияновтың) фажиғәле яҙмышы һүрәтләнә. Бында автор намыҫына ҡағылышлы бер фактты һыҙыҡ өҫтөнә алыу урынлы булыр: ваҡытында Әбүскә ярҙам ҡулы һуҙып, уның хәлен еңеләйтеүҙә туранан-тура ҡатнашмағаны өсөн Н. Нәжми күпмелер кимәлдә үҙен дә ғәйепле тоя һәм шуға йәне әрнеүен белдерә, үлгәс түгел, ә тере саҡта бер-береңә иғтибарлыраҡ булыу кәрәклегенә ишара яһай.

Назар Нәжми үҙе артынан килеүсе йәиһә уның менән бергә атлаусы шағирҙарҙың ижадын иғтибар менән күҙәтеп барҙы, уларҙың һәр поэтик асышына балаларса ҡыуанды, ә сейле-бешле шиғырҙарға тап булһа – борсолдо, кәйефе ҡырылды. Әнғәм Атнабаев менән Марат Кәримовтарға арналған очерктары иғтибарға лайыҡ. Үҙенән байтаҡҡа йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, Н. Нәжми был ике шағирҙың таланты алдында баш эйеүҙе һис тә кәмһенеү, түбәнһенеү тип һанаманы. Очерктарҙың икеһендә лә ул ҡәләмдәштәренең ижади оҫталығын бик нескә тотоп алған. Автор раҫлауынса, Ә. Атнабаев – һирәк осрай торған күренеш, сөнки ул бер үк ваҡытта көслө шағир һәм көслө драматург та: Ә. Атнабаев пьесаларының театрҙарыбыҙ сәхнәһенә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырына ла өмөтөн өҙмәй Н. Нәжми. Марат Кәримовты иһә ул ысын мәғәнәһендә халыҡсан шағир тип иҫәпләй, уның талант көсөн тәү сиратта юморҙа һәм сатирала күрә. Был шағирҙарҙың шәхсән уңыштарына ысын күңелдән шатланып, бер үк ваҡытта уларҙың ижады әҙәбиәт ғилемендә әле булһа ныҡлап өйрәнелмәүенә үкенес белдерә автор.

Назар Нәжми – шиғыр оҫтаһы ғына түгел, уны оҫта итеп тикшереүсе лә ине. Был йәһәттән ул хөрмәт ҡаҙанған тәнҡитселәрҙән һәм әҙәбиәт белгестәренән һис ҡайтыш булманы. Ҡайһы саҡта бөтә яҡлап та (формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә) камил тип

табылған бер генә шиғри юл да уның өсөн әллә күпме уй-хистәр, ассоциатив фекерҙәр сығанағы булды. Остаздың Ҡ. Аралбай менән М. Ямалетдин шиғриәте тураһындағы уйланыуҙары – быға асыҡ дәлил. Ҡ. Аралбайҙың «Ғүмер – һандуғас һайраған мәл генә…» тигән юлын ул шундай итеп балҡытып ебәргән, уның авторы беҙҙең алға бөтөнләй яңыса, көтөлмәгәнсә – башҡорт әҙәбиәтендә шәректе бөйөк классиктары Хайәм, Фирҙәуси, Низами, Навои, Хафиз традицияларын дауам иттереүсе булып баҫа.

«Күңел сәхифәләре»нең һуңғы дүртенсе, бүлеге «Иҫтәлектәр» тип атала. Жанр билдәләнештәре буйынса улар, әҙәби портреттарға ҡарағанда, мемуар характерындағы бәләкәй очерктарҙы хәтерләтә. Был очерктарҙа авторҙы бөтәһенән элек ижад мәсьәләләре түгел, ә үҙенә яҡшы таныш әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре тормошонан алынған теге йәки был хәлдәр һәм факттар ҡыҙыҡһындыра, гәрсә ул факттарҙы һәм хәлдәрҙе барыбер ҙә йәнле ижад процесынан тыш күҙ алдына килтереп булмаһа ла. Беҙҙең алға Ҡадир Даян, Сәләх Кулибай, Ғәйнан Әмири, Илья Эренбург, Ғәлимов Сәләм, Сәғит Агиш, Сәйфи Ҡудаш, Арыҫлан Мөбәрәков, Ғилемдар Рамазанов, Динис Исламов, Нәжибәк Хафизов, Шәриф Бикҡол ише бер төркөм әҙәбиәтселәр һәм артистарҙың галереяһы килеп баҫа. Шуныһы мөһим: Назар Нәжми уларҙың һәр ҡайһыһынан тик уға ғына хас сифат, характер үҙенсәлеге эҙләй һәм таба.

Назар Нәжмиҙең егәрле ижадсы булғанлығын иҫбат итергә тырышып яҙылған был мәҡәләне тамамлар алдынан, уның матбуғат биттәрендә донъя күргән иң һуңғы шиғырҙарына ла бер аҙ туҡталып китеү кәрәктер тим. Вафатына һанаулы ғына айҙар ҡалып барғанда шағир «Ағиҙел» журналында «Ғүмер оҙонайған һайын…» тигән шиғырҙар шәлкемен баҫтырып сығарҙы. Был шиғырҙарында ла автор үҙенең күнегелгән стиленә, поэтик алымдарына хыянат итмәгән: шул уҡ ыҡсымлыҡ, шул уҡ тапҡырлыҡ, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайыу; әйтергә теләгән фекерен уҡыусы аңына тосораҡ итеп еткереү өсөн һүҙҙәрҙе бер туҡтауһыҙ уйнатыу; тормошта йыш ҡына осраһа ла, бөтә кешенең дә күҙенә салынып тормаған хәл-ваҡиғаларҙан берәй хикмәт килтереп сығарыу маһирлығы һ.б., һ.б. Шәлкемгә ингән «Француздар Өфөлә», «Һүндерелгән дан», «Ике төрлө ҡорал», «Ике телле», «Заман бүлмәһенә кергәндә», «Яуап», «Беҙ бишәү инек бер өйҙән», «Ҡәйнәм һүҙҙәренә ике яуап», «Тыуған көнөмдә» тигән шиғырҙар идея-тематик үҙенсәлектәре йәһәтенән айырыуса заманса яңғырай.

«Француздар Өфөлә» шиғырына, мәҫәлән, телефон аша бирелгән, ябай күҙлектән сығып ҡарағанда һис нәмәгә лә дәғүә итмәҫлек «Ваҡытым юҡ. Барыбыҙ ҙа француздар менән мәшғүл» тигән яуап ойотҡо һалған. Ошо уҡ яуап әҫәргә эпиграф итеп тә алынған. Күләме буйынса бәләкәй генә шиғыр үҙ эсенә иҫ китмәле бай йөкмәткене һыйҙырған. Ни эшләп әле йәһәннәм тишегендә йәшәгән француздар килеп сыҡҡан беҙҙең яҡтарға һәм тәү тапҡыр үтеп ингән «ил ҡапҡаһы аша баш йорттоң?» Ҡасан хасил булған ер йөҙөндә башҡорт һәм француз тигән ике зат? Салауат Наполеондан элегерәк балҡыған, башҡорттоң Парижда булыуына ла ике быуат тулып килә, ә бына француздарҙың башҡорт иле барлығы хаҡында быға тиклем ишеткәндәре булғанмы икән? Тора-бара бөтәһе лә асыҡлана: Парижды хушбуй еҫтәре данлаһа, Өфөнө данлай бензин һәм газ еҫе. Тик, ти шағир, «еҫтәр ҡыҫырыҡлай хистәрҙе», сөнки «ғәҙәттә бит алыҫтарҙан… еҫте үткер һиҙә бүреләр».

Н. Нәжмиҙең байтаҡ шиғырҙарында һәм поэмаларында уның эстетик ҡараштары ярылып ята. Үҙенең ошо фиғеленә ул һуңғы шәлкемендә лә тоғро ҡалған. Был йәһәттән бигерәк тә «Ике төрлө ҡорал» һәм «Ҡәйнәм һүҙҙәренә ике яуап» тигән шиғырҙар айырылып тора. Тәүгеһендә автор, шағир ижадын Калашников автоматы менән сағыштырыу юлы аша, «Миндә лә бар үҙем ҡойған ҡорал, минең ҡорал – шиғыр, шиғри һүҙ» тип ғорурланһа, икенсеһендә «Ижад бит ул – бала табыу кеүек, бала табылмай бит сәхнәлә» тип нарыҡлай.

Өҫтә, «Күңел сәхифәләре» исемле китап тураһында һүҙ барғанда, Назар Нәжми һуңғы йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы иғтибар менән күҙәтеп барҙы тип әйткәйнек инде. Күңеленә ятмағандарына киҫкен рәүештә ризаһыҙлығын белдереүҙән дә тартынып торманы, матбуғат биттәрендә бәхәсләшеп тә алғыланы ул. Уның ошо халәте әле һүҙ барған шәлкемдә лә үҙен һиҙҙереп ҡуя. «Һүндерелгән дан»да, мәҫәлән, ул Чечня һуғышына мөнәсәбәтен белдерһә, Пушкин һүҙҙәренән сығып, уларға яуап һымағыраҡ яҙылған «Ике телле»лә иһә, ике теллелекте ике йөҙлөлөккә тиңләп, ике телде белгән, ике телдә һөйләшкән өсөн генә кешегә «ике йөҙлө» тигән ярлыҡ йәбештереүгә ҡәтғи ҡаршы сыға.

Әммә, илде үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, шағирҙы ҡаршылыҡлы уй-хистәр ҙә урап уҙманы, шикелле. «Йортта хужа – атай булған кеүек…» шиғырында, мәҫәлән, «коммунизм төҙөгән» (был һүҙҙәрҙе ҡуш тырнаҡтар эсенә автор алған. – *Ә.Х.*) ваҡыттарҙы иҫенә төшөрөп, «беҙ үҙебеҙ көн-төн хеҙмәт иттек, ялған тәғлимәткә суҡынып» ти ул.

Ләкин тәғлимәттәрҙең ялғанмы, ысынмы икәнлегенә ныҡлап төшөнөү өсөн бик ҙур һынау, бик күп ваҡыт арауығы үтергә кәрәктер ул. Беҙ табынған һәм «бүреләр» ҡамауында булһа ла яйлап тормошҡа ашыра башлаған тәғлимәткә килгәндә иһә, шуны әйтке килә: уның әлегә уңышһыҙлыҡҡа осрауында төп сәбәпсе, бәлки, тәғлимәт үҙе түгел, ә әҙер тәғлимәтте ваҡыт талаптарынан сығып, артабан ижади үҫтерергә һәм уны кеше мәнфәғәтен үтәү өсөн файҙаланырға һәләтһеҙ талмудсылар булғандыр? Улайһа ниңә әле «Француздар Өфөлә» әҫәрендә шағир алыҫтарҙан еҫте һиҙеүсе бүреләргә нәфрәтен белдерә? Ул бүреләр, әлеге шул ҡайһы берәүҙәрҙең бөйөрөнә таш булып ултырған тәғлимәттән баш тартҡас, айырыуса йәнләнеп, ишәйеп китте түгелме ни?

Әгәр шағир күптән түгел булып үткән һайлауҙарға тиклем йәшәп, уларға әҙерләнгәндә түгелгән бысраҡты үҙ күҙҙәре менән күрһә, ниндәйерәк хистәр кисерер ине икән? Ни әйтһәң дә, заманында күккә күтәреп маҡталған, ә хәҙер шул уҡ маҡтаусылар тарафынан аяҡ аҫтына һалып тапалған (ошонан да ғәйриерәк фарисейлыҡтың булыуы мөмкинме икән?) был тәғлимәт – гуманлы тәғлимәт. Әгәр кешелек донъяһы уҙған быуат башындағы шикелле көслөк менән түгел, ә үҙ аңы һәм үҙ ирке менән ошо тәғлимәт юғарылығына күтәрелә алмаһа, әкренләп уның планета күләмендәге ҙур фажиғәгә тарыуы ихтимал тип уйлайым мин.

(Фарисей һүҙенең бында Назар Нәжми адресына әйтелмәгәнлеге аңлашыла, әлбиттә. Ул бит сәйәсмән түгел, ә шағир. Шағир ҙа сәйәси мәсьәләләрҙән алыҫ торорға тейеш түгел түгеллеген. Ни өсөн тигәндә, шағир ҙа, сәйәсмән дә халыҡҡа хеҙмәт итергә, уның мәнфәғәтен яҡларға тейеш. Ләкин шағир барыбер ҙә шағир булып ҡала, сөнки ул – образдар менән эш итеүсе сәнғәт әһеле, матурлыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәүсе. Өндәүсе генә түгел, тәү сиратта ул үҙе саф, ғәҙел булырға тейеш. Шул яғы менән ул сәйәсмәндән айырылалыр ҙа, бәлки.)

Назар Нәжмиһеҙ үткән биш йыл дауамында уның рухын һаҡлау һәм исемен мәңгеләштереү буйынса республикала, бигерәк тә Дүртөйлө тарафтарында байтаҡ эштәр башҡарылды. Шағир тураһында иҫтәлектәр баҫылғылай, ижадын өйрәнеүгә бағышланған мәҡәләләр сығып тора. Тере Нәжми беҙҙән алыҫлашҡан һайын, уның шәхесе олпатлана, әҙәбиәтебеҙ тарихында биләйәсәк урыны уғата ла асыҡлана төшә һымаҡ. Шағир тураһында иҫтәлектәр китабы сығарырға ла ваҡыттыр.

2004

БЫУЫНДАР КҮСӘГИЛЕШЛЕГЕНӘ ТОҒРОЛОҠ

Факиһа Туғыҙбаева – яңы быуатты уңышлы башлап ебәргән шағирәләребеҙҙең береһе. Егерменсе быуатты ул «Минең ҡошом Һомай» тигән йыйынтығы менән ослап ҡуйҙы ла, яңы дәрт, яңы көс менән Егерме беренсеһенә аяҡ баҫты: шағирәнең һуңғы йылдарҙа бер-бер артлы донъя күргән күләмле ике әҫәре шул турала һөйләй. Уларҙың береһе «Күкрәк һөтө» тигән поэма булһа («Ағиҙел» журналы, 2003 йыл, 5-се һан), икенсеһе – «Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!» исемле һағышнамә («Ағиҙел» журналы, 2004 йыл, 6-сы һан). Өҫтәүенә, уның яңы шиғырҙары ла күренгеләп тора.

Ф. Туғыҙбаеваның быуаттар артылышындағы ижадына ҡараш ташлағанда, ирекһеҙҙән Х. Ғиләжевтың «Аҡыл менән игеҙәк булып…» тигән мәҡәләһе иҫкә килеп төшә. Был мәҡәләлә Назар Нәжмиҙең «Ағиҙел» журналында (1983 йыл, 9-сы һан) баҫылып сыҡҡан «Яҡты күҙҙә» исемле шиғырҙар шәлкеме хаҡында һүҙ бара. (Мәҡәләне Х. Ғиләжевтың 1984 йылда донъя күргән «Ҡәләмдәштәр» тигән китабында табырға мөмкин.) Унда шундай юлдар бар: «Мин һүҙемде Назар Нәжмиҙән башлағайным, уны йәштәргә арнап, ижад уңыштары юлдаш булһын тигән теләк менән тамамламаҡсымын. Юҡ, был теләк ниндәйҙер үпкә ташлау, оло быуынды йәштәргә ҡаршы ҡуйыу булып аңлашылмаһын берүк. Киреһенсә, һүҙ сәнғәтенең йәш вәкилдәре үҙ ижадтарының иң һәйбәт өлгөләре менән быуындар күсәгилешлегенә тоғро ҡалып, башҡорт әҙәбиәте традицияларын лайыҡ дауам иттереү генә түгел, бәлки, уның артабан үҫешенә үҙҙәренең тос өлөштәрен индерә. Тимер Йосопов, Факиһа Туғыҙбаева, Ҡәҙим Аралбай, бында исеме аталмаған ҡайһы бер шағирҙарыбыҙ һәм шағирәләребеҙ (хәйер, уларҙы инде йәш тип атауы ла нисектер яйһыҙыраҡ та!) ижадының гражданлыҡ һәм художество оҫталығы яғынан әҫәрҙән әҫәргә үҫә килеүе бының асыҡ миҫалы. Өс шағирҙың исемдәрен атап китеүемдең сәбәбе улар ижадының йәш поэзиябыҙ үҫешенә тон биреүендә, уның артабан үҫеш перспективаларын билдәләүендә».

Күренекле шағир, ялҡынлы публицист, үткер ҡәләмле тәнҡитсе Х. Ғиләжевтың «Аҡыл менән игеҙәк булып…» тигән мәҡәләһенән ошондай ҙур өҙөк килтереүем һис яҙыҡ булмаҫ. Сөнки бер-беребеҙ

яҙғанды иғтибар менән күҙәтеп барабыҙ тип әллә ни маҡтанырлыҡ урын юҡ. Оло быуын вәкилдәре биргән аҡыл-кәңәшкә лә иренеп кенә, теләр-теләмәҫ кенә ҡолаҡ һалабыҙ, шикелле. Бер-беребеҙҙе ишетеү, бер-беребеҙгә таяныу, бер-беребеҙҙең йөҙөн йыртмайынса бәхәс ҡороу – әҙәбиәтебеҙ тормошоноң тулы ҡанлы тибешен тәьмин итеү өсөн фарыз булған шарттарҙың береһелер тимәксемен. Юғиһә, ҡайһы берҙә күптән асылған Американы ҡайтанан асып ҡуйыуыбыҙ ҙа ихтимал.

Шиғриәтебеҙҙең сафлығы, юғары кимәл өсөн янып-көйөп йәшәгән Х. Ғиләжевтың зирәклеге, эстетик зауығы, поэтик сослоғо ошо мәҡәләлә ярылып ята. Ул телгә алған өсәүҙең өсөһө лә (ваҡыт һынауын үткәндән һуң) Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары, ә берәүһе хатта халыҡ шағиры дәрәжәһенә күтәрелгән икән, был һис тә күрәҙәселек ғәләмәте түгел, ә күҙәтеүсәнлек һөҙөмтәһе, һиҙемләү ҡеүәһенең асыҡ сағылышы.

Әҙәбиәтебеҙ тарихы быуындар күсәгилешлегенә бәйле башҡа миҫалдарҙы ла белә. Шуларҙың иң сағыуы – Мостай Кәримдең уҙған быуат уртаһында Балтик буйынан, Рига ярҙары тип йөрөтөлгән ерҙән йәш ҡәләмдәштәренә – Абдулхаҡ Игебаевҡа, Марат Кәримовҡа, Рәми Ғариповҡа, Рафаэль Сафинға – яҙған дүрт хатылыр, моғайын. Был хаттар менән хәҙерге йәштәр таныш микән? Хат тип аталһалар ҙа, асылда улар – шағир ҡулы менән яҙылған тәнҡит мәҡәләләре. Улар әле лә, илле йыл самаһы ваҡыт үткәндән һуң да, үҙҙәренең әһәмиәтен юғалтмаған – шиғриәтте тикшереүҙең юғары өлгөһө булып ҡала. Был хаттарҙа нескә күҙәтеүсәнлек тә, талапсанлыҡ менән ҡайғыртыусанлыҡ та, ихтирамлылыҡ та етерлек. Мостай Кәримдең үҙенән ун – ун өс йәшкә кесе шағирҙарға «ҡәләмдәш иптәштәр» тип мөрәжәғәт итеүендә генә лә ҙур мәғәнә ята.

Заманында Ғилемдар Рамазанов менән Муса Ғәлиҙәргә тартылған, улар ҡанаты аҫтында тәүге аҙымдарын яһаған йәш шағирҙар һәм шағирәләрҙең булғанлығы тураһында ла ишеткәнем бар. Тимәк, быуындар күсәгилешлеге – әҙәби процеста мөһим урын алып торған һәм мөһим роль уйнаған тәбиғи күренеш. Тик ошо урында сетерекле бер мәсьәләгә килеп юлығабыҙ. Ололар үрнәгендә (ҡайһы саҡта хатта уларға таянып!) ҡанат йәйеп осоп киткәс, үҙебеҙҙе үҙебеҙ онотоп ташламайбыҙмы? Был инде әҙәплелеккә ҡайтып ҡала. Әҙәплелек иһә бик ҡатмарлы төшөнсә. Әлбиттә, күп осраҡта ул тәрбиәнән килә. Ләкин яһалма әҙәплелектең ғүмере ҡыҫҡа. Хатта күренекле, талантлы тип һаналған шәхестәрҙең дә ваҡыты менән әҙәпһеҙлек ҡылып

ташлауы ихтимал. Шуға күрә ысын әҙәплелек орлоҡтары төпкөлдәрәк яталыр, бәлки, ҡанға ла һеңгәндер. Тик теге йәки был сифат (айырыуса ыңғай сифат!) ҡанға бик тиҙ һеңеп бармай, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, – уға ваҡыт арауығы кәрәк. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, ысын әҙәплелек кешенең тәбиғәтенән киләлер ул.

Әҙәплелек һымаҡ, традиция төшөнсәһе лә ҡатмарлы күренеш. Әҙәбиәт ғилемендә уға өҙөп кенә яуап биреүсе юҡ һәм уның булыуы ла мөмкин түгел. Сөнки традицияны ҡулға тотоп та, иңен-буйын үлсәп тә булмай – уны фәҡәт тойомларға ғына мөмкин. Х. Ғиләжев та исемдәре аталған өс шағирҙы башҡорт әҙәбиәте традицияларын лайыҡ дауам иттереүселәр тиеү менән генә сикләнгән. Шуға ла Факиһа Туғыҙбаеваның үрҙә телгә алынған яңы әҫәрҙәрендә традициялар, быуындар күсәгилешлеге нисегерәк тойомлана һуң тигән һорау ҡыҙыҡһыныу уятһа, һис тә ғәжәп түгел.

Әйтәйек, «Күкрәк һөтө» поэмаһының атамаһы Н. Нәжмиҙең «Тере ҡан» поэмаһындағы «Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып…» тигән юлына ауаздаш. Ләкин традиция хаҡында киң юҫыҡта һүҙ алып барыр өсөн бындай оҡшашлыҡ ҡына етмәй торғандыр әле. Сәнғәттең бөтә төрҙәренә лә хас был күп яҡлы күренештең сағылышын әҫәрҙең идея-эстетик асылынан, унда күтәрелгән мәсьәләләрҙән, уларҙы художестволы хәл итеү ысулдарынан, тел-стиль сараларынан эҙләү хәйерлерәктер. Ошондайыраҡ талаптарҙан сығып фекер йөрөткәндә, Ф. Туғыҙбаеваның «Күкрәк һөтө» поэмаһы менән уға тиклем ижад ителгән лиро-эпик әҫәрҙәр араһындағы уртаҡлыҡты шәйләмәй мөмкин түгел (авторҙың «Өлгөләрҙән, бәлки, көлөргәлер, мин үҙемсә генә өлгөргән» тип иҫкәртеүенә лә ҡарамаҫтан).

Сюжет ҡоролошо йәһәтенән «Күкрәк һөтө», мәҫәлән, Н. Нәжмиҙең «Йоҡлаған бала янында» тигән поэмаһына тартым. Ике осраҡта ла әҫәргә ойотҡоно бала образы һалған: Нәжмиҙең лирик геройы, тыныс ҡына тын алып, сәңгелдәктә йоҡлап ятҡан бала эргәһендә төрлө уйҙарға батып, егерменсе быуаттың тәүге яртыһында булып үткән шанлы ла, ҡанлы ла хәл-ваҡиғаларҙы хәтерендә яңыртып, күңеленән кисереп ултыра, Факиһаның лирик героиняһы иһә имсәктән айырғандан һуң ярылырҙай булып яр һалған ейәнсәрен йыуата-йыуата серем дә итмәй уҙғарған тотош бер төн буйына беҙ йәшәгән дәүерҙең асылына төшөнөргә тырыша һәм үҙен борсоған уйҙар менән уртаҡлаша. («Кеше тыуа балыҡ ҡиәфәтле, шундай болғансыҡһың һин, дәүер!»; «Кеше тыуа быҙау ҡиәфәтле, – уф, Хоҙайым,

ташҡа үлсәйем»; «Зат-зәүерем минең – әзмәүер, иргәйелгә әйләндереп ҡуйма, ҡаты бәғерлеһең һин, дәүер...»; «Тотош ҡалаларҙы упҡын йота, донъяларҙы ниңә һыу баҫа?»; «Океандар ҡалҡа туфан булып, ажғырына ҡойон, ҡотора»; «Еребеҙ һуң – океанда карап, батыр ҙа бит ҡуйыр – батырһаң» һ.б.).

Поэмаларҙың икеһендә лә бала образы дөйөмләштереп бирелгән. «Күкрәк һөтө»ндә лә, «Йоҡлаған бала янында» ла уларҙың хатта тәғәйен исемдәре лә юҡ һәм был әллә ни мөһим дә түгел: әҫәрҙәрҙең икеһендә лә дөйөмләштерелгән бала образы аша беҙҙең кисәге һәм бөгөнгө ысынбарлығыбыҙға ҡараш ташлана, бала яҙмышы ил яҙмышына, ғаләм яҙмышына илтеп тоташтырыла. Әгәр «Күкрәк һөтө»ндәге лирик героиняның йәне:

Ил генәйем тиеп илерәм бит,
Гөнаһтары баштан ашырлыҡ.
Гөнаһтарҙан бер урын да юҡтыр
Йыһандарға китеп ҡасырлыҡ, –

тип ытырғалана икән, уны аңларға була. Поэмалағы «Батшаларҙың гөнаһтары өсөн йәнкәйҙәрен биреп түләргә тейешме ни аҫыл уланҡайҙар?» тип кинәйәләп әйтелгән юлдарҙа ла тәрән мәғәнә һәм ҙур дөрөҫлөк ята.

«Йоҡлаған бала янында» поэмаһынан айырмалы булараҡ, «Күкрәк һөтө»ндә экспозицияға мул урын бүленгән. Лирик героиняның ҡайһы бер характер үҙенсәлектәре лә, портреты ла башлыса ошонда асыла, ошонда һүрәтләнә. Билен биштән быуып, иртә таңдан ҡара көс түгеп көн иткән был зат эйәһе башкөллө тормошҡа ғашиҡ: тыуған һәр яңы көндө ул шатланып ҡаршы ала, уның өсөн һәр яңы көн – тотолмаған хазина, шуға ла уны ҡәҙерен белеп, наҙына рәхмәт әйтә-әйтә тотонорға тырыша. Ер-һыу, тыуған тупраҡ байлыҡтарынан да, тәбиғәт гүзәллектәренән дә ғәм һәм йәм табып йәшәй ул. Уның өсөн хатта ҡояш байыуы ла үҙе бер тантана – был мәлдә тирә-йүн ялҡынға мансыла. Ҡартлыҡтың яҡынлашыуы ла уны әллә ни борсомай. Йыйып ҡына әйткәндә, Факиһаның был героиняһы, заманыбыҙҙың ни тиклем генә ҡатмарлы, болғауыр булыуына ҡарамаҫтан, яҡты донъянан туймаған, асыҡ йөҙлө, йомарт күңелле, дуҫтарға бай йән эйәһе ҡиәфәтендә килеп баҫа күҙ алдына. Поэманың тәүге строфаһы ла, артабанғы юлдары ла ошо фекерҙе раҫлай һымаҡ:

Күҙҙәремде Ҡояш асты үбеп,
Һаумы, иртә!
Һаумы, яҡты көн!
Тағы күргәс Ҡояш сығыуҙарын,
Тағы бәхетлемен мин бөгөн!
. . . . . .
Тағы күрҙем Ҡояш сығыуҙарын:
Ҡояшлы таң – ул һил тантана.
Күңелдәрем тулы иман менән,
Телдәремдән бал да май тама.
. . . . . .
Ҡояш байыуы ла тантана бит:
Офоҡ – ялҡын, тауҙар – ялҡында.
Терһәгеңде тешләй алмайһың шул:
Йәшәлгән көн – йәшәлгән бер ғүмер,
Үҙе алыҫ, үҙе яҡында.

Поэманың төп өлөшөнә күсерҙән элек, автор «Урал батыр» эпосының баш геройҙарын хәтеренә төшөрә, улар образына таянып, Ерҙә яҡшылыҡ менән яманлыҡтың йәнәш йөрөүенә ишара яһай («Кеше эсә кешенең!»). Был фекер лирик героиняның бәпесенә һөйләгән әкиәтендә уғата ла көсәйтелә. Әкиәт барышында поэманың атамаһы ла асыҡлана: борон заманда ата-бабаларыбыҙ ерен баҫып алған яу башлығы («Яуҙың башлығы булған, ти, Аждаһаға тиң – көслө. Кешеләрҙең башын йотҡан булһа ла үҙе кеше»), күкрәк һөтөнә баҫып бешерелгән алабута күмәсен ауыҙ иткәс, уны ҡыуып ебәреп, илде дошмандан ҡотҡарырға тип килгән егеттең имсәктәшенә әүерелгән.

Әсәң һөтөн ауыҙ иткәс,
Булдың хәҙер туғаным!
Сихырсының көсө етмәҫ,
Боҙолдо таҙа ҡаным.
Ту-ға-ным!
Ҡа-ным!
... ым! –

тип үкереп илаған яу башлығы һәм, Тәңре ҡарғышынан ҡурҡып, үҙ илендә генә донъя көтөр өсөн беҙҙең төйәкте ташлап китергә мәжбүр булған.

Ҡосаҡлаған егетте ул:
– Хуш булып тор, туғаным.
Иҫтәлеккә алып китәм
Уралыңдың ҡылғанын.

Ошонда беҙ йәнә Н. Нәжмиҙең «Тере ҡан» поэмаһына әйләнеп ҡайтҡандай булабыҙ. Унда ла бит һүҙ күкрәк һөтө хаҡында бара. Тик, Н. Нәжми поэмаһының нигеҙендә тормоштоң үҙенән алынған реаль хәл-ваҡиғалар ятһа, Ф. Туғыҙбаева әҫәрендә ул хәл-ваҡиғалар әкиәт ҡалыбына төрөп бирелгән.

Был сағыштырыуға аныҡлыҡ индерер өсөн, ҡыҫҡаса ғына булһа ла «Тере ҡан» поэмаһының сюжет һыҙыҡтарын хәтергә төшөрөргә кәрәктер. Тыуған ил һағында торған лейтенант Яхин һуғыштың тәүге минуттарында уҡ һәләк була. Сик буйындағы ҡаланы дошман самолеттары утҡа тотҡанда, Яхиндың бала табыу йортонда ятҡан ҡатыны Зифа ҡаты яралана. Һушына килгәс, ошо мәхшәр ваҡытында бер көнө лә тулмаған бәпесен юғалтыуын аңлай: йәп-йәш ҡатын әсәлек вазифаһын атҡарыуҙан мәхрүм ителә. Терелеп, аяҡҡа баҫҡас, ул ялан госпиталендә доктор булып хеҙмәт итә башлай. Шунда, ҡаты яраланған бер һалдатҡа ҡанын бирep, уны үлемдән ҡотҡара. Оҙаҡламай Зифа үҙе һәләк була. Үлемдән ҡотҡарылған теге һалдат Яхиндың ординарецы Иван булып сыға. Һуғыш бөтөп, байтаҡ ваҡыт үткәс, Иван Зифаның юғалған ҡыҙын эҙләй башлай, сөнки уны үҙенең ҡандашы, туғаны итеп иҫәпләй. Бына шулай, традиция тигәнең «Күкрәк һөтө» менән «Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып» һүҙбәйләнешtәренең тышҡы оҡшашлығында һәм берҙәй яңғырашында ғына түгел икән. Үрҙә әйткәнебеҙсә, ул төпкөлдәрәк ята һәм күҙгә бик бәрелеп бармаҫҡа ла мөмкин. Әлеге осраҡта иһә Ф. Туғыҙбаеваның «Күкрәк һөтө» поэмаһына ауыҙ-тел ижады традицияларының да, шулай уҡ әҙәби традицияларҙың да хас икәнлеген инҡар итеп булмай торғандыр.

«Күкрәк һөтө» менән «Йоҡлаған бала янында», «Тере ҡан» поэмалары араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ йәшәй икән, был һис кенә лә Ф. Туғыҙбаеваның үҙаллылығына шик уятмай. Барыһынан да элек, темалар, идеялар, ҡайһы бер художество алымдарының һәм һүрәтләү сараларының берҙәмлеге хаҡында һүҙ бара. Уртаҡ теманы һәр яҙыусы, һәр шағир үҙенсә хәл итә, уртаҡ идеяны ла һәр кем үҙенсә тормошҡа ашыра. Шуға ла бит әҙәбиәт ғилемендә стиль, тел

үҙенсәлектәре, ижад манераһы һәм ижад индивидуаллеге кеүек төшөнсәләр йәшәп килә. Улар Ф. Туғыҙбаеваға ла хас.

«Күкрәк һөтө» поэмаһының төп темаһы – кеше тураһында, уның Ерҙәге урыны, яҙмышы һәм күрәсәктәре хаҡында уйланыуҙар. Ошо уйланыуҙары менән уртаҡлашыу, әйтергә теләгән фекерен бойомға ашырыу сараһы итеп шағирә «күкрәк һөтө» төшөнсәһен һайлаған. Әҙәм балаһының Ерҙәге булмышы, ысынлап та, күкрәк һөтөнән башлана:

Күкрәк һөтө!
Тәүге ризыҡ тәнгә,
Йәнгә лә ул тәүге тәғәмдер.
Күкрәк һөтө менән ингәнгә
Был донъяла әҙәм әҙәмдер.
. . . .
Әсә һөтө, күкрәк һөткәйенән
Ағыраҡ һуң ни бар донъяла?
Бер тамсыһын татымаған кеше –
Ғүмер буйы йәтим бер бала…

Әҙәби әҫәрҙәрҙә был образ-төшөнсәнең нәҡ ошо мәғәнәлә файҙаланылғанын хәтерләмәйем. Әгәр Ф. Туғыҙбаева уны тәүгеләрҙән булып ҡулланған икән, тимәк, ул новаторлыҡ күрһәткән шағирә тип иҫәпләнергә хаҡлы.

Поэмала миҙалдың икенсе яғы ла ялтырап китә. Күкрәк балаһын имсәктән айырғанда бәпес тә, уның әсәһе лә ыҙа сигә. Быны автор үҙе лә йәшермәй: күкрәк һөтөнән айырылыуҙы ул кешенең тәүге ҡайғыһына тиңләй:

Ирендәрен ҡуя сәпелдәтеп,
Төшөндәме имә әсәһен?
Онота алмай тәүге хәсрәттәрен,
Йота микән әллә күҙ йәшен?

«Күкрәк һөткәйенә бәрәбәр йән тылсымын» хатта даһи ҙа уйлап таба алмағас, ниңә һуң әле баланы илата-илата, хатта Аждаһаның Аждаһаһын аждаһалыҡтан баш тартырға мәжбүр иткән әсә һөтөнән айыралар? Н. Нәжмизең Зифаһы һөйөнә-һөйөнә имеҙер ине лә бит бәпесен, ләкин һуғыш касафаты уның күкрәк һөтөн ҡанға әйләндерә.

Ә Ф. Туғыҙбаева поэмаһында сабыйҙы көсләп имсәк ташлаттыралар. Ваҡыты еткәс, ул үҙе лә ташламаҫ инеме ни? Ҡыҙ баланың кейәүгә сыҡҡансы, ир баланың кәләш алғансы әсәһен имеүен күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Тимәк, кеше тыумыштан уҡ сикләүҙәргә, ғазапланыуҙарға, ҡыйырһытылыуҙарға, күҙ йәштәрен түгеүгә дусар ителгән. Тимәк, күкрәк балаһы сағында уҡ кеше хоҡуғы боҙола башлай. Баланан да хоҡуҡһыҙ, яҡлаусыһыҙ зат эйәһе бар микән донъя йөҙөндә?! Бына шундай уйҙар уята миҙалдың икенсе яғы.

«Күкрәк һөтө»нөң композицияһына килгәндә, ул дүрт бүлектән тора. Башта әйткәнемсә, экспозиция тулы бер бүлекте биләгән – унда юлдар һаны йөҙҙән ашып киткән. Үҙәк урында – икенсе бүлек. Юлдар һаны яғынан да ул – иң ҙуры. Өсөнсө бүлекте лирик героиняның беҙ йәшәгән болғансыҡ дәүер тураһындағы уйланыуҙары тәшкил итә. (Юл ыңғайында әйтәйем: был бүлек Факиһаның «Фатихамды бирәм һиңә»һен хәтерләтеп ҡуйғандай.) Дүртенсе бүлек – иң ҡыҫҡаһы. Уны имсәк бала тирәһендә бер аҙ ҡуйырып алған ғаилә конфликтының сиселеше тиергә була.

Композицияның бер ни тиклем кәүшәклеген (минең ҡарашҡа, әлбиттә) кисергәндә, «Күкрәк һөтө» поэмаһы – яҡтылыҡ бөркөп торған әҫәр. Бөгөнгө тормоштан алынған һәм поэманың өсөнсө бүлегендә тормошса һүрәтләнгән күренештәр уҡыусыны ни ҡәҙәр генә хафаландырмаһын, ниндәй генә ауыр уйҙар уятмаһын, улар барыбер ҙә шағирәнең донъяға оптимистик ҡарашын тоноҡландыра алмай. Уның: «Ғүмер ҡәҙерен белгәнгә тормош – үҙе оло туй» тигән юлдары поэманың төп лейтмотивы булып яңғырай.

Традицияларҙы, быуындар күсәгилешлеген «Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!» тигән әҫәрҙә лә тойомларға мөмкин. Был әҫәрҙең жанрын автор һағышнамә тип билдәләгән. Бынан дүрт-биш йыл элек ижад иткән «Атылған йыр» исемле әҫәрен ул реквием тип атағайны. Шулай итеп, шағирә жанрҙар төрөн байытыу юлы менән поэзиябыҙға новаторлыҡ һыҙаттары өҫтәй.

«Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»тың тәүге строфаһын уҡыу менән хәтер төпкөлөнән Мостай Кәримдең «Салауат» трагедияһы ҡалҡып сыға. Үҙған быуаттың 20–40-сы йылдарына ҡараған әҫәрҙәрҙә Салауат Юлаев башлыса батыр яугир һәм шағир сифатында һүрәтләнә ине. Архивтарҙа табылған тарихи документтар ярҙамында ил азаматының артабанғы яҙмышы асыҡлана төшкәс, әҙиптәребеҙ ҙә был шәхестең образына мөрәжәғәт иткәндә ижад офоҡтарын һиҙелерлек

киңәйтте. Салауат Юлаевтың Балтик диңгеҙе ярындағы һөргөндә тотҡон хәлендә үткән фажиғәле ғүмерен тәүгеләрҙән булып М. Кәрим кәүҙәләндерҙе, шикелле. Уның башланғысын башҡалар ҡеүәтләне. Бөгөн иһә был исемлекте Ф. Туғыҙбаева тулыландырҙы. Тимәк, беҙҙең алда – быуындар күсәгилешлегенең дауам иттерелеүен, традицияларҙың үҫтерелеүен раҫлаусы йәнә бер факт.

«Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»тың аҙағына яҡынлашҡас, хәтер һандығында һаҡланған тағы бер традицион образ үҙен һиҙҙереп ҡуйҙы – Сыңрау торна образы. Халҡыбыҙҙың бик боронғо ҡомарт-ҡыларынан һаналған был образ сәнғәт һәм әҙәбиәт әһелдәренең иғтибарын үҙенә аҙ тартманы. Әммә йыш ҡабатлауҙан уның уҡаһы уңмай, киреһенсә, заман талаптарына тап килерҙәй яңы һыҙаттары, яңы мөмкинлектәре генә асыла бара. Дөрөҫ, Ф. Туғыҙбаеваның һағышнамәһендә Сыңрау торна образына туранан-тура һылтаныш юҡ. Ләкин Факиһа Аҡсарлағының ауыҙ-тел ижадындағы Сыңрау торнаны хәтерләтеүе, уға яҡын тороуы, минеңсә, бер кемдә лә шик уятмай.

Тәүге юлдарынан уҡ М. Кәримдең «Салауат» трагедияһын иҫкә төшөргәс, аңлашыла инде: «Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!» милли батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа арналған. Әҫәрҙә, М. Кәрим трагедияһындағы һымаҡ, герой биографияһының икенсе яртыһы – ихтилал баҫтырылғас, ғүмере зинданда ашалған дәүер һүрәтләнгән. Аныҡыраҡ итеп әйткәндә, сюжет нигеҙендә Салауаттың фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсер алдынан төндәге уйланыуҙары ята. Ул уйланыуҙар автор аңлатмалары менән аралаштырып бирелгән. Һөҙәмтәлә геройҙың һуңғы сәғәттәре генә түгел, егерме биш йыл буйы таш ҡәлғәлә үткәргән ғүмере бөтә драматизмы менән күҙ алдына килеп баҫҡандай була.

Әҫәрҙә Салауаттың аяныслы яҙмышын ентекләп тасуирлау бурысы ҡуйылмаған. Авторҙың иғтибары геройҙың ошондай киҫкен һынауҙар аша үткәндә үҙ идеалына хыянат итмәйенсә, кешелек сифаттарын һаҡлап ҡала алыуын күрһәтеүгә йүнәлтелгән. Әбей батша һәм уның ҡатилдары Салауатты ни хәтлем генә ҡыйырһытмаһын, «Злодей», «Бунтовщик», «Изменник» тигән мөһөр һуғып, уны күпме генә кәмһетмәһен, ул төшөнкөлөккә бирелмәй, үҙ намыҫы менән һатыу итмәй, ғүмеренең ахырынаса уға тоғролоҡ һаҡлай.

Геройҙың ошо сифаттары уның эске монологында бик асыҡ сағылған. Башта ул Хоҙайҙан «Яҙыҡтарым булһа, Ватанымды үҙең бәхилләһ!» тип үтенә лә, артабан уны иркенән мәхрүм иткән һәм,

язаларҙың иң ҡатыһын уйлап табып, ер ситенә олаҡтырған ҡанһыҙ Батшаға ғәҙел хөкөмөн сығара:

Егерме лә биш йыл ғүмеремде
Көнгә күрһәтмәйсә ашаның,
О хөкөмдар!
Батша өҫтөн түгел,
Беҙ – тиң балалары асмандың...
. . . . . .
Рух баш бирмәй, тәнем генә ҡол.
Бер һорауың мине үтәләйгә
Ҡаҙаҡлаған, Батша, нисә йыл:
«Ғәйебеңде танып, инородец,
Гөнаһтарҙан, – тиһең, – һин ҡотол!»
Аҡылдарың һинең етер микән,
Яуабымды бирәм мин төрөп:
«Ғәйеплеме кеше тыуған өсөн,
Донъяларға килеү – ул ирек.
Иркенлектә, иреклектә йәшәй
Хоҙай биргән һәммә тереклек!»

Намыҫ төшөнсәһе бында геройҙың сәйәси ҡараштары менән үрелеп китә. Монологтан күренеүенсә, ғүмеренең һуңғы мәленә ҡәҙәр Салауат бөйөк гуманист булып ҡалған. Уның ярайһы ғына тәрән фәлсәфәүи фекер йөрөткәнлеге һиҙелеп тора. Геройҙың йәштән һайлап алған шөғөлөнә тоғролоғо, ирек яулар өсөн көрәшкә аҡлы рәүештә күтәрелгәнлеге түбәндәге юлдарҙа ла сағылыш тапҡан:

... Елек майын һурмаҫ ине ҡоллоҡ,
Бүгәс ише, дарға аҫһалар.
Илен һайлар ине барыбер ҙә,
Батырға ла ял кәрәктер, тип,
Ожмах ишектәрен аҫһалар.

«Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»та тағы бер монолог бар. Уныһы инде әҫәрҙең атамаһына һәм бигүк ғәҙәти булмаған жанрҙың асылына аныҡлыҡ индерә торған монолог. Дөрөҫөрәге, монолог-өндәшеү. Уны ла Салауат әйтә. Ун һигеҙ юлдан торған был монологтың әҫәрҙә

тотҡан урынын билдәләү өсөн бында уның тәүге строфаһын килтереү ҙә етер:

«Дуҫым минең,
Һуңғы теләгемдер,
Ҡушайымсы һиңә бер йомош:
Илгә еткерһәңсе сәләмемде,
Ҡысҡырғанда исем-атым ҡуш!»

Бына шундай үтенес менән мөрәжәғәт итә Сыңрау торнаны хәтерләткән Аҡсарлаҡҡа ер ситенә илтеп олаҡтырылған Салауат, сөнки уны «Тарта Йүрүҙәне, күк Уралы, йылдар үткән һайын көслөрәк…» Атаһы Юлай ҙа һуңғы көндәренә тиклем тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтыу хыялы менән йәшәгән. Баҡыйлыҡҡа күсер алдынан ул:

«Ерләгеҙсе, – тине, – Тәкәйемдә! –
Бығауҙарға башы һуғылды,
Эй ялбарҙы үҙе Хоҙайғамы? –
Һаҡлай ғына күрсе улымды!»

Ф. Туғызбаеваның һағышнамәһендә Салауат Юлаевтың сәсәнлек һәләте лә ситләтеп үтелмәгән. Ситләтеп үтелмәгән генә түгел, ауыр минуттарҙа шиғриәттең уға яһаған тәьҫире хаҡында һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтелгән:

Күкрәктәге ыласын йыр – серҙәш,
Яңғыҙлыҡтан һаҡлай, яҙыҡтан.

Шиғриәт менән йәнәш – диңгеҙ образы. Был аңлашыла ла: әҫәрҙә кәүҙәләндерелгән хәл-ваҡиғалар диңгеҙ буйында бара. Ләкин Факиһа өсөн диңгеҙ – тәбиғәт күренеше генә түгел: пейзаждан бигерәк, үҙ аллы йәшәүсе символик образ. Ул һәр ваҡыт хәрәкәттә: бәргеләнә, үрәпсенә, ҡотора, үкһей, үкерә, шаулай. Лермонтовтың «Зәңгәр диңгеҙ томанында яңғыҙ елкән күренә ағарып» тигән юлдарын хәтерләтеп ҡуя. Диңгеҙ менән Салауат – антитезаға ҡоролған образдар. Салауат бығауланған килеш ситлектә хөкөм һөрә, ә «Икһеҙ-сикһеҙ Диңгеҙ рәхәт сигә, ни ҡылһа ла, үҙенең иркендә». Авторҙың

диңгеҙ һүҙен яңғыҙлыҡ исеменә әйләндереп ебәреүе лә юҡтан түгелдер (уның географик атамаһы булыуға ла ҡарамаҫтан). Яңғыҙлыҡ исеменә әйләндерелгән башҡа һүҙҙәр ҙә осрай: Батыр, Ваҡыт, Азатлыҡ, Мәңгелек, Әжәл, Батша, Шағир. Улар ғәҙәти уртаҡлыҡ исемдән үҙ аллы хәрәкәт итеүсе тере әҙәби образ шәйенә ингән.

«Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»тың сюжеты, сымы йыйылып, бына-бына атылып китергә торған пружинаны хәтерләтә. Шағирә ҡоршау тип аталған композицион-стилистик алымды ҡулланған: әҫәр авторҙың «Таш зинданда Батыр уйҙар ҡора, барҙай ҡылыс ҡойор булаты!» тигән һүҙҙәре менән башлана һәм «Рухы һынмаһа ла Батырҙың, ҡорос бығауҙары, зыңлай-зыңлай, баҡыйлыҡҡа уны батырҙы» тигән һүҙҙәре менән тамамлана. Ошо ике яр, ике бейеклек араһында – Салауаттың тотҡонлоҡта үткәргән ғүмеренә бәйле автор хыялында яралған ҡайһы бер күренештәр; геройҙың уй-кисерештәре, Тыуған иленә, халҡына һөйөү, ә тыуған төйәгенән, ғәзиз Уралынан мәңгелеккә айырған Хөкөмдарға нәфрәт хистәре; тыуған ере, туған халҡы менән оҙаҡ йылдар хәбәрҙар булмауы арҡаһында барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡлы фекерҙәр; аҡлыҡты, паҡлыҡты кәүҙәләндергән һәм әҙгә генә булһа ла Батырҙың һағыштарын онотороп торған Аҡсарлаҡ образының тыуыуы, һ.б., һ.б. Сюжет пружинаһы ысҡынып китә лә, атаһы Юлай артынан улы Салауат та донъя ҡуя.

Әҫәрҙе өс строфанан торған эпилог ослай. Дөрөҫ, автор уны ни өсөндөр үҙ исеме менән атамаған – йондоҙҙар менән генә айырып ҡуйған. Ләкин йөкмәткеһе йәһәтенән был өс строфа барыбер ҙә эпилог, минеңсә. Салауаттың һәләкәтенән һуң үткән ике быуат Ваҡыт ҡосағына инеп юғалғас, тәрән уй-хистәргә бирелгән шағирә тарихты бөгөнгө заманға килтереп ялғай һәм эске бер ғорурлыҡ менән «Һаҡлай илем Шағир ҡылысын» тип иҡрар итә.

«Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»та күкрәк һөтө, ҡандаш кеүек һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр осраһа ла, ул «Күкрәк һөтө» поэмаһынан һиҙелерлек айырыла. Әлбиттә, үҙеңдән үҙең ҡасып булмаған шикелле, әҫәрҙәрҙең икеһендә лә стиль уртаҡлығы – Факиһа Туғызбаева стиле – күҙгә бәрелеп тора. Минең уйымса, ул стилдең эйәһе – көр тауышлы, тура һүҙле, ҡыйыу, тарих һабаҡтарын яҡшы үҙләштергән һәм уларға үҙ ҡарашы булған, кеше хоҡуғын, милләттәр яҙмышын бөтә нәмәнән дә өҫтөн ҡуйған шәхес булырға тейеш. Ләкин был ике әҫәрҙе стилдәр уртаҡлығы берләштерһә лә, уларҙың һәр ҡайһыһына

хас булған ниндәйҙер үҙенсәлекте лә тоймай ҡалмайһың. «Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»та, мәҫәлән, һүҙҙәр тосораҡ яңғыраған кеүек, ә шиғри юлдар тығыҙыраҡ итеп үрелгән һымаҡ. Тос һүҙҙәр ярҙамында ыҡсым юлдарға төрөлгән фекер ҙә, тәбиғи, үҙенең тәрәнлеге һәм үткерлеге менән айырылып тора. «Күкрәк һөтө»ндә лә, «Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!»та ла строфанан строфаға күскәндә ҡайһы саҡта мәғәнәүи бәйләнеш етеңкерәмәгәндәй. Бәлки, миңә генә шулай тойолалыр.

Йомғаҡлап шуны әйтке килә: Факиһа Туғыҙбаева – ижадының сәскә атҡан осорона ингән шағирә. Хәҙер ул – ысын мәғәнәһендә һәм бөтә яҡлап та өлгөрөп еткән шәхес. Киләсәктә лә беҙҙе яңы әҫәрҙәре менән ҡыуандырыр әле тигән өмөттә ҡалайыҡ.

2004

«Ҡояш та бит, ана, эстән яна…»

Был мәҡәләнең исемен Зөфәр Вәлиттең «Яныу» тигән шиғырынан алдым. Шиғыр «Ағизел» журналының 2005 йылда сыҡҡан 9-сы һанында баҫылған. Миңә был шиғыр поэзияның юғары өлгөһө һымаҡ тойолдо. Унда хәтерҙә ҡалырлыҡ поэтик образ тыуҙырылған. Әҫәрҙең теле шыма, йүгерек.

«Яныу» ике киҫәктән тора. Тәүге киҫәкте укыған саҡта уҡ, келт итеп Назар Нәжмиҙең «Һәр нәмәлә шиғыр ята, әгәр күрә, тоя белһәң, күргәнеңде йөрәгеңдә шиғыр итеп ҡоя белһәң» тигән һүҙҙәре иҫкә килеп төшә. Зөфәр Вәлит – шундайҙарҙың береһелер, моғайын. Уның лирик геройы фантазияға бай. Ләкин ул саманы онотмай. Мейес эсендәге уттың ялдарынан төшкән шәүләне күҙәтеп ултырғанда, мәҫәлән, был геройҙың аңында беҙҙең заман Есенин йәшәгән дәүергә барып тоташа. Баҡһаң, был ике осор араһында күҙгә бик бәрелеп тормаған оҡшашлыҡтар һәм уртаҡлыҡтар бар икән дәбаһа.

Шиғырҙың икенсе киҫәгендә лирик геройҙың образы уғата ла ҡабарынҡылана кеүек. Уның донъяға ҡарашы ла бер аҙ асыҡлана төшә. Заман тыуҙырған ҡаршылыҡтарға, беҙ йәшәгән дәүерҙең ығы-зығыларына, бигүк аңлашылып бөтмәгән үҙгәртеп ҡороуҙарға ул һис тә битараф түгел:

Эстән янам. Ниңә янғанлыҡты
Теүәл генә үҙем белмәйем.
Ни булһа ла, уның сәбәптәрен
Күктән түгел, ерҙән эҙләйем.

Әҫәрҙең аҙағына табан лирик герой тауышына авторҙыҡы ла килеп ҡушыла һәм төптәрәк ятҡан фекер уратып-солғатып түгел, ә асыҡтан-асыҡ ярып һалына:

Шағир йәне нисек ситләп үтһен
Кешеләрҙең йөрәк яраһын,
Бәғзеләрҙең йыртҡыс ҡылыҡтарын,
Яуыздарса ергә ҡарашын!..

Йәшерә алмайым, ошо шиғырҙы тәьҫирләнеп уҡып ултырғанда беҙҙең араға Хәким Ғиләжев менән Шәриф Бикҡолдар ҡайтып төшкәндәй булды.

Икебеҙ ҙә Яҙыусылар союзы ағзаһы булһаҡ та, «Яныу»ҙың авторын күреп белмәйем. «Ағизел» журналы бирелеп килгән ҡыҫҡаса белешмәләргә ҡарағанда, ул байтаҡтан бирле яҙыша икән. 2006 йылда сыҡҡан «Писатели земли башкирской» тигән биобиблиографик белешмәлә уның китаптары ла һаналған. Тик минең шәхси китапханамда уларҙың береһе лә юҡ. Сөнки хәҙер Өфөлә сыҡҡан китапты республикабыҙҙың башҡа ҡалаларында һәм ауылдарында көндөҙ ҡулыңа шәм яндырып эҙләһәң дә табалмаҫһың. Бынан бер нисә йыл элек китап саүҙәһенә ҡағылған мәсьәлә яҙыусыларҙың дөйөм йыйылышында уртаға һалып тикшерелһә лә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йөк, Крылов мәҫәлендәге шикелле, һаман да үҙ урынында. Шуға күрә З. Вәлит ижадына ташланган был ҡарашым менән уның һуңғы ете йыл арауығында донъя күргән шиғырҙарына ғына таянып уртаҡлашмаҡсымын.

Яңы быуатҡа аяҡ баҫкас, шағир «Ағизел» биттәрендә дүрт тапҡыр сығыш яһаны: 2001, 2003, 2005 һәм 2007 йылдарҙа. Тәүге икеһендә уның шиғырҙары «Йөрәгем менән яраттым…» һәм «Бер серҙәрен астым барыбер…» тигән баш аҫтында, ә һуңғы икеһендә – бер ояға туплаусы дөйөм исемһеҙ генә бирелде. Бөтәһе – 25 әҫәр. Уларҙың күҙгә бәрелеп торған иң мөһим үҙенсәлеге – ҡыҫҡалыҡ: ҙур тигәне лә 36 юлдан артмай. Күбеһе – 12, 16, 20 юллыҡтар.

Темалары буйынса был шиғырҙарҙы мотлаҡ ниндәйҙер төркөмдәргә бүлеп ҡарарға тырышыу – файҙаһыҙ хеҙмәт булыр ине. Уларҙың бөтәһенә лә лириклыҡ хас. Шул лириклыҡ үҙ эсенә гражданлыҡ пафосын да, тормош ҡанундары тураһындағы фәлсәфәүи уйланыуҙарҙы ла, пейзаж күренештәрен дө, мөхәббәт ғазаптарын да һыйҙыра. Нимә хаҡында ғына яҙһа ла, З. Вәлит шиғырҙарынан эске бер йылылыҡ бөркөп тора һымаҡ. «Ятҡа бирмәм» тигән шиғыр, мәҫәлән, ике яҡлыраҡ фекер уятһа ла, уның лирик геройы йөрәге менән яратҡан һөйгәнен йөрәгендә ерләргә әҙер. «Түҙмәҫ йәнем…», «Эстән янам, әллә шуға…» тигән шиғырҙарҙың да геройҙары үҙҙәренең асылдары, характер үҙенсәлектәре, эске халәттәре менән уртаҡлашалар, ләкин артыҡ асылып китмәйҙәр, ҡайһы бер һыҙаттарҙы билдәләү менән генә сикләнәләр. Әйтәйек, «Түҙмәҫ йәнем…»дә ул туң йөрәктәрҙе үҙенә иш итмәһә, «Сабый тимәҫ инем һиңә…»лә иһә йән иретер ҡараштан күңеле тулыуын белгертә. «Эстән янам, әллә шуға…»ла лирик

геройҙың хистәре төпкәрәк юлланған: уйлай китһәң, кеше ғүмере умырзая сәскәһенең яҙмышына оҡшаш икән.

Һүҙемде юҡҡа ғына «Яныу»ҙан башламаным, сөнки был шиғырҙағы мотив З. Вәлиттең башҡа әҫәрҙәрендә лә йыш ҡына яңғырап китә. «Ниҙәр көтәлер…»ҙе, мәҫәлән, уның туранан-тура дауамы, тиергә мөмкин. Бында ла лирик герой үҙ яҙмышы тураһында ғына түгел, ил яҙмышы хаҡында уйлана. Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә штрихтар ярҙамында ул үткәнебеҙгә лә, бөгөнгөбөҙгә лә үҙ баһаһын бирә, киләсәгебеҙ өсөн дә борсола:

Беҙҙең ҡанундарҙы Хоҙай
Нисек ҡабул итәлер…
Намыҫ аҡсаға әйләнде,
Алда ниҙәр көтәлер? –

тигән һорау ҡуя ул.

«Тормош», «Мин йәшәгән донъя» тигән шиғырҙарҙың нигеҙендә уҡыусыны һүҙгә әүрәтеү алымы ята. Был шиғырҙарҙың лирик геройҙары күҙлегенән ҡарағанда, донъяла бөтәһе лә төп-теүәл, әйтерһең дә ул гел мөхәббәттән, йыр-көйҙәрҙән, доғаларҙан туҡылған. Ләкин һуңғы, йомғаҡлау строфаларында уларҙың ҡарашы ҡырҡа үҙгәрә лә ҡуя. «Мин йәшәгән донъя», мәҫәлән, түбәндәге юлдар менән тамамлана:

Мөхәббәт тә, ғазап та
Йөрәгемә туҡылған, —
Мин йәшәгән донъяла
Нәфрәт тә бар, суҡынған!..

Шуныһы мөһим: лирик герой кисергән был метаморфозала бер ниндәй асыу ҙа, ҡысыу ҙа һиҙелмәй, ул бары тик фактты гына раҫлай һәм, аҫтыртын йылмайып, ошо хаҡта уҡыусыны ла киҫәтә.

Зөфәр Вәлиттең быйыл донъя күргән «Хушығыҙ», «Шатлыҡ күрергә ҡайтам да…» исемле шиғырҙары ла тематикалары, стилдәре, ғөмүмән алғағында, бөтә йүнәлештәре буйынса «Яныу»ға яҡын тораларҙар. «Хушығыҙ»ҙа тыуған төйәк тәбиғәтендәге кире үҙгәрештәрҙе (һыуҙар ҡорой, йылғалар һайыға, таштар ярыла) шағир ил күләмендә хөкөм һөргән яманлыҡтарға күсерә («Донъялар сәсрәп үҙгәрҙе,

бысаҡҡа килә бысаҡ»). Шиғыр алтышар юллы строфа менән яҙылған. Шуға микән, ул йыр шикеллерәк яңғырай – еңел уҡыла һәм тиҙ хәтергә һеңә. Әҫәр ерһәү (ностальгия) тойғоһо менән һуғарылған кеүек, сөнки уның башынан алып ахырына тиклем лирик герой үҙенең һағышлы, болоҡһоу уйҙары менән уртаклаша. Ләкин был – сәләмәт ерһәү. Унда авторҙың гражданлыҡ позицияһы ярылып ята. «“Йәшел йылан” саға илде – төйнәлеп йөрөй ҡаштар», йәиһә «Ышаныс юҡ яуызлыҡты изгелек еңеренә», тағы килеп «Битарафлыҡ шомлоғонан тонғанмы уяу ҡолаҡ?» тигән юлдарға һалынған аяныслы фекерҙәр менән кем генә килешмәҫ икән? Лирик герой тыуған төйәге менән генә түгел, хатта тыуған иле менән дә хушлашҡан һымаҡ.

«Шатлыҡ күрергә ҡайтам да…» исемле шиғыр ҙа ошо юҫыҡтараҡ яҙылған. Ҡаланан ауылға ҡайтҡан лирик герой, ундағы хәлде күреп, тәрән уйға бата, башы ҡата:

«Йәшел йылан» шом тарата,
Үҙгәрә ауыл халҡы –
Тимер өҙөрҙәй егеттәр
Йөрөйҙәр илке-һалҡы.
Элек «Ер етмәй», тинеләр,
Хәҙер ерҙәр буш ята.
Йәштәрҙең моңһоҙлоғона
Ҡарттарҙың башы ҡата.

«Йәшел йылан» темаһы З. Вәлиттең элегерәк ижад ителгән «Ҡараңғылыҡ» шиғырында ла төп урынды алып тора. Унда ла заманыбыҙҙың иң әшәке, иң ҡурҡыныс сире – эскеселек фашлана. Дөрөҫ, был сирҙең симптомдары күптән йәшәп килде. Уға яҙыусылар ҙа, шағирҙар ҙа битараф булманы – тәнҡит уты аҫтында тоттолар. Ләкин был тәнҡит элек башлыса сатира һәм юмор ҡалыбында яңғырар ине. Ә бына Зөфәр Вәлиттең «Ҡараңғылыҡ» шиғыры – сатира ла, юмор ҙа түгел, бәлки беҙҙең дәүергә хас күренештең киләсәгебеҙ өсөн ниндәй фажиғәле хәл икәнлеге хаҡында әсенеп уйланыу. Әҫәрҙең тәүге строфаһында уҡ ошо нота яңғырай башлай:

Ауылда төн… Ниңә элеккесә
Ишетелмәй йәшлек моңдары?..
Эттәр генә төнөн хөкөм һөрә.
Һәм йөрөйҙәр… хәмер ҡолдары.

Көтөлмәгән ерҙән хикмәтле йәнәшәлек килеп тыуа: эскеселек – төн ҡараңғылығы менән бер. Автор был сирҙең асылын асыҡлап, өгөт-нәсихәт уҡыу менән генә сикләнмәй, бәлки уға ҡаршы киҫкен көрәшкә саҡыра:

Иҫерек башҡа әйттең әйтмәнең ни,
Һеҙгә әйтәм, айыҡ аҡылдар:
«Хәмерйәнгә ҡойоп эсермәҫкә
Айык баштың тулы хаҡы бар!»

Яңғырашы һәм йөкмәткеһе менән бигүк ҡыуаныслы булмаһа ла, шағир ҡәләме аҫтында «Хәмерйән» тигән яңы исем, яңы һүҙ-образ тыуған.

«Хушығыҙ», «Шатлыҡ күргә ҡайтам да…», «Ҡараңғылыҡ» тибындағы шиғырҙар уҡыусының эстетик зауығына тап киләме икән, тигәнерәк һорау тыуырға мөмкин. Сөнки беҙ шиғриәткә юғары сәнғәт өлгөһө итеп ҡарарға күнеккәнбеҙ бит. Ә бында һүҙ матурлыҡ, сафлыҡ, паҡлыҡ хаҡында түгел, ә эскеселек, вайымһыҙлыҡ, моңһоҙлоҡ һәм башҡа шуның кеүек тиҫкәре күренештәр тураһында бара. Сөнки улар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең замандың айырылғыһыҙ юлдаштарына әйләнеп китте. Заманы ниндәй, уҡыусыһы ла шундай, тип әйтә алмайым алыуын, әммә шағирҙарыбыҙға ошо ҡараңғы теманы яҡтыртмай сара юҡ. Йәмғиәттең көҙгөһө лә, әйҙәүсеһе лә – улар бит.

Бәхеткә күрә, тиәйем микән, Зөфәр Вәлиттең «Ҡараңғылыҡ», «Ниҙәр көтәлер…», «Хушығыҙ», «Шатлыҡ күргә ҡайтам да…» әҫәрҙәренә антитеза һымағыраҡ яңғыраған шиғыры ла бар. Ул – «Ҡаратау урмандары». Стиле буйынса йырға, ҡобайырға тартым, ә йөкмәткеһе йәһәтенән Ҡәҙим Аралбайҙың «Ҡаратау тотҡоно» тигән поэмаһын хәтерләтеп ҡуя. Был шиғыр пейзаж лирикаһына оҡшап торһа ла, унда һүҙ пейзаж тураһында ғына бармай. Эйе, тәбиғәт күренештәре бик матур тасуирланған бында: иңдәренә аҡ томан ятҡан Ҡаратау урмандары; ҡаялы тауҙар; ашкынып аҡҡан Йүрүҙән йылғаһы; батырҙар эҙен һаҡлаған һуҡмаҡтар… Бөтә ошо хозурлыҡҡа һиҙмәҫтән генә тарих ептәре килеп ялғана:

Әле генә үткән кеүек
Әбей батша заманы.
Шул саҡтарҙан килгән кеүек
Бәндәләрҙең яманы.

Сөнки:

Бохайырҙар, Тәфтиләүҙәр

Әле лә бар арала…

Оптимистик рухта башланып киткән шиғыр («“Салауаттар рухы бында!” – тиеүҙәре хаҡ булған») шундай уҡ тонда тамамлана:

Батыр даны киләсәккә
Оран булып тарала.
Уның рухын бығауларға
Был донъяла юҡ йоҙаҡ!

Пейзаж лирикаһы, тигәндән, З. Вәлит шиғырҙарында тәбиғәт күренештәре йыш ҡына осрай. Шулар араһынан, саф пейзаж лирикаһына дәғүә итмәһәләр ҙә, икәүһен – «Апрель» һәм «Кәрәҙле минуттар» тигәндәрен – айырып күрһәтер инем. Улар икеһе лә метафораларға бай, йүгерек тел менән яҙылғандар, шуға күрә еңел уҡылалар. «Апрель»дең шаян холоҡло лирик геройы йылдың яҙғы миҙгеленә ғашик. Бәләкәй генә ошо шиғырҙа тәбиғәттең бәләкәй генә бер күренеше, тере кеше образы һымаҡ, йәнле итеп һүрәтләнгән. Ул – лирик герой менән бер бөтөн. Тәбиғәт тә, лирик герой ҙа бер-береһен һүҙһеҙ аңлайҙар, әйтерһең дә, улар үҙҙәре өсөн генә ниндәйҙер уртаҡ тел тапҡандар: лирик герой Апрелгә ҡул болғай, ә Апрель иһә «Көлә шаян ҡыҙ кеүек». Шулай итеп, ай исеме, автор уны баш хәреф менән яҙмаһа ла, кеше шәйеһә инеп, яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп китә. Был шиғырҙы мәктәп программаһына индергәндә лә яҙык булмаҫ ине.

«Кәрәҙле минуттар»ҙың да лирик геройы тәбиғәт менән хозурлана. Тик был юлы йәй уртаһы һайлап алынған. Шиғыр сағыу эпитеттарҙан, сағыштырыуҙарҙан үрелгән. Ләкин ул барыбер ҙә саф пейзаж лирикаһы түгел. Авторҙың иғтибар үҙәгендә – кеше. Тәбиғәт ҡосағына сумған, уның сихрилеген аңлай һәм тоя белгән кеше. Тик «Был сәхрәне күрмәй ҡалдың, һинең юҡлыҡ бигерәк йәл» тигән юлдарҙың кемгә төбәлгәнлеге генә аңлашылып бөтмәй. Шиғыр «Кәрәҙле минуттар» тип аталһа ла, унда һүҙ күңел кәрәҙҙәре хаҡында бара. Ишетер ҡолаҡҡа был – яңыраҡ метафора. Тора-бара, бәлки, уға ла күнегелер.

Әйткәндәй, һүҙҙәре теүәл яңғырап, матур рифмалашһалар ҙа, мәғәнәләре бигүк аңлашылып бөтмәгән, йә иһә ике яҡлы мәғәнә аңалтҡан юлдар «Мәңгелек сер»ҙә лә осраштыра. Был, бәлки, шиғырҙың ярым етди, ярым шаярыу теле менән яҙылыу бәләһелер. Ләкин шаярыуҙың да төбөндә етдилек ятырға тейештер бит. Юғиһә, XX быуат башындағы рус символистарынса килеп сыға. Улар ҙа бит тыштан ялтыраған шиғыр артынан ҡыуғандар. Әҫәрҙең йөкмәткеһен иһә, уның темаһын һәм идеяһын, һәр уҡыусы үҙенсә – нисек теләй, нисек аңлай, нисек булдыра ала – шулай ҡабул итергә тейеш, йәнәһе.

З. Вәлиттең «Китмә, һөйөү!»е лә «Ятҡа бирмәм», «Мәңгелек сер» тибындағы шиғыр: авторҙың нимә әйтергә теләгәнлеген йәһәт кенә тотоп алыуы ҡыйын. Бәлки, лирик геройҙың күҙе гүзәл затҡа төшкәндер ҙә, мөхәббәт утында янып, ғазап сигәлер, ә гүзәл зат быны күрмәйҙер ҙә, һиҙмәйҙер ҙә. Ә, бәлки, «һөйөү» һүҙе бында үҙенең абстракт (дөйөм, бер кемгә лә йүнәлтелмәгән) мәғәнәһендә генә ҡулланылғандыр. Әммә, нисек кенә булмаһын, шағир мөхәббәт тойғоһоноң ифрат нескә күренеш икәнлеген һәм уның һүҙ менән генә аңлатып бөтөрә алмаҫлыҡ эске энерияға эйә булғанлығын сағыу итеп күрһәтеүгә ирешкән.

Әлбиттә, әҙәбиәт өсөн, айырыуса шиғриәт өсөн, был әллә ни ҙур яңылыҡ түгел. Ләкин «Китмә, һөйөү!»ҙең авторы ошо мәңгелек темаға үҙенсәрәк килгән. Шағир ҡарашынса, мөхәббәт тойғоһо, әгәр ул саф та, ысын да икән, йөрәкте елкендергән елде лә, уны хатта көс етмәҫтәй эшкә егеүсене лә, хыялдың зәңгәр күген дә хәтерләтергә мөмкин. Дөйөм алғанда, З. Вәлиттең мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарына ыҫпайлыҡ, ихласлыҡ, был тойғоно тасуирлау өсөн һайлап алынған һүҙҙәрҙең эстетик камиллығы хас. Ә был бик мөһим, бигерәк тә – беҙҙең заманда. Сөнки иң изгеләрҙән, иң ҡәҙерлеләрҙән иҫәпләнгән һөйөү, мөхәббәт тойғоһо һуңғы егерме йылда бөтә ил күләмендә ижад ителегән сәнғәт әҫәрҙәренең күбеһендә ғәфү итмәҫлек боҙоп, түбәнәйтеп, тупаҫландырып күрһәтелә, хатта хайуандар донъяһына яҡынайтыла.

Зөфәр Вәлиттең быйыл донъя күргән дүрт шиғырына («Бер үҙгәрер донъяң…», «Мәңгелек түгел икән дә…», «Тамағымды ҡыҫтай яңғыҙлығым…», «Бәхетһеҙ йәшәү») айырым-айырым туҡталып китмәксемен.

«Бер үҙгәрер донъяң…»дың лирик геройы үҙенең уй-хистәре менән уртаҡлаша. Тик кем менән уртаҡлашалыр – уныһы билдәһеҙ. (Теләһә генә ниндәй шиғырҙа ла ошондай билдәһеҙлектәргә урын булмауы хәйерлерәк, әлбиттә). «Ә ҡасандыр булған донъябыҙҙы иҫкә

алып балҡыр йондоҙҙар» тигән юлдарға таянып, бер аҙ күрәҙәселек итергә генә ҡала. Һүҙ юҡ, шиғыр матур яҙылған. «Ҡасан да бер мине оноторһоң, янған ерҙә үҫмәй сәскәләр», «Беҙҙе түгел, үткәндәрен уйлап моңайырҙар, бәлки, моңһоҙҙар» шикеллерәк хәтерҙә ҡалырҙай әйтемдәр ҙә юҡ түгел бында. Ә бына «алтын бәпкә» мәҙәгерәк яңғырағандай. Һүҙ «ҡаҙанында» оҙайлыраҡ соҡонғанда, бәлки, уңышлыраҡ эпитет табылған булыр ине.

«Мәңгелек түгел икән дә…» – үтә лирик та, үтә фәһемле лә шиғыр. Өс кенә строфанан торһа ла, унда ҡошсоҡ образы аша тормоштоң кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәте тотоп алынған: тулып баштан ашҡан саҡтары булһа ла, бәхет барыбер ҙә мәңгелек түгел. «Яҙҙар кире ҡайтһа ла, ҡайтмаҫ илаһи мәлдәрем» (был юлдарҙың урындарын алыштырып килтергәнем өсөн авторҙан ғәфү үтенәм) иһә үҙе бер фәлсәфә – тормош ағышының йүнәлешен раҫлаусы фәлсәфә. Һәм уның менән килешмәй булмай.

Тәбиғәте буйынса «Тамағымды ҡыҫтай яңғыҙлығым…» да үтә лирик шиғыр. Лирик герой үҙенең эске донъяһын шар асҡан, күңелендәгеһен түҡмәй-сәсмәй укыусыға еткергән. Ул – яңғыҙ, ә яңғыҙлыҡ уның өсөн – яҙмыштың әсе төйөнө. Ул кемгәлер үпкә тота («Бер үҙгәрер донъяң…»дағы шикелле тағы бер билдәһеҙлек!), уға: «Их, һинең дә һалҡын күңеленде уятмаҫмы икән шул буран!» тип өндәшә, ләкин яуап юҡ. Шуға ла лирик герой үҙенең эске кисерештәрен: «Бер һауаны һула, ҡауыша алма!..» тигән үкенес-уфтаныу менән тамамларға мәжбүр.

«Бәхетһеҙ йәшәү» – башынан алып, ахырына тиклем лиризм менән һуғарылған тағы бер шиғыр. «Мәңгелек түгел икән дә…»ге кеүек, һүҙ бында ла бәхет тураһында бара. Әлбиттә, шиғырҙа: «Нәмә ул бәхет?» тигән темаға бәхәс ҡуптарылмай – лирик герой башлыса үҙе, үҙ яҙмышы хаҡында һөйләй. Ләкин уның һөйләгәне укыусыны ла уйландырмай ҡалмаясағына шик юҡ:

Бәхетте күргән бар ҙа ул,
Булмай уны туҡтатып.
Эләктерҙем, тигән саҡта
Юҡҡа сыға илатып.

Әллә ул мине ятһына,
Әллә үҙем бер мәшәү…
Ялкыта икән бәхетһеҙ
Гел аҡыл менән йәшәү.

Әле бында күҙ уңынан уҙғарылған егерме шиғырҙы бер епкә тезеп, уларға дөйөм ҡараш ташлаһаҡ, Зөфәр Вәлиттең лирик геройы инде йәш кеше түгел икәнлеге күҙгә салыныр. Әгәр «Ике донъя йортонда», «Ниңә?», «Атай йортонда», «Әсәй» тигән шиғырҙарын да шунда өҫтәһәк, был фекер оторо ла нығыныр.

«Ике донъя йортонда»ла дауаханала ятҡан лирик геройҙың уй-кисерештәре сағылдырылған. Ул – донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған, аҡты ҡаранан айырырға күптән өйрәнгән шәхес булып күҙ алдына баҫа. Холҡо менән баҫалҡы, һынсыл, барына ҡәнәғәт кешегә оҡшаған. Йәшәүгә өмөтөн өҙмәһә лә, үлемдең аяуһыҙ икәнлеген яҡшы аңлай («Көндөҙ алған яраны төнөн йоҡо дауалай. Үлем генә донъяла бер кемде лә аямай…»). Туранан-тура ярып һалмаһа ла, авторҙың тел төбөнән хатта дауаханала ла кешегә бер төрлө ҡараш хөкөм һөрмәгәнлеген шәйләргә мөмкин. «Донъя бит ул – ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа» тигән халыҡ әйтеме лә бик урынлы яңғырай был шиғырҙа. Ә шиғырҙың метафорик мәғәнәле атамаһы – үҙе бер табыш. Ысынлап та, әгәр уйлана башлаһаң, дауаханала кемдер теге донъяға юллана, ә кемдер быныһында ҡала.

«Ниңә?»нең лирик геройы менән автор араһындағы айырма юҡ хәлендә – улар бер бөтөнгә әйләнгән. Асылда һүҙ олоғая төшкән лирик геройҙың, шул иҫәптән, авторҙың да йәшлеге уҙған төйәктәрҙе һағынып иҫкә алыуы тураһында бара. Шиғырҙа лирик ағым өҫтөнлөк иткән һымаҡ тойолһа ла, ул ағым барыбер ҙә фекер төйнәлешенә алып килә: ни өсөн әҙәм балаһы йәше олоғайғас ҡына һағышлы тойғоларға бирелә башлай? Һорау яуапһыҙ ҡала, әлбиттә. Сөнки ул тойғоно һүҙ менән генә аңлатып биреүе мөмкин түгел.

«Атай йортонда» Назар Нәжмиҙең «Атай йорто»на тартым, ләкин күсермә түгел. Шиғыр йылы хистәр менән һуғарылған. Үҙенең тормош юлын, яҙмыш һуҡмаҡтарын күҙаллағанда, лирик герой атай йортоноң һәр саҡта ла иң ҡәҙерле төйәк, иң ышаныслы терәк булып ҡалғанлығына баҫым яһап әйтә. Шиғырҙың һуңғы строфаһы – лирик геройҙың атай йортона тоғролоҡ һаҡлауын, уға ғүмер буйы бурыслы булып ҡалыуын күрһәтеп тороусы асыҡ миҫал:

Бер саҡ әжәл тартып алһа
Мине донъя ҡулсаһынан,
Моңға төрөнөп осһа ине
Йәнем атай тупһаһынан…

«Әсәй» шиғырын «Атай йортонда»ның туранан-тура дауамы, тиһәк тә, хата булмаҫ. Айырма уларҙың күләмендә генә. Лирик геройҙың әсәһенә булған йылы тойғоларын автор матур шиғри юлдарға һалған. Тәү ҡарамаҡҡа, был әҫәрҙә лирик геройҙың шәхсән хистәре генә сағылыш тапҡан һымак:

Упҡындарға осҡан саҡтарымды
Күптәр белә.
Әсәй генә тартып алды кеүек,
Әсәй генә...
……
Ҡайғым таратмайым, үҙем беләм,
Үҙем генә.
Мең саҡрымдан шуны һиҙеп тора –
Әсәй генә…

Миңә ҡалһа, шәхсән хистәрҙе сағылдырған был шиғыр дөйөмләштерелгән әсә образын тыуҙырыуға ла дәғүә итә. Әсәләр тураһында яҙылған, уларға бағышланған шиғырҙар беҙҙә етерлек. (Әсә тураһында шиғыр яҙмаған шағирҙың ҡулы ҡорор, күңеле һурығыр!). Шулар араһында З. Вәлиттең «Әсәй»е лә үҙенең хаҡлы урынын алыр, тип ышанғы килә.

Ошо урында мине күптән борсоп килгән бер фекерем менән уртаҡлашмаҡсымын. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ – шиғриәт иле. Шағирҙарыбыҙ ҙа күп, тәбиғи – шиғыҙар ҙа етәрлек. Уларҙы ентекләберәк күҙәтеп барһаң, оҡшашлыҡтар ҙа осрашторып тора. Был да – тәбиғи хәл. Сөнки бер-беребеҙҙе уҡыйбыҙ, шатланабыҙ, фәһем алабыҙ, аратирә көнләшеп тә ҡуябыҙ. Әгәр теге йәки был шиғырыңа ойотҡоно теге йәки был шағирҙың теге йәки был шиғыры һалған икән, ниңә шул шиғырҙан берәй юлды эпиграф итеп алмаҫҡа? Ошо мәсьәлә Назар Нәжмиҙе лә бик борсой ине. Ә ул иһә, бөйөк шағир, Пушкиндан да, Лермонтовтан да, Феттан да, Блоктан да, Маяковскийҙан да, Туҡайҙан да, Ғафуриҙан да һәм башҡаларҙан, һәм башҡаларҙан эпиграфтар алырға һис тә оялманы. Ҡайһы берҙәренә хатта ҡат-ҡат мөрәжәғәт итте.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо хәл әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә лә осраштыра. Һин әйткән фекерҙе башҡа һүҙҙәр менән ҡабатлайҙар, ә һылтанма юҡ. Ниңә шулай? Ниңә бер-беребҙәғә һылтанма яһарға ҡурҡабыҙ? Ҡурҡыумы был, әллә фыртлыҡмы?

Мәҡәләмде «Тыуған илем» тигән шиғырға ҡыҫҡаса күҙәтеү менән тамамламаҡсымын. Тыуған илен, тыуған ерен маҡтап яҙмаған шағир юҡтыр ул. Ләкин Зөфәр Вәлит, минеңсә, бер кемде лә ҡабатламай. Шиғыр үҙенең ыҡсымлығы менән иғтибарҙы тартып тора. Тимәк, шағир был осраҡта ла үҙ стиленә тоғро ҡалған. Шиғырҙың елеге түбәндәге строфаларҙалыр:

Ер йөҙөндә күпме дәүләттәрҙең
Һүҙе менән эше тап килмәй!
Башҡортостанымдың йөрәгенән
Халҡым ышанысы төңөлмәй.

Ошо түгелме ни бәхет башы?
Башы булғас, булыр ҡалғаны!
Ауырлыҡ та булыр, шатлығы ла,
Тик булмаһын ине ялғаны.

Ҡайһы бер юлдары менән одаға оҡшап торһа ла, был, әлбиттә, ода ла, һуҡыр табыныу ҙа түгел – бары тик донъяға объектив ҡараш, бөгөнгөбөҙ һәм киләсәгебеҙ хаҡында уйланыу. Көрһөнөү ҙә, борсолоу ҙа, эстән яныу ҙа һиҙелә бында. Эстән янған ҡояш һымаҡ. Яңһын әйҙә шағир йөрәге! Ялғанды – фашлаһын, изгелекте – маҡтаһын.

2007, июль

«ЕБӘКТӘН ДӘ НЕСКӘ КҮҢЕЛЕМ ҡЫЛЫ…»

Уҙған быуаттың етмешенсе йылдарынан бирле әҙәбиәтебеҙгә тоғро хеҙмәт итеп килһә лә, Мөхәммәт Закиров күҙеңә кереп барған шағирҙаран түгел, шикелле. «Быуаттан быуатҡа күскәндә» тигән мәҡәләмдә мин уны «шау-шыуһыҙ, артыҡ ҙур дәрәжәлрәргә өмөтләнмәйенсә, тыныс ҡына ижад итеп ятҡан шағирҙар» иҫәбәнә индрегәйнем. Ошонан һуң тағы биш йыл үтеп китте, ләкин Мөхәммәт тураһында яҙып баҫтырылған әҙәби тәнҡит мәҡәләһе күҙгә салынманы. Әгәр яңылышһам, бик шат булыр инем.

М. Закиров – дүрт китап авторы. Шиғырҙар китабы, әлбиттә. Уларҙың тәүгеһе 1985 йылда сыҡҡан, һуңғыһы – 2005 йылда. Егерме йылға – дүрт китап. Аҙҙырмы был, күптерме, әллә тамансаҙырмы – әйтеүе ҡыйын. Әгәр аҙ булһа, бында, бәлки, автор ғына ғәйепле түгелдер. «Китаптарым» тигән бер шиғырында ул, бәлки, юҡҡа ғына былай тип яҙмағындыр:

Әллә артыҡ иртә тыуҙыҡ,
Әллә артыҡ һуңланыҡ.
Ниндәй ҡаза булды һуң был –
Булмай китап сығарып
.....
Юҡ кеүек талантһыҙҙар ҙа,
Юҡ кеүек таланттар ҙа.
Кемдең кемлегенә ҡарап –
Бер түгел талаптар ҙа.

Һуңлабыраҡ булһа ла яҙылған был мәҡәләлә шағирҙың дүрт китабына байҡау яһау күҙ уңында тотолмай, әлбиттә. Артыҡ ҙурға ымһынмайынса, уның фәҡәт яңы быуат башында (йәғни ете йыл арауығында) «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән шиғырҙарына ғына ҡараш ташламаҡсымын. Ошо дәүер эсендә иһә әҙәбиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ өсөн янып-көйөп йәшәгән берҙән-бер журналда Мөхәммәт Закиров биш тапҡыр «ҡунаҡта» булды һәм унда үҙенең 59 шиғырын баҫтырҙы. Улар араһында дүрт юллыҡтар ҙа байтаҡ ҡына. Ләкин, дүрт юллыҡтар ғына булһа ла, һәр ҡайһыһы иғтибарға

лайыҡ. Хәйер, М. Закировтың башҡа шиғырҙары ла күләмдәре яғынан әллә ни ҙур түгел. Уның стиленә тап килмәгән бер генә шиғыр күҙгә салынды. Ул «Һағыныпмы иҫкә алдым?» тип атала. Ҡырҡ һигеҙ юлдан тора. Күрәһең, тыуған йортон, тыуған өйөн һәм шунда үткән бала сағын иҫенә төшөргәндә, шағир үҙен биләп алған уй-хистәрен ыҡсымыраҡ строфаларға һыйҙыра алмағандыр инде. Ә шулай ҙа ҡышҡы ауыл тормошо хәтерҙә ҡалырлыҡ деталдәр аша сағыу буяуҙар менән тасуирланған был шиғырҙа. Айырыуса әсә портреты йәнле итеп һүрәтләнгән унда:

Емелдәшкән йәп-йәш ҡарҙы
Нурға күмгән ай нурында,
Әсәй ҡарҙан ҡалҡып ятҡан
Тар һуҡмаҡлы һыу юлында.
.....
Боҙ сайҡала – силәгендә,
Әсәй үҙе аҡ бәҫ кенә.
Ишек асылыуға алдан
Түргә уҙып һалҡын инә.

Тыуған–үҫкән яҡтарын, балалыҡ йылдарын шағир йыш иҫкә ала. «Әллә ғүмер, әллә күңел?..», «Пәйғәмбәрҙәр», «Өндәр менән төштәр араһында», «Киткәнемә үтһен тотош ғүмер...», «Асфальтта япраҡ ярам», «Йыраҡ бит ул балалыҡтан...», «Гиҙәм тыуған яҡтарымдың...», «Һағыҙаҡ», «Ҡуйыра тағы эңерҙәр...», «Һыйлы көн – һыйыр...» тигән шиғырҙар быға асыҡ миҫал. Уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китмәксемен.

Дүртәр юллы өс строфанан торған «Әллә ғүмер, әллә күңел?..» тигәнен бында тулы килеш күсерһәк, яҙыҡ булмаҫ, тимен. Шиғыр шундай матур, рифмалар шундай теүәл, унда мин килешһеҙ бер генә һүҙ ҙә тапманым. Лирик герой тыуған яҡтарына, бәләкәйҙән таныш иген ҡырҙарына һаҡланған һөйөү хистәре менән уртаҡлаша. Уның һүҙҙәрендә бер ниндәй ҙә яһалмалыҡ та, ялғанлыҡ та һиҙелмәй:

Һағындым тыуған яҡтарҙы,
Һағындым иген ҡырын.
Яланаяҡ шул ҡырҙарҙа
Башланды ғүмер юлым.

Нимә кәрәк мин – малайға,
Ҡырҙарым булһа – еткән.
Белдем аҙаҡ, тыуған – үҫкән
Ҡырҙарһыҙ ҡыйын икән.
Ҡыйын саҡтарҙа йыуаныс
Булып тыуған яҡ ҡала.
Әллә ғүмер, әллә күңел
Шул ҡырҙарҙа башлана.

Һигеҙ генә юлдан торған «Ҡуйыра тағы эңерҙәр...» тигән шиғыр ҙа йөрәккә йәтеш. Унда тыуған яғын һағынып ҡайтҡан лирик геройҙың күңел донъяһы, кәйеф-сафаһы бик оҫта тотоп алынған: «Бында ҡайғыларым яҡты, шатлыҡтарым — яманһыу», тип бүлешә ул үҙенең хәле менән.

М. Закировтың лирик геройы инде күптән ҡала кешеһе булып китһә лә, ул йыш ҡына үҙен атаһы-әсәһе йортонда, ауылдаштары араһында, бала саҡтан хәтеренә һеңеп ҡалған тәбиғәт ҡосағында итеп тоя. «Өндәр менән төштәр араһында» һәм «Киткәнемә үтһен тотош ғүмер...» тигән шиғырҙарҙа ошо тойғо айырыуса ныҡ һиҙелә. Дөрөҫ, уларға төрөлгән фекер тәүге уҡыуҙа уҡ бик сиселеп тә бармаған һымаҡ. Әммә:

Киткәнемә үтһен тотош ғүмер –
Тауышымдан таныр ауылдаштар.
– Ә-ә, һинме был! – тиеп ҡайһы йорт та
Ете төн уртаһы ишек асыр, –

тигән юлдар аша шағирҙың да, уның лирик геройының да тыуған яҡтарында көтөп алынған үҙ кеше икәнлектәрен дә шәйләмәй мөмкин түгел.

Үҙ сиратында шағир ҙа, уның лирик геройы ла яҡташтарына иғтибарһыҙ түгелдәр. Ошо йәһәттән быуындар күсәгилешлеген сағылдырған «Пәйғәмбәрҙәр» тигән шиғыр отошло күренә. Был шиғырҙа автор ауыл ҡарттарын пәйғәмбәрҙәргә тиңләй, уларҙың «сабыр, ипле, күркәм» сифаттарын һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм, яҡты хәтирәләре алдында баш эйеп, бер аҙ юҡһыныу, үкенеү тойғоҙарын да белдереп ҡуя:

Һеҙме әйтмәнегеҙ,
Беҙме аңламаныҡ.
Юғалдығыҙ, ғүйә,
Эңерҙәрҙә ҡалып.

Әгәр М. Закировтың тыуған яҡ моңдары йоғонтоһо аҫтында ижад иткән шиғырҙары тотош идиллиянан ғына тора икән, тип уйлаһаҡ, дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине: шағир унда барған күңелһеҙ үҙгәрештәрҙә һис тә ҡыуанмай. «Гиҙәм тыуған яҡтарымдың...» тигән шиғырында ул, мәҫәлән, тәбиғәт күренештәре һәм бала саҡ хәтирәләре аша, бөгөнгө тормош ҡанундарына үҙенең мөнәсәбәтен бына нисек белдерҙән:

Аулыма нимә булған:
Аттар ҙа юҡ, ҡарттар ҙа.
Ҡайта, ҡайта күңел һаман
Яланаяҡ саҡтарға.
.....
Теләһәң дә, был тормоштоң
Булмаҫ серен аңларға.
Эңер ҡуйыра кистәрҙә,
Ысыҡ төшкән таңдарҙа.

«Һыйлы көн – һыйыр...» исемле шиғырҙа иһә, ауыл тормошонан тотоп алынған бәләкәй генә бер күренеш аша, беҙ йәшәгән дәүергә хас хәҡиҡәт оторо ла көслөрәк итеп асып һалынған:

Һыйлы көн – һыйыр. Үҙ көйөн
Һуҙа сепарат яйлап.
Айыртҡан һөтө – силәклән,
Мыҫҡаллап ҡына – ҡаймаҡ.

Был тормошта шул ҡаймаҡтан
Кемдәргәлер май төшә.
Айыртылған һөттө беҙҙәй
Аңһыз быҙауҙар эсә.

Ошонда Мөхәммәт Закировтың гражданлыҡ лирикаһына күсергә лә ваҡыт етте һымаҡ. Шағирҙың гражданлыҡ позицияһы иһә, тормошҡа ҡарашы уратып, солғатылмаған – ул ап-асыҡ итеп,

йәшермәй-батырмай ярып һалынған. Ундай әҫәрҙәр Мөхәммәттең шиғриәт багажында ярайһы ғына йыш осрай.

Һүҙҙе быйыл донъя күргән «Китмә, ямғырҙарҙа сыланырһың» тигән өр-яңы шиғырҙан башлаһаҡ, хәйерлерәк булыр төҫлө. (Йәйәләр эсендә шуға ла иғтибар итәйек: башҡорт шағиры М. Закиров билдәле рус шағиры С. Есениндың ижад мираҫына битараф түгелдер, ахырыһы, сөнки әлеге мәҡәләлә һүҙ барған арауыҡта ғына ла уға ике тапҡыр мөрәжәғәт итә. Был юлы ул үҙ шиғырына рус шағирының «Ни жены, ни друга» тигән һүҙҙәрен эпиграф итеп алған). Әйтергә теләгән фекерен уҡыусыға түкмәй-сәсмәй еткереү өсөн автор бик уңайлы форма уйлап тапҡан: ямғырлы көндө, бер ҡайҙа ла бараһы булмауҙан файҙаланып, ул Есенинды уҡып ултыра һәм, уҡыуҙан туҡтап торған мәлдә, уның менән әңгәмә ҡороп ала. Шул әңгәмә барышында автор байтаҡ ҡына көнүҙәк мәсьәләләргә ҡағылып өлгөрә:

... Дуҫым да юҡ
Һәм юҡ ҡатын да.
Күҙаллаған яҡты киләсәгем
Һаман әле томан артында.

Барыһы ла, ахыры, ҡабатлана:
Бөгөнгө ул – мираҫ үткәндән.
Ғәйепһеҙгә шуғамы ҡан аға? –
Мавзолейға сират бөтмәгән.
Сергей!
Йылдар үҙенекен итә,
Йәшәлгәнсә, беләм, йәшәмәм.
Ни булаһын эт тә белмәй хәҙер,
Көтә нимә: ожмах, йәһәннәм?
.....
Илде баҫып бара, һин әйткәнсә:
«Туймаҫ бизнес-тиреҫ ҡорттары».
Улар үрсей,
Йота бар нәмәне,
Аҡса булһын, аҡса ни бары.

Шуныһы мөһим, М. Закиров өсөн был «тиреҫ ҡорттары» – юҡ, ә Есенин – бар: ул әле лә беҙҙең арала. Шиғырҙың һуңғы ике юлы айырыуса көслө яңғырай:

Заманынан башҡа шағир булмай,
Шағирынан башҡа заман юҡ.

Йә булмаһа, бик сетеркле теманы күтәргән «Үҙ халҡынан» тигән шиғырға күҙ һалайыҡ. Чечнялағы ваҡиғаларға арналған был шиғыр йөкмәткеһе йәһәтенән дә, эшләнеше менән дә ғәйәт көслө әҫәр. «Ни хаҡына һиндә ҡан аға?» тигән һорау ҡуя автор, ләкин яуап таба алмай. Һорау артынан һорау тыуа: «Үҙе тотош халыҡ әүерелгәнме ни бандаға?..», «Бандит ул юл баҫа, бандит талай, тыуған ерен бандит якламай», «Гүзәл чечен илен, әйтерһең дә, үҙ халкынан азат итәләр». Уйландырырлыҡ һорауҙар...

Темаһы һәм яңғырашы буйынса «Үҙ халҡынан»ға «Чечнянан тутыя табутта ҡайткан егет ауазы» бик яҡын тора, төрлө йылдарҙа ижад ителгән булһалар ҙа, хатта уның дауамы кеүек ҡабул ителә. Йөкмәткеһе менән ул тетрәндергес әҫәр. Ярым һорау, ярым өндәш фразаларҙан торған һәм ярым диалог формаһында яҙылған был шиғыр психологик күҙәтеүҙәргә бай. Чечнянан табутта ҡайтҡан егет, телгә килеп, уны һуңғы юлға оҙатыусыларға бына ниндәй үҙәк өҙгөс һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә:

Мин бит ҡайттым. Ниңә тын ҡалдығыҙ?
Янығыҙға ҡайтҡас – юғалдығыҙ.
Тауышығыҙ ниңә ишетелмәй?
Йырламай ҙа бер кем? Бер кем көлмәй...
Ауыр тынлыҡ. Мәйет бармы өйҙә?
Бейегеҙ, аһ, шашып. Аһ, асығыҙ күңел:
Ун һигеҙҙә өҙөлгән йәш ғүмер
Күҙ йәшенә генә лайыҡмы ни?

Шиғыр аҙағына тиклем ошо тонда дауам итә. Телгә килгән мәйет ауызынан Чечня һуғышын ҡабыҙыусылар адресына тәнҡит һүҙҙәре лә яңғырай был әҫәрҙә. Үзенең «һуңғы туйында» ҡитғаларҙы яңғыратырҙай хәсрәт йыры һәм тәхеттәрҙе тетрәтерҙәй нәфрәт йыры йырларға ла саҡыра ул табут янындағыларҙы. Шиғырҙың һуңғы юлдарын тыныс ҡына уҡыу мөмкин түгел:

Атай, әсәй! Йортоғоҙға төшөр килен
Хәҙер инде булыр насип бүтәндәргә...

Хушлашмайым. Мин шул башҡа
үлсәмдәрҙә.
Эй үкенес, ғүмерем, ҡалдың йәшәлмәйсә,
Һүндегеҙ ҙә, йәшендәрем – йәшнәмәйсә.

Күҙҙең яуын алып торған яхталарҙа йөҙөп, көндәрен көньяҡ ҡояшының эссе нурҙары аҫтында, төндәрен ҡиммәтле ресторандарҙа уҙғарған заттар өсөн был йән өҙгөс һүҙҙәрҙең бары ни ҙә, юғы ни. Ә бына Афған, Чечня афәттәрендә ғәзиз улдарын юғалтҡан ата-әсәләр уларҙы ай-һай күҙ йәшһеҙ генә укый алырҙар микән?

«Үҙ халҡынан» һәм «Чечнянан тутыя табутта ҡайтҡан егет ауазы» тигән шиғырҙарҙа ҡуйылған һорауҙарға М. Закиров үҙенең «Тормош сәхнәһендә» исемле шиғырында күпмелер яуап та биргәндәй. Был шиғырында ул бөтә кешелек донъяһына, унда хөкөм һөргән хәл-ваҡиғаларға философтарса киң ҡараш ташлаған. Уның фекеренсә, Ер йөҙөндәге тормош театр сәхнәһендә барған тамаша менән бер. Айырма тик шунда: тормош сәхнәһендә пәрҙә лә, шаршау ҙа юҡ, шуға күрә уларҙы асырға ла – ябырға ла, күтәрергә лә – төшөрөргә лә кәрәкмәй, ул һәр ваҡыт асыҡ, бөтә яуызлыҡтар, яманлыҡтар, ҡан ҡойоштар, алдаҡ-ялдаҡтар күҙ алдында бара: дәүләт ҡоролоштары алмашына, «ҡара урмандағы кеүек, дәүерҙәрҙә илдәр аҙаша», «мәңгелек һәм бер мәл араһында» хатта «емерелә империялар». Ләкин замандар, ҡоролоштар алышынып торһа ла, уларҙың төп асылы үҙгәрешһеҙ ҡала:

Төшмәй пәрҙә. Бары алышына
Ҡараңғылыҡ менән яҡтылыҡ.
Алышына йөҙҙәр. Ҡояш һәм Ай шул уҡ,
Мең йыл элек йөҙгән кеүек, ана,
Баш осонда йөҙә аҡ болот.

Барыһы ҡабатлана. Әҙәми зат
Ирешәме хыял-бәхеткә?
Элеккесә, ҡорбандары аша
Дәғүәселәр атлай тәхеткә.

«Тормош сәхнәһәндә»лә һүрәтләнгән күренештәр «Стена» тиғән шиғырҙа тағы ла асығырак төҫ ала. Йөкмәткеһе менән был шиғыр сатираға оҡшап торһа ла, ул һис тә сатира түгел. Шағир «затлы каби-

неттар тынлығында» ултырған хәҙерге заман чиновниктары менән ябай халыҡ араһындағы күҙгә күренмәҫ, аңға һыймаҫ ҡаршылыҡтың символик образын тыуҙырған һәм уны стена тип атаған:

Ишеттермәй уға был стена
Йөрәк ярып сыҡҡан «аһ» тарҙы,
Тал сыбығы итә имәндәрҙе,
Бахыр яһай батыр заттарҙы.

... Кубаһымы ҡара дауыл булып,
Туфан булып әллә ҡалҡаһы?!
Күҙгә күренмәгән стенаны,
Стенаны –
Нисек ватаһы?

Лирик геройҙың үҙен сорнап алған ысынбарлыҡ менән мөғәмәләһе «Йырлатты ла, илатты ла ...» тигән шиғырҙа ла ярайһы ғына асыҡ сағылған. Әҫәрҙән аңлашылыуынса, тормош уға гел генә яҡты йөҙ күрһәтеп тормаған: йырлатҡан да, илатҡан да, көлдөргән дә, бөлдөргән дә. Шуға ла ул: «Ахырыһы, үҙе мине яратмай яраттырҙы», тип, сисеп һалырға мәжбүр. Ләкин, ниндәй генә һынауҙар һәм ауырлыҡтар аша үтергә тура килһә лә, лирик герой өлөшөнә төшкән көмөшөнән баш тартмай, киләсәккә өмөтөн өҙмәй:

Үҙемдеке, шуға хәләл
Юғалтыу, табыштарым.
Шатлыҡтарым булыр әле,
Булғанда һағыштарым.

Ә бына «Ҡалам бит йыш тойғоларҙың...» тигән шиғырҙа үрҙәге мотив, үкенесҡә күрә, башҡасараҡ тон алған. Был шиғырҙың лирик геройы бик ауыр, бик күңелһеҙ хистәр кисерә: «Йәшәүҙең дә мәғәнәһе юҡ, килмәй бик үләһем дә», ти ул. Лирик герой артында автор үҙе торғанлығы шик тыуҙырмай:

Алтынсы тиҫтәм ваҡлана –
Уҙылған юлдар урау,
Алдан китмәй һаман: «Нисек
Йәшәргә?» – тигән һорау.

Быйыл донъя күргән «Һорағыҙ эштәрҙе...», «Тотолмаҫһың, бәлки. Тиҡ шулай ҙа...», «Яҙғаны минеке булыр..» тигән береһенән – береһе ҡыҫҡа шиғырҙарҙа ла лирик геройҙың эске халәте, күңел донъяһы, үҙебеҙ йәшәгән заманға мөнәсәбәте асып һалынған. «Тотолмаҫһың, бәлки. Тик шулай ҙа...» тигән дүрт юллыҡта автор әхлаҡ мәсьәләһенә ҡағыла: бәндәне урлашмаҫҡа өндәй, сөнки күпме генә байлыҡ йыйһаң да, ул бырыбер бында ҡала – үҙең менән теге донъяға алып китәлмәйһең. Яңғырашы һәм фекер йүнәлеше буйынса был шиғырға «Яҙғаны минеке булыр...» ҙа аһәңдәш. Лирик геройҙың намыҫлы, ғәҙел, нәпсеһен аҙҙырмаған кеше икәнлеге күренеп тора: «Яҙғаны минеке булыр – дауламам яҙмағанды», ти ул. Ләкин, тыштан тыныс күренһә лә, күңеле урынында түгел уның, шуға ла ул үҙ-үҙенә:

Береһе лә түгел мәңге:
Шатлыҡ та, ҡайғы ла.
...Ике донъяны бар тиҙәр,
Мин әле ҡайһыһында? –

тигән һорау ҡуйырға мәжбүр.

Алтынсы тиҫтәм ваҡлана, тигәндән, яңы быуатты Мөхәммәт Закиров үҙенең иллеһен тултырып ҡаршыланы. Шуға микән, һуңғы йылдарҙа ул шиғриәт, шағир яҙмышы хаҡында күберәк уйлана башланы. Үрҙә «Китаптарым», «Китмә, ямғырҙарҙа сыланырһың» тигән шиғырҙары телгә алынғайны инде. Уларға «Алда – емерәһе быуаларым...», «Ергә баҫтым...», «Нисек тыуһам, шул көйөмөн», «Ҡызмағыҙ һеҙ шағир талантына», «Ҡайғының еле тейһә лә...», «Һыйҙырмай икән», «Салт ҡояш артында...», «Иҫемдә юҡ», «Ап-аҡ дауыл иңдәренә төшкән», «Сергей Есенинға», «Болот болотҡа ҡушыла...» тигәндәрҙе өҫтәргә мөмкин. Был шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәренә айырым-айырым туҡталырҙан алда, шуны киҫәтеү урынлы булыр: уларҙың бөтәһенә лә тиерлек тәрән лиризм хас, күп осраҡта лирик геройҙы авторҙың үҙенән айырып ҡарауы ла ситен булып ҡуя. Шул уҡ ваҡытта, лиризм менән һуғарылған хәлдә лә, өҫтә һанап кителгән шиғырҙарҙың байтағынан гражданлыҡ тойғоһо аңҡып тора.

Бына быуат башында донъя күргән «Ҡызмағыҙ һеҙ шағир талантына» тигән шиғыр. Күләме яғынан ул бәлкәй түгел – ошо яғы менән М.Закиров стиленә бик тап килеп тә бөтмәй. Әммә йөкмәткеһе йәһәтенән күптәрҙе битараф ҡалдырмаҫ. Автор шағирҙың һәм шиғриәттең иланһи

көскә эйә булыуын һыҙыҡ өстөнә ала, уларҙың иңенә төшкән ғәйәт ҙур бурыс һәм яуаплылыҡ хаҡында уйлана. Донъяның ҡайһы ғына тарафында йәшәмәһен, ҡайһы илдең, ҡайһы халыҡтың, кайһы замандың вәкиле булмаһын, шағир һәр ваҡыт шағир булып ҡала, тигән идеяны алға һөрә ул. Уның ҡарашынса, шиғриәт «тылсымында – йәшәү менән үлем араһы, мәңгелектәр һыя ул араға – үлемһеҙлек менән бөйөклөк». Әҫәрҙең төп темаһы тәүге строфала төҫмөрләнә:

Ҡызыҡмағыҙ һеҙ шағир талантына:
Артыҡ ҡиммәт тора ул талант.
Ерҙә уны үлсәр үлсәүҙәр юҡ,
Бөтөп булмай уны баһалап.
Артыҡ ҡиммәт тора ул талант...

Артабанғы алты строфала автор, шағир тормошон һәм яҙмышын һәр яҡлап асыҡлап һәм һүрәтләп, бындай нөҙөмтәгә килә: «Һирәктәре менә пьедесталға, меңәрҙәре эҙһеҙ юғала».

М. Закировтың шиғриәт һәм шағир яҙмышы темаһына былай саманан тыш дөйөмләштереп түгел, ә шәхсән пландараҡ яҙылған шиғырҙары ла етерлек. Шулар араһында яңғыраштары буйынса ла, төҙөлөштәре менән дә иң күркәмдәре – «Алда – емерәһе быуаларым...» һәм «Ергә баҫтым...» тигәндәре. Улар икеһә лә дүртәр юллы икешәр строфанан тора. Тәүгеһендә автор шатлығы-ғазабы бергә ҡушылып сыҡҡан тауыш менән: «Әй, шиғриәт, ҡәтғи һинең талап...», тип оран һалһа, икенсеһендә иһә, тәбиғәттең кескенә бер күренешен кәүҙәләндереү аша, шағир илленсе яҙына аяҡ баҫыуын белгертә.

«Иҫемдә юҡ» шиғыры ла авторҙың ифрат шәхсән уй-тойғоларын сағылдырған әҫәр. Шиғырҙың тәүге строфаһы буйынса, лирик герой менән авторҙың бер бөтөн булыуҙарын шәйләмәй мөмкин түгел:

Ошо сиҡһеҙ тормош океанында
Үҙ-үҙеңде ҡара иҫбатлап.

Ярты быуат йәшәп, әйтерһең дә,
Донъяға мин баҫам тәүге ҡат.

Артабанғы юлдарҙа лирик герой, артта ҡалған ғүмеренә күҙ ташлап, уның бик тиҙ үтеп китеүенә көрһөнә: «Иҫемдә юҡ, ҡайһы юл

сатында йәшлегемдән китеп аҙаштым», ти ул. Шуныһы мөһим, ҡайһы ғына юл сатында «аҙашмаһындар», лирик герой ҙа, автор ҙа донъяға айыҡ аҡыл, асыҡ күҙ менән ҡарайҙар:

Юғиһә бит үҙ иңемдә татып
Белдем яҡшы, белдем яманды.
Күҙем менән күрҙем хыянатты,
Ҡулым менән тоттом ялғанды.

Шулай итеп, ун ике генә юлдан торған шиғырҙа ла автор тәрән дә, төплө лә фекер әйтеүгә ирешкән.

«Нисек тыуһам, шул көйөмөн» исемле шиғырҙа ла авторҙың шәхсән уй-фекерҙәре өҫтөнлөк итә. Иллегә етеп тә, йүнле-башлы бер ни ҙә ҡыралмағанлығына үкенгән дә, үкенмәгән дә һымаҡ ул:

Нисек тыуһам, шул көйөмөн,
Илле йәшемә етеп.
Тимәк, минең ғүмер алда –
Китмәгән әле үтеп.

Гүйә, әле йәшәлмәген
Йәшәләһе йылдарым.
Гүйә, әле яҙылмаған
Яҙылаһы юлдарым.

Шиғыр шаярыу формаһындараҡ яҙылған булһа ла, уның төбөндә авторҙың үҙенә генә бәйле тормош хәҡиҡәте яталыр.

Ошо мотив «Ҡайғының еле тейһә лә...» тигән шиғырға ла күскән. Яҙмыш тарафынан ҡағылған, һуғылған лирик герой, «аҡылдан яҙыр урынға», шиғырҙар яҙып ята. Тик шиғырҙың аҙаҡҡы юлдары ғына яманһыуыраҡ яңғырай:

Уйҙар – ҡырмыҫҡа иләүе.
Күренмәй бер яҡтылыҡ.

Ә бына «Һыйҙырмай икән» тигән шиғырҙа шаярыу ҙа, ҡыланыу ҙа юҡ: тик етдилек һәм кире ҡаҡҡыһыҙ дөрөҫлөк кенә бар. Ун ике генә юлдан торған иҫ киткес матур шиғыр. Унда ғорур тәбиғәтле ли-

рик геройҙың эске халәте бөтә тәрәнлегендә асып һалынған. Туранан-тура әйтелмәһә лә, бында ла һүҙҙең шағир яҙмышы хаҡында барғанлығына төшөнөү ауыр түгел:

Арбаһына ултырғандың
Йырын йырларға кәрәк.
Үҙ йырымды йырланым мин,
«Ғәйеплемен» бигерәк.

Ярай әле ошонда уҡ «Салт ҡояш артында...» тигән шиғырға тап булабыҙ. Юғиһә, йөрәктә күңелһеҙ эҙ ҡалыр ине. Был шиғырҙың да лирик геройы уның авторы менән бер бөтөн, тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Үрҙә тикшерелгән ҡайһы бер шиғырҙарҙағы һымаҡ, бында ла тәбиғәттең бәләкәй генә бер күренеше тотоп алынған. Шул фонда – шағир фигураһы. Ул үҙ-үҙенән ҡәнәғәт:

Шиғыр яҙам. Быуҙар бөркөп,
Сәйҙәрем сыҡты ҡайнап.
Донъям тулы. Был миҙгелдә
Кем бар минән байыраҡ.

Пейзаж да матур, шиғыр ҙа пейзаждан кәм түгел был шиғырҙа: «Күк йөҙө алтынлана. Үләндәр йәш, елдәр еләҫ, усаҡта ут талпына».

Әйтергә кәрәк, тәбиғәтте һәм тәбиғәт күренештәрен шағир, ысынлап та, оҫта һүрәтләй. Улар лирик геройҙың да, автоҙың да уй-хистәрен, эске кисерештәрен тулырак һәм тәрәнерәк асырға булышлыҡ итә. Шиғриәт өсөн был фекер яңылыҡ түгел, әлбиттә. Һүҙ бында ошо традицияның М. Закиров тарафынан уңышлы дауам ителеүе һәм артабан үҫтерелеүе хаҡында ғына бара. Өҫтә был фекерҙе раҫларҙай ҡайһы бер миҫалдар килтерелгәйне инде. Уны яңылары менән дә нығытырға мөмкин.

«Миләш ҡыҙыл тәлгәш ырғытты...»ла, мәҫәлән, тәбиғәттең бер күрке булған ағас йәнле кеше һымаҡ ҡабул ителә – әйтерһең дә, лирик герой менән миләш араһында диалог бара:

Миләш ҡыҙыл тәлгәш ырғытты –
Таныҫғандай йыраҡ тиңдәшен.
Һин ҡайғырма артыҡ тигәндәй,

Ҡыштар нисек кенә килмәһен.
Миләш ҡыҙыл тәлгәш ырғытты.

«Ошо йондоҙҙарҙың аҫтарында» тигән шиғырҙа ла ғүмере уҙып барған лирик геройҙың күңел донъяһы асып бирелгән. «Йондоҙҙарҙы барлай ҡараштарым, яҙмыштарҙы барлай уйҙарым», тип, ул бер аҙ уфтанып та, моңһоуланып та ала:

Ғүмер сикле. Фани донъяларҙа
Йәшнәмәйсә, ахыры, күкрәнем.
Керпегемдә – йыраҡ йондоҙ нуры,
Татлы хитсәр тулы күкрәгем.

Көрәше мин бар булмышым менән
Өмөтһөзлөк менән өмөттөң.
Хәлем ғәжәп: йырлар инем – илар,
Илар инем – йырлар кеүекмен.

«Эңерҙәр алды ине» тигән һигеҙ юллыҡ шиғыр ҙа уҡыусыны битараф ҡалдырмаҫ. Унда лирик геройҙың һағышлы уйҙары йәйге тәбиғәттең ғәҙәти бер күренешенә төрөп бирелгән: «Һулҡылдай йәндә ғүмерҙең үтерен тойоу хисе». Юл ыңғайында авторға бер дәғүәмде лә белдермәксемен: «эңер» һүҙен ул саманан тыш күп ҡуллана. Шиғырҙар «Ағиҙел»дең төрлө һандарында сәселеп ятҡанда ул, бәлки, һиҙелмәй ҙә торғандыр. Ә бына уларҙы бергә туплап тикшерә башлағаҫ, шунда уҡ күҙгә ташлана.

«Ел. Төндә ел. Янымда – ел...», «Башым артҡа ташлап, йондоҙ тулы...», «Үҙ йәнеңдә әгәр янмаһа», «Көҙ – йәйҙәрҙең һаубуллашыу йыры...» тигән шиғырҙарҙа ла лирик геройҙың булмышы тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып тасуирланған.

М. Закировтың саф пейзажды һүрәтләгән шиғырҙары ла юҡ түгел. Шундайҙарҙан «Ямғыр», «Ҡайын шаулай» тигәндәрен күрһәтергә мөмкин. Шағирҙың үҙ стиленә хас булғанса, улар икеһе лә күләмдәре менән елаткес түгелдәр. Уларҙың икеһен дә пейзаж лирикаһының матур өлгөһө тиер инем. «Ҡайын шаулай»ҙа, мәҫәлән, һүҙ фәҡәт тәбиғәт күрке тураһында ғына бара – башҡа йән эйәһе юҡ бында. Шиғыр эпитеттарға, метафораларға, сағыштырыуҙарға бай. Урыны-урыны менән тәбиғәт батшаһы аҡ ҡайын йәнле кеше образына ла инеп ала:

Япраҡтарҙан әллә таң ысығы,
Әллә ынйы-мәрйен түгелә.
Ҡасандыр ул аҡ туй күлдәгендә
Йүгереп менгән ҡырҙар үренә;
Ун һигеҙе тулған ҡыҙҙар кеүек,
Йәшел шәлен һалып иңенә.

Ниһайәт, мөхәббәт лирикаһы. Бар М. Закиров шиғриәтендә мөхәббәт лирикаһы, бар. Мөхәббәт лирикаһынан башҡа шиғриәт буламы ни! Был тәңгәлдә лә шағир үҙ амплуаһында ҡалған. «Тәҙрә янында һин ал күлмәктән...», «Ә тау йәнәшә генә», «Ҡараңғыла сисенеүеңде яратам...», «Йәшендәрҙең йәшнәр мәле» тигән шиғырҙар – быға асыҡ дәлил. Ләкин, мөхәббәт темаһын яҡтыртҡанда, М. Закиров, минең ҡарашымса, мәғәнәләре бигүк аңлашылып бөтмәгән шиғырҙар ҙа яҙғылай («Һин ҡатын да, һөйәркә лә түгел...», «Хәҙер миңә һин кәрәкмәйһең...»). Мөхәббәт лирикаһына ҡарамаһа ла, «Йондоҙҙарға ҡарап» тигән шиғыр ҙа ҡапма-ҡаршылыҡлыраҡ фекер уята.

Мөхәммәт Закиров шиғриәте тураһындағы был уйланыуҙарымды тамамлар алдынан, уның шиғриәт һәм шағир темаһын күтәргән ике әҫәренә әйләнеп ҡайтмаҡсымын. Уларҙың береһе – «Ап-аҡ дауыл иңдәренә төшкән», икенсеһе – «Сергей Есенинға» тип атала.

«Ап-аҡ дауыл иңдәренә төшкән» Назар Нәжмигә арналған. Сюжетлы шиғырға оҡшап тора. Уның йөкмәткеһен хәтерҙә ҡалырлыҡ ике эпизод тәшкил итә. Тәүгеһе – олпат Назарҙы Пушкин урамында, «Кызыл таң»да күреү. Икенсеһе – көҙгө ҡала урамы буйлап «ҡарҙай сәсле шағир артынан» эйәреп барыу. Әҫәрҙең елеге һуңғы ике юлда:

Эй шиғриәт! Шаҙра егетеңә
Киләм кеүек һаман эйәреп.

«Сергей Есенинға» шиғыры ла шағирға бағышлап яҙылған ҡоро дифирамб түгел, ә уның таланты һәм яҙмышы тураһында тәрән уйланыу:

Башҡаса һин яҙа алмағандай,
Йәшәй алмағанһың башҡаса.
Һиндәй шағир ниндәй булыр ине,
Үҙен үҙе әгәр һаҡлаһа?!

Әгәр был ике шиғырҙың авторы бөйөк таланттарға мөрәжәғәт итеп, уларҙың ижадына һоҡлана икән, тимәк, ул – дөрөҫ юлда. Уға ошо юлда яңы уңыштар теләйһе генә ҡала. Ул бит үҙенең «Көҙ – йәйҙәрҙең һаубуллашыу йыры...» тигән шиғырында юҡҡа ғына: «Ебәктән дә нескә күңелем ҡылы», тип әйтмәгән.

2007, июль

ЯУЛАНҒАН ҮРҘӘР БАҺАҺЫ

Тәүҙә был мәҡәләмде «Ете йылға – ете шәлкем» тип атамаҡсы булғайным. Сөнки яңы быуаттың ете йылында Нәжибә Әминева «Ағиҙел» биттәрендә ете тапҡыр сығыш яһаны. Журналдың 2005 йылда сыҡҡан 12-се һанындағы белешмәгә ҡарағанда, ул хәҙер – алты китап авторы.

Ләкин Н. Әминеваның ете йыл дауамында донъя күргән ҡырҡ һигеҙ шиғырын (бәләкәй генә булһа ла, үҙе бер йыйынтыҡ бит инде ул!) ентекләберәк уҡый башлағас, тәүге уйымдан кире ҡайттым. Сөнки күңелдә еңел генә яралған ул атама «фәләп гектарҙан фәләп хәтле ашлыҡ һуғып алынды» тигән гәзит штампын хәтерләтеп ҡуйҙы. Бының менән һис кенә лә ашлыҡ һуғып алыусыларҙың сәменә тейергә йыйынмайым – һуғыш ваҡытындағы шикелле яңынан икмәкһеҙ ҡалырға яҙмаһын. Икмәктән дә ҡәҙерле, икмәктән дә бөйөк нәмә юҡ донъяла. Гәзит штампынан баш тартыуым иһә бары тик «шифриәт бер ниндәй зә үлсәүгә һыймай», тип әйтергә теләүемдән генә килә.

Мәҡәләгә яңы исемде табырға Н. Әминеваның 2004 йылда донъя күргән «Һейнене уҡығас» тигән шиғыры ярҙам итте. Минең уйымса, тәрән мәғәнә төрөлгән аҡыллы шиғыр ул. Бөйөк немец шағирының әҫәрҙәрен уҡығас, башҡорт шағирәһе үҙен тауҙағы ташҡа менеп баҫҡандай хис итә һәм шул хисте башҡаларға ла еткерә:

... Күнегелгән үҙәнлеккә.
Тауҙарға баҫтым – башҡа.
Баҫҡыларға кәрәк икән,
Менеп, тауҙағы ташҡа.

Йәнең унда шундай киңлек,
Шундай иркенлек тоя.
Үҙәнлектә ҡайнашҡандар
Ҡыҙғаныс булып ҡуя.

Иғтибарымды ни өсөн мотлаҡ ошо шиғыр һәм ошо юлдар йәлеп иткәнен дә әйтә алам. Билдәле булыуынса, Нәжибә Әминева – ауылда тыуып, ауылда үҫкән һәм ғүмере буйы шунда уҡытыусылыҡ иткән

шағирә. Ауылда тороп, төп эшенән тыш ижад менән дә шөғөлләнергә ваҡыт тапҡан шағирә бөйөк таланттар бейеклегенә күтәрелергә ынтылып йәшәй икән, тимәк тәбиғәт уға тылсымлы көскә эйә булған күңел нескәлеген мул итеп биргән. Тимәк, башҡортса ла, русса ла бер төрлө яңғыраған һәм цивилизация тип йөрөтөлгән мөхиттең үҙәгендә ҡайнамайынса ла мәҙәни үҫештең юғары кимәленә үрләргә мөмкин. Был – асыш түгел, бары тик күптәнге хәҡиҡәтте раҫлаусы бер факт ҡына. Сөнки, донъя мәҙәниәте тарихында ҡаҙына башлаһаң, ҡала шау-шыуынан алыҫта – тәбиғәт ҡосағында йәшәп, сәнғәт өлгөһөнә торорлоҡ әҫәрҙәр ижад иткән байтаҡ авторҙың (яҙыусыларҙың да, шағирҙарҙың да, рәссамдарҙың да, хатта композиторҙарҙың да) исемен аяҡҡа баҫтырырға булыр ине. Ошонан сығып, ауыл ерендә быуаттан-быуатҡа тәбиғи рәүештә формалашып килгән рухи цивилизация ҡала тормошона яһалма рәүештә индерелгән матди цивилизациянан юғары тормаһа ла, һис тә кәм түгелдер, тимәксемен.

Н. Әминеваны «төп эшенән тыш ижад менән дә шөғөлләнергә ваҡыт тапҡан шағирә» тинем дә, тағы уйға ҡалдым. Уның төп эше лә ифрат яуаплы һәм ифрат күп көс һалыуҙы талап итә торған хеҙмәт бит. Айырма шунда ғына: тәүгеһе уҡытыусы Әминеваның тамағын туйҙырһа, икенсеһе шағирә Әминева өсөн йән аҙығы булып тора. Был – мин уйлап сығарған уйҙырма түгел. Уны йөпләү өсөн шағирәнең үҙенә мөрәжәғәт итергә мөмкин. «Шиғыр яҙғанда» тигән әҫәрендә ул бына нимә ти:

Шиғырымдан
Йән риза мәл
Һирәк була.
Уны нисә үҙгәртергә
Кәрәк була.
.....
Шәберәк әйтәм
Тип, моғайын,
Яҙған яҙа...
Йә минең кеүек –
Кисерер өсөн
Татлы яза...

Заман һәм шиғриәт темаһын күтәргән «Ышанам» тигән икенсе бер шиғырҙа «татлы яза»ның баһаһы бөтә тәрәнлегендә асып

һалынған. Ҡарап тороуға шиғыр йомшаҡ, көлөмһәрәк тел менән яҙылған һымаҡ:

Ташҡа баҫылды шиғырым,
Хаҡы –
Аҙ ғына аҡса...
(Шиғыр тип йәшәйем, тиһәң,
Тәүбә, үлерһең асҡа...)

Ләкин йөкмәткеһе менән ул бөтөнләй икенсе тәьҫир ҡалдыра. «Үҙем өсөн түгел, миңә шиғриәт өсөн ғәрлек!», «Бер һинең генә баһаң юҡ, бер хаҡың юҡ, әй, шиғыр» тигән юлдар айырыуса көслө яңғырай. Ә бына бынығы инде:

Байҙарынан замананың
Шиғриәт ҡасҡан инде.
Шиғыр үтмәҫ –
Улар күңелен
Күптән май баҫҡан инде, –

эстетик зауыҡтың беҙҙең дәүергә хас кимәлен күрһәтеп тороусы факт. Бәхеткә күрә, һуңғы ике строфаға һалынған фекер шиғриәткә булған һөйөүҙе тамам һүндермәй әле:

Туҡта, күңел, замананы
Тиргәгән ниндәй йыр был?!
Шундай икән заман,
Тимәк,
Шиғыр кәрәк осор был!

...Үтмәй шул донъяға һүҙең,
Әллә ни һөйлә, ни әйт...
Тик ышанам: һиндә ул һүҙ –
Донъя тетрәнерлек ҙур һүҙ
Бер табылыр, шиғриәт!

Шиғриәткә, ижад серҙәренә бәйле уйланыуҙар Н. Әминеваның «Ышандырһаң әгәр», «Беләм», «Бөтәбеҙҙең дә була», «Йән йылыһы һаклана әле бында», «Риза булыр ине...», «Бер һыҙланыу йәшәй йәндә...»

тигән шиғырҙарына ла хас. Быуаттар ҡауышҡанда ижад ителгән «Ышандырһаң әгәр»ҙә шиғриәткә генә түгел, беҙҙең бөтә булмышыбыҙға философтарса киң ҡараш ташланған. Автор фекеренсә, кеше ғүмере – мәңгелектә тарих һалған эҙгә барып тоташа торған бәләкәй генә бер мәл. Беҙгә хәтлем дә ул тигеҙ, матур тормош тураһында хыялланып йәшәгән. Алыҫ киләсәктә беҙҙең хаҡта ла шулай уйлаясаҡтар. Әлегә иһә хаҡтар үҫә, тик баһаһы төшә һаман шиғри һүҙҙең. Киләсәк көндәрҙең яҡшырыуына әллә ни ышаныс булмаһа ла, автор барыбер өмөтөн өҙмәй:

Их, ышаныр инем,
Заман, шуға
Ышандырһаң әгәр,
Шул көндәргә
Аҙ булһа ла үҙең
Оҡшап торһаң әгәр.

Шиғыр үткер тел менән яҙылған: һәр бер һүҙҙең һәм һүҙбәйләнештең төбөндә, Чехов әҫәрҙәрендәгесә, йәшерен ағым урғылып ята кеүек.

Ҡайһы бер өлкән ҡәләмдәштәренә эйәреп, Н. Әминева шиғриәткә, шағирлыҡҡа ифрат ҙур яуаплылыҡ менән ҡарай, хатта уларға табына, тиергә мөмкин. Халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең «Һатылырға әҙермен бөгөн, минән Тукай сыҡһа иртәгә» тигән һүҙҙәренә таянып ижад иткән «Риза булыр ине...» исемле шиғырында, мәҫәлән, ул, һүнергә иртәрәк булһа ла, ун ете, ун һигеҙ йәшендә дөрләп янған бөйөк Рәшит Назар кеүек ҡабынырға ризалығын белдерә.

Йәиһә «Бер һыҙланыу йәшәй йәндә...» тигән шиғырҙы алып ҡарайыҡ. Ул – өр-яңы әҫәр, быйыл ғына донъя күрҙе. Шиғырҙың төп идеяһы түбәндәге юлдарға төрөлгән:

Ҙур донъяны йоҙроҡ ҡәҙәр
Йөрәгеңдә тойоу ул.
Бөтә бәхетле – бәхетһеҙ
Йыйылып йәнеңә һыйыу ул.

Бына шулай аңлай лирик герой үҙенең ерҙәге билдәләнешен һәм бурысын. Шиғырҙың авторы ла уға бәрәбәр, тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ.

Үкенескә күрә, тийәйем микән, быға тиклем Нәжибә Әминева тураһында әҙәби тәнҡит мәҡәләһе уҡырға тура килмәне миңә. Ярай әле уҙған йылда «Писатели земли башкирской» тигән биобиблиографик белешмә донъя күрҙе. Унда Н. Әминеваның поэтик ижады фекерҙәрҙең һәм образдарҙың фәлсәфәүилеге менән айырылып тора, шағирә кешенең нескә күңел ҡылдарын оҫта итеп һүрәтләй белә, тиелгән. Бәләкәйҙәрҙән дә бәләкәй был миниочерктың авторы кемдер, әммә, кем булыуына ҡарамаҫтан, ул шағирәнең ижадына хас төп сифатты һәм йүнәлеште бик дөрөҫ төҫмөрләгән. Һәм, әйтергә кәрәк, Н. Әминева һуңғы ете йылдағы ижадында ла ошо йүнәлешкә тоғро ҡалған. Быны раҫлау өсөн уның байтаҡ шиғырҙырына («Ҡояш тотолғанда», «Укып барам рәхмәт», «Күңелдә бит...», «Ғорурлығыма тейҙе», «Әрем», «Мин риза», «Уйлат, донъя», «Туғандар кәмегәндә», «Ҡанатланһаң – икенсе», «Һүҙҙәр», «Кисер, Донъя!..», «Президент киләһе көн», «Бына ҡасан айырылаһың...», «Маяҡ», «Минор шиғыр», «Ҡала урамы. Ел, ямғыр...», «Нисек әйтә алдым...», «Күҙәтһәң...», «Йәшәге килә!», «Көтөүе рәхәт») туҡталырға булыр ине. Ләкин журнал мәҡәләһе сиктәрендә уларҙың ҡайһы берҙәре менән генә ҡәнәғәтләнергә тура килер.

Н. Әминеваның яңы быуат башында уҡыусы иғтибарына тәҡдим иткән тәүге шиғыры «Ҡояш тотолғанда» тип атала. Йыһан киңлектәрендә һирәк-мирәк ҡабатланып торған астрономик күренеште шағирә тәрән мәғәнәгә эйә булған фекер әйтеү өсөн ифрат оҫта файҙаланған: әгәр кешелек, ғәҙәттә, ҡояш тотолғанда кисерелә торған шомло уйҙарҙы онотмайынса, яҡты донъяның ҡәҙерен белеп йәшәһә, Ерҙә юҡҡа ҡан да ҡойолмаҫ, көс тә түгелмәҫ ине:

... Кешелек юҡҡа
Түкмәҫ ине, бәлки,
Бөгөн ҡанын, көсөн,
Берҙәм яһһа кинәт
«Йәшәү» тигән
Оло бер йәм өсөн,

Бөтөнөбөҙ бергә тетрәнһәк, тим,
Яҡты донъя өсөн!..

Ысынлап та, Н. Әминеваның лирик геройы, Ер йөзөндә ғәҙелһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ, шәфҡәтһеҙлек, әхлаҡһыҙлыҡ кеүек күренештәрҙең һиҙелеп артыуына ла ҡарамаҫтан, фани донъяның һәр көнөнән йәм табып йәшәргә тырыша. Һәм был тема, шиғырҙан шиғырға күсеп, торған һайын киңәйә, тәрәнәйә һәм үткерләнә бара. «Мин риза» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, башта яңылыҡһыҙ, мөғжизәһеҙ, бары ла бер төҫлө уҙған көндәре менән ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә, бер көнгә генә үлеп ҡарауҙы күҙ алдына килтерә. Һәм тәүбә итә. Шиғырҙың һүңғы строфаһында ул үҙенең баштағы уйынан кире ҡайта:

Бына булыр бер яңылыҡ,
Бына булыр мөғжизә...
Туҡтай күрмә, ғүмеркәйем,
Һәр көнөңдән мин риза,
Мең риза!

Донъянан йәм табып йәшәргә тырышыу теләге Н. Әминева шиғырҙарының хатта исемдәрендә лә сағыла. Дөрөҫ, моңһоуыраҡ, яманһыуыраҡ хистәр уятҡан юлдар ҙа осрап ҡуя ҡайһы берҙә. «Йәшәйһем килә» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, үҙенең киләсәген бына нисегерәк күҙаллай:

Их! Үлгәс тә Ерҙең өҫтөн
Аҙыраҡ күреп торһаң ине.
Яңылыштарҙа
Ейәндәрҙе
Дөрөҫлөккә борһаң ине...

Улар бәхетенә аҙ ғына
Һөйөнөп тә ҡуйһаң ине...
Майҙарҙа йәшел үләндең
Йәп-йәш еҫен тойһаң ине.

Шуныһы мөһим: моңһоу хистәр яңғырап киткән хәлдә лә, яҡты донъяла йәшәү йәмен тойорға өндәгән был шиғырҙарҙың төбөндә ҙур фәлсәфә ята – көндәлек тормош фәлсәфәһе: беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡ ваҡыты-ваҡыты менән ниндәй генә сюрприздар килте-

реп тыуҙырмаһын, ул барыбер ҡыҙыҡлыраҡ та, йөкмәткелерәк тә. Әгәр кеше гел үлем тураһында ғына уйланып йөрөһә, уның тормошо үтә лә күңелһеҙ һәм төҫһөҙ булыр ине. Өгөт-нәсихәткә ҡоролған «Йәшәү – ышаныу» тигән шиғырҙа ошо фекер оҫта төҫмөрләнгән. Шиғырҙың тәүге ике строфаһында (уларҙың һәр ҡайһыһы дүртәр юлдан тора) лирик герой үҙен ҡайғыларға бирешмәҫкә, шатлыҡтан бик шашмаҫҡа өндәй. Ун юлдан торған икенсе строфала иһә ошо сифаттарҙы үҙ-үҙендә тәрбиәләй алмағанына үкенә, сөнки уға ҡайғы – үтмәҫ, шатлыҡ – бөтмәҫ, ә ғүмер – мәңгелек кеүек тойолған. Авторҙың әйтергә теләгәне һуңғы биш юлға һыйған:

Их, йәшәү тип аталмай шул инде
Ҡайғы-шатлыҡтарҙан бушаныу.
Йәшәү бит ул –
Донъя – мәңгелек, тип,
Үҙең үлемһеҙ, тип ышаныу.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең заманда был хәҡиҡәттән ситкә тайпылыусылар ҙа аҙ түгел. Өгөт-нәсихтҡә нигеҙләнгән «Йәшәйек» тигән шиғыр – тап ана шул хаҡта. Ун һигеҙҙә үҙе теләп донъянан киткән егеттең йыназаһы таусирланған унда. Күләме һәм яңғырашы менән бәйеткә оҡшап тора. Әлбиттә, юғары мотивтар, рух күтәренкелеге, алдынғы идеялар менән һуғарылырға саҡырылған шиғриәт өсөн был тема бик ҡулай ҙа түгелдер. Әммә тормош уны үҙе көсләп таҡҡас, нишләмәк кәрәк? Шиғырҙа ике быуын сағыштырылған (ләкин бер-береһенә ҡаршы ҡуйылмаған!): үҙенә ҡул һалған йәштәр һәм «ятып үлер саҡтарҙы ла түҙем» үткәргән ҡарттар:

Арҡаларынан күренә:
Йөктәр булған ауырҙан.

Теҙ өҫтөндәге ҡулдары
Тора тотош тамырҙан.
.....
Һаҡ булһаҡсы ашығыуҙан,
Төҙәлмәҫ яңылышыуҙан.
Тамырланып бөтһөн ҡулдар
Йәшәүгә йәбешеүҙән.

Быйыл донъя күргән «Йәшәге килә!» тигән шиғыр ҙа – ошо сериянан. Ябай тормош фәлсәфәһе унда, бәлки, уғата ла көслөрәк янғырайҙыр әле:

Тыуған өйҙәге кеүек үк
Булмай икән бар донъя.
Һиңә оло һөйөү менән
Тулмай икән был донъя.

Ошо хәҡиҡәтте асҡан һәм аңлаған лирик герой артабан үҙенең хыялы-теләге менән уртаҡлаша:

Ә килә, килә йәшәге
Бар донъяны ҡаратып.
Бөтәгеҙҙән яратылып,
Бөтәгеҙҙе яратып.

Әйткәндәй, «Йәшәге килә!»лә күтәрелгән проблеманың ҡайһы бер һыҙаттары бынан бер нисә йыл элегерәк яҙылған «Уйлат, донъя» тигән шиғырҙа ла һиҙелеп ҡалғайны. Уның лирик геройы аҡ ҡайындарға, һабан турғайына, аҡ болоттарға, иҫкән елгә, ҡояшҡа мөрәжәғәт итеп, уларҙан «донъя матур», «донъя мине ярата», тип алдатмауҙарын, ялғанламауҙарын үтенә. Ләкин шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарында фекер ағышы ҡырҡа үҙгәрә, сөнки алданып йәшәһәң дә, яҡты донъя – барыбер яҡты донъя инде ул:

Кем йәшәй белмәй?
Моғайын, —
Кемдәр алдана белмәй.
Алдата бир, донъя
Минән
Уйлат бөгөн – көҙөмдә:

Донъя матур
Һәм һөйкөмлө
Һөйәкмен, тип, үҙем дә...

Н. Әминева шиғырҙарында тормоштоң фәлсәфәүи асылы йыш ҡына психологик күҙәтеүҙәр аша һүрәтләнә. Нигеҙендә антитеза

алымы ятҡан «Һүҙҙәр» исемле ыҡсым ғына шиғырҙа, мәҫәлән, «йәшәү-үлем», «ҡайғы-шатлыҡ», «рәхәт-ҡыйын» кеүек парлы төшөнсәләргә ғәйәт тәрән мәғәнә һалынған: беҙҙең ғүмер, ысынлап та, ошо һүҙҙәргә бәйләнгән бит, хатта уларҙың ҡоло хәлендәбеҙ. Шуға ла был һүҙҙәр телдән төшмәй, телдән төшһә лә – күңелдә һаҡлана.

«Минор шиғыр» тип аталған әҫәрҙә лә лирик герой Ерҙә йәшәүҙең мәғәнәһе хаҡында уйлана. «Мәңгелек оҙон да, ник ғүмер бик ҡыҫҡа?..», тип баш вата ул. Һәм, күпме генә фәлсәфә һатһаң да, «һәр ғүмер фажиғә...», тигән һөҙөмтәгә килә. Шағирә өсөн был да – бер асыш.

«Һуңыраҡ кил» һәм «Кисер, Донъя!..» тигән шиғырҙар ҙа психологик күҙәтеүҙәргә бай. Улар икеһе лә ҙтә лирик әҫәрҙәр. «Һуңыраҡ кил»дең лирик геройы үҙенең холҡон, характер үҙенсәлеген асып һалған. Ул үҙенсәлек иһә – ғүмер баҡый икеләнеп йәшәү: ауыр, алыҫ юлға юлланырға икеләнә; хаҡ хәкиҡәт телдән осор мәлдә икеләнеп ҡала; уның йәнендә күпме дөрөҫлөктәр бикләнеп ҡалған; ҙур эш башларҙан алда икеләнә. Ә бына әжәл алдында икеләнеп булмаҫ, ти лирик герой. Ғүмере ҡыҫылып барғанды һиҙенеп, ул: «Йәшәнемме, юҡмы, ҙтәһең бит, әйтсе, һынар вакыт?!», тип һорай үҙ-үҙенән. Шиғырҙың атамаһы һәм төп идеяһы уның һуңғы юлдарында асыҡланған:

... Иртән яныр саҡта һуңлап янам,
Янам кискә ҡалып...
Һуңлап, тимәйем дә,
Һуңыраҡ кил, әжәл,
Холҡом иҫкә алып.

«Кисер, Донъя!..»ның төбөндә психологик кисерештәргә төрөп бирелгән тормош фәлсәфәһе ята: бала саҡта күҙҙән бәреп сыҡҡан йәш, үҫә төшкәс һәм олоғайғас «тамаҡ төбөнә төйнәлгән төйөр»гә әйләнә. Эске төҙөлөшө буйынса был шиғыр «Һуңыраҡ кил»гә аһаңдәш булһа ла, фекер ағышы йәһәтенән, улар бер-береһенән күпкә айырыла: тәүгеһендә лирик геройҙың башлыса шәхсән уй-хистәре, күңел торошо сағылыш тапҡан булһа, быныһында иһә ул уй-хистәр авторҙы ярайһы уҡ етди дөйөмләштереүгә килтергән. Кеше күңелендә яралып, йылдан-йылға тәрәнәйә һәм ауырая барған ошо эске кисерештәрҙең һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә хәрәкәте түбәндәге юлдарҙа асыҡ сағылған:

Тамаҡ төбөнән шул төйөр
Көскә генә йотола.
Йылмайыуҙар моңһоулана,
Хистәр эскә йотола.
.....
Аңлата Донъя:
Ул – Әсә.
Тик уҫал үгәй әсә
Уйынсыҡты мәңге бирмәй,
Бирергә теләмәһә.

Шул һаран үгәй әсәлә
Бәхет – тәтәй уйынсыҡ...
Кисер, Донъя!
Һине кем тип
Әйттермәҫ был ҡыйын саҡ...

Н. Әминева ҡайҙа ҡарамаһын, шунда хикмәт таба. Фекерҙе раҫлау өсөн бер-ике миҫал да килтерергә мөмкин. Билдәле булыуынса, фармацевтика өлкәһәндә киң генә ҡулланыу тапһа ла, халыҡта бигүк популярлыҡ яуламаған «әрем» атлы үлән бар. Ул бик күп төрлө була икән. Ләкин, ниндәй генә төрө булмаһын, әрем барыбер әрем инде. Яраға тоҙ һала торған әсе һүҙле әҙәмдәрҙе юҡҡа ғына «әрем тел», тип, йөрөтмәйҙәр бит. Бына ошо йәмһеҙ еҫле әсе үлән Н. Әминеваның да иғтибарын йәлеп иткән һәм ул «Әрем» тигән шиғыр яҙған. Шиғыр ҙур түгел, әммә, әрем телле булмаһа ла, бик уҫал яңғырай: хатта асфальтты тишеп сыҡҡан әрем тиклем әрем дә ҡала тормошона яйлаша икән, башҡаға ни һан?!

Икенсе миҫал – «Күҙәтһәң...» тигән шиғыр. Был әҫәрендә шағирә аҡһаҡ ҡаҙ бәпкәһе образы аша бик ҡыҙыҡ та, ҡызғаныс та һөҙөмтәгә килә:

Ҡаҙҙар һәм сәпсектәр,
Ҡоштар һәм ҡошсоҡтар, –
Күҙәтһәң, нәҡ кеше...

Сөнки суҡылып-таланып ғүмер иткән аҡһаҡ бәпкә, үҙенән көсһөҙ себеште күргәс, ыҫылдай, бәйләнә башлай – көсһөҙ янында көслөгә әйләнә.

Эшләнеше яғынан ябай ғына күренгән «Туғандар кәмегәндә» тигән шиғырҙың да төбөндә тәрән мәғәнә ята – яҡын туғандар кәмегәндә дуҫтар иҫкә төшә. Һәм, ошоға таянып, шағирә был донъяла бөтәбеҙҙең дә ҡәрҙәшлек ебе менән тоташҡанлығыбыҙға ишара яһай:

Кешелек тора, ниһайәт,
Дуҫтарҙың дуҫтарынан.
Туғандың туғандарынан
Күбәйгәнбеҙ яралып.
Туғанлыҡты онотҡанбыҙ
Алыҫтарға таралып.

Быуындар бәйләнеше, йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйланыуҙар «Бына ҡасан айырылаһың....», «Маяҡ», «Әй, өләсәй...», «Толом тураһында хикәйәт», «Килешер ине», «Дуҫтарға», «Һуңғы теләк», «Көтөүе рәхәт» тигән шиғырҙарҙа ла иҫтә ҡалырлыҡ образдар һәм сағыу күренештәр аша һүрәтләнгән.

«Бына ҡасан айырылаһың....» тәүҙә аҡыл һатыуға оҡшап тора: тыуған ер менән, мөхәббәт менән, балаң менән, мәңгелеккә күскән әсәң менән айырылаһың, ләкин был айырылышыуҙар, йәнәһе, бигүк өмөтһөҙ түгел, сөнки улар менән ҡасан да булһа бер осрашасағыңа ышанып йәшәйһең. Шиғырҙың аҙағында көтөлмәгән боролош яһала: баҡһаң, йәшәү тигән өмөттән һис тә айырылаһы килмәй икән. Йәшәүгә өмөтөң һүнһә – шул булыр ысын айырылышыу, тигән һөҙөмтә сығарып ҡуя автор.

«Көтөүе рәхәт» тигән шиғыр «Бына ҡасан айырылаһың...»дың дауамы шикелле ҡабул ителә. Әҫәр күтәренке рух, яҡты оптимизм менән һуғарылған. Уның нигеҙенә һалынған тормош фәлсәфәһенең асылы инһә шунда: кеше ғүмер буйы бөгөнгө менән генә түгел, тыуаһы көн менән йәшәй. Һәм был фекер шиғырҙа бик асыҡ кәүҙәләндерелгән:

Һүндермәйһең өмөтөмдө,
Тыуаһы көнөм, рәхмәт!
Буламы-юҡмы
Бәхетте –
Көтөп йәшәүе рәхәт!

Лирик геройҙың йәшәүгә тартылыу көсө «Дүҫтарға» тигән шиғырҙа ла ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнгән. Дуҫтарынан ул татлы күстәнәс тә, затлы кейем дә, сәскә лә көтмәй. Уға иң мөһиме – яҡшы һүҙ: «Йәнем өшөгәндә йылытырлыҡ һүҙҙәр генә миңә эҙләгеҙ»,ти ул. «Һәм эҙләгеҙ, һүҙҙәрҙең һеҙ миңә өмөт бирерҙәйен эҙләгеҙ. Һүнәм тигән саҡта балҡыйымсы, миңә шулай ғүмер өҫтәгәҙ», тип дауам итә лирик герой дуҫтарына белдергән теләгән. Шиғырҙың һуңғы юлдарында был теләк уғата ла көслөрәк һәм асығыраҡ яңғырай: «Өҫтәгеҙ һеҙ ғүмер, ah, ғүмерҙән баш тартмайым, йәшермәйем мин...».

Бөтә халыктарға ла, шул иҫәптән, уларҙың әҙәбиәттәренә һәм сәнғәттәренә лә хас булған «ололар һәм балалар» тигән сетерекле бер проблема йәшәп килә. Шағирә генә түгел, педагог та булғанға күрә микән, Н. Әминева ижадында ошо тема ла йыш ҡына сағылып китә. «Һуңғы теләк» тигән шиғырҙа ул ифрат тормошсан, хатта, әйтер инем мин, тетрәткес итеп кәүҙәләндерелгән. Һүҙ бында конкрет хәл-вакиға хакында түгел, ә дөйөм, тағы ла шул фәлсәфәүи юҫыҡта бара. «Ололар бала түгел шул, бала ҡарау ҙа ҡыйын...», «Әсә күңеле балала, бала күңеле – далала» тигән халыҡ һүҙҙәре лә шиғырҙы биҙәй һәм автор әйтергә теләгән фекерҙе тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә. Шиғырҙың бөтә елеге һуңғы строфала:

Әҙ ауырыу, анһат үлем
Бир, Хоҙай, һәммәбеҙгә,
Оҙаҡ ятып, әйләнмәһен
Ата-әсә – ҡәҙерһеҙгә,
Балалар – бәгерһеҙгә.

Һирәк-мирәк булһа ла, Н. Әминева шиғриәтендә тәбиғәт күренештәре лә осраштырып ҡуя. «Ҡанатланһаң – икенсе», «Ғорурлығыма тейҙе», «Йәш инем», «Беренсе ҡарҙарҙы күреп...» тигән шиғырҙар – шулар иҫәбендә. Тик улар саф пейзаж лирикаһы түгел. «Йәш инем»гә генә туҡталып китәйек. Кеше менән тәбиғәт араһында йәнәшәлек үткәрелгән унда. Шиғыр һигеҙ һәм ун ике юллыҡ ике строфанан тора. Тәүге строфала болоттан япраҡҡа тамған бер тамсының яҙмышы иҫ киткес матур итеп тасуирланған. Икенсе строфала лирик герой үҙенең яҙмышын шул тамсы менән сағыштыра һәм байтаҡ ҡына оҡшашлыҡтар таба:

... Бер саҡ шундай саф инем мин,
Бөтөн инем, йәш инем.
Ҡояшлы көмөш тамсыға
Мин дә бит тиңдәш инем.
Меңгә бүленде лә йәнем
Ҡатмарлы тормошонан.
Йә сәселдем, йә һибелдем
Йәшәргә тырышыуҙан.
Юйылырмын, юҡ булылрмын,
Һибелермен мең яҡҡа,
Һеңермен мең йәнгә, моңға
Һәм... һуңынан – тупраҡҡа.

Н. Әминеваның быуат башындағы шиғриәтенә яһалған был күҙәтеүемде уның уҙған йылда донъя күргән «Тик шуныһы» тигән шиғыры менән осламаҡсымын. Был шиғырҙың лирик геройы үҙенең бөтә булмышын ярып һалған. Ул йәш түгел: уның иңендә тормош тәжрибәһе ята. Донъя көткәндә уҫалдарға бирешмәҫкә бер аҙ уҫаллanған да ул. Ышанысһыҙ кешеләргә сер бирмәҫкә лә өйрәнгән. Тормоштоң көйөн яйларға ла күнеккән. Шар асылып, иреп бармаҫҡа, бер аҙ үҙен яҡларға тырышҡан. Йәнендә яҡшылыҡ та бар, етешһеҙлек тә юҡ түгел. Уртаса булмаҫҡа хыялланған. «Үҙәнлек»тән «бейеклек»кә күтәрелһә лә, яулаған үренә баһа биргәндә лирик герой иҫ киткес тыйнаҡлыҡ күрһәтә:

Тырыша торғас, ниһайәт,
Башҡаларса була алдым.
Башҡаларса...
Тик шуныһы:
Үҙем булалмайса ҡалдым...

Был аҡыллы, тыйнаҡ һүҙҙәрҙең авторына, ирешкән бейеклектән төшмәйсә, уҡыусы: «Бына исмаһам шиғыр!», тип һоҡланырлыҡ әҫәрҙәр ижад итәһе лә итәһе әле.

2007, август

Йөкмәткеһе

Күңел дарьяһына сәйәхәт (Баш һүҙ урынына)..... 3
Поэтик бейеклектәрҙе яулап
(Н. Нәжмиҙең ижади портретына ҡайһы бер һыҙаттар)..... 21
Көслө һәм ныҡ шәхес йырсыһы
(Д. Юлтыйҙың тыуыуына 90 йыл тулыуға ҡарата)..... 30
Шағир һәм ғалим..... 36
Яҙыусыға тере һәйкәл..... 40
Хәҙерге башҡорт романында ауыл тормошо..... 44
Халҡыбыҙҙың ғорурлығы (Һәҙиә Дәүләтшинаның
тыуыуына 80 йыл тулыуға ҡарата)..... 52
Яугир шағир ауазы..... 56
Ноғман Мусин ижадында кеше һәм тәбиғәт проблемаһы..... 61
Әҙип образы..... 69
Назар Нәжмиҙең Бөйөк Ватан һуғышы
йылдарындағы лирикаһы..... 74
Һуҡмаҡтар оло юлға илтһен..... 81
Һары һағыштар һәм яралы яҙмыштар..... 88
Оло әҙип тураһында етди тикшеренеү..... 96
Үткәндәрҙе ваҡыт хөкөмөнә тарттырып..... 101
Тормош һабаҡтары һәм әҙәбиәт.....110
«Сәфәр сығам, эйәрегеҙ миңә…»..... 120
Шағирҙың поэтик донъяһы..... 132
«Өлгөрҙө микән һүҙҙәрем…»..... 149
Өҙгөләнә шағир йөрәге..... 156
«Ә үҙем ул үҙе әллә нисәү…»..... 175
Ике поэма тураһында бер һүҙ..... 188
Шифриәттә заман һулышы (1994 йылғы «Ағиҙел»
журналы биттәре буйлап)..... 200
Лирик поэзия ҡылдары (Туҡһан бишенсе
йылдың поэтик йомғаҡтарына ҡарата)..... 229
Шифри хистәрҙән гөл үреүсе
(Абдулхаҡ Игебаев ижадына бер байҡау)..... 256
«Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып»..... 282

«Йырым менән донъя яҡты» (Әнисә Таһирова шиғриәте тураһында уйланыуҙар) 295
Назар Нәжмиҙең «Ике Зөләйха» поэмаһында шәхес, ғаилә һәм әхлаҡ мәсьәләләре 310
Шағирҙың өмөт шәмдәлдәре 322
Йөрәгендә – ил ҡайғыһы 332
Иманына ҡалды тоғро 353
Аҡыл һәм хис гармонияһы 372
Үкенмәй ул үткәндәргә… 389
Назар Нәжмиҙең «Ағым» поэмаһы 404
Назар Нәжмиҙең «Бер туғандар» поэмаһы (Әҫәрҙең сюжет нигеҙе һәм идея-эстетик асылы) 411
Назар Нәжми хаттары (Осрашыуҙар. Тәьҫораттар. Уйланыуҙар) 422
Быуаттан быуатҡа күскәндә (Кисәге һәм бөгөнгө шиғриәтебеҙ хаҡында) 443
Егәрле ижадсы ине (Назар Нәжми) 504
Быуындар күсәгилешлегенә тоғролоҡ (Факиһа Туғыҙбаева) 514
«Ҡояш та бит, ана, эстән яна...» (Зөфәр Вәлит) 527
«Ебәктән дә нескә күңелем ҡылы...» (Мөхәммәт Закиров) 538
Яуланған үрҙәр баһаһы (Нәжибә Әминева) 553

Литературно-художественное издание

Хабиров Ангам Хайбрахманович

НА СТЫКЕ ВЕКОВ

В 2 томах

Том 1
Статьи
(на башкирском языке)

Әҙәби-художестволы баҫма

Хәбиров Әнғәм Хәйбрахман улы

БЫУАТТАР ҠАУЫШҠАНДА

2 томда

1-се том

Мәкәләләр

Редакторҙар *И. С. Сырлыбаева*, *Р. Ә. Сиражитдинов*
Компьютерҙа верстkаланы *Ф. Ш. Мөҙәрисова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 25.12.2017. Форматы 60x84 1/16.
«Снегурочка» офис ҡағыҙы. «TimesNewRoman» гарнитураһы.
Ризографта баҫылды. Шартлы баҫма таб. 33,02. Иҫәп-баҫма таб. 27,71.
Тиражы 100 дана. Заказ № 27.

ДАФУ «Башҡорт энциклопедияһы»
450006, Өфө ҡ., Революцион урамы, 55. Тел.: (347) 250-06-72.
http://www.bashenc.ru
E-mail: gilem@bashenc.ru

ДАФУ «Башҡорт энциклопедияһы» типографияһында баҫылды.
450006, Өфө ҡ., Революцион урамы, 55.